# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДИАЛЕКТТАРЫ ҺҮҘЛЕГЕ

# ДИАЛЕКТОЛОГИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
ӨФӨ ФӘННИ ҮҘӘГЕ
БАШҠОРТОСТАН ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
ГУМАНИТАР ФӘНДӘР БҮЛЕГЕ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДИАЛЕКТТАРЫ ҺҮҘЛЕГЕ

*Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты эргәһендәге «Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында»ғы Башҡортостан Республикаһы Законын бойомға ашырыу буйынса Комиссия тарафынан раҫланды*

КИТАП
ӨФӨ • 2002

УДК 809.434.3
ББК 81.2
Б 27

Мөхәрририәт:

филология фәндәре кандидаты М. И. ДИЛМӨХӘМӘТОВ
*(яуаплы мөхәррир)*, филология фәндәре докторы Э. Ф. ИШБИРҘИН,

филология фәндәре докторы Н. Х. МӘҠСҮТОВА,

филология фәндәре кандидаты У. Ф. НӘҘЕРҒОЛОВ

Төҙөүселәр:

ДИЛМӨХӘМӘТОВ М. И. (б, ҙ, ж, з, ҡ, ф)

НӘҘЕРҒОЛОВ У. Ф. (а, м, о, ө, п, р, с, ҫ, х, ш, ә)

САБИРЙӘНОВА С. Ғ. (к, л, н, т)

ГӘРӘЕВА Ғ. Ғ. (ў, ү̆, г, ғ, д, и, й, у, ү, һ, ы, э)

**Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге** (Рәсәй Фәндәр академияһы. Өфө
Б 27 фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты). — Өфө: «Китап», 2002. —
432 бит.

ISBN 5-295-03104-7

«Башҡорт диалекттары һүҙлеге» 1928 — 1946, 1960 — 1982 йылдарҙағы экспедициялар һәм командировкалар ваҡытында халыҡтан йыйып алынған материалдан төҙөлдө. Унда Башҡортостан Республикаһында һәм уға йәнәш урынлашҡан өлкәләрҙәге (Силәбе, Ырымбур, Пермь, Свердлов, Курган, Һарытау, Һамар), шулай уҡ Татарстан Республикаһындағы райондарҙа йәшәгән башҡорттарҙың һөйләү теле тикшерелде. Һүҙлектә бөтә башҡорт һөйләштәренең лексик һәм фонетик-морфологик үҙенсәлектәре билдәләнә. Өс томда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт һөйләштәре һүҙлектәре» (1967, 1970, 1987), шулай уҡ «Башҡорт теленең диалектологик атласы» материалдары файҙаланылды.

Һүҙлек башҡорт һөйләү теленең тарихын, уның диалекттарын, һөйләштәрен өйрәнеү өсөн әсбап булараҡ тәҡдим ителә. Ул әҙәби телде тулыландырыу һәм камиллаштырыу өсөн дә нигеҙ була ала.

УДК 809.434.3
ББК 81.2

ISBN 5-295-03104-7

© Төҙөүселәр: Дилмөхәмәтов М. И., Нәҙерғолов У. Ф., Сабирйәнова С. Ғ., Гәрәева Ғ. Ғ., 2002

# ИНЕШ

Телдең ғилми нигеҙҙә эҙмә-эҙлекле, һәр яҡлап даими рәүештә өйрәнелә барыуы уны артабан камиллаштырырға һәм үҫтерергә ярҙам итә. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәгенә ҡараған «Почет билдәһе» орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты (1932 йылдан 1936 йылға тиклем Милли мәҙәниәт институты) тикшеренеүселәренең фән өлкәһендәге беренсе аҙымдарын туған телде өйрәнеүҙән башлауҙары ана шуға бәйле. 20-се йылдарҙа башҡорт теленең өндәр, ялғауҙар, һүҙҙәр төҙөлөшөн ғилми эшкәртеп, уның ғәмәли ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү йүнәлешендәге көнүҙәк бурыстарҙы тормошҡа ашырыу кәрәклеге килеп тыуа. Уҡыу әсбаптары яҙыу, һүҙлектәр төҙөү, терминология мәсьәләләрен хәл итеү, яҙмала төрлөлөккә юл ҡуймау йәһәтенән һәм милли әҙәби тел нормаларын билдәләү кеүек үтә ҡатмарлы мәсьәләләр шул замандағы телселәр Ғ. Дәүләтшин, Х. Әбдрәшитов, Ғ. Амантаев, Т. Байышев, Ҡ. Әхмәров, М. Билалов, Н. Таһиров һ. б.-лар тарафынан башҡарыла.

Тел ғилеме өлкәһендәге тәүге ҡаҙаныштар (орфографик, башҡортса-урыҫса һүҙлектәр, фонетика, морфология һәм синтаксис буйынса хеҙмәттәр) башҡорт халҡының йәнле һөйләү телен өйрәнеү, һүҙ байлығын туплау кеүек мөһим тикшеренеүҙәрҙән тора. Телселәр, әҙиптәр һәм журналистар ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларынан, әҙәби әҫәрҙәрҙән, иҫке төрки телендә яҙылған ҡульяҙмаларҙан, көндәлек гәзит һәм һәр төрлө журнал биттәренән һүҙҙәр сүпләгәндәр, телдән һөйләнелгән сығыштарҙа осраған, мәғәнәләре аңлашылып етмәгән һүҙҙәрҙе теркәй барып, мәғәнәләрен асыҡлап, теге йәки был һүҙҙең ҡайһы төбәктә ҡулланылыуын тәфсирләп өйрәнгәндәр.

Йәнле һөйләү телен тикшереү маҡсатында башҡорт халҡы йәшәгән һәр төбәккә экспедициялар ойоштоРола. 1928—1946 йылдар араһында ошондай 14 экспедиция эшләй. Тупланған материалдар буйынса тулы фәнни отчеттар яҙыла. Ошо тикшеренеүҙәр нигеҙендә иң тәүҙә Н. Таһировтың «Башҡорт лөғәте», һуңғараҡ «Башҡортса-русса һүҙлек», «Башҡорт теленең ғилми грамматикаһы», терминологик һүҙлектәр төҙөлә һәм баҫыла, ерле һөйләштәрҙең үҙенсәлектәренә ҡарап, уларҙы төркөмдәргә берләштереү мәсьәләһе лә күтәрелә. Башҡорт һөйләштәрен төркөмләүҙә төрлө принциптарҙан (фонетик, морфологик, күплек ялғауҙарының үҙенсәлеге) сығып фекер йөрөтөлөүенә ҡарамаҫтан, Ғ. Дәүләтшин һәм Т. Байышевтың хеҙмәттәре айырыуса әһәмиәтле. Асылда улар башҡорт теленең диалекттары системаһын дөрөҫ билдәләйҙәр һәм башҡорт диалектологияһына нигеҙ һалалар. Т. Байышевтың «Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку» (М., Наука, 1955) исемле китабының үҙәк нәшриәттә урыҫ телендә баҫылып сығыуы башҡорт теле һәм уның ерле һөйләштәренең үҙенсәлегенә, төрки телдәрен өйрәнеү фәне, төрки һәм славян телдәре диалектологияһы донъяһына юл ярыу булды. Т. Байышев был хеҙмәтендә, әҙәби тел һәм диалекттарҙы, һөйләштәрҙе тасуирлау, уларҙың сиктәрен билдәләү менән бергә, башҡорт халҡының ырыу-аймаҡ картаһын да бирә. Хеҙмәткә ҡушымта итеп бирелгән алты таблица (туғанлыҡ быуыны, малдарҙың енес һәм йәш буйынса бүленеш терминдары) ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ғөмүмән, ғалим тарафынан бынан күп йылдар элек тупланған белешмәләр тел ғилеме өсөн бик тә әһәмиәтле, сөнки йылдар үткән һайын әҙәби телдең үҫеше, һөйләш һәм әҙәби тел араһындағы бәйләнештең көсәйә барыуы, айырым һөйләш һәм диалект вәкилдәренең тығыҙ бәйләнеше, аралашыуы ерле тел күренештәренең юғалыу процесын тиҙләтә. Әҙәби телдең һүҙлек нормаһын аныҡлау буйынса диалектолог-ғалим билдәләгән принциптарҙы, нигеҙҙә, дөрөҫ тип әйтергә кәрәк.

Башҡорт теле буйынса тикшеренеүҙәр, мәғлүмәттәр туплау дауам итә. Яңынан-яңы һүҙҙәр, күренештәр асыҡлана бара. Был йүнәлештәге эштәрҙә һүҙ ҡәҙерен ысын мәғәнәһендә белеп, туған телдең бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлығын өйрәнеүгә бағышлаған «Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку» исемле башҡорт диалектологияһы буйынса ғилми хеҙмәт бөгөнгө һәм киләһе быуын тикшеренеүселәре өсөн өлгөлө һәм фәһемле булып ҡаласаҡ.

Атаҡлы ғалим Ж. Ғ. Кейекбаевтың да башҡорт диалектологияһы фәненә индергән өлөшө ҙур ғына. Уның «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш» («Ғилми яҙмалар», 3-сө баҫма, Өфө, 1958) исемле төплө мәҡәләһе донъя күрҙе. Университетта был фән тармағы күп йылдар буйына уның классификацияһы буйынса уҡытылды. Артабан башҡорт диалектологияһы һөйләштәрҙе системалы рәүештә монографик планда тикшереү юлында уңышлы аҙымдар яһай башланы.

Диалекттар һәм уларға ҡараған һөйләштәр әҙәби телгә әленән-әле һут биреп, уны тулыландырып тороусы тамырҙары улар. Әҙәби тел дөйөм халыҡ һөйләү телендә киң таралған һәм, һөйләштәрҙә булып та, әҙәби телгә әлегә ҡәҙәр алынмаған үҙенсәлекле һүҙҙәр иҫәбенә байый барырға тейеш.

Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге тел тарихы, тел күренештәренең үҫеш юлында кисергән үҙгәрештәре, телдең үткән осорҙарҙағы һәм бөгөнгө торошо тураһында өндәр, ялғауҙар һәм лексик берәмектәр ҡулланылышы аша белешмәләр бирә. Ниндәй етди тикшеренеүҙәр алып барылыуына, күп һанлы һәм күп төрлө һүҙлектәр төҙөлөүенә ҡарамаҫтан, халыҡ теле һәр ваҡыт сағыштырмаса өйрәнелгән булып ҡала килә.

Махсус һораулыҡ ярҙамында диалекттар һүҙлеге өсөн материал йыйыу 60-сы йылдарҙа башлана. «Башҡорт һөйләштәре һүҙлеге»нең беренсе томы Н. Х. Мәҡсүтова һәм Н. Х. Ишбулатов мөхәррирлегендә 1967 йылда донъя күрҙе. Ул көнсығыш диалектҡа ҡараған арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, әй һөйләштәренең диалекталь һүҙҙәрен берләштерә. Был һүҙлек филология фәндәре кандидаттары Н. Х. Мәҡсүтова, Н. Х. Ишбулатов, С. Ф. Миржанова һәм лаборант С. Ғ. Ғилманова тарафынан төҙөлдө. Һүҙлек тюркология донъяһында, нигеҙҙә, ыңғай баһа алды. Әммә баш һүҙҙең һәм уның мәғәнә төҫмөрҙәренең рус теленә тәржемәһе бирелмәүе һүҙлектең етешһеҙлеге булды.

Көнсығыш диалектта л тартынҡыһынан башланған ялғауҙар (**-лыҡ, -лы, -ла, -лыҡлы, -лаған, -лата, -лай, -лап, -лан** һ. б.), һүҙҙең ниндәй өнгә бөтөүенә ҡарап, дүрт төрлө килә:

1. **П, т, с, ҫ, ш, ф, к, ҡ, х** һаңғырау тартынҡыларына бөткән һүҙҙәргә ялғауҙар **т** өнөнән башланып ҡушыла: *ипте, аттаныу, хастыҡ, иҫтәү, таштыҡ, кәрәкте, ҡырҡтаған* һ. б.
2. **Л, м, н, ң, ж, з** тартынҡыларына бөткән һүҙҙәргә ялғауҙар **д** өнөнән башланып ҡушыла: *йелде, ҡомдоҡ, төтөмдө, йандау, ундаған, моңдо, ҡыразды (тау)* һ. б.
3. **Р, й, ҙ, -ў, ү (уау)** тартынҡыларына бөткән һүҙҙәргә ялғауҙар **ҙ** өнөнән башланып ҡушыла: *шарҙыҡ, меңәрҙәгән, дауарҙата, сейҙәй, йәйҙәү, утыҙҙап, тауҙы (йер), өсәүҙәп* һ. б.
4. Һуҙынҡы өндәргә бөткән һүҙҙәргә ҡушылған ялғауҙарҙың башындағы **л** тартынҡыһы, әҙәби телдәге һәм көньяҡ диалекттағы һымаҡ, үҙгәрешһеҙ ҡала.

Көнсығыш диалектта күплек ялғауҙары дүрт төрлө вариантта йөрөй. Мәҫәлән, *аттар, баҫыуҙар, ҡалалар, урмандар.* Үҙенсәлекле был күренеш әҙәби телгә нигеҙ итеп алынған.

Көньяҡ диалектта иһә ялғауҙар ике төрлө вариантта ҡулланыла. **Ҙ, ж, з, й, к, ҡ, л, п, р, с, ҫ, т, у, ф, ш, ў, ү (уау)** тартынҡыларына бөткән һүҙҙәргә ялғауҙар **л** тартынҡыһынан *(ҡаҙлар, тайлар, ҡырлар, ташлар)* һәм **м, н, ң** тартынҡыларына бөткән һүҙҙәргә **н** тартынҡыһынан (*урамнар, көннәр, моңнар*) башлап ҡушыла. **Л** һәм **н** тартынҡыларынан башланған ялғауҙар, күплек ялғауҙарынан тыш, ҡылым, рәүеш, сифат һәм һан ялғауҙары өсөн дә хас (*килгәннәр, игеннәтә, тәмне, уннарса*).

Атап үтелгән ялғауҙар ҡулланылышы буйынса төньяҡ-көнбайыш һәм көньяҡ диалекттар бер-береһенә оҡшаш.

Көньяҡ диалектты өйрәнеү өсөн Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты 1963—1966 йылдарҙа ғилми экспедициялар ойошторҙо. Экспедиция Н. Х. Мәҡсүтова етәкселегендә 1964 йылда Башҡортостандың Архангель, Белорет, Ғафури һәм Ҡырмыҫҡалы районларында, 1965 йылда Бишбүләк, Дәүләкән, Ишембай, Маҡар, Миәкә, Стәрлебаш, Федоровка һәм Әлшәй райондарында, 1966 йылда Асҡын, Иглин, Ҡариҙел, Нуриман райондарында, 1963 йылда Н. Х. Ишбулатов етәкселегендә Башҡортостандың Ейәнсура, Күгәрсен, Мәләүез һәм Хәйбулла райондарында эшләне. Һүҙлеккә ерле һөйләш вәкилдәре булған уҡытыусылар (Ә. Моратов, Ғ. Шәйәхмәтов, М. Ҡылысбаева) тарафынан йыйылған мәғлүмәттәр ҙә индерелде. Тел йәһәтенән үҙенсәлекле әҙәби әҫәрҙәрҙән Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ», З. Биишеваның «Кәмһетелгәндәр», Х. Ғиләжевтың «Погонһыҙ һалдаттар» романдарынан һүҙҙәр һайлап алынды. Һүҙлектең икенсе томын да Н. Х. Мәҡсүтова, Н. Х. Ишбулатов, С. Ф. Миржанова, С. Ғ. Ғилмановалар төҙөнө. Ул 1970 йылда баҫылып сыҡты.

Икенсе том беренсе томдан баш һүҙҙең һәм уның мәғәнә үҙенсәлектәренең урыҫ теленә тәржемә ителеүе менән айырыла. Синонимдар бер-береһенә тоҫҡама менән бирелде.

Был томға көньяҡ диалектҡа ҡараған дим, ҡариҙел, урта, эйек-һаҡмар һөйләштәренең һүҙҙәре индерелде. Эйек-һаҡмар һөйләше Һүрәм, Нөгөш, Таналыҡ, Йылайыр йылғалары буйында йәшәгән башҡорттар телендәге үҙенсәлектәрҙе берләштерә. Фәҡәт лексик күҙлектән генә сығып билдәләгәндә уны һүрәм, һаҡмар (үрге, түбәнге), эйек, юшатыр, нөгөш, таналыҡ һөйләшсәләренә бүлеп ҡарарға мөмкин булыр ине. Һүҙлеккә «һаҡмар һөйләше» атамаһы менән Ырымбур өлкәһендә Һаҡмар йылғаһының түбәнге ағымында Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ, Төйләгән һәм Гай райондарында йәшәгән башҡорттар теленең диалекталь лексикаһы алынды. Ырымбур өлкәһе башҡорттарының теле төньяҡ-көнбайыш (Туҡ һәм Соран йылғалары буйы) һәм көньяҡ-көнсығыш (Гөбөрлө, Ҡаҫмарт, Һаҡмар буйы) региондарына бүленә. Уның тәүгеһе туҡ-соран, икенсеһе һаҡмар һөйләше тип алынды.

Һаҡмар һөйләшенең өндәр системаһына һуҙынҡыларҙың иренләшеү законлылығы хас. Мәҫәлән: *боҙау, боғау, бойма, ҡоршау, көтөү, мөхәпәт, өндөү, өндөшеү, өңкөлдөү, өркөлөү.* Беренсе һәм икенсе ижектәрҙә **у** өнө йыш ҡулланыла. Миҫалдар: *бутҡа, уклау, йурау, йамғур, ҡуңғырау, ҡуңыр.* **-Ый** өн ҡушылмаһы урынына күп осраҡта **и** өнө әйтелә: *ҡиммәт, сирсыҡ, ҡимылдау, һираҡ, һиғаҡ* һ. б. Һүҙ башында әҙәби телдәге **х** өнө урынына тамаҡ төбө **һ** өнө ҡулланыла: *һат, һәбәр, һөрмәт, һәләл* һ. б. Һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында **й** өнө урынына **ж** өнө лә йыш әйтелә: *жен, жер, жыр, жоҡ (йуҡ* урынына*), жыу, жауын, жыуа, жең (җиң* йәки *йең* урынына*), мәржә, мәржән, ынжы.* Һөйләшкә, башҡорт теленең боронғо күренештәренең береһе булараҡ, һүҙ башында **п, т** өндәренең ҡулланылышы ла хас: *песән, пеләк, пер, пәй (бәй* урынына*), палдаҡ, паш, пала; турт, тонйа, тур (ҙур* урынына*).* **-Лау,/-ләү, -нау/-нәү** аффикстары сифат теүәлһеҙлеген күрһәтә: *йүләрләү, сейләү, һорғоллау, һараннау.*

Туҡ-соран һөйләше тар һуҙынҡылар ҡулланылыуы менән айырыла. Мәҫәлән: *быҙау, бығау, ҡыршау, кетеү, эндәү.* Һирәк осраҡтарҙа һүҙҙең беренсе һәм икенсе ижектәрендә **о** өнө лә килә: *йорау, йамғор.* Һөйләштә өн ҡушылмалары әҙмә-әҙлекле ҡулланыла: *ҡыйбат, сыйраҡ, ҡыймылдау.* Һүҙ башында **һ** өнө урынында **с** өнө күҙәтелә. Мәҫәлән: *сағыҙаҡ, сайрау, сурәт, сырт, сыр, сыҙыҡ, саташыу* һ. б. Һүҙ башында

й өнө килә: *йөн, йер, йеләк*. Һәр ике һөйләштең лексик байлығында күп кенә уртаҡлыҡтар булһа ла, уларҙың үҙҙәренә генә хас үҙенсәлектәре лә бар.

Диалектолог-ғалимдар, «Башҡорт теленең диалектологик атласы»на мәғлүмәт йыйыу менән бер рәттән, яңы, өсөнсө том һүҙлек өсөн дә материал тупланылар. Уға тейешле һүҙ байлығы филология фәндәре докторы Н. Х. Мәксүтова етәкселегендәге экспедицияларҙа (1972—1980) һәм махсус ойошторолған командировкаларҙа филология фәндәре кандидаттары, өлкән ғилми хеҙмәткәрҙәр М. И. Дилмөхәмәтов, У. Ф. Нәҙерғолов, шулай уҡ Р. Ғ. Аҙнағолов, кесе ғилми хеҙмәткәр С. Ғ. Ғилманова тарафынан йыйылды. Свердловск, өлөшләтә Силәбе өлкәләрендәге башҡорт һөйләштәре буйынса мәғлүмәт М. И. Дилмөхәмәтов, Куйбышев һәм Һамар өлкәләре буйынса У. Ф. Нәҙерғолов төҙөгән картотеканан алынды. Һүҙлектең был томында айырым һөйләштәргә хас һүҙ-берәмектәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең, һөйләштәрҙә һәм әҙәби телдә булып та, мәғәнәһе менән айырылғандары йәки өҫтәмә мәғәнә төшөнсәһе булғандары, шулай уҡ һирәк осрай торған фонетик һәм фонетик-морфологик реликттар, сингармоник варианттар бирелде.

Һүҙлектең өсөнсө томы төҙөлөшө менән бер ни тиклем үҙенсәлекле. Унда лексик берәмектәрҙең ниндәй грамматик категорияға ҡарауы күрһәтелә бара, икенсе томдағы һымаҡ, баш һүҙ һәм уның мәғәнә төрҙәре урыҫ теленә тәржемә итеп бирелә.

Билдәле булыуынса, башҡорт теле синонимдарға бик бай. Ҡайһы бер синоним һүҙҙәр бер нисә тиҫтәгә барып етә. Мәҫәлән, урыҫ телендә «божья коровка» тип аталған бөжәк һөйләштәрҙә *аллабабай һыйыры, аллабабай пипейе, алматутай, биҙәкле ҡондоҙ, гөз, гүзбабай, йетенөктә, көжмә, көжмәкәй, көнйылытҡыс, күсмә, күсмәкәй, күсәбей, күсапай, көйәпапа, кейәүпапа, күсмәкүс, күскәнәй, күскәнтәй, күсәрхан, ҡаңғабиҙәр, ҡапҡауыс, ҡойашапай, ҡойашҡорт, ҡойашымбаҡ, ҡыҙыл һыйыр, ҡыр һыйыры, ҡылайтун, осайаҡ, оскөсөк, осҡалаҡ, осҡамҡа, осйөҙөгөм, осомос, оссыйырым, сибәрапай, сыуағапай, сыуағәбей, сыуар һыйыр, тәтәйәбей, тутапай, әбейсыуаҡ, әпипә* тигән варианттарҙа йөрөй. Бындай осраҡта төп форма тип алынған һүҙгә ҡырҡтан ашыу һүҙҙе тоҫҡау мөмкин түгел. Һүҙлекте файҙаланыу уңайлыраҡ булһын өсөн синонимдарҙың һәр береһен баш һүҙ хоҡуғында бер төрлө термин-эталон, айырым осраҡтарҙа бер генә төрлө аңлатма менән биреү ҡулайлы, тип табылды.

Һүҙлек Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарындағы, Пермь, Свердловск, Силәбе, Куйбышев, Һамар һәм Ырымбур өлкәләрендәге башҡорт һөйләштәре материалдарынан төҙөлдө.

Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты Башҡортостандың шаҡтай ҙур территорияһын алып тора. Ул Ҡариҙелдең урта ағымы, Төй, Сөн, Ҡармасан, Сәрмәсән, Ағиҙелдең түбәнге ағымы, Танып йылғалары тирәһенә урынлашҡан башҡорттарҙың тел үҙенсәлектәрен берләштерә. Был регионға ингән ҡариҙел һөйләше үҙенә генә хас лексик берәмектәре, фонетик һәм морфологик күренештәре менән айырылып тора. Шуға ла баш һүҙ йәки уның мәғәнә үҙенсәлектәре күпселек осраҡтарҙа ҡариҙел һөйләшенә генә ҡаратып алынды, ә инде уртаҡлыҡ булғанда, «төньяҡ-көнбайыш» тип, киңерәк территорияны күҙ уңында тотоп бирелде.

Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты үҙенең төп үҙенсәлектәре буйынса ҡалған бөтә һөйләштәр менән дә уртаҡ. Әйтәйек, *а — ә, о — у, ө — ү, ө — е* һуҙынҡыларының сиратлашыуы буйынса ул арғаяш, әй, эйек-һаҡмар һөйләштәре менән оҡшаш. Мәҫәлән, төньяҡ-көнбайыш һәм көнсығыш диалекттарҙа *асы, әҙ, оҡлау (оҡтау), бөгөн* (татар әҙәби телендә *бүген*), *гөмөр*, көньяҡ диалектта *гүмер* (татар әҙәби телендә *гомер*); *үрҙәк*, көньяҡ диалектта *өйрәк* һ. б. Төньяҡ-көнбайыш диалектҡа с тартынҡыһы урынына ч; һ тартынҡыһы урынына с өндәрен ҡулланыу хас (*чирәм* — көнсығыш диалектта *сирәм; сарыҡ — һарыҡ* һ. б.). Лексик берәмектәр үҙҙәренең мәғәнәһе һәм ҡулланылышы буйынса урта урал, гәйнә, һаҡмар, туҡ-соран һөйләштәре менән уртаҡлыҡ таба.

Өсөнсө том һүҙлектә бирелгән «урта урал» һөйләшенә Свердлов (көньяҡ өлөшө), Силәбе (иң төньяҡ-көнбайыш өлөшө) өлкәләрендәге ауылдар һәм Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы, йәғни Мәсетле районындағы Аптулла, Аҡа (Оло Аҡа, Кесе Аҡа), Аҡабаш, Борғатъя, Ишәле, Ҡыҙылбай, Ҡорғат, Мәләкәҫ, Теләш, Туғыҙҙар, Тәкәуыл, Әжекәй, Әләгүз һәм Юлай ауылдары инә.

Урта урал һөйләше тел үҙенсәлеге һәм географик таралышы менән төньяҡ һәм көньяҡ зоналарға бүленә. Төньяҡ зонаға билдәле бер кимәлдә татар теле йоғонтоһон кисергән ауылдар, йәғни Свердлов өлкәһенең Красноуфим, Әртә, Түбәнге Һирге районындағы Аҡбаш, Аҡкүл, Араҡай, Боғалыш, Бәйәк-түз, Өфө-Шигер, Үрмәкәй, Һыҙғы, Шөкөр, Әртә-Шигер һәм Башҡортостандың Мәсетле районының төньяғындағы Аҡа, Аҡабаш, Аптулла, Ҡыҙылбай, Тәкәуыл, Әжекәй ауылдары индерелде. Татар теле йоғонтоһона бирелмәгән Мәсетле районының төньяғындағы, Силәбе өлкәһенең Нязепетровск районындағы ауылдар көньяҡ зонаға ҡаратылды. Был зонағы ауылдар һөйләше үҙенсәлеге буйынса әй һөйләше менән тап килә. Һүҙлектә ул урта урал һөйләшенә индерелеп бирелде. Ә төньяҡ зона күплек һәм һүҙ яһаусы ялғауҙар ҡулланылышы буйынса көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар менән оҡшаш (*атлар, көннәр, ташлыҡ* һ. б.). Өндәрҙең ирен гармонияһы күп осраҡта һаҡланылмай (*йолдыз, этборын*), морфемаларҙа өн ҡушылмаларының ҡулланылыуы (*эшләй, уйлый, алыу* һ. б.) күҙәтелә. Һөйләштең диалекталь лексикаһы башҡорт теленең башҡа һөйләштәре лексикаһы менән, нигеҙҙә, уртаҡ.

Пермь өлкәһенең хәҙерге Барҙы, Уса, Пермь районында йәшәүсе башҡорттарҙың лексикаһы һүҙлеккә «гәйнә һөйләше» тип алынды. Гәйнә һөйләшенең лексикаһы икенсе томда ла бер ни тиклем сағылыш тапҡайны. Ул ваҡытта һөйләш буйынса материал филология фәндәре докторы Ә. Н. Кирәев етәкселегендәге экспедицияла тупланған фольклор бүлеге фондынан һайланып алынды. Һүҙлектә боронғо башҡорт теленең үҙенсәлектәрен сағылдырған, шулай уҡ хәҙерге төп башҡорт һөйләштәре менән тура килгән лексик берәмектәр генә баш һүҙ хоҡуғында бирелгәйне. Өсөнсө томға, ундай һүҙҙәр менән бергә, һөйләштең үҙенә генә хас һүҙҙәр ҙә индерелде.

Гэйнә һөйләше буйынса материалдар 1973 йылда «Башҡорт теленең диалектологик атласы»на мәғлүмәт туплау программаһы нигеҙендә махсус экспедицияла, шулай уҡ 1975 йылда һөйләште монографик планда өйрәнеү йәһәтенән ойошторолған командировкаларҙа өлкән ғилми хеҙмәткәр С. Ф. Миржанова тарафынан йыйылды. Гэйнә һөйләше лексик байлығы яғынан төп башҡорт һөйләштәре менән, нигеҙҙә, оҡшаш. Был һөйләштә өндәр ҡулланылышында киң һәм тар әйтелешле һуҙынҡыларҙың йәнәш килеүе (*чаңға // чаңғы, ҡарчаға // ҡарчыға, тура // туры, умырзайа // умырзыйа, жәйәү // жейәү*); боронғо башҡорт телендәгесә, у, ө өндәренең киң ҡулланылыуы (*ҡумған, сурау, туҡмаҡ, бөгөн, жөгөрөү, йөткөрөү, көзәтеү*); с, ж өндәренең эҙмә-эҙлелеге (*салам, сарыҡ, сул, сосар, сырт, буйсын; жен, жир, жирән, жите, жийын, жәй, жәймә*); д, т тартынҡыларын ҡулланыуҙағы төрлөлөк (*дага, дары, тамға, дегәнәк, туғай, тыуарыу, тулау, тән*); ч, с, т өндәренең сиратлашыуы (*чөчө // сөсө // төсө, чирәм // сирәм, чөчкөрөү // төчкөрөү*) һ. б. күҙәтелә.

Һүҙлеккә «Ырғыҙ һөйләше» атамаһы менән Куйбышев һәм Һамар өлкәләрендә йәшәүсе башҡорттарҙың диалекталь лексикаһы индерелде. Был һөйләш буйынса һүҙҙәр «Башҡорт һөйләштәре һүҙлеге»нең икенсе томында ла бер ни тиклем бирелгәйне. Улар Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романынан алынған булһа, өсөнсө томдағылары күбеһенсә йәнле телдән йыйылған материалдарҙан тора. Ырғыҙ һөйләшенең өндәр системаһы киң әйтелешле артҡы рәт һуҙынҡыларының (*һабай, аҡаҡ, маҡал, масҡара, сайахат, ҡабыр*), шулай уҡ башҡа күп һөйләштәрҙәге о өнө урынына у өнөнөң сағыштырмаса йыш ҡулланылыуы (*буҡай, буғырлаҡ, ҡумған, ҡумалаҡ*), ç өнөнөң һ өнөнә тап килеүе (*çимеҙ, çул, çыйыр*), й, д, с өндәренең йәнәш әйтелеп йөрөтөлөүе йәки сиратлашыуы (*йеңгәсәй // диңгәсәй // сеңгәсәй*), иренләшкән һуҙынҡы өндәрҙең һуңғы ижеккә тиклем һаҡланыуы (*көркөтөү, көшкөтөү, көрпөлдөк* һ. б.) менән үҙенсәлекле.

Һуңғы йылдарҙа лексика фондын тулыландырып, ҙур күләмле дөйөм һүҙлек төҙөү мәсьәләһе килеп тыуҙы. Һөҙөмтәлә, һөйләштәр һүҙлектәренең 1967, 1970, 1987 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан өс томы берләштерелде. Уға Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты архивында һаҡланған, диалектология буйынса яҙылған ғилми хеҙмәттәрҙән алынған яңы материалдар ҙа өҫтәлде. Бынан тыш, һүҙлеккә башҡорт яҙыусыларының тел йәһәтенән үҙенсәлекле тип табылған проза әҫәрҙәренән алынған диалектизмдар индерелде.

Берләштерелгән һүҙлек филология фәндәре докторы Н. Х. Мәҡсүтова тарафынан төҙөлгән инструкция талаптарына ярашлы итеп эшләнде. Уға һүҙлектәрҙең өс томының принциптары нигеҙ итеп алынды. Диалект синонимдар, бер-береһенә тоҫҡалмай, алфавит тәртибендә бирелде. Баҫылып сыҡҡан өс томдағы диалектизмдарҙың мәғәнәләре асығыраҡ аңлашылып торһон өсөн, күп урында теге йәки был һөйләштән алынған миҫал һөйләмдәр килтерелде. Көньяҡ диалектҡа ҡараған әйек-һаҡмар һөйләше бик ҙур территорияға таралған. Һүҙҙәрҙең таралыу сиген анығыраҡ итеп билдәләү маҡсатында был һөйләш һаҡмар, туҡ-соран һөйләштәренә һәм нөгөш, әйек һөйләшсәләренә бүлеп күрһәтелде. Ҙур территория биләгән төньяҡ-көнбайыш диалект, бүлгеләнмәй, тотош көйөнсә, ә ҡариҙел һөйләше үҙенә бер башҡа итеп бирелде, сөнки ул башҡорт теленең үҙенсәлектәрен сағыштырмаса ныҡ һаҡлаған. Һүҙҙәрҙең таралышы уртаҡ булған осраҡтарҙа көнсығыш диалектҡа ҡараған арғаяш, әй, мейәс, салйоғот һөйләштәре, берләштерелеп, «төньяҡ-көнсығыш» атамаһы менән, көнсығыш диалекттың ҡыҙыл һөйләше менән көньяҡ диалекттың һаҡмар һөйләше «көньяҡ-көнсығыш» исеме менән алынды.

Диалектизмдарҙың таралышы ғәжәп үҙенсәлекле. Ҡайһы бер һүҙҙәр тотош бер диалектҡа йәки уға ҡараған күпселек һөйләштәргә таралған булһа, икенселәре айырым бер һөйләштә, уның бер өлөшөндә, бәләкәй генә бер төбәктә, хатта бер-ике ауылда ғына осрарға мөмкин. Бына шуға ла һүҙҙәрҙең таралыу сиге һөйләшсәләр, һөйләштәр һәм диалекттар сигенә тап килеп кенә тормай.

Ерле һөйләштәргә хас булған бөтә диалект күренештәрен бер юлы ғына йыйып бөтөрөү мөмкин түгел, сөнки халыҡ теле ифрат бай, уны өйрәнгән һайын яңынан-яңы һүҙҙәр, һ. б. үҙенсәлектәр табыла тора. Шуға ла берләштерелгән һүҙлек башҡорт һөйләштәренең тел байлығын сағыштырмаса тулы кәүҙәләндергән сығанаҡ булып һанала. Һүҙлеккә әҙәби телгә инерлек терминдар, төрлө өлкәләргә ҡараған һүҙҙәр, әйтемдәр һәм фразеологик берәмектәр тупланған.

# ҺҮҘЛЕК ТӨҘӨҮ ПРИНЦИПТАРЫ

Диалекттар һүҙлеген төҙөгәндә иң тәүҙә диалектизмдарҙың үҙенсәлектәрен, уларҙың таралыу сиктәрен аныҡ билдәләү мотлаҡ. Баш һүҙҙе билдәләү һәм уның аңлатҡан мәғәнәһен йәки мәғәнәләрен, әҙәби телдәге варианттарын асыҡлау, диалект һүҙгә әҙәби телдә эквивалент булмағанда уға тасуири аңлатма биреү төҙөүсенең туған телдең лексик байлығын һәйбәт белеүен талап итә.

Һүҙлеккә әҙәби телгә ҡабул ителмәгән йәки унда ҡулланылмаған, мәғәнәләре менән үҙенсәлекле ерле һөйләш һүҙ берәмектәре алына. **Уларҙың ҡайһы берҙәре, матбуғатта йыш ҡулланылып, норматив кимәлгә күтәрелгән хәлдә лә диалекттар һүҙлегенә индерелергә тейеш.**

Ономастик һүҙҙәрҙә диалект үҙенсәлектәре сағылһа, һүҙлеккә улар ҙа алына. Мәғәнәләре менән аныҡ һәм тапҡыр һүҙҙәрҙе, ҙур йәки бәләкәй территорияла таралыуҙарына ҡарамаҫтан, әҙәби телдең лексик составына индереү зарур. Диалекттар һүҙлегенең төп бурыстарының береһе әҙәби телде мөмкин тиклем байытыуҙан тора.

Бер нисә мәғәнәле һүҙҙәрҙең һәм һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләре түбәндәгесә ғәрәп цифрҙары менән билдәләнә:

**ҠАРЫЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, эй) *с.* 1. Ҡарт — *старый (о человеке).* Ҡарый буғаһың инде тей (эй). 2. (ҡыҙыл, нөгөш) *и.* Ҡөрьәнде яттан белгән кеше — *знающий Коран наизусть.* Ҡарый ҡашына саҡырҙым (нөгөш). Ҡари (эйек-һаҡмар). 3. (арғаяш, салйоғот) диуана — *юродивый.*

Омонимдар, рим цифрҙары менән билдәләнеп, баш һүҙ итеп бирелә:

**АЙАЗ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аҡлан — *поляна.* Айаҙ (урта урал)

**АЙАЗ II** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* алсаҡ — *приветливый*

**СУР I** (ырғыҙ) *и.* шеш — *опухоль.* Сурға сей икмәк йабалар

**СУР II** (һаҡмар) *и.* ҡайғы, хәсрәт — *горе, печаль.* Аңа тағы сур өҫтөнә сур булды.

Синонимдарҙың һәр береһе алфавит тәртибендә баш һүҙ итеп бирелә:

**КӨЖМӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ҠОЙАШЫМБАҠ** (урта урал) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ОСАР** (һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ЭТЕМҮС** (кариҙел) *и.* ҡамҡа — *божья коровка.*

Бер йәки бер нисә һөйләштә бер төрлө мәғәнәлә ҡулланылған фонетик һәм морфологик вариантлы һүҙҙәр баш һүҙ хоҡуғында өтөрҙәр аша бирелә:

**БЫЗМЫР, МЫЖМЫР** (урта урал, һаҡмар) *и.* ығыш — *копуша*

**СЫРТЛАМА, СЫРТЫЛДАҠ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* сыртлаҡ — *кнопка (для одежды).*

Ике йәки бер нисә һүҙҙән торған, бер мәғәнәгә эйә булған һүҙбәйләнештәр баш һүҙ хоҡуғында бирелә:

**АЛАҒАРҒА ҮЛӘНЕ** (һаҡмар) *и.* тау һарынаһы — *козья саранка.*

Ике һүҙҙән торған һүҙбәйләнеш бер төшөнсә бирһә, улар шул көйөнсә баш һүҙ хоҡуғында килә:

**БЕРШӘП** (кариҙел, урта урал) *р.* бер аҙ — *немного.* Бершәп барғас та ауыл булыр (урта урал)

**ЙАҘЫМДАНТАЙЫМ** (гәйнә) *р.* аңғармаҫтан — *нечаянно, неожиданно.*

Әгәр һүҙбәйләнеш, грамматик юл менән бәйләнеп, конкрет термин төшөнсәһен бирһә, түбәндәгесә алына:

**БАУҘЫ ЙАУҘЫҠ** (мейәс) *и.* ҡушъяулыҡ — *национальный спаренный платок.*

Ике йәки бер нисә һүҙҙән торған һүҙбәйләнештәрҙең тәүгеһенән һуң ике нөктә ҡуйыла:

**ҠАРҺАЛАНЫП: ҠАРҺАЛАНЫП АШАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* ҡабаланып ашау — *есть впопыхах.*

Фразеологик берәмектәр һәм идиоматик әйтемдәр, төп һүҙгә бәйләп, аңлатма менән ромбик аша бирелә:

**ТӘРТӘНӘ, ТӘРТНӘ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* тәртә — *оглобля.* ◊ тәртәһе һыныу *(бер ҙә юҡҡа үпкәләү) — обижаться без причины.*

Баш һүҙҙең мәғәнәһенә әҙәби телдә тап килерлек вариант булмаһа, уға тасуири аңлатма бирелә:

**КЕТМЕРҘӘҮ** (дим) *ҡ.* әкренләп көн күреү — *жить потихоньку.* Бабайың ҡорт та көттө, кыладауай ҙа булды, шулайтып кетмерҙәп киләһең.

Баш һүҙгә әҙәби телдә ҡулланылған интернациональ термин мәғәнәһе менән тап килһә, ул аңлатма урынына ла, тәржемә өсөн дә урыҫ телендәгесә бер генә тапҡыр бирелә:

**ФАЛИЖ** (ҡыҙыл, мейәс) *и. паралич.* Фалиж рәнйеүе (дим), фараиз (гәйнә).

Һөйләштәрҙә бер нисә вариантта йөрөгән һүҙҙәр күп осрай. Мәҫәлән, һөйләштәрҙә урыҫ телендә *уховертка* тип әйтелгән бөжәктең айрығойроҡ, асаҡай, көйәҡорт, ҡатыҡабаҡ, ҡатыҡорт, сатағойроҡ, сатаҡай һ. б. атамалары бар. Әҙәби телгә уларҙың береһе лә алынмаған. Ундай осраҡтарҙа баш һүҙгә эквивалент итеп диалекталь һүҙ килтерелә:

**АЙРЫҒОЙРОҠ** (төньяҡ-көнбайыш, эй) *и.* асаҡай — *уховертка.*

Баш һүҙ бер нисә һөйләшкә таралған булһа, уның мәғәнәһен асыҡлаған миҫал һөйләмдең ҡайһы һөйләштән алынған икәнлеге күрһәтелә:

**АРТАУ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡырҡыуланыу — *перекисать (о хлебе, кумысе и т.д.).* Әсетеүгә утыртҡан икмәгем артап киткән (ҡыҙыл).

## Һүҙлектең төҙөлөшө

Диалекттар һүҙлегенең үҙенә хас төҙөлөш үҙенсәлеге бар. Ул түбәндәге өлөштәрҙән тора.

Инеш һүҙ. Унда һүҙлек төҙөү принциптары, тупланған материалдарҙың сығанаҡтары күрһәтелә, һүҙлеккә индерелгән региондарҙағы һөйләү теленең ҡыҫҡаса фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәре тасуирлана.

Һүҙлектең төп өлөшө — уның статьяһы. Ул түбәндәгесә бирелә:

1) баш һүҙ;

2) йәйәләр эсендә бәләкәй хәрефтәр менән баш һүҙҙең аңлатҡан мәғәнәләренең таралыу сиген күрһәткән һөйләш йәки һөйләштәр атамалары;

3) баш һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауын күрһәткән шартлы ҡыҫҡартмалар (*и.* — исем; *ҡ.* — ҡылым; *с.* — сифат; *р.* — рәүеш һ. б.);

4) мәғәнәһе менән диалекталь баш һүҙгә тап килгән әҙәби телдәге лексема, йәғни эквивалент;

5) әҙәби эквивалент булмаған осраҡта тасуири аңлатма;

6) баш һүҙ мәғәнәләренең урыҫ теленә тәржемәһе;

7) һүҙ мәғәнәһен асыҡлаусы миҫал һөйләм;

8) таралыу урыны менән һүҙҙең фонетик һәм морфологик варианты.

## Шартлы ҡыҫҡартмалар

Диалекттар, һөйләштәр һәм һөйләш төркөмсәләре атамалары тулыһынса алынды. Диалекталь һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмдәренә ҡарауы түбәндәгесә ҡыҫҡартмалар аша күрһәтелде:

| | |
|---|---|
| *и.* — исем | *өн. һ.* — өндәш һүҙ |
| *с.* — сифат | *я. һ.* — ярҙамсы һүҙ |
| *ҡ.* — ҡылым | *я. и.* — ярҙамсы исем |
| *р.* — рәүеш | *я. ҡ.* — ярҙамсы ҡылым |

*а.* — алмаш
*һ.* — һан
*и. һ.* — инеш һүҙ
*м. һ.* — модаль һүҙ
*нум. һ.* — нумератив һүҙ
*б.* — бәйләүес
*к.* — киҫәксә
*т.* — теркәүес
*ы.* — ымлыҡ

## Транскрипция

Диалектологик материал практикала ныҡынған ғәмәлдәге транскрипция нигеҙендә бирелә.

## Һуҙынҡылар

йа — я
йу, йү — ю
йе — е

## Тартынҡылар

ў — в (ўажибат, ўал)
ү̆ — в (ү̆әсү̆әсә биреү, ү̆әтәт)

## Диалекттар һәм һөйләштәр (Диалекты и говоры)

а) **Көнсығыш диалект (Восточный диалект)**

арғаяш һөйләше (аргаяшский говор)
ҡыҙыл һөйләше (кызылский говор)
мейәс һөйләше (миасский говор)
салйоғот һөйләше (сальзигутский говор)
эй һөйләше (айский говор)

б) **Көньяҡ диалект (Южный диалект)**

дим һөйләше (демский говор)
туҡ-соран һөйләше (ток-соранский говор)
урта һөйләш (средний говор)
һаҡмар һөйләше (сакмарский говор)
эйек-һаҡмар һөйләше (ик-сакмарский говор)

в) **Төньяҡ-көнбайыш диалект (Северо-западный диалект)**

**Төньяҡ-көнсығыш һөйләштәр төркөмө (Группа северо-восточных говоров)**

арғаяш һөйләше (аргаяшский говор)
мейәс һөйләше (миасский говор)
салйоғот һөйләше (сальзигутский говор)
эй һөйләше (айский говор)

**Көньяҡ-көнсығыш һөйләштәр төркөмө (Группа юго-восточных говоров)**

ҡыҙыл һөйләше (кызылский говор)
һаҡмар һөйләше (сакмарский говор)

Филология фәндәре докторы **Н. Х. МӘҠСҮТОВА.**

Филология фәндәре кандидаты
**М. И. ДИЛМӨХӘМӘТОВ**

# А

**А-А, А-А, АҺ-АҺ!** (гәйнә, мейәс, һаҡмар) *ы.* аптырау ымлығы — *междометие недоумения.* А-а! Ҡайҙан гилеп сыҡты был (һаҡмар)

**АБА, АБЫ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ы.* аптырау ымлығы — *междометие недоумения.* Абы, тағы йауа башланы (һаҡмар). Абаҡ (төньяҡ-көнбайыш). Абаҡ, алармы ни?

**АБАҒАЙ** (гәйнә) *с.* сос, теремек — *шустрый*

**АБАТА** (һаҡмар) *с.* ыҙғыш — *копотливый, медлительный (о человеке).* Абатаһы әйләнеү — *медлить*

**АБДАН** (ырғыҙ) *р.* — бөтөнләй — *окончательно.* Абдан ҡараңғы төшкәс кенә лыҡ ҫыу булып ҡайтып инде

**АБҘАР** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Лапаҫ — *навес.* 2. Ялан кәртә — *загон*

**АБҘИНӘЙ, АБЗИНӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Атайҙың йәки әсәйҙең апаһы — *тетя (старшая сестра отца или матери).* 2. Атайҙың бер туған ағаһының ҡатыны — *тетушка (жена старшего брата отца)*

**АБҘЫЙ, АБҘЫҠАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ата-әсәнән оло ир кешегә өндәшеү һүҙе — *дядя (обращение к мужчине, который по возрасту старше родителей).* 2. Ағай — *старший брат*

**АБҘӘБЕЙ, АБЫЗӘБЕЙ, АБЫЗӘБЕКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Атайҙың бер туған ағаһының ҡатыны — *тетушка (жена старшего брата отца).* 2. Уҡымышлы оло ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе — *почтительное обращение к пожилой грамотной женщине*

**АБҘӘТӘЙ, АБҘӘТЕЙ, АБЗӘТӘЙ, АБЗӘТЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Атайҙың йәки әсәйҙең оло ағаһы — *дядя (старший брат отца или матери).* 2. Уҡымышлы оло ир кешегә өндәшеү һүҙе — *почтительное обращение к пожилому грамотному мужчине*

**АБЗЫЙ** (көньяҡ диалект, төньяҡ-көнбайыш, әй) *и.* 1. Бер туған ағай — *старший брат.* 2. (урта) Ҡайнаға — *старший брат мужа*

**АБЗЫҠАЙ** (ҡариҙел) *с.* тас абзыһы — *похожий на брата*

**АБЗӘҢКӘЙ, АБҘӘҢКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* атайҙан йәки әсәйҙән оло ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе — *тетушка (почтительное обращение к женщине, которая по возрасту старше родителей)*

**АБЖЫ, АБЖЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ағай — *старший брат*

**АБЕРКА, АБЫРКА** (дим) *и.* балитәк — *оборка*

**АБЕТКА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һандыҡ — *объедья.* Абйатка (урта урал)

**АБПӘ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ы.* абау — *ба! (междометие удивления)* Абпә, кем анда? (урта урал)

**АБРУЙҘЫҠТЫ** (ҡыҙыл) *с.* абруйлы — *авторитетный*

**АБСУК** (һаҡмар) *и.* ҡара һоло — *овсюг.* Әпсүк (туҡ-соран)

**АБСЫН** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* апһын — *жены родных братьев (по отношению друг к другу)*

**АБУРҠА** (дим) *и.* ҡатлансыҡ — *книжка (часть желудка у жвачных животных)*

**АБЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* 1. Ағай — *старший брат.* 2. Бабай — *дядя (старший брат отца или матери).* 3. (әй) Ир уҡытыусыларға өндәшеү һүҙе — *обращение к учителям-мужчинам*

**АБЫЖУК I** (мейәс) *и.* дегет мейесе — *обжиг*

**АБЫЖУК II** (мейәс) *и.* туғын ҡулсаһы — *обруч*

**АБЫЗБАБАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бабай — *дядя (старший брат отца или матери)*

**АБЫЗӘНЕЙ** (гәйнә) *и.* кендек инәй — *повивальная бабка*

**АБЫРАТ** (ҡариҙел) *и.* айыртылған һөт — *обрат*

**АБЫРҒАТЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* албырғатыу — *занимать, забавлять.* Абырғатып, башнын ушын алып, исәңкерәтеп утырасын

**АБЫСТАЙ** (гәйнә, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* апай — *старшая сестра.* ◊ Абыстай бураны (иҫкесә апрель башындағы буран) — *буран в начале апреля по старому стилю.* Абыстай ашы (иң тәмле ашамлыҡ) — *изысканное блюдо*

**АБЫШҠА** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, урта, әйек-һаҡмар) *и.* 1. Ир — *муж.* Абышҡа киткәненә байтаҡ ғүмер булды (әйек-һаҡмар). 2. (ҡыҙыл, мейәс, урта, әйек-һаҡмар, әй) Ир-атҡа кәмһетеп әйтеү һүҙе — *уничижительное слово по отношению к мужчинам*

**АВАРКЫ** (һаҡмар) *и.* ике ат егелә торған арба — *телега для запрягания лошадей впристяжку*

**АҒА I** (көньяҡ диалект, ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ағай — *старший брат.* Жегетнең ағаларын да бәхетле иткән (төньяҡ-көнбайыш)

**АҒА II** (туҡ-соран) *и.* уҡытыусы — *учитель.* Ағағыҙ класҡа ингән бит, йөгөрөгөҙ

**АҒАБЕЙ, АҒӘБЕЙ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Атайҙың йәки әсәйҙең апаһы — *тетушка (старшая сестра отца или матери).* 2. Атайҙың, әсәйҙең ағаларының ҡатындары — *жены старших братьев отца или матери*

**АҒАЙ** (урта) *и.* 1. Үгәй атай — *отчим.* 2. (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) м. һ. — *модальное слово.* Әй барабыҙ бата сума, әй барабыҙ, ағай! (урта урал)

**АҒАЙРАУЫҠ** (дим, әй) *и.* йылан тарыһы — *бекмания обыкновенная*

**АҒАЙРЫҠ** (мейәс) *и.* 1. Йылан тарыһы — *бекмания обыкновенная.* 2. (урта) һолобаш — *овсяница*

**АҒАЙЫМА, АҒАЙЫМАЛАР** (арғаяш) *и.* ағайымдар — *братья.* Ағайымалар ул ауылдан күскән былтыр. Ағайымаларға әйтмәнем

**АҒАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аҡыҡ — *сердолик.* Ағаҡ йаҡалар кейеп йөрөйләр иде

**АҒАЛА** (ҡыҙыл, мейәс, әйек-һаҡмар) *и.* ҡыу бәшмәк — *трутовик*

**АҒАЛОБОТА** (урта урал) *и.* алабута — *лебеда*

**АҒАЛАШ** (урта) *и.* бер туған ир балалар — *родные братья*

**АҒАЛЫ-ҠОТОҠЛО** (һаҡмар) *и.* ағалы-энеле — *братья.* Ағалы-котоклo барып ҡайттылар Сарукка

**АҒАЛӘНДЕ** (арғаяш) *и.* ағалы-энеле — *братья*

**АҒАНСЫ** (һаҡмар) *р.* уғаса — *до того.* Ағансы булмай, сыҡҡан да тайғансы

**АҒАПА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* апай — *тетя (младшие сестры матери и отца)*

**АҒАРПА** (дим) *и.* ҡырлы арпа — *белый ячмень*

**АҒАРСАҠ** (урта) *и.* ағасъяңаҡ — *жерех.* Ағасаҡ (дим, урта, һаҡмар)

**АҒАС** (урта) *и.* талҡыш — *кострика, костра*

**АҒАСАЙАҠ** (һаҡмар) *и.* 1. Ағас табаҡ — *большая деревянная чаша.* 2. Ағас күнәк — *бадья*

**АҒАСАЛМА** (дим, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* алма — *яблоко*

**АҒАСАТ** (һаҡмар) *и.* салпы — *упрямый (о лошади).* Ағасатҡа менмә, сабыйға теймә, күккә сөймә *(мәҡәл).* (эй) Ағасатҡа аттандырыу *(алдау)* — *обмануть, обвести.* Аңдамаған гешене ағасатҡа аттандырыу йеңел инде ул

**АҒАСАУЫҘ** (ҡариҙел) *с.* тәрбиәһеҙ, тупаҫ — *невоспитанный, грубый*

**АҒАС АШЛАУ** (дим) *и.* ашлау — *деревянная чаша, выдолбленная из цельного куска дерева*

**АҒАСИГӘҮ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* үҙһүҙле — *упрямец.* Ну, ағасигәү булырһың да һин, бер эйттең — йеткән (эйек-һаҡмар). Ағач игеү (ҡариҙел)

**АҒАСЙАҢАҠ** (урта урал) *и.* үҙһүҙле — *упрямец*

**АҒАС ЙЕЛӘГЕ** (кызыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡурай еләге — *малина*

**АҒАС КӘРИТӘ** (арғаяш) *и.* ялғаш — *корыто*

**АҒАС ҠОРТО I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* айрығойроҡ — *уховёртка*

**АҒАС ҠОРТО II** (гәйнә) *с.* тынғыһыҙ — *неугомонный*

**АҒАС СҮБӘГЕ** (ҡариҙел) *и.* ағас сүсе — *луб (древесные волокна)*

**АҒАСТАБАН** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* сабатаға ҡағылған ағас күтәрмә — *деревянная подошва лаптей*

**АҒАС ТАЛҠЫ** (ҡыҙыл) *и.* талҡыуыс — *льномялка*

**АҒАС ТАУАРЫ** (дим) *и.* ағас материалы — *лесоматериал*

**АҒАС: АҒАС ТЕЛ** (минзәлә, эй) *с.* тупаҫ тел — *грубиян*

**АҒАСТИРМӘН** (һаҡмар) *и.* ҡул тирмәне — *жернова*

**АҒАС ТӨВӨРӨ** (арғаяш) *и.* төпсөк — *пенёк.* Ағас төбө (урта), ағас төпсөгө (дим)

**АҒАС ТӘГӘС** (арғаяш, салйоғот) *и.* баҙыян сеүәтә — *деревянная расписная чашка*

**АҒАСҮҘӘК, АҒАСҮҢӘС** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* боғарлаҡ — *трахея*

**АҒАС ҺАРЫҺЫ** (һаҡмар) *и.* яҙ көнө ағастан аҡҡан һыу — *весенний сок деревьев.* Ағас һарыһын түкмәйенсә йаҙ булмай. Ағас сарысы (ҡариҙел)

**АҒАС-ҺӘЛЕП** (урта) *и.* ағас-мағас — *всякие деревья*

**АҒЛАҠ** (мейәс) *с.* аулаҡ — *укромный*

**АҒЛАР** (һаҡмар) *а.* улар — *они.* Ун ике гөн ағларға йал була

**АҒРАЙ** (салйоғот, эй) *с.* аҡыш — *лупоглазый*

**АҒРАМАТ** (һаҡмар) *и.* сасаҡ — *бахрома.* Ағраматты теүәрәк ҡуйаһың ашйаулыҡҡа

**АҒРЫҠ** (арғаяш, мейәс) *с.* аҡыш — *лупоглазый*

**АҒСЫН** (гәйнә) *а.* уныһын — *то.* Ағсын гел генә эйтәләр ҡушып сүзгә

**АҒУЙ** (ҡыҙыл) *и.* ағарып яткан уй — *открытая долина между гор*

**АҒУЙМАҠ I** (урта) *и.* уймаҡ — *наперсток*

**АҒУЙМАҠ II** (мейәс) *и.* ағарып яткан уй — *открытая долина между гор.* Ағуймаҡай күбек уйылып аға Ағиҙелкәй һыуҙың ағыны

**АҒУТА** (һаҡмар) *и.* түрә — *начальник*

**АҒҮҘӘК** (дим) *и.* умыртҡа — *позвоночник*

**АҒҮЛӘН** (урта) *и.* йылан тарыһы — *бекмания обыкновенная*

**АҒЫҘЫУ** (дим) *ҡ.* ағытыу — *отпускать жеребят на волю.* Ағатыу (урта, эйек)

**АҒЫЙ** (ҡыҙыл, урта) *и.* бер туған ағайға өндәшеү һүҙе — *слово-обращение к старшему брату*

**АҒЫЛА** (урта урал) *и.* ҡыу бәшмәк — *трутовик*

**АҒЫМСЫЛАУ** (арғаяш, салйоғот) *ҡ.* ваҡһыу — *мелочиться*

**АҒЫН-ТҮГЕН** (ырғыҙ) *с.* бөтмәҫ-төкәнмәҫ — *нескончаемый.* Шул тиклем ағын-түген байлыҡты ҡайҙа ғуйып бөтмәк кәрәк

**АҒЫСЫ** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *а.* унының — *тот.* Ағысы да быгысы да йәрдәм иттеләр (гәйнә)

**АҒЫТАУ** (ҡыҙыл) *и.* тирмәләр ҡоролған йәйге йәйләү — *юртовая летовка*

**АҒЫТЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Ағыҙыу — *сплавить (по воде).* Шу йаҡҡа ағыталар бүрәнәне. 2. (һаҡмар) Оҙон итеп һөйләү — *говорить, рассказывать долго.* Хәбәрҙе ағыта белә ул Хәмит бавай

**АҒЫУ** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* йылға — *река.* Ырғыҙға бөтә ағыулар ҙа ҡойа (ырғыҙ)

**АҒЫУ КЕСЕРТКӘН** (ҡариҙел) *и.* баҡса кесерткәне — *крапива жгучая*

**АҒЫУ УТЫ** (һаҡмар) *и.* айыу көпшәһе — *болиголов крапчатый*

**АДЙУР** (ҡариҙел, мейәс) *и.* көлтә арбаһы — *сноповозка*

**АҘАҠҠЫ ТУЙ** (мейәс) *и.* туйҙың һуңғы көнө — *последний день свадьбы*

**АҘАҠЛАЙ** (дим, туҡ-соран, ырғыҙ) *р.* аҙағында — *в конце.* Май аҙаҡлай ҡырау була (дим). Април аҙаҡлай сәсергә була (ырғыҙ)

**АҘАЛАНЫУ** (гәйнә, дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал) *ҡ.* тәртипһеҙләнеү, аҙыу — *портиться.* Олоғайғас аҙаланып йөрөп алды, көнө йеткәнсе (урта урал)

**АҘАЛАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ыҙалау — *мучить, замучить.* Минең улымды ҡаһылай аҙалаған

**АҘАМАТ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* ил гиҙгән, күпте күргән, күпте белгән ир-ат — *бравый, видавший виды мужчина.* Аҙамат ир — йөрөлгән йер *(мәҡәл)*

**АҘАМАТТАЙ** (ырғыҙ) *с.* мыкты, эре кәүҙәле — *сильный, крупнотелый.* Ике аҙаматтай эт бүрегә ташланды

**АҘАМАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* арымау — *не устать.* Көнө буйы гиһәм дә аҙаманым әле

**АҘАП** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар) *и.* ҡылыҡ, ғәҙәт — *привычка.* Бабайҙың аҙабы насар булған икән йәшендә (һаҡмар). Әллә ней аҙап, шулайта бит кеше, аптырарлыҡ (ҡыҙыл)

**AҘАПЛАНДЫРЫУ** (урта) *ҡ.* эшләп, ѳһап мәшәҡәтләнеү — *пытаться делать, изготовлять что-либо.* Аш ҡашығын үҙләре аҙапландыралар

**AҘАПЛЫ I** (эйек-һаҡмар) *и. һ.* моғайын — *наверно.* Аҙаплы, Нурикамал әйткәндер

**AҘАПЛЫ II** (урта, эйек) *с.* бәләле; мәшәҡәтле — *беспокойный; хлопотливый*

**AҘАР** (ҡыҙыл, ырғыҙ) *и.* уңайһыҙ; борсолоу — *неприятность; беспокойство.* Баланың аҙары булһа ла биҙәре булмаһын (ырғыҙ)

**AҘАР-БИҘӘР: AҘАР-БИҘӘР БУЛЫУ** (дим) *ҡ.* үҙ-ара мөнәсәбәт боҙолоу — *испортить взаимоотношения.* Аҙар-биҙәр булып бөттөләр

**AҘАРЫНЫУ** (көньяҡ диалект) *ҡ.* 1. Ҡыҙып китеп ағарыныу — *побледнеть от злости.* Аҙарынып, киҙәнеп, йөнен сәсеп килә. 2. Зарланыу — *роптать, жаловаться.* Йер-һыуым булһа, йортом булһа, тип аҙарынып йөрөгән саҡтар бар ине лә бит. 3. (дим, ҡыҙыл, урта) Таныу — *отпираться.* Алманым да алманым тип аҙарына (ҡыҙыл). 4. (арғаяш, ырғыҙ) Үкенеү — *каяться*

**AҘАРЫНЫУ-БИҘӘРЕНЕҮ** (туҡ-соран, урта) *р.* ағарып-буҙарып — *побледнев (разговаривать).* Сәй эскәндә атының ауырыуы хаҡында аҙарынып-биҙәренеп һөйләп ултырҙы (урта)

**AҘАТ: AҘАТ ИТЕҮ** (әй) *ҡ.* юғалтыу — *потерять.* Әллә ғайҙа йөртөп ул балдағыңды аҙат иттең. Аҙат һынтырыу (урта) *ҡ.* бөкөрө сығыу — *появление горба*

**AҘАУ I** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡаушау, аптырап ҡалыу — *растеряться.* Бибекәй әбей менән Хәсбийамал да, аптырауҙан, ҡыуаныуҙан аҙап, бер аҙ өндәшә алмай торҙолар (эйек-һаҡмар). 2. (ҡыҙыл) Арыу — *устать*

**AҘАУ II** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Усал — *злой.* Ул бик аҙау, хәтәр геше. 2. (ҡариҙел) Бик ҡарт — *престарелый.* Аҙау ни, сабый ни, барыбер инде

**AҘАУ: AҘАУ АҒАС** (арғаяш, туҡ-соран, һаҡмар, әй) *и.* ҡабығынан таҙартылған, киптерелгән ағас — *сухое строительное дерево.* ◊ Аҙау йер *(сиҙәм)* — *целина.* Аҙау ир (күпте күргән ир) — *видавший виды мужчина.* Аҙау ҡыҙ *(оҙаҡ кейәүгә сыҡмаған ҡыҙ)* — *старая дева.* Аҙау мал *(оҙаҡ йәшәгән мал)* — *старое животное.* Аҙау, ажау (төньяҡ-көнбайыш). Аҙау айғыр (дим, көнсығыш диалект) — алты-ете йәшлек өйөр айғыры — *жеребец-производитель шести-семи лет*

**AҘАУАНДАЙ** (туҡ-соран, һаҡмар) *с.* әзмәүерҙәй — *сильный, ладный.* Мынау аҙауандай булып тороп эшләмәй йөрөй (һаҡмар)

**AҘАУЛАНЫУ I** (һаҡмар) *ҡ.* ныҡ, ҡаты булып кибеү — *сушиться сильно (о дереве).* Аҙауланып кибеп ҡала имәнтабан, сылтылдап ҡына тора

**AҘАУЛАНЫУ II** (урта урал) *ҡ.* оҙаҡ өйләнмәй йөрөү, йәше үтеү — *долго не жениться, в свое время не обзавестись семьей.* Аҙауланған иргә ней кем барһын? Аҙауланыу (төньяҡ-көнбайыш)

**AҘАУ ТЕШ** (эйек) *и.* ҡаҙыҡ теш — *клык.* Аҙыу теш (ҡыҙыл, мейәс), ажау теш (ҡариҙел)

**AҘБАР-ҠУРА** (дим, урта) *и.* аҙбар — *хлев.* Аҙбар-ҡура мал менән тулты (урта)

**AҘҒЫН** (һаҡмар) *и.* 1. Әрһеҙ — *пройдоха.* 2. (мейәс, һаҡмар, әй) Йылмаяҡ — *зимагор, проныра.* 3. Һәпрә — *неряха*

**AҘҒЫН: AҘҒЫН ЙЫЛ** (дим) *и.* ауыр йыл — *тяжелый год.* ◊ Аҙғын тел *(икенсе тел менән ҡатнашҡан тел)* — *смешанный язык.* Аҙғын йел *(ҡыуан ел)* — *суховей*

**AҘҒЫНДЫҠ БАШҠОРТ** (дим) *и.* башҡа милләт менән аралашҡан башҡорт — *смешанный с другими нациями башкир*

**AҘҒЫНДЫ ҠОРТ** (дим) *и.* һоро ҡорт — *трутень*

**AҘМАН** (туҡ-соран, ырғыҙ, эйек-һаҡмар, әй) *и.* 1. Аҙып-туҙып йөрөгән кеше — *бродяга.* Азман (гәйнә). 2. (туҡ-соран, ырғыҙ) Аҙып, өйгә ҡайтмай йөрөгән мал — *скотина, не возвращающаяся домой.* 3. (ҡыҙыл, һаҡмар) Аҙғын — *распутница*

**AҘНАГИС** (мейәс, әй) *и.* кесаҙна — *четверг*

**AҘНАКӨН** (гәйнә) *и.* йәкшәмбе — *воскресенье*

**AҘНАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* кешнәү — *ржать (о лошади).* Был ике аттың аҙнауына башҡалары ҡушылды

**AҘРА: AҘРА ҠАЛЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бер әйберһеҙ ҡалыу — *остаться ни с чем.* Аҙра ҡалһаҡ та, улым менән эшләп, түләп бөтөрбөҙ

**AҘЫҠ** (салйоғот) *с.* асыҡ — *открытый*

**AҘЫЛМА** (арғаяш, салйоғот) *и.* ҡалҡыулыҡ — *возвышенность*

**AҘЫМСЫ: AҘЫМСЫ АТ** (мейәс) *и.* ҙур аҙымлы ат — *лошадь с широкими шагами.* Үңгәмә мән һуға аҙымсы ат

**AҘЫМТЫҠ** (әй) *и.* аҙғын — *распутник.* Аҙымтыҡ, жәйзең буйы аҙҙырҙы баланы

**AҘЫР I** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ҡыҙыу — *вспыльчивый.* Аҙыр ҡыҙһа, ҡый-талаш (һаҡмар)

**AҘЫР II** (һаҡмар) *и.* сағыл — *плоскогорье*

**AҘЫРЫЙ** (һаҡмар) *с.* тәкәббер — *высокомерный.* Аҙырый кеше ней тәкәбер ғуй

**AҘЫУ** (һаҡмар) *и.* дағa теште̇ре — *зубья подковы*

**AЖАР I** (һаҡмар) *и.* 1. Илһам — *вдохновение.* Ажар ғайтыу *(дәрт һүнеү)* — *стать апатичным.* 2. (урта) Өтөк — *замухрышка*

**AЖАР II** (ырғыҙ) *с.* күркәм — *великолепный.* Бер аҙ йабыҡҡан, элекке ажар мыйыҡ урынына бармаҡ баҫымы тиклем генә итеп мыйыҡ ҡалдырған

**AЖАУ СЕБЕНЕ** (урта) *и.* һыу мыры — *поденка*

**AЖҒЫУ** (дим) *ҡ.* ныҡ әсеү — *прокисать.* Ҡымыҙ ажғып килеп сыға

**AЖЫР-БОЖОР** (мейәс, урта) *р.* ҡытыршы — *шероховато.* Сыйҙым ажыр-божор тунһа, уражай була (мейәс)

**AЖЫРТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* сәбертеү — *высыпать (о сыпи).* Бөтә тәнем ажыртып китте

**AЗАРЛАШЫУ** (дим) *ҡ.* талашыу — *ссориться.* Азарлашып алып киттеләр баламды

**AЗАТҠЫ** (дим, ҡариҙел, туҡ-соран) *и.* елгәргестән төшкән сүп — *отходы зерна.* Аҙатҡы (эйек)

**AЗДА, AЖДА** (һаҡмар) *и.* аждаһа — *дракон.* Азда (дим)

**AЗДАЙЫЛАН** (һаҡмар) *и.* аждаһа — *дракон.* Әлдәйылан, әждәһә (урта урал)

**AЗЫ-БОЗО: AЗЫ-БОЗО ҠАРАУ** (һаҡмар) *ҡ.* алан-йолан ҡарау — *озираться*

**АЗЫҒАН** (һаҡмар) *и.* ялағай — *зарница.* Азыған уйнай аштыҡ бешер алдынан

**АЙ** (һаҡмар) *өн. һ.* — *эй! (слово-обращение).* Ҡайҙа барҙың, ай?

**АЙАҘ: АЙАҘ КҮКӘЙ** (дим) *и.* серетке — *яйцо-болтун*

**АЙАҒ АРБА** (ҡыҙыл) *и.* балалар арбаһы — *детская коляска*

**АЙАҒ ОСЛАУ** (урта) *ҡ.* сатанлау — *хромать.* Айағ ослай ине шикелле Ғәфури, шуны иҫләп ҡалғаным

**АЙАҒОС** (дим, ҡариҙел, урта) *и.* баҡса арты — *задворки.* Айағоч (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) Бозоу айағочта ғынайы (гәйнә)

**АЙАҒУРАУЫ** (әй) *и.* сылғау — *портянка*

**АЙАҒЫНА: АЙАҒЫНА ХӘТЛЕ** (дим) *р.* аҙағына хәтле — *до конца.* Айағына хәтлем утырҙы

**АЙАЗ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аҡлан — *поляна.* Айаз урын булмаған борон

**АЙАЗ II** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* асыҡ — *приветливый, душевный.* Бик айаз кеше ул (төньяҡ-көнбайыш)

**АЙАҠ I** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* мал түшкәһенең дүрттән бер өлөшө — *одна четвертая часть туши.* Күршеләрҙең һуғымынан бер айаҡ алғайныҡ, бик матур булды (туҡ-соран)

**АЙАҠ II** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ағас табаҡ — *деревянная чаша.* Бер айаҡ ҡатыҡ эстем дә эшкә гиттем. 2. (гәйнә, һаҡмар) Сынаяҡ өҫтө — *чашка*

**АЙАҠ III** (ҡыҙыл) *и.* солоҡ ағасында тороу өсөн баҫҡыс — *подставка для ног на бортевом дереве*

**АЙАҠ IV** (ҡыҙыл, мейәс, урта, һаҡмар, әй) *и.* кәләп — *мотушка (пряжи).* Бер айаҡ йеп күп була

**АЙАҠ V** (мейәс) *и.* кузла — *козлы (для распиловки дров)*

**АЙАҠ VI** (урта) *и.* аяҡ кейеме — *обувь.* Айағың эстәлер шунта

**АЙАҠ: АЙАҠҠА ҮҪЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* һабаҡҡа үҫеү — *идти в рост*

**АЙАҠ БАҪҠЫСЫ** (урта) *и.* тәбәлдерек — *педаль ткацкого станка*

**АЙАҠ БАҪЫУЫ** (мейәс) *и.* йыртыш — *лоскут материи, которым во время свадьбы загораживают комнату невесты, жених должен разорвать ногами эту материю и зайти в комнату*

**АЙАҠ-БАШ: АЙАҠ-БАШ ТОРОУ** (дим) *ҡ.* аяҡ осонда тороу — *стоять на цыпочках*

**АЙАҠ ЙӨҘӨ** (дим) *и.* йөҙләк —*подъем ноги*

**АЙАҠ-ЙУЛЛЫҠ: АЙАҠ-ЙУЛЛЫҠ КҮРЕҮ** (дим) *ҡ.* саҡ-саҡ ҡына аяҡ аҫтын күреү — *еле различать дорогу под ногами*

**АЙАҠ-ҠАШЫҠ** (дим) *и.* ҡашығаяҡ — *посуда*

**АЙАҠ-ҠУЛЛЫҠ: АЙАҠ-ҠУЛЛЫҠ АҠСА** (урта) *и.* юл-аяҡлыҡ аҡса — *дорожные расходы*

**АЙАҠЛАНЫУ** (гәйнә) *ҡ.* һабаҡҡа ултырыу — *идти в стебель*

**АЙАҠЛАУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* епте тубыҡҡа һалып урау — *собирать пряжу в пасмы*

**АЙАҠЛЫ ЛАМПА** (дим) *и.* ултыртмалы шәм — *настольная лампа*

**АЙАҠ САУЫТЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аяҡ кейеме — *обувь*

**АЙАҠСЫ** (һаҡмар) *и.* туй ашнаҡсыһы — *повар свадебного угощения*

**АЙАҠСЫЛАУ** (урта урал) *ҡ.* күп йөрөү — *много ходить, шататься без дела*

**АЙАҠ СЫЛҒАУЫ** (мейәс) *и.* кейәүгә бүләк итеп бирелә торған нағышлап эшләнгән сылғау — *подарок невесты жениху (вышитая гладью материя)*

**АЙАҠ-ТУН** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *и.* өҫ-баш — *одежда.* Ағайы йанына барһа, айаҡ-тундыҡ эштәр ине (мейәс)

**АЙАҠ ҺЫҘҘАУЫ** (мейәс, урта, әй) *и. ревматизм*

**АЙАҠҺЫУ** (ҡыҙыл, әй) *ҡ.* тапау — *затоптать.* Кешеләр айаҡһып йөрөй баштағас, эт эҙҙе йуғалта (ҡыҙыл)

**АЙАҠ ЫУЫЛДЫҒЫ** (дим) *и.* балтыр — *икры ног*

**АЙАҠ ӘКЕСЕ** (ҡариҙел) *и.* йөҙлөк — *подъем ноги*

**АЙАНЫУ** (гәйнә, урта) *ҡ.* 1. Аяу, ҡыҙғаныу — *жалеть.* Бабайларҙың бар шәпләре, үҙләрен айанмай эшләп йөрөй (урта). 2. (дим) Иренеү — *лениться*

**АЙАТАРАҠ** (һаҡмар) *и.* дебет тарағы — *пухочесалка*

**АЙАТЫУ** (урта) *ҡ.* аяҙытыу— *проясниться.* Бәҫ йергә йатһа, айата

**АЙАУҪЫҘ** (дим) *с.* 1. Әҙәпһеҙ, оятһыҙ — *неприличный, бесстыдный.* Айауҫыҙ ҫүҙ. Айаусыҙ (төньяҡ-көнбайыш). 2. (урта) Әрһеҙ — *неприхотливый*

**АЙАУСЫҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ҡылансыҡ — *кокетливый*

**АЙАУҺЫҘ** (әй) *р.* бик күп — *множество.* Быйыл айауһыҙ ҡырылды мал

**АЙБАҒЫР** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* көнбағыш — *подсолнечник*

**АЙ-БАЙ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран) *ы.* ғәжәпләнеү ымлығы — *междометие удивления.* Ай-бай, ул заманда күп ҡырылды хайуан (туҡ-соран). Ай-буй (һаҡмар). Ай-буй, әллә алмаған микән

**АЙБАР** (һаҡмар) *и.* биҙәкле яулыҡ — *платок с разводами.* Бына-бына тәҙрәнән өләсәйҙең айбар йаулыҡлы нурлы йөҙө балҡып күренер тип көттө

**АЙБАРАҠТЫ** (ҡыҙыл) *с.* айбарлы— *мужественный.* Айбараҡты геше

**АЙБАРҒЫЛАУ** (урта) *ҡ.* айбарланыу — *стать мужественным.* Бабай миңә айбарғылап һуғырға килә

**АЙБАШ** (урта) *с.* ялтыр баш — *плешивый*

**АЙБЫНЫУ** (урта, һаҡмар) *ҡ.* шикләнеү — *сомневаться.* Ҡурҡып, айбынып торалар Зәбихулланан (һаҡмар)

**АЙҒАҘАУ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Иҫәнгерәү — *быть оглушенным.* Тауыштан айғаҙап киттем (эйек-һаҡмар). 2. Төшөнкөләккә бирелеү — *стать апатичным*

**АЙҒУРЫ** (дим) *и.* шаңдаҡ — *зарево*

**АЙҒЫЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* алаҡандау — *вертеть головой (о лошади).* Шул саҡ айғыр айғылдап кешнәп йебәрҙе. Айҡылдау (мейәс)

**АЙҒЫРСАҠ** (салйоғот) *и.* айғыр — *жеребец (о жеребенке).* Айғырсаҡ ҡолҡай

**АЙҒЫРТАШ** (урта) *и.* биш таш уйыны — *игра в пять камешков*

**АЙҒЫР ҮГЕҘ** (ҡыҙыл) *и.* үгеҙ — *бык (производитель)*

**АЙҘУР** (ҡариҙел) *и.* оҙон арба — *дрога.* Айҙур (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш), айзар (дим), айҙыр (эй)

**АЙ-ҘАЙ: АЙ-ҘАЙ ТОРОУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡаҙыҡкай тороу — *впервые вставать на ноги (о ребенке).* Ай-һай тороу (ҡыҙыл, туҡ-соран, урта), ай-тай тороу (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар)

**АРКА ЙОЛОНО** (дим) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**АРКАЛЫК I** (арғаяш) *и.* кереш — *тетива (ручной пилы)*

**АРКАЛЫК II** (гәйнә, төньяк-көнбайыш) *и.* ҡара йәки төҫлө материянан тегелгән тәңкәле сәсбау — *монетный накосник*

**АРКА МАҢКАҺЫ** (мейәс) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**АРКАН: ҮРМӘ АРКАН** (арғаяш) *и.* ишелгән аркан — *свитый аркан*

**АРКАСАК** (урта) *и. комета*

**АРКАСАК ЙОНДОҘ** *(эйек-һаҡмар) и.* Орион йондоҙлоғо — *созвездие Орион.* Арҡылсаҡ (дим, урта)

**АРКА СҮМЕС** (урта урал) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**АРКАҪАБАК** (дим) *и.* умыртҡалыҡ — *позвоночник.* Арҡасабаҡ (гәйнә, ҡариҙел, төньяк-көнбайыш), арҡасыбыҡ (ҡариҙел), арҡаһабаҡ (урта урал), арҡа һабағы (урта)

**АРКА ҪӨЙӘГЕ** (дим) *и.* умыртҡалыҡ — *позвоночник.* Арҡа һөйәге (ҡыҙыл, салйоғот, эйек-һаҡмар), арҡаһөйәк (арғаяш, мейәс, һаҡмар), арҡасөйәк (ҡариҙел), арҡасуаҡ (гәйнә)

**АРКАУ I** (ырғыҙ) *и.* иҙән өрлөгө — *матица половая*

**АРКАУ II** (ҡариҙел) *и.* арҡалыҡ — *чересседельник*

**АРКАУҘА: МИНЕҢ АРКАУҘА** (урта) *б.* минең арҡала — *из-за меня.* Минең арҡауҙа һиңә лә түләтмәне

**АРКАУЫНДА** (урта) *б.* арҡаһында — *благодаря.* Ағас арҡауында торабыҙ

**АРКҮҘӘК** (төньяк-көнбайыш, урта, урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Умыртҡалыҡ — *позвоночник.* 2. (дим, урта) Арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**АРКЫЛЫ: АРКЫЛЫ ТАҪТАМАЛ** (дим) *и.* биҙәге арҡыры һуғылған таҫтамал — *полотенце с поперечнотканым узором.* Арҡылы балаҫ — биҙәге арҡыры һуғылған балаҫ — *палас с поперечнотканым узором*

**АРКЫЛАҒАС** (дим) *и.* урындыҡ ширлеге — *наличник на нарах*

**АРКЫЛЫ-ТИРКЕЛЕ** (дим) *р.* арҡыры-торҡоро — *как попало*

**АРКЫРАҒАС I** (эй) *и.* урҙа — *шест, прикрепляемый к стене пониже потолка для развешивания вещей*

**АРКЫРАҒАС II** (һаҡмар) *и.* бик — *запор (ворот, дверей)*

**АРКЫРАЙЫУ** (гәйнә) *ҡ.* киреләнеү — *упрямиться*

**АРКЫРЫ I** (гәйнә, ҡариҙел, ҡыҙыл, туҡ-соран, урта урал) *с.* тиҫкәре, кире — *упрямый.* Арҡыры менән һөйҙәшеп буламы у (урта урал)

**АРКЫРЫ II** (дим) *б.* көйөнсә — *несмотря.* Торорлоҡ өйө бар арҡыры икенсегә йәнә йорт ҫалалар

**АРКЫРЫ АУЫҘҘЫК** (мейәс) *и.* айыссыҡ — *мундштук (уздечки)*

**АРКЫРЫ ЙУРҒАН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* түр юрған — *узкая длинная стеганая подстилка на нарах*

**АРКЫРЫ КОЛАК** (мейәс) *и.* һалпы ҡолаҡ — *вислоухий*

**АРКЫРЫ-МАРКЫРЫ** (ҡыҙыл) *р.* арҡыры-торҡоро — *крест-накрест.* Арҡыры-марҡыры бүрәнәләр ҡуйылған

**АРКЫРЫЛАНЫУ** (гәйнә, ҡариҙел, ҡыҙыл, туҡ-соран, урта урал, эй) *ҡ.* тиҫкәреләнеү, киреләнеү — *упрямиться*

**АРКЫРЫ ТҮШӘК** (һаҡмар) *и.* түр юрған — *узкая длинная стеганая подстилка на нарах*

**АРКЫРЫ ҺУҘМА** (эйек) *и.* түр юрған — *узкая длинная стеганая подстилка на нарах*

**АРҘАН** (дим, туҡ-соран, урта, эйек) *и.* арлан — *кобель*

**АРЛАН АНДЫҘ** (һаҡмар) *и.* ата андыҙ — *мужская особь девясила*

**АРЛЫМ-БИРЛЕМ** (урта) *а.* теләһә ниндәй — *какой-нибудь.* Арлым-бирлем мөжәк йуҡ һыуыбыҫта. Ары-бире (дим)

**АРМАН** (дим, ҡариҙел, урта, һаҡмар) *и.* дарман — *сила, энергия.* Арманың йуҡ икән бер ҙә (һаҡмар)

**АРМАНҺЫҘ** (мейәс) *с.* 1. Оятһыҙ — *бесстыдный.* 2. (эй) Һөйкөмһөҙ — *несимпатичный*

**АРМА-ТОРМА** (урта) *р.* арҡыс-торҡос — *как попало.* Тегеһе, киҫкән ағас кеүек, арма-торма барып та төштө

**АРМАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* арбау — *заговаривать; заколдовывать.* Йылан армау

**АРМЫТ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Тармаҡ — *рукав (реки).* Һүрәм һыуының армыты (һаҡмар). 2. (ҡыҙыл, мейәс) Сата — *развилина (рогов).* Ун армыт болан мөгөҙө (ҡыҙыл). 3. (ҡыҙыл, мейәс, урта) Ҡамсы суғының бер тармағы — *ветвь кисти плети.* 4. (ҡыҙыл, мейәс) Сәсбау тармағы — *ветвь косоплетки.* 5. (ҡыҙыл, мейәс) Ышлыя биллеге — *поперечные ремни шлеи*

**АРМЫ-ТОРМО: АРМЫ-ТОРМО КИЛТЕРЕҮ** (урта) *ҡ.* пыр туҙҙырыу — *разнести в пух и прах.* Бер көн Нурғәлиҙе тәртешкә менән армы-тормо килтереп сығарҙым

**АРПА ТЫШЛАУ** (гәйнә) *ҡ.* арпа һурҙырыу — *обдирка ячменя*

**АРСАУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡурсалау — *оборонять, защищать.* Йерен-һыуын арсап йауға сапҡан Урал йегетеләй ир ғайҙа *(халыҡ йырынан)*

**АРСЕЙ, АРСИ** (ҡариҙел) *и.* арсый — *провожатый (сопровождающий невесту в дом жениха после свадьбы)*

**АРСЛАН** (мейәс) *с.* үткер — *смелый.* Арслан йегет

**АРСЫ** (урта урал) *и.* ҡыҙҙы оҙата торған арба — *повозка, на которой провожают невесту*

**АРСЫУ** (арғаяш, урта урал, салйоғот, эй) *ҡ.* 1. Әрсеү — *очищать.* 2. Балыҡ тәңкәһен таҙартыу — *снять чешую с рыбы.* Арсып бешер балыҡты (арғаяш)

**АРҪЫМ-БИРҪЕМ** (дим) *р.* арлы-бирле — *кое-как.* Арҫым-бирҫем генә эшләмә, үҙемә тип эшлә

**АРТ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ата йорто — *отчий дом.* Артына китте, Йосопҡа

**АРТАБА** (гәйнә) *р.* артабан — *дальше, в дальнейшем.* Артаба көйөү жигет йөрөй

**АРТАБАН** (эйек-һаҡмар) *и.* теге яҡ — *та сторона*

**АРТАҒАН** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* ҡырҡыу — *перекисший (кумыс, хлеб и т.д.)* Артаған икмәк, артаған бал. Артыған (урта)

**АРТ АҒАСЫ** (һаҡмар) *и.* арт сөй — *задний шпиль (в домашнем ткачестве)*

**АРТАМАН** (һаҡмар) *р.* артабан — *дальше, в дальнейшем*

**АРТАУ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡырҡыуланыу — *перекисать (о хлебе, кумысе и т.д.).* Әсетеүгә утыртҡан икмәгем артап киткән (ҡыҙыл)

**АРТБАҒАН** (мейәс) *и.* арт сөй — *задний шпиль (в домашнем ткачестве)*

**АРТ БҮКӘН** (һаҡмар) *и.* артҡы күкрәк — *задняя подушка (на телеге)*

**АРТ ЙОРТ** (дим, урта) *и.* ата йорто — *отчий дом*

**АРТҠАРЫ** (гәйнә, һаҡмар) *с.* алыҫтағы — *дальний.* Артҡары йаланға барҙыҡ (гәйнә)

**АРТҠЫ БИЛЛЕК** (урта) *и.* һыртлыҡ — *продольник (у шлеи)*

**АРТҠЫ СИКӘ** (мейәс) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**АРТҠЫ СӨЙҘӘ** (эй) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**АРТҠЫ ҺҮМЕС** (эй) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости.* Артсүмес (дим, ҡариҙел, урта урал), артчүмеч (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш)

**АРТҠЫ ӘЙБЕР** (дим) *и.* ҡыҙ әйберҙәре — *вещи невесты*

**АРТЛАС** (мейәс) *с. атлас (материя).* Артлас күлдәк

**АРТЛАУ** (туҡ-соран) *ҡ.* ырамау, алға бармау — *не везти.* Маллар артланы

**АРТЛЕПКӘ** (дим) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**АРТЛЫ БҮКӘН** (урта урал) *и.* ултырғыс — *стул*

**АРТЛЫ САНА** (урта) *и.* кашауай сана — *кошёвка*

**АРТЛЫШ** (урта) *и.* артыш — *можжевельник*

**АРТМАҠ** (дим) *и.* һарай башын баҫтырған һайғау — *жерди, придавливающие соломенные крыши*

**АРТМЫШ** (салйоғот) *и.* килмешәк — *пришелец*

**АРТҺЫҘ УРЫНДЫҠ** (дим) *и.* артһыҙ ултырғыс — *табуретка*

**АРТЫМНЫ** (ҡариҙел) *с.* кенәсел — *злопамятный.* Ул бик артымны, йомош-тулаҡ итеп булмай

**АРТЫУ** (урта) *ҡ.* артмаҡлау — *навьючивать*

**АРУҠ** (урта, һаҡмар) *р.* арыу уҡ — *изрядно, достаточно.* Аруҡтан бире йамғыр (һаҡмар)

**АРЫ БУМАНЫ** (урта) *р.* күп тә үтмәне — *прошло немного времени.* Ары буманы, ҡыҙылтар гилеп тә йетте

**АРЫЙ** (дим, урта) *р.* мәртәбә — *раз.* Ике арый әйттеләр. Ике арый ҡайтып китте (дим). Өс арый килте инте беҙгә (урта)

**АРЫҠЛАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* 1. Арыу, хәлһеҙләнеү — *уставать, обессилеть.* 2. (ҡариҙел, һаҡмар) Ябығыу — *худеть.* Мал да, кеше лә арыҡланы ул саҡта (ҡариҙел). Арыҡтау (көнсығыш диалект)

**АРЫҠСАЙ** (салйоғот) *с.* арыҡ — *тощий*

**АРЫҠҪЫҘ** (ырғыҙ) *с.* арымаҫ — *неустающий.* Ат арыҡҫыҙ булмай

**АРЫҠ-ТУЛАҠ** (урта, һаҡмар) *с.* арыҡ — *тощий.* Арыҡ-тулаҡ малы менән килде (һаҡмар)

**АРЫЛЫУ** (урта) *ҡ.* шәбәйеү — *выздоравливать.* Арылып йеттениһәм, барырға тура килер

**АРЫТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тағатыу — *распутать.* Эсәк арытыу

**АРЫУҒА: АРЫУҒА КЕЙЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* яҡшыға кейеү — *одеваться на выход.* Бу бәлтәне арыуға кейерсен инте

**АРЫШ** (арғаяш, салйоғот) *и.* тәртә — *оглобля.* Сана арышы, арба арышы

**АРЫШ АНАҪЫ** (дим) *и.* арыш атаһы — *спорынья.* Арыш анаһы (эйек)

**АРЫШ БАТШАҺЫ** (мейәс) *и.* арыш атаһы — *спорынья*

**АРЫШБАШ** (һаҡмар) *и.* аҡтамыр — *пырей*

**АРЫШ ИНӘҺЕ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* арыш атаһы — *спорынья.* Арыш инәҫе *(дим)*

**АРЫШТӨП** (ҡариҙел) *и.* арыш ҡамылы — *стерня ржи.* Арыштөпкә йарауай сәсәләр

**АРЫШУТ** (һаҡмар) *и.* ялағай — *зарница*

**АРЫШҺУҒАН** (дим, эйек) *и.* ҡара һуған — *лук-чернушка*

**АС** (ҡыҙыл, туҡ-соран, урта) *с.* буш — *пустой (о колосе).* Быйыл һоло ла ас булты (урта)

**АСА I** (гәйнә, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* бәҫ — *иней на деревьях.* Ағасҡа аса бәйләнгән (төньяҡ-көнбайыш)

**АСА II** (гәйнә, урта урал) *и.* балаҫҡа төшөрөлгән дүрткел биҙәк — *квадратный узор на домотканых половиках.* Аһа (туҡ-соран). Аһалы балаҫ һата

**АСА III** (арғаяш) *и.* бармаҡ араһы — *развилина пальцев.* Айағының асаһы шешә лә гитә

**АСА АРБА** (арғаяш) *и.* оҙон арба — *дроги*

**АСАБАЛАН** (салйоғот) *и.* миләш — *рябина*

**АСАБЫ** (һаҡмар) *и.* күн биҙәге — *узор на коже.* Күнгә асабы төшөрәләр, ағас эшләп күндә туҡмап узыр эшләгәннәр

**АСАҒОЙРОҠ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* айырығойроҡ — *уховёртка*

**АСАЙ** (дим) *с.* анһат — *легкий*

**АСАҠАЙ** (арғаяш, һаҡмар) *и.* айырығойроҡ — *уховёртка*

**АСАЛАҠ** (ҡыҙыл) *и.* айырығойроҡ — *уховёртка*

**АСАЛАҠ-ЖОМАЛАҠ** (дим) *и.* ни арба, ни сана булмаған көҙгө ваҡыт — *осенняя распутица*

**АСАЛАҠ-ЙОМАЛАҠ: КҮҘЛӘРЕН АСАЛАҠ-ЙОМАЛАҠ ИТЕҮ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *ҡ.* күҙ йомғолау — *моргать.* Күҙләрен асалаҡ-йомалаҡ итеп ултырҙы ла ҡапыл ырғып тороп сығып китте

**АСАЛАНЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* насар юлға баҫыу — *стать на дурной путь, испортиться*

**АСАЛЫ БАЛАҪ** (гәйнә, урта урал, эйек) *и.* биҙәкле балаҫ — *домотканый половик с узорами.* Асалы палас (төньяҡ-көнбайыш)

**АСАЛЫҒОЙРОҠ** (ҡыҙыл, мейәс, салйоғот) *и.* айырығойроҡ — *уховёртка*

**АСАМА** (урта) *и.* саталап бәйләнгән кәбән башына һалына торған сыбыҡ — *гнет из нескольких ветвей для стога*

**АСАМАЙ** (минзәлә, эйек-һаҡмар) *и.* атлама — *стропила*

**АСАМАЙ: АСАМАЙ БУЛЫУ** (арғаяш) *ҡ.* аймылыш булыу — *расходиться, разойтись в пути.* Икебеҙ ике йулдан китеп асамай булдыҡ

**АСАН** (арғаяш) *с.* 1. Сибек — *хилый.* Асан ат. 2. (арғаяш, эй) Ябыҡ — *тощий.* Асан ғына ине бәләкәй сағында, ҡалай буған (эй)

**АСАРБАҠ** (урта урал) *с.* 1. Ҡарун — *жадный.* 2. Бирән — *обжора.* Ғүмер буйына асарбаҡ булды

**АСА ТАРАҠАН** (мейәс) *и.* айырығойроҡ — *уховёртка*

**АСА ТОЙАҠЛЫ** (һаҡмар) *с.* айыры тояҡлы — *парнокопытный.* Киленгә аса тойаҡлы мал бүләк итәләр

**АСБИЛ** (һаҡмар) *и.* нескә бил — *тонкая талия.* Асбиленән һығып тотоп бырғыным

**АСИКМӘК** (арғаяш, салйоғот) *и.* әсе икмәк — *хлеб из квашеного теста*

**АСҠАБЫРҒА** (эйек) *и.* ҡулан ҡабырға — *первые ребра от ключицы*

**АСҠАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *с.* ҡаҡса — *поджарый.* Ашаһа ла көрәймәй, үҙенең бөтмөшө шулай асҡаҡ (урта)

**АСҠАҠҺЫУ** (мейәс, һаҡмар) *ҡ.* асығыу — *голодать.* Асҡаҡһып торам әле (һаҡмар)

**АСҠАРНАЙ** (эйек) *р.* ас ҡарынға — *натощак*

**АСҠАРЫН** (арғаяш) *и.* аскернә — *обжора.* Кит, асҡарынданып йөрөмә

**АСҠУСҠАР** (дим) *и.* ҡусҡар — *улитка*

**АСҠЫ** (урта) *и.* аслыҡ — *голод.* Асҡы саҡта булды, әйбит

**АСҠЫЛ** (арғаяш, эй) *с.* әскелт — *кисловатый.* Асҡылт (дим). Аштан ниндәйҙер асҡылт тәм килә (арғаяш)

**АСҠЫЛТ** (дим) *и.* татырлауыҡ — *солончак.* Беҙнең ҫыу буйында ла асҡылтлар бар

**АСҠЫС** (дим) *и.* кран — *кран (сепаратора)*

**АСЛАН: АСЛАН АЛАҒАЙЫМҒА** (урта) *р.* алъюҫыҡҡа — *понапрасну.* Машинаны аслан алағайымға өйөрөлтмәгеҙ

**АСЛАНТЫРЫУ-РАЗЛАНТЫРЫУ** (урта) *ҡ.* кеше араһын боҙоу — *вносить разлад.* Аслантырып-разлантырып йөрөгән кеше ул

**АСЛАУ** (һаҡмар) *с.* буш — *пустой (о колосе).* Аслау бойҙай буһа, ашлыҡ кәүен була. Астау (урта урал)

**АСЛЫҠ** (салйоғот) *и.* татырлауыҡта үҫкән үлән — *трава, растущая на солончаке*

**АСМАНДАН** (һаҡмар) *р.* көтмәгәндә — *неожиданно.* Асмандан килеп сығып эште харап итте

**АСМУХА: АСМУХАЛЫ СӘЙ** (салйоғот) *и.* бөртөклө сәй — *зернистый чай*

**АСМӘЙЕЛ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* аскернә — *обжора*

**АСТА** (урта урал) *и.* сыраҡ ҡыҫтырғыс — *лучинодержатель.* Аста тигән өс тарбаҡ тимергә сыраҡ ҡыҫтырып, йөн иләп утыра торғайнылар

**АСТАР I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Кәрниз — *карниз (крыши).* 2. Арба күкрәге — *подушка (телеги)*

**АСТАР II** (арғаяш, гәйнә) *и.* әҙеп — *оторочка, подкладка (из материи).* Аҫтар (мейәс)

**АСТЫРМА** (урта урал) *и.* асмалы тәҙрә — *створчатое окно.* Астырмағыҙ бармы, асығыҙ әле

**АСУАТ** (арғаяш) *и.* ҡылған — *ковыль*

**АСЫ** (дим) *и.* татыр — *солончак.* Ҫыйырлар асыла йөрөй

**АСЫ БАЛАН** (салйоғот) *и.* миләш — *рябина*

**АСЫҒАУЫҘ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* ваҡ бәлеш — *беляш.* Асығауыҙға бешергәндә ҡалаҡ белән һурпа һалып сығалар (туҡ-соран)

**АСЫҒЙАРЫҠ** (ҡыҙыл, урта урал) *с.* әскерһеҙ — *простодушный.* Асыҡ-йарыҡ (көньяҡ диалект)

**АСЫҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* аҡлан — *поляна.* Ағаслыҡ араһында асыҡта йөрөйҙәр малҡайҙар (ҡыҙыл)

**АСЫЛМА I** (арғаяш) *и.* *форточка*

**АСЫЛМА II** (ҡариҙел) *с.* аҫмалы — *висячий.* Асылма лампы

**АСЫЛМА: АСЫЛМА ТӘҘРӘ** (дим, ҡариҙел) *и.* асмалы тәҙрә — *створчатое окно*

**АСЫЛМА ГӨЛ** (гәйнә) *и.* үрмәле гөл — *вьюнок*

**АСЫЛЫ I** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *м. һ.* ахыры — *наверное.* Асылы, ул китмәҫкә уйлай микән (эйек-һаҡмар)

**АСЫЛЫ II** (дим) *и.* татырлауыҡ — *солончак.* Малдар асылыла

**АСЫЛЫҠ I** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* 1. Татырлауыҡ — *солончак.* 2. Татырҙа үҫкән үлән — *трава, росшая на солончаке*

**АСЫЛЫҠ II** (арғаяш, салйоғот) *и.* әсетке — *закваска*

**АСЫЛЫҢҠЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* һалынҡы — *обвислый*

**АСЫЛЫШ: АСЫЛЫШТЫ БУЛЫУ** (эй) *ҡ.* асыуланышыу — *разругаться.* Илле тәңкә аҡса түләмәйем тип туғандар менән асылышты булыпумай инде

**АСЫМНЫ ТӘҘРӘ** (дим) *и.* асылмалы тәҙрә — *створчатое окно*

**АСЫНЫУ** (дим, ҡариҙел) *ҡ.* әсенеү — *переживать; страдать*

**АСЫҘЫУ** (урта) *ҡ.* аяҙытыу — *проясниться*

**АСЫУ** (дим, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* әсеү — *киснуть*

**АСЫУАТ** (арғаяш, мейәс. эй) *и.* 1. Татырлауыҡ — *солончак.* 2. Татырҙа үҫкән үлән — *трава, росшая на солончаке*

**АСЫУҺЫРАУ** (арғаяш) *ҡ.* әсе ашарға теләү — *хотеть, желать кислого, горького.* Асыһырау (эй)

**АҪА** (дим) *и.* бәҫ — *иней.* Аса (ҡариҙел)

**АҪАБА** (һаҡмар) *и.* 1. Аймаҡ — *род.* Бер аҫаба баллары. 2. (урта) Аймаҡ башлығы — *старейшина.* Аҫабаһынан ризалыҡ алалар

**АҪАЛЫ** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *с.* биҙәкле — *узорчатый.* Аҫалы балаҫ. Асалы (төньяҡ-көнбайыш)

**АҪАТ** (дим, урта) *р.* анһат — *легко.* Ҡаҫылай аҫат ҡына уйлайһың (урта)

**АҪАУ** (һаҡмар) *с.* 1. Күпте күргән — *видавший виды (о человеке).* 2. (мейәс) Ярһыу — *горячий, разъяренный (о скотине)*

**АҪҠАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, һаҡмар) *с.* аҡһаҡ — *хромой.* Аҫҡаҡ күп йөрөр (мейәс)

**АҪҠАНДАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* аҡһаҡлау — *хромать*

**АҪҠАУ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, һаҡмар, әй) *ҡ.* аҡһау — *хромать*

**АҪҠОЙРОҠ** (һаҡмар) *и.* аҡ алабута — *белая лебеда*

**АҪҠОРҺАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, һаҡмар) *и.* аҡһырғаҡ — *чемерица.* Ҡаҙайаҡ, аҫҡорһаҡ, мәтрүшкә ҡушып бәйләнгән ҡайын миндеге (урта)

**АҪҠЫ ИТӘК** (салйоғот) *и.* аҫҡы балитәк — *нижняя оборка (платья)*

**АҪҠЫЛЫҠ I** (арғаяш) *и.* урҙа — *шест, прикрепляемый к стене для развешивания вещей*

**АҪҠЫЛЫҠ II** (урта урал, әй) *и.* аҫҡаҡ — *дерево, на которое вешают посуду при приготовлении пищи на открытом огне.* Асҡылыҡ (гәйнә). Асҡылыҡны палаткаға йаҡын ҡуйма

**АҪҠЫМАУ** (һаҡмар) *ҡ.* йонсомау, интекмәү — *не мучиться.* Ауылда бөтәһе лә бар, ул йаҡтан аҫҡымайбыҙ

**АҪҠЫМСЫ** (мейәс, урта) *с.* кенәсел — *злопамятный*

**АҪҠЫРҒАҠ I** (һаҡмар) *и.* аҡһырғаҡ — *чемерица*

**АҪҠЫРҒАҠ II** (мейәс, урта, һаҡмар) *и.* аңҡау — *нёбо*

**АҪ: АҪ МЕНДӘР** (дим) *и.* күпсек — *думка (подушечка)*

**АҪТАР** (ҡыҙыл, мейәс, эйек) *и.* 1. Инес — *подкладка.* 2. (төньяҡ-көнбайыш, урта) Өҫкө итәк — *оборка на талии платья.* 3. (мейәс) Әҙеп — *оторочка (из материи)*

**АҪТЫҢҠЫ, АСТЫҢҠЫ** (ҡариҙел) *с.* аҫҡы — *нижний.* Ҡунаҡларны аҫтыңҡы өйгә алып киттеләр

**АҪТЫСЫНАЙАҠ** (арғаяш, мейәс) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце.* Аһтысынайаҡ (салйоғот)

**АҪЫЛМАЛЫ** (дим) *с.* аҫмалы — *подвесной.* Аҫылмалы йоҙаҡ

**АҪЫЛЫ** (һаҡмар) *м. һ.* ахыры — *наверное.* Алып киткәннәр, аҫылы

**АҪЫРАУ: АҪЫРАУ ӨЙӨРҘӘК** (урта, эйек) *и.* йорт өйрәге — *домашняя утка;* ◊ аҫырау күгәрсен (һаҡмар) өй күгәрсене — *домашний голубь;* аҫырау ҡуйан (урта) йорт ҡуяны — *кролик;* аҫырау сейә (дим) баҡса сейәһе — *садовая вишня;* аҫырау әсәй, аҫырау инәй (урта, эйек) сит кеше тәрбиәһендәге әсә — *одинокая мать, находящаяся на иждевении у чужих людей*

**АҪЫУ: СИРӘМ АҪЫУ** (дим) *ҡ.* сирәм һөрөү — *поднимать целину.* Асыу (эйек). Ағайымнар сирәм аҫырға барғаннар

**АТА: АТА БИҘРӘ** (урта) *и.* ҙур биҙрә — *большое ведро.* Ата биҙрәләр белән гитте; ◊ ата хатын (төньяҡ-көнбайыш) үткер хатын — *бойкая, смелая женщина;* ир-ат ҡыланышлы хатын — *мужеподобная по характеру женщина*

**АТА АРЫШ** (арғаяш, гәйнә, мейәс, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* арыш атаһы — *спорынья*

**АТАБА** (ҡыҙыл) *и.* аҫаба — *вотчинник*

**АТАБАШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ғаилә башлығы — *глава семьи*

**АТАБИЛСӘН** (дим, һаҡмар) *и.* ҡара билсән — *осот черный*

**АТАГӨСӨК** (дим, әй) *и.* арлан — *кобель*

**АТАҒОР** (мейәс, һаҡмар) *и.* әтәс ҡор — *косач*

**АТАҒОРТ** (дим, урта, һаҡмар) *и.* әреғорт — *трутень*

**АТАЙ-БОТАЙ** (ҡыҙыл) *р.* әләм-борхан — *кое-как.* Тегене ситкөйөнә атай-ботай апарып индерҙе

**АТАЙ ҒАРТ** (арғаяш) *и.* морондоҡ атай — *посаженый отец*

**АТАЙҘАУЫС** (арғаяш, салйоғот) *и.* ҡыҙылтүш — *зяблик*

**АТАҠ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* 1. Яманат — *дурная слава.* Йуҡтан ғына атағы сыҡты (ырғыҙ). 2. Исем — *имя.* Барсын тигән атағым бар (туҡ-соран)

**АТАҠАЙ** (дим, ҡариҙел, урта урал, һаҡмар) *р.* атас — *похожий на отца.* Атаҡас (мейәс, урта урал)

**АТАҠЛЫ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *с.* данлыҡлы — *славный.* Атаҡлы урын тип килеп ауыл ҡорғаннар (ырғыҙ)

**АТАҠТАЙ** (арғаяш) *с.* ҙур, бик ҙур — *большой, огромный*

**АТАҠЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* уйнашсы — *развратник*

**АТАЛАНЫУ** (туҡ-соран, урта) *һ.* аҙаланыу, ҡабаланыу — *рваться, сильно торопиться.* Төлкөсура биш-алты таштан ғына һалынған баҫманан аталанып сығып килгәндә тайып йығыла йаҙҙы (урта)

**АТАЛАУЫС** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* бешкәк — *пахталка*

**АТАЛҒЫ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* арҡыры балта — *тесло*

**АТАЛМА** (дим) *и.* атама — *название.* Һәр кем үҙ ырыуының аталмаһын белеү тейеш

**АТАЛМЫШ** (урта) *и.* атама — *название.* Ул ҡартның аталмышы ғына мулла инте

**АТАЛЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* ата — *самец (по отношению к птицам).* Аталыҡ ҡаҙ. Аталыҡ өйрәк. Аталығы ҡара, инәлеге сыбар була ҡорҙоң

**АТАМ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* 1. Атайым — *мой отец.* 2. (арғаяш, салйоғот) Морондоҡ атай — *посаженый отец*

**АТАМА ИСЕМ** (урта, һаҡмар) *и.* ҡушамат — *прозвище*

**АТАМАНЛАШЫУ** (урта) *ҡ.* ҡушарланыу — *стать парными.* Атаманлашып алабыҫ та уйнайбыҙ

**АТАН** (һаҡмар) *и.* дөйәнең беренсе балаһы — *верблюжонок-первенец*

**АТАНЙАР** (һаҡмар) *и.* сиңерткә төрө — *вид кузнечика*

**АТАҢ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* атайың — *твой отец*

**АТАҢЛАП: АТАҢЛАП ЙӨРӨҮ** (урта) *ҡ.* аҙаланыу, ҡабаланыу — *рваться, сильно торопиться.* Балдаҡ үҙенә түгелдер, берәй ҡыҙға бирергәләр, йуғиһә ул тиклем атаңлап йөрөмәҫ ине

**АТ АРБАҘЫ** (арғаяш) *и.* ат аҙбары — *конюшня*

**АТАРЖЫН** (дим) *и.* айыу сиңерткәһе — *кобылка (вид стрекозы)*

**АТАРЫШ** (һаҡмар) *и.* зәңгәр сәскә — *василек голубой*

**АТА СӘСКӘ** (ҡыҙыл) *и.* ҡыҫыр сәскә — *пустоцвет*

**АТА ТӨЙӨНӨ** (ҡыҙыл) *и.* күмәгәй — *кадык*

**АТАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡалдау — *залежь.* 2. Болон — *луг.* 3. (урта) Аяҙ — *лужайка (лесная).* Баҡсалар йулды ике йаҡлап матурлап түңәрәк аҡландарҙа, атауҙарҙа утырған

**АТАУА** (урта урал) *и.* ҡурпы — *отава*

**АТАУЛЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* атаҡлы — *знаменитый, известный*

**АТА ҺӨЙӘГЕ** (урта) *и.* күмәгәй — *кадык*

**АТА ҺУҒАН** (һаҡмар) *и.* ҡышҡы һуған — *батун*

**АТАҺЫ** (арғаяш, ҡыҙыл, урта) *и.* ҡатындың иренә өндәшеү һүҙе — *слово-обращение жены к мужу*

**АТАҺЫН** (ҡыҙыл) *м. һ.* юҡлыҡ төшөнсәле модаль һүҙ — *модальное слово в значении отрицания.* Түрә кигән тейҙәр, атаһын, бы ҡараңғы ауылға кимәҫ

**АТАШ I** (һаҡмар) *и.* тартына белмәгән кеше — *беспардонный*

**АТАШ II** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* аҡыш — *лупоглазый*

**АТА ШАЙТАН** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эй) *и.* шаталаҡ — *балагур.* Шул Зөбәрйәт, ата шайтан, ҡыҙҙарҙы эпкиткәндер әле (ҡыҙыл)

**АТА ШЕШЕК** (эйек-һаҡмар) *и.* һыҙлауыҡ — *фурункул*

**АТАШЛАУ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *ҡ.* аша атлау — *перешагнуть*

**АТАШЛЫҠ** (гәйнә) *и.* арыш атаһы — *спорынья*

**АТАШТАНЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Айбарланыу — *стать мужественным.* 2. Тәкәбберләнеү — *возгордиться*

**АТБАРМАҠ** (гәйнә) *и.* урта бармаҡ — *средний палец*

**АТБАШСЫ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* кейәү егете — *шафер*

**АТ БОРСАҒЫ** (мейәс, урта) *и.* 1. Кәрешкә — *вика.* 2. (эйек) Ҡара борсаҡ — *бобы*

**АТИҪӘ** (дим) *р.* юғиһә — *а то, иначе.* Мин йаратмайым атиҫә

**АТ ЙАБЫМЫСЫ** (арғаяш, салйоғот) *и.* ат ябыуы — *попона*

**АТЙАЛҒАШ** (гәйнә) *и.* улаҡ — *колода (водопойная)*

**АТ: АТ ҠАРАТЫУ** (арғаяш, ҡыҙыл) *ҡ.* атты бәйгегә әҙерләү — *подготовка лошади к скачкам*

**АТ ЙЫУАҺЫ** (ҡыҙыл) *и.* әтмәкәй — *лук линейный*

**АТ: АТ КЕЙЕНДЕРЕҮ** (эйек) *ҡ.* ат егеү — *запрягать лошадь*

**АТКҮҘ I** (дим, урта) *с.* аҡыш — *лупоглазый*

**АТКҮҘ II** (ҡариҙел) *и.* бәләкәй генә тимер туҫтаҡ — *маленькая металлическая чашка*

**АТҠАЙАҠ** (ҡыҙыл) *и.* атҡы — *стрела с грузом на конце, пускаемая без лука*

**АТҠАРЫ** (гәйнә) *с.* арғы — *дальний*

**АТҠАТАШ** (гәйнә) *и.* биш таш уйыны — *игра в пять камешков*

**АТ ҠОЙРОҒО** (ҡариҙел) *и.* атҡолаҡ — *щавель конский*

**АТҠОЛАҠ** (дим) *и.* әрекмән — *лопух*

**АТ ҠУҘҒАЛАҒЫ** (гәйнә, дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* атҡолаҡ — *щавель конский.* Ат ҡуҫҡалағы (арғаяш), ат ҡуһҡалағы (салйоғот)

**АТҠЫ, АТҠЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* атҡолаҡ орлоғо — *семена конского щавеля*

**АТҠЫЙ I** (арғаяш, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡаҙҙың бәләкәй ҡанаты — *маленькое крылышко гуся.* 2. Атҡы — *стрела с грузом на конце, пускаемая без лука*

**АТҠЫЙ II** (минзәлә) *и.* аштырып һөйләүсе кеше — *человек, который преувеличивает*

**АТҠЫС I** (арғаяш) *и.* мәргән — *стрелок.* Атҡыс буғандар боронғо буайҙар

**АТҠЫС II** (дим) *и.* шөңгөрҙәк — *хлопушка*

**АТЛАҒАНКӨН** (гәйнә) *и.* шишәмбе — *вторник*

**АТЛАМ** (һаҡмар) *и.* аҙым — *шаг.* Бы ат атламға йаҡшы

**АТЛАМА I** (урта) *и.* 1. Кәбән башына һалына торған сыбыҡ — *гнет из нескольких ветвей для стога.* 2. (ҡариҙел, урта) Нығытҡыс — *скоба.* Аттама (ҡыҙыл)

**АТЛАМА II** (урта) *и.* 1. Ыңғырсаҡ ҡанаты — *лопатки седелки.* 2. Ышлыяның бүленеп төшөп торған ҡайыштары — *поперечники шлеи.* Аттама (ҡыҙыл)

**АТЛАМНЫ** (һаҡмар) *с.* аҙымлы — *ходкий (о лошади).* Атламны мал. Аттамды (ҡыҙыл)

**АТЛАНМА** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* эйәр — *седло*

**АТЛАН-САТЛАН** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* аша-маша — *кое-как, редко.* Атлан-сатлан ғына итәм дә тегәм

**АТЛЫҠ** (урта) *с.* исемле — *именной.* Атлыҡ ҡарағай

**АТЛЫҠСА** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* утлыҡ — *ясли (для сена)*

**АТМА I** (урта) *и.* атлама — *обойма*

**АТМА II** (дим) *и.* сүмес ау — *сачок*

**АТНА АРТЫ** (ҡариҙел) *и.* шәмбе — *суббота*

**АТНАКИС** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* кесаҙна — *четверг*

**АТНАКӨН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йома — *пятница*

**АТНАКӘ** (урта) *и.* сәбәп — *причина.* Уларҙың бер атнакәһе барҙыр ул

**АТОЛАТАЙ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* ата-баба — *предки*

**АТ ОСҠОЛАУ** (мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ат ослап егеү — *запрячь цугом*

**АТРАҠЛАУ** (гәйнә) *ҡ.* аш талымлау — *быть разборчивым в пище.* Атыраҡтау (арғаяш, урта урал). Бәндә бик атыраҡтаған һәҙер (арғаяш)

**АТРАСМАН** (урта урал) *и.* һары умырзая — *горицвет весенний*

**АТРАУ** (туҡ-соран) *и.* атау, утрау — *остров.* Дирмән тоҡтан урынды атрау тейбеҙ

**АТРУП** (дим, урта) *и.* һәр кешегә бүленеп бирелгән ер участкаһы — *отруб*

**АТРУС** (туҡ-соран) *и.* үҫенте — *отросток.* Әүәле гел ҡалын ағас, урман тей торғайныҡ, хәҙер атруслары ғына утыра

**АТ СЕБЕНЕ** (салйоғот, һаҡмар) *и.* һуҡыр себен — *мошка*

**АТ СОЛОҒО** (арғаяш) *и.* бөгәлсән — *овод лошадиный*

**АТСЫҘ БАРМАҠ** (минзәлә) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**АТТИРЛЕК** (һаҡмар) *и.* тирлек — *потник (седла)*

**АТ ТОЙАҒЫ ҮЛӘНЕ** (ҡариҙел) *и.* үгәй инә үләне — *мать-и-мачеха*

**АТ ТОЙАҠ ПЕЧИН** (гәйнә) *и.* үгәй инә үләне — *мать-и-мачеха*

**АТ ТЫРНАҒЫ** (һаҡмар) *и.* тояҡ — *копыто (лошади)*

**АТУ, АТЫУ** (туҡ-соран, урта) *т.* 1. Юғиһә — *а то.* Ҡара, ату минең уахытым йуҡ (урта). 2. (туҡ-соран, һаҡмар) *к.* эйе — *да.* Атыу, үҙем бармай кем барһын (туҡ-соран)

**АТЫЙ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* атайға өндәшеү һүҙе — *слово-обращение к отцу*

**АТЫЛМАҠ** (арғаяш) *и.* бәүелсәк — *качели*

**АТЫНҒЫС** (төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран) *и.* бәүелсәк — *качели*

**АТЫНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран) *ҡ.* бәүелеү — *качаться.* Баллар сәңгелдәк атыналар (туҡ-соран)

**АУ: АУ АРҠАЛЫҒЫ** (арғаяш) *и.* ауҙың өҫкө һәм аҫкы арҡандары — *верхние и нижние веревки сети;* ◊ ау балаҫы (дим) ауҙың эске ҡаты — *внутренняя часть сети;* ау инәҫе *(ауҙың тышҡы ҡаты)* — *наружная часть сети*

**АУА** (гәйнә, ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* һауа — *воздух.* Ана ғалай ауанан осоп киләләр (ҡыҙыл)

**АУАЗ** (минзәлә) *и.* тауыш — *звук.* Мылтыҡ ауаздары ишетелә

**АУАҠ** (дим) *с.* ваҡ — *мелкий.* Ауаҡ бесән

**АУАЛАТА: АУАЛАТА ТЕЙӘҮ** (арғаяш, ҡыҙыл) *ҡ.* бейек тейәү — *грузить высоко;* ◊ ауалатып ҡарау *(өҫкә ҡарау)* — *смотреть наверх.* Өйҙө ауалатып ҡарап сыкты (арғаяш)

**АУАН I** (һаҡмар, эй) *с.* 1. Тәүәккәл — *решительный.* Ҡыҙыр ғарт бик ауан була. 2. (арғаяш, ҡыҙыл) Еңел аҡыллы — *легкомысленный.* 3. (ырғыҙ) Ғәмһеҙ — *беспечный*

**АУАН II** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта урал) *с.* 1. Арыҡ — *кляча (о лошади).*2. (урта урал) Сабан — *ленивый (о лошади)*

**АУАРА: АУАРА БУЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* миңрәүләнеү — *отупеть.* Уйлай-уйлай башым ауара булды инде

**АУАРАЛАНДЫРЫУ: КҮҢЕЛЕН АУАРАЛАНДЫРЫУ** (урта) *ҡ.* күңелен биләп алыу — *овладеть (душой).* Йелбәҙәк ҡыҙ күңелен ауараландырырға күп кәрәкме ней

**АУҘАРЫУ** (дим) *ҡ.* уҙғарыу — *провести.* Убырҡаларҙы ауҙарып йебәрә торғайныҡ

**АУҘАРА: АУҘАРА ТЕЙӘҮ** (эйек) *ҡ.* бик күп тейәү — *слишком много нагрузить*

**АУҘАРЫУ: КӨТӨҮ АУҘАРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* көтөүҙе тау йәки ҡалҡыулыҡтың икенсе яғына ҡыуыу — *гнать стадо на противоположный склон горы или возвышенности.* Көтөүҙе Көндөғайыш тауына ауҙарып йебәрәбеҙ

**АУҘАУА** (мейәс, салйоғот, урта, эйек) *и.* тол ҡатын — *вдова.* Ауҙаһа (арғаяш), уҙауа (эй)

**АУҠАН** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *с.* аулаҡ — *укромный, глухой.* Ҡортҡа ағас башында ауҡан була (эйек-һаҡмар). Ауҡам (ҡариҙел)

**АУҠЫН-ТЫУҠЫН** (һаҡмар) *р.* ауа-түнә — *переваливаясь.* Ат әле һыртлама көрткә батып, әле ҡатыға тойаҡ төртөп, ауҡын-тыуҡын күпме йуртҡандыр

**АУЛАҒ ӨЙ** (мейәс) *и.* кейәү өйө — *дом, предоставленный жениху и невесте в дни свадьбы*

**АУЛАРА: АУЛАРА КИЗЕҮ** (гәйнә) *и.* кизеү — *повальная болезнь.* Аулара кизеү йәбеште

**АУЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Тынысландырыу, йыуатыу — *успокаивать.* 2. Әүрәтеү — *развлекать.* Йарай инде, күңелен аулап алып йөрөгәс. Ауҙау (урта урал). Үҙ күңелен үҙе ауҙап йыуана ла йөрөй. 3. (урта) Яңылышыу — *ошибаться.* Иҫләрем аулай

**АУМАЛАТЫУ** (мейәс) *ҡ.* аунатыу — *валять*

**АУМАЛЫ** (мейәс) *с.* аумаҡай — *непостоянный*

**АУМАЛЫ-ТҮКМӘЛЕ: АУМАЛЫ-ТҮКМӘЛЕ БУЛЫУ** (һаҡмар) *р.* аңҡы-тиңке булыу — *сбиться с толку.* Аумалы-түкмәле булып йөрөймөн

**АУМАРҘЫ-ТҮКМӘРҘЕ** (ҡыҙыл) *с.* үҙгәреүсән — *изменчивый.* Донйа аумарҙы-түкмәрҙе инде ул

**АУМӘҺӘР** (һаҡмар) *с.* аумаҡай — *непостоянный*

**АУМӘҺӘРҘӘН** (һаҡмар) *р.* аңғармаҫтан — *невзначай.* Аумәһәрҙән әйтеп йебәргәйнем бит әле

**АУНАҠАЙ** (һаҡмар) *с.* аумаҡай — *непостоянный.* Аунаҡай, ҡайһы йаҡҡа аунағанын кем белһен

**АУНАҠСЫУ** (урта) *ҡ.* сайҡалыу — *качаться (о лодке)*

**АУНАҠТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* аунап ятыу — *валяться.* Көн буйы урындыҡта аунаҡтай

**АУНАУ** (гәйнә, дим, ҡыҙыл, мейәс, урта урал) *ҡ.* йығылыу — *валиться.* Уҡ барып тейгән көйөнә ат аунай шул йерҙә (дим)

**АУРАУ I** (гәйнә) *с.* ауырыу — *больной*

**АУРАУ II** (ҡыҙыл) *ҡ.* әүрәү — *увлечься*

**АУҪАҠ** (эй) *и.* уҫаҡ — *осина.* Ауһаҡ (арғаяш, мейәс, салйоғот), аусаҡ (гәйнә)

**АУҪЫН** (туҡ-соран, урта) *и.* 1. Зәңге — *цинга.* Ауыҙсын, аусын (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, эйек). 2. (ырғыҙ) Телбешмә — *ящур.* Ауырсын, ауырҫын (ҡариҙел, урта урал)

**АУҺАР** (урта) *с.* иҫәр — *глупый.* Был тиклем тә ауһар, аңһыҙ кеше булыр икән

**АУҺЫЛДАУ** (һаҡмар) *ҡ.* асылыу — *рассеяться, развлечься.* Кеше белән күңеле ауһылдап йөрөр ине, байағыса

**АУШАНДАУ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* сайҡалыу — *качаться.* Өйрәк һымаҡ аушандап аттап китте (ҡыҙыл). Аушаннау, аушаңнау (эйек-һаҡмар)

**АУЫҘ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* асыҡ ауыҙ — *разиня.* Әсәйем шикелде лә ауыҙ булмаҫ кеше (урта)

**АУЫҘ: АУЫҘ БЕШМӘҺЕ** (арғаяш, мейәс, һаҡмар) *и.* телбешмә — *ящур*

**АУЫҘҘАНМАУ** (мейәс, урта) *ҡ.* тыуғас та иммәү — *не сосать после рождения.* Тыуғандан ауыҙҙанманы был быҙауҡай, һөтөн эсереп үҫтерҙек (мейәс)

**АУЫҘҘАУ** (урта) *ҡ.* ауыҙ итеү — *попробовать на вкус.* Ауыҙлау (һаҡмар)

**АУЫҘҘАУЫҠ, АУЫҘҘЫҠ** (мейәс) *и.* телбешмә — *ящур*

**АУЫҘ ИҘЕЛМӘҺЕ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* телбешмә — *ящур*

**АУЫҘ ИҘЕЛЕҮ** (дим, эйек-һаҡмар) *ҡ.* телбешмә менән ауырыу — *болеть ящуром*

**АУЫҘЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* әйтеү — *сказать.* Барайыҡ тип ауыҙланһаң, өҙмәй ҙә ҡуймай ул

**АУЫҘЛЫҠ: АУЫҘЛЫҠ БУЛЫУ** (дим) *ҡ.* 1. Телбешмә менән ауырыу — *болеть ящуром.* 2. (эйек) Ауыҙҙың ике яҡ сите сейләнеү — *прение краёв губ*

**АУЫҘ ТАҘЫ** (һаҡмар) *и.* ауыҙ таҙы — *парша рта (болезнь овец)*

**АУЫҘ ӘҪПЕЛӘҮ** (мейәс) *ҡ.* телбешмә менән ауырыу — *болеть ящуром*

**АУЫҠ: АУЫҠ АТ** (арғаяш) *и.* шәп йөрөп, тиҙ арый торған ат — *лошадь с хорошим ходом, но быстро устающая.* Ауыҡ ат шәп бара ла тиҙ генә бөтә лә ғуйа

**АУЫЛ АРАҺЫ** (арғаяш, әй) *и.* урам — *улица*

**АУЫЛ КИҘЕҮЕ** (һаҡмар) *и.* киҙеү — *повальная болезнь*

**АУЫЛ-КҮРШЕ** (урта) *и.* күрше-күлән — *соседи.* Ауыл-күршеңте саҡырыб ашатаһың һуғым һуйғас

**АУЫЛ САНАҺЫ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар, урта) *и.* кашауай сана — *кошёвка.* Ауыл санаһы ҡунаҡҡа, йеңел-йелпегә йөрөй торған сана (эйек-һаҡмар)

**АУЫЛСЫ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар, әй) *и.* ауыл буйлап йөрөргә яратыусы кеше — *человек, любящий ходить по деревне.* Ауылсы астан ҡыҙырыр (һаҡмар)

**АУЫЛ ТУРҒАЙЫ** (урта) *и.* турғай — *воробей*

**АУЫМБАҠ I** (арғаяш) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**АУЫМБАҠ II** (арғаяш) *и.* аласыбар өйрәк — *пеганка*

**АУЫРЛАУ** (туҡ-соран) *ҡ.* ауыр күтәреп билгә көс төшөрөү — *болезнь поясницы от поднятия тяжестей.* Ауырҙау (мейәс)

**АУЫРЛЫ** (урта) *с.* ауырыу — *больной.* Йөрәк ауырлы ул минең

**АУЫРСА** (ырғыҙ) *и.* ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгән тоҙло шыйыҡ ҡорот — *жидкий подсоленый курут (заготавливается на зиму)*

**АУЫРСЫ** (арғаяш, төньяҡ-көнбайыш) *с.* ныҡ шәрбәтле — *пресладкий*

**АУЫРҪА** (дим) *с.* сөскөл — *пресный.* Ауырҫа, күңелгә тейә

**АУЫРҪЫУ** (дим) *ҡ.* күңелгә тейеү — *опротиветь (от пресной еды)*

**АУЫРТҮЛӘК** (ҡыҙыл, мейәс, урта, урта урал, һаҡмар, әй) *с.* баҫалҡы, тыныс тәбиғәтле — *степенный, спокойный.* Һай, ауыртүләк йегет икәнһең дә, ниндәй этлек күрһәттеләр һиңә, өн дә сығарманың (һаҡмар)

**АУЫРҺЫНЫУ** (салйоғот) *ҡ.* ауырыҡһыныу — *чувствовать себя больным*

**АУЫСҠАЛ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* онотоусан — *забывчивый*

**АУЫҪ БЕШМӘҺЕ** (арғаяш) *и.* телбешмә — *ящур.* Ауыһ бешмәһе (салйоғот)

**АУЫҪҠАЛ** (дим) *и.* 1. Миңрәү — *тупица.* 2. (урта) Ләпелдәк — *болтун.* 3. (дим) *с.* аумаҡай — *непостоянный.* Хисметдин әй ауыҫҡал да инде, асыуланҫа ҙа шунда уҡ ҫөйләшә ҙә китә

**АУЫУ I** (гәйнә, урта) *ҡ.* ҡайтарылыу — *свернуться (об острие кос, ножей).* Сарлағанда балтаның йөҙө ауған (урта)

**АУЫУ II** (ҡыҙыл) *ҡ.* артылыу — *перевалить (через гору).* Йанһарыға барғанда Баҙал тауын ауабыҙ

**АУЫШЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* сығыу — *вывихнуться.* Ҡул һөйәге ауышҡан, талыҡлап ҡуйҙым.

**АФЫН** (арғаяш, мейәс, салйоғот, әй) *и.* апһын — *жены родных братьев (по отношению друг к другу)*

**АХАҠ, АХЫҠ** (дим) *и.* аҡыҡ — *сердолик.* Ахуҡ (ҡариҙел)

**АХАЛЛА: АХАЛЛАҒА ТӨШӨҮ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* арып-талыу — *уставать, утомиться.* Ахаллаға төшөп, ҡараңғы төшкәс саҡ барып йеттек (туҡ-соран). Аһалламға төшөү (урта урал), аһаллаға төшөү (әй)

**АХ ИТЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* 1. Өлтөрәп тороу — *быть приветливым, гостеприимным.* 2. Ашҡыныу — *рваться.* Ҡайтырға ах итә лә тора. 3. (төньяҡ-көнбайыш) Интегеү — *мучиться.* Бала йүтәлләп ах итте әле

**АХҠАУ** (арғаяш) *ҡ.* аҡһау — *хромать.* Аның айағы ахҡай

**АХЛИМСКИ** (эйек) *с.* бына тигән — *замечательный.* Айамаған йәнен, түккән ҡанын ахлимски ҡыпсаҡ йегете

**АХМАЛ: АХМАЛҒА ТӨШӨҮ** (урта) *ҡ.* арып-талыу — *уставать, утомиться.* Беҙҙе күреүсе лә, белеүсе лә йуҡ, ә беҙ ахмалға төшөп алышабыҙ

**АХЫЙ** (ҡариҙел) *ы.* үкенеү ымлығы — *междометие сожаления.* Ахый, бармай ҡалам бит

**АХЫМДАУ** (арғаяш, урта урал) *ҡ.* боларыу — *бузить.* Улым алай ахымдап йөрөмәне (арғаяш)

**АХЫМСЫ** (арғаяш, урта урал) *с.* боласы — *бузотёр*

**АХЫРБАТ** (урта урал) *и.* аҙаҡ — *конец.* Донйа ахырбаты түгелдер әле

**АХЫРҒЫҒА** (арғаяш, әй) *р.* ахырға — *на конец.* Ахырғыға ҡаған йә уңа ла йә туңа (әй)

**АХЫРҒАҠ** (мейәс, әй) *и.* аҡһырғаҡ — *чемерица*

**АХЫРМАТ** (әй) *и.* ғәләмәт, йорат — *подобие.* Мин ней ҡапҡа ахырмат эштәп йөрөйөм

**АҺ** (туҡ-соран) *и.* ғазап — *мучение.* Ул бер туҡтамай үҙенең аһын һөйләне

**АҺАҠТАУ** (мейәс) *ҡ.* тын ҡыҫылыу — *задыхаться.* Аһаҡтап килеп йығылды

**АҺАРЫНЫУ** (салйоғот) *ҡ.* үтенеү — *умолять*

**АҺАУ** (салйоғот) *с.* 1. Аҙау — *коренной (зуб).* 2. Өйөр айғыры — *жеребец-вожак (в табуне)*

**АҺҠАҠ I** (ҡыҙыл) *с.* аҡһаҡ — *хромой*

**АҺҠАҠ II** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* аҫҡаҡ — *дерево, на которое вешают посуду при приготовлении пищи на открытом огне*

**АҺҠЫРҺАҠ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* аҡһырғаҡ — *чемерица*

**АҺ ОРОУ** (туҡ-соран) *ҡ.* һоҡланыу — *восхищаться.* Тырнаҡлы уҡа баҫҡан тип аһ ораһың инде

**АҺТЫ СЫНАЙАҠ** (салйоғот) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце*

**АҺЫЛ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* 1. Аҫыл — *благородный.* Аһыл аҡыл уйлағанса ахмаҡ эшен бөтөргән (һаҡмар). 2. Аҫыл — *драгоценный*

**АҺЫЛДАМ: АҺЫЛДАМҒА ТӨШӨҮ** (эй) *ҡ.* арыу, хәлһеҙләнеү — *уставать, обессилеть*

**АҺЫЛТЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* аҫылындырыу — *свешивать*

**АШ I** (арғаяш, мейәс, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Ашлыҡ — *хлеб.* Элек тә аш сәстеләр (урта урал). 2. (дим, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Аҡһым — *белок.* 3. (дим, эйек-һаҡмар) Крахмал. Ашҡа ҡатырылған тауар (дим)

**АШ II** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* эрен — *гной.* Шешеге аштаған, һәҙер йүнәлер (һаҡмар)

**АША** (дим, мейәс, ырғыҙ) *и.* ау бәйләү энәһе — *игла для вязания сети*

**АША: АША ЭСЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* артыҡ эсеү — *выпить чересчур много.* ◊ Аша һөйҙәшеү (мейәс, эй) эре һөйләшеү — *разговаривать свысока.* Аша һөйләшеү (урта). Аша бирмәү (һаҡмар) сер бирмәү — *не подавать вида.* Бер ҙә аша бирмәй торғайным

**АШАҒАРАУ** (урта) *с.* күрәш — *близорукий*

**АШАЙАҠ** (һаҡмар) *и.* ҡаҙанлыҡ — *кухня.* Балаларҙы ашайаҡ йағына сығарып тор әле.

**АШАҠАЙ I** (һаҡмар) *с.* ашай торған — *предназначенный кушанью.* Был ашаҡай нимә түгел

**АШАҠАЙ II** (һаҡмар) *и.* ашамһаҡ — *любитель поесть.* Ашаҡайға аш йетмәҫ, алаҡайға бар бөтмәҫ

**АША-ҠОША** (гәйнә) *р.* арҡыры-торҡоро — *как попало*

**АШАҠТАНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* аша атлау — *перешагнуть.* Кешене ашаҡтанырға ҡушмай туғайнылар

**АШАҠТАУ** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *ҡ.* аша атлау — *перешагнуть.* Кешене ашаҡтаһаң бәхете гәмей тейҙәр (эй)

**АШАМАҠ** (ҡариҙел) *ҡ.* ашау — *есть.* Ашамаҡ уаҡытына кил

**АШАМ-ЭСЕМ** (дим, ҡариҙел, эйек, эй) *ҡ.* ризыҡ — *пища.* Мында ашам-эсем йуҡ тип эйтә, тей (эй)

**АШАНДЫ** (дим, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* ризыҡ — *пища.* Тейендең үҙенә гүрә ашандыһы була инде (эйек-һаҡмар). Ашанты (урта). Ашанты йаҡлары шу хәҙәре әйбәт

**АШАРБА** (ҡариҙел) *и.* килен әйберен тейәгән арба — *телега с приданым невесты*

**АША-ТӨШӘ** (һаҡмар) *р.* арлы-бирле — *кое-как.* Мин был китапты аша-төшә генә ҡараным

**АШАУҘЫҠ** (арғаяш, салйоғот) *и.* ашъяулыҡ — *скатерть.* Ашаулыҡ (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, туҡсоран, урта, эйек-һаҡмар)

**АШАУЛЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ашамһаҡ — *любитель поесть.* Ул ашаулы бит, дүрт шүшкей белән сәй эстем тей

**АШАУЛ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* бер ауыл аша урынлашҡан ауыл — *населенный пункт через одну деревню.* Дүрт ир бала атаһын ашауылға йебәрҙеләр (һаҡмар)

**АША: АША ҺӨЙЛӘШЕҮ** (урта) *ҡ.* үҙенә ныҡ ышанып һөйләшеү — *разговаривать самоуверенно*

**АШАҺЫНДА** (арғаяш, мейәс) *р.* аръяғында — *на той стороне.* Силәбе ашаһында эштәй (арғаяш)

**АШ ИЖАУЫ** (мейәс) *и.* ағас ҡалаҡ — *деревянная ложка*

**АШ: АШ ЙЕРЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* бүгеү — *переедать.* Аш йыйыу (урта, эйек) эренләү — *гноиться.* ◊ Аш менәү (ҡариҙел) аш төрләү — *привередливость к пище (во время беременности или болезни).* Аш талғау (һаҡмар) аш талымлау — *быть разборчивым в пище*

**АШЙАБЫУ** (гәйнә) *и.* ашъяулыҡ — *скатерть*

**АШЙАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡаҙанлыҡ — *кухня*

**АШ ЙӘШЕНЕ** (арғаяш) *и.* ялағай — *зарница*

**АШ КӘБӘНЕ** (арғаяш, салйоғот) *и.* эҫкерт — *скирда*

**АШ КӘКЕРЕҪЕ** (дим) *и.* эремсек билмәне — *вареники*

**АШ КӘРТӘ** (салйоғот) *и.* 1. Баҫыу кәртәһе — *изгородь посева.* 2. ырҙын — *ток*

**АШҠАБАҠ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* ҡабаҡ — *тыква*

**АШҠАЙАҠТАНЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Ялҡауланып йөрөү — *бездельничать.* 2. Тәртипһеҙләнеү — *вести себя недисциплинированно (о женщинах)*

**АШҠАҠ** (урта урал) *и.* һонтор — *долговязый.* Ашҡаҡ килә ашаттап

**АШҠАН** (гәйнә) *и.* өс йәшлек быҙауламаған һыйыр — *трехлетняя неотелившаяся корова*

**АШҠАНА, АШХАНА** (һаҡмар) *и.* йәйге аш өйө — *летняя кухня*

**АШ ҠАШЫҒЫ** (нөгөш) *и.* ижау — *половник*

**АШҠЫЙАҠ** (ҡыҙыл) *и.* сөсөк үҫкән ваҡытта ҡабығы һыҙырылған ағас — *обдирка дерева во время образования камбия*

**АШЛАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эренләү — *нарывать, гноиться*

**АШЛЫҠЛЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* туҡлыҡлы — *питательный.* Аштыҡты (урта урал)

**АШЛЫҠПАШ** (гәйнә) *и.* башаҡ — *колос*

**АШЛЫҠ ТУПҪАҺЫ** (дим) *и.* орлоҡ ҡабы — *чешуйка зерна*

**АШНАҠ** (ҡариҙел, һаҡмар) *и.* йәйге аш өйө — *летняя кухня*

**АШ ӨЙӨ** (дим, урта) *и.* йәйге аш өйө — *летняя кухня*

**АШ ӨЙСӨГӨ** (арғаяш) *и.* көшөл — *ворох (намолоченного хлеба)*

**АШСАНА** (ҡариҙел) *и.* туйға күстәнәс һалып килтергән сана — *сани с гостинцем для свадьбы*

**АШ СИБӘРЕ** (һаҡмар) *и.* аш-һыу оҫтаһы — *искусный кулинар*

**АШТАБАҠ** (ҡариҙел) *и.* ҡоштабаҡ — *большая чаша*

**АШТЫҠ** (арғаяш, салйоғот) *и.* арпа — *ячмень*

**АШТЫҠ ТУРҒАЙЫ** (мейәс) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**АШТАЛЫУ** (урта урал) *ҡ.* атлығыу — *рваться, стремиться.* Ҡунаҡҡама, ул инде аштала, ашталып китә

**АШТАУ I** (һаҡмар) *и.* 1. Ағас табаҡ — *большая деревянная чаша.* 2. (урта урал) Ағас ялғаш — *деревянное корыто*

**АШТАУ II** (урта урал, һаҡмар) *ҡ.* ашлау — *накрахмалить.* Кейәү киндерен аштап әҙерләйһең инде, ап-аҡ, шығырҙаҡ була (һаҡмар)

**АШТЫҠ** (урта урал, һаҡмар) *и.* ашлыҡ — *хлеб*
**АШЫЗБА** (гәйнә) *и.* йәйге аш өйө — *летняя кухня*
**АШЫҠ I** (урта) *с.* яшыҡ — *постный (о мясе)*
**АШЫҠ II** (ырғыҙ) *р.* ашыу — *больше.* Ике тоннанан ашыҡ иген алдыҡ
**АШЫҠТАШ** (мейәс) *и.* һаҡа — *налиток (в игре в бабки)*
**АШЫҠ ҺӨЙӘГЕ** (мейәс) *и.* беләк һөйәге — *предплечевая кость*
**АШЫРЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* үткәреү — *провести.* Таң ашырыу

# Б

**БА** (гәйнә) *ы.* бәй *(ғәжәпләнеү һүҙе)* — *слово, выражающее удивление.* Ба, Мөкәрәмә түтәй килә
**БАБА-БАБА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* нәҫел-нәҫел менән — *поколениями.* Алар тарау булғаннар баба-баба
**БАБАЙ** (минзәлә, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ир — *муж.* Ошо бабайым белән йегерме биш йыл ғүмер иттек (һаҡмар). 2. (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-һаҡмар) Ҡайны — *тесть.* 3. (төньяҡ-көнбайыш) Оло ир кеше — *старик, пожилой мужчина.* 4. (мейәс) Атай-әсәйҙең ағаһы — *старший брат отца или матери.* Бабай, бауай, бауый (мейәс), быуай (әй). 5. (урта, эйек-һаҡмар) Атайҙың ағаһы — *старший брат отца.* 6. (төньяҡ-көнбайыш) Атай-әсәйҙән оло ир кешегә өндәшеү һүҙе — *слово-обращение к мужчине старше родителей*
**БАБАЙБАШ I** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Бабай үләне (урта)
**БАБАЙБАШ II** (ҡариҙел) *и.* ҡаҡ ағас — *высушенное дерево, идущее на строительство*
**БАБАЙҒОЛАҠ** (һаҡмар) *и.* сүсбәрә — *вареники*
**БАБАЙКА** (ҡариҙел, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Һал бора торған ишкәк — *рулевое весло на плоту.* 2. (ҡариҙел) Ҡаҡ, ныҡынған борош ағас — *высохшее кривое дерево.* 3. (әй) Ҡаҙау һурғыс — *гвоздодер*
**БАБАЙНИК** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* Һалда йәки паромда ҡойроҡта тороусы — *рулевой на плоту или на пароме*
**БАБАҠАЙ** (һаҡмар) *и.* бабай *(оло ир кешегә өндәшеү һүҙе)* — *дед (обращение к пожилому мужчине)*
**БАБАЛАШ I** (гәйнә) *и.* ябалаҡ — *сова*
**БАБАЛАШ II** (гәйнә) *и.* ике туғандың балалары — *троюродные (братья и сестры)*
**БАБАСАР** (мейәс) *и.* бабасыр уты — *горечавка*
**БАБАСЫ** (урта) *и.* сөннәтсе — *человек, совершающий обряд обрезания.* Бапа (төньяҡ-көнбайыш)
**БАБАҪЫР** (дим, урта, һаҡмар) *и.* бабасыр — *глист.* Бабаһыр (дим, урта, эйек-һаҡмар)
**БАБАҺАР ҮЛӘНЕ** (ҡыҙыл) *и.* бабасыр уты — *горечавка.* Бабасыр үләне (арғаяш)
**БАБҠАЙ: ЖАҠЫН БАБҠАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* атайҙың атаһы — *дедушка со стороны отца*
**БАБҠАЙ, БАБЫҠАЙ, ЖЫРАҠ БАБҠАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әсәйҙең атаһы — *дедушка со стороны матери*
**БАБУР ЙЕҢГӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кейәү менән ҡыҙҙы ҡарай торған еңгә — *сноха, ухаживающая за женихом и невестой.* Ике бабур йеңгә ҡуйалар, кейәүне ашата, эчерә, муйча йағып кертә
**БАБЫ БОРСАҠ** (дим) *и.* ҡара борсаҡ — *бобы*
**БАҒАЙАҠ** (арғаяш, мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*
**БАҒАЛАНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* инаныу — *верить*
**БАҒАН** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* 1. Баҕана — *столб.* Баған ғатыу. 2. Киндер урынындағы ян ағастар — *боковые рамы у домашнего ткацкого станка*
**БАҒАНА I** (гәйнә, дим, эйек-һаҡмар) *и.* һырғауыл — *длинный вертикальный шест, на конце которого прикрепляются подарки (обязательный атрибут сабантуев)*
**БАҒАНА II** (көнсығыш диалект, урта) *и.* бармаҡ араһына йәки ус төбөнә сыҡҡан шеш — *нарыв между пальцами или на ладони*
**БАҒАНА III: БАҒАНА ҒАБЫРҒА** (дим, урта) *и.* быҕым — *ложные ребра*
**БАҒАНА IV** (арғаяш, мейәс) *р.* бая — *недавно.* Баҕанаҡ, байағынаҡ (ҡыҙыл)
**БАҒАНАҠ** (урта) *и.* бәпембә — *одуванчик*
**БАҒАНАНҒЫ** (арғаяш, мейәс) *а.* теге — *тот.* Баҕананғы әйткән
**БАҒАН ТУБЫ** (арғаяш, мейәс) *и.* туп ҡағыш уйыны — *игра в мячик*
**БАҒАНУҠ** (арғаяш, мейәс) *р.* бая уҡ — *давненько*
**БАҒАРА** (һаҡмар) *и.* йылға маймаһы — *речной гольян.* Бағра (дим)
**БАҒРА I** (урта) *и.* 1. Шарҡылдаҡ баш — *волкобой.* 2. Бойҙай араһында үҫкән ал сәскәле үҫемлек — *сорняк, растущий среди пшеницы.* Бағыра (дим)
**БАҒРА II** (ҡариҙел, әй) *и.* бағры — *форель*
**БАҒҮЛӘН** (салйоғот, әй) *и.* бәпембә — *одуванчик*
**БАҒЫМ** (салйоғот) *и.* тауҙың төньяҡ итәге — *южный склон горы*
**БАҒЫМБАҠ** (арғаяш) *и.* бәпембә — *одуванчик*
**БАҒЫНДЫРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* буйһондороу — *подчинять*
**БАҒЫНЫУ I** (арғаяш, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* дауаланыу — *лечиться.* Бер аҙна булһа ла йатып браштан бағынып ҡайтырмын тигәйнем (арғаяш)
**БАҒЫНЫУ II** (урта) *ҡ.* бағымсылыҡ менән шөғөлләнеү — *знахарствовать*
**БАҒЫНЫУ III** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* хәйләләү — *хитрить.* Нейә бағынаң? (ҡыҙыл)
**БАҒЫР I** (һаҡмар) *и.* тәрбиәләүсе, ҡараусы — *содержатель, ухаживающий за кем-либо.* Бағыры йуҡ, байағы бахырҙың, бер үҙе. Ҡарт көнөндә бағыры йуҡ, нисек көн итәр?
**БАҒЫР II** (ҡариҙел) *и.* бәғер — *душа.* ◊ Ҡар бағыр *(һалҡын, һауалы кеше)* — *холодный, высокомерный человек*
**БАҒЫР III** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар, әй) *и.* 1. Бағры — *форель.* 2. (мейәс) Йылға маймаһы — *речной гольян*
**БАҒЫР IV** (гәйнә) *и.* баҡыр — *медь*
**БАҒЫР V** (һаҡмар) *и.* шырт балыҡ — *ерш*

**БАҒЫУ I** (гәйнә, көньяҡ диалект, төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* 1. Ҡарау, тәрбиәләү — *воспитывать.* Баланы үҙем бағыбутырам (һаҡмар). 2. (көнсығыш диалект, көньяҡ диалект) Ҡарау — *содержать.* Хөкөмәткә һүҙ йуҡ, баға (эйек-һаҡмар). 3. (ҡыҙыл, төньяҡ-көнсығыш, һаҡмар) Дауалау — *лечить.* Бер фиршел бөтә ауылды баға (ҡыҙыл). 4. (ҡыҙыл) Буйһоноу — *подчиняться.* Батшаға баҡмағандар

**БАҒЫУ II** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* көтөү — *пасти.* Бабайы бейә баҡты, әбейе һауҙы (һаҡмар)

**БАҒЫУ III** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *ҡ.* тотоу — *ловить.* Балыҡ баға киткән (арғаяш)

**БАҒЫУСЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ҡараусы — *ухаживающий за кем-чем.* Башмаҡ бағыусылар йуғары йөкләмә алдылар. 2. (ҡыҙыл) Көтөүсе — *пастух*

**БАҒЫУҺЫҘЛАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡараусыһыҙ ҡалыу — *прийти в запустение.* Өй бағыуһыҙланып китте

**БАДИЛИК** (ҡыҙыл) *и.* бер йыл сәселмәй ҡалған ер — *паровое поле*

**БАДИША** (һаҡмар) *и.* батша — *падишах.* Әбей батшаға тиклем бадишалар торған

**БАҘ I** (мейәс, урта, һаҡмар, эй) *и.* 1. Иҙән аҫты — *подпол.* 2. (һаҡмар) Мөгәрәп — *погреб.* 3. (урта) Соҡорға күмер һалып күмгән ер межаһы — *межевая яма, заполненная углем и засыпанная землей*

**БАҘ II** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта) *и.* иҙән — *пол.* Баҙ түшәлгән ыҡсым ғына ихата, башы ҡыйыҡлы ҙур ҡапҡа (урта). Баҙҙы түшәнем (салйоғот)

**БАҘАҒЫЙ** (урта) *и.* һаҙ билсәне — *бодяк болотный*

**БАҘАНЫУ, БАҘЫНЫУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* 1. Интегеү — *мучиться.* Һуғыш уахытында һөт бумағас баҙанып бөттөләр (мейәс). Баҙаныу (урта урал). 2. (арғаяш, мейәс, урта урал) Арыу — *утомляться.* Быйыл бик баҙандым эштән (урта урал). 3. (урта урал) Биҙеү — *осточертеть*

**БАҘАР АРТЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* дүшәмбе — *понедельник*

**БАҘАРҠАЙ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* баҙыян — *расписной.* Баҙарҡай сеүәтә

**БАҘАРЛАУ I** (һаҡмар) *ҡ.* баҙарға барыу — *ездить на базар.* Баҙарлау (гәйнә)

**БАҘАРЛАУ II** (урта урал) *ҡ.* әйберҙе, өҫ-кейемде ҡәҙерләп тотоу — *содержать вещи, одежду в опрятности*

**БАҘАРЛАУ III** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* баҙлау — *ярко гореть (об углях).* Баҙарлап йатҡан ҡуҙға ғына һалып шөтөрләтеп ашай ҙа ғуйа

**БАҘАРЛАП** (эйек-һаҡмар) *с.* мулдырап — *быть налитым, ядреным (о колосьях).* Баҙарлап йатып ҡала башаҡлар

**БАҘАРЛЫҠ** (урта урал, ырғыҙ) *и.* дәрәжә — *достоинство.* Минең ҡыҙымдың баҙарлығы бөтмәгән, айыр, кейәү табылыр, тинем (урта урал)

**БАҘАРОЙОҠ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* еп ойоҡ — *хлопчатобумажные чулки*

**БАҘАТЫУ** (арғаяш, эй) *ҡ.* йонсотоу — *утомлять.* Йоҡтамай эштәү кешене баҙата (арғаяш)

**БАҘАУ I** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡурҡыу — *опасаться.* Әйтергә лә баҙайым, ҡырыҫ ғуй. 2. Ҡыйынһыныу — *не осмеливаться взяться за что-то.* Ул эште башлауға баҙап торам, бер ҡорал йуҡ

**БАҘАУ II** (мейәс, эй) *ҡ.* баҫылыу — *смириться.* Тәйән тиргәп торһа, баҙайһың инде (мейәс)

**БАҘАУ III** (арғаяш, мейәс, эй) *ҡ.* арыу, йонсоу — *утомляться.* Баҙаным ауырыуҙан (мейәс)

**БАҘАУ IV** (дим, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ойоу — *неметь.* Бөкләп утырғанға айағым баҙап китте (һаҡмар)

**БАҘАУЫЛ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* 1. Балауыҙ — *воск.* 2. (урта) Кәрәҙ — *соты.* Баҙауыллы бал

**БАҘАУЫЛ ҺАРЫ** (урта) *с.* балауыҙ һары *(йылҡы малының төҫө)* — *желтый как воск (масть лошади)*

**БАҘЛАҒАН** (урта) *с.* баҙҙа ҡышлаған — *зимовавший в подполе.* Баҙлаған бәрәңге; баҙлаған кишер

**БАҘЛАУ I** (ырғыҙ) *ҡ.* 1. Ҡыҙыу, яныу *(игенгә ҡарата)* — *преть.* Иген баҙламағанмы тип ҡарарға сығып киттеләр

**БАҘЛАУ II** (урта) *ҡ.* баҙға һалыу — *заложить в подпол.* Йетмеш биҙрә кәртүк баҙланыҡ. Базлау (төньяҡ-көнбайыш)

**БАҘМАУ** (туҡ-соран) *ҡ.* баҙнат итмәү — *не осмеливаться.* Дөрөҫөн әйтергә баҙмағаннар

**БАҘ ҮРҘЕГЕ** (арғаяш) *и.* иҙән урҙаһы — *лага*

**БАҘРАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* баҙлау — *ярко гореть (об углях).* Баҙрап йатҡан күмергә һалалар ҡыҙҙырырға. Баҙҙау (эй)

**БАҘЫЙА** (салйоғот, урта) *и.* бәләкәй биҙрә — *маленькое ведро*

**БАҘЫЙАН** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Биҙәк төшөрөлгән ағас сеүәтә — *расписная деревянная чашка.* Тотонғаннары баҙыйан буған (урта). Баҙыйан сеүәтә (ҡыҙыл, һаҡмар) 2. (һаҡмар) Биҙәк төшөрөлгән ағас ҡалаҡ — *расписная деревянная ложка*

**БАҘЫЙАН ГӨЛ** (кариҙел) *и.* еҫле гөл — *мята*

**БАҘЫҠ** (арғаяш) *с.* оялсан — *застенчивый*

**БАҘЫМ** (урта) *и.* бүрәнәне буйлап, ырырҙан алда, ырыуыс менән һыҙылған һыҙыҡ — *линия, проведенная вдоль бревна для снятия паза*

**БАҘЫНМАУ** (урта) *ҡ.* баҙмау — *не осмеливаться.* Һүҙ ҡыҫтырырға баҙынманы һәм аш өйө йағынан табаҡ менән аш килтертеп йеңгәһенә йарҙамлашты

**БАЖА УАҠЫТ, БУЖАР УАХЫТ, БУРЖА УАХЫТ** (урта урал) *и.* ҡыҙҙы күсереүгә алдан билдәләнгән ваҡыт — *заранее назначенный срок переезда невесты в дом жениха*

**БАЖАҒА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡайнаға — *старший деверь, старший брат мужа*

**БАЖАЙ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* бажа — *свояк.* Бажай менән балыҡ тоторға гиттек (эйек-һаҡмар)

**БАЖЫҠ** (һаҡмар) *с.* ныҡ — *крепкий*

**БАЖЫМ** (дим) *и.* ырма — *паз*

**БАЖЫМЛАУ** (дим) *ҡ.* ырыу, ырма алыу — *снять паз, пазить*

**БАЙ I** (арғаяш, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ир — *супруг.* Тәүге байым үлгәс, ҡәйнешем алды, үҙем дә бай белән ун һигеҙ йыл ғына торҙом (һаҡмар)

**БАЙ II** (көнсығыш диалект, урта, һаҡмар) *и.* хаҡ — *плата.* Ашау байын ҡайтара (ҡыҙыл). Эшләгән байын түләһен (урта). Һин фермала эшләһәң дә байын ҡайтарырһың (һаҡмар)

**БАЙАҒЫ** (көнсығыш диалект) *р.* 1. Бая — *недавно.* 2. (көнсығыш диалект, эйек-һаҡмар) *м. һ.* — *слово, выражающее подтверждение.* У заманда, байағы, Ирәндектен ҡайа ташларына ҡул гөсө белән йул һалынды. Шунан, байағы, һыйығайып әсегәс ҡымыҙ була инде (һаҡмар). Байағыҙы (туҡ-соран). Байағы, теге турһыҡ була инде (салйоғот). ◊ Әлеге лә байағы (көнсығыш диалект) нисә әйтһәң дә — *опять то же самое, опять о том же.* 3. (эйек-һаҡмар) *а.* теге — *тот.* Байағыға сығып китә лә бара

**БАЙАҒЫНАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* бая — *недавно.* Байағынаҡ кереп сыҡты

**БАЙАҒЫСА** (туҡ-соран, һаҡмар) *т.* шулай булһа ла — *и все-таки.* Тик байағыса өндәшмәйһең инде (һаҡмар)

**БАЙАЛА** (мейәс, салйоғот) *и.* кәләп — *мотушка.* ◊ Байала һалыу *(эшһеҙ тик йөрөү)* — *бездельничать*

**БАЙАН** (урта) *и.* баҡыр — *медь*

**БАЙАН ИТЕҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* һүрәтләү — *описывать.* Ул бик мәрәкәләп беҙҙең мажараларҙы байан итергә тотондо

**БАЙАНТАЛАҠ** (ҡыҙыл) *и.* ҡатынын «талаҡ» әйтеп айырғандан һуң да кире алырға мөмкинлек биргән шәриғәт ҡануны — *старинный обычай объявления развода* «талаҡ», *который допускает примирение.* Минен бабайҙан һорайлар: «Хәрәм талаҡ» тип әйтәһеңме, әллә «байан талаҡ» тип әйтәһеңме?» Бер нәмә лә тимәй. Шунан тегене хәрәм талаҡҡа сығарҙылар

**БАЙАН ТУРҒАЙЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* суҡтурғай — *свиристель*

**БАЙАҢҒЫ** (төньяҡ-көнсығыш) *а.* теге — *тот.* Байаңғы геше тағы гилде (әй)

**БАЙАР ГӨЛӨ** (урта) *и.* ҙур ал сәскәле, емеше ашарға яраҡлы гөл — *комнатная мальва*

**БАЙАР ЕМЕШЕ** (ҡариҙел) *и.* ҡамырйемеш — *боярышник*

**БАЙАРКА** (арғаяш, мейәс, урта) *и.* ҡамырйемеш — *боярышник.* Байарка һеҙҙең йаҡта үҫәме? (урта)

**БАЙАРЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* инселәү — *наметить.* Үҙенә байарлап картуф сәсеп ҡалдырһаң ней була

**БАЙБАЙ АҒАЧЫ, БАЙБЫЙ АҒАСЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* оскат — *бузина красная*

**БАЙ: БАЙҒА ТЕЙЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* иргә сығыу — *выйти замуж*

**БАЙҒОШ ЙАПАЛАҠ** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ябалаҡтың бер төрө — *домовой сыч*

**БАЙҒОШ ӨКӨ** (урта) *и.* ябалаҡтың бер төрө — *домовой сыч*

~~**БАЙҘА**~~ (һаҡмар) *и.* файҙа — *польза.* Байҙаһыҙ мал булды

**БАЙҠАЙЫН** (ҡариҙел) *и.* яңғыҙ ҡайын — *одинокая, ветвистая береза.* Элек байҡайынға бесәнселәр әйберләрен, йәш бала белән бишекләрен элгән

**БАЙҠАЛ** (ырғыҙ) *и.* Ырғыҙ башындағы күл — *название озера у истока реки Иргиз — Байкал*

**БАЙҠАУ** (көнсығыш диалект, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Ҡарау — *смотреть, обозревать.* Байҡап ҡалғанын әйт әле (һаҡмар). 2. (һаҡмар, ырғыҙ) Абайлау — *заметить.* Ҡойроғоноң игәү икәнен дә байҡамайым мин (һаҡмар). Мин, бала геше, аны-мыны байҡамағас ней, алдым да түшемә таҡтым (ырғыҙ). 3. (урта, һаҡмар) Күҙәтеү — *наблюдать.* Байҡап торһаң, йәйен шап та шоп балыҡ ҡыуа (һаҡмар)

**БАЙМАБАШЛАНЫУ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* баш-баштаҡланыу — *самовольничать.* Баймабашланмағыҙ! Иген ней эшләп икенсе пыланға күсергә тейеш һуң? (урта)

**БАЙМАН** (урта) *с.* тәбиғәткә бай — *богатый природой.* Алар һилерәк, баймандыраҡ таулы-урманлы, йылға-күлле төбәктәргә төпләнеүҙе хәйерлерәк тапҡаннар

**БАЙМАУЫР** (урта) *с.* йомшаҡ характерлы — *слабовольный.* Мин, әллә йәш булғас, был баймауыр ғыналыр инте, тип уйлай инем әле

**БАЙНА, БӘЙНӘ** (гәйнә), *р.* бая — *недавно*

**БАЙНАҠ** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *р.* бая — *недавно*

**БАЙПАЛАНДАУ** (арғаяш) *ҡ.* сайҡалып атлау — *шагать вразвалку.* Ҡарале байпаландап китепара малайың

**БАЙПАҢЛАУ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* сайҡалып атлау — *шагать вразвалку.* Ана, йеңгәң өйрәк һымаҡ байпаңлап килә (туҡ-соран)

**БАЙТАЛ I** (һаҡмар) *и.* дүрт йәшлек бейә — *четырехлетняя кобыла.* Тай байтал (төньяҡ-көнсығыш) ике йәшлек бейә — *двухлетняя кобыла.* Ҡонан байтал *(шунда уҡ)* өс йәшлек бейә — *трехлетняя кобыла*

**БАЙТАЛ II** (урта) *и.* ялағай — *подхалим*

**БАЙТАЛЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* ялағайланыу — *подхалимничать.* Байталланып йарарға йөрөмәһәң тағы

**БАЙТУС** (һаҡмар) *и.* сәкән һуҡҡанда тупты ултыртып тороусы, көтөүсе — *пастух (в игре), гальчик*

**БАЙУҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* бая уҡ — *давно.* Байуҡ ҡайттылар ҙаһа инәйемдәр (мейәс). Байағуҡ (әй)

**БАЙҺӨЙӘК** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* өлөш һөйәге — *мясо, раздаваемое участникам коллективной помощи при их угощении*

**БАЙЫМБАҠ** (арғаяш) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Баҡымбаҡ (дим, урта)

**БАКАУЫШ** (урта) *и.* быҙау өсөн йүкәнән ишелгән муйынсаҡ — *лыковый ошейник для теленка.* Быҙау муйынына йәш йүкәнән бакауыш ишә торғайныҡ

**БАҠЛАШКА** (һаҡмар) *и.* бәләкәй кәүҙәле кеше — *низкорослый (о человеке)*

**БАКУЙ** (ҡыҙыл, әй) *и.* сабылған бесән рәте — *вал (ряд скошенного сена).* Һинең бакуйҙарың ҡалай тигеҙ генә (әй)

**БАҠ I** (һаҡмар) *и.* бәхет — *счастье.* Һеҙгә баҡ бирһен

**БАҠ II** (урта урал) *с.* пак — *чистый.* Баҡ әйбергә урағаң, бәхете булһын тимәгән *(халыҡ йырынан)*

**БАҠА I** (арғаяш, гәйнә, дим, ҡариҙел, ҡыҙыл, мейәс, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Тәлмәрйен — *лягушка.* 2. (ҡыҙыл, мейәс, минзәлә, салйоғот, әй) Ҡабырсаҡлы моллюск — *моллюск с раковиной.* 3. (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) Әрмәнде — *жаба.* ◊ Баҡа тамаҡ (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, әй) убыр — *обжора.* Кит, туйарын белмәҫ был баҡа тамаҡ (арғаяш)

**БАҠА II** (һаҡмар) *и.* тирмән үҙәгенең башы — *верхняя крестовина мельничной оси, на которой вращается жернов*

**БАҠА III** (дим) *и.* ауыҙлыҡ ҡулсаһына эләктерә торған тейәк — *псалий в удилах*

**БАҠАБАЛА** (гәйнә) *и.* сүмесбаш — *головастик.* Баҡа балаһы (һаҡмар). Баҡа балдары (төньяҡ-көнсығыш) *сумесбаштар*

**БАҠА БАШЛЫ ГАЛУШ** (һаҡмар) *и.* түңәрәк башлы калуш — *галоши с округлой головкой*

**БАҠАБУҠ** (туҡ-соран) *и.* лай — *тина*

**БАҠАУЫҘ** (һаҡмар) *и.* ҡыҫҡыс, тәгәрмәскә ҡулса кейҙереү ҡоралы — *технический ключ*

**БАҠАУЫЛДЫҠ I** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ылымыҡ — *водоросль*

**БАҠАУЫЛДЫҠ II** (урта урал) *и.* сүмесбаш — *головастик.* Баҡауылдыҡты күргәнегеҙ бармы?

**БАҠ ҒАПСЫҒЫ** (һаҡмар) *и.* ләм — *ил*

**БАҠАЙ, БАҠАЛСАЙ** (һаҡмар) *и.* йәкәл, бәкәлсәй — *бабка*

**БАҠАЙАҢАҠ** (арғаяш) *и.* ыйыҡ — *туберкулез шейных желез*

**БАҠА ЙАФРАҒЫ** (дим, ҡариҙел, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* 1. Юл япрағы — *подорожник.* Баҡайафраҡ (урта урал), баҡайапраҡ (гәйнә, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш), баҡа йапрағы (дим, урта). 2. (гәйнә, һаҡмар) Үгәй инә үләне — *мать-и-мачеха.* Баҡа йапрағы (һаҡмар). 3. (һаҡмар) Томбойоҡ — *кувшинка.* Баҡайафраҡ (гәйнә). 4. (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) Әҙрәс гөл — *бегония.* 5. (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) Ағын һыуҙа үҫә торған оҙон, тура, ныҡ һабаҡлы, баш өлөшө түңәрәк япраҡлы үҫемлек — *неслия, речное растение с круглыми листьями*

**БАҠА ЙЕФӘГЕ** (арғаяш, дим) *и.* 1. Ләм — *ил.* 2. (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) Лай — *тина*

**БАҠАЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* аҡайыу — *таращиться.* Йә, күҙеңде баҡайтма, ҡурҡмайым. Баҡайып утыра

**БАҠА ҠАБЫҒЫ** (салйоғот) *и.* ҡабырсаҡ — *ракушка моллюска.* Баҡа ҡапчығы, баҡа ҡауырчағы (төньяҡ-көнбайыш), баҡа ҡабырсағы (дим, туҡ-соран)

**БАҠА ҠАРШЫУАСЫ** (ҡариҙел) *и.* ҡабырсаҡ — *ракушка моллюска*

**БАҠАСАЙ** (һаҡмар) *и.* лай — *тина*

**БАҠАСАП** (һаҡмар) *и.* йәшел йомшаҡ ебәк — *зеленый шелк.* Баҡасаптан сапан кейгән, үҙе беҙгә килгән

**БАҠАТАЛ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* йүрмә тал — *ива ползучая*

**БАҠА ҮЛӘНЕ** (урта урал) *и.* 1. Үгәй инә үләне — *мать-и-мачеха.* 2. (дим, төньяҡ-көнбайыш) Юл япрағы — *подорожник.* 3. (дим, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) Ҡаҙ үләне — *лапчатка гусиная.* 4. (дим) Ылымыҡ — *водоросль*

**БАҠАШЕШ** (һаҡмар) *и.* ҡолаҡ һәм эйәк аҫты шеше — *свинка*

**БАҠБАБАЙ, БАҠБАҠ** (дим, урта) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Бағыр-бағыр баҡбабай. Баҡымбаҡ (дим, урта)

**БАҠБАЙ** (ҡариҙел) *и.* бапаҡ — *бука (которой пугают детей)*

**БАҠМА** (ҡариҙел, урта урал, һаҡмар, эй) *и.* 1. Имгәк — *обуза.* Был бик баҡма ғына әҙәм булып сыҡты бит әле, ҡулынан бер ней гилмәй (һаҡмар). Баҡма булып оҙаҡ утырҙы инде (эй). 2. (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* сирләшкә — *болезненный.* Бер баҡма балаcы бар, сирҙән кәрсенмәй (төньяҡ-көнбайыш). Баҡмачы (гәйнә)

**БАҠМАҒҮЛӘН** (салйоғот, эй) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Баҡбағүлән (арғаяш)

**БАҠМЫР** (мейәс) *и.* ҡымыҙ әсеткеһе — *закваска для кумыса*

**БАҠМЫРЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться*

**БАҠРА** (урта) *и.* бағра — *куколь.* Баҡыра (һаҡмар)

**БАҠРАҠ** (урта урал) *и.* ҡысҡырып һөйләшкән кеше — *горластый.* 2. Ҡысҡырыҡ мал — *ревун (о скотине).* Баҡраҡ мал ул бәлә генә

**БАҠРАС** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* ижау — *половник.* Айғыр баҡрас башындай күҙҙәрен аҡайтып борола ла әлеге сүлмәктәй тойағы менән сапсырға тотона (эйек-һаҡмар). Баҡрач (минзәлә)

**БАҠРАУ** (эй) *ҡ.* йәштәрҙең ауылдан тауыҡ-фәлән алып китеп, яланға сығып бешереп ашауы — *выходить на страду*

**БАҠСА I** (ҡыҙыл, урта) *и.* ишек алды — *двор*

**БАҠСА II: САУЫЛ БАҠСА** (ҡариҙел) *и.* емеш баҡсаһы — *фруктовый сад*

**БАҠТА** (дим, көнсығыш диалект, туҡ-соран, урта, һаҡмар) *и.* 1. Ҡаулан — *слинявшая шерсть животных.* 2. (ҡыҙыл) Һарыҡтың ҡырҡып алынған яҙғы йөнө — *овечья шерсть весенней стрижки.* Баҡтанан ғына эштәлгән йурған ине. 3. Һарыҡ йөнөнөң мамығы — *пух овечьей шерсти.* Баҡтаһы ҡалҡҡас, һарыҡтың йөнөн ҡырҡалар. 4. (мейәс, эй) Һарыҡ йөнөнөң эреһе, шырты — *грубая овечья шерсть*

**БАҠТИҺӘҢ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эй) *м. һ.* баҡһаң — *оказывается*

**БАҠТЫРЫУ I** (ҡариҙел, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, эй) *ҡ.* 1. Тураһын әйтеү — *сказать прямо.* Баҡтырғанса әйттем (ҡыҙыл). ◊ Күҙен баҡтырыу *(дөрөҫөн күҙгә ҡарап әйтеү)* — *сказать правду в глаза.* 2. (урта) Аптыратыу — *озадачить*

**БАҠТЫРЫУ II** (һаҡмар) *ҡ.* дауалатыу — *заставить лечить*

**БАҠТЫРТЫУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* күҙләштереү — *очная ставка*

**БАҠҮЛӘН** (дим) *и.* 1. Ҡаҙ үләне — *лапчатка гусиная.* 2. Юл япрағы — *подорожник*

**БАҠШЫЛЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* алдан әйтеү, күрәҙәлек ҡылыу — *гадать.* Эй, ошо ҡарт пуһа, баҡшылланыр ҙа торор

**БАҠЫЙ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Мәңгелек — *вечность.* 2. *с.* мәңге — *вечный.* Ахирәт кенә баҡый, бу донйа фаный

**БАҠЫЙ II** (гәйнә, урта урал, һаҡмар) *и.* ҡарый — *престарелый человек*

**БАҠЫЙ III** (гәйнә) *с.* абыныусан — *спотыкающийся (о человеке)*

**БАҠЫЙАС** (һаҡмар) *с.* төтөмлө — *ноский (об одежде)*

**БАҠЫРҒАС** (ҡариҙел) *и.* ижау — *половник*

**БАҠЫРСА** (дим) *и.* ижау — *половник*

**БАҠЫРСАҠ** (салйоғот, эй) *и.* һыбыҙғы — *дудка.* Баҡырҡыс (урта урал), баҡыртма (гәйнә)

**БАҠЫРТЫУ** (эй) *ҡ.* тиргәү — *ругать.* Баҡыртһаҡ сығып китә лә гилә

**БАҠЫРТӘТӘЙ** (гәйнә) *и.* арыш араһында үҫкән күк сәскә — *василек полевой*

**БАҠЫРЫУ** (дим, гәйнә, ҡариҙел, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *ҡ.* аҡырыу — *кричать.* Көн буйына балдарға баҡырып утыра (урта урал). Ишетмәй бит ул, нығыраҡ баҡыр (ҡыҙыл)

**БАҠЫТ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* һыуҙа оҙаҡ ятҡан ағас — *древесина, пропитанная водой*

**БАҠЫТЛАНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ағастың һыуҙа оҙаҡ ятып шешенеүе — *разбухать (о валежнике)*

**БАЛ I: БАЛ БОРОУ** (мейәс) *ҡ.* балды кәрәҙҙән айыртыу — *откачивать мед.* Бал һыҡтырыу, бал һиптереү (эй), бал йелпетеү (урта), бал өрҙөртөү (мейәс)

**БАЛ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сайыр — *живица.* Тет ағач балы

**БАЛА I** (гәйнә, көнсығыш һәм көньяҡ диалекттар, урта урал) *с.* 1. Йәш — *молодой.* Бала ғайын. Бала йүкә. 2. Ваҡ — *мелкий.* Бала сәс. 3. (көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар) Бәләкәй — *маленький.* Бала йылға ғына анда (төньяҡ-көнбайыш). Бала йаулыҡ. Бала мендәр. Бала сана (төньяҡ-көнбайыш, урта урал)

**БАЛА II** (һаҡмар) *и.* ир бала — *мальчик, сын.* Пер ҡыҙлар йуҡ, бөкөл балалар гитте. Һуңғы йылларҙа күберәк балалар тыуа, ҡыҙлар аралаш ҡына. ◊ Бала йәнле *(кеше)* — бала яратыусан — *любящий детей душой (о человеке)*

**БАЛА III: ЙӨҘЛӨКЛӨ БАЛА** (ырғыҙ) *и.* бөркәнсекле бала — *ребенок, рожденный в сорочке*

**БАЛАБЕСӘЙ** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* бесәй балаһы — *котенок*

**БАЛАБИК** (мейәс) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный самотканый половик.* Балабикты күп һуҡты инде инәйем

**БАЛА ГҮРПӘ** (көнсығыш диалект) *и.* төлкө босҡағынан тегелгән әбейҙәр туны — *шуба, сшитая из лоскутков лисьих шкур для старух*

**БАЛАҒАС** (гәйнә) *с.* бәләкәс — *маленький.* Балағас сыу

**БАЛАҒОС** (урта) *и.* айырылған ҡорт күсе — *молодой пчелиный рой*

**БАЛАЙАН** (ҡыҙыл) *и.* ҡарсығаның уртансы себеше — *средний птенец ястреба*

**БАЛА ҠАБЫ** (дим) *и.* һуңғылыҡ — *послед.* Бала ғапсығы (урта)

**БАЛАҠАС** (арғаяш) *и.* йәлдәү — *горловина верши.* Мурҙаның балаҡасын имгәткәндәр

**БАЛАЛАУ** (салйоғот) *ҡ.* елгәргестән үткән ашлыҡтың ҡолаҡҡа айырылыуы — *рассортировка зерна веялкой*

**БАЛАЛЫҠ** (мейәс) *и.* балаятҡы — *матка*

**БАЛАПАН I** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Йыуантыҡ кеше — *толстяк.* 2. (ҡыҙыл) *с.* тос — *тяжеловесный.* 3. (арғаяш) *и.* бәпес — *грудной ребенок.* 4. Сабый — *младенец*

**БАЛАПАН II** (ҡыҙыл) *и.* бөркөт йәки ҡарсығаның ирәбе себеше — *сильный птенец беркута или ястреба*

**БАЛАПАН III** (ырғыҙ) *и.* әсмүхә — *восьмушка.* Бер балапан сәй алдым

**БАЛА-СУЛА, БАЛА-СҮРӘ** (һаҡмар) *и.* бала-сағa — *детвора.* Бала-сула ҡайҙан килеп тулдәле мында?

**БАЛАҪ** (дим, урта, эй) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный самотканый половик*

**БАЛА ТЕШ** (урта, һаҡмар) *и.* һөт теше — *молочный зуб*

**БАЛА ТӨШ** (урта) *и.* төш алды — *предобеденное время.* Ҡойаш тауҙан йаҡшы уҡ күтәрелеп, бала төш йетеп килә ине инде

**БАЛАУЫҘҒАРЫН** (ырғыҙ) *и.* таҙғарын — *сычуг*

**БАЛАУЫҘЛАНЫУ** (дим) *ҡ.* башаҡтағы ашлыҡтың өлгөрөүе — *затвердение (о зернах)*

**БАЛҒА I** (төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *и.* 1. Сүкеш — *молоток.* 2. (эй) Салғы сүкеше — *молоток для отбивания косы.* 3. (ҡыҙыл) Ҙур сүкеш — *молот, кувалда*

**БАЛҒА II** (урта) *и.* солоҡ соҡой торған бәләкәй балта — *топорик для долбления борти.* Солоҡ соҡомаға балға һорап килгәйне Ғәфүрҙең малайы

**БАЛҒАТҮШ** (мейәс, салйоғот) *и.* салғы сүкеүҙә ҡулланыла торған түш — *маленькая наковальня для отбивки косы*

**БАЛҒАШЫҠ** (дим, туҡ-соран, һаҡмар) *и.* балғалаҡ — *чайная ложка.* Балҡашыҡ (дим, урта, төньяҡ-көнбайыш)

**БАЛДАҠ I: СЫҢҒАЛЫ БАЛДАҠ** (ҡыҙыл) *и.* ваҡ ҡына тәңкәләр ҡуйылған балдаҡ — *звенящее кольцо с мелкими монетами.* Сылтыраҡты балдаҡ (мейәс)

**БАЛДАҠ II** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡуныс — *голенище.* Кейеҙ ҡата ҡыҫҡа балдаҡлы була (төньяҡ-көнбайыш). 2. Бейәләй ҡунысы — *резинка варежек.* Биәләйнең балдағын ҡыҫҡа итмәскәйе (гәйнә)

**БАЛДЫҘ** (мейәс, эй) *и.* 1. Ҡәйнеш — *шурин (младший брат жены).* Балдуҫ (мейәс, салйоғот), балдыз (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал), балтыз, балтыҙ (ҡариҙел). 2. (дим, мейәс) Ҡатындың һеңлеһе *(иренә ҡарата)* — *свояченица (младшая сестра жены).* Балдыз (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал), балтыз, балтыҙ (ҡариҙел, урта)

**БАЛДЫҠАЙ** (ҡыҙыл) *и.* — *клевер*

**БАЛДЫР** (дим, ырғыҙ) *и.* балтыр — *икры ног*

**БАЛДЫРҒАН** (ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* балтырған — *борщевник*

**БАЛИНӘ: БАЛИНӘҺЕ БУЛЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* әсә булыу — *стать матерью.* Бер балинәһе буғас, әбейҙәрҙе саҡырып алаһың (ҡыҙыл)

**БАЛЙЫ** (һаҡмар) *и.* солоҡ соҡой торған бәләкәй балта — *топорик для долбления борти*

**БАЛЛЫ БӘБӘНӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Клевер. 2. (дим, ҡариҙел) Күк һөтләгән — *медуница*

**БАЛСЫҠ: ЭНӘДЕ БАЛСЫҠ** (мейәс) *и.* һары балсыҡ — *желтая глина*

**БАЛСЫҠ БАҘАР** (арғаяш) *и.* өй түшәменең балсығын тотоп ята торған арҡыры бүрәнә — *самое верхнее поперечное бревно дома*

**БАЛСЫМАҠ** (һаҡмар, ырғыҙ) *с.* бысый *(икмәккә ҡарата)* — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* Ҡунаҡ көтөп торғанда ғына икмәгем балсымаҡ булып әрәм булды лабаһа (һаҡмар)

**БАЛТА: БАЛТА ҒЫНЫ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *и.* һәлпәк — *чехол для топора (носимый на поясе).* Балта ғабы (урта) — һәлпәк. Балта имесәге, балта ҡолағы (һаҡмар), балтасаҡал (гәйнә), балта һаҡалы (ҡыҙыл) балта һағағы — *бородка топора.* Балта дүдә (гәйнә) балта төйҙәһе — *обух топора.* ◊ Балтаһы һыуға гитеү (мейәс) етем ҡалыу — *остаться сиротой.* Балта менән һумлау (урта) килбәтһеҙ эшләү — *делать грубо.* Мынһы балта менән һумлаған кеүек насар эшләнгәйне

**БАЛТАҠАН** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *с.* бер һүҙҙе өҙмәй ҙә ҡуймай һөйләүсе — *любящий много раз повторять одно и то же*

**БАЛТА ҠОРОСО** (дим) *и.* балта беҙе — *острие топора.* ◊ Балта ҡабы (гәйнә) бер һүҙҙе ҡат-ҡат һөйләүсе кеше — *трепач*

**БАЛТАС** (һаҡмар) *и.* аймаҡ исеме — *название родового подразделения.* Алар балтас аймағынан

**БАЛТҮТӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* үҙеңдән өлкән туған тейешле ҡатын-ҡыҙға иркәләп өндәшеү һүҙе — *форма ласкательного обращения к старшей родственнице.* Балтүтәйем ҡайтҡан

**БАЛТЫР** (арғаяш) *и.* бот ите — *ляжка*

**БАЛ ҮҪЕМЛЕГЕ** (дим) *и.* бал ҡорттарына ҡуйыла торған күк сәскәле еҫле үлән — *трава медовка*

**БАЛЫҠБАЛА** (гәйнә) *и.* селбәрә — *мальки рыб*

**БАЛЫҠ ИШКӘГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* балыҡ ҡанаты — *плавники рыбы*

**БАЛЫҠ ЙАҢАҒЫ** (дим) *и.* айғолаҡ — *жабры*

**БАЛЫҠ ҠАПСЫҒЫ** (урта) *и.* балыҡ тәңкәһе — *рыбья чешуя.* Балыҡ ҡабағы (дим)

**БАЛЫҠСЫЛАУ** (мейәс, урта, урта урал) *ҡ.* балыҡ тотоу — *рыбачить.* Абыҙыйым балыҡсылап йөрөй (урта урал)

**БАЛЫҠСЫ ӨЙРӘК** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* беле — *большой крохаль*

**БАЛЫУАН I** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* бәһлеүән — *богатырь.* Бәлеүән (һаҡмар)

**БАЛЫУАН II** (эйек-һаҡмар) *и.* тыйғыса — *притужальник*

**БАНАР** (ҡариҙел) *и.* монар — *марево*

**БАП I** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ, эй) *и.* ҡиәфәт, сүрәт — *вид.* Инәйең ниндәй баптарға кермәне инде һеҙҙе үҫтерәм тип (эй). Бөтеннәй оҡшамаған бапҡа кереп китә (төньяҡ-көнбайыш)

**БАП II** (һаҡмар) *и.* оҫталыҡ — *мастерство.* Ул аш-һыу тирәһенә тепте баплы

**БАП III** (һаҡмар) *и.* тәм — *вкус*

**БАП IV** (һаҡмар) *и.* тәрбиә — *уход*

**БАПАҠ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* яман, ҡотһоҙ — *неуютный.* Һатта бапаҡ булыпөткән өй, саңнанып (һаҡмар)

**БАПЛАП** (туҡ-соран, һаҡмар) *р.* 1. Оҫталарса, оҫталыҡ менән — *мастерски.* Ашты баплап бешерә инде ул (һаҡмар). 2. Ентекләп — *детально.* Ул хәбәрҙе баплап һөйләй инде (туҡ-соран)

**БАППАҒҮЛӘН** (эй) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Баппағүлән бағүлән

**БАПЫМБАШ** (урта) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БАРА** (урта) *и.* Ҡөрьән бите — *страница Корана*

**БАРАБАН** (эй) *и.* бал һурҙыртҡыстың иләге — *сито медогонки.* ◊ Йарыҡ барабан *(артыҡ ҡысҡырып һөйләшә торған кеше)* — *крикун (букв. треснутый барабан)*

**БАРАБАР** (ҡыҙыл, һаҡмар, эй) *р.* бәрәбәр — *одинаково, одинаковый; тождественно, тождественный.* Минең менән барабар эшләй ул (һаҡмар). Бер ҡаҙаҡ майыңа барабар инде шул (эй)

**БАРАМАТ** (урта) *и.* ауылсы — *человек, шатающийся по деревне*

**БАРҘЫҠ** (эй) *и.* етешлек — *достаток.* Барҙыҡ белән торғанға йетәмә, балдарын уҡытты ул Хужый ғайтҡас

**БАРКАТ** (мейәс) *и.* бәрхәт — *бархат*

**БАРҠЫЛТАУ** (урта) *ҡ.* быжҡылдау — *крякать.* Үрҙәкләр барҡылташа

**БАРЛЫ** (эйек-һаҡмар) *с.* хәлле — *зажиточный.* Барлы гешеләр бар инде уыл ауылда

**БАРЛЫ-КӨРЛӨ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* етеш, бай — *зажиточный, зажиточно.* Ғүмер буйы барлы-көрлө йәшәне (төньяҡ-көнбайыш). Барҙы-гөрҙө (эй). Барҙы-гөрҙө гешегә барғас, бирешмәнеләр һуғыш сағында ла

**БАРМАҒА** (гәйнә, урта) *ҡ.* барырға — *идти.* Бармаға булдыра алмайым (гәйнә)

**БАРМАҠ: БАШТАЙ БАРМАҠ** (ырғыҙ) *и.* баш бармаҡ — *большой палец.* Балалы өйрәк (ырғыҙ), балан өйрәк (һаҡмар), балан өрәк, балан өйрәк (арғаяш), балан бармаҡ (дим), палан бармаҡ (гәйнә), бур бармаҡ (мейәс), сөбәбә бармаҡ (һаҡмар), уҡбармаҡ (эй) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец.* Урта тирәк (гәйнә, ырғыҙ) *и.* урта бармаҡ — *средний палец.* Ҡубыҙ уйын (гәйнә) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец.* Сөлдөрсөмәк (ырғыҙ). Кескенә бүбәк (ырғыҙ) *и.* сәтәкәй бармаҡ — *мизинец.* Әнсә бармаҡ, әнчә бармаҡ, әнәсә бармаҡ, әнәчә бармаҡ (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш), әнәсә бармаҡ (дим). Чеҙелек, чыңылиҡ, чыңырыҡ бармаҡ (гәйнә). Чәнтей барнаҡ (төньяҡ-көнбайыш)

**БАРМАҠСЫ** (дим, ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* уймаҡ — *наперсток.* Бармаҡсын (ҡыҙыл, урта урал)

**БАРМАҠСЫН** (мейәс) *и.* 1. Ҡаты тиренән эшләнгән уймаҡ — *наперсток из жесткой кожи.* 2. (эй) Бирсәткә — *перчатки.* 3. Һалҡында эшләгәндә бармаҡтарға тиренән тегелгән ҡулайлама — *специально сшитые для пальцев меховые чехлы, используемые во время работы в холодную погоду*

**БАРМАН** (эйек-һаҡмар) *и.* фарман — *указ, приказ.* Барҙыҡы барман белән, йуҡтыҡы дарман белән

**БАРНАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бармаҡ — *палец*

**БАРНИК** (мейәс, урта) *и.* сәйгүн — *чайник (фарфоровый для заварки чая)*

**БАРСАЛАУ** (дим, урта) *ҡ.* биҙәк төшөрөү — *делать узоры.* Барсалап тороп тегәбеҙ ҡара белән буйлатып (урта)

**БАРСАЛЫ** (эй) *с.* биҙәкле — *узорчатый.* Барсалы тауар

**БАРСАҺЫ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* бөтәһе — *все*

**БАРСЫЛЛЫҠ** (һаҡмар) *и.* муллыҡ — *достаток*

**БАРҪ** (һаҡмар, эй) *с.* ҡаты, тығыҙ — *плотный (о теле).* Барҫ итле ат (һаҡмар)

**БАРТАБАН** (һаҡмар) *р.* бирьяҡҡа — *сюда, в эту сторону.* Бартабан килә, кереүе бар

**БАРТАНДАУ, БАРТАН ИТЕҮ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* 1. Үсегеү — *таить злобу.* 2. (урта урал) Үпкәләү — *обижаться.* Бартандай ҙа йөрөй, бер һүҙ күтәрмәй

**БАРТАНСЫЛ** (төньяҡ-көнсығыш) *с.* үсексән, кенәле — *обидчивый, вредный*

**БАРЫМ** (урта, һаҡмар) *и.* көс, хәл — *сила.* Барымың йуҡ шул, ҡустым (һаҡмар)

**БАРЫМҺЫҘ** (урта, һаҡмар) *с.* арымтал — *слабый, быстро устающий (о лошади)*

**БАРЫМТА** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ҡаршы саҡырыу — *ответное приглашение в гости.* Барымтаһын ҡайтарыр гәрәк (ҡыҙыл)

**БАРЫШЛАНДЫРЫУ** (дим) *ҡ.* һатыу итеү — *барышничать*

**БАСИСА** (әй) *и.* шырттан тартылған иң юғары сортлы етен — *высший сорт кудели*

**БАСЛЫҠ** (гәйнә) *и.* 1. Күтәрмә — *крыльцо.* 2. Баҫҡыс — *ступенька*

**БАСМА** (гәйнә) *и.* ситса — *ситец*

**БАСТИЛ** (дим) *и.* мендәр ҙурлығындағы бәләкәй түшәк — *ватная подстилка для сидения*

**БАСТИТ, БАШТИТ** (урта) *и.* ваҡ бәлеш — *пирожки мясные*

**БАСУДНИК** (мейәс) *и.* һауыт-һаба кәштәһе — *полка для посуды*

**БАСЫУ ҠАНДАЛАСЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* еңгәсәй — *солдатик*

**БАСЫУ ТУРҒАЙЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**БАСЫМ** (кариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* йыуаш — *кроткий (о человеке).* Басымға баҡа баш

**БАСЫНЫУ** (гәйнә) *ҡ.* әйбер сигеү — *заниматься вышиванием*

**БАҪА** (урта) *и.* баҫмаҡ, гармун теле — *клавиш.* Гармун баҫалары эшләмәй

**БАҪАУ** (ҡыҙыл) *и.* баҫа — *посконь*

**БАҪАҠАЙ** (һаҡмар) *и.* баҫҡыс — *ступенька*

**БАҪАЛҠАЛЫ** (урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *с.* баҫалҡы — *скромный (о человеке).* Баҫыңҡалы (туҡ-соран, һаҡмар). 2. Йыуаш — *кроткий.* Баҫыңҡалыны баҡа баҫыр (һаҡмар)

**БАҪҠЫС** (ҡыҙыл, урта) *и.* 1. Күтәрмә — *крыльцо.* Батҡыс (дим, урта). 2. (төньяҡ-көнсығыш, урта) Түбәсәй — *заглушка (у самовара).* Басҡы (мейәс)

**БАҪМА I** (көньяҡ диалект, төньяҡ-көнсығыш) *и.* киндер буйлығында ун ете әйтем *(утыҙ һабаҡ)* еп — *тридцать ниток при счете нитки-основы (в домашнем ткачестве).* Баһма (ҡыҙыл), басма (төньяҡ-көнбайыш)

**БАҪМА II** (мейәс, урта) *и.* төрткө — *пятно.* Әйберә баҫма-баҫма ғына сыбар. Баһма сыбар (ҡыҙыл)

**БАҪМАҠ I** (мейәс, әй) *и.* 1. Баҫма — *мостки.* 2. (мейәс) Баҫҡыс — *лестница.* 3. (арғаяш, мейәс) Күтәрмә — *крыльцо.* 4. (арғаяш) Түбәсәй — *заглушка (у самовара)*

**БАҪМАҠ II** (ҡыҙыл, урта) *и.* этмә — *западня (на птиц)*

**БАҪМАҠТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йыш барып бер кешене йонсотоу — *утомлять человека частым посещением.* Баҫмаҡтаны лаһа был арала Ғәйней

**БАҪМАЛАУ** (һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* артынан килеү — *идти следом.* Ҡыҙыҡ бит, бала-саға шуға баҫмалай (һаҡмар)

**БАҪМАЛАТЫП** (ырғыҙ) *р.* артынса — *следом.* Мин уға ашыҡмай аҙағыраҡ килергә ҡушҡайным, ә ул баҫмалатып килеп тә йеткән

**БАҪМАЛЫ** (урта) *с.* күкһелләнеп торған — *мглистый.* Көн баҫмалы булып китһә, көн монары төшкән тейләр

**БАҪМАНСЫЛЫҠҠА БАРЫП** (туҡ-соран) *ҡ.* баҫып алырға ынтылып — *стремясь оккупировать*

**БАҪМАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* яҡын юлатмау — *близко не подпустить.* Ҡыҙыҡай ҙа баҫмай, ҡайтмайым тей ҙә ғуйа. ◊ Маң баҫмау (мейәс) килешергә теләмәү — *не соглашаться*

**БАҪРАУ** (урта) *ҡ.* баҫырыу — *наглухо накрыть, закрыть*

**БАҪТЫҒЫУ** (ҡыҙыл, урта урал, һаҡмар, әй) *ҡ.* баҫлығыу — *бредить во сне.* Йоҡтағанда баҫтығып-баҫтығып ала балаҡайым, ҡурҡҡан ахры (урта урал). Бастығыу (төньяҡ-көнбайыш)

**БАҪТЫРҒЫС I** (эйек-һаҡмар) *и.* салғы шынаһы — *клин-закрепитель (у косы)*

**БАҪТЫРҒЫС II** (әй) *и.* түбәсәй — *заглушка (у самовара)*

**БАҪТЫРМА I** (дим, урта) *и.* 1. Кәбән башына салап бәйләп һалына торған сыбыҡ — *гнет из нескольких ветвей для стога.* Баҫырма (ҡыҙыл). 2. (һаҡмар) Кәбән өҫтөнә һалынған ағас — *слега для стога.* Баҫырма (дим, урта). 3. (урта) Баҫрау — *слега*

**БАҪТЫРМА II** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* салғы шынаһы — *клин-закрепитель (у косы)*

**БАҪТЫРЫҠЛАУ** (урта) *ҡ.* артынан йөрөү — *ходить по пятам.* Баҫтырыҡлап йөрөй ирен

**БАҪТЫРЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Тауыҡты себеш сығарырға ултыртыу — *посадить курицу насиживать цыплят.* 2. Кеше итеү — *поставить на ноги кого-то (вывести в люди)*

**БАҪТЫРТЫУ** (әй) *ҡ.* баҫтырыу — *гнаться за кем*

**БАҪЫҠ** (мейәс) *с.* баҫалҡы — *спокойный (о человеке)*

**БАҪЫМСАҠ** (урта) *и.* бур ҡорт — *пчела-воровка*

**БАҪЫП: БАҪЫП ЙАУЫУ** (мейәс, туҡ-соран, әй) *ҡ.* оҙаҡ яуыу *(ямғыр тураһында)* — *идти продолжительно (о дожде)*

**БАҪЫПИРЕҮ** (мейәс, һаҡмар, әй) *ҡ.* көсләп биреү — *отдать насильно.* Әүәле геше ҡыҙҙы кейәүгә баҫыпирҙе лә ғуйҙы (һаҡмар)

**БАҪЫУ I** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* өйкәү — *натереть что (повредить трением).* Ат арҡаһын эйәрҙән баҫтырған (ҡыҙыл)

**БАҪЫУ II** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Һуғыу — *молотить (хлеб).* Комбайндар баҫмай, йамғыр булды бит. 2. (мейәс) Эшкәртеү — *возделывать.* Йер баҫыу

**БАҪЫУ III: МАЙ БАҪЫУ** (дим) *ҡ.* май яҙыу — *сбивать масло*

**БАҪЫУ IV** (урта) *ҡ.* һүндереү — *выключать.* Мынау илектерҙе баҫ әле, улым

**БАҪЫУ ҠАНДАЛАҺЫ** (урта) *и.* ҡыр ҡандалаһы — *клоп полевой*

**БАҪЫШЫУ** (урта) *ҡ.* баҫтырышыу — *гнаться друг за другом.* Баҫышып йөрөгәннәр урамта

**БАТАҺЫН: БАТАҺЫН УҠЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҙур эште тамамлау — *завершить большую работу*

**БАТИМА** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и. Фатима (женское имя)*

**БАТИСАҠ** (дим) *и. батист*

**БАТҠЫЛЫҠ** (арғаяш, дим) *и.* батҡаҡлыҡ — *топь*

**БАТҠЫЛЛЫҠ** (урта) *с.* батҡыл — *топкий*

**БАТҠЫС** (дим, ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, һаҡмар) *и.* баҫҡыс — *лестница*

**БАТЛЫҒЫУ** (дим) *ҡ.* баҫлығыу — *бредить во сне*

**БАТМА** (урта) *и.* баҫма — *издание*

**БАТМАН I** (ҡыҙыл) *и.* һаҙаҡ — *колчан*

**БАТМАН II** (дим) *и.* мөгәрәп — *погреб.* Ҡаймаҡ әнә шунда батманда

**БАТМАНСЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* күнәсек — *небольшой сосуд, сделанный из полого ствола дерева*

**БАТУЛ** (мейәс, әй) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный самотканый половик.* Хатыны эшкә шәб икән, әллә күпмә батул һуҡҡан (мейәс)

**БАТУН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* йыллаған һуған — *лук-батун*

**БАТШАЙ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* Урта Азияла ныҡ таралған йоҡа ебәк туҡыма — *среднеазиатская шелковая ткань.* Батшай сапан (ҡыҙыл)

**БАТЫЛ БУЛЫУ** (урта) *ҡ.* батыу, юғалыу — *застрять.* Киттеләр ҙә батыл булдылар

**БАТЫНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* баҙнат итеү — *осмеливаться.* Миңә батына алмай ул бик, бөжләй

**БАТЫР I** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* тырыш — *старательный.* Эшкә бик батыр түгел. Батыр эшләү *(еренә еткереп, тырышып эшләү)* — *работать с усердием.* Батырып эштәү (әй)

**БАТЫР II** (кариҙел) *и.* 1. Юл япрағы — *подорожник малый.* 2. Юл япрағының сәскәһе — *цветок подорожника.* Батыр йафраҡ (гәйнә)

**БАТЫР III** (дим) *и.* ҡаҙау һурғыс — *гвоздодер*

**БАТЫРҒЫС** (һаҡмар) *и.* шыртлаҡ — *кнопка (для одежды)*

**БАТЫРМАҠ** (дим) *и.* батырғыс *(ҡармаҡты һыуға батырғыс)* — *грузило.* Ҡармаҡҡа батырмаҡ эшләб алдым

**БАТЫРЫП** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* туйғансы — *вдоволь.* Батырыб аша

**БАТЫУ** (көнсығыш диалект, туҡ-соран, урта) *ҡ.* барыу, ярау — *идти, соответствовать.* Һиңә, ағай, хәрби кейем килешә, тик эфисәр пагуны ғына батмай, тине (урта)

**БАУ АУЫРЫУЫ** (ҡыҙыл) *и.* ыуа — *суставной ревматизм*

**БАУҘАЛЫП** (ҡыҙыл) *р.* иҫһеҙ көйө — *бессознательно.* Ҡалҡмай ҙа, бауҙалып тик йата. 2. (ҡыҙыл, әй) Уҡмашып — *висеть цепляясь друг за друга (о пчелах).* Ҡорт бауҙалып тора (ҡыҙыл). Бауланыу (эйек-һаҡмар)

**БАУҘЫ ЙАУҘЫҠ** (мейәс) *и.* ҡушъяулыҡ — *спаренный платок, которым покрывались молодые и средних лет замужние женщины*

**БАУЛАНДЫРЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ауырыҡһындырыу — *чувствовать тяжесть, ломоту в теле*

**БАУЛАУ, БАУЫЛАУ** (урта) *ҡ.* бәйләү — *завязывать.* Баланды бауылап әләһең

**БАУЫЛДАУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Яман тауыш сығарыу — *кричать дурным голосом.* Кәзәң бауылдай түгелме? 2. Аҡырыу — *орать.* Ниңә бауылдайһың?

**БАУЫЛЫУ** (дим) *ҡ.* мауығыу — *увлекаться.* Малларға бауылып тик торам

**БАУЫР: БАУЫР АҪТЫ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар, әй) *и.* кеше, хайуан һәм ҡоштарҙың ҡорһаҡ аҫты — *пах.* Йамғырҙан һуң дәрән кисеүҙең һыуы аттың бауыр аҫтынан булды (әй). ◊ Ней бауыр (арғаяш) ни тиклем — *сколько.* Бауыр аҫтынан йел үтеү (һаҡмар) үҫә төшөү — *подрасти.* Балалар йортонда бауыр аҫтынан саҡ ҡына йел үткәйне, күҙе-башы тыуған ауылға ҡарай боролор булды ла ғуйҙы бит бахырҙың. Бауыры ғалҡыу (көнсығыш диалект), бауыры ҡатыу (һаҡмар), үҫеү, үҫеп етеү — *вырасти (о человеке).* Улымдың баҫуыры ғалҡһа бирешмәҫ инем дә (әй). Бауыр баҫыу (ырғыҙ) эйәләшеү — *привыкать к кому-чему*

**БАУЫР АҒАСЫ** (дим, урта) *и.* борғоса — *пришва (в домашнем ткачестве).* Бауыр ағачы (минзәлә)

**БАУЫРҒАЛЫҠ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-һаҡмар) *и.* айыл — *подпруга.* Бауырһалыҡ (мейәс). Бауылтырыҡ (урта)

**БАУЫРҘАП: ЙЕР БАУЫРҘАП** (төньяҡ-көнсығыш) *р.* ергә тейә яҙып — *низко над землей.* Ыласын йер бауырҙап оса

**БАУЫРҘАУ** (арғаяш) *ҡ.* тирене һоло иҙелмәһендә екетеү — *пикелевание кожи в овсяном растворе*

**БАУЫРҘЫҠ** (көнсығыш диалект) *и.* айыл — *подпруга.* Бауырлыҡ (һаҡмар)

**БАУЫРМАЛ** (көнсығыш диалект) *и.* терәк мал — *основа, фонд (о скотине).* Ата малы — бауырмал (ҡыҙыл)

**БАУЫР ҮЛӘНЕ** (урта) *и.* шыршы үләне — *хвощ полевой*

**БАХ-БАХ-БАХ!** (минзәлә) *ы.* ат саҡырыу ымлығы — *междометие зова лошади*

**БАХИЛА I** (мейәс) *и.* 1. Тәрән итеп үрелгән бауһыҙ сабата, ҡата — *глубокие лапти-галоши без оборы.* Бахил (дим). 2. (әй) Һунар итеге — *охотничьи сапоги.* Абызыйымдың бахилаһы була туғайны аусыларға йөрөргә

**БАХИЛА II** (урта урал) *и.* буйға оҙон, ҡиәфәтһеҙ кеше — *человек высокого роста с некрасивой внешностью*

**БАХМИС** (һаҡмар) *и.* арғымаҡ — *рысак*

**БАХТА** (дим) *и.* баҡта — *шерсть-линька*

**БАХЫР** (дим) *и.* һалды туҡтатыр өсөн йылға уртаһына ҡағылған ағас — *кол, вбиваемый в середину реки для остановки плота.* Йылғаның әнә шул тәңгәленә бахыр ҡағылғайны

**БАХЫРНИСА** (гәйнә) *и.* тәлмәрйен — *лягушка*

**БАҺАУ** (һаҡмар) *и.* бағау *(бағана соҡоу өсөн тар йөҙлө бәләкәй балта)* — *топорик-долбежка*

**БАҺЫРСЫҠ** (һаҡмар) *и.* бахырҡай — *бедненький*

**БАҺМА: БАҺМА ЙАМҒЫР** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* оҙаҡ һибәләп яуған ямғыр — *моросящий продолжительный дождь*

**БАҺРАУ** (һаҡмар) *и.* өйкәлеүҙән малдарҙың, ҡоштарҙың аяҡтарында була торған ауырыу — *наминка (натертое, воспалившееся место на ногах животных и птиц)*

**БАҺРАУ ҺӨЙӘГЕ** (ҡыҙыл) *и.* умрау, умрау һөйәге — *ключица.* Баҫырау һөйәге (әй). Баҫҡыстан осоп төшөп баҫырау һөйәге һынған тей

**БАҺТЫРЫШ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* әбәк уйыны — *догонялка (игра)*

**БАҺЫЛҠА** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* баҫалҡы — *спокойный (о человеке).* Баһылҡа геше баш баһып эштәй ҙә йөрөй. Бәләкәй ғыҙы шу тиктем баһылҡа (ҡыҙыл)

**БАҺЫМ** (һаҡмар) *и.* ырҙын — *гумно.* Кискә саҡлы баһымда эшләнек

**БАҺЫМДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* яҡынлау *(йәш буйынса)* — *приближаться (по возрасту).* Ҡырҡҡа баһымдай

**БАҺЫРЫҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ҡыйыҡ тырансаларын баҫырып ятҡан ағас — *слега для придавления дранок на крыше*

**БАҺЫРЫУ I** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* быҫырыу — *наглухо накрыть, закрыть.* Буҙаны баһырып ултыртһаң ҡабарып килеп сыға (ҡыҙыл)

**БАҺЫРЫУ II** (мейәс) *и.* баҫрау — *слега.* Баһырау (ҡыҙыл)

**БАҺЫУ** (ҡыҙыл) *и.* йәшелсә баҡсаһы — *огород.* Ҡыҙҙар баһыуҙа эштәй

**БАШ I** (көнсығыш диалект) *с.* тәүге — *первый.* Баш ҡар. ◊ Башын ашау, башына йетеү *(һәләк итеү)* — *губить.* Баш таштап *(ярһып китеп)* — *разгорячась.* Баш тарау (мейәс) килен алырға барған еңгәнең килен башын тарап тәңкә биреү йолаһы — *свадебный обряд причесывания волос невесты.* Баш һыйпау *(ҡәйнәнең тәңкә биреп килененең башын һыйпау йолаһы)* — *свадебный обряд поглаживания свекровью по голове невесты*

**БАШ II** (дим, ҡыҙыл, һаҡмар, әй) *и.* сүпрә — *закваска.* Ҡымыҙға баш йаһабалаң (ҡыҙыл)

**БАШ III** (дим) *и.* мәһәр — *выкуп за невесту.* Баш ҫалдылар бөгөн

**БАША** (ҡариҙел) *и.* уҡ башағы — *наконечник стрелы*

**БАШАҒАС** (ҡыҙыл) *и.* киндерҙе һуға башлағанда ирешь башына ептәрҙе теҙә торған ағас — *палочка, при помощи которой основа прикрепляется к пришве (в домашнем ткачестве).* Башһалғыс ағасы (дим)

**БАШАЙ I** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* башаҡ — *колос.* Башай туҡманылар һуғыш уахытында (туҡ-соран). Һуғыш уахытында башайға күп йөрөлдө инде у (ҡыҙыл)

**БАШАЙ II** (дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Башалтай — *шерстяные носки ручной вязки.* 2. (арғаяш) *и.* баш һабып туланан тегелгән ҡунислы аяҡ кейеме — *обувь с суконными голенищами.* Башойоҡ (салйоғот)

**БАШ-АЙАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Баш-айаҡ сығып китте (ҡыҙыл). ◊ Бәләһенән баш-айаҡ (әй) бәләле булмайыҡ — *от греха подальше*

**БАШАҠ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бутау, малға бутап һалынған аҙыҡ — *месиво для скота.* Малға башаҡ бирәсе бар

**БАШАҠ II** (урта) *и.* ҡуҙаҡ — *стручок.* Башаҡай (дим)

**БАШАҠ: СЕЛГӘР БАШАҠ** (һаҡмар) *и.* ас башаҡ — *колос без семян*

**БАШАҠЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* малға аҙыҡ бутау — *готовить месиво для скота*

**БАШАЛАЙ** (урта) *и.* 1. Башалтай — *шерстяные носки ручной вязки.* Башаҡай (дим, ҡыҙыл, урта), башатай (урта), башантай (дим). 2. (һаҡмар) Ҡунысһыҙ башалтай — *шерстяные носки ручной вязки без паголенка*

**БАШ АЛМАҺЫ** (арғаяш) *и.* лепкә — *родничок (у новорожденных)*

**БАШАН** (урта, һаҡмар) *и.* 1. Бүкән — *подушка (у телеги).* 2. (урта урал) Башы ҡайҙа һуҡһа, шунда йөрөгән кеше — *неуправляемый (о человеке)*

**БАШБАУ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта) *и.* арба һәм сананың алдында баҫрауға эләктерелә торған бау — *веревка на передке телег и саней для закрепления слеги*

**БАШ-БАШҠА** (урта, әй) *р.* башҡа-башҡа — *по отдельности.* Баш-башҡа һал бесәнде менә шулайтеп (урта)

**БАШБӘЙҘӘМЕС** (салйоғот) *и.* яулыҡ эсенән бәйләй торған материя — *повязка под платок*

**БАШБӘЙРӘМ** (эйек-һаҡмар) и. баш-тояҡ бешереп саҡырыу йолаһы — *приглашение гостей на голье*

**БАШАУ МАЛ** (урта урал) *и.* 1. Оҙаҡ йәшәгән мал — *скотина, содержанная много лет.* 2. (әй) Баш бирмәҫ *(кеше, мал)* — *непокорный (о человеке, животных)*

**БАШЙАҪТЫҠ** (дим, урта) *и.* бүкән — *подушка (у телеги)*

**БАШЙЕП** (көнсығыш диалект, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Арба һәм сананың алдында баҫрауға эләктерелә торған бау — *веревка на передке телеги и саней для закрепления слеги.* 2. (көнсығыш диалект) Баштандырыҡ йәнәшенә ҡуйылған сепрәк — *тряпка, поставленная рядом с полочкой, при помощи которой основа прикрепляется к пришве (в домашнем ткачестве)*

**БАШКИҘЕҮ** (эйек-һаҡмар) *и.* хәситә — *женское нагрудное украшение из монет.* Башкиҙеү бер-ике кила була

**БАШКӨЛЛӨ, БАШКӨЛЛӘЙ** (һаҡмар) *р.* бөтөнләйгә — *навсегда.* Йаңы донйаға — китаптар донйаһына башкөллө инеп йуғалаһың да, тамаҡ ас, өҫ йаланғас булыуҙы ла онотаһың. Башкөллөй (ырғыҙ), башкөлли (төньяҡ-көнбайыш)

**БАШКӨН** (гәйнә) *и.* дүшәмбе — *понедельник*

**БАШ-КҮҘҘЕ: БАШ-КҮҘҘЕ БУЛЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* йәмәғәтле булыу — *жениться, выйти замуж*

**БАШҠАЛАНЫУ** (көнсығыш диалект, көньяҡ диалект) *ҡ.* ата йортонан башҡа сығыу — *отделиться хозяйством от родителей.* Атаңдар менән бергә тораһыңмы әле, улым, әллә башҡаландыңмы? (һаҡмар)

**БАШҠАРАМА** (көнсығыш диалект) *и.* сана табандарының алғы яҡтағы кәкре баштарын тоташтырып торған ҡарама — *передние вязки саней*

**БАШҠАРЫУ** (мейәс, әй) *ҡ.* үҙгәреү — *изменяться.* Ситтә йөрөп ҡалай башҡарып киткән ҡыҙы (әй)

**БАШҠАПСЫҠ** (һаҡмар) *и.* башкүнәк — *сосуд, сшитый из шкуры головы лошади*

**БАШҠОРТ КАФЫРЫ** (дим) *и.* «һ» өнө менән һөйләшеүсе башҡорт — *башкир, употребляющий в языке звук «һ»*

**БАШҠУРТ** (урта, әй) *и.* башҡорт — *башкир.* Башҡырт (урта, урта урал)

**БАШЛАНСЫҠ** (эйек) *с.* башланғыс — *начальный.* Башлансыҡ уҡыу

**БАШЛАНСЫҒАҒАС** (урта) *и.* киндерҙе һуға башлағанда ирешбашына ептәрҙе теҙә торған ағас — *палочка, при помощи которой основа прикрепляется к пришве (в домашнем ткачестве)*

**БАШЛАНТАЙ** (дим) *и.* башалтай — *шерстяные носки ручной вязки*

**БАШЛАУ I** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* баш һабыу — *пришивать голенище сапог к головкам*

**БАШЛАУ II** (урта, һаҡмар) *и.* йылға башы — *исток (реки).* Йылға башлауында ҡоҙоғо бар таҙа ғына (һаҡмар). Баштау (ҡыҙыл)

**БАШЛАУ III** (эйек) *с.* боронғо — *старинный.* Иһкеләрҙе белалмайым, алар башлау бит

**БАШЛАШ I** (урта) *р.* бер сығанаҡтан — *с общим источником (о реке).* Нәмәҙ Инйәр белән башлаш

**БАШЛАШ II** (урта) *р.* йәнәш — *рядом.* Башлаш йоҡланыҡ

**БАШЛЫҠ I** (урта) *и.* ҡайыш осон беркетеп ҡуя торған сыңға — *металлическое ушко ремешка*

**БАШЛЫҠ II** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Башкүнәк — *сосуд, сшитый из шкуры головы лошади.* 2. (эйек) Күҙлек — *сетка для лица (от пчел)*

**БАШЛЫ ШӘКӘР** (дим) *и.* эре киҫәкле шәкәр — *сахар комовой*

**БАШМАҠ I** (гәйнә) *и.* бер быҙаулар ике йәшлек һыйыр малы — *двухгодовалая телка*

**БАШМАҠ II** (урта) *и.* күндән тегелгән калуш — *кожаные галоши*

**БАШМАҠАЙ, БАШМАҠТАНА** (урта урал) *и.* башмаҡ — *годовалая телка.* Аҡ башмаҡай кетеүҙән ҡайтты

**БАШМАҠ ҠАТА** (мейәс) *и.* әрһеҙгә кейә торған тәпәшәк калуш — *неглубокие галоши для повседневной носки*

**БАШМАҠ МАЙЫ** (нөгөш) *и.* майҙың туртаһын йыйып, ҡабаттан иретеп алған май — *масло от повторного топления накипи масла*

**БАШМАҠ САБАТА** (гәйнә) *и.* йомро башлы сабата — *лапти с округленной головкой.* Башмаҡ сабатасын кейеп бейейләр иде ойоп...

**БАШМАН** (һаҡмар) *и.* ағас һауыт — *большая деревянная чаша.* Бал ҡарау өсөн башман йөрөтәбеҙ

**БАШОЙОҠ** (салйоғот) *и.* башалтай — *шерстяные носки ручной вязки.* Ике пар башойоҡ бәйҙәнем әле

**БАШПАЛА** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* баш бала — *первенец.* Сәлимәнең башпалаһы йабыҡ ҡына икән (ҡыҙыл)

**БАШ ПАҺЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Башты түбән эйеү — *опустить голову.* Баш паһа ойатынан. 2. *р.* киреләнмәй — *покорно.* Башын паһып эшләп тиг йөрөй

**БАШ СҮМЕСЕ** (дим, урта) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости.* Баш сүмес (әй), баш чүмеч (урта урал)

**БАШТАҠ** (гәйнә) *и.* 1. Шаян — *балагур.* Баштаҡ малай! Әйткәнне белми. 2. (урта урал) Уйында ла, эштә лә алда йөрөүсе кеше — *ведущий.* Ул һәр уаҡыт баштаҡ булды

**БАШТАНДЫҒАҒАС** (салйоғот) *и.* киндерҙе һуға башлағанда ирешбашына ептәрҙе теҙә торған ағас — *палочка, при помощи которой основа прикрепляется к пришве (в домашнем ткачестве).* Баштансыҡ (мейәс, әй), баштандырыҡ (әй), башлантырыҡ (ҡариҙел)

**БАШТАН-ТАБАН** (урта) *р.* баштан-аяҡ — *с головы до ног.* Баштан-табан кейҙереп ҡайтарҙы

**БАШТАНЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* баш яһалыу *(кәбеҫтә, һуғанға ҡарата)* — *образование кошечки, головки (о луке, капусте).* Кәбеҫтә баштана

**БАШТАНҠЫЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* аулаҡ өй ойоштороу — *организовать посиделки.* Әйҙә, беҙҙә баштанҡып алайыҡ әле

**БАШТАНЫЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* кемде булһа ла оҙон юлға оҙатҡандан һуң йыйылып сәй эсеү — *ритуал чаепития после проводов кого-нибудь в долгую дорогу*

**БАШТИРЕ: БАШТИРЕ БЕЛӘН** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *р.* бөтә яҡлап — *всесторонне.* Баштире белән уйлағанда эшләп була (төньяҡ-көнбайыш)

**БАШТҮБӘН** (урта) *и.* тау түбән — *в уклон.* Ат баштүбәнгә шәп барыр ул

**БАШ: БАШТЫ БӘЙЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* йәмәғәтле булыу — *жениться, выйти замуж.* Бер башты бәйләгәс, торалар инде

**БАШ ТҮНЕҮ** (минзәлә) *ҡ.* мейе һелкенеү — *сотрясение мозга*

**БАШТЫҒ ИТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* баш булыу — *быть главарем.* Тамыйан, Тиләү ошо Уралда баштыҡ иткәндәр

**БАШТЫҠ** (әй) *и.* 1. Күҙлек — *сетка для лица (от пчел).* 2. (ҡыҙыл, мейәс) Ҡолон нуҡтаһы — *недоуздок для жеребенка*

**БАШТЫ ТАҪТАМАЛ** (мейәс, әй) *и.* һөлгө — *полотенце с вышивкой на концах*

**БАШУЛ** (һаҡмар) *и.* тәүге ир бала — *мальчик-первенец*

**БАШ ҺАРҠЫУЫ** (ҡыҙыл) *и.* тау түбән — *уклон.* Бер тауҙы менеп баш һарҡыуына төшһәң, Ботай ауылы

**БАШҺЫНЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* буйһоноу — *подчиниться.* Бер кемгә лә башһынманы ул Таһир

**БАШҺӘНӘК** (һаҡмар) *и.* ос һәнәге — *вилы для завершения стогов*

**БАШ: БАШЫ БЕЛӘН** (ҡариҙел) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Башы белән бетте, йуҡ тием ҡый! Башы белән белмәйем!

**БАШЫРЫУ** (мейәс, урта урал, әй) *ҡ.* ошаҡлау — *доносить.* Белиндәге кешеләр бер-береһен башырҙылар (мейәс). Малайын башырып йөрөгән (урта урал). Үҙ ирең һине башырам теймә? (әй)

**БЕҘ АҒАСЫ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* энәлек — *боярышник*

**БЕҘЕ ҒАТЫУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* үтмәҫләнеү — *затупляться.* Бысаҡтың беҙе ғатҡан (арғаяш)

**БЕҘ: СИГӘ БЕҘЕ** (һаҡмар) *и.* итек табанын тегә торған беҙ — *шило для пришивания подошвы сапог*

**БЕҘҺАП** (ҡыҙыл) *и.* суртан балаһы — *щуренок*

**БЕҘӘЛЕК** (көнсығыш диалект, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Беләҙек — *браслет.* Борма беҙәлек (арғаяш) — *витой браслет.* Дамбаҡ беләҙек (дим) — *латунный браслет.* Көмөш беҙәлек (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) — *серебряный браслет.* Ҡаралтын беләҙек — *браслет из червонного золота.* Ҡауырҫын беләҙек (дим) — *перла-*

*мутровый браслет.* Ҡашты беҙәлек (көнсығыш диалект, эйек-һаҡмар) — *браслет с камнем.* Сулпылы беләҙек (ҡыҙыл), ҡылдыраҡты беҙәлек (мейәс), сыңғалы беҙәлек (ҡыҙыл, мейәс) — *браслеты со звенящими монетами.* Шимә беләҙек (дим) — *тоненький узорчатый браслет.* 2. (көнсығыш диалект) Бейәләйҙең һырланып бәйләнгән ҡунысы — *резинка варежек.* 3. (арғаяш, ҡыҙыл) Сепаратор тәрилкәләре — *тарелки сепаратора.* 4. (арғаяш, эй) Ең осо — *манжета*

**БЕҘӘЛЕК II** (арғаяш) *и.* энәғараҡ — *стрекоза.* Беләҙек (урта)

**БЕҘӘЛЕКЛЕК** (урта) *и.* шаушаҡ *(беләҙек)* һөйәктәре — *кости запястья.* Беләҙеклек (дим, урта), беләҙектек (эй)

**БЕЖӘҮКӘЙ** (һаҡмар) *и.* быҙау — *теленок.* Быҙауҡай (урта урал), безәү, безәүкәй (туҡ-соран, һаҡмар)

**БЕЗГӘКЛӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* себенләү — *метаться от укусов мух (о животных).* Безгәкләп ҡайтып китә һыйырлары, эҫе (һаҡмар). Безгәктәү (ҡыҙыл)

**БЕЗГӘЛӘК** (дим) *и.* тик тормаҫ кеше — *непоседа*

**БЕЗДӘҢНӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ултырып сыҙамау — *вести себя беспокойно.* Бездәңнәп тик йөрөй, бар сығып тор

**БЕЗЕЛДӘК I** (ырғыҙ) *и.* екән — *рогоз.* Безкелдәк (һаҡмар)

**БЕЗЕЛДӘК II** (урта) *и.* турғай төрө — *сверчок речной*

**БЕЗЕЛДӘК III** (урта) *и.* сүрәкә — *чижик (детская игра)*

**БЕЗЕРЕКЛӘҮ** (дим) *ҡ.* юрғалау — *идти иноходью (о лошади).* Безереклэп йуртыпара аты. Бызырыҡлау (урта)

**БЕЗЛӘК ЛАМПЫ, БЕЗЛӘҮЕК** (дим) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка*

**БЕЗНИК, БЕЗНӘК** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* эт ҡарағаты — *паслен черный*

**БЕЗНӘКӘҮ** (дим) *и.* ҡырҡ тартмасы — *коробейник*

**БЕЗӘҮ** (дим) *и.* 1. Быҙау — *теленок.* Безәүкәй (ҡыҙыл). 2. (ҡыҙыл) *ы.* быҙау ҡыуыу һүҙе — *слово для отгона теленка*

**БЕЗӘҮКӘЙ** (ҡыҙыл) *и.* быҙауҡай *(иркәләү мәғәнәһендә)* — *теленочек (ласкательно-уменьшительное слово)*

**БЕЗӘҮЛӘҮ** (дим) *ҡ.* быҙау саҡырыу — *звать теленка.* Безәүкәйләү (ҡыҙыл)

**БЕЙАҒА, БИАҒАЙ** (гәйнә, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡайнаға — *старший брат мужа*

**БЕЙАНА, БЕЙАНАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйнә — *свекровь.* Минем дә килен ике бейанай белән торҙо. Биана, бианай (гәйнә), бейанай (минзәлә)

**БЕЙАНДЫҘ** (һаҡмар) *и.* бер йыллыҡ андыҙ — *девясил-одногодник*

**БЕЙАТА, БЕЙАТАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡайны — *свекор.* Бейата, бейек ҡата, тип бейеп китәр ине. Биата (гәйнә), бейата (минзәлә)

**БЕЙБАШТАҠ** (һаҡмар) *с.* баш-баштаҡ — *своевольный.* Бейбаштаҡ бала булдың инде

**БЕЙБАШТАҠЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* баш-баштаҡланыу — *своевольничать*

**БЕЙЕК ЖИЛКӘ** (минзәлә) *и.* мунда — *холка (часть шеи животных)*

**БЕЙЕК ҠАНАТ** (дим) *и.* ләжәнкә сана — *розвальни*

**БЕЙЕКТЕЛЕК** (мейәс) *и.* бейеклек — *высота.* Кеше бейектелегендә бер айыу килеп сыҡты

**БЕЙЕМ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡәйнә — *свекровь.* Бейем улы биртеңгән, биртек-һәртек һорайым, ҡайным улы биртеңгән, ҡатыҡ-ҡотоҡ һорайым. Ундай йырларҙы бейем белмәһә, беҙ белмәйбеҙ (һаҡмар). Бием (минзәлә)

**БЕЙЕҮСЕ** (ҡыҙыл) *и.* торомтай — *пустельга.* Бейеүсе көйгәнәк (урта)

**БЕЙӘ ГҮНӘГЕ** (ҡыҙыл, урта) *и.* башкүнәк — *кадка (изготовленная из кожи головы или шеи лошади, коровы для доения кобыл)*

**БЕЙӘ ҒОНАН** (мейәс) *и.* ҡонажын — *кобыла от двух до трех лет*

**БЕЙӘНЕҮ** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* инаныу — *верить*

**БЕЙӘ СИЛӘГЕ** (мейәс) *и.* башкүнәк — *кадка (изготовленная из кожи головы или шеи лошади, коровы для доения кобыл)*

**БЕЙӨТ, НЕЙӨТ** (дим) *ҡ.* мөйәт — *хомутина.* Бөйәт (ҡариҙел), нөйәт (урта)

**БЕЙӘ ҺӨТТӨГӘНЕ** (эй) *и.* кәзә һаҡалы — *примула*

**БЕКЕЙ** (эй) *с.* бәләкәй — *маленький.* Бекей генә өй һалдыҡ

**БЕЛ** (мейәс) *и.* беле — *большой крохаль*

**БЕЛГЕРТЕҮ** (урта, эй) *ҡ.* белдереү — *известить.* Исмаһа, һат та йаҙмай белгертеп (урта)

**БЕЛЕК** (гәйнә, туҡ-соран, урта урал, эй) *и.* бәҫ — *достоинство.* Белеге бар аның (туҡ-соран). Белеге бумағас ней (урта урал)

**БЕЛЕКЕЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* бәләкәй — *маленький.* Белекей малайы өйҙә ҡалған (төньяҡ-көнбайыш). Бетеки (гәйнә), бетекей, белкей (ҡариҙел), белекәй (мейәс)

**БЕЛЕКТЕРЕҮ** (урта) *ҡ.* төшөндөрөү — *разъяснять.* Баланы туҡмап белектерепумай

**БЕЛЕМНЕК** (дим) *и.* белем, уҡымыш — *образование.* Беҙҙә белемнекле кешеләр булған ул

**БЕЛЕМСЕ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Бағымсы — *знахарь, знахарка.* 2. (ҡыҙыл, һаҡмар) Күрәҙәсе — *гадалка, предсказатель.* 3. (ҡыҙыл, мейәс, эй) Белгес — *специалист.* Бик белемсе ахутник булып һөйҙәй (эй) 4. (һаҡмар) *с.* уҡымышлы — *образованный.* Хәҙер халыҡ бик белемсе

**БЕЛЕН** (урта) *и.* ҡоймаҡ — *блины*

**БЕЛЕШ** (көнсығыш диалект) *и.* башҡорттоң урыҫ дуҫы — *русский друг, знакомый башкира.* Аҙна-ун көнгә Ырымбурға барам. Андағы бик шәп бер белешемдә ҡунаҡҡа саҡырырмын тигәйнем (ҡыҙыл)

**БЕЛЕШТЕРМӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* белмәү— *не знать.* Үҙемдә үҙем белештермәй килеп әсәйемде ҡосаҡланым

**БЕЛКЕРМӘҮ** (нөгөш) *ҡ.* белдермәү — *не оглашать*

**БЕЛМӘК** (урта) *ҡ.* белеү — *знать.* Арйағын белмәк йуҡ

**БЕЛМӘМ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* белмәйем — *не знаю*

**БЕЛМӘН ИДӘГЕ, БЕЛМӘН КҮПШЕГЕ** (урта) *и.* һөҙгөс — *дуршлаг*

**БЕЛСӘН** (урта) *и.* билсән — *осот.* Белсән беҙҙең баҡсала ла күб ул

**БЕЛӘ, БЕЛӘН** (көньяҡ диалект, ҡыҙыл) *б.* менән — *с.* Ҡул белә сәсергә булдыҡ (дим). Белән (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал), была, былан (урта), мынан, ман, мән (төньяҡ-көнсығыш)

**БЕЛӘ БЕЛЕҮ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* белеү — *знать.* Белә белһәң, тылда ла шәп кешеләр кәрәк (ҡыҙыл). Белә белһәң, мин аны әллә ғасан ишеттем (ҡыҙыл)

**БЕЛӘГАҒАСЫ** (әй) *и.* тырпыса үҙәге *(өйөртөү өсөн)* — *стержень дуплянки.* Белагагаҫ (урта урал)

**БЕЛӘҘЕК** (дим) *и.* ең осо — *манжета*

**БЕЛӘК** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* 1. Тотҡа *(сипарат, сар һәм ҡапҡанда)* — *ручка.* Сипарат беләге. Миҙагун беләге (ҡыҙыл). 2. (һаҡмар) Арбаның тимер үҙәге — *железная ось телеги*

**БЕЛӘК БӘКӘЙЕ** (мейәс) *и.* шаушаҡ *(беләҙек)* һөйәктәре — *кости запястья*

**БЕЛӘКСӘ** (арғаяш, урта) *и.* 1. Еңсә — *нарукавник.* 2. (урта) Шаушаҡ *(беләҙек)* һөйәктәре — *кости запястья*

**БЕЛӘНДЕК** (ҡыҙыл) *и.* намаҙлыҡ — *белая матерчатая подстилка, на которой совершают намаз*

**БЕЛӘНЕҮ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, әй) *ҡ.* беленеү — *стать известным; быть заметным*

**БЕЛӘҮ I** (арғаяш, мейәс) *ҡ.* беләүләү — *точить (бритву).* Сәс бәкеһен беләү (арғаяш)

**БЕЛӘҮ II** (ҡыҙыл, һаҡмар, әй) *и.* Уңмаған икмәк — *неудавшийся (о хлебе).* Беләү буған әпәйем, баҫылған (әй)

**БЕЛӘҮ III** (дим) *и.* мәләү — *лопаточка (употребляемая для выкапывания корнеплодов)*

**БЕЛӘҮҒОЙРОҠ** (һаҡмар) *и.* бәләкәй беләү — *оселок для бритвы*

**БЕЛӘҮ ТАШ** (мейәс) *и.* беләү — *оселок для бритвы*

**БЕЛӘШПАШ** (һаҡмар) *и.* беләш. 1. Таҙ — *паршивый.* 2. (урта урал) Пеләш — *плешивый*

**БЕРАУЫМ** (урта) *р.* бер аҙ — *немного.* Саматтың йөрәге йелкенеп ҡуйҙы, хатта бераууым үҙенең мында ниңә килгәнен онота биреп ултырҙы

**БЕР-БЕР** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш) *а.* 1. Ҡайһы бер — *некоторый.* Бер-бер малда ла булды бит ул ауырыу (ҡыҙыл). 2. (көнсығыш диалект) Берәй — *какой-нибудь.* Бер-бер нәмә бумаһа йарар ине (мейәс)

**БЕР-БЕРӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *а.* берәйһе — *кто-нибудь.* Ус төбө ҡысытһа, аҡса төшәргә, йә бер-берәү белән күрешергә була (ҡыҙыл)

**БЕРБӘС** (мейәс) *с.* бик бәләкәс — *крошечный, очень маленький.* Берәбәс, берәмәс (арғаяш, салйоғот). Берәбәс кенә бала ла шул хәҙәре була икән (салйоғот). Берәмәс кенә әпәй бир әле (арғаяш)

**БЕР ГӨЙЛӨ** (урта) *с.* аҡылға еңел — *придурковатый.* Аның бер гөйлө балаһынан ниндәй өмөт. Бер ғыйлы (ҡариҙел), бер ғыйҙы (әй)

**БЕРГҮТӘРӘМ** (көньяҡ диалект) *с.* ауыр — *тяжелый.* Бергүтәрәм балаһын ҡарай алмайым уның

**БЕР ҒАРА** (көнсығыш диалект) *и.* дүрт кәләп буйы еп — *длина четырех мотушек*

**БЕРҒАРЫШ** (һаҡмар) *и.* тәлмәрйен — *лягушка*

**БЕРҒАУЫН** (арғаяш, мейәс) *р.* берғауым — *немного.* Берҡауым (минзәлә). Тастымалны әлеп торам берҡауым

**БЕРҘЕКСӘГӘ** (әй) *и.* бер осраҡҡа — *на первый случай.* Әнә шул балтанды биреп тор, берҙексәгә йарар әле

**БЕРҘЕКТӘН** (төньяҡ-көнсығыш) *и. һ.* беренсенән — *во-первых.* Берҙектән, һин дөрөҫ эштәмәгәһең (арғаяш)

**БЕРҘЕКТӘШЕҮ** (ҡыҙыл, әй) *ҡ.* берләшеү — *объединиться.* Тәүге кәлхузға берҙектәшкәс, ана шунан үлеместе булып ауырып киткән (әй)

**БЕРҘӘТЕҮ, БӨРҘӘТӘҮ, БӨЙӨРЛӘТӘҮ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц).* Беркәтәү, беркәтә (ҡыҙыл), берләтәү (дим, урта), бөрмәтәү (урта)

**БЕРЕМЕС** (эйек) *ы.* бәй *(ғәжәпләнеү һүҙе)* — *слово, выражающее удивление.* Беремес, ҡулымды бешерҙем

**БЕРИҪӘП** (ҡариҙел) *р.* бер ни тиклем — *некоторое количество*

**БЕР ЙАРЫ** (урта) *и.* бер яҡ ситтә, ары — *в стороне.* Ғәжәп шәп ине был айран, ҡымыҙың бер йары торһон

**БЕР ЙОҺОҠ** (мейәс) *р.* бер ыңғайҙа — *попутно*

**БЕРКЕҮ** (мейәс, салйоғот) *ҡ.* берегеү — *сплотиться; сомкнуться*

**БЕРКЕШЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* берегешеү — *сомкнуться.* Икөй беркешеп утыра. Беркәү (дим, урта), беркеү (урта)

**БЕРЛЕК** (ҡыҙыл) *и.* белек — *понимание.* Үҙ берлегемә йөрөнөм

**БЕРЛЕКЛЕ** (дим) *с.* һүҙендә тороусы — *верный своему слову.* Берлекле кеше белән эш итҫәң дә була

**БЕРЛЕКЛӘШЕП** (һаҡмар, ырғыҙ) *р.* бергәләшеп — *сообща.* Кешеләр менән берлекләшеп берәй нәмә эшләрһең (ырғыҙ). Берлекләшеп сәсеп алып китteләр игенде (һаҡмар)

**БЕРЛИКЕ** (һаҡмар) *р.* бер килке — *немножко.* Асма ла бер лике нимә алды

**БЕРЛӘМ I** (ҡыҙыл) *с.* бөтөн — *целый, цельный.* Берләм кәмә

**БЕРЛӘМ II** (урта) *р.* берҙәм — *единодушно.* Берләм эшләйләр алар

**БЕРЛӘС** (ырғыҙ) *с.* яңғыҙ, бер — *одинокий.* Быйыл һарығымдың берләс кенә бәрәсе булды

**БЕРЛӘТӘ** (эйек) *с.* 1. Берҙән-бер — *единственный.* Бер генә ул ине, берләтә үлеп ҡалды йәшләй. 2. *р.* бер тапҡыр — *один раз.* Берләтә генә барып кил әле һиуға

**БЕРЛӘҮСЕ** (дим) *с.* яңғыҙ — *одинокий.* Берләүсе торғаннары ике ҫыйыр тотҡан

**БЕР НИГЕҘ** (эйек) *и.* ниргә — *венец.* Сәғәт йарымда саҡ бер нигеҙ бураныла̄р

**БЕР ОСТОҠ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *р.* саҡ ҡына — *капельку.* Бер остоҡ ҡына картуф апсығыпир быйаҡҡа (ҡыҙыл)

**БЕРРӘТ** (көнсығыш диалект, туҡ-соран, урта) *р.* бер ваҡыт — *однажды*

**БЕР ТИГӘС** (туҡ-соран, урта) *р.* 1. Бик тиҙ — *мигом.* Бер тигәс икебеҙгә лә йетәр тейер ине (туҡ-соран). Шунан ней бер тигәс ҡурҡыуым, бер тигәс ғәрләнеүем булды (урта). 2. (урта) *и. һ.* беренсенән — *во-первых*

**БЕР ТИП ТӘ** (мейәс) *р.* бер нисек тә — *никак.* Бер тип тә әйтәлмәйем

**БЕР ТИРӘ** (урта, әй) *и.* ҡорҙаш — *ровесник.* Икебеҙ ҙә бер тирә, алтмыш алты йәштәбеҙ (урта)

**БЕР ТӨРҘӨ** (көнсығыш диалект) *а.* 1. Әллә ниндәй — *какой-то.* Бер төрҙө ҡейәфәтһеҙ геше ул Сәлих (ҡыҙыл). 2. (әй) *с.* аҡылға еңел — *придурковатый.* Бер төрҙө буғас бер эш эштәйамай тиг йата. Бер төрлө (дим, һаҡмар)

**БЕР УҢАЙ** (урта) *р.* бер ыңғайҙа — *заодно.* Тунап ырғыта баралар бер уңай

**БЕРУТАЛА** (ырғыҙ) *р.* бер ыңғайҙан — *заодно.* Берутала эшләп ҡалайыҡ тинем шул

**БЕР-ҺЕР КИТЕРЕҮ** (дим) *ҡ.* пыран-заран килтереү — *разносить в пух и в прах.* Әрләп бер-һер китереп бетерҙеләр

**БЕРШӘП** (кариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, әй) *р.* 1. Бер аҙ — *немного.* Бершәп кенә көт әле (ҡариҙел). Бершәп барғас та ауыл булыр (урта урал). Бершәп эштәбағас сәй эсәрбеҙ (әй). 2. (ҡариҙел) Бер ваҡыт, бер ара — *когда-нибудь, одно время.* Йә йыуыб аласың бершәптә

**БЕР ӘҘЕР** (әй) *р.* бер ваҡыт — *однажды.* Бер әҙер донйа йемеш сәйе китергәйнеләр лафкаға, иҫеңдәме?

**БЕР ӘҘЕРӘК** (көнсығыш диалект) *р.* бер аҙ — *немного.* Бер әҙерәк кетеү гөтөп ҡайттым әле, һыуһаным (әй)

**БЕРӘЙ ЙАРЫ** (ҡыҙыл, урта) *р.* бер яры — *куда-нибудь.* Закирҙы берәй йары командировкаға киткәндер, тип уйлап, урын йәйеп йатты (урта)

**БЕРӘМЕГ АУЫРЫУ** (әй) *и.* таралмаған, йоғошло булмаған ауырыу — *одиночная, незаразная болезнь.* Берәмег ауырыу буғас, ҡурҡыныс түгел шул

**БЕРӘМТЕКЛӘҮ** (гәйнә, дим, ҡариҙел) *ҡ.* 1. Бөртөкләү — *перебирать по одному.* Берәмтекләп сүпләп алдым (ҡариҙел). Берәмтектәү (ҡыҙыл, урта урал, әй). 2. (ҡариҙел) Ауырлыҡ менән ҡәҙерләп ҡарау, үҫтереү — *воспитывать с большим трудом.* Берәмтекләп ҡараным балаларҙы. Ата-инәгә лә берәмтекләп ҡарау гәрәк

**БЕРӘМӘ** (мейәс) *а.* бер нәмә — *ничто.* Ҡоро ҡуҙаҡ шыптырҙап тора, берәмә лә йуҡ

**БЕРӘМӘ, БЕРӘМЕ** (әй) *р.* хатта — *очень, сильно.* Берәмә сарсаб ауырып йаттым

**БЕРӘҪ** (арғаяш) *с.* тырыш — *старательный*

**БЕРӘҮЕЛКӘ** (ҡыҙыл) *и.* тыҡрыҡ — *переулок.* Берәүелкә йағында йөрөй ине малайың

**БЕРӘҮЕШ** (дим) *с.* бер төрлө — *одинаковый.* Берәүеш ғәҙәтле ике геше булды ул ауылда

**БЕРӘҮКӘЙ** (ҡыҙыл) *а.* берәү — *кто-то.* Бөгөн берәүкәй мине уйынға саҡырҙы

**БЕРӘШКӘ АТЫ** (ҡыҙыл) *и.* мисәү аты — *пристяжная*

**БЕРӘШКӘЛӘҮ** (дим, ҡариҙел, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* мисәүләү — *запрячь в пристяжку.* Берәшкәләп тереп ат йегеп сығып китерҙәр ине әүәле (ҡыҙыл)

**БЕСБЕТЕҮ** (урта) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**БЕСБЕТӘҮ, БЕСТӘТӘҮ** (эйек) *и.* ыштанһыҙ малай — *мальчик без штанов*

**БЕСЕЙ ГҮМӘСЕ** (әй) *и.* бесәй табаны — *просвирняк.* Бәләкәй саҡта бесей гүмәсен беҙ ҙә ашай туғайның. Бесәй гүмәсе (урта)

**БЕСЕЙ ГОЙРОҒО** (дим, урта) *и.* 1. Аҡ алабута — *щирица.* 2. (дим) Тимофеевка

**БЕСЕЙ ЖИЛЕГЕ** (дим) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг.* Бесей йелеге (дим, ҡариҙел, танып, урта урал)

**БЕСЕЙ ЙЕМЕШЕ** (арғаяш) *и.* бесәй табаны — *просвирняк*

**БЕСЕЙ КӨПШӘҪЕ** (дим) *и.* шыма көпшә — *дягиль*

**БЕСЕЙ МАЙЫ, БЕСЕЙ МАҢҠАҺЫ** (әй) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг.* Бесей майы өҙөлһә эш хараб инде

**БЕСЕЙ ҺӘҘӘБЕ** (әй) *и.* бесәй табаны — *просвирняк.* Бесей һәҙәбе беҙ бәләкәй саҡта урам тулы булыб утырыр ине

**БЕСЕК** (урта) *и.* 1. Ебегән — *недотепа.* 2. (кариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта) *с.* кешегә һырығыусан — *навязчивый.* 3. (төньяҡ-көнсығыш) Ҡылтым — *обидчивый.* Бесек буған өсөн бөрҙө тора ул (әй)

**БЕСЕКТӘНЕҮ** (мейәс) *ҡ.* көйһөҙләнеү — *капризничать.* Ҡунаҡ киһә бала бесектәнеп китә ул

**БЕСЕКҺАҒЫҘ** (әй) *с.* кешегә һырығыусан — *навязчивый.* Ну, бесекһағыҙһың да инде, бер һырышһаң ҡайтырыңды онотаһың

**БЕСЕМҒАТА, БЕСЕМНЕ ҒАТА, БЕСМӘ ҒАТА** (урта) *и.* ҡатын-ҡыҙҙар өсөн аянан яҫы ҡара тауар һаплап, өҫтөнән төрлө төҫ менән ҡайылып, олтарып теккән үксәһеҙ аяҡ кейеме — *вид женской обуви без каблука с кожаной головкой и холщевым передком с разноцветной каймой*

**БЕСЕМЕЙ** (урта урал) *и.* ығыш — *копуша.* Шул бесемейгә эш ҡушама гешe?

**БЕСЕМНӘҮ** (урта) *ҡ.* ҡатаға киндер ҡуңыс һаплау — *пришивать к обуви верх из холста*

**БЕСКЕЛДӘҮ** (кариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* йәшләнеү *(күҙҙәр тураһында)* — *слезиться*

**БЕСКӘКЛӘҮ** (эйек) *ҡ.* сәскәкләү — *носиться от укуса овода (о животных).* Һыйырлары бескәкләп сығып китте

**БЕСЛӘК** (урта) *и.* 1. Бысый күҙ — *больные слезящиеся глаза.* 2. Һуҡыр шәм — *коптилка.* Беслек (дим)

**БЕСЛӘКЛӘНЕҮ** (дим) *ҡ.* һыуланыу — *мокнуть*

**БЕСНӘК** (урта урал) *и.* епшек ҡар — *мокрый снег*

**БЕСПЕК** (ҡариҙел) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка*

**БЕСПЕК КҮҘ** (кариҙел) *и.* бысый күҙ — *больные слезящиеся глаза.* Беспек күҙле ҡыҙын күргәнең бармы?

**БЕСТЕК** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *с.* бәләкәй — *маленький.* Бестек тирәҙә (төньяҡ-көнбайыш), бестекәй (гәйнә), быстыҡ (туҡ-соран)

**БЕСТЕРӘҮЛӘҮ** (урта) *ҡ.* биштәрләү — *повесить через плечо.* Арҡаһына бестерәүләп тос ҡына әйбер артмаҡлаған был йегет Баҡый ауылын сығып, тайаҡ ташламы йер китмәне, тауға үрелде

**БЕСӘЙ АЙАҒЫ** (мейәс) *и.* бесәй табаны — *просвирняк.* Бесәй усы (урта), бесәй һәҙәбе (әй)

**БЕСӘЙБАШ ЙАБАЛАҒЫ** (урта) *и.* һупайҙы — *сыч.* Өкө йабалағы — *филин.* Бесәйбаш йабалағын кисә генә күргәйнек тә

**БЕСӘЙБАШ ӨКӨ** (ҡыҙыл) *и.* өкө ябалағы — *филин*

**~~БЕСӘЙ БӘРӘМӘСЕ~~** (дим) *и.* бесәй табаны — *просвирняк*

**БЕСӘЙГҮҘ** (урта) *и.* ябалаҡ — *сова*

**~~БЕСӘЙ ИКМӘГЕ~~** (урта, һаҡмар) *и.* бесәй табаны — *просвирняк.* ~~Бесәй йафрағы~~ (урта), ~~бесәй икмәге үләне~~ (мейәс), ~~бесәй төймәһе үләне~~ (ҡыҙыл), ~~бесәй үләне~~ (һаҡмар), ~~бесәйүлән~~ (эйек)

**БЕСӘЙ ЙЕЛЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**~~БЕСӘЙ ҠУҘҒАЛАҒЫ~~** (урта, һаҡмар) *и.* башы ҡуҙғалаҡ сәскәһе һымаҡ ваҡ ҡына япраҡлы үлән — *щавелеобразная трава*

**БЕСӘЙ МАЙЫ** (дим, туҡ-соран) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг.* Бесей майы (әй)

**БЕСӘЙ МАҢҠАҺЫ** (урта) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**~~БЕСӘЙ ТАРЫҺЫ~~** (урта) *и.* ҡара алабута — *лебеда черная.* Бесәй дарыҫы (дим)

**БЕСӘН: ҠАТЫҠЛАНҒАН, ТӨТӘГӘН БЕСӘН** (урта) *и.* еүеш көйөнсә йыйылыу сәбәпле янып ҡатҡан бесән — *перепревшее сено*

**БЕТЕЙ** (кариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* имсәк — *грудь*

**~~БЕТЕП~~** (кариҙел) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Ул да бетеп башҡырт. Бетеп безнең тормош инде ул китапта

**БЕТЕҮ** (дим, урта) *и.* 1. Ҡорама — *верх одеяла или подстилки, сшитый из треугольных разноцветных лоскутков.* 2. Ҡораманан тегелгән стена ҡорғаны — *занавес для стены, сшитый из треугольных лоскутков*

**БЕТЕҮЛӘҮ** (дим, урта) *ҡ.* ҡорама тегеү — *пришивать лоскутки*

**БЕТЕҮСӘ I** (урта) *и.* 1. Ваҡ ҡына өсмөйөш бетеү формаһындағы биҙәк — *узор-аппликация в форме треугольников.* Бетеү биҙәк (мейәс). 2. Ҡорама — *одеяло или покрывало, сшитое из клинышков материи в форме треугольников*

**~~БЕТЕҮСӘ~~ II** (урта) *и.* йыуаса — *печенье, сваренное в кипящем масле*

**~~БЕТЛЕКӘЙ~~** (урта) *и.* сүрәкә — *чижик (детская игра).* Бетлекәй тайағы

**БЕТЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* хәрәмләшеү, алдашыу *(уйында) — хлюзить (в игре).* Күпме бетләшергә була һиңә?

**БЕТМЕР** (салйоғот) *с.* уңған — *расторопный в работе.* Бетмер геше. Бөтмер (әй)

**~~БЕТСӘ~~** ( көнсығыш диалект, урта) *и.* 1. Ҡысынма — *чесотка.* 2. Һыткы — *прыщ*

**БЕТСӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* эҫенән тәнгә ваҡ ҡына ҡыҙыл бөрсөк сығыу — *появление потницы на теле*

**~~БЕТТЕКӘЙ~~** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* һарыҡ йыуаһы — *горный лук.* Беттекәй эҙҙән сығып китә туғайныҡ (арғаяш)

**~~БЕҮӘ~~** (минзәлә) *и.* быуа — *пруд.* Балыҡ беүәсе

**БЕТҺЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тиҙ генә аяҡҡа баҫыу — *быстро встать на ноги*

**~~БЕТӘҮ~~ I** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* 1. Ваҡ мал ояһы — *овчарник.* 2. (әй) Кетәк — *курятник*

**~~БЕТӘҮ~~ II** (көнсығыш диалект) *с.* бөтәү — *цельный.* Бетәү аштыҡ

**БЕТӘҮ III** (мейәс) *и.* бетеү — *амулет*

**БЕТӘҮҘӘЙ** (көнсығыш диалект) *р.* бөтәү көйө — *в цельном виде.* Тирмәнде тешәмәгәндәр әллә ней, бойҙай бетәүҙәй төшөп тик тора (ҡыҙыл)

**~~БЕЧНӘК~~** (гәйнә) *и.* беснәк — *синица*

**~~БЕШБЕЛДЕК~~** (танып) *и.* бысый күҙ — *больные слезящиеся глаза*

**БЕШЕБАШ** (ырғыҙ) *с.* үҙ фекерле — *самостоятельный в мышлении*

**БЕШЕГЕҮ** (дим, ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* нығыныу — *стать крепким (о дереве).* Ҡарағас ағасы йер аҫтында суйын булып бешегеп китә (ҡыҙыл). Бешенеү (дим). Бешенгән ағас был. 2. (мейәс, әй) Һыу эсендә оҙаҡ ятҡан ағастың шешенеүе — *разбухание дерева, долгое время находящегося в воде*

**~~БЕШЕКЛӘҮ~~** (һаҡмар) *ҡ.* бешегеү — *преть, упреть (о ногах).* Бешенеү (арғаяш, мейәс, салйоғот). Айаҡ бешенеп киткән (арғаяш)

**БЕШЕРЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡыҙҙырыу — *калить.* Тимер бешереү

**БЕШЕҮ I** (дим) *ҡ.* мал тиреһен йоҙроҡ менән һыҙырыу — *освежевать шкуру кулаком*

**БЕШЕҮ II** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡыҙарыу — *покраснеть.* Болот бешенкерәп йәшкәҙәй

**БЕШЕҮҘЕ** (көнсығыш диалект) *с.* бешкән — *испеченный.* Бешеүле (урта, һаҡмар). Бешеүле икмәк алығыҙ (урта)

**~~БЕШКӘК~~ I** (арғаяш) *и.* бешмә — *ящур*

**БЕШКӘК II** (урта) *и.* гөмбөр — *ботало.* Бешкәгемә һап ҡуйып алырға кәрәг ине

**~~БЕШКӘН I~~** (дим, көнсығыш диалект) *с.* 1. Ҡайнаған — *кипяченый (о воде, молоке и т.д.).* Бешкән ҫыу (дим), бешкән һөт, бешкән ҡаймаҡ (көнсығыш диалект). 2. (урта) Һелтелә ҡайнатылған — *отбеленное в щелочи.* Бешкән йеп

**БЕШКӘН II** (дим) *с.* бешеккән — *плотный, крепкий (о дереве)*

**БЕШМӘК** (урта) *и.* ҡыҫыҡ күҙ — *глаза с узким разрезом*

**БЕШӘКЛӘҮ** (көньяҡ диалект) *ҡ.* бешекләү — *обваривать (внутренности скота и т.д.).* Бешәләү (ҡыҙыл)

**БЕШӘЛКӘҺЕҘ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ебегән — *недотепа.* 2. (эйек-һаҡмар) Кешегә һырығыусан — навязчивый

**БЕШӘРЕҮ** (һаҡмар, эйек) *ҡ.* йәшәреү — *зеленеть.* Ҡарағай ағаслар бешәреп китә йәшен килеү белән (эйек)

**~~БЖАН~~** (минзәлә) *и.* иңкеш — *шмель*

**БИАҒАЙ** (гәйнә, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡайнаға — *старший брат мужа.* Биағай — ҡарт ир, йанағай — йарты ир (төньяҡ-көнбайыш)

**БИАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* буяу — *краска.* Биағың күп түгелме?

**БИАНА, БИАНАЙ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйнә *(иренең әсәһе) — свекровь (мать мужа).* Ғөмөргә бианай белән торҙом (минзәлә)

**БИАНУЛ** (урта) *и.* ейән — *внук.* Бианулым әле генә килеп киткәйне

**БИАТА** (минзәлә) *и.* ҡайны *(иренең атаһы) — свекор*

**БИБАШТАҠ** (ырғыҙ) *с.* баш-баштаҡ — *своевольный.* Бибаштаҡ балам буманы, алай

бигылсын

**БИБЕК** (каризел, ырғыз) *и.* тәгәрлек — *чибис.* Бибет (ырғыз)

**БИБЕШ** (урта) *и.* себеш — *цыпленок.* Бипеш (дим). Бибешләрем сыға тип өйзә тик торам

**БИҒЕЛЕЙ** (һаҡмар) *с.* 1. Килделе-киттеле — *ненормальный.* Биғелей бай белән ғүмер үтте кий. Биғәнәш (һаҡмар). 2. (урта урал) *и.* бер урында йәшәп сыҙамаған, төрлө ерҙә йөрөгән кеше — *беглый, беглец*

**БИҒЫЛ** (дим) *и.* ҡасҡын — *беглец*

**БИҘ** (урта) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**БИҘА** (ҡыҙыл, әй) *и.* 1. Бәлә — *беда.* Мын утыра бер биҙа (ҡыҙыл). 2. (мейәс, әй) *р.* бик — *очень.* Биҙа күп. Беҙҙең мәктәп биҙа һәйбәт бит ул (мейәс)

**БИҘАЙ** (дим, һаҡмар) *и.* бойҙай — *пшеница.* Боҙай (һаҡмар, әй)

**БИҘА ҠОРОУ** (һаҡмар) *ҡ.* бәләләү — *скандалить.* Ҡайҙа ла биҙа ҡороп тик йөрөй

**БИҘАЛАШЫУ** (урта) *ҡ.* бәлә һалыу — *балясничать*

**БИҘ АУЫРЫУЫ** (арғаяш) *и.* силсә — *туберкулез шейных желез*

**БИҘБОЛОТ** (мейәс) *и.* йомарланып торған ҡуйы, ҡара болот — *густая темная туча.* Биҙболот сыҡҡан, йамғыр йауыр инде

**БИҘГӘК КӨН** (урта) *и.* йонсоу көн — *пасмурный день*

**БИҘГӘКЛЕ: БИҘГӘКЛЕ РӘҮЕШТӘ** (туҡ-соран) *р.* сабырһыҙланып — *с нетерпением.* Кисте көтөү беҙҙең өсөн бик оҙаҡ булды. Беҙ уны биҙгәкле рәүештә көттөк

**БИҘҘӘТЕҮ: КӨН БИҘҘӘТЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* көн боҙолоу — *стать пасмурным (о погоде).* Көн бизләү (әйек-һаҡмар). Быйма кейгән булып көндө бизләтеп ҡуй тағы!

**БИҘЕЛ** (дим) *и.* төп ауылдан айырылып күсеп ултырған ауыл — *выселок.* Алар бөтәҫе лә биҙелдәр

**БИҘЕР I** (арғаяш) *и.* бүҫер — *грыжа*

**БИҘЕР II** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* асыҡлыҡ — *просека*

**БИҘЕРКӘ** (мейәс) *и.* бәләкәй биҙрә — *ведерко*

**БИҘЕРӘҮ** (ҡыҙыл, урта урал, һаҡмар, ырғыз) *ҡ.* 1. Ялҡыу — *тяготиться.* 2. (урта урал) Ҡурҡыу — *опасаться.* Аларға барырға биҙерәп торам, тағы ней булыр тип

**БИҘЛӘҮЕК** (урта) *и.* йонсоу көн — *ненастье*

**БИҘРӘ ҠЫЛЫСЫ** (урта) *и.* биҙрә тотҡаһы — *ведерная дужка.* Хатта һыу килтергәс, биҙрәләренең ҡылысын, тауыш сыҡмаһын тип, әкрен генә ысҡындырыр булды

**БИҘРӘТӘҮ** (дим) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БИҘУН** (ҡыҙыл) *и.* бәләсел — *поднимающий шум (о человеке).* Икенсе шу биҙунынды эйәртеп кимә беҙгә

**БИҘӘКӘЙ** (әйек-һаҡмар) *с.* биҙәлгән — *разукрашенный.* Ҡара күк костйум уның биҙәкәй күҙҙәренең төҫөн тағы ла асыҡлап, һомғол буйына килешеп тора ине

**БИҘӘНСЕК I** (дим, туҡ-соран) *и.* ташбаш — *пескарь*

**БИҘӘНСЕК II** (урта урал) *и.* үҙен ҡарап, биҙәнептөҙәнеп йөрөгән ҡатын-ҡыҙ — *аккуратная в одежде женщина*

**БИҘӘР I** (көнсығыш диалект, урта) *и.* биҙәк — *узор*

**БИҘӘР II** (урта) *с.* матур — *красивый*

**БИҘӘР III** (ырғыҙ) *и.* ерәнеү — *отвращение.* Баланың аҙары буһа ла, биҙәре бумаһын

**БИҘӘРҘЕ** (әй) *с.* тауарҙың урыны-урыны менән түңәрәк булып, ҡалҡып ҡына торған төрө — *буклерованный (о ткани).* Биҙәрҙене йаратам, йомшаҡ кейеүгә

**БИҘӘРҘӘНЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* һирәк кенә булып селтәрләнеп тороу — *быть сетчатым.* Биҙәрҙәнеп тора ҡаҙбауыр болот

**БИҘӘРҘӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* биҙәкләү — *разрисовать*

**БИҘӘРЕҮ I** (һаҡмар) *ҡ.* ялҡыу — *тяготиться.* Кеше унан биҙәрей

**БИҘӘРЕҮ II** (урта урал) *ҡ.* 1. Ҡыҙарыу — *покраснеть.* Үҙ һүҙенән үҙе биҙәреп сығып китте. 2. Буҙарыу — *посереть.* Болоттар биҙәрә баштаны

**БИҘӘРЛЕ** (урта) *с.* 1. Биҙәкле — *узорчатый.* Биҙәрле сеүәтә. 2. Сыбар — *пестрый*

**БИҘӘРЛӘҮ I** (һаҡмар) *ҡ.* интегеү — *мучиться.* Кыуартир йағынан нык биҙәрләне

**БИҘӘРЛӘҮ II** (ырғыҙ) *ҡ.* биҙәкләү — *украшать; разрисовывать.* Биҙәрҙәү (көнсығыш диалект)

**БИҘӘҮ СӘСКӘ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ҡыҫыр сәскә — *пустоцвет*

**БИЗГАР** (каризел) *и.* ташбаш — *пескарь*

**БИЗДЫЙАЛА** (ҡыҙыл, мейәс, урта, әй) *р.* бушҡа — *впустую.* Биздыйала эрәнйетәһең кешене (ҡыҙыл)

**БИЗЕК** (ырғыҙ) *и.* ашыҡ уйнағанда отош мәсьәләһен хәл итә торған бер аяҡ баҫымы күләмендәге үлсәү берәмеге — *единица измерения, равная длине ступни, которая учитывается во время игры в бабки для решения вопроса о выигрыше*

**БИЗЛӘНЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* уҡмашыу — *скомкаться (о шерсти)*

**БИЗМЕН** (һаҡмар) *и.* осҡат — *бузина красная*

**БИЗМӘН: БИЗМӘНГӘ УЛТЫРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* кәм үлсәү — *недовесить.* Бизмәнгә ултырыпирә

**БИЗНАҺАҠ** (урта) *с.* ғәйепһеҙ — *безвинный.* Бизнаһаҡ кешегә бәйләнеп тораһың

**БИЗНӘКӘҮ** (урта урал) *и.* 1. Ҡылтым — *недотрога.* Бизнәкәүгә бизнәк, биленә имгәк. 2. Юҡҡа шаулап йөрөгән кеше — *скандалист*

**БИЗӘҢГЕС** (каризел) *с.* биҙәнгән — *накрашенный.* Бизәңгес кенә апалар килгән

**БИЙАҠ, БИЙАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* буяу — *краска*

**БИЙӘНЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* инаныу — *верить*

**БИК: БИК ТӘ БИК** (көнсығыш диалект) *р.* бигерәк — *слишком.* Бик тә бик баланды ҡыҙғана икәнең кешенән, өйөндә утыр (ҡыҙыл)

**БИКАР** (көньяҡ диалект) *р.* бикәр — *напрасно.* Байа бикар ҡыҙымды өй йыуырға ҡушмағанмын (һаҡмар)

**БИКЕРӘ** (ҡыҙыл) *и.* шырт балыҡ — *ерш*

**БИКЕТКЕС** (урта) *и.* келә — *дверной крючок.* Ишектең бикеткесе һурылып сыҡҡан. Биккес (салйоғот)

**БИКЛӘҮЕС** (һаҡмар) *и.* ылаш — *помост для сушки курута*

**БИКӨЛЛӨ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Бикөллө йүк кешеләй торалар (урта)

**БИКРӘ** (минзәлә) *и.* ҡырпа *(балыҡ) — белуга*

**БИКСЕРЕҮ** (дим) *ҡ.* сүгеү — *стать меньшим (о человеке).* Ҡартайҙыҡ, биксерҙек

**БИКӘ** (дим, урта, һаҡмар) *и.* 1. Ҡәйенбикә — *золовка (старшая сестра мужа или жены).* Бикәм (эйек-һаҡмар). 2. (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) Кәләш — *жена.* 3. (арғаяш) Абыстай — *жена духовного лица*

**БИКӘН** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* балтырған бәбәге — *завязь борщевика.* Пикән (ҡариҙел)

**БИКӘН КӨПШӘҪЕ** (урта урал) *и.* балтырған — *борщевик*

**БИКӘНСӘ** (урта) *и.* сәсеп үҫтерелгән кәрешкә — *окультуренная вика*

**БИКӘНӘ** (арғаяш) *и.* бөйән — *двенадцатиперстная кишка*

**БИКӘР** (ҡыҙыл) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Бикәр шәбәйҙе лә гитте

**БИКӘС** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡайынһеңле — *младшая золовка*

**БИҠӘСӘП** (ырғыҙ) *и.* тар иңле ҡалын ебәк туҡыма — *толстая узкая шелковая ткань*

**БИЛ: БИЛ БЫУЫУ** (көнсығыш диалект, урта) *ҡ.* оҙатып алып киткәндә еңгәләре килендең билен билбау менән быуыу йолаһы — *обычай подвязывания снохами вышитым кушаком невесту при ее сопровождении.* Килгәс, бикәстәре аның билен быуып һыуға башланылар (урта). Бил сисеү (көнсығыш диалект, урта) килен төшкәс тә уның билбауын ҡайынһеңлеләре сисеп алыу йолаһы — *обычай развязывания младшими золовками кушака невесты после ее входа в дом жениха*

**БИЛ** (эйек-һаҡмар, эй) *и.* билтер — *подъем (у обуви)*

**БИЛАЙ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* сәйгүн — *чайник (для заварки чая).* Билай ҡапҡасын ҡайҙа иттең? (ҡариҙел)

**БИЛАЛА** (көнсығыш диалект) *и.* мүктәрге — *кобчик*

**БИЛБАУ** (дим) *и.* мейес кәрнизен ураткан тар ғына таҡта — *узкая дощечка, опоясывающая карниз печи.* ◊ Билбау аҫты бушау (урта) асығыу — *проголодаться*

**БИЛ БЫУАРЫНАН** (урта) *р.* бил тиңенән — *по пояс.* Лоҡман менән Ғилман бил быуарынан үҫкән үләнте йарып ҡарама төбөнә килгәнсе күс йарһый башланы

**БИЛГЕ** (эйек) *и.* инәү — *метка (на ушах животных и лапках птиц)*

**БИЛГӘЛЕ** (мейәс) *с.* билдәле — *заметный*

**БИЛГӘЛӘҮ** (мейәс) *ҡ.* билдәләү — *отмечать*

**БИЛГӘҮ** (арғаяш) *и.* билбау — *кушак*

**БИЛДЕК** (арғаяш, мейәс) *и.* 1. Арбаның артҡы күсәрендәге кәштә — *полка на задней оси телеги.* 2. Арбаның алғы һәм артҡы күсәрҙәрен тоташтырып торған бер иш ике ағас — *два продольных бруса, соединяющих переднюю ось телеги с задней.* Биллек (урта)

**БИЛДӘ I** (дим) *и. бакен*

**БИЛДӘ II** (дим) *и.* инәү — *метка (на ушах животных и лапках птиц).* Мынау ҫарыҡҡа билдә ҫалынмағанмы?

**БИЛДӘК I** (ҡыҙыл) *и.* биллек — *поперечные ремни (у шлеи)*

**БИЛДӘК II** (һаҡмар) *и.* инәү — *метка (на ушах животных и лапках птиц).* Билдәк һалынған ҡаҙ әле генә шунда йөрөй ине

**БИЛДӘМСӘ** (туҡ-соран) *и.* һырма күкрәксә — *стеганка.* Билдәмсәң ҡыҫҡараҡ булған икән

**БИЛДӘМӘ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* 1. Түшкәнең янбаш менән ҡабырға араһынан билдән аша ҡырҡып алынған өлөшө — *мясо средней части хребта туши.* 2. Бешерелгән картуфтың арҡырыға ҡырҡып алынған урта өлөштәре — *средняя кольцеобразно нарезанная часть сваренной картошки.* 3. (минзәлә) Һауыт-һабаға төшөрөлгән биҙәк — *узоры на посуде*

**БИЛЕН АЛЫУ, БИЛӘН АЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* биленләү — *встрепенуться.* Китепара торғас аты билән алған. Билен алыу (дим)

**БИЛЕНДӘК** (көнсығыш диалект) *с.* ҡурҡып тертләп бара торған мал — *пугливое животное.* Билендәк атың менән сығып китмәксе булаһыңмы? (эй)

**БИЛЕНДӘҮ** (урта) *ҡ.* сәнсеү — *колоть.* Өс көн тәнем билендәп йаттым

**БИЛЕННӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* өҙлөгөп ауырыу — *осложнение после болезни*

**БИЛЕНСЕЛ** (мейәс) *с.* ҡурҡып тертләп бара торған мал — *пугливое животное.* Танабыҙ биленсел булып сыҡты

**БИЛЛЕК** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ҡайыш — *ремень (поясной)*

**БИЛЛӘМӘ** (дим) *и.* биллек — *поперечные ремни (у шлеи)*

**БИЛЛӘС** (урта) *с.* бөгөлөп торған — *вогнутый.* Ҙур көҙгөнөң уртаһы билләс булып тора

**БИЛМАУ** (арғаяш, мейәс) *и.* билбау — *кушак.* Билмауың ҡыҫҡаҡ түгелме? (арғаяш). Билмәү (арғаяш)

**БИЛ МЕЙЕҺЕ** (урта) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг.* Бил мейәһе (мейәс, урта урал)

**БИЛСӘН** (мейәс) *и.* 1. Бөргәк — *липучка.* 2. (урта) Ҡара билсән — *бодяк полевой.* 3. Дегәнәк — *репейник*

**БИЛТЕР** (һаҡмар) *и.* билән — *седловина*

**БИЛӘМ I** (көньяҡ диалект) *и.* бал ҡорто күсе — *пчелиный рой*

**БИЛӘМ II** (дим) *и.* диләнкә — *делянка (участок леса).* Аңа шул биләмдә йата инде беҙнең ағаслар

**БИЛӘМ III** (дим) *и.* ауыл ултырған урын — *место расположения деревни*

**БИЛӘМ IV** (һаҡмар) *и.* тау итәге — *склон горы*

**БИЛӘМ V** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* уйынкөлкө — *развлечение.* Биләмдә йөрөмәсен, әйт малайыңа (төньяҡ-көнбайыш)

**БИЛӘМ VI** (урта) *и.* тына — *промежуток рабочего времени от одной передышки до другой.* Бер биләм эшләгәс, малайлар көндөҙгө тамаҡҡа ашау өсөн күмәкләп ауылға ҡайтып киттеләр

**БИЛӘМСЕ I** (дим, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ауылсы — *человек, любящий много ходить по деревне.* Биләмсе хатын өйөнә йеткәс йүгерә (дим)

**БИЛӘМСЕ II** (урта) *и.* яңы оя эҙләүсе ҡорт күсе — *пчелиный рой, подыскивающий новое гнездо*

**БИЛӘН I** (дим) *и.* буйы ҡырҡ, киңлеге туғыҙ сажинлы ер — *участок земли длиной в сорок, шириной в девять саженей*

**БИЛӘН II** (мейәс, әй) *и.* бирән *(һары һыу ауырыуы)* — *водянка*

**БИЛӘҢКЕ: БИЛӘҢКЕ БУЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* 1. Бала тапҡан ҡатындың өҙлөгөүе — *осложнение после родов.* 2. Өҙлөгөү — *заболеть повторно, не поправившись после первой болезни*

**БИЛӘҢКЕ I** (гәйнә, урта урал) *и.* 1. Аҡ бәшмәк — *белянка (гриб).* 2. (әй) Ҡыҙыл төҫтәге кәпәсбаш бәшмәк — *груздь красный*

**БИЛӘҢКЕ II** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* һыкра — *человек, страдающий недержанием мочи*

**БИЛӘННӘҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* биленләү — *встрепенуться, испугаться*

**БИЛӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* биләүес — *свивальник.* Был тәнәйегеҙ, булыр бала биләүҙән тигәндәй, бик теремек (мейәс)

**БИЛӘҮСӘ** (арғаяш) *и.* биләүес — *свивальник.*

**БИМА** (мейәс, урта) *и.* быйма — *валенки.* Буйма, бойма (әй)

**БИНЖӘК** (мейәс) *и.* пинжәк — *пиджак.* Бинйәк (ҡыҙыл)

**БИНАХАҠ** (урта) *с.* ғәйепһеҙ — *безвинный.* Бинахаҡҡа бәйләнерҙәр икән шулай

**БИНИҺАЙА** (дим, минзәлә, урта урал) *р.* уғата — *чересчур.* Биниһайа эреләнгән, бер күрәсәге булмағайы (урта урал). Йер, бесәнлек биниһайа, тимер-томорға фәкир (дим). Бинихайа (төньяҡ-көнбайыш)

**БИПАПА, БИПАПАУ** (дим) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БИПЕЙ I** (ҡариҙел, урта урал) *и.* 1. Ҡаҙ бәпкәһе — *гусенок.* 2. Себеш — *цыпленок.* 3. Иркәләү һүҙе *(балаға ҡарата)* — *ласкательное слово по отношению к ребенку, букв. цыпленок мой*

**БИПЕЙ II** (урта урал) *и.* сәскә төймәләге — *бутон.* Бикән көпшәсенең бипейе была

**БИПКЕЙ** (дим) *и.* ҡош ҡанаты өҫтөндәге ваҡ ҡауырһын — *маленькие прямые перья на крыльях птиц*

**БИПКӘ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* ҡаҙ бәпкәһе — *гусенок.* Бипкә ҡараб үтә жәйем (урта урал)

**БИПКӘ: АЙАҠТЫҢ БИПКӘҺЕ СЫҒЫУ** (әй) *ҡ.* ялан аяҡ бысраҡ һыу кисеп йөрөгән бала-сағаның аяҡ йөҙлөктәре боҙолоп ярылыуы — *цыпки, появляющиеся на ногах у детей от долгого хождения босиком по грязной воде*

**БИПКӘЛӘҮ** (әй) *ҡ.* йыш булып сығыу — *прорастать густыми рядами.* Шалҡан орҙоктары бипкәләп килеп сыҡҡан

**БИР** (гәйнә) *б.* бирле — *с, со.* Йаздан бир ҡайтмый

**БИРА** (һаҡмар) *и.* оят — *совесть.* Бираң йуҡ икән, ҡустым

**БИРАҘЛАНЫУ** (эйек) *ҡ.* асыуланыу — *сердиться*

**БИРАН** (һаҡмар) *и.* 1. Бирән — *водянка.* 2. Бирән — *обжора.* Биран ҡорһаҡ — *обжора*

**БИРАН-ТАРАН: БИРАН-ТАРАН КИТЕРЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* пыран-заран килтереү — *разнести в пух и в прах.* Буржуйларҙың өйләренә йөрөп, биран-таран китергән уахытлар. Биран-таран итеү (эйек-һаҡмар)

Бипкә / Гүзәл - ... ...

**БИРАХАТ ИТЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* юҡҡа сығарыу *(мал-мөлкәткә ҡарата)* — *разбазаривать*

**БИРАҺЫҘ** (һаҡмар) *с.* 1. Оятһыҙ — *бессовестный.* 2. Ышанысһыҙ — *ненадежный.* Әйткән һүҙендә тормаған кеше бираһыҙ була инде

**БИРЕ I** (мейәс, ырғыҙ, әй) *р.* бында — *сюда.* Бире ғарай ғайттым (ырғыҙ). Берерәк кил (ҡыҙыл, мейәс, әй)

**БИРЕ II** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* пәрей — *бес.* Әллә биреле инде, кит мынан (ҡыҙыл). Бирегүҙ *(яман күҙ)* — *дурной глаз.* Бирем һөймәй *(енем һөймәй)* — *ненавижу.* Биреһе ғалҡыу *(ене ҡубыу)* — *разбушеваться*

**БИРЕ III** (ҡыҙыл, мейәс, урта урал, әй) *р.* бирле — *с тех пор.* Шунан бире инде көн итеп китәләр (урта урал). Күп замандан бире эштәгәс беләм инде (әй)

**БИРГЕ: БИРГЕ АҒАСЫ** (урта) *и.* һабантуйҙа көрәшселәргә биреләс торған бүләктәрҙе баулап, элеп ҡуя торған ағас — *шест, на который вешают призы для борцов сабантуя*

**БИРЕГЕ I** (эйек) *б.* бирле — *с, со.* Әллә ғасанан бирегә күргәнем йуҡ һине

**БИРЕГЕ II** (дим) *с.* һуңғы — *последний.* Бирегә ҫуғышта бик күп кеше һәләк булды

**БИРЕГҮМӘЛӘК** (һаҡмар) *и.* шайтан күбәләге — *совка (бабочка).* Кис буһа бирегүмәләк тоноша шәмгә

**БИРЕЛЕ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* енле — *бесноватый*

**БИРЕЛЕГЕ** (дим, эйек) *б.* бирле — *с, со.* Калхуз сыҡҡандан бирелеге эшләй (дим). Бирлеге (дим)

**БИРЕЛӘНЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *ҡ.* енләнеү — *беситься.* Туғрыһын әйтһәң, биреләнә лә гитә (мейәс). Биреләнеп бараһың йуҡҡа (һаҡмар). Әйтер әмәл йуҡ, биреләнәң дә гитәң (ҡыҙыл)

**БИРЕМ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* 1. Бирнә — *приданое.* Бирем биреп атаһы ҡыҙын айырыб алып ҡайта (ҡыҙыл). 2. (гәйнә, урта) Ришүәт — *взятка.* Ә суд тирәһендәге кешеләр һәр береһенә бирем бирергә кәрәг ине тей (урта). Бирен (ырғыҙ)

**БИРЕНӘ** (гәйнә, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* бирнә — *приданое.* Биренә алпаралар ике йаҡтан да (гәйнә). Бирен (төньяҡ-көнбайыш)

**БИРЕС** (һаҡмар) *и.* уңалған яра урыны — *рубец от раны.* Бирс (ҡыҙыл), биреч (гәйнә)

**БИРЕЧ** (урта урал) *и.* биҙ — *железа.* Биреч туңмайда была

**БИРҠАЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться*

**БИРЛЕ** (һаҡмар) *с.* ҡыҙыу — *вспыльчивый (о человеке)*

**БИРМӘ** (ырғыҙ) *и.* ришүәт — *взятка.* Бирмә биреп ҡотолоп ҡалған

**БИРНӘ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Кейәү бүләктәре — *подарки со стороны жениха.* Мынан тағы кейәү алып бара бирнә — күлмәк, шәлйаулыҡ (төньяҡ-көнбайыш). Бирәнә (ҡариҙел). 2. (дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта, әй) Ҡыҙ бүләктәре — *подарки со стороны невесты.* Ҡыҙ йегеттең атаһына бирнә күлмәге китерә (урта). Һандыҡ тутырып бирнә әҙерҙәнә апайым (әй)

**БИРС** (ҡыҙыл, мейәс, салйоғот) *и.* оро — *нарост (на дереве).* Бирсе буған ағас эшкенмәй (ҡыҙыл). Бирсте ағас ауыр йарыла (мейәс)

**БИРСӘЙЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* Ҡалҡып тороу — *выступать (о костях).* Беләк һөйәге

бирсәйеп ҡалды (ҡыҙыл). 2. (ҡыҙыл) Уңалғандан һуң йәрәхәт урынының йөйләнеп ҡалыуы — *появление рубцов после заживления раны.* Йәрәхәттең урыны бирсәйеп ҡалды

**БИРҪ** (һаҡмар) *с.* беше — *плотный.* Бик бирҫ утын икән, йарыуы ҡалай ауыр

**БИРҪЕНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* биртенеү — *надорваться*

**БИРТАБАЙ** (урта) *р.* бында — *сюда.* Биртабайраҡ маңлайҙарын көнйаҡҡа сәнсеп йатҡан шыр йаланғас ағасһыҙ таулар теҙелеп киткән

**БИРТАБАН** (ҡыҙыл, һаҡмар) *р.* бында, былай — *сюда.* Унан биртабан икенсе ыруда китә (ҡыҙыл). Биртабанырак шылып ултырһаңсы (һаҡмар)

**БИРТАБАНҒЫ** (һаҡмар) *с.* бындағы — *местный.* Мин биртабанғы ла инде

**БИРТЕК I** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Бахыр — *бедняжка.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) *с.* бойоҡ — *подавленный.* 3. (урта урал) *с.* ҡыйырһытылған — *обиженный*

**БИРТЕК II** (көнсығыш диалеҡт, ырғыҙ) *и.* 1. Биртенгән кешене ырымлау өсөн, ауылдаштарынан йыйыла торған аҙыҡ — *продукты, собираемые односельчанами для лечения надорвавшегося человека.* Бер әбей бер баш паланы, бер кинйә баланы эйәртеп өс өйгә биртек һорарға килә. Ишектән һауытты ғына тығып һамаҡтайҙар:

Бейем улы биртенгән,
Биртек-һәртек һорайым,
Ҡайным улы биртенгән,
Әсе ҡатыҡ һорайым (мейәс). 2. (мейәс) Ҡоторған эт тешләгән кешене ырымлау өсөн йыйыла торған аҙыҡ — *продукты, собираемые для лечения больного от укуса бешеной собаки.* Ҡоторған эт тештәһә биртек йыйа туғайныҡ

**БИРТЕКЛӘНЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* кәмһенеү — *считать себя неполноценным*

**БИРТЕНМӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* бирешмәү — *не поддаваться чему-то.* Мин үҙемдең шунан ғына биртенмәйәсәгемде беләм инде

**БИРТЕҮ** (дим) *ҡ.* биртенеү — *надорваться*

**БИРХАТ: БИРХАТ ИТЕП** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* шәп итеп — *замечательно.* Бирхат итеп ҡунаҡ һыйҙағандар (мейәс). Бирхәт итеп (ҡыҙыл)

**БИРХАУАТ ИТЕНӘ САҠЫРЫУ** (эйек) *ҡ.* туйҙағы ҡоҙаларҙы өс-дүрт өй бер булып һыйлау йолаһы — *обычай угощения сватов во время свадьбы тремя-четырьмя хозяевами*

**БИРӘН** (урта) *и.* рахит менән ауырыусы — *рахитик*

**БИС** (ҡариҙел, минзәлә) *и.* мейес — *печь.* Бис башына шимешкә салғанмын (ҡариҙел). Ҡалай бис (минзәлә)

**БИСАЛЫЙ** (мейәс) *с.* шат — *веселый.* Бигерәк бисалый геше лә инде Йаҡуп

**БИСТЕР** (көнсығыш диалект) *и.* йүкәнән үрелгән юл һандығы — *дорожный сундук, плетеный из лыка*

**БИСТЕРКӘ** (салйоғот) *и.* талдан үрелгән кәрзин — *корзинка, плетеная из ивы*

**БИҪКӘК СЕБЕНЕ** (салйоғот) *и.* биҙгәк серәкәйе — *малярийный комар*

**БИҪТӘҮ ҮЛӘН** (мейәс) *и.* буҫтау үлән — *медуница неясная*

**БИҪТӘ** (дим) *и.* киҫкә — *малоподвижный, тяжелый на подъем человек.* Биҫтәләй булып тормай йатаҫын

**БИТ** (арғаяш, мейәс) *и.* йөҙ — *лицевая сторона.* Балта бите. ◊ Сарыҡ бит (эй) оятһыҙ кеше — *бесстыжий.* Сарыҡ бит, битенә сарыҡ йамаған тейбеҙ андай әшәке гешене

**БИТБАҠҠЫҺЫҘ БУҒАНСЫ** (эй) *р.* бер-береһен күрә алмаҫлыҡ булғансы — *до полной ненависти.* Битбаҡҡыһыҙ буғансы әрҙәштеләр

**БИТЛА** (дим, урта) *и.* һандыҡ күгәне — *шарниры от сундука.* Питла (дим)

**БИТЛӘК I** (эйек-һаҡмар) *и.* тау битләүе — *косогор*

**БИТЛӘК II** (һаҡмар) *и.* тотлоҡма — *заика*

**БИТЛӘС** (урта) *и.* тау битләүе — *косогор.* Ташбатҡан ауылы бейек тауҙар итәгендә, бер битләстә, тау ҡуйынына һыйынып ҡына ултырған

**БИТСАЙА** (һаҡмар) *с.* оятһыҙ — *бессовестный.* Тәнзилә кеүек битсайа кешене күргәнем йуҡ ине

**БИТӘЛ** (эй) *и.* бәләкәй ау — *маленькая сеть.* Битәлә (мейәс). Бител (дим)

**БИХАЙА** (төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *с.* оятһыҙ — *бессовестный.* Ул бихайаға нисек ышанып һүҙ әйтәһең (урта урал)

**БИҺЕР** (арғаяш, салйоғот) *и.* бүҫер — *грыжа*

**БИШБАРМАҠ** (гәйнә, дим, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Бирсәткә — *перчатки.* Бишпармаҡ (дим). 2. (гәйнә) Ҡул суғы — *кисть руки*

**БИШБАШ** (һаҡмар) *и.* биш көлтәле һоҫлан — *суслон из пяти снопов.* Бишбаш һала торғайныҡ иген урғас

**БИШ БИЛ: БИШ БИЛ КАЗАКИЙ** (мейәс) *и.* тубыҡтан түбән төшөп торған кәзәкей — *род полукафтана, длиною ниже колен*

**БИШИНӘ, БИШӘНӘ** (салйоғот) *и.* ойоҡ энәһе — *спицы для вязания*

**БИШ: БИШ ЙАТҠАНДА ЛА** (ҡыҙыл) *р.* бер ваҡытта ла — *никогда.* Биш йатҡанда ла иҫкә төшмәй

**БИШКӨЛТӨ** (дим) *и.* һоҫлан — *суслон*

**БИШҠАТАР** (һаҡмар) *и.* йәштәш биш кеше — *пять ровесников.* Атайым иптәшләре белән бишҡатар булғаннар

**БИШКУНАҠ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* иҫке стиль буйынса апрель башында дүрт көн була торған епшек буран — *четырехдневный буран в начале апреля по старому стилю*

**БИШМЫЙЫҠ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* бапаҡ — *бука.* Бишмыйыҡ килә тип ҡурҡыталар ине (һаҡмар). Илама, бишмыйыҡ әпкитер үҙеңде (ҡыҙыл)

**БИШМӘТ** (урта) *и.* 1. Пинжәк — *пиджак.* 2. (дим, мейәс) Һырылған бишмәт — *стеганка.* 3. (мейәс) Камзул — *камзол.* Уҡалы бишмәт, тәңкәле бишмәт. 4. (ҡариҙел) Эсле камзул — *стеганый камзол.* 5. (ҡыҙыл) Еңһеҙ йәки ҡыҫҡа еңле камзул — *камзол без рукавов или с короткими рукавами.* 6. (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) Пальто

**БИШНӘ** (дим, ҡыҙыл) *и.* һөймән — *пешня*

**БИШПАРМАҠ** (урта) *и.* бишташ — *игра в пять камешков*

**БИШТЕҒЫЛЫС** (әй) *и.* биш тешле тула ҡылысы — *бёрдо с пятью зубьями для грубой пряжи шерсти*

**БИШТЕК I: БИШТЕК ШӘМ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* бишле лампа — *пятилинейная лампа*

**БИШТЕК II** (гәйнә) *и.* тиктормаҫ кеше — *непоседа.* Биштек бала

**БИШТИНДЕК** (ҡыҙыл) *и.* ишек төбөндәге бәләкәй урындыҡ — *маленькие нары в преддверье*

**БИШТӘРЛӘҮ** (урта) *ҡ.* 1. Арҡаға аҫыу — *повесить за спину.* Арҡаһына ҡалай күп биштәрләгән. 2. (дим) Йөкмәнеү — *навьючиваться*

**БИШӘМБӘК** (ырғыҙ) *и.* ашыҡ уйыны — *игра в альчики.* Йәш саҡта бишәмбәк уйнай торғайныҡ

**БИӘСӘТ** (ҡариҙел) *и.* бейә һөтләкәйе — *молочай кобылий*

**БИӘТӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡайны — *свекор.* Ғөмөргә биәтәсен тәрбиәләде килен

**БЛАНТ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* ишек алды — *двор*

**БЛИС, БЛИШ** (урта) *и.* хәтфә — *плюш.* Йәшел блистән камзул тектем ҡәйнәмә. Бөлөш (урта)

**БЛИСА, БЛИСӘ** (арғаяш) *и.* һоҫко — *совок*

**БОБАЙ** (ҡариҙел) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БОҒАҘҘАУ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Боғарлаҡ — *горло.* 2. (төньяҡ-көнсығыш) Үгеҙҙең, һыйырҙың үңәсе аҫтында һалынып төшкән тән өлөшө — *нижняя часть шеи быка, коровы*

**БОҒАҘҘАУ II** (урта урал) *ҡ.* алҡымдан алыу — *брать за горло*

**БОҒАҘ: БОҒАҘ ЙЫРТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* аҡырыу — *горланить.* Тир сығарып эшләргә йаратмаһа ла йыйылыштарҙа күкрәк һуғып боғаҙ йыртырға тиһәң — аны ғына ҡуш

**БОҒАҘЛАУ ТӨЙӨНӨ** (дим) *и.* салыу һөйәге — *бугор атланта*

**БОҒАҘЛАУЫҠ** (дим) *и.* салыу һөйәге — *бугор атланта*

**БОҒАҘ ТӨЙӨНӨ** (урта, һаҡмар) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко.* Боғаз төйөнө (төньяҡ-көнбайыш)

**БОҒАЗЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* боғарлаҡ — *горло*

**БОҒАҠ** (салйоғот, урта урал, әй) *и.* 1. Күмәгәй — *адамово яблоко.* 2. (урта урал, әй) Ҡалҡан биҙенең шеше — *зоб (у людей).* 3. (арғаяш, мейәс, урта урал, әй) Бөрләтәү — *зоб (у птиц).* Боғағы тулғансы ашаған (мейәс). 4. (ҡыҙыл, мейәс) Үгеҙҙең, һыйырҙың үңәсе аҫтында һалынып төшкән тән өлөшө — *нижняя часть шеи быка, коровы*

**БОҒАЛА** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* боғал — *лассо*

**БОҒАЛАҠ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Боғал — *лассо.* 2. (әй) Мәскәү — *петля (проволочная или волосяная для ловли рыб)*

**БОҒАЛАҠ II** (урта) *и.* бөгәлсән — *овод конский*

**БОҒАН** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* өйрәк төрө — *гоголь*

**БОҒАНА** (урта) *и.* быҒым — *мягкая, уязвимая часть между ложными ребрами и бедром*

**БОҒАРҘАҠ ОРОҺО** (әй) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**БОҒАРҘАҠ ТӨЙӨНӨ** (әй) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**БОҒАРСА I** (урта) *и.* бөгәрсә — *елец (рыба).* Боғарсай (урта)

**БОҒАРСА II** (мейәс) *и.* бөгәр — *подколенный изгиб*

**БОҒАРСӘЙ** (урта) *и.* бөгәрсә — *елец (рыба)*

**БОҒАС: БОҒАС ЙАҒА** (әй) *и.* сүпләп күтәрелеп һуғылған, текә итеп тегелгән яға — *высокий воротник, вытканный с узорами*

**БОҒАҪЛАУ** (дим) *и.* боғарлау — *горло*

**БОҒАУЛЫҠ** (ырғыҙ) *и.* быҒау — *путы (железные)*

**БОҒОҘЛАУ** (минзәлә) *и.* боғарлаҡ — *горло*

**БОҒОРҘАҠ** (дим) *и.* боғарлаҡ — *горло*

**БОҒОУ I** (ҡариҙел, мейәс, урта урал, әй) *ҡ.* боҫоу — *притаиться.* Ҡыҙы посмаҡҡа боҡҡан (ҡариҙел)

**БОҒОУ II** (гәйнә) *и.* быҒау — *оковы*

**БОҒОУЙОҘАҠ** (гәйнә) *и.* быҒау йоҙаҡ — *винтовой замок*

**БОҘАЙ I** (дим, төньяҡ-көнсығыш, урта) *и.* бойҙай — *пшеница.* Аҡ туҡал боҙай, ҡыҙыл туҡал боҙай (арғаяш)

**БОҘАЙ II** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**БОҘҘАУЫҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ваҡ йомро ҡар — *мелкая снежная крупа.* Боҙлауыҡ (урта, эйек-һаҡмар)

**БОҘЛАУЫҠ** (урта) *и.* бәҫ — *иней*

**БОҘОҠ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* 1. Холҡһоҙ — *дурной по характеру.* Шу тиктем боҙоҡһондор тип уйҙамағайным (ҡыҙыл). 2. (урта урал) Йөрөксән — *гуляка.* 3. (дим, көнсығыш диалект, урта) Кенәсел — *злопамятный.* 4. (дим, урта) Аҙғын — *развратный.* 5. (салйоғот) Мәкерле — *коварный.* Боҙоҡ ҡан *(вена ҡаны)* — *венозная кровь*

**БОҘОҠЛАШЫУ** (урта) *ҡ.* уҫаллашыу — *злодействовать*

**БОҘОҠЛОҠ** (ҡариҙел) *и.* сихыр — *колдовство.* Әкәй боҙоҡлоғо ҡағылған

**БОҘОҠТОҠ** (көнсығыш диалект) *и.* уҫаллыҡ — *злодейство*

**БОҘОЛҒАН** (көнсығыш диалект) *с.* юлдан яҙған — *сбившийся с пути (о человеке)*

**БОҘОМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* урман, ер атамаһы — *название леса, местности*

**БОҘОРА** (мейәс) *с.* 1. Бөҙрә — *кудрявый.* 2. Борош — *кривой.* Боҙора ағас

**БОҘОРАЛАТЫУ** (мейәс) *ҡ.* бөҙрәләтеү — *завивать (у кого-л. волосы)*

**БОҘТИШКЕС** (әй) *и.* аҡ сәпсек — *трясогузка*

**БОҘТУРҒАЙ** (дим, туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* аҡ сәпсек — *трясогузка.* Боҙ турғайы ҡойороғон ҫелкебутыра шул ул (дим)

**БОҘЫМ** (дим) *и.* боҙолған — *испорченный*

**БОЖАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* иңкеш — *шмель*

**БОЖҒОТОУ** (ҡариҙел) *ҡ.* тиргәү — *выругать.* Әле ҙә божғотоп ташлайым

**БОЖОР I** (арғаяш, дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* сел — *рябчик.* Божыр (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш)

**БОЖОР II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Төпөш — *коротыш.* 2. *с.* етеҙ — *проворный.* 3. Оҫта — *умелый.* Сүҙгә божор ул

**БОЖОРА I** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* дуға дүңгәләге — *кольцо на дуге*

**БОЖОРА II** (дим) *с.* бөҙөр — *рябь.* Божора тулҡыннар

**БОЗДЫР-БАЗДЫР БУЛЫП** (ҡариҙел) *р.* ялтйолт итеп — *сверкая.* Боздыр-баздыр булып ҡойашта күренә сыҡы ҡар

**БОҘОМ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* сихыр — *колдовство.* Боҙом менән боҙолған әнәуыл

**БОЗОР I** (дим) *и.* 1. Аҕуна — *куропатка.* Божыр (ҡариҙел). 2. (мейәс, урта урал, ырғыҙ) Сел — *рябчик.* Урман бозоро, йалан бозоро (урта урал)

**БОЗОР II** (һаҡмар) *с.* шаҙра — *рябой.* Бозор Фатима ҡайтҡанмы?

**БОЗОР III** (урта) *и.* лампа ҡыуыҕы — *ламповый пузырь*

**БОЗОРА I** (дим) *и.* зәңге — *цинга*

**БОЗОРА II** (дим) *и.* шәм селтәре — *решетка от лампы*

**БОЗОРА III** (дим, урта) *и.* елбәҙәк — *блестки.* Тәңкәнән бозора йаҫай торғайнылар (дим)

**БОЗОРАЛАУ** (дим, урта) *ҡ.* елбәҙәк баҫыу — *украшать блестками*

**БОЗОРАЛЫ** (дим, урта) *с.* елбәҙәкле — *с блестками.* Бозоралы шәл

**БОЗОРТМАҠЛАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* суғырмаҡланыу — *быть шероховатым (о коре).* Ҡарт ҡайын ҡабыҕы бозортмаҡланып тора

**БОЗОУ** (гәйнә) *и.* быҙау — *теленок.* Азыраҡ бозоуға ла кәрәк бәрәңге

**БОЗПЕСЛӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аҡ сәпсек — *трясогузка*

**БОЙАУ** (салйоғот) *и.* буяу — *краска*

**БОЙҘАЙОҠ** (ырғыҙ) *и.* аҡтамыр — *пырей*

**БОЙҘАЙ ТӨЙӨНӨ** (һаҡмар) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**БОЙОРА** (арғаяш, эй) *с.* борош — *кривой.* Бойора ағасты йарыуы бик ҡыйын була (арғаяш)

**БОЙРА** (һаҡмар) *и.* илтер *(бәрәс тиреһенең бер төрө)* — *мерлушка*

**БОЙТОМ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *р.* байтаҡ — *изрядно.* Бойтом ғына йәшәп йатабыҙ (ҡыҙыл). Һәҙер бойтом утырталар (һаҡмар). Буйтым (ҡыҙыл, мейәс, эй)

**БОЙОУ** (гәйнә) *и.* буяу — *краска.* Бойоу сүзе сирәк беҙдә, сыр тип әйтәләр

**БОҠАЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* боҫоу — *притаиться.* Кесерткән араһына ингән дә боҡайып ултырған була

**БОҠАЛ** (салйоғот) *и.* маҡау — *тупица.* Нәмәкәй аңдаһың ул боҡал

**БОҠОУ** (һаҡмар) *ҡ.* йоҡо баҫыу — *клонить ко сну*

**БОҠТАЙЫУ** (мейәс) *ҡ.* 1. Ҡорошоу — *съеживаться.* Түшәкһеҙ, бер нәмәһеҙ боҡтайып йоҡтанылар. 2. Боҫоу — *притаиться*

**БОҠТОРОУ** (һаҡмар) *ҡ.* бөгөү — *согнуть, перегнуть (о вещах)*

**БОЛ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, урта урал, ырғыҙ) *и.* 1. Байлыҡ — *богатство.* Атаһының боло бумаһа аңа андай донйаны күреү ҡайҙа у (ҡыҙыл). 2. (мейәс, эйек-һаҡмар). Аҡса — *деньги.* Итте һатып бол итеп ҡалған йаҡшы (мейәс). Болоң буһа бары ла бар хәҙер. Болоң бармы? (эйек-һаҡмар)

**БОЛА-ДАЛА** (мейәс) *с.* тәртипһеҙ — *беспорядочный.* Ул уахытта бола-дала булып китте әҙәм. Бола-тала (ҡыҙыл)

**БОЛАЛАНЫУ** (мейәс) *ҡ.* боларыу — *бузить*

**БОЛАМА I** (гәйнә, урта, урта урал, ырғыҙ) *и.* бола — *беспорядок.* Өйөм бик болама булып китте әле (урта урал)

**БОЛАМА II** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* теләһә нисек — *как попало.* Болама дауа иттеләр

**БОЛАМА III** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* аралаш — *вперемешку.* Болама булып йәшәлде инде төрлө кеше

**БОЛАМСЫҠ** (арғаяш, мейәс) *и.* боламыҡ — *мучная каша.* Боламса (арғаяш). Боламсай (эй). Боламсайҙы күб ашаныҕ инде аны

**БОЛАН** (көнсығыш диалект, урта урал) *и.* мышы — *лось*

**БОЛАН КӨПШӘҺЕ** (мейәс) *и.* шыма көпшә — *дягиль*

**БОЛАНҠЫР** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Йонсоу — *пасмурный (о погоде).* Көн боланҡыр булып киттәле (ҡариҙел). Болаңғыр (гәйнә), бөләңгер (урта урал). 2. Болғансыҡ — *мутный (о воде)*

**БОЛАНУТ** (ҡыҙыл) *и.* ҡыҙылхан — *кипрей.* Боланыт (мейәс)

**БОЛАРТҠЫ** (ҡыҙыл) *с.* йонсоу — *пасмурная (о погоде).* Болартҡы көн

**БОЛАРТЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* боҙоу — *испортить*

**БОЛАРЫУ I** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Боҙолоу — *испортиться (о погоде).* Көн боларып тора (ҡыҙыл). 2. Туҙғыу — *взъерошиваться (о волосах).* Сәсе боларған мынау ғыҙҙың (арғаяш)

**БОЛАРЫУ II** (дим) *ҡ.* мәшәкәтләнеү —*утруждать себя.* Боларып торма инде, ҫуңынан эшләрҫең

**БОЛАТМА** (урта) *и.* тәртипһеҙлек — *беспорядок*

**БОЛАШМАҠ: БОЛАШМАҠ ЙЫРҘАР** (мейәс) *и.* ҡара-ҡаршы башҡарылған шаян таҡмаҡтар — *шуточные состязательные частушки*

**БОЛАШЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Ыҙғышыу — *ссориться.* 2. (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) Шаярыу — *шалить.* Ҡара әле, ҡоҙа белән ҡоҙаса болаша (ҡыҙыл)

**БОЛҒАҒЫС** (мейәс) *и.* болғатҡыс — *мешалка.* Болғағыс әнә шунда ғына йата

**БОЛҒАЙЛАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* болғау — *мешать.* Кәртүгеңде болғайлаб ултыр

**БОЛҒАҠ I** (ҡыҙыл, эй) *и.* 1. Бола, тәртипһеҙлек — *беспорядок.* Өйҙәре болғаҕ ине (ҡыҙыл). 2. (ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ, эй) Боласыл — *подстрекатель.* Ул йөрөгәнә белән бер болғаҡ (һаҡмар)

**БОЛҒАҠ II** (гәйнә) *с.* болғансыҡ — *мутный (о воде)*

**БОЛҒАЛАНЫУ** (урта урал) *ҡ.* боларыу — *бузовать.* Апуш болғаланып тороп ҡалды шунда

**БОЛҒАМА** (салйоғот) *с.* тәртипһеҙ — *беспорядочный.* Болғама булып йатабыһ

**БОЛҒАНЛАҠ** (ырғыҙ) *и.* 1. Шаян — *балагур.* 2. Ҡылансыҡ *(ҡыҙ кешегә ҡарата)* — *кокетка (о девушках)*

**БОЛҒАНТАУ** (урта) *ҡ.* тәнтерәкләү — *идти шатающейся походкой*

**БОЛҒАНЫУ** (дим) *ҡ.* ауырлы ваҡытҡа ашҡа төрләнеү — *разборчивость в пище во время беременности*

**БОЛҒАР: БОЛҒАР ГҮНЕ** (ҡыҙыл) *и.* ҡыҙыл күн — *кожа, выкрашенная в красный цвет*

**БОЛҒАУ I** (гәйнә) *с.* болғансыҡ — *мутный.* Болғау сыу

**БОЛҒАУ II** (дим, туҡ-соран) *и.* бутама — *мешанина.* Ат болғауы. Тауыҡ болғауы

**БОЛҒАУ III** (көнсығыш диалект) *ҡ.* бутау — *путать.* Йаҙа баштаһам бис болғайым да таштайым (мейәс)

**БОЛҒАУЫЛ** (дим) *с.* болғансыҡ — *мутный*

**БОЛҒАУЫС** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* тәртешкә — *кочерга*

**БОЛДА** (урта) *и.* бола, тәртипһеҙлек — *беспорядок*

**БОЛДАЛАУ I** (ҡыҙыл, мейәс, урта, һаҡмар) *ҡ.* самаһыҙ тотоноу — *расходовать чрезмерно (о деньгах, продуктах и т.д.)* Май-һайҙы болдалама (ҡыҙыл)

**БОЛДАЛАУ II** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* ботарлау — *разламывать (все, по частям).* Итте болдалап ташта (мейәс)

**БОЛДАЛАУ III** (урта, һаҡмар) *ҡ.* арлы-бирле эшләү — *делать кое-как.* Бер эште йеренә йеткереп эшләмәҫ был, болдалаған булып (һаҡмар)

**БОЛДОР** (мейәс, ырғыҙ) *и.* 1. Күтәрмә — *крыльцо.* 2. (мейәс) Солан — *сени*

**БОЛЖЫМАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ыжламау — *и в ус не дуть*

**БОЛЛАУ I** (һаҡмар) *ҡ.* байыу — *разбогатеть.* Баҙарҙан боллап ҡайтып килеүселер был

**БОЛЛАУ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* хөрмәтләү — *почитать.* Йәшләр болламай ҡарыйны, әүәл боллайлар ыйы

**БОЛОТ: АЙАҘ БОЛОТ** (көнсығыш диалект, урта) *и.* аҡ болот — *белые облака;* йамҡыр болото, йауым болото (урта) ҡара болот — *дождевая туча.* Күк болот (төньяҡ-көнбайыш), йәшен болото (урта) — *грозовая туча.* Ҡыҙғылт болот, көйҙө болот (ҡыҙыл). Тамырлы болот (урта) шекәрә болот — *тонкое волнистое облачко*

**БОРА** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта) *и.* 1. Ҡур — *закваска.* 2. (мейәс) Бысҡы вағы — *опилки.* Бысҡанда бысҡы бораһы ҡойолоп тора

**БОРАЗ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* гөмбөр — *ботало*

**БОРАҠ I** (ҡариҙел) *и.* кәбәк — *мякина*

**БОРАҠ II** (мейәс) *и.* бысҡы вағы — *опилки*

**БОРАЛАМАН** (һаҡмар) *и.* бола — *беспорядок.* Өй эсе бораламан булып китте

**БОРАЛҠЫ** (ҡыҙыл) *с.* 1. Бола — *безалаберный.* Боралҡы гиһә, бороңғоға урын йуҡ. Боларҡы (һаҡмар). 2. (дим, мейәс) *и.* килмешәк — *пришелец*

**БОРАЛТЫУ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* боҙоу — *разбить семейную жизнь.* Донйа боралтып йөрөй шунда (ҡыҙыл)

**БОРАЛЫУ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* болярыу — *прийти в беспорядочное состояние.* Донйа боралып китте (урта)

**БОРАМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и. паром.* Борам йөрөй башлағанмы?

**БОРАНДАҠ** (салйоғот) *и.* ҡылансыҡ — *кокетка*

**БОРАНҠА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡаҙаҡ — *фунт*

**БОРАУ** (урта) *и.* тейәк — *палка, перевязанная по середине веревкой (для различных целей).* Борау шунда һарай башындалыр, ҡарале

**БОРАУ: БЕЛӘК БОРАУ** (ҡыҙыл) *и.* сапҡыслы бырау — *коловорот*

**БОРҒАҘАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* күл атамаһы — *название озера*

**БОРҒАҠ** (ҡыҙыл) *и.* ваҡ йомро ҡар — *мелкая снежная крупа.* Ул йаҡта борғаҡ йауҙы микән?

**БОРҒАҠТАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* борғаҡ кейҙереү — *надевать намордник.* ◊ Борғаҡтап йебәреү (арғаяш) ҡоҙаларҙы «хуш айағы»на һыйлап ебәреү — *прощальное угощение сватов*

**БОРҒАНАҠ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* 1. Ваҡ йомро ҡар — *мелкая снежная крупа.* 2. (ҡариҙел) Ҡар ҡатыш ямғыр — *снег вперемешку с дождем.* 3. (мейәс) Боҙлауыҡ — *гололедица*

**БОРҒАНДАУ** (ҡариҙел, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡыланыу — *кокетничать*

**БОРҒО** (арғаяш, салйоғот) *и.* бырау — *сверло*

**БОРҒОЛДАТЫУ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* пыран-заран килтереү — *разнести в пух и в прах*

**БОРҒОСА** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Күкрәк ағас *(киндер урынында)* — *пришва (на домашнем ткацком станке).* 2. (урта урал) Ҡалтырса — *скальница*

**БОРҒОСАҒАС** (урта) *и.* тыйғыса — *притужальник (часть домашнего ткацкого станка)*

**БОРҒОСА СӨЙӨ** (дим) *и.* тыйғыса — *притужальник*

**БОРҒОСА ТАЙАҒЫ** (арғаяш, дим, ҡариҙел, урта) *и.* тыйғыса — *притужальник.* Борғоса тайағы һынып сыҡты (арғаяш)

**БОРҘАУ** (мейәс) *ҡ.* борҡоу — *вздыматься.* Шыршы аҫты шу тикте ҡоро була, саңы борҙап тора. Бырҙау (әй)

**БОРҘОҒОУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* быуын сығыу — *вывихнуть(ся).* Малайының ҡулбаш һөйәге борҙоҡҡан (ҡыҙыл)

**БОРҘОҠТОРОУ I** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Боршайтыу — *перекосить.* Бысҡыны борҙоҡторма. 2. Имгәтеү — *искалечить*

**БОРҘОҠТОРОУ II** (әй) *ҡ.* ҡағыу — *притеснять.* Йәтим баланы борҙоҡтормағыҙ тей туғайны ҡәртнәйем

**БОРҠАҠ** (һаҡмар) *и.* туҙғанаҡ — *одуванчик*

**БОРҠАНАҠ** (ҡариҙел) *и.* туҙғанаҡ — *одуванчик*

**БОРҠОЛДАҠ** (ҡыҙыл) *и. порошок*

**БОРҠОЛДАП АҒЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* сорлап ағыу — *течь струей.* Ҡаннары борҡолдап аҡты

**БОРҠОЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* һөйләнеү — *ворчать.* Борҡолдар ҙа йөрөр инде шул

**БОРҠОЛДАТЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* борҡотоу — *образовывать клубы пыли.* Ауылдан йаланға килә торған оло йулдың саңын борҡолдатып, бер һыбайлы күренде

**БОРҠОРАТЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ҡыуыу — *разгонять.* Тауыҡларны борҡоратма

**БОРҠОРАУ** (ҡариҙел, урта урал) *ҡ.* борҡоу — *вздыматься (о пыли, дыме)*

**БОРЛАТЫУ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* борҡотоу — *образовать клубы дыма, пыли и т.д.* Күмәкләшеп тереп тәмәке борлатырға тотондолар (эйек-һаҡмар)

**БОРЛОҒОУ** (урта) *ҡ.* быуын сығыу — *вывихнуть(ся)*

**БОРЛОҒЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Ҡайғырыу — *горевать.* Бала борлоҡмасын. 2. Һағыныу — *скучать.* Борҙоғоу (урта урал)

**БОРМА I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бығау йоҙаҡ — *винтовой замок*

**БОРМА II** (һаҡмар) *и.* дуға дүңгәләге — *кольцо на дуге*

**БОРМА III**(урта) *и.* шәм селтәре — *решетка от лампы.* Өслө шәмдең бормаһы йуғалмай һаман да йөрөп йата икән әле һеҙҙә

**БОРМА ЙӨҘӨК** (арғаяш) *и.* бормалы йөҙөк — *витой перстень*

**БОРМАҠАЙ** (арғаяш) *с.* бөҙрә — *кудрявый*

**БОРОЖ I** (ҡариҙел, эй) *и.* борош — *подуст*

**БОРОЖ II** (арғаяш) *с.* борош — *кривой*

**БОРОЖ III** (көнсығыш диалект) *и.* бағау — *поперечный топор для выдалбливания внутренности колодочных ульев и бортей*

**БОРОЖИН** (мейәс) *и.* балта бөгәзе — *дугообразное или кольцеобразное приспособление, применяемое при точке топора*

**БОРОҠ** (гәйнә, эй) *р.* һис бер — *нисколько.* Йаратмим бороҡ (гәйнә). Әндәшмә бороҡ, эшетһен ҡолағың (эй)

**БОРОЛҒАН** (көнсығыш диалект) *с.* айыртылған — *сепарированный.* Боролған һөт

**БОРОЛДАНЫУ** (салйоғот) *ҡ.* баш ҡоҫоу — *колоситься (о хлебных злаках)*

**БОРОЛДАТЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* пыран-заран килтереү — *разнести в пух и в прах.* Балаларны боролдатып сығарып йебәргән

**БОРОЛОШ I** (ҡариҙел, ҡыҙыл, урта) *с.* ҡыйыш — *кривой.* Муйыны боролош (ҡариҙел)

**БОРОЛОШ II** (гәйнә) *и.* еңмеш — *упрямец, упрямица*

**БОРОЛОШЛАНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* салышайыу — *скривиться.* Беләге боролошланып ҡалты

**БОРОЛТА** (эй) *и.* бөгәл — *извилина реки.* Боролтанан алып тауҙың йартыһын ҡырғыҙға һаттылар

**БОРОМ** (ҡыҙыл) *и.* дүрт шөйтә күҙе — *четыре навоя (в домашнем ткачестве)*

**БОРОМКА** (арғаяш) *и.* моҙға — *лукошко*

**БОРОМТА** (мейәс) *и.* бөгәл — *извилина реки.* Йылға боромтаһынан бирерәк туҡтанылар

**БОРОН I** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Танау — *нос.* ◊ Борон төшөү *(бойоғоу)* — *чувствовать себя подавленным.* 2. (дим, ҡариҙел) Һемәк — *кран.* Самауыр бороно. 3. Суҡыш — *клюв.* Ҡош бороно

**БОРОН II: КӨН БОРОН** (мейәс) көн элгәре — *заранее.* Көн борон ала торғайнылар эш хаҡын

**БОРОНДОҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әлгәнйәк — *бурундук*

**БОРОНКА** (гәйнә) *и.* төйөҫ — *бурак (берестяная коробка)*

**БОРОНСА** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* морондоҡ — *намордник*

**БОРОНСАҠ I** (урта урал) *и.* морондоҡ — *намордник*

**БОРОНСАҠ II** (ҡариҙел) *и.* ауыҙлыҡ — *удила*

**БОРОН СӨЙӘГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* танау биле — *переносица*

**БОРОНТОҠИНӘЙ** (ҡариҙел) *и.* морондоҡ инәй — *посажёная мать*

**БОРОНТОҠӘТӘЙ** (ҡариҙел) *и.* морондоҡ атай — *посажёный отец*

**БОРОН: БОРОН ТӨРТЕҮ** (дим) *ҡ.* морон терәү — *найти защиту у кого-л.* Борон төртәр кешең бармы?

**БОРОУ: ҺӨТ БОРОУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* һөт айырыу — *пропускать молоко через сепаратор*

**БОРОУ** (ҡыҙыл) *с.* урау — *круговой.* Бороу булһа ла йул йаҡшы

**БОРОШ** (һаҡмар) *с.* ҡыйыш — *кривой.* Борош ауыҙ ҡыҙ йәрәште

**БОРСАҠ АҒАСЫ** (мейәс) *и. акация*

**БОРҪАЛАНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, эй) *ҡ.* 1. Тынысһыҙланыу — *беспокоиться.* Айауһыҙ тигәнсә борсаланып көйҙө инде (эй). Борҫаланыу (дим). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Боларыу — *бузить.* Борсалашҡаннар буғай бабай белән дә

**БОРСОУҒА ҺУҒЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* борсоуға һалыу — *вызывать беспокойство.* Балниска йатырға мәжбүр итеүҙәре шаҡтай борсоуға һуҡҡайны аны

**БОРҪАЛАҠ** (дим, эй) *и.* ҡарлы буран — *буран со снегопадом.* Көндәр борҫалаҡ булып китте (эй). Борһалаҡ (көньяҡ-диалект)

**БОРҪАЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* буталыу — *перемешиваться.* Бүре ҡарға борҫаланып барып йатты

**БОРҪАЛЫ** (мейәс) *с.* тигеҙһеҙ — *неровный.* Борҫалы иләгәнһең йөндө

**БОРТАҠ** (салйоғот) *с.* тыйнаҡһыҙ — *непослушный*

**БОРХАТ** (урта урал) *и.* 1. Теләк — *желание.* 2. Мөмкинселек — *возможность*

**БОРХОЛДАТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* борҡотоу — *образо(вы)вать клубы дыма.* Борхолдата өрөп тартҡан тәмәке төпсөгөн итек табаны аҫтында иҙҙе лә Ғайзуллаға ҡаршы атланы

**БОРХОТОУ** (туҡ-соран, эйек) *ҡ.* әрләү — *сильно ругать.* Бармайым тип йата ине, атаһы борхотоп сығарып йебәрҙе (туҡ-соран)

**БОРҺАЛАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* тынысһыҙланыу — *беспокоиться.* Малайҙар борһаланып ауылдарына тайа башланы

**БОРШАЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* борғаланыу — *вертеться.* Боршаланып, көрһөнөп йатты-йатты ла, ахырҙа урынынан тороп, ҡабаттан кейенде

**БОРШАНДАУ** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *ҡ.* борғоланыу — *вертеться.* Боршаңнау (урта)

**БОРШАННАУ** (урта) *ҡ.* ҡәнәғәт булмау — *быть недовольным.* Күлмәк бәләкәйерәк тип боршаннағайны

~~**БОСҠАЙ**~~ (мейәс) *и.* босҡаҡ — *лоскут (кожи, шкуры)*

~~**БОСҠАҠ**~~ (көнсығыш диалект) *и.* 1. Малдың аяҡ тиреһе — *шкура с ног животных.* 2. (арғаяш) Йорон — *лоскут от шкуры.* 3. (урта) Ҡыҫҡа йөн — *короткая шерсть*

**БОСҠАҠЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* босҡаҡ ҡуйыу — *прибивать шкурки (к лыжам)*

**БОСМАҠ** (дим, ҡариҙел, урта, эйек) *и.* мөйөш — *угол.* Алты босмаҡлы өй ҫалып керҙеләр (дим)

**БОСОҠ I** (эй) *и.* 1. Ағас күнәк — *бадья.* 2. Эсе соҡолған ҡарағай — *сосна, у которого выдолблена сердцевина*

**БОСОҠ II** (дим) *и.* ~~йәмшек танау — *курносый*~~. Босоҡ ҡына ҡыҙы бар

**БОСОҠ: БОСОҠ ТАНАУ** (һаҡмар) *с.* йәмшек танау — *курносый*

~~БОСТАШ:~~ **БОСТАШ БУЛЫУ** (эй) *ҡ.* юғалыу — *пропадать*

**БОҪАРЫУ** (эйек) *ҡ.* быуланыу, тирләү — *запотеть.* Тайба әбей тирләп боҫарған тәҙрә быйалаһы үтә нейҙәрҙер күрергә теләгән һымаҡ, бик оҙаҡ тышҡа ҡарап, тынып ултырҙы

**БОҪҠАҠ: БОҪҠАҠ ЙӨН** (мейәс) *и.* шырт йөн — *грубая шерсть*

**БОҪҠАҠЛАУ** (дим) *ҡ.* быҫҡаҡлау — *моросить*

**БОҪҠОТОУ** (дим) *ҡ.* быҫҡыу — *тлеть*

**БОҪЛАУ** (урта) *ҡ.* төтәҫләү — *окуривать.* Ҡорт боҫлау

~~**БОҪЛОҠ**~~ (урта) *и.* мейестән йылы сығыу өсөн яһалған тишек — *отдушина в печи*

**БОҪТАЛАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* боҙоу — *испортить.* Оҫталайым тип боҫталап бөткәнең бит, улым

~~**БОҪТАН**~~ (эйек) *и.* картуф араһына ҡабаҡ аралатып сәселгән баҡса — *огород, засеянный тыквой и картошкой*

**БОҪТАУ** (көнсығыш диалект) *и.* буҫтау — *сукно*

**БОҪТАШ: БОҪТАШ ИТЕҮ** (төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *ҡ.* зыян итеү — *вредить кому-чему.* Босташ итеү (ҡариҙел). Ҡара, босташ итәмәлләә балаң? Боҫташ итеп йөрөү (эй)

~~**БОТ**~~ (урта, һаҡмар, эйек) *и.* арба күкрәгенә текә ултыртылған ике ағас — *ножки-подставки на задних углах корпуса телеги*

**БОТА** (гәйнә) *и.* сигелгән оҙон билбау — *вышитый длинный кушак из материи.* Ботаны кейәү биленә урай торғаннарейе

**БОТАҠ** (урта) *и.* ырыу — *род.* Ботаҡларынта шунтай кешеләр бар

**БОТАҠ-САТАҠ** (ҡыҙыл, эй) *р.* тәртипһеҙ рәүештә — *беспорядочно.* Китаптарын ботаҡ-сатаҡ таштап сығып киткән анау малай (ҡыҙыл)

**БОТАЛАУ** (дим) *ҡ.* бутау — *перемешивать*

**БОТАМА** (урта) *и.* 1. Ботағынан таҙартылған ағас — *дерево, очищенное от ветвей.* 2. Урманда ағасы киҫелгән асыҡ урын — *лесная просека*

**БОТАУ** (дим) *ҡ.* 1. Бутау — *перемешивать.* 2. (урта) Ағас төпләү — *корчевать*

**БОТКҮНӘК** (урта) *и.* ботлоҡ — *сосуд, изготовленный из кожи задней ноги лошади или коровы*

**БОТЛАУ I** (төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ) *ҡ.* ыңғайына тороу — *потворствовать.* Шул баланы ботлайсың (төньяҡ-көнбайыш). Өйгә саҡ ботлап алып кереп китте инәһе, бер кемгә баш бирмәй (ырғыҙ)

**БОТЛАУ II** (эйек) *ҡ.* катлау — *сдваивать.* Йеп ботлау

**БОТОҠ I** (гәйнә, урта урал) *с.* 1. Тупаҫ — *грубый.* 2. Аҡылға бер сама — *недалекий (о человеке).* Ул малай ботоҡ ул үзе (гәйнә)

**БОТОҠ II** (гәйнә, ҡариҙел, урта урал, эйек, эй) *а.* бөтәһе — *все.* Ботоғо шунда йәшәй (урта урал)

**БОТОМ** (мейәс) *и.* йыллаған һуған — *лук-батун*

**БОТСУМКА** (арғаяш) *и.* малдың бот тиреһенән тегелгән бәләкәй тоҡ — *мешочек, сделанный из кожи бедра скотины*

**БОТТОҠ I** (көнсығыш диалект) *и.* турһыҡ — *бурдюк*

**БОТТОҠ II** (көнсығыш диалект) *и.* биллек — *поперечный ремень (у шлеи)*

**БОХ-БОХ, МОХ-МОХ** (төньяҡ-көнбайыш) *ы.* ат саҡырыу ымлығы — *междометие призыва лошади.* Боһ-боһ! (гәйнә)

**БОХАР БОРСАҒЫ** (дим, урта) *и.* 1. Ноҡот борсағы — *фасоль.* 2. (көнсығыш диалект) Ҡара борсаҡ — *бобы*

**БОХАР СЕЙӘҺЕ** (мейәс) *и.* күгән — *тёрн*

**БОХАР ТАЛЫ** (урта) *и.* селек — *чилига*

**БОХТА** (дим, мейәс) *с.* бөхтә — *чистоплотный*

**БОҺАНЫУ** (мейәс) *ҡ.* күңел тулыу — *растрогаться.* Хат уҡығанда Ғайан боһанып китте

**БОҺОЛДАҠ** (ҡыҙыл) *и.* төтәткес — *дымарь.* Бер аҙға ғына боһолдағыңды биреп тор әле

**БОҺОЛДАТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бал ҡортон төтәҫләү — *окуривать пчел*

**БОҺОРАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* быуланыу — *испаряться.* Йылыу ҡышҡыһын боһорап йата

**БОШМА** (эй) *с.* бойоҡ — *унылый*

**БОШМАНЛАНЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бойоғоу — *унывать.* Был арала бошманланып киттең әле

**БОШОНҠО** (көнсығыш диалект) *с.* бойоҡ — *унылый.* Бошонҡо ғына йөрөй улым хәҙер (эй)

**БОШОРҒОЛАНЫУ** (дим) *ҡ.* көйһөҙләнеү — *капризничать*

**БӨБӘЛӘК** (ҡыҙыл) *и.* бөгәлсән — *овод лошадиный*

**БӨГӨЛМӘ I** (дим, мейәс, урта) *и.* бөгәл — *извилина реки.* Ана шул бөгөлмәлә йөрөй ине атың (дим)

**БӨГӨЛМӘ II** (ҡариҙел) *и.* соңғол — *омут*

**БӨГӨЛМӘК** (мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БӨГӨЛӨШ** (салйоғот) *и.* терһәк бөгәре — *локтевой изгиб*

**БӨГӨЛСӨН** (урта) *и.* бөгәлсән — *овод лошадиный*

**БӨГӨЛТМӘ** (мейәс) *и.* бөгәл — *извилина реки*

**БӨГӨМ I** (арғаяш, мейәс) *и.* бөгәл — *извилина реки*

**БӨГӨМ II** (арғаяш, мейәс) *и.* быуын — *сустав*

**БӨГӨМЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* бөгәрләү — *свернуть.* Бәппәғүлән-бәғүлән тип бөгөмләй торғайныҡ

**БӨГӨҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бүгеү — *приедаться.* Аштан бөккән ул

**БӨГӘҘӘК** (һаҡмар) *и.* бөгәзе — *приспособление из согнутого ивового или черемухового прута, применяемое как часть различных орудий труда (ручки косы, распорки капкана, морды и т.д.).* Бөгәзе (ҡыҙыл), бөгәз, бөгәзә (урта), бөгәҙә (дим), бөгәжә (дим, урта)

**БӨГӘЖӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аҫма лампа элә торған ырғаҡ — *крюк подвесной лампы*

**БӨГӘЗЕ** (ҡыҙыл) *и.* туғын — *обод*

**БӨГӘЙБӘП** (мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БӨГӘЙЛЕЛӘҮ** (дим) *ҡ.* бөгәрләү — *свернуть*

**БӨГӘЛБӘП** (мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БӨГӘЛЖӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сулпы сыңғаһы — *дужка накосника*

**БӨГӘЛЙӘ I** (ҡариҙел, урта, эйек, эй) *и.* 1. Бөгәзе — *приспособление из согнутого ивового или черемухового прута, применяемое как часть различных орудий труда (ручки косы, распорки капкана, морды и т.д.).* Ҡабыҡ пишекнең бөгәлйәсе була (ҡариҙел). Бөгәлжә (дим). 2. (эй) Арба үрәсәләрен тоташтырып торған арҡыры ағастар — *перекладины, соединяющие нащепы телеги*

**БӨГӘЛЙӘ II** (ҡариҙел, эй) *и.* бөгәлсән — *овод лошадиный.* Бөгәли, бөгәлйән (гәйнә), бөгәлсә (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта)

**БӨГӘЛТӘ** (мейәс) *и.* бөгәл — *извилина реки*

**БӨГӘЛӘ** (мейәс, туҡ-соран, эй) *и.* бөгәлсән — *овод лошадиный.* Бүгәлә (мейәс, эй)

**БӨГӘЛӘК, БӨГӘНӘК** (мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БӨГӘЛӘК** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* бөгәлсән — *овод лошадиный.* Үлән ашап йөрөгән аттар, бөгәләктәр безелдәүгә сыҙай алмайынса, төтөнлөк һалған урынға килделәр (ҡыҙыл)

**БӨГӘЛӘКЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* себенләү — *носиться от укуса овода (о животных)*

**БӨГӘНСӘ** (һаҡмар) *р.* был көнгә саҡлы — *до сих пор.* Бөгәнсә ҡайҙа йөрөнөң?

**БӨГӘР, БӨГӘРЕМ** (мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БӨГӘРЛӘК** (урта) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Бөгәрләүек (дим)

**БӨГӘРСӘЙ** (урта) *и.* бөгәрсә — *елец*

**БӨГӘСӘ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *р.* 1. Бөгөн төндә — *сегодня ночью.* Бөгәсә алып ҡасты (ҡыҙыл). 2. (урта) Бөгөн — *сегодня.* Бөгәсә төнө буйы буран ойоҡһотоп торҙо

**БӨГӘТ** (ырғыҙ) *и.* быуа — *пруд.* Ырғыҙ буйҡайлары бөгәт-бөгәт, бөгәтендә лә уйнай бер өйрәк... *(халыҡ йыры)*

**БӨҘӨРКӘ** (ҡариҙел) *с.* бөҙрә — *кудрявый*

**БӨҘӨРЛӘТӘҮ** (дим, ҡыҙыл) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БӨҘРӨЙ** (ҡариҙел) *с.* бөҙрә — *кудрявый.* Ҡап-ҡара бөҙрөй сәсле

**БӨҘРӘТӘҮ** (дим, ҡыҙыл) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БӨҘӘНДӘНЕҮ** (мейәс) *ҡ.* көн боҙолоу — *испортиться (о погоде)*

**БӨҘӘҢКЕЛӘНЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* ҡараңғыланыу — *темнеть.* Беҙ ҡайтып йетеүгә көн бөҙәңкеләнеп тора ине

**БӨЖЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* шөрләү — *струсить.* Ә-ә-ә, бөжләнеңме, йөрәк йетмәнеме?

**БӨЖМӘН** (һаҡмар) *и.* ҡурҡаҡ — *трус.* Эй, бөжмән икәнһең дә үҙең

**БӨЙӨЛДӨРӨК** (ҡыҙыл) *и.* бөйөрлөк — *позумент с наборными кистями или монеты, нашитые на зилян по обеим сторонам талии*

**БӨЙӨМҺӨҘ** (ырғыҙ) *с.* булдыҡһыҙ — *неспособный*

**БӨЙӨРӨК** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* 1. Бәлеш — *пирог.* 2. (ҡыҙыл, мейәс) Ваҡ бәлеш — *беляш*

**БӨЙӨРЛӘТӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БӨЙӨРСӘК** (мейәс) *и.* бөйөрлөк — *позумент с наборными кистями или монеты, нашитые на зилян по обеим сторонам талии*

**БӨЙӨРТАШ** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* һуйырташ — *булыжник*

**БӨЙРӘК I** (ҡыҙыл, эй) *и.* бөйөр тапҡыры аҡ һыҙатлы һыйыр — *масть коровы (с белой полосой в области поясницы).* Бөйөрәк (урта, һаҡмар). Бөгөн бөйөрәк көтөүҙән ҡайтманы (һаҡмар)

**БӨЙРӘК II** (арғаяш) *и.* йәлдәү — *горловина верши.* Мурҙа бөйрәге бигерәк бәләкәймә?

**БӨЙСӨК** (ҡыҙыл) *и.* ҡом шәкәр — *сахарный песок*

**БӨЙӘНӘ** (арғаяш) *и.* 1. Бөйән — *двенадцатиперстная кишка.* 2. (мейәс) Таҙғарын — *сычуг*

**БӨЙӘНӘК** (эй) *и.* бөйөр — *почки.* Бөйәнәге ауыры ул бахырҙың

**БӨЙӘТ I** (дим, минзәлә) *и.* мөйәт — *хомутина (хомут без деревянного остова)*

**БӨЙӘТ II** (ҡариҙел) *и.* тултырма — *домашняя колбаса.* Бөйәт йасау

**БӨК-БӨГӘЙЕМ, БӨК-БӨГӘРЕМ** (мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БӨККӨЛ** (урта, һаҡмар) *а.* бөтә — *весь.* Бөккөл ауылды йыйған (һаҡмар). Бөкөл (һаҡмар)

**БӨККӘН** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* 1. Ваҡ бәлеш — *беляш.* Балан бөккәне. 2. (ҡариҙел) Билмән — *пельмени*

**БӨКӨ** (һаҡмар) *и.* йоморҡа, май ҡушып, иҙеп, ваҡ-ваҡ йоморса итеп бешерелгән ҡамыр ашы — *сдобные булочки.* Тиҙ генә бөкө бешереб алайым әле

**БӨКӨРӨЙ** (төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран) *и.* 1. Сүсбәрә — *творожные вареники.* 2. (дим) Малдың үпкә-бауырынан тапап бешерелгән бәлеш — *ливерный пирог*

**БӨКӨРӨШ** (мейәс) *и.* керәндил — *крендель*

**БӨКӨС** (дим, көнсығыш диалект, урта) *и.* бөкрө — *горбатый (о человеке).* Бөкөс кенә булһа ла ҡаҫылай көслө үҙе (урта)

**БӨКӨ ШАЛҠАН** (урта) *и.* керән — *хрен*

**БӨКСӘ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БӨКСӘ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Төпөш — *коротыш.* 2. (һаҡмар) *с.* бөкрө — *горбатый.* Әнә бөксә ғайтып килә

**БӨКСӘЙЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* бөкрәйеү — *сгорбиться.* Биленән бөксәйеп бөткән ҡарт ине (эй)

**БӨКСӘНДӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* бил яҙмай эшләү — *работать не разгибая спины.* Һин бөксәндәп йөрөгәндә, мин нисек ҡунаҡ булып утырайым, тей (мейәс)

**БӨКШӨРӨҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* еңеү — *побеждать*

**БӨКҺӨҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* оҙаҡ ябып ҡуйылған һауыттың еҫләнеүе — *стать затхлым (о посуде, долго стоявшей в закрытом виде)*

**БӨКӘ** (гәйнә) *и.* эремсек билмәне — *творожные вареники*

**БӨКӘЙ** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* бапаҡ — *бука.* Әнә, бөкәй тип ҡурҡыталарейе (гәйнә)

**БӨКӘҢНӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* кәкрәйеү — *согнуться.* Бөкәңнәп кенә йөрөй саҡ

**БӨКӘЧЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* имгәкләү — *ходить на четвереньках (чаще о ребенке)*

**БӨЛГӨНСӨЛӨК** (мейәс) *и.* бөлгөнлөк — *разорение.* Бөлгөнсөлөктө күрҙег инде ул әүәле

**БӨЛДӨК** (төньяҡ-көнсығыш) *р.* хәүефле — *опасно*

**БӨЛДӨРГӘН** (дим, ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ҡыҙыл бөрлөгән — *костяника.* Йылға буйында бөлдөргән дә күп була (ырғыҙ). Батима йеңгә, әйҙә беҙҙе белән бөлдөргәнгә (ҡыҙыл)

**БӨЛДӨРКӘ** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөлдөргә — *темляк*

**БӨЛДӨРӨҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* харап итеү — *погубить.* Бөлдөрҙө бит был йамғыр йауып (эй)

**БӨЛДӨРСӨН** (мейәс) *и.* бөйән — *двенадцатиперстная кишка*

**БӨЛӨК** (көнсығыш диалект) *р.* 1. Хәүефле — *опасно.* Хәл бөлөк бит! (салйоғот). 2. (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* йонсоу — *измученный.* Һәйрүзәгә нимә буған, бик бөлөк йөрөй (ҡыҙыл). 3. (мейәс, эй) *р.* бик — *очень.* Бөлөк шәп (мейәс)

**БӨЛӨНӨҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* меҫкенләнеү — *прибедняться*

**БӨЛӨҮ** (көнсығыш диалект, эйек-һаҡмар) *ҡ.* харап булыу — *быть погубленным.* Бөлдөм дәһә эй! Өфөгә эпкитәләр инде (ҡыҙыл)

**БӨЛӨШ** (ҡыҙыл, урта) *и.* хәтфә — *плюш.* Фөлөш (ҡыҙыл, мейәс)

**БӨЛӘЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бапаҡ — *бука*

**БӨЛӘҢГЕР** (урта урал) *с.* 1. Күкшел — *синеватый.* Бөләңгер дауарҙан күлмәк тектерҙе. 2. Бер аяҙып, бер яуып торған — *пасмурная (о погоде).* Бөләңгер көнө йулға сыҡма, тинем. Бөләңгерт (эй). 3. Болғансыҡ — *мутная (о воде).* Һыуы бөләңгер ине, самауырға һалды ла ҡайнатты

**БӨЛӘХӘТ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* 1. Бәлә — *беда.* Эсһә, бөләхәт инде. Берәр бөләхәт сығарып йөрөмәгеҙ (һаҡмар). 2. Бола — *беспорядок*

**БӨЛӘХӘТЛӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* 1. Тотоноп бөтөрөү — *растратить.* 2. Йонсотоу — *утомлять*

**БӨР I** (ҡыҙыл) *и.* бөрө — *почка.* Ҡайын бөрө йыйып алдым әле

**БӨР II** (ҡыҙыл) *и.* бөргәк — *липучка.* Бөр һарыҡ йөнөнә йәбешә

**БӨРГӘК** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* 1. Дегәнәктең емеше — *семена репейника.* Итәгенә һырыған бөргәктәрҙе сүпләй-сүпләй, шыбырҙап ҡына Сәмиғәгә йауап бирә (ырғыҙ). 2. (мейәс) Тегәнәк — *репейник.* Бөрмәк (ҡыҙыл)

**БӨРГӘКЛӘНЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* дегәнәктең бешеп етешеүе — *созревание репейника.* Дегәнәк бөргәкләнде инде

**БӨРГӘНКЕ** (урта) *с.* бөрмәле — *со сборками.* Бөргәнке күлмәк кейҙек морон

**БӨРГӘНСӘК I** (һаҡмар) *и.* таҙғарын эсендә һаҡланған ит — *вид вяленого мяса.* Мал һуйғас иң йаҡшы майлы ерен тоҡ ҡарын эсенә һалып бөргәнсәк эшләгәннәр, аны йаҙ ит әҙәйгәс йә бик ҡәҙерле тыуғаны килгәндә башҡа иткә ҡушып ашатҡаннар

**БӨРГӘНСӘК II** (һаҡмар) *и.* бөрмәкәй — *подмаренник*

**БӨРҘӘНЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Бөрөләнеү — *почковаться.* 2. (ҡыҙыл, мейәс) Йомарланыу — *образование кошечки (о капусте).* Кәбеҫтә бөрҙәнде (мейәс)

**БӨРКӘНЕҮ** (арғаяш, эй) *ҡ.* болот менән ҡапланыу — *покрыться облаками (о небе).* Көн бөркәнеп китте, йауыр ахыры (эй)

**БӨРКӘНСЕК** (көнсығыш диалект) *и.* күлдәк — *сорочка.* Бала бөркәнсекте тыуһа бәхетте була (ҡыҙыл)

**БӨРКӘТЕҮ** (дим) *ҡ.* бөркәндереү — *накрывать.* Йаулыҡ бөркәтеп сығарҙым

**БӨРКӘТӘҮ** (ҡыҙыл) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БӨРКӘҮЛЕ** (дим) *с.* көплө — *крытый.* Бөркәүле машина

**БӨРЛӘНТИН** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, урта, урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Бөҙрәләнеп торған йомшаҡ ҡына ситса — *ситец с вафельным узором.* Бөрләдин (мейәс). 2. (урта) Яҡшы сортлы буҫтау — *сукно высшего сорта*

**БӨРМӘБАШ** (көнсығыш диалект) *с.* дүрт яҡлап ябылған — *четырехскатный.* Бөрмәбашты өй (салйоғот)

**БӨРМӘК** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* суҫҡа дегәнәге — *прицепник.* Бөрәнәк (эйек)

**БӨРМӘСӘ I** (урта) *и.* бөрмә — *сборка*

**БӨРМӘСӘ II** (урта) *и.* һырлан — *липучка*

**БӨРМӘТ I** (дим, ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* бөрмә — *сборка.* Бөрмәтле күлмәк кейеп алған (һаҡмар)

**БӨРМӘТ II** (һаҡмар) *и.* бөрмәкәй — *подмаренник.* Бөрмәттең орлоғо кейемгә йәбешеүсән була

**БӨРМӘТЕГӘНӘК** (урта) *и.* һырлан — *липучка*

**БӨРӨ** (дим, урта) *и.* 1. Тубырсыҡ — *шишка.* Ҡарағай бөрөһө (урта). 2. (арғаяш) Гөлйемеш емеше — *плод шиповника*

**БӨРӨҘ** (урта) *и.* бөрөз — *долото или поперечный топор для скобления и отделки внутренней части колодочных ульев и бортей.* Бөрөж (ҡыҙыл)

**БӨРӨҘӨ** (көнсығыш диалект) *р.* бер үҙе, яңғыҙ — *одиноко.* Бөрөҙөм тигатам (эй). Бөрөҙөм ултырып ҡалдым дүрт эҫтинә эсендә, балдар гитебөттө (ҡыҙыл)

**БӨРӨЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тубырсыҡ — *шишка.* Сыршы бөрөйө

**БӨРӨК** (кариҙел, урта урал) *и.* *һ.* берүк — *пожалуйста, чтобы.* Оҙаҡ йөрөмә, бөрөк (урта урал)

**БӨРӨЛӨҮ** (мейәс) *ҡ.* ҡыҫылыу — *сузиться.* Күҙе бөрөлөп кенә тора

**БӨРӨЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* йомарланыу — *образование кошечки (о капусте).* Кәбеҫтә бөрөләнә башлаған

**БӨРӨМ** (ҡыҙыл) *и.* бөрмә — *сборка*

**БӨРӨНӨҮ** (салйоғот, урта) *ҡ.* төрөнөү — *закутываться.* Алама йурғанға бөрөнөп кенә йатҡан тей (урта)

**БӨРӨС** (дим) *ы.* брес — *брысь!* Зәрә йөнө ҡойола шул бесәйҙең, бөрөс! Бырс (урта), бөрөс, бөрөсмә (эй)

**БӨРӨШ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* бөршәйгән — *сморщенный*

**БӨРӨШАУЫҘ** (мейәс) *и.* борош — *подуст*

**БӨРӨШКӘК** (ҡыҙыл) *и.* арҡыры балта — *поперечный топор*

**БӨРСӨК** (арғаяш) *с.* ҡыҫыҡ — *узкий (о глазах).* Бөрсөк күҙ

**БӨРСӨКТӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* яңы ишкән арҡандың сығып торған йүкә остарын бысаҡ менән ҡырҡып таҙартыу — *очищение нового аркана ножом от выступающих концов мочала.* Арҡаныңды бөрсөктәп сыҡ (эй). Бөрсөү (дим, урта)

**БӨРСӨМӘ** (һаҡмар) *и.* сабыртма — *сыпь*

**БӨРСӨП ЖЫЙЫУ** (эй) *ҡ.* берәмләп йыйыу — *собирать поштучно.* Жиләкте бөрсөп жыйҙыҡ

**БӨРСӘ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар) *с.* сос — *ловкий.* Эй, һин, бөрсә! Сабир алға ынтылды. Миндеғәленең уң ҡулын ҡуҙғата алмаҫтыҡ итеп ҡысып, боғаҙына йәбеште (ҡыҙыл)

**БӨРСӘКӘЙ, БӨРСӘЛӘЙ** (урта) *и.* һырлан — *липучка.* Бөрсәнәй (дим)

**БӨРҪӨГӨН** (һаҡмар) *р.* иртәнән һуң — *послезавтра.* Бөрҫөгөңгә барып сығырбыҙ әле һеҙгә. Берсегән (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш)

**БӨРТКӘ, БӨРТМӘ** (ҡариҙел) *и.* бөрмә — *сборка*

**БӨРТӨК** (көнсығыш диалект) *р.* һис тә — *нисколько, вовсе.* Ҡолонға шалтыраҡ ҡуйһаң, бөртөк сейәлмәй (ҡыҙыл)

**БӨРӘ** (мейәс) *и.* 1. Бөрө — *почка.* Ҡайын бөрәһе бик файҙалы тейҙәр. 2. Бөргәк, һырлан — *липучка*

**БӨҪКӨҮ** (һаҡмар) *ҡ.* һөт ашамлыҡтарының әсеп еҫләнеүе — *стать затхлым (о молочных продуктах)*

**БӨҪТӨҠ** (урта) *р.* саҡ ҡына — *чуть.* Бөҫтоҡ та аңламаным

**БӨТЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бетеү — *амулет, талисман.* Бөтөй (һаҡмар), бөтөү (дим, әй)

**БӨТЕНТӘҢКӘ** (дим) *и.* көмөш һумлыҡ — *серебряный рубль*

**БӨТЕРКӘ** (дим) *и.* бөрмә — *сборка.* Бөтеркә баш сабата кейгән

**БӨТКӨЛ: БӨТКӨЛ БУЙЫНА** (мейәс) *р.* бик оҙаҡ — *очень долго.* Бөткөл буйына әҙәрҙәп китә

**БӨТЛӨГӨСӨ** (гәйнә) *и.* бөтәһе — *все.* Сәйетбаттал жәүере бөтлөгөсө шулай атала

**БӨТЛӨК I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* булмыш — *сущность.* Бөтлөгө шу аның (гәйнә)

**БӨТЛӨК II** (гәйнә) *а.* бөтә — *весь.* Бөтлөк жирҙә ҡоролоҡ булған

**БӨТЛӘҮ** (урта) *и.* балыҡ ятыуы — *место спячки рыб*

**БӨТМӨР** (урта) *и.* оҫта — *умелец*

**БӨТМӘРСЕК, БҮТМӘРСЕК** (әй) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта.* Йаҙ гөнө бөтмәрсек ҡаҙып ашай туғайныҡ

**БӨТӨҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡорама — *лоскут*

**БӨТӨЙЛӘҮ** (дим) *ҡ.* өсмөйөшләү — *делать треугольным.* Бөтөйләп төргән

**БӨТӨК** (төньяҡ-көнбайыш) *а.* бөтә — *весь*

**БӨТӨКӘ** (ҡыҙыл) *с.* ҡыҫыҡ — *узкий (о глазах)*

**БӨТӨН** (көнсығыш диалект) *а.* бөтә — *весь.* Бөтөн кеше шунда жыйылған (әй)

**БӨТӨНӨЙӨҠ** (урта урал) *и.* оҙон ҡуңыслы бәйләм ойоҡ — *длинные шерстяные чулки ручной вязки*

**БӨТӨНӨҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Бөтөрөнөү — *быть подавленным.* Ағайым бик бөтөнгәйне (эйек-һаҡмар). 2. (арғаяш, ҡыҙыл) Ябығыу — *похудеть.* Ауырып бөтөнөп китте (арғаяш)

**БӨТӨНӨҺӨ** (көнсығыш диалект) *и.* бөтәһе — *все.* Сасһаң, бөтөнөһө лә үҫә туғайны (салйоғот)

**БӨТӨНСӨЛӨК** (һаҡмар) *и.* етешлек — *достаток.* Хәҙер генә бөтөнсөлөк инде

**БӨТӨП ТОРОУ** (әй) *ҡ.* оҡшап тороу — *быть похожим.* Аҡылдыға бөтөп тора ла

**БӨТӨРГӨС** (дим) *и.* юйғыс — *резинка стиральная*

**БӨТӨРКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөҙрә сәс — *кудри*

**БӨТӨРКӘЛӘНЕҮ I** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* өлтөрәп тороу — *быть приветливым.* Барсаң, бөтөркәләнеп тора

**БӨТӨРКӘЛӘНЕҮ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* бөҙрәләнеү — *виться (о волосах).* Сәсе бөтөркәләнеп тора

**БӨТӨРӨНӨП ТОРОУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Өлтөрәп тороу — *быть приветливым.* Әле әбекәй тип бөтөрөнөб тора. 2. (урта) Яратып етеңкерәмәү — *недолюбливать.* Был ней бөтөрөнөб тора бит кешене

**БӨТӨРСӨК** (ҡариҙел) *с.* етеҙ — *проворный*

**БӨТӨРӨШЛӨ: БӨТӨРӨШЛӨ ТҮГЕЛ** (минзәлә) *с.* бөтөргөһөҙ — *нескончаемый.* Аны бәйләп тә бөтөрөшлө түгел ыраннарны

**БӨТМӨШ** (көнсығыш диалект, урта, һаҡмар, ырғыҙ) *с.* ҡыҫыҡ — *узкий (о глазах).* Бөтөш күҙ (урта)

**БӨТӨШ: БӨТӨШ ЙАРА** (һаҡмар) *и.* бөтәү яра — *закрытая рана*

**БӨТӘЙЕШЕҮ** (мейәс) *ҡ.* бөтәшеү — *закрываться (об отверстии).* Сәсәктән һуң танауы бөтәйешеп ҡуйҙы берәүҙең

**БӨТӘҮ I** (ҡыҙыл) *ҡ.* бөтәйтеү — *снабдить одеждой.* Әүәле ҡыҙҙы кейәү бөтәне баштан-айаҡ, атинәһе бөтәмәне

**БӨТӘҮ II** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Камил — *совершенный.* 2. Хәлле — *состоятельный*

**БӨТӘҮ III** (салйоғот) *и.* һарыҡ аҙбары — *овчарня*

**БӨТӘКӘ** (гәйнә) *и.* төпөш — *коротыш*

**БӨТӘКӘЙ** (һаҡмар) *с.* бөтә торған — *проходящий (о болезни).* Бер эсәкәй дарыу ғына эсәм, былай бөтәкәй түгел ауырыуым

**БӨТӘШЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* хәлһеҙләнеү — *слабеть*

**БӨКИЛ** (һаҡмар) *с.* насар — *плохой.* Эштәр бөкил, ҡустым

**БӨХИЛ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *с.* һаран — *скупой.* Бөхил икәнһең дә (әй). Бөхөл (мейәс)

**БӨШКЕРИК, МӨШКЕРИК** (урта урал) *и.* буранка — *воронка*

**БӨШКӨЛ** (һаҡмар) *с.* мөшкөл — *неважный*

**БӨШКӘК** (һаҡмар) *и.* гөмбөр — *бόтало*

**БӨШНӨК, МӨШНӨК** (әй) *и.* ваҡ бөйөрөк — *пирожок.* Мөшник (урта урал). Килен күб итеп мөшник бешергән

**БӨШӨГӨҮ** (дим) *ҡ.* күшегеү — *промокнуть насквозь*

**БУА** (дим) *и.* быуа — *пруд*

**БУАҘҘАУ** (мейәс) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БУАЙ, БЫУАЙ** (әй) *и.* бабай — *дядя (старший брат отца или матери); любой мужчина старше родителей*

**БУАҠ I** (ҡариҙел, урта) *и.* бәҫ — *иней.* Ағасларға буаҡ төшкән (ҡариҙел). Боаҡ, быуаҡ, (урта)

**БУАҠ II** (дим) *и.* боғаҡ — *Базедова болезнь.* Быуаҡ (гәйнә)

**БУАЛА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сысҡан тота торған тоҙаҡ — *силок для ловли мышей*

**БУАМ** (гәйнә) *и.* быуа — *пруд.* Буамнар күп беҙдә

**БУҒАҘ** (дим) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**БУҒАҘҘАУ ҺӨЙӘГЕ** (мейәс) *и.* салыу һөйәге — *шейный позвонок*

**БУҒАҠ** (мейәс) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**БУҒАН** (арғаяш, салйоғот) *и.* боған — *гоголь.* Буған тигән үрҙәк бар беҙҙә (арғаяш)

**БУҒАНА ҠАБЫРҒА** (дим, урта, һаҡмар) *и.* быбым ҡабырға — *ложное ребро.* Бәйге-көрәштә буғана ҡабырға ҙур малдыҡын биргәннәр (һаҡмар). Буғанай ҡабырға (дим)

**БУҒАРҘАҠ** (дим, ҡариҙел, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* боғарҙаҡ — *дыхательное горло.* Буғырҙаҡ (дим, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш), буғырлаҡ (урта)

**БУҒАРҘАҠ ТӨЙӨНӨ** (мейәс) *и.* кумәгәй — *адамово яблоко.* Буғас төйөнө (арғаяш)

**БУҒАРСА** (урта) *и.* бөгәрсә — *елец (рыба).* Оҙонса ғына, ҡарараҡ ҡанатлы, аҡ төҫтәге йоморо балыҡ ул буғарса

**БУҒАТТАУ** (арғаяш) *ҡ.* 1. Тамаҡлау — *задушить (о зверях).* Бүре әллә нисәмә һарыҡты буғаттаған. 2. Салыу — *резать (скот)*

**БУҒЫРЛАҠ** (урта) *и.* мығырлаҡ — *ворчун, ворчунья*

**БУҒЫРЛАУ** (эйек) *ҡ.* һөйләнеү — *ворчать про себя*

**БУҘ** (ҡыҙыл) *и.* ғауға — *скандал.* Кисекһеҙ кешенән буҙ сыға. Буҙа (дим)

**БУҘА** (һаҡмар) *и.* айыу балаһы — *бузина.* Буҙа тигән ағасты күргәнең бармы?

**БУҘАҒЫЙ** (һаҡмар) *и.* буҙа — *буза (напиток)*

**БУҘАҠЛАУ** (эйек) *ҡ.* бер буйын аҡтан, бер буйын ҡыҙылдан һуғыу — *ткать в полоску.* Таҫтамалларҙы буҙаҡлап һуҡтылар ҡыҙыл киҙе белән

**БУҘАМЫҠЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡуҙғалыу *(боҙ тураһында)* — *тронуться (о льде)*

**БУҘАР** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡуш кәмә — *катамаран*

**БУҘҘАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Үкереп илау — *реветь.* Тағы нейә буҙҙарға тотондо был бала? (салйоҒот). 2. Олоу — *петь протяжно, нудным голосом.* Буҙҙама көн биҙҙәтеп (ҡыҙыл)

**БУҘҠА: БУҘҠА ТУРҒАЙ, БУҘТУРҒАЙ** (һаҡмар) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**БУҘЛАҠ, БУҘЛАҠАЙ** (һаҡмар) *и.* инә һуйыр — *самка глухаря.* Йаҙ буҙлаҡайҙы атмағыҙ, күкәй һалыр сағы. Буҙҙаҡ (мейәс)

**БУҘЛАУ I** (ырғыҙ) *ҡ.* оҙаҡ итеп илау — *долго плакать.* Бутаһынан айырылған дөйә һымаҡ буҙлап илай, бахыр

**БУҘЛАУ II** (һаҡмар) *с.* буҙ — *сизый.* Төҫө буҙлау ғына була ул ҡоштоң.

**БУҘТУРҒАЙ** (арғаяш, урта, эйек-һаҡмар, әй) *и.* 1. Һабан турғайы — *жаворонок.* Буҙтурғайлар йергә ҡарай төшөп һайраһа, көн һыуый (һаҡмар). Бузтурғай (ырғыҙ). 2. (дим, урта) Ҡыҙылтүш — *снегирь.* 3. (һаҡмар) Аҡсәпсек — *трясогузка*

**БУҘШЕШЕК** (ҡыҙыл) *и.* шеш — *опухоль*

**БУЖАЙ** (мейәс) *с.* йыуан — *толстый (о человеке)*

**БУЖАЛ** (дим, ҡариҙел, урта урал) *и.* ҡыҙҙы күсереүгә алдан билдәләнгән ваҡыт — *заранее назначенный срок перевозки невесты в дом жениха.* Килен йәрәшкәс, бер-ике айҙан бужал ҡуйалар (дим). Булйал (ҡариҙел), булжал (урта урал)

**БУЖАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* иңкеш — *шмель*

**БУЖАР: БУЖАР УАХЫТ** (урта урал) *и.* ҡыҙҙы күсереүгә алдан билдәләнгән ваҡыт — *заранее назначенный срок перевозки невесты в дом жениха.* Бужар ла уахыт йеттинде, тор тиһәң дә тормамын инде

**БУЖЛАУ** (нөгөш) *ҡ.* буҙлау — *долго в голос плакать.* Мин нишана бужлап илайым да илайым

**БУЖМАҠ** (һаҡмар, ырғыҙ) *с.* йыуан — *толстый (о человеке).* Бужмаҡ кәүҙәле, көптәй ҙур ҡорһаҡлы булһа ла, ныҡ-ныҡ баҫып килә (һаҡмар)

**БУЗИР** (дим, ҡыҙыл) *и.* лампа селтәре — *ламповая решетка.* Бүҙер (ҡыҙыл, әй)

**БУЗЫР** (арғаяш, урта) *и.* лампа ҡыуығы — *ламповый пузырь*

**БУЙ** (мейәс) *и.* 1. Ҡыра — *сгребённые ряды сена.* Биш-алты буй бесәнең бер күбәләй булыр. 2. *(арғаяш,* мейәс) Яҡ — *сторона.* Анау буйға ҡара (арғаяш)

**БУЙАҠ** (мейәс, ырғыҙ) *и.* буяу — *краска.* Иҙәнемә ике һауыт буйаҡ кәрәк (мейәс)

**БУЙАНЫУ** (мейәс) *ҡ.* буяу — *красить.* Буйанып йөрөйөм

**БУЙБАШ** (мейәс) *с.* тыңлауһыҙ — *непослушный, непослушная.* Буйбаш бисә

**БУЙ: БУЙ БИРМӘҮ** (ҡыҙыл, эйек) *ҡ.* баш бирмәү — *неповиновение.* Тайба әбейҙең кесе улы Закир өлкәндәргә бер ҙә буй бирмәне (эйек)

**БУЙ-БУЙЫНСА** (мейәс) *р.* туҡтауһыҙ, оҙаҡ — *беспрерывно.* Буй-буйынса кире һуға, тартыша

**БУЙГӨЙӘҘ** (урта) *с.* һынһыҙ — *неуклюжий (о человеке)*

**БУЙГҮЛМӘК** (урта) *и.* һыпайта күлдәк — *платье простого прямого покроя.* Буйгүлмәк кейеп алғанһың икән бөгөн

**БУЙҒАУ** (эйек-һаҡмар) *и.* буйлыҡ, буй еп — *основа (в домашнем ткачестве).* Берәй гөн тағы йыйылырбыҙ ҙа, сөй тартып, балаҫ буйғауын оҙатырбыҙ, шөйтөләрбеҙ

**БУЙҒОРАМА** (һаҡмар) *и.* түрйурған — *узкое лоскутное одеяло для нар.* Буйғорама әле лә йаҫаштырабыҙ

**БУЙҒЫҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* еткән ҡыҙ — *девушка, достигшая совершеннолетия*

**БУЙҘАҠ** (гәйнә) *с.* баш-баштаҡ — *своевольный.* Буйҙаҡ кеше шулай эшләр инде ул

**БУЙҘАЙ: БУЙҘАЙ ГҮЛМӘК** (мейәс) *и.* билһеҙ, тотош күлдәк — *платье простого прямого покроя*

**БУЙҘАҠ** (дим, урта) *и.* 1. Биҙәү ҡатын — *бездетная женщина.* 2. Ҡыҫыр — *яловая.* Буйҙаҡ ҫыйыр (дим)

**БУЙҘАҢЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* эшләр-эшләмәҫ йөрөү — *работать неохотно.* Күп буйҙаңланың инде буйҙыҡай, эшләб ал әҙерәк

**БУЙҘАУ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, әй) *ҡ.* буйһонмау, баш бирмәү — *неповиновение (о человеке, животных).* Йетәләп барған танүгеҙе буйҙап киткән (мейәс)

**БУЙҘЫҠ** (әй) *и.* үрәсә — *грядки (телеги).* Арбаның бер йаҡ буйҙығы һыңған

**БУЙЙУРҒАН** (арғаяш, ырғыҙ) *и.* түрюрған — *узкое лоскутное одеяло для нар.* Ҡораҡлы буй йурғаныбыҙ бар ине (ырғыҙ)

**БУЙЛАТЫУ** (урта) *ҡ.* үҙ иркенә ҡуйыу — *дать волю.* Баланы баштан буйлатты ла үҙе. Буйҙатыу (әй)

**БУЙЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* оҙатыу — *сновать.* Балаҫҡа йеп буйланым

**БУЙРАҠ** (мейәс, урта, һаҡмар) 1. *с.* буръяҡ — *мутный (о воде).* Буйраҡ һыу. 2. *и.* соңғол — *омут*

**БУЙРАТЫУ, БУЙРАУ** (урта) *ҡ.* буръяҡландырыу — *замутить (воду)*

**БУЙСИКЕ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* стена буйлап эшләнгән тар һике — *скамья, узкие нары вдоль стены.* Буйҫике (дим)

**БУЙТ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* мәғәнә, рәт — *толк.* Ул малайҙың буйты йуҡ (ҡыҙыл)

**БУЙТЬЫҘ** (эйек-һаҡмар) *с.* мәғәнәһеҙ — *бестолковый*

**БУЙТЫМ** (көнсығыш диалект, урта) *р.* 1. Күп, етәрлек — *много, достаточно.* Ҡорт бал бирә буйтым (урта). 2. Оҙаҡ ҡына — *довольно долго.* Йәйҙәүҙәрҙә буйтым йөрөнөк (мейәс). 3. Ныҡ — *сильно.* Буйтым ҡунаҡ иттеләр (урта). Буйтым ашаныҡ, рәхмәт (әй). Бойтом (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар). 4. Ғәҙәттәгесә — *вполне.* Машина белән буйтым йөрөргә була (ҡыҙыл)

**БУЙ: БУЙ ҺАЛЫУ** (урта, әй) *ҡ.* буйлау — *проверять глубину воды ростом.* Әҙерәк йөҙ ҙә буй һалып ҡара (урта). Буй һалале, дәрән микән? (әй)

**БУЙҺУҘМА** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* түрюрған — *узкое лоскутное одеяло для нар*

**БУЙҺЫУ** (урта) *с.* 1. Һырғый — *стройный, высокий (о дереве).* Буйһыу ағас. 2. Оҙон тороҡ — *с длинным туловищем (о лошади).* Буйһыу ат

**БУЙЫ БЕЛӘН** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* 1. Буйҙан буйға — *во всю длину.* Буйы белән күренеп йата. Ирәндек (ҡыҙыл). 2. Туҡтауһыҙ — *беспрестанно.* Буйы белән бурылдап алып китәр эле (мейәс)

**БУЙЫ-БУЙЫНСА** (арғаяш) *р.* туҡтауһыҙ — *беспрестанно.* Буйы-буйына һөйҙәнә лә йөрөй

**БУЙЫН** (гәйнә, урта урал) *и.* муйын — *шея.* Буйыным ауырта (гәйнә). Буйыны тоташ (урта урал)

**БУЙЫНСА** (гәйнә, ҡариҙел, урта урал) *и.* муйынса — *ожерелье из монет.* Муйса (урта урал)

**БУЙЫРАУ** (урта) *ҡ.* буръяҡланыу — *стать мутным.* Йамғырҙан һуң һыу буйыраған

**БУКАС ИТЕҮ** (урта урал, һаҡмар) *ҡ.* аламалыҡ эшләү — *пакостить.* Букас итеп тик йөрөй мынау малай (урта урал)

**БУҠАЙ** (мейәс, әй) *и.* бапаҡ — *бука (которой пугают детей).* Әнә, буҡай гилә (мейәс)

**БУҠАН** (урта) *и.* бәләкәй буйлы кеше — *коротыш, коротышка.* Әрләгәнтә буҡан тип әрләйләр. Буҡанай (мейәс)

**БУҠЛҮҢӘС** (урта) *и.* ҡыҙыл үңәс — *пищевод.* Буғүңәс (ҡариҙел). Буҡтүңәс (ҡыҙыл, мейәс, әй)

**БУҠТЫРЫШЛАНЫП** (эйек) *р.* ҡарышып — *упрямившись.* Кузофта барҙым, буҡтырышланып кәбинәгә ултырманым

**БУҠЫЛДАҠ** (дим, мейәс) *и.* мығырлаҡ — *ворчун, ворчунья.* Буҡылтаҡ (урта)

**БУҠЫЛДАУ** (мейәс, һаҡмар) *ҡ.* мығырлау — *ворчать*

**БУЛ** (гәйнә, һаҡмар) *а.* был — *этот, эта, это, эти.* Бәй-бәй, бул ни хәл, бул ни хәл, тип аптыраны үҙе (һаҡмар)

**БУЛАШЫУ** (урта) *ҡ.* болашыу — *тягаться*

**БУЛДЫРМАЛЫ** (урта) *с.* булдыҡлы — *способный*

**БУЛДЫРСА** (ҡыҙыл) *и.* эсәк төрө — *вид кишок*

**БУЛЙАЛ** (ҡариҙел) *и.* ваҡыт — *срок.* Булйал ҡуйып киәү алып та ҡайтты. Булйол (урта)

**БУЛЙАЛ: БУЛЙАЛ КӨН** (әй) *и.* килен оҙатыу көнө — *день сопровождения невесты.* Булйал көндәрем тулдинде, тор тиһәгеҙ ҙә тормайым

**БУЛЙАУ, БУЛЙАП ҠАЙТЫУ** *(арғаяш) ҡ.* туй ваҡытын билдәләү — *определение срока свадьбы*

**БУЛЫШЫУ** (мейәс, әй) *ҡ.* маташыу, мәшәҡәтләнеү — *возиться.* Нейә минең менән булышаң? (мейәс)

**БУМА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Тын ҡыҫылыуы — *удушье.* 2. (төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ) Быума — *эпилепсия*

**БУМАЖҮТӘЛ** (гәйнә) *и.* күк йүтәл — *коклюш*

**БУНАУ** (гәйнә, дим) *ҡ.* үҫеп ултырған ағасты тунау — *ободрать кору с дерева*

**БУПАС** (урта) *и.* йыуан кеше — *толстяк (о человеке)*

**БУПУП** (ырғыҙ) *и.* һөҙһөт — *удод.* Буп-буп (һаҡмар)

**БУПЫЙ** (урта урал) *и.* тотлоҡма — *заика*

**БУПЫЛ** (урта) *и.* мығырлаҡ — *ворчун*

**БУПЫЛДАҠ I** (мейәс, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* мығырлаҡ — *ворчун.* Бупылдаҡҡа нәмәкәй йетмәй тағы? (мейәс). Бупылтыҡ (урта)

**БУПЫЛДАҠ II** (һаҡмар) *и.* һөҙһөт — *удод*

**БУПЫШ** (арғаяш) *с.* лупыш — *мешковатый.* Салбарың бупыш буған да

**БУР** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* аҡ балсыҡ — *белая глина*

**БУРА I** (ырғыҙ) *и.* ата дөйә — *верблюд*

**БУРА II** (дим, урта, эйек) *и.* бурап эшләнгән лар — *бревенчатый ларь*

**БУРАЛАНЫУ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* 1. Асыуланыу — *рассердиться.* Бураланып ней эш ҡылмаҡ булаһың инде? (һаҡмар). 2. Көйәләнеү — *остро переживать.* Кисә әй бурала инде әбейең (ҡыҙыл). 3. (әй) Пыр туҙыу — *разбушеваться*

**БУРАМ** (арғаяш, мейәс) *и.* бура — *сруб*

**БУРАМА** (мейәс, урта) *и.* 1. Бура аласыҡ — *бревенчатая летняя кухня.* 2. (мейәс) Бура — *сруб.* 3. (урта) Келәт — *клеть.* Арҡан әнә шунда бурамала булырға тейеш

**БУРАН: АЙЫУ БУРАНЫ** (арғаяш) *и.* йәйәүле буран — *позёмка;* бишҡунаҡ (эйек-һаҡмар, ырғыҙ) иҫке стиль буйынса апрель башында була торған буран — *буран в начале апреля по старому стилю;* йылан бураны (урта) йәйәүле буран — *позёмка;* ҡарға бураны (урта) яҙғыһын ҡара ҡарғалар килер мәлдә була торған буран — *буран перед прилетом грачей;* ләүән бураны (һаҡмар) март айы бураны — *мартовский буран;* тауыл бураны (урта) өйөрмә буран — *метель;* торнатүш буран (арғаяш) ҡарҙы өйөм-өйөм итеп ҡатырып һала торған буран — *зимний буран, после которого остаются затвердевшие заносы;* һепертке буран (һаҡмар) йәйәүле буран — *позёмка*

**БУРАНҠЫ** (дим) *и.* төйөҫ — *бурак*

**БУРАН ТУРҒАЙЫ** (дим, ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* ҡыҙылтүш — *снегирь*

**БУРАН ТҮРӘ** (ҡыҙыл) *и.* буран турғайы — *белая лазоревка*

**БУРАУ** (салйоғот) *и.* бура аласыҡ — *бревенчатая летняя кухня*

**БУРАУЫҘ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡыпһыуыр — *клещи.* 2. Бөгәзе — *железное или деревянное приспособление, применяемое при точке топора*

**БУРБАЙ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* балтыр — *икры ног.* Бурбай (һаҡмар)

**БУРБАЙ ҺӨЙӘГЕ** (һаҡмар) *и.* сираҡ — *голень*

**БУРҒОРТ** (көнсығыш диалект) *и.* һурнаҡ — *пчела-воровка.* Бурҡорт (каризел)

**БУРҘАЙ** (салйоғот) *с.* шәп — *замечательный.* Бурҙай ир ине

**БУРИЗ, БУРИС** (дим) *и.* борош — *подуст*

**БУРҠЫЛДАҠ, БУРЫЛДАҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* мығырлаҡ — *ворчун.* Ул бурҡылдаҡҡа ней йетмәй тағы? (ҡыҙыл)

**БУРЛАҠ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* ҡалдау — *залежь*

**БУРЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* урлашыу — *воровать.* Ул ней бурланып та йөрөгән

**БУРЛЫ** (дим, минзәлә) *с.* бурыл — *чалый (о масти лошади).* Бурлы ат

**БУРМАШ** (мейәс) *и.* ҡармаҡ һалғанда файҙаланылған күл ҡорто — *озерный червяк, используемый при ужении рыбы*

**БУРС** (ҡыҙыл) *и.* бурыс — *долг.* Бурс булып тормаһын

**БУРСЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* бурһыу — *преть.* Ат майы бурсыған (ҡаризел)

**БУРСЛЫҠ** (дим) *и.* бурһыҡ — *барсук.* Беҙҙә ҡыр кәзәҫе лә бар, мышый ҙа, бурҫлыҡ та бар

**БУРҪЫҠ I** (урта) *с.* серек — *гнилой*

**БУРҪЫҠ II** (дим) *с.* киң битле — *толстощекий.* Зөфәр киң бурҫыҡ битле, йоморо башлы, йыуантыҡ ҡына үҫмер йегет

**БУРҪЫУ I** (дим, урта) *ҡ.* 1. Оҙаҡ илауҙан шешенеү — *опухать от слез.* 2. (дим) Турһайыу — *надуться*

**БУРҪЫУ II** (дим) *ҡ.* күгәреү — *плесневеть.* Бурһыу (ҡыҙыл, мейәс)

**БУРТАШ I** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* аҡбур — *мел*

**БУРТАШ II** (дим) *и.* аҡ балсыҡ — *белая глина*

**БУРТЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ташбаш — *пескарь*

**БУРҺАЙ** (ҡыҙыл) *и.* бурҙай — *борзой, борзая*

**БУРЫЖ** (эй) *и.* борош — *подуст.* Бурыз (эйек), бурыҫ, бурыс (эйек-һаҡмар), бурыҫ (ҡыҙыл)

**БУРЫҠ** (ырғыҙ) *и.* екән тамыры — *корень рогоза*

**БУРЫЛДАҠ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* мығырлаҡ — *ворчун*

**БУРЫСТЫҒЫУ** (эй) *ҡ.* бурысҡа батыу — *задолжать.* Бик бурыстығып, раскуттанып ала туғайныҡ

**БУРЫШ** (гәйнә, ҡыҙыл, мейәс, урта, урта урал) *и.* борош — *подуст.* Бурш (урта)

**БУСМЫҠ** (эй) *и.* күпкәк — *толстопузый*

**БУҪАҒА** (арғаяш, урта, һаҡмар) *и.* тупһа — *порог.* Бусаға (төньяҡ-көнбайыш). Килен ҡәйнә буҫағаһынан (урта) — *сноха похожа на свекровь*

**БУҪАЛАҠ** (урта урал) *и.* 1. Мыҡты кәүҙәле — *здоровяк.* Буҫалаҡ ине, үлде лә гитте. 2. (урта, урта урал, эйек) Йыуантыҡ, тулы тәнле бәпес — *бутуз (о младенце).* Буҫалаҡ күк бәпәйе бар. Бусалаҡ (ҡаризел). Буҫалаҡтай (урта, эй), буһалаҡтай (ҡыҙыл)

**БУҪЛЫҒЫУ** (урта) *ҡ.* буҫығыу — *беззвучно плакать, не успокаиваться от долгого плача*

**БУҪЫУ** (туҡ-соран) *ҡ.* айырыу — *оторвать.* Туб атҡан һайын ҡурҡып ауып китәбеҙ. Кухнаның мөйөшөн буҫыб әпкитте туп

Бурҙайҙың карау 'йоҙ (?), аслаҡ карау' (Юлс-2011)

**БУТ I** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* гөмбөр — *ботало.* Күптән балыҡҡа йөрөгән йуҡ, бут ҡайҙа икән? (арғаяш)

**БУТ II** (арғаяш) *и.* мәғәнә — *толк.* Бутһыҙ геше була ла инде

**БУТА** (ырғыҙ) *и.* дөйә балаһы — *верблюжонок*

**БУТАЛА I** (арғаяш, гәйнә, урта, урта урал) *и.* дуңғырҙаҡ — *ботало*

**БУТАЛА II** (ҡаризел) *и.* гөмбөр — *ботало*

**БУТАЛАНЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* алйотланыу — *дурачиться.* Буталанып йөрөмәле

**БУТАЛАУ** (урта, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Бутау — *путать.* Буталап мине йырып апҡайтты (урта). 2. (урта) Айҡап сығыу — *изъездить вдоль и поперек.* Шу беҙҙең тирәне буталайһығыҙ икән

**БУТАЛЫШ** (эйек) *р.* яңылыш — *неправильно.* Һеҙ буталыш алғанһығыҙ йулды

**БУТАМА** (дим) *и.* төпсөктәрҙән таҙартылған ер — *выкорчеванный участок земли*

**БУТАНЫУ** (эй) *ҡ.* буташыу, соҡоноу — *копаться.* Бөрөҙө буһа мынығы саташмай, бутана ла бутана

**БУТАРЛАУ** (урта) *ҡ.* һүтеү — *распороть.* Бутарланҡан көйөнсә йата йағам

**БУТАРСЫ** (урта) *и.* үҙ алдына эҙләүсе — *старатель*

**БУТАУ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* бутама — *мешанина для скота.* Ҫыйырға бутама бирергә гәрәк (дим)

**БУТАУ II** (дим) *ҡ.* төпләү — *корчевать (лес).* Урман бутап утырғаннар

**БУТАУ III** (ҡаризел) *ҡ.* айҡап сығыу — *изъездить вдоль и поперек*

**БУТАФҠАН** (гәйнә) *и.* кәзәкей — *род полукафтана на подкладе длиной выше колен, с рукавами до локтя.* Ҡыҫҡа йеңле бутафканны йәшләр кейде

**БУТИЛ** (һаҡмар, эйек) *и.* дуңғырҙаҡ — *ботало.* Бутыл (һаҡмар)

**БУТИҢКӘ** (туҡ-соран) *и.* шәл бәйләй торған мамыҡ ебенә ҡатланған еп — *нитка, спаренная с пуховой пряжей для шали*

**БУТБАРҠАҠ** (салйоғот) *и.* бер ҡат һөрөлгән ер — *земля, вспаханная один раз*

**БУТУҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *а.* бөтәһе — *все.* Бутуҡ ҡар астында йата (гәйнә)

**БУТТА** (көнсығыш диалект) *т.* әйтерһең — *будто, как будто.* Бутта мин белмәйем

**БУТҺЫҘ** (төньяҡ-көнсығыш) *с.* 1. Оятһыҙ — *бесстыжий.* Бутһыҙ һүгешеү (салйоғот). 2. (урта урал) Мәғәнәһеҙ — *бестолковый.* Бутһыҙҙың һүҙе лә шул инде үҙе гүк

**БУЙАҠ** (гәйнә) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БУТЫ** (ҡаризел) *и.* гөмбөр — *ботало*

**БУФКА** (мейәс, эй) *и.* төймә — *пуговица.* Пинжәгендең буфкаһы төшөп ҡаған да, ҡарале (эй). Буфкә (салйоғот). Пуфка (мейәс)

**БУХЫЙ** (урта) 1. *и.* Рахит менән ауырыусы — *рахитик.* 2. Йыуантыҡ, тулы тәнле бәпес — *бутуз (о младенце).* Эй, бухыйымды, кил әле мында

**БУХЫЛДАҠ** (эй) *и.* ҡарлыҡҡан тауышлы — *хрипун*

**БУҺҠЫН** (һаҡмар) *и.* йәшеренеү урыны — *убежище.* Әнә шунда ауыл осонда ғына бер буһҡын бар ине

Бутһыҙ 'бейек, ... ' (... йәшерен ... ташлап ...)

**БУҺТАМА** (һаҡмар) *и.* май йәки япраҡ компрессы — *компресс из масла или листьев*

**БУҺЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* боҫоу — *притаиться*

**БУШ** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* 1. Былай ғына — *просто так.* Нимәштәп килдең? — Буш килдем (ҡыҙыл). 2. *м. һ.* үкенеүҙе, йәлләүҙе белдергән һүҙ — *слово, выражающее сожаление.* Буш, бәпәйемде, аурып торған нәмәне! (мейәс). Буш аш (ҡариҙел, мейәс) итһеҙ аш — *постный суп*

**БУШ-БУШ** (ҡыҙыл) *р.* бигерәк, үтә — *слишком.* Буш-буш китте шашып. Буш та туш (ҡыҙыл)

**БУШАЛАҒАЙЫМ** (мейәс) *р.* 1. Былай ғына — *просто так.* 2. (урта) Бушҡа, алъюҫыҡҡа — *зря.* Бушалағайым йөрөп ҡайттым. Бушалағайымҡа (урта), бушалийуҡҡа (эйек-һаҡмар)

**БУШАЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* бушау — *освободиться.* Бушаламайым эштән

**БУШАН** (мейәс) *с.* буш — *пустой*

**БУШАНЫУ** (төньяҡ-көнсығыш, урта) *ҡ.* бала табыу — *рожать ребенка.* Килендәре бушанып ҡайтҡан икән балнистан (арғаяш)

**БУШАТАН** (гәйнә, урта урал) *и.* ҙур беҙ — *большое шило.* Шул тартмала ғына ине бушатан, ҡайҙа булды икән? (урта урал)

**БУШДИЛАЛАЙҒА** (урта) *р.* бушҡа, алъюҫыҡҡа — *зря.* Бушдилалайға оҙон йәй буйына йөрөйбөҙ

**БУШҠА САЛ** (ҡариҙел) бер нисә ҡатлы һал — *многослойный плот.* Бушкауай сал (ҡариҙел)

**БУШКӨН** (гәйнә) *и.* шәмбе — *суббота.* Ҡоҙалар бушкөнгә ҡунаҡҡа саҡырғайнылар.

**БУШҠОРҒА** (дим) *р.* бушҡа, алъюҫыҡҡа — *зря.* Бушҡорға йылап утырма.

**БУШТЫҠ** (урта) *с.* буш — *пустой.* Буштыҡ һүҙ.

**БУШТЫҠАЙҒА** (ҡыҙыл) *р.* бушҡа, алъюҫыҡҡа — *зря.* Баҙарға буштыҡайға барып ҡайттыҡ.

**БУШ-ТӘҮКӘЛГӘ** (ҡыҙыл) *р.* бушҡа, алъюҫыҡҡа — *зря.* Буш-тәүкәлгә һерәндәп эш сыҡмаҫ

**БУШЫМ** (гәйнә) *и.* бышым — *холщевый верх национальной обуви*

**БҮГЕҮ** (көнсығыш диалект, урта, урта урал, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться.* Ул ботҡаны ашай туғас бүктем инде (эй)

**БҮГӘЙ** (һаҡмар) *и.* тоҡом үгеҙе — *бык-производитель*

**БҮГӘК I** (мейәс) *и.* ҡыҫҡа аҡ сәс — *короткий седой волос*

**БҮГӘК II** (мейәс) *и.* үбәк — *кусок войлока или холстины, который накладывается на хомутину, чтобы она не натирала шею лошади*

**БҮГӘЛӘ** (мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БҮГӨН I** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ҡыҫҡа аҡ сәс — *короткий седой волос.* Бүгәнен гел дә өҙөп тора (ырғыҙ)

**БҮГӘН II** (ҡыҙыл) *и.* күгән — *дверная петля*

**БҮГӘТ** (ырғыҙ) *и.* быуа — *пруд*

**БҮГӘП-БҮГӘП: БҮГӘП-БҮГӘП ҠУЙЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* быуып-быуып ҡуйыу — *прудить.* Йаҙ гөнө һыуҙы бүгәп-бүгәп ҡуйабыҙ

**БҮЖӘК** (урта) *с.* яңғыҙ суҡайып торған — *одиноко возвышающаяся (о горе).* Бүжәк кенә тау бар бит, шунда йәшәйек тигән ҡарт

**БҮЗЕКӘ** (дим) *и.* кәрлә — *карлик*

**БҮЗЕРЕК** (салйоғот, һаҡмар) *и.* лампа ҡыуығы — *ламповое стекло*

**БҮКЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться*

**БҮКСӘ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц).* Тауыҡтың бүксәһе тулған. Бүкҫә (дим, урта)

**БҮКСӘ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төпөш — *коротыш.* Бүкҫә (дим, урта урал), бүкхә (мейәс)

**БҮКТӘРГӘЙ** (арғаяш) *и.* мүктәрге — *кобчик*

**БҮКҺӘ, БҮКҪӘ** (мейәс) *и.* ярты; урта — *половина; середина*

**БҮКӘ** (арғаяш) *и.* һебә — *конина-приз, который вручался победителям на майданах*

**БҮКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* боҡай — *бука (которой пугают детей)*

**БҮКӘЙЛӘП** (урта) *р.* сүкәйеп — *на корточках.* Бабайым айыу өңөнә бүкәйләб инеп китте

**БҮКӘЙЛӘҮ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* имгәкләү — *ходить на четвереньках.* Аның малайы ла бүкәйләй башлаған (дим). Бүкә йөрөү (төньяҡ-көнбайыш)

**БҮКӘН I** (арғаяш, дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Артһыҙ ултырғыс — *табуретка.* Болашып йөрөп утыралар бүкәнгә (арғаяш). 2. (арғаяш, ҡыҙыл, һаҡмар) Ултырғыс — *стул.* 3. (төньяҡ-көнсығыш, урта, ырғыҙ) Арбаның алғы күсәрҙә ятҡан өлөшө — *подушка (у телеги).* Арбаның бүкәне йарылған (урта). 4. (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал) Көпсәк — *ступица.* 5. (эйек) Үрәсә — *нащепы (у саней и телег).* 6. (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) Бурса — *брус (у телеги).* 7. (урта) Төпсөк — *пенек.* 8. (ҡыҙыл, урта) Тумрау — *обрубок, чурбан*

**БҮКӘН II** (урта) *и.* 1. Сипарат барабаны — *сепараторный барабан.* 2. (дим) Сәғәт гере — *гири у часов.* Бүкәнне сәғәт

**БҮКӘН III** (гәйнә, дим, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, эй) *и.* бәйләм — *пук.* Баланды бүкәнгә ҫалдыҡ (дим). ◊ Бүкән баш (ырғыҙ, эйек) башы ҙур, ләкин аҡылы һай кеше — *большеголовый, но не умный человек.* Бүкәнгә утырыу (мейәс) һабаҡҡа ултырыу — *идти в стебель*

**БҮКӘНДЕ** (мейәс) *и.* һәпәләк — *жмурки (игра).* Күмәк буғанда бүкәнде уйнайбыҙ

**БҮКӘННӘҮ** (дим, гәйнә, ҡариҙел, таныш) *ҡ.* бәйләм яһау — *связать пук.* Баланны тотош бүкәннәҙек (ҡариҙел)

**БҮКӘН СӘС** (туҡ-соран) *и.* ҡыҫҡа аҡ сәс — *короткий седой волосок.* Бүкән сас (салйоғот)

**БҮКӨШ** (туҡ-соран) *и.* буйға бәләкәй йыуан кеше — *низкорослый, толстый (о человеке)*

**БҮЛБЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* картуф — *картофель*

**БҮЛДӘК** (һаҡмар) *и.* быуын — *колено.* Орлоғо бүлдәк-бүлдәк була ҡаҡынын

**БҮЛЕК** (арғаяш, ҡыҙыл, салйоғот, урта) *и.* турпыша — *полог.* Будыҡ, былуҡ (урта)

**БҮЛЕК-БҮЛЕК** (ҡыҙыл) *р.* бүлеп-бүлеп — *с перерывом.* Йамғыр бүлек-бүлек йауып үтте

**БҮЛЕМТӘ** (мейәс) *и.* бүлексә — *подотдел, часть*

**БҮЛЕП ҺУҒЫУ** (салйоғот) *ҡ.* биҙәкләп һуғыу — *ткать узорами.* Бүлеп һуғылған балаҫ

**БҮЛКЕ** (ырғыҙ) *и.* быуын — *колено.* Ҡамыш бүлкеһе. Бүлкә (һаҡмар)

**БҮЛКӘ** (һаҡмар) *и.* 1. Өлгө — *звено (у окна).* Тәҙрәбеҙҙең бер бүлкәһе уатылды. 2. (урта) Өлөш — *часть.* Бүлкәс (эйек-һаҡмар)

**БҮЛКӘС** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* бүлкәт — *часть.* Тау бүлкәсе (ҡыҙыл)

**БҮЛКӘСЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* айырылып бүленеп-бүленеп тороу — *быть разделенным на части.* Көрәшсенең мускулдары бүлкәсләнеп тора

**БҮЛКӘСТӘП** (ҡыҙыл) *ҡ.* киртләс-киртләс итеп — *делая лесенки.* Тайҙарҙың ҡойороғон бүлкәстәп ҡырҡтылар

**БҮЛМӘ** (дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта, һаҡмар) *и.* 1. Солан бүлмәһе — *отсек в сенях.* 2. (һаҡмар) Солан — *сени.* 3. (мейәс) Йәйге аш бешереү урыны — *летняя кухня*

**БҮЛСӘР** (ҡыҙыл) *и.* балтыр — *икра (часть ноги).* Бүлсәр ите

**БҮЛТЕРЕК I** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, һаҡмар) *и.* 1. Көҙгө бәрәс — *осенний приплод овец и коз.* Бүлтерәк (дим). 2. (ҡыҙыл, һаҡмар) Сибек мал — *щуплый, малорослый (о скотине)*

**БҮЛТЕРЕК II** (минзәлә, һаҡмар) *и.* төпөш — *коротыш.* Шул бүлтерек Сәғит ҡайтҡанмы? (һаҡмар)

**БҮЛТЕРЕКЛӘҮ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ) *ҡ.* һарыҡ һәм кәзәләрҙең көҙ көнө бәрәсләүе — *осенний приплод овец и коз.* Сәмиға апайларҙың кәзәһе бүлтерекләгән (ырғыҙ)

**БҮЛТӘК** (ҡыҙыл) *и.* бүлкәт — *часть.* Картуфтарҙың ҡайһы бере бүлтәктәнеп киткән

**БҮЛӘ I** (ҡыҙыл) *и.* эштә бер ял алыуҙан икенсеһенә саҡлы булған ваҡыт — *промежуток времени на работе от одной передышки до другой.* Бер бүлә эштәгәнсә үлә йаҙҙы

**БҮЛӘ II** (мейәс) *и.* 1. Өләсәһененең тыуған ауылына ҡарата ир бала — *мальчик по отношению к односельчанам бабушки.* 2. (мейәс, эй) Нәҫел-нәсәп — *родня*

**БҮЛӘ-БҮЛӘ** (ҡыҙыл) *р.* бүлеп-бүлеп — *с перерывом, по частям*

**БҮЛӘК** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Урман — *лес.* Менә мында бүләк булған әүәле (урта урал). 2. Сауҡалыҡ — *березовая роща.* 3. Әрәмәлек — *урема*

**БҮЛӘКЛЕК** (кариҙел) *и.* сауҡалыҡ — *березовая роща*

**БҮЛӘСӘР** (мейәс) *и.* өләсәһененең тыуған ауылына ҡарата ҡыҙ бала — *девочка по отношению к односельчанам бабушки*

**БҮЛӘТЕЙ** (салйоғот) *и.* ҡара һоло — *овсюг*

**БҮРАУЫҘ** (урта) *и.* ҡыпһыуыр — *клещи.* Бүраyыҙынды биреп тор әле, күрше

**БҮРЕБАШ** (урта) *и.* бөгәзе — *приспособление, сделанное из согнутого ивового или черемухового прута, применяемое как часть различных орудий труда (ручки косы, распорки капкана, морды и т.д.)*

**БҮРЕБОРОЧ** (гәйнә) *и.* айыу емеше — *купена лекарственная*

**БҮРЕ: СЕЛ БҮРЕҺЕ** (мейәс) *и.* сүл бүреһе — *шакал*

**БҮРЕ ЙЕМЕШЕ** (көнсығыш диалект) *и.* 1. Эт муйылы — *крушина.* 2. (эй) Бүре еләге — *волчья ягода*

**БҮРЕ ЙҮКӘҺЕ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* осҡат — *бересклет.* Бүре йүкәһе ҡайала лыпышып йатып тамырҙан тамырға йәйелеп үҫә (ҡыҙыл). Бүрейүкә (гәйнә, урта урал, һаҡмар)

**БҮРЕ КӨПШӘҪЕ** (дим) *и.* айыу көпшәһе — *болиголов крапчатый.* Бүре көпшәҫе тиҙәктә, кесерткән араҫында үҫә

**БҮРЕК I: ТЫРПЫСА БҮРЕК** (эй) *и.* ҡырпыулы бүрек — *шапка, отороченная мехом*

**БҮРЕК II** (ҡыҙыл) *и.* тәҙрә йәки ишек ҡашы — *доска, прибиваемая поверх окна или двери с внутренней стороны в деревенских избах*

**БҮРЕКТЕКӘЙ** (ҡыҙыл) *и.* бүрекле тауыҡ — *хохлатая курица*

**БҮРЕ КӘКҮГЕ** (салйоғот) *и.* көрән һөтләкәй — *молочай махровый*

**БҮРЕ ҠОЙРОҒО** (мейәс) *и.* бүре ҡойроғона оҡшаған үлән — *трава, похожая на волчий хвост.* Бүре ҡойроғо һары сискәле була

**БҮРЕ ҠУҘҒАЛАҠ** (гәйнә) *и.* атҡолаҡ — *щавель конский*

**БҮРЕҢКЕ** (кариҙел, мейәс, урта) *и.* картуф — *картофель.* Быйыл бүреңкене бик күп утырттыҡ (мейәс). Бүреңге (дим), бүрәңке (кариҙел, урта)

**БҮРЕҢКЕ ГӨЛӨ** (урта) *и.* төбөндә бүлбеһе булған күк сәскәле гөл — *комнатный цветок с синими цветами, размножающийся клубнями*

**БҮРЕС** (дим) *и.* борош — *подуст.* Бүрес Димдә күб була

**БҮРЕ СЫБЫҒЫ** (кариҙел) *и.* бүре йүкәһе — *волчье лыко*

**БҮРЕ ҪЫРҒАҒЫ** (дим) *и.* февраль айындағы һуңғы буран — *последний февральский буран*

**БҮРЕ ТУБЫҒЫ** (урта) *и.* айыу көпшәһе — *болиголов крапчатый*

**БҮРЕҮ** (һаҡмар) *и.* аяҡ шеше — *отек ног.* Айағының бүреүе ҡалҡҡан

**БҮРКЕЛ** (ырғыҙ) *с.* бүрекле — *хохлатый.* Ҡайҫы тауыҡ бүркел була бит

**БҮРКЛЕК** (һаҡмар, эйек) *и.* бүртлек — *чердак.* Иҫке быймалар бүрклектә элеүле тора (һаҡмар). Бүрктек (ҡыҙыл)

**БҮРКӘТӘҮ** (мейәс, һаҡмар) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц).* Бүрҙәтәү (ҡыҙыл), бүрләтәү (дим, урта)

**БҮРЛӘҮ, БҮРЛӘҮИС** (һаҡмар) *и.* ҡурылдай — *бронхи*

**БҮРСЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡабарыу — *волдыриться.* Айағының баш бармағы бүрсегән. Бүрҫеү (урта)

**БҮРСЛЕК** (һаҡмар) *и.* бүртлек — *чердак.* Бүрҫлек (урта)

**БҮРТЕК** (арғаяш) *и.* тәбәнәк — *малорослый (о человеке)*

**БҮРТЛЕК** (һаҡмар) *и.* 1. Сарҙаҡ ишеге — *чердачная дверь.* Өй башына бүртлектән ин, бүртлеге асыҡ. 2. Ҡыйыҡ — *крыша*

**БҮРТЛЕК ТӨБӨ** (һаҡмар) *и.* мөрйә төбө — *основание печной трубы.* Бүртлек төбөн ҡарағыҙ әле, ут ҡабып китмәһен

**БҮРТМӘКЕС** (һаҡмар) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта.* Заманында бүртмәкесте күб ашаныҡ инде

**БҮРТМӘНСЕК** (мейәс) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта.* Бүтмәрсек (урта урал)

**БҮРТМӘС I** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* бөрмә — *складки на одежде*

~~**БҮРТМӘС II**~~ (арғаяш, дим, мейәс) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта*

**БҮРТМӘС БУТҠА** (дим, ҡаризел) *и.* туй бөтөүгә ҡарата ярмаһы бүрттереп кенә алынған, яртылаш бешерелгән бутҡа — *обрядовая каша, подаваемая в день завершения свадьбы.* Бүртмәс бутҡа йәһәт әҙер булыр ине (дим)

**БҮР ЫУЫ I** (ҡаризел, танып) *и.* эт муйылы — *крушина*

**БҮР ЫУЫ II** (дим, урта) *и.* кесерткән биҙгәге — *крапивница*

**БҮРӘК** (мейәс) *и.* тырыз — *кузовок из бересты (для ягод и грибов)*

**БҮРӘН** (арғаяш, салйоғот) *и.* бирән — *водянка*

**БҮРӘҢКЕ** (ҡаризел, урта) *и.* картуф — *картофель.* Бүрәңкегеҙ уңтымы? (урта). Бүрәңге (дим, ҡыҙыл)

~~**БҮСТЕРӘ** (урта) *и.* күстерә — *костерь*~~

**БҮҪЕЛЕҮ** (урта, әй) *ҡ.* йөй буйынан йыртылыу — *разорваться по швам.* Бишмәтеңдең ҡултығаҫты бүҫелеп киткән икән дә (әй)

**БҮҪЕП-БҮҪЕП** (урта) *р.* айырып — *разделив на части.* Тегеләрҙе бүҫеп-бүҫеп туҡманылар

**БҮҪЕР ЙЕЛӘГЕ** (һаҡмар) *и.* әҫпе еләге — *жостер слабительный*

**БҮҪЕҮ** (урта) *ҡ.* 1. Йыртыу — *разорвать.* Бүре үткер тырнаҡтары менән Миңлегөлдөң балитәкле күлдәген бүҫеп йебәрергә өлгөрҙө. 2. (ҡыҙыл) Бүһереү — *обвалять*

**БҮҪКӘ** (урта) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц).* Бүҫә (эйек), бүҫәгә (дим)

**БҮТБЕЛДЕК** (әй) *и.* бытбылдыҡ — *перепел, перепелка*

**БҮТЕК** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Өндәшмәүсән — *молчун.* Бүтек, бүтекләнеб ултыра шунда (урта). 2. (урта урал) *с.* ҡыйырһытылған — *обиженный*

**БҮТЛӘНЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* күнегеү — *освоиться.* Бер бүтләнеб алһа, торор әле

**БҮТӘГӘ I** (дим) *и.* аҡтамыр — *пырей*

**БҮТӘГӘ II** (арғаяш, урта, һаҡмар) *и.* ҡылған — *ковыль.* Йалан ғына йерҙең бүтәгәһе сайҡала ла микән йелдәргә... (һаҡмар)

**БҮТӘГӘ III** (һаҡмар) *и.* ҡурпы — *отава*

**БҮТӘГӘ IV** (һаҡмар) *и.* имән үҫентеһе — *молодые побеги дуба*

~~**БҮТӘГӘ V**~~ (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* төпөш — *коротыш.* Бүтәкә (төньяҡ-көнбайыш)

**БҮТӘКӘ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц).* Бүтәгә (төньяҡ-көнбайыш)

**БҮТӘКӘ II** (дим) *и.* бүтәгә — *мятлик кистевидный*

**БҮХКӘРЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* кәмеү — *уменьшаться.* Минең әллә мейе бүхкәргән инде

**БҮҺЕРЕЛЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йөй буйынан йыртылыу — *разорваться по швам.* Күлдәгем бүһерелеп китте

**БҮҺЕРЕҮ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* йыртыу — *разорвать*

**БҮҺЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* емереү — *разрушать.* Машинаһы белән кәртәләүҙе бүһеб инеп киткән

**БҮҺКӘ, БҮХКӘ** (ҡыҙыл) *с.* тулы түгел, тулмаған — *неполный*

**БҮҺӘ** (ҡыҙыл) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БҮШКӘ** (урта) *и.* күшкә — *луб, лубок*

**БЫҒАЗЛАУ** (дим) *и.* боғарҙаҡ — *дыхательно горло*

**БЫҒЫН** (арғаяш, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* быҒым — *ложные ребра.* Һай-һай, быҒыны һимеҙ (һаҡмар)

**БЫҒЫРҘАУ** (ҡаризел) *ҡ.* мыжғыу — *кишеть* Быгырҙап йатҡан йылан ойаһы

**БЫҒЫТЫУ** (дим) *ҡ.* быҡтырыу — *тушить.* Дөг бутҡаһы ла быҒытып ҡарайым, ашамай

**БЫҒЫУ** (мейәс, урта) *ҡ.* ылыҒыу — *льнуть.* Һара кеше кешегә быҡмай, ҡаты, шыҡыр була (мейәс)

**БЫҘАУ** (ҡаризел) *и.* 1. Ҡара һоло — *овсюг* 2. (дим) Арыш атаһы — *спорынья.* Ашлыҡның быҙа уын иләп алалар

~~**БЫҘАУКА**~~ (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* ашлыҡ үлсә өсөн ағас тәпән — *деревянный чан, используемый дл взвешивания зерна.* Ике быҙаука арышҡа икай эш ләйһең (һаҡмар). Беҙаука (минзәлә)

**БЫҘАУҠАЙ** (арғаяш, мейәс, урта урал) *и.* быҙау — *теленок*

**БЫҘАУ СҮБЕ** (дим) *и.* сыу — *плацента (у животных)*

**БЫҘЛАУЫҠ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* боҙлауыҡ — *гололедица.* Быҙлауыҡ йауған, ҡарале (урта). Моҙлауыҡ (һаҡмар)

**БЫҘЫҒЫУ** (урта) *ҡ.* яйлау — *медлить.* БыҙыҒы йөрөйһөң шунда

**БЫҘЫҠ** (ырғыҙ) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка* Әүәле ней һәр гемдә быҙыҡ булды инде

**БЫҘЫРАЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* тулышыу — *наливаться (о колосьях).* Ашлыҡ уңһа быҙырайып утыра

~~**БЫЖ**~~ (һаҡмар) *и.* гөжләү — *жужжание.* Сама уырҙың быжы сыҡмай

**БЫЖАЛАЙ** (дим) *и.* ығыш — *копуша*

~~**БЫЖАН**~~ (минзәлә) *и.* ҡуңыҙ — *жук*

**БЫЖЛАУ** (туҡ-соран) *ҡ.* шөрләү — *струсить* Беҙҙән ҡурҡмаһа ла атаһынан аҙыраҡ быжлаңҡырай

**БЫЖҒЫРТЫУ** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *ҡ* быжғытыу — *отругать.* Малайҙы быжғыртыб алдым әле (ҡыҙыл)

**БЫЖҒЫТЫУ** (дим, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ* отҡотоу — *подстрекать.* Божғотоу (ҡаризел)

**БЫЖДАУ** (әй) *ҡ.* шыжлау — *шипеть.* Самауы быждай

**БЫЖЛАТЫУ** (урта) *ҡ.* быжғытыу — *отругать*

**БЫЖМЫН** (урта урал) *и.* лаҡылдаҡ — *пустомеля*

**БЫЖМЫНДАУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ* 1. Быжмырлау — *копошиться.* 2. Лаҡылдау — *болтать*

**БЫЖМЫР** (мейәс) *и.* бөтмөр — *аккуратный в работе.* Бызмыр (арғаяш)

~~**БЫЖЫ**~~ (дим) *и.* рахит менән ауырыусы — *рахитик.* Шул бер быжы инде

**БЫЖЫҠ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бәйләнсек — *назойливый.* Эй быжыҡ та инде был Ҙакир

**БЫЖЫҠ II** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* һулыған — *вялый (о растении)*

**БЫЖЫҠ III** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* сибек — *слабый, хилый.* Быжыҡ ҡына бала булдың инде, хоҙайым (урта урал)

**БЫЖЫҠ IV** (мейәс) *и.* ике ағастың бер-береһенә ҡушылып үҫкән ере — *место сращения двух деревьев*

**БЫЖЫҠЛАНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* теңкәгә тейеү — *надоедать*

**БЫҘЫЛДАУ I** (салйоғот) *ҡ.* ҡурҡыу — *испугаться*

**БЫЖЫЛДАУ II** (урта) *ҡ.* ҡабарыу — *подняться (о тесте и т. п.)*

**БЫЖЫРТМАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *с.* ҡытыршы — *шероховатый.* Боҙ быжыртмаҡ булып туңған (ҡыҙыл)

**БЫЖЫУ I** (урта) *ҡ.* сәнсеп ебәреү — *пырнуть (чем-л. острым)*

**БЫЖЫУ II** (дим, урта) *ҡ.* таушалып бөтөү — *мяться.* Быжып бөткән ҡалфағым (дим)

**БЫЗЛАҠ** (дим, урта) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка.* Быҙлаҡ (туҡ-соран), мызлаҡ (урта)

**БЫЗЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* яҡтыртыу — *светиться.* Сөрөктөң дә бызлағаны була

**БЫЗМЫР** (арғаяш, дим, урта, урта урал, эйек-һаҡмар, ырғыҙ) 1. *и.* ығыш — *копуша.* Бызмыр, пыштыр әкерен эшләй инде ул эште (дим). 2. (һаҡмар) *с.* ялҡыҡтыс — *нудный*

**БЫЗМЫРЛАУ** (дим, һаҡмар) *ҡ.* яй ҡуҙғалыу — *копошиться.* Балам, бызмырлама, тиҙерәк йөрө (һаҡмар). Бызмырҙау (әй)

**БЫЗЫЙЫТ** (салйоғот) *и.* таҡыя турғай — *обыкновенная чечетка*

**БЫЗЫЛДАҠ** (арғаяш) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка*

**БЫЗЫМЫҠ** (арғаяш) *и.* ҡаймаҡҡа он туҡып бешерелгән боламыҡ — *мучная каша, сваренная в сметане*

**БЫЗЫР** (дим, урта, һаҡмар) *с.* быжыр — *рябой*

**БЫЗЫРАЙЫУ** (урта) *ҡ.* аҡайыу — *выпучиться (о глазах)*

**БЫЗЫРЛАУ I** (ҡыҙыл) *ҡ.* сәбертеү — *высыпать (о сыпи)*

**БЫЗЫРЛАУ II** (һаҡмар) *ҡ.* шәп һөйләү — *тараторить.* Ғәлимә ней бызырларға оҫта инде ул

**БЫЗЫРАҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* әйберҙе йомшартыу өсөн ҡулланылған туҡмаҡ — *каталка*

**БЫЙ** (мейәс) *и.* буй, урын, ер — *место.* Был быйҙы мейә сасы тейбеҙ

**БЫЙАУ** (арғаяш, дим, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта, әй) *и.* буяу — *краска*

**БЫЙМА ГАЛУШ** (мейәс) *и.* ҡыҫҡа ҡуңыслы быйма — *валенки с короткими голенищами*

**БЫЙТАНДАҠ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Быйтанnаҡ (һаҡмар). 2. Ҡылтым — *обидчивый*

**БЫЙТАҢНАУ, БЫЙТАҢЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡыйшандау — *кокетничать.* Быйтаңлама кеше араһында, ҡара уны!

**БЫЙТЫЙ** (һаҡмар) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Быйтыс (ҡыҙыл), быйтыҡ (эйек)

**БЫЙТЫҠАС** (урта урал, һаҡмар) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Бер быйтыҡас ҡына кеше ул Нурикамал (һаҡмар). Быйтыҡа (ҡариҙел)

**БЫЙЫЛҒЫЛЫҠТА** (мейәс) *р.* быйыл — *в этом году.* Быйылғылыҡта торфта эштәнем

**БЫҠЫЙ** (дим) *и.* әрпеш — *неряха*

**БЫҠЫЛДАҠ** (һаҡмар) *и.* мығырлаҡ — *ворчун*

**БЫҠЫР-ШЫҠЫР** (ырғыҙ) *р.* арлы-бирле — *кое-как.* Эште эш итеп эшләүсе бар, быҡыр-шыҡыр эшләүсе бар

**БЫЛАҒУМ** (эйек) *и.* дыуамал — *сумасброд.* Былағум ғына уланнары бар

**БЫЛАЙ I** (урта, эйек) *б.* бирле — *с, со.* Ҡыштан былай ынтылдым мин һаман һатыб алырға (урта)

**БЫЛАЙ II** (мейәс) *и.* бирге яҡ — *эта сторона.* Исмаҡайҙан былайы тамыйанға ғарай

**БЫЛАЙ-АЛАЙ** (ҡыҙыл, эйек) *р.* шул саҡлы — *настолько.* Былай-алай көстөмө! (ҡыҙыл)

**БЫЛАЙАЛАЙЫМ** (һаҡмар) *р.* шул саҡлы — *настолько.* Былайалайым матур!

**БЫЛАЙЫМ АРБА** (арғаяш) *и.* оҙон арба — *дроги*

**БЫЛАМЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* иҙелгән картуфка он ҡушып бешерелгән ашамлыҡ — *вид мучной каши*

**БЫЛАФҠЫ** (урта) *и. брошка*

**БЫЛАШТЫРЫУ** (дим) *ҡ.* маташтырыу — *попытаться*

**БЫЛҒАНДАҠ** (көнсығыш диалект) *и.* тиктормаҫ — *непоседа*

**БЫЛҒАНДАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* һерәндәү — *торчать, толкаться без дела.* Болғандау (мейәс)

**БЫЛҒАУЫС** (һаҡмар) *и.* тәртешкә — *кочерга*

**БЫЛҒЫЛАЙ** (дим) *р.* былай — *так.* Беҙ былғылай итеп утырғас та, эш күп бит эле

**БЫЛДЫРҘАҠ** (ҡыҙыл) *и.* «р» өнөн дөрөҫ әйтә алмаусы — *картавый*

**БЫЛДЫРҘАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* «р» өнөн дөрөҫ әйтә алмау — *картавить*

**БЫЛЖАҢЛАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* ҡыланыу — *кривляться*

**БЫЛЙЫМАУ** (мейәс) *ҡ.* иҫ(е) китмәү — *и в ус не дуть.* Йәрҙәмде былйымай ғына утырып бирҙе тейҙәр

**БЫЛЙЫРАУ** (һаҡмар) *ҡ.* ебеп төшөү — *раскисать (о человеке).* Нәмә былйырап төштөң дә ғуйҙың?

**БЫЛҠЫЛДАП ЙАТЫУ** (урта) *ҡ.* хәлһеҙләнеп ятыу — *лежать обессилившись*

**БЫЛҠЫМ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *с.* 1. Йомшаҡ — *мягкий.* 2. (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* булдыҡһыҙ кеше — *неспособный человек*

**БЫЛҠЫМДАНЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* артыҡ ныҡ һимереү — *ожиреть излишне*

**БЫЛҠЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* балҡыу — *сверкать.* Йәшен былҡығанда ағасҡа ышыҡланып ултырырға йарамай (ҡыҙыл)

**БЫЛСАЙЫУ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар, әй) *ҡ.* 1. Ауырыуҙан күҙҙәрҙең ҡыҙарып, һыуланып тороуы — *слезоточить, краснеть от болезни (о глазах).* 2. (әй) Күҙ сағылыу — *ослепиться (светом)*

**БЫЛСЫҠ: БЫЛСЫҠ КҮҘ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Йәшле ауырыу күҙ — *больные слезящиеся глаза.* 2. (ырғыҙ) Ҡыҙарып торған күҙ — *покрасневшие глаза*

**БЫЛСЫҠЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* йәш ағыу — *слезиться.* Күҙләрең былсыҡланып тора

**БЫЛСЫЛДАУ I** (ырғыҙ) *ҡ.* юҡты һөйләү — *пороть чушь.* Былсылдап тормале, кит мынан

**БЫЛСЫЛДАУ II** (урта урал) *ҡ.* йәш ағыу — *слезиться*

**БЫЛСЫМ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *с.* йәшле — *слезящийся.* Былсым күҙ (ҡыҙыл)

**БЫЛСЫМАҠ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *с.* бешеп етмәгән, уңмаған — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* Былсымаҡ икмәк. Палсымаҡ (һаҡмар)

**БЫЛСЫМАҠЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* бешеп етмәү, сей булыу — *быть сырым (о хлебе).* Икмәгем әллә бешеп йетмәне инде, былсымаҡланып тора

**БЫЛТАЙЫУ** (мейәс, эй) *ҡ.* 1. Ҡылтайыу — *обидеться.* Бер нәҫтә әйтеүең моң, былтайа ла гитә (эй). 2. (ҡыҙыл) Турһайыу — *дуться.* Ауыҙын былтайтып йөрөй шунда

**БЫЛТАНДАҠ** (мейәс) *и.* тиктормаҫ — *непоседа*

**БЫЛТАНЛАУ** (урта) *ҡ.* 1. Ҡылтайыу — *обидеться.* 2. Һикерәнләү — *резвиться (о детях).* Былтаңнау (урта)

**БЫЛТЫҠ** (урта) *и.* 1. Ҡылтым — *обидчивый.* 2. Ҡылансыҡ — *кривляка.* Шул былтыҡҡа һүҙ ҡушҡан булаһың тағы

**БЫЛТЫҠАЙ** (ырғыҙ) *с.* аҡыш күҙле — *лупоглазый*

**БЫЛТЫМ** (ҡыҙыл, эй) *и.* ҡылтым — *обидчивый*

**БЫЛЫҒЫУ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* 1. Ебеү — *размокнуть, преть (о растении).* Болонут былыҡтынинһә, ҡайнатып мөтрөшкә ғатыштырып сәй эштәйҙәр (ҡыҙыл). 2. (туҡ-соран) Быҕыу — *преть (о каше).* 3. (ҡыҙыл, һаҡмар) Күгәреү — *плесневеть.* Бүрегем мейес артында йатып былығып киткән (һаҡмар)

**БЫЛЫЙЛЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бытбылдыҡ — *перепел, перепелка*

**БЫЛЫҠ** (ҡыҙыл) *с.* һыйғыр — *хлёсткий.* Былыҡ тал

**БЫЛЫҠТЫРЫУ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* быҡтырыу — *парить.* Балыҡларыңды былыҡтырыб ал (туҡсоран). Көнө буйы мейестә былыҡтырып ҡына бешерәсең (ырғыҙ)

**БЫЛЫМЫҠ** (арғаяш) *и.* ҡаймаҡҡа он туҡып бешерелгән боламыҡ — *мучная каша, сваренная в сметане*

**БЫЛ ӘҘЕРҘӘ** (арғаяш, эй) *р.* был арала — *в последнее время.* Был әҙерҙә ней хәлдә йөрөйһөң? (арғаяш)

**БЫР** (һаҡмар) *и.* ғәйеп — *вина.* Берәй быры бар инде, шуға йыпылдап йөрөп йата

**БЫРАҒЫТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бырақтырыу — *отбросить.* Бөтә әйберҙәрҙе бырағытып бөткәнһең. Бырғытыу (урта)

**БЫРАМАТ ЙӨРӨҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ауылсылап йөрөү — *ходить по домам*

**БЫРАҢҠЫТЫУ** (урта урал) *ҡ.* борҡотоу — *вздымать, поднимать (пыль, снег)*

**БЫРАУЛЫҠ** (дим, урта) *и.* тыҡрыҡ — *переулок.* Быҙауығыҙ бырауылыҡта йөрөй ине (дим). Быраулик (урта)

**БЫРАУЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* бер аҙ — *немного.* Бырауыҡ эшләп алайыҡ әле

**БЫРАУЫЛКА** (көнсығыш диалект) *и.* тыҡрыҡ — *переулок.* Бырауҡа (мейәс)

**БЫРАШКА** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* мисәү — *постромка.* Бырашка аты (мейәс)

**БЫРБЫЛДАУ** (гәйнә) *ҡ.* һөйләнеү, мығырлау — *ворчать*

**БЫРБЫЛДЫҠ** (гәйнә) *и.* мығырлаҡ — *ворчун*

**БЫРҒАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* бырақтырыу — *отбросить.* Борон беҙҙең халыҡ ҡаманы ҡолата һуғып бырғаған да йөрөгән (ҡыҙыл). Бырғыу (арғаяш)

**БЫРҒЫ** (дим) *с.* тар — *узкий.* Бырғы күлдәк

**БЫРҘАУ** (арғаяш, эй) *ҡ.* борҡоу — *вздыматься.* Ыржа төшкәс, бесән сапһаң бырҙап тора (арғаяш). Мейесенең бырҙап төтөнө сыға, шунда утыра түҙеп (эй)

**БЫРҘАТЫУ** (эй) *ҡ.* борҡотоу — *вздымать.* Нейә шу хәҙәре саң бырҙаттың?

**БЫРҘЫМСЫҘ** (ҡариҙел) *с.* әҙәпһеҙ, оятһыҙ — *нахальный.* Шундай бер бырҙымсыҙ кеше инде ул

**БЫРҠЫТЫУ** (урта) *ҡ.* борҡотоу — *вздымать*

**БЫРҪАЛАҠ** (Эй) *и.* буранлы ҡар — *буран со снегопадом.* Бырҫалаҡ көндә йулға сыҡма, аҙашырһың

**БЫРҪАЛАНЫУ** (эй) *ҡ.* буталыу — *извозиться (в чем).* Ҡарға бырҫаланып бөткәһең дә, балаҡайым

**БЫРТ** (ҡариҙел) *с.* ҡырыҫ — *резкий, грубый (о человеке).* Мин үҙем быртмын шул бигерәк

**БЫРТЛАМА** (һаҡмар) *и.* сыртлаҡ — *кнопка (для одежды)*

**БЫРХАТЫП** (мейәс) *р.* геүләтеп — *с (радостным) шумом.* Бырхатып туй үткәрҙеләр

**БЫРХЫТЫУ** (мейәс, урта урал) *ҡ.* 1. Борҡотоу — *вздымать (о пыли).* Саң бырхытыу. 2. (эй) Туҙҙырыу — *разнести в пух и в прах.* Бер инәй ҙә түҙеп тормаҫ, бырхытыр ҙа сығарыр ине

**БЫРҺЫЛДАП: БЫРҺЫЛДАП ТОРҒАН** (мейәс) *с.* быҫҡаҡлап торған — *моросящий.* Бырһылдап торған көн

**БЫРЫҒЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* ҡыҙыу — *преть (о растении).* Тумбыйыҡты тоҡҡа тултырып баһырып ҡуйһаң бырығып, майы сығып китә (ҡыҙыл)

**БЫРЫЛДЫҒЫН СЫҒАРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* пыр туҙҙырыу — *сильно ругать.* Хәҙер бырылдығын сығарам мин аны

**БЫС** (мейәс) *с.* бешеп етмәгән, уңмаған — *неудавшийся, сырой (о хлебе)*

**БЫСАҠАЙ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Әрпеш — *неряха.* 2. *р.* бысрағыраҡ — *грязновато*

**БЫСАҠЛЫ** (көньяҡ диалект) *с.* һуйылған — *зарезанный.* Бысаҡлы ҡуйанды ашайбыҙ (урта)

**БЫСАҠҪЫҘ** (дим) *и.* һаран — *скряга*

**БЫСАЛА: БЫСАЛА БУЛЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сейләнеү йәки һыуланыу — *преть или мокнуть (о ногах).* Бысала булып китте айаҡ

**БЫСАЛАНЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сейләнеү йәки һыуланыу — *преть или мокнуть (о ногах).* Айаҡ бысаланыу

**БЫСҠЫ: БЫСҠЫ ҠОЛАҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* йәйә бысҡы һабы — *ручка лучковой пилы*

**БЫСҠЫЛ** (ҡыҙыл, эйек) *с.* дымлы, еүеш — *влажный, мокрый.* Бысҡыл үҙәк

**БЫСҠЫЛДАҠ I** (урта урал) *с.* йәшле — *слезящийся.* Бысҡылдаҡ күҙ

**БЫСҠЫЛДАҠ II** (һаҡмар) *с.* бешеп етмәгән, уңмаған — *неудавшийся, сырой (о хлебе)*

**БЫСҠЫЛДАУ** (урта) *ҡ.* йәш ағыу — *слезоточить*

**БЫСҠЫ ОНО** (дим) *и.* бысҡы онтағы — *опилки*

**БЫСҠЫТА БАҪЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* һыта баҫыу — *раздавить кого-(что) ногой.* Сиңерткәне бысҡыта баҫтым

**БЫСЛЫҠ I** (дим) *и.* төтәткес — *дымарь*

**БЫСЛЫҠ II** (дим) *с.* йәшле — *слезящийся*

**БЫСМА I** (урта урал) *с.* ялҡытҡыс — *нудный*

**БЫСМА II** (һаҡмар) *с.* бешеп етмәгән, уңмаған — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* Бысма икмәген тоҡсайлап йөрөр ине, бахыр, быстырлап

**БЫСРАҠ-ҺАСРАҠ** (көнсығыш диалект) *с.* бысранып бөткән — *измазанный, загрязненный.* Бысраҡ-һасраҡ ҡулың менән күрешергә итәһеңме? (арғаяш). Өйгә бысраҡ-һасраҡ итеге менән килеп кергән (эй)

**БЫСТЫҠ I** (Эй) *с.* йәшле — *слезящийся.* Бысыҡ (урта, һаҡмар, эй)

**БЫСТЫҠ II** (нөгөш) *с.* бәләкәй генә — *малюсенький.* Шунда быстыҡ ҡына йүкә үҫеп ултыра

**БЫСТЫР** (дим) *и.* ығыш — *копуша*

**БЫСТЫРҘАУ** (дим) *ҡ.* мыштырлау — *копошиться.* Быстырлау (дим). Быстырлаб эшләй, эшер-өшөр эшләмәй

**БЫСЫЙ** (дим, ҡыҙыл, мейәс, урта) *с.* бешеп етмәгән, уңмаған — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* Бысый икмәк. Бысым, бысҡый (мейәс)

**БЫСЫЙҘАНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* сейләнеү — *преть (о ногах).* Бысыйҙанып бөткән айаҡтарың ман ҡайҙа бармаҡсы булаһың?

**БЫСЫҠ-БЫСЫҠ** (урта) *ы.* ныҡ аптырауҙы белдергән һүҙ — *междометие, выражающее недоумение, удивление.* Бысыҡ-бысыҡ, ҡайҙан килеп сыҡтың әле?

**БЫСЫҠА** (ҡыҙыл) *с.* йәшле — *слезящийся.* Күҙе бысыҡа икән, әҙәм йерәндереп йөрөй. Бысым (эйек)

**БЫСЫЛҒЫ** (урта) *и.* меңъяпраҡ — *тысячелистник*

**БЫСЫЛҒЫ: БЫСЫЛҒЫ БУЛЫУ** (мейәс, урта) *ҡ.* сейләнеү йәки һыуланыу — *преть или мокнуть (о ногах).* Айаҡ бысылғы булып китте (урта). Бысылҡы (мейәс)

**БЫСЫЛДАҠ** (мейәс) *с.* 1. Йәшле — *слезящийся.* 2. (ҡыҙыл, мейәс) *и.* еүеш тимерәү — *влажный лишай*

**БЫСЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сейләнеү — *преть (о ногах)*

**БЫСЫЛҠЫ I** (урта) *с.* йәшле — *слезящийся*

**БЫСЫЛҠЫ II** (мейәс) *ҡ.* һыйыр тояғының сейләнеүе — *прение копыт коров*

**БЫСЫНҠЫ** (арғаяш) *с.* йәшле — *слезящийся.* Бысынҡы күҙ

**БЫСЫНҠЫ ҮЛӘНЕ** (урта) *и.* юл япрағы — *подорожник*

**БЫҪҠАҠ** (урта, урта урал) *и.* ямғыр бәшмәге — *дождевик*

**БЫҪҠЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* быҫҡаҡлау — *моросить.* Сәхипгәрәй, быҫҡылдап йауған йамғыр тауышына ойоп, ҡуҙғалмай торҙо

**БЫҪҠЫС** (ырғыҙ) *и.* бысҡы — *пила.* Быҫҡысыңды биреп тор әле. Бысҡыс (урта урал)

**БЫҪҠЫТЫУ I** (ҡыҙыл) *ҡ.* төтәтеү — *дымить.* Ағас күнәкте йыуалар, көнгә киптерәләр ҙә, сөрөк быҫҡытып, күнәкте ыҫтайҙар

**БЫҪҠЫТЫУ II** (дим) *ҡ.* ҡотортоу — *подстрекать*

**БЫҪТАУ** (эй) *и.* мыжыҡ кеше — *ворчун, ворчунья*

**БЫҪТЫЙ** (эй) *и.* «с» өнө урынына «ҫ» менән һөйләшеүсе — *разговаривающий со звуком «ҫ» вместо «с».* Ул тик быҫтыйҙауыл

**БЫҪТЫР** (дим) *и.* ләпәкәй — *мошка.* Күҙенә быҫтыр кергән

**БЫҪЫМ ЙАМҠЫР** (урта) *и.* быҫҡаҡ ямғыр — *моросящий дождь*

**БЫҪЫМЛАУ** (урта) *ҡ.* быҫҡаҡлау — *моросить.* Быҫымлап йауып тик тора

**БЫТАҠАЙТЛАУ** (урта) *ҡ.* бутау — *путать*

**БЫТАЛАЙ** (һаҡмар) *и.* ҡыҙыу һөйләшеүсе — *разговаривающий скороговоркой.* Алар аралары белән быталайлар

**БЫТАЛАҠ** (ҡариҙел) *и.* йылыу — *полынья*

**БЫТБЫҠ** (урта урал) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка*

**БЫТБЫЛДАҠ** (мейәс) *и.* бытбылдыҡ — *перепел*

**БЫТБЫЛДЫҠ** (урта урал) *и.* тартай — *дергач.* Бытбылдыҡҡа төш буһа, бүҙәнәгә урын йуҡ *(мәҡәл)*

**БЫ ТЕМГӘ** (мейәс) *и.* ошо ваҡытҡа — *до этого времени.* Бы темгә тәре ауырыманым. Бы тимгә (ҡыҙыл, эй)

**БЫ ТИКТЕ** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *р.* шул тиклем — *настолько.* Бы тикте лә йаман кеше бумаҫ! (ҡыҙыл)

**БЫ ТИМ** (урта) *р.* шул тиклем — *настолько.* Бы тим тә кеше ошай икән

**БЫТҠЫП: БЫТҠЫП ЙАТЫУ** (урта урал) *ҡ.* күп булыу — *быть в большом количестве.* Йеләк бытҡып йата анда

**БЫТҠЫП: БЫТҠЫП ЙӨРӨҮ** (урта урал) *ҡ.* буталыу — *мешаться (под ногами).* Айаҡ аҫтында бытҡып йөрөмәле

**БЫТҠЫШ** (һаҡмар) *с.* ҡуйы — *густой (о растениях).* Рассадағыҙ ҡайһылай бытҡыш сыҡҡан, һирәкләтегеҙ

**БЫТҠЫШЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* өйөлөшөү — *скопляться.* Бытҡышып торған йондоҙҙо Иләк йондоҙ тейләр

**БЫТҺЫНЫУ** (эй) *ҡ.* тығылыу — *вмешиваться в чужое дело.* Кәрәкмәгәнгә бытһынып йөрөй шунда

**БЫТЫЙ** (урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Һаҡау — *косноязычный.* 2. (урта урал) Һүҙгә, эшкә ҡатнашып, буталып йөрөгән кеше — *совчая бабушка.* 3. Теле сығып килгән балаға иркәләп әйтеү һүҙе — *ласковое обращение к ребенку, заговорившем впервые*

**БЫТЫҠАЙ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* 1. Уңмаған — *бестолковый.* 2. (эй) Һүҙгә, эшкә ҡатнашып, буталып йөрөгән кеше — *совчая бабушка.* 3. Әрпеш — *неряха*

**БЫТЫҠАС** (һаҡмар) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка*

**БЫТЫЛДАУ** (эй) *ҡ.* 1. Ҡайһы бер өндәрҙе дөрөҫ әйтмәү — *неправильно произносить отдельные звуки.* 2. Ҡыҙыу һөйләшеү — *разговаривать скороговоркой*

**БЫТЫМЫР** (һаҡмар) *и.* 1. Лығырлаҡ — *болтун.* 2. (урта урал) Һүҙгә, эшкә ҡатнашып, буталып йөрөгән кеше — *совчая бабушка*

**БЫТЫР** (эй) *и.* ҡыҙыу һөйләшеүсе кеше — *человек, разговаривающий скороговоркой*

**БЫТЫРҘАҠ I** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *и.* *мотоцикл.* Бытырҙаҡтан аунап йатып ҡаһаң (ҡыҙыл)

**БЫТЫРҘАҠ II** (эй) *и.* лыҡылдаҡ — *болтун*

**БЫТЫРҘАУ** (эй) *ҡ.* ҡыҙыу һөйләшеү — *разговаривать скороговоркой*

**БЫТЫРЫЙ** (дим) *и.* бәрҙе — *хариус*

**БЫТЫШ** (ҡыҙыл) *с.* буталған — *перемешанный.* 2. (әй) Уңмаған — *бестолковый*

**БЫТЫШЫУ I** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* тығылыу — *вмешиваться в чужое дело.* Кит, бытышма! (мейәс)

**БЫТЫШЫУ II** (урта урал) *ҡ.* теләр-теләмәҫ эшләү — *работать без охоты*

**БЫУ I** (һаҡмар) *и.* монар — *марево*

**БЫУ II** (һаҡмар) *и.* хәл — *сила.* Мал барҙа, этейҙең быуы бөтмәҫ борон, алып ҡалайым тигән инем

**БЫУА** (гәйнә, ҡыҙыл, урта урал, һаҡмар) *и.* тапҡыр — *раз.* Беҙгә улар ике быуа гилде (һаҡмар)

**БЫУАҒЫТЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Еүешләнеү — *отсыревать.* Өйҙөң серек бүрәнәләре быуағытып тора (ҡыҙыл). 2. (урта урал) Бәҫләнеү — *покрываться инеем.* Ағастар быуағытты, йәрингә аштыҡ булыр

**БЫУАҘҘАУ I** (мейәс) *и.* боғаҙ — *горло*

**БЫУАҘҘАУ II** (мейәс) *ҡ.* быуаҙ булыу *(ҡайһы бер малдар тураһында) — быть стельной (о животных)*

**БЫУАҘҘАУ III** (арғаяш, мейәс) *ҡ.* тамаҡлау — *задушить.* Бүре һарыҡты быуаҙҙаған (арғаяш)

**БЫУАҘҘАУ ҺӨЙӘГЕ** (арғаяш) *и.* салыу һөйәге — *верхний шейный позвонок*

**БЫУАҘҘАУЫҠ** (мейәс) *и.* боғаҙ — *горло*

**БЫУАҘЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Быуаҙ булыу *(ҡайһы бер малдар тураһында) — быть стельной (о животных).* 2. (һаҡмар) Йыуанайыу —*толстеть.* Өйөрөләөйөрөлә быуаҙый *(Йомаҡ. Яуабы — орсоҡ)*

**БЫУАЙ** (арғаяш, мейәс, урта урал) *и.* бабай — *дядя (старший брат отца или матери); любой мужчина старше родителей*

**БЫУАҠ I** (мейәс, урта) *и.* бәҫ — *иней*

**БЫУАҠ II** (гәйнә) *и.* 1. Боғаҡ — *Базедова болезнь.* 2. Бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**БЫУАҠ III** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* бүлкә, өлөш — *часть.* Эйәгенең быуаҡтарын йағаһына ҡыҫып, ҡатлау-ҡатлау итеп, быуылып, оҙаҡ итеп көлә (ырғыҙ)

**БЫУАҠЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* ҡуйы ҡыҙыл-күк төҫкә инеү — *стать багряным.* Болот быуаҡланты, айаҙға гитәр

**БЫУАЛА** (урта) *и.* боғал — *аркан для поимки коней из стада; лассо*

**БЫУАН** (әй) *и.* быуа — *пруд.* Балыҡка быуанға йөрөй торғайныҡ

**БЫУАНАҠ** (дим) *и.* быҒым — *ложные ребра*

**БЫУАРТЫУ** (урта) *ҡ.* йөҙәтеү — *надоедать.* Сипарат һатып алыу тураһында ирен быуартып, унын теңкәһен ҡоротоп бөттө

**БЫУҘЫҒЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Быуылыу — *задыхаться (от кашля).* Быуҙығып тәгәрәп китәләр хаттаким балалар сәсәмә ауырыуынан. Быулығыу (дим, урта). 2. (әй) Ҡарлығыу — *охрипнуть.* Әлләнейә тамағым быуҙыҡты эле бөгөн

**БЫУҘЫҠ** (арғаяш) *и.* ҡаҙан өҫтөнә эшләнгән таҡта кәштә — *полка на кухне над котлом*

**БЫУЛАУ** (урта) *ҡ.* зыйлау — *свистеть (о пуле)*

**БЫУМА РӘНЙЕҮЕ** (урта, һаҡмар) *и.* быума — *эпилепсия.* Йел-дауылдан быума рәнйеүе һуғылған (һаҡмар)

**БЫУЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Ҡалын тауыш сығарыу — *издать низкий звук.* Быуылдап йөрөй бер себен. 2. Үкереп илау — *плакать в голос.* Йетәр, быуылдама

**БЫУЫЛМА** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* быума — *эпилепсия*

**БЫУЫЛМАЛЫ СИР** (дим) *и.* быума — *эпилепсия*

**БЫУЫН I** (дим, көнсығыш диалект, ҡариҙел) *и.* 1. Тапҡыр — *раз.* 2. (дим, урта) Ғүмер — *жизнь.* Мин быуынымта күрмәнем (урта)

**БЫУЫН II** (мейәс) *и.* быуа — *пруд*

**БЫУЫН III** (урта) *и.* тороҡ — *звено.* Бер быуын ҡойма эшләне

**БЫУЫН ҪӨЙӘГЕ** (дим) *и.* ашыҡ — *бабка (игра).* Быуын сөйәге (төньяҡ-көнбайыш)

**БЫХЫЙ, МЫХЫЙ** (урта урал) *и.* йыш-йыш тын алыусы кеше — *человек с коротким частым дыханием.* Быхый килебутыра

**БЫХЫУ** (ырғыҙ) *с.* тыңҡыш — *гнусавый*

**БЫХӘЛЛЕК** (урта) *р.* шул тиклем — *настолько.* Быхәллек атас булыр икән

**БЫШАНТАЙ** (дим) *и.* башалтай — *шерстяные носки-самовязки*

**БЫШЛАТЫУ** (дим) *ҡ.* төтәҫләү — *обкуривать.* Ҡорт бышлатырҫың

**БЫШЛЫҠТЫРЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* яндырыу — *загнать (о лошади).* Атын бышлыҡтырған малайлар

**БЫШТЫЙ** (дим) *и. пинетки*

**БЫШТЫҠ, БЫШТЫҠАЙ** (урта урал) *и.* ығыш — *копуша*

**БЫШТЫҠ-БЫШТЫҠ** (әй) *р.* 1. Арлы-бирле — *кое-как.* 2. Шаярып ҡына — *шутя.* Быштыҡ-быштыҡ һөйҙәшеб алдылар

**БЫШТЫР** (урта, урта урал) *и.* ығыш — *копуша.* Эй-й, быштыр, эштән һаман ҡайтмаған да (урта урал)

**БЫШЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* сәнсеп ебәреү — *пырнуть (чем-л. острым)*

**БӘ** (туҡ-соран) *ы.* бәй — *ба.* Бә, ҡунаҡлар ней бер нәмә лә ашаманылар

**БӘПЕМБӘП** (урта) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Бәпем (урта)

**БӘБЕРКӘ** (ҡыҙыл) *и.* балитәк — *оборка.* Бәберкәле оҙон күлдәк кейгән

**БӘБИТӘК, БӘБӘЙТӘК** (дим, ҡариҙел, урта) *и.* балитәк — *оборка*

**БӘБКЕ I** (урта урал) *и.* ашыҡ — *альчик (кость)*

**БӘБКЕ II** (урта урал) *и.* атлама — *стропила.* Бәбкеләргә йарарлыҡ ағастар алып ҡайттым эле урмандан

**БӘБКӘ I** (урта) *и.* балтырған бәбәге — *завязь борщевника*

**БӘБКӘ II** (гәйнә) *и.* ҡабаҡ, күҙ ҡабағы — *веко*

**БӘБСҮК** (һаҡмар) *и.* ашыҡ — *альчик (кость)*

**БӘБӘЙ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Бәпес — *грудной ребенок.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Себеш — *цыпленок.* Бәбәйләре сыҡмас бу тауыҡның

**БӘБӘЙ II** (урта) *и.* балитәк — *оборка.* Бәбәйле күлдәк

**БӘБӘЙТӘК** (дим, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта, һаҡмар) *и.* бала итәк — *оборка.* Ул кейә өч бәбәй итәкле күлмәк (минзәлә)

**БӘБӘК I** (дим, ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ҡабаҡ, күҙ ҡабағы — *веко.* Аһҡы бәбәгем

тартһа илайым (ҡыҙыл). Бисәһе шешмәк бәбәкле генә ине (ырғыҙ)

**БӘБӘК II** (арғаяш, урта урал) *и.* йәрбесәк — *мочка*

**БӘБӘК III** (дим, урта, урта урал) *и.* йәш балтырған — *молодая поросль борщевника*

**БӘБӘЛӘК** (ҡыҙыл) *и.* бөгәлсән — *овод лошадиный; желудочный*

**БӘГӘНӘШ** (ҡыҙыл) *и.* бәрәнәш — *воронец колосовидный*

**БӘҒЕЗЕЛӘ** (әй) *р.* ҡайһы бер саҡта — *иногда.* Бәгезелә ирешеп китәм

**БӘҒЕМБӘ** (арғаяш) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БӘҒЕР: БӘҒЕР ҠОРОУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* теңкә ҡороу — *надоедать.* Аны сығаралмайса бәғер ҡорҙо

**БӘҒҮЛӘН** (әй) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Бәғүләндең һабағын ауыҙға ҡабып бәп-бәп бәғүлән, — тип ҡабат-ҡабат әйтһәң бөгәрҙәлә

**БӘҘЕ** (ҡыҙыл) *и.* ҡаҡы — *свербига*

**БӘҘИҒӘТ: БӘҘИҒӘТ АШАТЫУ** (мейәс) *ҡ.* ҡунаҡ итеү — *угощать*

**БӘҘРӘЙЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* таҫрайыу — *выпучиться (о глазах).* Күҙе бәҙрәйҙе, малай. Бәҙерәйеү (урта)

**БӘЖЕЙ** (кариҙел) *и.* тарма — *конопля.* Бәжи (гәйнә)

**БӘЖЕК** (урта урал) *с.* быжыған — *увядший*

**БӘЖЕҮ** (ҡыҙыл, урта урал) *ҡ.* быжыу — *увядать.* Бөтә кәртүктәре бәжегән (урта урал)

**БӘЗЕЙ** (дим) *и.* 1. Ҡаҡы — *свербига.* 2. (кариҙел) Тарма — *конопля*

**БӘЗЙЫЛАН** (кариҙел) *и.* баҡыр йылан — *медянка*

**БӘЗЛӘҮ** (урта) *и.* 1. Баҙлау — *светиться (о глазах).* Күҙе бәзләб утыра. 2. Күҙ уйнатыу — *играть глазами*

**БӘЗӘКӘЙЛӘП: БӘЗӘКӘЙЛӘП СЫҒЫП КИТЕҮ** (дим) *ҡ.* себенләү — *бегать из-за укусов мух (о животных).* Үгеҙләр бәзәкәйләп сығып китә

**БӘЙГЕ** (мейәс) *и.* ҡыҙыл тауар киҫәге — *кусок красной материи.* ◊ Бәйге апҡасыу *(туйға барғанда ҡунаҡтарҙың беренһенең ҡыҙыл билғауын алып ҡасыу йолаһы)* — *обычай срыва красного пояса одного из едущих на свадьбу гостей после угощения и гонки за ним*

**БӘЙҒӘМБӘР ТЫРНАҒЫ** (көнсығыш диалект) *и.* һары сәскәле гөл — *ноготки*

**БӘЙҘӘЛЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* бәйләнеү — *придираться.* Кешегә бәйҙәлергә әҙер тораһың (әй)

**БӘЙҘӘЛЕШ** (көнсығыш диалект) *и.* бәйләнеш — *связь, соотношение*

**БӘЙҘӘМ** (көнсығыш диалект) *и.* 1. Бәйләй торған нәмәләр — *вещи, предназначенные для вязания.* Бәйҙәмем күп (ҡыҙыл). 2. (арғаяш, мейәс, салйоғот, әй) *с.* бәйләнгән — *вязаный.* Бәйҙәм шәл

**БӘЙҘӘМЕС** (ҡыҙыл) *и.* 1. Быҙау бәйләй торған урын — *место, где находится теленок на привязи.* 2. (мейәс) Сәсбау — *косоплетка.* 3. (салйоғот) Яулыҡ аҫтынан тартып бәйләй торған бәйләүес — *повязка под платок.* Бәйҙәмесемде йыуыб алырға кәрәг ине

**БӘЙҘӘМӘ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* бәйләнгән — *вязаный.* Бәйҙәмә шәл

**БӘЙЕЛ** (һаҡмар, әй) *и.* нәфсе — *желание.* Бәйел аҙмай, башҡа бәлә гилмәй (һаҡмар). Мәйел (урта урал). Мәйеленә баш булалмай харап булды

**БӘЙЕЛЬЕҘ** (мейәс) *и.* бәйелен тота алмаған кеше — *человек, болеющий недержанием мочи*

**БӘЙЕТ** (кариҙел) *и.* мөйәт — *хомутина (хомут без деревянного остова)*

**БӘЙЛӘМ** (дим, кариҙел, урта) *с.* бәйләнгән — *вязаный.* Бәйләм ойоҡ кейеб алған (дим)

**БӘЙЛӘМӘ I** (урта) *и.* ҡунысбау — *подвязка для суконных голенищ*

**БӘЙЛӘМӘ II** (гәйнә, урта урал) *и.* бәйләү әйбере — *вязание.* Бәйләмәм тороп ҡалған, эш йуҡ (урта урал)

**БӘЙЛӘМӘ III** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* ялан кәртә — *загон для скота.* Атыңды бәйләмәгә ҡуй (һаҡмар)

**БӘЙЛӘМӘ ГӘРТӘ** (туҡ-соран) *и.* ялан кәртә — *летний загон для скота.* Атыбыҙ бәйләмә гәртәне йемереп сығып киткән

**БӘЙМӘН: БӘЙМӘН ТАБЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* хәл алыу, тынысланыу — *отдышаться, успокоиться.* Нумианы ашағас ҡына бәймән таптым, тине

**БӘЙМӘТ** (гәйнә) *и.* ваҡ балыҡ — *вид мелкой речной рыбы*

**БӘЙНӘ** (гәйнә) *р.* бая — *недавно*

**БӘЙНӘТ** (арғаяш, һаҡмар) *и.* яфа, ғазап — *мука.* Бәйнәт кенә бала булдың башыма (һаҡмар)

**БӘЙРӘМ** (төньяҡ-көнбайыш, әй) *и.* байрам — *праздник.* Бәйрәм алдынан ғына йаңы өйгә сыҡтыҡ (әй)

**БӘЙӘ** (дим, кариҙел) *и.* ҡиммәт, дәрәжә — *ценность, достоинство.* Ил бәйәҫе кеше ул атайың (дим)

**БӘКЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* мәке — *прорубь*

**БӘКЕС I** (әйек) *и.* тау йыуаһы — *лук горный*

**БӘКЕС II** (дим) *и.* ағас киле төйгөсө — *толкуша деревянной ступы*

**БӘКЕС III** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *р.* эскә ҡарай кәкре *(салғы тураһында)* — *с придвинутым к ручке концом (о косе).* Салғы бәкес ашталған (ҡыҙыл)

**БӘКЕСЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* салғы йөҙөн турылау — *подправить лезвие косы*

**БӘКСӘЙТЕҮ** (дим) *ҡ.* бөгөү — *гнуть*

**БӘКСӘҢНӘҮ** (әйек-һаҡмар) *ҡ.* кәкрәйеү — *согнуться.* Бәксәңнәп иртүк ҡайҙа китепараһың?

**БӘКТӘРБӘЙ** (салйоғот) *и.* мүктәрге — *кобчик*

**БӘКӘЙ I** (урта) *с.* бәләкәй — *маленький.* Бәкәй генә ҡыҙыҡайы бар

**БӘКӘЙ II** (кариҙел, төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *и.* 1. Бәкәлсәй — *путовый сустав.* Бәкәйенән кире батты (кариҙел). 2. (төньяҡ-көнсығыш) Бәкәл — *щиколотка (у человека); бабка (у животных)*

**БӘКӘЙ III** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бәрәс — *ягненок, козленок*

**БӘКӘЙЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* бәрәсләү — *оягниться.* Күберәген сарыҡ ҡыш көнө бәкәйләй

**БӘКӘКТӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Сыпрандау — *сопротивляться, перечить.* 2. Тыпырсыныу — *биться ногами.* 3. Нәмә етештерә алмай йонсоу — *изнуриться от недостатка*

**БӘКӘЛ** (һаҡмар) *и.* 1. Беләк быуыны — *сустав руки.* 2. (урта) Кәтмән һөйәге — *часть стопы (у лошади).* Бәкәлсәй (урта)

**БӘКӘЛ: БӘКӘЛГӘ ҺУҒЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* аяҡтан йығыу — *нуждаться.* Оҙаҡ эшләй алмай йатыу бәкәлгә һуҡты

**БӘКӘЛСӘЙ** (һаҡмар) *и.* 1. Бармаҡ быуыны — *сустав пальцев.* Бәкәлсәйем сыҡты, бармағым һыҙлай. 2. Ашыҡ — *альчик (у животных)*

**БӘКӘЛ СӘСЕ** (урта) *и.* сәсә — *щетка (на ногах у лошади).* Бәкәл сәсәге (урта)

**БӘКӘЛӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төпөш — *коротыш.* Бер бәкәлә бәндә йөрөҙө

**БӘКӘС I** (дим, урта) *с.* бик бәләкәй — *малюсенький.* Бәкәс кенә йеп кәрәг ине (дим)

**БӘКӘС II** (урта) *и.* ашыҡ — *альчик (у животных)*

**БӘЛДӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце*

**БӘЛЕ** (мейәс, әй) *с.* бер тиң, бәрәбәр — *одинаковый, равный.* Аҡман-тоҡман алты гөн, алты айға бәле гөн (мейәс). Бөрөҙә ике гешегә бәле (әй)

**БӘЛЕШ** (ҡыҙыл) *ы.* аптырауҙы белдергән һүҙ — *ба (слово, выражающее недоумение).* Бәлеш, ҡайтып та киткәнме апайым?

**БӘЛЖЕҮ** (кариҙел) *ҡ.* 1. Ауыҙ бәлшәйтеү — *распустить губы.* 2. (ҡариҙел, урта урал) Бышыу — *увядать.* Кәртүк бәлжейме? (ҡариҙел)

**БӘЛЖӘЙЕҮ** (әй) *ҡ.* һытылып илап барыу — *плакать, скривив губы.* Бәлжәйергә әҙер генә тораһың

**БӘЛЖӘЛӘҮ** (гәйнә) *ҡ.* талыҡлау — *наложить шину.* Ҡулы сынса ҡабыҡ белән бәлжиләр

**БӘЛИЕРӘҮ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* бәлтерәү — *стать апатичным.* Тиктомалдан бәлйерәп төшәрһең икән (ҡыҙыл)

**БӘЛЙӘ** (дим, ҡыҙыл) *и.* ағас ырыу ҡоралы — *тесло*

**БӘЛЛЕҮ** (дим, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Сәңгелдәк — *колыбель.* 2. (дим) Бәүелсәк — *качели*

**БӘЛЛҮ: БӘЛЛҮ БИШЕК** (дим) *и.* сәңгелдәк — *колыбель*

**БӘЛМӘН** (арғаяш, салйоғот) *и.* билмән — *пельмени*

**БӘЛСӘН I** (арғаяш, мейәс) *и.* тегәнәк — *лопух.* Бәлсән мында донйа ул (мейәс)

**БӘЛСӘН II** (арғаяш, ҡариҙел, эйек) *и.* ләйсән — *первый весенний дождь.* Бәлсән йамғыры (арғаяш, эйек). Бәлсән йаңғыры (ҡариҙел)

**БӘЛТЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* бәләкәй — *маленький.* Шишмәгә бәлтек кенә улаҡ ҡуйғаннар

**БӘЛТЕРӘК** (әй) *и.* ҡурҡаҡ — *трус, трусиха.* Ул бәлтерәк нәмәкәй эштәй алыр икән?

**БӘЛТЕРӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Маташыу — *возиться.* Сезгә безнең кебек кешеләр белән бәлтерәргә уаҡыт йуҡтыр инде. 2. (ҡариҙел) Мәшәкәтләнеү — *озаботиться, хлопотать.* Шаңкә белән бәлтерәп йатырға ней. 3. (урта урал) Мәлйерәү — *одряхлеть.* 4. Ҡалтырау — *дрожать.* 5. Аптырап ҡалыу — *растеряться*

**БӘЛҮЗӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце*

**БӘЛТӘКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* босҡаҡ — *лоскут*

**БӘЛШӘЙЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* ауыҙ йәйеү — *распустить губы.* Ауыҙы бәлшәйеп йылай ҙа утыра (әй)

**БӘЛӘК I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бәкәл — *путовый сустав*

**БӘЛӘК II** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡыҙыл таракан — *таракан-прусак*

**БӘЛӘКАБЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* атайҙың йәки әсәйҙең уртансы ағаһы — *дядя, средний брат родителей*

**БӘЛӘКЛӘҮ** (урта) *ҡ.* бәләк менән һуғып йомшартыу — *бить вальком*

**БӘЛӘКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* 1. Әҙ — *мало.* Аның туғаны бәләкәй түгел. Безнең белем бәләкәй. 2. (көнсығыш диалект, урта) Бер аҙ — *немного.* Бәләкәй йегәрҙе буһаң, йаланғас утырмайһың (ҡыҙыл). Бәләкәс (көнсығыш диалект, урта). 3. (көнсығыш диалект) *с.* йәш; кесе — *молодой; младший (по возрасту).* Бәләкәй ғоҙаса

**БӘЛӘКӘЙЛӘНЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* кәмеү — *убавиться.* Газ бәләкәйләнде

**БӘЛӘКӘЙТӘК** (дим) *и.* балитәк — *оборка*

**БӘЛӘКӘЙ УРАМ** (дим) *и.* ишек алды — *двор.* Балалар бәләкәй урамда уйнап йөрөй

**БӘЛӘН** (һаҡмар) *а.* фәлән — *такой-то.* Бәлән кеше шунда тип йөгөрҙөләр

**БӘЛӘНСӘ** (ҡыҙыл) *а.* фәләнсә — *на такой-то.* Бәләнсә гөңгә барығыҙ тип ҡайталар

**БӘЛӘСНИК** (көнсығыш диалект, урта) *с.* бәләсел — *бедовый (о человеке).* Һин бигерәк бәләсник кеше икән (ҡыҙыл). Шу тиктек бәләсник, үҙенекен алмай ғуймай (әй)

**БӘЛӘСӘЙ** (һаҡмар) *и.* *фельдшер*

**БӘЛӘ-ТҮЛЕШ** (ҡариҙел) *и.* бәлә-ҡаза — *беда*

**БӘЛӘҮ** (дим) *ҡ.* ғәйепләү — *обвинять.* Һигеҙ йылға бәләп алып китеп утырттылар

**БӘЛӘХӘТЛӘҮ** (һаҡмар) *и.* ғауғасы — *дебошир.* Уй, ул бигерәк бәләхәтләү, теймә инде

**БӘМБӘКӘ** (эйек) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Бәмбәм бәмбәкә, һары тәкә, күк тәкә

**БӘНӘХӘТЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* яфалау — *мучить.* Мине күп бәнәхәтләне инде

**БӘПЕКӘС** (дим) *и.* балаҡай — *деточка*

**БӘПЕЛДЕК** (ҡыҙыл) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Бәпелдәк (ҡыҙыл)

**БӘПЕЛДӘҮ** (һаҡмар) *и.* ҡуян ҡысҡырыуы — *крик зайца.* Ҡуйан бәпелдәй башланы, йаҙ оҙаҡламаҫ ахры. Бәпелтәү (урта)

**БӘПЕМ** (арғаяш, дим, урта) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Бәпембәп (урта)

**БӘПЕС: БӘПЕС ҠАҘЫ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* сәтәкәй бармаҡ ҡалынлығы ҡаҙы — *конское сало шириной в мизинец*

**БӘП ИТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* йығылыу *(балаға ҡарата)* — *падать (о ребенке).* Әнә, тағы ла бәп иттең

**БӘПКҮЛӘН** (төньяҡ-көнбайыш, урта, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* йорт үләне — *горец птичий.* Бәпкүләне (дим, мейәс)

**БӘПКӘ I** (дим, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-һаҡмар) *и.* атлама — *стропила.* Бәпке (урта урал)

**БӘПКӘ II** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* йәш балтырған бәбәге — *завязь борщевника.* Көпшәһен ашайлар, бәпкәһен ҡайнатып эсәләр (һаҡмар)

**БӘПКӘ III** (мейәс) *и.* йәлдәү — *горловина верши.* Мурҙа бәпкәһе

**БӘПКӘ IV** (салйоғот) *и.* биш көлтәнән торған һоҫлан — *суслон из пяти снопов*

**БӘПКӘ V** (мейәс) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**БӘПКӘЙАТЫШ** (дим) *и.* атлама яткан бүрәнә — *подстропильник*

**БӘПӘЙ** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *и.* бәпес — *грудной ребенок.* Золҡағиҙәнең бәпәйе бар тей (ҡыҙыл). ◊ Бәпәй итеү (арғаяш) эш боҙоу *(балаларға ҡарата) — пакостить (о детях).* Бәпәй итеү (һаҡмар) иркәләү — *приласкать.* Кил, бәпәй итәйем. Бәпәй итеү (салйоғот) йығылыу — *упасть*

**БӘПӘЙҘӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс, урта урал, һаҡмар) *ҡ.* бала табыу — *рожать.* Килен өйҙә генә бәпәйҙәр инде (урта урал)

**БӘПӘҮЛЕК** (эйек) *и.* бәпембә үҫкән ер — *место, где растут одуванчики*

**БӘПӘҮЛӘҮ** (урта) *ҡ.* иркәләү — *баловать.* Балаларын бәпәүләп кенә аҫырайлар

**БӘРҘЕСӘК, БӘРСӘК** (һаҡмар) *и.* бәрҙе селбәрәһе — *малек хариуса*

**БӘРҘЕ-ОРҘО** (дим) *р.* теләһә ҡалай — *как попало.* Бәрҙе-орҙо ҫөйләшеп утырып буламы?

**БӘРҘӘ** (урта) *и.* бәпес башындағы ҡауаҡ — *корочка на голове у грудного ребенка.* Бәрҙәгәй, бәрҙәкәй (һаҡмар)

**БӘРҘӘК** (урта) *с.* шаян — *озорной.* Бәрҙәк кенә малайлары бар

**БӘРЕ I** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* пәрей — *нечистая сила*

**БӘРЕ II** (мейәс) *р.* бары — *только.* Бәре шул ғынамы?

**БӘРЕ III** (һаҡмар) *а.* барыһы — *все.* Гөбөрлө таулары бәре күренә. Бәр лә башкорт исемне

**БӘРЕБЕР** (мейәс) *р.* барыбер — *все равно.* Минең өсөн бәребер

**БӘРЕЙ** (урта, урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Пәрей — *нечистая сила.* Бәрей алмаштырыу *(холоҡһоҙланыу) — капризничать.* Бәрей *(холоҡһоҙ бала) — капризный (о детях).* Бәрей арбаһына утырған *(тотанаҡһыҙ кеше) — несдержанный человек.* Бәрей мәйле *(туймаҫ тамаҡ) — ненасытный*

**БӘРЕЙ КҮБӘЛӘГЕ** (дим) *и.* шайтан күбәләге — *мохнатая бабочка*

**БӘРЕЛЕҮ: АУЫРЫУҒА БӘРЕЛЕҮ** (дим, урта) *ҡ.* ауырыуға һабышыу — *слечь, заболеть (от тяжелого горя, переживаний)*

**БӘРЕП-ОРОП БАРЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* туҡмау — *бить.* Малайымны бәреп-ороп бара

**БӘРЛЕГЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Тап булыу — *встретиться.* Хәммәт был ҡыҙға нисек бәрлекте икән? 2. (гәйнә, ырғыҙ) Бәрелеү — *встречаться, сходиться.* Тау тауға бәрлекмәй, кеше кешегә бәрлегә (ырғыҙ)

**БӘРКӘК** (һаҡмар) *и.* тире менән ит араһындағы яры — *мездра.* Бәркә (ырғыҙ)

**БӘРСӘК** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Бәрҙе селбәрәһе — *малек хариуса.* 2. (һаҡмар) Селбәрә — *малек*

**БӘРСӘК-БӘРСӘК** (һаҡмар) *р.* әҙләп-әҙләп — *понемногу, изредка.* Бәрсәк-бәрсәк йамғыр тамсылары төштө

**БӘРСӘКТӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сәрпәкләү, әҙләп-әҙләп ватыу — *разломать, раздробить на мелкие кусочки*

**БӘРҪ** (урта) *ы.* берс — *брысь, слово для отгона кошки*

**БӘРХӘТ ГӨЛ** (гәйнә, ҡыҙыл, мейәс, урта, эй) *и.* әҙрәс гөл — *бегония*

**БӘРӘБӘР** (төньяҡ-көнбайыш, эй) *р.* бер тиң — *одинаково.* Хәҙер ҡыҙ-хатын бәрәбәр эшләй (төньяҡ-көнбайыш). Һинең улың менән бәрәбәр үҫтеләр инде минең ғыҙым (эй)

**БӘРӘЙ** (эй) *ы.* ғәжәпләнеүҙе белдергән һүҙ — *ба (слово, выражающее удивление).* Бәрәй, атаһы Ишморат бит

**БӘРӘК** (дим, ҡариҙел, урта, урта урал, һаҡмар) *ы.* ғәжәпләнеүҙе белдергән һүҙ — *ба (слово, выражающее удивление).* Бәрәк, айаҡтың ауыртҡанын белмәйем үҙем (урта урал). Бәрәкәт (дим)

**БӘРӘКӘЙ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* бәрәс — *ягненок, козленок*

**БӘРӘКӘНДӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* имгәкләү — *ходить на четвереньках*

**БӘРӘМЕС I** (дим, урта, эйек) *и.* бәрәмәс — *большая ватрушка*

**БӘРӘМЕС II** (дим) *и.* һиҙәбүлән — *алтея*

**БӘРӘМЕС III** (урта) *р.* мөшкөл — *неважно.* Үҙ хәлем бәрәмес, кешелә эшем йуҡ

**БӘРӘМЕС IV** (дим) *ы.* ғәжәпләнеүҙе белдергән һүҙ — *ба (слово, выражающее удивление).* Бәрәмес, ашың ҫыуыған да

**БӘРӘМЕТ** (һаҡмар) *и.* ҡармаҡлы ау — *перемет.* Кисеүҙән өҫтәрәк бәрәмет һалғаннар

**БӘРӘНҠАП** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* күрпә — *шуба поярковая*

**БӘРӘҢГЕ** (арғаяш, ҡариҙел, урта, һаҡмар, эй) *и.* картуф — *картофель.* Бәрәңке (ҡариҙел, урта). ◊ Бәрәңге бутҡаһы (һаҡмар) йомшаҡ кеше — *растяпа.* Бәрәңге кәлжәмәһе (урта урал) йүнһеҙ — *бестолковый*

**БӘРӘҢГЕ ГӨЛ** (мейәс) *и.* әҙрәс гөл — *бегония.* Кәртүк гөлө (ҡыҙыл)

**БӘРӘҢГЕ ТӨПӘЛСӘҺЕ** (арғаяш, мейәс) *и.* картуф алмаһы — *семенники картофеля*

**БӘРӘҢГЕ ТУЙРАҺЫ** (дим) *и.* картуф алмаһы — *семенники картофеля*

**БӘРӘҢГЕ ТӘКӘСЕ** (минзәлә) *и.* картуф бәлеше — *картофельный пирог*

**БӘРӘС** (дим, ҡариҙел, урта) *ы.* ғәжәпләнеүҙе белдергән һүҙ — *ба (слово, выражающее удивление)*

**БӘРӘ-ҺӘРӘ** (дим, ҡыҙыл, һаҡмар) *р.* 1. Аңҡы-тиңке — *очумело.* Бәрә-һәрә булдым да гиттем бит (ҡыҙыл). Бәрә-ҫара килеү (дим). 2. (ҡыҙыл) Арлы-бирле — *кое-как.* Ҡабыҡ-кобоҡ йағып бәрә-һәрә итә торғайныҡ

**БӘРӘҮӘЙҺЕҘ** (урта) *и.* һаҡһыҙ — *неэкономный, -ая*

**БӘРӘШӘН** (ҡыҙыл, урта, ырғыҙ) *и.* 1. Самаһыҙ — *чрезмерно.* Ашты бик бәрәшән тотма (ҡыҙыл). Алдан бесәнде бик бәрәшән ашаттылар (урта). Ай, балам, бесәнде бик бәрәшән тотонаһың, бер айға ла йетмәҫ (ырғыҙ). 2. (ҡыҙыл) *р.* тәртипһеҙ — *безалаберно.* Бигерәк бәрәшән ҡыйналаһың

**БӘС I** (туҡ-соран, урта) *и. фетр.* Бәс бәлтә кейгән әсәйем (урта)

**БӘС II** (һаҡмар) *и.* көс, хәл — *сила.* Бәстән тайыб утырам балларҙы бағам тип

**БӘС-БӘС-БӘС** (дим) *ы.* һарыҡ саҡырыу ымлығы — *междометие зова овец*

**БӘСЕЙ ҒОЙРОҠ** (арғаяш) *и.* аҡ алабута — *лебеда белая.* Бәсей ғойрокто заманында күб ашанығ инде аны

**БӘСӘ I** (арғаяш) *и.* иләнгән һарыҡ тиреһе — *выделанная овчина*

**БӘСӘ II** (әй) *ы.* ғәжәпләнеүҙе белдергән һүҙ — *ба (слово, выражающее удивление).* Бәсә, килеп сыҡһаң, беҙгә лә кер

**БӘСӘЙ** (ҡыҙыл) *и.* бәкәлсәй — *путовый сустав.* Бәсәй уйнатыу

**БӘСӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *ы.* аптырауҙы белдергән һүҙ — *междометие, выражающее недоумение.* Бәсәк, һин ҡайҙан килеп сыҡтың әле (салйоғот). Бәсәк-бәсәк (урта)

**БӘСӘЛ** (һаҡмар) *и.* булдыҡһыҙ — *неспособный.* Бәсәл генә шул беҙҙең Ғәйнулла эшкә

**БӘСӘТУН** (урта урал) *и.* 1. Бәрән тун — *овчиная шуба.* 2. Баса тун — *шуба из шкурок лисьих лап*

**БӘҪ I** (һаҡмар) *и.* 1. Эҫе көндә ерҙән елберләп кенә сыҡҡан һауа — *теплая волна на поверхности земли.* Йәй гөнө йерҙән бәҫ сыға, йер йарыла. 2. (урта) Томан — *туман.* Бәҫ күтәрелте, йауыр

**БӘҪ II** (ҡыҙыл, урта, урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Хәл, көс — *сила, мощь.* Бәҫтән тайҙым инте (урта). ◊ Бәҫтән уҙыу *(хәлдән тайыу)* — *обессилеть, измотаться.* Бәҫ баҫыу *(ҡайғы-хәсрәт баҫыу)* — *переживать горе.* Бәҫ баҫыпөткән бахырҙы (урта). Бәҫтән сығарыу — *уничтожить, выводить из строя.* Бер атты туҡмап бәҫтән сығарҙы (ҡыҙыл). 2. Ҡәҙер — *честь.* Үҙ бәҫен дә белмәҫ икән кеше (урта урал). 3. (әй) Тәртип — *порядок.* Бер бәҫ белмәгән кеше инде ул

**БӘҪ III** (дим) *и.* 1. Бәз — *бязь.* 2. Ҡытат — *глазет*

**БӘҪТЕК** (дим, төньяҡ-көнсығыш, урта) *и.* тәбәнәк — *низкорослый (о человеке).* Бәләкәй буйлы кешегә кит, бәҫтек, тип әйтеб йебәрә ҡайһы бер геше (урта). Бәһтек (салйоғот)

**БӘҪТӘҮ** (урта урал) *ҡ.* 1. Хөрмәтләү — *почитать.* Хатынын бәҫтәп тотманы. 2 Ҡәҙерләү *(кейемһалымға ҡарата)* — *бережно относиться (к одежде)*

**БӘҪҺЕҘ** (әй) *и.* 1. Изгелекһеҙ — *неблагодарный.* Шул бер бәҫһеҙ ыштука инде малайы. 2. *р.* тәртипһеҙ — *безалаберно.* Кейемде бик бәҫһеҙ гейәһең

**БӘҪӘРЕҮ** (урта, эйек-һаҡмар, әй) *ҡ.* күгәреү — *заплесневеть (об одежде).* Куфайкаң соланда тороп бәҫәреп киткән дә (әй)

**БӘҪӘРТЕҮ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* быҡтырыу — *тушить.* Ҡурай йеләгенең йапрағын бәҫәртеп сәй итеп эстек (урта)

**БӘТЕҮӘ** (мейәс) *и.* мәғәнә — *толк.* Аның бәтеүәһе йуҡ

**БӘТЛЕК** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* яуызлыҡ — *зло.* Ул бер бәтлек уйлап эшләгән. Бәтлек уйлап әйткәндер (һаҡмар). ◊ Бәтлектән башы сыҡмау *(үсләшеп йөрөү)* — *враждовать, задумать недоброе*

**БӘТМӘКӘЙ** (һаҡмар) *и.* төпөш — *коротыш*

**БӘТМӘСЕК, БӘТМӘРСЕК, БҮТМӘРСЕК** (урта урал) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта*

**БӘТӘШӘ** (салйоғот, урта урал) *и.* босҡаҡ — *лоскут*

**БӘҮЕЛЙЕП КИЛЕҮ** (урта) *ҡ.* һушһыҙ булып килеү — *идти не помня себя.* Бәүелйеп йылап килә

**БӘҮЕЛТЕРЕК** (урта) *и.* бәүелсәк — *качели*

**БӘҮКӘЛДӘҮ** (мейәс) *ҡ.* бәүелеп атлау — *шагать, раскачиваясь*

**БӘҮЛӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* баулау — *заарканить.* Һалдың эсмәлеген бәүләү

**БӘХИЛ** (урта) *и.* ҡомһоҙ — *жадный.* Бик нәфселе, бәхил кеше ул

**БӘХИЛ БУЛЫУ** (урта) *ҡ.* риза булыу — *согласиться.* Мырҙаҡайҙы бер күрмәһәм дә бәхил булыр инем

**БӘХИЛЛӘТЕҮ** (дим) *ҡ.* ризалыҡ алыу — *получить согласие*

**БӘХИЛӘ** (мейәс) *и.* 1. Бахила — *бахилы (вид обуви).* 2. Бурка — *бурки*

**БӘХМИС** (һаҡмар) *и.* ҙур кәүҙәле, оҙон ботло ат — *крупнопородная лошадь*

**БӘХМҮЗ** (ҡыҙыл) *с.* килбәтһеҙ — *неуклюжий.* Уның бәхмүз ҡыҙын кем алһын

**БӘХРӘМӘ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* һары уҡа — *желтый позумент*

**БӘҺЕМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәҙер — *честь.* Әпәкәйнең бәһеме бик оло булыр аның

**БӘШКҮНӘК** (дим, ырғыҙ) *и.* башкүнәк — *кадка (изготовленная из кожи головы или шеи лошади, коровы)*

**БӘШМӘК, БӘШМӘКӘЙ** (әй) *и.* мәмәй, ебегән — *мямля.* Эй, ул бәшмәкәйгә ышанып бала ғалдырама гешеʔ!

**БӘШӘЙ I** (әй) *и.* башалтай — *шерстяные носки-самовязки.* Улыма бәшәй бәйҙәпирәйем, айағы өшөр итек менән

**БӘШӘЙ II** (мейәс) *ы.* аптырауҙы белдергән һүҙ — *междометие, выражающее недоумение*

**БӘШӘК** (һаҡмар) *и.* туғай атамаһы — *название луга*

**БӘШӘЛКӘҺЕҘ** (һаҡмар) *и.* мәмәй, ебегән — *мямля.* Һин бәшәлкәһеҙҙән дә бер ҡотолдом бит

**БӘШӘЛТӘЙ** (һаҡмар) *и.* 1. Аяҡ табаны — *ступня.* 2. Башалтай — *шерстяные носки-самовязки*

**БӘШӘРЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* күгәреү — *заплесневеть.* Анауында утырған ағас бәшәргән икән (мейәс)

# Ў—Ү

**ЎА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөкрө — *горб*

**ЎАҒЫТ** (кариҙел) *и.* ваҡыт — *время*

**ЎАЖИБАТ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* мәғәнә — *смысл.* Ғибәҙәт ҡылыуының уажибаты бар аның, тей

**ЎАЖМА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ырма — *паз.* Бу бүрәнәнңнең уажмасы йуҡ икән

**ЎАЖЫМ, ЎАЗЫМ, БАЖЫМ, ПАЗЫМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ырма — *паз*

**ЎАЙ** (кариҙел) *р.* былай — *так-то.* Уай арыу ҫымағырак телгә

**ЎАҠАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Ваҡсыл — *мелочный.* 2. Мыжыҡ — *ворчливый*

**ЎАҠ САТЫУЧЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡырҡ тартмасы — *коробейник.* Уаҡ сатыучылар сатадырыйы

**ӮАҠСЫРЛАН, ӮАҠШЫРЛАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөрмәкәй — *подмаренник*

**ӮАҠСЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Көйһөҙләнеү — *капризничать.* 2. Мыштырҙау — *копошиться.* 3. Мыжыу — *ворчать*

**ӮАҠТАЛ** (гәйнә) *и.* мурҙа талы — *ива корзиночная*

**ӮАҠ ЧАҠ** (гәйнә) *и.* бала саҡ — *детство*

**ӮАЛ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* борғоса — *прямая палка в передней части ткацкого станка, на которую наматывают вытканный материал*

**ӮАЛ II** (мейәс) *и.* ҡыра — *длинный ряд сгребенной высохшей травы*

**ӮАР** (ҡариҙел) *и.* ыҫмала — *смола*

**ӮАФАСЫҘ** (дим) *с.* йомшаҡ — *мягкотелый*

**ӮАФИЛЛӘМӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и. вафля*

**ӮЫЖҒЫЙ САЛЫУ** (урта урал) *ҡ.* һөрән һалыу — *кричать во всеуслышание*

**ӮЫЖҒЫТЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* быжғытыу — *бранить*

**ӮӘЖӮЕЙӘТ** (ҡариҙел) *и.* тапшырылған эш — *поручение.* Шундай үәжүейәт йөкмәтеп ҡайтарҙылар

**ӮӘЗЕН, ӮӘЗИМ** (эйек-һаҡмар) *и.* көй — *мотив.* Ҡаһарман кантундың үәзене ошолаймы? «Сәлимәкәй» йырының дөрөҫ үәзимен бер кем белмәй, боҙоп йырлайҙар (һаҡмар)

**ӮӘЙЕЛКӘ** (дим) *и.* елгәргес — *веялка.* Көннәр буйы, төннәр буйы үәйелкә әйләндерәбеҙ

**ӮӘЙТ-ӮӘЙТ** (һаҡмар) *ы.* өйрәк саҡырыу ымлығы — *междометие зова уток*

**ӮӘЛ** (минзәлә, туҡ-соран) *и.* 1. Мамыҡ шәл — *пуховой платок.* Абыстай аппаҡ үәл йабынып утыра (туҡ-соран). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Селтәр шәл — *паутинка*

**ӮӘСҮӘСӘ БИРЕҮ** (урта урал) *ҡ.* ошаҡлау — *наговаривать (на кого-либо)*

**ӮӘТӘТ** (ҡариҙел) *с.* шараҡ, ярылыусан — *колкий (о дровах)*

# Г

**ГАЛИАН, ГӘЛИӘН, ҒАЛИАН** (арғаяш, салйоғот) *и.* майма — *гольян.* Галйан бүтән балыҡтың ыуылдығын ашап үхкәне ирек бирмәй (арғаяш)

**ГАЛУШ** (эйек-һаҡмар) *и.* күн ҡата — *кожаные галоши*

**ГАРБУН ИТӘК** (ҡариҙел) *и.* гармун итәк — *плиссе.* Гарбун итәкле күлмәк кигән

**ГАРИГАТКА** (эй) *и.* бура һуғыу уйыны — *городки*

**ГАРНИС** (дим, салйоғот) *и.* кәрниз — *карниз.* Гәрнис, кәрнис (урта)

**ГАРСИС** (дим) *и. горчица*

**ГЕҮӘ** (гәйнә, ырғыҙ) *и.* шаһит — *свидетель.* Геүәм йуҡ тиһең, ана тирәк үҙе бик йаҡшы геүә инде ул (ырғыҙ). Геүаһ (дим), гыуаһ (эйек-һаҡмар)

**ГЕГӘҮЕН, ГӘГӘҮЕН** (урта) *и.* күгәүен — *слепень.* Көгәүен (ҡариҙел), кигәүен (төньяҡ-көнбайыш)

**ГЕҘЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* кеҙе — *упрямый*

**ГЕЗЕГЕТ, ГЕҘЕГЕТ** (салйоғот) *и.* тәгәрлек — *чибис.* Гезгеттәү (арғаяш)

**ГЕЙЕН ҺҮТЕҮ** (салйоғот) *ҡ.* ныҡ әрләү — *сильно ругать*

**ГЕЛ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *р.* 1. Тас, хас — *точь в точь.* Гел этәсе, гел аңа ошаған (төньяҡ-көнбайыш). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Тотош — *сплошь.* Гел әҙәм башы ла, әҙәм бото икән, тей (экиәттән)

**ГЕЛ II** (дим) *и.* батҡаҡлыҡ — *топь.* Шунда бер күл бар, гел ҡапла бөткән

**ГЕЛЛЕК** (дим) *р.* гел — *всегда*

**ГЕЛҮК** (ырғыҙ) *и.* бер үркәсле дөйә — *одногорбый верблюд*

**ГЕЛӘН** (дим, урта) *р.* 1. Гел, һәр ваҡыт — *всегда, постоянно.* Гелән кеше һөйләгәнтең киреһен һөйләйһең (урта). 2. Тик — *только, лишь.* Гелән берәр һумныҡ (дим)

**ГЕЛӘН II** (урта) *с.* шыма — *гладкий*

**ГЕЛӘННЕ-ГЕЛӘННЕ** (ҡариҙел) *р.* ваҡыт-ваҡыт — *временами.* Геләнне-геләнне ауырта башым

**ГЕНИЛИС** (ҡыҙыл) *и.* серек ауырыуы — *гнилец (болезнь пчел).* Глинес (мейәс)

**ГЕР-ГЕР** (төньяҡ-көнбайыш) *ы.* ҡаҙ ҡыуыу ымлығы — *междометие отгона гусей*

**ГЕРИФ** (урта) *и. грипп*

**ГЕҮЛЕЙ БАШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* яңғыҙлыҡ — *одиночество*

**ГИЖЕМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кизе мулинә — *мулине*

**ГИҘӘТ ҪАҠЛАУ** (дим) *ҡ.* ғөрөф-ғәҙәт һаҡлау — *соблюдать обычаи*

**ГИЗЛӨҮ** (эйек) *ҡ.* йәшереү — *скрывать*

**ГИЛКЕМ: БЕР ГИЛКЕМ** (ҡыҙыл) *р.* бер талай, байтаҡ — *изрядно, значительно*

**ГОЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *и.* күмәгәй — *кадык*

**ГОМБАҒЫШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көнбағыш — *подсолнух.* Ғомбағыш ( дим), гөмбағыш (минзәлә)

**ГОРҘА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* күмәгәй — *кадык*

**ГОРӨБ, ҒОРФ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ғөрөф — *обычай*

**ГӨБӨ** (арғаяш, дим, ҡариҙел, урта) *и.* 1. Көбө — *деревянный сосуд, предназначенный для приготовления кумыса или сбивания масла.* Ҡаймаҡны гөбөгә һалып көбөрләтеп бешәләр (урта). Гөбө яҙыу (арғаяш) май бешеү — *сбивать масло.* 2. (дим) Һаба — *большой кожаный сосуд для кумыса*

**ГӨБӨ БЕШКӘГЕ** (арғаяш) *и.* бешкәк — *пахталка*

**ГӨБӨ МАЙЫ** (дим) *и.* күбекмай — *сливочное масло особого приготовления: сметана смешивается с кислым молоком и сбивается в кадушке*

**ГӨБӨРЛӨ БАҠА, ҠУТЫРЛЫ БАҠА** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* 1. Әрмәнде — *жаба.* 2. (туҡ-соран) Гөбөргәйел — *черепаха*

**ГӨБӨ СӨТӨ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* май айраны — *пахта*

**ГӨБӘК** (мейәс) *и.* көбәк — *ствол (у ружья)*

**ГӨДРӘ** (гәйнә) *и.* бөҙрә — *кудри*

**ГӨҘМӘН** (дим) *и.* һалда йәки паромда ҡойроҡ ишкәге — *рулевое весло на плотах, на пароме.* Гөҙмән белән бара инек ҫал өҫтөндә

**ГӨҘӨРКӘ** (гәйнә) *и.* балитәк — *оборка*

**ГӨЖГӨТ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төтәткес — *дымарь*

**ГӨЖГӨЛӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* ышҡыу — *тереть.* Уң йағың гел гөжгөләйһең дә тораң, һыҙҙанаңмы?

**ГӨЖГӨТКӨС** (урта) *и.* гөмбөр — *ботало (рыболовная снасть для сгонки рыбы)*

**ГӨЖГӨТӨҮ** (эй) *ҡ.* ҡотҡо һалыу, ҡотортоу — *подстрекать*

**ГӨЖМӘЙЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* бөкрәйеү — *согнуться (от старости)*

**ГӨЖНӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кәрзин — *корзина (сплетенная из ивовых прутьев)*

**ГӨЖӨҮ** (дим) *ҡ.* гөрөү — *сгрести.* Мөрйә гөжөү

**ГӨЗ** (урта) *ҡ.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ГӨЙӘЛ** (арғаяш) *и.* һөйәл — *мозоль.* Гөйәлде айға күрһәткәндәр, ай кәмеп барһа

**ГӨЛБАҘРАН, ГӨЛБӘҘРӘН** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Һары мәтрүш — *зверобой.* Гөлбаҙранды сәй итеп эсәләр инде. Хәҙер зверобой тейләр, әүәле гөлбаҙран тип йыйа торғайныҡ. 2. (минзәлә) Миләш — *рябина*

**ГӨЛБАЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* алғы бүлмә — *передняя*

**ГӨЛБИС, ГӨЛБӘС, ГӨЛМИС** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, эй) *и.* 1. Мейес арты — *голбец.* Гөлбәҫ (дим). 2. Солан бүлмәһе — *кладовка в чулане.* 3. (гәйнә) Баҙ — *подпол.* 4. (урта урал) Мөгәрәп — *погреб*

**ГӨЛБӘҘЕЙӘ I** (гәйнә) *и.* гөбәҙиә — *губадия (пирог с начинкой)*

**ГӨЛБӘҘЕЙӘ II** (ҡариҙел) *и.* еҙтөймә — *пижма*

**ГӨЛБӘҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* матур булыу — *быть приятным, красивым.* Ҡунаҡлар гөлбәп тора

**ГӨЛГӨЛДӘҮ** (урта) *и.* йәшенмәк — *прятки*

**ГӨЛГӨПШӘ** (дим, урта) *и.* ҡырлы ҡурай — *порезник*

**ГӨЛДӨРЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* өлтөрәп тороу — *быть приветливым.* Барып керсәң гөлдөрләп тора

**ГӨЛДӨРӘҮ** (урта урал) *ҡ.* гөрләп үҫеү — *буйно разрастись.* Кечерткән кәртә буйда гөлдөрәб утыра

**ГӨЛЖЕМЕШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* гөлйемеш — *шиповник*

**ГӨЛИ I** (гәйнә) *р.* бөтөнләй — *совсем*

**ГӨЛИ II** (минзәлә) *и.* иркәләү һүҙе — *ласкательное слово: цветик мой.* Ана килә минем гөлийем

**ГӨЛИТЕҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* селпәрәмә килтереү — *разбить вдребезги.* Тәҙрәне ғалай гөлитә çуҡҡан

**ГӨЛЙЕМЕ** (салйоғот) *и.* гөлйемеш — *шиповник*

**ГӨЛКӘЙ, ГӨЛӨКӘЙ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡолон — *жеребенок*

**ГӨЛКӘЙ II** (минзәлә) *и.* шамтыр — *неряха*

**ГӨЛКӘЙЛӘНЕҮ** (минзәлә) *ҡ.* шамтыр кейенеү — *одеваться неряшливо*

**ГӨЛЛӨҺӨ** (дим, урта) *р.* бөтәһе — *все.* Гөллө (дим). Гөлләһөн дә эшләнем (урта)

**ГӨЛМИС** (төньяҡ-көнбайыш) *ы.* ҡолон саҡырыу ымлығы — *междометие зова жеребенка*

**ГӨЛСИРЕН** (дим) *и. сирень*

**ГӨМБӘК, ГҮМБЕК, ГӨМСӘ** (гәйнә) *и.* түңгәк — *кочка.* Гөмсәк (ҡариҙел)

**ГӨМБОРҘОҠ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* гөмбөр — *ботало (рыболовная снасть для сгонки рыбы)*

**ГӨМБӘ I** (дим, ҡариҙел) *и.* ҡыу бәшмәк — *трутовик*

**ГӨМБӘ II** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Торон — *головня (болезнь злаков).* Көмбә (ҡыҙыл, урта). 2. Торон бәшмәк — *гриб головневой*

**ГӨМБӘ III** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и. стоматит.* Ауыҙы гөмбә былған, ачыташ, йәшел-зәңгәр белә чайҡатасын (төньяҡ-көнбайыш)

**ГӨМБӘҘ** (урта, ырғыҙ) *и.* көмбәҙ — *куполообразная жестяная монета (для украшения национальной женской одежды).* Атлаған һайын сәсентәге сулпыһы, түшентәге һаҡалының гөмбәҙләре, тәңкәләре сылтырап ҡала (урта)

**ГӨМБӘСКӘ** (минзәлә) *с.* түңгәк — *кочка*

**ГӨМӨРЗАЙА** (арғаяш) *и.* умырзая — *сон-трава*

**ГӨМӨРСӨК, ГӨМСӘ** (урта урал) *и.* түңгәк — *кочка*

**ГӨНЖӘЛӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көнйәлә — *пучок шерсти или трепаного льна, прикрепленный к прялке*

**ГӨПКӘ** (салйоғот) *и.* аҙбар — *хлев*

**ГӨПЛӘҢКЕ** (дим) *и.* кәүерт — *сгнившее изнутри дерево*

**ДӘҒӘЛӘШЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* дәғүәләшеү — *оспаривать (что-л.)*

**ДӘҒӘМ** (урта) *и.* ризыҡ — *пища.* Дәғәм йыйҙыҡ

**ДӘЖЕ** (арғаяш, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, салйоғот) *и.* тәже — *тяж телеги.* Дәзе (мейәс, урта, урта урал), тәзе (туҡ-соран)

**ДӘЖЕҢКЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* терһәкле сана — *розвальни*

**ДӘЛБЕ** (арғаяш) *и.* тәлмәрйен — *лягушка*

**ДӘЛБӘРЙЕН** (мейәс) *и.* тәлмәрйен — *лягушка*

**ДӘЛИҒӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* ырыҫ, бәхет — *счастье*

**ДӘЛ ИТЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* тап итеү, осратыу — *встретить на пути (кого, что)*

**ДӘЛЛӘ** (ҡариҙел) *р.* 1. Ихлас — *с душой, охотно.* Сүләшеүгә бик дәллә кеше. 2. (дим, урта) *с.* аңлы, белемле — *знающий, толковый*

**ДӘМДЕ** (арғаяш) *с.* тәмле — *вкусный*

**ДӘМНӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* сәй һалыу — *заваривать чай*

**ДӘН: ДӘН ЙЕМЕРЕЛЕҮ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *ҡ.* һыҙланыу — *ломота (в теле).* Дән һарһылыу (мейәс), дән ҡатыу (урта). ◊ Дән шытыу (арғаяш) өшөүҙән тәндең шаҙраланыуы — *гусиная кожа.* Дәне шытып китте

**ДӘНӘЙ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өләсәй — *бабушка по отцу и по матери*

**ДӘНӘЙ II** (ҡыҙыл) *и.* һөҙөмтә — *исход*

**ДӘНӘЙЛЕ** (ҡыҙыл) *с.* һөҙөмтәле — *с исходом.* Ҡыҙамыҡ һыҙланыу ике дәнәйле: йә үлә, йә ҡала

**ДӘҢГЕРСӘК, ДӘҢГӘРСӘК** (арғаяш, салйоғот) *и.* тәгәрмәс — *колесо.* Дәңгерсәк сөйө (салйоғот). Дәңәрсәк (арғаяш)

**ДӘҢГӘҮЕР** (дим) *с.* эре, ҙур — *крупный.* Эй, дәңгәүер сарыҡлар үлә

**ДӘҢНӘЛ** (арғаяш) *р.* тәңгәл — *противолежащее место*

**ДӘҢӘРРӘҮ** (мейәс) *ҡ.* тәгәрәү — *катиться (о колесе).* Дәңәрәп айҙана торғаны туғын

**ДӘРҘӘ** (дим) *и.* тәҙрә — *окно*

**ДӘРЖЕН, ДӘРЖИН** (гәйнә) *и.* билсән — *осот*

**ДӘРТНӘ** (дим, мейәс, эй) *и.* тәртә — *оглобля*

**ДӘРТ ТӨШӨҮ** (урта) *ҡ.* күҙ төшөү — *симпатизировать (кому).* Шул ҡыҙға дәрте төшөңкөрәй

**ДӘРТӘНДӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* имгәкләү — *ходить на четвереньках (о ребенке)*

**ДӘРТТӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* дәртләнеү — *вдохновиться*

**ДӘРХАН I** (гәйнә, урта) *и.* иркенлек, сәхрә — *приволье.* Дәрхан йата ҡый тик эрәхәтләнеп, йәйерәп (гәйнә)

**ДӘРХАН II** (һаҡмар) *и.* тархан — *право наследования (земельных угодий в феодальной Башкирии)*

**ДӘРӘН** (нөгөш, эй) *с.* тәрән — *глубокий.* Дәрән йере йуҡ Туғыҙ тимер һыуынын (нөгөш)

**ДӘРӘНДЕК** (салйоғот) *и.* һыу өйөрмәһе — *водоворот*

**ДӘСТӘ** (гәйнә) *и.* тиҫтә — *десяток*

**ДӘҮ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, эй) *с.* 1. Ҙур — *большой.* Дәү итек кейгән (урта). Дәү сыуы бар (төньяҡ-көнбайыш). Шошо малайым бигерәк дәү итеп бура бураған (ҡариҙел). 2. Оло — *старший.* Дәү улымдың ҡыҙы нәнәс тип йөрөтә (ҡариҙел). 3. Ҡарт — *пожилой.* Ул дәү йәштә (ҡариҙел)

**ДӘҮ БУҒЫРҘАК** (дим) *и.* боғарлаҡ — *трахея*

**ДӘҮГӘТ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* эмәйҙек — *женское нагрудное украшение, надеваемое через левое плечо под правую руку*

**ДӘҮҒАРЫН** (урта) *и.* оло ҡарын — *рубец.* Дәүҡарын (дим, эй)

**ДӘҮЕР ГҮЛЕ** (нөгөш) *и.* Башҡортостандың Мәләүез районы Ҡотош ауылы эргәһендәге күл исеме — *название озера у деревни Кутуш Мелеузовского района Башкортостана*

**ДӘҮЕРҘӘШ** (һаҡмар) *и.* замандаш — *современник.* Ул йеҙнәмнәрҙең дәүерҙәше

**ДӘҮӨРСЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* дау ҡуптарыу — *скандалить*

**ДӘҮЕС** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ҙур — *большой*

**ДӘҮЕШЛӘМӘ** (ҡариҙел) *и.* ләүәш — *пирог*

**ДӘҮИНӘЙ** (дим, ҡариҙел) *и.* 1. Өләсәй — *бабушка.* Дәүәсәй (урта). 2. (дим, урта) Олинәй *(атаһының тәүге ҡатыны кесе ҡатын балаларына ҡарата) — первая жена отца по отношению к детям от второй жены*

**ДӘҮ ЙАҠ** (урта) *и.* түр яҡ, ҡунаҡ өйө — *гостиная*

**ДӘҮҠОҘА** (урта) *и.* оло ҡоҙа — *старший сват*

**ДӘҮЛӘШЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* даулашыу — *спорить*

**ДӘҮМЕЙЕС** (урта) *и.* икмәк мейесе — *русская печь*

**ДӘҮМӘТ** (минзәлә) *и.* изгелек — *добро, благодеяние.* Балаларҙың дәүмәтен күрәлмәҙе. Зәүмәт (эй)

**ДӘҮРӘН ҪӨРӨҮ** (дим) *к.* рәхәттә йәшәү — *вести беззаботную, вольную жизнь.*

Аппаҡ тирмәләр ҡороп,
Мал илән күсеп йөрөп,
Йөргәннәр дәүрән ҫөрөп,
Һай, Өйҙөрәк буйлары *(халыҡ йырынан)*

**ДӘҮ ФАРЫҪЫ** (дим) *и.* дейеү пәрейе — *див*

**ДӘҮЭСӘК** (ҡариҙел) *и.* туғэсәк — *толстая кишка*

**ДӘҮӘ I** (урта) *и.* дөйә — *верблюд*

**ДӘҮӘ II** (мейәс, туҡ-соран, урта) *и.* дауа, дарыу — *лекарство.* Әүәле шу дәүәгә аҕаннар аҕаланы (туҡ-соран)

**ДӘҮӘЙЕҮ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта) *ҡ.* ҙурайыу, үҫеү — *стать большим, вырасти.* Балаларым дәүәйеп китепөттө (ҡариҙел)

**ДӘҮӘ ҠОШО** (ҡыҙыл) *и.* дөйәғош — *страус.* Дәүә ҡошо тейерең, бөтә килбәтендә айырым бер ғорурлыҡ, мөһәбәттек, күркәм тәкәберҙек бар

**ДӘҮӘЛӘНЕҮ** (мейәс, туҡ-соран, урта) *ҡ.* дауаланыу — *лечиться.* Бераҙ дәүәләйеп алтым әле (урта)

**ДӘҮӘНЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Өләсәй — *бабушка как по линии матери, так и по линии отца.* 2. Атай-әсәйҙең бер туған апайҙары — *родные сестры матери и отца*

**ДӘҮӘСӘЙ** (урта) *и.* атаһының тәүге ҡатыны кесе ҡатын балаларына ҡарата — *первая жена отца по отношению к детям от второй жены*

**ДӘҮӘТ** (дим, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* эмәйлек — *женское нагрудное украшение, надеваемое через левое плечо под правую руку.* Һаҡал бәйләй торғайныҡ, дәүәт таҡтыҡ (урта)

**ДӘҮӘТӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* олатай — *дедушка*

**ДӘХЕЛ** (ҡыҙыл) *и.* ҡатнашлыҡ — *участие, вмешательство.* Түбин завутынын дәхеле йуҡ

**ДӘХИ** (дим, мейәс, эй) *р.* тағы — *еще.* Дәхе (арғаяш)

**ДӘҺӘР** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* зәһәр, үтә — *очень, слишком.* Ирмәк ҡыланалар инде дәһәр (ҡариҙел). Ҙәһәр (ҡариҙел)

## Ҙ

**ҘАБУТ** (дим, урта) *и. завод.* Ҙавут (һаҡмар)

**ҘАБУТ БАҘАРЫ** (урта) *и.* дүшәмбе — *понедельник*

**ҘАКАҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и. заказ*

**ҘАКУН** (төньяҡ-көнбайыш) *и. закон*

**ҘАМАН** (төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран) *и.* заман — *период, время.* Бик хәтәр йау ҙаманы булған (туҡ-соран)

**ҘАН** (урта) *и.* дан — *слава, известность*

**ҘАНЫҠАЙ-ҘАНАШ** (һаҡмар) *и.* йәнкәй-йәнәш — *душенька*

**ҘАР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* зар — *горе.* Ҙар белән ғүмер иттек

**ҘАРАР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* зарар — *вред*

**ҘАРЫУ** (ҡариҙел) *и.* дарыу — *лекарство*

**ҘАТ** (урта) *и.* зат — *род; порода; пол*

**ҘЕГЕТ** (ҡариҙел) *и.* дегет — *деготь*

**ҘЕГӘНӘК** (ҡариҙел) *и.* тегәнәк — *репей*

**ҘЕН** (урта) *и.* дин — *религия, вера*

**ҘИКТАР** (ҡариҙел, урта) *и. гектар.* Диктар (урта)

**ҘИМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* шыя — *шуга.* Йылғаҙан ҙим аға, күрҙеңме?

**ҘИМНӘҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* димләү — *уговаривать.* Өйне ҙимнәштереп саттырҙылар

**ҘИН** (ҡариҙел) *и.* дин — *религия, вера*

**ҘИҠЕН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* зиһен — *память.* Ҙиһенем таралып китте

**ҘИҢКҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ҡаңғырыу — *тупеть.* Ҙиңкеү (әй)

**ҘОНЙА** (ҡариҙел) *и.* донъя — *вселенная, свет.* Бөтөн ҙонйа аныңда

**ҘӨБӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һебә — *ложное ребро*

**ҘУАҘАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Дуғаҙаҡ — *одинокий, без птенцов (о птицах).* 2. Япа-яңғыҙ — *совершенно одинокий (о человеке)*

**ҘУЙ КИЛЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* геү килеү — *шуметь.* Ҡолаҡ тондороп ҙуй киләләр

**ҘУР** (һаҡмар) *р.* 1. Ныҡ — *чрезмерно.* Быйыл һыу ҙур ташты. 2. *с.* ҙур — *большой.* Тәүлә туҡып ҡуйаһың да шунан ҙур ғамыр итеп иҙәһең. 3. (урта) *р.* алыҫ — *далеко.* Ҙур йөрөмәнеләр, ум биш-егерме саҡрым ғына. 4. (дим) *с.* оло — *пожилой.* Ул инде ауылда иң ҙур әҙәм, туҫҡан йәш

**ҘУР АСЫҠ** (салйоғот) *и.* майҙан — *площадь*

**ҘУРҒАРЫН** (мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* оло ҡарын — *рубец*

**ҘУРҒАТЫН** (эйек-һаҡмар) *и.* өлкән ҡатын — *старшая жена*

**ҘУР ЙАУҘЫҠ** (мейәс) *и.* бәләкәйерәк кизе шәл — *цветастый шерстяной полушалок*

**ҘУР СЫПҠАЙ** (арғаяш) *и.* урҙан — *чомга*

**ҘУРЫҒЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* йылҡы малының бик ҡыҙыу йөрөүҙән ҡапыл хәлдән тайыуы — *внезапное обессиление лошадей от быстрой езды*

**ҘУР ЭСӘК** (эйек-һаҡмар) *и.* йыуан эсәк — *толстая кишка*

**ҘУРӘҢКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* өләсәй — *бабушка*

**ҘУРӘТӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Олатай — *дедушка (со стороны отца).* 2. Атай йәки әсәйҙең иң оло ағаһы — *старший брат отца или матери*

**ҘЫЙАН** (дим, ҡариҙел) *и.* зыян — *вред*

**ҘЫЙАН-ДӘҮЛӘТ** (дим) *и.* зыян — *вред.* Ҙыйан-дәүләт ҫамаҙы симейәҫенә

**ҘЫЙАРАТ** (минзәлә, урта) и. зыярат — *кладбище*

**ҘЫМ** (урта) *и.* дым — *влага*

**ҘӘ** (мейәс, урта, әй) *к.* ҙәбаһа — *ведь.* Ҡунаҡтарығыҙ һаман килмәгәндәр ҙә (әй). Нейә, китмәй ҙә (урта)

**ҘӘГЕС** (төньяҡ-көнбайыш) *и. загс.* Туйлар йасаҙылар, ҙәгескә барҙыҡ

**ҘӘҢГӘЛӘ** (урта) *и.* зәңге — *цинга*

**ҘӘРӘ** (дим) *к.* бик — *очень.* Ҙәрә шәп кешеләр була

**ҘӘРРӘ** (ырғыҙ) *с.* үтә бәләкәй — *слишком маленький.* Алдыбыҙҙы ҡыйып ҙәррә эт үтеп китте

**ҘӘҺӘ** (арғаяш) *к.* ҙәбаһа — *ведь.* Кескәй ҙәһә

**ҘӘҺӘР** (минзәлә) *р.* ныҡ — *крепко.* Талашып киткәннәр ҙә бик ҙәһәр, балалары ҡайтмайлар

# Ж

**ЖАБА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әрпеш — *неряха*

**ЖАБАҒА** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ябағы — *шерсть-линька (весенняя)*

**ЖАБАЛАНЫУ** (гәйнә) *ҡ.* юхаланыу — *подлизываться.* Жабаланырға әҙер генә тора инде

**ЖАЗҒЫДА** (гәйнә) *р.* яҙын — *весной*

**ЖАЙ** (төньяҡ-көнсығыш ) *и.* яй — *удобный момент*

**ЖАЙҘАУ** (төньяҡ-көнсығыш ) *ҡ.* яйлау — *замедлить.* Ашыҡмай ғына жайҙаб аттап сығып китте (әй)

**ЖАЙҠАН** (урта урал) *и.* уйһыулыҡ — *низменность.* Жайҡын (төньяҡ-көнбайыш)

**ЖАЙМАН** (ҡариҙел) *и.* түшәк — *постель.* Мин әллә ҡасан жайманда йатыр идем үземне үзем ҡарамасам

**ЖАЙПЫН** (әй) *и.* уйһыу — *низина*

**ЖАЛАҒАЙ СӘСКӘҪЕ** (дим) *и.* уҡ япраҡ — *стрелолист*

**ЖАЛБЫР** (ҡариҙел) *и.* 1. Ғәйбәтсе — *сплетник.* 2. *с.* иҫке — *ветхий.* Жалбыр ызба

**ЖАЛҒЫЙАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ялағай — *подхалим.* 2. (урта урал) Алдына сығармаған, үткер, бөтә нәмәгә яраҡлаша торған кеше — *легко приспосабливающийся (о человеке).* Ул жалғыйан йалын-ҡойроғон ашапөткән

**ЖАЛПЫ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* уйһыулыҡ — *низменность*

**ЖАН** (арғаяш) *и.* ян — *лук (оружие).* Жам ман атҡан

**ЖАМАЙАҠ** (гәйнә) *и.* 1. Туҫтаҡ — *чашка (эмалированная).* Жамыйаҡ (минзәлә). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Каса — *пиала*

**ЖАМАТАЙ** (гәйнә) *с.* 1. Ямаҡ — *некрасивый.* Безнең сүләшеү жаматай. Йаматай (урта урал). 2. Яман — *плохой.* 3. Уҫал — *злой*

**ЖАНАҒА, ЖАНАҒАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кәйнеш — *деверь (младший брат мужа)*

**ЖАН: ЖАН ЙӘҺӘРЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* рәнйетеү — *обидеть*

**ЖАНТАЙЫУ** (дим) *ҡ.* тайыу — *вывихнуть(ся).* Быуыны жантайып сығып китә урынынан

**ЖАПМА МАЙЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡарынъяу — *внутреннее сало*

**ЖАРАПЕЧИН** (гәйнә) *и.* 1. Алоэ — *столетник.* Жарапечин жабу. 2. (төньяҡ-көнбайыш) Юл япрағы — *подорожник*

**ЖАРЫУ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* ярыу — *сечь, бить.* Иҫәр бумай, иҫәр инде, атын жара ла жара (әй)

**ЖАТЫУ** (дим, ҡыҙыл) *и.* ятыу — *омут*

**ЖАУЫН** (гәйнә) *и.* ямғыр — *дождь.* Йауын (урта урал, әй)

**ЖАКИЛ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, әй) *с.* 1. Яуыз, уҫал — *коварный.* 2. (эйек-һаҡмар) Наҙан — *невежественный.* 3. (гәйнә) *и.* алдаҡсы — *плут*

**ЖВАН** (ҡариҙел) *и. банка*

**ЖЕГЕРЛӘҮ, ЖИГЕРЛӘҮ, ЖӨГӨРЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* иләү — *прясть.* Утырмаға йөрөштөрҙөг инде, орсыҡ йебе жегерләҙек

**ЖЕЙЕҮ** (гәйнә) *р.* йәйәү — *пешком.* Жейеү килдек. Жейәү (арғаяш, дим, ҡариҙел, урта урал, әй)

**ЖЕЙӘН** (төньяҡ-көнсығыш ) *и.* әсәһенең тыуған ауылына ҡарата бала — *дитя женщины по отношению к ее односельчанам.* Жейән ул. Жейән ҡыҙ. Жийан (әй). Жиан (урта урал)

**ЖЕЛЕК** (дим) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг.* Жүлек, жөлөк (гәйнә)

**ЖЕМЕР-ЖЕМЕР: ЖЕМЕР-ЖЕМЕР КИЛЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* семерләү — *почувствовать дрожь в теле*

**ЖЕМӘН, ЖИМӘН, ЖИМИН** (гәйнә) *р.* күп — *много.* Жемән төрлө кешеләр күрҙем

**ЖЕН I** (төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш ) *и.* ен — *бес*

**ЖЕН II** (дим, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* ҡыҙыл үңәс — *пищевод*

**ЖЕНДЕКӘЙ, ЖИНДЕКӘЙ** (әй) *и.* ҡыҙыу кеше — *вспыльчивый человек.* Ул жендекәйгә бер һүҙ әйтеп булама?

**ЖЕН ҪУҒЫУ** (дим) *ҡ.* паралич һуғыу — *парализовать(ся)*

**ЖЕНТ, ЙЕНТ** (һаҡмар) *и.* киптерелгән ҡыҙыл эремсеккә май, шәкәр, талҡан йә муйыл оно ҡушып яһалған ашамлыҡ — *блюдо, изготовляемое из сушеного красного творога с добавлением масла, сахара, толокна или молотой черемухи*

**ЖЕН ТУБАЛЫ** (әй) *и.* ҡыҙыу кеше — *вспыльчивый человек*

**ЖЕРЖЕК** (гәйнә) *с.* аңра — *глупый*

**ЖЕТЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Ҡырҡыу — *острый (о пище).* 2. (төньяҡ-көнбайыш) *к.* Үтә — *слишком.* Жете ҡыҙыл. Житә (урта урал)

**ЖИАНДАШ** (гәйнә) *и.* һуғылма — *припадок.* Жиандаш тиде дә, бер дә айынмый. Жыйандаш (урта урал)

**ЖИБЫЛҒЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ығыш — *копуша.* Йыбылғы (урта урал). Йыбылғыға ҡушма, уҫал ман алышма *(әйтем)*

**ЖИГЕРМЕ, ЗИГЕРМЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *h.* егерме — *двадцать*

**ЖИГЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* егеү — *запрягать*

**ЖИҘ ҮЛӘНЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡылған — *ковыль*

**ЖИЗ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* шәм селтәре — *решетка лампы*

**ЖИЙМӘ** (һаҡмар) *и.* ыйыҡ — *туберкулез желез*

**ЖИЙЫУ** (гәйнә) *ҡ.* ерләү — *похоронить*

**ЖИЙЫН, ЖИЫН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Йәйге байрамдар — *летние празднества.* Жәй айларын жийын белән исәплиләр, Ҡаратал жийыны, Жәмәй жийыны дип. Жыйын (урта урал). 2. (гәйнә) һабан туйы — *сабантуй.* Барда жийынын күресез. 3. (ҡариҙел) Ара — *низшее родовое подразделение башкир*

**ЖИЙЫШТЫРЫУ** (гәйнә) *ҡ.* әҙерләү — *приготовить.* Кейәүгә китсәң, сийә әйбер жийыштырырбыз

**ЖИКЕТЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* ебетеү — *отмочить.* Житенде һыуға һалып жикетәбеҙ

**ЖИК: ЖИК КҮРЕҮ** (әй) *ҡ.* 1. Ек күреү — *измучиться.* Анан жик күреүем бар. 2. (урта урал) Ек күреү — *чувствовать отвращение*

**ЖИКӘН** (арғаяш, салйоғот, әй) *и.* 1. Екән — *рогоз.* 2. Екән башы — *головка рогоза*

**ЖИЛБЕГӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* елбәгәй — *нараспашку.* Жилбәгәй (урта урал). Бишмәтен жилбәгәй йебәргән

**ЖИЛДӘТ** (ҡариҙел) *с.* егәрле — *проворный*

**ЖИЛЕ** (урта урал) *и.* иреш буйы — *нитка-основа от пришвы до заднего шпиля (в домашнем ткачестве).* Жиле бауы (дим)

**ЖИЛЕК I** (арғаяш, әй) *и.* елек — *пустотные кости*

**ЖИЛЕК II** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**ЖИЛКӘ СӨЙӘГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сөйҙә — *бугорок атланта.* Жилкәсеүәк (гәйнә)

**ЖИЛЛЕГАРТ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кәбәк — *мякина*

**ЖИЛЛЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* елгәргес — *веялка*

**ЖИЛӘК** (гәйнә) *и.* ҡайын еләге — *земляника*

**ЖИЛӘКЧИЧКӘ** (гәйнә) *и.* ҡыңғырау сәскә — *колокольчик*

**ЖИЛӘКЧЫПЧЫҠ** (гәйнә) *и.* кесерткән турғайы — *крапивник*

**ЖИЛӘН I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кәзәкей — *полукафтан.* Йелән (һаҡмар)

**ЖИЛӘН II** (минзәлә) *и.* болондағы ҡалҡыулыҡтар — *холмики на лугу.* Ул болонның бер жиләне бар, шул Йауҡачты ҙип атала

**ЖИЛӘҮ I** (дим, ҡариҙел) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться*

**ЖИЛӘҮ II** (дим) *ҡ.* талғын ғына юртыу — *плавно бежать рысью (о коне).* Атым жиләп китте

**ЖИМЕШ** (әй) *и.* емеш — *плод.* Йоморо ҡамыштың һоло шикелде жимеше булып китә

**ЖИМТЕК** (гәйнә, әй) *и.* ҡош-ҡортҡа ашата торған орлоҡ — *корм для домашних птиц*

**ЖИМҺӘК** (арғаяш) *с.* ашамһаҡ — *прожорливый.* Һыйырым жимһәк булып сыҡты

**ЖИМШӘҮ** (арғаяш, ҡариҙел) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**ЖИН** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡыҙыл үңәс — *пищевод*

**ЖИН: ЖИНЕНДЕ АШАҒЫР** (мейәс) *и.* ҡарғау һүҙе — *слово проклятия*

**ЖИННЕЙ** (урта) *и.* ҡыҙыу кеше — *вспыльчивый человек*

**ЖИНЧЕК** (гәйнә) *и.* енсек — *голень*

**ЖИНЖЕ** (арғаяш, салйоғот) *и.* ынйы — *жемчуг*

**ЖИҢ** (төньяҡ-көнсығыш ) *и.* ең — *рукав (одежды).* Жиң һабыу *(ең ултыртыу)* — *пришивать рукав*

**ЖИҢМЕШ** (төньяҡ-көнсығыш ) *с.* үҙһүҙле — *упрямый*

**ЖИҢӘРЛЕ** (гәйнә) *с.* егәрле — *проворный.* Бик жиңәрле ул

**ЖИР** (ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, әй) *и.* ер — *земля.* Әүәле жир бик аҙ эйе (төньяҡ-көнбайыш)

**ЖИР АЛМАСЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* картуф — *картофель*

**ЖИР: ЖИР БУЙЫ ЖИР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* күҙ күремә ер — *расстояние, досягаемое взглядом*

**ЖИРЕК ҮЛӘНЕ** (дим) *и.* ерек үләне — *лабазник вязолистый.* Жирек үләне жирек араһында үҫә

**ЖИРК** (арғаяш, мейәс) *и.* ерек — *ольха*

**ЖИР ҠОРТО** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Төпөш — *коротыш.* 2. (урта урал) *с.* үткер, теремек — *бойкий, шустрый (о детях).* Йер ҡорто (туҡ-соран)

**ЖИР ПӘЛӘГЕ** (дим) *и.* еңгәсәй — *солдатик*

**ЖИР ТАРАҠАНЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* айрығойроҡ — *уховертка*

**ЖИР ТАУЫҒЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ЖИРҺЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться*

**ЖИТЕ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнсығыш ) *һ.* ете — *семь.* Жите һарығым бар (ҡыҙыл)

**ЖИТЕГӘР** (урта урал) *и.* Етегән йондоҙ — *Большая медведица*

**ЖИТЕҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* етеҙ — *проворный.* Житеҙ үҙен бетерә, экрен эшен бетерә (мәҡәл)

**ЖИТЕЙӘН** (мейәс) *и.* Етегән йондоҙ — *Большая медведица*

**ЖИТЕК ЙУЛ** (ҡыҙыл) *и.* һуҡмаҡ — *тропинка*

**ЖИТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* етәкләү — *водить (за повод).* Ат житеү

**ЖИҺАН** (мейәс, әй) *и.* йыһан — *вселенная*

**ЖИҺЫН** (ҡыҙыл) *и.* зиһен — *память.* Ҡайным бик жиһынны булды

**ЖИӘКЕ** (арғаяш) *и.* иләнгән еп — *шерстяная пряжа*

**ЖОҠАМЫШ** (гәйнә) *р.* йоҡараҡ — *потоньше*

**ЖОМҒАҠ** (гәйнә) *и.* йомаҡ — *загадка.* Минең бабайым бик күп жомғаҡ белә торғанейе

**ЖОМОҠ** (гәйнә) *и.* лепкә — *родничок (у детей)*

**ЖОМОРО** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сынаяҡ өҫтө — *чашка чайная*

**ЖОМОШАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* лепкә — *родничок (у детей)*

**ЖОМОШҠО** (гәйнә) *и.* юнышҡы — *стружка*

**ЖОР** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Йор — *проворный.* Эшкә жор (ҡариҙел). 2. (минзәлә) Ҙур — *большой.* Ул уаҡытта вилсәпит тә жор бүләк ие

**ЖОТ** (арғаяш, әй) *и.* убыр — *обжора*

**ЖӨББӘ** (туҡ-соран) *и.* оҙон сапан — *длинный чапан.* Башына эшләпә, өҫтөнә жөббә һымаҡ кейем кейгән кеше, мәсеттән сығып, ырандасҡа ултырҙы

**ЖӨЖӨ** (әй) *ы.* баланы тыйыуҙы белдергән һүҙ — *слово запрета ребенку делать что-либо.* Эй, малай, жөжө!

**ЖӨҘЛӨК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йөҙлөк — *наличник на нарах*

**ЖӨМБАШ ПЕЧИН** (гәйнә) *и.* бәпембә — *одуванчик (после цветения).* Жөнбаш (дим, ҡариҙел)

**ЖӨМӘЙ** (дим) *и.* ығыш — *копуша*

**ЖӨМӘЙЛӘҮ** (минзәлә) *ҡ.* йүкә сөй ҡағыу — *польстить.* Ҡайсы бер кеше жөмәйләүне йарата. Йүпәйләү, йүпәйтләү (урта, эйек-һаҡмар)

**ЖӨННӨКӘЙБАШ** (дим) *и.* бәпембә — *одуванчик (после цветения).* Жөннөбаш, жөннөкәй (гәйнә)

**ЖӨҢКӨТӨҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ыҙалатыу — *замучить.* Үгәй балаһын жөңкөтөп көтәләр

**ЖӨҢКӨҮ** (урта) *ҡ.* сумыу — *нырять*

**ЖӨНТӘФИ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йөнтәҫ — *волосатый (о человеке).* Йөнтәфей (урта урал)

**ЖӨСӨМБАШ** (гәйнә) *и.* торонбаш — *головешка*

**ЖУАЛҒЫ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* торонбаш — *головешка*

**ЖУАЛҒЫ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әрпеш — *неряха*

**ЖУАСУҒАН** (гәйнә) *и.* һаҙ йыуаһы — *лук угластый*

**ЖУЙҒЫС** (арғаяш, әй) *и.* юйғыс — *резинка (стиральная)*

**ЖУЙҠАНҺЫҘ** (арғаяш) *с.* тыңлауһыҙ — *непослушный*

**ЖУЙЫУ** (әй) *ҡ.* юғалтыу — *терять.* Намыҫын жуйған ул

**ЖҮКӘЛӘҮ** (гәйнә) *ҡ.* ялағайланыу — *льстить*

**ЖҮНҺЕҘ** (әй) *с.* йүнһеҙ — *бестолковый*

**ЖҮНӘҮ** (гәйнә) *ҡ.* йүнәлеү — *поправляться (после болезни).* Булниста жүнәде

**ЖҮҢКЕТЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* йөпләү — *поддакивать*

**ЖҮПЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* йөпләү — *поддакивать*

**ЖҮР** (гәйнә) *и.* иләк тирәсе әҙерләгәндә ҡулланыла торған махсус бысаҡ — *специальный нож, применяемый при изготовлении ободка решета*

**ЖҮРӘМТӘ** (гәйнә) *с.* йорат — *подобие*

**ЖЫБАУ** (арғаяш, дим) *и.* ығыш — *копуша*

**ЖЫБЫТҠЫ** (гәйнә) *и.* ығыш — *копуша*

**ЖЫВАН** (дим) *и.* май бешә торған тәпән — *жбан*

**ЖЫҒЫТЫУ** (гәйнә) *ҡ.* йығыу — *валить.* Ул батырны тәки жығыта алмаҙылар

**ЖЫЖЫҠ: ЖЫЖЫҠ УЙНАУ** (әй) *ҡ.* сүрәкә уйнау — *игра в чижик*

**ЖЫЙАНСАР, ЖЕЙӘНСӘР** (әй) *и.* әсәһенең тыуған ауылына ҡарата ҡыҙ бала — *дочь женщины по отношению к ее односельчанам*

**ЖЫЙАРГЕЙЕМ** (мейәс) *и.* ҡаралды — *постельные принадлежности*

**ЖЫЙНАНЫУ** (мейәс) *ҡ.* йыйыныу — *собираться.* Жыйналыу (әй)

**ЖЫЙУ** (гәйнә) *р.* күп — *много*

**ЖЫЙЫН I** (гәйнә) *и.* урам — *улица*

**ЖЫЙЫН II** (мейәс, әй) *и.* мәжлес — *обед или ужин (с гостями).* Жыйынға барабыҙ (әй)

**ЖЫЙЫН III** (дим) *и.* нәҫел — *род.* Беҙнең жыйында бала-саға күп

**ЖЫЙЫНСАҠ** (әй) *и. запас*

**ЖЫЙЫНТЫҠ** (гәйнә, урта урал, әй) *и. запас.* Ғүмер буйына жыйынтыҡ менән торҙо (урта урал)

**ЖЫЙЫНҺЫҘ** (арғаяш) *с.* һаҡлыҡһыҙ — *неэкономный.* Жыйынсаҡһыҙ, жыйынтаҡһыҙ (әй)

**ЖЫЙЫНЫСЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөтәһе — *все.* Жыйынысы печән эшләгәннәр

**ЖЫЙЫРЫҠ, ЗИЙЫРЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йыйырсыҡ — *морщина*

**ЖЫЙЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Йыйым — *налог.* 2. (гәйнә, төньяҡ-көнсығыш ) *ҡ.* йыйыштырыу — *убирать.* Урын жыйыу. 3 (гәйнә) *ҡ.* ерләү — *похоронить*

**ЖЫЛАН ҠАРАҒЫ** (дим) *и.* тырнаҡ аҫтына һәм тырнаҡ эргәһендәге туҡымаларға сыҡкан шеш — *онихия*

**ЖЫЛАНҠУЗҒАЛАҠ** (гәйнә) *и.* атҡолаҡ — *щавель конский*

**ЖЫЛАУ** (гәйнә) *и.* йылыу — *полынья*

**ЖЫЛАШЛЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һабан ашлыҡ — *яровой хлеб*

**ЖЫЛҒАЙАҠ** (арғаяш) *и.* кәйелтмәк — *раскат (на зимней дороге)*

**ЖЫЛҒЫР** (гәйнә) *с.* шыма — *скользкий.* Саңғыны майласаң жылғыр была. Йылғыр (урта урал)

**ЖЫЛЫЙ** (мейәс) *и.* серетке — *яйцо-болтун.* Жылыйҙы баҫып утырғандыр әле ҡаҙ

**ЖЫЛЫМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* илгәҙәк — *приветливый*

**ЖЫЛЫУ** (гәйнә) *ҡ.* шыуыу — *кататься (с горы)*

**ЖЫНЖЫР, ЗӘНЖИР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сынйыр — *цепь*

**ЖЫНТЫ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* уйһыулыҡ — *низменность*

**ЖЫНҒЫРАУ** (гәйнә) *ҡ.* сыңғырау — *звенеть*

**ЖЫПҠЫ** (гәйнә) *и.* уйһыулыҡ — *низменность.* Жыпты (төньяҡ-көнбайыш)

**ЖЫРАҒӘБЕЙ, ЖЫРАҠАЙ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* өләсәй — *бабушка (со стороны матери)*

**ЖЫРАҠБАБАЙ, ЖЫРАҠБАБҠАЙ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* олатай — *дедушка (со стороны матери)*

**ЖЫРМАЛАҠ** (гәйнә) *и.* йырғанаҡ — *овраг*

**ЖЫРТҠЫС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әрһеҙ — *проныра.* Бер ишетмәгәне былмай жыртҡысның

**ЖЫРУ** (минзәлә) *и.* йыр — *песня.* Хәҙерге жырулар кирәкме?

**ЖЫРЫНДЫ** (гәйнә) *и.* йырғанаҡ — *овраг*

**ЖЫУАТТАНЫУ, ЙЫУАТТАНЫУ** (урта урал, әй) *ҡ.* ярамһаҡланыу — *подхалимничать.* Жыуаттанырға ла кәрәк ирҙәргә

**ЖЫУЫНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* юныу — *обтесывать.* Шунан кәсәклекне жыуындылар бит шулар

**ЖӘҘӘЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәтәс — *дужка (у птиц).* Энем белә жәҙәч айырыштыҡ

**ЖӘЙГЕС** (әй) *и.* уҡлау — *скалка (для теста)*

**ЖӘЙГЕЧ** (гәйнә) *и.* көлсә — *лепешка из кислого теста*

**ЖӘЙҘЕК** (салйоғот) *с.* йәйгелек — *предназначенный для лета*

**ЖӘЙЕЛМӘ I** (гәйнә) *и.* ике яҡка асылмалы тәҙрә — *двухстворчатое окно*

**ЖӘЙЕЛМӘ II** (гәйнә) *и.* һабан турғайы — *жаворонок.* Жәйелмәләр килгән, жәй была

**ЖӘЙЕҢКЕ, ЖӘЙЕНКӘ** (ҡариҙел) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце.* Жәйеңке (арғаяш)

**ЖӘЙЕҮ** (төньяҡ-көнсығыш ) *ҡ.* йәйеү — *расстилать.* Ашйауҙыҡты жәйебәрер гәрәк

**ЖӘЙКӘ, ЖӘЙПӘК** (төньяҡ-көнсығыш ) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце*

**ЖӘЙЛЕКТӘ** (ҡариҙел) *р.* йәйен — *летом*

**ЖӘЙМӘ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный домотканый половик.* Ҡыҙыл асалы жәймә суғыштырҙы

**ЖӘЙМӘ II** (урта урал, әй) *и.* сөсөнән табала бешерелгән ҡамыр ашы — *лепешка из пресного теста*

**ЖӘЙНӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* рәхәтләнеү — *наслаждаться*

**ЖӘЙПӘЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Йәйенке — *мелкий и широкий (о посуде).* 2. Йәйенке — *плоский (о поверхности)*

**ЖӘЙРӘҮ** (әй) *ҡ.* йәйрәү — *наслаждаться*

**ЖӘЙӘ** (әй) *и.* йәйә — *лук (оружие)*

**ЖӘЙӘҮ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҙур күләүек — *большая лужа.* Ҙур ҫыу булса жәйәү тибеҙ

**ЖӘЙӘҮ II** (арғаяш, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, әй) *р.* йәйәү — *пешком*

**ЖӘЛЕШ** (мейәс) *и.* аҡтамыр — *пырей.* Жәлеш (мейәс)

**ЖӘМКИ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәмкә — *щипцы (для углей).* Жәмкей (минзәлә)

**ЖӘННЕКСЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һунарсы — *охотник*

**ЖӘНЧЕ, ЙӘНЧЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* янсыҡ — *кисеть*

**ЖӘТ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* йәһәт — *быстро.* Жәтерәк йыйыштыр урыныңны

**ЖӘҮЕР** (гәйнә) *и.* ара — *низшее родовое подразделение башкир.* Ауылда бүре, айыу, ҡуйан, төлкө, бурсыҡ кебек иске жәүерләр булған

**ЖӘҮКӘРЛӘНЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* яҡшатланыу — *лебезить*

**ЖӘҺӘТ** (ҡариҙел) *с.* егәрле — *проворный*

**ЖӘШШҮР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* телбешмә — *ящур*

# З

**ЗАВУННАНЫУ** (әйек-һаҡмар) *ҡ.* эс бошоу — *грустить.* Ул завуннанып утыра

**ЗАДАН** (ҡариҙел) *и.* йәшник умарта — *дадан*

**ЗАДАПЛУК** (мейәс) *и.* аҫтар — *подкладка*

**ЗАЙА: ЗАЙА БЫЛЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* әрәм булыу — *пропасть зря.* Тирәзәм зайа былты (ҡариҙел)

**ЗАЙАҠЫЛ** (һаҡмар) *р.* ләйәҡыл — *вдрызг.* Зайаҡыл иҫергәнсе эсәме инде кеше

**ЗАЙАЛ: ЗАЙАЛ БУЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* мәхрүм булыу — *лишиться.* Аҡылдан зайал булып ҡуйҙы бахырсағың

**ЗАЙНАТЫП** (әй) *р.* моңло, яңғырауыҡлы итеп — *мелодично, звонко.* Зайнатыб йырҙаб йевәрә туғайным йәш саҡта

**ЗАЙЫҒА: ЗАЙЫҒА БУЛЫУ** (әйек-һаҡмар) *ҡ.* мәхрүм булыу — *лишиться.* Аҡылдан зайыға булдым шулайҙа ла. Зайыҡ булыу (арғаяш)

**ЗАЙЫМКА** (мейәс) *и.* революцияға тиклем ер һатып алып йәшәгән бәләкәй ауыл — *дореволюционная маленькая деревня с покупными земельными угодьями.* Күлде зайымкаға бирә торғайнылар

**ЗАЛАТКА** (эйек-һаҡмар) *и. заклад.* Бүркемде залатҡаға һалып торҙом

**ЗАЛАФКА** (мейәс) *и.* ҡаҙанлыҡ яғындағы урындыҡ — *нары на кухонной половине дома*

**ЗАЛЫМ** (эйек-һаҡмар) *и.* эләгет — *бурелом*

**ЗАМАЙ** (урта) *р.* нәҡ — *точно.* Замай йәйғоро төҫлө инте

**ЗАМАН I** (ырғыҙ) *и.* балыҡ тотоу өсөн файҙаланылған мәке — *прорубь для ловли рыб*

**ЗАМАН II** (гәйнә) *р.* бик тиҙ — *очень быстро.* Заман килеп йетә

**ЗАМАНДА** (гәйнә) *р.* бик тиҙ — *очень быстро.* Заманда ҡайтасызмы?

**ЗАМИР** (мейәс, урта, әй) *и.* һөҙөмтә — *результат.* Һунарҙың замиры төшә инде, дән һыҙҙай (әй)

**ЗАМЫСКА** (урта) *и.* йүкә ҡайыры менән көпләнгән тире ҡумта — *кожаный ларчик*

**ЗАҢ** (һаҡмар) *и.* иҫтәлек — *воспоминание.* Ҡырға сығып йәмне уахытта бутҡа бешереп ашау үҙләренә бер заң булған инде

**ЗАПУН** (гәйнә, мейәс, урта урал, әй) *и.* алъяпҡыс — *передник*

**ЗАРА** (урта) *и.* зарар — *вред.* Күҙгә зараһы тейҙе

**ЗАРАУАТ ИТЕҮ** (урта) *ҡ.* ыҙғышыу — *скандалить*

**ЗАРҘАУ** (кыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Ҡайғырыу — *горевать.* 2. (әй) Илау — *плакать*

**ЗАР ИТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* ҡайғырыу — *горевать*

**ЗАРҠЫЛЫУ** (кыҙыл) *ҡ.* ҡайғырыу — *горевать.* Зарҡылып йөрөй

**ЗАРЛАНДЫРЫП** (урта) *р.* һағышлы итеп — *тоскливо.* Бигерәк зарландырып йырлай ҙа инте Ғәфүр

**ЗАРУРАТ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Теләгән нәмә — *необходимое.* Заруратτан артыҡ күренә. *2.* р. сараһыҙҙан — *поневоле*

**ЗАРУТ** (арғаяш, мейәс, әй) *и.* эҫкерт — *скирд*

**ЗАРЫҒЫУ** (урта) *ҡ.* инәлеү — *умолять*

**ЗАСТУИН** (урта, әй) *с.* ҙур, мыҡты — *большой, здоровенный.* Шу хәҙәре застуин, зирәг ине ул ғарт (әй)

**ЗАТ** (кариҙел, туҡ-соран, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* кеше йәки әйбер — *личность или вещь.* Ырҙында бер зат та йуҡ (ырғыҙ). Күлдә бер зат бумаған (эйек-һаҡмар)

**ЗАТ-БОТ** (ҡыҙыл) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня*

**ЗАТ-ЗАМИР** (арғаяш) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня*

**ЗАТ-ЗӘҮЕР** (мейәс, урта) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня.* Зат-зәүеренә таратып биргән (урта). Шунан затызәүере ат йегеп килеп бөтә байҙығын, нәҫтә-ғараһын тейәп ҡыҙ күсеп китә (мейәс)

**ЗАТ ИТЕҮ** (мейәс, әй) *ҡ.* туған күреү — *считать родным*

**ЗАТ-ПИРУТ** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* алға-артҡа — *взад и вперед.* Келән йәйҙәүҙә булдыҡ. Зат-пирут күсебалып тиг йөрөй торғайныҡ (ҡыҙыл)

**ЗАТСЫЗ** (гәйнә) *с.* уңмаған, булдыҡһыҙ — *неспособный (о человеке)*

**ЗАТ ТА** (эйек-һаҡмар) *р.* һис тә — *нисколько.* Зат та сығып йөрөгән кеше түгелмен

**ЗАТТЫ** (көнсығыш диалект) *с.* 1. Нәҫел-нәсәпле — *имеющий родню (о человеке).* 2. (әй) *и.* гел ир бала тапҡан ҡатын — *женщина, всегда рожающая мальчика*

**ЗАТТЫҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* туғанлыҡ — *родство.* Аның хатынының беҙгә заттығы бар

**ЗАТЫҠАЙ** (мейәс) *и.* затына тартҡан бала — *ребенок, похожий на свой род.* Затыҡай, кит шул хәҙәре лә тартмаҫ затына

**ЗАТ-УТ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня.* Зат-утыбыҙ әйбәт беҙҙең (мейәс)

**ЗАТҺЫҘ-БОТҺОҘ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* нәҫелнәсәпһеҙ — *безродный (о человеке)*

**ЗАУАЛ** (һаҡмар) *и.* афәт — *бедствие.* Бер зауал булған ахыры у ҡоромаға, ҡорой бит ағас

**ЗАУАТ** (төньяҡ-көнбайыш) *и. завод.* Зауыт (урта урал, һаҡмар). Зауат мында йаҡын ул (гәйнә)

**ЗАУ: ЗАУ КҮРЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һоҡланып ҡарау — *любоваться.* Бала-саға у мәлдә машинаны зау күреп тора

**ЗАУЛАШЫУ** (урта) *ҡ.* зауыҡ итеү — *загореться желанием*

**ЗАУЫҒЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Ябығыу, насарайыу —*похудеть.* 2. Ҡайғырыу — *горевать.* Шулай бик зауыҡтым мынта

**ЗАҺИЛ** (әй) *с.* уҫал, яһил — *злой (о человеке).* Заһил уаҡ-төйәг өсөн тоношоп бара

**ЗЕБӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һебә — *ложное ребро*

**ЗЕВЕРҘӘТЕҮ** (урта) *ҡ.* ҡыҙҙырыу, тиргәү — *задать жару.* Апайым бөтәбеҙҙе лә зеверҙәтеп ташлай ул

**ЗЕКӘНБАШ, ЗИКӘНБАШ** (гәйнә) *и.* екән башы — *головка рогоза*

**ЗЕЛҒАРАТАШ** (һаҡмар) *с.* ауыр — *тяжелый.* Торғаны бер зелғараташ, у нимештәп аны күтәреп аҙаптанаһың?

**ЗЕЛПЕ** (дим, гәйнә, урта урал) *и.* оҫкат — *бересклет*

**ЗЕЛПЕҘЕ** (дим) *и.* эт муйылының бер төрө — *разновидность крушины*

**ЗЕЛТЕРӘНЕҮ** (мейәс) *ҡ.* дерелдәү — *мелко дрожать (о человеке)*

**ЗЕЛФӘРӘ, ЗЕЛФӘРӘМӘ** (дим) *р.* селпәрәмә — *вдребезги*

**ЗЕМЕЛЕЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ЗЕН-ЗӘХМӘТ** (гәйнә) *и.* ен — *бес.* Жин-зәхмәт (урта урал)

**ЗЕННЕ** (гәйнә) *с.* енле — *сумасбродный*

**ЗЕҢГЕ** (гәйнә) *и.* үҫемлек сәнскәге — *игла колючих растений*

**ЗЕҢГЕР I** (арғаяш) *и.* тубыҡ ҡапҡасы — *коленная чашка*

**ЗЕҢГЕР, ЗЕҢКЕР II** (урта) *и.* шөңгөр — *бубенец*

**ЗЕҢКЕТЕҮ** (урта) *ҡ.* олоу — *выть (о ветре).* Ҡарҙы уйнатып әсе тауыш сығарып зеңкетебөрә һепертмә буран

**ЗЕР** (ырғыҙ) *и.* ер — *земля.* Һыйырҙы зергә таҡап бәйләмә, муйыны аҫтына гилеп йатыр

**ЗЕРКӘНДӘК** (урта урал, әй) *и.* ҡыҙыу кеше — *вспыльчивый человек*

**ЗЕРКӘНДӘТЕП: ЗЕРКӘНДӘТЕП СЫҒАРЫУ** (мейәс, әй) *к.* елтерәтеп сығарыу — *вышвырнуть, выгнать (грубо).* Иҫәр, ҡыҙыу ул. Зеркәндәтеп сығарып йебәрер буркылдап йөрөмәгеҙ тип (мейәс)

**ЗЕРКӘНДӘҮ** (ҡыҙыл, әй) *к.* 1. Ҡыҙыу — *разгорячиться.* Зеркәннәү, зеркәндәү (урта урал). Зеркәндәп нимәкәй эштәгәнен дә белмәй (әй). 2. Ашығыу — *спешить.* Зеркәндәп ней алғанын, ней һалғанын да белмәй (әй). 3. (ырғыҙ) Биҙрәү — *чувствовать отвращение*

**ЗЕРӘН** (гәйнә) *с.* уҫал — *злой.* Кешегә зерән ул

**ЗИЙЫЛЫУ** (гәйнә) *к.* йыйылыу — *собираться*

**ЗИЙЫРЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *к.* йыйырсыҡ — *морщина*

**ЗИЙЫШТЫРЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *к.* йыйыштырыу — *убирать*

**ЗИКӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* екән — *рогоз*

**ЗИЛ I** (төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ) *и.* ел — *ветер.* Иртәгә ҙә зил булыр микән? Жил (урта урал, әй) Жилфер-жилфер жилдәр иҫә (әй)

**ЗИЛ II** (урта) *и.* йыл — *год*

**ЗИЛАЛАЙҒА** (туҡ-соран, ырғыҙ, әйек-һаҡмар) *р.* бушҡа — *напрасно.* Ул ней, уҡырға керә алмаған, зилалайға йөрөп ҡайтҡан (ырғыҙ)

**ЗИЛӘН** (урта) *и.* елән — *зилян*

**ЗИМ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* шыя — *шуга.* Зим килә. Зин (гәйнә)

**ЗИМ II: ЗИМ ИТ** (гәйнә) *и.* һум ит — *филе.* Бөгөн генә зим ит алып килдем әле

**ЗИМ III** (гәйнә) *с.* тос — *увесистый.* Зим май

**ЗИМОРЛАНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *к.* йомарланыу — *скататься.* Зиморланғаны бер шәптә үсеп китте

**ЗИНАЗА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йыназа — *ритуал погребальной молитвы*

**ЗИҢГӘ** (гәйнә, дим, ырғыҙ) *и.* еңгә — *старшая сноха*

**ЗИҢГӘМӨҢКИР** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* тыңлауһыҙ — *непослушный.* Зиңгәмөңкир кеше ул Ҙакир

**ЗИҢГӘСӘЙ, ЗӘҢГӘСӘЙ** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* еңгәсәй — *солдатик*

**ЗИҢЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *к.* еңеү — *побеждать.* Жиңеү (урта урал)

**ЗИҢКӘ, ЗӘҢГӘ** (урта) *и.* зәңге — *цинга*

**ЗИР** (һаҡмар) *и.* уҡа — *позумент.* Ситегемдең зире бөткән

**ЗИРАТ** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар, әй) *и.* зыярат — *кладбище.* Йулай йеҙнәй әйтә ул бер батыр зираты ул тей (һаҡмар). Зийәрәт (гәйнә)

**ЗИРГӘК** (дим, ҡыҙыл, урта, әйек-һаҡмар) *с.* зирәк — *смышленый.* Беҙҙең Ғәли бик зиргәк балаға оҡшай (һаҡмар)

**ЗИРГӘКЛЕК** (урта) *и.* зирәклек — *смышленость.* Зиргәклегем йуҡ, тиҙ онотам

**ЗИРЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ерек — *ольха.* Әйберләр зиреқ астында йата

**ЗИР-ЗӘВӘР: ЗИР-ЗӘВӘР КИЛЕҮ** (әй) *к.* ҡапыл ҡыҙып китеү — *вспылить.* Зир-зәвәр гилеп сыҡты ла гитте

**ЗИРЛЕ** (һаҡмар) *с.* уҡалы — *украшенный позументом*

**ЗИРӘБӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәрәбә — *жребий.* Зирәбә сикертеп уйный торғанейек

**ЗИТ: ЗИТҠА ТЕЙЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *к.* теңкәгә тейеү — *надоедать.* Был һүҙ (ҡурҡаҡ тигән) Ҡолсобайҙың зитына тейҙе (урта)

**ЗИТЬЫҘ** (ҡыҙыл) *с.* моңһоҙ — *беспечный.* Ә Нәфисәһе — бешмәгән, бигерәк боламыҡ. Үҙ күләгәһенән үҙе ҡурҡа. Шул тиклем дә зитһыҙ кеше булыр икән!

**ЗИҺЫН** (ҡыҙыл, урта, әйек-һаҡмар) *и.* зиһен — *память.* Зиһыннарым бөттө күп уйлап (әйек-һаҡмар). Зиһан (дим)

**ЗМИХ** (һаҡмар) *и.* эт ҡарағаты — *паслен черный*

**ЗОБАН ҠАБЫРҒА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һебә — *ложное ребро*

**ЗОР, ЗУР** (арғаяш, әй) *с.* бик ҙур — *очень большой.* Тырыша туғас зор кәбән һалып ҡуйҙыҡ (әй). Зур (мейәс)

**ЗӨБӘ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һебә — *ложное ребро*

**ЗӨБӘ II** (урта) *и.* эт ҡыуалау ымлығы — *междометие отгона собаки.* Сәбә (урта), себә (әйек-һаҡмар), себә, сөбә (әй)

**ЗӨГӘЙ** (әй) *и.* эт балығы — *вьюн*

**ЗӨЛФӘРӘ, ЗӨЛФӘРӘМӘ, ЗӨЛПӘРӘМӘ** (урта, әйек) *р.* селпәрәмә — *вдребезги.* Тәҙрәбеҙ зөлфәрәмә гилеп ыуалды (урта). Зөлфәрәкән (ырғыҙ)

**ЗӨМБӘЙ** (ҡыҙыл) *и.* соңғол — *омут.* Сөңгөл (әй)

**ЗӨҺӨЛДӨК** (әй) *и.* этлек — *подлость.* Гел генә зөһөлдөк уйҙай

**ЗУМТИК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* киң балитәк — *широкая оборка*

**ЗУР** (мейәс) *р., h.* күп — *много.* Иген зур шул хәҙер

**ЗУРИНӘЙ, ЗУРНӘЙ, ЗУРӘҢКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Өләсәй — *бабушка.* 2. (кариҙел) Әсәйҙең әсәһе — *бабушка со стороны матери.* 3. (төньяҡ-көнбайыш) Атайҙың еңгәләренә өндәшеү һүҙе — *слово обращения к супругам старших братьев отца*

**ЗУРӘБЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ата-әсәнән өлкән ҡәрҙәш ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе — *слово обращения к женщине-родственнице старше родителей*

**ЗУРӘТӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Олатай — *дедушка.* 2. Атайҙың бер туған ағаларына өндәшеү һүҙе — *слово обращения к старшим братьям отца.* 3. Иренең бер туған ағаларына өндәшеү һүҙе — *слово-обращения к старшим братьям мужа*

**ЗҮМГӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* түңгәк — *кочка*

**ЗЫБАНЫЙ, ЗОБАНЫЙ** (дим, кариҙел) *с.* 1. Уҫал — *злой.* 2. *и.* дошман — *враг*

**ЗЫБАНЫЙ ҠУТАРЫУ** (урта) *к.* пыр туҙҙырыу — *разнести в пух и в прах.* Зыбаный ҡутарып әрләп китә

**ЗЫБАНЫЙСА** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* дошмандарса — *враждебно*

**ЗЫВЫН** (урта) *и.* май бешә торған көбө — *жбан*

**ЗЫЙАНДАШ** (урта) *и.* 1. Ен — *бес.* 2. (ҡыҙыл, урта, ырғыҙ, әй) Быума — *припадок*

**ЗЫЙАНДАШЛЫ** (урта) *с.* енле — *бесноватый (психически ненормальный)*

**ЗЫЙАН-ЗАУҠА** (урта) *и.* 1. Бәлә-ҡаза — *несчастье, беда.* 2. Ҡаза — *урон*

**ЗЫЙАН-ЗӘҮРӘТ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* бәләҡаза — *несчастье, беда.* Һис зыйан-зәүрәтһеҙ йөрөткән айғыр әле иһә, йылҡыларҙы тыңлата алмайынса, улар тирәһендә йарһып саба (эйек-һаҡмар)

**ЗЫЙАСЫҘ** (Курган өлкәһе, Сафакүл ауылы) *с.* ғәйепһеҙ — *безвинный.* Бер зыйасыҙ йебәрҙеләр баламды

**ЗЫЙҘАТА ҪУҒЫП** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* бик тиҙ — *очень быстро.* Зыйҙата ҫуғып сығып китте

**ЗЫЙТ** (һаҡмар) *р.* ҡаршы, тиҫкәре — *наперекор.* Ул зыйтына йөрөй, кеше ыңғайына бармай

**ЗЫЙТЫМ** (һаҡмар) *и.* бала суртан — *щуренок*

**ЗЫЙЫРСЫҠ** (гәйнә) *и.* сыйырсыҡ — *скворец*

**ЗЫЙЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* тиҙ генә китеп барыу — *уходить очень быстро.* Зыйыу (туҡ-соран)

**ЗЫҠ КИЛЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* шаулашыу — *расшуметься*

**ЗЫҠМА** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Зыҡма хәлдән тайдым

**ЗЫҠ ТӨШӨҮ** (ҡариҙел, урта урал) *ҡ.* зыҡ ҡубыу — *расшуметься.* Күмәкләшеп зыҡ төшкәннәр (ҡариҙел)

**ЗЫҠЫ** (арғаяш, дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Бәҫ — *иней.* 2. (арғаяш) Йоморо ҡар — *зернистый снег.* 3. (мейәс) *с.* һыҡы — *не скользкий, затрудняющий скольжение (о зимней дороге в очень морозные дни).* Зыҡы йул

**ЗЫЛФАРАҺЫ ҠАЛМАУ** (урта) *ҡ.* селпәрәмә килеү — *разбиться вдребезги*

**ЗЫМБЫРЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* земберләү — *чувствовать мурашки на теле.* Эй йырлай, бөкөл тәннәрендә иретеп, зымбырлатып йебәрә. Зымбырҙау (ҡыҙыл, урта, әй). Дән зымбырҙай ирәмән үләне ашаһың (ҡыҙыл)

**ЗЫМЗЫЙА, ЗЫБЗЫЙА** (һаҡмар, ырғыҙ) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Саҙиҡ ҡарттың улы һуғышта зымзыйа йуҡ булды (ырғыҙ)

**ЗЫМЗЫЙА ИТЕҮ** (дим) *ҡ.* әйберҙәрҙе быраҡтырып бөтөү — *разбрасывать вещи*

**ЗЫҢҒА** (мейәс) *и.* сыңға — *кольцо (с ушком).* Йеҙ зыңғалы муртай буған элек

**ЗЫҢҒАЛАҠ** (мейәс) *и.* ҡыңғырау сәскә — *колокольчик*

**ЗЫҢҒЫР** (мейәс) *и.* сыңғырлаҡ — *звонок*

**ЗЫҢҒЫРАУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* зыңлау — *звенеть, лязгать (о металле).* Ҡумыҙ тауышы зыңғырап тора

**ЗЫҢҠЫЙ: ЗЫҢҠЫЙ КИЛЕП БӘРЕЛЕҮ** (урта) *ҡ.* баш менән шаңҡығанса бәрелеү — *оглушительно удариться головой.* Башы туң йергә зыңҡый килеп бәрелгәс, аның йөрәк-бауырҙары өҙөлөп киткәндәй булды. Зыңҡ итеү, зыңҡ итеп ҡалыу, зыңҡылдау (ҡыҙыл, төньяҡ-көнсығыш, урта). Башыма һайғау төшкәйне, зыңҡ итеп ҡалды (ҡыҙыл)

**ЗЫҢҠЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* зыңлау — *звенеть (о шпорах).* Ҡыҫҡа һәм аңлайышлы командалар ишетелде. Йаҡында ғына шпорҙар зыңҡылданы

**ЗЫҢҠЫТА: ЗЫҢҠЫТА, ЗӘҢКЕТӘ ҺУҒЫУ** (урта) *ҡ.* шаңҡытҡанса һуғыу — *оглушительно ударить;* зыңҡыта баҫыу *(ныҡ баҫыу)* — *наступать сильно, с шумом;* ◊ зыңҡытып тороу *(һәйбәт йәшәү)* — *жить хорошо.* Зыңҡытып торған әбей ул

**ЗЫҢҠЫЛТЫҠ: ЗЫҢҠЫЛТЫҒЫН ОЙОТОУ** (урта) *ҡ.* кәрәген биреү — *делать от души.* Буйтым ырғының, зыңҡылтығын ойоттоң

**ЗЫҢҠЫТЫП** (әй) *р.* ныҡ итеп — *крепко.* Батинҡандың бауын зыңҡытып бәйҙәп ҡуйғаһың да

**ЗЫҢҠЫТЫУ** (урта) *ҡ.* һиңкетеү — *трясти.* Башымды зыңҡытты ҡаҕ арбала

**ЗЫҢҠЫРЛАУ** (урта) *ҡ.* сыңғырлау — *звенеть (о бубенчиках)*

**ЗЫР I** (урта) *и.* һыр — *резьба (по дереву)*

**ЗЫР II** (дим) *и.* йыр — *песня*

**ЗЫРҘАТА: ЗЫРҘАТА КЕШӘНӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* көслө тауыш сығарып кешнәү — *заржать, издавая сильный звук из груди (о лошади).* Аһау бейә зырҙата кешәнәб йәрҙе

**ЗЫРЛЫ-ЗЫРЛЫ** (дим, урта) *с.* һырлы-һырлы — *узорчатый*

**ЗЫРТУПЫЙ** (ырғыҙ) *с.* егәрле — *проворный*

**ЗЫР: ЗЫР ТҮҢӘРӘК** (ҡыҙыл, әй) *р.* тотош, әйләндереп — *сплошь, кругом.* Зыр түңәрәк тәңкә баһа торғайнылар (ҡыҙыл). Зыр горогом (ҡыҙыл, мейәс). Киртмәсте уҡа һалдыҡ йағанан зыр горогом уратып (мейәс)

**ЗЫУ-ҒӘЛӘМӘТ КИЛЕҮ** (урта) *ҡ.* бөтөрөлөп тороу — *вертеться волчком.* Мозафар, бәхетле йылмайып, әсәһенең зыу-ғәләмәт килеүенә ҡарап тора ине

**ЗЫУҘАУ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* 1. Шаулау — *шуметь.* Зыуҙамағыҙ әле, һүҙ алыштырмайһығыҙ (мейәс). Зыулау (дим, урта). 2. (ҡыҙыл, мейәс, әй) Асыуланыу — *сердиться.* Көйөп зыуҙап китәм эштәре алға бармағанҕа (мейәс)

**ЗЫУЛАТЫП** (урта, һаҡмар) *р.* кәрәген биреп — *как следует.* Зыулатып туй үткәрҙек

**ЗЫУ ТӨШӨҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* шаулау — *шуметь*

**ЗЫУЫЛДЫҠ** (һаҡмар) *и.* шау-шыу — *шум-гам*

**ЗӘБ-ЗӘБ** (ҡыҙыл, урта) *ы.* быҙау саҡырыу ымлығы — *междометие зова теленка.* Зәп-зәп (мейәс). Зәп-зәп-зәү (дим, ҡыҙыл, мейәс)

**ЗӘҒИФ** (дим) *р.* ярлы — *бедно.* Ағас йағы зәғиф беҙҙә

**ЗӘҒИФ-ЗӘҢКЕЙ** (һаҡмар) *с.* зәғиф-маҙар — *искалеченный.* Балам әлдә теүәл, зәғиф-зәңкей булмаған

**ЗӘҒИФТӘЛЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* зәғифләнеү — *калечиться*

**ЗӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәй — *лето.* Сезне зәй буйы көттөк. Жәй (урта урал)

**ЗӘЙНӘПЕЧИН, ЗӘҢНӘПЕЧИН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* умырзая — *горицвет.* Зәйнәпечин чыҡкас терелермен әле (гәйнә)

**ЗӘЙРӘ: ЗӘЙРӘ КИТЕҮ** (әй) *ҡ.* бик ныҡ ҡурҡыу — *бояться сильно.* Бөтөн зәйрәм гитте

**ЗӘЙХАР** (урта урал) *и.* ялағай — *зарница*

**ЗӘЛ I** (ҡыҙыл) *р.* йәл — *жаль*

**ЗӘЛ II** (әй) *и.* һөҙөмтә — *результат.* Шул һыуыҡтарҙың зәле төшөп утырам инде айаҡһыҙ

**ЗӘЛЕШ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* аҡтамыр — *пырей*

**ЗӘЛПӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ялпаҡ — *плоский*

**ЗӘЛӘТЕР** (урта) *и.* аҡтамыр — *пырей*

**ЗӘЛӘТӘПЕЧИН** (гәйнә) *и.* аҡтамыр — *пырей*

**ЗӘМ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Сәм — *самолюбие.* 2. (һаҡмар) Намыҫ — *честь.* Кешенең зәменә тейергә бик шәпһең

**ЗӘМБӘЛӘ** (мейәс) *и.* 1. *Ревматизм.* 2. Зәңге — *цинга.* Зәңгәлә (ҡыҙыл, мейәс)

**ЗӘМБӨРӘ, ЗӘМБӘЙ** (мейәс) *и.* тирәс — *обечайка (у сита и т.д.)*

**ЗӘМЗӘМ ЙАМҒЫРЫ** (мейәс) *и.* ләйсән ямғыры — *первый весенний дождь*

**ЗӘМЗӘМ РӘНЙЕҮЕ** (урта) *и.* зәңге — *цинга*

**ЗӘМЗӘ I** (әй) *и.* сәрҙә — *сныть*

**ЗӘМЗӘ II** (эйек-һаҡмар) *и.* биҙәк — *узор.* Зәмзәле ситек

**ЗӘМӘНӘ** (гәйнә) *и.* заман — *время.* Безнең зәмәнәдә уҡыу былмады. ◊ Зәмәнә ҡубыу (төньяҡ-көнбайыш) шаулашыу — *расшуметься.* Замана ҡубыу (урта урал)

**ЗӘҢГӘЛӘ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, һаҡмар) *и.* зәңге — *цинга.* Зәңгәрә (арғаяш)

**ЗӘҢГӘР: ЗӘҢГӘР БАШМАҠ** (арғаяш) *и.* йәш ярымлыҡ башмаҡ — *полуторогодовалая телка*

**ЗӘҢГӘР БУҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* металл ҡалдығы — *отходы руды*

**ЗӘҢГӘРҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* миҙгелһеҙ бәрәсләү — *окотиться не по сезону (об овцах, козах и т.д.)*

**ЗӘҢГӘСӘЙ** (һаҡмар) *и.* еңгәсәй — *солдатик*

**ЗӘҢКЕ** (мейәс, урта) *и.* 1. Зәңге — *цинга.* 2. (мейәс) Ревматизм

**ЗӘҢКЕЙ I** (ҡариҙел, урта) *с.* күтәрелеп сығып торған — *выпирающий.* Зәңкей башлы ҡорт (ҡариҙел). Зәңкей эйәк (урта). Зәңке-зәңке-зәңке йылан, зәңкей башты ҡара йылан (әй) *(Йылан арбау һамағынан)*

**ЗӘҢКЕЙ II** (эйек-һаҡмар) *с.* аҫтыртын уҫал — *зловредный*

**ЗӘҢКЕҮ** (урта, әй) *ҡ.* өшөүҙән әрнеп һыҙлау — *почувствовать жгучую боль от холода.* Ҡулым зәңкеп китте

**ЗӘҢКӘЛТӘЙ** (мейәс) *и.* сатлама һыуыҡ — *трескучий мороз*

**ЗӘҢКӘРҘӘҮ** (урта) *и.* тимер купоросы — *железный купорос*

**ЗӘҢНӘ** (урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Тән һыҙлап ауырыу — *ревматизм.* 2. Зәңгене дауалауға ҡулланыла торған үлән — *лекарственная трава от цинги.* 3. (дим, әй) Зәңге — *цинга*

**ЗӘҢНӘ ҮЛӘНЕ** (дим, ҡариҙел) *и.* сәрҙә — *сныть*

**ЗӘР I** (һаҡмар) *и.* 1. Йөк — *обуза.* Бер зәр булып йатаһың, ҡартайғас. 2. Бәлә — *беда.* Башыңа зәр төшмәгән шул әле

**ЗӘР II** (ҡыҙыл) *и.* елбәҙәк — *блестки*

**ЗӘРҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* елбәҙәк менән биҙәп сигеү — *вышить, украшая блестками*

**ЗӘР, ЗӘӘР** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* зәһәр — *замечательный.* Бигерәк зәр эйе печәнегез (гәйнә)

**ЗӘРӘ** (көнсығыш диалект, урта) *р.* 1. Бик — *очень.* Зәрә шайарыбөрөмә, ойат булыр (урта). 2. (урта) Һәр ваҡыт — *постоянно.* Зәрә арба белән йөрөмәгәс... Ҙәрә, ҙәрә лә (дим)

**ЗӘРӘТӘ** (гәйнә) *и.* сәрҙә — *сныть*

**ЗӘРӘХӘТ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* йәрәхәт — *рана*

**ЗӘРРӘ** (әй) *и.* ваҡ мәрйен — *мелкий коралл*

**ЗӘРРӘ: ЗӘРРӘ ҠӘҘӘРЕ** (һаҡмар) *р.* әҙ генә — *чуточку.* Зәррә ҡәҙәре лә йарҙамың теймәй бит һинең. Зәррә тиклем (туҡ-соран). Һеҙ эҙләгән кешенән зәррә тиклем дә айырылмай, ҡарағыҙ

**ЗӘРТ ИТЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* йөҙәтеү — *докучать.* Ниғмәтйән былтыр ҙа зәрт итте, өс бәпкәне үтерҙе

**ЗӘҮ-ЗӘҮ-ЗӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ы.* быҙау саҡырыу ымлығы — *междометие зова теленка*

**ЗӘҮЕК** (гәйнә) *р.* яҡшы — *хорошо*

**ЗӘҮКӘЛӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* быҙау саҡырыу — *звать теленка*

**ЗӘҮЕР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* дәүер — *период*

**ЗӘҮРЕ** (һаҡмар) *и.* ара — *род*

**ЗӘҮӘ** (һаҡмар) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

**ЗӘХМӘТ** (һаҡмар) *и.* яра — *рана.* Уң айағында тимерҙән зәхмәте бар ине

**ЗӘҺЕҮ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар) *р.* 1. Бик шәп — *прекрасно.* Зәһеү килеп сыҡты был эш (һаҡмар) 2. (туҡ-соран) *с.* сыбар — *пестрый.* Зәһеү күлмәк кейгән

**ЗӘҺӘР** (дим, ҡыҙыл, урта, әй) *р.* 1. Бик шәп — *прекрасно.* Ҡыҙын зәһәр итеп кейендергән Сафа (урта). Элек беҙнең йул зәһәрейе ул (дим). 2. (урта, урта урал, һаҡмар) *с.* үткер — *бойкий.* Зәһәр кеше бирешәме ней инде, йетмәгән йере, төртөлмәгән төйәге йуҡ (урта урал). Зәһәр генә әбей ине ул (урта). 3. (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *к.* бик — *очень.* Зәһәр матур йөрөп йатайе (гәйнә). 4. (урта урал) *с.* дан — *замечательный.* Зәһәр кеше ул Сабир

# И

**ИБЕЛЕСЛӘНЕҮ** (эйек) *ҡ.* ялағайланыу — *подхалимничать, лицемерить*

**ИБЕТ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта) *к.* эйе бит — *да ведь.* Һәйбәт кешеләр була икән, ибет, әсәй (урта). Ибит (дим, ҡариҙел, урта, һаҡмар). Туйлыҡҡа бер туса һыйыр бирҙек ибит (һаҡмар)

**ИБӘ: ИБӘ ҠЫЛЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* хәйер биреү — *дать милостыню, подаяние*

**ИБӘС I** (урта) *и.* сабата ҡалыбының һабы — *выступ задника колодки лаптей в форме ручки*

**ИБӘС II** (урта) *и.* 1. Иҫке-моҫҡо — *ветошь.* 2. Ашамлыҡ ҡалдығы — *объедки*

**ИБӘТ: ИБӘТКӘ КИЛЕҮ** (әй) *ҡ.* ипләнеү — *исправляться (о поведении).* Лапҡытып туҡмайым, шунан ибәткә килә әҙерәк

**ИБӘТӘЙҺЕҘ** (ырғыҙ) *р.* 1. Шыҡһыҙ — *невзрачно.* Ауылдағы өйләр ҙә ибәтәйһеҙ булып ҡалған, урам бупбуш. 2. (әй) Бик — *очень.* Ибәтәйһеҙ күп

**ИГЕ I** (төньяҡ-көнбайыш) *һ.* ике — *два.* Иге генә балам булды (ҡариҙел)

**ИГЕ II** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *р.* 1. Ярай — *пойдет.* Йуҡта иге инде (һаҡмар). 2. (ҡыҙыл) Яҡшы — *лучше.* Өйрәнгән ҡатын өйрәнмәгән ирҙән игерәк була тейҙәр

**ИГЕЛӘНЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* икеләнеү — *сомневаться*

**ИГЕН** (арғаяш, мейәс) *и.* 1. Баҫыу — *нива.* Картуф сасмағабыҙ, игенен кисә генә һөрҙөләр (мейәс). 2. (көнсығыш диалект) Ашлыҡ — *зерно*

**ИГЕННЕК** (һаҡмар) *и.* игенселек — *земледелие.* Башҡорт халҡы игеннек, маллыҡ белән көн иткән

**ИГЕНСЕ** (төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ көнсығыш, урта) *һ.* 1. Икенсе — *второй.* 2. *с.* башҡа, бүтән — *другой*

**ИГЕНСЕЛ** (көнсығыш диалект) *с.* ашлыҡ сәсеүсән — *хлебопашеский.* Алар игенсел булдылар (әй)

**ИГЕНСЕЛЕКТӘН** (мейәс) *һ.* икенсенән — *во-вторых*

**ИГЕНСЕЛӘНЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *ҡ.* үҙгәреү — *измениться.* Ана нисек үҫеп игенселәнеп киткән (урта)

**ИГЕН ТӨБӨ** (ҡыҙыл) *и.* ҡамыл — *стерня.* Игентөп (урта)

**ИГЕН ТУРҒАЙЫ** (арғаяш, мейәс) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**ИГЕН ТҮҘЕ** (эйек) *и.* ҡамыл — *стерня*

**ИГЕРЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* иләү — *прясть.* Жеп игерләргә беләсеңме?

**ИГЕРМАУ, ИҒЫРМАУ** (ҡыҙыл) *и.* үңербау — *этн. завязка, тесемка (у воротника рубахи)*

**ИГЕСЕ** (гәйнә) *һ.* икеһе — *двое*

**ИГЕҮ** (гәйнә) *и.* игәү — *напильник.* Тутыҡҡан игеү табыбалдым

**ИГЕ-ҺАҒА: ИГЕ-ҺАҒА БУЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* бәлиғ булыу — *стать совершеннолетним.* Хәҙер инде иге-һаға булдың. Үҙем иге-һаға буғас ҡына көн күрҙем

**ИГӘЛӘШТЕРЕҮ** (әй) *ҡ.* эйәләштереү — *приучать.* Балаларҙы игәләштергәс киләләр

**ИГӘР** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ялҡау — *ленивый*

**ИГӘРЕШЕҮ** (ҡариҙел, урта урал, әй) *ҡ.* 1. Һүҙ көрәштереү — *спорить.* 2. Шаяртыу — *подшучивать.* 3. Талашыу — *ссориться.* 4. Үсекләшеү — *дразниться*

**ИГӘТ** (урта) *и.* эйәрсән — *пасынок, падчерица*

**ИГӘҮҒОЙРОҠ** (ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, урта) *и.* ҡомаҡ — *крыса*

**ИГӘҮҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* игәү — *точить*

**ИГӘҮ ЙАМҒЫР** (ҡыҙыл) *и.* быҫҡаҡ ямғыр — *накрапывающий дождь*

**ИГӘШЕҮ** (арғаяш, ҡариҙел, мейәс) *ҡ.* 1. Һүҙ көрәштереү — *спорить.* 2. (һаҡмар) Үсекләшеү — *дразниться.* 3. (һаҡмар) Ҡарышыу — *противиться (кому).* Мынауындай балларына тиклем игәшмә тип паралар (һаҡмар). 4. (әй) Теңкәгә тейеү — *докучать*

**ИҒЫРМАУ** (мейәс) *и.* үңербау — *этн. завязка, тесемка (у воротника рубахи)*

**ИҒӘНӘТ I** (эйек) *и.* ярҙам — *помощь.* Бер иғәнәт иткәндән ни буған инде

**ИҒӘНӘТ II** (урта) *с.* аҫтыртын, уҫал — *скрытный, зловредный.* Шу хәҙәре иғәнәт, шу хәҙәре боҙоҡ ине

**ИҒӘНӘТЛЕ** (һаҡмар, ырғыҙ) *с.* итәғәтле — *вежливый, обходительный.* Иғәнәтле кеше ул

**ИҒӘНӘТҺЕҘ** (һаҡмар) *с.* изгелекһеҙ — *неблагодарный.* Шул иғәнәтһеҙгә ышанаһыңмы инде?

**ИҒӘНӘҺЕҘ** (мейәс) *с.* мөхәббәтһеҙ — *несимпатичный*

**ИДЕЛ, ИҘЕЛ, ИЗЕЛ** (ырғыҙ) *и.* асыл — *суть.* Изелен аңларға тырыша бала. Һеҙҙең үпкәләшеүҙең изеле ни һуң?

**ИҘА** (дим, әй) *и.* ыҙа — *мучение.* Беҙ күргән иҙаны

**ИҘАЛАНЫУ** (әй) *ҡ.* ыҙаланыу — *мучиться.* Шул түмәрҙе йарам тип иҙаланыпөттөм

**ИҘАЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *ҡ.* ыҙалау — *мучить.* Күп әҙәмне иҙалай инде (урта)

**ИҘА СИГЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш, урта, әй) *ҡ.* ыҙалау — *мучить*

**ИҘГӘЛӘК** (ҡыҙыл) *с.* 1. Илгәҙәк — *приветливый, ласковый.* 2. Тартыныусан — *застенчивый*

**ИҘЕЛМӘ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Телбешмә — *ящур.* Иҙылма (һаҡмар). 2. (ҡыҙыл) Тояҡ иҙелмәһе — *понарициӣ*

**ИҘЕМ** (урта) *и.* исем — *имя.* Кеше араһында иҙем һатып йөрөмә инте

**ИҘЕМ ИТЕҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* исем ҡушыу — *дать имя*

**ИҘЕРӘЙЕҮ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* асыуланыу — *сердиться.* Ниңә иҙерәйеп йөрөйһөң, нәмә килешмәне (ырғыҙ)

**ИҘЕҮ** (һаҡмар) *и.* ваҡ балитәк — *мелкая оборка*

**ИҘЕҮ ҠАПТАМАҺЫ** (ҡыҙыл, әй) *и.* иҙеү ҡапҡасы — *планка (рубашки)*

**ИҘЕҮЛӘҮ** (урта) *ҡ.* иҙеү һалыу — *пришить планку.* Күлмәкте иҙеүләп тектеләр. Иҙеүҙәү (мейәс)

**ИҘЕҮСЕ, ИҘЕҮСӘ** (дим) *и.* иҙеү — *нашивка из лент, тесьмы и монет вокруг прорези на груди женского платья*

**ИҘЕҮСӘ** (ырғыҙ, эйек) *и.* һаҡал — *женское нагрудное украшение из монет, кораллов и бисера*

**ИҘ-МИҘ** (арғаяш) *с.* аҡылға зәғиф — *ненормальный, слабоумный*

**ИҘМӘ** (эйек) *и.* зәңге — *цинга*

**ИҘРӘТКЕС** (урта) *с.* әлһерәткес — *утомительный.* Йәйге төн томра, иҙрәткес, шомло була

**ИҘЫЛЫУ, ИЗЫЛЫУ** (эйек) *ҡ.* 1. Иҙелеү — *преть (о ноге).* 2. (һаҡмар) Иҙелеү — *развариться.* Һалмаһы ла иҙылып бөткәндер инде

**ИҘЫРАУ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* иҙелеү, һытылыу — *помяться (о ягодах).* Йеләкте иҙырата баҫып бөткәннәр (урта)

**ИҘЫУ, ИЗЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* иҙеү, тапау — *раздавить.* Иҙып пөттө өйрәк бәпкәләрен

**ИҘӘНЖӘЙМӘ** (гәйнә, урта урал) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный половик.* Иҙән йәймәсе (төньяҡ-көнбайыш)

**ИҘӘН ҠЫРҒЫС** (эйек-һаҡмар) *и.* ҙур бысаҡ — *косарь (нож)*

**ИҘӘН ӨРҘӨГӨ** (арғаяш) *и.* иҙән урҙаһы — *половая балка.* Иҙән өрлөгө (дим, эйек), иҙән урҙаһы (ҡыҙыл), иҙән үрҙеге (салйоғот)

**ИҘӘН ТУЛАСЫ** (дим) *и.* иҙән йыуғысы — *половая тряпка*

**ИҘӘН ҺЫРҘАУ** (урта урал) *ҡ.* иҙән буяу — *красить пол.* Иҙәнде үҙем һырҙаным

**ИҘӘҮ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* бармаҡ йәки ҡул менән ымлап саҡырыу — *призывать, делая знаки пальцем или рукой.* Ағаһы аны бармаҡ иҙәп саҡырҙы: — Кил әле, йомошом бар (урта). — Һылыу, лафка ҡайҙа? Ҡыҙ ҡулын иҙәне: — Ана, тимер түбәле йорт (эйек-һаҡмар)

**ИҘӘР** (арғаяш) *с.* 1. Иҫәр — *глупый.* 2. *р.* бигерәк, үтә — *очень.* Иҙәр шәп

**ИЖАУ** (дим) *с.* иләк сүмес — *дуршлаг.* Ижәү (урта)

**ИЖДИҪАТ ИТЕҮ** (дим) *ҡ.* ҡайғыртыу — *заботиться.* Кешеләрнең иждиҫат итеүе лә кәрәк. Ижтиһат итеү (мейәс), иждиһат итеү (әй)

**ИЖДИҺАТТАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Күңел һалыу — *иметь расположение.* 2. (әй) Әҙерләү — *приготовить*

**ИЖДИҺАТТЫ** (арғаяш) *с.* 1. Күңел һалып эш итә торған — *работающий с душой.* 2. Тапҡыр, зирәк — *находчивый. 3. (әй)* Хәстәрлекле — *заботливый.* Иждиһатлы (дим, төньяҡ-көнбайыш). Минең атай иждиһатлы буған (дим). Издиһатлы (һаҡмар), иждиҫатлы (дим). 4. (төньяҡ-көнбайыш) Иғтибарлы — *внимательный*

**ИЖДИҺАТТЫҠ** (көнсығыш диалект) *и.* хәстәрлелек — *заботливость*

**ИЖНЫУА ТӨБӨ, ИЖНЫУАЛЫҠ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* ҡамыл — *стерня.* Ижнауа төбө (арғаяш)

**ИЖТИҺАТЛАМАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* хәстәрләмәү — *не позаботиться.* Тимер күпер салыуҙы ижтиһатламайсыҙ тиҙе

**ИЖӘБ ИТЕҮ** (урта) *ҡ.* никахҡа ризалыҡ биреү — *благословить на брак*

**ИЖӘБ УҠЫУ** (ҡариҙел, ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* никах уҡыу — *совершать религиозный обряд бракосочетания.* Уҡыу белгән бер олораҡ кеше ижәб уҡый (ҡыҙыл). Ижаб уҡыу (әй)

**ИЗАЛАУ** (мейәс) *ҡ.* ыҙалау — *мучить*

**ИЗГЕЛЕКСЕ** (арғаяш, салйоғот) *с.* изгелекле — *человечный, делающий добро*

**ИЗҒЫЛАУ** (эйек) *ҡ.* иҙгеләү — *помять*

**ИЗДИҺАТҺЫҘ** (һаҡмар) *с.* дәртһеҙ — *бездеятельный.* Ҡаһылай издиһатһыҙһың

**ИҘЕК** (дим, туҡ-соран, һаҡмар) *и.* 1. Яҙыу — *письмо.* Изек таныманым (дим). 2. Ижек — *слог.* Изекләбуҡып бөткәйне (һаҡмар)

**ИЗЕКЛӘП** (дим) *р.* берәмләп, ентекләп *(һанау, һөйләү)* — *подробно (считать, рассказывать).* Изекләп сыға Хәләп бабай.

**ИЗЕКӘЙ** (ырғыҙ) *и.* әжекәй — *досуха вываренный творог, чуть приправленный маслом и сахарным песком*

**ИҘЕМ I** (ҡариҙел) *и.* исем — *имя.* Баланың иземе сыкты. Балаға изем ҡушмағаннар әле

**ИЗЕМ II** (мейәс, урта, эйек, әй) *и.* сәбәп — *причина.* Изем буһа, тора (мейәс). Аға изем генә буһын (урта)

**ИҘЕМҺЕҘ I** (урта) *с.* изгелекһеҙ — *неблагодарный*

**ИЗЕМҺЕҘ II** (урта) *с.* исемһеҙ — *без имени, безымянный*

**ИЗЕН** (һаҡмар) *и.* ризалыҡ — *разрешение.* Һинән кем изен һорап тора, алдым да киттем

**ИЗЕРӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* иҙрәү — *раскиснуть, становиться вялым*

**ИЗЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* туҡмау — *побить.* Күгәртеп изәләр. Атаң кебек издереп торма инәңне?

**ИЗМӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* картуф буҡтаһы — *картофельное пюре.* Килең инде, измә ҡуйам бит (ҡариҙел)

**ИЗНИҒАМ** (мейәс) *с.* тыңлаусан — *послушный*

**ИЗРАТЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* иҙә баҫыу — *растоптать*

**ИЗЫЛМА** (эйек) *и.* телбешмә — *ящур*

**ИЗЫРАТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* иҙрәтеү — *расслабить, разморить*

**ИЗЫРАУ** (дим) *ҡ.* һыҙланыу — *ломота*

**ИЗӘҒӘЛӘШЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һүҙ көрәштереү — *препираться*

**ИЗӘЛЕНДӘ** (һаҡмар) *р.* ғүмеремдә лә, бер ҙә — *никогда.* Клубҡа мин изәлендә барған йуҡ. Изәлендә күрмәһәм дә ризамын

**ИЗӘН** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* иҙән — *пол*

**ИК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ек — *щель*

**ИКАРА: УЛ ИКАРАЛА** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, эйек-һаҡмар, әй) *р.* тиҙ арала — *быстренько.* Ул икарала нимәштәйһең? (ҡыҙыл)

**ИКЕ БАШТАН** (эйек-һаҡмар) *р.* барыбер — *все равно.* Ике баштан йылы мында

**ИКЕ ҒАЙТА** (әй) *р.* ике тапҡыр — *дважды.* Ҡулымды ике ғайта һабынданым да

**ИКЕ ҒАЙТЫУ** (урта) *ҡ.* барып ҡайтыу — *сходить, съездить (за день).* Ике ғайтыуға бик йыраҡ

**ИКЕ ҒУЛДЫ, ИКЕ ЙАҠТЫ** (арғаяш, салйоғот) *с.* ҡулы тик тормаған — *нечистый на руку, вороватый*

**ИКЕ ИҺТЕ** (ҡыҙыл) *с.* ваҡыты-ваҡыты менән аҡылы томаланыусан — *временами помутившийся разумом (человек).* Икиҫле (ҡариҙел, эйек-һаҡмар)

**ИКЕ ЙАҠЛАНЫУ** (дим) *ҡ.* юхаланыу — *подхалимничать*

**ИКЕ ЙАҠЛЫ ПӘКЕ** (дим) *и.* юха — *подхалим*

**ИКЕ ЙАНАШ** (мейәс) *с.* ҡуш — *парный*

**ИКЕ ЙАНАШ МЫЛТЫҠ** (арғаяш) *и.* ҡушкөбәк — *двухстволка*

**ИКЕ ЙАРЫШ** (урта) *р.* ике тапҡыр — *два раза*

**ИКЕҠОЙРОҠ** (дим) *и.* саталыҡойроҡ — *уховертка*

**ИКЕЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* иҫәрләнеү — *терять разум.* Икеләнеп сығып китеб үлгән ул ҡарсыҡ

**ИКЕСЕЛЕККӘ** (һаҡмар) *р.* икенсе тапҡырға — *вторично.* Икеселеккә килгәйне

**ИКЕНСЕ УРТА БАРМАҠ** (ҡыҙыл) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**ИКЕНТЕ КҮЛӘГӘСЕ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *с.* һонтор — *долговязый*

**ИКМӘК I** (дим) *и.* һитә — *перга, хлебина*

**ИКМӘК II** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* иген — *зерно.* Быйыл икмәк уңды (төньяҡ-көнбайыш). Ике центнер икмәк алып ҡайтырға ҡуштылар (минзәлә)

**ИКМӘК: ИКМӘК БАШЫ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* сүпрә — *закваска*

**ИКМӘКЧЕЛЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* игенселек — *земледелие*

**ИКЕ ТАУЫҠ, БЕР ӘТӘС** (эйек) *и.* йәшенмәк уйыны — *игра в прятки*

**ИКЕ ТЕҮӘЛ, БЕР ЙАЛАН** (ҡыҙыл) *и.* киндер һуҡҡанда ике тешкә икешәр, өсөнсөгә бер еп үткәреп һуғыу — *способ ткаческого льна, при котором на два «зуба» одевается две нитки, на третий одна.* Ике төгәй, бер йалан (әй)

**ИКМӘК-ТӨЙӨР** (арғаяш) *и.* ҡоро аҙыҡ — *сухомятка*

**ИКШЕҮ** (мейәс) *ҡ.* ҡыйшандау — *кокетничать*

**ИКШӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* иксәү — *лязгать (ножом, ножницами)*

**ИКШӘШЕҮ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* 1. Бәхәсләшеү — *спорить, препираться.* 2. (урта урал) Үсекләшеү — *дразниться*

**ИКӘРТӘ** (дим) *и.* ишек алды — *двор.* Ҫыйырың икәртәҙә тора

**ИКӘТӘ** (һаҡмар) *и.* 1. Ике туған ҡусты — *двоюродный брат.* Икәтәнде эйәртеп әсәйләргә бар. 2. Ҡусты — *младший брат.* Энем, мыртыйым, икәтәм тейләр ҙә ғуйалар үҙенән кесеһен

**ИКӘҮ-АРА** (дим, туҡ-соран, урта) *р.* үҙ-ара — *между собой.* Икәү-ара һөйләшеп килештек (дим)

**ИҠЛАУ** (гәйнә, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* уҡлау — *скалка*

**ИҠЫЛДАУ** (эйек) *ҡ.* тотлоғоу — *заикаться.* Хәлил ағай иҡылдап һүҙгә ҡыҫылды

**ИЛ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡорт иләүе — *пчелиная семья.* ◊ Ил айырыу *(ҡорт айырыу)* — *роиться*

**ИЛ II** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ауыл — *деревня.* Илгә барса, илгәзәк, үзенә барсаң — бик мәзәк (төньяҡ-көнбайыш). Бында ил халҡына үрәнгәнмен (ҡариҙел). 2. (гәйнә, эй) Халыҡ — *народ.* Йә, Хилаж ағай, һин нисек уйҙайһың? Мин ней, мин ил нисек итһә шулай инде (эй). Күчеп килгән ил түгел (гәйнә). 3. (арғаяш) Ырыу — *род*

**ИЛАМҺЫРАУ** (эйек) *ҡ.* йәшкәҙәү — *стать пасмурной (о погоде)*

**ИЛАРА** (ҡариҙел) *и.* ауыл араһы — *улица.* Иларағa сыҡһаң, шундай ләскет күбул

**ИЛАУҠАЙ** (мейәс) *и.* ваҡ балыҡ — *мелкая рыба*

**ИЛАУЛАУ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* зарланыу — *ныть.* Илаулап йата инде ҡайталмай. Уңа ла барып ҡараным илаулап (һаҡмар)

**ИЛАУЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Иламһырап йөрөү — *плакаться.* 2. Йыш илау — *часто плакать*

**ИЛАУЫРЫУ** (урта) *и.* 1. Эндәт — *повальная болезнь.* 2. Киҙеү — *грипп*

**ИЛАҺЫМ** (көнсығыш диалект, эйек-һаҡмар) *и. һ.* — *вводное слово.* Илаһым, был бәләнән дә ҡотолор көн бар икән (эйек-һаҡмар). Илаһый (дим)

**ИЛБАС** (урта) *и.* йөрәк ауырыуынан ҡуллана торған дарыу үләне — *лекарственное растение, употребляемое от сердечных заболеваний*

**ИЛБЕР, ИЛЕМ** (мейәс) *с.* илгәҙәк — *приветливый, любезный*

**ИЛБЕРСӘК** (арғаяш) *и.* йәрбесәк — *мочка*

**ИЛБИКӘ** (дим) *и.* ауылсы — *женщина, любящая ходить по деревне.* Ил бурдайы (төньяҡ-көнбайыш), ил көсөгө (ҡариҙел)

**ИЛБӘГӘЙ** (мейәс) *с.* 1. Илгәҙәк — *приветливый, ласковый.* 2. Осоҡ, еңел — *непоседливый, легкомысленный.* 3. Әүрәү — *мякина (сенная)*

**ИЛБӘҘӘК** (эй) *с.* илгәҙәк — *приветливый, ласковый.* Ҡыҙыҡайы илбәҙәк кенә. Илбәк (ҡыҙыл, һаҡмар)

**ИЛГИҘЕҮЕ** (эйек) *и.* эндәт — *повальная болезнь.* Илкиҙеүе (дим), ил рәте (урта)

**ИЛГИҪКӘН** (арғаяш) *и.* илгиҙәр — *путешественник, скиталец*

**ИЛГӘЙЕР** (ҡыҙыл, урта, эйек) *с.* тәбәнәк — *низкорослый (о человеке)*

**ИЛГӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ләйсән — *первый весенний дождь*

**ИЛГӘСӘК АТ** (арғаяш) *с.* бирек ат — *выносливый (о лошади).* Илгәсәк ат

**ИЛЕБЕЙ I** (урта) *и.* сабыртма — *сыпь (на теле)*

**ИЛЕБЕЙ II** (дим, туҡ-соран, урта) *т.* йәки — *или.* Илебей ул барып килһен (урта). Илебей Әлшәйҙән, илебей Бәләбәйҙән (дим)

**ИЛЕРЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* тилереү — *беситься.* Теге малай илегеп, йеннән дә гит

**ИЛЕКТЕРЕҮ** (мейәс) *ҡ.* һөйөү, иркәләү — *ласкать.* Балаһын илектереп утыра

**ИЛЕМ** (мейәс, салйоғот, урта урал) *с.* илгәҙәк — *приветливый, любезный*

**ИЛЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* иләү — *просеивать (муку).* Он илеү

**ИЛЕШЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* эйәләшеү — *привыкать.* Жәйгелеккә мында илештеләр, теге ҡоҙағыйға илешмәйләр

**ИЛЛАЛЛА** (көнсығыш диалект, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *р.* көскә, саҡ-саҡ — *кое-как.* Иллалла белән саҡ пөттөм эште (көнсығыш диалект)

**ИЛЛЕ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, урта урал, эй) *и.* иле — *вершок.* Бер илле

**ИЛЛӘ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *т.* әммә, әммә ләкин — *но, но и, однако.* Иллә хат барыбер килмәне (эйек-һаҡмар)

**ИЛ МӨСТӘНЕ** (эйек) *и.* ауылсы — *человек, любящий ходить по деревне*

**ИЛПӘК** (арғаяш) *с.* сапсан, уйнаҡлап торған — *ретивый, живой (о коне)*

**ИЛСЕ I** (арғаяш) *и.* башҡоҙа — *главный сват*

**ИЛСЕ II** (дим) *и.* 1. Ауылсы — *человек, любящий ходить по деревне.* 2. (ҡыҙыл) Вәкил — *посол, посланник.* Аҡ сәс үлемдең илсеһе

**ИЛТАБАН** (мейәс) *с.* уҫал — *злой*

**ИЛТЕР** (гәйнә) *и.* бәрәс тиреһе — *мерлушка*

**ИЛТЕР БҮРЕК** (гәйнә) *и.* ҡолаҡһыҙ бүрек — *круглая шапка из мерлушки*

**ИЛТИМАС** (урта) *и.* ихтирам — *уважение*

**ИЛТИМАСЛЫ** (урта) *с.* ихтирамлы — *уважительный.* Әҙәмгә илтимаслы бул

**ИЛТИҺАТ** (эй) *и.* илтифат — *уважение, внимание*

**ИЛӘ: ИЛӘ НАМАҘЫ** (гәйнә) *и.* өйлә намаҙы — *намаз, который совершается перед обедом (в середине дня)*

**ИЛӘГӨСТӨ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көрпә — *отруби, вывески*

**ИЛӘК** (урта) *и.* 1. Һөҙгөс — *дуршлаг.* 2. Һалмалғыс — *шумовка*

**ИЛӘК ЙОНДОҘ, ИЛӘК ЙОНДОҘО** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, эй) *и.* Өлкәр — *стожары.* Иләкйолдоҙ, Иләкйолдыз (урта урал, эй)

**ИЛӘК ҠЫРЫ** (дим) *и.* иләк тирәсе — *околыш (сита)*

**ИЛӘК СӘМБӘРЕ** (арғаяш, салйоғот) *и.* иләк тирәсе — *околыш (сита)*

**ИЛӘКТЕ ҠАЛПАҠ** (мейәс) *и.* битлек — *сетка (для предохранения лица от укусов пчел)*

**ИЛӘКӘЙ** (һаҡмар) *и.* еп иләгес — *прялка.* Хәҙер йепте иләкәйе лә бар, шәл бәйләкәйе лә бар

**ИЛӘМСЕҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* йәмһеҙ — *некрасивый.* Иләмсеҙ генә бер кеше инде ул Закир

**ИЛӘМТЕК, ИЛӘГ ӨСТӨ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көрпә — *отруби*

**ИЛӘНГӘН ЙЕП** (арғаяш, салйоғот) *и.* тегәр еп — *суровая нитка*

**ИЛӘНДӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* баш-баштаҡланыу — *своевольничать*

**ИЛӘП: ИЛӘП ЙАУЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ваҡ ямғырҙың һибәләп яуыуы — *моросить*

**ИЛӘСӘ** (гәйнә, мейәс) *и.* бейәләй — *варежки*

**ИЛӘҪЛӘНЕҮ** (мейәс, туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ауырайыу, йоҡо баҫыу — *клонить ко сну.* 2. Илереү — *бредить во сне.* Иләҫләнеп уйанған һалдат, бер ней төшөнмәй утырҙы ла блиндаж ишегенә атлыҡты (туҡ-соран). 3. Елкенеү — *рваться, порываться.* Йөрәк иләҫләнә төштән кире (урта)

**ИЛӘҪЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ялт итеп ҡалыу — *сверкнуть*

**ИЛӘҪТӘНЕҮ** (эй) *ҡ.* тулҡынланыу — *волноваться (о человеке).* Ул иләҫтәнеп китте

**ИЛӘТЛЕК** (ҡыҙыл) *и.* һирәк ағаслы сағыл — *редколесный косогор*

**ИЛӘҮ** (мейәс) *с.* хыялый — *помешавшийся (человек).* Иләү кеше

**ИЛӘҮЕРӘҮ** (мейәс, урта) *ҡ.* саташыу — *бредить.* Иләүһерәү (эй). Йоҡтаб йатҡан йереңдән эле иләүһерәйһең эле (мейәс)

**ИЛӘҮЕС** (мейәс) *и.* һоҫҡо — *совок*

**ИЛӘҮЛЕ** (һаҡмар) *с.* сығынсы — *норовистый, упрямый (о лошади).* Иләүле ат

**ИЛӘҮЛЕК** (ырғыҙ) *и.* 1. Төлкө, һыуыр, йомрандарҙың өң яһап йәшәгән урыны — *скопление норок лис, сурков и сусликов.* Иләү (эйек-һаҡмар). 2. Ҡырмыҫҡа иләүе — *муравейник.* Бында ҡырмыҫҡа иләүлеге күп

**ИЛӘШЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш, урта, эй) *ҡ.* эйәләшеү — *привыкать.* Иләшә ул анда, кеше ҡулыннан хөкөмәт ҡулы лутшы (төньяҡ-көнбайыш). Иләшү (дим)

**ИМА** (кариҙел) *к.* эйеме — *ведь да.* Име (төньяҡ-көнбайыш)

**ИМАҠ** (эй) *с.* ахмаҡ — *глупый, бестолковый*

**ИМАМ БАРМАҠ** (эйек) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец.* Иман бармаҡ, имән бармаҡ (һаҡмар)

**ИМБАШ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, эй) *и.* иңбаш, ҡулбаш — *плечо*

**ИМГӘК I** (мейәс) *и.* лепкә — *родничок (у ребенка).* Имкәк (урта)

**ИМГӘК II** (ҡыҙыл) *и.* ауырыу — *болезнь.* Үҙеңә-үҙең имгәк табаһың

**ИМГӘСӘЙ** (урта) *и.* еңгәсәй — *солдатик*

**ИМЕҘЕҮ БАЛА** (урта урал) *и.* имеүсе — *сосун (о ребенке).* Имеҙәк бала (арғаяш, салйоғот)

**ИМЕҘӘК, ИМСӘК** (арғаяш, салйоғот) *с.* 1. Имеүсе — *сосун (о ребенке).* Имсәк (ҡыҙыл, эй), имеҙек (урта). Имеҙек баламдың тамағы шеште. 2. (ҡыҙыл) Имеҙлек — *соски*

**ИМЕЙ** (гәйнә, урта, эй) *и.* имсәк — *грудь (женская)*

**ИМЕЙ БАЛА** (минзәлә) *и.* имсәк бала — *грудной ребенок.* Имей баласы ҙа барейе. Имесәк (урта). Быныһы бәләкәй, имесәк, 28 көнлөк

**ИМЕЙ МАЙЫ** (дим) *и.* йоғаныс — *смазка для сосков коров (перед дойкой)*

**ИМЕК** (гәйнә) *и.* имсәк — *грудь (женская).* Имеккә оронма

**ИМЕН-АМАН** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, эй) *р.* иҫән-һау — *жив-здоров*

**ИМЕРӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йомшарыу — *смягчение (о человеке)*

**ИМ-ЖОМ** (гәйнә, дим, урта) *и.* им-том — *заговор, заклинание (болезни).* Сарананы имгә-жомға ғына тоталар (гәйнә). Им-жом иттек (дим)

**ИМИН** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* имен — *целый; цел и невредим*

**ИМКӘК** (урта) *и.* лепкә — *родничок (у ребенка)*

**ИМКӘКЛӘҮ** (урта) *ҡ.* имгәкләү — *ходить на четвереньках (о ребенке)*

**ИМКӘМДӘҮ** (арғаяш, салйоғот, эй) *ҡ.* иркенләү — *чувствовать себя свободным.* Бер көн имкәмдәп килеп утыр, балаларың өйҙә саҡта (арғаяш). Имкәмдәп тереп бесән эштәйһең тей (эй). Имкәмнәү (минзәлә)

**ИМКӘМНЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* иркенлек — *раздолье.* Имкәмдек (урта урал), имкәмлек (эй). Ҡайҙа имкәмлек!

**ИМКӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* имгәнеү — *искалечиться*

**ИМНӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* емләү, шимләү — *засахарить бражку, кислушку*

**ИМСЕ МАЛ** (арғаяш) *и.* инсе мал — *подаренный, завещанный скот*

**ИМСӘК** (ҡыҙыл, эй) *и.* имсәк бала — *грудной ребенок.* Ырауҙа атаһынан имсәк кенә ҡалды (эй). Ул саҡта ҡыҙым имсәк кенә ине (ҡыҙыл). Имсәк теш (арғаяш, ҡыҙыл, салйоғот, эй) *и.* һөт теше — *молочные зубы*

**ИМСӘКТӘШ** (көнсығыш диалект) *с.* бер туған — *родной.* Имсәкләш (урта, һаҡмар)

**ИМЬЕҘ** (туҡ-соран, һаҡмар) *с.* тыңлауһыҙ — *непослушный (о ребенке).* Имһеҙләр, кейенмәй аптыраталар (туҡ-соран)

**ИМЬЕҘЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* тынысһыҙлау, маҙаға тейеү — *беспокоить, тревожить.* Кешене имһеҙләп йөрөмә инде

**ИМШӘҮ** (урта) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**ИМӘН АЛМАҺЫ** (урта) *и.* имән сәтләүеге — *желудь.* Имән бороҫо (дим)

**ИМӘН БАРМАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец.* Имән бармаҡ (арғаяш, минзәлә)

**ИМӘНЕС** (төньяҡ-көнбайыш, эй) *к.* бик — *очень.* Имәнес сүләшмәгә хәтәр (төньяҡ-көнбайыш). Быйыл аҡса бөткәйе, имәнес ауырыраҡ (урта урал). Әйбәттәр имәнес (эй)

**ИМӘНЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран) *ҡ.* 1. Ҡыймау — *не осмелиться.* Алтыбыҙға алты атлас йурған, йатырға имәнеп торабыҙ (туҡ-соран). 2. Ерәнеү — *чувствовать отвращение.* Имәнәм мин йыландан (туҡ-соран)

**ИМӘН ЙЕМЕШЕ** (эй) *и.* имән сәтләүеге — *желудь*

**ИМӘН ТУЙЫРАҺЫ** (әй) *и.* имән сәтләүеге — *желудь*

**ИМӘН ТЫҢҠАУЫҒЫ** (урта, һаҡмар) *и.* имән сәтләүеге — *желудь*

**ИМӘН ӘКӘЛӘҺЕ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* имән сәтләүеге — *желудь*

**ИН I** (ҡыҙыл) *и.* иңбаш — *плечо.* Ике инендә ике багуны бар

**ИН II** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар, ырғыҙ, әй) *и.* 1. Иң — *ширина.* Дауарҙың ине тар (һаҡмар). Бакуйының ине (мейәс). 2. Кейемгә индерелгән ҡыйыҡ — *клин на одежде.* Итәге өс индән тегелгән (ҡыҙыл). Күлмәгенең артҡы ине (һаҡмар)

**ИН III** (дим, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* инәү, билдә — *метка, клеймо (на животных)*

**ИН IV** (туҡ-соран, һаҡмар) *к.* иң — *самый, в высшей степени.* Иң йаҡшы. Ин матуры минеке (һаҡмар)

**ИНАБАТА** (туҡ-соран) *и.* инабат — *доверие, надежда.* Булыр, ҡарт кешенең инабатаһы бармы әй

**ИНАНЫШТЫ** (арғаяш) *с.* ышанычлы — *благонадежный*

**ИНГЕЖ, ИНГЕРЕШ** (әй) *и.* иңкеш — *шмель.* Ингеш (дим)

**ИНГЕРБАУ, ИҢЕРБАУ** (ҡыҙыл) *и.* үңербау — *завязка, тесемка (у воротника рубахи).* Әүәле ҡыҙҙар туйға ингербауҙар әҙерҙәр ине

**ИНГӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* имгәнеү — *калечиться*

**ИНДЕ** (урта) *р.* бик, хатта — *очень, слишком.* Инде матур

**ИНДЕРЕМ** (мейәс) *и.* иң — *ширина (материи)*

**ИНДИГЕҮ** (кариҙел) *ҡ.* интегеү — *мучиться*

**ИНДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Киң алдырып сабыу — *широкоохватная косьба.* 2. Иңләү — *охватывать во всю ширину.* Йылым йылғаны индәп килә. Иңдәү (әй)

**ИНЕЙ** (мейәс) *и.* әсәйгә өндәшеү һүҙе — *слово-обращение к матери.* Иней, йоҡом гилә

**ИНЕС** (арғаяш) *и.* ҡушъяулыҡтың ситенә уҡалап тегелгән нәҙек ҡайма — *вышитый позументами кайма национального платка (кушъяулыка)*

**ИНЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бешеләнеү, ултырыу — *укоротиться, стать плотным (об одежде, материале после стирки).* Ойоҡто көҙгә йөндән бәйҙәһәң инеп китә

**ИНЕШКӘК** (арғаяш) *с.* борош — *закрученный.* Инешкәкте ағас

**ИНЕШ-СЫҒЫШ** (һаҡмар) *и.* ҡатнашлыҡ итеү — *соучастие.* Инешем дә йуҡ минең бында, сығышым да

**ИНЖЕНӘЙӘТ** (дим) *и.* енәйәт — *преступление.* Микулайға инженәйәт күрҫәтеп Төркейәгә ҡасҡан кеше булған ул

**ИНЖИҪӘҘӘП** (дим) *и.* ынйы һиҙәп — *жемчужная пуговица*

**ИН ЙАПРЫЙ** (һаҡмар) *с.* екһеҙ — *сплошной*

**ИННЕ** (гәйнә) *р.* инде — *уже.* Сәлхә әбей белә инне, белсә әмә? Үксез үчкәч михнәтне күрдең инне

**ИННЕК** (дим, кариҙел) *и.* индек ҡапҡа — *ворота из нескольких снимающихся жердей*

**ИНСЕТЕЛӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* баланың ҡолаҡ арты сейләнеүе — *опрелость за ухом у ребенка.* Ҡыҙым инсетеләгән, анау һарығымды уға атап ҡолағына инәү һалдым да шуның ҡанын һөрттөм әле (ҡыҙыл)

**ИНСӘ** (һаҡмар) *и.* иңбаш — *плечо.* Шәүрә килен кейгән йеләненең ике инсәһе аның мунсаҡлы *(халыҡ йырынан)*

**ИНТЕГЕШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* интегеү — *мучение.* Халыҡҡа интегеш булды алабота ашап, чөгөндөр

**ИНТЕКЛӘҮ** (дим) *ҡ.* интектереү — *мучить*

**ИНТӘРГӘ, ИНТӘРГӘЙ** (туҡ-соран) *и.* һарҡыу — *уклон.* Йул интәргә, түбәнгә китте

**ИНЬАМ** (дим) *и.* теләк — *желание*

**ИНӘ: ИНӘ ГЕШЕ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* әсәй — *мать*

**ИНӘ ГҮНӘГЕ** (урта) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**ИНӘ ГҮРПӘҺЕ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* кейәү тарафынан ҡәйнәһенә бүләк ителгән тун — *шуба, подаренная женихом свекрови*

**ИНӘЙ** (дим, мейәс, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш, туҡ-соран, урта, урта урал, әй) *и.* 1. Әсәй — *мать.* Инәйем дә, атайым да ун икенсе йылғы (туҡ-соран). Инәйем бар саҡта барғайным мин (урта). Әнәй, әней, аный (гәйнә). 2. (дим, кариҙел, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, ырғыҙ) Ҡәйнә — *свекровь.* 3. (дим, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) Әбей кешегә өндәшеү һүҙе — *обращение к женщинам старше своих родителей.* Ниңә инәйләр уңа ғәжәпләнәһегеҙ? (ырғыҙ). 4. (ҡыҙыл, һаҡмар) Инәй — *старшая сестра родителей*

**ИНӘ ЙАПҠЫС** (мейәс) *и.* инә ҡортто һаҡлай торған ҡап — *коробка для хранения пчеломатки*

**ИНӘ ЙАТАҒЫ** (мейәс) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**ИНӘ ЙОРТО** (арғаяш) *и.* төп йорт — *отчий дом*

**ИНӘ КӨБӨҺӨ, ИНӘ КҮНӘГЕ** (урта) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**ИНӘКӘЙ** (дим, мейәс, әй) *ы.* 1. Ҡурҡыу, аптырауҙы белдергән ымлыҡ — *междометие, выражающее испуг, удивление.* 2. *и.* әсәйгә иркәләп өндәшеү — *ласковое обращение к матери.* Фөлөр йаулыҡ, инәкәй, йабынмайым, инәкәй, йат кешенең санаһына утырмайым, инәкәй *(сеңләүҙән)* (әй). 3. (төньяҡ-көнбайыш) Әсәй — *мать.* 4. (урта урал) Өләсәй — *бабушка по матери.* 5. (минзәлә) Ҡәйнә — *свекровь.* 6. (урта) Кендек әбейе — *повитуха.* 7. (кариҙел, ҡыҙыл, әй) Тас инәһе — *весь, вся в мать*

**ИНӘКӘЙЕМ-АТАҠАЙЫМ** (төньяҡ-көнбайыш) *ы.* ҡурҡыу, аптырауҙы белдергән һүҙ — *слово, выражающее испуг, удивление*

**ИНӘКӘС, ИНӘКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш, әй) *и.* тас инәһе — *весь, вся в мать*

**ИНӘ ҠАБЫ** (дим) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**ИНӘ ҠАҘАНЫ** (дим) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**ИНӘЛЕ АУ** (дим) *и.* өс ҡатлы ау — *сеть тройная*

**ИНӘЛЕК I** (урта) *и.* балаятҡы — *матка*

**ИНӘЛЕК II** (эйек-һаҡмар) *и.* инә ҡош-ҡорт — *самка (о птице)*

**ИНӘЛЕП-ТАБЫНЫП: ИНӘЛЕП-ТАБЫНЫП ҺОРАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* инәлеп һорау — *умолять*

**ИНӘЛЕ-СЫҒАЛЫ: ИҺЕ ИНӘЛЕ-СЫҒАЛЫ** (мейәс) *с.* иҫәүән — *беспамятный, забывчивый.* Иҫе инәрҙе-сығарҙы (әй). Иҫе инәле-сығалы (һаҡмар). ◊ Йәне инәле-сығалы — *состояние агонии; агония*

**ИНӘМ** (арғаяш, мейәс, ҡыҙыл) *и.* морондоҡ инәй — *посаженая мать*

**ИНӘНЕ ҠЫРҠЫУ, ИНӘНЕ ҠЫЙЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* бал ҡорттарының артыҡ инәһен үлтереү — *уничтожение пчелами лишних пчеломаток.* Инәне киҫеү (дим), инә өҙөү (урта)

**ИНӘНӘН ТЫУМА** (туҡ-соран, әй) *с.* сыр ялан-ғас — *совершенно голый*

**ИНӘҢҒАНАН** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* иртәнге сәйҙән һуң булған ваҡыт — *время после утреннего чая.* Инәңғанан тороп Йылайыр гитте (эйек-һаҡмар)

**ИНӘР, ИННӘР, ИНҢӘР** (урта) *и.* Инийәр — *Инзер (название реки).* Инғәр, Инйәр (урта)

**ИНӘРҘЕ-СЫҒАРҘЫ: ИНӘРҘЕ-СЫҒАРҘЫ АҠЫЛ** (мейәс) *с.* аңра, тиле — *придурковатый, несообразительный.* Инәрле-сығарлы (дим)

**ИНӘС** (дим, ҡыҙыл, мейәс, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *р.* тас инәһе, инәһенә оҡшаған — *весь, вся в мать*

**ИНӘСЕК** (урта) *и.* кендек инәһе — *повитуха.* Инәсе (мейәс)

**ИНӘ СИТЛЕГЕ** (ҡыҙыл) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**ИНӘ ҪАУЫТЫ** (дим) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**ИНӘ ТАШТАУ** (арғаяш) *ҡ.* бал ҡорттарының артыҡ инәһен үлтереүе — *уничтожение пчелами лишних пчеломаток*

**ИНӘ ТИМЕРӘҮ** (дим, урта) *и.* ҡоро тимерәү — *лишай (сухой)*

**ИНӘТУН** (арғаяш, дим, ҡыҙыл, мейәс, урта, ырғыҙ) *и.* 1. Кейәү тарафынан ҡәйнәһенә бүләк ителгән тун — *шуба, преподнесенная женихом свекрови.* 2. Кейәү тарафынан ҡәйнәһенә бирелгән тире йәки тауар — *материя или шкура, преподнесенные женихом свекрови*

**ИНӘ ҺАУЫТЫ** (урта) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**ИНӘЧКӘ** (гәйнә) *и.* инә — *самка (о мелкой скотине, собаках, кошках).* Инәчкәме бесей бала

**ИҢ** (урта) *и.* 1. Иңбаш — *плечо.* Йул тоҡсайын иңенә аҫып китепара. 2. Тышҡы күренеш — *внешний вид*

**ИҢГЕЛ** (ҡыҙыл) *с.* иңкеү — *покатый, наклонный (о местности).* Иңгел йер

**ИҢГЕЛЕК** (гәйнә) *р.* иң элек — *сначала.* Иңгелек жиңгәсе элгәрегә чығып ҡыздан сурый

**ИҢГЕРБАУ** (ҡыҙыл) *и.* иңербау — *завязка, тесемка (у воротника рубахи)*

**ИҢГЕШ** (дим, урта, һаҡмар, әй) *и.* иңкеш — *шмель.* Иңгеж (әй)

**ИҢГЕРЕШ** (ҡариҙел) *и.* иңкеш — *шмель*

**ИҢГӘК** (ҡыҙыл) *и.* имгәк — *обуза*

**ИҢГӘКТӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* имгәкләү — *ходить на четвереньках (о ребенке)*

**ИҢГӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* имгәнеү — *искалечиться.* Күп күтәрмә утынды, иңгәнеп ҡуйырһың

**ИҢГӘРӘК** (дим) *р.* иң элек, тәүҙә — *сначала*

**ИҢГӘСӘЙ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* еңгәсәй — *солдатик*

**ИҢҒАЙ** (туҡ-соран) *р.* ыңғай — *попутно.* Шул иңғайҙан китте

**ИҢЛЕ** (ҡыҙыл) *р.* иңле — *широкий (о материи)*

**ИҢЕНСЕ** (мейәс, урта урал, әй) *р.* икенсе — *второй.* Иңенсе уахытта килерһең (мейәс)

**ИҢЕРҺЕҮ** (ҡыҙыл) *и.* ябыҡ иттән килгән һыу тәме — *вкус нежирного мяса*

**ИҢЕС** (дим, мейәс, урта) *и.* инес — *подоплека (у рубахи).* Иңеч (гәйнә, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш)

**ИҢЕСЕ** (мейәс, төньяҡ-көнбайыш, әй) *с.* икенсе — *другой.* Иңенсе геше менән бутаған шу (әй). Башҡортлар бөтөнләй иңесе (төньяҡ-көнбайыш). Иңесе геше булып сыҡты ла был (әй). Тышы әҙрәс, эче иңесе (төньяҡ-көнбайыш). Иңече (төньяҡ-көнбайыш), иңсе (арғаяш). Иңсе ире дан булды

**ИҢЕШ** (гәйнә) *с.* иңкеү — *наклонный, покатый (о местности).* Иңеш тау

**ИҢЕШЕҮ** (салйоғот) *ҡ.* ултырыу — *сесть, укоротиться (об одежде, материале после стирки)*

**ИҢКЕЗЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* индереү — *ввести.* Иңкезеп ташлады

**ИҢКЕЛДӘҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* 1. Ҡайғыртыу — *заботиться.* 2. Иркәләү — *ласкать*

**ИҢКЕНСЕ, ИҢКЕСЕ** (мейәс, урта, һаҡмар, ырғыҙ) *һ.* 1. Икенсе — *второй.* Иңкенселәй сәй ҡайнаттым (ырғыҙ). Иңкесе ҡабат килә инде ул (ырғыҙ). 2. *с.* башҡа, бүтән — *другой*

**ИҢКЕШ** (арғаяш, гәйнә, ҡариҙел, мейәс, урта, урта урал, ырғыҙ, әй) *с.* иңкеү — *наклонный.* Иңкес (урта), иңкеү (дим), иңкереш (ҡариҙел), иңеш (гәйнә)

**ИҢКӘЛЕҮ** (урта урал) *ҡ.* 1. Йонсоу — *известись.* Улар менән иңкәлеүҙе һөйҙәп тораһы ла йуҡ. 2. (ырғыҙ) Инәлеү — *умолять.* Һинән башҡа кемгә барып иңкәләйем. 3. (әй) Ҡайғырыу — *переживать*

**ИҢНЕК** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* индек ҡапҡа — *ворота из нескольких снимающихся жердей.* Иңнекте йабып йөрө (урта). Иңнекте бикләп ҡуймайбыҙ ҙа ишек алдына мал инә лә китә (эйек-һаҡмар)

**ИҢСӘ** (төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек) *и.* яурын — *заплечье.* Иңсәһенә шәл һалып сығып ултырған ҡапҡа төбөнә (эйек)

**ИҢТӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* иң алда, тәүҙә — *сначала, сперва*

**ИҢҺӘЛЕК** (мейәс) *и.* яурынға һала торған ҡатынҡыҙҙар шарфы — *женский шарф, предназначенный для ношения на заплечье*

**ИҢӘК** (гәйнә) *и.* 1. Урт — *нижняя часть щеки.* Иңәкләр тешебетте. Иңәк керебетте. 2. Ҡаты аңҡау — *твердое нёбо.* 3. Эйәк — *подбородок*

**ИПАЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Ойпалау — *мять.* 2. (урта урал) Туҡмау — *колотить*

**ИПАПА, ИПАПАЙ** (дим) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**ИПЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* икмәк — *хлеб.* Ипей бар, теш йуҡ (төньяҡ-көнбайыш). Ипәй (ҡариҙел), ипәкәй (минзәлә). Арыш ипәкәйе булған икән

**ИПЕЙ ҠОНДОҘО** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ИПКЕН** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *с.* тонсоу — *спертый (о воздухе).* Өйөгөҙҙөң ипкене тышҡа бәреп тора (эйек-һаҡмар)

**ИПКЕНЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* килешеп тороу — *подходить.* Эшкә ҡулы ипкенеп тора (мейәс). Тәғзимә уңҡан бисә, һәр нәмәгә ҡулы ипкенә (урта). Йоҡоһо йоҡо булманы, эшләгән эше лә ипкенмәне, барыһы ла ҡулынан төштө (урта)

**ИПЛӘШЕҮ** (дим) *ҡ.* килешеү — *сговориться.* Ҡыҙына ипләшеп ҡайттыҡ

**ИПМӘК** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* икмәк — *хлеб.* Ипмәк бешерер гәрәк, утын эвинәйем (ҡыҙыл)

**ИПМӘКЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* кәлләнеү — *слеживаться, засохнуть слоями.* Бесән оҙаҡ йатһа, ипмәкләнеп бәҫәрә

**ИП-САБ ИТЕҮ** (урта урал) *ҡ.* рәтләнеү, юлға һалыныу — *наладиться (о жизни).* Ип-һап итеү (әй)

**ИПТЕ** (әй) *с.* уңайлы, яйлы — *удобный.* Иптәштәр, беҙ ипте йерҙә

**ИПТЕГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *б.* ҡәҙәрле, самаһы — *около.* Бер пот иптеге былса йарарыйы (төньяҡ-көнбайыш)

**ИПТӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Йүнәтеү — *наладить.* 2. Һипләү — *подновить (дом)*

**ИПТӘШ ГЕЙӘҮЕ** (урта) *и.* кейәү үнәре — *шафер*

**ИПТӘШЕ** (урта) *и.* һыңары, ише — *один из пары; один из парных предметов.* Башатайҙың иптәше тартмалалыр, эҙләп китер

**ИПТӘШЕҮ** (мейәс) *ҡ.* йүнәтешеү — *налаживать (взаимно)*

**ИПТӘШЛӘП** (һаҡмар) *р.* ҡушлап — *вместе, парами.* Әле генә бит ул иптәшләп йөрөйләр

**ИПТӘШЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* танышыу — *знакомиться*

**ИПКӘ-ҺАПҠА ҺАЛЫНЫУ** (эйек) *ҡ.* рәтләнеү — *наладиться (о жизни).* Донйа бер аҙ ипкә-һапҡа һалынғайны, йәнә һуғыш сыҡты ла гитте

**ИРАУАННАНЫУ** (урта) *ҡ.* иркенләү, рәхәтләнеү — *блаженствовать.* Бисәләр мында ҡунаҡ булып, ирауаннанып тик йөрөйләр. Ирауаннау, ирәүәннәү (урта)

**ИРБАЛДЫҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйнеш — *младший деверь*

**ИРГАСЫУ** (мейәс) *ҡ.* күңел асыу — *забавляться.* Иргасыуға биҙа шәп

**ИРГӘИ** (урта) *р.* иркен — *привольно.* Һеҙҙә бигерәк ирген икән дә

**ИРГӘҘӘК** (эйек) *с.* илгәҙәк — *приветливый, ласковый.* Кешегә иргәҙәк

**ИРГӘ ГИТЕҮ** (дим) *ҡ.* кейәүгә сығыу — *выходить замуж*

**ИРГӘНӘК** (ҡыҙыл) *с.* тәбәнәк буйлы — *низкорослый (о человеке)*

**ИРҒАҘАҠ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* иргә оҡшаш ҡатын-ҡыҙ — *мужеподобная женщина*

**ИРҒОРҪАҠ** (эйек, әй) *с.* түлһеҙ — *бесплодная (женщина)*

**ИРҒӘЛӘШЕҮ** (эйек) *ҡ.* талашыу — *ссориться*

**ИРҘАУАЙ I** (урта урал, әй) *и.* 1. Иргә оҡшаш ҡатын-ҡыҙ — *мужеподобная женщина.* 2. (әй) *с.* ҡыйыу — *смелый, боевой*

**ИРҘАУАЙ II** (урта) *р.* тырышып — *старательно.* Ирҙауай эшләй ул

**ИРҘӘН** (арғаяш) *и.* ирлән — *хомяк.* Баҡсабыҙға ирҙән ойалаған

9879 CYC2=930

**ИРҘӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* иләү — *прясть (шерсть)*

**ИРҘӘҮКӘ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* иргә оҡшаш ҡатын-ҡыҙ — *мужеподобная женщина.* Ирҙәүкә ир булырға тырышыр, ирләр йанына сырышыр (төньяҡ-көнбайыш)

**ИРЕГАШАУ** (мейәс) *ҡ.* киндерҙең, етендең һыуҙа йомшарыуы — *вымачивание конопли, льна.* Киндер ирегашаһа һөйәйбеҙ

**ИРЕГИТЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* рөхсәт итеү — *разрешить.* Питыр Карпыч ирег итмәй тей

**ИРЕК I** (салйоғот) *и.* ерек — *ольха*

**ИРЕК II** (мейәс) *и.* тире эшкәртә торған әсетмә — *закваска для выделывания кожи*

**ИРЕКЛӘҮ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Киреү — *натянуть (о шкуре).* 2. (урта, ырғыҙ) Тирене әсетергә һалыу — *квасить (о шкуре).* Иректәү (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс), ирекйеү (ҡыҙыл)

**ИРЕКТЕ** (арғаяш, ҡыҙыл) *с.* ныҡ ихтыярлы — *волевой.* Хәтәр иректе геше булып сыҡтың илли (арғаяш)

**ИРЕК ТӨШӨҮ** (арғаяш) *ҡ.* күңел күтәрелеү — *подняться (о настроении)*

**ИРЕМ** (гәйнә) *и.* соңғол — *омут*

**ИРЕМТӘЛ** (ҡыҙыл) *с.* иреүсән — *плавкий*

**ИРЕМӘН** (ҡыҙыл) *и.* ирәүән — *ревень.* Иремән барҙа ир үлмәй, андыҙ барҙа ат үлмәй *(мәҡәл)*

**ИРЕНЕС** (дим) *с.* ерәнес — *отвратительный, мерзкий.* Иренес ҡейәфәттә

**ИРЕНЙАРҒЫС** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡырлы ҡурай — *порезник.* Ҡаҡыға оҡшаған, иренгә тидермәй генә ашайсың, тәмне, иренне ҡабарта (төньяҡ-көнбайыш). Ирен сабырҡсысы (дим)

**ИРЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* күңел йомшарыу — *расчувствовать, смягчиться.* Ҡарттар күңеле ҡайтымһаҡ, бер-ике шәшке сәй эсерһәләр, ирейем дә гитәм (ҡыҙыл)

**ИРЕШ БУЙЫ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар, әй) *и.* буйлыҡ — *основа (на домашнем ткачестве)*

**ИРЕШЕНЕҮ** (мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, әй) *ҡ.* 1. Ирешеү — *ругаться.* Бер бала-сағаға ирешенмәнем (әй). Ирешенеп киткән ике ҡыҙ (мейәс). Кеше белән ирешенмәгеҙ (урта урал). 2. (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) Үсекләшеү — *дразниться.* Ирешенгәнен белгәннәр (гәйнә). 3. (ҡариҙел) Шаярыу — *озорничать*

**ИРЕШЕҮ** (урта урал) *ҡ.* 1. Тейеү — *трогать, прикасаться.* Шөкөргә ирешмәң тигәннәр, ауылны күсерергә тип әйткәс. 2. (арғаяш) Аңлау — *понять.* Ирешмәйем һөйҙәгәненде. 3. (һаҡмар) Ҡарышыу — *противиться*

**ИРЕШ-ТЫРЫШ** (мейәс) *и.* талаш — *ссора, раздор.* Иреш-тырыш китһә, боларың бит ул

**ИРЕШЕП-ТЫРЫШЫП** (урта) *р.* ыҙғышып — *споря*

**ИР-ҘАТЛЫ** (дим) *с.* ирле — *имеющая мужа.* Ирзатлыға донйа гөтөүе әрәхәт

**ИРЖӘҢКЕ, ИРЖӘҢКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* иргә оҡшаш ҡатын-ҡыҙ — *мужеподобная женщина*

**ИР ЙЕТЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* бешеү, өлгөрөү — *созреть.* Кәртүк ир йеткәс килерһең (мейәс)

**ИРЙӘН** (ырғыҙ) *и.* ир-ат — *мужчины.* Ирйән йуҡ өй эсендә, әйҙә инегеҙ

5302 CVC2=575

**ИРКҺЕҘТӘҮ** (арғаяш, салйоғот) *ҡ.* ирекһеҙләү — *приневолить*

**ИРКӘБАБАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* атай йәки әсәйҙең ағаһына өндәшеү һүҙе — *слово-обращения к старшему брату родителей*

**ИРКӘБЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* атай йәки әсәйҙең апайына өндәшеү һүҙе — *слово-обращения к старшей сестре родителей*

**ИРКӘГЕТ** (һаҡмар) *и.* арҙан — *кобель*

**ИРКӘЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* ят ир кеше — *незнакомый мужчина.* Иркә (урта)

**ИРКӘК** (арғаяш, ҡыҙыл, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* ата — *самец (у животных, зверей и мужская особь у растений).* Иркәк ҡолон. Иркәк бүре (арғаяш). Андыҙҙың иркәге сәскә ата, орғасыҫы атмай (ырғыҙ)

**ИРКӘЛӘК** (урта) *с.* иркә — *изнеженный.* Иркәләк бала булты

**ИРКӘТТӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* апайға иркәләп өндәшеү һүҙе — *слово ласкового обращения к старшей сестре.* Түтәйне балтүтәй, иркәттәй тидерейек. Тәмне теллейек әлек

**ИРЛӘН** (дим, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* алйырҙан — *хомяк*

**ИРЛӘҮ** (гәйнә, ҡариҙел) *ҡ.* иләү — *прясть.* Жеп ирләү (ҡариҙел)

**ИРНӘК** (ҡыҙыл) *и.* ирмәк — *забава, потеха*

**ИРНӘҮ** (дим) *ҡ.* ауҙы аҫҡы һәм өҫкө бауға ултыртыу — *насадить сеть на верхнюю и нижнюю веревку*

**ИРНӘК** (ҡыҙыл) *и.* шаталаҡ — *балагур*

**ИРҪЕҮ** (урта урал, эй) *ҡ.* 1. Әллә кем булыу — *возомнить.* 2. Хушһынмау — *быть недовольным.* Туҡтыҡҡа ирҫеп киттеләр, нужна күрмәгәнгә (урта урал). Ирсеү (ҡариҙел)

**ИРҪӘК** (эй) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Ирсәк (гәйнә)

**ИРҪӘКТӘНЕҮ** (эй) *ҡ.* ҡыйшандау — *кокетничать*

**ИРТЕ** (арғаяш, мейәс) *и.* 1. Кәртәләрҙе ваҡ бағаналарға бәйләй торған тал сыбыҡ — *ивовый прут, используемый при обнесении оградой (огород, двор и др.).* 2. Һуҡа уҡлауының башына сыбыҡтан ишеп ҡуйыла торған ҡулса — *колечко-прикрепитель грядиля плуга*

**ИРТЕЛЕК** (мейәс) *и.* кәртәләрҙе ваҡ бағаналарға бәйләй торған тал сыбыҡ — *ивовый прут, используемый при обнесении оградой (огород, двор и др.)*

**ИРТӘГЕНӘ** (мейәс) *р.* иртәгеһенә — *назавтра.* Иртәгенә береһе йыйа йыйылышҡа. Иртәһенә (эй)

**ИРТӘК** (арғаяш) *и.* проза һәм поэзиянан торған батырҙар тураһындағы хикәйәт — *сказание о батырах в форме прозы и речитатива*

**ИРТӘКӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* хөнәҫә — *гермафродит*

**ИРТӘНАҺУН** (мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *р.* иртәнән һуң — *послезавтра.* Иртәнәһун (ҡыҙыл). Иртәнәһун килерем тигәйне. Иртәнаһуң (урта), иртәнәһуң (эй), иртәндәһен (мейәс), иртәнәсуң (төньяҡ-көнбайыш)

**ИРТӘНГЕЛӘ** (арғаяш) *р.* иртәнсәк — *утром.* Иртәңгелә (салйоғот)

**ИРТӘНГЕЛӘЙ** (арғаяш) *р.* иртүк — *рано утром.* Иртәнгеләй килеп йеткән

**ИРТӘНСӘККЕ** (ҡыҙыл) *р.* иртәнге — *утренний.* Иртәнсәкке сәй

**ИРТӘҢГЕЛЕК** (эйек-һаҡмар) *р.* иртәнге — *утренний.* Һыйырҙың иртәңгелек һөтөн бешерҙем

**ИРТӘҢГЕҺЕН** (туҡ-соран, эй) *р.* иртән — *утром.* Өйөмә йатҡыҙам шуларҙы иртәңгеһен (эй)

**ИРТӘСӘК** (урта) *р.* иртәнсәк — *утром*

**ИРЫЖА** (дим) *и.* бүҫер — *грыжа*

**ИРӘБЕ** (ҡариҙел, ҡыҙыл, мейәс, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Теремек, көр күңелле — *подвижный, бодрый, развитый.* Ирәбе бала. Ирәбе бәрәс (ырғыҙ). Ирәбе шебеш (эйек-һаҡмар). Атайым ирәбе генә күренә эле (ҡыҙыл). Үҙенең ирәбелеге, йегәрлелеге менән ул мине шаҡ ҡатырҙы (эйек-һаҡмар). 2. (ҡыҙыл, салйоғот, урта, эйек-һаҡмар) Уңған, егәрле — *дельный, проворный.* Ирәбе ғатын иллелә лә таба (ҡыҙыл)

**ИРӘБЕЛӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* күңел күтәрелеүе — *подняться (о настроении).* Йеңгәм ирәбеләнеп киткән. Мулла ирәбеләнеп, ҡулдарын артҡа ҡуйып, иҙән буйлап йөрөй

**ИРӘГӘЛӘШЕҮ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* телләшеү — *пререкаться.* Утыралар шунда ирәгәләшеп, бер-береһенең һүҙен күтәрмәй (эйек-һаҡмар). Иргәләшеү (эйек), ирәгешеү (мейәс, ырғыҙ)

**ИРӘЙЕҮ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, ырғыҙ, эй) *ҡ.* 1. Рухланыу, күңел күтәрелеү —*вдохновиться.* Үҙ йағыма ҡайтһам, ирәйеп китәм (урта урал). 2. (дим) Кинәнеү, һулыш киңәйеү — *насладиться, дышать свободно.* Сәйҙән ҫулауым ирәйҙе

**ИРӘК** (ырғыҙ) *и.* шәл теле — *зубчик (у пухового платка).* Ике йөҙ ирәкле шәл

**ИРӘМ** (ҡыҙыл) *с.* күңелле — *жизнерадостный (человек).* Ирәм кеше

**ИРӘМЕК** (дим, урта, ырғыҙ) *с.* 1. Теремек — *бодрый.* 2. (ырғыҙ) Шаян — *шаловливый.* 3. (урта) Илгәҙәк — *приветливый*

**ИРӘМҺЕТЕҮ** (эй) *ҡ.* әллә кем итеү, шаштырыу — *возвысить*

**ИРӘМҺЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Шатланыу — *радоваться.* Мәкәләм баҫылғас шул тиклем ирәмһенем. 2. (эй) Ҡотороу, шашыу — *беситься.* Йетеште тормоштан ирәмһеп, ҡотороп йөрөй

**ИРӘМӘН** (ҡыҙыл) *и.* ирәүән — *ревень.* Атайым белән ирәмән тамыры эҙҙәп бы йаҡтарҙы күп ҡыҙырҙыҡ

**ИРӘНЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* сирҡаныу — *испытать отвращение*

**ИР-ӘПСЕН** (урта) *и.* ир-ат — *мужчины.* Һуғыш уахытында калхуз эшендә ир-әпсеннәр әҙ булды

**ИРӘҮЕЛ** (эйек-һаҡмар) *и.* иркенлек, рәхәтлек — *приволье, наслаждение.* Ул күлдәк ҡаптырмаһын ысҡындырып, бына ҡайҙа икән уның ирәүеле, тине үҙ-үҙенә

**ИРӘҮӘН** (эйек-һаҡмар) *с.* эскерһеҙ — *простодушный, открытый*

**ИРӘҮӘНЛӘҮ** (мейәс, урта, эйек) *ҡ.* иркенләү, ирекҡә сығыу — *чувствовать себя свободным.* Был йулы уға бик күп ирәүәнләп китеп һөйләргә тура килмәне (урта). Ирәүәнләп утырып сәй эсте (мейәс). Ирәүәннәү (һаҡмар). Мин бумағас, ирәүәннәгәннәр, кинаға йөрөгән дә йөрөгәннәр. Мин бумағас бауҙан ысҡынған шайтан шикелле ирәүәннәгәннәр

**ИРӘШӘ** (мейәс) *и.* рәшә — *мгла, сухой туман*

**ИС I** (төньяҡ-көнбайыш) *к.* 1. Бит — *ведь.* Хәзер машина йөрөй ис (ҡариҙел). Әнә килә ис (төньяҡ-көнбайыш). 2. *р.* Һис — *отнюдь, сроду.* Ис бер үтергә йарамай (ҡариҙел). Ис баралмайым (ҡариҙел)

**ИС II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* еҫ — *запах.* Нинди ис?

**ИСЕ-ҠОҢҒЫСЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* хәтер, иҫ — *память.* Маратның исе-ҡоңғысы да йуҡ

**ИСЕЛӘШЕҮ** (мейәс) *ҡ.* һүҙ көрәштереү — *препираться*

**ИСЕМ-АТ** (ҡариҙел, урта) *и.* яманат — *дурная слава.* Исем-аты ҙа былмаҙы (ҡариҙел). Исем-атҡа уралып йөрмәҙе (ҡариҙел)

**ИСЕМ: ИСЕМГӘ ТАҒЫЛЫУ** (мейәс, урта) *ҡ.* яманаты сығыу — *заиметь дурную славу.* Исемгә тағылып ҡуйарың тей (мейәс). Исем-атҡа уралыу (дим)

**ИСЕМДЕК** (урта) *р.* исем өсөн — *для блезиру.* Исемдек кенә ҡомбағыш сәстем

**ИСЕРЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* әйләнеү — *закружиться.* Азбар башынан йығылып төштөм, башым исереп китте лә

**ИСЙУҒЫ** (дим, мейәс, туҡ-соран, эйек) *к.* исмаһам — *хотя бы.* Исйуғы миңә апҡайтыр инең (мейәс). Әсәйем һуғыш бөткәс тә үлде, исйуғы бер биш йыл йәшәмәне (эйек). Иссуғы (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, әй)

**ИСКИТАЛ** (әй) *и.* ҡыҙыл тал — *верба красная*

**ИСКӘРЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* иҫкә алыу — *чтить, вспоминать.* Искәреп баралар икән

**ИС-ҠОҢҒО, ИС-ҠУС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* иҫ — *память.* Аның ис-ҡоңғоһо да йуҡ

**ИСЛЕКӘЙ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөтнөк — *мята.*67 Ислүлән (төньяҡ-көнбайыш)

**ИСЛЕКӘЙ II** (гәйнә, минзәлә) *и.* ҡандала — *клоп.* Ислекәйне ағыулай торған дарыу кирәк (минзәлә). Ислекәйләре күп, йоҡлай алмадым (гәйнә)

**ИСЛЕҠУРАЙ** (ҡариҙел) *и.* ҡырлыҡурай — *порезник*

**ИСМАҺА** (ҡыҙыл) *к.* исмаһам — *хотя бы, хоть бы*

**ИСПӘТ** (мейәс) *и.* утын балтаһы — *колун (топор для колки дров)*

**ИССУҒАТА, ИСУҒАТА** (әй) *р.* бигерәк, саманан тыш — *чрезмерно, сверх меры.* Иссуғата алдашып тормаһаң. Һин иссуғата китәһең

**ИСТӘК** (көнсығыш диалект) *и.* ҡаҙаҡ халҡының башҡортҡа ҡарата ҡулланған һүҙе — *слово, употребляемое казахами по отношению к башкирам*

**ИҪ: ИҪ АЛМАШТЫРЫУ** (урта) *ҡ.* иҫен юғалтыу — *потерять сознание.* ◊ Иҫауылжыу (дим), иҫ ауылийыу (дим, урта), иҫ үңгәлеү (эйек-һаҡмар) хыялый булыу — *помутиться (о разуме).* Беҙ барып ингәндә, иҫе үңгәлеп йата ине (эйек-һаҡмар). Иҫ инеү (эйек-һаҡмар) иҫкә килеү — *прийти в себя;* иҫ йотоу, иҫ ҡороу (урта) иҫ китеү — *изумляться, удивляться.* Һырғый ҡарағайҙарҙы иҫе ҡороп ҡараны (урта); иҫ кертеү (урта) иҫкә төшөрөү — *припомнить;* иҫтән гитеү (урта) онотолоу — *забыться;* иҫ әйләнеү (гәйнә) иҫен юғалтыу — *лишиться чувств;* иҫ ауышыу (ҡыҙыл, әй) иҫтән яҙыу — *потерять сознание*

**ИҪ-АҠЫЛ: ИҪ-АҠЫЛ ҠОРОУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йөҙәп бөтөү, теңкә ҡороу — *замучиться.* ◊ Иҫ-аҡыл гитеү (ҡыҙыл, мейәс) бик ныҡ аптырау — *сильно удивиться.* Иҫ-аҡылы гитеп килеб иңгән (ҡыҙыл)

**ИҪАУАЛ** (дим) *с.* иҫәр — *глупый.* Иҫауан (мейәс, урта), иҫәүән (эйек-һаҡмар), иһәүән (ҡыҙыл)

**ИҪ-ҒОҪ** (мейәс) *и.* еҫ-маҙар — *какой-то запах.* Бер иҫ-ғоҫ та йуҡ

**ИҪЕМ** (дим, туҡ-соран, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* исем — *имя.* Иҫем ҡыйағаҙы (дим). Иҫеме ауылдың шул өс ағай-эненән (эйек-һаҡмар). Иҫеме барҙыр әле (урта). Аның ысын иҫеме Мәрйәм, ә Сағай ҡушамат иҫеме (дим).

Тыуған илләремдә йаҙып
Ҡалтырҙым иҫемемде.
Хатларымты уҡырһығыҙ,
Күралмаҫһығыҙ үҙемте (урта) *(Халыҡ йырынан)*

**ИҪЕМДӘҮ** (ҡариҙел, эйек-һаҡмар) *ҡ.* исем ҡушыу — *дать имя.* У тиктеһен ней тиб иҫемдәйбеҙ (ҡыҙыл). Иҫемнәү (туҡ-соран, эйек)

**ИҪЕМЛЕКЛӘҮ** (дим) *ҡ.* ололау — *почитать, уважать.* Олоҫон иҫемлекләп абзый тип әйтә инде

**ИҪЕМНӘҮ** (туҡ-соран, урта) *ҡ.* иҫнәү — *зевать.* Иҫәннәү (урта, ырғыҙ), иҫеннәү (дим, эйек-һаҡмар)

**ИҪЕНДЕРЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эйһенеү — *задержка молока при доении (о корове).* Тиҙерәк һау, һыйырҙы иҫендерәһең

**ИҪЕНӘ ҺАЛЫУ** (салйоғот, әй) *ҡ.* хәтеренә һалыу — *запоминать.* Иҫенә һалып утырған кеше иҫте була (әй)

**ИҪЕРЕК** (һаҡмар) *с.* алйот — *глупый*

**ИҪЕРЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡаңғырыу — *отупеть (от забот).* Был самауыр иҫертә инде ҡайнамай

**ИҪЕРТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бал ҡортон төтәҫләү — *обкуривать пчел*

**ИҪЕРТКЕЛЕК** (ҡыҙыл) *и.* иҫерткес — *спиртное*

**ИҪКЕ I** (арғаяш, дим, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Йүргәк — *пеленка.* 2. (арғаяш, салйоғот) Иҙән балаҫы — *половик*

**ИҪКЕ II** (эйек) *с.* ҡарт, оло — *старый, пожилой.* Беҙ әбей белән иҫке шул, онотабыҙ

**ИҪКЕ АУЫРЫУ** (һаҡмар) *и.* быума — *эпилепсия*

**ИҪКЕ-БОҪКО** (ҡыҙыл) *и.* иҫке-моҫко — *старье, хлам.* Иҫке-оҫко (урта)

**ИҪКЕ ЙЕР** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ҡарағура — *бурьян*

**ИҪКЕ ЙӨН** (эйек) *и.* ҡауҙан — *шерсть-линька (животных)*

**ИҪКЕРТЕҮ** (урта) *ҡ.* иҫкә алыу — *вспомнить.* Онотҡаннарымды ла иҫкерттем бит әле

**ИҪКӘРЕҮ, ИСКӘРЕҮ** (ҡариҙел, әй) *ҡ.* иҫләү — *помнить.* Ул мужит иҫкәрер (әй)

**ИҪЛЕ I** (урта, ырғыҙ) *с.* ҙур — *большой.* Ошонан иҫлерәк мендәр (ырғыҙ). Туғырлама күгәүендән иҫлерәк (урта). Иҫте (әй)

**ИҪЛЕ II** (дим) *с.* еҫле — *душистый.* Иҫле йәрән

**ИҪЛЕ-ИҪӘҮӘН** (һаҡмар) *с.* алйот — *глупый*

**ИҪЛЕЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* аҡыл кереү — *поумнеть*

**ИҪНӘТЕҮ** (урта урал) *ҡ.* иҫкәртеү — *предупредить*

**ИҪҪЕҘ** (әй) *с.* онотоусан, иҫһеҙ — *забывчивый.* Кит, иҫҫеҙ, тағы онотҡаһың да

**ИҪТЕ** (көнсығыш диалект) *с.* 1. Иҫле — *имеющий хорошую память.* 2. (урта урал, эй) Өлкән — *взрослый.* Улына һигеҙ йәш тулды, иҫте инде хәҙер (урта урал). Анау ҡыҙы беҙҙекенән иҫтерәк (эй). 3. (урта урал) Зирәк — *сообразительный*

**ИҪТӘН АУЫУ** (мейәс) *ҡ.* иҫтән яҙыу — *потерять сознание*

**ИҪТӘН ГИТЕҮ** (урта) *ҡ.* онотолоу — *забыться*

**ИҪТӘН ТӨШӨҮ** (эйек) *ҡ.* иҫтән сығыу — *позабыть*

**ИҪ-УШ** (дим) *и.* иҫ-аҡыл — *разум.* Иҫе-ушы дөрөҫ

**ИҪ ҮҢГӘЛЕҮ** (эй) *ҡ.* иҫәрләнеү — *помешаться (о разуме)*

**ИҪҺЕҘ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *с.* алйот — *глупый.* Әллә малайы иҫһеҙ инде (туҡ-соран)

**ИҪӘЙЕҮ** (ҡыҙыл, урта урал, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* аҡыл кереү — *поумнеть.* Был малай иҫәйгән инде (эйек-һаҡмар). Исәйү (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш)

**ИҪӘННӘҮ** (мейәс, ырғыҙ) *ҡ.* иҫнәү — *зевать.* Кит, иҫәннәб утырмале ҡаршымда (мейәс)

**ИҪӘҢКЕРӘҮ** (дим) *ҡ.* иҫәңгерәү — *одуреть, обалдеть.* Исәңкерәү (ҡариҙел), иһәңгерәү (ҡыҙыл)

**ИҪӘҢКЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* иҫәңгерәү — *одуреть, обалдеть.* Һәр кем шунан иҫәңкеп, ней эшләргә белмәй ине

**ИҪӘҮ** (эйек-һаҡмар) *с.* иҫәр — *глупый*

**ИТАҒАТТЫ** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *с.* итәғәтле — *послушный*

**ИТЕК: ИТЕК ЙЕБЕ** (ҡыҙыл, урта) *и.* ишкән еп — *дратва.* Итек тегемнеге (ҡыҙыл); Итек ҡолағы (мейәс) итек элгесе — *петля (на голенище сапога)*

**ИТЕҮ: ТУЙ ИТЕҮ** (урта) *ҡ.* туй үткәреү, яһау — *справить свадьбу.* Туй итергә минең хәлем йуҡ

**ИТ ҠАБЫ** (мейәс) *и.* туйға кейәүҙең ата-әсәһенән килгән күстәнәс — *гостинец, присланный родителями жениха*

**ИТҠЫҘЫЛ** (арғаяш) *с.* үтә ҡыҙыл — *ярко-красный*

**ИТЛЕЙ** (минзәлә) *и.* ташбаш — *пескарь.* Итлей йар буйында этлей

**ИТЛЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һуғымлыҡ — *убойный скот.* Итлеккә бозау суйабыз

**ИТЛӘН** (урта, эйек) *с.* итләс — *мясистый.* Итлән һыйыр

**ИТЛӘҮ I** (дим) *и.* алҡым — *подъем ноги.* Айаҡ итләүе

**ИТЛӘҮ II** (дим, ырғыҙ) *ҡ.* һабыу — *союзить (в сапожничестве).* Итләү беҙе

**ИТМЕШ: КӨН ИТМЕШ** (һаҡмар) *и.* йәшәү, тормош — *жизнь, бытие.* Көн итмеш арыу

**ИТМӘК** (эйек-һаҡмар) *и.* икмәк — *хлеб.* Итмәге лә уңмай ул һыуға тейгән ашлыҡтың. Йыуасаға ла шул ит тә, сэй, итмәгең барыһы ла инә инде

**ИТТАПАУЫС** (мейәс) *и.* тәпке — *тяпка (для рубки мяса).* Итсапҡыс (урта)

**ИТ ТОТМАУ** (дим) *ҡ.* һимермәү, ит ҡунмау — *не поправляться.* Ит тотмай торған мал

**ИТ-ТӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һимеҙлек, таҙалыҡ — *упитанность.* Иттән-төннән төшкәс, хәл бетәйкән

**ИТ ТУҒАН** (урта) *с.* бер туған — *родной*

**ИТТУМА I** (мейәс, урта) *р.* ул тиклем — *настолько.* Иттума ҡарт кеше түгел, йәш әле (мейәс)

**ИТТУМА II** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *с.* бер туған — *родной.* Иттума, шулай бит (урта). Иттыума (эй). Иттыума туғаның түгелдәуыл

**ИТТЫУМА** (эй) *с.* яҡын ҡәрҙәш — *близкий родственник.* Иттыума туғаны була тороп шунда кешелә тора икән

**ИТТӘП** (ҡыҙыл) *р.* иплэп, һаҡ ҡына — *осторожно.* Иттәп кенә баһып бара

**ИТТӘҮ I** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* тиреләгә йоҡа ит ҡатламы — *пленочное мясо (на шкуре животных)*

**ИТТӘҮ II** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* тиренең эске ит ҡатламын әләктереп тегеү — *шить шкуру с наизнанки.* Иттәү беҙе

**ИТӘБАРА** (нөгөш) *р.* бара-тора — *постепенно, со временем*

**ИТӘГОСО** (урта) *и.* иң аҫҡы балитәк — *нижняя оборка на платье.* Итәгосло күлдәк тектем

**ИТӘГӨҪ** (урта, дим) *и.* билдәге балитәк — *оборка на талии платья.* Әүәле итәгөҫлөнө кейҙек (урта)

**ИТӘК I** (мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Балитәк — *оборка.* Итәкле күлдәк теккән (эйек-һаҡмар). Эй, элек итәкләр салып тегерейек (төньяҡ-көнбайыш). Икешәр итәкле, бишәр итәкле күлмәк кейә торғайныҡ (ырғыҙ). 2. (дим) Ашъяулыҡ аҫтынан йәйелә торған сигеүле материал — *вышитый материал, расстеленный под скатерть.* Өҫтәл итәге

**ИТӘК II** (дим) *и. юбка.* Ҡара итәк кейгән ҡыҙ кылубҡа килеп инде

**ИТӘК АҪТЫ** (дим) *и.* әҙеп — *оторочка.* Итәк аҫты һүтелгән

**ИТӘК: ИТӘК ТОТОУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ярарға тырышыу — *подхалимничать*

**ИТӘК ҠАТЫ** (ҡыҙыл) *и.* балитәк — *оборка*

**ИТӘКЛӘҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* етәкләү — *водить (за руку).* Баласын итәкләгән кем? Итәктәү (эй)

**ИФАРАТ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* ифрат — *очень, чрезвычайно.* Ифарат зур

**ИФТАРЫ** (һаҡмар) *р.* ифрат — *очень, чрезвычайно*

**ИХАҢНАУ** (дим) *ҡ.* хихылдау — *хихикать*

**ИХКОХҠО** (ҡыҙыл) *и.* иҫке-моҫҡо — *старье, хлам*

**ИХКӘРЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* иҫләү — *вспомнить*

**ИХЛАСТАП** (ҡыҙыл, эй) *р.* ихласлыҡ менән — *с душой, с увлечением.* Ихластап кереште ул бы эшкә (ҡыҙыл)

**ИХТИРАЗ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* 1. Зәғиф — *искалеченный.* Мынау ихтираздың тороуы (мейәс). Ихтираж (ҡыҙыл). 2. Йүнһеҙ — *бестолковый*

**ИХҺЕҘ** (ҡыҙыл) *с.* иҫһеҙ — *беспамятный, рассеянный*

**ИХЫЛТАУ** (урта) *ҡ.* хихылдау — *хихикать*

**ИҺ** (ҡыҙыл) *и.* иҫ — *память.* Иһкә төшмәй

**ИҺАЛЙУҠҠА** (эйек-һаҡмар) *р.* алъюҫыҡҡа — *попусту, понапрасну.* Иһалйуҡка көйөнә лә ултыраһың икән һин

**ИҺАУАТ** (дим) *и.* ухыуат — *ухват*

**ИҺАҺАЙ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* ҡағараҡ — *чернозобая гагара.* Иһәһәй (һаҡмар). Шулайтып ҡысҡыра, анда-мында бер килеп ҡысҡыра, ҡарғалай бурлауыраҡ була (һаҡмар)

**ИҺАҺАЙЛАУ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* 1. Иһаһайлау — *хихикать.* Нимә иһаһайланың тағы (эйек-һаҡмар). 2. (эй) Ҡуштанланыу — *заискивать (перед мужчинами)*

**ИҺЕРГӘҮ** (мейәс) *ҡ.* йәлләү — *жалеть.* Иһергәп алып ҡайтҡандар

**ИҺЕРТЕҮ** (эйек) *ҡ.* йонсотоу — *мучить.* Сағып иһертәләр ҡортлары

**ИҺКЕ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *с.* иҫке — *старый.* Иһке генә көпә гейгән (ҡыҙыл)

**ИҺКЕ ЙӨН** (салйоғот) *и.* баҡта — *шерсть (при весенней линьке лошадей и коров)*

**ИҺӘН I** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* иҫән — *здоровый*

**ИҺӘН II** (салйоғот) *и.* иҙән — *пол.* Иһәне йарыҡты

**ИҺӘН-АМАН** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* иҫән-һау — *живздоров*

**ИҺӘН ИҺКЕҺЕ** (салйоғот) *и.* иҙән балаҫы — *половик*

**ИҺӘННӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* иҫнәү — *зевать.* Иһәнәү (ҡыҙыл, мейәс). Бала иһәнәй, йоҡтатыр гәрәк (ҡыҙыл)

**ИҺӘННӘШЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* иҫәнләшеү — *здороваться.* Иһәннәшеп китмәй булмай

**ИҺӘҢГЕРӘТЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *к.* иҫәнгерәтеү — *оглушить*

**ИҺӘПСЕЛ** (эйек-һаҡмар) *с.* иҫәпсел — *рассчетливый.* Ҡырҡылсан, иһәпсел әбей әле ул

**ИҺӘР** (арғаяш) *с.* иҫәр — *глупый*

**ИҺӘҮӘН** (эйек-һаҡмар) *с.* иҫәүән — *глупый*

**ИЧАҠ** (гәйнә) *р.* иртәнсәк — *утром*

**ИШАНА: ИШАНА ҘУР** (мейәс, эй) *с.* бик ҙур — *очень большой*

**ИШАНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* ышаныу — *верить.* Малайым буғас ишанам

**ИШАРАТ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар, эй) *и.* йорат — *подобие.* Эх, һин, әҙәм ишараты (эйек-һаҡмар)

**ИШЕ** (дим, ҡыҙыл, мейәс, урта) *р.* кеүек — *подобно, как.* Беҙҙең ише ҡара ҡорһаҡҡа (дим). Ошонан ише өрәнергә гәрәк (ҡыҙыл)

**ИШЕГАЛ** (гәйнә, ҡариҙел, урта урал, эй) *и.* ишек алды — *двор.* Ишағал (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал)

**ИШЕГАЛДЫ** (дим) *и.* 1. Күтәрмә — *крыльцо.* Ишағалты (дим, ҡариҙел). Ишағаллары бейек (ҡариҙел). Ишегалты (урта). 2. (дим) Солан — *сени.* Ишағал, ишегал (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш)

**ИШЕГ АҠСАҺЫ** (ҡыҙыл) *и.* йәшеренгән ҡыҙҙы алыу өсөн ишек асыусы еңгәгә кейәү тарафынан бирелгән аҡса — *деньги, выдаваемые женихом снохе, чтобы пройти через дверь к спрятанной невесте*

**ИШЕК: ИШЕК ПЫУЫУ** (арғаяш) *ҡ.* 1. Кейәү килгәс, ҡыҙҙар ишектән уны аҡса бирмәйенсә индермәй тороу — *преграждение девушками двери жениху к невесте до тех пор, пока он не одарит их деньгами.* 2. Килен килгәс, малайҙар ишектән аҡса бирмәйенсә уны индермәй тороу — *преграждение двери невесте мальчиками, пока она их не одарит деньгами.* Айҡыры ағас ман ишекте ике малай быуа, ҡыҙҙы керетмәҫ өсөн

**ИШЕК БАУЫ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* 1. Йәшеренгән ҡыҙҙы алыу өсөн ишек асыусы еңгәгә кейәү тарафынан бирелгән аҡса — *деньги, выдаваемые женихом снохе, чтобы пройти через дверь к спрятанной невесте.* Ишекте асмаһ борон ишек бауы бирәләр (ҡыҙыл). Ишек бауы бер тәңкә, беҙҙең апай мең тәңкә тейләр (һаҡмар). ◊ Ишек бауы һатыуҙашыу (ҡыҙыл, мейәс) йәшерелгән ҡыҙҙы һатып алыу — *дать выкуп за спрятанную невесту.* Ишек пауы (һаҡмар). Ҡыҙҙы тапҡас, ишек пауын буш бирмәйҙәр, һатып бирәләр (һаҡмар). 2. (мейәс) Ишек тотҡаһы — *ручка дверная*

**ИШЕК БҮРКЕ** (арғаяш) *и.* ишек башы — *вершник*

**ИШЕК ЙАҒЫ** (мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ишек яңағы — *дверной косяк.* 2. (урта) Ишек төбө — *преддверье.* Ишек йаҡ (эйек-һаҡмар)

**ИШЕК ЙАҠТАУЫ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ишек яңағы — *дверной косяк*

**ИШЕК ТИМЕРЕ** (дим, урта, эйек) *и.* ишек күгәне — *дверная петля*

**ИШЕК ТОТҠОСО** (ҡариҙел) *и.* ишек тотҡаһы — *ручка дверная*

**ИШЕК ТУПҪАҺЫ** (эй) *и.* 1. Ишек төбө — *преддверье.* 2. (ҡариҙел, эй) Ишек күгәне — *дверная петля*

**ИШЕК ЭЛГӘҺЕ** (һаҡмар) *и.* ишек элгесе — *дверной крючок.* Ишек элмәге (арғаяш)

**ИШЕЛЕП АҒЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* шәп ағыу — *быстрина.* Бик ишелеп аға икән

**ИШЕЛЕҮ I** (гәйнә) *ҡ.* туҡмалыу — *быть побитым*

**ИШЕЛЕҮ II** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ишетелеү — *слышаться.* Йуҡ ишелмәде (гәйнә). Ишелмей анысы (гәйнә). Жыр тавышы ишелә (гәйнә). Хәҙер Ҡарман турысында тағы ишелә (төньяҡ-көнбайыш). Сүҙдә әзерәк ишелеп ҡала инде ул (дим)

**ИШЕМ ЙЕП** (мейәс) *и.* ишкән еп — *свитая нитка*

**ИШЕМТЕЛӘҮ, ИШЕНТЕЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* емләү — *засахарить (бражку, медовуху).* Балды ишемтеләп йаңыртып алабыҙ. Ишләү (туҡ-соран)

**ИШЕМТӘ: ИШЕМТӘГӘ ҠУШЫМТА** (көнсығыш диалект) *и.* иш янына ҡуш — *пара к паре*

**ИШЕНЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* ишеү — *вить (веревку).* Гел ишендем

**ИШЕТМЕШ** (дим, көнсығыш диалект, ҡариҙел, урта, эйек-һаҡмар) *р.* ишетеп, ишетеп кенә — *понаслышке.* Ишетмеште һөйҙәмәйем, үҙем күргәнде һөйҙәйем (ҡыҙыл). Тарихи йаҙыуы булмаҫа ла ишетмеш беләм (дим). Мин кешенән ишетмеш белән генә әйттем (һаҡмар). Ишетмәксе (эйек-һаҡмар). Мин ишетмәксе генә беләм. Эшетмеш (эй)

**ИШЕТӘ ҠАЛЫУ** (урта) *к.* ишетелгәндәй булыу — *послышаться.* Мин тә ишетә ҡалам

**ИШЕҮ I** (дим) *ҡ.* йөҙөү — *плавать*

**ИШЕҮ II** (гәйнә) *ҡ.* 1. Сиратыу — *сучить.* 2. (гәйнә, урта урал) Үреү — *заплетать.* Чәч ишеү (гәйнә)

**ИШЕРЕЛЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ишелеү — *обвалиться.* Башҡа ҡарлы боҙҙай ишерелеп төшкән был хәбәрҙән телһеҙ ғалдыҡ

**ИШКЕНЕҮ** (урта) *ҡ.* эшкә ярарлыҡ — *быть пригодным.* Малайым та ишкенә башланы хәҙер

**ИШКӘК** (урта) *и.* ҡоштарҙың йөҙөү ярыһы — *плавательная перепонка птиц (на лапках)*

**ИШКӘЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* 1. Баш ауырыуҙан яфаланыу — *мучиться от головной боли.* 2. Депрессия хәлендә булыу — *быть в депрессивном состоянии*

**ИШКӘНТЕҮ** (урта) *ҡ.* 1. Тәнгә сабыртма ҡалҡыу — *появление сыпи на теле.* 2. (һаҡмар) Тәнгә шеш сығыу — *появление нарывов на теле*

**ИШҠАНДАҠ** (мейәс) *и.* шиҡандаҡ — *кокетка, вертушка*

**ИШЛЕК** (урта) *и.* мая — *подкладень (яйцо, подкладываемое в гнездо, чтобы курица здесь неслась)*

**ИШЛҮҢКӘ** (арғаяш) *и.* шленка *(нәҙек йөнлө тоҡом һарыҡ һәм уның йөнө) — шленка*

**ИШМӘ** (гәйнә) *и.* сарыҡһабаҡ, еп ос — *дратва*

**ИШМӘЛЕ БЕҘӘЛЕК** (ҡыҙыл) *и.* ишмә беләҙек — *витой браслет.* Беҙәлегем ишмәле, кейһәм дә килешмәне (халыҡ йырынан)

**ИШМӘРСОҠ** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* сиратҡы орсоғо — *веретено сучильное*

**ИШТИҺАТЛЫ** (урта) *с.* илтифатлы — *почтительный, внимательный.* Кешегә иштиһатлы

**ИШЫРЫУ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* гөрөү — *сгрести.* Ышырыу (дим, ҡыҙыл, һаҡмар), эшереү (төньяҡ-көнбайыш). Ишырып ҡына сығарҙылар аҡларны (ҡариҙел)

**ИШ-ЫРЫУ** (гәйнә) *и.* туғандар, яҡындар — *родные, близкие*

**ИШӘЛӘНЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* 1. Аяҡтың быуыны бөтөү — *заплетаться (о ногах).* Ишәләнгән сағынта ҡыуып барып тоттолар бүрене. 2. Батыу — *~~вязнуть~~ (в снегу).* Ҡыр кәзәсен ҡарға ишәләнгән уахытта атып алалар. 3. (урта урал) Ураланыу — *крутиться под ногами.* АйаҒ араһында ишәләнмә

**ИШӘНЕҮ** (арғаяш, салйоғот) *ҡ.* сирҡаныу — *испытывать отвращение*

**ИШӘҮӘТЬЕҘ** (мейәс) *с.* килбәтһеҙ — *неуклюжий*

# Й

**ЙА** (арғаяш, урта) *и.* 1. Йәйә — *лук (оружие).* 2. Ян, йөнтеткес — *шерстобитка.* Йәйә (дим)

**ЙАА** (гәйнә) *ы.* ғәжәпләнеү ымлығы — *междометие, выражающее удивление*

**ЙАБ** (дим, ҡариҙел) *и.* йәп — *развилина.* Сәнәк йабың сыңған (дим)

**ЙАБАҒА** (дим, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *и.* ябағы — *шерсть-линька (весенняя).* Йабағасын ҡойа бит йылҡы малы (дим). Йабаҡ (ҡыҙыл, урта), йабаҡай (мейәс). 2. (урта, эйек-һаҡмар) Яҙғы йөн — *шерсть весенней стрижки.* Жабаға (төньяҡ-көнбайыш), йабағы йөн (ырғыҙ)

**ЙАБАҒАЙҘАНЫУ** (мейәс) *ҡ.* япһарыу — *свалить (вину на кого-либо).* Йабағайҙанып торма инде

**ЙАБАҒЫ** (ҡыҙыл, дим, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ябаҡ — *жеребенок до годовалого возраста.* Йал-ҡойроғон ҡырҡканса йабағы йабаҡ була (ҡыҙыл)

**ЙАБАҠ-ТАЙЛАҠ** (урта) *и.* тай-тулаҡ — *молодняк (о лошадях)*

**ЙАБАЛАҠ I** (урта урал) *и.* ялағай — *зарница*

**ЙАБАЛАҠ II** (гәйнә) *с.* аңра — *несообразительный*

**ЙАБАЛАҠ КҮҘ** (урта) *с.* шар күҙ — *лупоглазый.* Йабалаҡ күҙле кеше

**ЙАБАЛДАШ** (эйек-һаҡмар) *с.* тәбәнәк — *низкорослый.* Йабалдаш мал

**ЙАБАНЫУ** (ҡыҙыл) йыбаныу — *лениться*

**ЙАБҒЫ** (һаҡмар) *и.* тоҡом — *порода.* Мышы һыйырҙың йабғыһы

**ЙАБРАЙЫЛ** (ҡыҙыл) *и.* ғазраил — *азраил (ангел смерти)*

**ЙАБРЫЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* 1. Йалбыр — *лохматый.* Йабрый башлы ағас. 2. Һалыңҡы — *отвислый.* Йабрый ҡабаҡлы кеше

**ЙАБЫҠ** (арғаяш, мейәс) *с.* ярлы — *бедный.* Йабыҡ өй

**ЙАБЫҠЛАУ** (урта) *ҡ.* ябығыу — *исхудать.* Йабыҡтау (мейәс). Шу тиклем йабыҡтаны

**ЙАБЫУ** (арғаяш, ырғыҙ, эйек-һаҡмар, әй) *и.* 1. Өй, кәртә-ҡура түбәһе — *крыша, кровля.* Йабыуы булманы өйҙөң (эйек-һаҡмар). Һарай йабыуы тишелгән (арғаяш). 2. (ырғыҙ, эйек-һаҡмар, әй) Түшәк, кейем өҫтөнә ябылған ябыу — *накидка, занавес.* Йарлының йабыуы — болот, арғымағы — айаҡ, йылытҡысы — йүгереү, тей торғайнылар борон заманда (эйек-һаҡмар). 3. Мал өҫтөнә ябылған ябыу — *попона.* Һыйырға йабыу килешмәй *(әйтем).* 4. Йүшкә — *вьюшка.* Мейес йабыуы

**ЙАҒА I** (ҡариҙел, мейәс, урта урал, әй) *и.* 1. Селтәр — *нагрудник (женское нагрудное украшение из монет, кораллов и бисера).* Йағаның мына ошондай өлөштәре була: иң өҫтө — һапма, аға йетә — ҡыйыу, анан түбән — бүлмә, шунан — ҡор, билдек, селтер, өхкө тойаҡ, тойаҡ тәңкәһе (мейәс). 2. (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш, әй) Муйынса — *ожерелье (из монет, бус и цветных камней)*

**ЙАҒА II** (ҡыҙыл) *и.* бәлә — *беда.* Әсәһе улан йағаһынан үлеп ҡалды

**ЙАҒАЙҘАҢҒЫР** (ҡыҙыл) *и.* ҡарғыш һүҙе — *слово проклятия.* Һуй, йағайҙаңғырҙың торған буғаны

**ЙАҒАҠ I** (урта, эйек) *и.* 1. Яңаҡ — *челюсть.* 2. Сикә — *висок*

**ЙАҒАҠ II** (ҡыҙыл) *р.* йәнәш — *рядом.* Йағаҡ барабыҙ

**ЙАҒАЛ** (ҡыҙыл) *с.* ҡола-ерән — *булано-саврасый (о масти лошади)*

**ЙАҒАЛАУ I** (һаҡмар) *и.* әйләнә — *окружность*

**ЙАҒАЛАУ II** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* шаяртыу — *подшутить.* Йағала әле, Хәтирә, шул ҡоҙаны, бер ҡыҙыҡ буһын

**ЙАҒАЛБАЙ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* яғылбай — *дербник.* Йалан ғына йерҙә ай йағалбай, бүҙәнәләр тибеп алалмай (эйек-һаҡмар)

**ЙАҒАЛҒОШ** (мейәс) *и.* яғылбай — *дербник*

**ЙАҒАЛ-ЙОҒАЛ** (ҡыҙыл, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *р.* тимгел-тимгел — *пятнами (испачкаться).* Улым, күлдәгеңдең алды йағал-йоғал булып бөткән (ҡыҙыл). Кәстүмең йағал-йоғал булып бөткән, бензин белән таҙартһаңсы (эйек-һаҡмар)

**ЙАҒАЛАҠ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* шау тәңкәнән эшләнгән муйынса — *ожерелье сплошь из монет*

**ЙАҒАНЫС, ЙАҒЫНЫС** (дим, мейәс, урта, һаҡмар) *и.* йоғаныс — *масло для сосков коровы (перед*

*дойкой).* Йелененә йаҒаныс йаҒыу (мейәс). ЙаҒымыс (ҡыҙыл), йаҒымыс, йаҒыс (мейәс), йаҒынды (дим)

**ЙАҒАТӨП** (гәйнә) *и.* шау тәңкәнән эшләнгән күкрәксә — *женское нагрудное украшение сплошь из монет*

**ЙАҒИТӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* шау тәңкәнән эшләнгән күкрәксә — *женское нагрудное украшение сплошь из монет*

**ЙАҒОСО** (ҡыҙыл) *и.* сикә — *висок*

**ЙАҒЫЛБАЙ** (урта урал) *и.* ялаҒай — *зарница*

**ЙАҒЫЛМА** (дим) *и.* йоҒаныс — *масло для смазывания сосков коровы (перед дойкой).* ЙаҒылмыс (эйек-һаҡмар)

**ЙАҒЫЛМАЙ** (мейәс) *и.* яҒылбай — *дербник*

**ЙАҒЫЛМАҠЛЫ** (мейәс, урта) *с.* һөйкөмлө, яҒымлы — *симпатичный, привлекательный*

**ЙАҒЫЛЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* 1. Һырышыу, һырыҒыу — *льнуть.* Уҡытыусыларға йаҒылып торҙом (ҡыҙыл). 2. *с.* илгәҙәк — *приветливый, любезный.* 3. (һаҡмар) Күңелгә ятыу, оҡшау — *быть по душе.* Шу хәтлем йөрәгемә йаҒылып бара һеҙен һөйләгән һүҙегеҙ

**ЙАҒЫМ** (эйек-һаҡмар) *и.* туҡлыҡ — *сытность.* ЙаҒымы бумай ул урман бесәненең, кәүек кенә була

**ЙАҒЫМДЫ** (арҒаяш, ҡыҙыл, эй) *с.* 1. Һөйкөмлө — *симпатичный.* 2. Илгәҙәк — *приветливый, любезный.* ЙаҒымны (урта, эйек-һаҡмар). ЙаҒымны Ғына бала (эйек-һаҡмар)

**ЙАҒЫМҪЫҘ** (дим) *с.* һөйкөмһөҙ — *несимпатичный*

**ЙАҒЫМТА** (ҡыҙыл) *с.* яҒымлы — *приветливый.* Ул кешегә йаҒымта у. ЙаҒымтал, йаҒымтам (эйек-һаҡмар). ЙаҒымтал Ғына тей үҙләре. ЙаҒымчан (гәйнә)

**ЙАҒЫНДАН** (эйек-һаҡмар) *р.* яҒынан — *со стороны (отца, матери).* Атай йаҒындан туҒан

**ЙАҒЫН СӘЙНӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* әрләшеү — *ругаться.* Утыра шунда йаҒын сәйнәп

**ЙАҒЫРЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* ҡаҙна, йөҙлөк — *облицовка нар*

**ЙАҒЫУ** (мейәс) *ҡ.* тоҡандырыу — *зажечь (лампу).* Шәм йаҡты

**ЙАҒЫШЛЫ** (урта) *с.* һөйкөмлө — *симпатичный*

**ЙАДЫ** (гәйнә) *и.* йылмаяҡ — *проныра*

**ЙАҘА** (дим) *и.* 1. Яза — *наказание.* 2. (көнсыҒыш диалект) *р.* яңылыш — *ошибочно.* Әллә йаҙа булдымы?

**ЙАҘА-ЙОҘА** (арҒаяш, ҡыҙыл, мейәс, эй) *р.* саҡ-саҡ, саҡ ҡына — *чуть-чуть, немножко.* БороңҒо тормошто йаҙа-йоҙа күреп ҡалдым (мейәс). Йаҙа-йоҙа эшетеп ҡалдым (эй)

**ЙАҘАЛАТА** (арҒаяш) *р.* яңылыш — *ошибочно.* Йаҙалата һөйҙәйең

**ЙАҘАМЫҒЫҘ** (эй) *ҡ.* яҙаһыҒыҙмы — *пишете?* У йаҡка ла барып йаҙамыҒыҙ?

**ЙАҘАТАЙЫМДАН** (мейәс, урта, ырҒыҙ, эйек-һаҡмар) *р.* аңҒармаҫтан — *нечаянно, невзначай.* Йаҙатайымдан сәйнәр, гел ҡарап тораңмы (мейәс). Йаҙатайымдан әйтеп һалдым (эйек-һаҡмар). ҠыуҒынсы ҡайһы саҡта йаҙатайымдан һыуҒа төшөп аҒып та китә (урта). Йаҙатайым, йаҙымдантайым (гәйнә), йаҙатайым (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАҘҒА ҺАЛЫМ** (һаҡмар) *р.* яҙҒа табан — *к весне.* ЙаҙҒа һалым барымын

**ЙАҘҒЫ ЙОРТ** (ҡыҙыл, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* яҙлау — *весеннее кочевье*

**ЙАҘҒЫЛЫҠ I** (урта) *и.* яҙҒы йөн — *весенняя стрижка шерсти*

**ЙАҘҒЫЛЫҠ II** (дим, эйек-һаҡмар) *р.* яҙ — *весна.* ЙаҙҒылыҡ, йаҙлыҡ (төньяҡ-көнбайыш). ЙаҙҒылыҡ әйбәт килер (төньяҡ-көнбайыш). ЙаҙҒылыҡ сыуыҡ булты (ҡариҙел). Йаҙлыҡ (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАҘҒЫРМАУ** (эй) *ҡ.* күҙ яҙҙырмау — *не упускать из виду.* Килгән-киткәнде йаҙҒырмай таҒы үҙе

**ЙАҘҒЫРЫУ** (мейәс) *ҡ.* яҙҙырыу — *лишить.* Тәүфиҡтәренән йаҙҒырмаһын. Йулдан йаҙҒырыу

**ЙАҘҒЫ ҪЫУ** (дим) *и.* гөрләүек — *ручей (от таяния снега)*

**ЙАҘҘЫҒЫУ** (көнсыҒыш диалект) *ҡ.* 1. Аҙашыу — *сбиться с пути.* 2. Яҙа атыу — *промахнуться (при стрельбе).* Мылтыҡ яҙҙыҒыу. 3. Яҙылыу — *выпрямиться.* Бөгәҙе йаҙҙыҒып китеп тороп һуҡты айаҒына. 4. Ояҡа ҡалыу — *позориться.* Һунарсынан нисәмә кәрәк һораным бүре тотоу серен, әйтмәй, әллә йаҙҙыҒам тип ҡурҡа инде. 5. (эй) ЮҒалыу — *исчезнуть*

**ЙАҘЛАУЫС** (урта) *и.* яҙҒы бәрәс — *ягненок весеннего окота*

**ЙАҘЛЫҒЫУ: ЙУЛДАН ЙАҘЛЫҒЫУ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Йулдан яҙҙырыу — *сбиться (с пути).* Бер үк йулдан йаҙлыҒа күрмә инде, улым, тип йалбарып ҡалды әсәйем (эйек-һаҡмар). 2. ЮҒалыу — *потеряться.* Һырт менән арыраҡ китһәң, тумалаҡ йул бара-бара ла йаҙлыҒа (урта). 3. Яҙылыу — *распустить (губы).* Ҡасан Ғына ҡарышып ҡыҫылҒан ирендәре көстән тайып йаҙлыҡҡаннар (эйек-һаҡмар). 4. Аймылыш булыу — *расходиться (в пути)*

**ЙАҘЛЫҠТА** (дим, урта, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *р.* яҙын — *весной.* Йаҙлыҡта ҫабан туйы була торҒайны (дим)

**ЙАҘ ТУРҒАЙЫ** (һаҡмар) *и.* һабан турҒайы — *жаворонок*

**ЙАҘЫҠ I** (ҡыҙыл, мейәс, урта урал, эйек-һаҡмар) *р.* яңылыш — *ошибочно.* Әйтәйем тиһәм, йаҙыҡ булыр тейем (мейәс)

**ЙАҘЫҠ II** (ҡыҙыл) *и.* ҡышҡы йылҒыр юл — *укатанная зимняя дорога.* Йаҙыҡ йул йалтырап йата

**ЙАҘЫҠ III** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *с.* яҙылҒан — *разогнутый.* Дуҫаң бик йаҙыҡ икән (эйек-һаҡмар)

**ЙАҘЫЛЫУ** (урта, эй) *ҡ.* 1. ҺауыҒыу — *выздоравливать.* 2. (дим) Йөҙө яҡтырыу — *просветлеть (о лице).* Кейәүен күргәс йаҙылып китте

**ЙАҘЫҢҠЫ** (ҡыҙыл) *с.* тигеҙ — *ровный.* Бы тирә йаҙыңҡы

**ЙАҘЫРТЫН** (эйек-һаҡмар) *р.* 1. Аңғармаҫтан — *нечаянно.* 2. Яңылыш, йаҙа — *ошибочно, невпопад.* Йаҙыртын йөрөп ташлаҒанмын

**ЙАҘЫУАҠСА** (дим) *и.* ҡаҒыҙ аҡса — *бумажные деньги*

**ЙАЗМАР** (ҡыҙыл) *и.* күтәрем — *охапка*

**ЙАЙ** (арҒаяш) *и.* йәй — *лето.* Йай буйы эштәне тоҡорораҡ ҡына урта буйҙы геше

**ЙАЙА** (мейәс) *и.* йәйә — *лук (оружие)*

**ЙАЙҒАЛЛАНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* юхаланыу — *подхалимничать*

**ЙАЙҘАҠ, ЙАЙҘАҒАШ** (арғаяш) *и.* итһеҙ аш — *постный суп.* Йайҙаҡ өрә, йайлаҡ өрә (урта). Кискә йайҙаҡ өрә бешерермен инте. Йайҙаҡ һалма (мейәс)

**ЙАЙҘАУЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* әкренәйеү — *замедлиться.* Йайҙауылдаһаң ништәр?

**ЙАЙҠАЛИЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* яйлау — *медлить.* Фәүзиә килен йайҡалийып, иртә килмәй торған. Йайҡалийып торма инде, ығышып

**ЙАЙЛАУ** (урта) *ҡ.* ыңғайлау — *направиться.* Атын ҡыуып, ауыл осона йайлай

**ЙАЙМАН I** (урта) *с.* яй — *медлительный*

**ЙАЙМАН II** (ҡариҙел) *и.* ауырыу түшәге — *постель больного.* Йайманда йатҡаным йуҡ сирләп

**ЙАЙНАУ** (һаҡмар) *ҡ.* иркенләү — *чувствовать себя свободно.* Йайнап тороп үҙең эшләмәгәс

**ЙАЙПЫ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Яйла — *плоскогорье.* Анан ары тау йайпыға китә (эйек-һаҡмар). 2. *с.* йәйенке — *плоский.* Йайпы үҙәк. Йайпы йер

**ЙАЙПЫН** (мейәс, эй) *и.* йылғаның киң урыны — *широкое место реки*

**ЙАЙПЫС** (ҡыҙыл) *и.* һарыҡ тоҡомо — *порода овцы.* Йайпыстың бәрәне күп була

**ЙАЙСА** (эйек-һаҡмар) *р.* үҙ яйына — *на свой лад.* Йайса ғына ашап ултырығыҙ, ҡунаҡлар!

**ЙАЙҺЫНЫУ** (урта) *ҡ.* тартыныу — *чувствовать неловкость*

**ЙАЙЫН** (ырғыҙ) *р.* яй — *медленно.* Йайын ғына барайыҡ

**ЙАҠ I** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* яңаҡ — *челюсть.* Аҫҡы йаҡ, өҫкө йаҡ. Уй, йағың талғыры! (мейәс). Бәләкәй башлы, йоҡаҡ йаҡлы ат йөрөмлө була (ҡыҙыл)

**ЙАҠ II** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, эйек-һаҡмар, эй) *к.* юҡ — *нет.* Эшкә бардыңмы? — Йаҡ (гәйнә). Йаҡ та! Йыуындыра (ҡариҙел)

**ЙАҠ III** (дим, мейәс, туҡ-соран, урта, һаҡмар) *и.* яҡтау — *косяк (у окон, дверей).* Ишек йағы талдырмай, әбәк-һәбәк йөрөп торҙолар (урта). Ишек йағы, тәҙрә йағы (һаҡмар)

**ЙАҠ IV** (урта урал, һаҡмар) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня.* Йағында йүнле кеше йуҡ (урта урал)

**ЙАҠА** (дим, төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* яға — *воротник.* Йаҡалар ҡуйып, бәбәйтәкләр ҡуйып тегәдерейек (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАҠАЛАУ** (урта) *ҡ.* яғалау — *взять за шиворот*

**ЙАҠАЧЫЛБЫР** (гәйнә) *и.* тәңкә сылбыр баулы муйынса — *монетные подвески*

**ЙАҠ: ЙАҠ ЙАТМАУ** (туҡ-соран, урта) *ҡ.* 1. Туҡтауһыҙ илау — *плакать, не переставая.* 2. Туҡтауһыҙ һөйләү — *болтать.* ◊ Йаҡ сәйнәү *(һүҙ көрәштереү)* — *препираться*

**ЙАҠ ЙЕҘӘГЕ** (ҡыҙыл) *и.* урт — *полость между зубами и щекой*

**ЙАҠҠА** (дим) *б.* табан — к. киске йаҡҡа бәлки булыр. Киске йаҡҡа ҡайта

**ЙАҠЛАУ I** (урта) *и.* айғолаҡ — *жабры*

**ЙАҠЛАУ II** (һаҡмар) *и.* яҡтау — *косяк (у окон, дверей)*

**ЙАҠЛЫ** (урта, эйек-һаҡмар, ырғыҙ) *с.* яҡты — *светлый.* Йаҡлы гүҙ *(көн яҡтыһы)* — *засветло.* Йаҡлы гүҙҙә ҡайтып ҡал (эйек-һаҡмар)

**ЙАҠЛЫЙОНДОҘ** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* Зөһрә — *Венера (планета).* Йаҡлы йолдоз (төньяҡ-көнбайыш, урта урал)

**ЙАҠЛЫҠ** (эйек-һаҡмар) *р.* яҡлы — *на одной стороне.* Улар бер йаҡлыҡ булып алды

**ЙАҠЛЫРЫУ** (урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *ҡ.* яҡтырыу — *рассветать.* Таң һыҙылып ата, йаҡлыра гилә (эйек-һаҡмар). Төһләрең йаҡлырып китте (эйек-һаҡмар)

**ЙАҠЛЫ ҺЫУ** (эйек-һаҡмар) *и.* таҙа, тонoҡ һыу — *прозрачная, чистая вода*

**ЙАҠМЫШ** (ҡариҙел) *и.* шәңкә — *ватрушка*

**ЙАҠ ОСО** (мейәс) *и.* бит һөйәге — *скула*

**ЙАҠТАУ** (арғаяш) *и.* ҡаҙна — *бревно или толстая доска по краю башкирских нар, на которой делается настил*

**ЙАҠТАУ-ЙАҠТАУ** (урта) *и.* яҡ-яҡ — *сторонниками, группами.* Йаҡтау-йаҡтауы белә булған

**ЙАҠТАШЫУ-ЙАМҺАҠТАУ** (мейәс) *ҡ.* ҡурсалау — *защитить.* Йаҡташыр-йамһаҡтар гешеһе йуҡ

**ЙАҠТЕШ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* аҙау теш — *коренной зуб.* Йаҡтеш кенәһе барҙырмы, йуҡтырмы? (эйек-һаҡмар)

**ЙАҠТЫРЫЛЫУ** (минзәлә) *ҡ.* яҡтырыу — *светать.* Йаҡтырылды иртән

**ЙАҠШЫ ИТЕҮ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* насарлыҡ эшләү — *подстроить.* Йаҡшы итеп йөрөй икәнһең! (ҡыҙыл)

**ЙАҠЫ I** (мейәс, эй) *с.* 1. Йөнө ҡойолған тире — *облезлая шкура.* Ҡыҙы барҙың наҙы бар, ҡама гүрпәһе лә бар, ҡыҙы йуҡтың наҙы ла йуҡ, йаҡы тиртоно ла йуҡ (мейәс). 2. (мейәс) Иләнгән тире — *выделанная шкура*

**ЙАҠЫ II** (урта) *с.*ябыҡ — *тощий*

**ЙАҠЫНБАБАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Олатай — *дедушка (со стороны отца).* 2. Күрше бабай — *сосед (дедушка)*

**ЙАҠЫНДАШ** (дим) *и.* туған — *родственник.* Йаҡындашым килгән тей

**ЙАҠЫН-ТҮГӘРӘК** (урта) *и.* йаҡын-тирә — *то, что расположено вблизи, неподалеку*

**ЙАҠЫНБЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өләсәй — *бабушка (со стороны отца)*

**ЙАҠЫНҒЫ** (гәйнә) *с.* яҡындағы — *ближний.* Мин йаҡынғы теүгел, тей

**ЙАЛ: АЙАҠ ЙАЛЫ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар, эй) *и.* йомош үтәгән өсөн түләү — *плата за выполнение поручения.* Мына бы бер тәңкә айаҡ йалы өсөн булыр, ал, улым (эйек-һаҡмар)

**ЙАЛ: САЛҒЫ ЙАЛЫ** (ҡыҙыл, туҡ-соран) *и.* салғы төйҙәһе — *обух косы*

**ЙАЛАУ** (һаҡмар) *и.* элмәк — *вешалка (на одежде)*

**ЙАЛАҒАЙ I** (арғаяш, дим, мейәс, урта, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Арамъя — *халтурщик.* 2. (мейәс, салйоғот, эйек-һаҡмар) Ялҡау — *лентяй.* 3. (һаҡмар) с. баҫалҡы — *спокойный, смирный*

**ЙАЛАҒАЙ II** (һаҡмар) *и.* көләпәрә — *мужская легкая островерхая шапка, закрывающая уши и шею*

**ЙАЛАҒАЙ III** (урта) *и.* ятыу — *омут*

**ЙАЛАҒАЙ: ЙАМҠЫР ЙАЛАҒАЙЫ** (урта) *и.* йәшен — *молния*

**ЙАЛАЙЫР** (һаҡмар) *и.* Йылайыр — *Зилаир (ойконим)*

**ЙАЛАН** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* гел — *всегда (постоянно).* Йалан бергә булмабыз

**ЙАЛАН АБҘАР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ялан кәртә — *загон.* Йалан аҙбар (урта), йалан арбаҙ (дим, урта)

**ЙАЛАН БЕЛЕҺЕ** (ҡыҙыл) *и.* беле — *большой крохаль*

**ЙАЛАН БОЖЫРЫ** (ҡариҙел) *и.* ағуна — *белая куропатка*

**ЙАЛАН БУРАНЫ** (мейәс) *и.* һепертмә буран — *поземка*

**ЙАЛАН ГИНДЕР** (арғаяш, эй) *и.* һирәк һуғылған киндер — *неплотно вытканый холст*

**ЙАЛАН ГҮКРӘК** (эйек) *и.* оҙон арба — *дроги*

**ЙАЛАНДИР ТӘКӘҺЕ** (урта) *и.* һаралйын — *бекас*

**ЙАЛАНДЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* аҡлан — *поляна*

**ЙАЛАН-ЙАПАН** (дим, урта, урта урал) *и.* ҡыр — *поле.* Йаланға-йапанға сығалар (дим). Йалан-йапанда йөрөһәм, ҡайғым тарала (урта урал). Йалан-йафан (ҡариҙел). Йалан-йафан йуҡмы сиңә

**ЙАЛАНҠАБАТ** (ырғыҙ) *с.* ябай — *простодушный*

**ЙАЛАНҠАТ** (гәйнә) *с.* ябай — *простодушный*

**ЙАЛАН САНА** (арғаяш) *и.* утын санаһы — *дровни*

**ЙАЛАНСАЙАҠ** (дим, туҡ-соран) *р.* ялан аяҡ — *босиком.* Выймам тишек, йалансайаҡ ҡайттым (туҡ-соран). Әүәле киленнәр айаҡ-тувыҡ кұрҫәтмәгән, йалансайаҡ йөрөмәгән (дим)

**ЙАЛАН САЙЫН** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* гел — *постоянно*

**ЙАЛАН СЕЛЕ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Һоро ағуна — *серая куропатка.* 2. (урта) Ваҡ сел — *мелкий рябчик.* 3. (ҡыҙыл) Туғаҙаҡ — *дрофа*

**ЙАЛАН ТУРҒАЙЫ** (дим, урта) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**ЙАЛАН ТӘПӘЙ** (ҡариҙел) *р.* ялан аяҡ — *босиком*

**ЙАЛАНҺЫР** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бушап, ялан кеүек булып ҡалыу — *опустеть.* Ишеккәйем алды баланлыҡ, баланларын алһаҡ йаланһыр

**ЙАЛАНЫ** (мейәс) *и.* ерлеге — *фон.* Йаланы аҡ, сәскәһе һары тауар

**ЙАЛАНЫС** (ҡариҙел) *р.* яланғас — *голый*

**ЙАЛАНҒАТ** (мейәс, салйоғот) *р.* яланғас — *голый*

**ЙАЛ АРТЫ** (урта) *и.* дүшәмбе — *понедельник.* Йал арты көн (дим)

**ЙАЛАТЫУ** (туҡ-соран) *ҡ.* һуғыу — *ударить.* Санаға ултырыу менән дилбегәне тартып, атын сыбыртҡы белән ныҡ ҡына йалатып алды

**ЙАЛАУ** (һаҡмар) *и.* элмәк — *вешалка (на одежде).* Бәлтәндең йалауы өҙөлгән

**ЙАЛБАНЫУ** (урта) *ҡ.* алданыу — *обмануться.* Теленә йалбанып бирҙем

**ЙАЛБЫР** (дим) *с.* килешһеҙ — *неподходящий.* Йалбыр кейем

**ЙАЛБЫРЛАҠ** (урта) *и.* ваҡ ситса киҫәктәрен ялбырлатып теккән ҡорама ябыу — *лоскутное покрывало.* Йалбырсаҡ (арғаяш). Урындыҡҡа йалбырсаҡ ташта

**ЙАЙҒАЛЛАНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* юхаланыу — *подлизываться*

**ЙАЛҒАН ИНӘЙ** (салйоғот) *и.* ҡиәмәтлек әсәй — *посажёная мать*

**ЙАЛҒАН СОЛАН** (дим) *и.* төкәтмә — *пристрой*

**ЙАЛҒАН ТӘҢКӘ** (ҡыҙыл) *и.* талир тәңкә — *немецкая серебряная монета*

**ЙАЛҒАНЫУ** (эй) *ҡ.* тамаҡ ялғау — *перекусить, чуть-чуть поесть.* Шул һыйыр аҫрап йалғана туғайныҡ

**ЙАЛҒАУ I** (мейәс) *ҡ.* теркәү — *зарегистрировать.* Кенәгәгә йалғау

**ЙАЛҒАУ II** (урта) *и.* өҫкө балитәк — *оборка на талии платья*

**ЙАЛҒАШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Тағараҡ — *кормушка.* 2. (гәйнә) Улаҡ — *желоб*

**ЙАЛҒЫЗ-ЙАРЫМ** (ҡариҙел) *р.* ишһеҙ — *без пары.* Йалғыз-йарым дәштек

**ЙАЛҒЫЙАН** (ҡариҙел) *и.* 1. Ялағай — *подхалим.* 2. (урта урал) *с.* сая, үткер — *бойкий.* Йалғыйандан йал көтмә

**ЙАЛДАҠ, ЙӘЛДӘК** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ялҡау — *лодырь.* Оло малайыбыҙ йалдаҡ, бөтә эшкә ошо кинйә малайым йөрөй (ырғыҙ)

**ЙАЛДАНМЫШ** (ҡыҙыл) *и.* ялланып эшләүсе — *наемник.* Зауытка йалданмыш булып эштәнем

**ЙАЛДАУ I** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* урғылъян — *выбоина (в земле, на дороге)*

**ЙАЛДАУ II** (мейәс) *ҡ.* юныу — *обтесать.* Балта ман йалдаған

**ЙАЛДАУ III** (ҡыҙыл) *ҡ.* яллау — *нанимать.* Бы йырҙы тай биреп, бер гешене йалдап сығартҡан Зөлхәбирә

**ЙАЛДЫМ** (дим) *и.* ятыу — *омут*

**ЙАЛҠАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* маңка ауырыуы — *сап (болезнь животных)*

**ЙАЛҠАУ: ЭТ ЙАЛҠАУЫ** (мейәс) *с.* үтә ялҡау — *очень ленивый.* Ата йалҡау (көнсығыш диалект)

**ЙАЛҠАУ ҒОРТ** (арғаяш) *и.* һоро ҡорт — *трутень*

**ЙАЛҠЫҠ ЙЕҪ** (ырғыҙ) *и.* юғары температура менән ауырыған кешенән килә торған ауыр еҫ — *тяжелый запах, который несется от больного с высокой температурой*

**ЙАЛҠЫН I** (урта) *и.* маңка ауырыуы — *сап (болезнь животных)*

**ЙАЛҠЫН II** (гәйнә) *и.* рәшә — *мгла.* Йалҡын суға ашлыҡны

**ЙАЛҠЫЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ялтылдау — *блестеть, сиять*

**ЙАЛҠЫН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* үт — *желчь.* Йалҡын ҡоҫтом (ҡыҙыл)

**ЙАЛҠЫС** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ялҡытҡыс — *утомительный.* Кеше ауылында йалҡыс түгелме (ҡариҙел)

**ЙАЛМАҒАЙ** (урта) *и.* бирән — *обжора*

**ЙАЛМАЙАҠ** (һаҡмар) *и.* һәптән — *пройдоха.* Күп теләһимәне һөйләп анда ла йетешә, мында ла йетешә йалмайаҡ

**ЙАЛМАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Үҙәк ялғау, тамаҡ ялғау — *перекусить.* Әҙерәк йалманып алайыҡ та, эшкә тотонайыҡ. 2. (ҡыҙыл) Тамшаныу, яланыу — *облизываться*

**ЙАЛМАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Ҡомһоҙланып ашау — *есть с жадностью.* Һыйыр үләнде йалмап йота. 2. (эй) Ялау — *облизывать.* Быҙауын һыйыр йалмай

**ЙАЛПАЙЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* йыуанайыу — *потучнеть.* Һәйрүҙә ҡалай йалпайып киткән (ҡыҙыл)

**ЙАЛПАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, ырғыҙ) *с.* 1. Яҫы битле — *широколицый.* Йалпаҡ битте бер геше гилеп инде (ҡыҙыл). 2. (арғаяш) Тупаҫ — *грубый.* Йалпаҡ тел мән һөйҙәшәбеҙ

**ЙАЛПАҠ АЛАБУТА** (дим) *и.* аҡ алабута — *лебеда белая*

**ЙАЛПАҠ БОРСАҠ** (салйоғот) *и.* ҡара борсаҡ — *бобы*

**ЙАЛПАҠ ӘРЕМ** (салйоғот) *и.* тау әреме — *полынь горная*

**ЙАЛПАРЫУ** (дим) *ҡ.* ялпаҡланыу — *сплющиться*

**ЙАЛПАШ, ЙӘЛПӘШ** (эйек-һаҡмар) *с.* ялпаҡ — *сплюснутый.* Йалпаш танаулы кеше

**ЙАЛПАШҠА** (урта) *и.* табан балыҡ — *карась*

**ЙАЛПАШЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ялпаҡланыу — *стать сплюснутым*

**ЙАЛПЫ** (һаҡмар) *р.* 1. Күп — *много.* Иң йалпы урынына барығыҙ. 2. *с.* дөйөм — *общий.* 3. Берҙәм — *дружный.* Йарлы булдыҡ, йалпы булдыҡ

**ЙАЛПЫ ЙЕР** (урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* уйһыулыҡ — *низина*

**ЙАЛПЫЛДАҠ I** (ҡыҙыл) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**ЙАЛПЫЛДАҠ II** (ҡыҙыл, ырғыҙ) *и.* балитәк — *оборка.* Йалпылдаҡты гүлдәк кейгән (ҡыҙыл)

**ЙАЛПЫЛДАҠ III** (эйек) *с.* алсаҡ — *приветливый*

**ЙАЛПЫЛДАУ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Өлтөрәү — *быть приветливым.* 2. (дим) Ярамһаҡланыу — *подхалимничать.* Йалпылтау (урта)

**ЙАЛСАЙ** (ырғыҙ) *и.* ялсы — *наемник.* Йәй йетһә йалсай китә лә бара инеләр

**ЙАЛСЫМАУ** (мейәс, эй) *ҡ.* 1. Хәлләнмәү — *не улучшаться (о здоровье).* 2. Йәлсемәү — *жить всю жизнь в нищете*

**ЙАЛСЫТЫУ** (мейәс, эй) *ҡ.* кинәндереү — *получать удовольствие.* Күлдәгемде йалсытып текмәне (мейәс). Кейемде йалсытып текмәне (эй)

**ЙАЛСЫУ** (мейәс, урта, эй) *ҡ.* йәлсеү — *иметь пользу, выгоду*

**ЙАЛТ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* бик тиҙ, күҙ асып йомғансы — *мигом.* Канитә йалт сатып ҡайтты йоморҡасын

**ЙАЛТАҒАЙ** (салйоғот) *с.* хәйләкәр — *хитрый*

**ЙАЛТАМБЕЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* көрөҫ сығыры — *блок (на ткацком станке)*

**ЙАЛТАН** (эйек-һаҡмар) *и.* ялҡау — *лентяй*

**ЙАЛТАНДАҠ** (ҡыҙыл) *с.* юха — *хитрый*

**ЙАЛТАНДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* алан-йолан ҡараныу — *озираться; воровато озираться.* Ништәп алай йалтандайың?

**ЙАЛТАНЛАНЫУ, ЙАЛТАННАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ялҡауланыу — *облениться.* Йалтанлана башлаһа, ҡыу ҙа йебәр үҙен

**ЙАЛТАНЛЫҠ, ЙАЛТАННЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* ялҡаулыҡ — *леность.* Йалтанлыҡҡа килгәндә, миңә берәүегеҙ ҙә йетмәй

**ЙАЛТАНЫУ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* ялт итеп үтеү — *проскочить*

**ЙАЛ ТАРТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ял итеү — *отдыхать*

**ЙАЛТАРЫУ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* тайпылыу — *увернуться.* Персиҙәтелде күргеһе кимәй, йалтарырға тырыша (ҡыҙыл)

**ЙАЛТАС** (урта) *с.* 1. Ялтыр, шыма — *блестящий, гладкий.* Шешек урыны йалтас булып ҡалты. 2. Ялтыр баш — *лысый*

**ЙАЛТАСЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* ялтырау — *блестеть*

**ЙАЛТЛАС** (урта) *с.* ялтыр — *блестящий.* Йалтлас башлы бер кеше килеп китте

**ЙАЛТТАУ** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *ҡ.* ялтырау — *блестеть.* Йебәк сапаны йалттап тора (мейәс)

**ЙАЛТЫН-ЙОЛТОН ИТЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* ялт-йолт итеү — *сверкать.* Йалтын-йолтон торайы ышлыйалары аларныҡы

**ЙАЛТЫР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сабаҡ — *плотва*

**ЙАЛТЫРАЙ** (урта) *с.* ҡыҙыу, яндырай — *вспыльчивый*

**ЙАЛТЫРАЙЛАНЫУ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ярамһаҡланыу — *подхалимничать*

**ЙАЛТЫРАҠ I** (ҡыҙыл) *и.* ялтырауыҡ — *блесна*

**ЙАЛТЫРАҠ II** (арғаяш) *с.* тонoҡ — *прозрачный.* Йалтыраҡ һыу

**ЙАЛТЫРАС** (ҡыҙыл) *и.* ялтырауыҡ — *блесна*

**ЙАЛТЫРАУ** (арғаяш, мейәс) *ҡ.* 1. Йәшен йәшнәү — *сверкнуть (о молнии).* 2. Яҡты йөҙ менән ҡаршы алыу — *встречать приветливо.* Барып инһәң йалтырап тора (арғаяш)

**ЙАЛТЫРАУЫҠ** (урта) *и.* ваҡ сабаҡ — *мальки сорожек*

**ЙАЛТЫРГӨПШӘ** (ҡыҙыл) *и.* айыу көпшәһе — *болиголов крапчатый.* Йалтыргөпшә таҡыйа сәскәле була

**ЙАЛТЫРҠА I** (ҡыҙыл) *с.* алсаҡ, ирәбе — *приветливый, любезный*

**ЙАЛТЫРҠА II** (ҡыҙыл) *с.* йоҡа сабаҡ — *сорожка (плоская)*

**ЙАЛТЫРЛАУ** (урта) *ҡ.* йәшнәү, ялтырау — *сверкнуть (о молнии).* Йәшен йалтырлай

**ЙАЛТЫР МАҢДАЙЛЫ** (ҡыҙыл) *с.* аҡыллы, алсаҡ — *умный, приветливый.* Кейәүем һәйбәт, йалтыр маңдайлы

**ЙАЛТЫРСА** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* ваҡ сабаҡ — *мальки сорожек*

**ЙАЛТЫР САБАҠ** (мейәс) *и.* ваҡ сабаҡ — *мальки сорожек*

**ЙАЛТЫШ** (эйек-һаҡмар) *и.* күкен — *сопа, синец (рыба)*

**ЙАЛЫҠҺЫНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ялҡыу — *утомиться.* Йалыҡһыным инде, аны бешермәйерәк торам

**ЙАЛЫҠҺЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ялҡыу — *утомиться.* Был эштән йалыҡһып бөттөм инде

**ЙАЛЫНҺЫТЫУ** (арғаяш) *ҡ.* күмһеү — *пригореть (о молоке).* Йаңы һөттө йалынһытмай ғына ҡайнат

**ЙАЛЫНҺЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Ялҡын тәме, көйгән тәм килеү — *пахнуть подгорелым.* Ашың йалынһыған (мейәс). 2. (эйек-һаҡмар) Һауыт-һабаның

ян-яғы, сите көйөү — *обгореть (о краях посуды).* Сэйнүгең йалынһып киткэн, таҙартып алһаңсы. 3. (салйоғот) Икмэктең йөҙөн ялҡын һуғыу — *подгореть (о хлебе)*

**ЙАМ** (ҡыҙыл, мейэс, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, эйек-һаҡмар, эй) *и.* 1. Соҡор — *яма.* Дегет йамы. Кирбес йамы. 2. (дим) Мөгэрэп — *погреб.* Бэрэңге йамы

**ЙАМАЙАҠ, ЙАМЫЙАҠ** (дим, минзэлэ, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ағас ороһонан яһалған сеүэтэ — *деревянная чаша средней величины.* Борон йамайаҡлар тутырып ҡымыҙ эсэ инек (дим). Йамыйаҡты алты сум белэн апҡайтҡаныйы (төньяҡ-көнбайыш). Жамиаҡ (төньяҡ-көнбайыш). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Балсыҡ туҫтаҡ, каса — *пиала*

**ЙАМАҠАЙ** (ҡыҙыл, мейэс, урта, эй) *с.* 1. Насар, яман — *плохой, дурной.* Бисэһе һэлэк йамаҡай тей ҙэ (эй). Йамаҡай күлдэк кейеп алған (ҡыҙыл). Йэшен болото бик йамаҡай килэ (мейэс). Йамаҡ (дим, эйек-һаҡмар). 2. Йэмһеҙ — *отталкивающий*

**ЙАМАҠАЙЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* йэмһеҙлэнеү, насарланыу — *подурнеть.* Йаматайланыу (гэйнэ)

**ЙАМАН** (арғаяш, ҡыҙыл, мейэс, урта, һаҡмар, эй) *р.* бик, бик нык, үтэ — *очень, слишком.* Борон иген йаман уңа торғайны (һаҡмар). Туй йаман бара (урта). Ул йаман матур йаҙа (мейэс). Йаман матур (арғаяш). Йаман һуғышҡаннар (һаҡмар). Алар йаман байыған (урта)

**ЙАМАНАУЫҘ** (эй) *и.* 1. Насар хэбэр килтереүсе — *сообщивший неприятность.* 2. (туҡ-соран) Яман һүҙ — *брань.* Бик изгелек итэлэр, йаманауыҙ сүҙ ишеткэнем йуҡ

**ЙАМАНАУЫРЫУ** (дим, урта) *и.* түлэмэ — *сибирская язва*

**ЙАМАНДАШЫУ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейэс) *ҡ.* асыуланышыу — *рассориться.* Йамандашмаҫ кеше бумаҫ (мейэс). Йаманнашыу (урта)

**ЙАМАННАТЫУ** (һаҡмар) *и.* түлэмэ — *сибирская язва.* Йаманнау (эйек-һаҡмар)

**ЙАМАНРЭНЙЕҮ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* быума — *эпилепсия*

**ЙАМАНСЕБЕН** (урта) *и.* һуҡыр себен — *мошкара*

**ЙАМАНСИР** (ҡариҙел) *и.* түлэмэ — *сибирская язва*

**ЙАМАНСЫЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* яманһыулау — *скучать, тосковать*

**ЙАМАНТАЙ, ЙАМАТАЙ, ЙАМЫТАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* насар, яман — *плохой, дурной*

**ЙАМАНШЕШ** (һаҡмар) *и.* 1. *Рак.* 2. Кила — *рожа.* 3. (ҡариҙел) Һыйыҡ — *туберкулез желез*

**ЙАМАНЭСБЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡылауыр — *золотуха.* Йаманэсбе биткэ, тэнгэ ҡыҙыл ҡапҡас күк ҡалҡа. Ҡарайып батып китсэ, бала бер-ике көннэн үлэ

**ЙАМАТАЙЛАНЫУ** (гэйнэ) *ҡ.* насарланыу — *подурнеть*

**ЙАМАШ** (мейэс) *и.* һөҙһөт — *удод*

**ЙАМБАШ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейэс, урта, эй) *и.* 1. Иңбаш — *плечо.* Йарты йамбашым ауырта (ҡыҙыл). 2. (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) Ултырыш — *ягодица*

**ЙАМҒУР** (мейэс, ҡыҙыл, мейэс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ямғыр — *дождь.* Таңныҡ ҡыҙарҙы йамғур йауыр (эйек-һаҡмар). Йамғур йауа баштаны (ҡыҙыл). ◊ Баһма йамғур (ҡыҙыл, мейэс) ямғыр алдынан ауырайтыу — *отяжелеть (перед дождем).* Кеше баһыла, йамғур булыр ахыры (мейэс). Ҡуна килгэн йамғур (урта) оҙаҡҡа һуҙылған ямғыр — *затяжной дождь;* суҡ йамғыр (мейэс, урта) тар һыҙат булып йауған ямғыр — *дождь, проходящий полосой;* шыбаҡ йамғур, шырым ямғур (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) тар һыҙат булып йауған ямғыр — *дождь, проходящий полосой.* Йамҡыр (урта)

**ЙАМДАУ** (мейэс) *и.* турһыҡ — *бурдюк.* Йаннау (эйек-һаҡмар)

**ЙАМУРТАЙ** (арғаяш) *и.* туйға күстэнэс итеп алып барыла торған иҫерткес эсемлек — *опьяняющий напиток (гостинец), привезенный на свадьбу*

**ЙАМҺАҠЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* боҙолоу, боҙолоп китеү — *испортиться, разлагаться (о теле).* Йарам төҙэлмэй, тағы йамһаҡлап китте

**ЙАМҺАҠТАУ** (мейэс) *ҡ.* ҡурсалау — *оградить*

**ЙАМЫЙАҠ** (дим, минзэлэ) *и.* ағас ороһонан яһалған боронғо табаҡ — *старинная деревянная чаша*

**ЙАН I** (дим, ҡариҙел, мейэс, урта) *и.* йэн — *душа.* Йан башына бирҙелэр (дим). Йаныбыҙ көйэ (урта)

**ЙАН II** (ҡыҙыл, мейэс) *и.* йөн тетэ торған ян — *шерстобитка*

**ЙАНАҒА, ЙАНАҒАЙ** (мейэс, минзэлэ, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡэйнеш — *младший деверь*

**ЙАНАҠ** (урта) *и.* яңаҡ — *косяк (у окон и дверей)*

**ЙАНАУЫС, ЙАНЫУҒЫС, ЙАНУС** (ҡариҙел, урта) *и.* яныуыс — *брусок (точильный).* Йанауыс (ҡыҙыл, дим, эйек-һаҡмар)

**ЙАНАШ** (арғаяш, мейэс, урта, урта урал, эй) *р.* йэнэш — *рядом.* Йанаша (эйек-һаҡмар)

**ЙАНАША КЕЙЭҮ** (арғаяш) *и.* кейэү егете — *шафер*

**ЙАНАШТАП** (мейэс) *р.* ҡушлап, икэүлэп — *вдвоем*

**ЙАНБАЙ** (ҡыҙыл) *и.* һантый — *безумец, дуралей.* Кит, йанбай

**ЙАНДАП** (ҡыҙыл) *р.* ҡушлап, йэнэш — *рядом.* Кейэүҙе йандап килэ, һаҡтап. Һэҙер ултыралар йандап

**ЙАНДАУ I** (һаҡмар) *и.* 1. Сикэ — *виски.* 2. (мейэс) *ҡ.* сикэлэү — *дать пощечину.* Килэ гилеп йандап таштаны

**ЙАНДАУ II** (эйек-һаҡмар) *и.* япҡаҡ — *боковые стойки (у телеги)*

**ЙАНДАУ III** (арғаяш, ҡыҙыл, мейэс, урта урал) *ҡ.* сутлау — *обтесать.* Бүрэнэне эстэн йандап йөрөй ине (мейэс)

**ЙАНДАУ IV** (арғаяш, мейэс) *и.* һэндерэ — *полати.* Ҡайҙа буһын, йандау өҫтөндэлер (мейэс)

**ЙАНДАУАРЛАП** (эйек) *р.* ҡушлап, йэнэш — *рядом.* Ана, йандауарлап килэ йаталар

**ЙАНДАУЫР** (эйек-һаҡмар) *и.* япҡаҡ — *боковые стойки (у телеги).* Ниндэй ауырһыу, арбаның йандауыры мэйшэйеп китте

**ЙАНДАШ** (дим) *и.* дуҫ — *друг*

**ЙАНДЫРАЙ** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Ҡыҙыу — *вспыльчивый.* 2. (мейэс) Алсаҡ — *приветливый.* 3. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Өтөк, сабырһыҙ — *нетерпеливый.* 4. (мейэс) Маҡтансыҡ — *хвастливый.* 5. (мейэс, эй) Эсе-тышы бер кеше — *душа нараспашку*

**ЙАНДЫРАЙЛАНЫУ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡыҙыу — *вспылить.* Йандырайланып ни эш ҡыраһың (эйек-һаҡмар)

**ЙАНДЫУ** (гәйнә) *и.* ҡыҙҙың еңгәһе — *сноха невестки, которая ухаживает за новобрачными*

**ЙАН-ЙАҘМЫШ** (дим) *и.* хаҡ-яҙмыш — *судьба*

**ЙАНҠАЙ** (һаҡмар) *и.* йәнкәй — *душенька.* Алтын йөҙөк, фирүзә ҡаш йанҡай бармаҡларында *(халыҡ йыры)*

**ЙАНҠЫЙНАУ** (урта) *ҡ.* яфаланыу — *мучиться*

**ЙАНСА-ЙӨРӘКӘЙ** (арғаяш) *и.* йәнкәй — *душенька*

**ЙАНСЫҠ** (урта) *и.* кәшен — *мешок, сшитый из телячьей шкуры шерстью наружу*

**ЙАНҪЫНА** (һаҡмар) *р.* янына — *к нему.* Туғанының йанҫына барғыҫы килде

**ЙАНТАҠ** (мейәс) *с.* 1. Эйелгән — *наклоненный.* Йантаҡ иҙән. 2. (ҡыҙыл) *и.* кәйелтмәк — *раскат на зимней дороге.* Йантаҡ йул

**ЙАНТАРЫУ** (мейәс) *ҡ.* 1. Янтайыу — *уклониться.* 2. Япһарыу — *свалить что-то на кого-либо.* Кешегә йантарыу

**ЙАНТАУ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәшерелгән ҡыҙҙы оҙатыусы ағаһы — *брат невесты, сопровождающий ее в дом жениха*

**ЙАНТАУ II** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* 1. Күнәсек — *маленькая ведерка, сделанная из полого ствола дерева.* Бер йантау ҡатыҡ, бер һыныҡ күмәсемде артмаҡлап сығып киттем (урта). 2. (мейәс) Тәпән — *бадья*

**ЙАНТАУ III** (арғаяш) *ҡ.* сутлау — *обтесать.* Бүрәнә йантай

**ЙАНТЕГЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* интегеү — *мучиться.* Уртаға суҡкан йылан кебек мына шулай йантегеп йәшәйсең инде

**ЙАН-ТИРӘ** (һаҡмар) *и.* тирә-яҡ — *окрестность.* Йан-тирәһе биҙәреп бөткән

**ЙАНТУРҺЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* турһыҡ — *бурдюк*

**ЙАНТЫРАЙ** (урта) *с.* ҡыҙыу — *вспыльчивый*

**ЙАНУАР I** (эй) *и.* маҡтау, хуплау ымлығы — *междометие одобрения, восхваления.* Их, йануар, йыры ла йыры

**ЙАНУАР II** (ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, һаҡмар) *и.* януар — *зверь*

**ЙАНФАРМАН** (төньяҡ-көнсығыш, урта) *р.* йәнфарман — *во всю мочь.* Ашау тигәндә йанфарман, эшкә тигәндә мин бармам. Йәмфарман (ҡыҙыл)

**ЙАНҠАУ, ЙАНҠЫУ, ЙАНҺАЛАУ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Йәнәшләп барыу — *идти рядом.* 2. Ҡайғыртыу — *опекать.* Теге мине һаман йанһай (ырғыҙ). 3. Һағалау — *подстерегать*

**ЙАНҺЫУ** (ҡыҙыл) *и.* яҡындағы, эргәләге һыу — *близлежащая вода*

**ЙАНЫЙЫМ** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* йәнем — *душенька.* Бар күңелемде сарыф иттем, һин йаныйыма йарарға *(халыҡ йыры)*

**ЙАНЫП-КӨЙӨҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Юғары температура менән ауырыу — *болеть с высокой температурой.* 2. (ҡыҙыл, эй) Ныҡ ҡайғырыу — *сильно переживать.* Шу балдар тип йанып-көй ҙә утыр (ҡариҙел)

**ЙАНЫП ТОРОУ** (мейәс) *ҡ.* өлтөрәп тороу — *быть приветливым, радушным (по отношению к гостям)*

**ЙАНЫШЫУ** (ҡариҙел, урта урал) *ҡ.* 1. Янау — *угрожать.* 2. (гәйнә, ҡыҙыл, эй) Талашыу — *скандалить*

**ЙАНЫУ I** (көнсығыш диалект) *и.* яныуыс — *брусок (точильный)*

**ЙАНЫУ II: БАРМАҠ ЙАНЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* бармаҡ янау — *погрозить пальцем*

**ЙАНЫУАР** (урта урал) *и.* моңһоҙ кеше — *беспечный человек*

**ЙАНЫУЫСЛАУ** (урта) *ҡ.* салғы яныу — *точить косу*

**ЙАНЫШ I** (урта урал, һаҡмар) *и.* йәнкәй — *возлюбленная.* Йанышымдың нурлы йөҙөн ҡойаш белән тиң күрәм *(халыҡ йырынан)*

**ЙАНЫШ II** (эйек) *р.* йәнәш — *рядом*

**ЙАҢАҠ** (арғаяш, салйоғот) *и.* айғолаҡ — *жабры*

**ЙАҢАҠ БАШЫ** (урта) *и.* сикә — *висок.* ◊ Йаңаҡ бейетеп алыу *(ашап алыу)* — *поесть.* Йаңаҡ соҡоро (дим)

**ЙАҢАҠ СИРЕ** (дим) *и.* ҡылауыр — *туберкулез желез*

**ЙАҢБАШЛАУ** (урта) *ҡ.* боршаңлап атлау — *шагать вертлявой походкой*

**ЙАҢҒЫҘАЙЫҠ, ЙАҢҠЫҘАЙАҠ** (урта) *и.* ҡайын еләге — *земляника*

**ЙАҢҒЫҘАР** (мейәс, урта) *р.* айырым — *по отдельности.* Бөтәһе лә йаңғыҙар йыйалар (мейәс)

**ЙАҢҒЫҘ ҒОҘА** (дим) *и.* кейәү егете — *шафер*

**ЙАҢҒЫҘ-ЙАРЫМ** (ырғыҙ) *р.* япа-яңғыҙ — *совершенно одинокий.* Үҙе кеүек йаңғыҙ-йарым ҡалған ҡартлар йанына ла барғыһы килмәне

**ЙАҢҒЫҘ ЙУЛ** (дим, мейәс) *и.* һуҡмаҡ — *тропинка*

**ЙАҢҒЫР** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ямғыр — *дождь.* Йаңғыр буткасы (ҡоро йылда ҡырға сығып «ямғыр теләү» — бутка бешереү, һыу һибешеү йолаһы) — *обычай призыва дождя, когда всей деревней выходят на природу и варят кашу, обливают друг друга водой.* Йаңҡыр (ҡариҙел)

**ЙАҢҒЫРАТЫУ, ЙАҢҒЫРТЫУ** (дим, урта) *ҡ.* шаңҡытыу — *оглушить.* Алар балыҡ йаңғыратырға киттеләр. Йаңҡыртыу (урта)

**ЙАҢҒЫРЫУ** (арғаяш) *ҡ.* көндөң ямғырға тартыуы — *изменение погоды (к дождю)*

**ЙАҢҒЫШ** (дим) *р.* яңылыш — *неверно*

**ЙАҢКЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өйәңке — *ветла*

**ЙАҢҠЫҘҺЫРАТЫУ** (урта) *ҡ.* ситләтеү — *отчуждать, отталкивать*

**ЙАҢҠЫРЫҠ** (урта) *и.* 1. Бүкән, яҫтыҡ — *подушка (у телеги).* 2. Япҡаҡ — *боковые стойки (у телеги).* 3. Урындыҡ ширлеге — *наличник на нарах.* 4. Баҫрау — *слега*

**ЙАҢШЫУ** (мейәс) *ҡ.* ҡат-ҡат әйтеү, туҡыу — *твердить.* Йаңшыйың, йаңшыйың — һис белмәйҙәр

**ЙАҢЫ-ЙАҢЫ** (мейәс) *р.* саҡ-саҡ — *едва.* Йаңыйаңы өрәтебапарабыҙ

**ЙАҢЫ-ЙОРО** (көнсығыш диалект) *р.* яңы ғына — *только что.* Йаңы-йоро ғына күргәйнем мин аны (эй).

Йаны-йуры (ҡыҙыл). Йаңы-йоро хеҙмәттән ҡайтыусы йуҡ (мейәс)

**ЙАҢЫ-ЙУРЫҠ** (ҡыҙыл) *р.* яңы ғына — *только что*

**ЙАҢЫЛЫШЫУ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ваҡыт-ваҡыты менән иҫәүәнләнеп китеү — *временами терять рассудок.* Күрше ҡортҡа йаңылыша, үҙ улын танымаған әле (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАҢЫР** (ҡариҙел, һаҡмар) *и.* ямғыр — *дождь.* Бик шәп йаңыр йауҙы (һаҡмар)

**ЙАҢЫРЫҠ** (мейәс) *и.* ҡаҙна — *бревно или толстая доска по краю башкирских нар, на которой делается настил*

**ЙАҢЫШАҒАН** (дим, урта) *и.* ҡысҡырып күп һөйләүсе — *горлан*

**ЙАҢЫШАҠ** (дим, мейәс, урта, эйек-һаҡмар, эй) *и.* 1. Ҡысҡырып күп һөйләүсе — *горлан.* 2. Өйрәтеүсе — *обучающий чему-либо.* Анын йаңышағы барма? (эй). Өйөндә йаңышағы булды (урта). 3. (дим) Мыжыҡ — *ворчун.* 4. (һаҡмар) Илаҡ *(йәш балаға ҡарата)* — *плакса*

**ЙАҢЫШАУ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡысҡырып күп һөйләү — *горланить.* 2. Ҡысҡырып оҙаҡ илау — *плакать навзрыд.* 3. (һаҡмар) Йыш илау — *часто плакать*

**ЙАҢЫШЫУ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* яңылышыу — *ошибаться.* Ҡайсаҡта йаңышып китә (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАПАҠ I** (төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш) *с.* тәпәшәк — *низкий.* Йапаҡ түбәле ызба (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАПАҠ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ләпәк — *мошкара*

**ЙАПАЛАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ябалаҡ — *сова.* Йапалаҡтан йөн ал, тип әйтәләр беҙҙә (ҡыҙыл). 2. (мейәс) һабан турғайы — *жаворонок*

**ЙАПАЛАҠ: ЙАПАЛАҠ ҠАР** (көнсығыш диалект) *и.* ябалаҡ ҡар — *снег хлопьями.* Йапалаҡ ҡар йауа, матур (ҡыҙыл)

**ЙАПАЛАҠ СӨЙӨ** (эйек-һаҡмар) *и.* арт күсәргә күкрәк ағастарын беркеткән сөй — *шпиль, прикрепляющий заднюю ось к остову телеги*

**ЙАПАЛДАШ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* тәбәнәк, тәпәш — *низкорослый.* Йапалдаш бейә, һыйыр һөттө була (мейәс)

**ЙАПАН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* үҙләштерелмәгән ерҙәр — *неосвоенные земли.* Йатҡан йапандар (мейәс). Аш сасылмай туған йапан жирҙәр буған (мейәс)

**ЙАПАНАН-ЙАҢҒЫҘ** (мейәс) *р.* япа-яңғыҙ — *совершенно одинокий.* Йапанан-йаңғыҙ йетем ҡалған

**ЙАП-ЙАҠШЫ** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* бик яҡшы — *очень хорошо.* Өйөң йап-йаҡшы әле (ҡыҙыл)

**ЙАП-ЙАМАҠ** (мейәс) *с.* бик яман, бик насар — *очень плохой.* Йап-йамаҡай (ҡыҙыл)

**ЙАПҠАҠ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* 1. Үрәсә — *грядки, нащепы (у саней и телег).* 2. Ҡаҙна — *бревно или толстая доска башкирских нар, на которой делается настил*

**ЙАПҠЫ** (һаҡмар) *б.* тирәһе, эргәһе — *около.* Йылға йапҡы һөрмәгән байуҡ

**ЙАПҠЫС** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Алъяпҡыс — *передник.* 2. (ҡыҙыл) Балитәк — *оборка.* Йапҡысты күлдәк кейгән

**ЙАПМА I** (ҡыҙыл) *и.* 1. Балитәк — *оборка.* 2. *с.* ҡайтарма — *отложной.* Йапма йаға

**ЙАПМА II** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* ҡош ауы — *сеть (для ловли птиц)*

**ЙАПМА III** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* сепрәк балаҫ — *домотканый тряпичный половик.* Иҙән йапмасы. Сике йапмасы (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАПМА IV** (мейәс, гәйнә, дим, мейәс, салйоғот) *и.* лапаҫ — *навес*

**ЙАПМА ГҮҘ** (ҡыҙыл) *с.* шешмәк ҡабаҡ — *пухлое веко*

**ЙАПМАС** (салйоғот) *и.* иҙеү ҡапҡасы — *планка на грудном вырезе рубахи, платья.* Йапмыс (һаҡмар)

**ЙАПРАЙ** (ырғыҙ) *с.* 1. Тырпаҡ — *торчащий.* Йапрай ҡашлы ҡарт. 2. Киң, яҫы — *широкий.* Йапрай битле кеше гилеп инде

**ЙАПРАЙЫУ, ЙАПЫРАЙЫУ** (урта, эйек-һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Тырпайыу — *топорщиться.* 2. Ышыҡлау — *заслонить.* Йапрайып тороб алған, бер нәмә күренмәй (эйек-һаҡмар). 3. Ялбырау — *лохматиться.* Әүәле мүк йапрайып ултыра торғайны, хәҙер йотлоҡ булып китте (эйек-һаҡмар)

**ЙАПРАҠ** (төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш, урта урал, эйек-һаҡмар) *ҡ.* миндек — *веник (для парки в бане).* Йапраҡ апарҙыңма мунсаға? (эй)

**ЙАПРАҠ: ЙАПРАҠ ҠАР** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* ябалаҡ ҡар — *снег хлопьями*

**ЙАПРАҠ СӘЙ** (ҡыҙыл) *с.* төрлө еҫле үлән, ағас япраҡтарынан яһалған сәй — *чай, приготовленный из разных листьев*

**ЙАПРАҠТАП** (көнсығыш диалект) *р.* ябалаҡлап — *хлопьями.* Йапраҡтап ҡар йауа

**ЙАПРЫЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* ҡарпыш — *растопыренный.* Йапрый ҡолаҡ, ҡарама тойаҡ *(йомаҡ)*

**ЙАПСАРЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* өлтөрәп тороу — *быть радушным.* Инәй ҡайтма һин тип ҡыҙлары йапсарлап торалар

**ЙАПСАУЫРЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡурсалау — *оградить.* Йапсауырлап ала ла йөрөй шул балаһын

**ЙАПШАРЫУ** (урта) *ҡ.* япһарыу — *свалить (вину).* Икенсеһенә йапшарғаннар

**ЙАПЫРАҠ ТУРҒАЙЫ** (ҡыҙыл) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**ЙАПЫРТМА** (гәйнә) *и.* балитәк — *оборка*

**ЙАПЫРЫҠ** (урта) *и.* ҡалын, йыуан кеше — *толстяк.* Аңа йапырыҡ килә

**ЙАР** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* йәр — *возлюбленный*

**ЙАРА I** (мейәс) *р.* тура — *прямо.* Йара төшөргән тәңкә

**ЙАРА II** (ҡыҙыл, урта) *и.* сара — *мера.* Теге малай апҡайтыу йараһын күргән (ҡыҙыл). Ҡасыу йараһын күргәннәр (урта)

**ЙАРА ЙАПРАҒЫ** (арғаяш, дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* юл япрағы — *подорожник.* Йарайапраҡ (гәйнә, ҡариҙел), йарыйапраҡ (арғаяш, салйоғот), йары йапрағы (ҡыҙыл)

**ЙАРАҠАШҠА** (дим, урта, һаҡмар) *и.* сыбай ҡашҡа — *с белой полоской на лбу (о масти лошади)*

**ЙАРАЛАШ** (һаҡмар) *с.* 1. Ябай — *простой.* 2. Сер тотмаған — *болтливый.* Ул йаралашҡа һүҙ һөйләйме кеше

**ЙАРАЛАШНАЙ** (мейәс, урта) *с.* 1. Үҙ һүҙле — *упрямый.* 2. Бер ҡатлы — *простой*

**ЙАРАМҺАҠ: ЙАРАМҺАҠТЫ БУЛЫУ** (арғаяш, ҡыҙыл, әй) *ҡ.* 1. Ярамһаҡланыу — *подхалимничать.* 2. Ғәйепле булыу — *быть виновным.* Тураһын әйтәм тип андай гешегә йарамһаҡты ғына булаһың, аңдамай ул

**ЙАРАН** (арғаяш) *и.* борос — *перец*

**ЙАРАНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* ябыҡтырыу — *истощать (о лошади)*

**ЙАРАТАШ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* әсеүташ — *квасцы*

**ЙАРАТЫУ** (дим, ҡыҙыл, урта) *ҡ.* ябыҡтырыу — *истощать (о лошади).* Атты туйға йаратып ҡуйалар

**ЙАРАТЫУ: ЙАРАТЫП ҺУРАУ** (арғаяш) *ҡ.* үтенеп һорау — *умолять*

**ЙАРАУ I** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ябығыу — *сбросить вес.* Һыйыр йарап кигән, көнө буйы бикте торған ахыры (ҡыҙыл)

**ЙАРАУ II** (мейәс) *и.* сара — *мера, способ.* Ә был ирен апсығыу йарауын күрҙе

**ЙАРАУКА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ярамһаҡ — *угодник*

**ЙАРАУ ҠЫУЫҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* һейҙек ҡыуығы — *мочевой пузырь*

**ЙАРА ҮЛӘНЕ, ЙАРҮЛӘН** (арғаяш, мейәс) *и.* юл япрағы — *подорожник*

**ЙАРАШ** (ырғыҙ) *и.* солох — *мир.* Үктәбр йеңде, йараш йаһалды

**ЙАРАШТЫРЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* әҙерләү — *готовить.* Йараштыра һалып ашатып йебәр йәһәт кенә (салйоғот). Аш йараштырыу (урта). Аш йараштырып тик йөрөгән

**ЙАРАШЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *ҡ.* йәрәшеү — *сватать.* Иң элек йараштылар ҡыҙны, йаҙға хәтле кейәүләттеләр

**ЙАРБАЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* шамтыр — *неряха.* Ул йарбайҙан мәғәнә сыҡмаҫ, өҫ-башын да рәтләп йөрөтмәй

**ЙАРБАҠ ТАНАУ** (ҡыҙыл) *с.* киң танау — *широконосый*

**ЙАРБАН-ЙОРБАН** (урта) *р.* йалт-йолт, ашығыс — *спешно.* Йарбан-йорбан кейенеп, йалпылтап килеп тә ултыра

**ЙАР БӨРЛӨГӘНЕ** (урта урал) *и.* ҡара бөрлөгән — *ежевика*

**ЙАРҒАНАҠ, ЙАРҒАНАТ** (мейәс) *и.* кәйелтмәк — *раскат (на зимней дороге)*

**ЙАРҘАМСАН** (дим) *с.* *ярҙамсыл* — *услужливый.* Йарҙамсан кеше ул

**ЙАРҘЫ-ЙАБА** (мейәс) *и.* ярлы-ябаға — *беднота.* Йарҙы-йабаға (ҡыҙыл)

**ЙАРҘЫҠАС** (мейәс, әй) *и.* ярлы — *бедный*

**ЙАР ИТЕҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Таратыу — *распространить слухи.* 2. (урта) Хәбәр итеү — *сообщить.* Ташбатҡан ауылында һалабаш эшләү йар ителде

**ЙАР ЙАПРАҒЫ** (арғаяш, дим, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Юл япрағы — *подорожник.* 2. (урта, һаҡмар) Үгәй инә үләне — *мать-и-мачеха*

**ЙАР ЙЕЛӘГЕ** (урта) *и.* 1. Ҡара бөрлөгән — *ежевика.* 2. (мейәс) Бүре емеше — *волчья ягода*

**ЙАР КҮБЕК** (гәйнә, ҡариҙел) *р.* бик күп — *очень много.* Йар күбек былып йыйыла кеше

**ЙАРҠА** (дим, ҡариҙел, урта, әй) *с.* артыҡ һимеҙ — *слишком жирный, упитанный.* Һыйырым йарҡа гүк, быйыл нығ ашаттым (әй)

**ЙАРҠА ЙҮКӘ** (урта) *с.* сабата үреү өсөн әҙерләнгән ҡаты йүкә — *твердое лыко, приготовленное для лаптей*

**ЙАРҠАЙЫУ** (мейәс, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Йәйелеп ултырыу — *сидеть развалившись.* 2. (әй) Йыуан кешенең йөрөүе — *походка тучного человека.* Аһай, йарҡайып урам тутырып китеп бармай шай

**ЙАРҠАЛАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* ярҡа яһау — *делать плахи.* Йарҡалап йарып өйәсең

**ЙАРҠАЛЫ** (мейәс) *и.* эремекле, төйөрлө — *неровная пряжа.* Йарҡалы була йөндө тетмәһәң

**ЙАР ҠАРҘЫҒАСЫ** (арғаяш) *и.* яр ҡарлуғасы — *ласточка-береговушка*

**ЙАРҠУНАЙ** (дим) *и.* маҡтансыҡ — *хвастун*

**ЙАРЛАУ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* соңғол — *омут.* Йарлауыҡ (эйек-һаҡмар)

**ЙАРМА** (һаҡмар) *и.* ағас ҡамыт — *ярмо.* Йурмы (туҡ-соран)

**ЙАРМАЙЛӘК** (ҡариҙел) *и.* эре иләк — *решето*

**ЙАРМАҠ: ЙАРМАҠ КЕШЕ** (мейәс) *и.* алдаҡсы — *обманщик*

**ЙАРМАН ПӘЛӘГЕ** (ҡариҙел) *и.* саталы ҡойроҡ — *уховертка*

**ЙАРМА ТАШЫ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡул тирмәне — *ручная мельница.* Йарматаш (дим)

**ЙАРМАШЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* 1. Тырмашып, үрмәләп менеү — *карабкаться.* 2. Сат йәбешеү — *вцепиться.* Балаһы әсәһенең итәгенә йармашҡан

**ЙАР МЫРЫ** (әй) *и.* һыу мыры — *подёнка*

**ЙАРПАЙЫУ** (мейәс, урта, әй) *ҡ.* 1. Һимереү — *располнеть.* Йаманға төшкән ҡартайған, йаҡшыға төшкән йарпайған *(Мәҡәл).* 2. (мейәс) Йәйелеп ултырыу — *сидеть развалившись.* Йарпайып тороп әсеп утыралар

**ЙАРПАС** (әй) *и.* маҡтансыҡ — *хвастун.* Йарпач (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАР ПЕСНӘГЕ, ЙАР ЧЫПЧЫҒЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аҡсәпсек — *трясогузка*

**ЙАРПЫ: ТИРЕ ЙАРПЫҺЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* босҡаҡ — *лоскут шкуры.* Тире йарпылары беләп босҡаҡлайһың саңғыны

**ЙАРПЫ: ЙАРПЫ ТАУЫШ** (дим) *и.* өҙөк-өҙөк ишетелгән тауыш — *прерывистый звук.* Йоҡо аралаш ниндәйҙер тауыш йарпыһы ишетелде

**ЙАРПЫЛДАУ** (һаҡмар) *ҡ.* ялбырау —*лохматиться.* Бөтөн сағың да була, йарпылдаған сағың да була

**ЙАРПЫСНАЙ** (һаҡмар) *и.* 1. Маҡтансыҡ — *хвастун.* 2. Ҡыйшандаҡ — *кокетка*

**ЙАРСА** (мейәс) *и.* яҙ сәскән арыш — *яровая рожь*

**ЙАРСЫҠ** (һаҡмар) *и.* һыуҙың айырылып аҡҡан ере — *развилина реки*

**ЙАРСЫЛЛЫУ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* ярылыу, сатнау — *трескаться*

**ЙАР СӘПСЕГЕ** (эйек-һаҡмар) *и.* аҡсәпсек — *трясогузка*

**ЙАР СӘСКӘҺЕ** (урта) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**ЙАР ТУРҒАЙЫ** (мейәс) *и.* ҡарлуғас — *ласточка*

**ЙАРТЫЙАҠ** (дим, ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *р.* ҡырын яҡта, ситтә — *в стороне, на отшибе.* Йартыйаҡта йата ауылы

**ЙАРТЫЛАУЫҠ** (урта) *и.* йарты юл — *полпути*

**ЙАРТЫЛЫҠ** (дим) *и.* илле тинлек — *полтинник*

**ЙАРТЫЛЫҠЛАУ, ЙАРТАЛЫҠЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* яртыһына етеү — *дойти до половины.* Эште йартылыҡланыҡ һымаҡ

**ЙАРТЫЛЫ** (гәйнә) *и.* ярты — *половина.* Йартылы жулны жейәү килдек

**ЙАРТЫСЫЛ** (ҡыҙыл) *и.* ярты — *половина.* Йартысыл йулда ҡоҙаларҙы ҡаршы алып һыйлайлар

**ЙАРТЫ ҮҢЕР** (мейәс) *с.* ҡабаҡлы — *возвышенный.* Йарты үңер йул

**ЙАР ҺАЛЫУ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* аҡырып-баҡырыу — *громко кричать, орать, плакать.* Уйынсығымды боҙҙо тип йар һалды ла баһа (эйек-һаҡмар). Йар һалып илай (ҡыҙыл)

**ЙАРҺЫТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* төтөнгә һарғайтыу — *обкуривать*

**ЙАРШЫҠ** (урта) *с.* яшыҡ, ябыҡ — *тощий.* Быйыл маллар бик йаршыҡ

**ЙАРЫ I** (арғаяш, ҡыҙыл) *и.* 1. Босҡаҡ — *лоскут шкуры.* 2. (урта) Һарыҡ тиреһе — *овчина.* 3. (гәйнә, мейәс) Тире бейәләй — *шубенки (меховые рукавицы).* Ҡулына йарылар кейеп алған (гәйнә)

**ЙАРЫ II** (төньяҡ-көнбайыш) *б.* табан — *к (предлог).* Кискә йары китте (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАРЫЙАҠ** (ҡыҙыл) *и.* күп һөйләүсе — *болтун.* Йарыйаҡ, йармаһын түгеп, зәрә күп һөйҙәй

**ЙАРЫҠТЫҠ** (һаҡмар) *и.* күҙ нурым — *свет моих очей.* Эй, йарыҡтыҡ, беҙен һаҡмар буйына йетәме һуң!

**ЙАРЫЛЫУ I** (дим) *ҡ.* һыныҒыу — *ломота (в теле)*

**ЙАРЫЛЫУ II** (ырғыҙ) *ҡ.* асылыу — *раздвинуться.* Шаршау йарылып китте

**ЙАРЫМ** (һаҡмар) *р.* теүәл түгел — *недостаточно.* Иһем йарым минең

**ЙАРЫМАЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* эс майы — *нутряное сало.* 2. (ҡыҙыл) Туң май — *сало*

**ЙАРЫМТЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* шүрәле — *леший.* Йарымтыҡтың тәпәйе алды артҡа йөрөгән, тей (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАРЫН, ЙАРЫНҒА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәренгә — *в будущем году.* Йарынға күсенәбеҙ

**ЙАРЫ САЛБАР** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *и.* тире салбар — *брюки из шкуры*

**ЙАРЫУ** (урта) *и.* урай — *вихри на макушке*

**ЙАРЫШ I** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *р.* йәнәшә — *рядом.* Йарыш ҡына торалар ине (урта). Өс күбәне йарыш ултыртабыҙ (ҡыҙыл)

**ЙАРЫШ II** (урта урал, эй) *и.* ҡысҡырып һөйләүсе — *крикун*

**ЙАРЫШТАП** (ҡыҙыл) *р.* йәнәшенән — *рядом.* Ҡараңғы урамдан йарыштап киләләр ине. Йарышлап (урта)

**ЙАСҠЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* һағалау — *подстерегать*

**ЙАҪ** (арғаяш) *и.* яҙ — *весна*

**ЙАҪАҠАЙ** (һаҡмар) *с.* ҡулдан яһалған — *самодельный.* Йаҫаҡай алҡам бар

**ЙАҪАЛМЫШ** (мейәс) *и.* морондоҡ *(атай йәки әсәй) — посажёный (отец или мать).* Йаҫалмыш инәйем килде

**ЙАҪАНЫУ** (эй) *ҡ.* биҙәнеү, төҙәнеү — *краситься.* Йаҫанып бөттөм, әйҙә киттек

**ЙАҪАУ** (мейәс, урта, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* 1. Төҙөү, эшләү — *сделать.* 2. Ҡойоу, йаһау — *наливать.* Сәй йаҫағайным, әйҙә эс (мейәс)

**ЙАҪҠАНЫУ** (урта урал) *ҡ.* киҙәнеү — *замахнуться.* Бисәһенә йаҫҡана тей

**ЙАҪҠАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ямау һалып йүнәтештереү — *наложить заплатку*

**ЙАҪҠЫ** (арғаяш, салйоғот) *с.* яҙғы — *весенний.* Йаҫҡы йөн

**ЙАҪҠЫЙ** (дим) *и.* уртаса оҙонлоҡтағы ҡауырһын — *птичье перо средней величины*

**ЙАҪҠЫУ** (урта) *ҡ.* тибергә яҡынайыу, өҫтән баҫып килеү — *нападение хищной птицы*

**ЙАҪМЫҠ I** (туҡ-соран) *и.* кәрешкә — *вика*

**ЙАҪМЫҠ II** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Яҫы — *плоский.* Йаҫмыҡ ҡына була әтлек йапрағы. Йаҫмаҡ (урта). Йаҫмаҡ таш. 2. Йалпаҡ — *широкий.* Йаҫмаҡ битле кеше (урта). Береҫе йаҫмығыраҡ битле (дим)

**ЙАҪМАҠ БОРСАҒЫ** (дим) *и.* яҫмыҡ — *чечевица.* Йаҫмыҡ борсағы (ҡариҙел)

**ЙАҪМАР** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Ҡыра — *сгребленные ряды сена.* Йаһмар (ҡыҙыл). 2. Киңлек, яҫылыҡ — *плоскость.* Һыу йаҫмары белән үткән (ҡыҙыл)

**ЙАҪТАУ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* һалыу — *положить.* Башың аҫтына нимә йаҫтаның?

**ЙАҪТЫҠ I** (гәйнә, дим, ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *и.* күкрәк — *подушка (телеги)*

**ЙАҪТЫҠ II** (ҡыҙыл) *и.* түмәр — *чурбан*

**ЙАҪТЫҠ ЙАПҠЫС** (ҡыҙыл) *и.* мендәр япыуы — *накидка (для подушек)*

**ЙАҪТЫҠ-ТҮШӘК** (арғаяш, салйоғот) *и.* урын әйберҙәре — *постельные принадлежности*

**ЙАҪЫҠАМЫШ** (урта) *и.* һаҙ ҡамышы — *болотный камыш*

**ЙАТАҠ** (һаҡмар) *и.* 1. Йәйләүгә сыға алмай ауылда ҡалған кеше — *человек, оставшийся в деревне во время летовки.* 2. (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) Көтөүҙең көндөҙ ял итә торған урыны — *дневное лежбище животных*

**ЙАТАҠ: ЙАТАҠ БУЛЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* оҙаҡ ауырып ятыу — *продолжительно болеть*

**ЙАТАҠТАУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* 1. Ятҡы килеп тороу — *желание полежать в постели, полеживать.* Нейә йатаҡтайың, ауырыйың мәллә? (ҡыҙыл). Йатаҡлау (эйек-һаҡмар). Бик йатаҡлай был бала, әүен баҙарына китергә итәлер. 2. (эйек-һаҡмар) Оҙаҡ ауырып ятыу — *продолжительно болеть.* Йатаҡтау (урта урал)

**ЙАТБИТЛӘП** (эйек-һаҡмар) *р.* ятҡа — *наизусть.* Ҡарый Ҡөрьәнде йатбитләп белә

**ЙАТҠА БИКЛӘҮ** (урта) *ҡ.* ятлау — *запоминать.* Уҡығанымды хәҙер йатҡа бикләп алам. Йаттан бикләү (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш)

**ЙАТҠАРА** (ҡыҙыл) *р.* ятҡа — *наизусть.* Йатҡара уҡыйбыҙ

**ЙАТҠЫЛЫҠ** (дим) *и.* һуңғылыҡ, бала яҫтығы — *послед*

**ЙАТҠЫН** (урта) *и.* ятыу — *омут*

**ЙАТҠЫРМАСИТӘН** (ҡариҙел) *и.* ситән — *плетень.* Йатма ситән, йатҡырма читән (төньяҡ-көнбайыш). Элек йатҡырма читән булаҙырыйы

**ЙАТЛАЙҒА** (ырғыҙ) *р.* ятҡа — *наизусть.* Йаттайға (урта урал)

**ЙӨРМӨЛӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* яй ғына атлау — *идти тихим шагом*

**ЙӨРӨК** (төньяҡ-көнсығыш, һаҡмар) *с.* йүгерек — *быстроногий, гонкий.* Йөрөк атты салт тейләр (һаҡмар). Йалман имгән малҡай йөрөк була (төньяҡ-көнсығыш)

**ЙӨРӨКТӘТӘ** (эй) *р.* йөрөп, аяҡ өҫтө йөрөп — *на ногах.* Йөрөктәтә йатып үлде хайуаның

**ЙӨРӨЛӘТӘ** (арғаяш) *р.* йөрөп, аяҡ өҫтө йөрөп — *на ногах.* Йөрөләтә ауырыу

**ЙӨРӨМДӨ** (мейәс, эй) *с.* алыҫ юлға сыҙамлы ат — *ходкий на дальнюю дорогу (о лошади)*

**ЙӨРӨМӨШ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* йөрөш — *походка.* Йөрөмөшө оҡшай (ҡыҙыл)

**ЙӨРӨМСӘН, ЙӨРӨМСӘК** (арғаяш, салйоғот) *с.* йөрөмһәк — *непоседа (о человеке), любящий много ходить.* Ғүмергә шулай йөрөмсәк булды (арғаяш). Йөрөмтәл (дим), йөрөмтәк (ҡыҙыл)

**ЙӨРӘГАУЫҘ** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта, эй) *и.* йөрәк алды — *предсердие*

**ЙӨРӘК I: ЙӨРӘК АЛҠЫНЫУ** (мейәс) *ҡ.* йөрәктең шәп тибеүе — *сильное сердцебиение*; йөрәк бауы өҙөлөү (урта) йөрәк ярылыу — *разрыв сердца*; йөрәк ҙерҙәү (мейәс) йөрәк тибеү — *сердцебиение;* йөрәк йарылыу (көнсығыш диалект) нық ҡурҡыу — *сильно испугаться*; йөрәк күтәрелеү (арғаяш) *(йөрәк ҡыҫылыу)* — *захватить дыхание, одышка*; йөрәк йалғау (дим) ашап алыу — *перекусить*; йөрәк кәлдерәү (салйоғот) хәл бөтөү — *обессилеть*; йөрәк ҡатыу (эйек-һаҡмар) үҙен-үҙе ҡулға алыу — *взять себя в руки.* Иламаным, йөрәгем ғатып утырҙым. Йөрәк ҡатыусылау (мейәс) йөрәк йыш тибеү — *сердцебиение.* Йөрәк ҡатыусылап китә. Йөрәк ҡауғалау (ҡыҙыл) йөрәк һуғыу — *сердцебиение*; йөрәк ҡубыу (дим) йөрәк тулау — *сердцебиение*; йөрәк ҡабыныу (урта) йөрәк тулау — *сердцебиение*; йөрәк атыныу (урта) йөрәк тулау — *сердцебиение*; йөрәк тайыу (мейәс) йөрәк тулау — *сердцебиение от испуга.* Йөрәге тайҙы ҡурҡыуҙан. Йөрәге тайһа, йөрәген һылайбыҙ. Йөрәк шыу итеү (көнсығыш диалект) ҡапыл ҡурҡыу — *сердце екнуло*; йөрәк һөймәү (ҡыҙыл) теләмәү — *нежелание*; йөрәк уйнау (арғаяш, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) күңел болғаныу — *тошнота*; йөрәк тулҡыу (арғаяш) йөрәк тулау — *сердцебиение*

**ЙӨРӘК II** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* тояҡ мендәре — *сердечко под копытом (лошади)*

**ЙӨРӘК III** (мейәс) *и.* йәлдәү — *горловина верши.* Йәлдәү (эйек-һаҡмар)

**ЙӨРӘК БАРМАҠ** (мейәс) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**ЙӨРӘК БОЛҒАНЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* күңел болғаныу — *тошнить*

**ЙӨРӘК ИТЕ** (дим) *и.* тояҡ мендәре — *сердечко под копытом (лошади).* ◊ Йөрәк ите тейеү *(тояҡ мендәре сереп ауырыу)* — *болезнь сердечка под копытом*

**ЙӨРӘК ЙАПРАҒЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* йөрәк ҡапҡасы — *сердечный клапан*

**ЙӨРӘК КӨЙӨҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* үҙәк көйөү — *изжога*

**ЙӨРӘККӘ ЙАТЫУ** (дим, ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* күңелгә оҡшау — *иметь расположение (к кому).* Бик йөрәгемә йатты ул сибәр йегет (ҡыҙыл). Йөрәккә йатышлы (дим)

**ЙӨРӘК КӘЙҺЕҮ** (мейәс) *ҡ.* бүгеү — *переесть до отвращения.* Йөрәк кәйһеү (ҡыҙыл)

**ЙӨРӘК ҠАБЫ** (арғаяш, дим) *и.* йөрәк ҡапҡасы — *сердечный клапан*

**ЙӨРӘК ҠАУЫНЫ** (мейәс) *и.* йөрәк ҡапҡасы — *сердечный клапан*

**ЙӨРӘК ҪАРАЙЫ** (дим) *и.* күкрәк пәрҙәһе — *диафрагма*

**ЙӨРӘКҪЕҮ** (урта) *ҡ.* ҡыҙыу, ярһыу — *горячиться*

**ЙӨРӘК ТАБАН** (эйек-һаҡмар) *и.* тояҡ мендәре — *сердечко под копытом (лошади)*

**ЙӨРӘК ТАМЫР** (дим, көнсығыш диалект, ҡариҙел, урта, эйек-һаҡмар) *и.* барлау тамыры — *сонная артерия*

**ЙӨРӘК ШАРШАУЫ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* күкрәк пәрҙәһе — *диафрагма*

**ЙӨРӘКӘСЕМ** (мейәс) *и.* йөрәкәйем *(балаға ҡарата)* — *сердечко мое.* Уй, йөрәкәсем, ҡолоҡасым минең!

**ЙӨСӨН** (гәйнә) *и.* ҡором — *копоть.* Йөсөнө чығып тора

**ЙӨСӨНБАШ, ЙӨСӨМБАШ** (гәйнә) *и.* торонбаш — *головешка*

**ЙӨҪКӨРМӘ: ЙӨҪКӨРМӘ САЛҒЫ** (арғаяш) *и.* оҙон үләнде эйелмәй генә сабыу өсөн йөҙө ҡайырыңҡы, һабы кәкре салғы — *специальная коса с вывернутой вверх лезвием.* Йөҫтөрмә салғы (арғаяш)

**ЙӨҪТӨК** (арғаяш, салйоғот) *и.* алҡым — *подъем (у обуви).* Сарыҡ йөҫтөгө мына ошонда хәтте булар ине (арғаяш)

**ЙӨҺӨРӘ ЙОНДОҘО** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* Зөһрә йондоҙо — *Венера.* Таң сулпаны, Шафаҡ та тейләр, Йөһөрә лә, ул икеһе лә бер йондоҙ (эйек-һаҡмар)

**ЙУАЧА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әсе ҡамырҙан бешерелгән ваҡ ҡалас — *баранки из дрожжевого теста*

**ЙУҒАРЛАУ, ЙУҒАРЫЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* үрләү, һауаға күтәрелеү — *взвиваться.* Һабан турғайы һайрай-һайрай йуғарлай

**ЙУҒАРТЫН, ЙУҒАРЫТЫН** (ҡариҙел) *р.* юғарынан — *сверху.* Осоп килә лә йуғартын, бомбы төшөрә башлай ыйы

**ЙУҒЫЛЫШ** (нөгөш) *и.* юҡлыҡ — *недостаток.* Йуғылышҡа сабыр итәм, барына шөкөр итәм

**ЙУҒЫРАҠ** (арғаяш) *и.* юртаҡ — *рысак.* Йуғыртаҡ (мейәс)

**ЙУҒЫРТЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* юртыу — *бежать рысью*

**ЙУЙМА** (урта) *и.* юйғыс — *резинка, ластик.* Йуйғы (ҡыҙыл), йуймаҡ (дим)

**ЙУЙЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* юҡ итеү — *покончить.* Кизимирҙә шаршау ҡорҙолар, баш-башына төймә ҡуйҙылар, берәүләре йаусы, береһе тимсе, ҡэзиз башҡайымды йуйҙылар *(халыҡ йырынан)*

**ЙУҠ** (эй) *р.* ярамай — *нельзя.* Һауа һөйҙәшергә йуҡ, көфөрҙәгөнә төшәрһең

**ЙУҠСЫЛ БУЛЫУ** (дим, урта) *ҡ.* етешһеҙлектә көн итеү — *жить в бедности*

**ЙУҠТАН** (урта) *р.* аңғармаҫтан — *невзначай.* Йуҡтан милиция килеп сығар ҙа

**ЙУҠТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* юҡ тип уйлау — *полагать, что нет.* Мин һине йуҡтап йөрөһәм, һин мында буғаның икән. Йуҡлау (эйек-һаҡмар)

**ЙУҠҺЫРАУ** (мейәс) *ҡ.* юҡһыныу — *тосковать.* Инәһен йуҡһырай, атайым ҡайҙа тей

**ЙУҠТЫБАРЛАУ** (урта) *ҡ.* иғтибарлау — *обращать внимание.* Кем аны йуҡтыбарлап тора инте

**ЙУЛ: ҠАШҠА ЙУЛ** (ҡыҙыл) *и.* таҡыр юл — *укатанная дорога.* Ҡашҡа йулдан бара инек. ◊ Йул ғалыу (көнсығыш диалект) йул өҙөлөү — *распутица, бездорожье*; йул һуғыу (ҡыҙыл) юл ыңғайында һуғылыу — *зайти по пути*; һулым йул (ҡыҙыл) иҫке юл — *старая дорога*; йылғыр йул (урта) — ялтырап ятҡан шыма ҡышҡы юл — *гладкая, скользкая зимняя дорога*; йәйәүле йул (ҡыҙыл) һуҡмаҡ — *тропинка*; йул сатаһы, йул сатраһы, йул саттығы (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс), йул сатлығы (ҡыҙыл) юл саты — *перекресток*

**ЙУЛАБ** (урта) *и.* ырма — *паз*

**ЙУЛАЙ I: БЕР ЙУЛАЙ** (эйек-һаҡмар) *р.* бер юлы — *заодно.* Бер йулай беҙгә лә тейеп үтһәңсе

**ЙУЛАЙ II** (урта) *и.* 1. Ырма — *паз.* 2. Кәмәшәү — *продолговатое корыто для мешанки.* 3. Улаҡ — *желоб*

**ЙУЛАЙҠАН** (ырғыҙ) *р.* юл ыңғайында — *по пути.* Мин уларға йулайҡан инеп сыҡтым. Йулайҡан Таллыға ла һуғылып, сәй эсеп киттек

**ЙУЛАЙХА** (ҡариҙел) *и.* юлаусы ҡатын-ҡыҙ — *спутница*

**ЙУЛАҠЛАУ** (дим) *ҡ.* һипләү — *подновить дом*

**ЙУЛАМСЫ** (эй) *и.* юлаусы — *путник*

**ЙУЛАП** (дим, урта) *и.* 1. Улаҡ — *желоб.* 2. Кәмәшәү — *продолговатое корыто для мешанки.* Йулапҡа һалып атҡа булғама ашата торғайныҡ (урта)

**ЙУЛАУЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* юллау — *хлопотать.* Йулдалау (гәйнә). Көҙгөдә йулдалап ҡына ҡуйалар энен айыунын

**ЙУЛҒЫНСЫ** (мейәс) *и.* юлаусы — *путник*

**ЙУЛҒЫУАР** (дим) *с.* елғыуар — *ветреный*

**ЙУЛДАНЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* юлға сығырға әҙерләнеү — *собираться в дорогу.* Йулданырға торам (эй). Йулланыу (урта, туҡ-соран, эйек-һаҡмар). Ҡайтырға йулланаһыңмы? (урта). Ҡайҙа йулланырға булдың? (эйек-һаҡмар)

**ЙУЛ ҠАЛЫУ** (ҡыҙыл, урта) *и.* юл өҙөклөгө — *распутица, бездорожье*

**ЙУЛЛАМА** (урта) *и.* иҙән балаҫы — *дорожка (коврик).* Иҙәннәренә лә эргәләре ҡыҙыл менән ҡаймалы йәшел йуллама йәйелгән

**ЙУЛЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* юл йөрөү — *ездить.* Хәҙер йуллай алмайым инде, ҡартайҙым. Йомағужаға ике йулланым

**ЙУЛЛЫҠ** (дим, урта) *и.* мейес тамағы — *начало дымохода*

**ЙУЛМАҠ** (дим) *и.* нәҫел, зат — *род.* Бабайың белән мин 26 балаға йулмаҡ

**ЙУЛ ХӘРЕЗЕ, ЙУЛ ХӘРИЗЕ** (дим, көнсығыш диалект, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Юл кәрәк-ярағы — *дорожные принадлежности.* Йул хәризенә бер аҙ аҡса буһа йарай (ҡыҙыл). Ул әйләнеп инеп, йул хәрезләрен ҡутара башланы (урта). 2. (туҡ-соран) Алыҫ юлға сығыр алдынан бирелгән хәйер — *подаяние перед дальней дорогой*

**ЙУЛ ҺУҒЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* юл ыңғайында берәй ергә инеү — *зайти по пути.* Тиҙ ҡайт, теләһә ҡайҙа йул һуғып, эсеп-нитеп йөрөмә!

**ЙУМАРТ** (ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *с.* йомарт — *щедрый*

**ЙУМЫРЫСҠА** (арғаяш) *и.* кәрешкә — *вика*

**ЙУМЫСҠЫ** (урта) *и.* юнышҡы — *стружка.* Йуныҫҡы (ҡыҙыл, арғаяш, туҡ-соран, урта, ырғыҙ)

**ЙУН** (һаҡмар) *и.* сыу — *плацента (у животных)*

**ЙУНАЙ** (һаҡмар) *и.* умыртҡалыҡтың ике яҡ эргәһе — *боковые стороны позвоночника*

**ЙУННАУ** (һаҡмар) *ҡ.* яндау — *обтесать*

**ЙУНҪЫҠ** (урта) *р.* йүнләп — *как следует, порядком*

**ЙУНҒЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* йышҡы — *рубанок*

**ЙУР I** (гәйнә, мейәс, урта, ырғыҙ) *с.* ҙур — *большой.* Симейәм йур булды (гәйнә). Бер йур йаҙыусыны һөйләй ине (ырғыҙ)

**ЙУР II** (урта) *с.* үткер һүҙле, йор — *остослов*

**ЙУРАТ** (мейәс) *и.* ҙурат — *продолговатая копна снопов в поле*

**ЙУРҒА: ЙӨРӨШ ЙУРҒА** (мейәс) *с.* шыу юрға — *иноходец с ровным аллюром*; саҡма йурға (мейәс) һикереп юрғалаған ат — *иноходец с прискакивающим ходом*; һибә йурға (ҡыҙыл, мейәс) юрта барып юрғалап ала торған ат — *бежать рысцой и иноходью*; ығыу йурға (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) шыу юрға *(ойотоп ҡына юрғалаған ат)* — *иноходец с ровным аллюром*

**ЙУРҒАН: БЕТЕҮЛЕ ЙУРҒАН** (дим) *и.* ҡорама юрған — *одеяло, сшитое из клинышков.* Буй йурған, түр йурған (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) тәҙрә эргәләтеп урындыҡҡа йәйелә торған тар ғына юрған — *узкое стеганое одеяло из клинышков*

**ЙУРҠАН** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта) *и.* юрған — *стеганое одеяло*

**ЙУРҠАН БАҪТЫРЫУ** (арғаяш) *ҡ.* юрған һырыу — *стегать одеяло*

**ЙУРМА** (һаҡмар) *и.* йүрмә — *внутреннее сало, свернутое в рулет*

**ЙУРМАЛАУ** (урта) *ҡ.* үрмәләү — *карабкаться, ползать.* Тәҙрә төбөнтә бесәй йурмалай

**ЙУРМЫ** (туҡ-соран) *и.* үгеҙ ҡамыты — *бычий хомут*

**ЙУРЫҠ** (ҡыҙыл) *р.* 1. Бик үк — *не очень.* Улай йурыҡ оҙон түгел. 2. (салйоғот, эй) ыңғай — *на поводу.* Инкубатыр себештәре ҡыуған йурыҡҡа йөрөмәйҙәр (салйоғот). 3. (эй) Бөтөнләй — *совсем.* Йурыҡты белмәйем

**ЙУРЫҠТАП** (ҡыҙыл) *р.* 1. Яҡынса — *приблизительно.* Йаҡшылап белмәгәс, йурыҡтап ҡына һөйҙәй. 2. (төньяҡ-көнсығыш) Бөтөнләй — *совсем.* Балыҡ йурыҡтап эләкмәй. Йурыҡлап (урта)

**ЙУРЫМҠЫ** (ырғыҙ) *р.* юрамал — *нарочно*

**ЙУРЫН** (арғаяш) *и.* йорон — *лоскуты из шкур*

**ЙУРЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* юрау — *разгадать.* Төш йурый белә (мейәс). Йаманға йурыб утырма (эйек-һаҡмар)

**ЙУРЫШ** (арғаяш, салйоғот) *и.* шырт балыҡ — *ерш*

**ЙУСЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ауыр-түләк — *тяжелый на подъем*

**ЙУҪАЛАҒАЙЫМ** (урта) *р.* алъюһыҡҡа — *понапрасну*

**ЙУҺЫҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* 1. Ныҡлап, йүнләп — *как следует.* Йуһыҡ ҡар иреп бөтмәй (мейәс). 2. (мейәс) Ыңғай — *на поводу.* Тегенең йуһығына ҡарап китәләр. Бер йуһыҡ шаны ла эштәп ташта. Йуҫыҡ (урта, эйек-һаҡмар). Үҙ йуҫыҡларына ғына өйрәнәләр (эйек-һаҡмар). 3. (эйек-һаҡмар) Бөтөнләй — *совсем.* Йуһыҡ барманым

**ЙУҺЫРЫҠ** (ҡыҙыл) *р.* яҡшылап, йүнләп — *как следует.* Йуһырыҡ белеп йетмәй

**ЙУҪЫҠЛЫ, ЙУҪЫҠЛАП** (урта) *р.* яҡшылап, йүнләп — *как следует.* Арба ла йуҫыҡлап йөрөмәй. Йуҫыҡлап белмәй. Йуҫыҡлап йоҡо ла йуғ инте. Балыҡ йуҫыҡлы йуғ инте

**ЙУШ I** (ҡыҙыл) *и.* юшҡын — *накипь*

**ЙУШ II** (эйек-һаҡмар) *р.* тап, тура — *как раз, точь-в-точь.* Йурағанға йуш килә

**ЙУША I** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* бәҫ — *иней*

**ЙУША II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Болан — *олень.* 2. (ҡариҙел) Мышы — *лось.* Сахатны йуша тейбеҙ

**ЙУШАН** (ырғыҙ) *и.* ҡамырйемеш — *боярышник*

**ЙУШҠЫ** (арғаяш) *и.* юнышҡы — *стружка*

**ЙУШҠЫН** (салйоғот) *и.* йылыу — *полынья*

**ЙҮГЕРЕК БУРАН** (мейәс) *и.* һепертмә буран — *позёмка*

**ЙҮГЕРМӘЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* йүгерә атлау — *идти то бегом, то шагом.* Нәҫтә йүгермәләп йөрөйһөң?

**ЙҮГЕШ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* еүеш — *сырой*

**ЙҮКМӘҮ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* йөкмәү — *навьючиться*

**ЙҮКӘ** (мейәс) *и.* ығыш — *копуша.* Һәй, йүкә, йүкәнде һуҙып йөрөйһөң

**ЙҮКӘБУЛӘК** (ҡариҙел) *и.* йүкәлек — *липняк*

**ЙҮКӘ ЙЫУАҺЫ** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* тау йыуаһы — *лук горный*

**ЙҮКӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* ниндәй булһа ла берәй маҡсаттан сығып маҡтау — *льстить.* Йүкә шына ҡатыу (ҡыҙыл) маҡтау — *льстить*

**ЙҮКӘ ТАЛПАНЫ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* аҡ талпан — *белый клещ*

**ЙҮЛГӘ** (ырғыҙ) *и.* тәрән булмаған үҙәк — *неглубокая ложбина*

**ЙҮЛӘРЛӘҮ** (һаҡмар) *с.* йүләр — *придурковатый*

**ЙҮН** (ҡыҙыл, урта) *и.* 1. Әмәл, сара — *средство, мера.* 2. (ҡыҙыл, эй) *с.* уңышлы, рәтле — *удачный, успешный.* Баҙар бы йулы йүн булды (эй)

**ЙҮНДЕРЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* хәлһерәү — *ослабеть.* Йүнтерәү (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙҮН-ЙУЛ** (урта) *р.* улай-былай — *так и сяк.* Йүн-йул итеп нисек тә тырыша кеше

**ЙҮН-ЙУҪЫҠ** (урта) *р.* арлы-бирле — *кое-как.* Шул йүн-йуҫыҡ ашаған көйө иртәнән кискә хәтлем эшләтә

**ЙҮНКЕТЕҮ** (салйоғот, эйек-һаҡмар) *ҡ.* йонсотоу — *мучить.* Миңә ҡаҙалып йүнкетте

**ЙҮНКЕТКЕС** (эйек-һаҡмар) *с.* йонсотҡос — *утомительный.* Йүнкеткес эш булды ла баһа аҡҡа күсереү

**ЙҮҢКЕҮ, ЙҮҢКЕҮ** (мейәс, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* йонсоу — *утомиться.* Ошо эш менән йүнкенем дә инде (эйек-һаҡмар). Әбейләр гүрһә ҡурҡып йүнкер инде ул бала (эйек-һаҡмар). Бала-саға гөтөп йүнкей геше (мейәс)

**ЙҮНЛЕ-БАШЛЫ** (урта) *р.* тейешенсә — *как следует.* Йаҙ һуң килгән йылдарҙа бойҙай йүнле-башлы өлгөрмәй ҙә ҡуйа. Мынта йүнле-башлы үлән тә үҫмәй, ҡаҡ йаланҡа әҙерелеп ҡалған

**ЙҮНТЕРӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* тәнтерәү — *стать неработоспособным, одряхлеть.* Йүнтерәбеткән ҡарт

**ЙҮНӘКӘЙ** (арғаяш, салйоғот) *с.* осһоҙ — *дешевый.* Йүнәкәй хаҡты дауар (салйоғот). Йылҡы ите һеҫтә йүнәкәймә? (арғаяш). Йылҡы итен йүнәкәй генә алыр гитә (салйоғот)

**ЙҮНӘЛЕҮ** (көнсығыш диалект, туҡ-соран, урта) *ҡ.* 1. Һауығыу — *выздороветь (от болезни).* 2. Уңалыу — *зажить (о ране)*

**ЙҮНӘТЕҮ** (дим, төньяҡ-көнсығыш, урта) *ҡ.* 1. Әҙерләү — *готовить.* Аш йүнәтеү (дим). 2. *с.* татлы телле — *приятно и льстиво говорящий.* Береһен әрләп торам, бишәүен йүнәтеп әйтеб йебәрәм (урта). Йүнәтеп әйтеү мән ни (салйоғот)

**ЙҮНӘТЛӘП** (дим, туҡ-соран) *р.* яҡшылап, йүнләп — *как следует.* Ни булды? Йүнәтләп һөйлә (туҡ-соран)

**ЙҮҢКЕШ** (салйоғот) *с.* ялтаҡыл — *полоумный*

**ЙҮПӘЙЛӘҮ, ЙҮПӘЙТЛӘҮ, ЙҮПӘКӘЙЛӘҮ** (туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* йөпләү, ыңғайына тороу — *угождать, поддакивать.* Йүпәләү (дим, ырғыҙ). Әсәһе йомошаҡ ҡына йылмайып йүпәкәйләне (ырғыҙ). Йүпләү, йүпәләү (ырғыҙ)

**ЙҮРМӘ** (мейәс) *и.* ҡуйы урман — *густой лес*

**ЙҮРМӘЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* үрмәләү — *ползать.* Һалҡын табанлы, ўаҡ, йеүеш бөжәклләр ҡолаҡларҙа, муйыннарҙа йүрмәләй башланы

**ЙҮРМӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ) *ҡ.* типсеү — *наметать (что).* Башта күлдәгенде йүрмәбал (ҡыҙыл)

**ЙҮРӘЛӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әлгәнйәк — *бурундук*

**ЙҮТКЕРЕК** (ҡыҙыл) *и.* үпкә ауырыуы — *болезнь легких*

**ЙҮШКЕ, ЙҮШКЕН** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* юшҡын — *накипь*

**ЙҮШНӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* тәгәрмәс втулкаһы — *колесная втулка*

**ЙҮШӘ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Бәҫ — *иней.* 2. (урта) Рәшә — *сухой туман*

**ЙҮШӘЙАМҒЫР** (мейәс) *и.* быҫҡаҡ ямғыр — *моросящий дождь*

**ЙҮШӘР** (урта) *и.* 1. Бәҫ — *иней.* 2. Быҫҡаҡ ямғыр — *моросящий дождь.* Йүшәр йамҡыр

**ЙЫБАУ, ЙЫБЫШ** (ҡыҙыл, эй) *и.* 1. Ығыш — *копуша.* Йыбыу (урта урал). 2. (салйоғот) Ялҡау — *ленивец*

**ЙЫБЫТҠЫ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Яй — *медлительный, нерасторопный.* 2. *и.* әрпеш — *неряха*

**ЙЫҒАС** (мейәс) *и.* ағас — *дерево*

**ЙЫҒЫЛЫУ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* көнө төшөү — *быть зависимым.* Миңә гилеп йығылырале бер (эй)

**ЙЫЗЫҠАЙ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка*

**ЙЫЙАР ГЕЙЕМ** (мейәс) *и.* урын әйберҙәре — *постельные принадлежности*

**ЙЫЙҒЫС** (һаҡмар) *и.* йыйыусы — *собиратель.* Үҙ апайым белгестер, һөйәк-һайаҡ йыйғыстыр *(әкиәттән)*

**ЙЫЙНАЛЫУ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* йыйылыу — *собираться.* Әбейләре йыйналып утыра инде көнө буйы

**ЙЫЙЫН** (мейәс, урта) *и.* 1. Туй — *свадьба.* Ун дуғалап ҡоҙа йыйынға килә (мейәс). 2. Мәжлес — *меджлис.* Йыйын итә торғайнылар саҡырышып (урта). 3. (дим, ҡыҙыл, урта) һабан туйы — *сабантуй.* Жыйын (эй)

**ЙЫЙЫНТЫҠ** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* әҙерләнеп ҡуйылған кәрәк-яраҡ — *запас.* Йыйынтығы бумаған (ырғыҙ). Жыйынтыҡ (урта урал)

**ЙЫЙЫУ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ерләү, күмеү — *хоронить.* Ул үлеп тә гитте, беҙ йыйыуға барҙыҡ (ҡариҙел). Йыйыштырыу (урта), жыйыштырыу (эй)

**ЙЫҠМА** (ҡариҙел) *р.* лаякыл — *вдрызг (напиться).* Кетеү халыҡ йыҡма иҫерек

**ЙЫҠМА: ЙЫҠМА ЙАҒА** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* ҡайтарма яға — *отложной воротник*

**ЙЫЛАНБАУЫР КҮЛДӘК** (ҡыҙыл) *и.* йылҡылдап торған күлдәк — *платье из блестящей материи*

**ЙЫЛАНБАУЫР САЛҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* үткер салғы — *острая коса*

**ЙЫЛАНБАУЫР ТАУАР** (эй) *и.* буй-буй ҡара һыҙатлы тауар — *материя с черными полосками*

**ЙЫЛАН ҠАБЫ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* ҡау — *кожа (змеи).* Йылан ғауы (ҡыҙыл, эй), йылан ҡабығы (урта)

**ЙЫЛАН ҠАРАҠ** (мейәс) *и.* мөгөҙ ҡатлау *(күҙгә үҫкән кимерсәк)* — *роговица*

**ЙЫЛАН-САЙАН** (дим, ҡыҙыл) *и.* йылан-маҙар — *змеи*

**ЙЫЛАНСЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* бабасыр — *глисты*

**ЙЫЛАН ТЕЛ** (дим, көнсығыш диалект) *и.* йылан теле — *луговик дернистый*

**ЙЫЛАН: ТОС ЙЫЛАН** (ҡыҙыл) *и.* баҡыр йылан — *медянка*

**ЙЫЛАНУТ** (ырғыҙ) *и.* һағын — *струящийся воздух (в теплый солнечный день)*

**ЙЫЛАН ҮЛӘНЕ** (урта) *и.* кәрешкә — *вика*

**ЙЫЛАУ** (дим) *и.* йылыу — *полынья*

**ЙЫЛАУҠАЙ I** (мейәс) *и.* шүкә балаһы — *щуренок.* Йылауҡайҙы һыуҙа күреүе ҡыйын ул

**ЙЫЛАУҠАЙ II** (эй) *и.* насар ойоған ҡатыҡ — *недокисшее молоко*

**ЙЫЛАШЛЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* яҙ сәселә торған ашлыҡ — *яровое зерно*

**ЙЫЛБЫР** (урта урал) *с.* яй — *медлительный, нерасторопный*

**ЙЫЛБЫРАУ I** (урта урал) *ҡ.* емелдәү — *мерцать*

**ЙЫЛБЫРАУ II** (урта урал) *ҡ.* йылмылдау — *заискивать*

**ЙЫЛБЫРҘАУ** (мейәс) *ҡ.* елберләү — *колыхаться*

**ЙЫЛҒА БОРОМТАҺЫ** (арғаяш) *и.* йылғаның боролоп киткән урыны — *изгиб реки*

**ЙЫЛҒА КИНӘРЕ** (арғаяш) *и.* типһән — *прибрежная равнина*

**ЙЫЛҒЫЙ** (урта) *р.* гел, һәр ваҡыт — *постоянно.* Йылғый килеп тора

**ЙЫЛҒЫР** (ҡыҙыл, урта) *с.* 1. (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *с.* сос — *проворный.* 2. Шыма — *гладкий.* Йылғыр сәсле

**ЙЫЛДЫЗ** (ҡариҙел) *и.* йондоҙ — *звезда*

**ЙЫЛДЫРМА** (ҡыҙыл) *и.* ялтырауыҡ — *блесна*

**ЙЫЛҠИҘӘҮЕС** (арғаяш) *и.* ҡыҙылтүш — *зяблик*

**ЙЫЛҠ: ЙЫЛҠ ИТЕҮ** (урта) *ҡ.* йылт итеү — *сверкнуть*

**ЙЫЛҠЫЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* йылтылдау — *сверкать.* Шәм йылҡылдап йанып ултыра

**ЙЫЛМЫРҘАУ** (дим) *ҡ.* йылмылдау — *мерцать*

**ЙЫЛПАҪ** (эйек-һаҡмар) *и.* ятыҡ — *слега (о хлебе).* Борсаҡ йауһа, иген йылпаҫ булып бөтөр ҙә ҡуйыр инде

**ЙЫЛПЫЙШӘМ** (туҡ-соран) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка*

**ЙЫЛПЫЛДАҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка.* Йылтылдаҡ (эйек-һаҡмар)

**ЙЫЛПЫС** (дим) *и.* һелкеүес — *широкое, продолговатое деревянное корыто для провеивания на ветру крупы и т. п.*

**ЙЫЛТАМ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *с.* йылдам — *проворный*

**ЙЫЛТАН** (эйек-һаҡмар) *с.* хәйләкәр — *хитрый*

**ЙЫЛТАНДАҠ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Күҙ уйнатыусы — *хитро поблескивающий глазами.* 2. Ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Йылтаннаҡ (урта)

**ЙЫЛТАНДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Күҙе хәйләле йылтырау — *хитро поблескивать глазами.* Йылтаннау (урта). Күҙе йылтаннаб утыра. 2. (эй) Ярарға, оҡшарға тырышыу — *проявить угодничество*

**ЙЫЛТАҢ** (эйек-һаҡмар) *с.* шаян — *шаловливый*

йыҡҡрмаз /алҙаҫ, ҡоҙан ҙлесне/

**ЙЫЛТЫҠАЙ ШӘМ, ЙЫЛТЫН ШӘМ** (эйек-һаҡмар) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка*
**ЙЫЛТЫН КҮҘ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* йылтыр күҙ — *блестящие глаза*
**ЙЫЛТЫРАҒАН-ЙЫШЫРАҒАН** (ҡыҙыл) *и.* 1. Күҙгә һәйбәт булып күренгән нәмәләр — *все лучшее, что появляется в доме.* Йылтыраған-йышырағанды алып китә лә тора ошо ғыҙҙар. 2. (эй) Өй эсендә булған әйбер, йыһаз, һауыт-һаба — *все, что приобретается для дома*
**ЙЫЛТЫРАҠ: ЙЫЛТЫРАҠ ҠАР** (мейәс) *и.* кристалланған ҡар — *кристаллизированный снег*
**ЙЫЛТЫРАМА** (эйек-һаҡмар) *и.* ялтырауыҡ — *блесна.* Йылға буйында йалтырамаға балыҡ ҡаптырып йөрөй
**ЙЫЛТЫРБАШ** (дим) *и.* ялтырауыҡ — *блесна*
**ЙЫЛТЫРТАЛ** (урта) *и.* аҡ тал — *ива серебристая*
**ЙЫЛЫҒУЛДА** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *р.* йылы ваҡытта — *в теплое время.* Йылығулда йаҡшы итте мейесен сығарып (эйек-һаҡмар)
**ЙЫЛЫМ I** (салйоғот) *и.* шыя — *шуга.* Йылым ҡалкҡан
**ЙЫЛЫМ II** (эйек-һаҡмар) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*
**ЙЫЛЫМ III** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йылыу — *полынья.* Йылыу (ҡариҙел, урта урал, һаҡмар)
**ЙЫЛЫМСЫ** (мейәс) *с.* йылымыс — *чуть теплый*
**ЙЫЛЫМ ҺӨҘӨҮ** (урта) *ҡ.* балыҡ һөҙөү — *рыбачить (сетью, бреднем)*
**ЙЫЛЫМЫҠ, ЙЫЛЫМЫҠЛЫ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, һаҡмар) *с.* илгәҙәк — *ласковый (о человеке).* Кешегә йылымыҡ ул (мейәс)
**ЙЫЛЫМЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* йылыу — *полынья.* Ҡарт бисә көнөнә ҡалғансы, йылымыҡҡа төшөп йуғалғаның артыҡ
**ЙЫЛЫ СЫУАҠ** (ҡыҙыл) *и.* әбейҙәр сыуағы — *бабье лето*
**ЙЫЛЫТҠЫС** (мейәс) *и.* еңгәсәй — *солдатик*
**ЙЫЛЫУ** (дим, урта) *и.* йылылыҡ — *теплота.* Алама йөндөң бер йылыуы йуҡ (дим)
**ЙЫЛЫУҘАУ** (ҡыҙыл) *и.* шәре — *наледь.* Йылыулау (эйек-һаҡмар)
**ЙЫЛЫШЫУ** (ҡариҙел, урта) *ҡ.* 1. Шыуыу — *ползать.* Бала әүүәл йылышып йөри, аннан туманнай (ҡариҙел). 2. (урта) һырығыу — *прижаться.* Ул ҡапыл әсәһенә йылышты
**ЙЫМ I** (мейәс) *с.* шыма — *гладкий.* Киндер йым ғына була туҡмаған
**ЙЫМ II: ЙЫМ ИКМӘК** (салйоғот) *и.* бысый булып бешкән икмәк — *неудавшийся сырой, тяжелый хлеб*
**ЙЫМАЙАҠ** (урта) *и.* йылмаяҡ — *проныра*
**ЙЫМДАУ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* шымартыу, тигеҙләү — *сделать гладким.* Йетенде һаба белән йымдайһың (мейәс). Йымлау (урта, эйек-һаҡмар). Нисек йымлап, матурлап өйгәнһең урынды. Аласығының бүрәнәләре йымламай ғына һалынҡан (урта)
**ЙЫМҠЫРАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* ҡайтарыу — *отгибать.* Һауыттың ситтен йымҡырап эшләйһең
**ЙЫНС** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* милләт — *национальность.* Ил-көндә нисә төрлө йынс бар (эйек-һаҡмар). Беҙ бер йынс кешеләре (урта)
**ЙЫНҒЫРАУ** (эй) *ҡ.* яңғырау — *звучать*
**ЙЫПАЙТЛАП ЙӨРӨҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ғәйбәт һөйләү — *сплетничать*
**ЙЫПҠЫ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Уйһыулыҡ — *низменность.* 2. (мейәс) Ек, тишек — *щель, дыра*
**ЙЫПҠЫУ** (ҡариҙел) *с.* иңкеү — *наклонный*
**ЙЫПҠЫУЛЫҠ** (ҡариҙел) *и.* уйһыулыҡ — *низменность.* Йыпты (төньяҡ-көнбайыш)
**ЙЫПТЫР** (эйек-һаҡмар) *с.* ығыш — *копуша*
**ЙЫПЫҠАС** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *с.* ҡыйпысыҡ — *кокетка.* Йыпыҡас ҡыҙ икәнһең дә һин (эйек-һаҡмар)
**ЙЫПЫЛДАҠ** (эйек-һаҡмар) *с.* хәйләкәр — *хитрый.* Йыпылдаҡ бисә йығылғансы йыпылдар
**ЙЫПЫЛДАТЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡабаланып ашап бөтөү — *уплетать*
**ЙЫПЫЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ялағайланыу — *подхалимничать*
**ЙЫПЫРЫУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* ҡабаланып ашап бөтөү — *уплетать.* Икмәкте йыпыралар ғына (эйек-һаҡмар)
**ЙЫРАҒӘБЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өләсәй, әсәйҙең әсәһе — *бабушка со стороны матери*
**ЙЫРАҠА I** (һаҡмар) *р.* йыраҡ — *далеко.* Йыраҡанан килгән ҡунаҡ
**ЙЫРАҠА II** (ҡыҙыл, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* йырғанаҡ — *овраг.* Йыраңҡа (туҡ-соран)
**ЙЫРАҠАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өләсәй — *бабушка (со стороны матери)*
**ЙЫРАҠБАБАЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* олатай — *дедушка (со стороны матери)*
**ЙЫРАУСЫ** (ҡыҙыл, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* боронғо ваҡытта эпос, ҡобайырҙарҙы көйләп әйткән кеше — *сказитель*
**ЙЫРҒАМАҠ, ЙЫРҒЫНТЫ** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* йырғанаҡ — *овраг*
**ЙЫРМАҠТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йырғылау — *изрыть*
**ЙЫРМАЛАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* гөрләүек — *ручей (от талых, дождевых вод).* Йырманаҡ (ҡариҙел)
**ЙЫРМАС** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Йырыҡ — *прорезь.* 2. (урта) Элмә — *петля (для пуговиц).* Йырмыс (дим). 3. (эйек-һаҡмар) Шәлтәү — *ширинка*
**ЙЫРМАСТАУ** (арғаяш) *ҡ.* һупалау — *немного уметь говорить (по русски и т. д).* Белһә белмәһә лә урыҫса йырмастаған була
**ЙЫРМЫЗЛАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* йырмаҡланыу — *изрыться.* Йер өҫтө йырмызланып бөткән
**ЙЫРМЫС I** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* һиҙәп тишеге — *петлица*
**ЙЫРМЫС II** (эйек-һаҡмар) *и.* йылға тармағы — *рукав реки*
**ЙЫРМЫСТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йырғыслау — *избороздить.* Күрше Эстипандын сусҡаһы картуф паҡсаһын йырмыстапөткән
**ЙЫРМЫҪЛАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* йырмаҡланыу — *изрыться*
**ЙЫРПЫСЫҠ** (ырғыҙ) *и.* ҡыйпысыҡ — *кокетка*
**ЙЫРТАНАС** (ҡыҙыл) *и.* әҙәпһеҙ ҡыҙ бала — *неблаговоспитанная девочка*

**ЙЫРТАНДАҠ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Йыртаннаҡ (эйек-һаҡмар), йыртаңнаҡ (дим). Алдан сығып эйәмсеҙ ҡыланса, йыртаңнаҡ була инде. 2. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Көләкәс — *хохотунья*

**ЙЫРТАҢНАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Уйнаҡлау — *резвиться.* 2. Ҡыйшандау — *кокетничать.* Йыртаннау (төньяҡ-көнбайыш), жыртандау (урта урал), йыртандау (ҡыҙыл, мейәс)

**ЙЫРТҠЫС** (урта) *и.* йыртыш — *отрезки материи, раздаваемые во время свадьбы детям.* Бала-сағаларға йыртҡыс өләштеләр туйҙа. Йыртҡыш (ҡыҙыл)

**ЙЫРТЫҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* ҡайырылған — *свернутый (об острие косы)*

**ЙЫРТЫУ: БИТ ЙЫРТЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Кешенең йөҙөнә тура әйтеү — *сказать правду в глаза.* 2. Күңелгә ауыр һүҙ әйтеү — *опозорить, очернить.* Барасағым йуҡ, ошаҡҡа ышанып йөҙөмдө йыртты. Йөҙ йыртыу (туҡ-соран)

**ЙЫРТЫШ I** (арғаяш, дим, ҡыҙыл, мейәс, урта, ырғыҙ) *и.* 1. Ҡыҙға ҡушылырға ингәндә кейәү баҫып йыртыу өсөн ҡайынеңгәләре арҡыры тотоп торған туҡыма — *кусок материи, натянутый перед входом в брачный дом, который должен разорвать, наступив на него ногой, жених.* 2. Әбейҙәргә йыртып бүләккә бирелә торған туҡыма киҫәге — *подарок, раздаваемый на свадьбе пожилым женщинам в виде маленьких кусков материи.* Әбейләргә йыртыш тараттылар (урта). 3. (арғаяш, дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, эй) Йәштәргә, балаларға бирелә торған туҡыма киҫәктәре — *маленькие куски материи, раздаваемые молодым и детям*

**ЙЫРТЫШ II** (гәйнә) *и.* шырт балыҡ — *ерш*

**ЙЫРТЫШ III** (мейәс) *и.* Иртыш йылғаһы — *река Иртыш*

**ЙЫРУ, ЙЫРЫУ** (дим, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* йыр — *песня.* Шуңа йыру сығарҙым (дим). Иҫке йырулар Ҙиләйлүк, Бөҙрәтал, Ҡарурман (төньяҡ-көнбайыш). Мының йыруын ҡайчан әйтә инде, мәйтәм (минзәлә)

**ЙЫРУҘЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йырсы — *певец*

**ЙЫР: ШИҠАН ЙЫР** (салйоғот) *с.* төртмә йыр — *колкие куплеты*

**ЙЫРЫН** (ҡыҙыл, урта, ырғыҙ) *и.* йырғанаҡ — *поток талых вод.* Йырынды (гәйнә, мейәс)

**ЙЫТЫҠА** (ҡыҙыл) *и.* 1. Унда-бында тығылып, һүҙ ташып йөрөгән ҡатын-ҡыҙ — *легкомысленная женщина-сплетница.* 2. Остоҡ — *кокетка*

**ЙЫТЫЙАҒА ЙЕТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ярлыланыу, бөлөү — *обнищать (совсем).* Ул йытыйаһына йетеп ҡалды инде хәҙер

**ЙЫУА** 1. Һарыҡ йыуаһы (ҡыҙыл) *и.* сөсө йыуа — *лук горный*; ташйыуа (урта урал) таш араһында өйкөм-өйкөм булып үҫкән йоморо ваҡ йыуа — *вид дикого лука, растущего группами на каменистых горах*; сәүкә йыуаһы (ҡыҙыл) ҡая араһында үҫкән һыңар яҫы япраҡлы сөскөлт тәмле йыуа — *лук, растущий на каменистых горах, листьями похожими на злаковых*; һаҙ йыуаһы (эй) һаҙлыҡта үҫкән оҙон ҡыяҡлы сөсө йыуа — *дикий лук, растущий в болотистой местности*; йүкә йыуаһы (ҡыҙыл), талғыр йыуа (эйек-һаҡмар) һарымһаҡ һабағына оҡшаған әсе йыуа — *дикий лук, листьями и вкусом похожий на чеснок.* 2. (арғаяш, эйек-һаҡмар) һуған — *лук.* Тумалаҡ йыуа (эйек-һаҡмар) башлы һуған — *луковица*

**ЙЫУАЙТЛАНЫУ** (урта урал) *ҡ.* ярамһаҡланыу — *угодничать.* Йыуаттаныу (эй)

**ЙЫУАҠАЙ** (һаҡмар) *с.* йыуа торған — *для мытья.* Кер йыуаҡай тас

**ЙЫУАН АТ** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Биш йәштән үткән йылҡы малы — *лошадь старше пяти лет.* 2. Эшсе ат — *рабочая лошадь*

**ЙЫУАНДЫРЫУ** (дим) *к.* йыуатыу — *утешать*

**ЙЫУАНСА** (һаҡмар) *с.* йыуантыҡ — *коренастый.* Йыуансай (мейәс), йыуантыҡ (көнсығыш диалект). Йыуантыҡ ҡына ҡыҙҙары бар икән

**ЙЫУАН ТАМЫР** (ҡыҙыл) *и.* йоҡо тамыры — *сонная артерия*

**ЙЫУАСА** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Күстәнәс — *гостинец.* Ул ҡаты йүкәнән үрелгән сәрмәнән биш шешә сығарып уртаға ҡуйҙы, бына нинтәй йыуаса әпкигән ҡоҙам (урта). Ағаһынан йыуаса өмөт итеп килгән баланы ҡороғул сығарма, килен (урта). Йыуаса һантығын килтереүсе ҡоҙа йаңҡыҙ килә (урта). Туй йыуасалары белән сәй эстек (ҡыҙыл). Тегенән йыуаса, мынан йыуаса килтереп кенә торалар (ҡыҙыл). 2. (эй) Йоморҡаға, майға иҙелгән һәм ваҡ ҡына түмәрсәк итеп, мейескә тәгәрәтеп бешерелгән икмәк, көлсә — *маленькие булочки, выпеченные в русской печи.* 3. (арғаяш) Бауырһаҡ — *баурсак.* 4. (төньяҡ-көнбайыш) Аҡ ондан йәки тары ононан бешерелгән икмәк — *хлеб, испеченный из пшеничной сеянки или просяной муки*

**ЙЫУАСАЛАНЫП** (мейәс) *и.* күстәнәс менән — *с гостинцем.* Икенсе гөнөнә таныша гиләләр йыуасаланып тороп

**ЙЫУАШЫУ** (дим, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* йыуашайыу — *присмиреть.* Этне йебәрсәң йыуашый ҙа ғуйа (дим). Ат йыуашымай берҙе ҡолатмайынса (эйек-һаҡмар). Мында инһә йыуашый ҙа гитә ул (эйек-һаҡмар)

**ЙЫУҒЫР** (эйек) *и.* кешегә теле менән яраусан — *подхалим*

**ЙЫУЫНТЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йыуынды һыу — *помои*

**ЙЫУЫНЫП-ЙЫШЫНЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* йыуынып таҙарыныу — *умыться.* Йыуынып-йышынып алайыҡ

**ЙЫУЫНЫУ** (төньяк-көнбайыш) *ҡ.* юныу — *обтесать*

**ЙЫУЫРҒАН, ЖЫУЫРҒАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* юрған — *ватное одеяло*

**ЙЫУЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* юхаланыу — *льстить.* Ул йыуырға кешене шәп (мейәс)

**ЙЫУЫШҠЫН** (эйек-һаҡмар) *и.* юшҡын — *накипь*

**ЙЫУЫШЫУ** (арғаяш, мейәс, салйоғот, эй) *ҡ.* йыуыныу — *умываться.* Бар йыуыш! (мейәс)

**ЙЫҺАЗ** (урта) *и.* йорт-ҡаралды — *дворовые постройки*

**ЙЫҺАН** (арғаяш, салйоғот) *р.* 1. Бик — *очень.* Йыһан күп жиләге. 2. (һаҡмар) 1. Оҙаҡ — *долго.* Көттөгәле йыһан. 2. Күп — *много.* Йыһан аламаһы

**ЙЫҺАН-ЙАРА: ЙЫҺАН-ЙАРА ҠЫСҠЫРЫУ** (мейәс) *ҡ.* ер йыртып ҡысҡырыу — *кричать неистово*

**ЙЫШ-ЙЫЛТЫРАҠ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* өй эсендәге бар булған нәмә — *вещи домашнего обихода.* Йышын-йылтырағын тейәп ҡасҡан тейләр (ҡариҙел). Йыш-йылтыраҡты алып ҡына торалар (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙЫШҠЫННЫҠ** (дим) *и.* шырлыҡ — *чаща*

**ЙЫШҠЫС** (ҡыҙыл) *и.* йышҡы — *рубанок*

**ЙЫШҠЫ ТАБЫ** (ҡариҙел) *и.* юнышҡы — *стружка*

**ЙЫШЛЫҠ** (ҡариҙел, урта урал) *и.* шырлыҡ — *чаща*

**ЙЫШЫНДЫ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* юнышҡы — *стружка*

**ЙЫШЫНЫУ I** (дим) *ҡ.* ышҡыныу — *тереться.* Ат килеп йышына бағанаға. 2. (төньяҡ-көнбайыш) һырығыу — *льнуть*

**ЙЫШЫНЫУ II** (дим) *ҡ.* эрсеү — *очищать*

**ЙЫШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ышҡыу — *тереть.* Йылға буйына алып төшөп самауырын йышты. Шышыу (әй)

**ЙӘБЕЛЕК, ЙӘБЛЕК** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта урал, әй) *и.* картуф — *картофель.* Йәблик (салйоғот)

**ЙӘБЕРҘЕК: ЙӘБЕРҘЕК МЕНӘН** (мейәс) *и.* 1. Көслөк менән — *насильно.* Йәберҙек менән тотабыҙ. 2. (әй) Ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ — *трудность.* Йәберҙек менән йәшәйем

**ЙӘБЕР ИТЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* йәберләү — *притеснять*

**ЙӘБЕШКӘ** (көнсығыш диалект) *и.* йомаҡтың яуабын табырға ярҙам иткән һүҙ — *слово, помогающее отгадать загадку.* Йәбешкәһен генә әйт!

**ЙӘБЕШКӘК** (дим, ҡыҙыл) *и.* бөрмәкәй — *подмаренник*

**ЙӘБЕШКӘКПЕЧИН** (гәйнә) *и.* һырлан — *липучка*

**ЙӘБЕШКӘН I** (урта) *с.* һырма — *липкий, липучий.* Йәбешкән буранта килгән

**ЙӘБЕШКӘН II** (дим) *и.* 1. Ҡамырйемеш — *боярышник.* 2. Һырлан — *липучка*

**ЙӘБЛЕК** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* картуф — *картофель*

**ЙӘБЛИК СОҠОРО** (салйоғот) *и.* картуф баҙы — *погреб*

**ЙӘБЕЛДӘШ I** (дим) *с.* тәбәнәк — *низкорослый*

**ЙӘБЕЛДӘШ II** (мейәс) *с.* йомро — *шарообразный*

**ЙӘГҮР** (мейәс) *и.* шырт балыҡ — *ерш*

**ЙӨГӘҘ, ЙӘҒӘЗ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡағыҙ — *бумага*

**ЙӘДИМ** (дим) *и.* етем — *сирота*

**ЙӘҘӘС, ЙӘТӘС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сәтәш — *дужка.* Йәдәс, йәҙәш (дим)

**ЙӘЖӘҢКӘ** (мейәс) *и.* терһәкле арба йә сана — *розвальни.* Йәжәңкә арба. Йәжәңкә сана

**ЙӘЗБӘ, ЙӘЗҮӘ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и. циркуль*

**ЙӘЗИТ** (урта) *и.* бәләсел — *ябеда*

**ЙӘЙ** (арғаяш) *и.* ир менән ҡатындың бер-береһенә өндәшеү һүҙе — *слово-обращения мужа и жены между собой.* Әй (ҡыҙыл, туҡ-соран)

**ЙӘЙГЕС** (гәйнә) *и.* йәймә — *лепешка*

**ЙӘЙҒОРО, ЙӘЙҒОРОН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* йәйғор — *радуга.* Йәйғуры, йәйҡоро (урта), йәйғороһо (мейәс, урта). Йәйғор һыуалыу (ҡыҙыл) йәйғор осоноң һыуға төшөп тороуы — *опущение концов радуги в реку.* Йәйғор һыуала, йамғыр йауа (ҡыҙыл)

**ЙӘЙҒУР ТАШЫ** (ҡыҙыл) *и.* биҙәге йәйғорға оҡшаған һыу эсендә ятҡан тылсымлы таш — *камень, по окраске напоминающий радугу (по преданию волшебный)*

**ЙӘЙҘӘҮ** (арғаяш, мейәс) *и.* тирмә — *войлочная юрта.* Йәйҙәүҙә лә төндөк була (арғаяш)

**ЙӘЙҘӘҮКӘЙ** (ҡыҙыл, урта) *и.* йәйҙәүес — *летний приплод (у овец и коз)*

**ЙӘЙЕК I** (эйек-һаҡмар) *и.* яҙғы һыу — *вешние воды*

**ЙӘЙЕК II** (эйек-һаҡмар) *с.* йәйеңке — *мелкий и широкий (о посуде).* Йәйек һауытта аш тиҙ һыуына

**ЙӘЙЕМ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Йәймә — *тонко раскатанное тесто из муки для лапши.* Нисә йәйем һалма ғырҡайым? 2. (эйек-һаҡмар) Өшә — *лепешка.* Бер йәйем икмәк бешерепирҙем

**ЙӘЙЕН** (дим) *и.* йылғаның һай урыны — *отмель*

**ЙӘЙЕҢКЕ, ЙӘЙЕҢКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце.* Йәйенкә (гәйнә)

**ЙӘЙЕҢКЕ САБАҠ** (ҡариҙел) *и.* ҡорман балыҡ — *лещ*

**ЙӘЙЕТ** (эйек-һаҡмар) *и.* яҙғы һыу — *вешние воды*

**ЙӘЙЕҮ** (мейәс) *и.* йылғаның киң үҙәне — *долина вдоль реки.* Иҙел ташып йәйеүе белән гитә

**ЙӘЙ ЙӨРӨМ** (ҡыҙыл) *и.* һимеҙлек, көрлөк — *нагул*

**ЙӘЙЛЕ** (гәйнә) *р.* йәй буйы — *все лето.* Йәйле суда тотсаң, бетәуы

**ЙӘЙЛЕКТӘ** (ҡариҙел) *р.* йәйгелектә — *летом*

**ЙӘЙЛӘҮ I** (һаҡмар) *и.* икмәк тимере — *лист для выпечки хлебных изделий*

**ЙӘЙЛӘҮ II** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* аласыҡ — *летняя кухня*

**ЙӘЙЛӘҮ III** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* яйлау — *не торопиться*

**ЙӘЙЛӘҮ ҠЫНАҺЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡына гөлө — *бальзамин*

**ЙӘЙМӘ I** (дим, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* табикмәк — *лепешка*

**ЙӘЙМӘ II** (дим) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце*

**ЙӘЙНӘП: ЙӘЙНӘП УЛТЫРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йәйрәп ултырыу — *сидеть развалившись, блаженствуя*

**ЙӘЙПЕ I** (ҡыҙыл) *с.* киң, йәйеңке — *мелкий и широкий (о посуде).* Йәйпе табаҡ. Йәйпе ҡаҙан. Йәйпес (урта)

**ЙӘЙПЕ II** (ҡариҙел, дим) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце.* Йәйпес (ҡариҙел), йәйпеш, йәпеш (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙӘЙПЕРӘТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* йәйрәтеп атлау — *идти, ступая степенно, блаженствуя.* Йәйперәтә баҫып кем килә тиһәм, һин икәнһең

**ЙӘЙПӘК** (ҡыҙыл) *с.* йәйеңке — *плоский.* Аһты йәйпәк сынаяҡтарҙын

**ЙӘЙСӘН** (дим, ҡыҙыл, мейәс, әй) *и.* ләйсән — *первый весенний дождь*

**ЙӘЙ ТАШЫ** (ҡыҙыл) *и.* биҙәге йәйғорға оҡшаған һыу эсендә ятҡан тылсымлы таш — *камень, по окраске напоминающий радугу (по преданию волшебный)*

**ЙӘЙӘ** (һаҡмар) *и.* сана терһәге — *крылья саней-розвальней*

**ЙӘЙӘҮЛӘТЕП** (эйек-һаҡмар) *р.* йәйрәп — *блаженствуя, не торопясь.* Йәйәүләтеп ултырып сәй эстек

**ЙӘКМӘ** (мейәс) *и.* йәмкә — *щипцы (для угля)*

**ЙӘКӘЙ** (урта урал) *и.* иҙеү — *выем (у рубахи)*

**ЙӘКӘЛБАШ** (арғаяш) *с.* бәйләнсек — *придирчивый*

**ЙӘЛБЕРҘӘК** (ҡыҙыл) *с.* ялбырлаҡ — *лохматый*

**ЙӘЛДӘК I** (ҡыҙыл) *и.* йәлдәү — *горловина верши.* Йәлдәү (эйек-һаҡмар)

**ЙӘЛДӘК II** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Боҙоҡ, йөрөксән ир — *гуляка.* 2. Ялҡау — *лентяй.* 3. (туҡ-соран) *с.* сибек, көсһөҙ — *слабый.* Бигерәк йәлдәк ат йеккәнең бит. Ул йәлдәк малай белән эш эшләп буламы

**ЙӘЛПЕСӘК** (дим) *и.* балитәк — *оборка*

**ЙӘЛПӘШ** (ҡыҙыл, урта) *с.* ялпаҡ — *сплюснутый.* Йәлпәк танауыңты сирылтма

**ЙӘЛПӘШТЕРЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ялпаштырыу — *сплюснуть.* Йәлпәштерә һуҡтым да ғуйҙым

**ЙӘЛСЕҮҺЕҘ** (урта) *с.* тырыш, әрһеҙ — *неутомимый, неприхотливый*

**ЙӘЛТӘКӘЙ** (урта) *с.* аҡылға еңел — *слабоумный*

**ЙӘЛӘҮКӘР** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Үҙе эшләмәй кешегә һалыныу — *выезжать на других (в работе).* 2. *с.* ялағай — *льстивый, угодливый*

**ЙӘМБИЛ, ЙӘНБИЛ** (эйек-һаҡмар) *и.* бәләкәй йышҡы — *рубанок маленького размера*

**ЙӘМ-ҠОТ, ЙӘП-ҠОТ** (урта) *и.* тышҡы матурлыҡ — *внешняя красота.* Йәм-ҡот бөттө хәҙер

**ЙӘМПӘЙЕС** (туҡ-соран) *с.* буйға бәләкәй — *низкорослый (о человеке)*

**ЙӘМҮТ** (ҡыҙыл) *и.* балыҡ исеме — *название рыбы*

**ЙӘН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* йәнлек — *зверь.* Амаған йәне бумай торғайны (мейәс). Күп йәнде йыйҙы ул, төлкө фәләнде (мейәс)

**ЙӘНАҒА** (дим, ҡариҙел, минзәлә) *и.* ҡәйнеш — *младший деверь*

**ЙӘН-АСЫҺЫНА** (мейәс) *р.* йән-фарман — *во весь дух.* Йән-асыһына сабып кигән

**ЙӘНЕЧКЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һунарсы — *охотник*

**ЙӘН КИТЕҮ** (дим) *ҡ.* үлеү — *умереть.* Йетмешләп йән китте

**ЙӘН ҠОТОЛОУ** (урта) *ҡ.* иҫән ҡалыу — *остаться живым*

**ЙӘННЕК** (дим) *и.* мал — *скот.* Өс ат йәннеге, өс баш сыйыр йәннеге бирҙем

**ЙӘННЕКСЕ** (урта) *и.* һунарсы — *охотник*

**ЙӘННӘТ** (эйек-һаҡмар) *и.* йәлдәү — *горловина верши.* Бурыс мурҙаның йәннәтенә тиклем тулған да ғуйған

**ЙӘН ӨҘӨЛӨҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* асығыу — *проголодаться.* Йәннәрә өҙөләп килеп, ҡоротҡа май һылап, ашап йебәрәләр

**ЙӘНСЕ БАРМАҠ** (арғаяш, салйоғот) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**ЙӘНСЕЛЕҮ** (дим) *ҡ.* 1. Иҙелеү — *быть раздавленным.* Һейәк йәнселә икән тип торам. 2. (эйек-һаҡмар) Сәнселеү — *уколоться.* 3. Йәмшәйеү — *плющиться*

**ЙӘНСЕРЕҮ** (дим) *ҡ.* йәнсеү — *плющить.* Бармағын йәнсергән

**ЙӘНСЕҮ** (дим) *ҡ.* 1. Имгәтеү — *калечить.* Туғаныңа утырып йәнсеп ҡуйма. 2. (эйек-һаҡмар) Тапатыу — *топтать.* Нифт бырауласылар ашлыҡты йәнсеп бөткәннәр

**ЙӘН ТАПШЫРЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* үлеү — *умереть*

**ЙӘНТӘМӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* теләмәү, тырышмау — *не стремиться, не стараться*

**ЙӘНТӘСЛИМ** (туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *р.* йәнтәстем — *изо всей силы.* Ҡолағының төбөнә йәнтәслимкә һалып йебәрҙем (урта)

**ЙӘНҮР** (урта) *и.* ағас ҡорто — *тля*

**ЙӘНӘМӘҪЕ** (дим) *и. һ.* йәнәһе — *дескать.* Йәнәмәһе (ҡыҙыл), йәнәмәсе (төньяҡ-көнбайыш). Бал была, йәнәмәсе, аса төшсә

**ЙӘНӘ-ТАҒЫ** (урта) *р.* йәнә — *вдобавок.* Йәнә-тағы туған тейеш кешеһе

**ЙӘҢӘШМӘ: САНА ЙӘҢӘШМӘҺЕ** (мейәс) *и.* сана терәге — *лежанки у сани*

**ЙӘП** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* рәт, йүн — *удобный момент.* Йәбе сыҡҡанса тороп торайыҡ (эйек-һаҡмар)

**ЙӘПЕРЕЙ, ЙАПРЫЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* балитәк — *оборка.* Йәпрәй (дим, ҡыҙыл)

**ЙӘПЕШ** (ҡариҙел) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце*

**ЙӘП-ЙӘШӘН** (һаҡмар) *с.* йәп-йәшел — *ярко-зеленый.* Тау буйлары йәп-йәшән ине. Йәп-йәшел (ҡыҙыл, мейәс)

**ЙӘПЛӘШКӘ** (ҡыҙыл) *и.* ҡын — *чехол (для пики или ножа)*

**ЙӘПТӘШЕҮ** (әй) *ҡ.* оҡшашыу — *походить друг на друга.* Бигерәк икеһе лә йәптәшкәндәр

**ЙӘПҺЕҘ** (урта) *с.* ҡырыҫ — *ершистый, не покладистый*

**ЙӘПӘТЕКЛӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Яҡшатланыу — *лебезить.* 2. Ялағайланыу — *угодничать.* Йәпетниктәнеү (ҡыҙыл)

**ЙӘРБӘНДӘК** (әй) *с.* ҡаҡса — *сухощавый, легкий.* Йәрбәндәк кенә, йавыҡ ҡына ҡарт була торғайны

**ЙӘРЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* йәлсеү — *везти*

**ЙӘРМӘС** (эйек-һаҡмар) *и.* ошаҡсы — *ябедник.* Апайың да шу һинең кеүек йәрмәс

**ЙӘРМӘСЛӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ошаҡлашыу — *ябедничать*

**ЙӘРМӘШЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* йәбешеү — *вцепиться*

**ЙӘРПЕСӘК** (эйек-һаҡмар) *и.* балитәк — *оборка.* Йәрпесәкле күлдәгемде кейҙем

**ЙӘРСӘ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар, әй) *и.* яҙ сәскән арыш — *яровая рожь.* Йәрсәне хәҙер сәсмәй башланылар (эйек-һаҡмар). Ҡунаҡ алдына йәрсә икмәге ҡуйҙылар (эйек-һаҡмар)

**ЙӘРӘБӘ** (дим, урта) *и.* 1. Гәрәбә — *янтарь.* 2. Эре мунсаҡ — *крупные бусы.* 3. Муйынса — *бусы*

**ЙӘРӘХӘТ ҺҮҘҘЕ** (ҡыҙыл) *с.* уҫал телле кеше — *злоязычный*

**ЙӘРӘШЕҮ** (арғаяш, ҡариҙел, салйоғот) *ҡ.* ҡоҙалау — *сватать.* Абзыйың шушылай әбейең белән йәрәште лә ҡуйды ие (ҡариҙел). Килен йәрәшеү (арғаяш)

**ЙӘСЛӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* малға бесән һала торған урын — *кормушка*

**ЙӘТЕМ** (арғаяш, мейәс, әй) *и.* етем — *сирота.* Йәтим (төньяҡ-көнбайыш, урта)

**ЙӘТЕМ-ЙЕҺЕР, ЙӘТИМ-ЙЕҺЕР** (ҡыҙыл) *и.* етем-еһер — *сироты.* Йәтим-иҫер (урта, әй). Өйөрлө йәтим-иҫер (урта). Йәтим-йебер (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш)

**ЙӘТЕМСЕЛЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* етемселек — *сиротство.* Йетемселек (ҡыҙыл, мейәс)

**ЙӘТЕШ** (ҡыҙыл) *р.* әҙер — *наготове.* Ауыл араһына сығып китергә йәтеш тора. Йәтешкә сығыу *(рәхәткә сығыу) — блаженствовать*

**ЙӘТЕШ ИТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* яҡшы итеү, уңай итеү — *так и надо.* Йәтеш итә теге бейә, игенгә төшөп, ҡолондо һимертә

**ЙӘТЕШТӘЛЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Йәпләнеү — *приноровляться.* 2. Әҙерләнеү — *приготовиться.* Йәтешләнеү (туҡ-соран, эйек-һаҡмар). Һин ҡайҙа барырға йәтешләнәһең?

**ЙӘТЕШТӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* әҙерләү — *готовить.* Сәй йәтештәп торалар. Йәтешләү (эйек-һаҡмар). Балам, сәй йәтешләйек әле

**ЙӘТИМ БИСӘ** (дим, әй) *и.* тол ҡатын — *вдова.* Йәтим бисәне ҡыйырһыталар (әй)

**ЙӘТИМҺЕРӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* баланың ата-әсәһе юҡлыҡтан бойоғоуы — *унывание ребенка по родителям*

**ЙӘТИМӘК** (көньяҡ диалект) *и.* 1. Етем — *сирота.* Ул йәтимәк, атаһы Сухумда тора. 2. Йәтим ҡалған хайуан балаһы — *детеныш животного, оставшийся без матери*

**ЙӘТИНКЕ** (мейәс) *и.* сәүек — *моська*

**ЙӘТМӘ I** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* ейәк, таҫма *(күлдәк итәгенә тегелә) — лента, тесьма*

**ЙӘТМӘ II** (эйек-һаҡмар) *и.* яры — *перепонка (гусиных лап)*

**ЙӘТМӘ III** (урта) *и.* тоҙаҡ — *силок (для ловли зверей)*

**ЙӘТӘС** (урта) *и.* сапҡы — *мотыга*

**ЙӘТМӘЛЕ** (мейәс) *с.* йейәкле, ызмалы — *с тесьмой.* Йәтмәле күлмәк

**ЙӘҮЕШКЕ** (ҡыҙыл) *и.* йүшкә — *вьюшка*

**ЙӘҮКӘЛӘҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* һорашыу — *расспрашивать.* Бөтә йерҙе йәүкәләп сыҡтыҡ, ҡайҙа олаҡҡан икән был Йерән? (эйек-һаҡмар). Тайтулаҡ йуғалып китһә, йәүкәләп йөрөп табып ала торғайныҡ (ҡыҙыл)

**ЙӘҮЛӘҮ** (урта) *ҡ.* ниәтләнеү — *намереваться.* Баҡтиһәң, улар Ташбатҡан урманын алырға йәүләгәннәр икән

**ЙӘҮҺӘР I** (ҡыҙыл) *и.* гәүһәр — *бриллиант*

**ЙӘҮҺӘР II** (әй) *и.* ҡамырйемеш — *боярышник*

**ЙӘҺЕННӘМ** (туҡ-соран) *р.* күп — *очень много.* Ул халыҡ йыйылды йәһеннәм

**ЙӘҺӘР** (урта) *р.* зәһәр — *люто.* Ағәрем йәһәр әсе була

**ЙӘҺӘТ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* сара — *мера, средство.* Ҡайтыу йәһәтен ҡара (ҡыҙыл). Эштең йәһәтен күрмәйҙәр (ҡыҙыл)

**ЙӘҺӘТЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* өлтөрәп тороу — *быть услужливым, приветливым*

**ЙӘҺӘТТӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Тиҙләтеү — *ускорить.* 2. Ашыҡтырыу — *торопить*

**ЙӘШАҒАР** (мейәс) *и.* күҙ мороно — *слезный мешочек.* Йәшағыр (арғаяш)

**ЙӘШБИКӘ** (арғаяш, мейәс, салйоғот, әй) *и.* көндәштәрҙең йәше — *молодая жена (при многоженстве).* Ҡунаҡҡа йәшбикә мән китте (арғаяш)

**ЙӘШЕКӘЙ** (дим) *и.* ҡәберлек — *кладбище*

**ЙӘШЕЛ** (урта) *с.* зәңгәр — *голубой*

**ЙӘШЕЛҒОРТ** (ҡыҙыл, әй) *и.* баҙлауыҡ — *светлячок*

**ЙӘШЕЛ ДУҒА** (арғаяш) *и.* йәйғор — *радуга*

**ЙӘШЕЛЙЫЛАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кеҫәртке — *ящерица*

**ЙӘШЕЛ-ЙӘҢГӘР** (әй) *и.* йәшел-зәңгәр — *железный купорос*

**ЙӘШЕЛҠУНЫҘ** (ҡыҙыл) *и.* баҙлауыҡ — *светлячок*

**ЙӘШЕЛЛӘҮ** (һаҡмар) *с.* йәшкелт — *зеленоватый*

**ЙӘШЕЛ СЕБЕН** (ҡариҙел, ҡыҙыл, мейәс) *и.* ит себене — *зеленая падальная муха*

**ЙӘШЕЛҮҢӘС** (арғаяш) *и.* ҡыҙылүңәс — *пищевод*

**ЙӘШЕЛ-ҺӘҢГӘР** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* йәшел-зәңгәр — *железный купорос*

**ЙӘШЕН БЫЛҠЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* йәшен йәшнәү — *сверкание молнии.* Йәшен йалтырау (арғаяш)

**ЙӘШЕНБӘК** (дим, ырғыҙ) *и.* йәшенмәк — *прятки.* Йәшенмеш (ҡыҙыл)

**ЙӘШЕН УҒЫ** (мейәс) *и.* йәшен уты — *стрелы молнии.* Йәшен уғынан ҡурҡыныс нәмә йуҡтыр

**ЙӘШЕТ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* йәштәш — *ровесник.* Кесе улы минең белән йәшет (эйек-һаҡмар). Улым мына бы малай белә бер йәшет (ҡыҙыл)

**ЙӘШ-ЙЕЛКЕНДӘР** (ҡыҙыл) *и.* йәш-елкенсәк — *молодежь*

**ЙӘШКЕ** (мейәс) *р.* йәш саҡтағы — *в молодости*

**ЙӘШКӘҘӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *с.* яуынлы, йонсоу — *пасмурный.* Көн йәшкәҙәй, йамғыр йауыр ахыры (ҡыҙыл)

**ЙӘШКӘЛӘК** (арғаяш, мейәс) *с.* яуынлы, йонсоу — *пасмурный.* Йәшкәк (урта, һаҡмар). Йәшкәк көн (һаҡмар)

**ЙӘШЛӘҮЕК** (дим, урта) *и.* 1. Туғайлыҡ — *долина реки.* 2. (гәйнә) Сауҡалыҡ — *молодой березняк*

**ЙӘШ ТУЙЛАУ** (дим) *и.* исем туйы — *именины*

**ЙӘШТӘК** (арғаяш, салйоғот) *и.* йәштәш — *сверстник*

**ЙӘШТӘҮЕК** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* йәшеллек — *зелень (о траве).* Һыу арйағындағы йәштәүеккә йебәрҙем (ҡыҙыл)

**ЙӘШУЛАН** (гәйнә) *и.* яңы тыуған бала — *новорожденный*

**ЙӘШҮҢӘС** (арғаяш, гәйнә, дим, ҡариҙел, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* ҡыҙылүңәс — *пищевод.* Йәшүңәч (төньяҡ-көнбайыш)

**ЙӘШҮР** (гәйнә) *и.* телбешмә — *ящур.* Йәшүрә (ҡариҙел)

**ЙӘШ-ҮҪКЕРЕМ** (мейәс, урта) *и.* йәш-елкенсәк — *молодежь*

**ЙӘШ-ҮҪТЕРМӘ** (урта) *и.* йәш-елкенсәк — *молодежь.* Бүтәне вис йәш-үҫтермә инте

**ЙӘШӘЛ** (ҡыҙыл) *и. кашне*

**ЙӘШӘН** (ҡыҙыл) *и.* 1. Йәш үлән — *молодая трава.* Атты ишек алдындағы йәшәнгә йебәрҙем. Иртәнсәкәй тороп ат йебәрҙем, ишекәйҙәрем алды йәшәнгә. Йатһам ғына ла торһам мин теләйем дуһ-иштәрем белән йәшәргә (йыр). 2. (туҡ-соран) Күгүлән — *спорыш.* 3. (әй) Һары сәскәле йомшаҡ ҡара-йәшел япраҡлы үлән — *трава с желтыми цветами, темно-зелеными листьями.* Һыйырыбыҙ йәшәнде күп ашап эсе ташты

**ЙӘШӘННЕК** (туҡ-соран) *и.* күгүләнлек — *местность, заросшая спорышом*

**ЙӘШӘҢКЕ САНА** (дим, мейәс, туҡ-соран) *и.* терһәкле сана — *сани-розвальни*

**ЙӘШӘҢГЕРӘҮ** (көнсығыш диалект) *и.* йонсоу — *пасмурный.* Йәшәңкерәү (ҡыҙыл)

**ЙӘШӘРЕҮ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *ҡ.* йонсоу — *пасмурный.* Көн йәшәрә, кискә йауыр (дим)

# К

**КАБУ, КАБЫ** (әй) *к.* тағы, тағы ла — *как бы.* Ғәйептәп ҡуймаһындар кабу. Күҙеңә сүп кермәһен кабы

**КАЗА ЖЫЛАН** (гәйнә) *и.* сыбар төҫтәге ағыулы йылан — *пестрая ядовитая змея*

**КАЗАКИ, КАЗАКЫЙ** (урта) *и.* 1. Кәзәкей — *верхняя одежда на подкладке длиной по колен с рукавами до локтя.* 2. (ҡыҙыл, ырғыҙ) Йоҡа материалдан эс ҡуйып тегелгән оҙон еңле кейем — *верхняя одежда из тонкого материала на подкладке с длинными рукавами.* Казакуй (мейәс)

**КАЗАКИТУН** (ырғыҙ) *и.* билле тун — *приталенная шуба.* Элгәре казакитундың билен бермәсләп йебәрәләр ине

**КАЗАНКА, КАЗАҢКА** (арғаяш, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* Һөт-аҡ шул казаңкала инде беҙҙең (ҡыҙыл). Казуңка (салйоғот)

**КАЗБИКШӘЛ** (ҡариҙел) *и.* йоҡа шәл — *тонкая шаль*

**КАЗБӘПКӘ** (гәйнә) *и.* ун көлтәнән яһалған һоҫлан — *суслон из 10 снопов*

**КАЗЛАУ** (гәйнә) *и.* мөшкә *(тирмәндә) — насыпь (над жерновами мельницы).* Казлауға бер кеше ҡуйғаннарей

**КАЗ ПЕЧИН** (гәйнә) *и.* йылан тамыры — *шалфей*

**КАЗУЛ** (ҡыҙыл) *и.* йоҡа күн — *кожа тонкой выделки*

**КАЗЫРУК** (дим) *и.* шәм селтәре — *решетка лампы*

**КАКАЙ** (ҡариҙел) *и.* бысраҡ, кәкәй *(балалар телендә) — бяка (в детском лексиконе).* Ҡулың какай булыр, балам

**КАКСЫ** (гәйнә) *и.* ҡаҡланған ит — *вяленое мясо.* Каксы пешергәней ҡунаҡларға

**КАЛАҠАПҠА** (гәйнә) *и.* ҙур таҡта ҡапҡа — *большие дощатые ворота*

**КАЛАКУЛ** (урта) *и.* сипарат барабаны — *барабан сепаратора*

**КАЛАМАШКА** (ҡыҙыл) *и.* иген ташыу өсөн йәшникле арба — *телега с ящиком (для зерна)*

**КАЛАПУШ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* бәләкәй балалар өсөн йоҡа баш кейеме — *капор*

**КАЛДУН** (эйек-һаҡмар) *и.* әбәк *(балалар уйыны) — пятнашки (детская игра)*

**КАЛДЫ** (урта) *и.* саңдау — *открытый загон для скота*

**КАЛИДУР** (урта) *и.* тышҡы солан — *наружное крыльцо*

**КАЛМАРЙЫН** (ҡыҙыл) *и.* яҡшы сифатлы ҡыҙыл буҫтау — *кармазин*

**КАЛУДА** (урта) *и.* 1. Түмәр умарта — *колодочный улей.* 2. (урта, эйек-һаҡмар) Ялғаш — *корыто*

**КАЛУШ, КАЛУШ ҠАТА** (ҡыҙыл) *и.* 1. Күндән тегелгән ҡыҫҡа ҡуңыслы ҡата — *глубокие кожаные галоши.* 2. (урта) Галош — *галоши*

**КАЛУША** (дим) *и.* 1. Ҡыҫҡа ҡуңыслы быйма — *валенки с короткими голенищами.* Калуша быйма (мейәс, урта). 2. (әй) Галош — *галоши.* Һыңар калушамды тапмайым тей ҙә ҡәртнәйем

**КАЛУШ-ҠАТА** (урта) *и.* бейек үксәле ҡата — *кожаная обувь на каблуке без голенища*

**КАЛЫЙАР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ташын юлға түшәү өсөн ватылған ҡая — *скала, камни которой идут на изготовление щебня.* Ҡыш көнө калыйар бушаттыҡ

**КАЛЫШНАЙ** (әй) *и.* һыйыр аҙбары — *коровник.* «Ҡайтмаһаң, калышнайға кер ҙә йат», — тигән Мырҙаш ҡартҡа. Бесәнде калышнай башына һалдыҡ

**КАМАР БИЛҒАУ** (ҡыҙыл) *и.* йөндән биҙәклэп бәйләнгән билбау — *узорчатый вязаный шерстяной кушак*

**КАМА-ҺЫУА** (эйек-һаҡмар) *р.* баштан-аяҡ — *как есть, достоверно.* Мин аларҙың ней тураһынан кәңәш иткәннәрен кама-һыуа беләмен

**КАМБАЛАУ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Сигеү — *вышивать.* 2. (дим, урта урал) Канва менән сигеү — *вышивать по канве*

**КАМБИЙ: КАМБИЙ ЙЕВЕ** (дим, урта) *и.* мулинә — *мулине*

**КАМЗУЛ: БАТШАЙ КАМЗУЛ** (көнсығыш диалект) *и.* еңһеҙ камзул — *камзол без рукавов*; биш билде камзул *(билле камзул) — камзол приталенный*; тоҡор йеңде камзул *(ҡыҫҡа еңле камзул) — камзол с короткими рукавами.* Камҙул (төньяҡ-көнбайыш)

**КАМЗЫЛ** (арғаяш) *и.* камзул — *камзол*

**КАМИР: КАМИР ҺЫУЫҠ** (урта) *и.* ҡыраулы йәки ямғырлы көн — *холодный, дождливый день или заморозки*

**КАМКАКУРЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка.* «Камкакурей ҡач-ҡач, атаң килә ҡамсы белән, инәң килә балта белән», — дисең аңарға

**КАМФАРА МӘРЙЕН** (ҡыҙыл) *и.* оҙонса яһалма мәрйен — *продолговатый искусственный коралл*

**КАМФАРАТЫР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КАМФАРКА, КАНФАРКА, КӘМФӘРКӘ** (ырғыҙ) *и.* күлдәк еңе осондағы әберкә — *оборка на манжете рукавов платья.* Йең осон камфаркалап тектек күлдәктең

**КАМФОР, КАМФУР** (дим, ҡариҙел) *и. конфорка (самовара)*

**КАНАПИ, КАНАПЫ** (ҡариҙел) *и.* артлы эскәмйә — *скамья со спинкой*

**КАНАУА** (урта урал) *и.* канау — *канава.* Бейег итеп тереп канауа ҡаҙынылар

**КАНАУЫС** (салйоғот) *и.* төрлө төҫкә инеп йымылдап торған ебәк — *переливающийся шелк.* Канауыс ал шау йефәк, бер ҡарағанда аҡ, бер ҡарағанда күк булып күренә

**КАНДАУАЙ** (көнсығыш диалект) *и.* 1. Ҡарт төҙ ҡарағай — *многолетняя стройная сосна.* 2. (арғаяш) Ботаҡһыҙ төҙ ағас — *ровное дерево*

**КАНДРАТ: КАНДРАТ БӘКЕҺЕ** (һаҡмар) *и.* сәс бәкеһе — *опасная бритва.* Тәүге сәсте лә алаһың кандрат бәкеһе белән

**КАНИФАС** (ҡыҙыл) *и.* ебәк ҡатыш йоҡа тауар — *тонкая ткань с примесью шелка*

**КАНТИР** (эйек-һаҡмар) *и.* бәләкәй көрәк *(әтлек, һарына ҡаҙыу өсөн) — небольшая лопатка*

**КАНТР, КӘНТР** (һаҡмар) *и.* үлсәүестең бер төрө *(туҡмаҡ башлы, көйәнтәле үлсәүес) — разновидность весов*

**КАПРУН** (салйоғот) *и.* кәпрән — *наперник*

**КАРАБА** (эйек-һаҡмар) *и.* гәрәбә — *янтарные бусы.* Карабаны таҡһаң файҙалы тейләр

**КАРАМЫСЛА** (һаҡмар) *и.* ҡоҙоҡ һиртмәһе — *журавль (у колодца).* Карамыслалы ҡойолары бар

**КАРАННАЙ** (урта) *и.* үгеҙбалыҡ — *бычок (рыба)*

**КАРАНТАС** (ҡариҙел) *и. тарантас.* Карандас (урта урал, эй). Персиҙәтелдәр гел карандасҡа ғына утырып йөрөнө. Карандас (һаҡмар). Ситәнне карандас, йәшникле карандас пулды

**КАРАУАТ АЙАҒЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* карауат япмаһы аҫтынан ҡуйылған селтәр — *кружевные занавески под покрывалом*

**КАРҘЫ** (дим, эй) *и.* саңдау — *карды (открытый загон для скота).* Һарыҡтарҙы карҙыла тота инде калхуз

**КАРЛУК** (эйек-һаҡмар) *и.* иргәйел — *карлик*

**КИРҘӘЙЕҮ** (әй) *ҡ.* 1. Ҡайҡайыу — *выгибаться.* Нейә кирҙәйеп киттегеҙ, утырығыҙ йаҡын. 2. Иренеү, экрен ҡыланыу — *лениться.* Нейә кирҙәйеб утыраң, шәберәг аша

**КИРЕ I** (дим) *с.* кир — *мухортый.* Кире ат

**КИРЕ II** (ҡыҙыл) *и.* уҡтың керешкә терәлә торған башы — *уступ стрелы*

**КИРЕ III** (ҡыҙыл) *р.* 1. Ҡабаттан — *снова.* Ул кире йәшкә йаҙылды. 2. (дим, ҡыҙыл) Һуң, аҙаҡ — *после.* Төштән кире арткан (дим). ◊ Кире булыу (урта) кире уйлау — *передумать.* Кире ғағыу (ҡыҙыл) ситләтеү, ҡағыу — *обижать.* Һәҙер ул балларҙы кире ғаҡмай

**КИРЕНӘН** (эйек-һаҡмар) *р.* ҡабаттан — *снова.* Киренән һалып тегәләр. Киренән һорап килгән

**КИРЕК** (ырғыҙ) *с.* кире, тиҫкәре — *упрямый.* Кирек кеше ул

**КИРЕҢКЕ** (һаҡмар) *с.* яҙынҡы — *вытянутый, выпрямленный.* Көйәнтәң киреңке икән, бөгөңкөрә

**КИРЕП: КИРЕП БӘЙҘӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* ат кешнәмәһен өсөн башын күтәртеп бәйләү — *подтягивание головы лошади кверху для предупреждения ржания*

**КИРКА** (арғаяш, әй) тәпке — *мотыга*

**КИРТКӘС-КИРТКӘС** (эйек-һаҡмар) *с.* киртләсле — *с уступами.* Һаҡмар ғына буйы кирткәс-кирткәс, кирткәстәре бөтәр боҙ киткәс *(халыҡ йыры)*

**КИРЛӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ярлыланыу — *обеднеть.* Шо йылдарҙа кирләп ҡалдылар

**КИРМӘ I** (ырғыҙ) *и.* тирмә — *войлочная юрта.* Борон кирмә ҡорғаннар

**КИРМӘ II** (һаҡмар) *и.* дебет шәлдең ситендәге биҙәк — *вид узора на краях пухового платка*

**КИРПЕСӨЙ** (дим) *и.* аласыҡ — *летняя кухня*

**КИРТ** (туҡ-соран) *и.* киртләс — *зазубрина.* Атай ҡулы менән ишек йаңағына һырлап һалынған тәрән киртләргә ҡарап, ул буласаҡ һалдат хеҙмәте тураһында хыйылланды

**КИРТЕК** (ҡыҙыл) *и.* солоҡҡа менеү өсөн ағасҡа яһалған киртләс — *насечка на бортевом дереве*

**КИРТЕМ** (арғаяш, салйоғот) *и.* иле — *толщиной, шириной в один палец.* Бер киртем ҡаҙы

**КИРТКЕС** (дим) *и.* күтәрмә — *крыльцо.* Кирткестә генә утырып тора ине инәйем. Киртләс (ҡариҙел)

**КИРТКӘС ҠАБЫРҒА** (эйек-һаҡмар) *и.* дебет шәл ситендәге биҙәк — *узоры по краям вязаного платка*

**КИРТМӘ** (ҡариҙел) *и.* 1. Киртләс — *зазубрина.* 2. Күтәрмә баҫҡысы — *ступень крыльца.* Киртмәләрен бетә ҡырып йыуҙым

**КИРТМӘС** (урта) *и.* киртләс — *зазубрина.* Ағастың киртмәсенә эләктереп урҙаға эләләр тирене. 2. Солоҡҡа менеү өсөн ағасҡа яһалған киртләс — *насечка на бортевом дереве.* 3. Бәйләнгән шәл ситендәге биҙәк — *узоры по краям вязаного платка*

**КИРТМӘСТЕ АҒАС** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* тешле туҡмаҡ — *деревянный валек с зазубринами*

**КИРТМӘСТЕ УҠА** (урта) *и.* ситтәре һырлы уҡа — *позумент с зигзагообразными краями*

**КИРТМӘСЛӘҮ** (урта) *ҡ.* һырлау — *зазубрить.* Ҡатаның ҡуңысын ҡусҡарлап, киртмәсләп, алмалап тегә торғайныҡ

**КИРШӘҮ** (әй) *ҡ.* ҡайсыны үтмәҫләү — *отуплять ножницы*

**КИРӘ I: КИРӘ СИРЕК** (ҡыҙыл, әй) *и.* урта бармаҡ менән баш бармаҡ араһынан торған үлсәү берәмеге, ҡарыш — *пядь*

**КИРӘ II** (дим) *и.* кейә — *леток (у ульев)*

**КИРӘГӨН** (әй) *и.* көнө буйы — *целый день.* Кирәгөн буйы эшһеҙ бумай бит

**КИРӘГӘ** (арғаяш) *и.* 1. Кейеҙ тирмә — *войлочная юрта.* 2. (һаҡмар) Тирмәгә ҡабырға яҡлап ҡуйылған терәүҙәр — *боковые подпорки юрты*

**КИРӘК I** (һаҡмар) *и.* сит, ҡыр — *чужбина.* Йәшәүләрә шулай рәхәт микән ауылда ла түгел, кирәктә. Минен йанларымда бер Зөлхизә, анын башҡалары кирәктә *(халыҡ йыры)*

**КИРӘК II** (һаҡмар) *и.* күҙ күреме ер — *видимая даль.* Кирәктә бер әҙәм күренә. 2. Дала, киңлек — *простор.* Кәкүк кенә саҡыра әй тирәктә, ҡанатларын йәйеп кирәккә *(халыҡ йыры)*

**КИРӘК III** (һаҡмар) *и.* сит кеше — *чужак*

**КИРӘ ҠОРТ** (дим) *и.* айырған күскә ҡуныр ер эҙләүсе ҡорт — *пчела, ищущая место для роения*

**КИРӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* бер бал ҡортоноң айырған күскә ҡуныр ер эҙләүе — *разведывание пчелы места для роения.* Әре кирәләй, шунда ҡунарлар

**КИРӘМ** (ҡыҙыл) *и.* солоҡҡа менеү өсөн биш йәки туғыҙ ҡаттан ишелгән ҡайыш бау — *ремень, запле-*

*тенный из пяти или девяти полосков, при помощи которого бортники лазают на высокие деревья без сучков*

**КИРӘМ БАЛТАҺЫ** (һаҡмар) *и.* солоҡ балтаһы — *бортевой топор*

**КИРӘМӘТ** (дим) *с.* ғәжәп — *чудесный.* Ул, ысынлап та, кирәмәт сайа, уҫал нәҫелдән ине. ◊ Кирәмәт тейеү (гәйнә) кәйеф боҙолоу — *испортиться (о настроении).* Шундый кирәмәтем тейеп китә

**КИРӘҮ ҮЛӘН** (мейәс) *и.* асыҡлыҡ ерҙә тығыҙ үҫкән, салғы үтмәй торған үлән — *солончаковая густая трава, трудно поддающаяся косьбе*

**КИСАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* торомбаш — *головешка*

**КИСАП** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* киле төйгөсө — *толкушка*

**КИСЕГЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* кисләү — *вечереть.* Көн кисегеп тә гилә, һыу ташып алайым, тип уйланы

**КИСЕКҺЕҘ** (урта) *с.* тыңлауһыҙ — *непослушный*

**КИСЕМ** (гәйнә) *с.* киҫелгән, киҫәк — *рубленый, расколотый.* Кисем шикәр килгәней кибеткә

**КИСЕНДЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* киҫенте, ҡырҡынды — *лоскут.* Алай кисендеге чыға

**КИСЕНТЕ** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* урмандың ағасы ҡырҡылған урыны — *вырубка.* Кисентеҙә, көйөклөктә ҡурайеләк шәп була (гәйнә)

**КИСЕРЕКТӘЙ** (ҡариҙел) *с.* һимеҙ — *жирный, упитанный.* Беҙҙең үрҙәкләр кисеректәй

**КИСЕТ, КИСИТ** (дим, туҡ-соран, урта, урта урал, әй) *и.* янсыҡ — *кисет.* Кисәт (һаҡмар)

**КИСЕҮ I** (урта) *ҡ.* кисереү, күреү — *пережить.* Хоҙай барыһын да күргәҙҙе, барыһын да кистек

**КИСЕҮ II** (эйек-һаҡмар) *р.* һуң — *поздно.* Бик кисеү апсығалар малды

**КИСЕҮ III** (әй) *и.* тулғаҡ тотоу — *предродовые схватки*

**КИСЕҮ IV** (арғаяш) *ҡ.* үтеү — *проходить.* Машиналар урман кисә, төн булһа ла

**КИСЕҮ: КИСЕҮ БИРМӘҮ** (урта) *ҡ.* йылғаның кисеүе булмау — *отсутствие брода.* Йаҙғы ташҡынларҙа Үҙәште кисеү бирмәй

**КИСКЕ АҠШАМ** (арғаяш) *и.* эңер ваҡыты — *сумерки*

**КИСКЕЛЕК** (дим, ҡариҙел) *с.* киске — *вечерний.* Кискелек йоҡо (дим)

**КИСКЕТАҢНЫҠ** (һаҡмар) *и.* шәфәҡ — *вечерняя заря*

**КИСКЕҺЕН** (арғаяш, ҡыҙыл, әй) *р.* кисен — *вечером.* Кискеһен ҡайтып йеттек (әй)

**КИСКӘ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* киҫкә — *валежник*

**КИСКӘ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* түмәр — *обрубок.* Былтыр бер ойа бәпкә күтдем, кискә күк булыб үстеләр. Киҫкә (урта урал, әй). Киҫкә гүк малайы бар

**КИСКӘРЕ** (һаҡмар) *р.* кискә — *к вечеру.* Кискәре генә гилеп тамаҡ туйҙырҙым

**КИСЛАХРУМ** (ҡыҙыл) *и.* ҡиммәтле таш — *драгоценный камень*

**КИСЛЕКТӘ** (эйек-һаҡмар) *р.* кисен, кис менән — *вечером.* Кислектә ғайта атаһы

**КИСМӘК ӘПӘЙ** (ҡариҙел) *и. батон*

**КИСМӘЛЕК** (дим) *и.* кисеү — *переправа.* Шул йерҙә кисмәлек була торғайны

**КИСТЕҢ ГӨНӨ** (һаҡмар) *р.* кис, кисен — *вечером.* Кистең гөнө урамға сыға йәшләр

**КИСТӘ: КИСТӘ ҺӨЙҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* боронғо китапты ятҡа һөйләү — *рассказать на память древние сказания*

**КИСТӘМ** (әй) *и.* ағасҡа бау менән бәйләнгән тимер шарҙан яһалған суҡмар — *палка с железным шариком, подвешанным на конце, кистень*

**КИСТӘН** (ҡариҙел) *и.* суҡмар, айыу суҡмары — *кистень*

**КИС ҺАРҠЫУЫ** (ҡыҙыл) *и.* киске күләгә — *вечерняя тень*

**КИСЫРАНТАЙ** (ҡариҙел) *с.* ҙур, оло ғара — *большой.* Кисырантай май тотҡан

**КИСӘГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* кисә — *вчера.* Кисәгенәк (төньяҡ-көнбайыш)

**КИСӘҢГЕ** (әй) *р.* кисәге — *вчерашний*

**КИСӘК I** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* ҡапыл — *вдруг.* Кисәк кенә искә төшмәй. ◊ Кисәк ҡайғылы — тиҙ генә ҡайғырып барыусан — *близко принимающий к сердцу, эмоциональный*

**КИСӘК II** (гәйнә) *и.* урам осо — *конец улицы.* Бу кисәктә ҡартлар йуҡ

**КИСӘКЛЕ ЙАҢҒЫР** (ҡариҙел) *и.* эре күҙле көслө ямғыр — *проливной дождь*

**КИСӘМӘҮ** (урта урал) *ҡ.* тыңламау, әйткәнгә ҡолаҡ һалмау — *не слушаться.* Һич кисәмәй ул бала

**КИСӘҮ I, КИСӘҮБАШ, КИСӘҮ ТАЙАҒЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* торонбаш — *головешка.* Киҫеү, киҫәү (һаҡмар)

**КИСӘҮ II** (ҡариҙел) *и.* 1. Тәртешкә — *кочерга.* Киҫәү (дим). 2. (урта урал). Мунса мейесен болғай торған ағас — *палка для выгребания углей в бане*

**КИСӘҮ III** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *р.* һуң — *поздно.* Бик кисәү апсығалар малты, төш йеткәс (урта)

**КИСӘҮ IV** (ҡыҙыл, урта) *с.* һуң быҙаулаған — *поздно отелившаяся.* Кисәү һыйыр

**КИСӘҮЛӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Һуңлау — *опоздать.* Беҙҙең мал кисәүләп ҡайта (туҡ-соран). 2. Кисләү — *вечереть.* Шундай уҡ йаҙ, көн кисәүләгән саҡ

**КИСӘҮ АҒАСЫ** (һаҡмар) *и.* тәртешкә — *кочерга.* Кисәү тайағы (төньяҡ-көнбайыш)

**КИСӘҮ ӨЙЛӘ** (ҡыҙыл) *и.* ҡояш байыр алды — *время перед закатом солнца*

**КИСӘҮ ПАР** (арғаяш) *и.* һуң һөрөлгән пар — *поздно вспаханный пар*

**КИҪЕКҺЕҘ** (урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Тыңлауһыҙ — *непослушный.* 2. Мәғәнәһеҙ — *бестолковый*

**КИҪЕН** (урта) *и.* ағасы ҡырҡылған урында сыҡҡан үҫенте — *молодая поросль*

**КИҪЕҮ I** (дим) *и.* тулғаҡ — *предродовые схватки.* Ҡыҫ киҫеүе асы була

**КИҪЕҮ II** (әй) *ҡ.* 1. Бесеү — *кроить.* Күлмәк киҫтереп ҡайтайым тигәйнем. 2. (эйек) Сабыу — *косить.* Үлән киҫеп ҡайттым

**КИҪЕҮ III** (урта) *ҡ.* туҡмау — *бить.* Өсөһөн дә тотоп киҫәр икән ҡутарғанса

**КИҪКЕ** (урта) *и.* киҫелгән йыуан ағас — *срубленное толстое дерево*

**КИҪКӘ I** (урта) *и.* 1. Киҫелгән йыуан ағас — *срубленное толстое дерево.* 2. Һал ағыҙғанда һыуға батып ҡалған ағас — *лес, утонувший при сплаве.* Һыу эсентәге киҫкә гүк. 3. (урта, эйек) Төпсөк — *пенек.* 4. (ҡыҙыл, урта) Лапы — *валежник.* 5. (әй) *с.* таҙа, мыҡты — *здоровый, крепкий.* Киҫкә гүк була туғайны элек ҡарттар

**КИҪКӘ II** (урта) *и.* ҡаты балсыҡ — *комки почвы.* Киҫкәне йомшартам әле баҡсала

**КИҪМӘК** (урта) *и.* ағастан соҡоп эшләнгән ҙур һауыт — *чан деревянный.* Йәйен балаһын ҡотоҡ йанында торған киҫмәктәге һыуға һалтым

**КИҪТӘН** (дим) *и.* 1. Йәнлек һуға торған суҡмар — *кистень.* 2. (әй) *с.* ауыр, ҙур — *большой, тяжелый.* Киҫтәндәй баланы күтәреп килә

**КИҪӘ** (әй) *и.* 9 еп аҫҡа, 9 еп өҫкә ҡуйып һуғылған киндер үрнәге — *узор девятиниткoвый.* Туғыҙ йеп аҫҡа, туғыҙ йеп өҫкә бер арттырып, бер кәметеп барам, киҫә һуғам

**КИҪӘК** (урта) *с.* 1. Ҡырт — *резкий.* Киҫәк кеше. 2. *р.* ҡапыл — *резко.* Киҫәк боролоу

**КИҪӘК-ҠОҪАҠ** (дим) *с.* киҫәкле — *комками, кусками*

**КИҪӘКЛӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* шәлгә биҙәк яһап бәйләү — *делать узоры на пуховом платке*

**КИҪӘТЕҮ** (әй) *ҡ.* ҡат-ҡат әйтеү — *повторить неоднократно.* ◊ Киҫәтә һуғыу *(өҙөп, ҡырҡа әйтеү) — сказать резко, конкретно.* Килен алғаныбыҙ йуҡ әле тип, киҫәтә һуға теге әбей ҙә

**КИҪӘР: КИҪӘР ҒАРАҺЫ ЙУҠ** (әй) *с.* бик һимеҙ — *очень упитанный, жирный.* Бер йылдарҙы киҫәр ғараһы йуҡ һимеҙ һыйыр һуйҙыҡ

**КИҪӘРТКЕ** (арғаяш, мейәс) *и.* кеҫәртке — *ящерица*

**КИТАҒАЙ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *м. һ.,* аптырауҙы белдергән һүҙ — *слово, выражающее удивление.* Китағай, бик сыуытты бит әле (төньяҡ-көнбайыш)

**КИТАП** (һаҡмар) *и.* ҡатлансыҡ — *книжка (часть желудка у жвачных животных)*

**КИТЕШЕҮ** (урта) *ҡ.* китеү, китеп барыу — *уходить.* Йылы ҡан тәмен бер тойоп алдымы — йырткыс тиҙ генә китешмәй

**КИТМӘН** (ҡариҙел) *и.* кәтмән — *мотыга*

**КИТМӘС** (урта) *и.* киртләс — *зазубрина*

**КИТӘЙЕКЛӘР** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* китәйек — *пойдемте*

**КИТӘН** (һаҡмар) *и.* 1. Кәйтән — *басон.* 2. (урта) Киндер — *конопля.* Йаланғынай йеренең әй китәне, йел алып та китте кипкәнен. Был донйаҡайларға ғоһорланып, белмәй ҡалдым ғүмөрҙөң үткәнен *(халыҡ йыры)*

**КИТӨРЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* бөтөрөү — *вывести (уничтожить).* Һавынын китәргәнсә сайҡаһаң, тән бешенмәй

**КИФЕННЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кәфенлек — *материя для савана*

**КИҺӘ: КИҺӘ ЙАНЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* текә, ҡырҡа яныу — *править круто (о косе).* Салғыны киһә йаныған. Киҫә йаныу (әй)

**КИҺӘК** (ҡыҙыл) *и.* киҫәк — *кусок*

**КИҺӘКТӘН** (һаҡмар) *р.* ҡапыл — *резко.* Киһәктән боролоп сыҡты ла гитте

**КИҺӘҮ** (һаҡмар) *с.* яйға килмәгән — *непокладистый.* Киһәмәгән кире байталға әйтеп. Киһәү бала

**КИҺӘҮҺЕҘ** (ҡыҙыл) *с.* тыңлауһыҙ — *непослушный*

**КИШАННАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ҡыйшандау — *кокетничать*

**КИШКӘ** (ҡариҙел) *и.* йыуан эсәк — *толстая кишка*

**КИШМЕР** (эйек-һаҡмар) *и.* кешмир — *кашемир.* Кишмер шал йабындыҡ беҙ

**КИШНӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* кешнәү — *ржать*

**КИШӘҢКЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бойҙай ҡабығы — *шелуха пшеницы*

**КИШӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡайсыны үтмәҫләү — *лязгать ножницами*

**КИЧАРЫЙ** (гәйнә) *р.* кискә — *к вечеру.* Кичарый жигет килеп керде

**КИЧЛӘМӘ** (гәйнә) *ҡ.* ҡунарға — *ночевать.* Кичләмә малай килә

**КИЧКЕЧУЛПАН** (урта урал) *и.* Зөһрә йондоҙ — *Венера*

**КИЧҠОНҒАЙҒА** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* кискә — *к вечеру.* Кичконғайға йамғыр йауа дигәнейе ырадыйа

**КЛАШ, КЛИШ** (гәйнә) *и.* кәүәк — *перхоть*

**КЛЕБЕР** (урта) *и.* *клевер*

**КЛИМ** (гәйнә) *и.* сай — *ил*

**КЛИШША, КЛӘШШӘ, КЛЕШШӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡыпһыуыр — *клещи*

**КЛУП** (эйек-һаҡмар) *и.* балыҡ алдатыу өсөн мурҙаға һалынған көнбағыш ҡабығы — *приманка для рыб из шелухи подсолнуха.* Нурҙаның эсенә клуп бәйләйләр

**КЛҮПКӘ** (урта) *и.* ваҡ ҡына итеп ярылған таҡта — *клепка*

**КОҘЛА** (ҡыҙыл) *и.* утын һалып быса торған станок — *козлы*

**КОҘЛОТ** (урта) *и.* күҙлут — *пикульник* козлятник

**КОЛАБАРА, КОЛАПАРА** (һаҡмар) *и.* көләпәрә — *вид меховой или ватной шапки в форме капюшона, закрывающий уши и шею, с острым верхом.* Колапара йауырынға төшөп тора. Көлпәрә (урта)

**КОЛАКЧАН** (гәйнә) *и.* ҡолаҡсын — *шапка-ушанка*

**КОЛАША** (минзәлә) *и.* мәйет йыйыу өсөн ҡабыҡ улаҡ — *лубок для обмывания покойника.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Улаҡ — *колода (водопойная)*

**КОМАННЫ** (эйек-һаҡмар) *с.* ауырлы — *беременная.* Команны буған ул хатын. Көмән (төньяҡ-көнбайыш)

**КОМАРҘАНЫУ** (минзәлә, урта урал) *ҡ.* ҡомһоҙланыу — *жадничать.* Бигерәк ҡомарҙанды бахырың, донйаһының әрәхәтен күрмәне

**КОМБАҒЫШ ЭШЛӘПӘҺЕ** (әй) *и.* көнбағыш табағы — *головка подсолнуха*

**КОНАХ, КОНАҺ** (ҡыҙыл) *и.* гонаһ — *грех.* Конаһ шымлыҡлары! Конаҫ (һаҡмар)

**КОНЖЫЛ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* өс йәшлек һыйыр малы — *трехгодовалый (по отношению крупнорогатого скота).* Конжыл сыйыр. Конжыл үгез

**КОНЙЫҒЫР** (ҡариҙел) *и.* кеҫәртке — *ящерица*

**КОНОҘОН** (урта) *и.* көн буйы — *целый день.* Коноҙон тиг утыралар

**КОРАМЫШ** (гәйнә) *и.* шуҡ — *озорник*

**КОРКӨН** (гәйнә) *и.* шәмбе — *суббота*

**КОСАРКА** (дим) *и.* урғыс — *жнейка*

**КОТОЛОК** (ҡыҙыл) *и.* сирпәк — *ведерко*

**КОФЫЙ** (эй) *и.* оҙаҡ йәшәгән, ҡартлыҡтан сабый хөкөмөнә кергән кеше — *долгожитель*

**КӨБӨ** (урта) *и.* 1. Ашлыҡ һалып һаҡлау өсөн ҙур ағас күнәк — *большая кадка для хранения зерна.* 2. (эйек-һаҡмар) Эркет һауыты — *кадка.* 3. Май бешеү өсөн эсе соҡоп эшләнгән оҙонса ағас һауыт — *маслобойка.* 4. (мейәс) Моҙға — *лукошко*

**КӨБӨЛГӘН, КҮБЕЛГӘН** (арғаяш) *с.* һырылған — *стеганый.* Көбөлгән салбар

**КӨБӨЛМӘ** (арғаяш) *с.* һырыған — *стеганый.* Көбөлмә салбар

**КӨБӨҢКӘ** (арғаяш) *и.* бешкәк — *мешалка*

**КӨБӨРГӘЙЕЛ** (һаҡмар) *и.* гөбөргәйел — *черепаха*

**КӨБӨР** (арғаяш) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный половик*

**КӨБӨСӘК, КӨВӨСӘК** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Күнәсек — *маленькая деревянная посуда, сделанная из полого ствола дерева.* 2. (эйек-һаҡмар) Көпсәк — *ступица.* Тәгәрмәс көбөсәгенә тиклем батҡаҡҡа сумған арбалар үтеп киткеләй

**КӨБӨ САЛБАР** (арғаяш) *и.* һырыған салбар — *стеганые брюки*

**КӨБӨҮ I** (салйоғот) *ҡ.* һырыу — *стегать.* Йурған көбөү. Күбеү (ҡыҙыл)

**КӨБӨҮ II** (салйоғот) *и.* мамыҡһыҙ һырылған материал — *стеганая подкладка.* Йағаның аҫтына көбөү ғуйа

**КӨБӘК I** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Көпсәк — *ступица.* 2. Торба *(нефть быраулағанда ҡулланыла)* — *труба (при бурении нефти)*

**КӨБӘК II** (арғаяш) *и.* кәбәк — *мякина.* ◊ Көбәккә утырыу *(ашлыҡтың һабаҡҡа үҫеүе)* — *идти в стебель (о злаковых)*

**КӨГӘНӘК** (дим) *и.* ҡыйғыр — *сокол-белогорник*

**КӨГӘҮЕН** (ҡариҙел) *и.* күгәүен — *овод*

**КӨҘГӨ БҮЛТЕРЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көҙ тыуған бәрәс — *осенний приплод.* Көҙгө сәңгәр (һаҡмар)

**КӨҘГӨҺӨН** (эйек-һаҡмар) *р.* көҙ көнө — *осенью.* Көҙгөһөн ҡорға һунар итәләр

**КӨҘГӨ ЙӘЙЛӘҮЕС** (эйек-һаҡмар) *и.* көҙ тыуған бәрәс — *осенний приплод*

**КӨҘГӨ ЙОРТ** (ҡыҙыл) *и.* көҙгө йәйләү урыны — *место осенней стоянки (после летовки)*

**КӨҘГӨ ҠЫРАЙАҠ** (урта) *и.* көҙгө туңғаҡ — *осенние заморозки*

**КӨҘҘӨҢ ГӨНӨ** (һаҡмар) *р.* көҙ көнө — *осенью.* Көҙҙөң гөнө йегетләр эшкә барған инде

**КӨҘЛӨКТӘ** (ҡариҙел, ырғыҙ) *р.* көҙ көнө — *осенью.* Аҡлар көҙлөктә килеп баҫтылар (ырғыҙ). Көҙлөк (төньяҡ-көнбайыш)

**КӨҘЛӘҮ, КӨҘЛӘҮ ЙОРТ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* көҙгө йәйләү урыны — *место осенней стоянки (после летовки)*

**КӨҘЛӘҮЕС** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* көҙ тыуған бәрәс, быҙау — *осенний приплод*

**КӨҘӨЙ** (һаҡмар) *и.* урманлыҡ — *лес*

**КӨҘӨК** (ҡыҙыл, урта, урта урал, һаҡмар, ырғыҙ, эй) *и.* күңелдәге яманһыулыҡ — *состояние грусти на душе.* Эште осламайынса ҡайтып китеп, күңелендә көҙөк ҡалдырырға теләмәй ине ул (һаҡмар). ◊ Көҙөк булыу *(күңелгә ауыр булыу)* — *чувствовать тяжесть на душе.* Баламды биктәп киткәйнем, күңелгә көҙөк булыб йөрөй (урта урал). Күңелгә көҙөк булып тормаһын (урта)

**КӨҘӨРӨ** (дим, урта) *с.* көмрө елкәле, тыҡшыҡ — *съежившийся (о человеке).* Бөтә йөҙөн эре шаҙра ҡаплаған, көҙөрө йелкәле, күҙлекле кеше ҡабаланмай ғына бүлмәгә инде (урта)

**КӨҘӨРТ** (һаҡмар) *и.* тау һырты — *хребет горы.* Көҙөрт йулдан киттек

**КӨҘӨРӘЙТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡыҫыу *(күҙ тураһында)* — *сузить (о глазе).* Арыҫлан күҙҙәрен көҙөрәйтеп көлөмһөрәне. 2. Көмөрәйтеү — *сгорбить.* Бабай, йауырынын тағы көҙөрәйтә биреп, дилбегәһен ҡаҡҡылап ҡуйҙы

**КӨҘӨРӘ** (урта урал, эй) *с.* бөҙрә — *кудрявый.* Көҙөрә генә бәрәкәйе буған ҡара һарыҡтың (эй)

**КӨҘРИ СӘПСӘҮ, КӨҘРӨЙ СӘПСӘҮ** (арғаяш, салйоғот) *и.* турғай төрө — *разновидность воробья*

**КӨҘ ТАРТЫМ** (урта) *р.* көҙгә табан — *к осени.* Көҙ тартым ине инде

**КӨҘӘЛЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡыҫҡарыу — *укорачиваться.* Ҡойороғо көҙәлгәндән-көҙәлә бара

**КӨҘӨЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* көҙәү — *обрезать гривы и хвосты у стригунов (весной)*

**КӨҘӘМ** (ырғыҙ) *и.* көҙгө һарыҡ йөнө — *шерсть осенней стрижки*

**КӨҘӘН** (дим) *и.* нәҫел атамаһы — *название родового подразделения*

**КӨҘӘН: КӨҘӘН ЙӘБЕШЕҮ** (ҡариҙел) *и.* көҙән йыйырыу — *сводить судорогами.* Көҙән йырыу, көҙән тартыу (дим)

**КӨҘӘНМӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* тотонмау, ҡағылмау — *не прикасаться.* Ауыр эшкә көҙәнмәне ул Кәримә

**КӨҘӘП-ҺАҘАП** (һаҡмар) *р.* унан-бынан ҡыҫҡартып мөнтәү — *обрезать неровно.* Ҡана үҙеңде *(сәсеңде)* көҙәп-һаҙап йебәрәйем булмаһа, бер сауап булыр

**КӨҘӘТЕҮ** (дим, эй) *ҡ.* күҙәтеү — *следить.* Тауыҡ көҙәтәһең, ҡырға һалһа (дим)

**КӨҘӘҮ I** (арғаяш, эй) *ҡ.* тоҫҡау — *прицелиться*

**КӨҘӘҮ II** (арғаяш, һаҡмар) *ҡ.* тышаулау — *стреножить (лошадь).* Һауғанда бейәнен айағын көҙәп, башын бәйләп һауалар (һаҡмар)

**КӨҘӘШ** (урта урал) *с.* өҫ-башҡа, әйбер кейеүгә тәрбиәһеҙ, әрпеш *(ҡыҙ балаға ҡарата)* — *неопрятная, невнимательная к своей внешности, одежде*

**КӨЖГӨЛӘҮ** (урта) *ҡ.* гөрөү — *сгрести.* Мисте көжгөләп ал әле

**КӨЖГӨҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* таяҡ менән берәй нәмәне бутау, болғау — *мешать палкой что-нибудь.* Тайаҡ беләп солан аҫтын көжгөп, этте үсектерәлә йөрөй бит бы малайҙар (эй)

**КӨЖӨ** (ҡариҙел) *и.* кизе — *хлопчатобумажная пряжа для тканья.* Көжөгә күтәрелгән күлмәк

**КӨЖӘЛӘ** (арғаяш) *и.* 1. Талҡынған етен — *обработанный лен.* 2. (мейәс) Киндер талҡышы — *кост-*

*рика.* 3. Көнйәлә — *пух чесаной шерсти или трепаного льна, прикрепленный к прялке*

**КӨЗАУЫҠ** (ҡариҙел) *и.* көҙгө туңғаҡ — *осенние заморозки.* Көзауыҡтан суң ҡырпаҡ төшә

**КӨЗКӨЗГӨ** (ҡариҙел) *и.* күҙлек — *очки*

**КӨЗНИС** (ҡыҙыл, әй) *и.* 1. Тимерсе — *кузнец.* 2. Тимерлек — *кузница.* Көзнистә эштәттек беҙ тырманы ла (әй)

**КӨЗМӘ** (урта) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КӨЗӘТЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* күҙәтеү — *следить.* Көзәтеп торған икән

**КӨЙ I** (урта) *и.* кәйеф — *настроение.* ◊ Көй боҙолоу — кәйеф ҡырылыу — *испортиться (о настроении).* Көйөм боҙолоп тора

**КӨЙ II** (дим) *и.* торош — *справность.* Машинаның көйө киткән

**КӨЙ III** (ырғыҙ) *и.* ыңғай, йоҫоҡ — *направление.* Шул көйҙән Баймаҡҡа барҫа

**КӨЙГӘК** (ҡыҙыл, урта) *с.* 1. Сабырһыҙ — *вспыльчивый.* 2. (мейәс) Ҡабалан, өтәлән *(кеше)* — *торопливый, суетливый (о человеке)*

**КӨЙГӘЛЕК** (урта) *и.* көйгәнәк — *лунь луговой.* Көйгәләк (төньяҡ-көнбайыш)

**КӨЙГӘНӘК I** (һаҡмар) *и.* биткә сыҡҡан тут — *матеж*

**КӨЙГӘНӘК II** (арғаяш, ҡыҙыл) *с.* көйгәләк — *легко поддающийся беспокойству*

**КӨЙҘӨГӨҮ** (урта) *ҡ.* янып-көйөү — *горевать.* Көйҙөгөп тә китәң балалар өсөн

**КӨЙҘӨК** (дим) *и.* ҡыҫҡа ҡуңыслы быйма — *валенки без голенища*

**КӨЙҘӨРӨҮ I** (мейәс, урта, һаҡмар) *ҡ.* ваҡ малды бестереү — *кастрировать (о мелком скоте).* Мынау ҡара тәкәне көйҙөрөр гәрәг ине (мейәс)

**КӨЙҘӨРӨҮ II** (урта) *ҡ.* өтәҫләү — *коптить.* Ит көйҙөрөү

**КӨЙҘӘҮ I** (ырғыҙ) *ҡ.* ярмаға әҙерләнгән ашлыҡтың ҡабығын киләлә төйөп һыҙыртыу — *вышелушить зерно в ступке*

**КӨЙҘӘҮ II** (әй) *ҡ.* йүнәтеү, әйбәтләү — *поправлять.* Урынығыҙҙы көйҙәгеҙ

**КӨЙЕК, КӨЙЕКЛЕК** (гәйнә) *и.* урманда янғындан һуң ҡалған урын — *гарь*

**КӨЙЛӨ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* киле — *ступка.* Көйлө зур була, кисабы да була төйөргә (минзәлә)

**КӨЙЛӘҮ I: ЧӘЙ КӨЙЛӘҮ** (минзәлә) *ҡ.* сәй яһау — *наливать чай*

**КӨЙЛӘҮ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* йүнәтеү — *наладить.* Кереп көйләмәде матайны

**КӨЙЛӘШЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* килешеү — *сговориться*

**КӨЙМӘ I** (дим, урта, ырғыҙ, һаҡмар) *и.* 1. Мейес эсе — *свод печи.* Мейестең көймәһе бейек буһа икмәк уңа. 2. (эйек-һаҡмар) Өҫтө көпләүле арба — *карета.* Уйын ҡыҙған мәлдә генә тройка йеккән көймә килеп туҡтай

**КӨЙМӘ II** (гәйнә) *и.* ҡайғы — *горе, печаль*

**КӨЙМӘГӘПӘС** (ҡыҙыл) *и.* осло тире бүрек — *папаха*

**КӨЙМӘҘӘЙ** (һаҡмар) *и.* Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ р-ны Ибраһим ауылының элекке исеме — *старинное название дер. Ибрагимово Кувандыкского р-на Оренбургской области*

**КӨЙМӘ ЙУЛЫ** (урта, һаҡмар) *и.* төтөн юлы — *дымоход*

**КӨЙМӘЛЕ АРБА** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* өҫтө көпләүле арба — *карета.* Әбейбатша көймәле арбала Эсбирләүгә уҙған тей бы йаҡтан (урта урал)

**КӨЙМӘЛЕ МАШИНА** (һаҡмар) *и.* кузовы көпләүле машина — *крытый грузовик*

**КӨЙМӘЛЕ МЕЙЕС** (урта) *и.* икмәк мейесе — *русская печь*

**КӨЙМӘТИТЕЙ** (гәйнә) *и.* юл япрағы — *подорожник*

**КӨЙӨ I, КӨЙГӘ** (һаҡмар, әй) *я. һ.* көйөнсә — *вспомогательное слово для образования наречия.* Төрмәгән көйө бирә

**КӨЙӨ II** (дим) *и.* ҡауаҡ — *перхоть*

**КӨЙӨҘ** (урта, эйек-һаҡмар, әй) *и.* 1. Кейеҙ — *войлок, кошма.* 2. (мейәс) Йөн палаҫ — *ковер.* 3. (урта, эйек-һаҡмар) Йөндән һуғылған аҫалы палаҫ — *шерстяной домотканый половик с узорами.* Палаҫты алығыҙ ҙа ҡунаҡлар йағына көйөҙҙө түшәгеҙ (урта). 4. (ҡыҙыл) Күтәреп һуғылған сымылдыҡ — *занавеска, вытканная с выборкой.* 5. (ҡыҙыл) Тантана ваҡытында ат өҫтөнә ябыла торған аҫыл япма — *покрывало из драгоценного материала для лошади во время торжеств*

**КӨЙӨҘЛӘТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бестереү — *кастрировать.* Үгеҙ көйөҙләттег әле бөгөн

**КӨЙӨҘ ЙАПРАҒЫ** (урта) *и.* үгәй инә үләне — *мать-и-мачеха.* Көйөҙ йапрағының бер йағы аҡһыл йөнтәр була

**КӨЙӨК I** (гәйнә) *и.* 1. Мышы — *лось.* Көйөк мөгөзсөз була, йуша — мөгөзлө болан. 2. (төньяҡ-көнбайыш) Кейек — *зверь*

**КӨЙӨК II** (арғаяш) *и.* кәкресуҡыш көйөлдө — *кроншнеп*

**КӨЙӨКБАШ** (мейәс) *и.* йәкәл һуғыу уйыны — *игра в бабки*

**КӨЙӨКЛӨК** (ҡариҙел) *и.* урманда янғындан һуң ҡалған урын — *гарь*

**КӨЙӨЛГӨ** (эйек-һаҡмар) *и.* көйөлдө — *кулик.* Ҡайҙалыр көйөлгөләр, тәгәрлекләр, сыйырсыҡлар сырҡылдай

**КӨЙӨЛДӨР** (мейәс) *и.* кәкресуҡыш көйөлдө — *кроншнеп*

**КӨЙӨНӘҪЕ** (дим) *и.* юҫыҡ — *направление.* Ошо көйөнәҫе умбиш саҡырым

**КӨЙӨҢКӨ БОЛОТ** (ҡыҙыл) *и.* һары болот — *золотистое облако*

**КӨЙӨРӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* яныу — *преть.* Бесәнем көйөрәп йата

**КӨЙӨҪ-КӨЙӨҪ** (эйек-һаҡмар) *р.* ваҡыт-ваҡыт — *временами.* Көйөҫ-көйөҫ һораша йөрөнөм. Көйөҫ-көйөҫ иҫкә төшөп китә

**КӨЙӨҮ** (гәйнә, ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* асыуланыу, тиргәү — *сердиться, ругать.* Әсәйем көйә ҡыҫҡырып тороп (урта). Мине көймә йәме (урта)

**КӨЙӨШ** (туҡ-соран) *и.* 1. Мал аҙығы — *корм для скота.* Әҙ генә көйөшө буһа тора мал. 2. (ырғыҙ) Көйшәм — *жвачка.* 3. (һаҡмар) Көйшәү — *жевать.* Ҡарындан көйөшкә сығара

**КӨЙӨШ МАЛ** (мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* көйшәүсе мал — *жвачное животное*

**КӨЙӨШӨҮ** (эй) *ҡ.* 1. Асыуланыу — *сердиться.* Беҙ үҙенә бер ҙә көйөшмәнек. 2. Асыуланышыу — *ссориться.* Көйөшкәбеҙ әле Заһырттин бисәһе белә, бер ҙә барышмайбыҙ. Күршеләр көйөшеп тә, һөйөшеп тә гитә

**КӨЙӨҺ-КӨЙӨҺ** (ҡыҙыл) *р.* ваҡыт-ваҡыт — *временами.* Кимде-гимде, көйөһ-көйөһ килеп баштан тота, йәнде сығара йаҙа

**КӨЙРӘК** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* 1. Мурт — *хрупкий.* Көйрәк ағас. 2. Әшеүә, тиҙ туҙыусан — *неноский.* Күлмәгең көйрәк булһын, ғүмерең оҙаҡ булһын (һаҡмар)

**КӨЙСӨ** (һаҡмар) *и.* йырсы — *певец.* Көйсөһө көйләй, ҡурайсыһы ҡурай тарта, ҡумыҙ тартыусыһы ҡумыҙын уйнай

**КӨЙСӨҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* күңелһеҙ — *печальный.* Ахыр көннәрҙә көйсөҙ хәлләрҙә булмасаң йаҡшы

**КӨЙҪӨҘЛӘНЕҮ** (дим) *ҡ.* моңайыу — *грустить*

**КӨЙТЛӨ** (һаҡмар) *с.* 1. Ҙур — *большой.* Көйтлө балыҡ эләктергәнһең икән. 2. *р.* нык — *сильно.* Атай геше көйтлө эләктерә *(һуға)* ул

**КӨЙ-ШАЙ** (урта) *и.* кәйеф — *настроение.* Көй-шай насар

**КӨЙШӘМДЕ** (арғаяш) *с.* көйшәүсе — *жвачные.* Көйшәмде мал

**КӨЙШӘМ ТУҠЫРАУ** (арғаяш) *и.* көйшәүсе малдар ауырыуы — *болезнь жвачных животных*

**КӨЙШӘЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* шөйтөләү — *наводить навой*

**КӨЙШӘНЕҮ** (эй) *ҡ.* көйшәү — *жевать (о корове).* Тыныс ҡына көйшәнеп йатҡан һыйыр эргәһенән үтеп киттем

**КӨЙӘ I** (дим, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Айрығойроҡ — *уховертка.* 2. (ҡариҙел) Ҡарышлауыҡ — *гусеница*

**КӨЙӘ II** (мейәс, һаҡмар) *и.* ҡором — *сажа.* Мейес көйәһе

**КӨЙӘ АУЫЗ** (гәйнә) *и.* кейә — *леток (у улья)*

**КӨЙӘҘ** (урта) *с.* һауалы — *гордый.* Үтә көйәҙ, үҙ һүҙле, ғорур, маһайыусан булыб үҫте

**КӨЙӘЗ ТУРҒАЙ** (урта) *и.* ҡупшы турғай — *щеголь*

**КӨЙӘҠОРТ** (урта урал) *и.* айрығойроҡ — *уховертка*

**КӨЙӘЛСӘН, КӨЙӘЛСӘК** (һаҡмар) *с.* ҡыҙыу — *вспыльчивый.* Һай, көйәлсән икәнһең дә үҙең, бер һүҙ әйтер әмәл йуҡ

**КӨЙӘЛӘК, КӨЙӘЛӘН** (дим, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *с.* көйгәләк — *беспокойный*

**КӨЙӘЛӘНЕҮ** (дим, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *ҡ.* борсолоу, ҡайғырыу — *беспокоиться, горевать.* Бушҡа көйәләнмә инде (дим)

**КӨЙӘЛӘҮ I** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* борсолоу, ҡайғырыу — *беспокоиться, горевать*

**КӨЙӘЛӘҮ II** (һаҡмар) *ҡ.* ҡоромлау — *намазать сажей.* Битләрен көйәләп ҡуйа торғайнылар

**КӨЙӘНДӘ** (ҡариҙел) *и.* көйәнтә — *коромысло*

**КӨЙӘНТӘ** (һаҡмар) *и.* һиртмә — *журавль (у колодца).* Көйәнтәле ҡотоҡҡа йөрөйбөҙ

**КӨЙӘНТӘБИЛ** (һаҡмар) *и.* әйәрһеҙ ҙә һыбай менеп була торған һығылмалы билле ат — *конь с гибкой спиной, на котором можно ездить верхом без седла*

**КӨЙӘНТӘ ЙОЛДОҘ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* таң алдынан көнбайышҡа байый торған көйәнтәне хәтерләтеп теҙелгән өс йондоҙ — *Пояс Ориона.* Көйәнтә йолдоҙ бар, тәс көйәнтә инде (урта урал)

**КӨЙӘТИШЕК** (гәйнә) *и.* кейә — *леток у улья*

**КӨЙӘПАПА** (ҡариҙел) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КӨЙӘР** (арғаяш) *р.* ауыр — *тяжело.* Кешегә у йылды көйәр булды инте

**КӨЛ** (урта) *и.* гөл — *цветок*

**КӨЛБӨҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* күлбеү, йәйелеп ятыу — *раскинуться, простираться*

**КӨЛГӨРӨ: КӨЛГӨРӨ БЕШЕРЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* киндер әйберҙе һелтелә ҡайнатыу — *кипячение для отбеливания холщовой ткани в щелочной воде*

**КӨЛГӨПШӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* көпшә төрө — *вид купыря*

**КӨЛГИКМӘК** (ҡыҙыл) *и.* сөсө ҡамырҙан көлгә күмеп бешерелгән икмәк — *хлеб из пресного теста, испеченный в золе.* Көлгүмәсе (арғаяш, салйоғот, урта)

**КӨЛҒАҠҠЫС** (эйек-һаҡмар) *и.* самауыр селтәре — *самоварный колосник*

**КӨЛДӨ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта) *а.* бөтә — *все.* Көлдө әйберләрне ҡарап сыға дей (төньяҡ-көнбайыш)

**КӨЛДӨҺӨ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *а.* бөтәһе — *все.* Көлдөһө лә ҡатнашама? (мейәс)

**КӨЛДӨК** (арғаяш, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* Көлдөксә — *шесток (у печи).* Көлөксә (урта)

**КӨЛДӨГҮМӘС** (арғаяш) *и.* көл күмәсе — *хлеб, испеченный в золе.* Көл икмәге (урта)

**КӨЛЙЕМЕШ** (урта, эй) *и.* гөлйемеш — *шиповник*

**КӨЛКАЙ, КӨЛӨКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡолон — *жеребенок.* Көлөкей (гәйнә). Көлөкейнең күнен ҡутыра иде дә, итен берәү дә алмый. Көлөкейгә таҡмыйлар.

**КӨЛКӨ** (дим) *с.* көлкөлө — *забавный.* ◊ Көлкөгә ҫабышыу *(көлкөгә бороу)* — *превращать в шутку*

**КӨЛКӨНӨСТӨ** (көнсығыш диалект) *с.* көлкөлө — *забавный.* Көлкөнөстөгә көләң инде (эй). Көлкөнөчлө (төньяҡ-көнбайыш)

**КӨЛКӘ** (ҡариҙел) *и.* тубырсыҡ — *шишка еловая.* Сыршы көлкәсе

**КӨЛКӘЙ, КӨЛӨКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡолон — *жеребенок.* Көлөки (гәйнә)

**КӨЛЛЕ, КӨЛЛӨ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *а.* бөтәһе — *все.* Көлле балам да уҡыған (ҡариҙел). Көллө бер йерем үҙемдеке түгел (дим)

**КӨЛӨКСӘ, КӨЛЛӨКСӘ** (урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* көлдөксә — *шесток у печи.*

Көлөксәң тулы көл буһын,
Итәгең тулы ул буһын,
Ҡаҙаның тулы ит буһын...
*(Халыҡ ижадынан)*

**КӨЛӨКСӘ ҺЕПЕРТКЕСЕ** (урта) *и.* йүкә бумала — *помело*

**КӨЛ КӨПШӘҺЕ, КӨЛГӨПШӘ** (урта) *и.* көл тәме әйтеп торған көпшә — *вид купыря*

**КӨЛМӘСЛӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* темеҫкенеү — *шнырять, вынюхивая (что-л.).* Йөрөр инде көлмәсләнеп өйҙән өйгә

**КӨЛӨН, КӨЛӨКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡолон — *жеребенок.* Көлөңкәс (туҡ-соран)

**КӨЛӨННӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ҡолонлау — *ожеребиться.* Аты көлөннәгән аҡбабайыңның

**КӨЛӨНСӘ** (урта) *и.* көлдөксә — *шесток у печи.* Көлтөксә (эйек-һаҡмар)

**КӨЛӨШ** (ҡыҙыл) *с.* киң итәк — *клеш.* Көлөш күлдәк кейгән икән

**КӨЛӨШӨҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* аш йыйыу — *нарывать.* Теге ҡысыуы көлөшкән

**КӨЛТӨК ШИШМӘСЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* Башҡортостандың Тәтешле р-ны Ҡәлтәү ауылындағы шишмә исеме — *название родника в дер. Кяльтяево Татышлинского р-на Башкортостана*

**КӨЛТӨК ТӨБӨ** (арғаяш) *и.* мейес төбө — *основание ниши*

**КӨЛТӨННӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эренләү — *нарывать*

**КӨЛТӨҺӨ** (урта) *а.* бөтәһе — *все.* Көлтөһө лә беҙгә гилә

**КӨЛ ТОНОҒЫ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* һелте — *щелочь.* Уҫаҡ бәшмәген алып көл тоноғона ҡайнаталар (эйек-һаҡмар)

**КӨЛ ТУПРАҠ** (ҡыҙыл) *и.* көлһыу тупраҡ — *подзолистая почва*

**КӨЛТӘПӘН** (эйек-һаҡмар) *и.* тәбәнәк кеше — *коротыш*

**КӨЛТӘСӘНӘК** (ҡариҙел) *и.* уртаса оҙонлоктағы һәнәк — *вилы средней длины*

**КӨЛСӘ I** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* әсе ҡамырҙан бешерелгән йәймә — *лепешка из кислого теста.* Көлсә икмәк (урта). Ул көлсә икмәк кеүек йаҫы битле, ҡалын иренле ине

**КӨЛСӘ II** (урта) *и.* ҡылған — *ковыль*

**КӨЛҮШ** (мейәс) *с.* киң итәк — *клеш.* Күлмәге көлүш

**КӨЛФӘЙӘКЕН** (һаҡмар) *р.* селпәрәмә — *вдребезги.* Сынайаҡтарым көлфәйәкен килгән

**КӨЛӘ БАРЫП** (һаҡмар) *р.* көлә-көлә — *смеясь.* Көлә барып хәл бөттө

**КӨЛӘГӘС** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар, эй) *с.* 1. Көләкәс — *хохотун, хохотунья.* Аптулла көлә лә көлә торғайны, көләгәс булды (ырғыҙ). 2. Кешенән көләүсән — *имеющий привычку смеяться, глумиться*

**КӨЛӘЙҘӘҮ** (мейәс) *ҡ.* көләмһерәү — *слегка улыбаться.* Көләйҙәп кенә гилә

**КӨЛӘКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡолон — *жеребенок*

**КӨЛӘПӘ I** (урта, ырғыҙ) *и.* башлыҡ — *капюшон.* Кәжән көләпәле булғас, башҡа ла йамғыр теймәй (урта)

**КӨЛӘПӘ II** (урта) *и.* әрекмән — *лопух*

**КӨЛӘПӘРӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* буранда бүрек тышынан кейеү өсөн туланан тегелгән баш кейеме — *суконная шапка типа капюшона для ношения поверх меховой шапки*

**КӨЛӘПӘРӘЛЕ САРЛАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* керелдәк сарлаҡ — *чайконосная крачка*

**КӨЛӘСӘ I** (дим, ҡариҙел) *и.* табикмәк — *лепешка из кислого теста*

**КӨЛӘСӘ II** (гәйнә) *и.* тәгәрмәс — *колесо.* Көләчә (ҡариҙел)

**КӨЛӘҮМӘК** (арғаяш) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**КӨМАНЛЫ** (һаҡмар) *с.* йөклө — *беременная*

**КӨМБАҒЫШ ИГЕНЕ** (арғаяш) *и.* көнбағыш еме — *ядро семечки*

**КӨМБӘ I** (урта) *и.* 1. Бәшмәк — *гриб.* Йыла көмбәһе — *ильмовый гриб.* Йыла көмбәһе йыла киҫкәһентә үҫә. 2. Кәпәсбаш — *груздь.* 3. (ҡыҙыл) Үләндәрҙә, ашлыкта була торған гөмбә ауырыуы — *грибковая болезнь растений.* 4. Ҡылауыр — *золотуха.* Ҡарайып килеп тимерәү күбек ҡалҡа көмбә

**КӨМБӘ II** (ҡыҙыл, урта) *и.* ашлыҡтың ҡыу башағы — *пустой колос*

**КӨМБӘ III** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* көмбәҙ — *круглые, куполообразные жестяные украшения для национальной женской одежды*

**КӨМБӘҘ** (ҡыҙыл, урта) *и.* балыҡ тәңкәһе — *чешуя рыбы.* Салиха балыкларҙы шештән алып бысаҡ менән көмбәҙен ҡырсый башланы (урта)

**КӨМБӘҘЛӘНДЕРЕҮ** (урта) *ҡ.* таҫрайтыу — *выпучить.* Ҡотлоғужа күҙен көмбәҙләндереп тартышты ла тынып ҡалды

**КӨМБӘЙ** (арғаяш) *и.* шәм сығыры — *закрутка фитиля лампы*

**КӨМЖӘЙЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* көмрәйеү — *сгорбиться.* Көмжәйешепараһың

**КӨМӨ** (арғаяш) *и.* түңәрәк тимер элмәк — *круглая железная застежка*

**КӨМӨЛДӨРӨК** (ҡыҙыл, урта) *и.* күмелдерек — *нагрудник (седла)*

**КӨМӨР** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* ғүмер — *жизнь*

**КӨМӨРӨЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* бөкрө — *горбатый*

**КӨМӨШЙЕП** (урта) *и.* 1. Аҡ уҡа — *белый позумент.* 2. (салйоғот) Ҡалпаҡ — *женский головной убор (украшение) из позумента*

**КӨМӨШ ҠАЛАҠ** (арғаяш, ҡыҙыл, урта) *и.* балғалаҡ — *чайная ложка*

**КӨМӨШ ҠАРА** (эй) *и.* металлы буяу — *металлическая краска.* Көмөш ҡара менән дамға ҡуйылған

**КӨМӨШМОРОН** (арғаяш) *и.* суҡышы аҡ өйрәк төрө — *вид утки с белым клювом*

**КӨМРӨ, КӨМӨР** (арғаяш) *и.* өрфөйә — *куполообразная жестяная монета*

**КӨМРӘҢНӘҮ** (урта) *ҡ.* алпан-толпан баҫыу — *шагать в перевалку*

**КӨМҺӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* көмрәйеү — *сгорбиться*

**КӨМҺӘНЛӘҮ** (урта) *ҡ.* көмрәйеңкерәү — *слегка сгорбиться.* Ул ғәҙәтенсә саҡ ҡына көмһәнләберәк ҡыҙыу аҙымнар менән үтеп бара

**КӨМӘГӘЙ** (дим, урта) *и.* 1. Аңҡау — *нёбо.* 2. Һыйырҙың өҫкө теше урыны — *верхние десны коровы*

**КӨМӘҘЛӘҮ** (урта) *с.* соҡорораҡ — *с углублением.* Беҙ көмәҙләү йерҙә утырғамбыҙ

**КӨМӘЗЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* көмбәҙләү — *украшать куполообразными жестяными монетами*

**КӨМӘГӘЙ I** (дим, урта) *и.* аңҡау — *нёбо*

**КӨМӘГӘЙ II** (урта) *и.* төп — *дно.* Табаҡ көмәгәйе

**КӨМӘК** (дим) *и.* аңҡау — *нёбо*

**КӨМӘ-КӨН** (арғаяш) *р.* көн эсендә — *за день.* Машина мән көмә-көн барып килепула

**КӨМӘНЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* йөклө — *беременная*

**КӨМӘЙ** (әй) *и.* 1. Тел төбө — *глотка.* Кұмәй, кұмәгәй (салйоғот). 2. (арғаяш) Аңкау — *нёбо*

**КӨМӘШКӘ** (гәйнә) *и.* тәҙрә быялаһы — *оконное стекло*

**КӨН I** (дим, көнсығыш диалект, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Ҡояш — *солнце.* Көн төшөб утыра ҫөткә (дим). Көн тыуғансы йоҡтамағыҙ, балдар (әй). Көн тотолоу (арғаяш) *и.* ҡояш тотолоу — *солнечное затмение.* ◊ Көн ашау (ҡариҙел) *ҡ.* ҡояшҡа яныу — *загорать.* Көн ҡолаҡтаныу (ҡыҙыл, урта, әй) *и.* ҡояш ҡолаҡланыу — *появление ушей у солнца*; көн үтеү (урта) *ҡ.* ҡояш һуғыу — *солнечный удар.* Башына көн үткән, эсе гитә баланың; көн тәме сығыу — ҡояшта ултырып тәмһеҙләнеү *(азыҡ тураһында)* — *стать невкусным от солнца.* Майҙан көн тәме сыҡһа, тәмһеҙләнә. Көн ҡуныу (арғаяш) *и.* — *закат солнца.* 2. Яҡтылыҡ — *свет.* Ҡалын ҡарағай йәйегенән үтәһүтә көн төшмәй. 3. (көнсығыш, көньяҡ, төньяҡ-көнбайыш диалекттар) *и.* һауа торошо — *погода.* Көн алаҡасланыу (ҡыҙыл) *ҡ.* — *перемениться (о погоде).* Көн гилеү (урта) *ҡ.* аяҙытыу — *проясниться (о погоде).* Көн утырыу (эйек-һаҡмар, әй). Көн бизләү (урта) көн боҙолоу — *становиться пасмурно.* Үҙәште туғайында эш өҫтөндәге кешеләр көн бизләп китмәҫ борон йалан эшләрен бер төрлө итеп, ослап ҡайтырға ҡабаландылар. Көн боларып тороу, көн йәшкәҙәү (ҡыҙыл, урта). Көн шәмәреү (урта). Көн боҫтаныу (урта) *ҡ.* ерҙән быу күтәрелеү — *испарение влаги.* Көн йаманы гитәр, әҙәм йаманы гитмәҫ (әй) — *погода установится, человек останется самим собой.* Көн сасҡаулау (ҡыҙыл) *ҡ.* йәй, көҙ көн һыуытыу — *стать холодным (о летних, осенних днях)*; көн һауаланыу, көн эһереү (ҡыҙыл) көн эҫереү — *становиться жарко (о погоде).* 4. (көньяҡ, көнсығыш диалекттар) *и.* ваҡыт — *время.* Көнө бөтөү (ваҡыты бөтөү) *ҡ.* — *истечение времени.* Көн һорау *(ваҡыт һорау) ҡ.* — *просить день (время)*

**КӨН II** (көнсығыш диалект, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ғүмер — *жизнь.* Минең көнөм бөтмәгәс, үлмәнем (урта). 2. Хәл — *положение.* Кешегә көнөң ҡамаһын (әй). 3. Тормош, йәшәү — *существование.* Һис көн йуҡ мынау балаға (әй).

**КӨНАҪ** (ҡыҙыл) *и.* гонаһ — *грех.* Элек кеше көнаҫ була тип ышанып ине

**КӨНБАҒЫШ ТАЙАҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* көнбағыш һабағы — *стебель подсолнечника*

**КӨНБИТ** (эйек-һаҡмар) *и.* тауҙың көньяҡ бите — *южная сторона горы*

**КӨНБОЛОТ** (дим, ҡыҙыл) *и.* болотло көн — *пасмурный день*

**КӨНДӨҘ: КӨНДӨҘ ЙЕТЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* төш етеү — *наступление полудня*

**КӨНДӨК** (гәйнә) *и.* кендек — *пупок*

**КӨНДӨК БҮКӘН** (гәйнә) *и.* арба күкрәге — *подушка телеги*

**КӨНДӨКСӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* көлдөксә — *шесток печи*

**КӨНДӨҺӨ** (урта) *а.* көлләһө — *все.* Көндәһө лә йәшләрен миңә ҡалтырғаннар инте

**КӨНДӘҮ** (әй) *ҡ.* көнләшеү — *ревновать.* Ир көндәмәнем ғүмеремдә

**КӨНӘЛЕК** (эйек-һаҡмар) *р.* алдан — *заранее, преждевременно.* Көн элек барып торҙом

**КӨНИТЕШ** (ҡыҙыл) *и.* көнкүреш — *существование, быт.* Көнитмеш (салйоғот, эйек-һаҡмар). Эшһеҙ көнитмештен йәме йуҡ (эйек-һаҡмар)

**КӨНИТМЕШТЕ** (салйоғот) *с.* мул тормошло, хәлле — *зажиточный.* Көнитмеште гешеләр бар беһтә

**КӨНИНЕШ** (урта) *и.* көнбайыш — *запад*

**КӨНИРТӘН** (эйек-һаҡмар) *р.* иртән — *утром.* Көниртән торҙониһә ашарға һорап илап тора

**КӨНЖӘЛӘ** (арғаяш, ҡариҙел, мейәс, салйоғот, урта) *и.* көнйәлә — *пук чесаной шерсти или трепаного льна, прикрепленный к прялке.* Көнйала (төньяҡ-көнбайыш)

**КӨНЖӘЛӘ ТАЙАҒЫ** (арғаяш, ҡариҙел) *и.* ҡолға — *прялка.* Көнйала тайағы (дим)

**КӨН ЙАҒЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* көньяҡ — *юг*

**КӨНЙЫЛЫТҠЫС** (дим, мейәс, ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* 1. Еңгәсәй — *солдатик (насекомое).* 2. (ҡыҙыл, урта) Ҡамҡа — *божья коровка.* Көнйылытҡыс, ос, ос, кейәүең ҡалағ алып кигән (урта)

**КӨНКӨНДӘШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көндәш — *соперница*

**КӨНКҮРМЕШ** (һаҡмар) *и.* көнкүреш — *существование, быт.* Шулай көнкүрмешләр насар булды

**КӨНКҮРМӘС** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ырамаған — *невезучий*

**КӨНҠУНЫШ** (арғаяш) *и.* көнбайыш — *запад*

**КӨН ҠЫҘЫЛЫ** (урта урал, әй) *и.* шәфәҡ — *вечерняя заря*

**КӨНЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* көнләшеү — *завидовать.* Шул саңдарға ҡарап, атта уҙған һалдаттың бәхетен көнләйем

**КӨННӨК** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* көнлөк, бер көн эшләнелгән эш хаҡы — *поденщина.* ◊ Көннөккә йөрөү *(ялланып эшләү)* — *работать по найму.* Шут байарында көннөккә йөрөнөк йер тырмап, көлтә ташып... (эйек-һаҡмар)

**КӨННӨҢ-КӨН БУЙЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* көн буйы — *целый день*

**КӨННӨҢ-КӨНӨНДӘ** (ҡариҙел) *р.* һәр көн — *ежедневно.* Көннөң-көнөндә жар малайымның

**КӨННӘП: КӨННӘП САҠЫРЫУ** (урта) *ҡ.* көнөн, сәғәтен әйтеп саҡырыу — *пригласить на определенное время*

**КӨННӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* көнләшеү — *ревновать.* Аны көннәмә, үзеңнән биздермә

**КӨНОҘАЙ** (урта, һаҡмар) *р.* көн буйы — *целый день.* Көноҙайға бармаға гәрәк анда (урта). Көноҙон (урта), көн оҙасы (ҡариҙел)

**КӨНӨБЕР** (урта, эйек-һаҡмар, әй) *р.* шунда уҡ, шул уҡ көндө — *тотчас, в тот же момент.* Уны ней көнөбер тапҡаннар. Көнөбер төшмәһә лә йөрөй торғас иҫкә төшә ул (эйек-һаҡмар). Көнөбергөн (урта). Көнөбергөн табыпуламы ул

**КӨНӨГӘ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар, ырғыҙ) *р.* көнөнә — *за день.* Көнөгә ун уйана. Көнөгә ике трут (мейәс)

**КӨНӨЛГӘРЕ** (әй) *р.* алдан — *заранее, преждевременно.* Көнөлгәре көйөб утырма, тинем. Көнәлгәре (төньяҡ-көнбайыш). Әлләмәшләп бер бәпкәсе көнәлгәре чыҡҡан да

**КӨНӨЛӘҮ** (мейәс) *ҡ.* көнләшеү — *ревновать*

**КӨНСӨЛДӨК** (әй) *и.* көнсөллөк — *зависть, ревность.* Көнсөлдөктәре лә килеп китә

**КӨНСӨЛЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* көнләшеү — *ревновать.* Хәҙер йаҙмай, көнсөлләй

**КӨН СЫУАҒЫ** (урта) *и.* көн үҙәге — *полдень.* Көн сыуағында йылытыр

**КӨНТӨР-ҒАҢҠЫР** (урта) *р.* көңгөр-ҡаңғыр — *потихонечку.* Көнтөр-ғаңҡыр көн үтеп тик тора

**КӨНТӨШТӘН** (салйоғот) *р.* төш ваҡытында — *в полдень.* Көнтөштән йоҡтайым да

**КӨНТЫУЫШ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, әй) *и.* көнсығыш — *восток*

**КӨН ҮҘӘГЕ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Төш ваҡыты — *полдень.* Көнүҙәге бик эссе (төньяҡ-көнбайыш). 2. (ҡыҙыл) Яҙғы йылы көн — *весенний теплый день.* Көн йылы булһа, көн үҙәге бирҙәле тибеҙ, йаҙ уахыты уы

**КӨНШАҢҒЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әбейҙәр сыуағы — *бабье лето*

**КӨНӘЖӘЛӘ** (салйоғот) *и.* көнйәлә — *пук чесаной шерсти*

**КӨНӘРКЕҮ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, әй) *ҡ.* әллә кем булыу — *возомнить о себе.* Көнәркегән булып арыуҙан-арыуҙы һурайҙар был ҡыҙҙар (әй)

**КӨНӘРКӘШ** (эйек-һаҡмар) *и.* көндәш — *соперница.* Көнәркәш эшләү (урта) бер-берендән көнләшеп эшләү — *работать соревнуясь.* Улар кемуҙарҙан көнәркәш эшләйләр, һалабаш һыҙыралар

**КӨНӘРКӘШЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* тар эсле булыу — *быть завистливым*

**КӨҢГӨР I** (салйоғот) *и.* ағас һуҡа — *деревянная соха*

**КӨҢГӨР II** (дим) *с.* көрәнһыу — *бордовый.* Көңгөр бәрәңге

**КӨҢГӨРТ, КӨҢӨРТ** (урта, һаҡмар, әй) *с.* ҡараһыу — *темно-бурый.* Офоҡто алһыу көңгөрт йаҡтылыҡ ҡаплағайны (урта). Көңгөрт сырай (әй) — *хмурое выражение лица*

**КӨҢГӨРӘЙ** (арғаяш) *и.* ҡыңғырау — *ботало*

**КӨҢӨЛ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* күңел — *душа.* Көңөлгә килгән алға килә

**КӨҢРӘНӘ** (ҡыҙыл) *р.* ҡараңғы сырай менән — *с хмурым выражением лица.* Көлә инеп көңрәнә сыҡҡандан һаҡтан

**КӨП** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ҡуҙаҡ — *стручок.* Борсаҡ көбө. Көптә борсаҡ. 2. (һаҡмар) Йөҙләк — *облицовка*

**КӨПЕЙ, КӨПӨ** (ҡариҙел, эйек, әй) *и.* һырылған бишмәт — *стеганое пальто*

**КӨПКӘ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* 1. Мейес артына быҙау йәки бәрәс ябыу өсөн яһалған урын — *голбец.* 2. (әй) Соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* Көпкө солан (әй)

**КӨПЛӨ: КӨПЛӨ БАЛ** (урта) *и.* бал менән тултырылып һыланған балауыҙ — *печатанный воск;* ◊ Көплө булыу (һаҡмар) кәйегеү — *приедаться;* көплө дағa (эйек-һаҡмар) еҙ дағa — *латунная подкова;* көплө өй (көньяҡ диалект) тыштан таҡта менән көпләнгән өй — *обшитый дом.* Көптө өй (салйоғот)

**КӨПЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бал ҡортоноң тулы күҙәнәктәрҙе аҡ сайыр төҫлө матдә менән һылап ҡуйыуы — *печатание, запечатывание сот пчелами.* Ҡыналау (урта)

**КӨПӨ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* һырылған бишмәт — *стеганое пальто.* Көпөй (әй). Көпәләй (салйоғот)

**КӨПӨ САЛБАР** (ҡыҙыл, урта) *и.* һырылған салбар — *стеганые брюки*

**КӨПСӘК БЫРАУЫ, ҺОҪКО БЫРАУ** (эйек-һаҡмар) *и.* кендек бырау — *большой бурав*

**КӨПСӘК ШЫНЫ** (арғаяш) *и.* көпсәк ҡыршауы — *обруч ступицы*

**КӨПТӘЙ** (урта, һаҡмар, әй) *с.* йыуан — *толстый.* Ҡулын артҡа ҡуйып, көптәй ҡорһағын ҡалҡан итергә теләгәндәй, ҡайҡайа биреп һораны (урта). Эсе көптәй, айағы йептәй (әй)

**КӨПТӘЛЕ** (мейәс) *с.* көпләүле — *обшитый.* Көптәле машина

**КӨПТӘҮ** (салйоғот) *и.* урындыҡ ҡаҙнаһы — *толстая доска по краю нар, на которой делается настил.* Ҡаҙнаҡ (әй)

**КӨПШӘҮӘЙТ: КӨПШӘҮӘЙТ ИТЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* көпләү — *обшивать.* Өйөн таҡта белән көпшәүәйт итеп тә ҡуйҙы, кейәү уңған буғас

**КӨПШӘ I** (арғаяш, мейәс, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* балтырған — *борщевик.* Шыма көпшә (минзәлә, әй) *и.* монар көпшәһе — *болиголов.* Болан көпшәһе (ҡыҙыл) *и.* күпселек ерҙә үҫә торған таҡыябаш үлән — *вид купыря.* Көпшә өйрәһе (арғаяш) *и.* балтырған өйрәһе — *суп из борщевика.* ◊ Көпшә жийыны (төньяҡ-көнбайыш) *и.* яҙ көнө балтырғандан аш бешереп ашау аҙналығы — *неделя весеннего праздника с приготовлением пищи из борщевика*

**КӨПШӘ II** (дим) *и.* туп көбәге — *ствол орудия.* Хәҙер аның йалбыр сәсе йаңы ғына туп көпшәһенән сыҡкан бороңғо эртилирисләр бумалаһы кеүег ине

**КӨПШӘ III** (эйек-һаҡмар) *и.* тирмән мөшкәһе — *насыпь (у мельницы)*

**КӨПШӘ МАЙЫ** (әй) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**КӨПШӘК** (эйек-һаҡмар) *и.* тәгәрмәс көпсәге — *ступица.* Көпчәк (төньяҡ-көнбайыш)

**КӨПӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* күбеү, күптәйеү — *выпячиваться.* Уның эсе көпәйеп тора. Әрмәнде кәүҙәһен көпәйтте

**КӨПӘК** (һаҡмар) *с.* йомро — *круглый.* Йәрсә арышҡа ҡарағанда көпәгерәк була

**КӨПӘКЛӘР** (һаҡмар) *и.* Башҡортостандың Хәйбулла р-ны Йәнтеш ауылындағы ара *(нәҫел)* исеме — *название родового подразделения в дер. Янтыш Хайбуллинского р-на Башкортостана*

**КӨПӘНДӘЙ** (ҡариҙел) *с.* ауыр, һимеҙ — *тяжелый, полный.* Көпәндәй геше

**КӨПӘШ** (эйек-һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ташбаҡа — *черепаха.* Сатыр эсендә көпәш бар

**КӨР** (һаҡмар) *р.* 1. Етеҙ — *ловко.* Ат көр генә алып китте йоктө. 2. *с.* көслө (төньяҡ-көнбайыш) — *сильный.* Синең таушың көр

**КӨРБӨЙАН** (һаҡмар) *с.* тупаҫ — *грубиян.* Көрбөйан итеп үҫтермәнем аларҙы

**КӨРГӨ** (урта) *и.* гөмбөр — *ботало*

**КӨРГӨЛДӘК** (ҡыҙыл, урта) *и.* йәшенмәк *(балалар уйыны) — игра в прятки*

**КӨРГӨЛДӘҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* уйнағанда йәшеренгән балаларҙы табырға ҡалыу — *маяться (в прятках)*

**КӨРГӨЛӘҮ** (дим) *ҡ.* өрҙөрөү — *поддувать.* Самауырҙы көргөлә

**КӨРГӨҮЕС** (ырғыҙ) *и.* күмер болғатҡыс *(таяҡ) — мешалка (для углей)*

**КӨРГӘҮ** (кыҙыл) *ҡ.* болғау — *мешать*

**КӨРҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* гөрләү *(күгәрсен тураһында) — ворковать (о голубе)*

**КӨРКӨ, КӨРКӘ** (ҡариҙел) *и.* тубырсыҡ — *шишка (еловая)*

**КӨРКӨЛДӘҮ** (урта) *ҡ.* көртләү — *квохтать.* Тауығым көркөлдәп йөрөй баҫам тип

**КӨРКӨТӨҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* өркөтөү — *вспугнуть.* Атты көркөтмә

**КӨРКӘ I** (көнсығыш диалект) *и.* күркә — *индюк.* Урам тутырып көркә аҫырай ҡәртнәйем (әй)

**КӨРКӘ II** (һаҡмар) *и.* 1. Ер аҙбары — *сарай-землянка.* 2. (арғаяш, ҡариҙел) Ҡыуыш, аласыҡ — *шалаш, хижина*

**КӨРКӘ III** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тубырсыҡ — *шишка (еловая)*

**КӨРКӨБАШ** (арғаяш) *и.* ҡорохтан, яр көйөлдөһө — *турухтан*

**КӨРМӘТЕЛ** (урта урал) *и.* тотлоҡма — *заика*

**КӨРМӘЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* бөрөләнеү — *почкование.* Муйыл көрмәләнеп бөткән

**КӨРМӘҮ** (дим, урта, һаҡмар, әй) *ҡ.* салып бәйләү — *завязать крест-накрест*

**КӨРНИЧӘ** (гәйнә) *и.* түбәһе ябыулы ишек алды — *крытое крыльцо*

**КӨРӨ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Көрөҫ — *нитченка.* Көрөгә теҙеү. 2. (урта) Балаҫ һуғыу өсөн нәҙек кенә итеп сепрәктән йыртылған бау — *тонкая тряпочная веревка для тканья половика*

**КӨРӨ БАУЫ** (урта) *и.* көрөҫ ебе — *нитка нитченки.* Көрө йебе (дим)

**КӨРӨҘ** (салйоғот) *и.* көрөҫ — *нитченка*

**КӨРӨЗДӘЙ** (мейәс) *и.* кәпәсбаш — *грузди*

**КӨРӨК I** (ҡыҙыл) *с.* көр — *упитанный, откормленный.* ◊ Көрөгөн көрәү *(һарыҡҡа ҡарата)* көрәйеү — *стать упитанным.* Көрөгөн көрәһә, баҡтаһын һала баштай

**КӨРӨК II** (һаҡмар) *и.* ваҡ балыҡ — *мальки*

**КӨРӨК III** (урта) *и.* күрек — *дымарь*

**КӨРӨК IV** (гәйнә) *и.* ҡулса ауыҙлыҡ — *удило кольцеобразное*

**КӨРӨКТӨРӨҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* көрәйтеү — *откармливать, откормить.* Малдарыңды мандытып, көрөктөрөб алһаң, китәр ине улар

**КӨРӨЛДӘК** (ҡыҙыл) *и.* өйәр — *весенняя талая вода*

**КӨРӨН** (дим, ҡыҙыл, урта) *и.* өйәр — *весенняя талая вода.* Мына көрөн шекелде гитте ған. Шәп йауында көрөн аға. Көрөм (ҡыҙыл)

**КӨРӨНТӨ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йылға өҫтөндәге сурайып уҡмашып туңған боҙ — *ледяные шероховатости, комки*

**КӨРӨҪ АРБАҺЫ, КӨРӨҪ АТЫ** (урта) *и.* көрөҫ сығыры *(көрөҫ ебен тотҡан ағас, көрөҫ ебен урҙаға тоташтыра) — приспособление для поддержания нитки нитченки*

**КӨРӨҪ КЕҘӘҮЕ** (урта) *и.* көрөҫ ебе — *нитка нитченки*

**КӨРӨҪ ТӘГӘРМӘСЕ** (дим, ҡыҙыл) *и.* көрөҫ сығыры — *блок нитченки.* Көрөҫ шалтырағы (урта)

**КӨРӨСТАЛ** (арғаяш) *и.* шәм торбаһы — *пузырь для лампы*

**КӨРӨҺ, КӨРӨХ** (ҡыҙыл, салйоғот, һаҡмар) *и.* көрөҫ — *нитченка.* Көрөһ бауы

**КӨРПӨЛДӘК** (ырғыҙ) *с.* кәүшәк — *рыхлый.* Көрпөлдәк ҡар

**КӨРПӨТӨҮ** (һаҡмар) *ҡ.* өрҙөрөү — *поддувать.* Самауырҙы итек ҡунысы менән көрпөтәм

**КӨРПӘ I** (ҡариҙел, һаҡмар) *и.* ҡором — *сажа.* Шәм көрпәһе. Мейес көрпәһе

**КӨРПӘ II** (дим, урта) *с.* көрән — *бурый (о масти животных).* Көрпә һыйыр

**КӨРПӘГӘ: КӨРПӘГӘ ҪАЛЫУ** (дим) *ҡ.* тире иләгәндә уны көрпә әсеткеһенә һалыу — *пикелевание шкуры*

**КӨРПӘК** (һаҡмар) *с.* 1. Кәүшәк, өрпәк — *рыхлый, мягкий.* Көрпәк ҡар йауҙы. 2. Тулы кәүҙәле — *полный.* Әсәһе Аҫылбикә, көрпәк кәүҙәле булыуына ҡарамаҫтан, йүгергеләй-йүгергеләй, һәр малды күҙҙән уҙғарып, кәртәнән сығарҙы

**КӨРПӘЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* ҡоромланыу — *покрываться сажей*

**КӨРПӘС, КӨРПӘСӘЙ** (урта) *и.* ташбаш — *пескарь*

**КӨРПӘСӘТКӘ** (урта, әй) *и.* яҡшы сортлы бойҙай оно — *крупчатка.* Көрпәсәткәне беҙҙең бабай баҫыраулап китерә (урта)

**КӨРПӘ ТУН** (ырғыҙ) *и.* һарыҡ бәрәсе тиреһенән тегелгән тун — *мерлушковая шуба*

**КӨРПӘҮ** (урта) *ҡ.* 1. Бөркәү — *накрыться.* Бөркәнсек белән көрпәп ураҡ урған килен. 2. Ҡаплау, ябыу — *покрыть.* Аҙбарын ҡар көрпәгән. Көрпәмәгән бал

**КӨРПӘҮЛЕ** (урта) *с.* ябыулы — *покрытый.* Көрпәүле машина

**КӨРПӘҺЫУ** (урта) *с.* һорғолт — *буроватый (масть животных)*

**КӨРСӨК** (урта урал) *и.* шар уйынында туп һалына торған соҡор *(мая) — ямка для мячика в игре с деревянным шариком*

**КӨРСӘ** (һаҡмар) *с.* көр — *упитанный.* Көрсә генә мал икән

**КӨРҪ-МАРҪ** (һаҡмар) *р.* уңған — *проворный.* Ул эшкә көрҫ-марҫ ҡына

**КӨРТ** (урта) *и.* һырынды — *сугроб.* ◊ Көрт һуғыу *(ҡар һалыу) — заносить снегом.* Көрт йарыу (әйекһаҡмар) ҡар һыуы ағыу — *поток талых вод*

**КӨРТБАҪМА I** (дим) *и.* тауҙың ҡар ята торған яғындағы лапылыҡ — *заснеженное место горы, покрытое валежником*

**КӨРТБАҪМА II** (урта) *и.* көртмәле — *черника*

**КӨРТЛӨК I** (дим, ҡариҙел, минзәлә, урта) *и.* 1. Ағуна — *куропатка.* 2. (дим, төньяҡ-көнбайыш) Ҡор — *тетерев.* 3. (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) Көртләгән тауыҡ — *курица-квохта.* 4. (ҡариҙел) Эре өйрәк — *крупная порода утки.* Эре үрҙәкне көртлөк тибеҙ

**КӨРТЛӨК II** (һаҡмар) *и.* эсенә әйбер тултырылған йәнлек тиреһе — *чучело животного.* Һыйырҙы күп уахыт көртлөк менән әүрәттек

**КӨРТЛӘҪ** (һаҡмар) *с.* көрт баҫҡан — *заснеженный.* Көртләҫ йулдан саҡ барып йеттек

**КӨРТМӘ** (әй) *и.* көртмәле — *черника.* Көртмә ул йыраҡ, урманда ғына

**КӨРТМӘЛЕ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ҡыҙыл көртмәле — *брусника*

**КӨРТМӘЛИН** (мейәс) *и.* мүк еләге — *клюква*

**КӨРТНӘСЕ** (арғаяш, дим, мейәс) *и.* өй эйәһе, мал эйәһе — *домовой*

**КӨРТӨЙ, КӨРТӘЙ** (ҡариҙел) *и.* көртләгән тауыҡ — *курица-квохта*

**КӨРТӨКӘЙ, КӨРТӨЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* тиренән һырып тегелгән камзул — *душегрейка.* Көртәй (арғаяш, мейәс, салйоғот)

**КӨРШӨК** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Балсыҡ көршәк — *горшок.* Уны тағын көршөгөнә ғойҙоҡ. 2. Күмер һүндергес — *посуда для угля.* 3. (ҡыҙыл) Сөгөн — *чугунок*

**КӨРШӘК I** (арғаяш) *и.* балауыҙ күҙәнәге — *сотовая ячейка*

**КӨРШӘК II** (туҡ-соран) *и.* *черепица (өй башы ябыу өсөн).* Унда көршәк менән йапҡан түбәләр ҙә бар

**КҮРЙЕР** (ҡыҙыл) *и.* ваҡ-төйәк, кәрәк-яраҡ — *кое-что.* Күрйер нәмә алып килер гәрәк. ◊ Күрйергә йөрөү (һаҡмар) теләһә ҡайҙа йөрөү — *ездить куда попало*

**КҮРЙЕРҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* этмәләү — *смастерить кое-как.* Күрйерҙәп кенә өй һалдыҡ, йуҡтан бар итеп, йамап-ҡорап ҡына

**КҮРКЕЛДӘҮ** (урта) *ҡ.* көртләү — *квохтать*

**КҮР-КҮР** (һаҡмар) *ы.* күркә саҡырыу һүҙе — *слово, употребляемое при зове индюка*

**КҮРКҺЕҘ** (урта) *с.* йәмһеҙ — *неказистый.* Күсем тигән күркһеҙ генә башҡорт ауылында тыуған ул

**КҮРКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тубырсыҡ — *шишка.* Балалар күркә жыйарға киткән

**КҮРМЕШ** (ҡыҙыл) *и.* таныш, күргән-белгән кеше — *знакомый.* Беҙҙең күрмеш килде бит әле төнәгән

**КҮРМӘ** (урта) *с.* һуҡыр — *слепой*

**КҮРМӘГӘНЕН: КҮРМӘГӘНЕН КҮРЕҮ** (эй) *и.* уңыштан осоноп китеү — *быть в головокружении от успехов.* Күрмәгәнен күргән, күн итеген кейгән

**КҮРМӘКСЕ** (ҡыҙыл, һаҡмар, эй) *р.* күргән буйынса, эйәреп — *подражая.* Атайҙарҙан күрмәксе эйтәбеҙ. Беренән күрмәксе бере эйтә (ҡыҙыл)

**КҮРНЕШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Игәт — *приданое в виде скота, ульев.* Күрнешкә ҡорт бирдем. 2. (ҡариҙел, урта) Ҡыҙҙың ата-әсәһенә кейәү бүләге — *подарки жениха родителям невесты*

**КҮРНИС** (арғаяш, урта урал) *и.* йыртыш — *куски ткани, раздаваемые со стороны невесты при въезде в дом жениха.* Ҡыҙ килгәндә күрнис бирәләр (арғаяш)

**КҮРНИСӘ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Түрьяҡ — *горница.* 2. (салйоғот, урта) ҡунаҡ өйө — *гостиная.* Самауырҙар ҡайнай, сәйҙәр бешә аҡ күрнисәләрҙең эсендә (халыҡ йырынан)

**КҮРНӘСӘ** (урта) *и. кухня.* Сипаратты күрнәсәгә ҡаршы өйгә, һике башына дүрт шөрөп менән нығытып ҡуйҙылар

**КҮРПӘ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Бәрәс тиреһенән тышлап тегелгән яғаһыҙ тун — *крытая шуба из шкуры ягненка.* 2. (һаҡмар) Еңһеҙ кәзәкей — *род полукафтана без рукавов*

**КҮРТЛЕК** (урта) *и.* күтер — *трясина*

**КҮРҺӘТКЕС** (урта) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец.* Күрһәткесемте генә бешереб алтым таһа

**КҮРШЕБАБАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ауылдаш бабайҙарға яғымлы өндәшеү һүҙе — *слово почтительного обращения к пожилым мужчинам-односельчанам*

**КҮРШЕ-КӨЙӘН, КҮРШЕ-ҠУЛАН** (ҡариҙел) *и.* күрше-күлән — *соседи.* Күрше-күләм (дим, урта)

**КҮРШЕ-КҮЛӘНКЕ** (ҡыҙыл) *и.* күрше-күлән — *соседи.* Күрше-ҡолан (мейәс)

**КҮРШЕ-КҮРПЕ** (дим) *и.* күрше-күлән — *соседи*

**КҮРШИШ** (эй) *и.* күршеләр — *соседи.* Күршиш белән сәпсим йарамаған эш был

**КҮРӘҒАРАУ** (дим, урта, эйек-һаҡмар, ырғыҙ) *и.* 1. Күрәш — *близорукий.* 2. *ҡ.* салыш ҡарау — *косоглазить.* 3. (урта) Тауыҡ күҙ булыу — *куриная слепота*

**КҮРӘ-ГҮСӘ** (салйоғот) *р.* күрә-баға — *заведомо*

**КҮРӘГӘН** (арғаяш) *с.* үткер күҙле — *с острым зрением*

**КҮРӘҘӘ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* күрәҙәсе — *ворожея.* Күрәҙәгә барма, башыңа ҡайғы алма (ҡыҙыл). ◊ Күрәҙә ҡарау (урта) күрәҙәлек итеү — *ворожить.* Ул күрәҙә ҡарайлар иҫ киткес

**КҮРӘЗӘКЧЕ** (гәйнә) *и.* күрәҙәсе — *ворожея*

**КҮРӘЛӘТӘЙЕМ** (урта) *р.* күрә-баға — *заведомо.* Күрәләтәйем алтата

**КҮРӘН** (арғаяш, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. һаҙ үләне — *болотная трава.* Буйтым күрән саптым быйыл (мейәс). 2. (мейәс) Ағас ҡырҡыу эше — *лесозаготовка.* Күрән ҡырҡырға киткән

**КҮРӘН ЙАЛАНЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* Башҡортостандың Бәләбәй р-ны Тоҙлоҡуш ауылының төньяғындағы ялан исеме — *название луга у дер. Туз-лукуш Белебеевского р-на Башкортостана*

**КҮРӘН ЙЫУАҺЫ** (һаҡмар) *и.* һаҙ йыуаһы — *лук угловатый*

**КҮРӘНКЕ БЕСӘН** (ҡыҙыл) *и.* һаҙ бесәне — *сено болотной травы*

**КҮРӘТӘ** (дим) *б.* ҡарата, күрә — *по.* Хәленә күрәтә ҡоҙалар килә

**КҮРЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* көйрәү — *тлеть*

**КҮС I** (урта) *и.* 1. Төп, оя — *куст.* Бүреңке күсентә йатыб үлте. 2. (һаҡмар) Өйөм — *куча.* Бер күс күмер йаҡтыҡ

**КҮС II** (һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮС III** (урта) *и.* күмер — *уголь.* Күс үртәү (күмер яндырыу) — *заготовить уголь*

**КҮС: КҮС УРАУ** (дим) күс һарыу — *роение пчел.* Күс ураҙы әле. Күс ултырыу (урта)

**КҮСАПАЙ** (урта) *и.* ҡамҡа — *божья коровка.* Күчмә, күчмәкүч (төньяҡ-көнбайыш)

**КҮСЕЙ** (һаҡмар) *и.* Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Аҡсура ауылының элекке урыны — *прежнее название расположения дер. Акчура Кувандыкского р-на Оренбургской области*

**КҮСЕК** (ырғыҙ) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта*

**КҮСЕК-КҮСЕК** (урта) *ы.* аптырауҙы белдергән һүҙ — *междометие удивления*

**КҮСЕЛЕКҮС, КҮСЕМКҮС** (ҡариҙел) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮСЕМ, КҮСЕМКҮЄ** (дим, ҡариҙел) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮСЕМБЕЙ** (ҡариҙел) и. ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮСЕР** (дим) и. кейәү егете — *шафер.* Күсерсе (эйек-һаҡмар)

**КҮСЕРЕП** (эйек-һаҡмар) *р.* күп итеп, мул итеп — *много, обильно.* Тауарҙы күсереб апҡайтҡан

**КҮСЕҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* һарыу — *роиться (о пчелиной семье).* Бал ҡорто күскән

**КҮСКӘНТӘЙ, КҮСКӘЛӘК** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮСКӘН ҠЫҪ** (арғаяш) и. кейәүгә сыҡҡан ҡыҙ — *замужняя*

**КҮСМӘ** (дим) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮСМӘ: КҮСМӘ ХАЛЫҠ** (урта) *и.* килмешәктәр — *пришельцы.* Күсмә ҡоштар (йылы яҡҡа китә торған ҡоштар) — *перелетные птицы*

**КҮСМӘКҮС** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮСМӘКӘЙ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮСМӘНДЕ** (эйек-һаҡмар) *с.* күсмә — *кочующий.* Башҡорт малын бағып күсмәнде булып тик йөрөгән. Шу тикте гүтәренеп, күсмәнде ғаҙаҡ шикелде ҡайҙан киләһең?

**КҮСТЕЙ** (туҡ-соран) *и.* күстәнәс — *гостинец.* Күстейләр апара йегет. Ул күстейҙе бер һандыҡҡа төрнәб апараһың

**КҮСТЕРӘ** (урта) *и.* арыш атаһы — *спорынья*

**КҮС ТУБАЛЫ** (дим, ҡариҙел) *и.* моҙға — *лукошко для пчел*

**КҮСТӘНӘШ** (һаҡмар) *и.* күстәнәс — *гостинец.* Кигән һайын күстәнәш белән йөрөй ул ҡәрсәйем

**КҮСӨ I** (ҡариҙел, салйоғот) *и.* көшөл — *ворох, куча намолоченного хлеба.* 2. (арғаяш, салйоғот) ун йәки алты көлтәнән һалынған һоҫлан — *суслон из 6, 10 снопов*

**КҮСӘ II** (ҡариҙел) *и.* утрау — *остров*

**КҮСӘ III** (ҡариҙел) *и.* һыу сысҡаны — *водяная крыса*

**КҮСӘБЕЙ** (һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮСӘБӘ I, КҮСӘГӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* оло киҫәк — *большой кусок*

**КҮСӘБӘ II** (һаҡмар) *с.* күсмә — *кочующий.* Күсәбә халыҒ алар

**КҮСӘК, КҮСӘКӘЙ** (арғаяш, салйоғот, эй) *ы.* ҡапыл, ҡурҡҡанда әйтелә торған һүҙ — *междометие удивления*

**КҮСӘКӘ** (эй) и. сүрәкә — *чижик (детская игра)*

**КҮСӘЛӘЙЕМ** (салйоғот) *ы.* баланы иркәләү һүҙе — *слово для ласкового обращения к ребенку*

**КҮСӘМӘЛГӘ** (урта урал) *р.* юҡҡа, бушҡа — *понапрасну.* Күсәмәлгә генә йебәрҙеләр

**КҮСӘҢКӘ** (минзәлә) *и.* икмәк ҡатыһы — *корка хлеба*

**КҮСӘР** (урта, эй) *и.* күсән — *кочан.* Кәбеҫтә күсәре

**КҮСӘРБАЙЛАР** (һаҡмар) *и.* ара (нәҫел) исеме — *название родового подразделения*

**КҮСӘР БАТМУСЫ** (урта) *и.* арба күсәре аҫтындағы тимер (күсәр ашалмаһын өсөн) — *железка под осью телеги*

**КҮСӘРГӘН** (ырғыҙ) *и.* ҡамҡа — *божья коровка.* Күс-күс күсәргән тиб осоралар аны

**КҮСӘТОЙАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* тупыс тояҡ (атта) — *искалеченное копыто (у лошади)*

**КҮСЕЙ** (дим) *и.* күрер-күрмәҫ кеше — *подслеповатый*

**КҮСЕҮ** (дим) *ҡ.* әҙ генә күреү, шәйләү — *немного видеть*

**КҮҪ КӨҪКӨҺӨ** (салйоғот) *и.* күҙлек — *очки*

**КҮҪ МОРОНО** (салйоғот) *и.* күҙ төбө — *уздочок*

**КҮҪТЕҒАТА** (салйоғот) *и.* күҙлут — *пикульник.* Күҫтеғата сискәһен ҡойһа сәсә

**КҮҪТЕК I** (арғаяш) *и.* ат өркмәһен өсөн йүгәндең күҙ тирәһенә тегелгән күн — *шоры*

**КҮҪТЕК II** (салйоғот) *и.* самауыр утлығы — *низ самоварной трубы*

**КҮҪТӘЙЕҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* ҙур урынды алып ултырыу йәки баҫып тороу — *занимать большое место.* Күҫтәйеп тора ла алаптай булып

**КҮҪТӘҮ** (арғаяш) *и.* күләүекле урын — *местность с мелкими озерами*

**КҮҪ ЭЙӘҺЕ** (салйоғот) *и.* күҙ ҡараһы — *зрачок*

**КҮҪӘК** (мейәс) *и.* тәҙрә тупһаһы — *подоконник*

**КҮҪӘРТЕҮ** (дим) *ҡ.* күрһәтеү — *показать*

**КҮҪӘҮ I** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *с.* ҡыҫыр — *яловая.* Күҫәү бейә. Күҫәү һыйыр. Күҫәү кәзә

**КҮҪӘҮ II** (дим, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* тәртешкә — *кочерга*

**КҮҪӘҮ АҒАСЫ** (урта) и. тәртешкә — *кочерга*

**КҮТАЙАҠ** (мейәс) *и.* 1. Йөрөй башлаған бала — *ребенок, начинающий ходить.* 2. (арғаяш) Рахит ауырыулы — *рахитик*

**КҮТАЙАҠ АРБА** (арғаяш) *и.* ике тәгәрмәсле арба — *двухколесная телега.* Ҡуйангүт арба (эй)

**КҮТАЙАҠ ҮРҘӘК** (дим) *и.* өйрәк төрө — *вид утки*

**КҮТЕР** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Һаҙлыҡ — *болото.* 2. (дим) Күләүек — *лужа.* 3. (ҡариҙел) Һаҙ үсемлектәре — *болотные растения*

**КҮТЕРҘЕК** (ҡыҙыл, салйоғот) *и.* үлән баҫҡан күл— *озеро, покрытое растениями*

**КҮТЕРҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* буғырлау — *урчать.* Бүһере күтерҙәп тора

**КҮТЕРЛЕК** (урта, һаҡмар) *и.* батҡаҡлыҡ — *топь.* Йулдарыбыҙ күтерлек, лүбей геше үтерлек (урта)

**КҮТИ** (минзәлә) *и.* селбәрә — *мальки.* Күтис (дим)

**КҮТКӘРЕ** (һаҡмар) *р.* 1. Кире — *обратно.* Күткәре ғайтып килде. Күткире (урта урал, эй). 2. (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* тиҫкәре — *капризный, упрямый.* Күткәре геше ул (ҡыҙыл)

**КҮТТЕЙ** (дим) *и.* ташбаш — *пескарь*

**КҮТӘЙ** (арғаяш) *с.* кеше күңелле — *чувствительный.* Күтәй геше ул

**КҮТӘЙНЕКТӘНЕҮ** (арғаяш, салйоғот) *ҡ.* яҡшатланыу — *подхалимничать*

**КҮТӘМБАЙ** (урта) *и.* үҙ һүҙендә тормаған кеше — *человек, не сдерживающий свое слово*

**КҮТӘМӘ** (төньяҡ-көнбайыш) и. һыуыҡ һыуҙа була торған етеҙ, ваҡ балыҡ — *гольян*

**КҮТӘМӘЙ I** (һаҡмар) и. 1. Үҙ һүҙендә тормаған кеше — *человек, не сдерживающий свое слово.* 2. *с.* кеше күңелле — *чувствительный.* Мин күтәмәй геше ул, дуракка йарҙам иткән булам

**КҮТӘМӘЙ II** (дим) *и.* ташбаш — *пескарь*

**КҮТӘН** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта, эй) *и.* тура эсәк — *прямая кишка.* Күтән тутырыу (дим) тутырма яһау — *приготовление домашней колбасы*

**КҮТӘНҒОЛАҠ** (дим) *и.* һаңғырау — *глухой*

**КҮТӘНЬЕҘ** (ҡыҙыл, эй) *и.* үтә ябай, бер ҡатлы кеше — *слишком простой, наивный человек*

**КҮТӘНЕСӘК** (салйоғот, урта) *и.* тура эсәк — *прямая кишка*

**КҮТӘРГЕС** (урта) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок.* Ау күтәргесе

**КҮТӘРҘӘНЕҮ** (эй) *ҡ.* күтәреү — *поднимать.* Күтәрҙәнеп китәрбеҙ мишәкте

**КҮТӘРЕЛЕҮ** (арғаяш, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡыҙып китеү — *горячиться.* Күтәрелеү-бәрелеү (гәйнә, эй)

**КҮТӘРЕМ** (дим, мейәс, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Бесән ҡыраһы — *ряд сгребленного сена.* 2. (дим) Урғыс ташлап киткән бер көлтә ашлыҡ — *сноп сжатого зерна с лабогрейки.* 3. (урта) Ҡосаҡ — *охапка.* Бер күтәрем кейем

**КҮТӘРЕМНӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* бесәнде ҡыраға һалыу — *сгребать покосы сена в один ряд*

**КҮТӘРЕМ ТАҠТАҺЫ** (салйоғот) *и.* киндер һуҡҡанда биҙәк төшөрөү өсөн көрөҫ артына ҡуйыла торған нәҙек таҡта — *тонкая дощечка, которая ставится за нитченкой при узорном ткачестве.* Күтәреү таҡта (урта урал, эй)

**КҮТӘРЕҢКЕ** (салйоғот) *с.* хәлле — *состоятельный.* Ҡунаҡбай күтәреңке ауыл ине

**КҮТӘРЕҮ** (урта) *ҡ.* 1. Кизе буйлы киндергә биҙәктәр ултыртып һуғыу — *браное ткачество.* 2. (дим) Ике төрлө еп атып һуғыу — *ткать в клетку*

**КҮТӘРЕП: КҮТӘРЕП АЛҒЫЛАЙ ИТЕҮ** (эй) *ҡ.* бик ныҡ ҡәҙерләү — *показать всяческие почести.* Шун өсөн Линин сыҡҡас күтәреб алғылай иткәндәр инде. Күтәреп һуғыу (ҡыҙыл, эй) бер нәмә менән дә иҫәпләшмәү — *не считаться ни с чем.* Хәҙер йәштәр күтәреп һуғып сыға ла гитә (эй)

**КҮТӘРЛӘНЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* күтәренеү — *поднимать тяжести постоянно.* Ҡайтҡас эшләмә, күтәрләнмә

**КҮТӘРМАЛ, КҮТӘРМАЛДЫ** (урта урал, эй) *и.* ишек алды — *двор*

**КҮТӘРМӘ I** (дим) *и.* 1. Тупһа — *порог.* 2. (урта) Баҫҡыс — *ступенька, лесенка*

**КҮТӘРМӘ II** (ырғыҙ, һаҡмар) *и.* бейек үксә — *каблук*

**КҮТӘРМӘЛЕ ТӘҘРӘ** (һаҡмар) *и.* өҫтән күтәртеп асыла торған тәҙрә — *подъемное окно*

**КҮТӘРМӘЛӘҮ** (ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Ярҙам итеү — *помогать.* Шул ҡыҙым күтәрмәләп тора мине. 2. Яҡлау — *поддерживать.* Күтәрмәләнe тип көннәшкәннәр инде (һаҡмар). 3. (ҡыҙыл) Күтәреү — *поднимать.* Күтәрмәләб алып йөрөтәләр мине ҡәҙерләп

**КҮТӘРМӘС** (урта) *с.* эреле-ваҡлы — *большие и маленькие (вперемежку).* Күтәрмәс балалары туп-тулы

**КҮТӘРТКЕС** (урта) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок*

**КҮТӘРТМӘ** (дим, урта) *и.* 1. Бейек үксәле туфли — *туфли на высоких каблуках.* 2. Ҡышҡы йылы көндө иреп, йомшарып төндә туңған ер өҫтө — *мерзлая неровная поверхность земли, замерзшей после потепления в зимний день*

**КҮТӘРӘМ I** (ҡариҙел) *с.* ябыҡ — *худой.* Күтәрәм мал. ◊ Күтәрәм булыу (арғаяш, ҡариҙел, урта) күтәртеү — *дойти до полного истощения*

**КҮТӘРӘМ II** (ҡариҙел) *и.* 1. Түтәрәм — *четвертая часть.* 2. (урта урал) Ҡосаҡ *(бесән, һалам һ. б.)* — *охапка.* Бер күтәрәм бесән менән ҡыш сығаңма

**КҮТӘС** (дим) *и.* үҙ һүҙендә тормаған кеше — *человек, не сдерживающий свое слово*

**КҮҮӘТӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сеүәтә — *чашка средней величины*

**КҮХКӘҮ, КҮХҺӘҮ** (ҡыҙыл) *и.* хроник йүтәл — *хронический кашель*

**КҮҺТЕҒАТА** (салйоғот) *и.* күҙлут — *пикульник*

**КҮҺӘ** (ҡыҙыл) *и.* һаҡал-мыйыҡ үҫмәй торған ир — *безбородый мужчина*

**КҮҺӘҮ I** (ҡыҙыл) *и.* ағас тәртешкә — *деревянная кочерга*

**КҮҺӘҮ II** (салйоғот) *ҡ.* тоҫҡау — *прицелиться*

**КҮҺӘҮ III** (ҡыҙыл) *с.* 1. Ҡыҫыр — *яловая.* Күһәү һыйыр. 2. Биҙәү — *бесплодная.* Күһәү ҡатын

**КҮЧЕЛЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* күсеү — *переезжать.* Күчелеп килгәннәр алар

**КҮЧЕР ЖЕГЕТЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кейәү егете — *шафер*

**КҮЧМӘ, КҮЧМӘКҮЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**КҮЧТӘНӘЧ** (минзәлә) *и.* бүләк — *подарок.* Күчтәнәч итеп жибәргән ийе кейәү сәғәтне

**КҮШЕГЕҮ** (арғаяш, минзәлә, урта) *ҡ.* өшөү — *мерзнуть*

**КҮШЕР** (арғаяш, салйоғот) *и.* күсер — *кучер*

**КҮШЕРЕЛЕҮ** (дим, ҡариҙел, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Шәпрәләнеү — *быть неприглядным, несобранным.* Ниңә күшерелеп тораһың, элмәләреңде лә йыймай (ҡыҙыл). 2. (һаҡмар) Күшегеү — *промокнуть насквозь*

**КҮШЕҮ** (мейәс) *ҡ.* күшегеү — *промокнуть насквозь.* Йамғырҙа бәпкәләр күшей

**КҮШИЛКӘ** (ҡыҙыл) *и.* киптергес — *сушилка*

**КҮШКЕ** (ҡыҙыл) *и.* ҡамсы — *плетка*

**КҮШКЕЛДЕРЕК** (дим) *и.* әрекмән — *лопух*

**КҮШКӘ** (арғаяш) *и.* 1. Дүңгәк — *кочка.* 2. (ҡыҙыл, урта) Күшкә — *лубок березы.* 3. (ҡыҙыл) Әрселгән ҡайын — *обдиранная береза*

**КҮШКӘЙ, КҮШКӘЙ ЙАПРАҒЫ** (дим) *и.* әрекмән — *лопух*

**КҮШКӘК** (ҡыҙыл) *и.* күшкә — *лубок березы*

**КҮШКӘЛДЕРЕК** (дим) *и.* әрекмән — *лопух.* Күшкәлдеректе ҫыҙлағанда йабаҫың

**КҮШМӘК** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта, урта урал, эй) *и.* күшкә — *лубок березы*

**КҮШТЕЙ, КҮШТЕЙ ЙАФРАҒЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әрекмән — *лопух*

**КҮШӘ I** (мейәс) *и.* 1. Ун көлтәнән торған һоҫлан — *суслон из десяти снопов.* 2. Һуғылған ашлыҡ өйөмө — *куча зерна.* 3. Ботаҡ өйөмө — *куча веток*

**КҮШӘ II** (ҡариҙел) *и.* 1. Йыуан киндер бау — *конопляная веревка.* 2. (ҡариҙел, минзәлә, эй) Шөйтө — *навой*

**КҮШӘГӘБАШ** (эй) *и.* ҡыҙ йәрәшкәс, унын әсәһенә бүләктәр менән бергә бирелгән күлдәк, тун — *подарки (платье, шуба) для матери невесты после сговора.* Башта ҡоҙалашҡас һарыҡ, һыйыр апҡайттылар. Ун көрәңкә май, ун көрәңкә бал, күшәгәбаш — күлмәк, анатун инәйемә, сәйе, шәкәре

**КҮШӘ ЙЕР** (мейәс) *и.* дүң, өйөм ер — *куча земли*

**КҮШӘКЛЕ ЙЕҢ** (һаҡмар) *и.* еңсә — *нарукавник*

**КҮШӘЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Тарма ҡабығынан еп ишеү — *вить веревку из грубого конопляного волокна.* 2. (дим, ҡариҙел, эй) Киндер буйлығын шөйтөләү — *наворачивать (о навоях)*

**КҮШӘМ** (ҡариҙел) *и.* көйөш — *жвачка (у животных)*

**КҮШӘРЕЛЕҮ** (ҡариҙел, урта урал) *ҡ.* 1. Күп ағыу — *течь обильно.* Ҡан күшәрелте генә (ҡариҙел).

2. Еүешләнеү — *мокнуть.* Мынау бала күшәрелеп ҡайтты йауын аҫтында ҡалып. 3. Һейеп ятыу — *мочиться в постель*

**КҮШӘҮ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* көйшәү — *жевать жвачку (о животных)*

**КҮШӘҮЕР** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* үшән — *тяжелый на подъем*

**КҮӘ** (гәйнә) *и.* көйә — *моль*

**КҮӘНТӘ** (гәйнә) *и.* көйәнтә — *коромысло.* Бер күәнтәсе ҡалды

**КҮӘС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* икмәк күнәге — *квашня*

**КЫЗАРТКЫ** (гәйнә) *и.* талпан — *клещ*

**КЫЗЫРУК** (урта) *и. кепка.* Кузурек (дим)

**КЫЛАМБИТ**( урта) *и.* туҡыма төрө — *вид ткани*

**КЫЛАНУК** (ҡыҙыл) *и.* һары шәшке — *колонок*

**КЫЛИШ** (гәйнә) *и.* юшҡын — *накипь на дне посуды*

**КЫЛТЫКАЙ** (гәйнә) *и.* маҡтансыҡ — *хвастунья*

**КЫРАМИ, КЫРАМИСЛА** (урта) *и.* 1. Мыҫҡалдың көйәнтәһе — *коромысло золотника.* 2. (ҡыҙыл) Ботлоҡ — *пудовка (посуда)*

**КЫРАНДАС** (урта) *и. тарантас.* Карандас (әй)

**КЫРИШКА** (һаҡмар) *и.* кәрешкә — *вика*

**КЫРЛИСА** (ҡыҙыл, урта) *и.* һәйбәт баҫҡыс — *хорошая лестница*

**КЫРМИСЛА** (дим) *и.* мыҫҡал — *золотник*

**КЫРМЫЗЫ САПАН** (һаҡмар) *и.* ҡыҙыл буйлы тауарҙан ирҙәр сапаны — *мужская верхняя одежда из материала в красную полоску*

**КЫРНИС, КЫРНИСА** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ҡомаҡ — *крыса.* 2. Ирлән — *хомяк.* Кырниса шикелде китереп тора ине (урта)

**КЫРНИСА** (һаҡмар) *и.* күтәрмә — *крыльцо*

**КЫСАУҒАЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тәртешкә — *кочерга*

**КЫСЫЙА** (урта, әй) *и.* аҡ тауар — *кисея*

**КЫУАҺ** (салйоғот) *и.* кеүәҫ — *квас*

**КЫШАУАЙ** (урта урал) *и.* кашауай сана — *кошевка*

**КӘ** (гәйнә) *ҡ.* икән — *оказывается.* Анда әйтелгән кә, шунан ҡарап йаза кә

**КӘБЕН УҠЫТЫУ** (гәйнә, урта урал) *ҡ.* ижаб уҡытыу — *религиозный обряд бракосочетания*

**КӘБЕРКӘ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* 2. (урта урал, әй) Келәт кәштәһе — *полка (в амбаре).* 3. (салйоғот) Һике — *нары.* 4. Һике йөҙө — *наличник нар.* 5. (арғаяш) Ҡаҙанлыҡтағы бәләкәй өҫтәл — *маленький кухонный стол*

**КӘБЕРКӘ БАШЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* һәндерә — *полати*

**КӘБЕРСӘК** (арғаяш) *и.* аҡ сәпсек — *трясогузка*

**КӘБЕРТКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* мейәс арты — *голбец*

**КӘБӘК I** (эйек-һаҡмар) *и.* он эреһе — *отруби*

**КӘБӘК II** (урта, һаҡмар) *и.* ҡабаҡ — *веко.* Кәбәгең шешеп киткән

**КӘБӘК III** (дим) *и.* ҡауаҡ — *перхоть*

**КӘБӘКБАШ** (әй) *и.* башһыҙ — *безмозглый, олух.* Оныттым даһа, кәбәкбаш буғам инде

**КӘБӘН БАШЫ** (дим) *и.* икмәк ҡыйыры — *горбуша хлеба.* Кәбән башын кемгә?

**КӘБӘНҠОШ** (урта) *и.* төйлөгән — *коршун*

**КӘБӘН СЫБЫҒЫ** (урта) *и.* кәбән өҫтөнә һалынған сыбыҡ — *прутья на стоге сена*

**КӘБӘН ТАЛЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* кәбән башына һалған ағас — *деревянный пресс для стога*

**КӘБӘНӘК** (дим) *и.* ҡабаҡ — *веко*

**КӘБӘРТКЕ, КӘБӘРТКӘ, КӘБӘРКӘ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Мейес арты — *голбец.* 2. (урта) Соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* Кәбәрәкә (ҡыҙыл)

**КӘБӘС ТАУЫ** (туҡ-соран) *и.* Ырымбур өлкәһе Александр р-ны Иҫәнгилде ауылы эргәһендәге тау исеме — *название горы у дер. Исянгильды Александровского р-на Оренбургской области*

**КӘБӘТӘ: КӘБӘТӘҺЕНӘ ҒАТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Артыҡ һаранланыу — *жадничать.* Кәбәтәһенә ғатып мандымай. 2. (урта) *и.* тоҡор — *коротыш*

**КӘГИЗ** (ырғыҙ) *с.* ҡураныс — *щуплый.* Дүмәрҙәй ир кәгиз, селәүйән ҡыҙ алды. Кәгез (дим, урта, эйек-һаҡмар, әй)

**КӘГӘР, КӘГӘРҘӘЙ** (арғаяш) *и.* боғарлаҡ — *трахея*

**КӘГӘРҘӘК, КИГӘРҘӘК** (арғаяш, әй) *и.* боғарлаҡ — *трахея*

**КӘГӘРЖӘЙ** (арғаяш) *и.* боғарлаҡ — *трахея*

**КӘГӘҮЕН** (гәйнә, урта) *и.* күгәүен — *овод.* Суҡыр кәгәүен бик озур была (гәйнә)

**КӘҘӘ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* кәзә — *коза*

**КӘҘӘ САҠАЛЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта*

**КӘҘӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* кеҙәләү — *подтягивать веревкой при дойке заднюю ногу кобылы к ее шее*

**КӘЖЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Төпөш — *коротыш.* 2. (урта урал, әй) *с.* ҡаҡса — *щуплый.* Кәже генә ине аның атеһе лә (әй)

**КӘЖИНКӘ, КӘЖӘНКӘ, КӘЖҮНКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* Кәрзиңкә, кәржиңкә (урта урал)

**КӘЖЕҮ I** (арғаяш) *ҡ.* артыҡ ныҡ әсеү — *перекисать (о катыке)*

**КӘЖЕҮ II** (урта) *ҡ.* бер үк нәмәне гел ҡабатлап үртәп тороу — *постоянно напоминать об одном и том же.* Аның араһында йәмәғәте Факиһа ла Әхмәдигә мираҫ малы хаҡында кәжеп, өгәп торҙо

**КӘЖИҢКӘ, КҮЖИҢКӘ** (дим, ҡариҙел, әй) *и.* соландағы бүлмә — *отсек в чулане*

**КӘЖКЕЛДӘҮ, КӘШКЕЛДӘҮ** (дим, ҡыҙыл) *ҡ.* гел йүткереп тороу — *постоянно кашлять*

**КӘЖҮМКӘ, КӘЖҮҢКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* Сездә кәжүмкә бармы чолан эчендә (ҡариҙел)

**КӘЖҮННӘЙ** (урта урал) *и.* дәүләт урманы — *казенный лес.* Кәжүннәйҙә йеләк күп

**КӘЖӘМАТАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ике тәгәрмәсле мотоцикл — *двухколесный мотоцикл.* Бездә бер кеше утырып йөрөй торғанны кәжәматай тейләр

**КӘЖӨН I** (урта) *с.* тыңлауһыҙ — *непослушный*

**КӘЖӨН II** (эйек-һаҡмар, әй) күн пальто, пинжәк — *кожанка*

**КӘЖӘ САКАЛЫ** (минзәлә) *и.* 1. Ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта.* 2. Ҡырлы ҡурай — *порезник.* 3. (төньяҡ-көнбайыш) Ҡаҡы — *свербига*

**КӘЖӘҮНӘ** (урта) *и.* күн эшкәртә торған урын — *кожевня*

**КӘЗГЕЛДӘҮ** (дим) *ҡ.* ғыжылдау — *хрипеть*

**КӘЗ-ГӘЗ** (урта) *ы.* кәзә саҡырыу һүҙе — *слово для зова козы*

**КӘЗЕ** (эйек-һаҡмар) *и.* кизе *(уҡтың керешкә ҡуйыла торған осо)* — *выступ у стрелы.* Кинйә лә атырға көйләнеп, туҙ ҡолаҡлы аҡкый уғын йанға һалды ла уның кәзеһен керешкә ҡуйҙы

**КӘЗЕК-КӨЗӨК** (ҡыҙыл) *с.* ҡураныс — *щуплый*

**КӘЗЕКЛӘҮ** (урта) *ҡ.* ирештереү — *дразнить.* Мәйтәм, һин, мырҙам, ағайыңды кәзекләр өсөн килдеңме?

**КӘЗЕКЛӘШЕҮ** (урта) *ҡ.* һүҙ көрәштереү — *спорить.* Әле үк кәзекләшеп килмәһәләр, аларға оҙон йул үтәһе бар әле

**КӘЗИТ** (урта урал, эйек-һаҡмар) *и. газета.* Кәзитмә уҡып йата туғайны (урта урал)

**КӘЗНӘК** (һаҡмар) *и.* солandaғы бүлмә — *отсек в чулане*

**КӘЗҮНКӘ** (мейәс) *и.* һал өҫтөндәге склад — *склад на плоту*

**КӘЗӘ** I (арғаяш, салйоғот, һаҡмар) *и.* кузла — *козлы*

**КӘЗӘ** II (дим) *и.* эремсек билмәне — *вареники*

**КӘЗӘ** III (дим) *и.* һаралйын — *бекас*

**КӘЗӘ: КӘЗӘҺЕ ТӨКӨҮ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡылтайыу — *обидеться.* Кәзәһе бергә йөрөү (урта)

**КӘЗӘ АЙРАНЫ** (дим) *и.* кәзә ҡымыҙы — *козий кумыс*

**КӘЗӘ БАЛАҪЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* кәзә йөнөнән һуҡкан балаҫ — *палас из козьей шерсти*

**КӘЗӘБӘРӘНКӘЙ** (урта урал) *и.* кәзә бәрәсе — *козленок*

**КӘЗӘҒОШ** (гәйнә, һаҡмар) *и.* һаралйын — *бекас*

**КӘЗӘ ҒЫЛЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* кәзә йөнө — *козья шерсть.* Кәзә ғылынан ҫуҡкан балаҫ

**КӘЗӘЙАУЛЫҠ** (туҡ-соран, әй) *и.* кешмир яулыҡ — *кашемировый платок.* Ысын кешмер йаулыҡ — кәзә йаулыҡ

**КӘЗӘ ЙЫЛҒАСЫ** (ҡариҙел) *и.* Башҡортостандың Асҡын р-нда Мута йылғаһының уң яҡ ҡушылдығы — *правый приток р. Мута на территории Аскинского р-на Республики Башкортостан*

**КӘЗӘ ЙЫУАҺЫ** (ырғыҙ) *и.* 1. Ваҡ ҡына сөсө, йомро йыуа *(бер төптә куп булып үҫә)* — *вид дикого лука.* 2. (мейәс, эйек-һаҡмар) Тау йыуаһы — *(ташлы ерҙә үҫкән әсе ҡаты йыуа)* — *горный лук*

**КӘЗӘК** (эйек-һаҡмар) *и.* ашыҡ — *бабка (игра)*

**КӘЗӘКЕЙ** (урта) *и.* камзул — *камзол*

**КӘЗӘКЕЙГҮРПӘ, КӘЗӘКЕГҮРПӘ** (ҡыҙыл) *и.* ҡатындар кейә торған тышлы тун — *крытая шуба для женщин*

**КӘЗӘ КӨЙМӘҪЕ** (дим) *и.* айыу көпшәһе — *болиголов*

**КӘЗӘКӘЙ** I (әй) *и.* кәзә — *коза.* Беҙҙең кәзәкәй ғайтманы әле

**КӘЗӘКӘЙ** II (гәйнә) *и.* баштары менән төкөтөп һалынған ике көлтә — *снопы, поставленные в подпорку*

**КӘЗӘ МӨГӨҘӨ** (һаҡмар) *и.* һөтлөгән — *молочай*

**КӘЗӘ МӘМӘЙЕ** I (дим) *и.* шайтан һөтлөгәне — *молочай махровый*

**КӘЗӘ МӘМӘЙЕ** II (дим) *и.* беләктәге мускул — *мускул на руке*

**КӘЗӘМӘТ БУРАНЫ** (һаҡмар) *и.* аҡман-тоҡман — *буран в середине марта*

**КӘЗӘНКЕ, КӘЗӘНҠЕ, КӘЗӘНҠӘ** (арғаяш, дим, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* 2. (туҡ-соран) Мейес арты — *голбец*

**КӘЗӘНКӘ** (һаҡмар) *и.* ҡаҙан — *котел*

**КӘЗӘСАҠАЛ** (гәйнә) *и.* 1. *Укроп.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) ҡырлы ҡурай — *порезник.* Кәзә ҫаҡалы (дим)

**КӘЗӘ СӘСӘГЕ** (һаҡмар) *и.* эре сәсәк *(сәсәк ауырыуының бер төрө)* — *козлиная оспа*

**КӘЗӘ ТАЛЫ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* ваҡ, ҡыҫҡа тал — *козья ива*

**КӘЗӘ ТӘРӘШЕ** (ҡыҙыл) *и.* дебет тарай торған тараҡ — *гребешок для расчесывания козьего пуха*

**КӘЗӘ ҺАҠАЛЫ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, әй) *и.* 1. Бейә һөтлөгәне — *молочай кобылий.* 2. (һаҡмар) Ырымбур өлкәһе тауҙарында үҫкән, кактус гөлөнөң бер төрөнә оҡшаған, ашай торған үлән — *съедобная трава, растущая в горах Оренбургской области, напоминающая один из видов кактуса.* 3. (дим) Күк һөтлөгән — *молочай синий*

**КӘЗӘ КӨПШӨҪЕ** (дим) *и.* япрағы кишер япрағына оҡшаш нәҙек шыма көпшә — *вид купыря*

**КӘЗӘЛӘҮ** I (урта) *ҡ.* кеҙәләү — *подтягивать веревкой при дойке заднюю ногу кобылы к ее шее.* Кәзәләп һауҙыҡ беҙ бейәләрҙе

**КӘЗӘЛӘҮ** II (урта) *ҡ.* кәзә саҡырыу — *зов козы*

**КӘЗӘ МАЙЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг.* ◊ Кәзә майы сығарыу (ҡыҙыл) төйнәлгән мускулға һуғып күптереү — *делать шишку на мускуле резким ударом.* Сысканын сығарыу (әй)

**КӘЗӘ МАМЫҒЫ** (дим, ҡариҙел, урта, әй) *и.* дебет — *козий пух*

**КӘЗӘМЕРЙАУЛЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* француз яулыҡ — *большой ситцевый платок с крупной красной расцветкой*

**КӘЗӘҺАҠАЛ** (ҡыҙыл) *и.* уртаса һаҡал — *борода средней величины*

**КӘЗӘ ҺАРНАҺЫ** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта.* 2. Япрағы кактустыҡы һымаҡ, формаһы һарына һымаҡ эскел тәмле ашарға ярай торған үлән — *съедобная трава, напоминающая вид кактуса*

**КӘЗӘҺЫРНАҠ** (һаҡмар) *и.* тауҙың башында, битләүендә үҫә торған сәнскеле япраҡлы, күк төҫлө тумалаҡ башлы үлән — *мордовник шароголовый*

**КӘЗӘ ҺЫУҒАНЫ** (һаҡмар) *и.* кәзә һаҡалы — *козлец.* Түмәләстә кәзә һыуғаны, эппәкәс лыҡ тулы

**КӘЗӘШӘЛ** (эйек-һаҡмар) *и.* дебет шәл — *пуховый платок.* 2. (әй) Суҡлы кизе-мамыҡ шәл — *хлопчатобумажный платок с кистями*

**КӘЙ, ГӘЙ, ГӘҮ, КӘҮ** (арғаяш) *и.* талыҡ — *помост (у косы)*

**КӘЙГЕ** (урта) *и.* арҡыры балта — *поперечный топор*
**КӘЙҘӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* салғы һаплау — *насадить косу на косовище*
~~**КӘЙЕК АШ**~~ (арғаяш) *и.* былтыр сәселгән орлоҡтан үҙенән-үҙе үҫкән иген — *проросшее прошлогоднее зерно*
**КӘЙЕЛЕКЙУЛ** (һаҡмар) *и.* ҡабыра юл — *дорога, идущая по склону горы*
**КӘЙЕЛТЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* сөйөү — *подбросить вверх*
**КӘЙЕЛТМӘК** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡабыра юл — *дорога, идущая по склону*
**КӘЙЕН, КЕЙЕН** (һаҡмар) *б.* кире, һуң — *после.* Төштән кәйен ҡайтып килделәр. Мынан кәйен алайтып йөрмә
**КӘЙЕН II** (урта) *с.* бәләкәй кәүҙәле — *небольшой ростом.* Кәйен генә булды ҡатайлар. Кәйнә (ҡыҙыл)
**КӘЙЕПҪЕҘ** (дим) *с.* бойоҡ — *грустный*
**КӘЙЕҮ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Кәйеф ҡырылыу — *расстроиться.* Ҡайтһа ишек бикле, шунан был бала кәйей икән (ырғыҙ). 2. Асыуланыу — *сердиться.* Ҡатыны йеңмеш, шунан был кәйей ҙә гитә икән (ырғыҙ)
**КӘЙЕХҺЕТЕҮ** (салйоғот) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться*
**КӘЙИКМӘК** (ҡариҙел) *и.* икмәк ҡамырынан бешерелгән ҡалын йәймә — *лепешка из хлебного теста*
**КӘЙКЕБИЛ** (эйек-һаҡмар) *и.* биле эйәр кеүек төшеңкө йылҡы малы — *лошадь с вогнутой спиной*
**КӘЙКЕС** (ҡыҙыл) *и.* биле эйәр кеүек төшөңкө йылҡы малы — *лошадь с вогнутой спиной*
**КӘЙКӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡалтайыу — *выгибаться.* Трансалар кәйкәйеп кипмәһендәр, дүрт урындан ҡаҙаулап ҡуй
**КӘЙКӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* сайҡалыу — *качаться.* Ижау кәйкәләгән ыңғайға, һыуы ағып, ижау төбөндә һары алтын бөртөкләре йалтыраны
**КӘЙКӘН** (ҡыҙыл) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка*
**КӘЙКӘҢЛӘҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* маһайып, башты артҡа ташлабыраҡ атлау — *ходить с гордо поднятой головой.* Йөрөй шунда кәйкәңләп, сипаратҡа ла йөрөтмәй ҡуйырбыҙ әле
**КӘЙЛЕ I** (һаҡмар) *и.* кәйлә — *кайло*
**КӘЙЛЕ II** (урта) *и.* ҡылйылан — *волосатик*
**КӘЙЛЕГЕҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* кәйелеү *(йыртҡыс ҡоштоң яҫҡыуы)* — *пикировать*
**КӘЙЛЕК, КӘЙЛЕКМӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* кәйелтмәк — *раскат на зимней дороге*
**КӘЙЛӘ** (һаҡмар) *и.* мәләү — *лопаточка для выкапывания овощей и корней трав*
**КӘЙМЕЛДӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* һелкенеү — *качаться.* Тирәктең кәймелдәп торған иң бейек ботағына менеп ултырыу менән бөтә эс бошоуын онотто
**КӘЙМӘЛӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* ҡаймалау — *окаймлять*
**КӘЙНӘ** (ҡыҙыл) *с.* кәгез, ваҡ — *тощий, мелкий*
**КӘЙСЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һары турғай — *чиж*
**КӘЙҪЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* хәтер ҡалыу — *обидеться.* Исйуғында сабранйаларҙа ла иҫкә алмайлар, күңел кәйҫеп китә
**КӘЙТӘН** (арғаяш, гәйнә, дим, мейәс, әй) *и.* тулҡынлы тар таҫма, ейәк — *зигзагообразная тонкая тесьма.* Тар ғына кәйтән ҡыстырып теккән (гәйнә)
**КӘЙҺЕНЕҮ, КӘЙҺЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться*
**КӘЙҺЕНДЕ** (арғаяш) *и.* ҡайынһеңле — *золовка*
**КӘКЕЛҮМ** (арғаяш) *и.* сәсәмә — *коклюш*
**КӘКЕРЕ I** (дим, әй) *и.* 1. Эремсек билмәне — *вареники.* 2. Ваҡ пирог — *пирожок.* Балан кәкереҫе бешерҙек (дим)
**КӘКЕРЕ II** (урта) *и.* ураҡ кеүек кәкре бысаҡ — *серпообразный нож.* Элек ураҒ ура инек кәкере белән
**КӘКЕРЕ: КӘКЕРЕ ҠУЛЛЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* бур — *вор.* Кәкере ҡуллы булған, тотҡан да ҡыулаған
**КӘКЕРЕ ЙЫШҠЫ** (ҡыҙыл) *и.* солоҡ йышҡыһы — *скобель для очистки внутренних стен колодочных улей*
**КӘКЕРЕ-МӨКӨРӨ** (гәйнә, ҡариҙел) *с.* кәкре-бөкрө — *кривой*
**КӘКЕРЕС** (әй) *с.* сибек — *хилый, тощий*
**КӘКЕРЕ ТАЙАҠ** (урта) *и.* сәкән — *хоккей*
**КӘКЕРЕ ТИМЕР** (арғаяш) *и.* тәртешкә — *кочерга*
**КӘКЕРЕ ТУҒЫН** (эйек-һаҡмар) *и.* арба күкрәгенә арҡыры һалынған ағас — *подуги*
**КӘКЕРЕЧ** (гәйнә) *и.* кәкерсәк — *зигзаг*
**КӘКЕРЕШКӘ** (әй) *и.* 1. Бөкрө — *горбатый.* 2. (ырғыҙ) Әрләү һүҙе — *ругательное слово.* Ах, кәкерешкә, нәмә ҡыйланған була
**КӘКЕРСӘК I** (урта) *и.* арба күкрәгенә арҡыры һалынған ағас — *подуги*
**КӘКЕРСӘК II** (дим) *и.* йылғаның бөгөлгән урыны — *изгибы реки*
**КӘКЕРСӘК III** (ҡыҙыл) *и.* шәлгә төшөрөлгән тулҡынлы һыр — *зигзагообразный узор на платке*
**КӘКЕРСӘК ҺЫР** (дим) *и.* шәл биҙәге — *узор на пуховом платке*
**КӘКЕС** (урта) *с.* бөкрө — *согнутый.* Вафин кәкес танауының осон тызып алды
**КӘКЛҮШ** (ҡариҙел) *и.* сәсәмә — *коклюш*
**КӘКРЕСӘЙ** (арғаяш) *и.* бер тына эшләгәндән һуң эскән сәй — *чаепитие в первый перерыв*
**КӘКРУЙ** (һаҡмар) *и.* яҙын тулы һыулы, йәйен ҡороған күл — *высохшее озеро*
**КӘКСӘЙГӘН** (дим, эйек-һаҡмар) *с.* ябыҡ — *тощий (о животных).* Кәксәйгән ҫыйыр (дим)
**КӘКСӘҮ** (ҡариҙел) *и.* 1. Сәсәмә — *коклюш.* 2. *с.* сирле — *болезненный.* Әле кәксәүгенәмен
**КӘКСАҒЫЗ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* *каучук.* Кәксағызда эшләдек
**КӘКҪЕҮ** (урта) *ҡ.* үтә әсеү — *перекиснуть (о кислом молоке)*
**КӘКТӘЙ** (әй) *и.* башалтай — *шерстяные носки-самовязки*
**КӘКҮК** (салйоғот) *и.* һөтләкәй — *молочай*
**КӘКҮК АТЫНЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* бәүелсәктә бәүелеү — *кататься на качелях*
**КӘКҮК АЙАҒЫ** (дим) *и.* кәзә һаҡалы — *козлобородник*
**КӘКҮГАРБА** (урта) *и.* *коляска*
**КӘКҮК БАШМАҠ** (урта урал) *и.* кәкүк ситеге — *Венерин башмачок*
**КӘКҮК БАШЫ** (урта) *и.* күк һөтләгән — *молочай синий*

**КӘКҮК БӘШМӘГЕ** (һаҡмар) *и.* күк сәскәле, күләүек ерҙәрҙә үҫә торған күк сәскәле үлән *(буяу итеп ҡулланылған)* — *кукушкин гриб (название травы)*

**КӘКҮК ЙЕМЕШЕ** (һаҡмар, урта) *и.* 1. Күк һөтләгән — *молочай синий.* 2. (эйек-һаҡмар) Һары һөтләгән — *молочай кобылий*

**КӘКҮК КҮҘЕ** (урта) *и.* күгәрсен күҙ — *незабудка*

**КӘКҮК ҠАТАҺЫ** (ҡыҙыл) *и.* кәкүк ситеге — *Венерин башмачок.* Кәкүк ҡатаҫы (дим)

**КӘКҮКЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* тик тормау — *не засиделься*

**КӘКҮК МӘМӘЙЕ** (дим) *и.* күк һөтләгән — *молочай синий*

**КӘКҮК СИСКӘҪЕ** (дим) *и.* күк һөтләгән — *молочай синий*

**КӘКҮК СИСКӘҺЕ** (урта) *и.* 1. Һабын үләне — *барская спесь.* 2. (арғаяш) Кәкүк ситеге — *Венерин башмачок.* Кәкүк сәрмәһе (ҡыҙыл)

**КӘКҮК СӘСКӘҺЕ** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Һары һөтләгән — *молочай кобылий.* 2. (урта) Күк һөтләгән — *молочай синий*

**КӘКҮК ТӨКӨРӨГӨ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* һабын үләне — *барская спесь*

**КӘКҮК ТӘПӘЙЕ** (әй) *и.* күк һөтләгән — *молочай синий*

**КӘКҮГУТЫ** (урта) *и.* 1. Умырзая — *горицвет.* 2. Күк һөтләгән — *молочай синий.* 3. (ҡыҙыл) Һабын үләне — *барская спесь*

**КӘКҮК ҺАБЫНЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* һабын үләне — *барская спесь*

**КӘКҮКЧИТЕК** (гәйнә) *и.* кәкүк ситеге — *Венерин башмачок.* Кәкүк ыштаны (дим)

**КӘКҮР** (урта) *и.* кәкре ағас — *кривое дерево*

**КӘКҮРКӘ, КӘКҮРТКӘ** (һаҡмар) *и.* 1. Бер нисә вағыраҡ йомарламды бергә һалып бешергән икмәк — *хлеб-семейка (из нескольких долек).* 2. Йоморткаға баҫылған ҡамырҙан майҙа бешерелгән йәймә — *сдобные лепешки.* 3. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Ҡош теле — *хворост.* 4. (урта урал) Сей ҡатыҡҡа ҡаймаҡ ҡушып тандырҙа ғына эретелгән эремсек — *вид творога*

**КӘКӘЙ I** (кариҙел, әй) *и.* бысраҡ *(балалар телендә)* — *бяка (в детской речи).* Күлмәгең кәкәй булды (кариҙел)

**КӘКӘЙ II** (урта урал, әй) *и.* ҡорт — *букашка.* Ай, ана өҫтөңә бер кәкәй менепара (әй)

**КӘКӘЙЕМ** (гәйнә) *ы.* аптырау ымлығы — *междометие удивления.* Кәкәйем, бер дә мындый ҡыҙыҡ күргәнем йуғый, шу йәшемә йетеп

**КӘКӘНДӘҮ** (әй) *ҡ.* 1. Ҡыбырлау — *шевелиться.* Нәмәкәй төгөндә кәкәндәгәндәй була. 2. Саҡ-саҡ ҡуҙғалып йөрөү — *еле ходить.* Һаман кәкәндәгән булам әле

**КӘКӘҢЛӘҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* ҡаҙҙың, йыландың ыҫылдап баштарын һуҙыуы — *потягивание головой при шипении (о гусе, змее)*

**КӘКӘҮ** (әй) *с.* бик хәлһеҙ — *очень слабый.* Ул кәкәү буғанға ауырый

**КӘКӘҮЕР** (арғаяш) *и.* тәкәүер — *шпоры (у птиц)*

**КӘЛБИР** (урта) *и.* ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына итеп бысылған таҡта — *короткие дощечки*

**КӘЛБӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡубыу — *облупиться*

**КӘЛДЕРӘҮ** (салйоғот) *ҡ.* ҡалтырау — *дрожать*

**КӘЛДӘ** (гәйнә) *б.* нәк, шикелле — *как, подобно*

**КӘЛДӘК** (мейәс) *и.* төйөр — *комок.* Айрандың кәлдәген иҙәләр. Игендәге кәлдәген тырматалар

**КӘЛДӘК БЕСӘН** (урта урал) *и.* һыуланып ойошоп ятҡан бесән — *заплесневелое сено*

**КӘЛЕ** (кариҙел) *ҡ.* нәк — *точь-в-точь,* ‘*точно.* Яңы Бәрҙәш бар, кәле сыуҙа

**КӘЛЕГӘЛЕ** (ҡыҙыл) *ы.* ҡаҙ саҡырыу һүҙе — *слово для зова гусей*

**КӘЛЕЙЕҮ** (урта, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Һырғалау — *скользить по скату.* 2. (арғаяш, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Ҡоштоң шыҡыйып осоуы — *пикирование, парение птиц.* 3. (мейәс) Сайҡалыу — *качаться.* Кәлит буҙа эскәс кәлейем

**КӘЛЕП I: КӘЛЕП БУЛЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ярау — *подойти, соответствовать.* Итеге аның кәкере айағына кәлеп булған

**КӘЛЕП II: КӘЛЕП БУЛЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ғәҙәтләнеү — *брать в привычку.* Кешегә ҡаҙалыуға кәлеп булған инте ул (кариҙел)

**КӘЛЕПЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* йәтеш булыу, килешеп, ярап ҡына тороу — *быть аккуратным (об одежде)*

**КӘЛЕПТӘНЕҮ** (әй) *ҡ.* ғәҙәтләнеү — *брать в привычку.* Алдашырға ҡалай кәлептәнеп киткәһең

**КӘЛЕҮ** (урта) *ҡ.* һырғалау — *скользить по скату*

**КӘЛЕПТӘҮ** (мейәс) *ҡ.* кәләпкә һалыу — *сновать.* Сираткас кәлептәп тороп йыуалар

**КӘЛЕСИНКӘ** (арғаяш) *и.* тәгәрмәсле трактор — *колесный трактор*

**КӘЛЕШ** (әй) *и.* йәмшек танау — *курносый*

**КӘЛЖЕМӘ, КӘЛЖӘМӘ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал) *и.* 1. Ерҙә ҡалып ҡышлаған картуф — *картофель, перезимовавший в земле.* Эчергән бәрәңгене кәлжемә тиҙек инде (төньяҡ-көнбайыш). 2. Ерҙә ҡышлаған картуфтан бешкән йәймә — *лепешка из перезимовавшего в земле картофеля*

**КӘЛИГӘ** (төньяҡ-көнбайыш, әй) *и.* ҙур шалҡан — *крупная репа*

**КӘЛИТ: КӘЛИТ ИТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* буҙаға ҡыҙҙырылған тимер тығып быжлатыу — *мешать бузу раскаленным железом*

**КӘЛИТ БУҘА** (арғаяш, мейәс) *и.* ҡоролай ҡыҙҙырылған ашлыҡтан әсеткән буҙа — *буза из каленого зерна*

**КӘЛИТКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* соландағы бүлмә — *отсек в чулане*

**КӘЛИТӘ** (ҡыҙыл, урта) *и.* ялғаш — *корыто*

**КӘЛЙЕМӘ** (һаҡмар) *и.* 1. Йоморткаға баҫылған ҡамырҙан йоҡа йәймә йәйеп, уны ваҡлап киҫеп, майға бешерелгән ашамлыҡ — *хворост (вид печенья).* 2. (дим) Ерҙә ҡышлаған бәрәңгенән бешергән икмәк — *хлебцы из перезимовавшего в земле картофеля*

**КӘЛЙЕТЕҮ** (әй) *ҡ.* ташты һыу өҫтөнән һикерттереп ташлау — *пустить по поверхности воды плоским камнем.* — Йә кәлйет, нисә мәртәбә кәләш алырһың икән?

**КӘЛЙЕҮ** (әй) *ҡ.* йоҡа әйберҙең ҡалтайыуы — *коробиться (о тонких вещах).* Ул тимер кәлйеп бөткән

**КӘЛЙӘ** (дим) *и.* бөрөз — *бортечистка*

**КӘЛКЕМЕС** (дим) *и.* бәүелсәк — *качели*

**КӘЛЛЕ, КӘЛЛӘ** (гәйнә, ҡариҙел) *к.* нәҡ — *точь-в-точь, точно.* Кәлле шул. Сыҙа тәңкәлентә утырған Рыйа бай (ҡариҙел). Кәлләкомалаҡ инде (гәйнә)

**КӘЛЛЕ-МӘЛЛЕ** (дим) *р.* бөгөләп-һығылып — *изгибаясь.* Кәлле-мәлле атлап килә

**КӘЛП: КӘЛП ИТЕҮ** (дим) *ҡ.* яҙа баҫыу — *оступиться*

**КӘЛПӘК** (гәйнә) *с.* 1. Ялпаҡ — *сплющенный.* Кәлпәк бауырсаҡ. 2. (урта) Ҡаҙау эшләпәһе — *шляпа гвоздя.* Өҫкө кейемен сисеп, стенаға ҡағылған йаҫы кәлпәкле сөйгә элә башланы

**КӘЛСӘ** (урта) *и.* 1. Ҡылған — *ковыль.* 2. (ҡыҙыл) Үлән башы — *верхушка травы*

**КӘЛСӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡылтайыу — *обидеться.* Йуҡҡа кәлсәйеп бараһың, униң үсегерлек нәмәһе бар?

**КӘЛСӘК I** (ҡыҙыл) *и.* сәк-сәк — *чак-чак*

**КӘЛСӘК II** (эйек-һаҡмар) *и.* үлән башы — *верхушка травы.* Һуаҡ мал кәлсәккә үс була

**КӘЛСӘК III** (һаҡмар) *с.* ҡылтым — *обидчивый*

**КӘЛСӘКЛЕК** (һаҡмар) *и.* ҡылтымлыҡ — *обидчивость*

**КӘЛТ-КӨЛТ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *р.* ауа-түнә — *шатаясь.* Низнай, был әбейҙең кәлт-көлт баҫып килеүендә бер хикмәт бар

**КӘЛТЕРЕС** (мейәс, урта) *и.* бәләкәй биҙрә — *ведерко*

**КӘЛТЕРСӘ** (арғаяш) *и.* ҡалтырса — *сучило*

**КӘЛТӘ** (урта) *и.* киртләс — *уступ.* Ҡайа таштарҙың кәлтәләрендә үҫкән һырғый ҡарағайларға иҫе ғороп ҡараны

**КӘЛТӘБАЛЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йыланбалыҡ — *угорь.* Кәлтәбалыҡ тейләр бер төрлө шома балыҡны

**КӘЛТӘ ЖЫЛАНЫ, КӘЛТӘЙ ЙЫЛАНЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кеҫәртке — *ящерица*

**КӘЛТӘЙ, КӘЛТӘКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кеҫәртке — *ящерица*

**КӘЛТӘКӘЙ ЖЫЛАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кеҫәртке — *ящерица*

**КӘЛТӘНЛӘҮ** (урта) *ҡ.* кәлтән-көлтән килеү — *шататься.* Парауыз кәлтәнләп алға тәгәрәй

**КӘЛТӘР** (гәйнә) *и.* кәҫ — *дерн*

**КӘЛҮШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Күн башмаҡ — *кожаная обувь без голенища.* 2. Калош — *калоши*

**КӘЛӘ** (ҡыҙыл) *ы.* ҡаҙ ҡыуыу һүҙе — *слово для отгона гусей*

**КӘЛӘБАҒАС** (арғаяш) *и.* кәләп — *мотушка*

**КӘЛӘБӘ** (дим, урта, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* дебеткә ҡатлап ҡушылған еп — *пара пуховой пряжи.* Айаҡлы йеп кәләбә атала, һеҙләр шал белән занимайт итә алағыҙмы? (туҡ-соран)

**КӘЛӘБӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* дебеткә еп ҡатлау — *удвоить пуховую пряжу с ниткой*

**КӘЛӘБӘШ I** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡашмау — *старинный головной убор для замужних женщин, украшенный монетами.* 2. Ҡашмау өҫтөнән кейә торған башлыҡ — *шапка, надеваемая поверх украшенного монетами головного убора*

**КӘЛӘБӘШ II** (һаҡмар) *и.* томбойоҡ — *кувшинка белая.* Кәләбәш һыуҙа үҫә, ус йаһындай була йапрағы

**КӘЛӘЙТМӘ** (арғаяш) *и.* кәйелтмәк — *раскат (на зимней дороге)*

**КӘЛӘКӘЙ I** (һаҡмар) *и.* 1. Төпөш — *коротыш.* ◊ Кәләкәй тороу (арғаяш) ҡаҙыҡай тороу — *начать вставать на ноги (о ребенке)*

**КӘЛӘКӘЙ II** (арғаяш) *и.* ҡаҙ бәпкәһе — *гусенок*

**КӘЛӘ-КӘЛӘ** (арғаяш) *ы.* ҡаҙ саҡырыу һүҙе — *слово для зова гусей*

**КӘЛӘМФЕР** (арғаяш) *и.* ҡәнәфер — *гвоздика*

**КӘЛӘМӘС** (ҡыҙыл) *и.* көләмәс — *юмореска.* ◊ Кәләмәс ҡылыу (ҡыҙыл, һаҡмар) шаяртыу — *подшутить.* Мин былай ғына, кәләмәс ҡылып ҡына әйтәм

**КӘЛӘМӘСЛӘҮ** (урта) *ҡ.* ҡыҙыҡ һүҙ менән шаяртыу — *шутить*

**КӘЛӘМӘТ: КӘЛӘМӘТ КҮСТӘРЕҮ, КӘЛӘМӘТ ҠУСТАРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бола, тауыш күтәреү — *поднять шум, суматоху*

**КӘЛӘҢКҮР** (салйоғот, эй) *и.* *коленкор*

**КӘЛӘП: КӘЛӘП ҺАЛЫУ** (урта) *ҡ.* нәҙер әйтеү — *дать обет*

**КӘЛӘППАШ** (эйек-һаҡмар) *и.* томбойоҡ — *кувшинка белая*

**КӘЛӘПСӨЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* әүернә тыйғысаһы — *закрепитель нитки в крестовине (у домашнего ткацкого станка)*

**КӘЛӘПТЕ ЙӨН** (арғаяш) *и.* тубыҡлы йөн — *мотушка (пряжа, намотанная на колени в сидячем виде)*

**КӘЛӘПТӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* иләнгән йөндө йәки епте тубыҡҡа һалыу — *намотать пряжу на колени в сидячем положении.* Кәләпләү (көньяҡ диалект)

**КӘЛӘПҮШ, КАЛАПУШ** (дим, ҡыҙыл) *и.* теүәтәй — *тюбетейка.* Кәҙә үҙен-үҙе имһә, кәләпүште ыштыйалап бәйҙәп сығаралар (ҡыҙыл)

**КӘМ** (дим) *р.* аҙ — *мало.* Ҡайтып ашауға ризыҡ бик кәм ине

**КӘМЕР** (минзәлә) *и.* *порошок.* Кәмер завуттан ҡалған парашук, суға саласың, шуңа буйыйларейе киндерне

**КӘМЖЕК** (дим) *с.* бәлшек — *с отвисшими губами*

**КӘМИСИӘЛӘТЕҮ** (дим) *ҡ.* тикшертеү — *заставить проверить что-либо*

**КӘМСЕЛ** (ҡариҙел) *с.* ҡыйырһытылған — *обиженный.* Алар кәмселерәк иде, мишәр белән типтәр

**КӘМҪЕЛДЕРЕҮ** (дим) *ҡ.* ситләтеү — *относиться с пренебрежением, обижать*

**КӘМФӘРКӘ I** (урта) *и.* самауыр башы — *камфорка самовара.* Кәмфәркәһе ғайҙа самауырҙың? Камфарка (эй)

**КӘМФӘРКӘ II** (ырғыҙ) *и.* ең осондағы әберкә — *оборка на манжете платья*

**КӘМӘ** (арғаяш, ҡыҙыл, салйоғот) *и.* ағас ялғаш — *корыто деревянное.* Кәмәгә бесән болғар гәрәк атҡа (ҡыҙыл)

**КӘМӘҒОРТО** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡамҡа — *божья коровка.* 2. Айрығойроҡ — *уховёртка.* 3. (мейәс, урта) Ҡарға бете — *воронья вошь*

**КӘМӘРСЕК, КӘМӘСҮК** (арғаяш, салйоғот, урта урал, эй) *и.* аҡ сәпсек — *трясогузка*

**КӘМӘСЫҒЫШ** (эй) *и.* һыу аша сыға торған урын — *переправа (на лодке)*

**КӘМӘҺАУА** (һаҡмар) *и.* һарына — *саранка, лилия кудреватая*

**КӘН** (арғаяш) *к.* нәҡ — *точь-в-точь.* Кән үҙенең тауышы

**КӘНДЕ, КӘНДӘ** (дим, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, эй) *к.* нәҡ — *точь-в-точь, точно.* Кәнде ошо йерҙә утырған беҙҙең ауыл (ҡыҙыл). Кәнде мәсит тәңгәлендә ине өйҙәре (урта урал). Кәнте (арғаяш)

**КӘНДЕЙ** (һаҡмар) *и.* тилебәрән орлоғоноң һауыты — *кувшинка семян белены.* Тилебәрән кәндейе көршәктәй генә була

**КӘНДИЛ** (эйек-һаҡмар) *и. абажур.* Шәм кәндиле матур ине

**КӘНЗУЛ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* камзул — *камзол*

**КӘНИЗӘ** (ырғыҙ) *и.* хеҙмәтсе ҡатын — *прислуга.* Ул батша эшен бөтөрөп йөрөүсе кәнизә ҡатынға ҡыҙҙы тәрбиәләргә ҡуша

**КӘНСӘ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-һаҡмар, эй) *и. канцелярия.* Кәнсәгә саҡыртҡандар быуайынды (эй)

**КӘНСЕК, КӘНСЕГЕТ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* кәнтәй — *сука.* Атаны әрләп эт тибеҙ, орғасыһын кәнсегет тибеҙ (һаҡмар)

**КӘНСИР** (көньяҡ-көнсығыш) *и.* һауыт урынына ҡулланылған консерва банкаһы — *консервная банка, приспособленная для посуды*

**КӘНСӘЙ** (урта урал) *и.* кәнтәй — *сука*

**КӘНТ, КӘНТЕ** (арғаяш, ҡариҙел, урта, эй) *к.* нәҡ — *точь-в-точь, точно.* Кәнте шалай итеп эштәй (арғаяш). Улар кәнте сәсен алдырған кеше һымаҡ, үҙҙәре лапаҡ ҡына (урта)

**КӘНТЕЙ** (ҡариҙел) *и.* кәнтәй — *сука*

**КӘНТЕЙ ЙЫЛАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кеҫәртке — *ящерица*

**КӘНТИР** (эйек-һаҡмар) *и.* үлсәүестең бер төрө — *разновидность весов*

**КӘНТРӘК** (мейәс) *и.* балалар уйыны — *название детской игры*

**КӘНТҮШ** (ҡыҙыл, эй) *и.* бәләкәй ҡыҙ балаға ҡарата әрләү һүҙе — *ругательное слово по отношению к маленьким девчонкам*

**КӘНЧӘСЕ** (ҡариҙел) *и.* дөрөҫө — *правда.* Кәнчәсен белеп былмай

**КӘНӘБЕЙ, КӘНӘФЕЙ, КӘНӘПЕЙ** (ҡариҙел, урта, урта урал, эй) *и.* 1. Артлы эскәмйә — *скамейка со спинкой.* Арҡаһын кәнәфей артына терәберәк ултырҙы (урта)

**КӘНӘРҘӘК** (урта урал) *и.* боғарлаҡ — *трахея*

**КӘҢГЕЛДӘЙ** (дим) *и.* бәүелсәк — *качели*

**КӘҢГЕЛДӘҮ** (дим, эйек-һаҡмар) *ҡ.* тәнтерәкләү — *идти шатаясь, неустойчиво.* Шыйыҡ пала кәңгелдәп баҫалмай (нөгөш)

**КӘҢГЕР** (эйек-һаҡмар) *с.* йомшаҡ — *слабый.* Ҡарасәс әбейҙең кәңгер арыҡ кәүҙәһе йалп-йолп килә

**КӘҢГЕР-КӨҢГӨР** (эйек-һаҡмар) *р.* мығыр-мығыр — *воркуя.* Халыҡтың кәңгер-көңгөр һөйләшеүе генә ишетелде

**КӘҢӘР** (арғаяш) *и.* күмәгәй — *кадык*

**КӘҢӘРҘӘК** (арғаяш, салйоғот, эй) *и.* 1. Аңҡау — *нёбо.* 2. Боғарлаҡ — *трахея*

**КӘҢӘШЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* кәңәшләшеү — *советоваться.* Кәңәшеб эшләүгә ней йетә

**КӘҢӘШ-ТӨЙӨШ** (ҡыҙыл, урта) *и.* кәңәш-фәлән — *совет.* Әҙерәк кәңәш-төйөшһөҙ нисек биребәрәң? (ҡыҙыл). Кәңәш-төңөш (һаҡмар). Кәңәш-төңөш итеп алығыҙ ҙа, эшкә! Кәңәш-төңәш (урта)

**КӘП** (мейәс) *р.* таман, тап-таман — *как раз, точь-в-точь.* Үҙенә кәп кенә кейеме була

**КӘП: КӘП ҺУҒЫУ** (эй) *ҡ.* эшһеҙ йөрөү — *бездельничать*

**КӘПЕЛӘМ, КӘПЛӘМ** (эйек-һаҡмар) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**КӘПЕРЕК** (урта урал) *с.* һауалы — *высокомерный.* Кәперек, кәперәйгән булып һәләк йөрөгәмула

**КӘПЕРӘН** (урта) *и.* мендәр тышы — *наволочка.* Кәпрән (ҡыҙыл)

**КӘПЕСКӘЙ** (арғаяш) *и.* кәрлә — *карлик*

**КӘПИРӘТ** (һаҡмар) *и. магазин.* Кәпирәткә кәмфит алырға гиткәйне

**КӘПКЕР** (арғаяш) *и.* һоҫҡо — *совок*

**КӘПКӘКЛӘҮ** (урта) *ҡ.* 1. Ситләтеү — *обижать.* 2. Ирештереү — *поддразнивать*

**КӘПЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* кипсәлеү — *быть в обтяжку*

**КӘПЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* көпләү — *обшивать.* Йөндө һуғып, кейеҙ баҫып кәпләп алаһың

**КӘПЛӘШЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* йәпләшеү, тап килеү — *складываться*

**КӘПРЕНКЕ, КӘПРӘНКЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* маҡтансыҡ — *хвастун*

**КӘПСӘЛЕҮ** (урта) *ҡ.* кипсәлеү — *быть в обтяжку (об одежде)*

**КӘПТЕЙ** (эй) *и.* башалтай — *шерстяные носки-самовязки*

**КӘПТӘ** (туҡ-соран, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Быйма — *валенки.* 2. (туҡ-соран) Кейеҙҙән тегелгән ойоҡ — *войлочные чулки.* 3. (һаҡмар) Ҡыш көнө көрттә батмаҫ өсөн аяҡ кейеменә бәйләп кейелә торған яҫы ағас — *лыжи-коротыши*

**КӘПТӘН** (ырғыҙ) *и.* кулдәктең итәге өҫтөнә тегелгән нәҙек таҫма — *тесьма, пришитая на подол платья*

**КӘПТӘҮ** (эй) *ҡ.* маҡтау — *расхваливать.* Кәптәб йебәреү генә кәрәг ине ул балаға

**КӘПӘЙЕҮ** (дим, эйек-һаҡмар) *ҡ.* күбеү — *распухнуть.* Эс кәпәйеү. Йыуан ҡорһағы кәпәйгән (эйек-һаҡмар)

**КӘПӘЙ** (туҡ-соран) *с.* күпкәк — *вздутый.* Кәпәй ҡорһаҡлы ине

**КӘПӘЙТЕҮ** (урта) *ҡ.* күптереү — *выпячивать.* Сафуан күкрәген кәпәйткән

**КӘПӘК** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* түңәрәк бүрек — *кубанка*

**КӘПӘРЕК** (эй) *и.* маҡтансыҡ — *хвастун*

**КӘПӘС I** (ҡыҙыл) *и.* 1. Түбәтәй — *тюбетейка.* 2. (дим) Көләпәрә — *вид меховой или ватной шапки в форме капюшона, закрывающего уши и шею, с острым верхом.* 3. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Бүрек — *шапка.* Ҡорайыш кәпәс *(ҡамалы бүрек)* — *шапка, окаймленная шкурой выдры*

**КӘПӘС II** (һаҡмар) *ы.* балалар уйынында «туҡта» тигәндә аңлатҡан һүҙ — *слово, означающее «стой» в детской игре*

**КӘПӘС III** (әй) *и.* төпөш — *коротыш*

**КӘПӘС IV** (ырғыҙ) *и.* көнбағыш табағы — *головка подсолнуха*

**КӘПӘЧ, ТӘПӘЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сыбағас — *цепь.* Кәпәч белән суғалар ие

**КӘР** (урта урал, һаҡмар) *и.* ҡеүәт — *мощь.* Ҡарағай ҙа ағас бейек ағас, менепумай кәрем бумағас *(халыҡ йыры).* Кәрһеҙ генә булып ҡалды (һаҡмар)

**КӘРБИЛ** (эйек-һаҡмар) *и.* гәрбил — *горбыль*

**КӘРБҮЗ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡарбуз — *арбуз.* Кәрбүз-ғауын сәсә торғайнылар

**КӘРЕ** (кариҙел) *к.* нәк — *точь-в-точь.* Тауның кәре буйында ғына

**КӘРЕС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* гәрес — *гарус*

**КӘРЕҪ** (ҡыҙыл) *и.* кәрәҙ — *воск.* Кәреҫле бал

**КӘРЕТӘ** (арғаяш) *и.* кер ялғашы — *корыто.* Кәритә (әй)

**КӘРЕШЕ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Беше, нык, ҡаты — *плотный.* Кәреше ағас. Керәш (мейәс). 2. (урта) Үҙһүҙле — *упрямый*

**КӘРЕШКӘ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* торна борсағы — *мышиный горошек.* Кәришкә (ҡыҙыл)

**КӘРЕШЕЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* ағастың һыуҙа оҙаҡ ятып шешенеүе — *разбухать (о валежнике)*

**КӘРЖИҢКӘ, КӘРЗИҢКӘ** (әй) *и.* солландағы бүлмә — *отсек в чулане*

**КӘРИБ** (дим) *и.* ағай-эне, нәҫел — *родня.* Кәриб ул миңә

**КӘРИТӘ** (дим, ҡыҙыл, урта) *и.* 1. Ялғаш — *корыто.* 2. (һаҡмар) Ике тотҡалы, ҡапҡаслы, он, икмәк һалып ҡуя торған оҙонса ағас һауыт — *дощатая посуда с ручками, крышкой для хранения хлеба, муки*

**КӘРКЕЛДӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* йүткереү — *кашлять*

**КӘРКЕШ** (дим) *и.* сабата бауы — *обора*

**КӘРЛЕ, КӘРЛЕК** (урта, һаҡмар) *и.* кәрлә — *карлик*

**КӘРЛИГӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сөсө торма — *калега*

**КӘРЛӘПӘ** (ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* кәрлә — *карлик.* Кәрләпә, кәрләпкән (әй)

**КӘРЛӘС** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* кәрле — *карлик*

**КӘРЛӘ ҺАРАЛЙЫН** (эйек-һаҡмар) *и.* ваҡ һаралйын — *гаршнеп*

**КӘРМАНЙЕЛ** (ҡыҙыл) *и.* юғары сортлы ҡыҙыл буҫтау — *кармазин*

**КӘРНИЗ** (эйек-һаҡмар) *и.* мейес ҡашағаһы — *карниз печи.* Кәрнис (арғаяш, ҡыҙыл, салйоғот, урта, әй)

**КӘРНИС** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡомаҡ — *крыса.* 2. Ялман — *тушканчик*

**КӘРНИСӘ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* күтәрмә — *крыльцо*

**КӘРНӘСТӘЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* аҫ — *горностай*

**КӘРНӘТӘЙ** (урта) *и.* кәрлә — *карлик*

**КӘРСЕҮ** (кариҙел) *ҡ.* артыҡ әсеү — *перекиснуть.* Әпи кәрсегән. Кәрсегән бал

**КӘРСӘН, КӘРҪӘН** (урта урал, әй) *и.* ағастан соҡоп эшләнгән ҙур табаҡ — *большая деревянная чаша*

**КӘРҪ I** (урта) *и.* кәҫ — *дерн*

**КӘРҪ II** (урта) *и.* аймаҡ атамаһы — *название родового подразделения*

**КӘРҪЕҮ** (әй) *ҡ.* артыҡ әсеү — *перекиснуть (о хлебе)*

**КӘРТАҒАЧ** (гәйнә) *и.* тәртә — *оглобля*

**КӘРТЕШКӘ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, әй) *и. фотокарточка.* Кәртешкәгә төшөп ҡайттым (ҡыҙыл). Кәртишкә (урта урал)

**КӘРТЛӘНСЕК** (дим, урта) *и.* ҡатлансыҡ — *книжка (часть желудка).* Кәртләнсек һымаҡ ҡатланып, берберенә иңкелеп тора таулар (дим)

**КӘРТҮГҮЛӘН** (әй) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта*

**КӘРТҮК** (арғаяш, гәйнә, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, әй) *и.* картуф — *картофель.* Кәртүк-һәртүк сәстем дә гиттем (урта). Кәртүк соҡоу (ҡыҙыл, урта) картуф ҡаҙыу — *выкапывание картофеля*

**КӘРТҮК АЛМАҺЫ** (әй) *и.* картуф емеше — *семенники картофеля*

**КӘРТҮКӘ, КӘРТҮФКӘ** (әй) *и.* картуф — *картофель.* Баҡсаға кәртүфкә утырттым

**КӘРТАРБА** (ҡариҙел) *и.* оҙонбил арба — *дроги*

**КӘРТАРТЫ** (урта) *и.* картуф баҡсаһы — *огород*

**КӘРТУРҘА** (дим) *и.* һайғаҡ — *шест*

**КӘРТӘ** (дим, урта) *и.* 1. Ишегалды — *двор.* 2. (гәйнә, ҡыҙыл) Ҡаралды — *надворные постройки.* 3. (арғаяш) Ситән ҡамау — *загон.* 4. (арғаяш, эйек-һаҡмар) Мал аҙбары — *хлев.* Кәзә кәртәһе. 5. (урта) Айыу өңөнә тыға торған ағас, сәсә — *жердь для нападения на спящего медведя.* Кәртә бистеү (гәйнә) кәртә тотоу — *загородить*

**КӘРТӘ: УТЫРМА КӘРТӘ** (дим) *и.* текмә — *частокол*

**КӘРТӘ БАШЫ** (арғаяш, урта) *и.* аҙбар башы — *крыша хлева*

**КӘРТӘҒУРА** (салйоғот, эйек-һаҡмар) *и.* ишегалды — *двор*

**КӘРТӘ ЙЫЛАНЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кеҫәртке — *ящерица.* Кәртә йыланы сейсә черей икән дейләр, кеше ҡурҡа аңардан

**КӘРТӘҒАПҠА** (гәйнә, әй) *и.* арҡыры ағастарҙан эшләнгән ҡапҡа — *ворота из жердей*

**КӘРТӘЛЕ** (ҡариҙел) *с.* буйлы — *с полоской (о тканях).* Кәртәле киндерҙән күлмәк кейҙек

**КӘРТӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* ҡарау, тәрбиәләү — *присмотреть.* Балаларын кәртәләп торһаң да йарап булмай киленгә

**КӘРТӘТОРА** (эйек-һаҡмар) *и.* йорт-ҡаралты — *дом и надворные постройки.* Кәртәтораһын ҡарайым мин

**КӘРТӘ УЙНАУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* монар — *мгла*

**КӘРТӘ ҺАУЫҪҠАНЫ** (ҡыҙыл) *и.* ҡом һайыҫҡаны — *кулик-сорока*

**КӘРТӘ ЭЙӘҺЕ** (ҡыҙыл) *и.* мал эйәһе — *домовой*

**КӘРТӘ ЭСЕ** (арғаяш) *и.* 1. Аҙбар эсе — *внутрь хлева.* 2. (урта) Ишегалды — *двор*

**КӘРШЕ, КӘРЕШЕ** (эйек-һаҡмар) *с.* нык, беше — *плотный.* Кәрше ағасты йарыпумай

**КӘРШЕҮ** (арғаяш, ҡыҙыл) *ҡ.* артыҡ әсеү — *перекиснуть (о тесте).* Кәрһеү (салйоғот)

**КӘРШҮК** (урта) *и.* 1. Балсыҡ көршәк — *горшок.* 2. (ҡыҙыл) Суйын — *чугунок*

**КӘРШӘГӘ** (арғаяш) *и.* мурҙа — *морда (рыболовная снасть)*

**КӘРШӘН** (ҡыҙыл) *и.* парфюмерия әйберҙәре — *парфюмерные изделия*

**КӘРШӘНӘ** (урта) *и.* емеш ҡабығы — *кожура плода*

**КӘРӘБӘ** (мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Гәрәбә — *янтарные бусы.* 2. (эйек-һаҡмар) Мәрйен — *коралл*

**КӘРӘГЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* кәрәк булыу — *понадобиться.* Ташлама муҡсайыңды, кәрәгер

**КӘРӘМ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Кирәм — *специальная веревка, при помощи которой бортники лазают на высокие деревья.* 2. (әй) Блок. Кәрәмгә кейелгән арҡан өҫкә йеңел шыуа

**КӘРӘМЕС** (эйек-һаҡмар) *и.* көйәнтә — *коромысло*

**КӘРӘҢГЕ ШАЛҠАН** (минзәлә) *и.* гәрәнкә — *брюква*

**КӘРӘШ** (эйек-һаҡмар) *и.* кәрәҙ — *воск.* Кәрәшле бал

**КӘС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Балсыҡ — *глина.* 2. (урта) Кәҫ — *дерн*

**КӘСЕПЛӘНЕҮ, КӘСИПЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* кәсеп итеү — *промышлять.* Ҡыр йәннекләре тиреһе белән кәсепләндек. Йылҡы белән кәсипләнделәр

**КӘСЕПСӘН** (урта) *с.* эшкә шәп, оҫта — *проворный, способный промышлять*

**КӘСИП I** (дим, ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, әй) *и.* кәсеп — *промысел, ремесло, занятие.* Әйбәт кәсиб ул (әй). Йеңел кәсиптә эшләй (ҡыҙыл). Кәсибебеҙ ошо инде (эйек-һаҡмар)

**КӘСИП II** (эйек-һаҡмар) *и.* сәскә саңы — *пыльца цветочная.* Кәсип бар йылды ғына ҡорт айыра, кәсип йуҡ йылы айырмай. Кәсипкә барыу *(бал ҡорттарының бал эҙләп китеүе) — вылет пчел на медосбор*

**КӘСИПКӘР** (һаҡмар) *с.* кәсепсән — *способный промышлять.* Мин үҙем кәсипкәр кешемен

**КӘСИП ҠОРТО** (дим) *и.* әреҡорт — *трутень*

**КӘСТҮР** (дим) *и.* сәсеп үҫтергән бесән — *сено культурного луга*

**КӘСТӘКӘЙ** (ҡариҙел) *и.* сәтәкәй бармаҡ — *мизинец*

**КӘСӘ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Каса — *пиала.* 2. (һаҡмар) Сипарат тарелкаһы — *тарелка сепаратора*

**КӘСӘК I** (дим, ҡариҙел, урта, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* ишек, тәҙрә яңағы — *косяк*

**КӘСӘК II** (ҡыҙыл) *и.* йылҡы өйөрө — *табун лошадей.* Дүрт кәсәк бейә һауа

**КӘСӘКЛЕК** (һаҡмар) *и.* тәҙрә яңағы өсөн әҙерләнгән ағас — *материал для косяка.* Тәҙрә кәсәклек апкилдем тей, тәҙрәгә ҡуйһа, йағы тип әйтәләр

**КӘСӘРГӘ** (урта) *и.* тәртешкә — *кочерга*

**КӘСӘРТКЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кеҫәртке — *ящерица*

**КӘСӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тәртешкә — *кочерга*

**КӘҪ** (әй) *и.* 35 см. киңлегендәге ер үлсәме — *мера земли шириной в 35 см.* Утыҙ биш кәҫ сәстек

**КӘҪТЕК** (арғаяш) *и.* кәҫ таҡтаһы — *отвал (на плуге)*

**КӘҪТӘ** (һаҡмар) *и.* борондан ултырған ер-һыу урыны — *первоначальное месторасположение.* Башҡорттоң саммай кәҫтәһенә бараһығыҙ инде

**КӘҪТӘН** (ырғыҙ, әй) *с.* ҙур, ауыр — *тяжеловесный, большой.* Кәҫтәндәй балаһын күтәргән олобашты (әй). Утыҙлыҡ кәҫтәндәй ҙур аҡса була торғайны (ырғыҙ)

**КӘҪТӘР** (һаҡмар) *и.* сара, хәстәр — *мера, забота.* Мин аш әҙерләү кәҫтәрен күрермен

**КӘҪӘ БАЛЫ** (дим) *и.* яҙға умартала ҡалған бал — *остаточный в ульях мед.* Кәҫә балы әсегән була ул

**КӘТ** (арғаяш) *и.* мөйәшә — *засыпня*

**КӘТЕРМӘС I** (ҡариҙел) *и.* 1. Боғарлаҡ — *трахея.* 2. Боғарлаҡтың ҡулсалары — *кольца трахеи*

**КӘТЕРМӘС II** (урта урал) *и.* шөкәрә — *сухари*

**КӘТЕРМӘЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөрләтәү — *зоб (у птиц)*

**КӘТЕРӘК** (ҡыҙыл) *и.* ҡара ҡылау — *катаракта.* Күҙе кәтерәк тип хеҙмәткә алманылар

**КӘТКЕ I** (эйек-һаҡмар) *и.* *бокал*

**КӘТКЕ II** (эйек-һаҡмар) *и.* тәпке — *мотыга*

**КӘТ-КӘТ-КӘТ** (гәйнә) *ы.* һыйыр саҡырыу һүҙе — *слово для зова коровы*

**КӘТЛӘНСЕК** (урта) *и.* ҡатлы ҡарын — *книжка (часть желудка)*

**КӘТМЕН** (урта) *и.* ҙур сабаҡ — *крупная плотва*

**КӘТМӘЙГӘН, КӘТМӘКӘЙ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* төпөш — *коротыш*

**КӘТМӘ** (дим, ҡариҙел) *и.* тәпке — *тяпка*

**КӘТМӘК** (мейәс) *и.* төпөш — *коротыш*

**КӘТМӘН I** (дим, ҡариҙел, һаҡмар) *и.* 1. Тәпке — *тяпка.* 2. (эйек-һаҡмар) Мәләү — *лопаточка (для выкапывания овощей и корней трав)*

**КӘТМӘН II** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* уңыш йыйғанда беренсе булып яҡшы теләк белдереүсегә шул уңыштан бирелгән өлөш — *вознаграждение от урожая.* «Кәтмәне һиңә!» — тиләр

**КӘТМӘН III** (урта урал, әй) *и.* шайтанашыҡ — *щиколотка.* Кисеү һай ғына, кәтмәндән генә (әй)

**КӘТМӘН IV** (урта) *и.* юл тигеҙләгес машина — *каток*

**КӘТМӘНДӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* ҡаҙыу — *копать.* Кәҫ кәтмәндәү

**КӘТМӘНСУҠ** (һаҡмар) *и.* тәпке — *тяпка*

**КӘТТӘ I** (һаҡмар) *с.* ҙур — *большой.* Иң кәттәһе һиңә

**КӘТТӘ II** (ырғыҙ) *и.* 1. Түр — *передняя часть дома.* ◊ Күңел кәттәһе *(күңел түре) — тайники сердца.* Күңел кәттәһендә йата

**КӘТТӘ III** (урта) *р.* эре — *гордо.* Кәттә йөрөй мәгәр

**КӘТҮЛ** (урта, әй) *и.* бәләкәй биҙрә — *котелок*

**КӘТӘБӘ: КӘТӘБӘҺЕ ҒАТЫУ** (мейәс, әй) *ҡ.* ныҡ өшөү — *замерзнуть.* Кәтәбәһе ғатып килеп керҙе (мейәс)

**КӘТӨБӘЙ** (урта) *и.* төпөш — *коротыш*

**КӘТӨЙ** (әй) *и.* өләсәй — *бабушка*

**КӘТӘЛ** (мейәс) *и.* иргәйел — *карлик*

**КӘТӘЛҮК** (урта) *и.* бәләкәй биҙрә — *котелок*

**КӘТӨНӘ** (төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *и.* төпөш — *коротыш*

**КӘҮ** (арғаяш) *и.* салғы ҡарағошо — *помост у косы*

**КӘҮГӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* кәүгәсел — *паникер.* Алар кәүгә бит ул ауырыуға

**КӘҮГӘСЕЛЕК** (һаҡмар) *и.* ығы-зығы — *суматоха.* Әлеге кәүгәселек уахыт буған инде

**КӘҮҘӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ыуыу — *тереть.* Ҡабығын кәүҙәп осоропөтәһең инте (урта). 2. Ваҡлау — *крошить.* Сысҡан ашлыҡты кәүҙәй (ҡыҙыл)

**КӘҮЕЗ** (эйек-һаҡмар) *и.* йәлдәү — *горловина верши*

**КӘҮЕК** (һаҡмар) *и.* 1. Ас башаҡ — *пустой колос.* Аслау бойҙайҙы бер төрлө ашлыҡ кәүек тейләр. 2. *с.* еңел, бәрәкәтһеҙ — *непитательный.* Урман бесәне кәүеккә гилә. 3. (ҡыҙыл) *и.* баш кәүәге — *перхоть*

**КӘҮЕЛ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡылған — *ковыль*

**КӘҮЕН I** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ас башаҡ — *пустой колос.* Ашлыҡ аслай буһа, кәүен була (эйек-һаҡмар). 2. (ҡыҙыл, мейәс) Кәбәк — *мякина.* Ҡоро кәүен була инде (ҡыҙыл). 3. *с.* туҡлыҡһыҙ — *непитательный.* Һаҙ бесәне — кәүен бесән. 4. (мейәс, урта) *и.* баш ҡауағы — *перхоть.* 5. (эй) *с.* еңел холоҡло — *легкомысленный*

**КӘҮЕН II** (кариҙел) *и.* ҡауын — *тыква*

**КӘҮЕР** (урта) *и.* балаҫ — *ковер*

**КӘҮЕС, КӘҮЕЗ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* улаҡ — *желоб водяной мельницы*

**КӘҮЕШ I** (урта урал, һаҡмар) *и.* ҡунысһыҙ итеп күндән тегелгән ҡатын-ҡыҙ аяҡ кейеме — *кожаная обувь (женская) ручного изготовления шитья*

**КӘҮЕШ II** (гәйнә, урта урал) *и.* тәңкәһеҙ ялпағыраҡ балыҡ — *вид плоской рыбы без чешуи*

**КӘҮЕШЛӘМӘ** (гәйнә, дим) *и.* ит һәм бәрәңгенән бешерелгән ваҡ бәлеш — *беляши*

**КӘҮЖӘННӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡыйшайтыу — *скривить*

**КӘҮИЛ** (урта) *и.* эре бесән — *грубое сено*

**КӘҮҪӘННӘҮ** (урта) *ҡ.* яйлап ҡына атлау — *идти не торопясь.* Кәүҫәннәп һыйыр килеп утыра

**КӘҮҺӘР** (ҡыҙыл) *и.* гәүһәр — *бриллиант*

**КӘҮШЕРЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* өшөп ултырыу — *мерзнуть*

**КӘҮШӘ** (салйоғот) *и.* мөшкә — *насыпь (у мельницы)*

**КӘҮШӘЙГӘН** (мейәс) *с.* 1. Йәмшәйгән, йәмшек — *приплюснутый.* Әбей булыпөткән кәүшәйеп. 2. (һаҡмар) *ҡ.* Кәксәйеү *(өҫкә табан).* Итегең кәүшәйгән

**КӘҮӘЛДӘК** (арғаяш) *и.* 1. Тапанды — *объедья.* Кәүелдәк (урта урал). 2. Ҡауаҡ — *перхоть.* 3. (эй) *с.* кәүшәк — *легковесный.* Һаҙ бесәне кипкәс кәүәлдәккә әйҙәнә

**КӘФЕН** (кариҙел) *и.* кейем эсендәге мамыҡҡа ҡуйған марля — *марлевая подкладка одежды*

**КӘФЕННӘҮ** (кариҙел) *ҡ.* һырылған әйберҙең тышлығы аҫтынан мамыҡ көпләү — *вату подбить марлей (при стегании).* Элгәре мамыҡны кәфеннәйбес, аннан кирсе тыш тартабыс та сырибыс

**КӘҺЕЛДӘҮ** (урта) *ҡ.* аҡрын ғына йүткереп ҡуйыу — *покашливать*

**КӘШКӘЙЕК** *(кариҙел)* с. серек — *гнилой.* Кәшкәйек ағас

**КӘШМӘ, КӘШМӘК** (ҡыҙыл, урта) *и.* ун-ун биш бүрәнәнән бәйләп эшләнгән һал — *плотик из десятипятнадцати бревен.* Йуҡһа был ҡайаға кәшмәк менән генә түгел, эре-эре һалдар ҙа бәрелеп тарала (ҡыҙыл)

**КӘШМӘКЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бүрәнәләрҙе һал итеп бәйләү — *связывать бревна для плота*

**КӘШТӘ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Урҙа — *шест для развешевания вещей.* 2. Таҡта теҙеү өсөн атламаға ике яҡлап һалынған оҙон ағастар — *обрешетка.* 3. (урта) Төнәү — *насест.* 4. (ҡыҙыл, салйоғот, урта, һаҡмар) һауыт-һаба шкафы — *посудник.* 5. (урта) Төнөн айыу һағалап ултырыу өсөн ағас башына эшләнгән урын — *место на дереве для слежки за медведем.* 6. (арғаяш) Һәндерә — *полати*

**КӘШТӘЙЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* кәксәйеү — *загнуться кверху.* Башын кәштәйтеп йылан килә

**КӘШТӘК I** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш) *и.* кештәк — *подмышник, ластовица*

**КӘШТӘК II** (мейәс) *и.* ҡалҡыу ер — *возвышенность*

**КӘҺЕТЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* кәйегеү — *приедаться*

**КӘҺТЕК, КӘҺТӘМ** (салйоғот) *и.* кәҫтаҡта — *отвал (у плуга)*

**КӘҺӘЛ ЙЫУАҺЫ** (мейәс) *и.* әсе, ҡыуыш йыуа — *лук зеленый*

**КӘҺӘ** (мейәс) *и.* тәртешкә — *кочерга*

**КӘЧӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ишек, тәҙрә яңағы — *косяк.* Кәчәклек йуҡ бит димен

**КӘШЕН, КӘШИН** (кариҙел, ҡыҙыл) *и.* 1. Тиренән тегелгән тоҡ — *мешок, изготовленный из шкуры.* 2. (ҡыҙыл, урта) Быҙау тиреһенән тегелгән тоҡ — *мешок, сшитый из телячьей шкуры*

**КӘШКИ: КӘШКИ ҺҮҘ ӘЙТМӘҮ** (эй) *ҡ.* ләммим әйтмәү — *не промолвить ни слова.* Кәшки берәй һүҙ әйтһәм

**КӘШКЕЛДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* еңелсә йүтәлләү — *кашлять слегка.* Кәшкелдәп тиг утыраһың

**КӘШКҮК ТАНАУ** (ырғыҙ) *и.* йәмшек танау — *сплюснутый нос*

**КӘШКӘЙЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* кәксәйеү — *загнуться кверху*

**КӘШТӘЛӘҮ** (дим) *ҡ.* ҡыралау, ҡыраға йыйыу — *собрать покосы в ряды*

**КӘШӘКӘ** (дим, мейәс, минзәлә) *и.* 1. Сәкән — *игра с клюшками.* Көз көнө кәшәкә уйыны китте (минзәлә). 2. (арғаяш) Шайба

**КӘШӘЛӘҮ I** (дим) *ҡ.* 1. Ҡауаҡланыу — *покрыться перхотью.* 2. (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, һаҡмар) тиренең ярылып ҡубыуы — *обветриваться (о коже).* Айаҡлары кәшәләй (һаҡмар)

**КӘШӘЛӘҮ** (минзәлә) *ҡ.* маташыу — *пытаться (что-то делать).* Өй кәшәләп торабыҙ әле

**КӘШӘМИР** (арғаяш, салйоғот, эй) *и.* кешмир — *кашемир.* Кәшәмир шәл йабындыҡ (эй)

**КӘШӘНӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Шайба. 2. (эйек-һаҡмар) Ашлыҡ ҡабығы, кәбәк — *мякина*

**КӘШӘҮӘР** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* аш бешереүсе — *повар.* Үҙем кәшәүәр була торғайным (эйек-һаҡмар)

**КӘШӘР** (арғаяш) *и.* ситән аҙбар — *плетеный хлев*

**КӘШӘРГЕ** (мейәс) *и.* тәртешкә — *кочерга*

# Ҡ

**ҠАБАҒАН: ҠАБАҒАН ҺҮҘ** (урта) тупаҫ һүҙ — *грубое слово.* Үҙ атаңды ҡабаған һүҙ менән ҡаршылама

**ҠАБАҠ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡабыҡ — *кора, кожура.* Лимун бешмәгән, ҡабағы бер иле (ҡариҙел). Ҡайын ҡабағы (төньяҡ-көнбайыш). 2. Тәңкә — *чешуя (рыбы)*

**ҠАБАҠ II** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡауаҡ — *перхоть*

**ҠАБАҠ III** (урта, әй) *и.* 1. Ҡалҡыулыҡ, түбә — *холм.* 2. (туҡ-соран) Итәк — *подошва горы.* Йаҙ булыу белән маллар ҡабаҡҡа сыға

**ҠАБАҠ: ҠАБАҠ КҮҘ** (нөгөш) *и.* ҡабарыңҡы ҡабаҡлы күҙ — *глаза с пухлыми веками.* ◊ Ҡабағына ҡаршы ҡар йауыу (һаҡмар) ҡаш йыйырыу — *насупить брови*

**ҠАБАҠЛАУ: ҠАБАҠЛАУ ЙЕР** (эйек-һаҡмар) *и.* үрләс — *подъем.* Кәзә йыуаһы ҡабаҡлау йерҙә үҫә

**ҠАБАҠТЫ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* арғыллы — *гористый.* Ҡабаҡты йул (ҡыҙыл)

**ҠАБАЛАН-ҠАРҺАЛАН** (көнсығыш диалект, туҡ-соран, һаҡмар) *р.* ашыҡ-бошоҡ — *наспех.* Ҡабалан-ҡарҫалан (урта)

**ҠАБАЛАНЫШ** (дим) *р.* ашыҡ-бошоҡ — *наспех.* Ҡабаланыш ҡына эшләгән

**ҠАБАЛАУ** (гәйнә) *ҡ.* абалау — *наброситься с лаем (о собаке)*

**ҠАБАРСЫҠ** (ҡариҙел) *и.* маҡтансыҡ — *хвастун.* Ҡабарчик (төньяҡ-көнбайыш)

**ҠАБАРСЫУ** (мейәс, эйек) *ҡ.* күберсеү — *вздуться (о волдыре).* Ҡабарсып төшә торған эле дән (мейәс)

**ҠАБАРТМА** (ҡыҙыл, туҡ-соран) *и.* майҙа бешерелгән йәймә — *лепешка, испеченная в масле*

**ҠАБАРЫУ** (мейәс, әй) *ҡ.* ҡыҙыу — *сердиться.* Әйтһәң ҡабара ла гитә (мейәс)

**ҠАБАТ** (арғаяш, салйоғот) *и.* эргә — *место, расположенное рядом.* Йәйҙәүҙектә байҙар ҡабатына барып ситән үреп йәшәүселәр ҙә булды (салйоғот). Ҡолой ҡабатында йыраусы бар (арғаяш)

**ҠАБАТАРТҠЫС** (мейәс) *и.* тәрәш тараҡ — *чесалка (для льна)*

**ҠАБАТ: ҠАБАТ ЙЕГЕТ** (арғаяш, салйоғот) *и.* кейәү егете — *шафер, дружка*

**ҠАБАТЛАУ** (урта) *ҡ.* билендәү — *испугаться*

**ҠАБАТТАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* өҙләгөү — *заболеть повторно, не оправившись после первой болезни*

**ҠАБРЫЙ: ҠАБРЫЙ ЙУЛ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* тау битләүендәге юл — *дорога на косогоре.* Ҡабрый йулда машина ауа йаҙҙы (мейәс). Ҡабырый йул (урта). Ҡабыра йул (ҡыҙыл)

**ҠАБУЛ** (ҡариҙел, һаҡмар) *и.* ризалыҡ — *согласие.* Ҡабулыбыҙ бар тей, йаусы белән йегеттең атаһы гилә (һаҡмар)

**ҠАБЫҒУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* күгәреү — *заплесневеть*

**ҠАБЫҠ I** (ҡариҙел) *и.* йүкә — *липа.* Менә ҡабыҡ сискә ата хәзер. Ҡабыҡ ҡанат (мейәс) 1. Алабарман — *опрометчивый* (һаҡмар). 2. Еңел аҡыллы — *легкомысленный.* Уй, шу буһа ҡабыҡ ҡанат булыр инде

**ҠАБЫҠ II** (мейәс) *и.* 1. Ҡуҙаҡ — *стручок.* 2. Талҡыш — *кострика*

**ҠАБЫНДЫРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡабартыу — *раздувать.* Дөрөһ кенәһен әйтәм, бер ҙә ҡабындырмайым

**ҠАБЫР** (ҡыҙыл, урта) *и.* ҡәбер — *могила*

**ҠАБЫР: ҠАБЫР ТӨНӨ АСЫЛЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* төндә күк йөҙөнөң яҡтырып китеүе — *сильное свечение неба ночью за день до праздника уразы (объясняется падением крупной кометы).* Ҡабыр эйәһе булыу (ҡыҙыл) үлеү — *умереть*

**ҠАБЫРҒА** (ҡариҙел) *и.* тау битләүе — *косогор*

**ҠАБЫРҒА: ҠАБЫРҒА АТЫ** (мейәс) *и.* мисәү аты — *пристяжная (лошадь).* Ҡабырға аты арығыраҡ булып сыҡты

**ҠАБЫРҒАЛАШ** (арғаяш) *р.* ҡабырғанан — *сбоку.* Мынау геше кылупта миңә бер эскәмйәлә ҡабырғалаш туры гилде

**ҠАБЫРҒАЛАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йәнәшәләү — *идти рядом*

**ҠАБЫРҒАЛЫҠ** (арғаяш) *и.* бауырғалыҡ — *подбрюшник*

**ҠАБЫРСЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡабарып сығыу — *волдыриться.* Ҡабарсыу (урта)

**ҠАБЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* һырыу — *стегать (одеяло, пальто и т. п.).* Йурған ҡабыу

**ҠАБРЫЙ** (урта) *и.* киҫкен боролош — *резкий поворот*

**ҠАҒАЙТЫУ** (дим) *ҡ.* елләтеү — *проветривать*

**ҠАҒАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төйләгән — *коршун*

**ҠАҒЫЛДЫ: ҠАҒЫЛДЫ БУЛЫУ** (арғаяш) *ҡ.* бәүел ҡыуығы ауырыуы — *болезнь мочевого пузыря*

**ҠАҒЫЛЙЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Тайпылыу — *уклоняться.* 2. Сайпылыу — *расплескаться*

**ҠАҒЫЛСАН** (дим, көнсығыш диалект, төньяҡ-көнбайыш) *и.* кәйелтмәк — *раскат (на зимней дороге).* Ҡағылсан урыннар күб ул тапҡырҙа (дим). Ҡағылма (әй)

**ҠАҒЫЛТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡағыу — *притеснять*

**ҠАҒЫМҒАЛ** (һаҡмар) *с.* ябыҡ — *тощий (о скотине)*

**ҠАҒЫН** (урта) *и.* ҡалҡыу еләҫ урын — *возвышенное место, продуваемое ветром.* Йалан кәртәләре ҡағынға урынлашҡан. Ҡағыу (ҡыҙыл)

**ҠАҒЫНДЫ I** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* кәйелтмәк — *раскат (на зимней дороге)*

**ҠАҒЫНДЫ II** (әй) *с.* ситләтелгән — *обижаемый, непризнанный.* Ғүмер буйы ҡағынды булдым

**ҠАҒЫТ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* ҡаҡ — *пастила*

**ҠАҒЫТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡағыу — *притеснять*

**ҠАҒЫУ I** (урта) *и.* 1. Ел өрөп торған урын — *место, продуваемое ветром.* 2. Ҡоролоҡ — *засуха.* Көннәр ҡағыуға әйләнте

**ҠАҒЫУ II** (урта) *ҡ.* елләтеү — *проветривать*

**ҠАҒЫУ: ҠАҒЫУЙЕР** (ҡыҙыл) *и.* ҡалҡыулыҡ — *возвышенность.* Ҡағыу йерҙә бакуй тиҙ гибә

**ҠАҒЫШТЫ** (арғаяш) *и.* кәйелтмәк — *раскат (на зимней дороге)*

**ҠАҘАЙАҠ I** (дим, һаҡмар) *и.* 12 көлтәнән ҡаҙ айағына оҡшатып һалынған һоҫлан — *суслон из 12 снопов в виде гусиной лапки*

**ҠАҘАЙАҠ II** (арғаяш, дим, урта) *и.* ҡаҙ үләне — *лапчатка гусиная*

**ҠАҘАҠБАШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Яңғыҙ — *одинокий.* 2. Буйҙаҡ — *холостой.* Ҡаҙаҡбашҡа фатир бирмәйләр

**ҠАҘАҠАЙ: ҠАҘАҠАЙ ТОРОУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *впервые вставать на ножки (о ребенке)*

**ҠАҘАҠҠОҘА** (дим) *и.* кейәү егете — *шафер, дружка*

**ҠАҘАҠТАНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* үтенеп һорау — *умолять*

**ҠАҘАҠ УРЫҪЫ** (ырғыҙ) *и. казак*

**ҠАҘАҠ ҺАЛМАҺЫ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* ус аяһы ҙурлығында итеп киҫелгән һалма — *лапша, нарезанная размером с ладонь*

**ҠАҘАҠ ҺӨТТӨКӘЙЕ** (мейәс) *и.* кәкүк сәскәһе — *медуница*

**ҠАҘАЛМА** (урта) *и.* һикәлтә — *ухаб.* Ул тирәлә ҡаҙалмалы йерләр күп була торған

**ҠАҘАЛЫҠ** (дим) *и.* ҡаҙанлыҡ — *кухонная половина дома*

**ҠАҘАЛЫУ** (әй) *ҡ.* йомолоу — *накинуться.* Шу хәтте ашҡа ҡаҙалған, астыр инде

**ҠАҘАН** (арғаяш) *и.* өйрөлтмәк — *водоворот*

**ҠАҘАНАЙАҠ** (мейәс) *и.* өсаяҡ — *треножник (чугунная посуда)*

**ҠАҘАН АЛДЫ** (арғаяш, салйоғот) *и.* көлдөксә — *шесток (печи)*

**ҠАҘАНАС, ҠАҘАН АҪТЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* усаҡ — *очаг.* Ҡаҙан асу *(аш һалыу) — варить суп*

**ҠАҘАНАШ** (һаҡмар) *и.* аш — *суп.* Ул ней ҡаҙанашһыҙ һис түҙәлмай

**ҠАҘАН БӨЙӨРӨГӨ** (мейәс) *и.* эремсек билмәне — *творожные вареники.* Ҡаҙан бөйөрөгө бешереп ҡунаҡ саҡырҙыҡ. Ҡаҙан бөтөрөгө (мейәс)

**ҠАҘАН БӨККӘНЕ** (мейәс) *и.* эремсек билмәне — *творожные вареники*

**ҠАҘАНҒОЛАҠ** (дим, урта, ырғыҙ, эйек) *и.* эремсек билмәне — *творожные вареники*

**ҠАҘАНЙАҠ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡаҙандыҡ — *кухонная половина дома*

**ҠАҘАН ЙӘЙМӘҺЕ** (дим) *и.* әсе ҡамырҙан майҙа бешерелгән йәймә — *лепешка из кислого теста, сваренная в масле*

**ҠАҘАНЫҠ** (һаҡмар) *и.* ҡаҙанлыҡ — *кухня*

**ҠАҘАН КӘКЕРЕҺЕ** (арғаяш, әй) *и.* эремсек билмәне — *творожные вареники.* Ҡаҙан кәкереһен майлаптырып ашайһың аны (әй). Ҡаҙан кәкереҫе (дим)

**ҠАҘАНЛАТЫП** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡаҙан тултырып — *наполнив котел.* Итте ҡаҙанлатып һала ла һалмалап бешерә

**ҠАҘАН ӨЙӨ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡаҙанлыҡ — *кухня*

**ҠАҘАНСЫҠ** (урта урал) *и.* ҡылыслы бәләкәй ҡаҙан — *казанок*

**ҠАҘАН ТӘКӘҪЕ** (дим) *и.* эремсек билмәне — *творожные вареники*

**ҠАҘАРМА** (төньяҡ-көнбайыш) *и. землянка.* Ҡаҙармаҙа ғына тора иҙе Мөьмин ҡарт

**ҠАҘАРЫЛЫУ I** (мейәс) *ҡ.* 1. Ҡаҙалыу — *впиваться.* Дәнемә талпан ҡаҙарылды. 2. Баш ҡалҡытмай нимәлер эшләп ултырыу — *уткнуться*

**ҠАҘАРЫЛЫУ II** (урта) *ҡ.* хәтерен ҡалдырыу — *обидеть.* Ҡаҙарылып әрләй

**ҠАҘАУ I** (мейәс) *и.* ҡаяу — *жало (пчел, ос и т. д.)*

**ҠАҘАУ II** (урта) *ҡ.* баҫыу, тегеү — *пришивать.* Йеләнкә ҡаҙайһың тәнкәне ике йаҡлап

**ҠАҘАУҘАУ** (арғаяш, мейәс) *ҡ.* ерҙең ҡыртышын алыу — *снятие дерна.* Салауат ҡаҙауҙауҙа йата ла (арғаяш)

**ҠАҘАУ: ҠАҘАУ ЙЕР** (арғаяш) *и.* сиҙәм — *целина*

**ҠАҘАУ: ҠАҘАУ ҺҮҘ** (урта) *и.* 1. Ауыр һүҙ — *грубое слово.* Ҡаҙау һүҙ әйтә йөрәккә. 2. (дим) Төртмә һүҙ — *колкое слово*

**ҠАҘ БАЛАҺЫ** (урта) *и.* ҡаҙ бәпкәһе — *гусенок.* Ҡаҙ балаҫы (дим), ҡаҙ баласы (ҡариҙел)

**ҠАҘБАУЫР: ҠАҘБАУЫР БОЛОТ** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *и.* йоҡа сыбар болот — *перистые облака*

**ҠАҘ БИПЕЙЕ** (ҡариҙел) *и.* ҡаҙ бәпкәһе — *гусенок*

**ҠАҘ БОРСАҒЫ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* сысҡан борсағы — *мышиный горошек*

**ҠАҘҒАНАТҠА: ҠАҘҒАНАТҠА УТЫРТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* арпа көлтәләрен өйөү төрө — *один из видов складывания снопов ячменя.* Ҡаҙға утыртыу (мейәс)

**ҠАҘ-ҒОШ** (дим, урта) *и.* ҡош-ҡорт — *живность*

**ҠАҘҘАУ** (әй) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *впервые вставать на ножки (о ребенке).* Малайың ҡаҙҙай баштаған икән

**ҠАҘНА I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* эскәмйә — *скамья.* Ҡаҙнаҡ (ҡариҙел)

**ҠАҘНА II** (дим) *и.* нигеҙ — *основание, фундамент.* Мис ҡаҙнаҫы

**ҠАҘНА III** (көнсығыш диалект, эйек) *и.* яңаҡ — *челюсть*

**ҠАҘНА IV** (урта) *и.* утлыҡ — *ясли (для скота)*

**ҠАҘНАҠ** (ҡариҙел, әй) *и.* ҡаҙна — *облицовка нар.* Ҡаҙнаҡ буйҙап ҡаҙҙай баштаған ҡыҙы (әй). Ҡаҙналыҡ (арғаяш)

**ҠАҘ ТЕШЕ** (дим) *и.* тары һоҫланы — *суслон просяных снопов*

**ҠАҘ ТӘПЕЙЕ** (һаҡмар) *и.* ҡаҙ үләне — *лапчатка гусиная.* Ҡаҙ тәпейе (төньяҡ-көнбайыш)

**ҠАҘ ТӘПӘЙЕ** (дим) *и.* кәзә һаҡалы — *козлобородник*

**ҠАҘ ҮЛӘНЕ** (дим, ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* күгүлән, бәпкә үләне — *спорыш*

**ҠАҘЫЙАЛ** (көнсығыш диалект, туҡ-соран) *и.* йылҡының ял ҡаҙыһы — *подгривное сало лошади.* Ҡапҡан һайын ҡаҙыйал эләкмәй (ҡыҙыл)

**ҠАҘЫҠ** (урта) *и.* аҫҡаҡ — *кол, на который вешают посуду при приготовлении пищи на открытом огне.* Биҙрәне ҡаҙыҡҡа аҫҡансы утыным йанып бөтә йаҙҙы

**ҠАҘЫҠБАҒАНА** (ҡариҙел) *и.* ҡаҙыҡ — *кол*

**ҠАҘЫР: ҠАҘЫР ТӨНӨ АСЫЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* ҡәҙер төнө асылыу — *сильное свечение неба ночью за*

*день до праздника уразы (объясняется падением крупной кометы)*

**ҠАҘЫСӘЙ** (дим) *и.* һөтлө билсән — *осот белый.* Ҡаҙ чәйе (төньяҡ-көнбайыш)

**ҠАЖАЛ** (эй) *и.* текә яр — *обрыв.* Шунда ҡажалға төшкәндәрҙер, тей

**ҠАШҠЫЛТАУ** (урта) *ҡ.* быжҡылдау — *крякать.* Үрҙәкләрең ҡажҡылтап ҡолаҡты тондорҙо

**ҠАЖЫНЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* тырнаныу — *чесаться.* Кеше алдында ҡажынып тормаһаң (эй)

**ҠАЖЫУ I** (ырғыҙ) *ҡ.* мыжыу — *ворчать.* Йуҡты ҡажыйһың да ултыраһың, ул һиңә оронмай, зыйаны теймәй

**ҠАЖЫУ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* әрсеү — *обчищать.* Бәрәңге ҡажыу (гәйнә)

**ҠАҘАЛМА** (ҡариҙел) *и.* текмә — *частокол*

**ҠАЗБАЛА** (гәйнә) *и.* ҡаҙ бәпкәһе — *гусенок.* Ҡаз баласы (ҡариҙел)

**ҠАҘҒА: ҠАЗҒА УТЫРТЫУ** (гәйнә) *ҡ.* 20—25 көлтәнән кәбән һалыу — *стоговать 20—25 снопов*

**ҠАЗ-ҠАЗ ИТЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *впервые вставать на ножки (о ребенке)*

**ҠАЗЛАП ТОРОУ** (урта урал) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *впервые вставать на ножки (о ребенке).* Белеки бала ҡазлап тора

**ҠАҘНАҠ II** (ҡариҙел) *и.* утлыҡ — *ясли (для скота)*

**ҠАЗ ЧЕБЕНЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ләпәкәй — *мошка*

**ҠАЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта) *а.* ҡайһы — *который, какой.* Ҡай йаҡта йөрөнөң? (дим). Ҡай ауыллар? (урта)

**ҠАЙА I** (туҡ-соран) *и.* ҡаяу — *жало (пчел, ос и т. д.).* Ҡорт ҡайаһы

**ҠАЙА II** (төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта) *а.* ҡайҙа — *куда.* Ҡайа бараҫын? Ҡайан беләҫең? (туҡ-соран)

**ҠАЙАҘ** (урта урал) *и.* моҙға — *лукошко.* Ике ҡайаҙ йеләк жыйҙы апайың (урта урал). Ҡайаҫ (арғаяш), ҡайаһ (салйоғот)

**ҠАЙАЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* күбеү, ташыу — *распухнуть.* Сәйҙән эс китте ҡайалып

**ҠАЙАУ** (һаҡмар) *и.* биҙәк — *узор.* Сынайағым ун ике йерҙән ҡайаулы

**ҠАЙАҺЫҘ** (мейәс) *с.* хаяһыҙ — *бесстыжий.* Ҡайаһыҙ кешеләр беҙҙә лә йуҡ тиһеңмә

**ҠАЙҒЫЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* ҡайғырыу — *переживать.* Улы уҡый киткәнгә лә ҡайғылана

**ҠАЙҒЫРЫУ** (мейәс, урта, эй) *ҡ.* ҡайғыртыу, уйлау — *заботиться, думать.* Ҡайғырып та бирмәйҙәр (мейәс). Аны ҡайғырамы ней ул (урта)

**ҠАЙҘА** (эйек-һаҡмар) *р.* ярай ҙа — *хорошо, что...; хорошо если...* Аға эшкенгән тирмәне буһа ғайҙа

**ҠАЙЖАУ** (урта урал) *ҡ.* әрсеү — *очищать.* Тилерлоҡның төбөндәге шалҡан кебеген ҡайжап ашыйлар

**ҠАЙҠА** (ҡариҙел) *р.* һоноҡ — *откинутый назад (о косе).* Ҡайҡа ултыртылған салғы. Ҡайҡы (дим)

**ҠАЙҠАЛАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Ҡайҡайыу — *выгибаться.* Балаһы ҡайҡалап тороп үсегә (ҡыҙыл). 2. (урта) Ҡуҡырайыу — *зазнаться*

**ҠАЙҠАЛАТА: ҠАЙҠАЛАТА БАҪЫП** (ырғыҙ) *р.* күкрәкте киреп — *выпячивая грудь.* Нәсимә, һәр ваҡыттағы кеүек шайарып көлөп, ҡайҡалата баҫып килеб инде

**ҠАЙҠАЛАШЫУ** (урта) *ҡ.* ҡыланыу, борғоланыу — *кривляться*

**ҠАЙҠАНЛАТЫП** (урта) *р.* борғоландырып — *кривляя (плечом).* Иңбаштарын ҡайҡанлатып бер нисә аҙым түргә атланы

**ҠАЙҠЫЙ** (һаҡмар) *с.* 1. Һоноҡ — *откинутый назад (о косе).* Ҡайҡый салғы. 2. (эйек-һаҡмар) Дуғаланып торған — *выгнутый.* Ҡайҡы билле ат

**ҠАЙҠЫ: ҠАЙҠЫ ТАНАУ** (дим) *и.* йәмшек танау — *сплюснутый нос*

**ҠАЙЛА** (арғаяш) *и.* итте турап һалып бешерелгән аш — *суп с нарубленным на кусочки мясом*

**ҠАЙМАҠ: ҠАЙМАҠ БАҪЫУ** (мейәс) *ҡ.* май яҙыу — *сбивать масло.* Ҡаймаҡ килеү *(ҡырпаҡ ҡар төшөү) — порошить (о первом снеге)*

**ҠАЙМАҠ МАЙЫ** (урта) *и.* аҡ май — *сливочное масло*

**ҠАЙМИКӘ** (арғаяш, гәйнә) *и.* ҡәйенбикә — *свояченица (старшая сестра жены).* Ҡаймикәһе ҡунаҡҡа кигән икән (арғаяш). Ҡәймикә (гәйнә)

**ҠАЙНА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйнә — *свекровь.* Хәзер бит ҡайнаны йаратмыйлар (төньяҡ-көнбайыш)

**ҠАЙНАҒА** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *и.* килендең иренән оло ир кешеләргә өндәшеү һүҙе — *форма обращения невестки к мужчинам старше мужа*

**ҠАЙНАҒАЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйнеш — *деверь (младший брат мужа)*

**ҠАЙНАНА, ҠАЙНАНАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡәйнә — *свекровь.* Ҡайнаней (гәйнә). 2. Ҡәйнә — *теща*

**ҠАЙНАТА** (дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡайны — *свекор*

**ҠАЙНАУ I** (ҡыҙыл) *и.* шаршы — *перекат (на реке)*

**ҠАЙНАУ II** (урта) *с.* беше, ҡаты — *плотный.* Ҡайнау ағас

**ҠАЙНЕНЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйнеш — *шурин (младший брат жены)*

**ҠАЙНИГӘЧ, ҠАЙНЫҒАЧ, ҠАЙЫНГӘЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйенбикә — *свояченица (старшая сестра жены)*

**ҠАЙНТУТА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйенбикә — *золовка (старшая сестра мужа)*

**ҠАЙНЫҒА** (минзәлә) *и.* ҡайнаға — *старший брат мужа*

**ҠАЙНЫМ** (ҡыҙыл) *и.* иренең йәки ҡатынының атаһынан оло ир кешегә өндәшеү һүҙе — *форма обращения невестки или жениха к мужчинам старше отца.* Ҡайным тирмәндән ҡайтманымы әле?

**ҠАЙНЫҺЫ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *а.* 1. Ҡайһы — *который.* 2. (эйек-һаҡмар) Ҡайһыныһы — *некоторый.* Ҡайныһы әсминник сәсә, ҡайныһы дисәтинә

**ҠАЙНЫШ, ҠАЙНЕШ, ҠАЙНИШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйнеш — *шурин (младший брат жены); деверь (младший брат мужа).* Ҡайныш (минзәлә)

**ҠАЙРАҠ: ҠАЙРАҒ ИКМӘК** (көнсығыш диалект, нөгөш, урта, ырғыҙ) *и.* бысым икмәк — *неудав-*

*шийся сырой, тяжелый хлеб.* Икмәгем ҡайраҡ булған (урта). Ҡайраҡ ипей (минзәлә)

**ҠАЙРАҠЛАНЫУ** (дим, ҡариҙел, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡайраҡ булыу — *быть сырым, тяжелым (о неудавшемся хлебе).* Ҡайраҡтаныу (әй). Бөгөн икмәгем ҡайраҡтанған, башы килешмәгән ахры

**ҠАЙРАҠТАНЫУ** (әй) *ҡ.* 1. Ҡатыу, бысраныу — *пачкаться.* 2. Күнегеү — *привыкать.* Ул андыйға ғына ҡайраҡтанған инде

**ҠАЙРАҠШЕШ** (һаҡмар) *и.* ҡаты шеш — *твердая опухоль*

**ҠАЙРАМ** (мейәс, көньяҡ диалект, урта урал) *и.* һыуһын — *передышка.* Бер ҡайрам бесән саптыҡ (эйек-һаҡмар). Бер ҡайрам эштәб алайыҡ (урта урал). Бер ҡайрам эшләп ҡайттым (һаҡмар). ◊ Ҡайрам ҡандырыу (мейәс) эш араһында ял итеү — *отдыхать между делом*

**ҠАЙРЫ** (ҡыҙыл, әй) *и.* ҡайыр — *корье (снятая кора).* Күб итеп тал ҡайры апҡайттыҡ (әй). Ҡайыры (эйек-һаҡмар)

**ҠАЙСЫ** (салйоғот) *и.* йәмкә — *щипцы (для угля)*

**ҠАЙСЫЛЫ** (дим) *с.* асалы — *развилистый*

**ҠАЙСЫ, ҠАЙҪЫНЫҺЫ** (урта) *а.* ҡайһы — *который.* Йәрҙе һөйһәң йәр күп тә ул, мехәпәтһеҙ ҡайҫыһы *(халыҡ йыры)*

**ҠАЙТА I** (көнсығыш диалект, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* тапҡыр — *раз.* Бөгөн буранды гөн буһа ла өс ҡайта бесән алдым (ҡыҙыл). Ик-өс ҡайта йаҙа ул өйгә эшен (ырғыҙ)

**ҠАЙТА II** (ҡыҙыл, һаҡмар) *р.* 1. Киреһенсә — *наоборот.* Балта оҫталары ҡайта күбәйҙе (ҡыҙыл). Мында ҡайта эрәхәт (һаҡмар). 2. (урта) Яңынан — *снова.* Йабынһам, ҡайта йоҡлайым

**ҠАЙТА-ҒАЙТА** (ҡыҙыл, әй) *р.* ҡабат-ҡабат — *неоднократно.* Ҡайта-ғайта әйттем тей (ҡыҙыл)

**ҠАЙТАЛАЙ** (арғаяш, ҡыҙыл) *р.* 1. Ҡайтышлай — *на обратном пути.* Ҡайталай миңә тейәрһең (арғаяш). 2. (ҡыҙыл) Ҡабаттан, башҡаса — *повторно, снова, в другой раз.* Ҡайталай килебөрөмә

**ҠАЙТАЛАП** (мейәс) *р.* ҡабаттан — *снова.* Ҡайталап килде

**ҠАЙТАЛЫУ** (дим, урта) *ҡ.* йөҙө ҡайтарылыу — *затупиться (о лезвии кос, ножей)*

**ҠАЙТАРМЫШ** (урта) *и.* ҡаршы бирелгән бүләк — *ответный подарок*

**ҠАЙТАРЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Кире ҡағыу — *отбить.* Күмәктәгән — йау ҡайтарған. 2. Яуап биреү — *отвечать.* Урысса арҙы-бирҙе беләм, тик ҡайтара ғына белмәйем (ҡыҙыл)

**ҠАЙТАУАННАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡайтып-ҡайтып тороу — *часто ездить домой*

**ҠАЙТАУЛАУ** (урта) *ҡ.* кире ҡайтыу — *раздумать.* Үҙ уйынан тағы ла ҡайтауланы

**ҠАЙТАУЫЛДАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* ҡабат-ҡабат ҡайтыу — *возвращаться несколько раз.* Артыбыҙҙан сығып ҡарап ҡалма, кеше ҡайтауылдай (ҡыҙыл)

**ҠАЙТАУЫЛДАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һөйләшеп килешеп бөткәндән һуң кире ҡайтыу — *передумать после соглашения*

**ҠАЙТМАҠАЙ** (дим, ҡариҙел) *с.* үҙгәреүсән — *непостоянный.* Ҡайтмаҡай геше (дим)

**ҠАЙТМАЛЫ** (дим) *с.* кенә тотмаусы — *незлопамятный.* Әйтеп ҡайтмалы

**ҠАЙТЫМҺАҠ** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *с.* кенә тотмаусы — *незлопамятный.* Бәғезе берәү әйтемһәк тә ҡайтымһаҡ (ҡыҙыл). Ҡайтымһаҡ ул Хөснулхаҡ, оҙаҡ ҡыуалатып йөрөмәй (һаҡмар)

**ҠАЙТЫУ: ЙӨҘӨ ҠАЙТЫУ** (урта) *ҡ.* йөҙө ҡайтарылыу — *затупиться (о лезвии кос, ножей).* Әйләңкәнсе салғының йөҙө ҡайта

**ҠАЙҺЫНДАЙ** (ҡыҙыл) *р.* ҡалай — *как, каким образом*

**ҠАЙҺЫНЫҺЫ** (ҡыҙыл, салйоғот) *а.* ҡайһы — *который*

**ҠАЙШАЛАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* тартышыу — *упорствовать*

**ҠАЙШАНДАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Арт һанды яҡ-яҡҡа борғолау — *покачивать крупом.* Был ат арыны шикелде, ҡайшандай баштаны (ҡыҙыл). 2. (көнсығыш диалект) Тартышыу — *упорствовать.* Шул кеше ҡайшандамаһа ине йомош ҡушҡас (ҡыҙыл). 3. (әй) Кирегә бороу — *изменить в нужном направлении (напр. разговор)*

**ҠАЙЫ** (мейәс) *а.* ҡайһы бер — *некоторый.* Ҡайын иҫемә аламайым

**ҠАЙЫҘ** (көнсығыш диалект, нөгөш, урта) *и.* 1. Ҡайыр — *корье (снятая кора).* Ҡара тал ҡайыҙы (нөгөш). 2. (төньяҡ-көнсығыш) Моҙға — *лукошко*

**ҠАЙЫҘЛАМА** (дим) *и.* һалабаш — *лыко.* Атайым менән күлгә ҡайыҙлама батырып ҡайттыҒ әле

**ҠАЙЫҘЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* әрсеү — *очищать.* Ҡайызлау, ҡайыжлау (гәйнә). Картука ҡайыжлау

**ҠАЙЫМНАШЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* телләшеү — *пререкаться.* Гел генә ҡайымнашыр ҙа йөрөр шул

**ҠАЙЫНАПА** (дим) *и.* ҡәйенбикә — *золовка (старшая сестра мужа)*

**ҠАЙЫН БАЛЫ** (арғаяш, дим) *и.* ҡайын һыуы — *березовый сок.* Күб итеп ҡайын балы апҡайтҡандар апайымдар (арғаяш)

**ҠАЙЫН БЕСЕКӘЙЕ** (салйоғот) *и.* ҡайын бөрөһө — *березовая почка*

**ҠАЙЫНГӨЛ** (ҡариҙел) *и.* һары ҡына — *недотрога (цветок).* Ҡайынгөлөгөҙ күб икән

**ҠАЙЫН ИТЕ** (көнсығыш диалект) *и.* ҡайын сөсөгө — *березовый камбий*

**ҠАЙЫН ИТТӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡайын итен ҡырып алыу — *соскребать березовый камбий*

**ҠАЙЫНИЕҘНӘ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* иренең апаһының ире — *супруг старшей сестры мужа*

**ҠАЙЫН ЙЕЛЕГЕ** (эйек) *и.* ҡайын сөсөгө — *березовый камбий*

**ҠАЙЫНЙЕҢГӘ** (көнсығыш диалект) *и.* ҡәйенйеңгә — *жена старшего брата мужа или жены*

**ҠАЙЫН КИМЕГЕ** (мейәс, әй) *и.* ҡайын сөсөгө — *березовый камбий.* Ҡайын кимеге тәмде генә була (әй)

**ҠАЙЫН ҠАЙЫРЫ** (һаҡмар) *и.* күшкә — *березовый луб*

**ҠАЙЫН ЛАЙЛАҺЫ** (урта) *и.* ҡайын сөсөгө — *березовый камбий*

**ҠАЙЫН МАЙЫ** (арғаяш, мейәс) *и.* ҡайын һыуы — *березовый сок*

**ҠАЙЫНМӘШКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡайын бәшмәге — *чага.* Ҡайын мәшкәсе (ҡариҙел)

**ҠАЙЫНСАР** (гәйнә) *и.* ҡайынлыҡ — *березняк*

**ҠАЙЫН СӘЙЕ** (ҡариҙел) *и.* ҡайын бәшмәге — *чага*

**ҠАЙЫН ТӨЧӨГӨ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡайын сөсөгө — *березовый камбий.* Ҡайын чөчөгө (гәйнә)

**ҠАЙЫН ҺУТЫ** (һаҡмар) *и.* ҡайын һыуы — *березовый сок*

**ҠАЙЫН ШЕБЕШЕ** (урта) *и.* ҡайын бәшмәге — *чага*

**ҠАЙЫН ШЕШКЕҪЕ** (дим) *и.* ҡайын бәшмәге — *чага*

**ҠАЙЫНӘТӘЙ** (дим) *и.* ҡайны — *свекор*

**ҠАЙЫР I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡабыҡ — *кожура.* Бәрәңге ҡайыры

**ҠАЙЫР II** (эйек) *с.* көслө — *выносливый.* Йәшләр ҡайыр була

**ҠАЙЫРҒЫ** (мейәс) *и.* ҡайырғыс — *крутило (для затягивания воза)*

**ҠАЙЫРМА** (дим) *и.* текмә — *частокол.* Бер аҙ бөгөн ҡайырма ҡайырҙым әле

**ҠАЙЫРТ** (мейәс) *и.* ҡайын сөрөгө — *березовая гнилушка*

**ҠАЙЫРЫЛЫУ** (һаҡмар, әй) *ҡ.* ылығыу — *льнуть.* Үҙеңә ҡайырылғаны була, ҡайырылмағаны була (һаҡмар). Ул миңә ҡайырылмай (әй)

**ҠАЙЫРЫЛЫШ** (урта) *р.* 1. Урау — *далеко.* 2. *с.* урау — *круговой, окружной.* Йулы ҡайырылыш. 3. *р.* ҡырын — *боком.* Өҫтәлгә ҡайырылыш ултырма

**ҠАЙЫРЫУ** (арғаяш, дим, әй) *ҡ.* 1. Шаҡарыу — *прикрутить вожжи, поводья лошади.* 2. (дим, урта) Текмә тотоу — *делать изгородь из деревянных прутьев.* Текмә ҡайырыу (дим)

**ҠАЙЫҪҠАҠ, ҠАЙЫҪМАҠ** (арғаяш, салйоғот) *и.* йәш баланың лепкәһендәге ҡауаҡ — *корочка на темени новорожденного*

**ҠАЙЫҪМАҠ** (мейәс) *и.* ҡаҫмаҡ, һөт өҫтө — *пенка*

**ҠАЙЫУ I** (мейәс) *ҡ.* 1. Ҡаймалау — *окаймлять.* Әбейҙәр, камзулды ҡайып кейәләр. 2. Һөрөлгән баҫыуҙың ситен арҡыры һөрөп сығыу — *поперечная вспашка краев вспаханного поля*

**ҠАЙЫУ II** (салйоғот) *и.* ҡыҙыл буҫтау — *красное сукно*

**ҠАЙЫҺҠАҠ** (арғаяш, салйоғот) *и.* ҡауаҡ — *перхоть.* Ҡайыхҡаҡ (арғаяш)

**ҠАЙЫШАЙАҠ** (арғаяш) *и.* бапаҡ — *бука (которой пугают детей)*

**ҠАЙЫШҠАҠ** (дим, ҡыҙыл, мейәс, ырғыҙ) *с.* 1. Бысым, уңмаған — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* Әпәйем ҡайышҡаҡ буған (мейәс). Икмәгем уңманы, әйтәгүр, эрзиңкә һымаҡ ҡайышҡаҡ булып беште (ырғыҙ). 2. (ҡыҙыл, мейәс, әй) һығылмалы — *гибкий.* Селек сөй ҡайышҡаҡ була, һынмай (ҡыҙыл). 3. (әй) Артҡа ҡайтҡайып илаусан — *имеющий привычку плакать, выгибаясь назад.* Балаһы бигерәк ҡайышҡаҡ

**ҠАЙЫШҠАН** (салйоғот) *с.* беше — *крепкий (о дереве).* Ҡайышҡан ағас

**ҠАЙЫШ САЙҘАУЫ** (салйоғот) *и.* ҡайыш тимере — *железная пряжка ремня*

**ҠАЙЫШЫУ I** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡалйыу — *коробиться.* 2. Эйелеү, ҡыйшайыу — *гнуться.* Иҙән бер йаҡҡа ҡайышҡан

**ҠАЙЫШЫУ II** (дим) *ҡ.* көҙән йыйырыу — *сводить судорогой*

**ҠАЙЫШЫУ III** (урта урал) *ҡ.* ҡайҡайыу — *выгибаться.* Ҡыҙы ҡайышып йылай

**ҠАҠ I** (гәйнә) *и.* туңғалаҡ — *мерзлота.* Көзгө ҡаҡ

**ҠАҠ II** (арғаяш) *и.* юшҡын — *накипь*

**ҠАҠАЙ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта урал) *и.* ҡаҙ — *гусь (в детской речи).* Әнә, ҡаҡай гилә (әй). Ҡаҡаҡ (һаҡмар)

**ҠАҠАЙ II** (әй) *с.* ҡупырт — *чванливый*

**ҠАҠАЙ БАСУ, ҠАҠАЙ БАҪЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *впервые вставать на ножки (о ребенке).* Ҡаҡай басыу, ҡаҡай баҫыу (ҡариҙел)

**ҠАҠАЙ ТОРОУ** (ҡариҙел) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *впервые вставать на ножки (о ребенке)*

**ҠАҠАЙЫУ I** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* бысраныу — *пачкаться*

**ҠАҠАЙЫУ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ҡатыу — *зачерстветь.* Әпәкәйең ҡаҡаймасын

**ҠАҠАЙЫУ III** (ҡыҙыл, урта урал, һаҡмар) *ҡ.* башты артҡа ташлау — *закидывать голову.* Алар ҡаҡайа ғарап китә (һаҡмар)

**ҠАҠАҠ** (ҡариҙел) *и.* кәкәй — *бяка*

**ҠАҠАЛАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* төйөлөү — *подавиться.* Ҡаҡалыу (һаҡмар)

**ҠАҠАУҘАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* ҡауаҡлау — *шелушиться (о перхоти).* Аның таҙы ҡаҡауҙап киткән (ҡыҙыл)

**ҠАҠАҢНАУ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* суҡандау — *вертеться.* Ҡаҡаңнапбутырмәле (ҡыҙыл)

**ҠАҠАШ** (урта) *и.* әрпеш — *неряха*

**ҠАҠБӘЛЕШ** (гәйнә) *и.* өйөлгән сәк-сәк — *чак-чак, собранный в кучу.* Чәк-чәкне йәбештереп патмусҡа үйәләр, ҡаҡбәлеш була, шуны кодаларға апаралар

**ҠАҠЙАШЫҠЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* шаярыу — *балагурить.* Ошо буһа ҡаҡйашыҡланыб алыр ҙа утырыр

**ҠАҠҠЫС I** (арғаяш, дим, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш) *и.* етен тәрәшләүес — *льночесалка*

**ҠАҠҠЫС II** (ҡариҙел) *и.* бал ҡыуғыс — *медогонка*

**ҠАҠАЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* бушҡа ваҡыт үткәреү — *бездельничать*

**ҠАҠЛЫҒЫУ I** (ырғыҙ) *ҡ.* ныҡ арыу, йонсоу — *переутомляться.* Көнө буйы арбала йөрөп ҡаҡлыҡтым

**ҠАҠЛЫҒЫУ II** (урта) *ҡ.* вафат булыу — *скончаться.* Шулай тиҙ генә ҡаҡлыҡты

**ҠАҠМА ИЛӘК** (мейәс) *и.* ваҡ иләк — *сито с мелкой сеткой*

**ҠАҠМАҠ** (ҡыҙыл) *и.* үңәҙ, ҡаҫмаҡ — *плесень*

**ҠАҠМАЧ** (гәйнә) *с.* ҡаҡса — *сухощавый.* Ҡаҡмыш (төньяҡ-көнбайыш)

**ҠАҠМАШ** (дим, салйоғот, әй) *с.* бысраҡ — *грязный; неряшливый.* Ҡаҡмаша (мейәс)

**ҠАҠМАШЫУ** (урта, әй) *ҡ.* ҡаҡашыу — *сильно загрязняться*

**ҠАҠМЫШ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ҡаҡса — *сухощавый.* Минең кебек ҡаҡмыш (ҡариҙел)

**ҠАҠРАЙЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* кәпрәйеү — *важничать.* Ҡапрайыу (эй)

**ҠАҠСАЛҠАН** (һаҡмар, ырғыҙ) *р.* салҡан — *навзничь.* Ҡаҡсалҡан төшөп йоҡлап йата (һаҡмар)

**ҠАҠҪАН** (мейәс, төньяҡ-көнбайыш, эй) *с.* ҡаҡса — *сухощавый*

**ҠАҠСИРАҠ** (кариҙел, урта урал) *и.* сираҡ — *голень*

**ҠАҠСЫР I** (урта урал) *и.* ҡаҡ һайғау — *сухая жердь.* Кәбәнгә ҡаҡсыр ҡуйҙығыҙма?

**ҠАҠҪЫР II** (һаҡмар) *и.* ырҙын — *гумно*

**ҠАҠСЫР III** (мейәс) *и.* 1. Тары киптереү ҡыҫаһы — *деревянное приспособление для сушки проса.* 2. (арғаяш, мейәс) Ишек алдына һауыт-һаба элеп киптереү өсөн ҡағылған саталы бағана — *кол с развилкой, поставленный во двор для сушки посуды*

**ҠАҠСЫРҒАҠ** (кариҙел) *и.* айыуға һөжүм итеү өсөн эшләнгән асалы ағас — *рогатина для охоты на медведя*

**ҠАҠСЫУ** (дим, эй) *ҡ.* ҡаҡлығыу — *отскакивать.* Санабыҙ ҡаты ҡарға бәрелеп ҡаҡсып китте (эй)

**ҠАҠҪЫ** (урта урал) *и.* ҡаҙы — *домашняя колбаса из конского сала*

**ҠАҠТАЙ** (төньяҡ-көнсығыш) *р.* ҡоролай — *всухомятку.* Ҡаҡтай ашама (салйоғот)

**ҠАҠТАУ** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *ҡ.* ас тотоу — *морить голодом.* Ашатмай ҡаҡтап бөттөләр малды (мейәс)

**ҠАҠТОҘ** (урта) *и.* таш тоҙ — *каменная соль*

**ҠАҠТЫ I** (арғаяш) *и.* сыйырсыҡ ояһы — *скворечник*

**ҠАҠТЫ II** (ҡыҙыл) *с.* белдекле — *толковый*

**ҠАҠ ҺӨЙӘК** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* сираҡ — *голень*

**ҠАҠҺЫҒАН** (көнсығыш диалект) *с.* 1. Еҫләнгән — *затхлый.* Ҡаҡһыған бал (эй). 2. Ныҡ кипкән — *сильно высохший.* Көбө ҡаҡһыбөткән (ҡыҙыл)

**ҠАҠҺЫҘ** (ҡыҙыл) *с.* белдекһеҙ — *бестолковый*

**ҠАҠЧА** (гәйнә) *с.* ас — *голодный.* Ҡаҡча торан, хәлең йуҡ

**ҠАҠЧЫР** (гәйнә) *с.* ҡаҡса — *сухощавый*

**ҠАҠШАЛЫУ** (дим, ҡыҙыл, урта) *ҡ.* 1. Ныҡ арыу, йонсоу — *переутомляться.* Тәнем ҡаҡшалды (дим). 2. Ҡаҡшау — *измотаться.* Бик ҡаҡшалтым һуғыш дәүерентә (урта). 3. (төньяҡ-көнсығыш) Һаулыҡ бөтөү — *потерять здоровье.* 4. Ҡартайып хәлдән тайыу — *одряхлеть*

**ҠАҠШАР, ҠАҠШЫР** (кариҙел) *и.* 1. Айыуға һөжүм итеү өсөн эшләнгән асалы ағас — *рогатина для охоты на медведя.* 2. Һалдау — *острога*

**ҠАҠШАУ I** (кариҙел) *ҡ.* ҡаушау — *растеряться.* Ҡаҡшадым да төштөм

**ҠАҠШАУ II** (кариҙел) *ҡ.* иреп кәмей башлау — *убавляться от таяния (о снеге).* Ҡарлар ҡаҡшаған барам

**ҠАҠЫ ЙАПРАҒЫ** (дим) *и.* урман ҡаҡыһы — *лесная свербига*

**ҠАҠЫЙ-СУҠЫЙ** (кариҙел) *р.* ашығыс — *спешно, как попало.* Аҡсаны ҙа ҡаҡый-суҡый сутлайым

**ҠАҠЫЛДАУ** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *ҡ.* 1. Таҡылдау —*беспрерывно, много говорить.* Нисаҡты ҡаҡылдайһың, һис ишетмәй (ҡыҙыл). 2. (көнсығыш диалект) Ҡаңғылдау — *гоготать (о гусях).* Ҡаҙҙар ҡаҡылдаша

**ҠАҠЫРАЙЫУ** (урта) *ҡ.* күкрәген киреү — *выпячивать грудь.* Ҡаҡырайып ҡарап тороп тора

**ҠАҠЫР-ШАҠЫР** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* сүпсар — *мусор.* Урамында ҡаҡыр-шаҡыр тулып йата (эй)

**ҠАЛА** (көнсығыш диалект) *б.* һуң — *после.* Һинән ҡала аларҙа кем булды? (салйоғот)

**ҠАЛАБАТ** (кариҙел) *с.* тупаҫ — *грубый.* Алар ҡалабат ҡыналар, тупаслар

**ҠАЛАЙ** (кариҙел, туҡ-соран) *и.* икмәк тимере — *железная форма (для выпечки хлеба).* Ҡалай әтәс (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) һауалы — *высокомерный*

**ҠАЛАЙҘАУ** (эй) *ҡ.* мисәтләү — *опечатывать.* Ҡорттар ырамды ҡалайҙап ҡуйғандар

**ҠАЛАЙТЫП** (көнсығыш диалект, туҡ-соран, урта, һаҡмар) *р.* нисек итеп — *каким образом.* Ураҡ салғы беләң ҡалайтып сапҡандар? (ҡыҙыл). Фыронтта беҙҙең иптәшләр ҡан ҡойғанда ҡалайтып сыҙап утырмаҡ кәрәк (урта)

**ҠАЛАЙҠАПҠА** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* башы ябыулы ҙур таҡта ҡапҡа — *крытые большие дощатые ворота.* Ҡалиҡапҡа (кариҙел, төньяҡ-көнбайыш)

**ҠАЛАЙТ-ҪАЛАЙТ** (дим) *р.* теләһә нисек — *как попало.* Ҡалайт-ҫалайт йөрөй. Ҡалайт-салайт (кариҙел), ҡалайт-һалайт (эй)

**ҠАЛАЙ ТӘҢКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өрфөйә — *выгнутая железная монета*

**ҠАЛАҠ I** (дим, урта) *и.* 1. Ҡорт ҡашығы — *берестяная ложка для вычерпывания пчел.* 2. (арғаяш, мейәс, салйоғот) Ағас ижау — *деревянный ковш.* 3. (урта) Балғалаҡ — *чайная ложка.* 4. (дим, урта) Мүк тыҡҡыс — *конопатка.* Мүк тығырға тип биш ҡалаҡ эшләб алдым (урта)

**ҠАЛАҠ II** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* мал тиреһен һыҙырыу ҡорамалы — *самодельная лопаточка (для снятия шкурки)*

**ҠАЛАҠ III** (мейәс) *и.* киндер һуҡҡанда күтәреү таҡтаһы — *деревянная пластинка для набирания узора (при браном тканье)*

**ҠАЛАҠ IV** (мейәс) *и.* морондоҡ — *намордник (для теленка)*

**ҠАЛАҠ V** (урта, салйоғот) *и.* ау энәһе — *игла для вязки сети*

**ҠАЛАҠАЙ** (арғаяш, мейәс) *и.* баланы тәү тапҡыр аяғына баҫып торорға өндәү һүҙе — *слово, призывающее ребенка впервые встать на ноги*

**ҠАЛАҠБАШ** (урта) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

**ҠАЛАҠБАШ ҺӨЙӘГЕ** (мейәс) *и.* ҡалаҡ һөйәге — *лопатка*

**ҠАЛАҠ КҮМӘСЕ** (дим) *и.* йомортҡаға аҙ ғына он туҡып бешерелгән күмәс — *вид булочки*

**ҠАЛАҠ ҠУЙҒЫС** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡашығаяҡ стенаһына ҡалаҡтар ҡыҫтырып ҡуйыу өсөн ҡағылған йоҡа таҡта йәки ағас — *планка, прибитая в стенке кухни для ложек*

**ҠАЛАҠ ҠЫҪТЫРҒЫС** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* ҡашығаяҡ стенаһына ҡалаҡтар ҡыҫтырып ҡуйыу өсөн ҡағылған йоҡа таҡта йәки ағас — *планка, прибитая к стене кухни для ложек*

**ҠАЛАҠЧӨЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сикәсөй — *чека (на оси телеги)*

**ҠАЛАТАУ** (гәйнә) *и.* бейек тау — *высокая гора*

**ҠАЛА ТОРОУ** (урта) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *впервые вставать на ножки (о ребенке)*

**ҠАЛАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* һалыу, өйөү — *сложить.* Тиҙәк, сытырҙарҙы усаҡҡа ҡалай ҙа мөрйә асырға Айбикәне көтә

**ҠАЛБЫР** (дим, эйек-һаҡмар) *с.* алабарман — *опрометчивый.* Ҡалбырҙың эше йалбыр (дим)

**ҠАЛБЫРҘАП ТОРОУ** (мейәс) *ҡ.* өлтөрәп тороу — *быть радушным.* Мин барһам апайым ништәргә белмәй ҡалбырҙап тора инде

**ҠАЛҒАЛ ТОРОУ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *впервые вставать на ножки (о ребенке).* Ҡалған тороу (урта)

**ҠАЛҒЫ** (дим) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок*

**ҠАЛҒЫУ** (ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* йоҡомһорап сайҡалып ултырыу — *клевать носом, дремать*

**ҠАЛДА** (урта) *и.* ялан кәртә — *загон*

**ҠАЛДАУ** (урта) *и.* ҡурпы — *отава*

**ҠАЛДАУ: ҠАЛДАУ МАЛ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* эре һөйәкле, ит ҡунмай торған мал — *крупнокостная, не мясной породы скотина*

**ҠАЛДЫҠ** (гәйнә) *с.* һуңғы, аҙаҡҡы — *последний, конечный.* Очта ҡалдыҡ ызбада тора

**ҠАЛЙА I** (гәйнә, дим, ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, һаҡмар) *и.* 1. Ашҡа йәки буҡҡаға турап бешерелгән ит, туң май, ҡарта — *мелко нарезанные куски мяса, сала, толстой кишки, сваренные в супе, каше.* Ҡалҡы, ҡалғы (дим), ҡалйы (арғаяш). 2. (дим, урта) Йылҡының елкә ите — *подгривное сало конины*

**ҠАЛЙА II** (һаҡмар) *и.* күстәнәс — *гостинец.* Киленеме, кеме бәпәйләһә, ҡотлау өсөн ҡалйа апара, ҡоймаҡ буһа ла ҡалйа була

**ҠАЛЙЫҒЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* кәйелеү — *виражировать (например, о птице)*

**ҠАЛЙЫУ I** (ҡыҙыл) *ҡ.* тайпылыу — *уклоняться.* Бер алға алған эштән ҡалйымайыҡ инде алай

**ҠАЛЙЫУ II** (эй) *ҡ.* йөҙө ҡайтарылыу — *затупляться (о лезвии кос, ножей).* Салғы йөҙө ҡалйыған

**ҠАЛҠА** (арғаяш, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, салйоғот) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок*

**ҠАЛҠАУҒЫЧ, ҠАЛҠАУЫЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок.* Ҡалҡауғыс (дим, мейәс), ҡалҡауыс, ҡалҡыусыҡ (мейәс)

**ҠАЛҠҠЫ** (мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок.* Ҡалҡы (дим, ҡыҙыл), ҡалҡма (дим, эй)

**ҠАЛҠМА** (дим, эй) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок.* Ҡалҡма ҡапыл һыуға батты (дим)

**ҠАЛҠЫБ УТЫРЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* түрҙән уҙыу — *пройти в передний угол.* Ҡалҡыб утыр, ҡоҙағый (арғаяш)

**ҠАЛҠЫМЫС** (ырғыҙ) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок.* Ҡалҡымыс шунда сумды ла гитте

**ҠАЛҠЫС I** (дим) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок*

**ҠАЛҠЫС II** (урта) *и.* ҡалҡыулыҡ — *возвышенность.* Ана, йуғары ос ҡалҡысына һалынған өйләр күренә. Ҡалҡыш (мейәс)

**ҠАЛҠЫС ҺӨЙӘГЕ** (урта) *и.* ҡалаҡ һөйәге — *лопатка*

**ҠАЛҠЫТҠЫС** (урта) *и.* ау ҡалҡыуысы — *поплавки невода*

**ҠАЛҠЫТМА** (мейәс) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок*

**ҠАЛҠЫШ** (мейәс) *с.* ҡалҡыу — *возвышенный.* Ҡалҡыш йер

**ҠАЛҠЫШЫУ** (мейәс) *ҡ.* ҡалҡыныу — *приподниматься*

**ҠАЛМА** (ҡыҙыл) *и.* 1. Алам-һалам — *старье.* Ҡалманды йый! 2. Тәртипһеҙлек — *беспорядок.* Өй ҡалма булып китте

**ҠАЛМАҠ ЙЫУАҺЫ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ялан йыуаһы — *лук степной*

**ҠАЛМАРЙЫН** (мейәс) *и.* юғары сортлы ҡыҙыл буҫтау — *кармазин*

**ҠАЛМЫШ** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡалыу — *остаться.* Үһәргән ҡарттың йатып ҡалмышы Үһәргән ауылында (һаҡмар). 2. *и.* ҡалдыҡ — *остаток.* Ҡалмышын үҙең ҡарайсың инде (төньяҡ-көнбайыш)

**ҠАЛМӘРГӘН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ҡәлмәргән — *скопа*

**ҠАЛПАҠ** (ҡариҙел) *и.* түбәсәй — *заглушка (самовара)*

**ҠАЛПАҠ: ҠАЛПАҠ АУЫҘ** (һаҡмар) *с.* оло ауыҙ — *большеротый*

**ҠАЛСАЙ ҮЛӘНЕ** (дим) *и.* күк сәскә — *василек*

**ҠАЛТА** (мейәс, һаҡмар) *и.* 1. Күн тоҡса — *кожаная сумка.* Ҡаҙаҡ килһә, ҡалтаһында бер нисә баш шул талҡан булыр ине (һаҡмар). 2. (ҡыҙыл) Күн һандыҡ — *кожаный сундук.* 3. (арғаяш) Кейәү күстәнәсен һала торған һауыт — *посудина для гостинец жениха.* 4. (урта) Һауыт — *посуда.* 5. (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) Кеҫә — *карман.* Өҫтәмә төшөм килер, ҡалта ҡалынайыр (урта)

**ҠАЛТА: ҠАЛЫН ҠАЛТАЛЫ** (мейәс) *с.* бай — *богатый*

**ҠАЛТАҠАЙ, ҠАЛТЫҠАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡалтағай — *лыжи, обитые шкурой.* 2. Ҡалдағай (урта). (гәйнә) Киң саңғы — *широкие лыжи*

**ҠАЛТАЙЫУ I** (дим) *ҡ.* алға сығып тороу — *выпирать.* Сағылдың маңғай һымаҡ алға ҡалтайып сыҡҡан йере

**ҠАЛТАЙЫУ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* терһәк төйөү — *расставить локти в стороны*

**ҠАЛТАНДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Баланың атларға тырышыуы — *попытка ребенка встать на ножки.* 2. (эй) Эшһеҙ арлы-бирле йөрөү — *слоняться без дела.* 3. Осоп-ҡалҡып барыу — *беспокоиться*

**ҠАЛТАСЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* Ҡалтасы — *Калтасы (название деревни)*

**ҠАЛТЫЛДАУ** (һаҡмар) *ҡ.* һелкенеү — *качаться (о половых досках).* Өйөнөң иҙәндәре ҡалтылдап йата

**ҠАЛТЫРАҠ** (ырғыҙ) *и.* ҡарындыҡ — *брюшина (для окна).* Борон тәҙерәгә ҡалтыраҡ ҡуйғаннар

**ҠАЛТЫРАУЫҠ** (урта) *и.* һиртмә — *журавль (колодца)*

**ҠАЛТЫРАШЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡалтырау — *дрожать.* Илай алмайым, киттем ҡалтырашып

**ҠАЛТЫРСА I** (ҡыҙыл) *и.* кереләәк сөрәгәй — *чирок-трескунок*

**ҠАЛТЫРСА II** (урта) *и.* ҡыҙыу — *вспыльчивый*

**ҠАЛТЫРЫШ I** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* эре һөйәкле, ит ҡунмай торған — *крупнокостный, не мясной породы (о животных)*

**ҠАЛТЫРЫШ II** (мейәс) *р.* иҙеп, теткеләп — *превратив в клочья.* Салғы ҡалтырыш тапалған

**ҠАЛТЫРЫШТАНЫУ** (мейәс) *ҡ.* теткеләнеү — *превращаться в клочья*

**ҠАЛЫЙ** (гәйнә) *р.* ҡайһылай — *как, каким образом.* — Алый теүел! — Суң ҡалый?

**ҠАЛЫЙЫУ** (урта) *ҡ.* шыҡыйыу — *пикировать.* Мынау ҡош ҡаҫылай ҡалыйып оса

**ҠАЛЫМ** (ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡыҙҙың туғандарына егет яғынан бирелә торған бүләктәр — *подарки родственникам невесты со стороны жениха*

**ҠАЛЫН I** (урта, һаҡмар) *и.* егет яғындағы туй — *свадьба, проводимая со стороны жениха.* Ҡалым (ҡыҙыл, мейәс). Ҡалым ашарға барабыҙ (ҡыҙыл). Ҡалын ала барыу (һаҡмар) егет яғына туйға барыу — *поехать на свадебное угощение в дом жениха.* Ун дуға килделәр ҡалын алырға

**ҠАЛЫН II** (дим, минзәлә) *и.* бирнә — *приданое*

**ҠАЛЫН III** (дим, әй) *р.* күп — *множество.* Беҙ ҡалын башҡорт (дим). Аларҙың таныш ҡалын (әй)

**ҠАЛЫНАЙЫУ** (дим, минзәлә) *ҡ.* байыҡыу — *разбогатеть*

**ҠАЛЫНБАШ** (урта урал) *и.* егет яғындағы туй — *свадьба, проводимая со стороны жениха*

**ҠАЛЫН МАЛЫ** (һаҡмар) *и.* мәһәр — *выкуп за невесту (скотиной)*

**ҠАЛЫН ТАРТЫУ** (минзәлә) *ҡ.* мәһәр һорау — *просить выкуп за невесту*

**ҠАЛЫНТУЙ** (һаҡмар) *и.* ҡара-ҡаршы саҡырышыу — *взаимное приглашение в гости*

**ҠАЛЫУАТ** (ҡариҙел) *с.* мыҡты — *крепкий (о человеке).* Ҡалыуат ҡына ирекәй

**ҠАМАҒАШ, ҠАМАҒОШ, ҠАМАҠАШ, ҠАМАҠОШ, ҠАМАҠЫШ, ҠАМА ҠОШО** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡаты аңҡау — *твердое нёбо*

**ҠАМАҠАУ, ҠАМАШ, ҠАМАШАҠ, ҠАМЫШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡаты аңҡау — *твердое нёбо*

**ҠАМАЛАТЫУ** (эйек) *ҡ.* ҡамап, түңәрәтеп өйөү — *окружить, скучивать.* Балсығымды ҡамалатып һалып торҙом

**ҠАМАР** (ҡыҙыл) *и.* ҡәмәр — *ковровый, бархатный или шелковый пояс шириной 6—7 см, украшенный жемчугом, драгоценными камнями, серебряными бляхами и т. д.*

**ҠАМАСАУ I** (дим, урта) *и.* аңҡау — *нёбо.* Ҡамашау (дим, урта, әй)

**ҠАМАСАУ II** (һаҡмар) *и.* 1. *Экзема.* 2. (дим, ҡыҙыл) Тимерәү — *лишай.* 3. (урта) Сырхыуат — *рожа (кожная болезнь).* Ай-һай, тимерәү микән, ҡамасау шикелте ул

**ҠАМАСАУ III** (нөгөш) *и.* ярут — *ярутка (растение)*

**ҠАМАСАУ IV** (урта) *и.* бауға теҙелгән ҡармаҡтар — *перетяг (рыболовный)*

**ҠАМАСТАУ** (мейәс) *с.* ҡыҫыҡ — *тесный.* Ҡамастау йер

**ҠАМАУ** (ҡыҙыл) *р.* урап ағыу — *течь кругом.* Иҙел ҡамау аға

**ҠАМАШ** (дим) *и.* аңҡау — *нёбо*

**ҠАМАШЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* семәкәйләнеү — *ощущение ряби в глазах.* Күлмәгең күҙҙе ҡамаштыра (әй)

**ҠАМҒАҠ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* кәүгәсел — *недотрога.* Торғаны бер ҡамғаҡ (ҡыҙыл)

**ҠАМҒАҠЛАП I** (эйек-һаҡмар) *р.* ҡурҡытып — *пугая.* Сабранйа йыйып тороп ҡамғаҡлап...

**ҠАМҒАҠЛАП II** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* туҙғытып — *валить (о хлопьях снега).* Ҡамғаҡлап, осҡалаҡлап йауып тора ҡар

**ҠАМҒАҠТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* мәшәҡәт яһау — *беспокоить*

**ҠАМСАП ТОТОУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* матҡып тотоу — *вцепляться*

**ҠАМСЫП КИТЕҮ** (урта) *ҡ.* насарланыу — *ухудшаться*

**ҠАМТАРЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡайырыу — *закрутить руки (назад).* 2. (мейәс, урта, һаҡмар, ырғыҙ) Шаҡарыу — *прикручивать голову лошади к оглобле.* Атты ҡамтарып ҡуйҙым (һаҡмар)

**ҠАМТЫУ** (урта, һаҡмар) *ҡ.* матҡып тотоу — *вцепиться, захватить когтями.* Бүрене барып ҡамтыған бөркөт (һаҡмар)

**ҠАМШАЙАҠ, ҠАМШЫЙАҠ** (ҡариҙел) *и.* 1. Каса — *пиала.* 2. Сеүәтә — *чашка*

**ҠАМШАЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡамалыу — *быть окруженным*

**ҠАМШАРЫУ** (мейәс) *ҡ.* комһоҙланып ашау — *обжираться*

**ҠАМШАУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Уратып алыу — *охватывать, окружать.* Бөтөн беҙҙең кешеләр ҡамшап алдылар был малайҙы. 2. Биләү — *владеть.* Тирә-йаҡты ҡамшаб йата. 3. (туҡ-соран, ырғыҙ) Ҡапшау — *ощупывать.* Кеҫәләрен ҡамшап әллә ней эҙләне (туҡ-соран)

**ҠАМШЫРЫҠ, ҠАНШЫРЫҠ, ҠАҢШЫРЫҠ, ҠАНШЫЛЫҠ** (ҡариҙел) *и.* ҡаты аңҡау — *твердое нёбо.* Ҡаншырыҡ, ҡаңшырыҡ (дим)

**ҠАМШЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* ҡабыу — *брать в рот.* Бер генә ҡамшып йотто ла ашамаҙы

**ҠАМЫЛ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Иген һабағы — *стебель хлеба.* Арыш ҡамылы йетешкән. 2. Сабылғандан ҡалған үлән төбө — *стерня скошенного сена*

**ҠАМЫЛТӨП** (дим) *и.* ҡамыл — *стерня*

**ҠАМЫРАШ** (дим, урта) *и.* энәлек — *боярышник*

**ҠАМЫР ЖИМЕШЕ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* энәлек — *боярышник*

**ҠАМЫР ЙЕЛӘГЕ** (дим, ҡариҙел) *и.* энәлек — *боярышник.* Ҡамыр жиләге, ҡамыржиләк (дим, минзәлә)

**ҠАМЫРЙЕМЕШ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, әй) *и.* энәлек — *боярышник.* Ҡамыр жимеше (төньяҡ-көнбайыш)

**ҠАМЫРЛАМА** (дим) *и.* энәлек — *боярышник.* Ҡамырлыҡ (дим, минзәлә)

**ҠАМЫРЛАУЫҠ, ҠАМЫРЛЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* энәлек — *боярышник*

**ҠАМЫРТАРАҠ** (урта) *и.* ҡылыс — *бердо (часть ткацкого станка)*

**ҠАМЫТ-ҠОРАНТЫ** (дим) *и.* сбруй — *сбруя*

**ҠАМЫТПАУ** (гәйнә) *и.* ҡолаҡбау — *гуж*

**ҠАМЫШГӨЛ** (мейәс) *и.* *пальма*

**ҠАМЫШҠАРА** (ҡыҙыл) *и.* һаҙ көйгәнәге — *болотный лунь.* Ҡамышҡара сыҫҡан, йомран беләң туҡтана

**ҠАМЫШ: ҠЫУҒА ҠАМЫШ** (ҡыҙыл) *и.* екән — *куга*

**ҠАН: БЕР ҠАН** (урта урал) *и.* аймаҡ — *родовое подразделение.* ◊ Ҡанын ҡойоп әйтеү (һаҡмар) үҙәгенә үткәргәнсә әйтеү — *не в бровь, а в глаз.* Ҡан йағыу (урта урал) мөкиббән китеү — *предаться полностью.* Ҡаны ҡачыу (төньяҡ-көнбайыш) холҡо боҙолоу — *портиться, испортиться (о характере)*

**ҠАНАТ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Терәк, терһәк — *лежанки (у саней).* Сананың бер йаҡ ҡанаты һынған (ҡыҙыл). 2. Тирмә ағастары — *планки юрты.* 3. (мейәс) Бал ҡыуғыс иләге — *сито медогонки*

**ҠАНАТЛЫ УҠ** (дим) *и.* ҡауырһынлы уҡ — *стрела с пером*

**ҠАНАТСАНА** (дим) *и.* терһәкле сана — *розвальни.* Ҡанатты сана (ҡыҙыл, мейәс)

**ҠАНАТТЫ: ҠАНАТТЫ БЫРАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* сапҡыслы бырау — *коловорот*

**ҠАН ГӨЙӨҮ** (дим, урта) *ҡ.* сарсау — *пересыхать в горле*

**ҠАН: ҠАН ҒАЛТЫРАУ** (дим, урта) *ҡ.* ныҡ ҡурҡыу — *испытывать страх*

**ҠАН ДА БОЛАҠ** (урта урал) *и.* 1. Ҡан ҡойош — *кровопролитие.* Мин барғанда ҡан да болаҡ ине. 2. (әй) Һуғыш-талыш — *ссора с дракой*
**ҠЫРЫЛТАУЫҠ** (урта) *и.* боғарлаҡ — *трахея.* Ғырылдауыҡ (кариҙел), ҡырылдауыҡ (эйек)

**ҠЫРЫН** (ырғыҙ) *с.* кире — *упрямый*

**ҠЫРЫН-ЗАРАН ИТЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* пыран-заран килтереү — *разнести в пух и в прах*

**ҠЫРЫНДЫҠ** (эй) *и.* ҡамыр ҡырындыһынан бешерелгән бәләкәй икмәк — *маленький хлеб, испеченный из остатков теста*

**ҠЫРЫН ИҘЕҮ** (ырғыҙ) *с.* кире — *упрямый*

**ҠЫРЫН-ЙАРЫН ҠАРАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* асыуланыу — *сердиться.* Ана миңә һаман ҡырын-йарын ҡарабөрөй (ҡыҙыл)

**ҠЫРЫНТЫН** (мейәс) *р.* ҡырын — *косо*

**ҠЫРЫП-ЙУНЫП** (көнсығыш диалект) *р.* аҙ ғына ла ҡалдырмай — *не оставляя нисколько.* Майҙы ҡырып-йунып биреб эйҙем (арғаяш)

**ҠЫРЫУ I** (мейәс) *ҡ.* ҡағыу — *притеснять.* Балларымды ҡырманым

**ҠЫРЫУ II** (гәйнә) *и.* ҡырау — *заморозки.* Ҡырыу төшкән

**ҠЫРЫШТЫРЫУ** (кариҙел) *ҡ.* асыуландырыу — *рассердить.* Ҡырыштырма мине

**ҠЫРЫШЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* 1. Талашыу — *ругаться.* 2. Һуғышыу — *драться.* Ыҙғыштылар, ыҙғыштылар, суңында ҡырышып киттеләр (кариҙел). 3. (салйоғот) Ныҡышыу — *упорствовать*

**ҠЫСА I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тирәс — *обечайка (сита)*

**ҠЫСА II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡыҫыҡ — *теснина.* Бер ҡысаға килеп кергәнбеҙ

**ҠЫСАЛ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* бабасыр — *глист.* Ҡыһал (салйоғот)

**ҠЫСАННЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* ҡыҫаныслыҡ — *нехватка.* Элек ҡысанныҡ булды. Ҡыҫанныҡ (туҡ-соран)

**ҠЫСҠА ҠАРТА** (урта урал) *с.* тәбәнәк буйлы — *низкорослый*

**ҠЫСҠЫЛЫҠ ТОТОУ** (дим) *ҡ.* осҡолоҡ тотоу — *икать*

**ҠЫСҠЫС** (мейәс) *и.* 1. Йәмкә — *щипцы (для углей).* Ҡысҡыч (гәйнә). 2. (кариҙел) Ҡыпһыуыр — *клещи*

**ҠЫСЛА I** (кариҙел) *и.* ҡыҫала — *рак.* Ҡысна (төньяҡ-көнбайыш), ҡыҫла (дим)

**ҠЫСЛА II** (гәйнә) *и.* йәмкә — *щипцы (для углей)*

kypha kac 'ycad(...)'

**ҠЫСЛАН, ҠЫСЛАНҠЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡыҫлам — *земля на втором посеве (бывшая целина).* 2. (ҡариҙел) Ҡалдау — *залежь*

**ҠЫСТАУ, ҠЫСТЫУ** (гәйнә) *р.* ҡыҫыҡ — *тесно.* Тегендә ҡыстау былыр

**ҠЫСТЫРМА** (ҡариҙел) *и.* ҡыҫтыбый — *вездесущий*

**ҠЫСЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* әҙ — *мало.* Утын ҡысыҡ былған

**ҠЫСЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡысыулау — *покрываться болячками*

**ҠЫСЫЛЫҠ** (арғаяш) *и.* күл кесерткәне — *водяная крапива*

**ҠЫСЫНҒЫС** (дим) *и.* ҡысынма — *чесотка*

**ҠЫСЫР ЖИР** (гәйнә) *и.* ҡалдау — *залежь*

**ҠЫСЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Ҡысынма — *чесотка.* 2. (урта) Һыҙлауыҡ — *болячка*

**ҠЫҪА I** (урта) *и.* 1. Арба күкрәгән арт күсәргә нығыта торған тимер — *закрепитель корпуса телеги к задней оси.* 2. Салғы ҡулсаһы — *кольцо, закрепляющее косу к косовище*

**ҠЫҪА II** (урта) *и.* етен талҡыуыс — *льномялка*

**ҠЫҪА III** (дим, туҡ-соран) *и.* ҡапҡандың һуҡҡысы — *ударник капкана*

**ҠЫҪАЛА** (ҡыҙыл, урта) *и.* эҫкәкҡойроҡ — *уховёртка*

**ҠЫҪАЛАН I** (мейәс, урта) *и.* 1. Ҡыҫала — *рак.* 2. (мейәс) Ҡабырсаҡ — *ракушка*

**ҠЫҪАЛАН II** (мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ҡыҫыҡ — *тесное место.* Ҡыҫалан йулдан ғына барып була (эйек-һаҡмар). 2. (эйек-һаҡмар) Тау соҡоро — *ущелье*

**ҠЫҪАЛҒАН** (мейәс) *и.* ҡыҫала — *рак*

**ҠЫҪҠА: ҠЫҪҠА ТАНАУ** (мейәс) *и.* эшсе ҡорт — *рабочая пчела*

**ҠЫҪҠАҠ** (ҡыҙыл, урта, эй) *с.* ҡыҫҡа — *короткий.* Берәй ҡыҫҡаҡ ҡына бау кәрәг ине (эй). Ҡысҡаҡ (төньяҡ-көнбайыш)

**ҠЫҪҠЫС** (арғаяш, урта, һаҡмар) *и.* шәкәр ватҡыс — *щипчики (для сахара).* Ҡысҡыс (гәйнә)

**ҠЫҪЛАН** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡыҫлам — *земля на втором посеве (бывшая целина).* 2. Бер йыл һөрөлөп икенсе йыл һөрөлмәй ҡалған ер — *земля, оставленная на втором году без распашки.* Ҡыҫтам (һаҡмар). 3. (дим) Һөрөлгән ерҙең тирә-яғында һөрөлмәй ҡалған ер — *невспаханные края земли*

**ҠЫҪМА I** (һаҡмар) *и.* текмә — *тын*

**ҠЫҪМА II** (һаҡмар) *и.* ҡыпһыуыр — *клещи*

**ҠЫҪМА III** (ҡариҙел, урта) *и.* тағанды өй башы һымаҡ итеп бәйләп башына ашлыҡ һалып киптереү өсөн эшләнгән ҡулайлама — *приспособление из жердей для сушки снопов*

**ҠЫҪМАБИЛ** (һаҡмар) *и.* биллек — *хлястик (в одежде).* Ҡыҫмабил тун

**ҠЫҪРАҠ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* 1. Ҡыҫыр — *яловая.* Ҡыҫраҡ йөрөгән тыу бейә. 2. *и.* тай-тулаҡ — *молодняк.* Ҡыҫраҡлары бер башҡа, ҡолонно бейәләре бер башҡа (һаҡмар). Ҡыҫыраҡ (урта). 3. (һаҡмар) Ике йәшлек бейә — *двухгодовалая кобыла.* Ҡыҫраҡлар көтөүен ҡарайлар. 4. (төньяҡ-көнсығыш) Тана-торпо — *двухгодовалые телки.* Ҡыҫраҡтар көтөүе йылға буйында йөрөй ине (арғаяш)

**ҠЫҪТА** (эй) *и.* ҡыҫала — *рак*

**ҠЫҪТАЛЫУ** (урта) *ҡ.* ҡасыу — *течка (у животных)*

**ҠЫҪТАР ТӘҢКӘҺЕ** (арғаяш) *и.* кейәү тарафынан кәләшенең эхирәттәренә бирелгән аҡсалата бүләктәр — *денежные дары жениха подругам невесты*

**ҠЫҪТАУ I** (дим) *ҡ.* ҡыҫырыҡлау — *теснить.* Ҫыу ҡыҫтай

**ҠЫҪТАУ II** (урта) *и.* ҡыҫаныслыҡ — *нехватка.* У уахытта андай нәмәләр ҡыҫтау ине

**ҠЫҪТЫБЫЙ I** (дим, эйек) *и.* эремсек билмәне — *творожные вареники*

**ҠЫҪТЫБЫЙ II** (эй) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка.* Элек ҡыҫтыбый менән дә уҡынығыҙ бит

**ҠЫҪТЫРҒЫС I** (ҡыҙыл) *и.* ҡашығаяҡ стенаһына ҡалаҡтар ҡыҫтырып ҡуйыу өсөн ҡағылған йоҡа таҡта ағас — *планка, прибитая к стене кухни для ложек*

**ҠЫҪТЫРҒЫС II** (мейәс) *и.* таҫма — *тесьма.* Ҡыҫтырғысты гүлмәк

**ҠЫҪТЫРСЫҠ** (һаҡмар) *и.* ҡатын-ҡыҙҙар эшенә ҡыҫылыусы ир — *мужчина, вмешивающийся в женское дело*

**ҠЫҪТЫРЫЛЫУ** (арғаяш, ҡыҙыл) *ҡ.* ҡыҫылыу — *вмешиваться.* Икәү һөйҙәшеб утырғанда өсөнсөһө килеп ҡыҫтырылып китә (арғаяш)

**ҠЫҪТЫРЫШМАҠ** (салйоғот) *и.* йәшенмәк — *прятки*

**ҠЫҪЫҠ** (мейәс, эй) *и.* тарлауыҡ — *теснина.* Ҡыҫыҡтан ҡар һыуҙары ағып төштө (мейәс). Ҡыһыҡ (ҡыҙыл)

**ҠЫҪЫЛДЫРЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡатын-ҡыҙҙар эшенә ҡыҫылыусы ир — *мужчина, вмешивающийся в женское дело*

**ҠЫҪЫМ** (дим) *и.* шаран — *плетневые заграждения на реке, поставленные с двух сторон морды*

**ҠЫҪЫМҒА: ҠЫҪЫМҒА АЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* ҡыҫыу — *притеснять*

**ҠЫҪЫРБИҘӘҮ** (урта) *и.* бер бала ла аҫрамаған ҡатын — *бесплодная женщина*

**ҠЫҪЫР КЕСЕРТКӘН** (дим) *и.* һуҡыр кесерткән — *крапива глухая*

**ҠЫТАЙАЛДЫР** (гәйнә) *и.* каса — *пиала*

**ҠЫТАЙ СӘЙЕ** (урта) *и.* һары сәскәле, ваҡ япраҡлы сәй үләне — *чайная трава*

**ҠЫТАҠТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡытҡылдау — *кудахтать.* Тауыҡ ҡытаҡтай. Ҡытыҡтау (мейәс)

**ҠЫТҠЫС** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Таба тотҡос — *сковородник.* 2. (дим, урта) Ҡыҫҡыс — *щипцы (для углей)*

**ҠЫТМЫР** (урта урал) *с.* бөтмөр — *аккуратный*

**ҠЫТНАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* ҡытҡылдау — *кудахтать.* Тауығым ҡытнап йөрөй

**ҠЫТЫ** (урта) *с.* эре — *важный*

**ҠЫТЫЙ-МЫТЫЙ** (дим, минзәлә) *и.* 1. Ваҡ-төйәк — *мелочь.* 2. (эй) Ыбыр-сыбыр — *мелюзга.* Ҡытый-мытый балдар менән ҡайҙа бара ул

**ҠЫТЫРЛАНЫУ** (дим) *ҡ.* асыуланыу — *сердиться*

**ҠЫТЫРМАҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* ҡытыршы — *шероховатый*

**ҠЫТЫРЛЫ ҒАРЫН** (урта) *и.* таҙғарын — *сычуг*

**ҠЫТЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* буш ҡалыу — *остаться ни с чем*

**ҠЫУАЗ** (урта) *и.* ҡоһор — *возмездие; месть.* Шундайларҙан үс алмағас, ҡыуаз ҡайтармағас нисек була инде

**ҠЫУАҠ** (төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ) *и.* 1. Ҡауаҡ — *перхоть.* Башы тулы ҡыуаҡ малайның (төньяҡ-көнбайыш). 2. (ырғыҙ) Онтаҡ — *труха.* Бесән ҡыуағы. 3. (төньяҡ-көнбайыш) Кәбәк — *мякина*

**ҠЫУАЛ I** (һаҡмар, эйек) *и.* 1. Ҡармаҡ сыбығы — *удилище.* 2. (һаҡмар) Сиртмә — *журавль (колодца)*

**ҠЫУАЛ II** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* 1. Баҡан — *шест, столб (на которые взбираются при соревнованиях на сабантуях).* 2. (мейәс) Ҡабығы һыҙырылған ҡарағай — *ободранная сосна.* 3. (урта) Төнәгес — *насест*

**ҠЫУАЛ III** (урта урал) *и.* тәпәш кенә балсыҡ мейес — *печь из глины*

**ҠЫУАЛТЫ** (ҡариҙел) *и.* ҙур ағас туҡмаҡ — *большая деревянная колотушка*

**ҠЫУАНСЫҠ** (туҡ-соран) *и.* ҡоролоҡ — *засуха.* Йауһын инде ике-өс йылдан бирле ҡыуансыҡ булып йонсотто. Ҡыуансылыҡ (һаҡмар)

**ҠЫУАНҺЫТЫУ** (урта) *ҡ.* ҡоро ел иҫеү — *дуть суховею.* Бөгөн көнө буйы ҡыуанһытып торҙо

**ҠЫУАНҺЫУ** (мейәс) *ҡ.* 1. Ҡороға тартыу — *превратиться в засушливую погоду.* Ҡыуанһытып тора көн, йамғыр кәрәг ине. 2. (ҡыҙыл) Йәме китеү — *потерять вид.* Өйөм буш тороп ҡыуанһып киткән һатта

**ҠЫУАРЫУ** (көнсығыш диалект, урта, эйек) *ҡ.* ҡороу — *высохнуть.* Үләндәр ҙә ҡыуарҙы (ҡыҙыл). Мынау урманта әллә күпме ағас ҡыуарған (урта). Муйылым ҡыуарыпара һәҙер, кәртәләп булмай (эйек)

**ҠЫУАТ** (арғаяш, мейәс) *и.* ҡеүәт — *мощь.* Ҡыуатты мал (арғаяш)

**ҠЫУАУЛАУ** (гәйнә) *ҡ.* биреү — *выдать.* Рәхмәт инде калхозға пенсийасын ҡыуаулай

**ҠЫУБАШ I** (арғаяш) *с.* 1. Ялтыр баш — *плешивый.* 2. (урта урал) Ҙур башлы — *крупноголовый.* 3. (урта, һаҡмар) *и.* кәртә бағанаһына эленгән эре мал башы һөлдәһе — *скелет головы крупного скота, надетый на кол во дворе.* Сепейгә күҙ теймәһен тип ҡыубаш күҙенән үткәрәләр (урта)

**ҠЫУҒА I** (дим, ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡау — *прошлогодняя трава.* 2. (дим, урта) Йоморо ҡамыш — *куга.* Ҡыуғаның башынта йекәне була, быуынһыҙ, һабағы клетшатый була (урта). 3. (ҡыҙыл) Кипкән ҡайын бәшмәге — *трутовик березы*

**ҠЫУҒА II** (һаҡмар) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок*

**ҠЫУҒАУ** (ҡыҙыл) *и.* кәйелтмәк — *раскат на зимней дороге.* Ҡыуғау йулға килеп сыҡтыҡ

**ҠЫУҒЫҘ** (ҡыҙыл) *и.* яр ситенән өңөлөп төшөп киткән тәрән соҡор — *воронка у берега реки*

**ҠЫУҒЫЛ** (мейәс) *с.* аҡһыл һары — *светло-желтый*

**ҠЫУҒЫР I** (арғаяш, салйоғот) *с.* бестерелмәгән — *некастрированный.* Ҡыуғыр үгеҫтәре бар (арғаяш). Ҡыуыр (арғаяш)

**ҠЫУҒЫР II** (урта) *с.* йөрөмтәл — *любящий много ходить*

**ҠЫУҘАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* юллау — *проследить.* Йуғалған алтынды ҡыуҙап йөрөмәҫ булырҙар ине (ҡыҙыл)

**ҠЫУҘЫҠ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *с.* 1. Ҡыҫыр ҡалған — *яловелая.* Ҡыуҙыҡ бейә (ҡыҙыл). 2. (арғаяш, мейәс) Тәүге — *первый.* Ҡыуҙыҡ ҡолон (арғаяш). 3. (мейәс) Бала тапмай торған — *бесплодная.* Ҡыуҙыҡ хатын

**ҠЫУЛАУ I** (урта) *и. факел*

**ҠЫУЛАУ II** (ҡыҙыл) *и.* имән сөрөгө — *дубовая гниль*

**ҠЫУЛЫҠ** (урта) *и.* 1. Һыбай аты — *лошадь для верховой езды.* 2. (дим, урта) Тәү башлап ҡолонлаған бейә — *кобыла, ожеребившаяся первый раз*

**ҠЫУТОМШОҠ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡоротомшоҡ — *сирота, беспризорный.* 2. Бәхетһеҙ — *горемыка.* Ҡортомшоҡ (эй)

**ҠЫУЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡауаҡ — *перхоть.* Ҡыуыҡ була инде ул башта

**ҠЫУЫҠПАШ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* 1. Ялтыр баш — *плешивый.* 2. (мейәс, эй) Кәбәк баш — *безмозглый*

**ҠЫУЫЛҒАН** (арғаяш) *с.* айыртылған — *откачанный.* Ҡыуылған бал

**ҠЫУЫРҒЫЧ** (ҡариҙел) *р.* томра — *душно*

**ҠЫУЫРЛЫҠ** (гәйнә) *и.* әсетке — *закваска*

**ҠЫУЫРЫЛЫУ** (дим, урта) *ҡ.* ҡурылыу, эскә батыу — *ввалиться (о челюсти)*

**ҠЫУЫРЫУ** (дим, урта) *ҡ.* ҡурыу — *жарить.* Ҡурмас ҡыуырып бир (дим)

**ҠЫУЫШ** (урта) *и.* 1. *Палатка.* 2. (дим, урта) Мәмерйә — *пещера*

**ҠЫХ, ҠЫХАЙ** (көнсығыш диалект) *и.* бысраҡ — *бяка (в детской речи).* Ҡыхай бит ул, теймә (эй)

**ҠЫҺАСӨЙ** (һаҡмар) *и.* сикәсәй — *чекушка (на оси телеги)*

**ҠЫҺАЛАН** (ҡыҙыл) *и.* тарлауыҡ — *теснина.* Ике тауҙың араһы ҡыһалан була

**ҠЫҺАНДАУ** (салйоғот) *ҡ.* күренеү — *виднеться.* Ашҡағы ҡыһандап йөрөй

**ҠЫҺАНЫС** (ҡыҙыл) *с.* ҡураныс — *щупленький*

**ҠЫҺҠА САС** (салйоғот) *и.* кикел — *челка*

**ҠЫҺТАУ ГЕШЕ** (арғаяш) *и.* ҡабалан кеше — *торопливый человек*

**ҠЫҺЫМ** (мейәс, салйоғот) *с.* тар — *тесный.* Көйөнә көй йетмәй, күкрәк ҡыһым (салйоғот)

**ҠЫҺЫР ҒОРТ** (арғаяш) *и.* эре ҡорт — *трутень*

**ҠЫЧЫРТҠАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кесерткән — *крапива*

**ҠЫШҠАРЫ** (һаҡмар) *р.* ҡышҡа табан — *к зиме.* Ҡышҡары барып килербеҙ

**ҠЫШҠЫЛЫҒЫН** (көнсығыш диалект) *р.* ҡышын — *зимой.* Ҡышҡылығын ҡалайтаң (ҡыҙыл)

**ҠЫШЛАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* башмаҡ — *годовалая телка*

**ҠЫШЛАУ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* башмаҡ — *годовалая телка.* Ҡыштау (эй)

**ҠЫШЛАУ II** (һаҡмар) *и.* ужым — *озимь*

**ҠЫШЛЫЙ** (гәйнә) *р.* ҡыш буйы — *всю зиму*

**ҠЫШЛЫҠ** (дим) *и.* маңҡа ауырыуы — *сап*

**ҠЫШЛЫҠЛЫ** (урта) *с.* ҡышҡыһын бирешмәй торған — *стойкий к холоду.* Ҡышлыҡлы һыйыр

**ҠЫШЛЫҠҺЫҘ** (урта) *с.* 1. Ҡышҡыһын бирешә торған — *трудно переносящий зиму.* Ҡышлыҡһыҙ мал. 2. (туҡ-соран, урта) Өшөксән — *мерзлячка*

**ҠЫШТАУ** (мейәс) *и.* 1. Ыҙма — *деревня, селение.* Олатайҙар заманында ҡыштауҙа берәү ҙә бумай торғайны. 2. Умарта баҙы — *омшаник*

**ҠЫШТЫҠ** (эй) *и.* көс-ҡеүәт — *энергия.* Бер ҙә ҡыштығың йуҡ, өшөп ҡонторайып тиг йөрөйһөң

**ҠЫШТЫҠТАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* тән ҡатып тире ҡалынайыу — *утолщение кожи с затвердением тела*

**ҠЫШТЫҢ ГӨНӨ** (һаҡмар) *р.* ҡышын — *зимой.* Ҡыштың гөнө шунда йөрөб эшләйләр

**ҠӘБЕРҘӘЛЕҮ** (мейәс) *ҡ.* ерләнеү — *быть захороненным.* Бүгәс һалдаттары ҡәберҙәлгән мында

**ҠӘБЕРҘӘҮ** (мейәс) *ҡ.* ерләү — *захоронить*

**ҠӘҒӘҘ** (дим) *и.* ҡағыҙ — *бумага.* Бер генә бит ҡәғәҙ бир әле. Ҡыйағыҙ (урта, эйек-һаҡмар)

**ҠӘҘЕЛДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ғәҙел эшләү — *делать справедливо*

**ҠӘҘЕМГЕ** (ҡыҙыл) *с.* 1. Элекке, боронғо — *прежний; древний.* Ҡәҙимге (ырғыҙ). 2. Ғәҙәттәге — *обыкновенный.* Ҡәҙимге (ырғыҙ)

**ҠӘҘЕМГЕСӘ** (ҡыҙыл) *р.* 1. Элеккесә — *по-прежнему.* Ҡәҙемгесә тороп йатабыҙ әле. 2. Ғәҙәттәгесә — *как обычно.* Ҡәҙемгесә һин дә мин һөйҙәшеб йата. Ҡәҙимгесә (һаҡмар, ырғыҙ)

**ҠӘҘЕР-ҒИҘҘӘТ** (ҡыҙыл) *и.* ҡәҙер-хөрмәт — *почет.* Олоҡтап ҡәҙер-ғиззәт итәбеҙ

**ҠӘҘИМЕЙ** (урта) *с.* 1. Элекке, боронғо — *прежний; древний.* 2. Ғәҙәттәге — *обыкновенный.* Ауыл ҡәҙимей инде

**ҠӘҘРӘТ: ҠӘҘРӘТ ИТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* ант итеү — *дать клятву*

**ҠӘЗЕР** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* хәҙер — *сейчас*

**ҠӘЙЕБ ЭЙӘҺЕ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ғәйепле кеше — *виновный человек.* Ҡәйеб эйәһен табыб алыр гәрәг ине (ҡыҙыл)

**ҠӘЙЕМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡыйырсыҡ — *горбушка (хлеба).* Бер ҡәйем әпәй ашаным

**ҠӘЙЕННЕ** (арғаяш, салйоғот) *и.* ҡәйнеш — *шурин (младший брат жены)*

**ҠӘЙЕҺНӘ** (салйоғот) *и.* ҡайынеҙнә — *муж свояченицы (старшей сестры жены); муж золовки (старшей сестры мужа)*

**ҠӘЙМБИКӘ, ҠӘМБИКӘ** (урта) *и.* ҡәйенбикә — *золовка (старшая сестра мужа)*

**ҠӘЙМИКӘ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* ҡәйенбикә — *свояченица (старшая сестра жены); золовка (старшая сестра мужа)*

**ҠӘЙНЕ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Оло ҡәйнеш — *старший шурин (брат жены).* Мине ҡәйне тейеш кешегә бирҙеләр (мейәс). 2. (салйоғот) Ҡәйнеш — *шурин (младший брат жены)*

**ҠӘЙНЕГӘС, ҠӘЙНИГӘС, ҠӘЙНӘГӘЗ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәйенбикә — *свояченица (старшая сестра жены)*

**ҠӘЙНЕҺЕҢНЕ, ҠӘЙҺЕҢЛЕ** (урта) *и.* ҡәйенһеңле — *золовка (младшая сестра мужа).* Ҡайнысеңне, ҡәйнесеңне (дим)

**ҠӘЙНӘНЕЙ** (урта урал) *и.* ҡәйнә — *свекровь*

**ҠӘЙНӘ ТЕЛЕ** (эй) *и.* ҡайын гөлө — *тещин язык (комнатный цветок)*

**ҠӘЙПЕЙӘТҺЕҘ** (һаҡмар) *с.* ҡиәфәтһеҙ — *невзрачный.* Эй, шул ҡәйпейәтһеҙҙе иҫкә төшөрмә инде

**ҠӘЛЕП** (урта урал) *и.* ғәҙәт — *привычка*

**ҠӘЛЕЙҺЕҘ** (һаҡмар) *с.* килбәтһеҙ — *несуразный*

**ҠӘЛМӘР, ҠӘЛМӘРЙЕН** (мейәс) *и.* юғары сортлы ҡыҙыл буҫтау — *кармазин*

**ҠӘЛӘМ: ҠӘЛӘМ ОСТАУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡәләм тотоу — *держать карандаш.* Беҙ ҡәләм тотманыҡ, ҡәләм остамаһын ҡыҙлар, тинеләр

**ҠӘЛӘМФЕР** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *и.* ҡәнәфер — *гвоздика*

**ҠӘЛӘМӘТ: ҠӘЛӘМӘТ КҮСТӘРЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* аҫтын өҫкә әйләндереү — *перевернуть все вверх дном*

**ҠӘМӘРСЕК** (арғаяш, салйоғот) *и.* аҡ сәпсек — *трясогузка*

**ҠӘНИҒӘТ** (дим, туҡ-соран, һаҡмар) *и.* ҡәнәғәт — *довольство.* Әллә, эшенән ҡәниғәт булмаған шикелле (һаҡмар)

**ҠӘНӘР** (арғаяш) *и.* күмәгәй — *кадык*

**ҠӘНӘФЕЙ** (эй) *и.* ҡулдан яһалған ағас диван — *самодельный деревянный диван*

**ҠӘРЕНДӘШ** (ҡыҙыл, урта, эй) *и.* ир кешенең үҙенән кесе ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе — *слово-обращения мужчин к женщинам моложе себя.* Мынау шишмәгә һыуға барып кил әле, ҡәрендәш (урта). Хәрендәш (эй)

**ҠӘРЕНДӘШ-ЫРЫУ** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* ҡәрҙәш-ырыу — *родня*

**ҠӘРИП** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* ҡәрҙәш — *родственник.* Ҡәриберәк булҫа ағай тейсең инде (туҡ-соран)

**ҠӘРИӘ** (кариҙел) *и.* утар — *хутор*

**ҠӘРМӘЛЙЕН** (урта) *и.* юғары сортлы ҡыҙыл буҫтау — *кармазин*

**ҠӘРТӘСӘЙ, ҠӘРСӘЙ** (һаҡмар) *и.* өләсәй — *бабушка*

**ҠӘРТӘТЕЙ** (гәйнә) *и.* олатай — *дедушка*

**ҠӘРӘХӘТЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* мыҫҡыллау — *оскорбить.* Ошо Батима мине бик ҡәрәхәтләб әрләй

**ҠӘССӘЙ, ҠӘРТСӘЙ** (һаҡмар) *и.* өләсәй — *бабушка (со стороны отца)*

**ҠӘҮЕМ** (һаҡмар) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня.* Аңа, бармаһам, ҡәүемем ауылда булыр ине

**ҠӘҺӘҘӘК** (мейәс) *и.* ғәрәсәт — *ураган*

**ҠӘҺӘР** (арғаяш, мейәс) *р.* 1. Арыу — *неплохо.* Аның уҡыуы ҡәһәр генә (арғаяш). 2. *с.* ҙур — *большой.* Ҡәһәр тоҡ (мейәс). 3. Төп — *основной.* Ҡәһәр йорт (мейәс)

**ҠӘҺӘРМӘН** (ҡыҙыл, мейәс) *ы.* ҡәһәр һуҡҡыр — *проклятый.* Уй, ҡәһәрмән! Ыҫҡынды бит! (ҡыҙыл)

**ҠӘҺӘТ ИТЕҮ** (көньяҡ диалект) *ҡ.* ант итеү — *клясться.* Шулай йөрөргә ҡәһәт иттеңме инде? (һаҡмар)

**ҠӘҺӘТТӘНЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Үс алырға ант итеү — *клясться отомстить кому-либо.* 2. Янып көйөү — *сильно горевать.* 3. Йәлләмәү — *не жалеть*

# Л

**ЛАБАҘА** (арғаяш) *и.* алабута — *лебеда.* Лебаҙа (арғаяш, салйоғот, урта урал), либаҙа (арғаяш, мейәс, урта урал), либәҙә (һаҡмар)

**ЛАБЫЛДЫҠ** (ҡариҙел) *и.* стенаға ҡағылған тырпыса сөйө — *ручка дуплянки*

**ЛАГУН** (көнсығыш диалект, урта) *и.* 1. Дегет һауыты — *лагун.* 2. (ҡариҙел) Ағас мискә — *деревянный бочонок*

**ЛАГУШКА** (арғаяш, ҡыҙыл) *и.* Ағас күнәк — *бадья.* 2. Дегет һауыты — *лагун*

**ЛАГЫР** (ҡыҙыл) *и. лагерь.* Лагырға барҙы малайыбыҙ

**ЛАҒЫР** (мейәс) *и. палатка.* Лағырҙа торағыҙма әллә?

**ЛАҒЫР-ЛОҒОР** (урта) *и.* балалар уйыны *(тубыҡ сәнсеп түңәрәклән ултыралар; араларынан берәү уртала ултыра, уның арҡаһына ишелгән таҫтамал менән һуғалар ҙа таҫтамалды тубыҡ аҫтынан оҙаталар. Һуғыусыны урталағыһы табырға тейеш)* — *название детской игры, при которой сидящие кругом дети, передавая друг-другу прячут полотенце*

**ЛАҪЫМДАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* ихласлау, яйлап, урын-еренә еткереп эшләү — *делать кропотливо, аккуратно.* Лаҫымдап эштәй ул

**ЛАЖАҠ, ЛИЖАҠ** (дим, урта) *и.* егерме дүрт рамлы йәшник умарта — *многорамный улей*

**ЛАЖБАЙЫУ, ЛӘЖБӘЙЕҮ** (урта урал) *ҡ.* илаҡланыу — *без повода плакать*

**ЛАЖЫУ** (ҡариҙел) *и.* уйһыу — *низина*

**ЛАЙ I** (туҡ-соран) *и.* 1. Саман өй һалғанда кирбестәрҙе йәбештереү өсөн шыйыҡланған балсыҡ — *жидкий глиняный раствор.* 2. (эйек-һаҡмар) Сай — *ил.* 3. Шифалы батҡаҡ — *лечебная грязь.* Лайына күмеләләр, шул килешә дәнгә

**ЛАЙ II** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* тәлмәрйен ебәге — *улотрикс*

**ЛАЙ III** (һаҡмар) *и.* яй — *лад.* Төнйаһы ла булыр, үҙеңдең лайыңа ҡарап барһаң

**ЛАЙАҠЫН** (урта) *с.* ныҡ иҫерек — *вдрызг пьяный.* Лайаҡын ҡайтты Архәнгилдән. Ләйаҡын (ҡариҙел)

**ЛАЙ: ЛАЙ ҒОЙОУ** (арғаяш) *ҡ.* һылау — *мазать*

**ЛАЙҠАТЛЫ** (урта урал) *с.* ыңғай, яғымлы — *положительный (о характере человека).* Лайҡатлы персиҙәтел ҡуйҙылар. Лайҡатты (әй). Бик лайҡатты геше туры гилде бәхетенә

**ЛАҠЛА I** (һаҡмар) *и.* 1. Күләүектәге ваҡ бөжәктәр — *водяная живность.* 2. (урта урал) Һыу мүге — *речной мох*

**ЛАЙДА II** (ҡыҙыл) *и.* шыйыҡ батҡаҡ — *жидкая грязь*

**ЛАЙЛА: ЛАЙЛА БАЛЫҠ** (һаҡмар) *и.* шырт балыҡ — *ерш*

**ЛАЙЛАҠ I** (ҡариҙел) *и.* лайла — *слизь*

**ЛАЙЛАҠ II** (һаҡмар) *и.* шамбы — *налим*

**ЛАЙЫҠ** (ҡыҙыл, әй) *и.* ыңғай, уңай — *попутный.* Һүҙ лайығы сыҡҡанда...

**ЛАЙЫҠТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тәғәйенләү, төбәү — *назначить, нацелить.* Китеп барырға лайыҡтап сыҡҡан кешебеҙ туры гилһә...

**ЛАЙЫҠТЫ** (ҡыҙыл) *с.* уңайлы — *удобный, подходящий.* Үҙемә лайыҡты айаҡ кейеме тура гилһә, алам. 2. (арғаяш) Яратҡан — *любимый.* Лайыҡтыһын ағанма тим

**ЛАЙЫЛДАҠ** (һаҡмар) *с.* нәҙек тауышлы — *писклявый*

**ЛАЙЫЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡысҡырыу — *кричать.* Лайылдап ала ла тора. 2. (урта) Мәэлдәү — *блеять*

**ЛАК I** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* буяу — *краска*

**ЛАК II** (ҡариҙел) *и.* теш үңе — *зубная эмаль*

**ЛАКАУАЙ** (төньяҡ-көнсығыш) *с.* эмалле — *эмалированный.* Лаҡлы (эйек-һаҡмар)

**ЛАКТЫҠАЙ** (мейәс) *и.* кәстрүл — *кастрюля*

**ЛАҠ** (ҡариҙел, урта) *и.* буяу — *краска*

**ЛАҠАБЫЙ** (урта) *с.* ҡыҙыҡлы — *забавный, анекдотичный.* Лаҡабый һүҙ әйтте

**ЛАҠАН I** (урта) *и.* ағас күнәк — *бадья.* Лакан (гәйнә)

**ЛАҠАН II** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* һимеҙ — *жирный*

**ЛАҠАП, ЛАҠА ҺҮҘ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар, урта) *т.* 1. Көлкөлө хәбәр, көләмәс — *анекдот.* Лаҡап һөйләйһеңдер күп буһа, был ысын булмаҫ (эйек-һаҡмар). 2. (төньяҡ-көнсығыш) Мәҡәл — *пословица.* Лаҡап ман һөйҙәшә (арғаяш)

**ЛАҠАП: ЛАҠАП ИҪЕМ** (эйек-һаҡмар) *и.* ләкәп, ләкәп исем — *прозвище.* Лаҡап иҫем күб кешелә

**ЛАҠАПСАН** (салйоғот) *с.* күп һөйләүсән — *болтливый*

**ЛАҠАП ҺҮҘ** (ҡыҙыл) *и.* борондан килгән һүҙ — *предание, устный рассказ.*

**ЛАҠ-ЛАҠ** (дим) *р.* ҡысҡырып — *громко.* Лаҡ-лаҡ итеп һөйләй

**ЛАҠЫ** (һаҡмар) *и.* эт балығы — *вьюн*

**ЛАҠЫЙ** (арғаяш, ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* лаҡылдаҡ — *болтун.* Лаҡыйға дан булды (арғаяш)

**ЛАҠЫЛДАУ** (эйек-һаҡмар, әй) *ҡ.* күп һөйләү — *болтать.* Бер ҙә бушты лаҡылдамайым. Лаҡылдаб ултырып мал гимәһен (әй)

**ЛАМБЫ** (дим, урта) *и.* шәм — *лампа.* Лампы (арғаяш, салйоғот, урта, әй)

**ЛАМБЫ ТАҠТАҺЫ, ЛАМБЫ ЭШЛӘПӘҺЕ** (дим) *и. абажур*

**ЛАМПАСЫЙ** (арғаяш, дим, һаҡмар, әй) *и.* монпаси — *монпасье.* Беҙен мәгәзингә йүнле лампасыйлар килмәй бит (һаҡмар)

**ЛАМПА: ЛАМПА КӨМБӘЙЕ, ЛАМПЫ ҠАЛПАҒЫ** (арғаяш, салйоғот) *и. абажур.* Лампы тирәсе (урта урал); лампа күкеше (ҡариҙел) шәм сығыры — *закрутка фитиля лампы;* лампы сиве (әй) шәм ырғағы — *подвеска лампы;* лампа пүзере (салйоғот) шәм селтәре — *решетка лампы;* лампы шешәһе (салйоғот, эйек-һаҡмар) лампа ҡыуығы — *ламповый пузырь;* лампы шоробы (ҡариҙел) шәм сығыры — *закрутка фитиля лампы*

**ЛАҢҠЫЛДАУ, ЛӘҢКЕЛДӘҮ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *ҡ.* лаҡылдау — *болтать.* Күпме лаңҡылдарға була, тый телеңде. Һеҙҙең эргәгеҙҙә лаңҡылдап ултырыр инем

**ЛАПАҒАЙЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тәбәнәкләнеү — *стать приземистым.* Ике батҡыс бар, берәүһе анын лапаҒайҒан тейләр

**ЛАПАЙЫУ** (мейәс, әй) *ҡ.* йәйелеп ултырыу — *разваливаться.* Лапайып тороб утыра (мейәс)

**ЛАПАҠ I** (эйек-һаҡмар) *с.* 1. Ҡыйыҡһыҙ, баш ябыуһыҙ — *без крыши.* Лапаҫ лапаҡ була. 2. (ҡыҙыл, мейәс) *и.* яҫы таулыҡ — *плоскогорье.*

**ЛАПАҠ II, ЛӘПӘК** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, әй) *с.* тәпәшәк, тоҡор — *низкий, низкорослый.* Лапаҡ ҡына өйҙәре бар (ҡыҙыл). Лапаҡ апайҙын исеме гем ул? (һаҡмар)

**ЛАПАҠАЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* оҙон тороҡло — *с длинным туловищем (о лошади)*

**ЛАПАҠ: ЛАПАҠ ҠАР** (ҡариҙел) *и.* ябалаҡ ҡар — *снег хлопьями.*

**ЛАПАҠ ЫҢҒЫРСАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* ятма ыңғырсаҡ — *прямая седелка*

**ЛАПАЛДАШ** (арғаяш, салйоғот) *с.* тәпәш — *низкий.* Энәле ағас лапалдаш була

**ЛАПАМ, ЛАПАМ ИТ** (һаҡмар) *и.* туйҙың икенсе көнөндә әҙерләнгән һый — *угощение на второй день свадьбы*

**ЛАПАНТАШ** (һаҡмар) *с.* ҡыҫҡа аяҡлы — *коротконогий.* Ҡыр үрҙәге лапанташ була, ауыл үрҙәге кеүек

**ЛАПАС I** (дим,төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* аҙбар — *хлев.* Лапаҫ (дим, ҡыҙыл, урта, мейәс, әй), лапах (ҡыҙыл)

**ЛАПАС II** (гәйнә) *и.* һуҫар тәпеһе — *ловушка для куницы*

**ЛАПАҪ I** (урта) *с.* тәпәш — *низкий.* Лапаш (ҡыҙыл, һаҡмар). Улар лапаш өйҙә торалар (ҡыҙыл)

**ЛАПАҪ II, ЛӘПӘҪ** (мейәс) *и.* ләпәкәй — *мошкара*

**ЛАПАШЫУ I** (урта) *ҡ.* уҡмашыу — *скомкаться, сбиваться*

**ЛАПАШЫУ II** (ҡыҙыл, салйоғот, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Һеңеп ултырыу — *засидеться.* Ултыра инде лапашып, ҡуҙғалмай (ҡыҙыл). 2. (ҡыҙыл) Ергә йәбешеү — *прилипать к земле.* Йергә лапашып үҫкән.

**ЛАПҠЫТЫУ** (гәйнә, ҡариҙел) *ҡ.* 1. Лапылдатыу — *хлопать.* Мешикләрне лапҡытып ҡына ырғытамей арбаға (гәйнә). 2. Шаҡылдатыу — *чавкать.* Лапҡытып имә йылан. Лыпҡытыу (урта урал)

**ЛАПРА** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* әрпеш — *неряха*

**ЛАПСЫУ: ЛАПСЫУ ЙЕР** (ҡариҙел) *и.* уйһыулыҡ, түбән ер — *низина, низменность*

**ЛАПТА I** (төньяҡ-көнбайыш, әй) *и.* бәләкәй көрәк *(балалар уйынында)* — *бита.* Чүртейне лапта белән суғалар (төньяҡ-көнбайыш)

**ЛАПТА II** (дим) 1. Яҫы, киң — *широкий.* Лапта тойаҡ. 2. Тәпәшәк — *низкий.* Лапта ыңғырсаҡ. Лаптырҙаҡ (әй) *и.* сөйгә эленгән таҡта тырпысаны әйләндерә торған ҡорамал — *часть домашнего ткацкого станка*

**ЛАПШАЙЫУ, ЛӘПШӘЙЕҮ** (һаҡмар, урта урал, әй) *ҡ.* 1. Киңәйеү — *растягиваться.* Был майкы йыуғас шулай лапшайҙы (әй). Йәйелеү — *развалиться.* Лапшайып тороп утырған (һаҡмар). 3. Артыҡ һимереү — *растолстеть.* Баланан һуң лапшайҙы ла төштө (урта урал)

**ЛАПШАУЫР** (эйек-һаҡмар) *с.* яй — *медлительный*

**ЛАПШЫ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* 1. Әрпеш — *неряха.* Аңа бер лапшы бисә тап килгән (һаҡмар). 2. (урта) *с.* Тиҙ арыусан — *быстро устающая (о лошади).* Лапшы ат (ҡыҙыл)

**ЛАПШЫУ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* аттың ҡапыл арыуы — *быстро уставать (по отношению к лошади).* Аттары лапшып, үҙҙәре тамам йонсоп бөттө (арғаяш)

**ЛАПЫ I** (урта) *и.* аяҡ кейемен теккәндә кейҙерелә торған тимер ҡулайлама — *сапожная лапа*

**ЛАПЫ II** (ҡариҙел, төньяҡ-көнсығыш, урта) *и.* 1. Ҡый, сүп-сар — *сор.* Сәйгә лапы төшкән. Йорт сыпырылмаған лапы былып китте (ҡариҙел). 2. (урта) Талҡыш — *кострика.* 3. Кәбәк —*мякина.* 4. Һөрөлгәндән һуң үлән баҫҡан баҫыу — *поле, заросшее сорняком*

**ЛАПЫ III** (ҡариҙел, урта) *и.* 1. Бола, тәртипһеҙлек — *беспорядок.* Өйләре бола, ҡый (ҡариҙел). 2. (урта) Кәрәкмәгән әйбер — *лишняя вещь.* Салғы лапы булып йөрөмәһен тип алманым. 3. Әрпеш — *неряха*

**ЛАПЫ IV** (урта) *и.* батҡыл, һаҙамыҡ урын — *топкое место*

**ЛАПЫ V** (ҡариҙел) *и.* бәҫ — *иней*

**ЛАПЫ VI** (урта) *р.* күп, туп-тулы — *полным-полно.* Сыйырсыҡ беҙҙә лапы.

**ЛАПЫ VII** (эйек-һаҡмар) *и.* эләгет — *бурелом.* Лапыны һыуһар сыбарлап ташлай

**ЛАПЫЙ** (гәйнә) *и.* 1. Талҡыш — *кострика.* 2. Ваҡ тешле, сүп таҙарта торған тырма — *борона с мелкими зубьями*

**ЛАПЫЛДАУ** (әй) *ҡ.* кәрәкмәгәнгә күп һөйләү — *много болтать*

**ЛАПЫЛДЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* епшек — *мокрый (о снеге).* Кереште бит лапылдыҡ ҡар йауырға

**ЛАПЫ-ЛОПО** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сүп-сар — *мусор*

**ЛАРЫЛДАҠ, ЛАРЫЛДЫҠ** (дим) *с.* лабырҙаҡ — *тараторка, трещотка*

**ЛАРЫЛДАУ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар, әй) *ҡ.* 1. Ҡысҡырып әрләшеү — *ругаться во весь голос.* 2. Ҡысҡырыу — *кричать.* Был ларылдай башланы инде (әй)

**ЛАС, ЛАЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* тас — *точь-в-точь.* Лас этәсе. Лач бөйөрөнә ҡадалды (гәйнә)

**ЛАСА** (төньяҡ-көнбайыш) *к.* ләбаһа — *утвердительная частица.* Киткәннәр ийе ласа! Лаҫа (дим). Алды лаҫа

**ЛАСБЫҠ** (гәйнә) *и.* әрпеш — *неряха.* Ҡызлар ласбыҡ буламей?

**ЛАПЫЛЫҠ** (гәйнә, ҡариҙел, урта, әй) *и.* шырлыҡ — *чаща*

**ЛАПЫРТЛЫҠ** (һаҡмар) *и.* ҡарағура — *бурьян.* Ул туғай йатҡаны менән лапыртлыҡ

**ЛАПЫШ** (салйоғот) *и.* эре томбойоҡ — *крупная лилия*

**ЛАРҪЫЛДАУ, ЛАРҺЫЛДАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* ларылдау — *громкий лай (собаки)* Унының эте ларҫылдап өрөп сыҡты. Әгәр ҙә берәүҙең урған йерендә биш-алты башаҡ ҡалһа, Алламорат һағыҙ кеүек йәбешә, эт кеүек ларһылдай

**ЛАСИНКА** (дим) *и.* 1. Һөйрәтке — *волокуша.* Ласинкала малай-шалай булды инде. 2. (урта) Носилка — *носилки*

**ЛАСИНКАЛАУ** (урта) *ҡ.* көлтәне ике таяҡҡа тейәү — *сложить суслон на носилки*

**ЛАСҠУТ** (һаҡмар) *и.* ҡырҡынды — *лоскут.* Ласҡуттан һуҙма тегәләр ине әбейләр

**ЛАСТЫЛДАУ** (урта) *ҡ.* ласҡылдау — *чавкать, шлепать.* Батҡаҡ йырып барыусы тәгәрмәстәрҙән, үгеҙ айырыларынан бер үк төрлө йөҙәткес ластылдау аратирә ишетелеп ҡала

**ЛАСТЫР** (ҡариҙел) *с.* иҫке, алама — *истрепанный.* Ластыр кейем белән бараммы?

**ЛАСЫ** (ҡариҙел) *с.* һимеҙ — *жирный.* Ласы бала тиҙ атламай

**ЛАСЫЛДАТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ласҡылдатыу — *чавкать.* Ласылдатып һағыҙ сәйнәүҙән башҡа ни эше бар аның

**ЛАСЫН I** (арғаяш, дим, ҡариҙел, урта) *и.* ыласын — *сокол*

Ласын ғына булыр үрҙәрҙә,
Өрәк кенә булыр ҡулдәрҙә (арғаяш)

**ЛАҪТАЙЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Йәйелеү — *развалиться.* 2. (әй) Өлтәйеү — *взъерошиться (о волосах)*

**ЛАТИК** (урта) *и.* туғын бөгөү өсөн ҡулланылған махсус тимер — *приспособление для сгибания обода*

**ЛАТҠА** (арғаяш) *и.* ит быҡтырып бешерә торған суйын һауыт — *чугунок для тушения мяса*

**ЛАТҠЫ** (урта урал, әй) *и.* балсыҡ сеүәтә — *глиняная чашка*

**ЛАТЫШ БҮРЕҢГЕ** (дим) *и.* аҡ картуф — *белый картофель*

**ЛАУҠЫЛТАУ** (урта) *ҡ.* 1. Ләүкеү — *пылать.* 2. Ҡысҡырыу — *кричать*

**ЛАУЛАУ** (урта) *ҡ.* гөлтләп яныу — *воспламеняться.* Лауламаны, ҡулға тотҡоһоҙ булып таралып бөттө лә ғуйҙы

**ЛАУЛЫЙ** (урта) *с.* туҙған — *растрепанный.* Лаулый баш

**ЛАУЫҠ** (дим) *и.* текә яр — *крутой берег*

**ЛАУЫЛДАУ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡысҡырып һөйләшеү — *громко разговаривать*

**ЛАУЫР I** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ыйыҡ — *туберкулез желез.* Лауыр белән ауырығаннарҙың эрене ағып йөрөнө, аға ништәтергә лә белмәнеләр. 2. Ҡылауыр — *золотуха.* Шунын йағына лауыр сыҡҡан бит

**ЛАУЫР II** (эйек-һаҡмар) *и.* ыйыҡ ауырыуын дауалай торған үлән — *лекарственная трава, используемая при лечении туберкулеза желез.* Ике төрлө лауыр, переһе сәскә ата, переһе атмай

**ЛАФКАСЫ** (дим, туҡ-соран) *и.* һатыусы — *продавец*

**ЛАҺЫЛДАУ** (дим) *ҡ.* «һ» өнө менән һөйләшеү — *говорить со звуком «h»*

**ЛАШБЕК** (гәйнә) *с.* йәйенке — *широкий*

**ЛАШИҢКА** (төньяҡ -көнбайыш) *и.* носилка — *носилки.* Лашиңка белән көлтә кертәдерейек

**ЛАШМАН I** (ҡыҙыл, урта) *с.* килбәтһеҙ — *несуразный*

**ЛАШМАН II** (урта, әй) *и.* бәлә, мәшәҡәт — *канитель, возня.* Лашманы күп был эштең (урта). Лашман эш төшкәнмәллә башыңа (әй)

**ЛАШМАН III** (урта) *р.* 1. Ләж — *плашмя.* Ҡуҙғалмай ҙа лашман йата. 2. *с.* ауыр, ҡуҙғалмаусан — *тяжелый на подъем*

**ЛАШТАЙЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йәйелеү — *растянуться*

**ЛАШТЫР** (ҡариҙел) *с.* килбәтһеҙ — *неаккуратный, мешковатый (об одежде).* Лаштыр кейем (әй)

**ЛАШЫҠ** (урта урал, әй) *с.* яшыҡ — *постное (о мясе).* Ҡунаҡҡа лашығ ит бешермәҫ инде кеше

**ЛАХАН** (урта урал) *и.* 1. Ағас күнәк — *бадья.* 2. (эйек-һаҡмар, әй) Лаҡан — *лоханка.* Лаханды беҙ йыуынды һыуға ултыртабыҙ

**ЛЕБЕРДЕК** (ҡариҙел) *с.* кәүшәк — *рыхлый, мягкий*

**ЛЕБЕРЛӘК** (урта) *и.* һағын — *струящийся воздух (в теплый солнечный день)*

**ЛЕЗДЕР** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* бысраҡ — *неряшливый.* Лездер кешедә тороп үрәнгән йүнсезлеккә (төньяҡ-көнбайыш). Лездер кейем (ҡариҙел)

**ЛЕКЕЛДӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* йыш-йыш тибеү *(йөрәккә ҡарата)* — *учащенное сердцебиение*

**ЛЕКӘШЕҮ** (әй) *ҡ.* һырышып, йәбешеп йатыу — *прильнуть.* Кәк килдеме, лекәшеп йата, ҡыуып та ғайтарып бумай

**ЛЕПЕК** (дим, урта) *и.* һуҡыр себен — *мошкара.* Ләпәк (дим, урта)

**ЛЕПЕРТ** (дим, туҡ-соран) *р.* лыпын — *плашмя.* Йерләрҙә иген леперт йатты

**ЛЕПЕРТОЙАҠ** (дим, туҡ-соран) *и.* ҡаҙ-өйрәк — *гуси-утки.* Бирнәгә лепертойаҡ та була (туҡ-соран)

**ЛЕПКЕ** (ҡариҙел, мейәс, урта) *и.* лепкә — *родничок (у младенцев)*

**ЛЕП-ЛЕП** (урта, әй) *ы.* тауыҡ тотҡанда әйтелә торған һүҙ — *междометие при ловле курицы*

**ЛЕПШЕК** (урта, әй) *с.* йепшек — *мокрый, влажный.* Лепшек көндә лә тышта йөрөмәҫһең инде (әй)

**ЛЕПШЕЛТӘҮ** (урта) *ҡ.* епшетеү — *теплеть (зимой)*

**ЛЕПӘКӘЙ I** (дим) *и.* һуҡыр себен — *мошкара.* Ләпкәй, ләпәкәй (урта)

**ЛЕПӘКӘЙ II** (эйек-һаҡмар) *и.* лепкә — *родничок (у младенцев)*

**ЛЕРЛӘҮ** (урта) *ҡ.* бергәләп осоу тауышы сығарыу — *звук крыльев при дружном полете мелких птиц.* Турғайлар осһа, лер-лер итеп лерләп оса

**ЛЕРЛӘШЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эркелешеү — *хлынуть (о народе).* Балалар лерләшеп уның артынан әйәрләр. Кешеләр лерләшеп урамға һибелделәр

**ЛЕРКЕЛЕШЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эркелешеү — *хлынуть (о народе).* Өйгә эркелешеп-леркелешеп килеп инделәр

**ЛЕС** (салйоғот) *с.* бысым — *неудавшийся (о хлебе).* Лес икмәк. Лестек (төньяҡ-көнбайыш)

**ЛЕСТЕК** (ҡариҙел) *с.* һыулы күҙ — *водянистый (о больных глазах).* Лечтек (гәйнә)

**ЛЕҺЕРЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* йүгерекләү — *быстро двигаться (о детях)* Балалары леһерләп йөрөйләр

**ЛИБЫРЫҠ ПЕЧИН** (гәйнә) *и.* бесәй үләне — *валериана лекарственная*

**ЛИЖАК** (дим, урта) *и.* егерме дүрт рамлы йәшник умарта — *многорамный улей*

**ЛИКЕН** (ҡыҙыл, салйоғот) *т.* ләкин — *но, однако*

**ЛИМӘНТӘ** (урта) *и.* түшелдерек — *нагрудник*

**ЛИНТА** (салйоғот) *и.* филтә — *фитиль.* Линтаһы йана бит лампыңдың

**ЛИПА** (һаҡмар) *и.* 1. Мөлкәт, байлыҡ — *имущество, богатство.* Барлыҡ липаһын тейәп сығып китте. Ҡарап торған липа ошо инде. 2. Иҫке-моҫҡо — *ветошь.* Был липаларыңды йыйыштырып торһаң да йарай

**ЛИПАТА** (һаҡмар) *и.* төпөш — *коротыш*

**ЛИПАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* лыпын йатыу — *припасть, прилипать к земле.* Һуғаннарым ергә липашҡан

**ЛИПЕЙ-ЛИПЕЙ** (әй) *ы.* тауыҡ тотҡанда ҡабатлай торған һүҙ — *междометие, употребляемое при ловле курицы*

**ЛИПУШКА** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Емеш бәлеше — *пирог с ягодной начинкой.* 2. (урта) Көлсә — *лепешки*

**ЛИСКА** (ҡариҙел, әй) *и.* сәүек эт — *низкорослая собака*

**ЛИСКӘ** (төньяҡ-көнбайыш, әй) *с.* төпөш — *коротыш.* Лискә гөсөк

**ЛИСТ** (урта) *и.* икмәк тимере — *лист для выпечки хлеба*

**ЛИСТАЛЫ БАЛАУЫҘ** (ҡыҙыл) *и.* умартаға ҡуйыу өсөн әҙер балауыҙ — *воск, готовый для улья*

**ЛИСТУК** (көнсығыш диалект) *и.* балауыҙ табағы — *лист для воска.* Листек (арғаяш)

**ЛИСӘН** (урта) *и.* лэйсән — *первый весенний дождь*

**ЛИСӘСӘК** (урта) *и.* ҡырҡынды — *лесосека*

**ЛИТРУМ** (дим) *и.* майҙа бешерелгән ҡабартма — *пышки, испеченные в масле*

**ЛИТУК** (ҡыҙыл) *и.* кейә — *леток (у ульев)*

**ЛИХАМАН I** (урта урал) *и.* биҙгәк — *малярия.* Умбиш көн инде лихаман тота. Лихаманка (ҡариҙел)

**ЛИХАМАН II** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* бысраҡ — *грязный*

**ЛИХАМАН III** (урта, әй) *и.* эшкә ярамаған, файҙаһы булмаған кеше — *нетрудоспособный человек*

**ЛОБОРҘАУ** (урта) *ҡ.* лыбырҙау — *лепетать.*

**ЛОҠМА** (һаҡмар) *р.* саҡ ҡына, аҙ ғына — *чуточку.* Бөгөн лоҡма аҙыҡ ҡапҡан йуҡ

**ЛОҠОЛДАУ** (салйоғот) *ҡ.* кейем бушаҡ булып тороу — *висеть (об одежде).* Күлмәгем лоҡолдап тора

**ЛОҠОТ** (арғаяш, һаҡмар) *и.* ноҡот борсағы — *фасоль*

**ЛОРҪ: ЛОРҪ ИТЕҮ** (урта) *ҡ.* ауырлыҡ менән йығылыу тауышы — *звук при падении чего-либо тяжелого.* Аты ҡапыл туҡтаны, башын эйеп, әҙерәк бәүелеп торҙо ла, лорҫ итеп ҡарға ауҙы

**ЛОБОРҘАУ** (мейәс) *ҡ.* гөрләү (күгәрсенгә ҡарата) — *ворковать (о голубях)*

**ЛӨҒӘТ** (урта урал) *и.* тапҡыр һүҙ — *пословица, поговорка*

**ЛӨҒӘТСЕҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* килбәтһеҙ — *несуразный.* Лөкәтһеҙ (урта урал)

**ЛӨҠӘТ** (арғаяш) *и.* тел — *язык (средство общения).* Беҙҙең лөкәт шу инде

**ЛӨМТӘЙ** (урта) *с.* ҡараңғы сырайлы — *мрачный*

**ЛӨҢКӨЛДӘК** (салйоғот, әй) *и.* мыжык — *ворчун*

**ЛӨП: ЛӨП ИТЕҮ** (урта) *ҡ.* дөп итеү — *издать глухой звук при падении.* Лөп итеп әйләнде айыу

**ЛӨПӨРТ, ЛҮПЕРТ** (һаҡмар) *р.* 1. Мул — *обильно.* Малға бесәнде лөпөрт итеп һалғанһың, ҡышын сығыуына йетмәҫ кий. 2. (урта) Лыпын — *плашмя.* Өсөһө лә лөпөрт йата

**ЛӨПӨРТӨЙ, ЛӨПӨРТӘЙ** (һаҡмар) *с.* тоҡор — *короткий.* Кәүҙәгә лөпөртәй генә булды Төхвәт

**ЛӨПӨШ** (урта) *с.* 1. Лапаҡ — *низкий.* Тарбай оҙон ботло, бүҙәнә ҡыҫҡа лөпөш була. 2. Ҡыҫҡа — *короткий.* Бөҙрәләнеп йапраҡ йарған лөпөш ҡайыннар ҙа күҙгә ташлана

**ЛӨПШӨЛДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* мөлкөлдәү — *мелко качаться от полноты*

**ЛӨРПӨК ҠАР** (һаҡмар) *и.* епшек ҡар — *слякоть*

**ЛУБЫРЛАҠ** (урта) *и.* һөйләнсәк — *ворчун.* Лубырҙаҡ (мейәс)

**ЛУҘЫР I** (дим) *и.* ялҡау — *лодырь*

**ЛУҘЫР II** (һаҡмар) *и.* турғайҙан ҙурыраҡ ялан ҡошо — *степная птица больше воробья.* «Турғайҙан ҙурыраҡ, ҡара, сыбар, луҙыр-луҙыр, тип тауыш сығара, туғайҙа була»

**ЛУ ЙЫЛЫ, ЛЫУ ЙЫЛЫ** (һаҡмар) *и.* 12 йылдан ҡабатланыусы хайуан исеме — *год дракона в 12-ти цикличном животном календаре*

**ЛУҠРАЙЫУ** (урта) *ҡ.* маһайыу — *возгордиться.* Луҡрайып утырма

**ЛУҠЫ** (һаҡмар) *и.* әрпеш — *неряха.* Луҡы килен шулай буламы?

**ЛУПЕРТ** (салйоғот) *и.* бысраҡ — *грязь*

**ЛУПТЫР** (әй) *и.* әрпеш — *неряха*

**ЛУПШЫҠ** (ҡыҙыл) *с.* бушаҡ — *свободная (одежда)*

**ЛУПЫЛДАТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ауыҙ тултырып ашау — *набивать рот едой.* Лупылдатып ашаныр ҙа йөрөр ошо Мәхмүҙә әбей

**ЛУПЫРЫШ** (урта, урта урал) *с.* 1. Килбәтһеҙ — *несуразный (об одежде)* Лупырыш кейем. 2. Ауыр кәүҙәле — *тучный (о человеке).* Лупырыш кеше тиҙ ҡуҙғалмаҫ инде (урта)

**ЛУРҠАЙЫУ** (ҡыҙыл, һаҡмар, әй) *ҡ.* йәйелеп китеү — *расплываться.* Эштәмәй лурҡайып тиг утыра (әй)

**ЛУРҠЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* мығырҙау — *ворчать*

**ЛУРҠЫШ** (әй) *с.* артыҡ һимеҙ — *слишком полный.* Күб ашап лурҡыш булыб утыра инде

**ЛУРПЫШ** (дим) *с.* килбәтһеҙ — *несуразный (о человеке)*

**ЛҮПЕРТ** (һаҡмар) *р.* мул — *обильно.* Беҙен бабай бесәнде лүперт итеп һала торғайны

**ЛҮТЕР** (ҡыҙыл) *и.* күтер — *трясина*

**ЛҮШ** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ағас башына ултырған ҡар — *изморозь.* 2. Ағастың кипкән ботаҡтары — *высохшие ветки*

**ЛҮШКӘ** (арғаяш, салйоғот) *и.* йүшкә — *вьюшка*

**ЛҮШӘ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Бәҫ — *иней.* 2. (һаҡмар) Ағас ботағына боҙ булып туңған ҡар — *изморозь.* Лүшә сәпсим ағасты кәкерәйтеп төшә, йоҡа ғына булһа, бәҫ була (ҡыҙыл)

**ЛЫБРА** (гәйнә) *и.* ығыш — *копуша*

**ЛЫБЫЖҒЫ, ЛЫЖДЫР** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Ебегән — *недотепа.* 2. Ығыш — *копуша*

**ЛЫБЫЙ, ЛЫБЫҠ** (арғаяш) *с.* епшеү — *мокрый (о снеге)*

**ЛЫБЫК ҠАР** (арғаяш) *и.* епшек ҡар — *мокрый снег*

**ЛЫБЫЛДАТЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* епшетеү — *подтаять (о снеге)*

**ЛЫБЫРДЫРЫҠ** (гәйнә) *и.* ҡаҙ үләне — *гусиная лапчатка*

**ЛЫБЫРА, ЛЫБЫРЫҠ** (гәйнә) *и.* ебегән — *недотепа*

**ЛЫБЫРАҠ, ЛЫБЫРДЫҠ** (гәйнә) *и.* ығыш — *копуша*

**ЛЫБЫРДАУ** (гәйнә) *ҡ.* быжыу, ылдырау — *вянуть.* Лыбырдап китә картук кырау төшсә

**ЛЫБЫРҘАҠ** (арғаяш) *и.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**ЛЫБЫРҘАУ** (гәйнә) *ҡ.* мығырҙау — *ворчать*

**ЛЫБЫРҘЫҠ, ЛЫБЫРДЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* һөйләнсек — *разговорчивый.* Ҡунағым ҙерә лыбырҙыҡ булып сыҡты (ҡариҙел)

**ЛЫБЫРҘЫУ** (гәйнә) *с.* яй ҡуҙғалыусан — *медлительный*

**ЛЫҒЫР** (һаҡмар) *р.* 1. Бик күп — *в обилии, обильно.* Хәҙер балыҡ мурҙаға лығыр төшә лә ғуйа. 2. (эй) Ҡуйы — *густой.* Лығыр ашты ҡунаҡҡа ғуйыпумай инде

**ЛЫҒЫРҘАУЫҠ, ЛЫҒЫРҘЫҠ** (дим, ҡариҙел) *и.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**ЛЫЖ: ЛЫЖ ҠОМ** (дим) *р.* лыс ҡом — *весь в песке;* лыж һыу (лыс һыу) *насквозь мокрый.* Лыҡ (ҡариҙел), лыҡы (һаҡмар), лыпа (урта); лыж йатыу (гәйнә) лыпын йатыу — *лечь плашмя*

**ЛЫЖБЫР I** (эй) *и.* ығыш — *копуша*

**ЛЫЖБЫР II: ЛЫЖБЫР ҺЫУ** (эй) *с.* лыс һыу — *насквозь мокрый*

**ЛЫЖБЫР III** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Булдыҡһыҙ — *беспомощный.* 2. (гәйнә) Сибек — *слабый (о здоровье)*

**ЛЫЖЫҠ** (урта урал) *с.* яй ҡуҙғалыусан — *медлительный*

**ЛЫЖЫРДАУ** (гәйнә) *ҡ.* иҙелеү — *развести (о дороге)*

**ЛЫЙЛА** (салйоғот) *и.* ләм — *ил.* Лайла (эй)

**ЛЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* лыҡа — *до отказа.* Сандығы лыҡ булған. Лыҡ тулы (һаҡмар) лыҡа тулы — *полный до отказа.* Лыҡ һыу (лыс һыу) — *насквозь мокрый*

**ЛЫҠА I** (эйек-һаҡмар) *и.* йүкә — *лыко*

**ЛЫҠА II** (арғаяш) *к.* тик — *только, лишь.* Лыҡа йәблек утыҙтың

**ЛЫҠА: ЛЫҠА ЙЕР** (арғаяш) *и.* ҡалҡыуыраҡ ер, һөҙәк кенә тау — *возвышенное место*

**ЛЫҠЫ I** (мейәс, һаҡмар, эй) *р.* лыҡа — *до отказа, полностью.* Борон урман араһы лыҡы тулы мал ине

**ЛЫҠЫ II** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* шаталаҡ — *балагур*

**ЛЫҠЫЛТАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* лыҡылдау — *болтать*

**ЛЫҠЫРА** (дим) *и.* һалаҡы — *неряха*

**ЛЫҠЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ныҡышыу, ныҡыу — *повторять настойчиво.* Бер сүзне тәпәмә, бер сүзне лыҡыма

**ЛЫҠЫП: ЛЫҠЫП ЙАТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* күп булып ятыу — *наполняться; быть в изобилии.* Лыҡып йата мурҙалар

**ЛЫП: ЛЫП ЯТЫУ** (мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* лыпын ятыу — *лежать плашмя.* Лып ултырыу (һаҡмар) лыпын ултырыу — *плюхнуться.* Мәликә эбей, йөрәген тотоп, урындыҡ ситенә лып ултырҙы

**ЛЫПА: ЛЫПА ХЫУ** (урта) *р.* лыс һыу — *насквозь мокрый.* Тирләп лыпа һыу булдым

**ЛЫПАШЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Һалыныу — *обвисать (об одежде).* 2. Йәйелеү — *растянуться (об одежде).* 3. (урта урал, эй) Һыланып, йәбешеп тороу — *обтягивать (об одежде)*

**ЛЫПҠЫТЫП: ЛЫПҠЫТЫП АТЫУ** (урта урал) *ҡ.* бер-бер артлы атыу — *стрелять очередью*

**ЛЫП-ЛЫҠЫР** (урта) *р.* туп-тулы — *полным-полно.* Өҫтәл лып-лыҡыр тулы була ла ғуйа ыризыҡ белән

**ЛЫПТЫР** (ҡариҙел) *и.* 1. Әрпеш — *неряха.* Өс башын да ҡарамай ул лыптыр. 2. Ығыш — *копуша.* Лыптыра (эй)

**ЛЫПЫЛДАҠ** (арғаяш, ҡыҙыл, урта) *и.* епшек — *слякоть.* Лыпылдаҡҡа табанды быйма гейәм (ҡыҙыл)

**ЛЫПЫЛДАП ЙАТЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* епшетеү — *таять (о снеге)*

**ЛЫПЫМ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *р.* лыпын — *плашмя, вплотную, плотно прижавшись.* Лыпым ултырыу (лыпын ултырыу) — *плюхнуться.* Ләпан ултырыу (гәйнә)

**ЛЫПЫН I** (дим) *и.* ҡыйыҡһыҙ лапаҫ — *навес без крыши*

**ЛЫПЫН II** (гәйнә) *р.* тығыҙ — *тесно*

**ЛЫПЫРТ: ЛЫПЫРТ ИТЕП ТӨШӨҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* лырҡ итеп төшөү — *упасть с плюханьем.* Лыпырт итеп төшөп китте апиндисит

**ЛЫПЫРТЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* тырҡыш — *грязный*

**ЛЫПЫС, ЛЫТЫШ** (ҡариҙел) *с.* ләс — *неудавшийся (о хлебе)*

**ЛЫПЫТҠАЙ: ЛЫПЫТҠАЙ ҠАР** (арғаяш) *и.* епшек ҡар — *мокрый снег*

**ЛЫПЫШ I** (ҡариҙел, эй) *с.* 1. Бысым — *неудавшийся (о хлебе).* 2. Ығыш — *копотливый, медлительный*

**ЛЫПЫШ II** (эй). *и.* 1. Әрпеш — *неряха.* 2. *с.* Лупыш — *неуклюжий.* 3. (минзәлә) Һүлпән — *вялый.* Лыпышланып барма!

**ЛЫРҠАЙЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* артыҡ һимереү — *слишком полнеть*

**ЛЫРҠЫШ** (урта) *с.* 1. Бик йыуан, һимеҙ — *слишком полный, тучный.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) *и.* уңмаған — *размазня (о женщине)*

**ЛЫРПАЙЫП: ЛЫРПАЙЫП ЙАТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* килбәтһеҙ йәйелеп ятыу — *некрасиво растянуться*

**ЛЫС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ылыҫ — *хвоя*

**ЛЫСБЫҠ** (ҡариҙел, урта урал) *и.* бысый, йәше сығып торған күҙле кеше — *человек со слезящимися глазами.* Лысҡылдаҡ (дим)

**ЛЫСҠЫЙ** (туҡ-соран, ырғыҙ, һаҡмар) *р.* лыс — *совершенно.* Лысҡый һыу булған

**ЛЫСҠЫЛДАҠ** (дим) *с. бысым — неудавшийся (о хлебе)*

**ЛЫСТЫР I** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* 1. Иҫке — *ветхий.* Лыстыр йорт. 2. (ҡариҙел) Ығыш — *копотливый,* 3. Килбәтһеҙ — *несуразный.* 4. (урта урал) Насар — *плохой.* Лыстыр кеше беле жулға чыҡма дигән бабайлар, начар кеше беле. 5. (төньяҡ-көнбайыш) Һалаҡы — *неряшливый*

**ЛЫСТЫР II** (гәйнә) *с.* аҙ — *мало.* Белем лыстыр минең

**ЛЫҪТЫР I** (әй) *с.* 1. Насар, йәмһеҙ — *плохой.* Лыҫтыр кина күрҫәттеләр. 2. Әрпеш — *неряшливый.* 3. (гәйнә) Тупаҫ — *грубый.* Телем лыҫтыр минең

**ЛЫҪТЫР II** (әй) *и.* ваҡ сепрәк киҫәктәренән туҡымаға биҙәктәр һалып тегелгән ултырғыс йәки һандыҡ ябыуы — *покрывало из разноцветных лоскутьев*

**ЛЫФШЫРЫҠ, ЛЫШБЫРЫҠ** (урта урал) *и.* епшек — *оттепель*

**ЛЫШБЫРТ** (әй) *и.* һыулы ҡар — *мокрый снег*

**ЛЫШҠЫРТАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* мышҡылдау — *сопеть.* Лышҡыртап тик йөрөй

**ЛЫШТЫР** (гәйнә, әй) *с.* 1. Яй ҡуҙғалыусан — *копотливый.* 2. (ҡариҙел) *и.* иҫке кейем — *ветхая одежда*

**ЛЫШТЫРАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* һалбырау — *свисать.* Иреннәре лыштырап төшкән эйе

**ЛЫШТЫР-ЛАШТОР** (ҡариҙел) *р.* йыйнаҡһыҙ — *неряшливо.* Лыштыр-лаштор йөрөмәсәң булмаймы!?

**ЛӘ** (мейәс) *ы.* ҡапыл аптырауҙы белдергән ымлыҡ һүҙ — *междометие удивления.* Лә, ҡыҙым кигән дә!

**ЛӘБЕРЛӘК** (урта) *и.* тел биҫтәһе — *говорун*

**ЛӘБӘЙ: ЛӘБӘЙ ЭТ** (мейәс) *и.* сәүек эт — *низкорослая собака*

**ЛӘГҮШКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* лаҡан — *лохань*

**ЛӘГҮШӘ** (гәйнә) *и.* тәлмәрйен — *лягушка*

**ЛӘГӘН** (һаҡмар) *и.* тас — *корыто, таз.* Ләгәнгә һалып бир йемде атыңа. Эләгән (дим)

**ЛӘЙИР** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* сибек — *хилый*

**ЛӘЖ** (мейәс, урта) *р.* лыпын — *плашмя.* Ләж йатты ла ғуйҙы бала

**ЛӘЖБЕК** (гәйнә) *и.* илаҡ — *плакса*

**ЛӘЖБЕРӘҮ** (урта урал) *ҡ.* һулыу — *вянуть.* Гөлөм туңып вис ләжберәп киткән

**ЛӘЖӘК, ЛӘЖЖӘК** (дим, урта) *и.* рам ҡуйып йәтешләнгән бағана умарта — *колодный улей с рамами*

**ЛӘЖӘНКӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* бесән тейәү өсөн санаға арҡыры һалынған ағастар — *санные жерди*

**ЛӘЗ: ЛӘЗ ЙАТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* лыпын ятыу — *лежать плашмя*

**ЛӘЙКӘ** (урта, әй) *и.* һыу һиптергес — *лейка*

**ЛӘЙҠӘТЛЕ I** (дим) *с.* уңайлы — *подходящий.* Ләйҡәтле урын, йере, хыуы, урманы бар

**ЛӘЙҠӘТЛЕ II** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* саф күңелле, йомшаҡ күңелле — *душевный*

**ЛӘЙСӘ** (һаҡмар) *и.* ләйсән — *первый весенний дождь*

**ЛӘЙСӘН I** (һаҡмар) *и.* тәүге ҡар — *первый снег*

**ЛӘЙСӘН II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аяҙ, йылы көндә яуған ямғыр — *грибной дождь*

**ЛӘЙӘҠЫН, ЛАЙАҠЫ** (көнсығыш диалект) *р.* ләйәҡыл — *вдрызг.* Ләйәҡын иҫерек

**ЛӘЙӘҠӘТЛЕ** (туҡ-соран) *с.* ышаныслы — *надежный.* Йалыу итәргә бер ләйәҡәтле ир булманы

**ЛӘКӘК** (арғаяш ) *и.* сәкән — *клюшка.* Ләкәк һуғыу

**ЛӘКӘҪ** (дим) *с.* бысым, ләс — *неудавшийся, сырой (о хлебе)*

**ЛӘҠАП, ЛӘҠӘП** (арғаяш, әй) *и.* 1. Әйтем — *поговорка.* 2. (эйек-һаҡмар, урта) Ғәйбәт һүҙ — *сплетня.* Үәли ағай, әйтегеҙ әле, һеҙ ике йөҙләлөк, ләкәп һүҙ тараҡкан өсөн Хангилдингә ниндәй йаза бирер инегеҙ?

**ЛӘҠӘП СҮЗ** (урта урал) *и.* мәрәкәле әйтем — *забавное, анекдотичное выражение*

**ЛӘҠӘС** (дим) *с.* бысым — *неудавшийся (о хлебе)*

**ЛӘЛИМ** (гәйнә) *и.* шамбы — *налим*

**ЛӘЛ-ЛӘЛ ТОРОУ, ЛӘЛӘЙ ТОРОУ** (дим, ҡыҙыл, урта) *ҡ.* баланың башлап аяҡҡа баҫыуы — *впервые вставать на ноги (о ребенке).* Ләл-ләл баҫыу (һаҡмар).

**ЛӘЛӘЙ БУЛ, ЛӘЛӘКӘЙ БУЛ** (эйек-һаҡмар) *ы.* баланы аяғына баҫырға өндәү һүҙе — *слово призыва ребенка вставать на ноги*

**ЛӘМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Шыйыҡ балсыҡ — *жидкая глина.* Ләмгә аунаған (гәйнә). 2. (эйек-һаҡмар) Яҙғы ташҡындан һуң төбөндә һарҡып ҡалған ҡом — *мелкий песок, осевший на дно реки после половодья.* 3. (ҡариҙел) Лай — *ил*

**ЛӘМ II** (ырғыҙ, әй) *и.* ылымыҡ — *водоросль*

**ЛӘМ III** (арғаяш, урта, урта урал) *р.* ләм-мим — *ни слова.* Ләм һүҙ ғушманы (урта)

**ЛӘМЕК, ЛӘМҮК** (ҡариҙел) *и.* ылымыҡ — *водоросль*

**ЛӘМКӘ** (гәйнә) *и.* бауырғалыҡ — *подбрюшник.* Ләмкә булыу (төньяҡ-көнбайыш) күнегеү — *привыкать.* Ләмкә булып киткәммен инде аңа

**ЛӘМЧӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* лай — *ил*

**ЛӘННЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ылымыҡ — *водоросль*

**ЛӘҢГЕ** (ҡыҙыл) *и.* солоҡта баҫып тороу өсөн ҡуйылған табалдырыҡ — *подножка, приспособление для ног на бортевом дереве*

**ЛӘҢГӘС** (дим) *и.* яндау — *четырехлитровый деревянный сосуд*

**ЛӘҢКЕЛДӘҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* һөйләнеп ваҡыт уҙҙырыу — *болтать впустую*

**ЛӘҢКӘС** (урта) *и.* дегет һауыты — *лагун*

**ЛӘП** (ҡыҙыл, урта) *и.* шаҡ — *заячий или беличий след на снегу.* Тейен ләбе күрҙем (урта)

**ЛӘПАН** (гәйнә) *р.* лыпын — *плашмя*

**ЛӘПЕ I** (һаҡмар) *и.* тәпе — *мышеловка*

**ЛӘПЕ II** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* мәте — *глина*

**ЛӘПЕЙ I** (туҡ-соран) *и.* ҡош-ҡорт тәпәйе — *лапки птиц*

**ЛӘПЕЙ II** (һаҡмар) *и.* лаҡылдаҡ — *говорун.* Мөхәмәт ләпей бар саҡта тик торһаң да йарай

**ЛӘПЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Батҡаҡ ер — *топкое место.* Бер ҡат ләпек жирне үтәсең. 2. Бысраҡ — *грязь.* Ҡара ләпек. Ләпеккә кермә, бәбәйем. 3. Мәте — *глина*

**ЛӘПЕК СЕБЕН** (урта) *и.* һуҡыр себен — *мошкара*

**ЛӘПЕЛДӘК** (ҡыҙыл, ырғыҙ) *с.* лаҡылдаҡ — *говорун.* Ләпелдәк кеше була, ләпелдәп тик тора (ҡыҙыл)

**ЛӘПЕМБӘ** (һаҡмар) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**ЛӘПЕС** (ҡариҙел) *с.* бысым — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* Ләпес булған икмәгем, мейесем сүрән булған

**ЛӘПЕШӘ** (ҡариҙел) *с.* тәпәш — *низкий.* Өйләре дә ләпешә генәйе

**ЛӘПКЕ** (һаҡмар) *и.* 1. Әбәк уйыны — *пятнашки.* 2. (урта) Биш таш уйыны — *игра в пять камешков*

**ЛӘПКЕС** (гәйнә) *и.* уйһыу — *низина*

**ЛӘПКӘ I** (ҡариҙел) *и.* лепкә — *родничок у младенцев*

**ЛӘПКӘ II** (урта) *и.* һуҡыр себен — *мошка*

**ЛӘПКӘС** (гәйнә) *и.* 1. Уйһыу — *низина.* 2. Һаҙлы ер — *болотистое место*

**ЛӘПЛӘМӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ерҙә ҡалып серегән бәрәңге — *перезимовавший в земле картофель.* Ләпләмәне ашасаң, йөрәкәйем дәртләнә, тигәмбулайыҡ көләп

**ЛӘПҪЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡош йәки ҡуяндың өшәләктә ятыуы — *быть в зимней норе (о зайце или птицах).* Ҡош ҡарҙа ләпҫеп йата йоҡтап

**ЛӘПШӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* йәйелеү — *развалиться.* Быйма табаны, йеүеш ҡарға йейеп, таҡыйа кеүек ләпшәйгән

**ЛӘПӘ** (гәйнә) *и.* һөйләшмәгән кеше — *немой.* Баласы да ләпә ийе, сүләшмәй ийе. Әпә (төньяҡ-көнбайыш)

**ЛӘПӘЙКӘ: ЛӘПӘЙКӘ БУЛЫП** (ҡыҙыл) *р.* өйөрләп — *гурьбой.* Ләпәйкә булып уйнап килделәр балалар

**ЛӘПӘЙТ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡыра — *ряды сгребенного сена.* Күбәгә һалғансы ләпәйткә йыйаһың әле бесәнде

**ЛӘПӘК I** (дим, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта, һаҡмар) *и.* ләпәкәй — *мошкара*

**ЛӘПӘК II, ЛӘПӘКӘЙ** (ҡариҙел, ҡыҙыл, һаҡмар, эй) *с.* 1. Төпөш — *короткий.* Ләпәк үлән. Ләпәкәй генә апай ине ул. 2. (гәйнә, урта) Тәпәш — *низкий.* Шул ләпәк кенә өйҙә ғүмер иттеләр инде (урта)

**ЛӘПӘКӘС: ЛӘПӘКӘС СЫСҠАН** (ҡыҙыл) *и.* һуҡыр сыскан — *крот.* Ләпәкәс сысҡан тиреһен дә ыздавайт итте кеше

**ЛӘПӘН** (мейәс) *и.* һуҡыр себен — *мошкара*

**ЛӘПӘНДӘШ** (ҡариҙел, эйек-һаҡмар) *с.* төпөш — *короткий.* Ләпәндәш кенә кейәүгә барған тей

**ЛӘПӘҪ I** (ырғыҙ) *с.* нәкәҫ, ялҡау — *ленивый.* Ләпәҫ кеше генә йарлы булған ул элек

**ЛӘПӘҪ II** (ҡыҙыл, урта) *и.* һуҡыр себен — *мошкара*

**ЛӘПӘШ I** (эйек-һаҡмар) *и.* яндау — *четырехлитровый деревянный сосуд*

**ЛӘПӘШ II** (урта, һаҡмар, ырғыҙ) *с.* тәпәш — *низкий.* Ләпәшә (гәйнә). Ләпәшә ыҙба

**ЛӘПӘШАУЫҘ** (гәйнә) *и.* борош — *подуст*

**ЛӘПӘШКЕ, ЛӘПӘШКӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* күтәрем — *охапка.* Ләпәшкегә йыйаһың әле күбәләгәнсе

**ЛӘПӘШКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Йәйенке — *растянутый.* Ләпәшкә әйбер. Ләпәшкә танаулы бисә. 2. (урта) *и.* Әсе йәймә — *лепешка из дрожжевого теста*

**ЛӘС** (дим, урта, эйек-һаҡмар, эй) *с.* бысым — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* Икмәгем ләс буған, уңмаған, өшөгән, ахыры

**ЛӘСКЕЙ** (урта, эй) *с.* бысым — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* Ләскей икмәк бешергән

**ЛӘСКЕЛТӘҮ** (урта) *ҡ.* ләсләнеү, сей булыу — *быть недопеченным (о хлебе)*

**ЛӘСКЕТ I** (ҡариҙел) *и.* ләстит — *сплетня.* Ләскет // күбул, ләске сүҙ

**ЛӘСКЕТ II, ЛӘСПЕТ** (ҡариҙел) *с.* бысым — *неудавшийся, сырой (о хлебе)*

**ЛӘСКӘ, ЛӘСКӘЙ** (дим, һаҡмар) *с.* бысым — *неудавшийся, сырой (о хлебе)* Ләскә буған икмәк, уңмаған (дим). Ләсмә, ләскей (урта). Ләчтә, ләчтей (төньяҡ-көнбайыш). Шепкән ул сасы үлән, эпейләрне ләчтей йасайдырыйы (гәйнә)

**ЛӘСМӘ, ЛӘСКӘ** (дим) *с.* төпөш — *низкий.* Ләсмә генә булды улы, үҫмәй ғалды

**ЛӘСТИТ I** (ҡыҙыл) *и.* тел биҫтәһе — *говорун.* Һәтирә йенгәм ләстит ине бит ул торғаны белән

**ЛӘСТИТ II** (урта) *и.* буш һүҙ — *пустое слово.* Эш йуҡтан ләстит сәйнәйләр инде

**ЛӘСТЕРӘТЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* 1. Һалбыратыу — *свесить.* Тәрәзәгә айағын ләстерәтеп утыра. 2. Ҡаплау — *закрывать сплошь.* Ләстерәтеп бәсә төшкән

**ЛӘҪ I** (эй) *и.* бәҫ — *иней.* Ағастарға матур итеп ләҫ төшкән

**ЛӘҪ II** (урта, һаҡмар) *с.* 1. Бысым — *неудавшийся, сырой (о хлебе)* 2. Еүеш, дымлы — *мокрый.* Тәҙрәнән ҡағыҙ ләҫ булып ҡубып төшә (һаҡмар)

**ЛӘҪТӘ** (һаҡмар) *и.* әйбер — *вещь.* Вәс ләҫтәләремде күтәреп шулайтып йөрөйөм

**ЛӘТ** (арғаяш) *и.* мәте — *глина.* Ләте (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш)

**ЛӘТЕ** (ҡариҙел, урта) *с.* 1. Бысым — *неудавшийся, сырой (о хлебе).* 2. Һыулы, дымлы — *мокрый.* Бәрәңге ләтерәк була, йармалы булмай (ҡариҙел)

**МӨСӘ II** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* буй-һын — *телосложение, стан.* Мөсәһе һылыу

**МӨСӘҺЕҘ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *с.* килбәтһеҙ — *нескладный*

**МӨСӘЛ** (һаҡмар) *и.* бурыс, эш — *долг, занятие.* Ә Уралда тәбиғәт үҙенең мәңгелек мөсәлен башҡара, бер ней булмағандай, умырзайалар үҫтерә

**МӨҪӨРӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Ябығыу — *худеть.* Ауырыуҙан һуң бер аҙ мөҫөрҙөң. 2. Бөлөү — *нищать.* Улар, һыйырлары ҡазаланып, бер аҙ мөҫөрәп торалар

**МӨТДӘТ** (туҡ-соран) *и.* өмөт — *надежда.* Һуғыш көткән мөтдәттән оҙаҡҡа һуҙылды

**МӨТИК** (һаҡмар) *и.* ашыҡ — *альчик.* Мөтәк (төньяҡ-көнбайыш)

**МӨТКӨҮ** (урта урал) *ҡ.* көйшәү — *жевать.* Ите ҡаты, мөткөп тик утырам

**МӨТЛИ** (ҡыҙыл) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Мөтли буш һүҙ анаһы

**МӨТЛӨК** (дим, минзәлә, урта, эйек-һаҡмар) *и.* бөтнөк — *мята.* Уаҡ ҡына зәңгәр сөскәле, хуш йеҫле үлән ул мөтлөк (дим)

**МӨТМӨР** (дим) *и.* төйәк — *пристанище.* Мырҙаған ғарттың мөтмөрө өй алды инде

**МӨТӨРЛӘК** (һаҡмар) *и.* кетерләүек — *хворост*

**МӨТӨРЛӘК ИКМӘК** (һаҡмар) *и.* бауырһаҡ — *баурсак*

**МӨТӨРӨЙ** (ҡыҙыл) *с.* 1. Ҡыҫыҡ күҙле — *узкоглазый.* 2. Бысый күҙ — *слезящиеся глаза*

**МӨТӨРӨШКӘ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* мәтрүш — *душица*

**МӨТӨРӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* малдың ҡойроғон ҡыҫҡартып киҫеү — *обрезание хвоста животных.* Өс-дүрт йәшлек байталдың ҡойроғон мөтөрәп киҫәләр

**МӨТӘЙ** (урта урал) *и.* йүләр — *дурачина*

**МӨТӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ашыҡ — *альчик*

**МӨТӘҮКӘ I** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Бәләкәй —*маленький.* Мөтәүкә генә бисәһе бар (ҡыҙыл). 2. (урта урал) Йүләр — *дурачина*

**МӨТӘҮКӘ II** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡаҙ ояһы — *корзина, где гусыня высиживает яйца*

**МӨХСӨЛ** (арғаяш) *и.* мохтажлыҡ — *нужда.* Бик мөхсөл булдыҡ

**МӨХТӘЗ** (һаҡмар) *и.* мохтаж — *нужда.* Мөхтәзе йуҡ, эрәхәт инде һәҙер. Мөхтәж (урта)

**МӨҺӨР I** (урта) *и.* 1. Ат ышлыяһындағы йоморо ҡалай — *жестянка на шлее.* 2. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар). Биҙәк — *узор.* Йеләнде мөһөрҙәп тороп кейҙек (ҡыҙыл)

**МӨҺӨР II** (ҡариҙел) *и.* һөмһөр — *настроение, дух.* Мөһөрө төшмәсен, әйтмәйек

**МӨҺӨРӘС** (һаҡмар) *и.* Юрматы ырыуы башҡорттарында ара исеме — *название родового подразделения племени юрматы*

**МӨҺӨТҺӨНМӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* мөрхәтһенмәү — *недовольствоваться.* Ашларын бик мөһөтһөнмәнем

**МӨЧӘ** (гәйнә) *и.* кәүҙә — *тело, стан.* Мөчәң бәләкәй тей торғаннар

**МӨШКӨНСӨЛӨК** (арғаяш, эй) *и.* мөшкөллөк — *трудность.* Мөшкөнсөлөк ман үҫкерҙем балдарҙы (арғаяш)

**МӨШКӘ I** (ҡариҙел) *и.* морондоҡ — *намордник.* Мөшкәт (ҡыҙыл)

**МӨШКӘ II** (эй) *и.* мушка

**МӨШКӘЙЕҮ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* күңелһеҙләнеү, рух төшөү — *падать духом.* Тик ауырып ҡына мөшкәйеп киттем (һаҡмар)

**МӨШКӘНДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бөкөрәйеү — *сутулиться (во время работы)*

**МӨШКӘР** (ҡариҙел) *и.* балға — *кувалда*

**МӨШКӘТ I** (урта) *и.* мөйәшә — *засыпня*

**МӨШКӘТ II** (мейәс, урта) *и.* бүҫер — *грыжа.* Мөшкәттер йә, бушҡа йыламаҫ бала (мейәс)

**МӨШНИК** (урта урал) *и.* *пирожок*

**МӨШӨГӨР** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* мөншөгөр — *выпь*

**МӨШТИҢКЕ: МӨШТИҢКЕ ГЕНӘ** (урта) *р.* моңһоу ғына — *уныло.* Мөштиңке генә булып йөрөй

**МӨШТӨК** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* айыссыҡ — *мундштук (в узде)*

**МӨШТӨР** (ҡыҙыл) *с.* мыштыр — *медлительный*

**МӨШӘК** (эй) *и.* тоҡ — *мешок.* Мөшөк (урта)

**МӨШӘКӘТ** (урта) *и.* мәшәкәт — *хлопоты*

**МУҘҒА** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* моҙға — *лукошко (для пчел).* Айырған ҡортто тотоп муҙғаға бикләйһең (эйек-һаҡмар). Муҙғай (мейәс)

**МУҘЫЙ** (дим) *и.* йоғошло ауырыу таратыусы бөжәктәр — *насекомые-распространители инфекционных болезней.* Элекке муҙыйлар бөттө

**МУЙЛЫҒЫУ** (арғаяш, урта урал) *ҡ.* уйға сумыу — *задуматься*

**МУЙНЖАҠА** (гәйнә) *и.* бер ҡат тәңкә теҙеп эшләнгән муйынса — *женское украшение из монет, надеваемое на шею*

**МУЙНТӨП** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бер ҡат тәңкә теҙеп эшләнгән муйынса — *женское украшение из монет, надеваемое на шею*

**МУЙНТӘҢКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бер ҡат тәңкә теҙеп эшләнгән муйынса — *женское украшение из монет, надеваемое на шею*

**МУЙСА I** (урта урал) *и.* һаҡал — *женское нагрудное украшение из серебряных монет и кораллов.* Муйҫа (дим, эй)

**МУЙСА II** (дим, ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* мунса — *баня.* Ауылда аҡ муйса ла, ҡара муйса ла бар (ырғыҙ). Мулса (арғаяш)

**МУЙСАҠ I** (дим, мейәс, урта) *и.* муйынса — *ожерелье*

**МУЙСАҠ II** (урта, һаҡмар) *и.* муйынсаҡ — *ошейник (у телят)*

**МУЙЧАЛА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* мунсала — *мочало*

**МУЙЫНБАУ** (мейәс, урта) *и.* муйынса — *бусы*

**МУЙЫНСАҠ** (арғаяш) *и.* *галстук.* Муйынсаҡ ман кей кәстүмеңде

**МУЙЫНСУҠ** (мейәс) *и.* муйынса — *ожерелье.* Муйынсаҡ (арғаяш, салйоғот, эй)

**МУЙЫНҪА** (дим, урта) *и.* әмәйҙек — *амайдек (косо надеваемое женское нагрудное украшение)*

**МУЙЫН ТӨЙМӘҺЕ** (урта) *и.* муйынса — *бусы*

**МУЙЫН ТӨЙӨНӨ** (ҡариҙел) *и.* күмәгәй — *кадык*

**МУЙЫН ТӘҢКӘҺЕ** (эйек) *и.* 1. Муйынса — *ожерелье.* 2. (ҡыҙыл) Әмәйҙек — *амайдек (косо надеваемое женское украшение)*

**МУЙЫНҺА** (һаҡмар) *и.* муйынсаҡ — *ошейник (у телят)*

**МУКЛАШКА I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәкәл — *бабки.* Муклашкаларын кисеп бабка уйнайбыз

**МУКЛАШКА II** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *и.* үбәк — *кусок войлока или холстины, который накладывается на хомутину*

**МУКЛАШКА III** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йоҙроҡ — *кулак.* Йылама, муклашка ашарһың (эй)

**МУҠАЙЛАУ, МҮКӘЙЛӘҮ, МҮКӘЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* дүрттағандау — *ходить на четвереньках*

**МУҠСА, МУҠСАЙ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Һунар әйберҙәрен һала торған һауыт — *мешочек для охотничьих принадлежностей.* Фанеранан яһалған бәләкәй сумка — *фанерная сумочка.* 3. (әй) Китап һала торған сепрәк тоҡсай — *тряпичная сумочка для книг*

**МУҠТА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* нуҡта — *недоуздок*

**МУҠЧА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* янсыҡ — *кошелек*

**МУҠШЫ** (әйек-һаҡмар) *с.* 1. һаран — *жадный.* Муҡшыланма мулла, барыбер алырбыҙ. 2. Бөтмөр — *расторопный в работе.* 3. *и.* Әрпеш — *неряха*

**МУЛДА** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* мунда — *холка.* Мулта (урта)

**МУЛДЫРҘАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* мөлдөрәү — *быть переполненным (о жидкости)*

**МУЛҠЫТЫУ** (мейәс) *ҡ.* арттырыу — *переборщить.* Ғәйнетдин ағай мулҡытып йебәрергә йарата инде ул

**МУЛЛАБАБАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* уҡымышлы оло ир кешегә ихтирам итеп өндәшеү һүҙе — *почтительное обращение к пожилому грамотному мужчине*

**МУЛЛАБАШ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**МУЛЛАБЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* уҡымышлы оло ҡатын-ҡыҙға ихтирам итеп өндәшеү һүҙе — *почтительное обращение к пожилой грамотной женщине*

**МУЛЛА БЕЛӘГЕ** (дим, әйек) *и.* эремсек ҡыҫтыбыйы — *кыстыбый из творога*

**МУЛЛА САЛМАСЫ** (туҡ-соран) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Мулла салмаҫы (дим)

**МУЛЛА ҮЛӘНЕ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* меңъяпраҡ — *тысячелистник.* Мулла үләнен бороноraҡ сәй итеп тә эскәннәр (дим)

**МУЛТЫРАУ, МУЛТЫРЛАУ** (урта) *ҡ.* таҙа булыу, үтә күренеп тороу — *быть чистым, прозрачным (о воде).* Ҡойо мултырап ҡына йата

**МУЛЫҒЫУ** (дим, һаҡмар) *р.* мул итеп, теләгәнсә — *вдоволь.* Берсиҙәтел мулығып сәйләр алып торҙо (һаҡмар)

**МУМАЛА I** (ҡыҙыл, урта, әйек-һаҡмар) *и.* бумала — *помело.* Дегет майҙай торған мумала (ҡыҙыл)

**МУМАЛА II** (урта) *и.* ҡараҫҡы — *чучело*

**МУНАР I** (урта) *и.* монар — *мгла.* Мунар төшһә, ағас йапраҡлары йалтырап тора

**МУНАР II** (урта) *и.* монар көпшәһе — *болиголов крапчатый.* Мунар йерек ағаслары араһынта үҫә

**МУНАҠЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* юлаҡланыу — *расположиться.* Ҡулың бик ҡаты икән, тотҡан урындан тәнем мунаҡланып тора

**МУНАЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* өйкәлеп туҙыу — *изнашиваться.* Пальтоң әҙерәк муналған икән

**МУНАУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Тунау — *сдирать (шкуру).* 2. (урта) Һыҙырыу — *сдирать (кору)*

**МУНСА ЙАПРАҒЫ, МУНСА ЙАФРАҒЫ** (һаҡмар) *и.* миндек — *веник (для парки в бане).* Мунсала йапрағы (ҡыҙыл, мейәс)

**МУНСАҠ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* 1. Ҡытай — *бусы.* 2. *(урта)* Мәрйен — *коралл.* 3. (дим) Ынйы — *жемчуг.* 4. (һаҡмар) Муйынсаҡ — *ошейник (у телят)*

**МУНСАҠ ЙЕМЕШЕ** (һаҡмар) *и.* эт ҡарағаты — *паслен*

**МУНСАҠЛАНЫУ** (әйек) *ҡ.* тәндең дүңгәләкләнеп сабыртыуы — *появление круглой сыпи на теле*

**МУНСАЛА ЙАПРАҒЫ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* тегәнәк — *лопух*

**МУНСА СЕБЕРТКЕ** (минзәлә) *и.* миндек — *веник (для парки в бане)*

**МУНҠЫЛДАҠ** (әйек) *и.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**МУНТА** (урта) *и.* мунда — *холка*

**МУРҘА** (һаҡмар) *и.* ыдаш — *помост для сушки курута*

**МУРҘА АНАҺЫ** (әй) *и.* мурҙа корпусы — *корпус верши*

**МУРҘА БАЛАҺЫ** (һаҡмар) *и.* йәлдәү — *горловина верши*

**МУРҘАЙ** (һаҡмар) *и.* муртай — *бурдюк*

**МУРҘА ТАМАҒЫ** (әй) *и.* йәлдәү — *горловина верши*

**МУРҘА ТЕЛЕ** (дим) *и.* йәлдәү — *горловина верши*

**МУРТ** (ҡариҙел) *с.* эре, шырт — *грубая (о шерсти).* Болан йөнө ҡыш көнө мурт була

**МУРТАЙЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* 1. Бурһыу — *тухнуть.* 2. (урта) Сереү — *гнить*

**МУРТАҠ** (урта) *с.* өлкән — *пожилой.* Ике муртаҡ әбейгә осраным тей инте

**МУРТАҠАЙ** (мейәс) *и.* муртай — *бурдюк*

**МУРТЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* йомартланыу — *расщедриться*

**МУРТЫҒЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бурһыу — *тухнуть*

**МУРТЫЙ** (ҡыҙыл) *с.* аңра — *глупый*

**МУРТЫҠ** (дим, мейәс, урта, һаҡмар) *с.* мурт — *хрупкий.* Эт муйылы муртыҡ була (дим). Йомортҡа һалһаң икмәк муртыҡ ҡына була (мейәс)

**МУРЫЛЫУ** (туҡ-соран) *ҡ.* йәйрәп китеү — *блаженствовать.* Мынау бесекәй мурылып киткән

**МУРЫУ** (туҡ-соран, урта) *ҡ.* муртланыу — *стать хрупким.* Йаҙғы боҙ мурый (туҡ-соран)

**МУС** (һаҡмар) *и.* көс — *мощь.* Ниңә, ҡулымда мус барҙа утыртайым

**МУСА** (дим, ҡыҙыл, урта урал, һаҡмар) *и.* мунса — *баня*

**МУСАҠ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Тәңкә — *монета.* Мусаҡлы йелән. 2. Ҡытай — *бусы*

**МУТ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Шаян — *шутник.* 2. (салйоғот) *с.* шат — *веселый*

**МУТАУ** (дим) *ҡ.* шаңҡытыу — *оглушить*

**МУТАУҒЫС** (дим) *и.* гөмбөр — *ботало (рыболовная снасть)*

**МУТЫ** (урта) *и.* һаҡау — *мыт (болезнь животных)*

**МУШҠЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ләпәкәй — *мошка*

**МУШҠАР** (ҡариҙел) *и.* ләпәкәй — *мошка*

**МУШТИНҠӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* бойоҡ — *грустный.* Йәтим ҡалса, муштинкә була бала кешесе

**МҮГЕШ** (ҡариҙел) *и.* мөйөш — *угол*

**МҮЗЕКӘН I** (әй) *и.* гармун — *гармонь*

**МҮЗЕКӘН II** (мейәс) *и.* айғолаҡ — *жабры*

**МҮК ЙЕЛӘГЕ** (дим, әй) *и.* ҡыҙыл көртмәле — *брусника*

**МҮК ҠАЛАҒЫ** (арғаяш, дим, урта) *и.* мүк тыҡҡыс — *шпатель*

**МҮКЛӘК** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Туҡал — *комолый.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Уҫал — *злой.* Һыйышмаусан — *неуживчивый*

**МҮКЛӘКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бүкән — *чурбан*

**МҮКЛӘКӘРЕМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тау әреме — *горькая полынь*

**МҮКЛӘҮ** (һаҡмар) *с.* мүкле — *мшистый.* Мүкләү йер

**МҮКРИС** (ҡариҙел) *и.* еүеш тимерәү *(йылҡы малында була торған ауырыу)* — *мокрец*

**МҮКТӘК** (урта) *и.* 1. Һаҙ һеркәһе — *лапчатка норвежская.* 2. (ҡыҙыл, эйек) Ҡондораҡ — *полевица*

**МҮКТӘРҘЕ** (ҡыҙыл) *и.* мүктәрге — *кобчик*

**МҮКШҮ** (гәйнә) *ҡ.* күгәреү — *заплесневеть*

**МҮКӘЙЛӘҮ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек) *ҡ.* имгәкләү — *ходить на четвереньках.* Мынау ҡыҙым мүкәйләп йөри иҙе (төньяҡ-көнбайыш)

**МҮЛ I** (арғаяш) *и.* селбәрә — *малек*

**МҮЛ II** (ҡариҙел) *и.* ҡыуығын — *молевой сплав леса*

**МҮЛДЕРГӘ** (салйоғот) *и.* бөлдөргә — *темляк*

**МҮЛДӘКӘ** (һаҡмар) *и.* аҙман — *бомж*

**МҮЛДЕРӘҮ** (мейәс) *ҡ.* мөлдөрәү — *быть переполненным*

~~**МҮШКӘ, МҮШКӘРӘ**~~ (салйоғот) *и.* һуҡыр себен — *мошка.* ~~Мүшкәр~~ (төньяҡ-көнбайыш)

**МҮШКӘР** (ҡариҙел) *и.* ҙур сүкеш — *молот*

**МЫҒАЙЫМ** (эй) *и. һ.* моғайын — *наверно.* Һинең беҙҙә буғаның барҙыр, мығайым

**МЫҘА** (урта, эйек) *и.* маҙа — *покой.* Мыҙаһыҙлап йөрөмә кешене (урта)

**МЫҘЛАУ** (эйек) *ҡ.* осҡонланыу, ялтырау — ~~*испариться*~~. Унын кескәй йоморо күҙҙәрендә ғәжәп шайан, шат осҡон мыҙлай ине

**МЫҘЫҠ** (эйек) *с.* мыжыҡ — *капризный*

**МЫҘЫҠА, МЫҘЫҠАЙ** (урта) *с.* ығыш — *копотливый*

**МЫҘЫЛЫУ** (урта) *ҡ.* яйлау — *медлить.* Мыҙылып торма инде, ығышып

**МЫҘЫНЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* оҙаҡлау — *замешкаться*

**МЫЖ БУЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* күп булыу, мыжғыу — *кишеть.* Ҡырҡылған урынға ҡайын үҙенән-үҙе мыж булып үҫә лә китә

**МЫЖБЫР** (эй) *с.* быжмыр — *неторопливый.* Мыжмыр (ҡариҙел, туҡ-соран), мызмыр (дим)

**МЫЖҒЫУ** (дим) *ҡ.* ҡарап, тәрбиәләп тороу — *ухаживать.* Гөлнө мыжғып ҡына торам

**МЫЖҒУ** (ҡариҙел) *с.* ығыш — *копотливый.* Мыжғыр (төньяҡ-көнбайыш)

**МЫЖ КИЛЕҮ** (дим, эйек) *ҡ.* мыжғыу — *кишеть.* Каридорҙа мыж килгән — ҡул ҡыҫышҡан, төрткөләшкән кешеләр (эйек)

**МЫЖЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* мыжғыу — *кишеть.* Бына был аҡландарҙа күптән үткән замандарҙа ҡуйаннар мыжлап тора ине

**МЫЖМЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Мыжыҡ — *капризный.* 2. Һаран — *скупой*

**МЫЖМЫРҘАУ** (эй) *ҡ.* быжмырлау — *долго возиться*

**МЫЖЫ** (урта) *и.* рахит менән ауырыусы — *рахитик*

**МЫЖЫҒАН** (ҡариҙел) *с.* йомшаҡ — *мягкий (о человеке)*

**МЫЖЫҠ: МЫЖЫҠ ЙАМҒЫР** (ҡариҙел, урта урал) *и.* быҫҡаҡ ямғыр — *накрапывающий дождь*

**МЫЖЫҠАЙ** (ҡариҙел) *с.* йүнһеҙ; йомшаҡ — *бестолковый, слабый*

**МЫЖЫЛДАУ** (һаҡмар) *к.* мыжыу — *ворчать.* Былар мыжылдай башланылар, әйҙә китәйек

**МЫЖЫЛТЫҠ** (ҡариҙел) *с.* ығыш — *копотливый.* Инте мыжылтыҡ, ҡорт кебек ҡыбырлай

**МЫЗДАҠ, МЫЗЛАҠ** (урта, һаҡмар) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка.* Бызлаҡ (туҡ-соран)

**МЫЗЛАЙ** (һаҡмар) *и.* аҡ алабута — *лебеда белая*

**МЫЗЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* баҙлау — *светиться.* Йамаҡ ҡорт мызлап йанып тора

**МЫЗМЫРЛАУ** (туҡ-соран) *ҡ.* быжмырлау — *долго возиться.* Бисәһе мызмырлап аш-һыу тирәһендә генә болғана

**МЫЗЫЙ** (урта) *и.* һуҡыр шәм — *коптилка*

**МЫЗЫЛДАТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ялтыратыу — *блеснуть.* Күҙләрен мызылдаталар

**МЫЗЫЛЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Быжмырлау — *долго возиться.* Мызылып утырмаһыннар, сәй эсһендәр ҙә таралышһыннар. 2. (эй) Ләззәтләнеү — *блаженствовать*

**МЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* мейе — *мозг.* Арҡа мыйы

**МЫЙАТ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* 1. Ҡаралды — *постельные принадлежности.* 2. Өй кәрәк-яраҡтары — *домашняя утварь*

**МЫЙҠАН** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* һимеҙ — *жирный, полный (о человеке)*

**МЫЙҠЫЛДАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* йылҡылдау — *блестеть.* Мыйҡылдап торған атлар

**МЫЙМЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һалмаҡ ҡына юртыу — *нестись плавной рысью (о лошади)*

**МЫЙЫҠТАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* йолдоҡлау — *союзить.* Итекте мыйыҡтап кейҙем (ҡыҙыл)

**МЫЙЫЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* йылмайыу — *улыбаться*

**МЫҠТЫ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* 1. Шәп — *замечательный, хороший.* Эй, ҡороғорҙоң утырыуы, мыҡты геше ней (ҡыҙыл). 2. (ҡариҙел) *р.* ныҡлап — *толком.* Бик мыҡты белмәйем аны. 3. (ҡыҙыл, мейәс) *р.* нәк — *точь-в-точь.* Ул хәҙер мыҡты атаһы (мейәс). 4. (ҡыҙыл, мейәс) *р.* ысынлап — *вправду.* Мыҡты күрҙем, ҡайттылар улар. (ҡыҙыл). Мыҡлы (эйек). 5. (арғаяш) *р.* бөтөнләй — *вовсе.* Йәштәре мыҡты алай түгел

**МЫҠТЫЙ, МЫҠТЫМ** (урта) *с.* мыҡты — *здоровый, сильный.* Бар, йегет, төнәген кеүек шәп итеп һөйләп йебәр әле, тине мыҡтым кәүҙәле кеше.

**МЫҠЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* тотлоҡма — *заика.* Үҙе мыҡый ине, тоттоға туғайны (урта урал)

**МЫҠЫЛДАУ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *ҡ.* мығырҙау — *ворчать*

**МЫҠЫР** (гәйнә) *с.* ваҡсыл — *мелочный*

**МЫҠЫРДАУ, МЕКЕРДӘҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* мығырҙау — *ворчать*

**МЫҠЫРЛАУ** (урта) *ҡ.* мығырҙау — *ворчать.* Йуҡҡа-барға мыҡырларға тиһәң уны ҡуш

**МЫҠЫРСАН** (эй) *и.* эт балығы — *вьюн*

**МЫҠЫТЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* төкөтөү — *стукнуть.* Мыҡытты мөгөшкә үҙен

**МЫЛАЙ** (минзәлә) *р.* былай — *так.* Тегеләй ит, мылай ит

**МЫЛАМУК** (урта) *и.* боламыҡ — *мучная каша*

**МЫЛҠЫЛДАУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран) *ҡ.* мыйҡылдау — *трястись при движении (о тучном, полном теле).* Аты мылҡылдап килә (ҡыҙыл)

**МЫЛТЫҠ: ҠЫРҘЫ МЫЛТЫҠ** (арғаяш) *и.* һыҙма мылтыҡ — *нарезное ружье*

**МЫЛТЫҠЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* атыу — *стрелять.* Атам, бахыр, кош мылтыҡтай торғайны

**МЫЛТЫҠСЫ** (ҡыҙыл) *и.* мәргән атыусы — *меткий стрелок.* Һауаларҙа осҡан әй ике ғош, мылтыҡсы ла буһаң атыбал

**МЫЛЫЙЫУ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *ҡ.* көлөмһөрәү — *улыбаться.* Уңа әйт ни, әйтмә ни мылыйып тик утыра (туҡ-соран)

**МЫМАЗЫЙ** (ҡыҙыл) *и.* бумазый — *бумазея*

**МЫНА, МЫНАУ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, урта урал, һаҡмар) *а.* бына — *вот, этот.* Мына ҫыуыҡта балсыҡ ҡатып йата (туҡ-соран)

**МЫНАҒАЙ** (ҡариҙел, урта урал) *м. h.* бына ғайыш — *вот тебе на!* Ништәп бы тикте жыйылдығыҙ, мынағай (урта урал)

**МЫНАЙАТ, МОНАЙАТ** (урта урал) *и.* 1. Һауытһаба — *посуда.* 2. (урта) Затлы әйберҙәр — *драгоценности.* 3. (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар, эй) Өй кәрәк-яраҡтары — *домашняя утварь.* Мынайатын һатып китте (мейәс)

**МЫНАМЫН: МЫНАМЫН ТИГӘН** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, урта урал, һаҡмар) *с.* бынамын тигән — *настоящий, достойный.* Ауылдың мынамын тигән йегетләрен алдылар ҙа гиттеләр (туҡ-соран)

**МЫНАН** (мейәс, урта урал) *б.* менән — *с.* Тана мынан һыйырҙы тотам аны (урта урал)

**МЫНАНТЫН** (гәйнә) *р.* бынан — *отсюда.* Мынантын бер ике саҡырым йергә Солтанәхмәт дигән кеше килеп утырған

**МЫНАУ** (көнсығыш диалект, туҡ-соран) *а.* был, ошо — *этот.* Әсәй, нимә ул мынау

**МЫНДЫРЫҠТАЙ** (урта) *с.* ярҡалай, тулы — *полный.* Әле мындырыҡтай булып һимереп йөрөй

**МЫНТЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* мылтыҡ — *ружье*

**МЫНЫҠЫЙ, МЕНӘКЕЙ** (гәйнә) *м. h.* бына һиңә — *вот тебе на!* Мыныҡый, үҙе генә килә бит был

**МЫНЫСА** (һаҡмар) *р.* был тиклем — *столько.* Мыныса йергә ҡалайтып киләйем

**МЫҢ** (мейәс) *h.* мең — *тысяча*

**МЫҢАРСА** (туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *р.* бығаса — *до сих пор.* Мыңарса килеп йетергә тейеш ине инде ул (туҡ-соран)

**МЫҢАРТАН** (ҡариҙел) *р.* бынан һуң — *после этого*

**МЫҢҒАСА** (ҡыҙыл) *р.* бығаса — *до сих пор.* Мыңғанса (һаҡмар). Мыңғанса йәшәгәнен йәшәр

**МЫҢАНЧЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* бығаса — *до сих пор.* Әле мыңанчы үҙебеҙнең ауылда уҡыҙылар

**МЫҢҒЫЛАНЫУ** (дим) *ҡ.* ойор-ойомаҫ ултырыу (һөткә ҡарата) — *не киснуть (о молоке)*

**МЫҢҒЫРҘАҠ** (дим, мейәс) *с.* 1. Мығырҙаусан — *ворчливый.* 2. (мейәс) Тыңҡыш — *гнусавый*

**МЫР** (ҡыҙыл) *и.* теш ҡорто — *зубная червь.* Тешенде быуға тот, мыры төшһә, баһылыр

**МЫРАҠ** (салйоғот) *и.* һаҙ еләге — *морошка.* Мыраҡ һанта, күл эргәһендә үһә

**МЫРҘА** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* ҡусты, эне — *братишка*

**МЫРҘАР ҮЛЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* үҙенә ҡул һалыу — *покончить самоубийством*

**МЫРҠЫРАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* һөйләнеү — *ворчать про себя.* Мырҡырама берүк кенә

**МЫРҠЫЛДАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* һөйләнеү — *ворчать про себя.* Өйөңнө ул сатты тип былары мырҡылдамаҫмы?

**МЫРТ** (ҡариҙел) *с.* мурт — *хрупкий*

**МЫРТЫЙ I** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡусты — *братишка.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Малайҙарға иркәләп өндәшеү һүҙе — *форма ласкательного обращения к мальчикам*

**МЫРТЫЙ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ташбаш — *пескарь*

**МЫРТЫЙЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* балаларса ҡыланыу — *ломаться как ребенок*

**МЫРЫТЫУ** (урта) *ҡ.* тозороу, ашап бөтөрөү — *уплетать.* Мырытһам һинекен мырытмайым, үҙемдекен мырытам

**МЫРЫШ** (эйек) *и.* ҡусты — *братишка*

**МЫҪ** (һаҡмар, эй) *и.* кәзә тиреһенән эшләнгән һөт һауыты — *молочник из козьей шкуры*

**МЫСА** (ҡариҙел, салйоғот, урта) *и.* мунса — *баня.* Мыса йаҡтыңмы? (урта)

**МЫСАЛА ЙАПРАҒЫ** (урта) *и.* тегәнәк — *лопух*

**МЫСҠЫЛЧАҠ** (ҡариҙел) *с.* ирешеүсән — *любитель ругаться*

**МЫСТЫР I** (мейәс, эй) *с.* мыштыр — *медлительный*

**МЫСТЫР II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* иҫке-моҫҡо — *барахло*

**МЫСЫЙ** (һаҡмар) *и.* кәзә тиреһенән тегелгән һауыт — *сосуд из козьей шкуры*

**МЫСЫР** (һаҡмар, урта урал) *и.* 1. Өйҙән-өйгә ләстит һатып йөрөүсе — *сплетник.* 2. (урта урал) Һорайусы — *попрошайка*

**МЫСЫУ** (салйоғот) *и.* ҡорот киптерә торған еп сетка — *ниточная сетка для сушки курута*

**МЫҪЫ** (дим) *а.* быныһы — *этот.* Мыҫын ҫалайыҡ

**МЫТМЫР** (урта урал) *с.* мыштыр — *медлительный.* Мытыр (арғаяш)

**МЫТЫР** (ырғыҙ) *с.* төпсөнөүсән — *дотошный.* Бигерәк мытыр булып киттең әле, әллә ҡартайа башланың

**МЫШАННИК** (урта, дим) *и.* ҡорт баҙы — *омшаник*

**МЫШАТЫР** (ҡыҙыл) *и.* нишатыр — *нашатырь*

**МЫШАТЫРҘАНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* йоҡарыу — *утончаться (о льде)*

**МЫШАУ** (салйоғот) *й.* ҡорот киптерә торған еп сетка — *ниточная сетка для сушки курута.* Мышыу (арғаяш, мейәс, салйоғот)

**МЫШҠЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* киндер — *конопля*

**МЫШҠАРА** (арғаяш, мейәс, салйоғот, эй) *и.* ләпәкәй — *мошка*

**МЫШТЫМ** (ҡыҙыл, урта, урта урал, һаҡмар, эй) *с.* 1. Мыштыр — *медлительный.* 2. (эйек-һаҡмар) Тешеккән — *молчаливый*

**МЫШТЫҠАЙ** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡыйшандаҡ — *кокетка.* 2. (урта урал) Ығыш, мыштыр — *копуша*

**МЫШТЫР** (әй) *с.* хәйләкәр — *хитрый*

**МЫШТЫРҘАЙ, МЫШТЫРҘЫК** (төньяк-көнбайыш) *с.* мыштыр — *медлительный*

**МЫШЫЙ** (дим, урта урал) *и.* мышы — *лось*

**МӘ** (гәйнә) *ы.* ғәжәпләнеү ымлығы — *междометие удивления.* Мә, мине нейә алмыйлар. Мә, кайалар икән?

**МӘГӘ** (гәйнә) *а.* ниңә — *зачем, почему.* Мәгә алдаттың?

**МӘҒДӘН, МӘҒҘӘН** (урта) *и.* байлык — *богатство.* Ҙур мәғҙәнле ине

**МӘҒӘЛЕҮШЕҮ** (арғаяш) *к.* асыуланышыу — *ссориться*

**МӘҒЛҮН** (дим) *и.* меҫкен — *бедняга.* Әйҙә, мәғлүн, сәл инде

**МӘҒӘРӘ** (кыҙыл) *и.* мәмерйә — *пещера.* Сокорҙар, мәғәрәләр булыуы унда каскындар йәшәүе тураһында һөйләй

**МӘҒӘТЛЕ** (кариҙел) *и. h.* моғайын — *наверно.* Мәғәтле, былар эҙләп килгәннәрҙер

**МӘҘЕ-ГҮҘЕ: МӘҘЕ-ГҮҘЕ ТӨШӨҮ** (эйек-һакмар) *к.* эңер төшөү — *наступление сумерек*

**МӘҘЕЛИС, МӘҘЕЛЕС, МӘҘЛИС** (арғаяш, дим, кыҙыл, салйоғот, һакмар) *и.* йыйын — *меджлис.* Йәшләр белән бергә утырып, мәҙелес йаҫап, кунакка килгән кешеләр тарала, кейәү белән кыҙ йаңғыҙ кала (һакмар)

**МӘҘЕХ** (әй) *р.* кыҙык — *интересно.* Бөгөн һеҙгә мәҙех булды был әбейҙең һөйҙәгәндәре

**МӘҘЕХЛӘҮ** (ырғыҙ) *к.* иҫкә алыу — *чтить.* Изгеләрҙе мәҙехләргә лә онотмайһың

**МӘҘИХ** (арғаяш) *с.* матур, һәйбәт — *красивый, хороший.* Мәҙих итеп үрәбеҙ септәне. Мәҙих сәй эсәбеҙ

**МӘҘӘНИ** (тук-соран) *с.* культуралы, белемле — *культурный, образованный.* Һин дә мәҙәни күренәһең, әйҙә киттек

**МӘЖ: МӘЖ БУЛЫУ, МӘЖ КИЛЕҮ** (дим, тук-соран, төньяк-көнбайыш) *к.* кайнашыу — *суетиться.* Туйға әҙерләнеп мәж булып йөрөйбөҙ (тук-соран)

**МӘЖБҮРИ КИЛЕҮ** (кариҙел) *к.* тап килеү — *повстречаться.* Мәжбүри килсә, кешегә ташлана селәүсен

**МӘЖМӘК КИТАБЫ** (арғаяш) *и.* көндәлек — *дневник*

**МӘЖӨҮ** (урта) *и.* мәмәй — *мямля.* Мәшәү (тук-соран)

**МӘЗ БУЛЫУ** (ырғыҙ) *к.* риза булыу — *быть довольным.* Мәз булып килә йатам

**МӘЙДАН** (кариҙел) *и.* 1. Тамаша — *зрелище.* Бер мәйдан булты. 2. (төньяк-көнбайыш) Йыйын — *народное гулянье.* Карға боткасы тейләр беҙҙә, балыҡ алып чығып, күкәй, чәй алып мәйдан йасайлар

**МӘЙЕҘ** (урта урал) *и.* теләк — *желание.* Мәйеҙе нисек бит, каршы булыпумай

**МӘЙЕҘ ҮЛӘНЕ** (һакмар) *и.* эс китеүен дауалау үләне — *трава от поноса*

**МӘЙЕЗ** (һакмар) *и.* йөҙөм — *изюм.* Менә мәйез аша, күстәнәс мәйез

**МӘЙЕЛ** (кыҙыл, мейәс, тук-соран, эйек-һакмар) *и.* 1. Ихтыяр — *воля, желание.* Мәйелең, бөгөн китһәң китәң дә куйаң инде (тук-соран). Мәйле (дим). Бирҫәм үҙ мәйлем, бирмәҫәм үҙ мәйлем. 2. Холок, бәйел — *характер, натура*

**МӘЙЕЛ АҘЫУ** (кариҙел, эйек-һакмар) *к.* холокһоҙланыу — *испортиться (о характере)*

**МӘЙЕЛЕНСӘ** (тук-соран, һакмар) *р.* хәленән килгәнсә — *по возможности.* Кеше мәйеленсә мал бирә (һакмар)

**МӘЙЕШЕҮ** (һакмар) *к.* эйелеү, бөгөлөү — *гнуться.* Ай-һай, был йелде әйтәм, бына тигән кайыннарың мәйешеп бөткән

**МӘЙЕШЕП: МӘЙЕШЕП ТӨШӨҮ** (һакмар) *к.* бирешеү — *сдаваться (о человеке).* Ул бабай карт инде, мәйешеп төшкән

**МӘЙКӘМ** (мейәс) *и.* сүмесбаш — *головастик*

**МӘЙЛЕМСЕ, МӘЛЕМСЕ** (урта) *и.* кыуғынсы — *сплавщик (леса)*

**МӘЙМҮН** (урта) *и.* маймыл — *обезьяна*

**МӘЙШЕЛДӘК** (тук-соран, ырғыҙ) *с.* бөгөлөүсән, һығылыусан — *гибкий.* Баҫмалары бигерәк мәйшелдәк, тотоноп сығығыҙ (тук-соран)

**МӘЙШӘЙЕҮ** (кыҙыл, һакмар) *к.* йәмшәйеү — *плющиться.* Бысактың йөҙө мәйшәйгән (һакмар)

**МӘЙӘ** (төньяк-көнбайыш) *с.* һакау — *косноязычный*

**МӘКЕБАШ** (кыҙыл) *и.* шишмә башы — *исток родника*

**МӘКЕРҮФ** (дим) *и.* гонаһ — *грех.* Йаулык ташлау әүәл мәкерүф ине

**МӘКИНӘ** (арғаяш, салйоғот, тук-соран, урта урал) *и.* кәбәк — *мякина*

**МӘКИНӘБАШ** (тук-соран, урта урал) *с.* мәғәнәһеҙ — *бестолковый*

**МӘКТЕП** (дим, тук-соран) *и.* мәктәп — *школа.* Мәктүп, мәктөп (кариҙел, төньяк-көнбайыш)

**МӘКӘРЙӘ I** (һакмар) *и.* вак мәрйен — *мелкий коралл*

**МӘКӘРЙӘ II** (дим) *и.* вак күҙәнәкле ау — *сеть с маленькими ячейками*

**МӘКАМ** (тук-соран) 1. Көй — *мелодия.* Ул Хәлимофтың мәкам менән Көрьән укыуын һораны. 2. (әй) Әйтелеш — *произношение.* Һин укыма, һинең мәкамың дөрөҫ түгел, тип туктата туғандар ине

**МӘКӘЛСҮЗ** (кариҙел) *и.* мәкәл — *пословица*

**МӘКӘЛҺҮҘ** (һакмар) *и.* хикәйә — *сказ*

**МӘКӘМ** (мейәс) *и.* төйәк — *пристанище.* Һәр балыктың үҙ мәкәме була

**МӘКӘМЕ: МӘКӘМ ИТЕҮ** (мейәс, урта) *к.* ғүмер итеү — *жить, прожить.* Ошонта мәкәм иттем, бер кайҙа ла китмәнем (урта)

**МӘКӨН** (урта) *с.* йәмшек танау — *курносый*

**МӘЛ** (һакмар) *и.* хәл — *сила.* Мәлем калманы

**МӘЛЕ I** (төньяк-көнбайыш) *и.* селбәрә — *малек*

**МӘЛЕ II** (гәйнә) *ы.* ғәжәпләнеү ымлығы — *междометие удивления.* Мәле, элек боток жез былған

**МӘЛЕМ** (һакмар) *и.* һеләүһен — *рысь*

**МӘЛЕС** (ырғыҙ) *и.* куй һарығы төрө — *вид курдючного овца*

**МӘЛИКӘТУТАЙ** (ырғыҙ) *и.* камка — *божья коровка*

**МӘЛИХ** (әй) *р.* карап, тәрбиәләп — *присматривая, ухаживая.* Бик мәлих кайтарҙылар

**МӘЛКЕ** (дим) *и.* мәл — *время.* Бер мәлке йатып алам

**МӘЛКЕҮ I** (мейәс, һаҡмар) *ҡ.* бәлтерәү — *раскиснуть.* Нәмә мәлкеп төштөң әле (мейәс)

**МӘЛКЕҮ II** (мейәс, һаҡмар) *ҡ.* ирей төшөү — *подтаять*

**МӘЛЛЕ I** (урта) *с.* кәрәкле — *нужный.* Торомтай бисәһен йыуатырға мәлле һүҙ таба алманы

**МӘЛЛЕ II** (дим) *р.* һымаҡ — *подобно, вроде.* Шул төҫ мәллерәк була инде жирән

**МӘЛҮМ** (урта) *и.* ҡыуған — *молевой сплав.* Инийәрҙә мәлүм ғыуҙы ҡөмөргә

**МӘЛӘШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* миләш — *рябина.* Мәләш, балан күп, ҡарағай бик шәп (ҡариҙел)

**МӘМЕРЕК** (дим) *и.* мәмерйә — *пещера*

**МӘМЕРЙӘ** (урта) *и.* соҡор — *котловина*

**МӘМЕЧ** (гәйнә) *и.* төпөш — *коротыш*

**МӘМЕШ** (урта) *с.* мәмәй — *мямля.* Шуфирығыҙ мәмеш кенә икән, өйрәткәнте лә аңҡармай

**МӘМЕШКӘК** (дим, ҡариҙел) *и.* дунала — *боярышник*

**МӘМЛӘКӘТ** (туҡ-соран, урта) *и.* дәүләт — *государство*

**МӘМТӘКӘ** (эйек) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**МӘМӘЙ** (эйек) *и.* йәрбесәк — *мочка*

**МӘМӨК ЧЕБЕН** (ҡариҙел) *и.* ләпәкәй — *мошка*

**МӘМӘХӘРӘМ БУЛЫУ** (дим) *ҡ.* гонаһлы булыу — *стать грешным*

**МӘН, МАН** (арғаяш, мейәс, салйоғот, эй) *б.* менән — *с.* Ат мән дә, жейәү ҙә килдек (арғаяш)

**МӘНДӘ** (һаҡмар) *и.* бәндә — *человек.* Тәүфиҡлы мәндә тап буһын.

**МӘНДӘШ** (ҡариҙел) *и.* ҡарағай ҡайыры — *сосновая кора.* Мәндәше ҡалын, тиз серей

**МӘНЕ** (көнсығыш диалект, төньяҡ-көнбайыш, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* әҙәп, мәғәнә, рәт — *воспитанность, толк.* Эш мәнеһен дә, һүҙ мәнеһен дә белеү гәрәк (эйек-һаҡмар). Мәнеле генә килен төшкән икән (эйек-һаҡмар)

**МӘНЖҮН** (эй) *и. м.* мәжнүн — *потерявший рассудок*

**МӘНЗӘЛӘ** (мейәс, урта) *и.* зәңге — *цинга*

**МӘНТЕРӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* бәлтерәү — *расписать, раскиснуть*

**МӘНӘС** (урта) *и.* төпөш — *коротыш*

**МӘҢ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* мәгеҙ — *возьмите.* Мәң алығыҙ, мәң тотоғоҙ (ҡариҙел)

**МӘҢГЕ БАҠЫЙ** (ҡариҙел) *р.* мәңгегә — *навечно.* Мәңге баҡый тал суйасың

**МӘҢГЕ БУЙЫНА** (урта) *р.* мәңгегә — *навечно*

**МӘҢГЕРӘҮ** (мейәс) *ҡ.* миңрәүләнеү — *тупеть.* Һуғыш уахытында бүтән бисәләр мәңгерәп бөткәйне. Мәңерәү (эй)

**МӘҢГЕШ** (арғаяш) *и.* иңкеш — *шмель*

**МӘҢГӘЗӘЙ** (арғаяш) *и.* мәгәзәй — *амбар (для хлеба)*

**МӘҢЕРӘТЕҮ** (дим) *ҡ.* шаңҡытыу — *оглушить.* Балыҡ мәңерәтәбеҙ ҡыш көнө

**МӘҢЕРӘҮ** (урта) *с.* тыңҡыш — *гнусавый*

**МӘҢКЕ, МӘҢКӘ** (арғаяш) *и.* маңҡа — *сап (болезнь лошади)*

**МӘҢКӨ** (арғаяш) *и.* күл ҡорто — *червяк озерный*

**МӘҢКӘҮ** (арғаяш) *с.* йыуаш — *смирный, безропотный*

**МӘҢРӘҮ** (арғаяш, салйоғот, һаҡмар) *с.* 1. Миңрәү — *глупый.* 2. (дим) Туң — *тупой*

**МӘПЕМ** (ҡыҙыл) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**МӘРГӘН I** (ҡыҙыл) *и.* түләмә — *сибирская язва*

**МӘРГӘН II** (ҡыҙыл) *и.* байлыҡ, мөлкәт — *состояние.* Француз йаулыҡ, француз күлмәк, мәргәндәрең булһа, һатыб ал

**МӘРЕ** (урта, һаҡмар) *и.* 1. Мәте — *глина.* 2. (урта, урта урал) Епшек — *оттепель.* Мәретке, мәреткәк (урта)

**МӘРЕҮ I** (урта, урта урал, һаҡмар) *ҡ.* епшеү — *подтаять*

**МӘРЕҮ II** (төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта) *ҡ.* сигеү — *вышивать.* Матур итеп мәрегән ҡулйаулығын (ҡариҙел)

**МӘРЕҮӘТ I** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* бесәй табаны — *кошачья лапа*

**МӘРЕҮӘТ II** (салйоғот, һаҡмар) *и.* һиҙәп — *пуговица (мелкая)*

**МӘРЕҮӘТҺЕҘ** (эй) *с.* мөрәүәтһеҙ — *немилосердный.* Мәреүәтһеҙ кеше ул

**МӘРЖЕК** (мейәс, урта) *с.* йәмшек — *сплющенный.* Йәмшек танау

**МӘРЖЕН** (арғаяш, дим) *и.* мәрйен — *коралл.* Мәржәм, мәржән (төньяҡ-көнбайыш, урта урал), мәржин (мейәс), мәрйәм (урта урал)

**МӘРЖЕНКӘЙ ӨЙРӘК** (ҡыҙыл) *и.* сүрәгәй өйрәк — *чирок*

**МӘРЖӘЙЕҮ** (мейәс, урта) *ҡ.* йәмшәйеү — *плющиться*

**МӘРЖӘМАНАС** (ҡариҙел) *и.* емеш орлоғонан яһалған ҡытай — *бусы из косточек плодов*

**МӘРЙЕНКҮҘ** (мейәс) *и.* сүрәгәй өйрәк — *чирок*

**МӘРЙЕҢ АҒАСЫ** (урта) *и.* 1. Өҫкат — *бузина.* 2. (эйек) Бүре еләге — *паслен*

**МӘРЙӘБАШ** (урта) *и.* һоҫлан — *суслон.* Арышлар мәрйәбашта шытып бөттө

**МӘРЙӘМ АҒАСЫ** (урта) *и.* 1. Өҫкат — *бузина.* 2. (эйек) Бүре еләге — *волчеягодник*

**МӘРЙӘМАНА** (урта урал) *и.* торна бото — *герань*

**МӘРЙӘМАНА КҮҘ ЙӘШЕ** (мейәс) *и.* торна бото — *герань*

**МӘРЙӘ САСЫ** (арғаяш) *и.* ҡылған — *ковыль*

**МӘРКЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* епшетеү — *подтаять*

**МӘРТҮШ** (ҡариҙел) *и.* мәтрүшкә — *душица*

**МӘРҮӘР ТАШЫ** (мейәс) *и.* мәрмәр — *мрамор*

**МӘРҮӘТ КИТӘРЕҮ** (эйек) *ҡ.* әрһеҙләнеү — *проявить беззастенчивость.* Мәрүәт китереп йөрөмә инде

**МӘРХӘМ** (дим, урта) *и.* мәрхүм — *покойник*

**МӘРХӘМӘ** (арғаяш) *и.* гөлләмә — *букет.* Алып сығайым сахраға, бирер булһаң мәрхәмә

**МӘРХӘМӘТ** (дим) *и.* нәтижә — *последствие.* Сөгәндәр мәрхәмәте сыҡҡан бы шеш булып

**МӘРӘ I** (урта, һаҡмар) *и.* ығыш — *копуша*

**МӘРӘ II** (урта урал) *с.* епшеү — *подтаивать (о снеге)*

**МӘРӘЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* тәнтерәкләү — *ковылять*

**МӘРӘҮӘТ I** (мейәс) *и.* һиҙәп — *пуговица (мелкая)*

**МӘРӘҮӘТ II** (урта) *р.* яҡшы — *хорошо.* Һуғышып тороуы мәрәүәт түгел инте ул

**МӘС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бәҫ — *иней*
**МӘСҒҮЛ** (һаҡмар) *р.* мәшғүл — *занят.* Мин үҙемдә был ҙур эштә мәсғүл һанайым
**МӘСЕЛЕЙ** (туҡ-соран) *и.* бәләкәй суртан — *щуренок*
**МӘСЕТ ТАРАҠАНЫ** (һаҡмар) *и.* 1. Еңгәсәй — *солдатик.* 2. (урта) Ҡамҡа — *божья коровка*
**МӘСИХ** (эй) *и.* өй эйәһе — *домовой*
**МӘСКӘҮ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* балитәк — *оборка.* Алты мәскәүле итеп күлмәк тектергән (эйек-һаҡмар)
**МӘСЛҮМ** (һаҡмар) *и.* эт ҡарағаты — *паслен черный*
**МӘСТЕМ** (һаҡмар) *и.* бәләкәй суртан — *щуренок*
**МӘСТӘ** (гәйнә) *а.* ниндәй, нимә — *какой? что?* Бу мәстә хәл?
**МӘСҮӘК** (урта) *и.* тубылғы — *чилига*
**МӘСӘЙ** (мейәс) *и.* һеңер — *сухожилие*
**МӘҪӘРЕҮ I** (дим, туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* ашамлыҡтың гөмбәләнеүе — *появление грибков в пищепродуктах*
**МӘҪЕРЕҮ II** (дим, туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* бер ҡайҙа ла бармай, йөрөмәй, өйҙә генә йәшәү — *быть домочадцем, бирюком.* Мәҫәреп бөтөгөҙ бит инде бер ҡайҙа ла йөрөмәй, ҡалаға барып киһәгеҙ ни була (туҡ-соран)
**МӘТКӘ I** (ырғыҙ) *и.* сиңерткә — *стрекоза*
**МӘТКӘ II** (урта урал) *и.* иркәләү ҡатыш орошоу һүҙе — *слово порицания, журенья.* Нейә оҙаҡ йөрөйөң, мәткә!
**МӘТРЕЙ** (урта, һаҡмар) *и.* киҫәтеү һүҙе — *слово предупреждения.* Һин, мәтрей, барыһын да апарып бир атайыңа (һаҡмар)
**МӘТРҮКӘ I** (һаҡмар) *и.* шаян һүҙ — *шутливое слово.* Мәтрүкәне һөйләй ҙә йөрөй был
**МӘТРҮКӘ II** (һаҡмар) *и.* шаян һүҙ — *шутливое слово.* Мәтрүкәне һөйләй ҙә мираҫ — *наследие.* Был һыйырҙар «Ҡыҙыл Йылайыр» калхузынан ҡалған мәтрүкәләр
**МӘТРӘЙ БАШТЫ ҮЛӘН** (мейәс) *и.* меңъяпраҡ — *тысячелистник*
**МӘТРӘСӘ** (ҡариҙел) *и.* мәҙрәсә — *медресе*
**МӘТҮК** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* тәпке — *мотыга*
**МӘТӘЙЕС** (ҡыҙыл) *и.* төпөш — *коротыш*
**МӘТӘЛ** (урта) *с.* ҡыҫҡа — *короткий.* Мәтәл тайаҡ
**МӘТӘЛӘ** (һаҡмар) *и.* мәшәкәт — *хлопоты.* Уй, аның мәтәләһе гүп
**МӘТӘЛӘНЕҮ** (ҡыҙыл, урта, эй) *ҡ.* маташыу — *возиться.* Һаман машинаһы менән мәтәләнә (ҡыҙыл)
**МӘТӘЛӘҮ** (ҡыҙыл, урта, эй) *ҡ.* мәшәкәтләү — *беспокоить*
**МӘТӘҮ** (дим) *ҡ.* аттың дүрт аяғын тышау — *стреножить коня на четыре ноги*
**МӘТӘҮКӘ** (ҡыҙыл) *и.* иргәйел — *карлик*
**МӘҮЕГЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* мауығыу — *увлекаться.* Теге сүзгә мәүегергә генә тора
**МӘҮЕК САРҘАҠ** (арғаяш) *и.* күк сарлаҡ — *сизая чайка*
**МӘҮЕШ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* мәшәү — *мямля.* Өҙә һуғыр Яхинме был, әллә берәй мәүеш малаймы?
**МӘҮКӘЙ** (дим, мейәс) *с.* мәшәү — *мямля.* Ирем мәүкәй булды (дим)
**МӘҮЛӘ** (һаҡмар) *и.* алла — *бог.* Мәүләм бирһен инде
**МӘҮСҮК** (эй) *и.* өй эйәһе — *домовой*
**МӘХЛҮК I** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эй) *с.* меҫкен — *жалкий, несчастный*
**МӘХЛҮК II** (ҡариҙел) *и.* мәйет — *покойник*
**МӘХРҮМ ОЙОҠ** (ҡариҙел) *и.* капрон ойоҡ — *капроновые чулки*
**МӘХРҮМ ҮКСӘ** (ҡариҙел, мейәс) *и.* *танкетка*
**МӘХРҮҺ** (һаҡмар) *и.* гонаһ — *грех.* Икмәк уалсығын тапау мәхрүһ
**МӘХРӘМӘ** (һаҡмар) *и.* уҡа сасаҡ — *бахрома из позумента*
**МӘХӘПӘТҺЕҘ** (ҡыҙыл) *и.* мөхәббәтһеҙ — *негодник*
**МӘҺЕР** (арғаяш, мейәс) *и.* мәһәр — *выкуп за невесту.* Мәһеренә бер ҡонажын бейә, бер быҙауҙы һыйыр, бер тангүгеҙ, илле һум аҡса бирҙеләр (мейәс)
**МӘҺӘР МАЛЫ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Килен бирнәһе — *приданое невесты (в виде скота).* 2. Ҡыҙға егет бүләге — *подарки невесте от жениха*
**МӘҺӘШ** (һаҡмар) *с.* мәшәү — *мямля.* Һай мәһәш әҙәм икәнһең дә
**МӘШҒҮЛЛЕК ИТЕҮ** (урта) *ҡ.* мәшғүл булыу — *быть занятым*
**МӘШКӘ I** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* бәшмәк — *гриб*
**МӘШКӘ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бөкө — *пробка*
**МӘШКӘ III** (гәйнә) *и.* зәңге — *цинга*
**МӘШКӘ ЙАУЫН** (гәйнә) *и.* быҫҡаҡ ямғыр — *моросящий дождь*
**МӘШКӘК** (урта) *и.* бешкәк — *пахталка.* Ҡымыҙҙы мәшкәк белән бешеп торалар
**МӘШКӘҮЛӘН** (ҡариҙел) *и.* туҙғанаҡ — *одуванчик*
**МӘШҮЕРӘТ** (эйек) *и.* әһәмиәт — *значение.* Гел мәшүерәтле эштә эшләнем
**МӘШӘ, МӘШӘЙ** (урта) *и.* ашыҡ — *бабка*
**МӘШӘК** (дим) *и.* мәшәү — *мямля*

# Н

**НАБУРКА, НАБЫРКА** (арғаяш, салйоғот) *и.* балитәк — *оборка.* Набуркалап тегәр инек беҙ күлмәкте әүәл (арғаяш)
**НАҒАСЫ** (мейәс) *и.* кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙың тыуған ауылы кешеләренең уның балаларына өндәшеү һүҙе — *обращение жителей родной деревни женщины к ее детям*
**НАҒЫҘ** (ырғыҙ) *с.* иң шәп — *отборный.* Армийаға атларҙың иң нағыҙларын алдылар
**НАҒЫШ** (эй) *и.* юл япрағы — *подорожник.* Шешкәнгә херхәүәт өҫтөнән нағыш та йаваһың. Нағышйапраҡ (гәйнә)
**НАҒЫШЛАУ** (урта) *ҡ.* сигеү — *вышивать*
**НАҒЫШ ТЕГЕҮ** (салйоғот) *ҡ.* нағышлау — *вышивать гладью.* Кейәү ҡулйаулығына нағыш тегәр инек борон
**НАҒӘЛӘТ, НӘҒӘЛӘТ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* ләғнәт — *проклятье.* Нәғләт (эй)
**НАҘАЛЫМ** (дим) *р.* күп, донъя тулы — *навалом.* Хатыннарға уаҒ эшләр наҙалым инде

**НАҘАНСЫЛЫҠ** (ырғыҙ) *и.* наҙанлыҡ — *неграмотность.* Борон наҙансылыҡ көслө булған

**НАҘЛЫҠАЙ** (һаҡмар) *и.* 1. Наҙлы — *баловень.* Мал да наҙлыҡай булыр икән. 2. *с.* наҙлы — *изнеженный*

**НАҘИР** (һаҡмар) *с.* 1. Сейле-бешле — *неспелый (о ягоде).* Йеләк бында наҙир ғына икән. 2. Һүрән бешкән — *сыроватый (о хлебе).* Икмәгем наҙир ғына булып беште

**НАЖАҒАЙ, НАҘАҒАЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* ялағай — *зарница.* Нажағайны ашлыҡ йеткерә тибеҙ инде (гәйнә)

**НАЖУМ, НӘЖҮМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тиҙәк — *навоз.* Басуға нажум ташый калхуҙға

**НАҘАР** (ҡариҙел) *и.* күҙ ҡырыйы — *краешек глаза.* Күҙенең назары менән генә ҡарай

**НАЗҒАЙ** (дим) *и.* ялағай — *зарница.* Назғай йалтыраҫа арыш бешә тибеҙ

**НАЗУМ** (урта) *и.* тапанды — *объедье.* Эре бесәндең назумы күп

**НАЗЫУАЙТТАУ** (ҡыҙыл) *и.* ихласлап, еренә еткереп эшләү — *делать кропотливо, довести до ума*

**НАЙАН** (мейәс, һаҡмар) *с.* 1. Шуҡ — *озорной.* Анын тәүге балаһы найан булды, мыныһы йыуаш. 2. (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ығыш — *копуша.* 3. (урта) *с.* мәкерле — *коварный.* 4. Ышанысһыҙ — *ненадежный.* 5. Усал — *злой.* 6. *и.* юха — *подхалим*

**НАЙАТ** (дим) *р.* һәйбәт — *хорошо.* Хәҙер йәшәү найат инде ул, һис нужа йуҡ, мал аҫырайбыҙ

**НАЙАТЛАУ** (урта) *ҡ.* йыйыштырыу — *убрать.* Өйөн найатлап ҡуйған

**НАЙЫЛДАУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Мығырҙау — *болтать.* Алар хәҙер ултыра инде шунда найылдап. Лайылдау (туҡ-соран). 2. (урта урал) Һуҙып һөйләү — *мямлить*

**НАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* нәҡ — *как раз, точь-в-точь.* Наҡ үҙе, ике күҙе. Наҡ инәсе, суйған да ҡуйған. Наҡ булыу (салйоғот) етешеү *(ауырлы ҡатынға ҡарата)* — *дохаживать.* Наҡ булып ултырған хатындан ней эш көтәһең

**НАҠАП** (дим) *и.* 1. Борондан ҡалған йөкмәткеле һүҙ — *мудрое слово.* Бабайымдың наҡап һүҙҙәрен йаҙып алығыҙ

**НАҠАП ҺҮҘ** (дим) *и.* нахаҡ һүҙ — *клевета*

**НАҠЫҪАЙЫУ** (урта) *ҡ,* насарайыу — *ухудшаться.* Күҙгә лә наҡыҫайа башлағайны шул Зөлхизә әбей

**НАЛПЫ** (дим) *и.* шәм — *лампа*

**НАМАҘҠАР** (ҡыҙыл) *с.* иҫкесә уҡымышлы, намаҙ ҡалдырмаған — *соблюдающий религиозную молитву намаз*

**НАМБУК** (салйоғот) *и.* тауар төрө — *разновидность ткани*

**НАМҪЫУ** (урта) *ҡ.* намыҫ итеү — *совеститься.* Аңа намҫып сығып китте. Намыҫҡырау (әй)

**НАҢЫШТАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* нағыш сигеү — *вышивать гладью*

**НАҢЫШТЫ** (ҡыҙыл) *с.* сигеүле — *вышитый.* Таҫтамал һуғылған, наңышты ине

**НАПАРЙА** (һаҡмар) *и.* 1. Кендек бырау — *бурав большого размера.* 2. (урта) Ҡасау бырау — *перка.* Напарйа бырауының осо нәҙек, ҡанатлары үткер була

**НАР I** (һаҡмар) *р.* күңелле — *весело.* Нар булды инде шул тикле

**НАР II** (һаҡмар) *и.* лар — *ларь*

**НАРАТ КҮКӘЙЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡарағай тубырсығы — *сосновая шишка*

**НАРАТ СЫПСЫҒЫ** (гәйнә) *и.* шыршы турғайы — *клест-еловик*

**НАРДӨЙӘ** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* бер үркәсле дөйә — *одногорбый верблюд*

**НАРИСИЛА** (гәйнә) *и.* сабый — *младенец*

**НАРЫҠ** (туҡ-соран) *и.* баһа — *оценка.* Мин унын был эшенә ней тип тә нарыҡ бирә алманым

**НАҪАҠАЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* насар ғына — *плохонький.* Үҙем насаҡай булһам да утыҙ һум аҡса, танүгеҙ бирҙеләр

**НАСАРЛАУ** (урта) *ҡ.* яманлау — *хаять*

**НАСБЫЙ** (ырғыҙ) *и.* төйөлгән тәмәке — *толченый табак.* Насывай (туҡ-соран)

**НАСКЫЙ** (дим, урта) *и.* баталтай — *шерстяные носки ручной вязки.* Нәскей (ҡариҙел, урта)

**НАСТИК** (ҡариҙел) *и.* *сатин*

**НАСТРУКЛАУ** (дим) *ҡ.* йышыу — *строгать*

**НАҪЫЛА, НӘСЕЛӘ** (ҡыҙыл) *р.* көскә — *насилу.* Насила (әй) Насила килеп йығылды

**НАҪ: НАҪ БАҪЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йонсоу — *изнуряться.* Нәҫ баҫыу (әй).

**НАҪЫР, НАҺЫР** (эйек-һаҡмар, урта) *и.* өмөт — *надежда, чаяние.* Наҫыр ҡороу — өмөт өҙөлөү. Хайыуандың да наҫыры ҡоромаһын тейләр бәйгелә (урта). Наһыра тейеү — асыуға тейеү (урта) — *сердить*

**НАУАҘ** (дим) *с.* иҫәп белмәгән — *не разбирающийся в счете*

**НАУҠАҪЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* ауырыҡһыныу — *нездоровиться.* Науҡаҫлап тора әле беҙҙең малай

**НАУЫҘ** (дим) *и.* тиреҫ — *навоз*

**НАУЫР** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡылауыр — *туберкулез желез*

**НАУЫР ЙЕЛӘГЕ** (һаҡмар) *и.* ыйыҡ ауырыуын дауалай торған үлән — *лекарственная трава, используемая при лечении туберкулеза желез*

**НАҺАҠҠА** (ҡыҙыл, әй) *р.* нахаҡка — *напрасно.* Наһаҡка кешене эрәнжетмә (ҡыҙыл)

**НАҺАР: НАҺАР ҠЫРҠЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* үҙәккә үтеү — *вымотать душу*

**НЕГӘРТАУ** (ҡариҙел) *и.* Башҡортостандың Аҫкын районы Ҡашҡа ауылы янындағы тау исеме — *название горы у деревни Кашкино Аскинского района Башкортостана*

**НЕЙ** (көнсығыш диалект) *а.* 1. Нимә? — *что?* Мине лә биреп ней алдың, йапырыҡ та йапырыҡ аҡса алдың (мейәс-*сеңләүҙән).* 2. Ҡайһы? ниндәй? — *который? какой?* Ней гөн сығып китергә уйҙап тораһың? Ней йәне ҡалды икән? (салйоғот) 3. Йә (көнсығыш диалект, урта) *к. ни — частица ни, ни.* Ней арба түгел, ней сана түгел. Ней аҡыллы, ней тиле (ҡыҙыл). Нәй (мейәс). ◊ Ней әйтер инең — әйтерең бармы? — *А как же иначе?* 4. *И. һ.* — *вводное слово.* Ней, ана теге тауыҡлар икмәгеңде ашапөткәннәр (урта)

**НЕЙ АҠЫРЫ** (урта) *р.* ни тиклем — *сколько (достаточно много).* Ней аҡыры кеше йыйылған. Ни аҡырым (һаҡмар). Ни аҡырым эшем бөттө

Ноғала' эшләвез!

**НИНӘМӘ** (ҡыҙыл) *а.* нимә? — *что?* Нинәмә үләне тиб атала бы?

**НИНӘМӘХӘЛЛӘ** (ҡариҙел) *а.* ни нәмә? — *что такое?*

**НИРГӘ** (ҡариҙел) *и.* 1. Баҙ бураһы — *внутренняя завалинка.* 2. (дим) Стенаның тыш яғы — *наружная сторона стены.* 3. Бураның түбәндәге ике рәт бүрәнәһе — *нижние два венца сруба*

**НИРҠӘЛЕ** (салйоғот) *с.* соҡорло, һикәлтәле — *ухабистый.* Ниркәле йул тап булды

**НИСЕККӘРӘҠ** (урта) *р.* саҡ-саҡ — *кое-как.* Бер һыйырҙы нисеккәрәк һөйрәп йөрөп аҫраныҡ

**НИСТӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ни эшләү — *что делать?* Саҡ нистәмәнем, үлмәнем. Ништәү (көнсығыш диалект). Шуны белән ништәп йөрөй булам аны (мейәс)

**НИСҮБӘК** (ҡыҙыл) *и.* шайтан таяғы — *чертополох*

**НИСҮКТЕР** (һаҡмар) *р.* нисектер — *как.* Нисүктер атаһы бер бай әбей алған да

**НИСӘҒӘН** (дим) *и.* мисәү аты — *лошадь пристяжки*

**НИСӘМЕШӘР** (ҡыҙыл) *р.* күпмеләп — *поскольку.* Ҡыҙым, дижурҙа нисәмешәр геше йөрөйөгөҙ у?

**НИСӘҮ** (дим, салйоғот, урта) *и.* мисәү — *постромка.* Нисәү ағасы. Нисәү аты

**НИТКӘН** (ҡыҙыл) *а.* ниндәй — *какой?* Ниткән эш у?

**НИТУКМЫШТЫ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *р.* ул ғына түгел — *не только, но и.* Нитукмышты ул сағында, суңынан буталып торҙо (ҡариҙел)

**НИТУРЫН** (урта) *и.* ҡош теле — *хворост (печенье, изготовленное во фритюре)*

**НИФТЕ** (урта) *и. нефть.* Беҙҙең ҡыраҡанан нифте сыҡкан тей

**НИХАШАН** (урта) *и.* биҙгәк — *малярия*

**НИХМӘТ** (дим, ҡариҙел) *и.* михнәт — *нужда.* Нихмәтне күп күрҙег инде (дим)

**НИХЫЛДАУ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* ыңғырашыу — *стонать.* Нихылдай ҙа йөрөр шул әбей (урта)

**НИХӘЛ** (урта) *р.* нисек? — *как?* Нихәл өлгөрәһең аныңа?

**НИҺАН** (һаҡмар) *р.* күп — *множество, много.* Ниһан геше гигән. Ниһан ашамлыҡ биреб йебәргән

**НИ ҺЫНЛЫ, НИ ҺАНЛЫ** (һаҡмар) *р.* ни тиклем — *сколько.* Ни һынлы бысранып бөткәнһең. Ни һанлы эшем ҡалды

**НИШАН** (гәйнә) *р.* 1. Үтә — *очень.* Ҡартуп нишан эре. 2. Бер аҙ — *немного.* Терелде ҡый нишан. *3. с.* алйот — *ненормальный.* Баласы нишан ҡый. Нишана (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ)

**НИШИШАЙА** (гәйнә) *р.* байтаҡ — *значительно*

**НИШАНА** (һаҡмар) 1. *с.* аңра — *глупый.* 2. (ҡыҙыл) *и.* йүләр, алйот — *придурок.* 3. (ҡыҙыл, мейәс, әй) *с.* ҙур, нормаль булмаған нәмә — *несуразно огромный.* 4. (урта) Йәмһеҙ — *несуразный*

**НИШӘП** (ҡыҙыл) *а.* ниңә? — *почему?* Нишәп һуғаң? Нишәп йөрөү?

**НИШУРА** (ҡыҙыл) *и.* ялған уҡа — *мишура*

**НИӘМӘ** (ҡыҙыл, һаҡмар, әй) *а.* нимә? — *что?* Ниәмә һөйҙәп кигән төгө геше (әй)

**НИӘТ** (дим) *и.* мөйәт — *хомутина*

**НИӘСТӘ** (ҡариҙел) *а.* ниндәй? — *какой?* Ниәстә хәтерең ҡалыр, ниәстә зиһенең ҡалыр?

**НОҒАЛА, НУҒАЛА** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* 1. Күҙгә үҫкән кимерсәк — *хрящевидный отросток на глазу.* 2. *(әйек-һаҡмар) и.* күрәшлек — *близорукость*

**НОҒАЙЫМ** (ҡыҙыл) *м. һ.* моғайын — *наверно*

**НОЙОУ** (мейәс, әй) *ҡ.* ойоу — *задремать.* Йоҡтап китмәйем, нойоп ҡына йатам (мейәс)

**НОҠ** (урта) *и.* сөрәк — *труха (дерево)*

**НОҠОЙ: НОҠОЙ ЗАМАН** (һаҡмар) *и.* нух заманы — *давно, со времени Ноя.* Ноҡой заманынан бире барғаным йуҡ Аллабирҙегә

**НОҠОМ I** (һаҡмар) *и.* ваҡ бауырһаҡ — *мелкий баурсак*

**НОҠОМ II** (һаҡмар) *р.* ауыр — *туго.* Беҙен баллар уҡыуға ноҡом булдылар бит

**НОҠОТ I** (ҡыҙыл) *и.* оңҡот — *обжора*

**НОҠОТ II** (ҡариҙел, урта) *с.* 1. Тар ҡарашлы — *ограниченный (о человеке).* 2. (ҡыҙыл, ырғыҙ) Аңһыҙ — *глупый.* Элек кеше ноҡот буған (ырғыҙ). 3. (туҡ-соран) Мәғәнәһеҙ — *бестолковый.* 4. (һаҡмар) Наҙан — *неграмотный*

**НОҠОТ III** (һаҡмар) *и.* ноҡот борсағы — *фасоль.* Ноҡот (һаҡмар, әй)

**НОҠОТ СЕЛЕГЕ** (дим) *и.* тубылғыға оҡшаш борсаҡлы ваҡ ағас — *кустарник, напоминающий чилигу*

**НОҠСАНЛЫҠ** (урта) *и.* бәлә-ҡаза — *бедствие.* Күп бурыс йөкләтәләр, төрлө тарлыҡ һәм ноҡсанлыҡ килтерәләр

**НОҠТА** (арғаяш) *и.* нуҡта — *недоуздок*

**НОҠТАЛЫ ШЕШ** (ҡыҙыл) *и.* быҙау морондоғо — *намордник (для теленка)*

**НОРАҒАС** (дим) *и.* һырғауыл — *столб, на который взбираются на состязаниях*

**НОРАТЫУ** (арғаяш) *ҡ.* әлһерәү — *изнуряться.* Эҫе буғас норатып тора кешене

**НОРАУ** (арғаяш) *ҡ.* 1. Йөҙәү — *измучиться.* Норап ҡалдыҡ аслыҡтан. 2. (урта урал) Серем итеү — *дремать*

**НОРЛАУ, НУРЛАУ** (урта, әйек-һаҡмар) *ҡ.* умартала ваҡ ҡына ҡорттар барлыҡҡа килеү — *червиветь (в ульях).* Һыуланһа, йаҡшы таҙартманиһәң, норлай ҡорт умартала (урта)

**НӨГӘЛӘШЕҮ** (салйоғот) *ҡ.* аҙашыу — *заблудиться*

**НӨЙӘТ** (арғаяш, дим) *и.* мөйәт — *хомутина.* Ниәт (дим)

**НӨКТӘ** (урта) *и.* ваҡ-төйәк — *всякая мелочь.* Әй, барыһы ла әйтелә инте, нөктәһеҙ донйа гөтөпумай инте

**НӨНӨЛДӘК** (урта) *и.* күрән — *осока*

**НӨНӨНӨК** (әйек-һаҡмар) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Нөнөнөк күб беҙҙә (һаҡмар)

**НӨНӘР** (һаҡмар) *и.* нөгәр — *шафер*

**НӨҢКӨЛДӘК** (арғаяш) *и.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**НӨҢКӨР-НӘҢКЕР** (һаҡмар) *р.* көңгөр-ҡаңғыр — *потихонечку.* Нөңкөр-нәңкер гилеп донйа гөтөп йатабыҙ әле

**НӨКСӘНДЕК** (әй) *и.* бәлә-ҡаза — *бедствие.* Йортҡа нөксәндек китереп йөрөмәгеҙ тип әйтмәгәм дә

**НУЖАЛЫ** (урта) *с.* михнәтле — *бедственный.* Әй нужалы булдым, бигерәк әрнейем

**НУЖНА** (көнсығыш диалект) *и.* нужа — *нужда.* Һуғыш нужнаны күп күрҫәттe инде, ҡыҙым (ҡыҙыл)

**НУЙЫНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* сатнау — *треснуть*

**НУЙЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* 1. Ялҡыу — *надоесть.* 2. Йонсоу — *утомляться*

**НУҠРА** (гәйнә, ҡыҙыл, урта) *и.* уҡра — *овод (бычий)*

**НУҠТА: НУҠТА ҠАБАҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ноҡот — *фасоль.* 2. Күрәҙәлек итеү өсөн тәғәйенләнгән ҡырҡ бер таш — *камушки для гадания*

**НУРҘА** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* мурҙа — *морда (рыболовная снасть)*

**НУРЛЫ** (урта) *с.* мөхәббәтле, йондоҙло — *симпатичный.* Йәш сағымта йыуан, нурлы бултым

**НУРЫМ** (һаҡмар) *и.* яр ситенән өңөлөп киткән соҡорло урын — *углубление в побережье реки.* Был нурымнар әлек йуғ ине

**НУРЫТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* һыуҙың ярҙы өңөүе — *размывание берегов водой.* Һыу нурытып мурҙаны ағыҙып алып киткән

**НУРЫУ I** (ҡыҙыл) *ҡ.* һыуҙың ярҙы өңөүе — *размывание берегов водой*

**НУРЫУ II** (һаҡмар) *ҡ.* ярмаланыу — *засахариться (о меде).* Өйҙә утырып нурығанды файҙалы тейләр, ә умартала нурыһа, ҡорт тормай, әсегән була

**НУРЫШТАУ** (мейәс) *ҡ.* йәшкәҙәү — *стать пасмурным.* Көн нурыштан тора

**НҮКТӘРГЕ** (һаҡмар) *и.* мүктәрге — *кобчик.* Ҡара нүктәрге тибә себеште

**НЫҒЫТЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ныҡышыу — *упорствовать*

**НЫҠ** (эйек-һаҡмар) *р.* 1. Күп — *много.* Ауыл элек бик ныҡ күсеп йөрөгән. 2. (урта) *с.* күпте күргән, күпте белгән — *виды видавший.* Әбейләр ныҡ кеше бит ул, һөйләрләр

**НЫҠАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ныҡышыу — *упорствовать.* Ныҡашма, кәрәгеңә алырың

**НЫҠЛЫ** (урта) *с.* баҙнатлы — *смелый*

**НЫҠЫМЫШ** (эйек-һаҡмар) *с.* ныҡыш — *настойчивый*

**НЫҠЫТЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ныҡышыу — *настоять.* Аһ-аһ, бер ныҡыған кешене ныҡытып тиг утыра. Ныҡыу (урта)

**НЫҠЫ-МЫҠЫ** (ҡыҙыл) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Шитауыт эше Тойғонов ҡыҙы менән ныҡы-мыҡы уйнаған ише түгел

**НЫҠЫҪ: НЫҠЫҪҠА ҠАЛЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* кәмеү — *убавиться*

**НЫҠЫШЫУ** (урта) *ҡ.* ялҡытыу — *надоедать.* Йауын ныҡышты быйыл

**НЫҢҒЫЛДАУ** (гәйнә) *ҡ.* кәйефһеҙләнеү — *быть не в духе*

**НЫС** (эйек-һаҡмар) *к.* лыс — *совершенно.* Ныс һыу айағы

**НЫЦЫУ** (ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* тығыҙлап, тыңҡыслап тултырыу — *набивать.* Нышыбыраҡ тултыр тоҡто (ырғыҙ)

**НЫШЫНЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ашанып-ашаныу — *есть беспрестанно*

**НӘ** (арғаяш, гәйнә, һаҡмар) *а.* нимә? — *что?* Нә ғылаһың инде? Нә китереп өйгәннәр? Нә булды? (һаҡмар)

**НӘ БАРЫ** (һаҡмар) *а.* ни бары — *все.* Нә бары ла бының буш һүҙ

**НӘҒЕҘ I** (ырғыҙ) *с.* саф, ысын — *настоящий.* Беҙ нәғеҙ башҡорт

**НӘҒЕҘ II** (һаҡмар) *и.* көнбағыш емеше — *семечки подсолнуха*

**НӘҒЕШ** (салйоғот) *и.* нағыш — *гладь (вышивка)*

**НӘҒУШЫМ** (ҡариҙел, әй) *р.* яланғас — *нагишом.* Нәғушым ҡалып бөттөк (ҡариҙел)

**НӘҒӘЛӘТЛӘҮ** (урта) *ҡ.* ләғнәтләү — *проклинать*

**НӘҘЕГӘРЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* нәҙегәйеү — *утончаться*

**НӘҘЕК** (урта) *с.* 1. Сибек — *слабый.* Өй геше нәҙек була. 2. Артыҡ нескә — *деликатный.* Кешегә һөйләмәйем, төш нәҙек бит ул. 3. (ҡыҙыл) Тар — *узкий.* Нәҙек йерҙе белергә гәрәк

**НӘҘЕК АРҠАН** (урта) *и.* паром, пароход бәйләп ҡуя торған арҡан — *чалка*

**НӘҘЕК АУЫРЫУ** (ҡыҙыл) *и.* ҡылтамаҡ — *сужение пищевода*

**НӘҘЕК ЙУЛ** (арғаяш, әй) *и.* һуҡмаҡ — *тропинка*

**НӘҘЕКЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡылтамаҡ — *сужение пищевода.* Атаһы нәҙекләү менән үлде

**НӘҘЕК ЙЕЛЕК** (ҡыҙыл) *и.* терһәктән түбән беләк һөйәге — *локтевая кость*

**НӘҘЕК РӘНЙЕҮ** (арғаяш, ҡыҙыл) *и.* ҡылтамаҡ — *сужение пищевода*

**НӘҘЕК ТАРАҠ** (мейәс) *и.* йыш тешле киндер ҡылыс — *частое бердо*

**НӘҘЕКШӘЛ** (һаҡмар) *и.* йоҡа дебет шәл — *платок-паутинка*

**НӘҘЕКӘЙ I** (эйек-һаҡмар) *с.* 1. Һайлансыҡ — *привередливый (в еде).* 2. (ҡыҙыл) *и.* аш үтмәү ауырыуы — *сужение пищевода*

**НӘҘЕКӘЙ II** (урта) *и.* ташбаш — *пескарь*

**НӘҘЕК ЭШ** (урта) *и.* аныҡлыҡ талап иткән эш — *точная работа.* Аныһы ла нәҙек эш

**НӘҘЕЛЛЕ** (салйоғот) *с.* күңелле — *веселый.* Нәҙелле лә үткән йәш уахыт

**НӘҘӘРӘ** (ырғыҙ) *и.* танау биле *(малда)* — *переносица (у животных)*

**НӘЖАҒА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ялағай — *зарница.* Нәжеғәй (дим), нәжәғәй (урта)

**НӘЖБӘТТӘП, НӘЖЕҮӘТТӘП** (урта) *р.* ентекләп, еренә еткереп — *кропотливо.* Оҙағ эшләйһең нәжбәттәп

**НӘЖҮМ** (дим) *и.* тиҙәк — *навоз*

**НӘЖӘНКЕ САНА** (ҡариҙел) *и.* ләжәнкә сана — *розвальни.* Ләжәңкә (әй)

**НӘҘБЕРЕК** (мейәс) *с.* талымлы — *разборчивый (в пище)*

**НӘЙ** (урта) *а.* нимә? — *что?* Нәй гәрәк?

**НӘЙӘТ** (урта, һаҡмар) *р.* бына тигән — *на ять (великолепно).* Нәйәт итеп эшләп ҡуйған (урта)

**НӘКЕШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* нағыш — *вышивка (гладью)*

**НӘКӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* һупалау — *немного уметь*

**НӘКӘҪ, НӘҠӘҪ** (туҡ-соран, урта урал, ырғыҙ) *и.* ялҡау — *лодырь.* Шул хәтле нәкәҫ булыр икән, әлдә тимер-томор белә, астан үлер ине (урта урал). Нәкәс (төньяҡ-көнбайыш). Ҡарт нәкәҫ (әй) оло балаға

илағанда йәки иркәләгәндә әйтелә — *нытик (по отношению к взрослому ребенку)*

**НӘМЕ** (эйек-һаҡмар) *а.* нимә? — *что?* Нәме гейгәннәр у?

**НӘМПЕ** (арғаяш) *и.* һыу ҡорто — *водяная червь.* Ауҙы нәмпе ҡырҡып бөткән

**НӘМӘҘӘЙ, НӘМӘНДӘЙ, НИМӘНДЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *а.* ниндәй? — *какой?* Әле нәмәҙәй эше бар? Нәмәндәй кешеләр килеп тулған?

**НӘМӘКӘЙ** (дим, көнсығыш диалект, төньяҡ-көнбайыш) *а.* нимә? — *что?* Был тоғондағы нәмәкәй? Нәмәкәй тышлайсың? (төньяҡ-көнбайыш)

**НӘМӘҪТӘ** (урта) *а.* нәмә? — *что?* Әллә нәмәҫтә йуҡ

**НӘМӘХРӘМ** (эй) *и.* ҡатын-ҡыҙ — *женщина.* Нәмәхрәмгә зыйаратҡа барырға йарамай туғайны

**НӘНӘЙ I** (гәйнә) *и.* күҙ ҡараһы — *зрачок*

**НӘНӘЙ II** (төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал) 1. Өләсәй — *бабушка.* 2. (гәйнә) Ҡурсаҡ — *кукла*

**НӘНӘЙ III** (мейәс) *и.* бәрәс — *ягненок, козленок.* Үҙебеҙҙең ҙур кәзәкәй тәҙерәнән ҡарап тора. Ҡарале, бәпәй, нәнәйҙәре әллә ғайҙа

**НӘНКЕЛДӘҮ, НАНҠЫЛДАУ** (һаҡмар) *ҡ.* лаҡылдау — *галдеть.* Нәңкелдәү (эй)

**НӘНӘС** (дим) *с.* өләсәйгә оҡшаған — *похожий на бабушку.* Нәнәҫенә ошаған баланы нәнәс, нәк нәнәҫе инде тибеҙ

**НӘҢГЕЛДӘК** (дим) *и.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**НӘҢГЕЛДӘҮ** (дим) *ҡ.* күп һөйләү, лаҡылдау — *много говорить*

**НӘПСЕЛЕ** (көнсығыш диалект, урта) *с.* нәфселе — *честолюбивый.* Эшкә ҡомһоҙ, эшкә нәпселе (урта)

**НӘРҪӘ** (көнсығыш диалект, урта, эйек-һаҡмар) *а.* 1. Нимә? — *что?* Нәрҫә гәрәк тей? (урта). 2. Әйбер — *вещь.* Берәр нәрҫә йаҙып йөрөйөнмө? Келәт ней ит һала торған нәрҫә (арғаяш). Нәрҫә ҡағылыу (ауырыу һуғылыу) *по религиозным представлениям заболеть от нечистой силы.* Нәрҫә сығыу (эйек-һаҡмар) ҡысыу сығыу — *фурункул.* Дәнемә бызырлап нәрҫә сығып китте (ҡыҙыл). Нәрһә (мейәс, салйоғот)

**НӘРҪӘКӘЙ** (көнсығыш диалект, урта) *а.* нимә? — *что?* Нәрҫәкәй эштәр икән бөрөҙө? (эй)

**НӘРӘТӘ** (дим) *и.* 1. Шаран — *плетневые заграждения на реке для задержания косяка рыб.* 2. (эйек-һаҡмар) Ептән үрелгән мурҙа — *морда, плетеная из веревки.* 3. (ҡыҙыл) Түңәрәк ау — *круглая сеть для ловли рыб*

**НӘСЕЛ** (арғаяш, ҡариҙел, салйоғот) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня.* Нәселе бар микән мында? (ҡариҙел)

**НӘСЕЛСТЫУА** (ҡариҙел) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня.* Нәҫелстыуа (урта урал)

**НӘСИЛӘ** (арғаяш) *р.* саҡ-саҡ — *кое-как.* Иртәнге ашауға нәсилә бер буһанкаһы ҡалған

**НӘСКЕЙ** (ҡыҙыл, эй) *и.* башалтай — *носки*

**НӘҪТӘКӘЙ** (көнсығыш диалект) *а.* нимә — *что.* Нәҫтәкәй һатыла тей лафкала? (мейәс)

**НӘҺИЛЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Йонсоу — *известись.* 2. Төңөлөү — *разочароваться.* Был кешенән дә нәһилләнеп ҡалдыҡ, инде кеменә ышанырға?

**НӘҺТӘ** (салйоғот) *и.* әйбер — *вещь.* Нәһтә китергәндәр тей мәгәзингә?

**НӘҺӘР: НӘҺӘР ҺЫҘЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ашауэсеү — *есть.* Ул нәһәр һыҙғаны йуҡ нисә гөн

**НӘСКӘ** (ҡариҙел) *с.* нескә — *тонкий.* Нәскә билле, билле генә икән дә

**НӘСКӘЙ** (ҡыҙыл) *а.* нимә? — *что?* Нәскәй генә булды инде

**НӘҪТӘ, НӘСТӘ-ҒАРА** (һаҡмар) *и.* әйбер — *вещь.* Нәстәне йыҡҡанын күргәнем йуҡ

**НӘСӘЙ** (һаҡмар) *и.* эш хаҡы — *плата за работу.* Был биш һумы эшегеҙ өсөн нәсәй булыр

**НӘСӘП** (эйек-һаҡмар) *и.* нәҫел — *родня.* Һеҙҙең нәсәп әҙҙер шул. Нәсәбен дә һораша ҡыҙҙын. Нәсәп, нәҫәп (ҡыҙыл)

**НӘСӘР** (ҡыҙыл) *с.* насар — *плохой*

**НӘҪ** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *и.* 1. Ялҡаулыҡ, моңһоҙлоҡ — *леность, вялость.* Йоҡлай ҙа йатаһың, бигерәк нәҫһең (һаҡмар). 2. Ығыш — *копуша.* Наҫ (мейәс)

**НӘҪЕЛ-НӘҪӘБӘТ** (ырғыҙ) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня.* Нәҫел-нәҫәбәтләре белән килделәр. Нәҫел-нәсеп (эй)

**НӘҪЕР** (ырғыҙ) *и.* нәҙер — *обет.* Ҫуғыштан ҡайтҫа тип нәҫер әйтәҫең

**НӘҪТӘ, НЕЙӘҪТӘ** (көнсығыш диалект, эйек-һаҡмар) *а.* нимә? — *что?* Нәҫтә гейән һуң айағыңа? (салйоғот). 2. Әйбер — *вещь.* Кел забуттан ала торғайным нәҫтәне (ҡыҙыл) 3. Ҡорал — *оружие.* Нәҫтәбеҙ ҙә бар ине һуғышһаҡ (һаҡмар). ◊ Нәҫтә ҡағылыу *(ауырыу һуғылыу) — по религиозным представлениям заболеть от нечистой силы*

# О

**ОБАЛАЙ: ОБАЛАЙ ИТЕП** (нөгөш) *ҡ.* убалай — *делая большим и пышным.* Обалай итеп икмәк бешергән

**ОБЖИТ** (салйоғот) *и.* һандыҡ — *объедье.* Обжит ман мал һимермәһ

**ОҒОРО** (ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, һаҡмар) *и.* бур — *вор.* Сабыйлы өйҙә оғоро йатмаҫ (һаҡмар)

**ОҒОРОЛАУ** (мейәс, салйоғот, һаҡмар) *ҡ.* урлау — *воровать.* Калхуздың дүрт атын да оғоролап, ҡаҙаҡлар йағына оҙатҡаннар алар (һаҡмар)

**ОҘАЙ** (урта, һаҡмар, ырғыҙ) *р.* 1. Бер-бер артлы — *один за другим.* Инәйем бер оҙай дүрт ҡыҙ тапты (ырғыҙ). 2. Бер ыңғай — *заодно.* Бер оҙай ошо эште лә эшләп ташлайбыҙмы әллә? (һаҡмар) 3. *я. һ.* буйы — *в течение.* Көн оҙай эшләп ултырып йалҡып кителде (һаҡмар)

**ОҘАЙЛЫ** (ҡыҙыл) *р.* оҙаҡ — *долго.* Кеше ағастар әйләнешендә оҙайлы йәшәһә үҙен интектергән сирҙәрҙән ҡотола

**ОҘАЙЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* оҙонайыу — *вытянуться.* Улым ҡапыл ғына оҙайып үҫеп китте

**ОҘАҠЛАР** (һаҡмар) *р.* оҙаҡ — *долго.* Ғәфури районына барғанда ифрат оҙаҡлар йаттыҡ

**ОҘАҠТАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* балалар уйынында ишләшеп командаларға бүленеү — *разделение игроков*

*на команды при групповой игре.* Оҙаҡташып та тормай икегә бүленделәр ҙә уйнай ҙа баштанылар. Оҙаҡлашыу (эйек-һаҡмар), уҙаҡлашыу (туҡ-соран)

**ОҘАҠҺЫҘ** (мейәс, эй) *р.* оҙаҡ ваҡыт — *долгое время.* Оҙаҡһыҙ кипмәй ул, тышҡа ғуй

**ОҘАМ** (ҡыҙыл, урта, эй) *с.* 1. Алыҫ, оҙон — *дальний, длинный.* Оҙам йул арыта (урта). 2. Оҙаҡ — *длительный, продолжительный.* Был оҙам йауған йамғырға оҡшай (ҡыҙыл). 3. Сыҙамлы — *выносливый.* Оҙам ат

**ОҘАМ: ОҘАМДЫ АТТАУ** (эй) *ҡ.* эре аҙымлап атлау — *шагать большими шагами.* Оҙамды аттай, йетешеп бумай (эй)

**ОҘАМАУ** (дим, урта) *ҡ.* оҙаҡламау — *не задерживаться.* Оҙамай үҙенең «Волга»һында ҡалаға йелдереүсе Миҙхәт Йахин тап булыр (урта)

**ОҘАН** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, эй) *и.* 1. Ҡор — *тетерев.* 2. (арғаяш, мейәс) Ата ҡор — *косач*

**ОҘАНДАП, ОҘАҢДАП** (эй) *ҡ.* 1. Һуҙып — *протягивая.* Оҙандап йырлау. Оҙандап һөйҙәү. 2. Эре аҙымлап — *большими шагами.* Оҙандап аттай ул йеҙнәм

**ОҘАН ИНӘҺЕ** (арғаяш, мейәс) *и.* инә ҡор — *тетерка.* Оҙан инәһе һуғышмай, ҡарап тиг утыра (арғаяш)

**ОҘАРТЫУ** (мейәс) *ҡ.* оҙайтыу — *удлинить.* Иҫке сәкмәнде оҙартып алдым әле

**ОҘАРЫУ** (мейәс) *ҡ.* 1. Оҙайыу — *продление, прибавление.* Төн оҙара башланы. 2. Оҙонайыу — *стать длинным.* Сәсе оҙарып китте әле

**ОҘАТҠЫС I** (кариҙел) *и.* арсый — *сопроводитель невесты в дом жениха.* Озатҡыс (урта урал). Ағасы белән йеңгәсе озатҡыс булды

**ОҘАТҠЫС II** (эй) *и.* 1. Туҡыма нигеҙен кәләпләү өсөн ҡағылған сөйҙәр — *шпили для подготовки основы ткани.* 2. (салйоғот) Ҡыҫҡа кәләп — *короткая мотушка*

**ОҘАТЫР АШЫ, ОҘАТЫУ АШЫ** (эйек) *и.* хуш һыйы — *прощальное угощение в последний день свадьбы.* Оҙатыр ашына ҡоҙаның ағай-энеләре тағы ла бергә йыйыла

**ОҘОН ТОРҠОН** (мейәс) *с.* оҙон тороҡ — *с длинным туловищем (о лошади).* Аты оҙон торҡондо

**ОҘОНТОРОҠЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* буйға үҫеү — *вытянуться.* Ҡапыл ғына оҙонтороҡланып китте малайым

**ОҘОНУМАРТА** (эй) *и.* түмәр умарта — *колодочный улей*

**ОҘОНҮҘӘК** (дим) *с.* оҙон тороҡ — *с длинным туловищем (о лошади).* Оҙонүҙәк байтал

**ОҘОНҺАМАЙ** (салйоғот) *и.* оҙон сәс — *длинные косы*

**ОҘОНАЙАҠ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) и. серәкәй — *комар*

**ОҘОНАЩҠАҠ** (мейәс) *с.* 1. Оҙон тороҡ — *с длинным туловищем (о лошади).* Оҙонашҡаҡ ат оҙамға сабыуға йаҡшы. 2. (эй) Оҙон аяҡлы — *длинноногий.* Оҙнашҡаҡ Муллабай килгән

**ОҘОНБИЛ** (урта) *и.* оҙон арба — *дроги.* Оҙонбилгә үгеҙ йегеп ташыныҡ утынты

**ОҘОНБОРОН I** (гәйнә, минзәлә) *и.* серәкәй — *комар*

**ОҘОНБОРОН II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көйөлдө — *кулик*

**ОҘОНБҮКӘН** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* эскәмйә — *скамейка*

**ОҘОНҒОЛАҠ** (һаҡмар) *и.* 1. Һүҙ йөрөтөүсе — *человек, распространяющий всякие слухи.* Һүҙҙән һүҙ оҙонғолаҡтан ишетелә. 2. (ҡыҙыл) Ғәйбәтсе — *сплетник.* Ул оҙонғолаҡ нимә инде, кеше араһын болғаусы

**ОҘОНҒУЙТЫР** (арғаяш, салйоғот) *и.* оҙон тун — *длинная шуба.* Хәҙер геше оҙонғуйтыр ман йөрөмәй шай (арғаяш)

**ОҘОНКОНБАЙЫШ** (урта) *и.* көндөң иң оҙон ваҡытында ҡояш байышы — *закат солнца в период летнего солнцестояния.* Оҙонкөнбатыш (эйек-һаҡмар)

**ОҘОНКҮКРӘК** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* оҙон арба — *дроги*

**ОҘОНҠАБЫРҒА** (ҡыҙыл) *и.* һебә ҡабырға — *ложное ребро*

**ОҘОНҠУЛ** (урта) *с.* шуҡ ҡуллы — *нечистый на руку.* Абай бул, анта оҙонҡул малайлар ҙа бар

**ОҘОННАЙ** (урта) *р.* оҙон көйө — *во всю длину, целиком.* Ағасты оҙоннай һыҙырҙыҡ

**ОҘОНСАЙ** (мейәс) *с.* оҙонса — *продолговатый.* Ауыл осонда ҙур ғына оҙонсай күл бар

**ОҘОНСАНА** (салйоғот) *и.* ләжәнкә сана — *розвальни.* Оҙон саналар ман ылауға йөрөгәндәр

**ОҘОН САТЛЫ** (урта) *с.* оҙон асалы — *развилистый.* Шәйхи оҙон сатлы тайаҡ менән остан этәреп торҙо

**ОҘОНҺОНДОР** (эйек-һаҡмар) *с.* оҙон буйлы — *рослый, высокий.* Оҙонһондор Лотфулла ла ҡоҙа булып килгәйне

**ОҘОН ШАЛҠАН** (мейәс) *и. турнепс.* Оҙон шалҡанды малға ла, ҡош-ҡортҡа ла ашатабыҙ

**ОЖО** (урта) *и.* уҫаллыҡ, этлек — *злость, козни*

**ОЖО ҺАЛЫУ** (урта) *ҡ.* отҡотоу — *подстрекать.* Кешегә ожо һалып йөрөмә

**ОЖОҠ** (урта) *и.* әбәк уйыны — *игра в пятнашки*

**ОЖОТ** (ҡыҙыл) *р.* саҡ ҡына, аҙ ғына — *чуть-чуть, чуточку.* Ожот ҡына бүлеп бирҙе. Атайымдың әйткәнен ожот ҡына белеп ҡалам

**ОЗАЙЫТУ** (гәйнә) *ҡ.* оҙайыу — *продление, прибавление.* Көн озайыта башланы

**ОЗДАНЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* һикерәндәү, тик тормау — *не сидеться.* Көнө буйы озданлап йөрөп арып бөткән. Оҙаңлау (туҡ-соран)

**ОЗДОЙ** (һаҡмар, ырғыҙ, эй) *с.* 1. Шаян — *шалун.* Малайың бигерәк оздой, әҙерәк эшкә ғуш (ырғыҙ). 2. (һаҡмар) *с.* өйгә ҡайтмаған мал — *не возвращающийся домой скот.* Оздой үгеҙҙе һуйып һаттыҡ

**ОЗДОЙЛОҠ I** (һаҡмар) *и.* типтерергә яратыусы, йөрөмһәк — *гуляка.* Ғөмөр буйына оздойлоғон ташламаны инде ул

**ОЗДОЙЛОҠ II** (һаҡмар) *и.* яуызлыҡ, уҫаллыҡ — *злость.* Һәр уахыт оздойлоҡ уйлап йөрөмә

**ОЗДОЙ ҺАРЫҠ** (ҡыҙыл, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* оҙон ҡойроҡло һарыҡ тоҡомо — *порода овец с длинным хвостом*

**ОЗДОРҘАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* әрләшеп, ыҙғышып алыу — *повздорить.* Симйәһе менән оздорҙашып бөттө

**ОЗЛАТЫУ** (урта) *ҡ.* ыҙалатыу — *мучить.* Кеше әйберен бирмәй озлатып тик йөрөтә

**ОЗЛАУ** (урта) *ҡ.* 1. Өзләү — *горловое пение.* 2. (дим, урта) Ауыҙ күтәреп илап ултырыу — *громко плакать.* Өзләү (эйек). 3. Олоу — *выть.* Ишекте элеп йоҡлап китһәң озлап йөрөбөҙ. 4. Һыҙланыу, һыҡраныу — *испытать ноющую боль.* Теш һыҙлап төнө буйы озлап сыҡтым

**ОЗМАХ** (дим, туҡ-соран, һаҡмар) *и.* ожмах — *рай*

**ОЗОЛОЙ** (әй) *с.* уҫал — *злой.* Бы хәтте озолой булыр икәнһең

**ОҘОНАЙАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һәндерә — *подмостки.* Симәнә солоно оҙонайаҡҡа ҡуйалар ҙа, фивральдә генә суғалар

**ОҘОНҠОЙРОҠ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡомаҡ — *крыса*

**ОҘОНҠОЙРОҠ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* айрығойроҡ — *уховертка*

**ОЗОР, ОЗУР, УЗЫР, ЫЗУР** (гәйнә) *с.* ҙур — *большой.* Озур урында аларның ызбалары

**ОЗОРТУЙ** (гәйнә) *и.* ҙур туй *(ҡыҙ яғында яһалған туй) — свадьба у родителей невесты.* Башҡолтайға озуртуйға бардыҡ

**ОЗУРНӘЙ** (гәйнә) *и.* өләсәй — *бабушка*

**ОЗУРТӘЙ** (гәйнә) *и.* олатай — *дедушка*

**ОЙА I** (ҡыҙыл) *и.* мал аҙбары — *хлев, овчарня.* Һыйыр ойаһы. Һарыҡ ойаһы

**ОЙА II** (ҡыҙыл) *и.* бура, сүрәкә кеүек балалар уйынындағы дүрткел һыҙыҡ эсе — *внутренняя часть квадратной черты в играх «Городки», «Чижик» и т. п.*

**ОЙА III** (көнсығыш диалект, туҡ-соран) *и.* картуф төбө — *гнездо картофеля.* Бер ойанан бер гүнәк картуф сыға ла ғуйа (туҡ-соран)

**ОЙА IV** (дим) *и.* соҡалта — *выемка в боку печи.* Бейәләйең лыс ҫыу, ойаға ҫал

**ОЙА V** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар, әй) *и.* нәмәнеңдер күп булыуы — *место скопления, обилия чего-либо.* Йеләктең ойаһына тап булдыҡ, ҡып-ҡыҙыл булып түшәлеп йата (туҡ-соран)

**ОЙА VI** (салйоғот) *и.* умарта — *улей*

**ОЙА: ОЙА ТИБЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* себеш сығарыу — *вывести цыплят.* Кәкүктәр башҡа ҡоштар ойа тибеп сығарған себештәрен эйәртмәйҙәр

**ОЙАЛАУ I** (салйоғот, урта) *ҡ.* ауылдың билдәле бер урынға килеп ултырыуы — *обоснование деревни в выбранном месте.* Тәгеш мында ойалаған, Һары ауылы Һары йылғаһына ойалаған (салйоғот)

**ОЙАЛАУ II** (туҡ-соран, әй) *ҡ.* эйәләшеү — *привыкать, привыкнуть.* Малайың беҙгә ойаланы инде, үҙебеҙгә ул итәбеҙ ҙә ғуйабыҙ (туҡ-соран)

**ОЙАЛСЫҠ** (мейәс) *с.* ойалсан — *застенчивый.* Ойалсыҡ ҡына ҡыҙыбыҙ бар. Ойалчыҡ (төньяҡ-көнбайыш)

**ОЙАН I** (дим, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *с.* ойошҡан — *слепившийся, сбитый в комок.* Ойан йал. Ойан ҡойроҡ

**ОЙАН II** (дим) *и.* ыуа — *ревматизм сустава.* Ойан бөтөн тәндә була. Ойаң (төньяҡ-көнбайыш)

**ОЙАН III** (әй) *с.* ҡаты — *жесткий (о траве)* Ойан үлән

**ОЙАН IV** (әй) *и.* ҡыуаҡ — *куст*

**ОЙАҢ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көмөрө — *горб.* Ҡартайғас ойаң ныҒыраҡ беленә башлаҙы

**ОЙАРА** (ҡариҙел) *и.* ишек алды — *двор.* Бик бай тора, ойара тулы мал

**ОЙАРТ** (ҡыҙыл) *и.* өйҙөң солан яғынан башҡа өс яҡлап әйләнә тирәһе — *территории вокруг дома, кроме тыльной стороны.* Сысҡан киндере беҙҙең ойартта ла үҫә ул. Өйарты (әй)

**ОЙА ТӨБӨ** (дим) *и.* 1. Кинйә — *последыш.* 2. (ҡыҙыл) Мая — *подкладень.* 3. (нөгөш) Иң һуң сыҡҡан себеш *(цыпленок, вылупившийся самым последним)*

**ОЙАТСЫЛЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* хурлыҡ — *позор.* Бит йанһа, ойатсылыҡ ишетәһең

**ОЙАТ ТҮБӘҺЕ** (урта) *и.* түмһәкәй — *лобковой бугорок*

**ОЙ-БОЙ** (туҡ-соран, урта) *ы.* аптырау ҡатыш ҡәнәғәтләнеүҙе белдергән һүҙ — *междометие, обозначающее удовлетворение.* Ой-бой, бик күп аҡса — ике алтын бирҙеләр (урта)

**ОЙҠАШ** (урта) *с.* оҡшаш — *похожий, подобный.* Шуға ойҡаш инте

**ОЙҠАШЫУ** (урта, һаҡмар, әй) *ҡ.* йәбешеү — *прилипать.* Һарам ҡолаҡ йөрәккә ойҡашып ҡына үҫә (һаҡмар)

**ОЙМАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ойошоу — *сплотиться, слепляться.* Болот тыйаҡҡа барып оймашһа, йаумай

**ОЙМОС, ОЙОТМОС** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ойотҡо — *закваска*

**ОЙОҠБАШ** (дим, ҡариҙел, мейәс, урта урал, һаҡмар) *и.* башалтай — *шерстяные носки*

**ОЙОҠБЫУҒЫС** (урта) *и.* ойоҡ бәйләүес — *завязка к чулкам*

**ОЙОҠ ОСТАУ** (урта) *ҡ.* ойоҡ бөтөрөү — *завершение вязаного чулка.* Бәйләргә йаратам, ойоғ остарға йаратмайым

**ОЙОМОЙ** (эйек) *и.* ойотҡо — *закваска*

**ОЙОМДО** (ҡыҙыл) *и.* уйынты — *выбоина.* Йаҙ гөнө бөҙ ҙа йарҙы һөрөп, өңөп ойомдолар йаһай

**ОЙОНЬОҘ** (ҡыҙыл) *с.* ботаҡһыҙ — *неветвистый.* Ойонһыҙ ағас кәрәк инде ул рам йаһарға

**ОЙОҪҠОТОУ I** (туҡ-соран, һаҡмар, әй) *ҡ.* ойоҡһотоу — *клубиться, бушевать.* Тышта буран ойоҫҡота башланы, бер нәмә күренмәй (туҡ-соран). Ойохҡотоу, ойохһотоу (ҡыҙыл)

**ОЙОҪҠОТОУ II** (һаҡмар) *ҡ.* һүҙ менән кеше бутау, араларына инеү — *поссориться.* Күп булһа Зәбих килеп ойоҫҡотоп киткәндер

**ОЙОТҠАН** (ҡыҙыл, урта) *и.* ҡатыҡ — *катык.* Ойотҡан эсеп китһәңсе (ҡыҙыл)

**ОЙОТҠО I** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡатыҡ — *катык.* 2. (арғаяш) Сей ҡатыҡ — *простокваша*

**ОЙОТҠО II** (һаҡмар) *и.* отҡо — *подстрекательство.* Ойотҡо һалып йебәрәйемме әллә, әйҙә туҙһын

**ОЙОТҠОЛОҠ** (әй) *и.* ойотҡо — *закваска*

**ОЙОТҠОТОУ** (әй) *ҡ.* берәй эште тиҙ һәм оҫта итеп эшләү — *быстро и искусно выполнить какую-либо работу.* Ойотҡотоп ҡына утыра инде бәйҙәмде. Ойоҫҡотоу (туҡ-соран)

**ОЙОТОУ** (дим) *ҡ.* балды шәкәрләндереү — *засахаривание меда.* Йаңы балды ойоторға иҫке бал гәрәк ине, шунһыҙ шәкәрләнмәй

**ОЙОУ** (дим) *ҡ.* икмәктең ҡабармай бешеүе — *выпечка неудачного хлеба.* Икмәк ойоп бешкән

**ОЙОШҠАҠ** (ҡыҙыл) *с.* ойошоп барыусан — *быстро свернувшаяся (о шерсти).* Ойошҡаҡ йөн

**ОЙПАЛЫУ I** (урта) *ҡ.* арлы-бирле етештереү — *готовить скоропалительно.* Өйҙө ойпалаһыннар инте көҙгә сиктем

**ОЙПАЛЫУ II** (туҡ-соран, урта, һаҡмар) *ҡ.* бөтәрләү — *измять (одежду).* Кейендерер әмәл йуҡ, кейемен ойпалап бөтә лә ғуйа (туҡ-соран)

**ОЙПАЛАШЫУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран) *ҡ.* йығышып, көрәшеп уйнау — *балуясь кувыркаться, валяться.* Йә, көнө буйы ойпалашмағыҙ (туҡ-соран)

**ОЙПАТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡабартыу — *пушить (волосы).* Миңлеғәленең йеткән сәсен ойпатып, арҡаһынан һөйҙө

**ОЙТМАҠ** (мейәс) *и.* ҡаймаҡ ҡушып иҙелгән ҡорот — *курут, разбавленный сметаной.* Ойтмаҡты ҡалаҡ һырты ман йалайбыҙ

**ОЙЫҠҠУҢЫС** (кариҙел) *и. гольфы*

**ОҠАШТЫРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* оҡшатыу — *уподоблять.* Шуңа оҡаштырып әйтә ул

**ОҠЛАҠ** (гәйнә) *и.* уҡлау — *скалка.* Оҡлау (гәйнә), оҡтау (мейәс, урта урал, әй)

**ОҠОРҘАЙ** (ҡыҙыл) *и.* күмәгәй — *кадык*

**ОҠОТ** (эйек-һаҡмар) *и.* күмәгәй — *кадык*

**ОҠСОН ЙЫУА** (кариҙел) *и.* оҫҡон — *лук косой*

**ОҠШАУҺЫҘ** (урта) *с.* килешһеҙ — *нескладный (о человеке).* Оҡшауһыҙ оҙон бер һеңлеһе бар

**ОҠШАШЛЫ** (һаҡмар) *с.* йәтеш, уңайлы — *удобный.* Оҡшашлы ғына селтәрҙе йаҫаб алам да табаҡҡа ҡуйам, шунан балауыҙ эреп аға

**ОЛАҒЫУ** (урта) *ҡ.* юлдан яҙыу — *заблудиться.* Йулдан олаҡҡанмын да киткәнмен

**ОЛАЙЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Олоғайыу — *стареть.* Ағайымты бер йыл гүрмәгәйнем олайып киткән. 2. (дим) Ҙурайыу — *возмужать.* Киткәндә улым малай ғына ине, ике йыл ҫалдатта булып олайып ҡайтты

**ОЛАҠАН** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* лаҡан — *лохань*

**ОЛАН** (ырғыҙ) *и.* 1. Ир бала — *мальчик.* Ул ҡарттың оланнары Куйбышта тора. 2. (дим, төньяҡ-көнбайыш) Йәш бала, сабый — *младенец, ребенок.* Оланлы өйҙә йатмаҫ

**ОЛАНБАРМАҠ** (дим) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец*

**ОЛАП** (дим) *и.* ситәндән үрелеп, тиҙәк йәки балсыҡ менән һыланып нығытылған кәрзинкә — *плетеный короб*

**ОЛАРЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* олоғайыу — *стать пожилым.* Һуғыш уахытында йәш малайҙар ҙа бик тиҙ оларҙы

**ОЛАСЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* болон — *луг.* Малдар оласыҡта йөрөй

**ОЛАСЫН** (урта) *и.* ыласын — *сокол*

**ОЛАТА** (ҡыҙыл) *и.* ырыу башлығы — *глава племени*

**ОЛАТАЙ** (һаҡмар) *и.* 1. Атай-әсәйҙән өлкән ир кеше — *мужчина старше отца и матери.* Олатаңа урын бир. 2. Оло йәштәге бабай — *старик преклонных лет.* Ауыл тарихын Ғәли олатай белергә тейеш

**ОЛАТАЙ-БАБАЙ** (эйек) *и.* олатайҙар — *деды-прадеды.* Олатай-бабайлар ғына эшләгән солоҡто

**ОЛАУ I** (гәйнә, кариҙел, урта урал) *ҡ.* ялғау, оҙайтыу — *нарастить, удлинить.* Күлмәгенең итәг осон олап тектем (урта урал)

**ОЛАУ II** (урта) *ҡ.* аптырау, йөҙәү — *теряться.* Һүҙен эшетеп оланым та ҡуйҙым

**ОЛАУЫҘ** (ҡыҙыл) *и.* яман һүҙ менән әрләшкән кеше — *сквернословить.* Аның кеүек олауыҙ кешене табамаҫһың да

**ОЛАУЫРЫУ** (дим, туҡ-соран, урта) *и.* ыйыҡ — *туберкулез желез.* Олауыр (төньяҡ-көнбайыш). 2. Баштағы шеш — *чирей на голове*

**ОЛАШЫУ** (арғаяш) *ҡ.* тоташыу — *соединиться, слиться.* Башҡорттоң быйаҡ сиге ҡаҙаҡҡа олашып китә. Олғашыу (мейәс, эйек-һаҡмар). Йөрәккә олғашҡан тамыр тарҫлап тора

**ОЛҒАШЫУ I** (дим) *ҡ.* аралашыу — *общаться.* Бергә олғашып йәшәнек аталары бар сағында

**ОЛҒАШЫУ II** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* кәрәк булыу — *понадобиться.* Ул һүҙҙәр бер нәмәгә олғашамы?

**ОЛҒАШЫУ III** (урта) *ҡ.* дусар булыу — *подвергаться чему-либо.* Күп нужалар күреп ошондай сиргә олғаштым

**ОЛҒАШЫУ IV** (урта) *ҡ.* ойҡашыу — *слипаться, слепиться.* Һалма олғашҡан та ҡуйған

**ОЛҒАШЫУ V** (кариҙел, эйек) *ҡ.* етешеү — *созревать.* Түлгә олғаша алмаған (эйек)

**ОЛИКМӘК** (дим) *и.* башланмаған, киҫелмәгән икмәк — *неначатая буханка.* Күршеләрҙән бер оликмәк алып торҙом

**ОЛИНӘЙ** (арғаяш, урта) *и.* 1. Йәш ҡатын балаларына ҡарата оло ҡатын — *старшая жена по отношению к детям от второй жены.* 2. Үгәй әсә — *мачеха*

~~**ОЛИТӘК**~~ (дим, ҡыҙыл, урта) *и.* күлдәктең аҫҡы киң бала итәге — *нижняя широкая оборка платья*

**ОЛҠАН** (мейәс) *с.* өлкән — *старший.* Олҡан улым кисә генә ғайтты

**ОЛМОРАҠ** (дим) *и.* олтораҡ — *стелька*

**ОЛО I** (арғаяш, дим) *с.* оҙон — *высокий (о росте).* Оло кәүҙәле кешегә һонтор күлмәк килешмәй (дим)

**ОЛО II** (арғаяш, төньяҡ-көнбайыш) *с.* юғары дәрәжәле — *высокопоставленный.* Унын улы Уфаҙа оло урындағы кеше (төньяҡ-көнбайыш). Искәндәр тигән бик оло кеше булған, палкауник (арғаяш)

**ОЛО: ОЛОҒА ТАЙАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* өсөнсө быҙаулар һыйыр — *корова-третьетелка.* Олоға сығыу (дим)

**ОЛОБАШ** (мейәс) *с.* аҡыллы — *умный.* Бына бер олобаш ҡына малайым бар

**ОЛО БИСӘ** (туҡ-соран, урта) *и.* ике йәки унан да күберәк ҡатын алған ирҙең тәүге ҡатыны — *первая жена у полигамного мужчины*

**ОЛО БӘЙЕЛЛЕ** (урта, һаҡмар) *с.* яҡшы холоҡло — *с хорошим характером.* Факиһа әбей ҡыҙының оло бәйелле була баштауын төшөнә ине (урта). Боронғо оло бәйелле ҡартлар йуҡ һәҙер (һаҡмар)

**ОЛОҒ** (ырғыҙ) *с.* оло — *пожилой.* Бик олоғ бабайлар йуҡ, хәҙерге ҡартлар тарихҡа бик төшөнөп йетә алмайлар

**ОЛО-ҒАРА** (туҡ-соран, урта) *с.* 1. Ауыр, ҙур — *тяжелый, большой.* Оло-ғара йөк тейәп китерҙе (туҡ-соран). Оло-ғара бесәйҙе күтәрә лә йөрөй (урта). 2. (әй) Көслө, ҡаты — *громкий, сильный (о голосе).* Үҙе белкей генә, ә тауышы оло-ғара

**ОЛОҒОҘА** (салйоғот) *и.* башҡоҙанан оло ҡоҙа — *сват старше главного свата.* Олоғоҙаға урын бирең

**ОЛОҒОЛАУ** (урта) *ҡ.* ололау, хөрмәтләү — *чтить, уважать.* Шу тиңле олоғолап ҡаршы алтылар

**ОЛОЙАҠ** (дим, урта, әйек) *и.* түр — *гостиная.* Олойаҡта затлы кейемнәр кейгән олпат-олпат бабайлар утыра (әйек)

**ОЛО ЙАУЛЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* шәл — *шаль*

**ОЛО ЙЕТЕГӘН** (көнсығыш диалект) *и.* Етегән йондоҙ — *Большая Медведица*

**ОЛОЙОМА** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* йома — *пятница.* Олимә (арғаяш, салйоғот)

**ОЛО ЙУЛ** (урта, әй) *и.* 1. Урам — *улица.* 2. (арғаяш. ҡыҙыл) Таш түшәлгән урам — *мощеная улица*

**ОЛО КИЛЕН** (арғаяш, туҡ-соран) *и.* ғаиләләге тәүге килен — *первая сноха в семье.* Оло килен кесе киленнәргә килен тип өндәшә (туҡ-соран)

**ОЛО КИҪӘҮ** (дим) *и.* ҙур мейес тәртешкәһе — *кочерга русской печи.* Оло киҫәү тотоп алған да бер кемде лә йебәрмәй

**ОЛО КӨЙ** (мейәс) *и.* оҙон көй — *протяжная песня.* Ауылда оло көй белеүселәр бик аҙ

**ОЛО КҮҘ** (дим) *и.* аҡыш күҙ — *глаза с большими белками.* Оло күҙләре лә килешеп тора үҙенә. Олокүз (ҡариҙел)

**ОЛО ҠАБЫРҒА** (ҡыҙыл) *и.* һебә ҡабырға — *ложное ребро.* Оло ҡабырғалары таһырайып тора, бигерәк йабыҡ

**ОЛОҠАРЫШ** (дим) *и.* баш бармаҡ менән урта бармаҡ араһындағы үлсәм — *мера длины между большим и средним пальцами.* Олоҡарыш беләң биш үлсәм бер метр була

**ОЛО ҠАРЫН** (урта) *и.* ҡарын — *желудок.* Оло ҡарынын һыу буйынта йыуҙыҡ

**ОЛОҠАР** (ҡыҙыл) *и.* тәүге ҡарҙан һуң яуған ҡар — *снег, выпавший после первого снега.* Былтыр ҡоҙалар олоҡарҙа сана йегеп килгәйнеләр

**ОЛОҠАРТА** (гәйнә) *и.* туҡ эсәк — *толстая кишка*

**ОЛО ҠАТЫН** (салйоғот) *и.* ике йәки унан да күберәк ҡатын алған ирҙең тәүге ҡатыны — *первая жена у полигамного мужчины*

**ОЛОҠЛАУ** (ырғыҙ, һаҡмар) *ҡ.* ололау — *почитать.* Беҙҙә хәҙергә халыҡ йаҡшы эле, ҡартларҙы ла олоҡлайлар (ырғыҙ). Олоктау (ҡыҙыл)

**ОЛО ҠОШ** (дим) *и.* төйлөгән — *коршун.* Тәбиғәт йарлы хәҙер, оло ҡошлар ҙа бик күренмәй

**ОЛОЛАТА** (дим) *р.* иң олоһо булып — *по старшинству.* Ололата ауылда ул бабай ғына ҡалды инде

**ОЛОМЕЙЕС** (салйоғот, әй) *и.* икмәк мейесе — *русская печь.* Икмәк бешерә торған мейес оломейес була (әй)

**ОЛОМЕНДӘР** (урта) *и.* яҫтыҡ — *перина*

**ОЛОН I** (ҡыҙыл) *и.* һап — *ручка.* Бысаҡ олоно

**ОЛОН II** (ҡыҙыл) *и.* ирәк һабы — *ручка скребка для выделывания шкуры*

**ОЛОН III** (дим) *и.* таҫтамал үҙәге — *полотняная часть узорного полотенца*

**ОЛОН IV** (ҡыҙыл) *и.* арба күкрәге — *подушка телеги*

**ОЛОН V** (урта) *и.* ҡоймос — *копчик*

**ОЛОН БУЙЫ** (ҡыҙыл) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**ОЛО ОРСОҠ** (дим) *и.* сиратыу орсоғо — *сучильное веретено*

**ОЛО СЫСҠАН** (арғаяш, урта, әй) *и.* ҡомаҡ — *крыса.* Оло тысҡан (төньяҡ-көнбайыш)

**ОЛО СӨЙӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сираҡ — *голень*

**ОЛО СӘСӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* томбойоҡ — *кувшинка белая*

**ОЛО ҪӨЙӘКЛЕ** (дим) *с.* эре һөйәкле — *костистый.* Аларҙың нәҫелләре оло ҫөйәкле

**ОЛО ТАМЫР** (урта) *и.* барлау тамыры — *сонная артерия*

**ОЛО ТЕЛ** (ҡыҙыл) *и.* тел — *язык*

**ОЛО ТЕШ** (дим) *и.* ҡырҡҡыс теш — *резец*

**ОЛО УЛ** (мейәс) *и.* иренең оло ҡустыһы — *старший братишка мужа*

**ОЛО ШӘЛ** (дим, урта) *и.* ҡалын шәл — *плед*

**ОЛО ЫСПУТ** (дим) *и.* мейестең өҫкө кәрнизе — *верхний карниз печи*

**ОЛПА** (ырғыҙ) *с.* 1. Ихтирамлы — *почтительный.* Ул ауылдың олпа кешеһе. 2. (урта урал) *р.* мөһабәт — *величаво.* Олпа баҫып килә. 3. (ҡыҙыл) *с.* мыҡты — *крепкий.* Олпа кеше ине

**ОЛПАҠ** (ырғыҙ) *и.* дөйә йөнөнән яһалған бәләкәй мендәр — *маленькая подушка из верблюжьей шерсти.* Аш-һыуҙы һикелә ашағас, беҙҙә олпаҡты күп йаҫайлар

**ОЛТАН** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* 1. Олтораҡ — *стелька.* 2. (һаҡмар) Табан — *подошва*

**ОЛТАН ЙОНДОҘ** (арғаяш) *и.* ҡойроҡло йондоҙ — *комета*

**ОЛТАРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йөйөн эстә ҡалдырып тегеү — *вышивать швом изнутри.* Олтарған сарыҡ

**ОЛТАРМЫШ** (ҡыҙыл) *с.* йөйөн эстә ҡалдырып тегелгән — *вышитый швом изнутри.* Олтармыш итек. Олтармыш ҡата

**ОЛУҒ** (дим) *с.* оло — *старший.* Олуғы бит инде, ҡырҡ йәшкә йетеп бара

**ОЛУРАМ** (дим, урта) *и.* урам — *улица*

**ОЛУРЫН** (урта) *и.* түр — *гостиная*

**ОЛЫҒОШ** (ҡариҙел) *и.* ябалаҡ — *филин*

**ОЛӘСӘЙ** (һаҡмар, әйек) *и.* әсәйҙең әсәһе — *бабушка по линии матери*

**ОМБОЛ** (урта) *и.* 1. Соңғол — *омут.* Тауҙың итәген өңөп инә лә ҙур омбол яһап әйләнеп килеп сыға. 2. (ҡыҙыл) Батҡаҡлыҡ — *топь*

**ОМОРЗАЙА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* умырзая — *горицвет*

**ОМОРТҠА** (һаҡмар) *и.* умыртҡа — *позвонок.* Бала сағында йығылып оморткаһы зыйаннап ҡалған

**ОН** (дим) *и.* сөрөк — *гнилушка.* Өй эстинәмдең оно сыға

**ОНАШ** (салйоғот) *и.* туҡмас — *лапша.* Онаш һалдым ашҡа (салйоғот)

**ОНБОТҠА** (гәйнә) *и.* боламыҡ — *мучная каша*

**ОНДӨР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ырҙын — *ток*

**ОНИЛӘҮЕС** (арғаяш) *и.* иләк — *сито*

**ОҢКО** (урта) *и.* оңғо — *ушко топора, лопаты, тяпки и т. д., в которое вставляют ручку*

**ОНОЛАҠ** (гәйнә) *и.* ялғаш — *корыто*

**ОНОРҪЕ** (дим) *и.* көрпә — *отруби.* Онәре (төньяҡ-көнбайыш, әй). Он эреһе (мейәс)

**ОНОҠТАУ** (урта урал) *ҡ.* ҡушыу — *прибавить.* Үҙе һүҙгә һүҙ оноҡтап һөйҙәйҙер

**ОНТАҠ I** (көнсығыш диалект) *с.* 1. Үтә ваҡ — *слишком мелкий.* Онтаҡ таш. Онтаҡ тоҙ. 2. *и.* он, ярма вағы — *мучная и крупяная пыль.* 3. (һаҡмар) Бысҡы онтағы — *опилки*

**ОНТАҠ II** (эйек) *с.* мыжыҡ — *ворчливый.* Онтаҡ кеше

**ОН ТАҠТАҺЫ** (арғаяш, салйоғот) *и.* туҡмас таҡтаһы — *доска для лапши*

**ОН-ТАЛҠАН БУЛЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* бик ныҡ ваҡланыу — *сильно раздробиться.* Сәйгүнем төшөп китеп он-талҡан булды ла ғуйҙы

**ОНТАЛЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тән ҡырылыу — *страдать ломотой в теле.* Эштән арып, онталып саҡ ҡайтып йеттек

**ОНТАУ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* 1. Ярыу, ватыу — *расколоть, разбить.* Сынайаҡты онтап ҡуйма. 2. (урта) һытыу — *раздавить.* Биҙен онтаһаң бөтә

**ОНТАУ: ОНТАП ҺӨЙЛӘҮ** (урта) *ҡ.* ентекләп һөйләү — *рассказать подробно*

**ОНУҠ, ОНОҠ** (минзәлә) *и.* ейән — *внук*

**ОҢҒАЙ: ЙУЛ ОҢҒАЙ** (урта, ҡариҙел) *р.* юл ыңғай — *попутно.* Мин һиңә йул оңғайында керермен (урта)

**ОҢҒО I** (һаҡмар) *и.* салғы ямауы — *заклепка (на косе)*

**ОҢҒО II** (һаҡмар) *и.* ҡашмау арты — *накосник.* Ҡашмау оңғоһо артҡа төшөп, һалынып йөрөй

**ОҢҒОЛ** (һаҡмар) *и.* соңғол — *омут.* Һаҡмар оңғолло һыу

**ОҢҒОЛЛО-СОҢҒОЛЛО** (һаҡмар) *с.* соҡорло-саҡырлы — *ухабистый, неровный (о местности).* Урал күперенә барып йеткәнсе йул оңғолло-соңғолло инде ул

**ОҢКА** (урта) *и.* оңғо — *ушко.* Балта оңкаһы. Көрәк оңкаһы. Оңко (дим, ҡариҙел)

**ОҢҒОЛДАТЫП** (урта) *р.* ғолтолдатып — *с шумом.* Ул туҫтаҡтағы ҡымыҙҙы оңғолдатып төпҫәргәнсе эсте

**ОҢКОТ I** (ҡыҙыл, эйек) *с.* маҡау — *неспособный.* Уҡыуға оңкот булды (эйек)

**ОҢКОТ II** (ырғыҙ) *с.* ҡомһоҙ — *жадный.* Аның атаһы ла оңкот ине

**ОҢКОТЛАНЫУ** (дим, ырғыҙ) *ҡ.* ҡомһоҙланыу — *жадничать*

**ОҢОП** (һаҡмар) *ҡ.* онотолоп тороп — *впадая в забытье.* Түгеләр көнө буйы оңоп һөйләштеләр

**ОПИТ, УПИТ** (ҡариҙел, танып) *р.* тағы — *еще, опять.* Опит машина килә бында (ҡариҙел)

**ОПТОСАҠ** (ҡыҙыл) *и.* опто балаһы — *мальки язи*

**ОРҒАС** (дим) *с.* инә мал — *матка (о животных).* Малы шау орғас

**ОРҒАСАНДЫҘ** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* инә андыҙ — *женская особь девясила*

**ОРҒОУ I** (гәйнә) *ҡ.* үрсеү, ишәйеү — *размножаться, расплодиться.* Быйыл ҡош-ҡорт бик орғомады. Өргәү (төньяҡ-көнбайыш), өргөү (урта урал)

**ОРҒОУ II** (гәйнә) *ҡ.* ырғыу — *прыгать*

**ОРДОБАЙ** (гәйнә) *с.* алабарман — *опрометчивый.* Эшләгәндә бик ордобай булма

**ОРҘО-БӘРҘЕ** (эйек) *р.* теләһә нисек — *как попало.* Ул, бер ни һиҙҙермәйенсә, орҙо-бәрҙе һөйләнеп йөрөргә тырышты

**ОРҘОҠ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* тоҡомло — *породистый.* Калхуздың тәүге эпкилгән парутынан ҡалған орҙоҡ һарыҡ (ҡыҙыл)

**ОРҘОМША I** (дим) *и.* һал бүрәнәләрен тотторол өҫтәп һалынған баҫтырыҡ — *верхние соединительные бревна на плоту (ронжа)*

**ОРҘОМША II** (ҡыҙыл) *и.* кәрәк-яраҡ — *необходимость, пригодность.* Һарыҡты көтәйек әле, бер орҙомша булыр

**ОРҘЫҠМАЙ** (урта урал) *и.* көнбағыш майы — *подсолнечное масло.* Орҙоҡмай (әй)

**ОРАТҠЫН** (эйек) *и.* атҡы — *стрела с грузом на конце, пускаемая без лука.* Оратҡынды йепкә эләктереп алыҫҡа бәрәләр

**ОРЛАУ** (ҡариҙел, урта) *ҡ.* урлау — *красть.* Иген орлаған өсөн тә һигеҙ йыл төрмәгә ултырталар ине (ҡариҙел)

**ОРЛОҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Тарма — *конопля.* 2. Тарма орлоғо — *семена конопли.* Орлоҡто таба беләә ҡортабыҙ, килеҙә төйәбеҙ

**ОРЛОҠ МАЙЫ** (көньяҡ диалект) *и.* үҫемлек майы — *растительное масло.* Тирмәндә орлоҡ майы һыға торған әйберләре лә бар (һаҡмар)

**ОРЛОҠТАЙ** (дим) *с.* бәләкәй — *маленький.* Үҙе орлоҡтай булҫа ла ағаҫынан бер ҙә артта ҡалмай

**ОРМАН-БӘРМӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* ороп-бәреп — *как попало.* Баланы орман-бәрмән ырғыттыҡ та сығып та киттек

**ОРМАҺАР** (һаҡмар, ырғыҙ) *р.* ороп-бәреп — *как попало.* Ормаһар эшләп ташлай торған кеше ул (ырғыҙ)

**ОРМОТ** (мейәс) *и.* тыуған яҡ — *родной край.* Үҙ ормотом — үҙемә

**ОРО I** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* бур — *вор.* Оро гешe

**ОРО II** (арғаяш, дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**ОРО III** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта урал) *и.* ҡоҙоҡ — *колодец*

**ОРО IV** (ҡыҙыл) *и.* көмөрө — *горб*

**ОРО V** (мейәс, ҡыҙыл) *и.* күҙ кимерсәге — *глазной хрящ.* Оро күҙ

**ОРО VI** (әй) *и.* ҙур сөйәл — *большая бородавка.* Ҡулыма оро сыҡты

**ОРО VII** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* шеш — *опухоль.* Ҡулбашына оро ҡалҡты

**ОРОЙ** (ҡариҙел) *и.* күс — *рой.* Ҡырҙан бер орой тотоп алдыҡ

**ОРОҠ-ҺОРОҠ** (мейәс) *р.* урыҡ-һурыҡ — *урывками.* Ороҡ-һороҡ ҡына башым да әйҙәнеп китә. Урыҡ-һурыҡ (туҡ-соран)

**ОРОЛАНЫУ** (эйек) *ҡ.* йомарланыу, түңәрәк булыу — *быть шарообразным, круглым.* Тәнемә оролаңып әллә нәмә сығып килә

**ОРОН: ОРОН БИРЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* кешнәү — *ржать (о лошади).* Һары бейә эллә ҡайҙан орон биреп килә

**ОРОНОУ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡамасаулау — *мешать.* Айаҡ аҫтында ороноп йөрөмә әле. 2. (дим, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Тейеү — *притрагиваться, притронуться.* Бер эйбергә лә оронмағыҙ (ҡыҙыл)

**ОРОНСОҠ I** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *и.* мәшәҡәт — *хлопоты.* Һинең беҙгә оронсоғоң йуҡ, эйҙә утыр (ҡыҙыл)

**ОРОНСОҠ II** (ҡыҙыл) *и.* кәрәк-яраҡ — *необходимость.* Ошо башмаҡты көтәйек әле, берәй оронсоҡҡа ярар

**ОРО СЕҮӘТӘ** (ҡыҙыл, урта, урта урал) *и.* ағас ороһонан яһалған сеүәтә — *небольшая чашка, изготовленная из нароста*

**ОРО ТАБАҠ** (ҡыҙыл, урта, урта урал) *и.* ағас ороһонан яһалған табаҡ — *большая чашка, изготовленная из нароста*

**ОРО ТУҪТАҠ** (ҡыҙыл, урта) *и.* ағас ороһонан яһалған туҫтаҡ — *чашка средней величины, изготовленная из нароста.* Ортустаҡ (урта урал)

**ОРОТЕШ** (һаҡмар) *и.* төп тешкә ҡушылып үҫкән теш — *краудинг*

**ОРОУ I** (ҡариҙел, урта) *ҡ.* туҡмау — *бить, избивать.* Ормай, һуҡмай ғына үҫтерҙе балаларын (урта)

**ОРОУ II** (гәйнә, эй) *ҡ.* ырғытыу — *бросать.* Биргән аҡсаһын йөҙөнә орҙом (эй)

**ОРСОҠБАШ** (урта урал) *и.* бот һөйәгенең таз һөйәгенә инеп торған осо — *эпифес бедряной кости.* Орсоҡбаш — сөйәк (гәйнә), орсоҡпаш һөйәге (ҡыҙыл)

**ОРСОҠ МАШИНАҺЫ** (ҡыҙыл) *и.* еп иләүсе — *прялка*

**ОРСОҠТАШ** (урта) *и.* орсоҡбаш — *прясло.* Орсоҡтан иҙәнгә төшөп торған һары орсоҡташ һымаҡ тәгәрләп майҙанға килә башланы

**ОРСӨЙӘК** (урта урал) *и.* күмәгәй — *адамово яблоко*

**ОРФИА** (дим) *и.* өлфөйә — *выпуклое женское украшение из цветного металла в виде монет*

**ОРЫТ** (салйоғот) *с.* тапҡыр, тырыш — *находчивый, старательный.* Бик орыт кеше булды ул минең олатай

**ОС I** (урта) *и.* иң — *ширина.* Осло ҡытат булды, бер осо бер күлдәккә йетте

**ОС II** (дим) *и.* аймаҡ — *родовое подразделение.* Беҙҙең ос ҡыпсаҡлар, ә теге ос бөриән

**ОС III** (һаҡмар) *и.* сер, сәбәп — *секрет, причина.* Аларҙың берәй осо булғандыр ул

**ОС: ОСОНА СЫҒЫУ** (ҡыҙыл, урта урал, һаҡмар, эй) *ҡ.* 1. Бер нәмәһеҙ ҡалыу — *остаться ни с чем.* 2. Юғалған эйберҙе табыу, ҡатмарлы эш йәки хәлде асыҡлау — *найти пропажу, выяснить запутанную весть или происшествие.* Малдарҙы айыу туҙҙырғайны, һаман осона сығып бөтә алмайлар (һаҡмар)

**ОСА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бәҫ — *иней*

**ОСАЙАҠ** (дим) *и.* өсаяҡ — *станок для разматывания ниток или пряжи.* Йепте осайаҡҡа кейҙереп урайбыҙ

**ОСАЙАҠ: ОСАЙАҠ КҮНӘГЕ** (салйоғот) *и.* ҡатыҡ күнәге — *кадка для катыка*

**ОСАҠАЙ** (арғаяш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ОСАЛЫҠ** (урта) *и.* ышлыяның артҡы өлөшө — *задняя часть шлеи.* Ышлыйаның осалығы өҙөлгән

**ОСАР** (һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ОСАТҮШ** (арғаяш) *и.* төп ҡоҙаға бирелгән һыйлы ит — *мясо, преподнесенное основному свату.* Башта төп ҡоҙаға осатүш тотторҙолар, шан ҡалғандарға өләшеп сыҡтылар

**ОСАН** (дим) *и.* эс түбәнләү сире — *опущение живота.* Улым төҙөлөштә, ауыр йөрөгәйне, осан булған да ҡуйған

**ОСАРЫМ** (урта) *и.* шыбаға — *жребий.* Беҙкә йегетләрҙең ҡыҙлар өсөн осарым тотошҡанын һөйләнеләр

**ОСЙӨҘӨГӨМ** (эй) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ОСҠАҠ** (туҡ-соран) *с.* ослайып торған — *заостренный.* Аның былай ҙа осҡаҡ сырайы тағы ла һурылғандай булды

**ОСҠАЛАҠ I** (урта, эйек, һаҡмар) *и.* 1. Тиктормаҫ, останлаҡ — *непоседа.* 2. *с.* еңел аҡыллы — *легкомысленный.* 3. (эй) *и.* елғыуар — *вертушка*

**ОСҠАЛАҠ II** (эйек-һаҡмар) *и.* өрпәк ҡар — *пороша*

**ОСҠАЛАҠ III** (урта) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ОСҠАРТЫН УЛТЫРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* борғаланып ултырыу — *сидеть кривляясь.* Нишләп һин осҡартын ултыра башланың әле, ашыңды түгеп йебәрерһең

**ОСҠАРЫ** (арғаяш) *р.* ҡул осонда — *под рукой.* Бейәләйеңде осҡарыһына тот, иртә мән таба алмаҫһың

**ОСҠАТ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* айыу балаһы — *бузина.* Осҡат тәүлә аҡ сәскә ата, шунан ҡыҙыл сәскә ата (эйек-һаҡмар)

**ОСҠАУЫЛЛАУ** (урта) *ҡ.* атты осҡа ебәреп егеү — *упряжка цугом.* Старостаның ҡапҡа төбөнә ат осҡауыллаған кеше килеп туҡтаны

**ОСҠО ҠАРАУЫЛ** (арғаяш) *и. мушка.* Йәннекте атҡанда осҡо ҡарауылына утырып атаһың

**ОСҠОЛАҠ** (урта) *и.* көләпәрә — *капюшон*

**ОСҠОЛАУ** (мейәс) *ҡ.* атты осҡа ебәреп егеү — *упряжка цугом*

**ОСҠОН I** (урта) *и.* көл — *зола.* Ағас осҡоно. Күмер осҡоно

**ОСҠОН II** (дим) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка*

**ОСҠОНДО** (дим, һаҡмар) *и.* кәбәк — *мякина.* Күҙгә иген осҡондоһо төштө (һаҡмар)

**ОСҠОР I** (һаҡмар) *р.* шунда уҡ — *тот час.* Уйлағаным осҡор ғына алдыма килә лә ғуйа

**ОСҠОР II** (дим, ҡыҙыл, урта) *с.* отҡор — *сообразительный, сметливый*

**ОСҠОР: ОСҠОР ҒУЛЛЫ** (арғаяш) *с.* ҡулы оҙон — *не чист на руку*

**ОСЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* баланың аяғын тотоу — *держать ребенка над горшком.* Баланды ослаһаңсы, килен

**ОСЛОБАШ** (урта) *и.* ҡайын еләге — *земляника*

**ОСЛОБАШ КӘПӘС** (ҡыҙыл) *и. буденовка*

**ОСЛОҠАЙ I** (эйек-һаҡмар) *и.* тиктормаҫ, останлыҡ — *непоседа*

**ОСЛОҠАЙ II** (урта) *и.* балалар уйыны *(осло ағасты ултырталар ҙа таяҡ менән ергә индерә һуғалар, уйында отолған кеше уны теше менән тартып алырға тейеш) — детская игра (остроконечную палочку забивают в землю, проигравший должен вытащить ее зубами)*

**ОСЛОҠОЙРОҠ** (дим) *и.* айрығойроҡ — *уховертка*

**ӨСЛӨҠ ТА** (урта) *р.* бер ҙә, бөртөк тә — *нисколько.* Ослоҡ та ауыртмай айағым

**ОСЛОҺӨЙӘК** (дим) *и.* ҡоймос — *копчик*

**ОСМА** (ҡыҙыл) *с.* оса торған, осар — *летающий.* Ҡыш йетте хәҙер, осма ғоштар ҙа ғалманы

**ОСМОТ** (ҡыҙыл) *р.* остоҡ — *очень маленький.* Осмото ла тәтемәйәсәк һиңә был йерҙең

**ОСОҠ I** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* 1. Ҡыйшандаҡ — *кокетка.* 2. *с.* сабырһыҙ — *нетерпеливый, несдержанный.* 3. *(мейәс)* Еңел аҡыллы — *легкомысленный*

**ОСОҠ II** (мейәс, туҡ-соран, урта) *и.* кәбәк — *мякина.* Быйыл йыл ҡоро гилде, иген осоҡло (туҡ-соран)

**ӨСӨҠ III** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡысынма — *чесотка.* 2. (урта) Ҡауаҡ — *перхоть*

**ОСОҠ IV** (ҡыҙыл, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* сихырлап ташланған әйбер — *заколдованная вещь.* Осоҡларҙы ауыл ситенә соҡорға алып барып ташлай торғайнылар, шунан ауырыу бөтә тейләр ине (туҡ-соран)

**ОСОҠАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* һүҙсән — *разговорчивый.* Теге осоҡай ҡыҙны әпкилмәнегеҙме?

**ОСОҠ ҺУҒЫЛЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* рәнйеү һуғылыу — *заразиться, заболеть.* Осоҡ һуғылып ауырый, тора алмай

**ӨСӨМ** (урта) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ОСОНҠО, ОСОНҒО** (мейәс) *и.* һытҡы — *прыщ*

**ОСОНМАЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* ярһыуланыу — *горячиться.* Атайың кеүек осонмаланып, эсемте бошороп йөрөмә әле

**ОСОНОУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* сабыртыу — *высыпать (о сыпи).* Бөтә тәнем осондо ла гитте (ҡыҙыл)

**ОСОНОШОУ** (урта) *ҡ.* әллә кем булыу — *кичиться, чваниться.* Эй осоношоп ултыралар, әллә гем булып

**ОСОР I** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* ваҡыт — *время.* Был осор бер ҙә гилгәне йуҡ (эйек-һаҡмар)

**ОСОР II** (ҡыҙыл) *ҡ.* тура килеү — *совпадать.* Аның төшө осор була ла ғуйа

**ОСОРМА** (урта) *и.* бүрәнәләрҙе һыуға төшөрә торған текә яр — *крутой берег, предназначенный для сваливания бревен в воду*

**ӨСӨРМӘ: ОСОРМА ИТӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* итәк осондағы балитәк — *нижняя оборка платья*

**ОСОРОУ I** (урта) *ҡ.* һыҙырыу, һуйыу — *содрать (кору).* Ҡараманы осорҙолар ҙа ашаттылар малға

**ӨСӨРӨУ II** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* һатыу — *продавать.* Беҙ ҙә, шулай байтаҡ әйберҙәрҙе осорғас, тыуған ауылға ҡайтырға сыҡтыҡ (һаҡмар)

**ОСОРТҠОС** (дим) *и.* һүҙ йөрөтөүсе — *шептун.* Кеше араһында ҫүҙ йөрөткәне өсөн осортҡос әбей тей торғайнылар аны

**ОСОП-ТӨШӨП** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *р.* тиҙ, дәртле — *быстро, вдохновенно.* Шатлығынан осоптөшөп ҡунаҡларҙы ҡараны, ашын да бешереп утыртты, сәйен дә ғуйҙы (туҡ-соран)

**ОСОУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡолау, йығылыу — *падать.* Һыуға осоп ҡайтҡан, айаҡлары һаман боҙ һымаҡ (һаҡмар). 2. (урта) Шыуыу — *кататься.* Сана осорға киттеләр ҡаршы тауға

**ӨСЫЙЫРЫМ** (әй) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ОСТАҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аң-белем таратыусы — *просветитель.* Остаҙ барҙа телеңне тый, оста барҙа ҡулыңны тый

**ОСТАЛЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* алданыу, һемәйеү — *быть обманутым, остаться с носом.* Әллә ғайҙағы кешегә ышанып, осталып ҡалдым

**ОСТАНДАУ** (әй) *ҡ.* 1. Үпкәләү — *обижаться.* Остандап ирешергә әҙер тора. 2. (ҡыҙыл) Ҡыйшандау — *кокетничать.* Остаңнау (һаҡмар)

**ОСТАН-ОС** (дим) *р.* ат ослап — *цугом.* Туйға остан-ос атлар йегеп дуғаларына ҡыҙыллар тағып бара торғайнылар

**ОСТАНТАҠ** (арғаяш) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка*

**ОСТАУ I** (һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* тотоу — *содержать, иметь.* Быйыл биш ҡуй останым (ырғыҙ)

**ӨСТАУ II** (урта урал, әй) *ҡ.* юғалтыу — *потерять.* Тәҡи остағаһың икән шәлеңде (урта урал)

**ОСТАУ III** (урта) *ҡ.* алдау — *обманывать.* Хәҙер асыуландым аңа, ике рәт останы мине

**ОСТОЙЕЛӘК** (урта урал) *и.* ҡайын еләге — *земляника*

**ӨСТӨҠ I** (урта) *и.* йәш бала — *младенец.* Бөтәбеҙкә бер остоғобоҙ бар, ҡайтырбыҙ әле

**ОСТОҠ II** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡыйшандаҡ — *кокетка.* 2. (урта урал) *с.* тотанаҡһыҙ — *невыдержанный.* 3. (ҡыҙыл) *и.* Шаталаҡ — *балагур*

**ӨСТӨҠ III** (мейәс) *и.* ахыр — *конец.* Дан итеп һабан туйы үткәреүҙең остоғон ғына күреп ҡалдыҡ

**ОСТОҠАЙ** (арғаяш, дим, эйек-һаҡмар, әй) *с.* 1. Елғыуар — *ветреный.* Киленең остоҡай, бергә тора алмаҫһығыҙ, тинеләр (арғаяш). 2. (әй) Маҡтансыҡ — *хвастливый.* Атаһына оҡшап остоҡай ғына икән, эре генә итеп һөйҙәп утыра

**ОСТО ТЕЛДЕ** (әй) *с.* сәнскеле телле — *язвительный.* Хәстә инде ҡәйнәм шикетте осто телде

**ОСТОХЕЛИМ** (ҡыҙыл) *и.* гөргөлдәк уйнағанда ташланыла торған таяҡ — *палка для выбрасывания при игре в прятки*

**ОС ҺӘНӘГЕ** (дим, көнсығыш диалект) *и.* кәбән ослауҙа ҡулланыла торған оҙон һаплы һәнәк — *вилы с длинным черенком для вершения стога.* Кәбән бейегәйгәс, ос һәнәге белән ослайлар (дим)

**ОСЫЙАҠ** (урта) *и.* өсайаҡ — *треножник*

**ОҪҠОРҺАҠ** (ҡыҙыл) *и.* аҡһырғаҡ — *чемерица*

**ОҪҠОТОП** (һаҡмар) *р.* бик тиҙ, күҙ асып йомғансы — *одним духом.* Һарайҙы оҫҡотоп эшләп тә ташланыҡ. Ойоҫҡотоу (туҡ-соран)

**ОҪОЛ, ОҺОЛ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* таҫыл — *сноровка.* Һәр эштә оһол гәрәк (эйек-һаҡмар). Осол (ҡариҙел)

**ОҪТАНИТӘК** (дим) *и.* күлдәктең аҫҡы киң бала итәге — *нижняя широкая оборка платья*

**ОТҠАРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* отторoу — *проиграть.* Кәрт уйнатып ҡыҙын отҡарған

**ОТҠОЛОҠ** (урта) *и.* ҡотҡо — *подстрекательство.* Отҡо (туҡ-соран, урта урал). Аның отҡоһо белән йөрөп бәләгә ҡалырһың (туҡ-соран). Отҡороҡ (ырғыҙ)

**ОТҠОУ** (арғаяш) *ҡ.* һыҙырыу — *хлестать.* Аркаһы ҡысый икән әле, отҡой туғаны барҙыр

**ОТОП, УТЫП** (урта) *и.* 1. Киҫелгән йыуан ағас — *срубленное толстое дерево.* 2. Утыпша — *лес, утонувший при сплаве*

**ОТОРАК** (арғаяш, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* олтораҡ — *стелька*

**ОТОРО I** (ҡыҙыл, салйоғот, урта, эйек-һаҡмар) *р.* кире — *против.* Ал ғоштоң йөнө отоpo ғарап үҫә (салйоғот). Ағасты отороһона йышлайлар (эйек-һаҡмар). Отары (мейәс)

**ОТОРОЛАШЫУ** (арғаяш) *ҡ.* ҡаршы әйтешеү, бәхәсләшеү — *пререкаться.* Йә, йетәр, оторолашып утырмаң әле

**ОТОШСЕҮӘК** (гәйнә) *и.* йәтәс — *дужка (у птиц)*

**ОТЫРЫ** (мейәс, эй) *р.* бик, уғата — *очень.* Отыры ҡыҫҡа. Отыры белкей

**ОФТАНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* уфтаныу — *вздыхать*

**ОҺҠОНОШ** (һаҡмар) *и.* оҫҡон — *лук косой*

**ОҺОЛЛО** (һаҡмар) *с.* килбәтле, килешле — *складный, подходящий.* Атаһы ла бик оһолло кәүҙәле кеше ине

**ОШАҠ ЙЕТКЕҘЕҮ** (урта урал) *ҡ.* ошаҡлау — *доносить, донести*

**ОШАТЫУ** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран) *ҡ.* оҡшатыу, төҫмөрләү — *припомнить, уподобить*

**ОШОҠ** (урта) *с.* ҡулы оҙон — *нечистый на руки.* Йәштән үк бик ошоҡ булты ул

**ОШОҢҒАНСЫ** (һаҡмар) *р.* ошоға тиклем — *до сих пор.* Ошоңғансы йәйәүләп булһа ла килеп йетерләр ине инде

**ОШО ШАЙЫН** (урта) *а.* ошондай — *такой.* Ошо шайын йантау йаҫап бирәләр

**ОШТАУ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *ҡ.* тотоу — *держать.* Апайымды үҙем оштабалыбөрөйөм (арғаяш)

# Ө

**ӨБӨРҺӘЛӘНЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* дебет әйберҙең мамығы ҡабарыу — *ворситься.* Шәлем өбөрһәләнмәгән әле

**ӨБӨРСӨ** (урта) *и.* туҡыма киҫәктәренән бөҙөрләп яһалған ябыу, келәм — *покрывало, сделанное рябью из лоскутков*

**ӨБӨРҪӨ** (урта) *и.* өрпәк ҡар — *пороша.* Өбөрҫө йауғас, тышта йөрөүе күңелле. Өбөрһө (ҡыҙыл)

**ӨБӨРҪӘҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* борһалау — *переворошить.* Көн дә йыйыштыраң әйберләрен, теләһә ҡайҙа өбөрҫәйләр ҙә ырғыталар

**ӨБӘРЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* йөрәкһеү — *рваться, стремиться.* Өбәрләнеп ҡараны ла ул мин тә барам тип, эштән йебәрмәнеләр

**ӨГӨРСӨ** (ҡыҙыл) *и.* ҡыяр — *огурцы.* Әгүрсә, әгүрсе (мейәс)

**ӨГӨҮ I** (эй) *ҡ.* өмөтләнеү, өмөт итеү — *надеяться, питать надежду.* Был бала күстәнәс өгөп кигәндер әле

**ӨГӨҮ II** (урта) *ҡ.* 1. Иҫенә төшөрөп тороу — *постоянно напоминать.* Арҡыры ағасты буй ҙа бороп һала белмәйҙәр, өгөп тормаһаң. 2. (һаҡмар) Ҡоторттоу — *подстрекать, подзадоривать.* Йыуаш кеше булһа ла, өгөп йөрөй, машинник. 3. (ҡыҙыл, һаҡмар) Мыжыу — *ворчать.* Шыңшып өгөп йөрөй, нәмәне әҙ тот тип (ҡыҙыл)

**ӨГӨҮ III** (ҡыҙыл) *ҡ.* онтау — *дробить, размельчать.* Сыҫҡан ашлыҡты өгә

**ӨГӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һүгеү, әрләү — *ругать, бранить*

**ӨҘГӨРТӨҮ** (мейәс, эй) *ҡ.* һөсләтеү — *натравливать, науськивать.* Эт өҙгөртөү

**ӨҘҘӨКТӘҮ: ӨҘҘӨКТӘҮ БУЛЫУ** (арғаяш) *ҡ.* өҙләгәү — *получать осложнение после болезни*

**ӨҘЛӘН ҺАЛМА** (мейәс) *и.* ҡул һалмаһы — *лапша домашняя*

**ӨҘӨК I** (һаҡмар) *и.* тирмә ябыуы — *покрытие верхней части юрты*

**ӨҘӨК II** (урта) *и.* өҙөклөк — *нехватка, перебой в чем-либо.* Бер өҙөктә файҙаһы тейәр ине

**ӨҘӨК III** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* арыҡ — *худой.* Өҙөк мал

**ӨҘӨКБИЛ** (мейәс) *и.* тау теҙеменең өҙөлгән ере — *место обрывка горной цепи.* Йул анау өҙөкбил аша үтә

**ӨҘӨКҠАРЫШ** (дим) *и.* ҡарыштың дүрттән өс өлөшө — *три четверти пяди*

**ӨҘӨКЛӘНЕҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* аҙыҡ-түлек аҙайыу, ҡыҫылыу — *нехватка продуктов питания.* Һуғыш мәлендә бигерәк өҙөкләнеп киткән уахытлар булды (туҡ-соран)

**ӨҘӨК-ҺУРЫҠ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, эй) *р.* урыҡ-һурыҡ — *урывками.* Өҙөк-һурыҡ аҡҡоштар ҙа килеп ҡуна беҫтең күлгә (арғаяш)

**ӨҘӨМ-ЙОРТОМ** (туҡ-соран) *р.* өҫтән-мөҫтән — *кое-как, поверхностно.* Аларға кемнәр йетәкселек иткәнен дә өҙөм-йортом ғына беләм инем

**ӨҘӨНӨБАЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* тамаҡ ялғау — *перекусить.* Әйҙәйектәр, өҙөнөбалайыҡтар

**ӨҘӨП-ЙОЛОП** (һаҡмар) *ҡ.* өҙөп-йолҡоп — *отрывая от себя, лишая себя.* Ғөмөрө буйына ауыҙынан өҙөп-йолоп йыйған маллары таралып бөттө

**ӨҘӨРӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* асыуланыу — *злиться.* Атаһына оҡшап бер ҙә һүҙ күтәрмәй, өҙөрәйергә әҙер генә тора

**ӨҘӨҺӨТ** (һаҡмар) *и.* һөҙһөт — *удод*

**ӨҘӘНГЕ** (ҡыҙыл) *и.* тарантас, арба баҫҡысы — *подножка тарантаса, телеги*

**ӨҘӘ** (эйек) *р.* ҡырҡа — *резко, наотрез.* Уға өҙә йауап бирергә гәрәк ине

**ӨҘӘЛӘНЕҮ** (дим, туҡ-соран, урта, ырғыҙ) *ҡ.* өлтөрәп тороу — *быть приветливым, гостеприимным.* Әй үҙемтең ҡоҙағыйым, өҙәләнеп тә тора инте (урта)

**ӨҘӘРЕМ** (ҡыҙыл, урта) *с.* 1. Аяҡ баҫмаған, кеше йөрөмәгән — *нехоженый, глухой.* Өҙәрем йул. Өҙәрем йаҡ. 2. (эй) *и.* Берәй нәмәнең булмауы йәки бөтөп тороуы — *нехватка, перебои.* Өҙәрем уахыт

**ӨЖМӘХ** (эй) *и.* ожмах — *рай*

**ӨЖӘҮ** (урта) *и.* ижау — *половник*

**ӨЗДЕРӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* үтә, бик — *очень.* Ул өздерә аҡыллы шул

**ӨЗДӨРӨП** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* тырышып, бирелеп — *усердно.* Өздөрөп эшләгән кешеләрне ҡоно бүре күбек тейләр

**ӨЗЗӘЛӘТЕҮ** (урта) *ҡ.* һөсләтеү — *натравливать.* Эт өззәләтеү

**ӨЗКӨЛДӘП: ӨЗКӨЛДӘП ТОРОУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Артыҡ иғтибар биреү, хәстәрлек итеү — *опекать, уделять излишнее внимание.* Балаһына өҙкөлдәп тора. 2. (һаҡмар) Ҡыуаныу — *радоваться.* Һин китеп бармаҫ борон килеп йеттем тип, өҙкөлдәп килдем әле

**ӨЗӨК** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* үтә — *очень.* Өҙөк йабыҡ бала

**ӨЗӨЛӨ** (ҡариҙел) *р.* тар — *узкий.* Өҙөлө генә нәзек йерләре бар бит әле сыуның

**ӨЙАРА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ишек алды — *двор*

**ӨЙАРТЫ** (ҡыҙыл) *и.* нигеҙ өйөмө — *завалинка*

**ӨЙАШ** (салйоғот) *и.* йәйге аш бешереү урыны — *летняя кухня.* Аш өйө (дим, урта)

**ӨЙ БАҘЫ** (һаҡмар) *и.* иҙән аҫты — *подпол*

**ӨЙ БАҠСАҺЫ** (урта) *и.* өй алды баҡсаһы — *палисадник*

**ӨЙ БАШЫ** (ҡариҙел, ҡыҙыл, урта) *и.* бүртлек — *чердак*

**ӨЙ БӨРӨНӨ, ӨЙ БУРЫНА** (мейәс, әй) *р.* өйҙән-өйгә — *из дома в дом.* Өй боронса (ырғыҙ). Иртәгеһен өй боронса йөрөп, ауылдағы ағай-эне, туғандарын гүрҙе

**ӨЙ БҮЛЕМЕ** (әйек) *и.* бүлмә — *комната*

**ӨЙГЕШЕ** (ҡыҙыл, урта, урта урал, әй) *и.* ҡатын кеше — *женщина.* Өйгешенең мәшғүле күп (урта урал)

**ӨЙГӨ БАҘ** (һаҡмар) *и.* иҙән аҫты — *подпол*

**ӨЙГӨБӘКЛӘНЕҮ** (мейәс, һаҡмар) *ҡ.* өй һаҡлау, өйҙән сыҡмау — *домоседствовать.* Гел өйгөбәкләнеп утырып булмай бит инде (һаҡмар)

**ӨЙГӨНӨҮ II** (әй) *ҡ.* өйөлөшөү, ойҡашыу — *собираться, сбиваться в кучу.* Үрҙәк бәпкәләре өйгөнөп килә

**ӨЙГӨС** (урта) *и.* тәпке — *мотыга*

**ӨЙ КЕЙӘҮЕ** (һаҡмар) *и.* ҡыҙ йортонда йәшәгән кейәү — *зять примак*

**ӨЙКӨЛӨШӨҮ** (дим) *ҡ.* өйкөмләшеү — *группироваться.* Өйкөлөшөп торған халыҡ. Өймәкләшеү (урта). Өйкөшөү (әйек)

**ӨЙ КҮРҺӘТЕҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* килен әйберҙәре менән кейәү өйөн биҙәгәс өй күрһәтергә ҡунаҡ саҡырыу — *приглашение гостей в дом жениха для показа убранства невесты*

**ӨЙКӘЛӘНЕҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* 1. Һыйыныу — *льнуть.* 2. Ҡыйшандау — *кокетничать*

**ӨЙКӘРТӘ** (ҡариҙел, урта урал) *и.* 1. Ишек алды — *двор.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Баҡса — *огород*

**ӨЙЛӨК** (һаҡмар) *и.* мурҙаның ҡорһаҡ өлөшө — *корпус верши*

**ӨЙЛӘ** (дим) *и.* 1. Киске эңер — *вечерние сумерки.* 2. (мейәс) Төш ваҡыты — *полдень*

**ӨЙЛӘНЕҮ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта) *ҡ.* кейәүгә сығыу — *выйти замуж.* Китмә, ҡыҙым, өйләндерербеҙ үҙеңде Аҙау йегетенә (урта)

**ӨЙМӨЛӨП БУЛЫП** (әйек) *ҡ.* тәлгәшләнеп — *образуя грозди.* Муйыл бөрөләнгән өймөлөп булып

**ӨЙМӘК-ӨЙМӘК БУЛЫП** (һаҡмар) *ҡ.* өйкөм-өйкөм булып — *сплачиваясь в группы.* Йылға буйында өймәк-өймәк булып башҡорт ауыллары утырған

**ӨЙӨК** (мейәс) *и.* өйкөм — *купа.* Өйөк ағас

**ӨЙӨЛӨҮ** (әйек) *ҡ.* йыйылыу — *собираться.* Биш өй өйөлөп туйға гиттеләр

**ӨЙӨЛСӨК** (арғаяш) *и.* көшөл — *ворох (намолоченного хлеба).* Аш өйөлсөгө

**ӨЙӨМСӨК** (арғаяш) *и.* бәләкәй өйөм — *маленькая куча.* Өйөмсөк сырпыға ут тоҡандырғандар

**ӨЙӨР** (ҡыҙыл) *и.* гөрләүек — *ручей из снеговой или дождевой воды*

**ӨЙӨРГӘН ҺӨТ** (арғаяш) *и.* айыртылған һөт — *обрат*

**ӨЙӨРҘӘК** (урта) *и.* үрҙәк — *утка*

**ӨЙӨРЛӨ I** (дим, туҡ-соран, урта) *р.* тотош — *сплошь.* Өйөрлө борсаҡ араһынта бер бойҙай (урта). Өйөрҙө (көнсығыш диалект)

**ӨЙӨРЛӨ II** (урта) *и.* өйөр — *табун*

**ӨЙӨРМӘ I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* урай — *вихры на макушке.* Өйөрөлмә (ҡыҙыл)

**ӨЙӨРМӘ II** (арғаяш) *и.* өйрөлмәк — *вертушка (игрушка)*

**ӨЙӨРМӘКЛЕК** (дим) *и.* өйрөлтмәк — *водоворот*

**ӨЙӨРӨЛМӘК** (дим, урта) *и.* өйрөлтмәк — *водоворот.* Өйөрмәк (мейәс). Үҙәште тау йылғаһы, йалан йылғалары шикелле, унын кешене тарта торған өйөрөлмәкләре йуҡ (урта)

**ӨЙӨРӨЛТӨҮ: ҺӨТ ӨЙӨРӨЛТӨҮ** (арғаяш, мейәс) *ҡ.* һөт айыртыу — *сепарировать молоко*

**ӨЙӨРӨМ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡыра — *длинный ряд сгребенного сена.* 2. Һырынды — *сугроб.* Өйөрөм ҡар

**ӨЙӨРӨНДӨ** (һаҡмар) *и.* кәбәк — *мякина.* Ашлыҡ иләгендә өҫтөн, өйөрөндөһөн алаһың

**ӨЙӨРСӨК I** (мейәс) *и.* көрпә — *отруби*

**ӨЙӨРСӨК II** (мейәс) *и.* өйөрмә — *вихрь.* Аждаһа йыланды өйөрсөк ала. Өйөртмә (әй) *и.* урай — *вихры на макушке*

**ӨЙӨРТӘ: ӨЙӨРТӘ АУЫРЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡапыл ауырыу — *заболеть внезапно.* Өйөртә генә ауырып үлде лә ғуйҙы, түшәктәнеп йатманы

**ӨЙӨҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* шыуыу — *кататься.* Сана өйөү. Коньки өйөү. Эйеү (ҡыҙыл)

**ӨЙӨШӨҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* әйтешеү — *загадывать (загадки).* Беҙ төнө буйы йомаҡ өйөшә инек

**ӨЙРӨК** (әй) *и.* маҡтансыҡ — *хвастун.* Ирекәйе бигерәк өйрөк икән

**ӨЙРӨЛМӘКӘН** (ырғыҙ) *и.* ашыҡ уйыны — *игра в бабки*

**ӨЙРӨЛТӘ** (һаҡмар) *и.* нигеҙ өйөмө — *завалинка*

**ӨЙСӨК I** (ҡыҙыл) *и.* 1. Таған өҫтөнә өйөлгән көлтә йәки бесән — *сноп или сено, сложенное на стожары.* 2. (салйоғот) Көшөл — *ворох.* 3. (мейәс) Өйкөм — *купа.* Өйсөк сауыл

**ӨЙСӨК II** (ҡыҙыл) *и.* ҡош тоҙағы — *силок для ловли птиц*

**ӨЙСӨК III** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* тәндең һынған өлөшөн ҡуҙғатмау өсөн бинтҡа ҡушып урала торған йоҡа сыра йәки ҡабыҡ — *шина (медицинская)*

**ӨЙСӨҮ IV** (әй) *и.* Өлкәр — *Стожары (созвездие)*

**ӨЙСӨКЛӘҮ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Һынған урынды ҡабыҡ йәки ағас ҡуйып бәйләү — *наложить шины при переломе.* Ҡош-корттоң, ыуаҡ малдың айағы һынһа, өйсөклөй ҙә йебәрә инек (ырғыҙ). 2. (әйек-һаҡмар) Уртаһын ҡыуыш итеп нимәне булһа ла өйөү, һөйәү — *сложить что-нибудь, оставляя пустоту в середине.* Бесән өйсөкләү. Өйсөктәү (ҡыҙыл)

**ӨЙСЫПСЫҠ** (урта урал) *и.* турғай — *воробей*

**ӨЙТУРҒАЙ** (мейәс, урта урал) *и.* турғай — *воробей.* Өй турғайы (дим)
**ӨЙТҮБӘ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* ҡыйыҡ — *крыша*
**ӨЙТҮБӘБАШ** (урта урал) *и.* ҡыйыҡ — *крыша*
**ӨЙҮЛӘН** (әй) *и.* ҡый үләне — *бурьян*
**ӨЙ ХУЖАҺЫ** (һаҡмар) *и.* өй эйәһе — *домовой*
**ӨЙ ЭЙӘҺЕ** (һаҡмар) *и.* ҡатын кеше — *женщина*
**ӨЙӘҘӘҮ** (мейәс) *ҡ.* өйәләү — *заваливаться (о лошадях и птенцах домашних птиц, когда они, валяясь по земле, попадают спиной в выемку и не могут вставать.* Өйәҙәү (дим, ҡыҙыл, һаҡмар). Өйәҙеү (урта)
**ӨЙӘК-ТӨЙӘК** (ҡыҙыл) *и.* ваҡ-төйәк — *всякая всячина*
**ӨЙӘЛӘ** (ҡариҙел) *и.* төш, өйлә — *полдень.* Өйәлә уахытында ҡайтты
**ӨЙӘМӘ, ӨЙӘМӘЛӘМ, ӨЙМӘЛӘТӘ ИТЕП** (ҡыҙыл) *ҡ.* өйөп — *наполнив до краев.* Өйәмәкәй (әй). Аштығыңды өйәмәкәй итеп һалып бирҙең дә
**ӨЙӘНӘК** (мейәс) *и.* бил һөйәге — *поясничная часть позвонка*
**ӨЙӘНӘК: ӨЙӘНӘГЕН ӘЙҘӘНДЕРЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* аҫтын-өҫкә әйләндереү — *перевернуть все верх дном.* Беҙҙең кәртүктен өйәнәген әйҙәндерә һатта
**ӨЙӘНӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* өйәләү — *заваливаться (о лошадях и птенцах, когда они, валяясь по земле, попадают в выемку и не могут встать)*
**ӨЙӘҢГЕ** (һаҡмар) *и.* өҙәңге — *стремя*
**ӨЙӘҢКЕ** (урта урал) *и.* тарбаҡланып үҫкән ағас ҡыуағы — *раскидистый куст*
**ӨЙӘҢКЕ ТАЛ** (ҡыҙыл, әй) *и.* өйәңке — *ветла*
**ӨЙӘР** (мейәс, урта, урта урал) *и.* гөрләүек — *ручей из снеговой или дождевой воды.* Эйәр (әй)
**ӨЙӘТӘК** (мейәс) *и.* өйәнәк — *падучая болезнь*
**ӨКӨ** (эйек-һаҡмар) *и.* бүрек — *хохол (у птицы).* Башында өкөһө бар. Өкөлө тауыҡ
**ӨКӨ ЙАБАЛАҒЫ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* ябалаҡ — *филин*
**ӨКӨ: ӨКӨ ОЛОУ** (ҡариҙел) *ҡ.* ыҙа сигеү — *жить в нужде.* Безнең өкө олоҙо инде ул суғыш йылларында
**ӨКӨТӘ ЙАБАЛАҠ** (эйек) *и.* ябалаҡ — *филин*
**ӨКШӨНӨҮ** (һаҡмар) *ҡ.* еренә еткереү — *доводить до конца.* Өкшөнөп эшләр ҙә йөрөр инде был
**ӨКӘЙ** (һаҡмар) *и.* маңлай сәсе — *вихор*
**ӨКӘЛӘК** (һаҡмар) *и.* 1. Бәләкәй өй — *домик.* Минең дә бер өкәләк бар. 2. Ларек. Анау өкәләктә һатылмай микән?
**ӨКӘТӘ** (урта) *и.* бәпембә — *одуванчик*
**ӨЛГӨ I** (урта урал) *и.* ҡорама — *лоскут.* Өлгөлө йурған
**ӨЛГӨРИЕМ** (мейәс) *с.* 1. Мөстән — *много и допоздна ходящий (о человеке).* 2. (урта) Һәптән — *чудной*
**ӨЛГӨРӨМ** (һаҡмар) *с.* 1. Өлгөр — *проворный.* Өлгөрөм өс һуғыр. 2. Бөтә ергә лә етешеүсе — *вездесущий.* Шу тиклем өлгөрөм бит һин, күрше
**ӨЛГӘЙЕП: ӨЛГӘЙЕП ЙӘШӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* юҡлыкта йәшәү — *жить в лишениях.* Шу ҡәҙәр өлгәйеп йәшәгәннәр элек
**ӨЛГӘРЕГӨН** (әй) *р.* элекке көн — *позавчера*
**ӨЛГӘШЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Етеү — *достичь.* Бинсейәгә өлгәшә алмайым. 2. Өлгөрөү — *успеть.* Пуйызға өлгөшер микән ул?
**ӨЛГӘШТЕРЕҮ** (эйек) *ҡ.* ҡарау — *присмотреть.* Бер гем дә өлгәштермәй ошо баланы йотлоҡта
**ӨЛДӨР** (дим) *с.* өлгөр — *проворный.* Бик өлдөр геше булып сыҡтың
**ӨЛДӨРЛӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* ҡунаҡты хөрмәт итеү, йүгергеләп тороу — *оказывать гостеприимство.* Киленнәре бик уңған, ҡасан барһаң да өлдөрләп тора (туҡ-соран)
**ӨЛКӘН** (дим) *и.* ҡыуаҡ — *куст*
**ӨЛКӘН I** (ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *р.* күп — *много.* Һәҙер һеҙ өлкән аҡса алағыҙ (һаҡмар)
**ӨЛКӘН II** (ҡыҙыл) *с.* етди — *серьезный.* Ул бик өлкән ауырыу белән ауырый
**ӨЛКӘНЙОНДОҘ** (дим, урта, әй) *и.* Өлкәр — *Стожары (созвездие)*
**ӨЛКӘН ҠАБЫРҒА** (мейәс) *и.* бығым — *ложное ребро*
**ӨЛКӘН ҠАРЫН** (мейәс, һаҡмар) *и.* ҡарын — *желудок*
**ӨЛКӘН ҺӨЙӘК** (мейәс) *и.* топош һөйәге — *плечевая кость (у животных)*
**ӨЛКӘР** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот) *и.* Бәләкәй Етегән — *Малая Медведица (созвездие)*
**ӨЛӨКӨГӨН** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар, әй) *р.* элекке көн — *позавчера.* Өлкөгөн (әй). Өлкөгөн ҡойма йамғырҙа инәйем көтөү гөткән (әй)
**ӨЛӨККӨКӨННӨ** (ҡариҙел, танып) *р.* элекке көн — *позавчера.* Өлөккөкөннө ҡайтып киткән иҙе (ҡариҙел)
**ӨЛӨҮ** (дим) *ҡ.* өрөү — *дуть.* Ауыҙың бер бешсә, ҫыуҙы ла өлөп эсәң.
**ӨЛПӨ I** (һаҡмар) *и.* лепкә — *родничок (у ребенка)*
**ӨЛПӨ II** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ҡыуаҡ — *куст.* Йулдан ситкә сығып, күкшәүел өлпөләре араһына индек (туҡ-соран). 2. (эйек-һаҡмар) Ҡыр әреме — *полевая полынь*
**ӨЛПӨ III** (урта урал) *с.* өрпәк — *пушистый (о снеге).* Өлпө ҡар. Өлпө, элпә (әй)
**ӨЛПӨ IV** (әй) *с.* маҡтансыҡ — *хвастливый*
**ӨЛПӨ V** (салйоғот) *и.* елбәҙәк — *блестка.* Өлпә (арғаяш)
**ӨЛПӨЙ** (һаҡмар) *и.* кикел — *челка.* Аның йылтыр ҡара сәсләре, маңлайында өлпөй ғалдырып, түңәрәтеп ҡырҡылған
**ӨЛПӨЛДӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* йөрәктең ритмһыҙ тибеүе — *аритмичное сердцебиение.* Ҡапыл йөрәгем өлпөлдәп алды ла гитте (һаҡмар)
**ӨЛПӨРӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* дерелдәү — *дрожать.* Бик ныҡ ауырыуҙан аттың ике бөйөрө өлпөрәп тора. Һыу өҫтөндә аттың өлпөрәп торған арҡаһы ғына күренеп ҡалды
**ӨЛПӘ** (әй) *и.* күңел — *душа (внутренний мир человека).* Әтейенең йағымлы һүҙҙәре аның өлпәһен арттырып ебәрҙе
**ӨЛПӘК** (дим, урта) *с.* өрпәк — *пушистый (о снеге).* Өлпәк ҡар
**ӨЛПӘҪ** (мейәс) *с.* йөнтәҫ — *мохнатый.* Өлпәҫ ҡуллы

**ӨЛТӨК I** (урта) *с.* 1. Эшкинмәгән — *негодный.* Бигерәк өлтөк малай икәнһең тә. 2. (эй) Мак̡тансык̡ — *хвастливый*

**ӨЛТӨК II** (к̡ыҙыл, һак̡мар) *и.* бүрек — *хохол (у птицы).* Өлтөктө тауык̡ (к̡ыҙыл)

**ӨЛТӨЛДӘҮ** (эйек) *к̡.* өлтөрәү — *быть приветливым.* Балалары, килен дә килен, тип өлтөлдәп йөрөгән була

**ӨЛТӨРҘӘҮ** (кариҙел, к̡ыҙыл, эй) *к̡.* өлтөрәү — *быть приветливым*

**ӨЛТӘҢЛӘҮ** (тук̡-соран, һак̡мар) *к̡.* етеҙ йөрөү — *ходить проворно, быстро.* Килен к̡ыҙ балалар геүек өлтәңләп баҫып йөрөгән була (һак̡мар)

**ӨЛТӘҪ** (мейәс, урта) *с.* йөнтәҫ — *мохнатый.* Ана, өлтәҫ Таһир гилә (мейәс)

**ӨЛФӘТ** (һак̡мар) *и.* файҙа — *барыш.* Өлфәт итеү

**ӨЛӘМ** (дим, к̡ыҙыл, эй) *и.* өлөш — *порция, доля.* Ул, мөсә һөйәген бер ҙур өләм итеп, өмәнән к̡алмай (к̡ыҙыл)

**ӨЛӘМДӘП** (эй) *к̡.* әҙләп тотоноп — *расходовать понемногу*

**ӨЛӘМЛӘП** (тук̡-соран) *к̡.* өлөшләп — *разделив на отдельные порции.* Өләмләп кенә икмәк тараттылар

**ӨЛӘПСӘ** (к̡ыҙыл) *и.* өләсәй — *бабушка.* Өләпсәһе ауылда тора (к̡ыҙыл). Өләпсәй (мейәс)

**ӨЛӘС** (к̡ыҙыл) *и.* өләсәй — *бабушка.* Мына өләстәрҙең өйө

**ӨЛӘПСӘ, ӨЛӘСӘЙ** (һак̡мар) *и.* 1. Әсәйҙең әсәһе — *бабушка со стороны матери.* 2. (урта) Өлкән әсәй *(кесе к̡атын балаларының өлкән к̡атынға өндәшеү һүҙе)* — *старшая жена мужа по отношению к его детям от младших жен*

**ӨМКӨЛ, ӨМКӘ** (урта) *и.* соңғол — *омут.* Хәҙер балык̡ өмкөлтә була инте

**ӨМӨЖ** (гәйнә) *и.* к̡урай еләге — *малина.* Өмөжө (урта урал)

**ӨМӘЛӘҮ** (арғаяш) *к̡.* 1. Файҙаланыу, к̡улланыу — *пользоваться.* 2. (тук̡-соран) Йыйып, йәшереп к̡уйылған әйбергә тейеү — *трогать припрятанную вещь.* Өмәләгәннәр бит был баллар кәнфитте

**ӨМӘТ** (эйек-һак̡мар) *и.* утар — *хутор.* Кинйәләр бер өмәткә туктап, йал итергә булдылар

**ӨМӘТАБАК̡** (кариҙел) *и.* ҙур табак̡ — *большая чашка*

**ӨМӘҺӨЙӘК** (һак̡мар) *и.* өмәлә к̡атнашыусыларға бирелә торған ит өлөшө — *порция мяса, преподносимая участникам коллективной помощи*

**ӨМӘЧ** (төньяк̡-көнбайыш) *и.* күмәгәй — *кадык*

**ӨН I** (дим, тук̡-соран, һак̡мар, ырғыҙ) *и.* тауыш — *голос.* Бөтөнләй өнөм йук̡ (һак̡мар)

**ӨН II** (дим, эй) *и.* өң — *берлога.* Айыу өнө

**ӨН БЫУЛЫҒЫУ** ( дим, урта) *к̡.* тауыш өҙөлөү — *прерваться (о голосе).* Өнөм быулык̡ты ла ғуйҙы ҫыуык̡к̡а сығып (дим)

**ӨНГӨРӨ** (гәйнә) *и.* селбәрә — *малек*

**ӨНДӘЙГЕС** (салйоғот) *и.* уклау — *скалка (для теста)*

**ӨНДӘҮ I** (дим) *и.* сак̡ырыу к̡ағыҙы — *приглашение.* Кисә генә вайанкаматтан малайға өндәү гилде

**ӨНДӘҮ II** (тук̡-соран, һак̡мар, ырғыҙ) *к̡.* әйтеү — *известить.* К̡айҙа барғаныгыҙҙы аңа өндәмәгеҙ. Өндәмәй генә китегеҙ (тук̡-соран)

**ӨНЖӨҮ** (мейәс) *к̡.* сок̡соноу — *делать кропотливо, старательно.* Өнжөп эштәй ҙә тора!

**ӨНЙӘГЕС** (салйоғот) *и.* уклау — *скалка (для теста)*

**ӨННӨК** (дим) *и.* үндек — *потник*

**ӨННӘҮ** (һак̡мар) *к̡.* дауалау — *лечить.* Гөлшаттың серей башлаған айағын к̡әйнәһе төрлө сәскәләр белән өннәп айак̡к̡а баҫтырҙы.

**ӨНӨРСӨ, ӨНӨРӨҪӨ** (дим) *и.* көрпә — *отруби.* Өнөре (эй)

**ӨНТӘЙ** (арғаяш, мейәс) *и.* ашык̡ — *альчик*

**ӨНТӘҮ I** (к̡ариҙел, урта) *и.* кейәү яғынан туйға килгән нәҫел-нәсәп — *родственники жениха, участвовавшие на свадьбе*

**ӨНТӘҮ II** (эй) *к̡.* ак̡рынлап к̡ына ташып бөтөү — *постепенно перетаскивать.* Был бойҙайҙы ла өнтәгәндәр икән

**ӨНТӘҮ АШЫ** (к̡ариҙел) *и.* 1. Кейәү яғынан килгән к̡оҙалар һыйы — *угощение сватов со стороны жениха.* 2. Туйҙың өсөнсө көнөндә бешерелгән аш — *кушанье, приготовляемое на третий день свадьбы*

**ӨНТӘҮЛЕ** (к̡ариҙел) *и.* кейәү яғынан туйға килгән к̡оҙа — *сват со стороны жениха*

**ӨНГӨРӨ, ӨНЧҮРЕ** (гәйнә) *и.* селбәрә — *малек*

**ӨНӘР** (дим, төньяк̡-көнбайыш) *и.* һөнәр — *ремесло*

**ӨНӘРҺЕҘ** (урта урал) *с.* холок̡һоҙ — *бесхарактерный*

**ӨҢӘҮ** (төньяк̡-көнбайыш, урта, ырғыҙ) *к̡.* яратыу, ок̡шатыу — *любить.* Торомтай к̡ыҙының к̡ылығын бик үк өнәп бөтмәүен һиҙҙерҙе (ырғыҙ)

**ӨҢӘШ** (тук̡-соран, ырғыҙ) *с.* һөйкөмлө — *обаятельный, приятный.* Һөйгән йәрҙең өнө өнәшле (тук̡-соран)

**ӨҢГӨ I** (һак̡мар) *и.* 1. Һөңгө — *копье.* Өңгө һала, сәнеске һала атк̡а. 2. (урта урал) К̡асау — *долото*

**ӨҢГӨ II** (к̡ыҙыл, урта) *и.* оңғо — *ушко топора*

**ӨҢГӨР** (ырғыҙ) *и.* сок̡алта — *боковая выемка печи.* Арлы-бирле зат һалына инде ул өңгөргә

**ӨҢКӨЛ, ӨҢКӘЛ** (урта) *и.* соңғол — *омут*

**ӨҢКӨЛДӘҮ** (һак̡мар) *к̡.* к̡унак̡ты хөрмәтләү — *оказать почести гостям.* Һеҙ тип өңкөлдәп торам инде бына

**ӨҢНӨҮ** (һак̡мар) *к̡.* аңдыу — *выследить.* Атағыҙҙы өңнөүегеҙ йеткән инде

**ӨҢӨЛӨҮ I** (к̡ыҙыл, ырғыҙ) *к̡.* өмөт итеү, ымһыныу — *надеяться.* Исеме сык̡к̡ан бер геше өтәләнеп бутк̡а тәҙрәһенә барып өңөлә (ырғыҙ)

**ӨҢӨЛӨҮ II** (тук̡-соран, һак̡мар) *к̡.* эс бошоу — *грустить*

**ӨҢӨРӘЙЕҮ** (к̡ыҙыл, урта) *к̡.* 1. Күҙ тишелерҙәй булып к̡арау — *смотреть сверлящим взглядом.* Һаман өңөрәйеп утыраһың (к̡ыҙыл). 2. (к̡ыҙыл, урта, эй). Күҙҙәр төпкә баткансы ябығыу — *исхудать.* 3. (эй) К̡артайыу — *старение.* 4. Ҙур кәүҙәле кешенең эшһеҙ ултырыуы — *безделье, ничегонеделание солидного человека*

**ӨҢӨРӘҮ, ӨҢРӘҮ** (к̡ариҙел, эй) *к̡.* 1. Өҙлөкһөҙ илау — *плакать безостановочно.* Өңөрәб утырма бәхет кәметеп, тей туғандар ине (эй). 2. (к̡ариҙел) Мөңрәү — *мычать.* Сыйырлар өңрәй

**ӨҢӨРӘШ** (урта) *и.* боғарҙак̡ — *трахея*

**ӨҢӨШ** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡайғылы ҡараш — *грустный взгляд.* Өңөшө эсемде йандыра. 2. Ҡыҙыҡһыныуҙы ҡараш — *заинтересованный взгляд*

**ӨҢШӘЙЕҮ I** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* 1. Өмөт итеү, ымһыныу — *надеяться.* Ниңә өңшәйеп ҡарап тораһың? (һаҡмар). 2. (ҡыҙыл) Элмәндәү, әҙләнеп йөрөү — *рыскать*

**ӨҢШӘЙЕҮ II** (урта, эй) *ҡ.* 1. Теш ҡойолоп бөтөү — *выпадение всех зубов.* 2. (туҡ-соран, урта, ырғыҙ, эй) Күҙҙәр төпкә батҡансы ябығыу — *исхудать.* 3. (эй) Ҡартайыу — *старение.* 4. Ҙур кәүҙәле кешенең эшһеҙ ултырыуы — *бездельничание солидного человека*

**ӨӨЛДӘҮ** (урта) *ҡ.* аттың йөрәк ҡағып юртыуы — *екание лошади*

**ӨПСӨ** (мейәс) *и.* ҡойошҡанға тегелгән көмөш көмбәҙ — *серебряное монетообразное украшение, подшитое к подхвостнику*

**ӨПСӨН** (һаҡмар) *и.* үндек — *потник.* Ирмен тигән ирҙең эсендә эйәрле, өпсөнлө ат йатыр

**ӨПТӘҮ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* урлау — *украсть.* Һыуға ғына барып кигәнсә өйөмдө өптәп сығып киткәндәр (ҡыҙыл)

**ӨРГӨС** (эйек, эй) *и.* төтәткес — *дымарь.* Өрҙөргөс, өрҙөрткөс (урта)

**ӨРГӘТЕҮ I** (ҡариҙел) *ҡ.* 1. Өйрәтеү — *научить.* Хәҙер бар ҙа аҡыллы, өргәтеүне биг алып бармайлар. 2. (урта урал) Аҫтыртын ҡотортоу — *подстрекать.* Кеше өргәтеп тиг утыра

**ӨРГӘТЕҮ II** (ҡариҙел) *ҡ.* үрсетеү — *разводить.* Өргәтергә тырыша ҡортно

**ӨРГӘТЕҮ III** (гәйнә) *ҡ.* өрҙөртөү, төтәтеү — *дымить.* Умартаға өргәтмәгә черег алам

**ӨРГӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* 1. Үрсеү — *расплодиться, размножаться.* Ҡырмыҫҡа айыуы өргәп тора (урта урал). 2. (урта урал) Ҡотайыу — *разбогатеть*

**ӨРҘӨЙ** (ырғыҙ) *с.* йылғыр — *шустрый, верткий*

**ӨРҘӨКСӘ** (ҡыҙыл, эй) *и.* өрлөк шаршауы — *завеса матицы.* Өрлөксә (дим)

**ӨРҘӨКТӘМӘ** (урта урал) *и.* өрлөк шаршауы — *завеса матицы*

**ӨРКӨТКӨС** (дим) *и.* гөмбөр — *ботало (для сгонки рыбы)*

**ӨРКӘТ** (урта) *с.* өркәк — *боязливый (о лошади)*

**ӨРЛӨГӨШӨҮ** (урта) *ҡ.* өйкөмләшеү — *группироваться*

**ӨРМӘ** (һаҡмар) *с.* өрпәк — *пушистый (о снеге)*

**ӨРӨ I** (дим, ҡариҙел, минзәлә, эй) *и.* 1. Һөҙлөк — *навар.* 2. (ҡыҙыл). Ит бешкәндә төйөнләнеп йөрөгән аҡһым — *свернувшиеся белки, появившиеся при варке мяса*

**ӨРӨ II** (урта) *и.* һөйәл — *мозоль*

**ӨРӨ III** (гәйнә) *с.* эре — *крупный.* Өрө чыпчыҡ

**ӨРӨК I** (урта) *и.* кумәгәй — *кадык*

**ӨРӨК II** (эйек) *с.* ҡупыр — *чванливый*

**ӨРӨКСӘТЛЕК** (урта) *и.* рөхсәт — *разрешение*

**ӨРӨЛДӘЙ** (ҡыҙыл) *и.* бауырһаҡ — *баурсак (мелкие шарики из теста, замешанного на яйцах, приготовленные в масле)*

**ӨРӨЛМӘ** (урта) *и.* өйөрмә — *вихрь*

**ӨРӨЛМӘ, ӨРӨЛМӘК** (ҡыҙыл) *и.* өйрөлтмәк — *водоворот*

**ӨРӨЛМӘ ЙЫШҠЫ** (мейәс) *и.* түңәрәк йышҡы — *скобель (для скобления и отделки внутренней части колодочных ульев и бортей)*

**ӨРӨЛӨҮ I** (урта) *ҡ.* һимереү — *разжиреть.* Өрөлөп тик йөрөй, ашап

**ӨРӨЛӨҮ II** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* өйөлөү — *собираться в кучу.* Һыйырлар өрөлөп китте бараҡ йанынта (урта)

**ӨРӨЛТМӘ, ӨРӨЛТМӘК** (ҡыҙыл) *и.* өйрөлтмәк — *водоворот*

**ӨРӨЛТӨҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* өйрөлтөү — *крутить.* Иренгенәһен өрөлтөп йалап сыҡты (ҡыҙыл). Бер гешене өрөлтә лә өрөлтәбеҙ (урта)

**ӨРӨМ I** (арғаяш) *и.* 1. Бишбармаҡтың өҫтөнә туралып һалынған май — *кусочки сала, приправляемые бишбармак.* 2. (салйоғот) Һөҙлөк — *навар*

**ӨРӨМ II** (һаҡмар) *с.* маҡтансыҡ — *хвастливый.* Улар борон-борондан өрөм халыҡ булдылар

**ӨРӨ МАЙЫ** (ҡариҙел) *и.* һөҙлөк — *навар*

**ӨРӨМ: ӨРӨМ ҠАР** (урта) *и.* яңы йауған йомшаҡ ҡар — *свежий пушистый снег.* Өрөм ҡарҙа ҡуйанҡа һунарға сығалар

**ӨРӨНДӨ** (һаҡмар) *и.* 1. Һөрөнтө — *пахота.* 2. (көнсығыш диалект, һаҡмар) Һырынды — *снежные заносы.* Өрөндө аҫтынан килеп сыҡмаһынмы бер ҡуйан (һаҡмар). Өрөнтө (урта)

**ӨРӨНКӨ** (туҡ-соран) *с.* тарҡау — *рассыпной.* Беҙҙең баш особоҙҙа өрөнкө аҡ болотлар ағыла ла ағыла

**ӨРӨТ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* орлоҡ — *семена.* Өрөткә ҡалдырған бәрәңге генә бар

**ӨРПӨ** (һаҡмар) *и.* көнбағыш емеше — *семечки подсолнуха.* Көнбағыштың өрпөһөн генә һайлап ашаным

**ӨРПӨЛДӨК** (һаҡмар) *с.* өрпәк — *пушистый (о снеге).* Өрпөлдөк, өрпә (мейәс). Өрпәләм (ҡыҙыл)

**ӨРПӨЛДӘҮ** (мейәс) *ҡ.* уранҡып осоу *(ҡарға ҡарата)* — *завихрение пушистого снега*

**ӨРПӨЛСӘК I** (арғаяш) *и.* соҡалта — *выемка в боку печи*

**ӨРПӨЛСӘК II** (арғаяш) *и.* туҙ тышындағы йоҡа ҡабыҡ — *верхний тонкий слой бересты*

**ӨРПӨНДӨ** (эйек) *и.* һырынды — *снежные заносы*

**ӨРПӘЙЕҮ I** (салйоғот) *ҡ.* өлпәйеү ҡабарыу — *пушиться.* Йел йуҡ, ҡар өрпәйеп йата

**ӨРПӘЙЕҮ II** (урта) *ҡ.* өҙөрәйеү — *взъерошиться.* Ҡашы өрпәйеп китте, һөмһөрө ғойолоп

**ӨРПӘК** (ҡыҙыл) *и.* бүрек — *хохол (у птиц).* Тәгәрлектең башында мөгөҙ һымаҡ өрпәге була

**ӨРӘ** (ҡыҙыл, урта) *и.* өйрә — *суп.* Балтырған, һөтлөгәнте өрә итеп бешерәһең умас ыуып (урта)

**ӨРӘЙ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* 1. Ҡот — *душа.* Өрәйе ҡасып тора әле, ауырый микән? 2. (урта, һаҡмар) *с.* ҡурҡаҡ — *трусливый.* Өрәй бала. Өрәй мал. Өрәкәй (эйек-һаҡмар)

**ӨРӘЙЕН: ӨРӘЙЕН АЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡотон алыу — *перепугать*

**ӨРӘЙЛЕК** (урта) *и.* ҡурҡаҡлыҡ — *трусость*

**ӨРӘНГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өс мөйөшлө тамға атамаһы — *название трехугольной тамги*

**ӨРӘТЕҮ** (урта) *ҡ.* өйрәтеү — *учить, обучать.* Үрәтеү (дим, төньяҡ-көнбайыш)

**ӨСБИЛ** (арғаяш, урта) *с.* билле — *сшитый в талию.* Өсбил бишмәт. Өсбил йелән

**ӨСБОТ** (кыҙыл, әй) *и.* әүернә төбө — *основа крестовины*

**ӨСЙАК** (салйоғот, һаҡмар) *и.* өйҙөң аш-һыу бешерә торған өлөшө — *кухонная половина дома*

~~**ӨСЙАПРАК**~~ (урта) *и.* ваҡ селек — *мелкая чилига*

**ӨСЙӘН** (дим, ҡыҙыл, мейәс, урта, һаҡмар) *и.* 1. Рахит. Өсйән белән ауырыған баланың эсе ҡатып, өс бүлкәт булып бүленеп тора (ҡыҙыл). 2. (әй) *с.* үтә йабыҡ, үтә йеңел — *слишком тощий, легковесный*

**ӨСКӨЛ** (дим) *и.* әйбер һалыу өсөн мөйөшкә ҡағылған бәләкәй генә таҡта — *полка, прибитая в углу*

**ӨСКӨТӨҮ** (дим) *ҡ.* һөсләтеү — *натравливать, науськивать*

~~**ӨСКАТ ҠУНҒЫҘ**~~ (һаҡмар) *и.* баҙлауыҡ — *светлячок*

**ӨСЛӨК** (ырғыҙ) *и.* өслө — *тройка (оценка).* Ҡыҙымдың бер ҙә өслөкләре йуҡ

**ӨСЛӨ ТУҠМАС** (һаҡмар) *и.* өс мөйөшлө шәл биҙәге — *трехугольный узор шали*

**ӨСМӨЙӨШ** (һаҡмар) *и.* төкәтмә — *пристрой.* Өйҙөң өсмөйөшөн уһаҡтан бураныҡ

~~**ӨСНӘКӘТ**~~ (урта) *и.* ҡомағай — *обжора*

**ӨСӨК** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡыйшандаҡ — *кокетка.* 2. (урта урал) *с.* кескәй — *маленький.* Өсөк кенә балаһы бар

**ӨСӨКЛӘҮ** (әйек-һаҡмар) *ҡ.* осоҡлау — *способ знахарского лечения*

**ӨСПОСМАҠ** (дим) *и.* алғы бүлмә — *передняя часть дома*

~~**ӨСПӨТ**~~ (урта) *и.* өсайаҡ — *треножник*

**ӨСПӘТ** (урта) *и.* колун. Өспәт палта

**ӨСТӨРӨҮ** (дим) *ҡ.* һөсләтеү — *натравливать, науськивать*

**ӨСТАҒАН I** (мейәс) *и.* картуф менән ит бешерелгән ашамлыҡ — *кушанье, приготовленное из картофеля с мясом*

**ӨСТАҒАН II** (арғаяш, һаҡмар) *и.* кузла — *козлы.* Оҫталар өстағанды бер бөртөк ҡаҙауһыҙ эшләйләр (һаҡмар)

**ӨСТИТӘК** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* билдәге балитәк — *оборка при талии.* Өстөйтәк (урта)

**ӨСТӨ** (гәйнә) *с.* өҫкө — *верхний.* Өстө йулдан килеп төштөләр

**ӨСТӨК** (көнсығыш диалект) *с.* өслө — *трехлинейная.* Өстөк шәм

**ӨС ТЫНА** (ҡариҙел) *и.* өс тапҡыр — *три раза.* Килеп йеткәнсе өс тына йығылды

**ӨСТӘЛБАУ** (гәйнә) *и.* һөлгө — *полотенце*

**ӨСТӘЛЙАБЫУ** (ҡариҙел, урта урал) *и.* ашъяулыҡ — *скатерть*

**ӨҪӘК** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* бура, келәт өлөшө — *отсек закрома, амбара.* Өҫәк (дим)

**ӨҪ** (көнсығыш диалект) *и.* өҫ кейеме — *одежда.* Өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ хәҙер балдарҙың (әй)

**ӨҪКӨРӨҮ** (урта) *ҡ.* өшкөрөү — *нашептывать (при лечении заговором)*

**ӨҪКӨТЕЛ** (урта) *и.* кесе тел — *язычок*

**ӨҪКӨТӨҮ** (урта) *ҡ.* ҡотортоу — *подстрекать.* Уны былай имен ҡайтарып йебәрһәк, ул йаһил эллә нәмәләр өҫкөтөр

**ӨҪКӨ ЫРҒАҠ** (һаҡмар) *и.* аңҡау — *небо*

**ӨҪЛӨК** (һаҡмар) *и.* ҡаҙан арты *(әйбер ҡуйа торған урын)* — *напечник.* Күнәкте өҫләккә утырт, һыуы йемшеүләнеп торор

**ӨҪТӨК** (арғаяш, салйоғот) *и.* өйәнәк — *падучая (болезнь)*

~~**ӨҪТӨЛӨ ҪӨТ**~~ (дим) *и.* ҡуйы һөт — *молоко с высокой жирностью*

**ӨҪТӨНӘ СЫҒЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* туҙҙырыу — *произвести растрату.* Һатыусы булып бер йыл да эштәмәгән, мең һум өҫтөнә сыҡкан (әй)

**ӨҪТӨРӘТЕҮ** (дим) *ҡ.* һөйрәтеү — *волочить.* Өҫтөрәтеп алып киткәннәр

**ӨҪТӨ СЫНАЙАҠ** (арғаяш) *и.* сынайаҡ өҫтө — *чашка (чайная).* Өһтө сынайаҡ (салйоғот)

**ӨҪТӘЛ АҠСАҺЫ** (дим) *и.* кейәүгә сыҡкан ҡыҙҙың сығымдары өсөн алынған аҡса — *деньги, полученные на свадебные расходы невесты*

**ӨҪТӘЛ АШАУҘЫҒЫ** (арғаяш) *и.* ашъяулыҡ — *скатерть*

**ӨҪТӘЛ ЙАБЫУЫ** (урта) *и.* ашъяулыҡ — *скатерть*

**ӨҪӘК** (дим, ҡариҙел) *и.* иген бураһы — *закром для зерна*

**ӨТӨ** (арғаяш) *и.* өлтөк — *хохол (у птиц)*

**ӨТӨК I** (арғаяш, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Маҡтансыҡ — *хвастун.* 2. (урта, һаҡмар, әй) *и.* бисара, йолҡош — *бедняга.* 3. (ҡыҙыл, мейәс, урта, урта урал) *с.* ҡабалан — *суетливый (о человеке).* Бигерәк өтөк, өтәләнә лә йөрой (урта урал). 4. (ҡыҙыл, урта) *с.* ҡыҙыу — *вспыльчивый.* Үҙе шу тиклем өтөк, үҙе тиҙ ҡайтымһаҡ (ҡыҙыл)

**ӨТӨК II** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* көйөк — *гарь.* Өтөк йеҫе сығып киткән өйгә (туҡ-соран)

**ӨТӨКЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* ҡыҙып китеү — *горячиться.* Өтөкләнеү (ҡыҙыл)

**ӨТӨКӨШ** (урта, әй) *ҡ.* һалҡындан сирҡанып китеү — *почувствовать резкий холод.* Өтөкөш алдым

**ӨТӨКСӘ** (урта) *с.* ҡабалан — *суетливый.* Бер төрлө өтөксө кеше була бит инде

**ӨТӨКҺӘ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Өтөк — *заморыш.* Өтөкһә тауыҡ. 2. *с.* өшөксән — *мерзляк, мерзлячка*

**ӨТӨКӘБАШ** (урта) *и.* туҙғанаҡ — *одуванчик*

**ӨТӨЛӨП-ҠЫРЫЛЫП** (туҡ-соран, урта) *ҡ.* йанып-көйөп, тырышып — *беспокоившись, стараясь.* Өтөлөп-ҡырылып йөрөп мин тә һемәйҙем (урта)

**ӨТӨЛӨҮ** (мейәс) *ҡ.* ябығыу — *похудеть.* Өтөлөп киткән, бахыр

**ӨТӨЛӘҒЫРА** (туҡ-соран, урта) *р.* ашыҡ-бошоҡ — *торопливо*

**ӨТӨНӨП-ТӨРТӨНӨП** (дим) *р.* ашығып-бошоғоп — *второпях.* Өтөнөп-төртөнөп килеп тә йеттем

**ӨТӨРГӘ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡасау — *долото.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Йоҡа ҡасау — *стамеска*

**ӨТӨРМӘ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* төрмә — *тюрьма.* Өтөрмәгә керә йаҙҙым (төньяҡ-көнбайыш)

**ӨТӨРӨ** (һаҡмар) *с.* тырпайған — *взъерошенный.* Киҫәк кенә Тимурҙың өтөрө сәстәрен һыпырып ҡуйҙы

**ӨТӨРӨҮ** (дим) *ҡ.* төрөү — *завернуть.* Өтөрөп ҫалып ҡуйҙым

**ӨТӨРӨШ** (ҡыҙыл) *с.* маҡтансыҡ — *хвастливый.* Өтөрөш малай икән был

**ӨТӨРҪӘЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* бүҫелеү — *растягиваться (о ткани).* Аны өтөрҫәләнеп бөткән бер ментәр өҫтөнә һалып ҡуйҙылар

**ӨТӨРӘЙТЕҮ** (эйек) *ҡ.* өлпәйтеү — *распушить*

**ӨТӨҮ I** (урта) *ҡ.* 1. Ҡырау төшөү — *побить заморозками.* 2. Яндырыу — *сжечь.* 3. (дим) Ҡайнатыу — *кипятить.* Һағыҙ өтөп алдыҡ

**ӨТӨҮ II** (дим) *ҡ.* 1. Этеү — *толкать.* 2. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар, эй) Ҡабаландырыу — *торопить.* 3. Көн күрһәтмәү — *житья не давать.* Бигерәк уҫал, балдарҙы өтөбапара (эй)

**ӨТӘ БАҪЫУ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* ашығып атлау — *шагать энергично, быстро.* Ниғмәтулла өтә баҫып кантураға килеп тә инде (һаҡмар)

**ӨТӘКЕСЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ашығып һөйләү — *говорить скороговоркой*

~~**ӨТӘКӘС**~~ (һаҡмар) *и.* йомортҡанан иң аҙаҡ сыҡҡан өйрәк, ҡаҙ бәпкәһе — *утенок или гусенок-последыш.* Өтәкәс бит, шуңа бәләкәй

**ӨТӘЛӘНЕҮ** (кариҙел, ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Хәйерселеккә төшөү, хәйерселәнеү — *обнищать.* 2. (эй) Көйөп китеү — *печалиться.* Өтәләнергә әҙер генә тораһың

**ӨТӘЛӘНМӘ** (урта) *с.* ҡабалан — *торопливый.* Өтәлән (һаҡмар). Бигерәк өтәлән инде ул ғарсыҡ, барып инеү менән самауырын шаулата.

**ӨТӘЛӘҮ I** (һаҡмар, эй) *ҡ.* 1. Төләү — *линять.* Йәй булһа, бите өтәләнеп бөтә баланың (һаҡмар). 2. (урта урал) Ябығыу, йонсоу — *плохо выглядеть от изнурения.* Бахырың өтәләгән

**ӨТӘЛӘҮ II** (туҡ-соран) *ҡ.* 1. Ашыҡтырыу — *торопить.* Ниңә ул хәтлегем өтәләйһең, уахыт бар бит әле. 2. (урта) Ашығып һөйләү — *говорить скороговоркой*

**ӨҺКӨ ТӘГӘС** (арғаяш) *и.* сынайаҡ өҫтө — *чашка (чайная)*

**ӨҺТӘЛ ТОЙАҒЫ** (салйоғот) *и.* өҫтәл айағы — *ножка стола*

**ӨШГӨН** (урта) *р.* бөгөн — *сегодня.* Өшгөн китә инте ҡалаға

**ӨШКӨ** (кариҙел) *и.* тәгәрмәс бүкәненең эсен таҙарта торған ҡорал — *приспособление для чистки втулки колеса*

**ӨШКӨРӨМ** (мейәс) *ҡ.* өшкөрөү — *нашептывать (при лечении заговором).* Өшкөрөм-төкөрөм (ҡыҙыл, эй)

**ӨШКӨРӨҮ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡурҡыу — *пугаться.* Нимәнән өшкөп, нимәнән сысуыганнарҙыр, белмәйем. 2. (ҡыҙыл) Ҡыуып индереү — *загонять (скот)*

**ӨШКӘМӘ** (арғаяш, мейәс) *с.* өшөмтәл — *чувствительный к морозу.* Өшкәбә (эй)

**ӨШӨГӘН** (мейәс) *с.* тоноҡ ал — *бледно-розовый*

**ӨШӨК** (гәйнә) *с.* өшөгән — *мерзлый.* Өшөк хәлдә тапҡаннар баланы

**ӨШӨКҺӨНӨҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* өшөп барыу — *зябнуть.* Бөгөн өшөкһөнөп торам. Өшөмһәк (ҡыҙыл)

**ӨШӨНӨҮ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* өшөү — *мерзнуть.* Ат белән барҙыҡ, өшөнөп бөттөк (һаҡмар)

**ӨШӨРӨҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* һөйрәү — *волочить.* Песәнне өшөрөп алып киләбеҙ

**ӨШӘКӘЙ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* бүлгеләп бешерелгән икмәк — *хлеб, испеченный ячейкой.* Бер тава өшәкәй ҙә ғуйҙым мейескә (эйек-һаҡмар)

**ӨШӘ I** (туҡ-соран, урта, ырғыҙ) *и.* ебегән — *мямля.* Шулай өшә булмаҫ кеше, ҡаршы бер һүҙ әйтмәй тораң (ырғыҙ)

~~**ӨШӘ II**~~ (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Сөсө ҡамырҙан бешерелгән ваҡ икмәк — *булка из пресного теста.* Өшәкәй (урта, һаҡмар). 2. (ҡыҙыл, мейәс) һалма өсөн әҙерләнгән йәймә — *тонко раскатанное тесто для лапши.* Нисә өшә һалма йәйәйем икән? (ҡыҙыл)

**ӨШӘЛӘҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* 1. Эс-ҡарынды аҙ ғына ҡайнатып алыу — *обварить ливер.* Эс-ҡарынды аҙ ғына өшәләп алһаң, йәй көнө лә бик оҙаҡ һаҡлана. 2. (һаҡмар) Ит киҫәктәрен шештә ҡурыу — *поджаривание мяса на вертеле*

**ӨШӘН** (кариҙел) *с.* вайымһыҙ — *беспечный.* Өшән кеше

**ӨШӘНДЕРЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* сирҡандырыу — *чувствовать отвращение*

**ӨШӘНЕС** (ҡыҙыл, эй) *с.* һалҡын, йонсоу — *прохладный, пасмурный.* Өшәнеш (туҡ-соран). Ҡурҡып барған салт айаҙ селләне өшәнеш көннәр алмаштырҙы

**ӨШӘНЕҮ** (дим) *ҡ.* 1. Ҡурҡыу — *испугаться.* Табаҡтағы бойҙайҙы күргәс ҡарсыҡ өшәнеп китте. 2. (төньяҡ-көнбайыш, урта) Өшөү — *зябнуть.* Йерҙә йатып өшәнә башлағас Айытбай этен эйәртеп көтөүҙә әйләнеп сыҡты (урта)

**ӨШӘНЕШ БУЛЫУ** (урта) *ҡ.* һыулы кейемдән өшөү — *чувствовать озноб от влажной одежды*

**ӨШӘНСЕК** (дим) *и.* бирнә — *приданое.* Өшәнчек (төньяҡ-көнбайыш)

# П

**ПАДМУСҠЫ** (дим) *и.* йәтмә — *перемет.* Падмусҡыны төнгөләккә ҫалаҫың, бер нисә эре ҡармаҡ бәйләп, ҫыуҙың арҡырыҫына ырғытаҫың

**ПАЗДУШ** (дим) *и.* саман кирбес — *саманный кирпич.* Баҙдуш (һаҡмар), бадуш, уадуш (эйек)

**ПАЙАС** (дим) *и.* ҡайыш — *ремень*

**ПАЙМЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* селбәрә — *малек*

**ПАЙМАҠ** (дим) *и.* 1. Итеккә оҡшаш итеп тегелгән аяҡ кейеме — *вид кожаной обуви наподобие сапога (сшивается мехом во внутрь).* 2. (эйек) Тула ойоҡ — *чулки из домотканого сукна*

**ПАЙТУЛ I** (эй) *и.* асмалы тәҙрә — *створчатое окно*

**ПАЙТУЛ II** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* арыу ғына — *путем.* Ул мине пайтул ғына тиргәҙе

**ПАҠ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* 1. Таҙа — *незапятнанный (о человеке).* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Аҡ — *белый*

**ПАКЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* аҡлау — *белить.* Мейес паклау

**ПАҠЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* аҡлау — *реабилитировать, оправдать.* Соңғо йылларҙа күп кешеләр паҡланды

**ПАҠТА** (урта) *и.* баҡта — *шерсть-линька*

**ПАҠЫРСА** (урта) *и.* баҡырса — *медный чайник*

**ПАЛАБИК** (ҡариҙел) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный самотканый половик.* Палавик (мейәс), палауик (урта урал)

**ПАЛАН** (гәйнә, һаҡмар) *и.* балан — *калина*

**ПАЛАНСЫ** (ҡариҙел) *и.* шпал кеүек яҡшы ағас — *деловое дерево*

**ПАЛАС** (гәйнә, ҡариҙел, салйоғот, урта урал) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный самотканый половик*

**ПАЛАС** (арғаяш, дим, һаҡмар) *и.* балаҫ — *палас*

**ПАЛАТ, ПАЛАТА, ПАЛАТКА** (арғаяш) *и.* һәндерә — *полати*

**ПАЛАТКА** (дим) *и.* штапель туҡыма — *штапельная материя.* Балатна (урта)

**ПАЛАУНИК** (һаҡмар) *и.* ижау — *половник.* Полауник (урта)

**ПАЛТЫҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* балдыҙ — *свояченица*

**ПАМАЗЫЙ** (дим) *и.* бумазый — *бумазея*

**ПАПА, ПАПАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* боҡай — *бука.* Папаҡ (урта)

**ПАПАБАШ, ПАПАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**ПАПАЙ** (гәйнә) *и.* айаҡ — *нога.* Эшләп шулай былды папайлар

**ПАПЫЙ** (ҡариҙел) *и.* бышый — *пинетки*

**ПАРАБАН** (салйоғот) *и.* тәрилкә кәштәһе — *полочка для тарелок*

**ПАРАБАР** (ҡариҙел) *р.* бер тиң — *одинаково.* Ирләр белән парабар эшләнек

**ПАРАЛИЗ** (дим, туҡ-соран) *и. паралич.* Атаҫы парализ белән ауырыны (дим). Палариш (урта)

**ПАРЛАУ** (һаҡмар) *и.* барлау тамыры — *сонная артерия*

**ПАРНА** (дим) *и.* парға ҡалдырылған ер — *поле, оставленное под пар.* Парнаны арыш сәсеүгә ҡалдыралар

**ПАРНИК I** (гәйнә, дим, урта) *и.* сәйгүн — *чайник, заварник*

**ПАРНИК II** (урта) *и.* тәгәрмәс, сана табандары, дуға эшләгәндә ағас парлау урыны — *парилка для изготовления колес, санных полозьев и дуг*

**ПАРПЫЛДАҠ** (гәйнә) *и.* барҡылдаҡ — *дрозд*

**ПАРСА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* биҙәк — *узор*

**ПАРСАЛЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* биҙәкле, сәскәле — *цветистый*

**ПАРУТ** (дим) *и.* нәҫел — *род.* Аларҙың паруты оҙон буйлы

**ПАР ШЕБЕШЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* инкубатор себеше — *инкубаторский цыпленок*

**ПАСАТКА** (туҡ-соран, урта) *и.* ултыртылған ағастар — *лесопосадка.* Быйыл пасаткала йеләк күп (туҡ-соран)

**ПАСТИТ** (һаҡмар) *и.* емеш бәлеше — *пироги с фруктовой начинкой*

**ПАСТУТ** (арғаяш) *и.* ташландыҡ ер — *пустошь.* Пастуш (салйоғот)

**ПАСУТНИК** (урта) *и.* һауыт-һаба шкафы — *буфет*

**ПАСА** (урта) *и.* баҫа — *посконь.* Паса (ҡариҙел). Бер пот пәзей, бер пот паса алдыҡ

**ПАТИС** (дим) *и. батист*

**ПАТСАНКА** (урта) *и.* бүрәнә башын һалып ташый торған сана — *сани, предназначенные для перевозки бревен*

**ПАТШАЙ** (һаҡмар) *и.* ебәк туҡыма төрө — *вид шелковой ткани.* Патшай сапан йабынып йөрөй торғайнылар өлкәнерәк хатыннар

**ПАТШАҺЫҘ** (урта) *с.* тәртипһеҙ — *недисциплинированный*

**ПАУФКА, ПӘҮЕФКА, ПУФКА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төймә — *пуговица.* Бофка, буфка (төньяҡ-көнбайыш)

**ПЕЛ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* көр — *откормленный.* Пел атлар белән йөрөйҙе элгәре байлар

**ПЕЛМИН** (гәйнә) *и.* билмән — *пельмени.* Пилмин (гәйнә, урта)

**ПЕЛӘМӘ** (минзәлә) *и.* нәҫел — *род, племя.* Бер пеләмә дип тә йөрөтәләр

**ПЕЛӘЖ** (дим) *с.* пләш — *плешивый*

**ПЕРЕТӘК** (һаҡмар) *и.* балыҡ тотоу өсөн еп йәки бауға тере балыҡтар кейҙереп ярҙан-ярға тартылған ҡулайлама — *перетяг (рыболовная снасть)*

**ПЕРИСТУЛ** (ҡариҙел) *и.* ат йәкәле — *бабка лошадиная*

**ПЕРӘТНИК** (дим) *и.* бәләкәй йылым — *небольшой невод*

**ПЕРӘШКЕЛӘҮ** (урта) *ҡ.* парлап егеү — *запрягать парами.* Пырашкалау (арғаяш, мейәс)

**ПЕСЕ ҮЛӘНЕ** (дим) *и.* бесәй тырнағы — *алтея.* Песей йемеше (ҡариҙел)

**ПЕСИ** (дим) *и.* 1. Бесәй — *кошка.* Песей (гәйнә). 2. (гәйнә) Ҡурҡаҡ — *трус*

**ПЕСИ БОРЧАҒЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бесәй тырнағы — *алтея*

**ПЕСИ ЙАПРАҒЫ** (дим) *и.* бесәй тырнағы — *алтея*

**ПЕСИ ЙЕЛЕГЕ** (дим) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг.* Песи жилеге, песей йелеге (төньяҡ-көнбайыш), песи йелек (гәйнә), песей жилек, песи йелеге (ҡариҙел)

**ПЕСИ ЙЕЛӘГЕ** (дим) *и.* бесәй тырнағы — *алтея*

**ПЕСИ ҠОЙРОҒО** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* күгелйем алабута — *лебеда сизая*

**ПЕСИ МАЙЫ** (дим, эй) *и.* арҡа мейеһе — *спинной мозг*

**ПЕСИ МӘМӘЙЕ** (дим) *и.* бесәй тырнағының емеше — *семена алтея*

**ПЕСЛИК** (гәйнә) *и.* ҡарабаш турғай — *синица.* Песләк (ҡариҙел), песнәк (төньяҡ-көнбайыш)

**ПЕСЛӘЙГӘН** (ҡариҙел) *с.* йәшле — *слезящиеся (глаза).* Песләйгән күҙле. Пысым (һаҡмар)

**ПЕСЛӘК** (ҡариҙел) *с.* йәшле — *слезящиеся (глаза)*

**ПЕСИ МЕНДӘРЕ** (урта) *и.* күпсек — *думка*

**ПЕСӘЙ ТАБАНЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* бесәй тырнағы — *алтея*

**ПЕТИК** (гәйнә) *с.* бәләкәй — *маленький.* Петик кенә бала. Печтек (төньяҡ-көнбайыш)

**ПЕШКӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* беше — *крепкий.* Пешкән ағас. Пеше (һаҡмар)

**ПЕШТЕК** (гәйнә) *с.* тиктормаҫ — *озорной (о ребенке)*

**ПЕЧИН** (гәйнә) *и.* 1. Үлән — *трава.* 2. Сәскә — *цветок*

**ПЕЧТЕК** (гәйнә) *и.* шыршы үлән — *хвощ полевой*

**ПЕШПЕЛДӘҮ** (гәйнә) *ҡ.* бышылдау — *шептать.* Пешпелдәп сураша

**ПЕШТЕК** (гәйнә) *с.* осоҡ, тиктормаҫ — *непоседливый.* Пештек бала

**ПЕШТЕКЛӘНЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* шаярыу — *озорничать*

**ПИКАН** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* балтырған бәбәге — *бутон борщевика.* Пикан ашы ашаҙыҡ (гәйнә)

**ПИЛТӘ** (минзәлә) *и.* филтә — *фитиль*

**ПИМА** (ҡариҙел, урта, урта урал, һаҡмар) *и.* быйма — *валенки*

**ПИПЕ** (урта) *и.* ҡаҙ бәпкәһе — *гусенок.* Пипей (ҡариҙел, урта урал)

**ПИПЕЙ** (ҡариҙел, урта) *и.* 1. Себеш — *цыпленок.* 2. Бәләкәй балаға ҡарата иркәләү һүҙе — *ласковое обращение к ребенку.* Бирегеҙ әле пипейемде, бер йаратайым (ҡариҙел)

**ПИПИ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сөсө ҡамырҙан бешерелгән ваҡ икмәк — *булка из пресного теста*

**ПИРӘЙ** (дим) *и.* аҡтамыр — *пырей*

**ПИРӘЙӘЗ** (төньяҡ-көнбайыш, әй) *и.* етмеш биш сутыйға тигеҙ элекке ер үлсәү берәмеге — *старинная единица измерения земли, равная семидесяти пяти соткам.* Беҙ ҙә аш сәстек, йегерме пирәйәз (әй). Пирәйез (ҡариҙел)

**ПИРӘМӘН** (ҡариҙел) *и.* баҫыу — *поле.* Бар халыҡ пирәмәндә, убырка бит. Пиримин (гәйнә)

**ПИСКУН** (гәйнә) *и.* ҡомай — *пескарь.* Пискузук (ҡариҙел)

**ПИСТЕР** (мейәс, урта) *и.* үрелгән һандыҡ — *плетеный сундук*

**ПИТНАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡомай — *пескарь*

**ПИТРАС** (дим) *и.* аттың алғы мускулы — *мускул передней ноги лошади*

**ПИШНӘ** (дим, һаҡмар) *и.* бөрөз — *пешня.* Ҡыш көнө ҡоҙоҡ эргәһен пишнә менән таҙартабыҙ (һаҡмар)

**ПЛАНТАС** (ырғыҙ) *и.* йәшелсә баҡсаһы — *огород.* Бик күп йыллар плантаста эшләнем

**ПЛАСКАТИН** (дим) *и.* каса — *пиала*

**ПОНАР** (ҡариҙел) *и.* *фонарь.* Понар белән житен талҡыйбыҙ

**ПОНОҠ** (арғаяш) *и.* оҙон ашыҡ — *длинный альчик*

**ПОП ИТЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* йығылыу *(балаларға ҡарата)* — *упасть (о детях)*

**ПОРАЖ** (ҡариҙел) *и.* туҙан — *пыль.* Порағын йелләтәм

**ПОРАУЛКА** (ырғыҙ) *и.* тыҡрыҡ — *переулок.* Пыраулка (урта), пыралук (дим), пыраулылыҡ (ҡариҙел), быраулылка (ҡыҙыл)

**ПОРОС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Бурса — *брус.* 2. Янаҡ — *кокяк*

**ПОРШАЙЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* турһайыу — *надуться.* Көнө буйы поршайып йөрҙө

**ПОРЫН** (ҡариҙел) *и.* морон, танау — *нос*

**ПОС** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* он осондоһо *(ашлыҡ тарттырғанда)* — *мучная пыль (при обмолотке).* Онноң посон сыпырыб алып ашаталар малға (гәйнә)

**ПОСҠАҠ** (ҡариҙел, һаҡмар) *и.* киҫәк — *лоскут.* Кейеҙ посҡағы

**ПОСҠАҠЛАУ** (гәйнә) *ҡ.* быҫҡаҡлау — *моросить*

**ПОСМАҠ** (дим, эйек) *и.* 1. Мөйөш — *угол.* Дүрт посмаҡлы өйҙә тора (эйек). 2. (ҡыҙыл) Сик — *край.* Посмағы ошонда гилеп жит итеп киткән

**ПОСТАУ** (урта) *и.* буҫтау — *сукно.* Пыстау (мейәс). Пастау (төньяҡ-көнбайыш)

**ПОСТАШ: ПОСТАШ ИТЕҮ** (булыу) *(*төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ҡ.* 1. Зыян итеү — *повредить.* Баласы посташ итә (төньяҡ-көнбайыш). 2. Бөлөп бөтөү — *окончательно разориться.* Донйаһы посташ булыбөттө (урта урал)

**ПОТ I** (дим) *и.* дебеткә ҡатлап ҡушылған еп — *пара пуховой пряжи*

**ПОТ II** (дим) *и.* бот — *пуд*

**ПОШАЛАНЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* бошоноу — *беспокоиться*

**ПӨНЫЙ, ПЫНЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* мышы — *лось*

**ПОЧОҠ** (ҡариҙел) *и.* эсе ҡыуыш ағастан яһалған һауыт — *посуда, сделанная из полого дерева*

**ПРОУОТНИК** (ҡариҙел) *и.* кейәү егете — *шафер.* Проуотниккә тастымал бәйләйләр

**ПУВАРИНКӘ** (салйоғот) *и.* ижау — *половник*

**ПУЧЫМИС, ПУЧУМИС** (минзәлә) *и.* төймә — *пуговица*

**ПУЛЫҠ** (арғаяш, салйоғот) *и.* турпыша — *полог*

**ПУМАЛА** (арғаяш, салйоғот) *и.* бумала — *кисть*

**ПУМИЛЛЕК** (гәйнә) *и.* ваҡ шыршылыҡ — *молодой ельник.* Урманны пумиллек алған

**ПУМЫС, ПУМЫШ** (дим) *и.* талыҡ — *помост (у косы)*

**ПУП-ПУП** (урта) *и.* һөҙһөт — *удод*

**ПУПЫЛДАҠ** (ҡариҙел) *и.* тотлоғоп һөйләүсе — *заика*

**ПУФАЙКА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* *фуфайка.* Куфайка (урта урал), күфәйке (туҡ-соран)

**ПУФКА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төймә — *пуговица.* Буфка (урта урал)

**ПҮЛӘТӘЙ** (арғаяш) *и.* ҡара һоло — *овсюг*

**ПЧӘН ТҮПРӘСЕ** (урта урал) *и.* тапанды — *объедье*

**ПЫЖУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* быжыу — *увядать.* Ҡыйар пыжып китте. Пәжеү (һаҡмар), бәжеү (туҡ-соран)

**ПЫЛАНУТ** (һаҡмар) *и.* боланут — *иван-чай.* Пыланутын сәй итеп эсәләр

**ПЫЛТЫРАУ** (ҡариҙел, урта урал) *ҡ.* 1. Боҙолошоу — *поссориться.* Хатыны белән пылтырашып китеп айырылыштылар (урта урал). 2. (урта урал) Ҡыҫылыу — *вмешиваться.* 3. (урта урал) Туҙыу — *изнашиваться.* Өйнө аҡлағанда пылтыраған инде кенишкә

**ПЫЛСЫМАҠ** (һаҡмар) *с.* бысым — *неудавшийся, сырой (хлеб)*

**ПЫРҘАМҪЫҘ** (дим) *с.* 1. Көсһөҙ — *слабый.* Пырҙамҫыҙ ат. 2. Мәғәнәһеҙ — *бестолковый.* Пырҙамҫыҙ, ҡабара ҙа китә

**ПЫРТЫҠ** (гәйнә) *с.* ҡылтым — *обидчивый*

**ПЫРШАЙЫУ** (дим) *ҡ.* үсегеү — *обижаться*

**ПЫРЫЛДАТЫУ** (мейәс) ҡ. туҙан күтәреү — *поднимать пыль.* Пырылдатмай ғына һеперӗп ал

**ПЫРЫШҠЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) ҡ. бышҡырыу — *фыркать (о животных).* Атлар пырышҡып тора

**ПЫСМА** (эйек) с. бысым — *сырой, неудавшийся (хлеб)*

**ПЫСЫЛЫУ** (дим) ҡ. бүҫелеү, һуҙылыу — *растягиваться (о ткани).* Йаулыҡтың осо пысылып барып сыға

**ПЫТЫРЫЙ** (дим) и. ваҡ балыҡ — *малек*

**ПЫТЫРЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) и. әрпеш — *неряха*

**ПЫТЫШ** (төньяҡ-көнбайыш) с. 1. Мыштым — *медлительный.* 2. (урта урал) и. кеше әңгәмәһенә тығылған, ҡыҫылған кеше — *совущий человек.* 3. Кәмһетеү һүҙе — *слово оскорбления*

**ПЫШЛАУ** (дим) ҡ. шыжылдау — *шипеть.* Самауыр пышламаҫа ла пары килде

**ПЫШТЫР** (дим) с. мыштым — *медлительный*

**ПЫШЫЙ** (дим) и. өҫкө яғы материянан, түбән яғы күндән тегелгән аяҡ кейеме — *вид обуви с матерчатым верхом.* Шыпый (туҡ-соран)

**ПӘБӘЙТӘК** (урта) и. балитәк — *оборка*

**ПӘЖЕЙ, ПӘЗЕЙ, БӘЖЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) и. тарма — *конопля*

**ПӘЙҘӘ БУЛЫУ** (туҡ-соран, эй) ҡ. килеп сығыу — *появиться.* Тәҙрә алдында сандыр буйлы һуҡыр ҡарт пәйҙә булды (туҡ-соран)

**ПӘКЕ I** (төньяҡ-көнбайыш) и. мәке — *прорубь*

**ПӘКЕ II** (дим) и. бәке — *нож перочинный*

**ПӘЛӘК I** (дим, ҡариҙел) и. тараҡан — *таракан*

**ПӘЛӘК II** (урта) и. туҡмаҡ — *колотушка*

**ПӘНШИШӘМБЕ** (дим) и. кесаҙна — *четверг*

**ПӘРҘӘ** (эйек-һаҡмар) и. 1. Ҡаҫмаҡ — *пенка (на молоке).* 2. (ырғыҙ, эйек) Лепкә — *родничок (у ребенка)*

**ПӘРЕЙ КҮБӘЛӘГЕ** (дим) и. төн күбәләге — *ночная бабочка*

**ПӘРӘМӘС** (дим) и. бәрәмәс — *шаньги*

**ПӘРӘНКЕ** (ҡариҙел) и. картуф — *картофель*

# Р

**РАҒАЙАҺЫҘ** (мейәс) с. ҡаты күңелле — *жестокий.* Эрәғәйәһеҙ (ҡыҙыл, эй)

**РАЗЫЙ** (гәйнә, дим) р. риза — *согласен.* Ҡыҙ разый микән? (дим)

**РАЙ** (һаҡмар) и. теләк — *желание.* Кешенең райын ҡайтараһың

**РАМАЙ ЧИЧКӘСЕ** (гәйнә) и. умырзая — *подснежник*

**РАҠ БАЛЫК** (арғаяш) и. ҡыҫала — *рак*

**РАМАТИЗ** (дим, урта) и. *ревматизм.* Ырматиз, ырматизм (эйек-һаҡмар)

**РАМАШ** (эйек) и. аҡ сәскә — *ромашка.* Рамашты эс ауыртҡанда ҡайнатып эсәләр

**РАСПУСКА, РАСПУСКЫ** (урта, эйек) и. оҙон арба — *дроги*

**РАҪ-ТУРА** (һаҡмар) и. дөрөҫ — *правда.* Раҫ-тураһын әйткәндә, ул үҙе гилеп бәйләнде

**РИГА I** (һаҡмар) и. көлтә арбаһы — *сноповозка.* Эригә (ҡыҙыл)

**РИГА II** (туҡ-соран, ырғыҙ) и. япма — *навес.* Рига аҫты туп-тулы иген (туҡ-соран)

**РИДУАН** (туҡ-соран, урта) и. көлтә арбаһы — *сноповозка.* Риҙуан (арғаяш, һаҡмар)

**РИЗЫҠ ЙЫЙЫУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта) ҡ. ашау — *есть.* Ризыҡ йыйып алайыҡ (төньяҡ-көнбайыш)

**РУДА** (гәйнә) и. урҙа — *шест для развешивания вещей.* Ырауҙа (урта урал). Шәлең ырауҙала, күлмәк аҫтында

**РУДА ИНӘҺЕ** (урта) и. *самородок.* Руда инәһен Уфаға йебәргәннәр

**РУМЖА** (дим) и. һал тотторғос ағас — *бревно, скрепляющее плот*

**РЫЙАҺЫҘ** (мейәс, урта, һаҡмар) с. хәйләһеҙ — *бесхитростный.* Ул бигерәк рыйаһыҙ, арыһа ла туктап тормаҫ (һаҡмар)

**РӘБӘҒӘТЬЕҘ** ( һаҡмар) с. килбәтһеҙ — *нескладный (о человеке).* Ҡапыл рәбәғәтһеҙ булып үҫеп китте

**РӘГҮЖӘ** (арғаяш) и. септә — *рогожа*

**РӘҒӘТКӘ** (урта) и. рәшәткә — *решетка.* Рәғәткә йанына ҡуйҙылар

**РӘҺИЕҮ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) и. ауырыу — *болезнь.* Ул ҡартҡа әллә ниндәй рәнйеү тейгән (һаҡмар). Рәнжеү (эй, арғаяш)

**РӘТ** (ҡыҙыл, һаҡмар) и. ваҡыт — *пора, время.* Тәү рәттә Ташлыла торҙоҡ (һаҡмар)

**РӘТЛӘШ** (һаҡмар) 1. р. йәнәш — *рядом.* 2. и. йәштәш — *сверстник.* Инәйем белән рәтләш әбей ул. Эрәттәш (урта урал). Ауылда эрәттәштәрем ҡаманы

**РӘТҮК** (урта) р. рәттән — *подряд.* Рәтсә (туҡ-соран)

**РӘТ ҺӨЙӘГЕ** (эйек) и. ит өлөшө — *кусок мяса*

**РӘҮЕНКЕ** (эйек) и. кәүерт — *сгнившее изнутри дерево.* Рәүкә (дим)

**РӘҮЕШ** (урта) и. хәл — *состояние.* Шунан һуң ошо рәүеш ҡалтым

**РӘҮЕШЕН: РӘҮЕШЕН КИЛТЕРЕП** (урта) р. килештереп — *складно (сказать).* Рәүешен килтереп һөйләй бит әле

**РӘҮЕШЛЕ** (дим) с. оҡшаш — *похожий.* Ҫин татарға рәүешлеҫен тиләр миңә

**РӘҮЕШЛӘҮ** (дим, урта) ҡ. оҡшатыу — *уподобить.* Остоҡ ҡына булһа ла һыҙғылай ул, шөйлә рәүешләй (урта)

**РӘҮЕШТӘҮ** (мейәс) ҡ. килбәтләү — *довести до определенной формы.* Төйөп-төйөп рәүештәйҙәр ҙә киптерәләр

**РӘШӘ** (урта) и. баллы ысыҡ — *медвяная роса.* Рәшә йәй көнө ийүн, ийүл айларында була

**РӘШӘҠОРТ** (эйек) и. эре ҡорт — *трутень*

**РӘШӘТКӘ** (урта) и. самауыр төбө — *решетчатая основа самовара*

**РӘШӘТКӘҒОЙМА** (дим, урта) и. рәшәткә — *решетка*

**РӘШӘТНИК** (дим) и. лапаҫ башына һалынған һайғау — *потолочные жерди навеса*

# С

**САБАҒАС** (мейәс, урта) *и.* шыбағас — *цепь*

**САБАҠ I** (ырғыҙ, һаҡмар) *и.* ридуан аратаһы — *рама рыдвана.* Ридуан сабаҡлары ҡырылып бөткән, бесән тормай (ырғыҙ)

**САБАҠ II** (мейәс, урта) *и.* һап — *черенок.* Сабағас сабағы

**САБАҠ III** (ҡариҙел) *и.* таҫтамал үҙәге — *полотняная часть узорчатого полотенца*

**САБАҠ IV** ( дим, урта, һаҡмар) *и.* селбәрә — *малек.* Сабаҡа (дим, урта)

**САБАҠ V** (дим) *и.* тапанды — *объедье*

**САБАН, САУАН** (мейәс) *с.* 1. Тыңлауһыҙ — *непослушный.* Былайалай сабанма Рәфит. 2. (арғаяш) Ығыш — *копотливый.* 3. (дим) Яй — *медлительный.* Сабан ат ауыр йөккә йегеүгә йаҡшы. 4. Ялҡау — *ленивый*

**САБАНҠОРТ** (урта урал) *и.* май ҡуңыҙы — *майский жук*

**САБАН МАЛАЙЫ** (ҡариҙел) *и.* һабанда дилбегә эленеп ҡуйыла торған ҡулайлама — *вожжедержатель (на плуге)*

**САБАНСЫПСЫҠ** (гәйнә) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**САБАН УҒЫ** (гәйнә) *и.* алтөрән — *предплужник*

**САБАТА** (дим) *и.* *танкетка*

**САБАТА: БАШМАҠ САБАТА** (урта) *и.* тәрән сабата — *глубокие лапти*

**САБАТА: САБАТА ҠАЙТАРЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* 1. Сабата үреү — *плетение лаптей.* 2. Эшһеҙ йөрөү — *бездельничать.* Йетте сабата ғайтарыуың, эшкә башта! (ҡыҙыл)

**САБАУЫЛДАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Сабыштырғылап йөрөү — *поскакивать (верхом).* 2. Йүгергеләп йөрөү — *забегать, засуетиться.* Анда-мында йүгереп, сабауылдап тик йөрөй (ҡыҙыл)

**САБАШ I** (эйек-һаҡмар) *и.* һыуһын — *промежуток рабочего времени от одной передышки до другой.* Бер сабаш бесән саптым ағайымдан башҡа

**САБАШ II** (туҡ-соран, урта) *ы.* ғәжәпләнеү ымлығы — *междометие удивления.* Сабаш, иҫтән сыға ла ғуйа (урта)

**САБИАЛАР** (мейәс) *и.* сабыйҙар — *младенцы.* Сабиалары бәлән күсеп килделәр

**САБЫЙ** (урта) *и.* балаға ҡарата йәлләп әйтеү һүҙе — *дитя мое, деточка*

**САБЫЙТАШ** (урта) *и.* ҡырсынташ — *галька*

**САБЫЙТЕШ** (мейәс) *и.* һөт теше — *молочные зубы*

**САБЫМ** (урта) *и.* сабынлыҡ — *сенокос.* Беҙҙең сабым һыу буйынта

**САБЫНГӨЛ** (ҡариҙел) *и.* һабын үләне — *мыльнянка татарская*

**САБЫНТӘТӘЙ** (урта урал) *и.* һабын үләне — *мыльнянка татарская*

**САБЫРҒА: САБЫРҒА ҒУЙЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сабыр итергә ҡушыу — *просить — быть терпеливым.* Мине сабырға ғуйҙыуы, үҙе китте

**САБЫРТҠЫ I** (дим) *и.* ҡырлы ҡурай — *порезник*

**САБЫРТҠЫ II** (әй) *и.* сабыртма — *сыпь*

**САБЫРТМА** (әй) *и.* ирен осонмаһы — *губная волдырь*

**САБЫУ I** (дим) *ҡ.* 1. Тәрәшләү — *чесать (лен).* 2. (урта) Күмеү — *окучивать.* Бәрәңге сабырға сыҡтым

**САБЫУ II** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар, әй) *и.* ҡыйыҡ — *клин (у платья).* Элек күлмәккә бер нисә сабыу кертеп теккәндәр (мейәс)

**САБЫУЛАУ** (урта, ырғыҙ) *ҡ.* сабып барыу — *скакать, бежать.* Һарыбай ҙа арбаның әле ул йағына, әле был йағына сығып, сабыулай-сабыулай эйәреп китте (ырғыҙ). Сабыуыллау (урта). Көн оҙоно сабыуыллап йөрөп арығантыр инте

**САБЫШАҠ** (арғаяш) *с.* сапсан — *резвый (о лошади)*

**САҒА** (ҡыҙыл) *с.* сағыр — *бесцветный (о цвете глаз)*

**САҒҘАҠ** (дим) *и.* һағыҙаҡ — *оса.* Сағыҙаҡ (туҡ-соран, ырғыҙ), сағҙаҡ (ҡариҙел), сагадаҡ (гәйнә)

**САҒАНТӘГӘС** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *и.* баҙыян сеүәтә — *деревянная расписная чашка.* Сағантәгәсем йарыла баштаған (мейәс)

**САҒАРАҠ** (арғаяш, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* тирмәнең башына эске яҡтан уҡтарҙың башын беркетеп, түңәрәкләп ҡуйылған ағас — *деревянный обруч для прикрепления стрел юрты с внутренней стороны*

**САҒАУЫН** (салйоғот) *и.* 1. Бал ҡорто — *пчела.* 2. (арғаяш, салйоғот) Иңкеш — *шмель*

**САҒЫҘ** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* 1. Сайыр — *древесная смола.* Ҡарағай сағызы. Шыршы сағызы. 2. (төньяҡ-көнбайыш) Прополис

**САҒЫЛ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ағас үҫмәгән, бейек булмаған ҡалҡыулыҡ — *небольшая безлесная возвышенность.* Таштуғайҙа сағыл күп тип килеп ултырғандар (ҡыҙыл). 2. (урта) Тәпәшәк тау — *покатая гора.* Сағылтау (мейәс). 3. (урта) Тауҙың ағасһыҙ, асыҡ урыны — *безлесная часть горы*

**САҒЫЛДЫРЫУ** (дим, ҡариҙел, ҡыҙыл, әй) *ҡ.* алдан хәбәр итеү, иҫкәртеү — *предупреждать.* Апайыңа сағылдыр, бөгөн ырайундан киләләр (ҡыҙыл)

**САҒЫЛЙЫУ: КҮҘ САҒЫЛЙЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* күҙ сағылыу — *ослепляться (от света).* Күҙем ҡойаштан сағылйыған да ғуйған

**САҒЫЛТЫРЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Сирттереү — *спустить курок.* Мылтыҡты бер сағылтырҙым, ике сағылтырҙым, ут бирмәй. Сағылдырыу (һаҡмар), сағылтыу (ҡыҙыл). 2. (ҡыҙыл) Саҡма сағыу — *высечь огонь.* Ике ташты сағылтырып ут тоҡандыралар

**САҒЫМ** (туҡ-соран) *и.* монар — *мгла.* Алыҫтарға һуҙылған дала, май ҡойашы аҫтында күм-гүк сағымнарға күмелеп, тыныс йата

**САҒЫНА: САҒЫНА ЙЕТЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сигенә етеү — *дойти до предела.* Сағына йетһә, үтен һытып эсәр ул

**САҒЫР I** (дим) *с.* 1. Таҫыр, аҡыш — *пучеглазый.* 2. (мейәс) Йәшкелт күкһел (күҙ) — *зелено-голубые (глаза)*

**САҒЫР II** (ырғыҙ) *и.* 1. Һары акация — *чилига желтая.* Сағырҙы утын итеп йаҡҡаннар. 2. (һаҡмар) Ҡау, ҡышлаған үлән — *прошлогодняя, высохшая на корню трава.* Сағырлы бесәнде сабыуы ауыр

**САҒЫР-СОҒОР** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* төрлө ҡый үләндәре — *бурьян.* Һуғыш йылларында сағыр-соғор йағып йәшәнек (ырғыҙ)

**САҒЫУ: КӨМБАҒЫШ САҒЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* көнбағыш ярыу — *лущить семечки.* Ишек алдында көмбағыш сағып утыралар

**САДАФ** (гәйнә) *и.* һиҙәп — *пуговица.* Сәҙәп, сәҙәф (дим, ҡариҙел)

**САҘАҒАН** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* ҡарт, оло йәштәге — *пожилой.* Саҙаған ҡарсыҡтар бар беҙҙә (урта урал)

**САҘАУНИК** (һаҡмар) *и.* тубал — *лукошко.* Ҡортто саҙауниккә һалып ҡуйабыҙ

**САҘУҠ** (ҡариҙел, әй) *и.* 1. Өй артындағы баҡса — *палисадник.* Жәйен саҙуҡ эрәхәт була ҡойаштан (әй). 2. (мейәс) Эре ағас өйкөмө — *большая купа деревьев*

**САЗ ДҮҢГӘГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* түңгәк — *кочка*

**САЙ I** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* сәй — *чай.* Сай ман тамаҡтан да эшеңә бар (арғаяш)

**САЙ II** (урта) *и.* ике тау араһындағы бил — *седловина*

**САЙ III** (урта) *и.* ләм — *ил*

**САЙ: БАҠА САЙЫ** (һаҡмар) *и.* сай — *речная ленточная водоросль*

**САЙА** (ҡыҙыл, урта, әй) *с.* 1. Уҫал — *злой.* Сайан (дим), сайаҡ (эйек-һаҡмар). Тос йылан бик сайаҡ була ул. 2. (эйек-һаҡмар) Үҙ һүҙле — *своевольный.* 3. (ҡыҙыл, салйоғот) Үпкәсел — *обидчивый.* Ул сайаға һүҙ әйтһәң дә ғыйын (салйоғот)

**САЙА ГЕСЕРТКӘН** (мейәс) *и.* баҡса кесерткәне — *крапива жгучая*

**САЙАҠАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* сайҡау — *полоскать.* Сәйҡау (дим)

**САЙАЛАШЫУ** (дим, урта) *ҡ.* ыҙғышыу, талашыу — *ссориться*

**САЙАЛЫҠ** (дим, урта) *и.* уҫаллыҡ — *злость*

**САЙБАТА** (дим) *и.* әрпеш, бысраҡ — *грязнуля*

**САЙҒАҠ I** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Иҙән өрлөгө — *матица пола.* 2. Иҙән таҡтаһы — *половая доска*

**САЙҒАҠ II** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* һай — *мелкий.* Йылғаның сайғаҡ урынынан сыҡ

**САЙҒАРА** (мейәс) *с.* телгә үткер — *языкастый (о человеке).* Ул сайғараның алдына кем сыҡһын

**САЙҒАШЫУ** (ырғыҙ) *и.* көн менән төндөң тигеҙлеге — *равноденствие.* Хәҙер төн белән көндөң сайғашкан мәле

**САЙҘАУ** (мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* сайҡау — *споласкивать*

**САЙҠАТЫУ** (дим) *и.* ҡыбырлатыу — *шевелить*

**САЙҠАШЫУ** (урта) *ҡ.* сайҡалыу — *качаться.* Арығаннар, сайҡаша-сайҡаша тороп киттеләр инде

**САЙЛАУЫҠ** (ҡариҙел) *и.* һай урын — *мель.* Сайлауыҡтан ат белән сығабыҙ.

**САЙЛАШ** (гәйнә) *ҡ.* тиңдәш — *ровесник.* Без аның белән сайлаш

**САЙРАУ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Сарлау — *точить.* Бысаҡ сайрау. Балта сайрау. 2. Һайрау — *петь.* Сайраған ҡошлар ҙа хәҙер күп түгел (ырғыҙ). 3. (урта) Шытырлау — *трещать.* Шүкеш белән уйа һуҡкан, һөйәкләре сайрап тора. 4. (дим) Сатнау — *трескаться.* 5. (эйек-һаҡмар) Селпәрәмә килеү — *разбиться вдребезги.* Ҡулында тотоп торған һауыт ҡапыл төштө лә сайраны

**САЙРАП: САЙРАП КИБЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бик ныҡ кибеү — *пересохнуть.* Ҡойашта сайрап кипкән ҡарағай таҡталар шау күмергә әйләнде

**САЙСҠАН КИШЕРЕ** (ҡариҙел) *и.* ҡуянтубыҡ — *дикая морковь*

**САЙЫ** (гәйнә) *б.* һайын — *чем больше, по мере того, как и т. д.* Байыҡкан сайы байығалар. Хәҙер ауыл сайы кылуп

**САЙЫНДЫ** (ҡыҙыл, туҡ-соран) *и.* 1. Йыуынды һыу — *помои.* 2. Им-том иткәндә ишек тотҡаһын сайҡап алған һыу — *знахарова вода.* Күҙ тейгәндә баланы сайынды менән ҡойондоралар (ҡыҙыл)

**САЙЫЛСЫ** (һаҡмар) *и.* хәйерсе — *нищий.* Ул сайылсы инде

**САЙЫНЫУ** (һаҡмар, туҡ-соран) *ҡ.* йыуыныу — *искупаться.* Мунсаға инеп сайынып сыҡты (туҡ-соран)

**САЙЫР I** (ҡыҙыл) *и.* 1. Сыра итеп яндырылған ҡарағай ағасы — *сосновая лучина.* 2. Ҡарағай ҡайыры — *сосновая кора*

**САЙЫР II** (ҡыҙыл, әй) *и.* 1. Һарыҡ йөнөндәге һағыҙ — *сера в шерсти овцы.* 2. Кер, бысраҡ — *грязь.* 3. Сайыр һымаҡ аҡ төҫтәге балауыҙ — *особый сорт перги белого цвета*

**САЙЫР: САЙЫР ҺЫҘЫУ** (урта) *ҡ.* сайыр аҡһын өсөн ҡарағайҙың ҡабығын һыҙырыу — *скобление коры сосны для получения живицы*

**САЙЫУ** (туҡ-соран, урта, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Сайҡау — *полоскать.* Ырғыҙҙа кер сайа ахыры инәйең, бар, тиҙерәк ҡайтһын (ырғыҙ). 2. Йыуыу — *мыть.* Ҡул сайыу. Шәшке сайыу

**САЙЫХ** (эйек) *с.* үҙ һүҙле — *своевольный.* Торғаны бер сайых кеше икәнһең

**САКУШКА** (дим) *и.* сикәсөй — *чекушка (на оси телеги).* Тәгәрмәс ҫурылмаҫын өсөн күсәргә сакушка ҡуйалар

**САҠ I** (туҡ-соран) *и.* йәкәл — *бабки.* Малайлар көнө буйы саҡ бәрешәләр ине. Саҡа (салйоғот, мейәс)

**САҠ II** (ҡариҙел, ырғыҙ) *р.* әле генә — *только что*

**САҠ III** (урта) *р.* уңай (*услашеп әйтелә*) — *так и надо.* Бер уйлағанта миңә саҡ

**САҠ IV** (ҡариҙел, туҡ-соран) *и.* 1. Йәтмә — *сачок (рыболовная снасть).* 2. (ҡариҙел, урта урал) Ҡош ауы — *сеть для ловли птиц*

**САҠ: САҒЫНА ЙЕТЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* балиғ булыу — *стать совершеннолетним*

**САҠА: САҠА УТЫРТЫУ** (мейәс, салйоғот) *ҡ.* алдау — *обманывать*

**САҠАҠ** (ырғыҙ) *и.* соңҡа — *бугор атланта.* Башындағы таҡыйаһы саҡағына шыуған, бите йыуылмаған

**САҠАЛТЫРАҠ, САҠАЛТАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һағалдырыҡ — *тесьма, лента у женского платка (ҡушъяулыҡ), которая служит завязкой.* Сағылдырыҡ (гәйнә), сағалдырыҡ (ҡариҙел)

**САҠАМА** (мейәс) *и.* сәкән — *клюшка.* Саҡаманан күҙе сыҡкан кешеләр булды

**САҠАУ** (арғаяш, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* һаҡау — *косноязычный*

**САҠАУЛАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* билдәле бер ваҡыттан һуң кәкүк тауышының үҙгәреүе — *заиканье кукушки при куковании*

**САҠБАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* һаңғырау — *глухой.* Саҡбай бабай

**САҠИНА** (һаҡмар) *и.* бысаҡ, бәке һабына кейҙерелгән тимер йәки йеҙ дүңгәләк — *жестяное или латунное кольцо на рукоятке ножа*

**САҠҠЫС** (әй) *и.* ҡаяу — *жало (пчел)*

**САҠЛАУ** (ҡариҙел) *и.* ҡайынлыҡ — *березовая роща.* Оло саҡлау. Кесе саҡлау

**САҠЛЫҠ** (урта) *б.* саҡлы, тиклем — *до кого, чего.* Аларға саҡлыҡ барҙыҡ

**СИНӘҮ** (мейәс) *ҡ.* сигәләү — *заклепывать.* Салғың һынһа, синәйһең дә сабаһың

**СИНӘҮ: СИНӘП БӘЙҘӘҮ** (әй) *ҡ.* сейәлдереп бәйләү — *завязывать спутывая*

**СИНУФКА** (урта) *и.* септә — *рогожа*

**СИҢ** (мейәс) *и.* 1. Сик — *граница, край.* Сиң йаҫап алаһың да, ике командаға бүленеп уйнайһың. 2. (һаҡмар) *б.* эргәһендә, янында — *около.* Ул да Уфа сиңендә йәшәй

**СИҢҒА** (дим) *и.* зәңге — *цинга.* Сыңға (урта урал, һаҡмар). Синке (урта)

**СИҢЕРЕКТӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сырылдау — *стрекотать.* Сиңерткә сиңеректәй башлаһа, көн йылына

**СИҢЕРКӘ** (мейәс) *и.* сиңерткә — *кузнечик*

сипатай 'баланы ярату, сөйөү күзе'



**СИҢКАУАЙ** (арғаяш, салйоғот, эй) *с.* цинкланған — *оцинкованный.* Сиңкауай биҙерәнә һау (эй)

**СИП** (ҡариҙел, салйоғот, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* сынйыр — *цепь*

**СИПАЙ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* бәләкәй күҙле кеше — *человек с маленькими глазами*

**СИПАЙТЫУ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* күҙ йомғалау — *моргать.* Күҙләрен сипайтып ҡына утырған була (туҡ-соран)

**СИПАРАТ: СИПАРАТ АЙАҒЫ, СИПАРАТ АШТАУЫ, СИПАРАТ ҠАҘАНЫ** (арғаяш, мейәс) *и.* сипарат табағы — *чашка сепаратора.* Сипарат биҙерәһе (эй)

**СИПАРАТ: СИПАРАТ БЕЛӘҘЕГЕ** (көнсығыш диалект) *и.* сипарат тәрилкәһе — *тарелка сепаратора.* Сипарат сығанағы (арғаяш), сипарат талағы, сипарат үпкәһе (арғаяш, мейәс) сипарат һемәктәре өҫтөндәге ҡалҡыуыс *(күпсек) — поплавок сепаратора*

**СИПАРАТ: СИПАРАТ АЙЫРТЫУ** (эй) *ҡ.* һөт айыртыу — *сепарирование молока*

**СИПЕЙҮРҘӘК** (урта) *и.* һуна өйрәк — *кряква*

**СИПКӘН** (арғаяш, ҡариҙел, салйоғот) *и.* сәкмән — *чекмень*

**СИПКӘҮ, СЕПӘКТӘНЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* күҙ бысыйланыу — *покраснение глаз от слезотечения*

**СИПЛЕ ТУРҒАЙ** (туҡ-соран) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**СИПРАНДАУ** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *ҡ.* сыпрандау — *не стоять спокойно на месте (о человеке).* Сипрандап ҡараны ла Әрәхимә, тегеһе күҙ һаманы (мейәс)

**СИПСЕ, СИПСЫ** (дим, һаҡмар) *и.* 1. Ҡыпһыуыр — *клещи.* 2. (ҡыҙыл, һаҡмар) Ҡыҫҡыс — *щипцы (для углей).* Ҡыҙым, сипсыны әпир әле, самауырға ҡуҙ һалайым (ҡыҙыл)

**СИПСЕЛЕҮ** (эй) *ҡ.* тарҡалыу — *распадаться.* Аларҙың ғүмер буйы бер йерҙә тороп донйаһы сипселмәгән

**СИПТЫРЫУ, СЫПТЫРЫУ** (туҡ-соран, урта урал, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* һыптырыу — *подхлестнуть.* Аҙыраҡ сыбыҡ белән сыптырып ал (туҡ-соран)

**СИПТӘҮ** (мейәс, салйоғот) *ҡ.* сылбырлау — *привязать на цепь.* Ҡурҡма, эт сиптәлгән (мейәс)

**СИПЫЛДАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* туманаҡ — *володушка.* Бесән сапҡан мәлдә сипылдаҡты балалар сипылдаталар

**СИПӘЛӘҮ** (урта) *ҡ.* һибәләү — *моросить.* Сипәләп кенә йамҡыр йауа

**СИР I** (дим, эйек) *и.* 1. Һыҙлауыҡ — *чирей.* 2. (дим) Ауырыу кеше — *больной.* Өй тулы сир ҡараҙым бала саҡта. 3. (урта) Яра — *рана.* Айағынтағы сире һаман бөтәшмәй

**СИР II** (дим, эйек) *и.* сей ҡалдырылған урын *(ер) — огрех*

**СИР: СИРГӘ ТЕЙЕҮ** (урта) *ҡ.* бүгеү — *приедаться, переесть.* Ит майы сиргә тейгән, тип бөтөнләй ашаманы

**СИРАҠ** (ҡариҙел) *и.* 1. Аяҡ — *нога.* Арҡыры сираҡ. 2. (дим) Шайтанашыҡ — *щиколотка*

**СИРАҠАН** (мейәс) *с.* еңмеш — *капризный, упрямый*

**СИРАТ АУЫРЫУЫ** (дим) *и.* ҡыҙылса — *корь*

**СИРГӨПӘШ** (ырғыҙ) *и. рахит.* Балаһы сиргөпәш булған

**СИРГҮП** (ырғыҙ) *с.* сирләүсән — *болезненный.* Әллә нишәп сиргүп малай булды ла ғуйҙы

**СИРҒОУ** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Сөйөү — *метать, кидать.* Күккә сирғорҙар ине әүәл йеңеүсене. 2. Ырғыу — *прыгать.* Афтамашина түңгәккә менгәндә сирғоп-сирғоп китәбеҙ. Сирғыу (туҡ-соран, урта)

**СИРҘӘШКӘ** (мейәс, эй) *с.* сирләүсән — *болезненный.* Сирнәшкә (урта)

**СИРҘЫҠ** (урта) *и.* бөрмә — *оборка.* Сирҙыҡлап тегә торғайныҡ әйберҙе

**СИРЕ** (арғаяш) *б.* тикле — *до.* Ат ман өйгә сире әпкилде

**СИРЕГЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* уңалыу — *зажить (о ране)*

**СИРЕК I** (көнсығыш диалект, урта) *и.* ҡарыш — *пядь*

**СИРЕК II** (көнсығыш диалект, урта) *и.* өс литр һыйышлы банка, шешә — *трехлитровая банка, бутыль*

**СИРЕК III** (ҡыҙыл) *и.* ҡаҙаҡтың 1/4 өлөшө — *1/4 часть фунта*

**СИРЕКЛӘҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* түшкәне дүрт өлөшкә бүлеү — *разделка туши на 1/4 часть.* Итте уаҡлап торманыҡ, сиреклӛп һаттыҡ та ҡайттыҡ. Сиректәү (салйоғот, эй)

**СИРЕЛМӘК** (ҡыҙыл) *и.* өйрәлмәк — *водоворот.* Сирелмәктән сығалмаған

**СИРЕҮ I** (урта) *ҡ.* бөрөү — *делать сборки.* Сирыу (мейәс). Күлмәк сирыу

**СИРЕҮ II** (ҡариҙел) *ҡ.* баҫыу — *успокоить.* Ҡайғымны сирә

**СИРЕҮ III** (эй) *ҡ.* тиреү — *обирать.* Бер биҙерә муйыл сиреп апҡайттым. Сирыу (урта)

**СИРЕҮ, СИРУ** (ырғыҙ) *ҡ.* атыу — *стрелять.* Һауаға берәй зат ырғыта ла сирә

**СИРЕҮСЕ, СИРУСЫ** (ырғыҙ) *и.* атыусы — *стрелок.* Сиреүсе һауаға ҡалпаҡ ырғыта ла шуны тишкәнсе ата

**СИРКЕШ** (мейәс, һаҡмар) *и.* сирткес — *курок (у ружья)*

**СИРКӘ** (һаҡмар) *и.* кәзә тәкәһе — *козел*

**СИРКӘТӘҮ** (эйек-һаҡмар) *с.* сирле — *болезненный.* Тайва әвейҙең ире йыуаш, сиркәтәү генә геше булды

**СИРЛЕ-СОРЛО** (дим) *с.* сирле — *болезненный.* Ағай ҙа сирле-сорло ғына

**СИРЛЕ СУҠЫШ** (эй) *с.* ауырыу,ябыҡ — *больной, хилый.* Сирле шуҡыш (урта)

**СИРЛӘШКӘ, СИРНӘШКӘ** (дим, урта, ырғыҙ) *с.* сирле — *болезненный.* Беребеҙ ҡарттың үҙен, икенсебеҙ аны йөрөткән сирләшкә үҫмерҙе йетәкләп өйгә кире индек (ырғыҙ)

**СИРМЕШ, ШИРМЕШ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* милләте билдәһеҙ кеше — *неизвестной нации человек.* Ҡыҙлары Ташкин йағына китеп әллә ниндәй сирмешкә кейәүгә сыҡҡан (туҡ-соран)

**СИРМЕШ ТҮБӘТӘЙЕ** (ҡариҙел) и. *таҙғарын — сычуг*

**СИРПАҠ ҺҮМЕС** (эй) *и.* сүмес — *ковш*

**СИРПЕП МЕНЕҮ** (урта) *ҡ.* бау буйлап менеү — *подняться по веревке.* Ағас башына сирпеп менәләр бал алмаға

**СИРПӘК I** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* бәләкәй биҙрә — *ведерко*

**СИРПӘК II** (туҡ-соран) *и.* сүмес ау — *сачок.* Йаҙ гөнө сирпәк беләк балыҡ тота торғайныҡ

**СИР-СИНӘТ** (дим) *и.* сир-фәлән — *всякая хворь.* Үҙенә сир-синәт тейергә әҙер генә тора

**СИРСЫҠ I** (арғаяш, туҡ-соран, урта) *и.* сыйыр-сыҡ — *скворец*

**СИРСЫҠ II** (урта) *и.* һарына бүлексәләре — *дольки саранки.* Әпкилеп тороп сирсығын айырып, йыуып тороп бешерәһең һарына бутҡаһын

**СИРСЫҠ ҺЫУЫҒЫ** (урта) *и.* май айында сыйырсыҡтар бала осорған мәлдәге һыуыҡлыҡ — *холода в мае, в период вылета птенцов скворцов*

**СИРТА** (эйек-һаҡмар) *и.* бура бурағанда бүрәнә араһын сыйа торған ҡорамал — *рогатина (инструмент при закладывании венцов сруба).* Сиртуш (ҡариҙел)

**СИРТЕҮ: ҠОМБАҒЫШ СИРТЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* көнбағыш ярыу — *лущить семечки.* Эш йуҡтан ҡомбағыш сиртеп утырам

**СИРТЕҮ: ҪҮҪ СИРТЕҮ** (дим) *ҡ.* сүс иләү — *прясть кудель.* Беҙ барып ингәндә ҫүҫ сиртеп утыра ине

**СИРТЕҮ I** (дим) *ҡ.* моронлау — *вылупиться (о птенцах)*

**СИРТЕҮ II** (дим) *ҡ.* кәкерсәкләп киҫеү — *резать зигзагообразно.* Ҡайсы беләк сиртәм ситен

**СИРТКЕ, СИРТКЕШ** (урта) *и.* ҡапҡан дуғаларын тотоп тороусы ырғаҡ — *спусковой крючок капкана.* Сирткес (эй)

**СИРТКЕС I** (дим, урта) *и.* ҡалҡыуыс — *поплавок*

**СИРТКЕС II** (урта) *и.* һиртмә — *журавль (у колодца)*

**СИРТМӘ I** (дим) *и.* һиртмә — *журавль (у колодца).* Сиртмәле ҡойо

**СИРТМӘ II** (дим) *и.* төйгәс — *толкуша*

**СИРТМӘ ЙОҘАҠ** (дим) *и.* үҙе бикләнә торған аҫмалы йоҙаҡ — *висячий замок-защелка*

**СИРТМӘКЛӘШЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* һүҙ көрәштереү — *спорить.* Сиртмәкләшеп торҙо ла ҡалдылар теге икәү

**СИРТТАҠ** (арғаяш) *и.* сыртлаҡ — *кнопка (для одежды)*

**СИРХАУ** (арғаяш, салйоғот, урта) *с.* сирле — *болезненный.* Сирхуш (мейәс)

**СИРХАУАТ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот) *и.* ауырыу — *болезнь.* Әлдә ниндәй сирхауат ҡағылған үҙенә (мейәс)

**СИРШАЙЫУ** (дим) *ҡ.* сырышыу, бөрөшөү — *наморщиться.* Мин ней баш тип йатам сиршайып

**СИРЫҠ I** (һаҡмар, эй) *с.* сырышлы — *наморщенный.* Эй, сирыҡ танау, кил эле мында (һаҡмар)

**СИРЫҠ II** (һаҡмар) *с.* ҡайтарылған — *загнутый.* Сирыҡ йөҙлө балта. Сирыҡ йөҙлө салғы

**СИРЫУ** (мейәс, урта) *ҡ.* һырыу — *стегать (одеяло, пальто).* Мамыҡтан йурған сирҙым (урта)

**СИРИШ** (дим) *и.* дебет — *козий пух*

**СИРӘ** (дим) *и.* тирә — *окрестность.* Мынау сирәлә ыуыпсы күренмәй ине

**СИРӘМ** (арғаяш, дим, туҡ-соран, урта) *и.* сиҙәм — *целина*

**СИРӘМ ҠЫМЫҘЛЫҒЫ** (дим) *и.* ҡымыҙлыҡ — *кислица (степная)*

**СИСЕЛГӘН: СИСЕЛГӘН ИКМӘК** (салйоғот) *и.* ҡырҡыу икмәк — *перекисший хлеб*

**СИСКАЛ** (урта) *и.* һүҙ йөрөтөүсе, ғәйбәтсе — *сплетник*

**СИСКЕН** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* 1. Уңған, эшлекле — *трудолюбивый, деловой.* 2. (мейәс, урта) Таҙа, бөхтә — *чистоплотный.* Өләсәйем сискен булды (мейәс). 3. (мейәс) Етеҙ — *быстрый (о лошади).* Сискен ат

**СИСКӘ I** (дим, көнсығыш диалект, ҡариҙел, урта) *и.* сәскә — *цветок*

**СИСКӘ II** (ҡариҙел) *и.* баллы ысыҡ — *медвяная роса.* Игендә быйыл сискә һуҡты

**СИСКӘ: СИСКӘ ҠАҘЫ** (мейәс) *и.* йоҡа ҡаҙы — *тонкое конское сало*

**СИСКӘ: СИСКӘ АТЫУ** (арғаяш, ҡариҙел, урта) *ҡ.* сәс ағарыу — *поседеть.* Минең тә сәсләрем сискә атҡан инте хәҙер (урта)

**СИСЛА** (дим, туҡ-соран, урта) *и.* ай — *месяц.* Сисла башында ҡайтып төштө улым (дим)

**СИСЛӘТЕҮ** (урта) *ҡ.* ситләтеү — *относиться с пренебрежением, обижать.* Кеше ҡулынта үҫтем, сисләткән уахытлары ла булғантыр

**СИССЫ** (урта) *и.* ситса — *ситец*

**СИСӘК I** (арғаяш, ҡариҙел, салйоғот) *и.* сәсәк — *оспа.* Һыу сисәге

**СИСӘК II** (арғаяш, салйоғот) *и.* сәскә — *цветок.* Сисәк балы

**СИСӘК ИНӘСЕ** (ҡариҙел) *и.* сәсәк анаһы — *осложнение от оспы.* Сәсәк ойаһы (урта), сисәк анаһы (салйоғот)

**СИСӘН** (арғаяш, мейәс) *и.* сәсән — *импровизатор, сказитель*

**СИТ I** (урта) *и.* тирәс — *обечайка*

**СИТ II** (урта) *я. һ.* эргә — *у, около, возле.* Пасирҙың ситенә утырмаға киткәннәр

**СИТАҠА** (мейәс) *с.* насар — *плохой, дурной.* Был бисә торғаны беләк ситаҡа инде

**СИТ БАРМАҠ** (ҡариҙел, мейәс, салйоғот) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец.* Ситке бармаҡ (арғаяш, мейәс, салйоғот)

**СИТЕГЭРЗИНКӘ** (дим) *и.* калошлы ситек — *ичиги с калошами*

**СИТЕК ҠАТА** (ҡыҙыл) *и.* ҡатын-ҡыҙ ситеге — *женские ичиги*

**СИТЕКӘЙ, СИТӘКӘЙ, СЕТӘКӘЙ** (урта) *и.* сәтәкәй — *мизинец.* Сентәкәй (эйек-һаҡмар)

**СИТЕЛЕҮ** (урта) *ҡ.* 1. Ситкә китеү, ситкә эйәләшеү — *уехать на чужбину, привыкать на чужбине.* 2. (мейәс) Бирелеп эшләү — *работать увлеченно.* Мин артыҡ сителеп эштәмәнем

**СИТЕЛТЕҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* ситләтеү — *относиться с пренебрежением, обижать.* Һәҙер һөкөмәт сителтмәй бирәүҙе лә, әүәле ине ул... (ҡыҙыл)

**СИТЕМ ГҮРЕҮ** (эйек) *ҡ.* ситкә ҡағыу, һыйҙырмау — *отвергать.* Сит итеү (урта), ситкә тибеү (ҡариҙел), ситкә тибәреү (урта). Үҙенә оҡшамаған уҡытыусыларҙы ситкә тибәргән

**СИТЕН** (дим, урта) *р.* ҡыйын — *трудно, затруднительно.* Малның кимшереген ташлайбыҙ, ашарға ситен (дим)

**СИТКА** (арғаяш, мейәс) *и.* 1. Ҡорт анаһы яба торған ситлек — *сетка для пчелиной матки.* 2. Битлек — *сетка (для предохранения лица от укуса пчел).* 3. Бал һурҙырғыс иләге — *сетка медогонки*

**СИТКӨЙ** (ҡыҙыл) *и.* алғы өй — *передняя изба*

**СИТЛЕК** (урта, эйек) *и.* инә ҡорт күҙәнәге — *маточник*

**СИТМИЛЛИК** (урта) *и.* ун аҙым ер — *десять шагов земли*

**СИТ-МЫТ** (урта) *и.* сит яҡ — *чужбина.* Ситка-мытка йөрөмәне, тоҡомо йуғ ине. Сит-мит (туҡ-соран). Сит-миттә ғөмөрө уҙҙы аның, үлгәс кенә ауылына алып ҡайттылар

**СИТНӘТЕҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ситләтеү — *относиться с пренебрежением, обижать*

**СИТӘ** (һаҡмар) *и.* һитә — *перга*

**СИТӘЙЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* күҙҙең йәки яраның ҡыҙарып, һыуланып тороуы — *краснеть (о глазах и ране)*

**СИТӘН** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* 1. Ҡаҙ ояһы — *кошелка.* Ситәнойа (эйек). 2. (дим) Ҡорот киптереү өсөн талдан үрелгән һауыт — *корзина для сушки курута.* 3. (дим) Текмә — *частокол.* Сейтән (ҡариҙел)

**СИТӘУКӘ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* 1. Ҡаҙ ояһы — *кошелка.* 2. Ҡорот киптереү өсөн талдан үрелгән һауыт — *корзина для сушки курута*

**СИФАТТЫ** (ҡыҙыл, эй) *с.* төҫлө, рәүешле — *подобный.* Өрәк сифатты ғош та бар йылға буйында (эй)

**СИХУТ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Күкһәү — *чахотка.* 2. Күкһәү кеше — *чахоточный человек*

**СИХӘТ** (ҡариҙел, урта, һаҡмар) *и.* дауа, файҙа — *целебность.* Һаҡмар һыуҡайларын эстениһәң, тәнгә сихәтләре күп була (һаҡмар). Сихат (мейәс, эй). Мәтрүштең сихаты ҙур (мейәс)

**СИХӘТЛЕК** (ҡариҙел) *и.* таҙалыҡ — *здоровье.* Сихәтлек ҡаҡшап тора әле

**СИХӘТЛӘНЕҮ** (дим, туҡ-соран) *ҡ.* аяҡҡа баҫыу, шәбәйеү — *выздороветь.* Газ беләнн ағыуланыуҙан һаман булһа сихәтләнеп бөтмәйем әле (туҡ-соран)

**СИХӘТЛӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* дауалау — *лечить.* Әллә сихәтләп йебәрәһеңме, әбей (һаҡмар)

**СОБАН** (дим) *и.* шеш — *нарыв*

**СОҒА** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Юғары сифатлы буҫтау — *сукно высшего качества.* Ҡыҙыл соға, йәшел соға. 2. (дим, эйек) Буҫтау филтә — *суконный фитиль*

**СОҘҒАҠ, СОҘҒО, СОЗҒО** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* 1. Һоҫҡо — *совок.* Һоҙғаҡ (эй). 2. Һоҫа — *челнок*

**СОЙОРҒОУ** (һаҡмар) *ҡ.* сөйөү — *метать, кидать.* Беҙ ыласын сойорғоттоҡ

**СОҠАЛСА, СОҠАЛСАЙ** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* соҡалта — *боковая выемка печи.* Соҡалаҡ (мейәс, туҡ-соран). Соҡалаҡҡа ҡуй ҡомғанды (туҡ-соран)

**СОҠАНАҠ** (мейәс) *и.* уйҙыҡ — *выем.* Соҡанаҡ күләүекләнеп ята

**СОҠОНМА** (ҡыҙыл) *с.* ығыш — *копотливый, медлительный (о человеке)*

**СОҠОР, СОҠЫР, СОҠОРСА** (дим, ҡариҙел) *и.* сынайаҡ өҫтө — *чашка (чайная)*

**СОҠОРАҠ** (мейәс) *и.* суҡыраҡ — *комки засохшей грязи, земли*

**СОҠОРЛАШЫУ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* сөкөрҙәшеү — *ворковать.* Баллар беләнн соҡорлашып утырҙыҡ (туҡ-соран)

**СОҠОРСА** (ҡариҙел) *и.* соҡорло табала бешерелгән күмәс — *булка, испеченная на сковороде с углублениями*

**СОҠОРСАЛМА** (дим) *и.* ваҡ ҡына итеп бармаҡ менән соҡорайтып өҙөлгән һалма — *вид лапши.* Соҡорһалма (салйоғот, эй)

**СОҠОР ҺӨЙӘКТЕ** (ҡыҙыл) *с.* эре һөйәкле ябыҡ, ләкин тос итле *(мал тураһында)* — *крупнокостный (о животных).* Соҡор һөйәкте мал ҡарамаҡҡа йабыҡ булһа ла, һимеҙ була

**СОҠОТ** (ҡыҙыл) *и.* бетсә — *клещ (чесоточный)*

**СОҠОШОУ** (дим) *ҡ.* талашыу — *ссориться.* Ғөмөр буйы соҡошоп йөрөп бумай бит инде

**СОҠСОҠ, ҪОҠҪОҠ** (арғаяш) *и.* ҡашыҡморон — *широконоска*

**СОЛ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* таҫыл — *сноровка.* Солоң йуҡ, сол беләнн эшләмәгәнгә шулай

**СОЛАНАЛ, СОЛАНТУПСА** (дим) *и.* күтәрмә — *крыльцо.* Солантупҫаны ҫөртөп ал, ҡыҙым

**СОЛАН ӨЙ** (салйоғот) *и.* алғы өй — *передняя*

**СОЛАНСА** (урта, эй) *и.* 1. Соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* 2. (эйек, эй) Төкәтмә — *пристрой.* 3. (дим) Ҡара-ҡаршы бүлмә араһындағы коридор — *коридор между противоположными комнатами*

**СОЛО** (ҡариҙел) *и.* селбәрә — *малек*

**СОЛОҠ** (арғаяш) *и.* 1. Умарта — *улей.* 2. (арғаяш, мейәс) Бал ҡорто — *пчела*

**СОЛОҠ МИСКӘҺЕ** (арғаяш) *и.* күҙәнәк — *ячейка (сотовая)*

**СОЛОҠ МӨГӘРӘБЕ** (арғаяш) *и.* умарта баҙы — *омшаник*

**СОЛОҠ ОЙАҺЫ** (мейәс) *и.* умарта — *улей*

**СОМАН** (урта) *и.* шыуман — *приспособление для катания с гор.* Ҡорлаш, һин мине һемәйттең, тишек соманҡа утырттың

**СОМҒОЛ, СУМҒЫЛ** (эй) *и.* соңғол — *омут*

**СОМҒОР** (арғаяш) *и.* ҡағараҡ — *чернозобая гагара*

**СОМҠА I** (ҡыҙыл) *с.* сонтоҡ — *куцый*

**СОМҠА II** (ҡыҙыл) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**СОМТОР, СОНТОР** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, ырғыҙ, эйек-һаҡмар, эй) *с.* сонтоҡ — *куцый.* Хәҙер ҡыҙлар сонтор күлмәк кейәләр, беҙҙең геүек сепрәккә уранып тирләп-бешеп йөрөмәйләр (туҡ-соран)

**СОНА ҮРҘӘК** (дим) *и.* һуна өйрәк — *кряква*

**СОНТАЙЫУ** (урта) *ҡ.* ҡыҫҡарыу — *укоротиться.* Күлмәге сонтайып ҡалған

**СОНТОҠ I** (ҡариҙел) *и.* һандыҡ — *сундук.* Сондоҡ (дим). Сонтоҡҡа тутыр әйберләреңне

**СОНТОҠ II** (салйоғот) *с.* таҡыр — *бритый (о голове).* Сонтоҡ башын йалтыратыб утыра

**СОНТОР** (мейәс, туҡ-соран, эйек-һаҡмар, эй) *с.* сонтоҡ — *куцый.* **Фивраль айын боронғораҡ кешеләр «сонтор сисла» тей торғайнылар (ырғыҙ)

**СОНТОРАЙЫУ: СОМТОРАЙЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* 1. Ҡыҫҡарыу — *укоро-*

*титься.* Йәй сыҡҡансы күлмәге сомторайған да гиткән (туҡ-соран). 2. Кәмеү, аҙайыу — *уменьшаться.* Ашау йағы сонторайҙы хәҙер (эй)

**СОНҒОР, СОҢҠОР** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* соҡор — *яма, ров.* Төндә соңҡорға барып ауҙыҡ, арба бис ҡыйралды (һаҡмар)

**СОНҒОРЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* тәрән йылғаның ағыу тауышы — *журчание глубокой реки.* Сәғәтәй соңғорлап ҡына аға

**СОҢҠАП: СОҢҠАП СУМЫУ** (эйек) *ҡ.* баш менән ырғыу — *прыгать вниз головой (в воду).* Малайларҙың бейек йарҙан соңҡап сумғандары күп булды

**СОР I** (урта) *м. һ.* ҡуй — *чур.* Сор, улай йаҙмаҫҡа кәрәг ине

**СОР II** (дим) *и.* ваҡыт, осор — *период.* Мынау сорно әпәй бөттө

**СОРА** (һаҡмар) *и.* эсәк уралыу — *заворот кишок*

**СОРАҒАЙ** (мейәс, эй) *и.* сурағай — *щука*

**СОРАКА, СОРАШКА** (мейәс) *и.* бәләкәй суртан — *щуренок*

**СОРҒАУ** (арғаяш, ҡыҙыл) *ҡ.* сөйөү — *метать, кидать*

**СОРҒАЛТМА** (ҡыҙыл) *и.* һапҡан — *праща*

**СОРКА** (ырғыҙ) *и.* һыуыр — *сурок*

**СОРҠОЛДАЙ** (мейәс, һаҡмар) *и.* күмәгәй — *кадык*

**СОРЛАТЫУ** (урта) *ҡ.* ныҡ асыҡтырыу — *морить голодом*

**СОРЛАУ** (арғаяш) *ҡ.* 1. Көртләү — *квохтать.* 2. (ырғыҙ) Гөрөлдәү — *ворковать (при игре в прятки).* Балалар сорлайҙар көргөлдәк уйнағанда

**СОРЛАУЫҠ** (һаҡмар) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**СОРНАЛЫУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, эй) *ҡ.* ураныу, төрөнөү — *укутаться.* Нейә сорналаһың, әллә ауырыйһыңмы? (эй)

**СОРО ҠОРТ** (ҡариҙел) *и.* һоро ҡорт — *трутень*

**СОРОТАЛАҠ** (урта) *и.* эсәк уралыу — *заворот кишок*

**СОРСОҘ** (дим) *с.* һарауһыҙ — *бесстыдный*

**СОРТАН** (арғаяш) *и.* суртан — *большая щука*

**СОСАР** (ҡариҙел) *и.* һуҫар — *куница*

**СОСАСЫБЫҠ** (ҡариҙел) *и.* шүре энәһе — *ось челнока*

**СОСЛА I** (төньяк-көнбайыш, урта урал) *и.* арыш кеүәҫе — *квас из ржи.* Хәҙер сосланы эшләй белгән кешеләр аҙ (төньяк-көнбайыш)

**СОСЛА II** (ҡариҙел, мейәс) *и.* төпкә ете, өҫтөнә өс көлтә һалынып өйөлгән һоҫлан — *вид суслона*

**СОСЛА III** (ҡариҙел) *и.* һоҫа — *челнок*

**СОСОЛОУ, СОСМОРАУ I** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *ҡ.* һалынып төшөп тороу — *свисать.* Ағайым бигерәк йабыҡҡан, кейемнәре сосморап тора (туҡ-соран). Сосорау (ҡыҙыл)

**СОСОЛОУ, СОСМОРАУ II** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *ҡ.* мыштырҙау — *копошиться.* Нәмә сосолаһың, сәғәтең йеттө бит эшкә барырға! (туҡ-соран)

**СОСОЛТАУ** (эйек) *ҡ.* күбәйтеү — *увеличить.* Сосолтап бала һала ҡорт

**СОСТАН** (төньяк-көнбайыш) *и.* төпкә ете, өҫтөнә өс көлтә һалынып өйөлгән һоҫлан — *вид суслона*

**СОХАРЫЙ** (минзәлә, урта урал) *и.* шөкәрә — *сухарь.* Сөхәрей (туҡ-соран). Мейес-мейес сөхәрей һала инек баллар уҡырға гитер буһа (туҡ-соран)

**СӨБӨЛГӘН** (гәйнә) *и.* селәүсен — *дождевой червь*

**СӨБӨР БАЛЫҠ** (мейәс) *и.* селбәрә — *малек*

**СӨБӨРҘӘК** (мейәс) *и.* шаршы — *перекат (на реке).* Сөбөрләк (урта)

**СӨБӨРЛӘК** (һаҡмар) *и.* инеш — *ручей*

**СӨБӘ** (урта) *и.* һебә — *кусок вареной баранины, который вручался победителям башкирской национальной борьбы*

**СӨБӘБӘ** (дим, һаҡмар) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец*

**СӨБӨК** (мейәс) *и.* сөрөк — *гнилушка*

**СӨГӨЛЙӨР** (ҡыҙыл урта) *и.* сөгөлдөр — *свекла.* Сөңөлтөр (урта), сөгендер (ҡариҙел), сөгөндөр (дим, ҡариҙел)

**СӨГӨН** (ҡыҙыл, урта) *и.* суйын — *чугун.* Сүген (гәйнә, һаҡмар)

**СӨГӨН ЙУЛ** (дим, ҡыҙыл, урта) *и.* тимер юл — *железная дорога*

**СӨГӘ** (дим, ҡариҙел, урта) *и.* 1. Ташбаш — *пескарь.* 2. Уҡбалыҡ — *стерлядь*

**СӨГӨҘ** (эйек) *и.* уҡбалыҡ — *стерлядь*

**СӨГӘЛЗИН, СӨГӨЛЗИН** (гәйнә, ҡариҙел, урта урал) *и.* селәүсен — *дождевой червь*

**СӨГӘЛЙӘН, СӨГӘЛЖӘН, СӨГӘЛСӘН** (гәйнә, ҡариҙел, урта урал) *и.* селәүсен — *дождевой червь.* Балыҡ ҡаптырырға сөгәлйән алабыҙ (урта урал)

**СӨҘГӘК** (арғаяш) *и.* һөҙгөс — *шумовка*

**СӨҘМӘ I** (ҡариҙел) *и.* һөҙмә — *отжатое кислое молоко.* Сөзмә (гәйнә)

**СӨҪМӘ II** (минзәлә) *и.* һөҙгөс — *шумовка*

**СӨҘӨК** (дим) *и.* һөҙлөк — *навар*

**СӨҘӨК МАЙЫ** (дим) *и.* һөҙлөк — *навар*

**СӨҘӨН** (ырғыҙ) *и.* 1. Буй-һын — *телосложение, осанка.* Атайым ҡарт бик матур сөҙөннө кеше ине. 2. Йөҙ — *облик.* Нишләп сөҙөнөң ҡороп йөрөй, ҡурҡтыңмы, ауырыйһыңмы?

**СӨЙ I** (ҡариҙел, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, эй) *и.* 1. Эре ағас ҡаҙау — *большой деревянный гвоздь.* 2. (урта, эйек-һаҡмар) Тағара — *полочки, прибиваемые к внутренним стенкам колодочных ульев*

**СӨЙ II** (дим) *и.* сей — *огрех (на пашне)*

**СӨЙ III** (дим) *с.* сей — *сырой, водянистый.* Тәне сөй тимерәү

**СӨЙ: СӨЙ ҒАТЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* маҡтау — *хвалить.* Шул тиктегем ҙурайғанһың тип, сөй ғатып та йебәрә аныға (ҡыҙыл)

**СӨЙҘӨ** (арғаяш) *и.* ҡалаҡ һөйәге — *лопатка*

**СӨЙҘӨЛКӘ, СӨЙҘӨРКӘ** (арғаяш) *и.* ыңғырсаҡ — *седелка*

**СӨЙҘӨНӨҮ** (дим) *ҡ.* һөйөнөү — *радоваться*

**СӨЙКӘ** (мейәс, урта) *и.* 1. Сөйҙә — *бугорок атланта.* Атынан аша сөйкәһе белән барып төшкән (урта). 2. (урта) Ҡалаҡ һөйәге — *лопатка*

**СӨЙЛӨК** (дим, урта) *и.* тамаҡбау — *супонь*

**СӨЙЛӨКБАУ** (дим, урта) *и.* тамаҡбау — *супонь*

**СӨЙНӘКСЕЗ** (урта урал) *с.* һөйкөмһөҙ — *несимпатичный, немилый.* Сөйнәксез кеше

**СӨЙНӘҮ** (эй) *ҡ.* сейнәү — *заклепать.* Салғыны сөйнәтергә бараһым бар

**СӨЙӨЛДӨРӨК** (дим, ҡариҙел, ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* 1. Тамаҡбау — *супонь.* 2. Бөлдөргә — *темляк*

**СӨЙӨНСӨ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* һөйөнсө — *это слово произносят, когда сообщают кому-либо радостное сообщение, за которое обычно получают вознаграждение*

**СӨЙӨР-СИТНАУ** (урта) *и.* эске сир — *внутренняя болезнь.* Сөйөрөм-ситнауым йуҡ, йөрәк тә һау, айаҡ ҡына һыҙлай

**СӨЙӨҮ I** (ырғыҙ) *ҡ.* һөйләү — *говорить.* Хикәйә сөйөргә шәп кеше ине ул Рәшиттең атаһы

**СӨЙӨҮ II** (дим, туҡ-соран, урта) *ҡ.* артҡа бәйләү — *завязать платок узелком (в затылочной части головы).* Элек киленнәр йаулыҡ сөймәгән, алға бәйләгән (дим)

**СӨЙРӨЛТМӘК** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* өйрөлтмәк — *водоворот.* Балалар, сөйрөлтмәккә эләгә күрмәгеҙ, һөйрәп алыр үҙегеҙҙе (һаҡмар)

**СӨЙСӘ** (дим) *с.* тигеҙ булмаған — *неровный (о поверхности).* Сөйсә йер

**СӨЙ ҺУРҒЫС** (арғаяш, урта, һаҡмар) *и.* ҡыпһыуыр — *клещи*

**СӨЙӘЛ** (дим) *и.* 1. Оро — *нарост.* 2. (мейәс) Тыңғауыҡ — *чернильный орешек*

**СӨЙӘМ** (дим) *и.* һөйәм — *пядь (старинная мера длины, равная расстоянию между большим и согнутым указательным пальцами руки)*

**СӨЙӘН** (һаҡмар) *и.* һөйән — *липовое дерево со снятой корой*

**СӨКӨЛ I** (һаҡмар) *и.* сәкүшкә — *четвертинка.* Бер сөкөл бир әле, һатыусы туған

**СӨКӨЛ II** (ҡыҙыл) *и.* соҡалта — *выемка в боку печи*

**СӨКӨР** (ҡариҙел) *и.* соҡор — *овраг*

**СӨКӨРТ, СӨКӨЛТ** (урта) *и.* урғылъян — *выбоина.* Сөкөрттө йул. Сүкерт (мейәс)

**СӨКӨШКӘ** (арғаяш) *и.* сикәсөй — *чекушка (на оси телеги)*

**СӨКСӨМӘН** (мейәс) *с.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**СӨКӘЛ, СӨКӨЛ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* йәкәл — *бабка*

**СӨКӘЛСӘЙ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* йәкәл — *бабка.* Сөкәлсәйҙе һуғып уйнаталар (һаҡмар)

**СӨКӘЛТӘ** (ҡыҙыл) *и.* соҡалта — *выемка в боку печи*

**СӨКӘЛТӘЙ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* йәкәл — *бабка*

**СӨКӘЛӘЙ** (һаҡмар) *и.* сәкән — *клюшка*

**СӨКӘНСӘЙ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* йәкәл — *бабка*

**СӨКӘТӘ** (урта) *и.* шырт балыҡ — *ерш*

**СӨЛГӨ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* һөлгө — *полотенце с вышивкой на концах*

**СӨЛГӨБАШ** (арғаяш, әй) *и.* сигелгән таҫтамал башы — *вышитые концы полотенца.* Сөлгөбашын сасаҡтап эштәнем (әй)

**СӨЛКӘР** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* сыбар — *пестрый (о масти лошади).* Сөлкәр ат

**СӨЛӨК** (урта) *и.* солоҡ — *борть*

**СӨЛТӨРҘӘК, СЫЛТЫРҘАҠ** (мейәс) *и.* шаршы — *быстрина*

**СӨЛТӨРӘҮ** (әй) *ҡ.* артыҡ кибеү — *пересохнуть.* Керем сөлтөрәп кипкән

**СӨЛӘЙМӘ** (урта) *и.* эт еләге — *белладонна*

**СӨЛӘН** (арғаяш, салйоғот, әй) *и.* селән — *цапля*

**СӨМ I** (һаҡмар) *р.* шым — *тихо.* Сөм генә барып утыра йөҙөн күрһәтмәҫкә

**СӨМ II** (әйек-һаҡмар) *ҡ.* төшөрөп, битте күрһәтмәй бөркәнеп — *накрывшись, укутавшись.* Сәскәле шалларҙы сөм йабынып алыр инек

**СӨМ III** (дим) *и.* соңғол — *омут*

**СӨМБӘЛӘ** (минзәлә) *и.* *сентябрь*

**СӨМ: СӨМ ҠОРҺАҠ** (ҡыҙыл) *и.* бирән — *обжора.* Ана, ашай торғас сөм ҡорһаҡтың эсе ҡаҙандай буған

**СӨМБӨРҘӘК** (ҡыҙыл) *и.* шаршы — *быстрина*

**СӨМБӘЙ, СӨМГӘЙ** (ҡыҙыл, мейәс, әйек-һаҡмар) *и.* соңғол — *омут.* Көҙгөһөн балыҡ сөмбәйгә туплана (һаҡмар)

**СӨМГӨЛ** (урта) *и.* соңғол — *омут*

**СӨМКӘ** (ҡыҙыл) *с.* сөм — *глубокий.* Сөмкә ғаҙан. Сөмкә һауыт

**СӨМӨК** (урта) *и.* һемәк — *кран.* Сөмәк (мейәс)

**СӨМӨКӘЙ** (туҡ-соран, урта) *и.* 1. Соңғол — *омут.* 2. Өйрөлтмәк — *водоворот*

**СӨМӨЛДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ришүәт һорау — *просить взятку*

**СӨМӨРТ** (мейәс, урта) *к.* сөм — *усилительная частица.* Сөмөрт ҡара күҙҙәрең (мейәс)

**СӨМҪӨҘ** (дим) *с.* һөмһөҙ — *бесстыдный, непристойный.* Сөмҫөҙ (ҡариҙел)

**СӨМТӨР** (урта) *с.* сонтоҡ — *куцый.* Сөмтөр ҡойроҡло эт

**СӨМТӨРӘҮ** (урта) *ҡ.* хәүефләнеү — *опасаться*

**СӨМӘЛӘҮ** (мейәс) *ҡ.* әҙләп кенә тотоноу — *израсходовать в меру.* Ашты сөмәләп ашатманым

**СӨН** (һаҡмар) *р.* һис — *никак, сроду.* Мин шуны сөн йырлай алмайым

**СӨНӘШ** (мейәс) *и.* һаран, кеше хаҡына йәшәргә йаратыусы — *скупой, любитель проживать за чужой счет.* Сөнәштән бер ни артмай

**СӨҢГӨ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡаяу — *жало (у пчел)*

**СӨҢГӨЛ** (туҡ-соран) *и.* 1. Өйрөлтмәк — *водоворот.* Ҡайһы уахыт йылғала сөңгөлләр йаҫалып, һыу өҫтө өйрөлөп тора. Сөңкөл (мейәс). 2. (дим, урта, урта урал) Соңғол — *омут*

**СӨҢГӨЛДӘК** (дим, ҡариҙел) *и.* 1. Мығырҙаҡ — *ворчун.* Сөңкөлдәк (ҡыҙыл, урта). 2. (дим, ҡыҙыл) Ҡылансыҡ — *кокетка*

**СӨҢГӨР-САҢҒЫР** (һаҡмар) *р.* ысын күңелдән — *по душам.* Көнө буйы сөңгөр-саңғыр әллә нәмә һөйләшәләр

**СӨҢГӘЙ** (дим) *и.* соңғол — *омут*

**СӨҢГӘЙҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тәрәнәйтеү — *углубить.* Улаҡты сөңгәйҙәп ҡуйабыҙ

**СӨҢГӘ, СӨҢҒОР** (арғаяш) *и.* сәтәкәй бармаҡ — *мизинец*

**СӨҢКӨЛ** (ҡыҙыл) *и.* соҡалта — *выемка в боку печи*

**СӨҢКӨЛДӘШЕҮ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, әй) *ҡ.* ысын күңелдән һөйләшеү — *разговаривать по душам.* Байағынан бирҙе сөңкөлдәшәләр инде (ҡыҙыл)

**СӨҢКӨЛДӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* мығырҙау — *ворчать.* Он йуҡ тип сөңкөлдәй ине (туҡ-соран). Сөңкөлтәү (урта)

**СӨҢКӨЛТЛӘҮ, СӨҢКӘЛТЛӘҮ** (урта) *ҡ.* соҡорлау — *углубить*

**СӨҢКӘ I** (арғаяш) *и.* уйҙыҡ — *выемка.* Сөңкәлә һыу йыйылып йата

**СӨҢКӘН** (әй) *и.* сынаяҡ өҫтө — *чашка (чайная)*

**СӨҢКӘЛ** (дим) *и.* соңғол — *омут*

**СӨҢӨЛТӨР** (урта) *и.* сөгөлдөр — *свекла*

**СӨПӨКӘ** (мейәс, урта) *и.* төпөш — *коротыш (о человеке)*

**СӨПРӘ, СӨПӨРӘ** (дим, туҡ-соран, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* әсетке — *закваска.* Элек сөпрә алырға барғанда он апаралар ине (туҡ-соран)

**СӨПРӘК** (кариҙел, урта) *и.* сепрәк — *тряпка*

**СӨР: СӨР ИТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* парланыу — *спариться (при игре)*

**СӨРКӨРӘҮ** (әй) *ҡ.* шаулау — *шуметь*

**СӨРКӨШКӘ I** (һаҡмар) *и.* соҡалта — *выемка в боку печи*

**СӨРКӨШКӘ II** (һаҡмар) *и.* сирек — *четвертинка*

**СӨРКӘ** (дим) *и.* күк ат — *сивка*

**СӨРЛӨГӨҮ** (гәйнә) *ҡ.* һөрөнөү — *спотыкаться*

**СӨРЛӘК** (урта) *и.* бәләкәй шүкә — *щуренок*

**СӨРӨКЛӘҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* төтәтеү — *окуривать (пчел)*

**СӨРӨЛДӘҮ** (дим) *ҡ.* көртләү — *квохтать*

**СӨРӨМ** (мейәс) *и.* бәләкәй шүкә — *щуренок*

**СӨРӨПКӘ** (дим) *и.* тиле шалҡан — *сурепка.* Сөрөпкә ашлыҡ сәселмәгән урынға күберәк үҫә

**СӨРПӨЙ** (эйек) *и.* бәләкәй шүкә — *щуренок*

**СӨРПӨЛДӘК** (мейәс) *и.* бәләкәй шүкә — *щуренок*

**СӨРСӨНӨҮ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *ҡ.* һөрөнөү — *спотыкаться.* Дегәнәк төпҫәһенә сөрсөнөп күнәкләрен көйәнтәнән ысҡындырып йебәрҙе (эйек-һаҡмар)

**СӨРТӨЙ** (һаҡмар) *и.* 1. Бәләкәй шүкә — *щуренок.* 2. (дим) Селбәрә — *малек*

**СӨРТӨМ** (һаҡмар) *и.* сирек — *четвертинка.* Бер сөртөм икмәк ҡалғайны

**СӨРХӘНТӘЙ** (һаҡмар, әй) *с.* хөрәсән — *слабый телосложением*

**СӨРӨГӘЙ I** (арғаяш, ҡыҙыл) *и.* сүрәгәй өйрәк — *чирок*

**СӨРӘГӘЙ II** (мейәс) *и.* сәтәкәй бармаҡ — *мизинец.* Сөрәкәй (урта)

**СӨРӘК, СӨРӘКӘ I** (һаҡмар) *и.* бәләкәй шүкә — *щуренок*

**СӨРӘК, СӨРӘКӘ II** (һаҡмар) *и.* сүрәкә — *«Чижик» (детская игра).* Сөрәкә (ҡыҙыл)

**СӨРӘКӘ III** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* сүрәгәй өйрәк — *«Чирок»* 'аҡылһыҙ'

**СӨРӘКӘ IV** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* бәләкәй башлы — *с маленькой головой (о человеке).* Сөрәкә Малик та алған тей машина (һаҡмар)

**СӨРӘКӘШКӘ I** (һаҡмар) *и.* сирек — *четвертинка*

**СӨРӘКӘШКӘ II** (һаҡмар) *и.* бәләкәй шүкә — *щуренок*

**СӨРӘНТӘЙ I** (һаҡмар) *и.* сирек — *четвертинка*

**СӨРӘЙТӘЙ II** (һаҡмар) *и.* бәләкәй шүкә — *щуренок*

**СӨС** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Һиҙгер, зирәк — *чуткий; смышленый.* Бик сөс йоҡлай ул, тиҙ уйана. Уҡыуға сөс булды (эйек-һаҡмар). Сос (туҡ-соран, урта урал). 2. (урта) Егәрле — *трудолюбивый*

**СӨСКӨРӨМ** (арғаяш) *с.* сөскөлтөм — *пресноватый.* Һуған сөскөрөм генә

**СӨСНӨК** (һаҡмар) *и.* һарымһаҡ — *чеснок*

**СӨСӨ** (урта) *и.* ҡылауыр — *золотуха*

**СӨСӨ БАЛ** (кариҙел, урта) *и.* яңы бал — *свежий мед*

**СӨСӨГҮМӘС** (арғаяш, салйоғот) *и.* 1. Сөсө икмәк — *пресный хлеб.* Сөсө күмәс (урта). 2. Ҡалас — *калач*

**СӨСӨ ЙӘЙМӘ** (дим) *и.* сөсө көлсә — *пресная лепешка*

**СӨСӨКЛӨ** (кариҙел) *с.* һығылмалы — *пружинистый*

**СӨСӨКӘЙ** (дим) *и.* таҫма тел — *краснобай.* Ул әҙәм белән ниңә шулай оҙаҡ сөсөкәйләнә икән?

**СӨСӨРӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* йөрәк һуғыу, хәлһеҙләнеү — *сердцебиение.* Ошо арала йөрәгем сөсөрәп тик тора (туҡ-соран)

**СӨСӨТКЕ** (арғаяш) *и.* буҙа әсеткеһе — *закваска бузы*

**СӨТ ПЕЧИН** (гәйнә) *и.* һөтлөгән — *молочай*

**СӨТӘБӘ БАРМАҠ** (мейәс) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец*

**СӨТӘҢЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* мыштырҙау — *возиться.* Ашатһа ашатып ҡуймай, сөтәңләгән булып тик йөрөй

**СӨХПӘТҺЕҘ** (эйек) *с.* килешһеҙ, килбәтһеҙ — *нескладный, неуклюжий*

**СӨШЛЕ** (дим) *и.* шөшлө — *кочедык*

**СӨЪӨР** (ырғыҙ) *и.* ҡунаҡтарҙан ҡалған аш — *пища, оставшаяся после угощения гостей.* Сөъөр ашарға көрөң балалар

**СӨЪӘЛ** (ырғыҙ) *и.* һорау — *вопрос.* Изге гешеләр теге донйала һис бер сөъәлһеҙ озмахҡа инә, тей

**СПИСКА** (ырғыҙ) *и.* шырпы — *спички*

**СПУСКА** (арғаяш) *и.* тәте — *курок*

**СПУТ** (дим) *и.* мейес көмбәҙе — *свод (печи).* Спутта таҙартылған аҡ самауыр утыра

**СТРАГА** (дим) *и.* һалдау — *острога.* Сыраҡҡа төшкәндә балыҡты страга белән сәнсәң

**СТРУН** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* ҡыл — *струна.* Струннары өҙөлөп бөткән ахыры ул мандалиннарҙың (туҡ-соран)

**СТӘРӘПКӘ** (ҡыҙыл, урта, әй) *и.* хеҙмәтсе *(ҡатын-ҡыҙ)* — *домработница.* Борон байҙарҙың стәрәпкәләре лә буған (әй)

**СУБЫР** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *с.* ығыш — *копотливый, медлительный (о человеке).* Субытҡы (ҡыҙыл)

**СУБЫРЛАУ** (урта) *ҡ.* түгелеү, ҡойолоу — *течь струей.* Күҙҙән субырлап йәш аҡты

**СУ ГӨПШӘҺЕ** (арғаяш) *и.* айыу көпшәһе — *болиголов крапчатый*

**СУҒЫЛМА** (дим) *и.* 1. Өйәнәк — *падучая (болезнь).* Кинәт кенә ауырыта суғылма булғанда. 2. Биҙгәк — *малярия*

**СУҒЫМ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *с.* 1. Тәлгәшле — *с гроздьями.* Муйыл шу тиклем суғым булды (һаҡмар). 2. (туҡ-соран, ырғыҙ) *р.* күп — *мно-*

*го.* Суғым аҡса барҙа тип ҡалаға барып ҡайттым (туҡ-соран)

**СУҒЫР, СУҒЫРТ** (урта) *и.* күшкә — *лубок*

**СУҒЫРТМАҠ** (көнсығыш диалект) *и.* суғырмаҡ — *кора (нижней части ствола старой березы)*

**СУДА** (ырғыҙ) *и.* дөйәнең муйынындағы, алғы тубығындағы оҙон йөн — *длинная шерсть на шее и на коленях верблюда.* Суданан арҡан ныҡ була

**СУЙ** (ҡыҙыл) *с.* 1. Ҡаты — *крепкий, прочный.* Йар аҫтында оҙаҡ йатып ҡарағай суй булып китә. 2. Тығыҙ тәнле — *крепкого телосложения.* Суй ҡатын. 3. (ҡариҙел, урта урал, эй) *р.* тотош — *сплошь.* Тәне суй тимерәү. Суй урман ул йаҡ

**СУЙҘАҠ ЙАТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* эшһеҙ ятыу — *бездельничание.* Хатыны көнө-төнө эшләй, үҙе ир башы белән суйҙаҡ йата

**СУЙЫН ЙУЛЫ** (төньяҡ-көнсығыш, һаҡмар) *и.* тимер юл — *железная дорога.* Мин килен булып оҙатылып килгәндә суйын йулы ла, бер нәмә лә йуғ ине (һаҡмар)

**СУЙЫНТАШ** (туҡ-соран) *и.* һуйырташ — *булыжник.* Суйырташ (урта урал, һаҡмар). Йерәнкашканың дүрт тойағы ла суйырташтай була (һаҡмар)

**СУҠ I** (эй) *и.* төш — *место.* Урта суҡта уйнай улың

**СУҠ II** (ҡыҙыл) *с.* 1. Күп ботаҡлы — *ветвистый.* Суҡ ҡарағат. Суҡ сауыл. 2. (төньяҡ-көнсығыш) Кикел — *челка.* 3. (эй) Һырға — *сережки (у овец и коз).* 4. (эй) Ҡош-корттоң ҡойроҡ өҫтөндәге мамыҡ тумалаҡ — *хвостовой помпон (у птиц).* 5. (эй) Үңербау — *завязка (у воротника рубахи).* 6. (эй) Ҡоштарҙың бәләкәйерәк төркөмө — *небольшая стая птиц.* Бер суҡ үрҙәк күлгә килеп төштө

**СУҠ III** (дим, урта) *и.* сыу — *плацента (у животных).* Һыйыр суғын һалалмай (урта)

**СУҠ IV** (эйек) *и.* һуҡта — *чашелистник*

**СУҠ ЙАМҒЫР** (көнсығыш диалект) *и.* бер генә урындан сығып таралмай ғына яуған ямғыр — *внезапный дождь*

**СУҠА** (эйек) *и.* тау башы — *макушка горы.* Суҡай (туҡ-соран)

**СУҠАЙ** (һаҡмар) *и.* ҡалҡыулыҡ — *возвышенность*

**СУҠАЙТМА** (ырғыҙ) *и.* ҡалҡыулыҡ — *возвышенность*

**СУҠАЛАҠ** (эй) *с.* ярлы; мөшкөл — *бедный, тягостный*

**СУҠА МАҢЛАЙ** (ҡыҙыл) *и.* киң маңлай — *широкий лоб*

**СУҠАНДАҠ** (арғаяш) *с.* ҡылансыҡ — *кокетливый*

**СУҠА ТУРҒАЙЫ** (мейәс) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**СУҠ БАРМАҠ** (арғаяш) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**СУҠ ЙЕП** (эй) *и.* мулинә — *мулине*

**СУҠЛЫ** (дим, туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Тәңкәле — *с монетами.* Суҡлы йөҙөк. Суҡлы беләҙек. 2. Сыңғалы — *с колечками.* Суҡлы ғашыҡ

**СУҠЛЫГӨЛ** (дим, ҡыҙыл) *и.* тамсы гөл — *фукция*

**СУҠЛЫҠ** (һаҡмар) *и.* кикел — *челка*

**СУҠМАР** (эйек) *и.* төйгөс — *толкуша*

**СУҠМАРБАШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сүмесбаш — *головастик.* Үрҙәкләр ашай суҡмарбашны (ҡариҙел)

**СУҠМАРЫЛЫУ** (туҡ-соран, урта, урта урал, һаҡмар) *ҡ.* 1. Тәлгәшләнеп, суҡланып тороу — *висеть гроздьями, кистями.* Быйыл балан суҡмарылып утыра (һаҡмар). 2. (ҡыҙыл, мейәс) Ойҡашып, ойошоп тороу — *быть скученным.* Ҡарағаста һағыҙ суҡмарылып тора (мейәс). 3. (мейәс) Төшөнкөлөккә бирелеү — *впасть в апатию.* Суҡмарылыб китеб утыра

**СУҠ САС** (арғаяш) *и.* кикел — *челка*

**СУҠСА ҠЫУАҠ** (арғаяш) *и.* ваҡ ҡыуаҡ — *мелкий кустарник*

**СУҠТАЛ** (арғаяш) *и.* бөҙрә тал — *плакучая ива.* Суҡтал төбөндә шишмә эргәһендә туҡтап йыуыналар

**СУҠТЫБАШ** (арғаяш) *с.* бүрекле — *с хохлом.* Суҡтыбаш тауыҡ. Суҡтыбаш турғай

**СУҠЫЙ** (дим) *и.* суҡыш — *клюв*

**СУҠЫЛДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сиҡаҡлау — *икать*

**СУҠЫМЫШ** (һаҡмар) *и.* тәпке — *мотыга*

**СУҠЫНДЫРЫП** (туҡ-соран, һаҡмар, эй) *р.* шәп, тиҙ арала — *быстро, скоро.* Бер йылда суҡындырып өй һалып та инделәр (туҡ-соран)

**СУҠЫНСЫҠ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* суҡынған — *негодник.* Суҡынсыҡ, өҫтөн ҡалайтып ҡайтҡан инде (туҡ-соран)

**СУҠЫНМЫШ** (дим, ҡыҙыл, урта) *и.* суҡынған — *негодник.* Әле генә ошонта ине лә баһа, суҡынмыш, ҡайҙа инеп ҡасты (урта)

**СУҠЫНҒЫР** (ҡыҙыл) *и.* суҡынған — *негодник.* Табалмайым, суҡынғырҙы, әллә ғайҙа инеп йуғалған

**СУҠЫРАҠ I** (ҡыҙыл, һаҡмар, урта) *и.* бысраҡ — *грязь.* Йауын йауған, тәгәрмәстән суҡыраҡ ырғып бара (ҡыҙыл)

**СУҠЫРАҠ II** (дим, ҡариҙел) *с.* һуҡыр — *слепой.* Суҡыраҡ бабай ул, өйөндәлер (дим)

**СУҠЫР БАРМАҠ** (ҡариҙел) *и.* тупыс бармаҡ — *палец без одной фаланги*

**СУҠЫРЛАУ** (урта) *ҡ.* сутырлау — *болтать*

**СУҠЫР СЕРКИ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һуҡыр себен — *мошка*

**СУҠЫТЫҠ** (һаҡмар) *и.* суҡыш — *клюв.* Суҡытығы ниндәй ғибрәт был ҡоштоң

**СУҠЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Соҡоу — *ковырять, копать.* Бағау белән суҡыйһың. 2. (ҡариҙел) Сағыу — *жалить.* Йылан суҡыр, барма!

**СУЛА** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* яй, уңайлы мәл — *возможность, удобный момент.* Берәй йаҡҡа олағырға йул сулаһын көтөп кенә йөрөй торғайны (һаҡмар)

**СУЛАҠ ИНӘҮ** (һаҡмар) *и.* мал инәүе — *метка животных (отрезают кончики уха у животных)*

**СУЛПЫ I** (дим) *и.* дүңгәләк, ҡулса — *кольцо.* Бысаҡ сулпысын йеҙҙән, баҡырҙан йаҫайбыҙ

**СУЛПЫ II** (ырғыҙ) *и.* суҡ — *кисть, бахрома.* Төрлө йөн йептән сулпы йаҫап шаршау бауҙарына тағалар

**СУЛПЫ: ҠОЛАҠЛЫ СУЛПЫ** (ҡыҙыл, урта) *и.* көйәнтәле сулпы — *двойной накосник*

**СУМАЙ** (арғаяш) *и.* тиреҫ яҡ — *север.* Сумайҙан иҫкән йел һалҡын була

**СУМАЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* аҡшайыу — *выпучиться.* Күҙе сығарҙай булып сумайып ҡарап тора

**СУМАҠ** (һаҡмар) *с.* ҡабарып торған — *выпуклый.* Сумаҡ тау. Сумаҡ маңлай

**СУМАҠА** (мейәс) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**СУМАҠЛАУ** (һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* арҡанды, дилбегәне кәләпләү — *собрать аркан, вожжи в связку.* Арҡанды сумаҡлап элеп ҡуй (ырғыҙ)

**СУМАН** (урта) *и.* 1. Кәмәшәү — *продолговатое корыто.* 2. (дим) Кәрзинкә — *корзинка*

**СУМАНДАУ** (мейәс, урта, әй) *ҡ.* аушаңлап атлау — *переваливаться.* Өрәктәре сумандашып китеп бара (мейәс)

**СУМАР I** (урта) *и.* 1. Дүрткел һалма — *лапша квадратной формы.* 2. Ҡулбаш һөйәге аҫтындағы төйөр майы — *слой жира под плечевой костью (у животных)*

**СУМАРТ** (ҡыҙыл, урта, урта урал, һаҡмар, әй) *с.* йомарт — *щедрый.* Улар шу тиклем сумарт ул (ҡыҙыл)

**СУМАРТЛЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* йомартлыҡ — *щедрость.* Сумартлыҡ — һаранлыҡ дошманы. Сумартлыҡ (әй)

**СУМАСА** (эйек) *и.* сумғыс өйрәк — *красноголовый нырок*

**СУМБЫРЛАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тәрән һыуға әйбер батҡанда сыға торған тауыш — *звукоподражательное слово при погружении какого-либо предмета в воду.* Биҙерә сумбырлап һыуға төштө лә китте

**СУМҒОШ** (урта) *и.* сумғыс өйрәк — *красноголовый нырок.* Сумғыс (дим), сумғош үрҙәк (эйек)

**СУМҒЫР** (мейәс) *и.* соңғол — *омут*

**СУМҠА I** (ҡыҙыл) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости.* Сумҡы (урта), суңҡы, суңҡа (дим, һаҡмар). Насар аттың сумҡаһы осто була (ҡыҙыл)

**СУМҠА II** (ырғыҙ) *и.* сумғыс өйрәк — *красноголовый нырок*

**СУММА I** (мейәс) *и.* соңғол — *омут*

**СУММА II** (туҡ-соран, урта) *и.* ҡышҡы юлһыҙлыҡ — *зимнее бездорожье (в результате снегопада).* Элекке ҡартлар суммала бүре һуҡҡаннар (туҡ-соран)

**СУМНЫҠ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* һум — *рубль*

**СУМСА** (дим, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* ит, үпкә-бауыр, картуф, кәбеҫтә менән бешерелгән ҡыҫтыбый — *пирог с мясом, ливером, картофелем или с капустой*

**СУМСЫЛЫҠАЙ** (салйоғот) *и.* бөрмә башлы өй — *дом с шатрообразной крышей*

**СУМЫРАЙЫУ** (дим) *ҡ.* эңәләү — *впадать (о глазах).* Күҙләре сумырайып кереп киткән

**СУМЫРА: СУМЫРА ЙАУЫУ** (ҡариҙел, мейәс, урта, әй) *ҡ.* 1. Ҡарҙың күп яуыуы — *валом валить (о снеге).* Ҡар сумыра йауҙы уҙған йылы (әй)

**СУМЫРА: СУМЫРА КЕЙЕҮ** (һаҡмар) *р.* баҫып кейеү — *надеть глубоко (о головном уборе)*

**СУМЫУ** (дим) *ҡ.* вафат булыу — *умереть.* Ул бахыр сумды инде

**СУНАР** (урта урал) *и.* өрпөк — *пушистый.* Бөгөн көнө буйы сунар ҡар йауҙы

**СУҢҒЫЛЫҠ** (дим) *и.* сыу — *плацента (у животных)*

**СУҢҠА** (дим, ҡыҙыл, урта) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости.* Суңҡаҫы белән барып төштө балаҫы (дим)

**СУҢҠАЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* артҡа ауыу — *падать задком.* Йаңы сыҡҡан шебеш артына көсө йетмәй, суңҡалай

**СУПА ЙАПАЛАҠ** (дим, ҡыҙыл) *и.* һупайҙы — *мохноногий сыч.* Супа йапалағы (урта)

**СУПАЙ I** (дим) *и.* һупайҙы — *мохноногий сыч.* Супайҙы (ҡыҙыл, һаҡмар)

**СУПАЙ II** (урта) *и.* ҡуҡыш — *кукиш*

**СУПАЙ III** (һаҡмар) *и.* өлпө — *пучок.* Тәгәрләктең башы супай була

**СУПАЙ IV** (дим) *с.* яңғыҙ — *одинокий.* Ана, бер супай *(кеше)* ташта ҡыҙынып утыра

**СУПАЙ ӨКӨҺӨ** (мейәс, урта) *и.* һупайҙы — *мохноногий сыч*

**СУПАЛА** (дим) *и.* һупайҙы — *мохноногий сыч*

**СУПҠАЙ** (арғаяш) *и.* сыпҡай — *поганка (птица).* Супҡай һыуҙа гел сумып йөрөй

**СУПҠЫ** (дим) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**СУПТАЙЫУ** (һаҡмар, әй) *ҡ.* бер кемһеҙ, бер нәмәһеҙ ҡалыу — *остаться ни с кем, ни с чем.* Икәүең суптайыб утыраһың, баллар гитеб бөттө (һаҡмар). Суптайып тороп ҡалдым әйбер урҙатып (әй)

**СУПТАРЛАУ** (дим) *ҡ.* төрлө еп атыу *(киндерҙә) — ткать из разноцветных ниток.* Суптарҙау (әй). Суптарҙы гүлмәк. Суптарҙы шаршау

**СУПТАУ** (ҡыҙыл, әй) *ҡ.* аҙлап алыу, кәметеү — *понемногу взять, уменьшить что-либо.* Әһә, былар йарманы суптай баштағандар (әй)

**СУПЫРҘАУ** (һаҡмар) *ҡ.* сорлап ағыу — *течь ручьем.* Ҡарттың күҙҙәренән супырҙап йәш ҡойолдо

**СУР I** (ырғыҙ) *и.* шеш — *опухоль.* Сурлыға сей икмәк йабалар

**СУР II** (һаҡмар) *и.* ҡайғы, хәсрәт — *горе, печаль.* Аңа тағы сур өҫтөнә сур булды

**СУР III** (дим, салйоғот) *с.* ҙур — *большой.* Сур геше кигән тинеләр (салйоғот)

**СУРАҒАЙ I** (ҡыҙыл, әй) *и.* сүрәгәй өйрәк — *чирок.* Сүрәгәй (мейәс)

**СУРАҒАЙ II** (мейәс) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**СУРАҒАТ** (ҡариҙел) *и.* имән сәтләүегe — *желудь*

**СУРАЙЫУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар, әй) *ҡ.* тумтайып сығып тороу — *выпятиться.* Сөйәл сурайып сыға (һаҡмар). Айағы сығып, буыуны сурайып тора (ҡыҙыл)

**СУРАҠА** (һаҡмар) *и.* этеш — *ерш*

**СУРАҠАЙ** (ҡыҙыл) *и.* уртаса ҙурлыҡтағы суртан — *щука средней величины*

**СУРАТ** (гәйнә) *и.* һүрәт — *рисунок, снимок.* Сүрәт (төньяҡ-көнбайыш)

**СУРАШ** (урта) *и.* ут болғата торған асалы ағас — *развилистая деревянная кочерга*

**СУРАШЫУ** (арғаяш, дим, ҡариҙел, мейәс) *ҡ.* һорашыу — *спрашивать.* Аны сурашҡан да йуҡ (мейәс)

**СУРИП** (ырғыҙ) *и.* бүҙәнә ҡуҙағы — *сурепица*

**СУРҠАЙ** (әй) *с.* борош — *закрученный.* Сурҡай ағас

**СУРҠАК I** (мейәс, урта, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* әрпеш, шамтыр — *неряха*

**СУРҠАК II** (урта) *с.* күп һөйләүсән — *болтливый*

**СУРҠЫЛДАТЫУ** (дим) *ҡ.* баланы һөйләнә-һөйләнә һөйөү — *ласкать ребенка, приговаривая*

**СУРЛАУ** (урта) *ҡ.* 1. Һайрау — *петь (о птице).* Һабан турғайы сурлай ҙа туҡтай. 2. (дим) Баҡылдау — *квакать.* 3. (дим) Көртләү — *квохтать*

**СУРЛЫ** (һаҡмар) *и.* меҫкен — *бедняга.* Их, һин, сурлы!

**СУРТ: СУРТ ҺЫНЫУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эй) *ҡ.* бер урындан ҡапыл һынып сығыу — *резкий перелом.* Суртуҡ һыныу (дим)

**СУРТАН КҮБӘЛӘГЕ** (һаҡмар) *и.* энәғараҡ — *стрекоза*

**СУРТАННЫҠ I** (эйек-һаҡмар) *и.* ерә — *большой крючок (для ловли щук).* Суртандыҡ (ҡыҙыл)

**СУРТАННЫҠ II** (урта) *и.* ҡыш көнө балыҡ тотоу урыны — *место зимнего улова рыбы*

**СУРТАН ҮҘӘК** (кыҙыл) *и.* нәҙек билле ат — *лошадь с тонким туловищем*

**СУРТҺЫҘ** (һаҡмар) *с.* шамтыр — *нескладный, неаккуратный (об одежде).* Ҡаһылай суртһыҙ кейем был, бер эйәме йуҡ

**СУРЫҘА** (эй) *р.* һис бер — *сроду.* Сурыҙа күргән кешем түгел

**СУРЫЙ** (урта) *с.* күп һөйләүсән — *болтливый*

**СУРЫЛТАУ** (кариҙел) *ҡ.* бытырлау — *тарахтеть.* Биртәлеп сурылтай

**СУРЫЛТЫУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* бер хәбәрҙе ҡат-ҡат һөйләү — *говорить одно и то же.* Хәбәрҙе сурылтырға йарата инде ул (туҡ-соран). Сурытыу (кыҙыл, урта, урта урал)

**СУРЫТЫУ** (урта) *ҡ.* епте йәки арҡанды арлыбирле ишеү — *вить как попало (нитку, веревку)*

**СУСАЙСЫҠ** (һаҡмар) *с.* өлпә — *пучок.* Эҫе һөттөң башында сусайсығы була

**СУСАҠ: СУСАҠ БИТ** (урта) *и.* яҫы бит — *скуластое лицо.* Киң йаурынлы, сусаҡ битле бер бәндә килеп инте

**СУСАЛЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һалынып тороу — *свисать.* Башы һур булып, ҡойроҡтары сусалып осоп китә

**СУСАНДАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* ризаһыҙлыҡ белдереү — *выражать недовольство.* Йәш килен сусандамаҫ ине тегеләр ҡайтмаһа (ҡыҙыл)

**СУСАННАУ** (урта) *ҡ.* бәүелеү, тирбәлеү — *качаться.* Һыу сәпсеге ташҡа менеп сусаннап утыра

**СУСАҢНАҠ** (туҡ-соран) *с.* остандаҡ — *нескромный.* Был киленебеҙ баҫалҡы, сусаңнаҡ түгел

**СУСИНКЕ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и. чесанки.* Сусиңкә (урта урал)

**СУСҠА ДЕГӘНӘГЕ** (урта) *и.* 1. Бөргәк — *липучка.* 2. (дим, урта) Һырмауыҡ — *ясменник*

**СУСЛА** (мейәс) *и.* һоҫлан — *суслон.* Суслан (арғаяш, салйоғот)

**СУСТАНДАҠ** (эй) *с.* 1. Остандаҡ — *нескромный.* Тик тор сустандаҡ. 2. Үпкәсел — *обидчивый.* Ул сустандаҡҡа һүҙ эйтеп

**СУСТАНДАУ** (эй) *ҡ.* остандау, үпкәләп китеү — *нескромничать, обидеться*

**СУСТЫҠАЙ** (мейәс) *и.* тиктормаҫ — *непоседа*

**СУСЫЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* этеш — *ерш*

**СУСЫЛДАУ** (кыҙыл, туҡ-соран) *ҡ.* мығырҙау — *ворчать.* Сусылдап тик йөрөйсө, баш әйләндереп (ҡыҙыл)

**СУСЫУ** (урта урал, эй) *ҡ.* 1. Көйһөҙләнеү, һөйләнеү — *ворчать, проявлять недовольство.* 2. (туҡ-соран, ырғыҙ) һиҫкәнеү, тертләү — *вздрогнуть.* Ишек тауышына сусып уйанған малайын сәңгелдәген аҡырын ғына һелкетеп йоҡлатты (ырғыҙ)

**СУТ** (дим, ҡариҙел) *и.* иҫәп — *счет.* Мында малның суты бумаған (дим)

**СУТЛАМАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* иҫәпкә алмау — *не считаться*

**СУТЛАУ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* аҙлап ҡына алыу, кәметеү — *понемногу взять, уменьшить что-либо.* Ҡунаҡҡа тигән кәнфитемде сутлаған да бөткән (ырғыҙ)

**СУТНАТЫУ** (урта) *ҡ.* сутлау — *обтесать (стены дома).* Өйҙөң эсен сутнатып ҡуйғайныҡ. Сутлау (урта). Өй сутланмаған, ҡап-ҡара

**СУТЫ-ҠЫРЫЙЫ** (дим) *и.* осо-ҡырыйы — *концакраю.* Ҫуғыш ваҡытында ғәйрәттең суты-ҡырыйы йуғ ине. Суты-ҡырыйын табып ҡара

**СУТЫННЫЙ** (эйек) *и.* йөҙ башы — *сотник*

**СУТЫРМАҠ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *с.* түңгәкле — *кочковатый.* Сутырмаҡ йулдан көс-хәл гилеп йеттек (ырғыҙ)

**СУТЫРЫЙ** (дим) *с.* һөйләнсәк — *говорун, болтушка*

**СУХАҘОН** (эй) *и.* эрәм тамаҡ — *дармоед.* Сухаҙон көйөнә тик утырмағас ней ҡыҫылып

**СУХАР** (эйек) *и.* утын яра торған балта — *колун*

**СҮБЕКЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* туҙыу — *изнашиваться.* Хәҙрәт өйөндә батшаның сүбекләнгән генә һүрәте тороп ҡалған

**СҮБӨК** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* 1. Талҡыш — *кострика.* 2. Көнйәлә төбө — *остаток пучка пряжи*

**СҮБӘК: СҮБӘК БОРОУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* юкты һөйләү — *говорить чушь*

**СҮБӘК: СҮБӘК ҺАТЫУСЫ** (арғаяш) *и.* туңаяҡ, туйға саҡырылмай килгән кеше — *человек, явившийся на свадьбу без приглашения*

**СҮБӘКТӘНЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* ваҡһыу — *быть мелочным*

**СҮГЕН ЙУЛ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тимер юл — *железная дорога.* Суйын йул (урта урал, һаҡмар)

**СҮГЕРМӘК** (ырғыҙ) *и.* 1. Бәләкәй күл — *озерцо.* Кәмәлек буйында сүгермәкләр күп. 2. (урта) Өйрөлтмәк — *водоворот.* 3. (дим) Урамдағы батҡаҡ — *грязь на улице*

**СҮГЕРТМӘК** (дим) *и.* сүгермәк — *высохшая яма*

**СҮГЕҮ** (дим) *ҡ.* ауыу — *валиться*

**СҮГӘЙЕҮ** (урта) *ҡ.* сүкәйеү — *сесть на корточки*

**СҮГӘЛӘҮ** (дим) *ҡ.* сүкәйеү — *сесть на корточки*

**СҮГӘТӘ** (һаҡмар) *и.* сеүәтә — *деревянная чашка небольшого размера*

**СҮҘӘКИ** (дим) *т.* шулай ҙа — *все-таки.* Сүтәки (урта)

**СҮК, СҮП** (һаҡмар) *и.* ҡурылып төйөлгән тары — *толченое в жареном виде пшено.* Сүкне ҡаймаҡҡа йә һөткә болғатып ашайлар

**СҮКӘЙ** (туҡ-соран) *и.* сеүәтә — *деревянная чашка небольшого размера*

**СҮКЕР** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* ҡамыл — *стерня.* Элгәре йаланайаҡ сүкерҙә лә йөрөп булына торғайны (ҡыҙыл). Сүпер (урта)

**СҮКЕРЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* 1. Йығыу — *валить.* Бәрәңкене сүкереп китте боҙ. 2. (эй) Һуғыу — *ударить, стукнуть.* Башыңа сүкергәндә көтмә. 3. (эй) Баҫылыу — *придавливание.* Шуның ҡулында сүкерелеп бөттөм инде

**СҮҠЕРТ** (мейәс) *и.* урғылъян — *выбоина*

**СҮКЕРӘ** (дим) *и.* йәмшек танау — *курносый*

**СҮКЕРӘЙЕҮ** (урта) *ҡ.* бөршәйеү — *съеживаться*

**СҮКЕТЕҮ** (дим, туҡ-соран, урта, һаҡмар) *ҡ.* һикертеп сабыу — *скакать галопом.* Ҡарат йурта белмәй ҙә ул, сүкетә лә гитә (туҡ-соран)

**СҮКӘЙЕҮ** (дим) *ҡ.* кәкерәйеү — *сгорбиться*

**СҮКӘМӘ, СҮКӘМӘЙ** (арғаяш, мейәс) *и.* әүмәлә — *мучное кушанье: в растопленную сметану постепенно высыпается сеяная пшеничная мука*

**СҮЛ БАЛЫҒЫ** (һаҡмар) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

**СҮЛЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һөлөк — *пиявка*

**СҮЛМӘК** (дим, салйоғот, урта, урта урал, һаҡмар) *и.* көршәк — *горшок.* Сүлмәкте өсайаҡҡа ултыртып бауырҫаҡ бешерәбеҙ (һаҡмар)

**СҮЛМӘК ҠАҘАН** (арғаяш, ҡыҙыл) *и.* 1. Тәрән ҡаҙан — *глубокий котел.* 2. (арғаяш, мейәс) Өсаяҡ — *треножник.* 3. (мейәс) Көршәк — *горшок.*

**СҮЛМӘК МУРҘА** (дим) *и.* кәрзинкә кеүек итеп үрелгән мурҙа — *плетеная как корзина морда*

**СҮМЕС I** (дим, урта урал) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**СҮМЕС II** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Һөҙгөс — *дуршлаг.* 2. (ҡариҙел) Ижау — *половник*

**СҮМЕС III** (эйек) *и.* Етегән йондоҙ — *Большая Медведица*

**СҮМЕСАУ** (урта) *и.* сүмес формаһындағы һөҙгөс — *сеть в форме ковша*

**СҮМЕСБАШ I** (урта) *и.* Етегән Йондоҙ — *Большая Медведица*

**СҮМЕСБАШ II** (урта) *и.* убыр — *вампир*

**СҮМЕСБАШ ТӨЙМӘ** (мейәс) *и.* ялтырауыҡлы төймә — *блестящая пуговица*

**СҮМЕСПАҠА** (ҡариҙел) *и.* сумесбаш — *головастик*

**СҮМЕСПАШ** (ҡыҙыл, урта) *и.* 1. Сүмесбаш — *головастик.* 2. (ҡыҙыл) Этеш — *ерш*

**СҮМЕС ҪӨЙӘГЕ** (дим) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**СҮМӘКСЕҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡапыл салҡан ауыу — *внезапно упасть навзничь.* Малайы сүмәксеп барып төштө (һаҡмар). 2. (урта) Сүкәйеү — *сесть на корточки*

**СҮМӨЛӘ** (арғаяш, дим, мейәс, урта, урта урал, ырғыҙ, эйек) *и.* 1. Күбә — *копна.* 2. (арғаяш, мейәс) Бәләкәй кәбән — *маленький стог.* 3. (дим, урта, эйек) Һоҫлан — *суслон.* 4. (ырғыҙ) Тиҙәк өйөмө — *куча кизяка*

**СҮМӘЛӘ: СҮМӘЛӘ ЙОҘРОҠ** (ҡыҙыл, эй) *и.* ҙур йоҙроҡ — *кулачище.* Сүмәлә танау (ҙур танау) — *носище*

**СҮМӘЛӘБАШ** (урта урал) *и.* 1. Башы киң ҡолға — *прялка.* 2. Көнйәлә — *пук шерсти или льна, приготовленный для прядения*

**СҮМӘН** (һаҡмар) *и.* 1. Түңгәк — *кочка.* 2. Түмәр — *чурбан*

**СҮМӘН: СҮМӘНГӘ УЛТЫРТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* алдау — *провести, обмануть*

**СҮҢКӘ** (урта) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**СҮП I** (ҡыҙыл) *и.* саҡ ҡошоноң ише — *совка-сплюшка*

**СҮП II** (урта) *и.* балалар башлығын биҙәү өсөн ептән, киҙенән эшләнгән тумалаҡ — *пампушка*

**СҮП III** (арғаяш, мейәс) *и.* 1. Талҡыш — *кострика.* Бүрәнәгә сүп тыңҡыста (мейәс). 2. (һаҡмар) Үлән — *трава.* Турғай йәшенерлек тә сүп буманы. 3. (ҡыҙыл, мейәс, эй) Шырау — *заноза.* Бармағыма сүп керҙе (эй)

**СҮП IV** (ҡыҙыл) *и.* балалар уйынында ергә ҡағылған ҡыҫҡа таяҡ — *прибитая к земле палочка (в детской игре)*

**СҮП V** (ҡариҙел, мейәс, эй) *и.* сыу — *плацента (у животных).* Һыйырҙың сүбен ҡарауылдарға гәрәк (мейәс)

**СҮП: СҮП КҮРМӘҮ** (урта, эй) *ҡ.* һанға һуҡмау, бар тип тә белмәү — *не считаться, игнорировать*

**СҮПЛӘМ I** (ҡариҙел) *и.* киндерҙе күтәреп һуҡҡанда үрнәк ҡуйыр өсөн буйлыҡ ептәрен күтәреү тактаһы — *доска для выборки ниток под узор*

**СҮПЛӘМ II** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* һирәк, әллә ниҙә бер — *редко, мало.* Сүпләмә (һаҡмар). Бында йеләк сүпләмә генә инде. Сүптәм (эй)

**СҮПЛӘМЕШ** (урта) *и.* киндерҙе һуҡҡанда үрнәк ҡуйыр өсөн буйлыҡ ептәрен күтәреү таҡтаһы — *доска для выборки ниток под узор*

**СҮПЛӘМЛЕ** (дим) *и.* күтәреп, үрнәкләп һуғылған әйбер — *холст, вытканный узором.* Сүпләмле таҫтымал

**СҮПЛӘП ҺУҒЫУ** (урта) *ҡ.* күтәреп, суптарлап һуғыу — *выткать с узорами (в домашнем ткачестве)*

**СҮПЛӘҮГЕС** (дим) *и.* киндерҙе күтәреп һуҡҡанда үрнәк ҡуйыр өсөн буйлыҡ ептәрен күтәреү таҡтаһы — *доска для выборки ниток под узор.* Сүптәүес (эй)

**СҮПЛӘҮ ТАҠТАҪЫ** (дим) *и.* киндерҙе күтәреп һуҡҡанда үрнәк ҡуйыр өсөн буйлыҡ ептәрен күтәреү таҡтаһы — *доска для выборки ниток под узор.* Сүптәм таҡтаһы (салйоғот, эй)

**СҮП-ҺАҠ** (һаҡмар) *и.* саҡ-суҡ — *сак-сук (мифические птицы)*

**СҮП ҺАЛЫУ** (урта) *ҡ.* аҡ һалыу — *бельмо на глазу*

**СҮРЕ I** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* шүре — *цевка.* Бер өйҙән сүреләй генә мөрйәнән йептәй генә төтөн сығып тора (ырғыҙ)

**СҮРЕ II** (гәйнә) *и.* кәпрән — *нижняя наволочка*

**СҮРЕ III** (урта) *и.* ау бәйләү энәһе — *игла для вязания сети*

**СҮРЕ IV** (ҡыҙыл, урта) *и.* кәтүк — *катушка*

**СҮРЕ АҒАСЫ** (ҡыҙыл, урта) *и.* епһә — *тонкий деревянный прутик для прикрепления шпульки в челнок*

**СҮРЕ ЙЕБЕ** (эйек) *и.* кәтүк еп — *нитки катушечные*

**СҮРЕҮ** (минзәлә) *и.* кәпрән — *нижняя наволочка*

**СҮРЕ ҮҘӘГЕ** (мейәс, һаҡмар) *и.* шүре энәһе — *ось челнока*

**СҮРТӘЙЕҮ** (дим, туҡ-соран) *и.* бәлшәйеү — *распустить губы*

**СҮРӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төрлө төҫкә инә торған йоҡа ғына ефәк — *переливающийся шелк*

**СҮРӘК, СҮРӘКӘЙ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* әсе ҡамырҙан бешерелгән ваҡ икмәк — *булочка из дрожжевого теста.* Беҙ ни икмәкте сүпәкләп бешерәбеҙ (туҡ-соран)

**СҮРӘКӘ** (урта) *и.* кәрлә — *карлик*

**СҮРӘКӘЙ** (мейәс, урта) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СҮРӘТ I** (көнсығыш диалект, туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* ҡиәфәт, күренеш — *образ, облик.* Йуха төрлө сүрәткә кереп йөрөй, тей (туҡ-соран)

**СҮРӘТ II** (туҡ-соран, урта) *и.* осраҡ, хәл — *случай.* Ҡайтҡан сүрәттә лә, бөгөн уҡ баралмаҫ (урта)

**СҮРӘТКЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һөйрәтке — *волокуша.* Баҫылмаған бесәнне ағас сүрәткегә тейеп ташыйбыҙ (ҡариҙел)

**СҮРӘШКӘ** (ырғыҙ) *и.* сүрәгәй өйрәк — *чирок*

**СҮС** (ҡариҙел) *и.* тарма — *конопля*

**СҮСЕЛ** (һаҡмар) *и.* ҡараҫҡы — *чучело.* Сүселләрҙе тиҙерәк урынлаштыра һал, ҡорлар һәҙер гилеп йетер

**СҮСЕЛДӘҮ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* мығырҙау — *ворчать.* Сүселдәр ҙә йөрөр инде ул, йәнгә тейеп (туҡ-соран)

**СҮСИНКЕ, СҮСИНҠӘ** (дим, туҡ-соран) *и.* галошлы быйма — *чесанки.* Сүсинҡә эрзинҡәһе гәрәк тей йеҙнән

**СҮСПӘРӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* эремсек билмәне — *творожные вареники*

**СҮСТЕЛТӘҮ** (урта) *ҡ.* сутырҙау — *щебетать, трещать*

**СҮСӘНӘК: СҮСӘНӘК ҺАҠАЛ** (дим, урта) *и.* ослайып, ойошоп ҡына торған һаҡал — *пучкообразная борода.* Сүсәнәк ҫаҡаллы ҡарт үтеп китте (дим)

**СҮТЕРЛӘШЕҮ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* сутырлашыу — *трещать, болтать.* Улар бөгөн киске сәйҙе күберәк һөйләшеп, сүтерләшеп эстеләр (ырғыҙ)

**СЫБА** (ҡариҙел, ҡыҙыл, эй) *с.* сәкмән — *зипун*

**СЫБАЙ I** (урта) *и.* свай — *свая*

**СЫБАЙ II** (һаҡмар, урта) *и.* рәт, теҙем — *полоса.* Ҡаҙбауыр болот бер сыбай булып тора (һаҡмар). Ташйылканың тәрәнерәк сыбайларынта бәрҙеләр ҡарпый (урта)

**СЫБАЙ III** (эй) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный половик*

**СЫБАЙ IV** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *с.* оҙонса — *удлиненный.* Сыбай ҡашҡа. Сыбай һаҡал

**СЫБАЙ ЙАУЫН** (дим, туҡ-соран) *и.* буй-буй булып яуып үткән ямғыр — *дождь, идущий полосами.* Мында ҡоп-ҡоро икән, беҙ сыбай йауынға эләгеп лыс һыу булдыҡ (туҡ-соран)

**СЫБАЙҠА** (урта) *и.* шөшлө — *кочедык (приспособление для плетения лаптей)*

**СЫБАҠАЙ** (дим, туҡ-соран) *с.* сыбар — *пестрый.* Ҡалай сыбаҡай күлмәк кейеп алған (туҡ-соран)

**СЫБАЛАНЫУ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* буталыу — *мешаться.* Алар көнө буйы өй эсендә сыбаландылар (һаҡмар)

**СЫБАЛСЫҠ** (һаҡмар, эй) *и.* буталсыҡ — *путаница.* Был сыбалсыҡтан нисек сығыр икәнһең (һаҡмар)

**СЫБАЛЫУ** (мейәс, урта, эй) *ҡ.* 1. Сейәлеү — *спутаться.* Сәсе сыбалып бөткән (урта). 2. (урта) Буталыу — *мешаться (под ногами)*

**СЫБАР ЙӨРӘК** (туҡ-соран) *с.* 1. Ҡурҡаҡ — *трус.* Бигерәк сыбар йөрәк икәнһең, бер аҙым йергә лә инәйең белән бараң. 2. (дим) Сабырһыҙ — *нетерпеливый*

**СЫБАР КҮГӘҮЕН** (ҡариҙел) *и.* бөгөлсән — *овод*

**СЫБАР ҠАРЫН** (мейәс, урта) *и.* таҙғарын — *сычуг*

**СЫБАРСАЙ** (мейәс) *и.* таҙғарын — *сычуг*

**СЫБАР ТУҠРАН** (дим) *и.* ала тумыртҡа — *пестрый дятел*

**СЫБАР ҮРҘӘК** (дим) *и.* аласабыр — *пеганка*

**СЫБАР ҺӨЛӨК** (салйоғот) *и.* һөлөк төрө — *вид пиявки (пестрая)*

**СЫБАР ҺЫЙЫР** (арғаяш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**СЫБАТАЙЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* сыбаталап егеү — *запрячь цугом.* Ҡоҙалар атларҙы сыбатайлап йегеп килерләр ине

**СЫБАТМА** (һаҡмар) *и.* түр юрған — *узкое длинное одеяло, сшитое из лоскутов*

**СЫБАТЫЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* һуҙылыу — *вытянуться.* Сыбатылып үҫкән ағаслар

**СЫБАТЫУ I** (ҡыҙыл, һаҡмар, эй) *ҡ.* тағатыу — *разматывать.* Йеп сыбатыу. Арҡан сыбатыу

**СЫБАТЫУ II** (ҡыҙыл) *ҡ.* күрмәгәнен күрһәтеү — *проучить, сильно отругать*

**СЫБАШҠЫУ** (урта) *ҡ.* һыҙат булып ағыу — *течь полоской.* Күҙенән сыбашҡып йәш аға

**СЫБЫҠ I** (арғаяш, мейәс, урта урал) *и.* 1. Сауҡалыҡ — *березняк.* 2. (дим, урта) Ваҡ ағас — *молодое дерево.* 3. (эй) Ваҡ ботаҡ — *молодая ветвь*

**СЫБЫҠ II** (мейәс, урта) *и.* таҫма, нәҙек кенә итеп һалынған материя — *тоненькая лента, тесьма.* Сыбыҡтап тороп күлмәк кейҙереп ҡуйайым тиһәм (урта)

**СЫБЫҠКӘРТӘ** (дим) *и.* ситән — *плетень*

**СЫБЫҠЛАУ** (туҡ-соран, урта) *ҡ.* сыбыҡ менән йөн яҙыу — *трепать шерсть прутиком*

**СЫБЫҠТЫҠ** (мейәс) *и.* сауҡалыҡ — *березняк*

**СЫБЫЛЙЫУ** (урта) *ҡ.* семәрләнеү — *рябить в глазах.* Күҙ сыбылйып тик тора

**СЫБЫЛЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* һирәк-һаяҡ үҫкән ҡыуаҡлыҡтар — *редкие кустарники*

**СЫБЫРТҠЫ** (ҡариҙел) *и.* һепертке — *метла.* Мис сыбыртҡысы

**СЫБЫРТҠЫ ИТЕ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* туйҙа төп ҡоҙала үткән һуңғы һый — *последнее угощение в доме отца невесты.* Сыбыртҡы итендә үлән сыбыртҡы белән ҡоҙаларҙы һуҡҡан булалар (һаҡмар)

**СЫБЫРТҠЫ ЭЛГЕСЕ** (арғаяш) *и.* сыбыртҡы бөлдөргәһе — *темляк кнута*

**СЫБЫРЫШЫУ** (һаҡмар) *и.* эркелешеү, йыйылыу — *собираться, столпиться.* Балалар урам тулып сыбырышып йөрөйләр

**СЫВАЛЫУ** (урта) *и.* киҫелгән ағас төбөнән үҫеп сыҡҡан үҫентеләр — *поросль на пнях*

**СЫҒАНАҠ I** (арғаяш, салйоғот, урта урал, эй) *и.* терһәк — *локоть*

**СЫҒАНАҠ II** (һаҡмар) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҒАНАҠ III** (мейәс, һаҡмар) *и.* күгән — *дверная петля*

**СЫҒАНАҠ IV** (һаҡмар) *и. холоҡ — нрав, характер.* Сығанағы насар буғас һыйышмай ҡайтып киткән

**СЫҒАНАҠ БӨГӨМӨ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* терһәк быуыны — *локтевой сустав*

**СЫҒАНСА** (урта) *и.* 1. Сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец.* Сығансай (эйек-һаҡмар). 2. Сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҒАНСАҠ I** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* күгән — *дверная петля*

**СЫҒАНСАҠ II** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҒАРСАЙ** (һаҡмар) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҒАР ШИШМӘ** (дим) *и.* тау шишмәһе — *горный родник.* Сығар шишмә тауҙан атылып сығып йата

**СЫҒЫМСА** (дим, урта) *с.* сығынсы — *упрямый, норовистый (о лошади)*

**СЫҒЫНСЫЛ** (урта) *с.* сығынсы — *упрямый, норовистый (о лошади).* Сығынсыл ат йөктө тартмай, сигенеп тик тора

**СЫҒЫР I** (дим, мейәс) *и.* 1. Йөн сиратыу ҡорамалы — *приспособление для сучения ниток.* 2. (эйек) Һоҫа — *челнок.* 3. (ҡыҙыл, туҡ-соран, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш, ырғыҙ, эй) Вал. Шахтанан сығыр ман сығарған (салйоғот). 3. (мейәс) Шәмдең филтә йөрөтә торған тәгәрмәсе — *вал фитиля керосиновой лампы.* 4. (мейәс) Ялтырауыҡ тәгәрмәсе — *катушка блесны*

**СЫҒЫР II** (туҡ-соран) *и.* ағастан эшләнгән балалар арбаһы — *детская деревянная коляска.* Сығырға йәбешеп атлай башланы инде ҡыҙым

**СЫҒЫР ЙЕП** (арғаяш, эйек-һаҡмар) *и.* кәтүк еп — *катушечные нитки*

**СЫҒЫРҘАН СЫҒЫУ** (туҡ-соран, һаҡмар, эй) *ҡ.* ярһыу — *разъяриться*

**СЫҒЫРҘЫ МУЙЫН** (мейәс, урта) *и.* борғандаҡ — *вертишейка (птица)*

**СЫҒЫРҘЫ ОРО** (арғаяш) *и.* сығырлы ҡоҙоҡ — *колодец с воротом*

**СЫҒЫРИҠ** (гәйнә) *с.* сая — *злой.* Ул бик сығыриҡ хатын

**СЫҒЫТЛАУ** (урта урал) *ҡ.* осҡолоҡ тотоу — *икать*

**СЫҒЫУ** (урта) *и.* 1. Һыҭҡы — *угорь.* Битен сығыу баҫҡан. 2. (эйек) Ҡыҙамыҡ — *краснуха.* 3. (дим) Ҡысынма — *чесотка.* Дәнемә сығыу сыға

**СЫҒЫШ** (ырғыҙ) *и.* кисеү — *брод*

**СЫҒЫШҪЫҘ** (дим) *с.* ҡаты, бәғерһеҙ — *жестокосердный*

**СЫҒЫШҺЫҘ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* һаран — *скряга*

**СЫҒЫШМАУ** (урта) *ҡ.* сығып китә алмау — *не спешить выйти, выходить.* Өшөп килеп кергәнә кешеләр, тимерлектән сығышмай, тегентә-мынта терәлеп, һүҙ ҡуйырталар

**СЫҘА** (ҡариҙел) *и.* һыу ағып ятҡан үҙәк — *водоносная ложбина*

**СЫҘҒЫС** (урта) *и.* бүрәнә ырыу ҡоралы — *рогатина (для метки венца сруба)*

**СЫҘҘЫЙ-БЫҘҘЫЙ** (дим) *р.* файҙаһыҙ — *бесполезно.* Сыҙҙый-быҙҙыйға йөрөп ғүмер үткәрҙе

**СЫҘЫҠ I** (дим, туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* һыҙлыҡ — *шкварки*

**СЫҘЫҠ II** (ҡариҙел, урта) *и.* 1. Һыҙыҡ — *черта.* 2. (урта) Таҫма — *лента, тесьма.* Сыҙыҡлы күлмәк. Сыҙҙыҡ (мейәс)

**СЫҘЫЛЫУ** (мейәс, эй) *ҡ.* һыҙылыу — *брезжить.* Сыҙылып таң ата (эй)

**СЫҘЫУ** (дим, ҡариҙел, урта, эй) *ҡ.* һыҙыу — *чертить.* Күмер белән сыҙып үлсәнем (дим)

**СЫЖҒЫРТЫУ** (дим) *ҡ.* туңмайҙы табала иретеү — *растопить сало*

**СЫЗГЫ** (ҡариҙел) *и.* һоҫҡо — *совок*

**СЫЙА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сыйҙым — *шуга.* Шыйа (туҡ-соран)

**СЫЙАНАҠ** (урта) *и.* сынаяҡ — *чашка (чайная)*

**СЫЙБАЛА** (эйек-һаҡмар) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫЙ БЕШЕРЕҮ** (мейәс) *ҡ.* икмәк башы эшләү — *приготовление закваски*

**СЫЙҒАН** (урта урал) *и.* сиған — *цыган*

**СЫЙҒЫР** (арғаяш) *и.* ҡолға — *шест*

**СЫЙҒЫС I** (арғаяш, ҡариҙел, эй) *и.* шырпы — *спички*

**СЫЙҒЫС II** (дим) *и.* бүрәнә ырыу ҡоралы — *рогатина (для метки венца сруба)*

**СЫЙҘЫМСА** (ҡыҙыл) *и.* сыйҙым — *шуга*

**СЫЙМАЛЫ** (мейәс) *с.* ҡайыулы — *вышитый.* Сыймалы алйапҡысым туҙған инде

**СЫЙМАЛАУ** (урта) *ҡ.* әүәләү — *мять.* Үгеҙҙе сыймаланы айыу

**СЫЙМА-СЫЙ: СЫЙМА-СЫЙ КИЛЕП** (урта) *ҡ.* талашып-тиргәшеп — *ссорившись.* Ҡарт белән сыйма-сый килеп утырманым

**СЫЙПЫТА БАҺЫП** (һаҡмар) *ҡ.* тыҡылдата баҫып — *ступая со стуком.* Тағалы итекләр кейеп сыйпата баһып йөрөнөк

**СЫЙРЫҠ** (һаҡмар) *и.* киҫкә — *валежник*

**СЫЙЫҠ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ, эй) *и.* һыҙыҡ — *черта.* Сыйыҡ сыҙыу (эй)

**СЫЙЫҠ: СЫЙЫҠ ЭҘҘӘҮ** (эй) *ҡ.* ғәйеп эҙләү — *подыскивать вину.* Сыйыҡ эҙҙәп кенә йөрөй ул кешенән

**СЫЙЫР КӨПШӘСЕ** (ҡариҙел) *и.* ҡырлы ҡурай — *порезник.* Шүре сыйыр көпшәсенән эшләнә. Сыйыр күпшә (гәйнә)

**СЫЙЫРСЫҠ ҠАҠТЫСЫ** (арғаяш) *и.* сыйырсыҡ ояһы — *скворечник*

**СЫЙЫРСЫҠ УМАРТАҺЫ** (урта) *и.* сыйырсыҡ ояһы — *скворечник.* Сыйырсыҡ умартаҫы (дим)

**СЫЙЫР ТЕЛЕ** (минзәлә) *и.* эремсек пирогы — *пирожки с творогом*

**СЫЙЫРШАЛҠАН** (гәйнә) *и. турнепс (мал шалҡаны)*

**СЫЙЫРЫЛЫУ I** (арғаяш) *ҡ.* сирҡаныу — *испытать отвращение*

**СЫЙЫРЫЛЫУ II** (һаҡмар) *ҡ.* салғы, бысаҡ йөҙө ҡайтарылыу — *отложение лезвии косы, ножа*

**СЫЙЫУ: ҠАНАТ СЫЙЫУ** (эй) *ҡ.* 1. Ҡанат сығыу — *пробивание крыльев (у птиц).* 2. Балиғ булыу — *стать совершеннолетним.* 3. Маһайыу — *зазнаваться*

**СЫЙЫШ, ШЫЙЫШ** (һаҡмар) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫЙЫШЫУ** (һаҡмар, әй) *ҡ.* талашыу — *ссориться.* Үҙҙәре сыйышып саҡ торалар (әй)

**СЫҠ** (арғаяш, дим, ҡариҙел, урта урал, әй) *и.* ысыҡ — *роса.* Сыҡ төшһә, үлән ныҡ үҫә (урта урал)

**СЫҠМА** (мейәс, урта) *и.* шеш — *нарыв.* Ҙур булып сыҡма сыҡты ҡышын тырнаҡ аҫтына (мейәс)

**СЫҠМАЛЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* кисеү — *брод.* Йайыҡтағы сыҡмалыҡтарҙы атты ҡаҙаҡтар ҡарағандар

**СЫҠТА** (мейәс) *и.* ҡолон нуҡтаһы — *недоуздок (жеребенка)*

**СЫҠТАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* һыҡтау — *всхлипывать*

**СЫҠЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Бәҫ — *иней (на деревьях).* 2. Һалҡын — *мороз*

**СЫҠЫРҘАУ** (дим) *ҡ.* сырылдау — *стрекотать.* Сиңерткә сыҡырҙай

**СЫҠЫРЫШ** (ҡариҙел) *и.* ҡаты, һаран — *скряга*

**СЫЛ** (салйоғот, әй) *и.* әсетке — *закваска.* Сыл белән асытҡан әпәй тәмде була (әй)

**СЫЛАМАУ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *ҡ.* сыҙамау — *не терпеть.* Һимеҙҙегенә сыламай (мейәс)

**СЫЛАН** (дим, урта) *и.* солан — *сени*

**СЫЛБАРА** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫЛБЫР I** (урта, һаҡмар) *и.* ҡыл арҡан — *волосяной аркан.* Ҡылдан сылбыр ишәләр ҙә малды сылбырлап ашаталар (һаҡмар)

**СЫЛБЫР II** (салйоғот) *и.* һағалдырыҡ — *тесьма, лента у женского платка* (ҡушъяулыҡ), *которая служит завязкой.* Сылбыр һырғаға беркетелә, эйәк аҫтынан килә

**СЫЛБЫР III** (урта) *и.* шәл биҙәге — *узор шали (в форме цепочки)*

**СЫЛБЫР IV** (урта) *и.* түңәрәкләшеп тотошоп уйнаған уйын — *игра в круг*

**СЫЛБЫРЖАУ** (дим) *ҡ.* сымырлау — *чувствовать дрожь*

**СЫЛҒЫЙ I** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс) *р.* 1. Һәр ваҡыт, гел — *постоянно.* 2. (һаҡмар) Ылғый — *чересчур.* Игеннәре сылғый сүп

**СЫЛҒЫЙ II** (ҡариҙел) *и.* 1. Ҡаурый — *птичье перо.* 2. (мейәс) Сыбыҡ — *прутик.* Сылғый тотоп сығаң инде малға ҡаршы

**СЫЛПЫҠ** (әй) *с.* бысыҡ — *слезящийся (о глазе).* Күҙҙәре сылпыҡ

**СЫЛТЫЙ** (ҡыҙыл) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫЛТЫЛДАУ** (һаҡмар) *ҡ.* сыңлау — *звенеть.* Имән табан ҡорос кеүек сылтылдап ҡына тора

**СЫЛТЫРАҠ** (мейәс) *и.* сулпы — *накосник*

**СЫЛТЫРАҠТЫ ЙӨҘӨК** (урта) *и.* сыңғалы балдаҡ — *кольцо с монетами*

**СЫЛТЫРЛАҠ БАЛДАҠ** (һаҡмар) *и.* сыңғалы балдаҡ — *кольцо с монетами.* Сылтылдаҡты балдаҡ (ҡыҙыл), сылтыраҡты балдаҡ (мейәс, әй), сылтырмаҡлы балдаҡ (дим)

**СЫЛТЫРЛАҠ БЕЛӘҘЕК** (һаҡмар) *и.* сыңғалы беләҙек — *браслет с монетами*

**СЫЛТЫР: СЫЛТЫР ТАШ** (минзәлә) *и.* йоҡа таш — *тонкий камень*

**СЫЛТЫРЛАУЫҠ** (урта) *и.* һабына ағастан сыңға ҡуйылып яһалған сеүәтә — *деревянная чашка с деревянным кольцом на рукоятке*

**СЫЛЫМ I** (урта) *и.* бәпестең башындағы ҡауаҡ — *корочка на голове (у новорожденного)*

**СЫЛЫМ II** (салйоғот) *и.* балыҡ тәңкәһе — *чешуя*

**СЫЛЫМ III** (арғаяш, урта) *и.* сыуын — *послед*

**СЫМАУ** (урта) *ҡ.* сырмау — *опутать веревкой*

**СЫМБАТ** (ҡыҙыл) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫМ ЙАҪАУ I** (урта) *р.* бөхтә — *опрятно, аккуратно.* Сым йаҫау итеп кейенә, өйөн сым йаҫау итеп ҡуйа

**СЫМ ЙАҪАУ II** (төньяҡ-көнбайыш, урта) *с.* матур — *красивый, (-ая).* Сым йаҫау ҡатыны бар. Сын йаҫау (урта)

**СЫМСЫРЫҠ** (әй) *р.* тып-тын — *совершенно тихо.* Өйөгөҙ сымсырыҡ та

**СЫМТЫҠ** (дим, ҡариҙел) *р.* булыр-булмаҫ, еренә етмәгән — *кое-как.* Бик сымтыҡ икән был, үҙем дә беләм инде (ҡариҙел)

**СЫМЫЛДЫҠ I** (дим) *и.* 1. Шаршау — *занавес.* 2. (дим, урта урал, эйек-һаҡмар) Турпыша — *полог.* Сымылдырыҡ (ҡыҙыл, һаҡмар)

**СЫМЫЛДЫҠ II** (салйоғот) *и.* ҡымыҙлыҡ — *гречиха альпийская*

**СЫМЫРҒАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* көсөргәнеү, көсәнеү — *натужиться*

**СЫМЫРЖАУ** (дим) *ҡ.* сымырлау — *чувствовать дрожь.* Дәннәрем сымыржап китте

**СЫМЫРТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* сымырлау — *чувствовать дрожь.* Арҡалар сымыртып тора

**СЫМЫРЫ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *с.* бөтмөр — *аккуратный.* Әсәң һатта сымыры, алсаҡ пулды, барҙыниһәң сәй әсермәй сығармаһ ине (һаҡмар)

**СЫН I** (арғаяш, дим, ҡариҙел, мейәс, әй) *с.* 1. Ысын — *правильный; правда; истинно.* 2. (урта урал, һаҡмар) Ысын — *настоящий.* Быйаҡта сын башҡортлар буған (һаҡмар)

**СЫН II** (ырғыҙ) *и.* сым — *проволока.* Баҡсаға сын тартып йөрөй

**СЫНА** (һаҡмар) *и.* бәләкәй сеүәтә — *маленькая чашка*

**СЫНАҘА** (һаҡмар) *и.* йыназа — *погребальная молитва*

**СЫНАЙАҠ ТАБАҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце*

**СЫНАЙАҠ ТӘРИЛКӘҺЕ** (арғаяш, урта) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце*

**СЫНАЙАҠ КӘШТӘҺЕ** (салйоғот) *и.* һауыт-һаба кәштәһе — *посудница*

**СЫНАЙАҠ ҠУЙҒЫС** (һаҡмар) *и.* һауыт-һаба кәштәһе — *посудница*

**СЫНАЙЫР** (ырғыҙ) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫНАР** (дим) *и.* аҡ тирәк — *белый тополь*

**СЫНЙЫР** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* 1. Селбәрә — *малек.* 2. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Йыланбалыҡ — *угорь*

**СЫНЙЫРА** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* Ат түшенә сыҡҡан ҡаты шеш — *фурункул (у лошади).* Элгәре аттың сынйараһын таҙ кешенән төкөтөп дауалағаннар (эйек-һаҡмар)

**СЫНТУҪТАҠ** (урта урал) *и.* 1. Сынаяҡ — *чашка чайная.* 2. Каса — *пиала*

**СЫНЫ** (ҡариҙел) *и.* йән — *душа.* Сурамай китсә сынысы сыға

**СЫН ХАҠ** (эй) *и.* ысын дөрөҫлөк — *истинная правда.* Сын хаҡ, икәүҙәп кенә тартып сығарҙыҡ

**СЫҢАЛТАЙ** (ырғыҙ) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҢАРЙАУЛЫҠ** (кариҙел) *и.* яулыҡ — *платок*

**СЫҢАРСАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҢАРСАЙ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҢҒА I** (урта урал, һаҡмар) *и.* зәңге — *цинга*

**СЫҢҒА II** (эйек-һаҡмар) *и.* күгән — *шарнир.* Сыңҡа (урта)

**СЫҢҒАРА** (арғаяш) *и.* ат түшенә сыҡҡан ҡаты шеш — *фурункул (у лошади).* Сыңғыра (ҡыҙыл)

**СЫҢҒЫЛДАҠ I** (ырғыҙ) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҢҒЫЛДАҠ II** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* шөңгөр — *бубенцы.* Сыңғылдаҡты ҡолондарға тағалар, матур булып сыңғылдап йөрөй (ҡыҙыл)

**СЫҢҒЫЛДАУ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран) *ҡ.* сыңғырау — *звенеть (о колокольчике)*

**СЫҢҒЫЛДАП: СЫҢҒЫЛДАП ИЛАУ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран) *ҡ.* сеңләп илау — *жалобно плакать*

**СЫҢҒЫР** (ҡыҙыл) *и.* шөңгөр — *бубенцы*

**СЫҢҒЫРҘАҠ** (ҡыҙыл, эй) *и.* шөңгөр — *бубенцы.* Сыңғырлаҡ (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ)

**СЫҢҒЫРЛАҠ: СЫҢҒЫРЛАҠ ТАУЫШ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* сыңғырҙауыҡлы тауыш — *звенящий голос.* Ул сыңғырлаҡ тауыш менән көләп йебәрҙе (ырғыҙ)

**СЫҢҒЫР СӘНТӘЙ** (эйек) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҢДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сеңләү — *звенеть.* Ҡолаҡ сыңдау

**СЫҢЛАУ** (эйек) *ҡ.* сеңләү — *плач-причитание во время проводов невесты*

**СЫҢЛАҠ БАРМАҠ** (гәйнә) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫҢҒЫРҘАЙ** (ырғыҙ) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СЫП** (урта) *и.* ситән — *плетень*

**СЫПРАННАУ** (урта) *ҡ.* ярһыу — *разъяриться, плакать навзрыд.* Беҙҙең баллар сыпраннап иламайҙар у

**СЫП-СЫЙТЫ** (эйек) *с.* бысма, сей — *прелый, преющий.* Сып-сыйты булып китә бите

**СЫПСЫҠ** (урта урал, һаҡмар) *и.* турғай — *воробей*

**СЫПСЫҠ КҮҘЕ** (дим, минзәлә) *и.* күгәрсен күҙе — *незабудка*

**СЫПТАҒАЙ** (дим) *и.* һырғый — *высокое прямое дерево, у которого имеются ветви только на самой вершине*

**СЫПТЫРЫУ** (туҡ-соран, урта, урта урал, ырғыҙ) *ҡ.* һыҙырыу — *хлестать.* Ҡартатайы сыптырып алғайны, хәҙер малайларҙы баҡсаға әбинмәй (туҡ-соран)

**СЫЙЫЛЫУ** (минзәлә) *ҡ.* һүрелеү — *сечься (о тканях, волосах).* Ситса ситтән сипылып сыға

**СЫР I** (мейәс) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫР II** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* буяу — *краска*

**СЫР III** (дим, туҡ-соран, урта, урта урал, ырғыҙ) *и.* сер — *секрет, тайна.* Сыр һөйләп утырғанда ул әңгәмә һөйләне (туҡ-соран)

**СЫР IV** (ҡыҙыл, һаҡмар, эй) *и.* һыр, бөрмә — *склад, складка.* Өләсәйем күлдәгенә сыр тотоп кейә (ҡыҙыл)

**СЫР V** (ҡыҙыл, эй) *и.* һөҙлөк — *навар*

**СЫР VI** (урта урал) *и.* бәҫ — *иней (на деревьях)*

**СЫР VII** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар, эй) *р.* шыр — *совершенно*

**СЫРАҒАС** (урта, эйек, эй) *и.* сыра — *лучинка*

**СЫРАҠ I** (арғаяш, салйоғот, эй) *и.* сыра — *лучинка*

**СЫРАҠ II** (арғаяш, салйоғот, урта урал, һаҡмар) *и.* күҙ нуры — *острота зрения.* Ҡартайғас күҙ сырағы бөтә башлай инде (һаҡмар)

**СЫРБАЛА** (урта) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫРҒА I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Тәңкә муйынса — *монетная нашейная подвеска.* 2. Ҡытай — *бусы.* 3. (гәйнә) Һырға — *серьги*

**СЫРҒА II** (кариҙел) *и.* шаушаҡ — *запястье*

**СЫРҘАҠ** (һаҡмар) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**СЫРҘАН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* сырмалсыҡ — *вьюнок.* Сырлан (минзәлә)

**СЫРҘАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сырылдау — *пищать, визжать*

**СЫРҘАУЫҠ** (һаҡмар) *и.* һабан турғайы — *жаворонок.* Сырҙауыс (мейәс)

**СЫРҘЫ, СЫРҘЫЙ** (дим, урта) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫРЙЫ** (дим) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫРЙЫН** (ырғыҙ) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫРЖЫЙ** (дим) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫРҠРАУ** (арғаяш) *ҡ.* нәҙек тауыш менән кешнәү — *тонкое ржание*

**СЫРҠЫЛДАУ** (туҡ-соран, урта) *ҡ.* сырылдау — *пищать; визжать.* Йетәр, сырҡылдама әле, һинән башҡа ла тауыш күп (туҡ-соран)

**СЫРҠЫРАТЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* 1. Яфалау — *замучить.* Аларҙың кеше сырҡыратып йыйған донйаһы кәрәкмәй. 2. (урта урал, эй) Шаулатыу — *создать беспорядок, шум-гам.* Сырҡыратма инде шул балдарҙы (эй)

**СЫРҠЫРАУ** (һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* сырхаулау — *захворать.* Сырҡырап торам бит әле, балаҡайым, башым ауыртып (һаҡмар)

**СЫРҠЫУЫШ** (урта урал) *с.* көслө тауышлы — *голосистый.* Сырҡыуыш кеше

**СЫРДАҠ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**СЫРЛАМА** (мейәс, ырғыҙ) *и.* әсегән ҡамырҙан майҙа ҡайнатып бешерелгән ашамлыҡ — *хворост (кушанье)*

**СЫРЛАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Тегәнәк — *репейник.* 2. (кариҙел) Эт әсәге — *вьюнок*

**СЫРЛАУ I** (эйек) *и.* йәйә бысҡы — *лучковая пила*

**СЫРЛАУ II** (дим, ырғыҙ) *ҡ.* биҙәкләү — *отделать узорами*

**СЫРЛАШЫУ** (дим, урта, һаҡмар) *ҡ.* серләшеү — *секретничать*

**СЫРЛЫ** (ҡыҙыл) *с.* һырлы — *резной*

**СЫРЛЫ БОЛОТ** (кариҙел) *и.* шекәрә болот — *перистое облако*

**СЫРЛЫЙ** (дим, урта) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫРМАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* иҫке — *ветхий, старый.* Сырмаҡ ызбала торалар (төньяҡ-көнбайыш)

**СЫРМАЛСЫҠ I** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* буталсыҡ — *запутанный.* Сырмалсыҡ эш

**СЫРМАЛСЫҠ II** (дим, урта) *и.* кесерткән ебәге — *повилика.* Сырмалсыҡ сырмалмаға әҙер тора ул, беҙҙең артыбыҙҙа бар (урта)

**СЫРМАЛСЫҠЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* сырмалыу — *обвивать.* Күҙлут сырмалсыҡланып йата

**СЫРМАЛЫУ** (мейәс, урта, эй) *ҡ.* 1. Буталыу — *путаться, мешаться.* Байағы бала йөрөй беҙҙә сырмалып (урта). 2. (эйек, эй) Һырыу — *облеплять, облепить.* Дегәнәккә сырмалған һарыҡ (эйек)

**СЫРМАУ** (һаҡмар) *ҡ.* бәйләү — *завязывать, завязать.* Урындыҡка сырмайһың да баҫаһың

**СЫРМАУЫҠ** (арғаяш) *и.* һырмауыҡ — *ясменник*

**СЫРПАЛАНЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* юхаланыу — *подхалимничать*

**СЫРПЫ I** (урта, һаҡмар) *и.* 1. Талдан үрелгән умарта япмаһы — *плетеная из прутиков крышка для ульев.* Быйыл ҡыш бик ҡаты килә, умарталарҙы ла сырпы менән йабылмаған (һаҡмар). 2. (арғаяш, салйоғот) Кипкән япраҡлы ағас ботағы — *ветка с высохшими листьями*

**СЫРПЫ II** (ҡыҙыл) *и.* ярыҡ — *щель.* Мәмерйәлә йарғанат сырпы ғатына һырығып тора

**СЫРПЫЙ** (ҡыҙыл) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫРПЫҠ** (урта) *и.* балауыҙҙы тотоп тороу өсөн тағара өҫтөнә һалынған арҡыры ағас — *прутики для поддержания воска в колодочных ульях*

**СЫРСА I** (эй) *и.* һөҙлөк — *навар.* Сырсаһы ла сыҡмай, бигерәк йабыҡ

**СЫРСА II** (урта, салйоғот) *и.* сирса — *десна*

**СЫРСАЙ** (арғаяш, салйоғот) *и.* селбәрә — *малек*

**СЫРТЛАМА** (туҡ-соран, урта, һаҡмар) *и.* сыртлаҡ — *кнопка (для одежды)*

**СЫРТЛАУЫҠ I** (дим) *и.* сыртлаҡ — *кнопка (для одежды)*

**СЫРТЛАУЫҠ II** (дим) *и.* ҡар ҡатыш ямғыр — *снег с дождем*

**СЫРТ СӨЙӘГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* умыртҡа — *позвонок*

**СЫРТТАҠ ТАЛ** (мейәс) *и.* һыныусан тал — *ломкий тальник*

**СЫРТТЫҠ** (арғаяш) *и.* арҡалыҡ — *чересседельник.* Һырттыҡ (эй)

**СЫРТЫЛДАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, һаҡмар) *и.* сыртлаҡ — *кнопка (для одежды)*

**СЫРТЫЛДАҠ ЭЛМӘК** (арғаяш) *и.* сыртлаҡ — *кнопка (для одежды)*

**СЫРТЛАТЫУ** (урта) *ҡ.* сөртләтеү — *щелкать.* Теш араһынан сыртлатып төкөрә-төкөрә мәсет йағына боролоп китте

**СЫРХАУ** (урта) *с.* һайланыусан, талымлы — *разборчивый в пище*

**СЫРХАУАТ I** (мейәс) *с.* сырхау — *болезненный*

**СЫРХАУАТ II** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* сырхыуат — *рожа (болезнь).* Сырхыуат (мейәс)

**СЫРХӘМБӘТ** (ҡыҙыл) *с.* һайланыусан, талымлы — *разборчивый в пище*

**СЫРШЫ** (ҡариҙел) *и.* шыршы — *ель*

**СЫРШЫ КҮРКӘҪЕ** (дим) *и.* тубырсыҡ — *шишка.* Сыршы күркәсе (ҡариҙел)

**СЫРЫЛДАҠ I** (ҡыҙыл) *и.* һабан турғайы — *жаворонок*

**СЫРЫЛДАҠ II** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* өй сиңерткәһе — *сверчок*

**СЫРЫМ ИТЕҮ** (ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ, эй) *ҡ.* серем итеү — *вздремнуть*

**СЫРЫМТА** (һаҡмар) *и.* 1. Көҙгө йоҡа боҙ — *осенний тонкий лед.* 2. Ҡайнаған һөт өҫтөнә ултырған яры — *пленка на кипяченом молоке*

**СЫРЫҢҠЫЛАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* сирыңҡылау — *поморщить.* Тимерғәле ғарт, битләрен сырыңҡылап, һыбайға ғарап ҡатты

**СЫРЫШ** (ҡариҙел) *с.* беше, ҡаты — *плотный.* Сырыш ағас

**СЫСАҢЛАУ, СЫСАҢНАУ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Тик тормау — *вертеться.* Сысаңнай торғас, ҡуйан үҙен белгертте (һаҡмар). 2. Һәр ваҡыт күҙ алдында булыу — *быть постоянно на виду.* Һин, улым, бында сысаңлап йөрөмә әле, тоторлар ҙа апкитерләр (ырғыҙ).

**СЫСҠАН ДЕГӘНӘГЕ** (урта) *и.* ваҡ, йоморо ғына һырлан — *вид липучки (мелкая, круглая)*

**СЫСҠАН КИНДЕРЕ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар) *и.* юл япрағы — *подорожник*

**СЫСҠАНСЫҠ I** (ҡыҙыл, урта) *и.* сысҡан типкес — *лунь степной*

**СЫСҠАНСЫҠ II** (көнсығыш диалект, урта, һаҡмар) *и.* әйләнсек — *вертячка*

**СЫСҠАНСЫҠ ҠАЛҠЫУ** (көнсығыш диалект, урта, һаҡмар) *ҡ.* әйләнсек менән ауырыу — *болеть вертячкой*

**СЫСҠАНСЫЛАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* сысҡан тотоу — *ловля мыши.* Төлкө сысҡансылағанда һунарсыны йаҡын йебәрә (мейәс)

**СЫСҠАН УТЫ** (арғаяш, мейәс) *и.* һағын — *струящийся воздух (в теплый солнечный день)*

**СЫСҠАН ҮРТЕ** (ҡыҙыл) *и.* һағын — *струящийся воздух (в теплый солнечный день).* Сысҡан үрте йанһа көн йонсой

**СЫСҠАНҺЫРТ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, урта, эй) *с.* арҡа буйынан ҡара һыҙат үткән ат төҫө — *масть лошади (с черной полосой на спине)*

**СЫСҠАН ӘҮЕРӘТКЕС** (ҡыҙыл, эйек) *и.* сысҡан типкес — *лунь степной*

**СЫТ** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек) *и.* 1. Текмә — *частокол.* 2. (дим) Ситәндән эшләнгән ҡаҙ ояһы — *плетеное гусиное гнездо.* 3. (урта) Рәшәткә — *решетка*

**СЫТҠЫ** (дим) *и.* һытҡы — *угорь (на теле)*

**СЫТЛАУЫҠ** (дим) *и.* ҡар ҡатыш ямғыр — *снег с дождем*

**СЫТЫЙЫУ** (урта, һаҡмар) *ҡ.* сытырайыу — *морщиться, поморщиться.* Йөҙө сытыйған, үҙе һаман көлмәк итәге белән сандырын йабып маташа (һаҡмар)

**СЫТЫР I** (ҡыҙыл) *и.* тармаҡ — *ветвь.* Мөгөҙө сытырлы

**СЫТЫР II** (ҡариҙел) *и.* ҡылыс артындағы иреш буталсығы — *узелок спутавшихся ниток основы (в домашнем ткачестве)*

**СЫТЫРА** (ырғыҙ) *и.* уртаһына ҡаш ҡуйып биҙәкләп көмөштән йәки башҡа төҫлө металдан яһалған биҙәнеү нәмәһе — *предмет украшения из узорчатого серебра или другого цветного металла с драгоценным камнем*

**СЫТЫРАЙ** (һаҡмар, эй) *с.* арҡыры, үҙ һүҙле — *упрямый.* Сытырай геше икәнһең дә (эй)

**СЫТЫРҘАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сатырлау — *тараторить.* Сытырҙап тора, теленә һалынып

**СЫУАҒАПАЙ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**СЫУАЛ** (дим) *и.* 1. Йоморо тимер мейес — *круглая железная печка.* 2. (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, эй) Мейес — *печь*

**СЫУАЛ АРТЫ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, эй) *и.* мейес арты — *запечье*

**СЫУАЛ ҠАШАҒАҺЫ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* мейес ҡашағаһы — *передняя часть печи над шестком*

**СЫУАЛ ТАБАНЫ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, эй) *и.* мейес ҡаҙнаһы — *основание печи*

**СЫУАЛСАН** (ҡариҙел) *и.* 1. Бабасыр — *глист.* 2. Селәүсен — *дождевой червь*

**СЫУАШ КИТАБЫ** (урта) *и.* ҡатлансыҡ — *книжка (часть желудка у животных)*

**СЫУАШ КӘРТЛӘНСЕГЕ** (дим) *и.* ҡатлансыҡ — *книжка (часть желудка у животных)*

**СЫУАШ ӘФТИӘГЕ** (дим) *и.* ҡатлансыҡ — *книжка (часть желудка у животных)*

**СЫУ БУЛЫУ** (көньяҡ диалект) *ҡ.* 1. Ғауғалашыу — *ссориться.* 2. (эйек-һаҡмар) Зыҡ ҡубыу — *расшуметься.* Ҡоҙалар көрәшеп сыу була

**СЫУЗЫҠЛАУ** (дим, ҡариҙел) *ҡ.* ара ҡалдырып ике төрлө ептән һуғыу — *ткать с полосками*

**СЫУЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* үкереү, ҡысҡырышыу — *рычать, реветь.* Мал сыулаша, бүре-фәлән килмәне микән

**СЫУЛАШЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* зыҡ ҡубыу — *расшуметься*

**СЫУСЫТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* маҙаһыҙлау, тынысһыҙлау — *тревожить.* Йөрөй шунда малды сыусытып эте менән

**СЫУСЫУ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Һиҫкәнеү — *встревожиться, вздрогнуть.* Нимәнән сыусығаннарҙыр, тәгәрмәсте эпкиткән йерҙән ҡалдырғаннар (туҡ-соран). 2. (урта урал, һаҡмар) Шаулау — *шуметь.* Сыусымаң әле, ҡырғындар (урта урал). 3. (һаҡмар) Һуҡраныу — *роптать, сетовать.* Әсәй бахыр сыусый. 4. (ҡыҙыл, һаҡмар) Тулау — *биться.* Йөрәгем сыусый

**СЫУ СӘПСЕГЕ** (урта урал) *и.* аҡ сәпсек — *белая трясогузка*

**СЫУ ТЫСҠАНЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көшөл — *крыса водяная*

**СЫУ ҮГЕҘЕ** (арғаяш) *и.* мөншөгөр — *выпь*

**СЫУ ҮЛӘНЕ** (арғаяш) *и.* ылымыҡ — *водоросль*

**СЫУЫЛДЫҠ** (һаҡмар) *и.* шау-шыу — *шум-гам.* Был сыуылдыҡҡа баш ҡаңғырып китте

**СЫУЫН** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* сыу — *плацента (у животных)*

**СЫУЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Кейемдең ултырыуы — *садиться (об одежде).* Йөн күлдәк тиҙ сыуыусан була. 2. Бешкәндә ит аҙыҡтарының һурылыуы — *уменьшение в объеме мясных продуктов при варке*

**СЫФАТ** (дим) *и.* рәсем — *портрет*

**СЫФАТСЫҘ** (ҡариҙел) *с.* һынһыҙ — *непригляд-ный*

**СӘБАҒАШ, СӘБАҒАС** (арғаяш, мейәс) *и.* сыбағас — *цепь*

**СӘБЕ I** (ҡариҙел) *и.* эт тырнағы — *заусеницы*

**СӘБЕ II** (ҡариҙел, урта урал) *и.* шүре энәһе — *ось челнока*

**СӘБЕ III** (урта) *и.* текмә — *частокол*

**СӘБЕК** (арғаяш) *с.* сибек — *тощий, хилый*

**СӘБЕРЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* сабыртыу — *высыпать.* Бәхетйән ҡарттың тәне сәбереп киткән

**СӘБЕРСЕК** (урта урал) *и.* аҡ сәпсек — *белая трясогузка.* Сәберсәк (арғаяш)

**СӘБЕРСЕҮ** (урта) *с.* тиктормаҫ, йылғыр — *подвижный, вертлявый.* Улы бәләкәстән үк сәберсеү бала булты

**СӘБЕРСӘН** (ҡариҙел) *с.* сыпрандаҡ — *вертлявый*

**СӘБЕРТКӘН** (һаҡмар) *и.* ҡыҙамыҡ — *краснуха.* Балам сәберткәнен үткәрә

**СӘБӘК** (арғаяш) *с.* сибек — *слабый, хилый*

**СӘБӘЛӘК** (арғаяш) *и.* сәүек — *моська*

**СӘБӘЛӘНЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* 1. Бәйләнеү — *придираться.* 2. Йөрөү, аҙыу — *развращаться, испортиться*

**СӘБӘП** (урта) *и.* аң, белем — *знание, образование.* Бик сәбәпле геше ул, белмәй ҡалмаҫ

**СӘБӘПЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* башлау — *начать.* Донъйа гөтөүгә сәбәпләндек

**СӘГЕР** (урта) *с.* 1. Зәңгәр — *голубой.* Сәгер гүҙле сабыйы бар. 2. Йәшел — *зеленый.* 3. (ҡыҙыл, урта, эй) Бер юлағы күк, бер юлағы йәшел — *зелено-голубой*

**СӘГӘҮ** (урта урал) *и.* ағас һалмауыр — *деревянный рычаг*

**СӘҘӘП** (арғаяш, ҡариҙел) *и.* төймә — *пуговица (мелкая).* Сәҙәф (дим, минзәлә), һәҙәп (эй)

**СӘҘӘПГӨЛ** (ҡариҙел) *и.* роза гөлө — *роза*

**СӘЙ: СӘЙ СӘЙҘӘҮ** (эй) *ҡ.* сәйгә йөрөшөү — *ходить в гости на чай*

**СӘЙБАЛ** (дим) *и.* йәш бал — *свежий мед*

**СӘЙ БӘШМӘГЕ** (урта) *и.* ҡайын бәшмәге — *чага*

**СӘЙГЕК** (ҡариҙел) *и.* аҡ сәпсек — *белая трясогузка*

**СӘЙГҮМӘС** (урта урал) *и.* бауырһаҡ — *баурсак*

**СӘЙГҮШ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сәйгүн — *чайник*

**СӘЙ ҒАЛАҒЫ** (арғаяш, дим, ҡариҙел) *и.* балғалаҡ — *чайная ложка.* Сәйғалаҡ (урта)

**СӘЙҒОМҒАН** (һаҡмар, эй) *и.* сәйгүн — *чайник*

**СӘЙЕН, СӘЙЕМ** (урта урал, һаҡмар, ырғыҙ) *б.* тиклем — *до.* Иртәнән кискә сәйен өйҙә ултырҙым (һаҡмар)

**СӘЙЕНКӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* сайыр — *древесная сера*

**СӘЙ ЙЕЛӘГЕ** (ҡыҙыл) *и.* ҡурай йеләге — *малина*

**СӘЙЛӘН I** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Сын мәрйен — *природный мелкий коралл.* 2. (ҡариҙел) Ваҡ һиҙәп — *мелкая пуговица*

**СӘЙЛӘН II** (ҡариҙел, һаҡмар) *и.* ләйсән — *первый весенний дождь*

**СӘЙНЕЙ** (дим) *и.* сәйхана — *чайная*

**СӘЙНЕК** (урта) *и.* 1. Сәйнүк — *чайник.* 2. (мәйәс) Ҡомған — *кумган*

**СӘЙНӘМ** (салйоғот, эй) *и.* бер һыныҡ — *кусок (хлеба)*

**СӘЙНӘНСЕК** (дим, туҡ-соран) *с.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**СӘЙНӘҮ** (арғаяш, ҡариҙел, мейәс, урта урал, әй) *ҡ.* 1. Тешләү — *укусить.* Кеше мән болашһаң, эт сәйнәй (арғаяш). 2. (салйоғот) Сиртеү — *клевать (о рыбе)*

**СӘЙНӘҮЕС** (урта) *с.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**СӘЙНӘШКӘК** (мейәс, әй) *с.* тешләүсән, тешләй торған — *кусающая (лошадь).* Сәйнәшкән атҡа йаҡын барма тип торҙом (мейәс). Сәйнәшәк (арғаяш)

**СӘЙСЕ** (урта) *и.* 1. Таған — *стожар.* Сәйсе теркәнек, арыш өйә бар. 2. (дим) Айыу өңөнә тыға торған ботаҡлы ағас — *длинная сучковатая жердь для нападения на медвежью берлогу*

**СӘЙСӘЙНҮК** (дим) *и.* сәйнүк — *чайник*

**СӘЙСӘН** (урта) *и.* ләйсән — *первый весенний дождь*

**СӘЙ СӘСКӘҪЕ** (дим) *и.* сәй үлән — *чайот*

**СӘЙТУҪТАҠ** (дим, ҡариҙел) *и.* сынаяҡ — *чашка (чайная)*

**СӘЙӘСӘТ** (әй) *и.* мәғәнә, сер — *смысл, тайна.* Сәйәсәте барҙыр ахыры һүҙенең

**СӘКЕ** (ҡариҙел) *с.* еңмеш — *капризный.* Әллә ниндәй сәке малайны йебәргәннәр

**СӘКЕЛДӘҮ** (урта) *ҡ.* шаҡылдау — *стучать.* Ғилман ҡарт айырып торған ҡортто һарытырға була таш сәкелдәтә

**СӘКЕЛ САПҠЫ** (ырғыҙ) *и.* тиҙәк киҫә торған бәләкәй көрәк — *маленькая лопаточка для резания кизяка*

**СӘКЕН БАЛТА** (дим) *и.* бәләкәй балта — *маленький топорик.* Сәкен балта белән шәкәр ҙә уаталар

**СӘКЕҢ-СОҠОН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Ваҡ-төйәк — *всякая-всячина.* 2. (әй) *р.* йәшерен — *тайно.* Сәкен-соҡон генә һөйҙәшәләр

**СӘКЕРӘ** (урта урал) *с.* текә — *крутой.* Тау шундай бейек, шундай сәкерә

**СӘКЕТКЕС** (дим) *и.* тәте — *курок*

**СӘКЕШ** (һаҡмар) *с.* бәкес — *вперед насаженная (о косе)*

**СӘКЕШТИМЕР** (һаҡмар) *и.* ҡыҫҡыс — *щипцы для углей*

**СӘКИ** (туҡ-соран) *и.* бәләкәй ялан йомраны — *маленький степной суслик*

**СӘКЛЕ** (дим, ҡариҙел) *к.* саҡлы — *до.* Урманға сәкле бараҫың да, уңға бороласың (дим)

**СӘКМӘ** (дим) *и.* һитә — *перга (пчелиная)*

**СӘКСӘГЕЙ, СӘКСӘКЕЙ** (һаҡмар) *и.* сәксәк — *чак-чак.* Ҡыҙым кигәйне, сәксәкей тигәнде бешерә

**СӘКСӘК** (дим) *и.* бауырһаҡ — *баурсак*

**СӘКСӘККӘ: СӘКСӘККӘ ЙЫЙЫУ** (дим) *ҡ.* туйҙың һуңғы көнөндә сәйгә ҡунаҡ саҡырыу — *ритуал угощения в последний день свадьбы*

**СӘКТЕ** (ҡариҙел) *б.* саҡлы — *до.* Быйылға сәкте

**СӘКТЕРЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* эләктереү — *схватить.* Мин йем һалам, һин һимеҙерәк тауыҡты сәктер

**СӘКҮНӘЙ** (арғаяш) *и.* аумаҡай — *непостоянный.* Ул сәкүнәйгә ышанып йулға сыҡҡас шулай була инде

**СӘКҮШКӘ** (дим, ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* сикәсәй — *чекушка (на оси телеги)*

**СӘКӘ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* һитә — *перга.* Сәкә балы сары была (төньяҡ-көнбайыш)

**СӘКӘ II** (арғаяш) *и.* йәкәл — *бабка*

**СӘКӘЛСӘЙ** (һаҡмар) *и.* йәкәл — *бабка.* Сәкәлсән (әйек)

**СӘКӘЛӘШЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сәкән уйнау — *играть в хоккей*

**СӘКӘН** (дим) *и.* биҙәк — *узор (на холсте)*

**СӘКӘШЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* сәкәләшеү — *перекидываться, перекинуться колкостями*

**СӘЛДЕР** (ҡариҙел, мейәс, әй) *и.* балтыр — *икра (ноги).* Сәлдерен йылтыратып ҡалай йөрөй (әй). Сәлтер (ырғыҙ), сәнтер (ҡариҙел)

**СӘЛДӘТЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* һәлберәтеү — *свесить*

**СӘЛЕЙ** (гәйнә) *и.* сәңгелдәк — *колыбель.* Сәллей (ҡариҙел)

**СӘЛЕНСЕК** (гәйнә) *и.* сәңгелдәк — *колыбель*

**СӘЛЕШ** (ҡариҙел) *с.* еңмеш — *капризный.* Балалары бар ҙа сәлеш

**СӘЛЛЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* *пружина.* Бишек сәллейе

**СӘЛПӘК** (һаҡмар) *и.* сөсө ҡабартма — *пышка из пресного теста.* Сәлпәк, йыуасалар китерҙеләр

**СӘЛПӘРӘМӘ** (урта урал) *р.* селпәрәмә — *вдребезги*

**СӘЛТЕР БАУЫ** (урта) *и.* ойоҡ резинкаһы — *резинка для чулок*

**СӘЛӘҢГЕР** (арғаяш) *с.* ябыҡ — *тощий, худой.* Сәләңгер булһа ла эс майы күп булды

**СӘМ** (урта) *и.* бәхәс — *спор*

**СӘМБҮЛСӘ** (дим, урта, әйек-һаҡмар) *и.* үпкә-бауыр бәлеше — *пирог с ливером*

**СӘМБӘР** (арғаяш) *и.* селбәрә — *малек*

**СӘМБӨРӘ** (арғаяш, урта урал) *и.* тирәс — *обечайка (ободок у решета, сита, лукошка)*

**СӘМБӘТ** (ҡыҙыл) *и.* селбәрә — *малек*

**СӘМГЕЛДӘҮ** (урта) *ҡ.* һелкенеү — *шататься, колебаться.* Тумарҙаҡ кеше баҫтыниһә сәмгелдәп йата

**СӘМГҮЛДӘК** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* сәңгелдәк — *колыбель.* Сәмгелдәк (ҡыҙыл), сәмелдәк (ырғыҙ)

**СӘМСЕЛ** (дим, туҡ-соран, әй) *с.* сәмле — *задорный*

**СӘМСЕЛЕК** (дим, туҡ-соран) *и.* сәмлелек — *задорность.* Ул, йөҙөнә сәмселек сығарып, беҙгә генә урын йуҡтыр инде, тине (туҡ-соран)

**СӘМСӘ** (урта, әйек-һаҡмар) *и.* биҙәк — *узор.* Айағында утыҙ йыллап кейелмәгән сәмсәле ситек (әйек-һаҡмар)

**СӘМҮҢСӘ** (урта) *и.* үпкә-бауыр бәлеше — *пирог с ливером*

**СӘНДЕР** (дим) *и.* 1. Сандыр — *пах.* 2. (дим, ҡариҙел) Енсек — *голень.* Сәлдер (ҡариҙел)

**СӘНЕСКЕ I** (дим) *и.* һалдау — *острога*

**СӘНЕСКЕ II** (дим) *и.* шайтан таяғы — *чертополох.* Сәнескес (һаҡмар)

**СӘНЕСКЕС I** (ҡыҙыл) *и.* сәс ҡыҫтырғыс — *приколка*

**СӘНЕСКЕС II** (арғаяш, ҡыҙыл) *и.* сәнске — *вилка*

**СӘНЕСКӘ I** (дим) *и.* ҡылсыҡ — *ость (у хлебных растений).* Сәнескәле арпа оно ғына бирҙеләр

**СӘНЕСКӘ II** (ҡариҙел) *и.* бәләкәй сана — *салазки.* Сәләскә, сәнәскә (төньяҡ-көнбайыш). Сәнескә белән беҙне нужна йөрөттө (ҡариҙел)

**СӘНЕСКӘК I** (урта) *и.* энәғараҡ — *стрекоза*

**СӘНЕСКӘК II** (урта) *и.* һыйырғойроҡ — *коровяк черный*

**СӘНЕСКӘК III** (ҡыҙыл) *и.* ылыҫ — *хвоя.* Сәнескәк йапраҡ ҡыш та ҡыуармай, йәшел утыра

**СӘНЕСКӘК ҮЛӘН** (һаҡмар) *и.* күҙлут — *пикульник*

**СӘНЕСКӘКЛЕ ГӨЛ** (ҡариҙел, урта) *и. алоэ.* Сәнескеле гөл (ҡыҙыл)

**СӘНСЕК** (мейәс) *и.* енсек — *голень*

**СӘНСЕМ** (ҡыҙыл) *и.* тағара — *палочки, прибиваемые к внутренним стенкам колодочных ульев и бортей, чтобы пчелы могли строить на них соты*

**СӘНСКЕС** (ҡыҙыл) *и.* ҡылсыҡ — *рыбья кость*

**СӘНСКЕС ЭНӘҺЕ** (урта) *и. булавка*

**СӘНСКӘКЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* себенләү — *вести себя беспокойно (о животных).* Эҫе көндә маллар сәнскәкләй инде

**СӘНСӘ** (дим, урта) *и.* сәтәкәй — *мизинец.* Сәнәсә (ҡариҙел), сәнсәй, сәнсәкәй (дим, урта)

**СӘНСӘ БАРМАҠ** (арғаяш, дим) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СӘНСӘКӘЙ БАРМАҠ** (дим, урта) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СӘНТЕЙ** (дим, мейәс) *и.* сәтәкәй — *мизинец.* Сәнтәй (дим, һаҡмар) сәнтей бармаҡ (минзәлә)

**СӘНТЕРӘ** (ҡариҙел) *и.* һәндерә — *полати*

**СӘНТӘКӘЙ** (мейәс, һаҡмар) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СӘҢГЕЛ I** (һаҡмар) *с.* ҡырҡыу — *перекисший.* Сәңгел икмәк

**СӘҢГЕЛ II** (ҡыҙыл) *с.* күк — *синий.* Сәңгел картуф

**СӘҢГЕЛДӘҮ** (урта) *ҡ.* бәүетеү — *качать.* Икәүөсәү алмашлап сәңгелдәйҙәр бәкәс баланы

**СӘҢГЕЛМӘК, СӘМГЕЛМӘК** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* сәңгелдәк — *колыбель*

**СӘҢГЕЛСӘК** (арғаяш, мейәс) *и.* сәңгелдәк — *колыбель*

**СӘҢГЕЛ: СӘҢГЕЛ ТАУЫШ** (ҡыҙыл) *и.* юғары, яңғырауыҡлы тауыш — *высокий голос.* Сәңгел тауышты кеше йырҙай

**СӘҢГЕР** (арғаяш) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**СӘҢГЕРСӘЙ** (дим) *и.* кимерсәк ҡабырға — *нижнее ребро*

**СӘҢГЕРСӘК I** (арғаяш) *и.* сығанаҡ бармаҡ — *безымянный палец*

**СӘҢГЕРСӘК II** (дим) *и.* ҡатлансыҡ — *книжка (часть желудка у животных).* Сәңгәрсәк (һаҡмар)

**СӘҢГЕҮ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* тәндең ҡаты өшөүҙән һыҙлауы — *ныть от холода.* Сәңкеү (урта). Ҡулым шу тиклем сәңкене, ҡайҙа ғына тығып йылытайым (урта)

**СӘҢГӘЛӘ** (ҡыҙыл) *и.* зәңге — *цинга*

**СӘҢГӘРСӘЙ** (дим) *и.* еңгәсәй — *солдатики.* Сәңгәсәй (төньяҡ-көнбайыш)

**СӘҢГӘСӘЙ** (дим) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СӘҢГӘСӘР** (мейәс) *и.* 1. Сәңгәр — *теленок, родившийся летом, в возрасте до двух лет.* 2. (һаҡмар) Өс йәшлек тыу тана — *телка, не телившаяся до трех лет*

**СӘҢЕЛДӘК** (дим, урта) *и.* бәүелсәк — *качели.* Сәңкелтәк (урта)

**СӘҢЕРСӘК** (дим) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СӘП I** (ҡариҙел) *и.* эт тырнағы — *заусеницы*

**СӘП II** (урта) *и.* ситән — *плетень*

**СӘП III** (мейәс) *и.* маҡсат — *цель.* Сәбеңә ирешә амай хур булырһың

**СӘП БАРМАҠ, СӘТ БАРМАҠ** (мейәс, урта) *и.* сәтәкәй — *мизинец.* Сәпес бармаҡ (мейәс)

**СӘПЕК** (мейәс, эй) *с.* сибек — *хилый*

**СӘПЕН-СӨПӨН** (туҡ-соран, ырғыҙ) *р.* аҙ ғына — *понемногу.* Сәпен-сөпөн генә ашаны ла, тағын сығып йөгөрҙө (туҡ-соран). Сәпе-сөпө (эй)

**СӘПЕРЛӘҮ** (урта) *ҡ.* супырҙау — *плескаться*

**СӘПЕҮ** (ырғыҙ, эй) *ҡ.* тасҡау — *споласкивание и отжимание сливочного масла в воде*

**СӘПИ ТУП** (эй) *и.* туп уйыны — *игра в мяч*

**СӘПИЛ АЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* бүрәнәнең дүрт яғын да яндап алыу — *кромление бревен с четырех сторон*

**СӘПКЕ** (мейәс) *и.* тәпке — *тяпка*

**СӘПКӘН** (урта) *и.* сәкмән — *чекмень*

**СӘПКӘШ** (эйек) *с.* үҙһүҙле — *упрямый*

**СӘПЛЕ** (ҡариҙел) *с.* нескә — *тонкий*

**СӘПСЕК** (арғаяш, дим, ҡариҙел, урта, һаҡмар, эй) *и.* 1. Турғай — *воробей.* 2. (урта) Буҙ турғай — *жаворонок.* 3. (дим, урта, эйек-һаҡмар) Аҡсәпсек — *белая трясогузка*

**СӘПСЕК ЙЕЛӘГЕ** (һаҡмар) *и.* ер еләге — *клубника*

**СӘПСЕК МӘГЕ** (дим) *и.* ялан мәге — *дикий мак*

**СӘПСЕМ** (урта) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Беҙ ҡумырыҡ ҡатайлар, тәнкәселәр сәпсем ҡатайлар. Сәпсим (арғаяш, туҡ-соран, эй)

**СӘПСЕНЕҮ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *ҡ.* ярһыу — *нервничать, горячиться.* Бөгөн эшләп бумай тип сәпсенә башлағайным да, йарай инде тип туҡтап ҡуйҙым (туҡ-соран)

**СӘП-СӨП ИТЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* сапылдатыу — *чмокать (губами при еде).* Сәп-сөп итеп бер-ике ҡаба ла уйынға йөгөрә

**СӘПСӘННӘҮ I** (дим) *ҡ.* 1. Сыпранлау — *не стоять спокойно на месте.* 2. (урта) Күп һөйләнеү, кеше һүҙенә ҡыҫылыу — *вмешиваться в чужой разговор*

**СӘПСӘННӘҮ II** (туҡ-соран) *ҡ.* ашаныу, яланып тороу — *облизываться*

**СӘПСӘҮ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* 1. Ваҡ сәпсәү — *малый зуек.* Сәпсәүҙең айағы оҙон, күл буйында йөрөй. 2. (салйоғот) Аҡсәпсек — *белая трясогузка*

**СӘПҮК БАШ I** (эй) *и.* йөҙләкһеҙ калош — *тупоносая калоша*

**СӘПҮК БАШ II** (эй) *и.* аҡылға еңел — *легкомысленный*

**СӘПӘК I** (туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* һыйыр тиҙәген һаламға ҡушып, сәпәләп эшләнгән яғыулыҡ — *кизяк*

**СӘПӘК II** (урта урал) *и.* кер туҡмағы — *колотушка бельевая*

**СӘПӘКЛӘҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* тасҡау — *отжимать, лепить в форме лепешки.* Алабота алып, туң гартуфты алып, сәпәкләп ашаныҡ

**СӘПӘКӘ ҺУҒЫУ** (урта) *ҡ.* сәпәкәйләү — *хлопать в (ладоши)*

**СӘПӘЛӘК** (һаҡмар) *и.* умарта күбәләге — *роевница.* Сәпәләк умартаға инеп күкәй һалып ҡаса

**СӘПӘҢЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* арлы-бирле, йыбанып ҡына ашау — *есть без аппетита, есть нехотя.* Сәпәңләп, урыҡ-һурыҡ ашаныр ҙа йөрөр был

**СӘПӘҢ-СЕЛӘҢ** (һаҡмар) *р.* арлы-бирле, йабанып ҡына — *кое-как, нехотя.* Сәпәң-селәң итеп ултырғансы, туйа ғына аша ла гит

**СӘПӘТЕҮ** (эй) *ҡ.* һыу өҫтөнән таш кәйелтеү — *печь «блинчики» (кидать по воде камешки).* Таш сәпәтеп көн буйы һыуҙа йөрөй

**СӘПӘҮ** (эй) *ҡ.* ашлағандан һуң епте сәпәмә менән йомшартыу — *колотить нитку с вальком*

**СӘРБИ АҒАСЫ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* *акация*

**СӘРГӘЙ** (дим) *и.* ташбаш — *пескарь*

**СӘРГӘНСЕК** (эйек) *и.* ҡатлансыҡ — *книжка (часть желудка у животных).* Сәркәнсек (дим)

**СӘРҘӘК БАШ** (мейәс) *с.* йүнһеҙ — *бестолковый.* Ул сәрҙәк баштың шул булыр

**СӘРЕ** (салйоғот) *б.* тикле — *до.* Тыуғандан үлгәнсә сәре. Сары (арғаяш)

**СӘРЕЛТӘК** (урта) *с.* кире — *упрямый.* Бер сәрелтәк кенә малайым бар

**СӘРЕҮӘР АҒАС** (мейәс) *и.* *акация*

**СӘРКЕШ** (ырғыҙ) *и.* ялан йомраны — *суслик степной*

**СӘРКӨШ** (урта) *и.* түбәсәй — *заглушка (у самовара)*

**СӘРКӘ** (һаҡмар) *и.* селбәрә — *малек*

**СӘРКӘШ I** (ҡыҙыл) *и.* екке үгеҙ — *ездовой бык*

**СӘРКӘШ II** (эй) *с.* үҙһүҙле — *упрямый.* Бигерәк сәркәш бала

**СӘРМӘ I** (һаҡмар) *и.* намаҙлыҡ — *коврик, молитвенник.* Сәрмәне килен туйҙа ҡайныһына бүләк итә

**СӘРМӘ II** (ҡыҙыл) *и.* материянан сигеп, дүрткелләп тегелгән өҫ кейеме һалып йөрөтә торған муҡса — *четырехугольная сумка, сшитая из материи*

**СӘРМӘ ТӨБӨ** (һаҡмар) *и.* 1. Килендең ҡәйнәһенә биргән иң ҙур бүләге — *ценный подарок невестки свекрови.* 2. Килендең оло еңгәһенә биргән бүләге — *подарок невестки старшей снохе*

**СӘРМӘ: СӘРМӘ ЙӨКЛӘП БЕЙЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* туйҙың һуңғы көнөндә сәрмә йөкмәп бейеп аҡса йыйыу йолаһы — *свадебный ритуал — пляска, сопровождаемая сбором денег*

**СӘРПЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* сәрпәкләү, ваҡлап ярыу — *расщеплять полено на лучинки.* Утын сәрпеп бир йәһәт кенә

**СӘРПЕҮСЕ** (һаҡмар) *с.* һаҡсыл — *бережливый.* Мөхәмәтйәр бик сәрпеүсе, бороңғо нәмәләрҙе ғарауға бар

**СӘРПЕШ** (дим) *и.* түбәсәй — *заглушка (у самовара).* Сәрпүш (урта)

**СӘРПӘК БАЛТА** (һаҡмар) *и.* тараҡ балта — *плотничий топор*

**СӘРСӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тиктормаҫ кеше — *шалун, непоседа.* Сәрсән сәсрәп бара (урта урал)

**СӘРСӘҢКЕ** (урта) *с.* 1. Үпкәсел — *обидчивый.* 2. Үткер — *бойкий.* 3. и. ҡыйшандаҡ — *кокетка.* 4. (дим) *и.* ырғандаҡ — *попрыгун, попрыгунья*

**СӘРТЛӘК I** (ҡыҙыл) *и.* йоҡа, кәйелтмәк таш — *плоский, тонкий камень*

**СӘРТЛӘК II** (туҡ-соран) *и.* артһыҙ туфли — *шлепанцы*

**СӘРТЛӘҮЕК** (урта) *и.* сәтләүек — *орех.* Сәрттәүек (арғаяш)

**СӘРТӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* күбеү — *выпучиваться (о животе).* Эсен сәртәйтеп килеп тә йеткән

**СӘРХӘТЛЕ** (урта) *с.* матур — *красивый.* Сәрхәтле йалан

**СӘРӘҢГЕ** (арғаяш) *с.* арыҡ — *худосочный (о животных)*

**СӘРӘТӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* зәржә — *сныть.* Зәрәтә (гәйнә)

**СӘС I** (урта) *и.* шөйтө, шөйтө күҙе — *навой*

**СӘС II** (урта) *и.* тарамыш — *сухожилие.* Сәсе (дим)

**СӘС АҒАСЫ** (ҡыҙыл) *и.* киндер һуҡҡанда ireш башынаептәрҙе теҙә торған еп йәки ағас — *дерево для нанизывания ниток в домашнем ткачестве*

**СӘСАУЫРЛЫҠ** (урта) *и.* һумлыҡ, тәңкәле сәсүрмә — *накосник с рублевой монетой.* Сәс ауыртмағы (дим)

**СӘСЕ** (дим) *и.* таған — *стожар (для сушки сена).* Ҫыулы бесәнде сәсегә элеп киптерәләр

**СӘСЕЛЕҮ** (дим, туҡ-соран) *ҡ.* таралыу — *рассеяться.* Ҡыпсаҡ ырыуы туҡ буйына ла сәселгән (туҡ-соран)

**СӘСЕМ I** (эйек) *и.* сәсеү — *посев.* Былтыр сәсем уахытында килгәйнеләр

**СӘСЕМ II** (мейәс, эй) *и.* сәнсем — *охапка сена или соломы.* Бер сәсем бесән йуҡ (эй)

**СӘСЕРӘШЕҮ** (урта) *ҡ.* таралыу — *рассыпаться, рассеяться.* Дәнгә сәсерәшеп сабыртып киткән бер ҡыҙыл нәмә

**СӘСЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Сәнсеү — *втыкать.* Бағана сәсеү. 2. (мейәс) Сағыу — *жалить.* Бала ғорт сәскән

**СӘС ЙАРЫУЫ** (ҡыҙыл) *и.* урай — *вихри на макушке*

**СӘСЙЫЛАН** (дим) *и.* ҡылйылан — *волосатик*

**СӘСКЕС I** (урта) *и.* билсән — *осот*

**СӘСКЕС II** (ҡыҙыл) *и.* сәнске — *вилка*

**СӘСКӘ АУЫРЫУЫ** (мейәс) *и.* күкһәү — *чахотка*

**СӘСКӘ БИЛ** (арғаяш) *и.* рәшә — *овод (овечий)*

**СӘСКӘБӘРӘС, СӘСКӘБӘРӘН** (дим) *и.* яҙғы бәрәс — *ягненок весенного окота*

**СӘСКӘ ЙӨН** (ҡыҙыл, эй) *и.* йәйге йөн — *летняя шерсть*

**СӘСКӘК** (ҡыҙыл) *и.* 1. Шайтантаяҡ — *чертополох.* 2. (эй) Ҡаяу — *жало.* Бал ҡорто сәскәге. 3. (мейәс) Балыҡ энәһе — *рыбья игла*

**СӘСКӘКТЕ БИЛСӘН** (мейәс, салйоғот) *и.* һары билсән — *бодяк полевой*

**СӘСКӘКТЕ ГӨЛ** (мейәс, эй) *и.* *алоэ*

**СӘСКӘКТӘҮ** (ҡыҙыл, урта урал) *ҡ.* 1. Себенләү — *вести себя беспокойно (о животных).* 2. (эй) Борсолоу, хәүефләнеү — *беспокоиться, переживать.* Улың үҫкәс, хатын ала баштаһа, һин йөрөрһөң әле сәскәктәп

**СӘСКӘЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* аш үтмәү — *сужение пищевода*

**СӘСКӘНӘЙ** (дим) *и.* яҙғы бәрәс — *ягненок весеннего окота*

**СӘСКӘСӘЙ** (һаҡмар) *и.* әлморон — *шиповник*

**СӘСЛӘН** (арғаяш) *и.* ҡылйылан — *волосатик*

**СӘСМӘ** (ҡыҙыл, урта) *и.* сәсеп үҫтергән тарма — *посеянная конопля*

**СӘСМӘ ЙЕБЕ** (ҡыҙыл, урта) *и.* киндер ебе — *нитка конопляная*

**СӘСМӘҮ** (арғаяш, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* сәсбау — *косоплетка*

**СӘСМӘҮБАШ** (ҡыҙыл) *и.* бесәй борсағы — *просвирняк*

**СӘСМӘҮ ЙАЛЫ** (эйек) *и.* кикел — *челка*

**СӘСИҮК** (һаҡмар) *и.* һарымһаҡ — *чеснок*

**СӘСНӘК** (урта) *с.* сәнскәк — *колючий*

**СӘСРӘҢНӘҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* ҡыҙыу — *горячиться.* Сәсрәңнәп килеп ингәйне, йат кешене күреп туҡтап ҡалды

**СӘСТЕҮЛӘН** (арғаяш) *и.* ҡылған — *ковыль*

**СӘСТӘҢКӘ** (ҡыҙыл, урта, ырғыҙ) *и.* тәңкә теҙеп эшләнгән сәсбау — *накосник, украшенный монетами*

**СӘСҮРМЕС** (урта) *и.* сәсбау — *накосник.* Сәсүрмесендә сулпылары сылтырап тора. Сәсүргес (дим, ҡариҙел)

**СӘСҮРМӘ** (салйоғот) *и.* сәсбау — *накосник*

**СӘСҮНКӘ** (ҡариҙел) *и.* *чесанки*

**СӘСӘ I** (ҡыҙыл) *и.* айыу өңөнә тыға торған ботаҡлы ағас — *длинная сучковатая жердь, которой вызывают медведя из берлоги*

**СӘСӘ II** (һаҡмар) *и.* сәсәтмә — *коклюш*

**СӘСӘ III** (ҡыҙыл) *и.* кикел — *челка*

**СӘСӘК I** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* умырзая — *горицвет*

**СӘСӘК II** (ҡыҙыл) *и.* суҡ — *кисть.* Иңербауҙың башын сәсәктәп тороп ҡуйған

**СӘСӘК АНАҺЫ** (әй) *и.* сәсәк сығып үткәндән һуң сыҡҡан шеш — *опухоль, появившаяся после оспы.* Сәсәк атаһы (мейәс), сәсәк инәһе (ҡыҙыл), сәсәк ойаһы (урта)

**СӘСӘКЙАЛ** (һаҡмар) *и.* кикел — *челка*

**СӘСӘК ҺӨЙӘГЕ** (урта) *и.* сәсә һөйәге — *щеточная кость (у лошади)*

**СӘСӘ МӨЙӨҘӨ** (ҡыҙыл) *и.* сәсә һөйәге — *щеточная кость (у лошади)*

**СӘСӘМӘ** (дим, ҡыҙыл, урта) *и.* сәсәтмә — *коклюш*

**СӘСӘН** (дим, урта) *с.* 1. Ҡыҙыу — *вспыльчивый.* 2. Усал — *злой.* Сәсәнлегенә барып туҙынып сығып китте ти ҙә (дим)

**СӘСӘҮ I** (урта) *р.* һирәк — *редкий (о плодах).* Быйыл муйылы сәсәү булты

**СӘСӘҮ II** (урта) *и.* сәсә һөйәге — *щеточная кость (у лошади)*

**СӘТ БАРМАҠ** (мейәс) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**СӘТЕЛДӘТЕҮ** (дим, урта) *ҡ.* сапылдатыу — *плескать.* Айаҡларын сәтелдәтеп йөҙә (дим)

**СӘТЕРЛӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* сатырлау — *тараторить.* Бисә сәтерләй башлаһа, түҙем генә бирһен (һаҡмар)

**СӘТЕРСӘН** (ҡариҙел) *с.* уңған — *проворный*

**СӘТЛӘҮЕК** (мейәс, урта урал) *и.* бауырһаҡ — *баурсак*

**СӘҮ** (арғаяш, һаҡмар, әй) *ҡ.* сеү — *тише.* Сәү, балдар (әй)

**СӘҮГЕС, СӘҮГЕШ** (мейәс) *и.* сәйгүн — *чайник*

**СӘҮҘӘКӘЙ** (мейәс) *с.* сибек — *слабый, хилый.* Сәүҙәкәй бала

**СӘҮЕК** (салйоғот, һаҡмар) *и.* һоҫҡо — *совок*

**СӘҮЕКЛЕ** (дим, ҡыҙыл) *с.* һөйөклө — *любимый*

**СӘҮЕЛ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* сауҡа — *молодой березняк*

**СӘҮЕМ** (ҡариҙел) *и.* кәләп буйының бөртөгө — *три нитки мотушки (в домашнем ткачестве)*

**СӘҮЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Һөйөү — *любить.* 2. (мейәс) Өйрәтеү — *учить, научить*

**СӘҮКЕЛДӘҮ** (әй) *ҡ.* иркәләү — *ласкать, приласкать*

**СӘҮМӘЛЙЕҮ** (мейәс) *ҡ.* бәүелеү — *раскачиваться.* Сәүмәлйеп атлай

**СӘҮКӘ** (урта) *и.* һөт өҫтөнә ултырған шекәрә — *пленка (на молоке)*

**СӘҮКӘ ЙЕП** (арғаяш) *и.* кәтүк еп — *катушечные нитки*

**СӘҮКӘЛӘК** (ырғыҙ) *и.* ошаҡсы — *кляузник*

**СӘҮМӘЛӘҮ** (дим, туҡ-соран) *ҡ.* сәүмегеү — *опрокидываться.* Сәңгелдәктән сәүмәләп йығылыуы ихтимал (туҡ-соран)

**СӘҮСӘЛӘК** (дим, урта урал, ырғыҙ) *с.* 1. Сабырһыҙ — *беспокойный.* Киленнәре бигерәк сәүсәләк, күҙләре уйнап тора (ырғыҙ). 2. (дим) Һүҙсән — *разговорчивый*

**СӘХАТ** (ҡариҙел) *и.* болан — *олень*

**СӘХЕТ** (туҡ-соран) *с.* һаран — *скупой.* Сәхет кешенең дуҫлары күп булмай, малы күп була

**СӘХӘРӘ** (ырғыҙ) *и.* сәхрә — *живописная местность.* Бабай тауына сәхәрәгә сығабыҙ

**СӘХӘТ** (мейәс) *и.* дауа — *лекарство.* Тәнгә сәхәт, йәнгә ҙур файҙа

# Ç

**ÇАБА** (дим, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* һаба — *кожаный сосуд с узким горлышком, сделанный из шкуры животных*

**ÇАБАЙ** (дим) *с.* 1. Иҫәр — *глупый, бестолковый.* 2. Һушһыҙ — *рассеянный.* Мин үҙем çабай хатын

**ÇАБАЙЛАНЫУ** (дим) *ҡ.* аҡылдан яҙыу — *сходить с ума*

**ÇАБАҠЛАУ** (дим) *и.* яңаҡ тирәһендә буй-буй тәңкә тояҡ төшөп торған ҡашмау — *женская головная повязка с монетными кистями*

**ÇАБАУ** (дим) *с.* иҫәр — *глупый, бестолковый*

**ÇАБЫР** (ырғыҙ) *с.* сабыр — *терпеливый.* Ныҡлы çабыр инәçе

**ÇАҘАН** (дим, туҡ-соран) *и.* һаҙан — *сазан*

**ÇАҘКҮПЕР** (дим) *и.* күтер — *трясина*

**ÇАҘМЫРТ** (дим) *и.* һаҙлыҡ — *болотистая местность*

**ÇАЗМЫТ ПЕСӘНЕ** (дим) *и.* күрән — *осока*
**ÇАЙЛАНМЫШ** (туҡ-соран, ырғыҙ) *с.* һайланған — *выборный.* Ул саҡта çайланмыш ҡартлар хәл иткән бөтә дамғаларҙы (ырғыҙ)
**ÇАЙЫҠ** (дим) *с.* шыйыҡ, һай — *поверхностный (о грамотности).* Белемем çайыҡ инде, балам
**ÇАҠАЛ** (дим) *и.* тәрәш етендең иләнә торған осо — *конец пучка прядильного льна*
**ÇАҠАЛСАН** (дим) *и.* бейә һөтләкәне — *молочай кобылий*
**ÇАҠАЛТАЙ** (дим) *и.* бәләкәй муйынса — *вид женского нагрудника, украшенный монетами, кораллом*
**ТУНАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* туҡмау — *бить.* Давай теге кешене кендек белән тунарға

**ТУНАУ: ТОҠЛАП ТУНАУ** (урта) *ҡ.* йәнлек тиреһен ярмайынса тунау — *сдирать шкуру в целом виде*

**ТУНАУ БАЛЫ, ТУҢНАУ БАЛЫ** (урта) *и.* туңдау, умартала ҡышлаған бал — *остаток зимнего запаса меда*

**ТУНИ** (гәйнә) *и.* быйма — *валенки*

**ТУН ЙАРПЫҺЫ** (һаҡмар) *и.* иҫке тундан алынған ямаулыҡ — *заплатка, кусок шкуры из старой шубы*

**ТУҢ I** (һаҡмар) *и.* ҡалҡыулыҡ ер — *холм.* Атың туң башында йөрөй

**ТУҢ II** (урта) *с.* сей, өлгөрмәгән — *неспелый (о ягодах).* Туң йеләкте килтергән

**ТУҢ III** (гәйнә, ҡариҙел) *с.* 1. Наҙан — *неграмотный.* Ата-инә уҡытмаҙы, туң ҡалтыҡ (ҡариҙел). 2. (ҡыҙыл, урта) Һөйләшмәҫ, ҡараңғы сырайлы — *молчаливый, неприветливый.* 3. (эйек-һаҡмар) Һалҡын күңелле — *равнодушный*

**ТУҢ: ТУҢ КИЛЕҮ** (урта) *ҡ.* көҙгө туңғаҡ башланыу — *первые заморозки.* Тунһыҙҙарға туң килде

**ТУҢАЙАҠ** (урта, урта урал, эй) *и.* туйға саҡырылмай килгән кеше — *человек, явившийся на свадьбу без приглашения*

**ТУҢАҘЫУ, ТУҢҒАҘАУ, ТУҢАҘЫТЫУ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* туңдырыу — *подморозить.* Йаҙғы йел төңгөлөккә туңаҙыған ҡар битен әлдән-әле һыйпап үтә (эйек). Иртәнсәк бик туңаҙытҡан ине, көндөҙ йепшене. Йер туңаҙып малдар кәртәгә ингәс, уны һалдат хеҙмәтенә саҡырҙылар (урта)

**ТУҢҒАЛАҠ, ТУҢҠАЛАҠ** (ҡариҙел) *и.* туңғаҡ — *мерзлота.* Туңғалаҡ әйе ул көнне

**ТУҢДАТЫУ** (эй) *ҡ.* һуҡҡан киндерҙе ҡарға күмеп ағартыу — *отбеливать холст в снегу*

**ТУҢҠАС** (һаҡмар) *с.* ҡыҫҡа, тоҡос — *короткий, куцый.* Күлдәгендең артын туңҡас итеп теккән бит

**ТУҢҠАМБАШ: ТУҢҠАМБАШ КИТЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* баш аша әйләнеү — *кувыркаться*

**ТУҢҠАҢНАУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Эйелеп йүгереү — *бегать гуськом.* 2. (ҡыҙыл) Бөкөрәйеп йөрөү — *ходить сгорбившись.* Туңҡаңнап һыйыр һауам әле мин. 3. (һаҡмар) Бер батып, бер ҡалҡыу — *тонуть и всплывать.* Бер түңгәк туңҡаңнап ағып килә

**ТУҢҠОЙОРОҠ** (ҡыҙыл) *и.* ала таштурғай, шаҡылдаҡ *(ташҡа оялай, шунда бала сығара)* — *луговой чекан*

**ТУҢҠЫЛДАҠ I** (ҡыҙыл, урта) *и.* дуңғырҙаҡ — *ботало*

**ТУҢҠЫЛДАҠ II** (урта) *и.* ауыр ҡуҙғалыусан, булдыҡһыҙ — *медлительный, неспособный*

**ТУҢҠЫС, ТОҢҒОС** (арғаяш) *и.* баш бала — *первенец*

**ТУҢНАУ** (ырғыҙ) *и.* туңғаҡ — *мерзлота*

**ТУҢЫРТҠА** (һаҡмар) *и.* тумыртҡа — *дятел*

туңҡаһыу I - ҡалҡыу I (КӘ, №2-2011)

**ТУҢҺҮКӘ** (һаҡмар) *с.* баҙнатһыҙ — *несмелый.* Туңһүкә бер туйған, элдем-һалдым ике туйған

**ТУҢЫҘЫУ** (урта) *ҡ.* туңдырыу — *заморозить.* Хаттаки туңыҙып ҡуйа ҡымыҙҙы. Туңырыу (арғаяш)

**ТУП I** (һаҡмар) *и.* ара — *родовое подразделение.* Сурайҙа Килдебай тубы тип йөрөтәләр, мында туплар йуҡ

**ТУП II** (дим) *и.* үбәк — *кусок войлока или холстины, которым обматывают хомутину*

**ТУПА** (эй) *с.* ығыш — *копотливый.* Тупа кеше ул

**ТУПАЙ** (ырғыҙ) *и.* ашыҡ *(атта) — альчик (у лошади)*

**ТУПАЙ: ТУПАЙ БУЛМА!** (ҡыҙыл) баланы йығылыуҙан иҫкәртеү һүҙе — *слово предупреждения ребенка, чтобы он не упал*

**ТУПАЙСЫҠ** (һаҡмар) *и.* 1. Ус һөйәле — *мозоль на ладони.* 2. (ҡыҙыл) Тубыҡ, тубыҡ ҡапҡасы — *колено, коленная чаша*

**ТУПАЙЫУ I** (урта) *ҡ.* ослайыу — *торчать, выпячиваться.* Тауҙар тирәһендә тупайып торған таштарҙан башҡа нәмә күренмәй

**ТУПАЙЫУ: КҮҘ ТУПАЙЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* таҫрайыу — *выпучиться (о глазах)*

**ТУПАҠКҮҘ** (эйек-һаҡмар) *с.* таҫрыҡ — *пучеглазый.* Атылып сыға йаҙып торған тупаҡ күҙле, суҡмар танаулы улы бар

**ТУПАЛАМ, ТУПАЛАМА** (ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* 1. Аҡһаҡ ауырыуы *(малда) — хромота (болезнь у животных).* Һыйыр тупалам менән ауырыһа, малайҙарҙың һейлеге килешә (һаҡмар). Тупалан (ырғыҙ). 2. (һаҡмар) Ревматизм. Тупаламдан кәртүф бешереп, ҡабығы белән һыуына ултыраһың. 3. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Зәңге — *цинга*

**ТУПАЛАҒЫМ** (дим) *ы.* баланы иркәләү һүҙе — *ласкательное слово к ребенку*

**ТУПАЛАҠ** (дим) *и. буханка.* Бер тупалаҡ ҡына булды икмәк

**ТУПАЛАҠ ҺУҒЫУ** (салйоғот) *и.* шар һуғыу — *игра в шары*

**ТУПАЛАУ** (урта) *ҡ.* һупалау — *знать приблизительно, неточно.* Ары-бире генә бер-ике көйҙө тупаларға өйрәнгәйне Ирғәле

**ТУПАЛСАЙ I** (һаҡмар) *и.* күмәгәй — *кадык*

**ТУПАЛСАЙ II** (һаҡмар) *с.* тупаҡ — *тупой.* Һыныҡ тупалсай мөгөҙҙәрен, ҡамыт баҫып ҡатырған йелкә буйҙарынан һыйпаланым

**ТУПАН I** (һаҡмар) *и.* уҡ башағының төрө — *вид наконечника стрелы*

**ТУПАН II** (арғаяш) *и.* һыйыр аяғында иҙелмә ауырыуы — *панариций.* Тойағына тупан төшкән

**ТУПАН: ТУПАН БУЛЫУ** (кариҙел) *ҡ.* зәңге менән ауырыу — *заболеть цингой*

**ТУПАНАЙ** (урта) *и.* төпөш — *коротыш*

**ТУПАНАҠ** (дим) *и.* сүмесбаш — *головастик*

**ТУПАННАУ** (ҡариҙел) *ҡ.* аҡһап-туҡһап атлау — *ходить с трудом, прихрамывая.* Тупаннап мүк жолҡарға бардым

**ТУПАР** (эйек-һаҡмар) *с.* тупаҫ — *грубый.* Телдәре тупар

**ТУПАР, ТУПАР ЙЕЛӘК, ТУПАРБАШ** (урта) *и.* ер еләге — *клубника*

**ТУПИҠ, ТУПИК** (ҡариҙел) *с.* тупаҡ — *круглый.* Ике башы ҙа тупиҡ орсоҡ кеүек ҡорт. 2. Ҡыйыҡһыҙ — *без крыши*

**ТУПИҠ: ТУПИҠ БАРМАҠ** (дим) *и.* тупыс бармаҡ — *палец без одной фаланги*

**ТУПИЛ** (урта урал) *и.* тирәк — *тополь*

**ТУПИМ** (ҡариҙел) *с.* тупаҫ — *грубый.* Мында тупим халыҡ булған

**ТУП: ТУП КЕШЕ** (арғаяш) *и.* өндәшмәҫ кеше — *молчун*

**ТУПҠЫП: ТУПҠЫП ЙАТЫУ** (эй) *ҡ.* күп булыу — *быть многочисленным.* Балалары тупҡып йата. Туптырҙап йатыу (ҡыҙыл)

**ТУПҠЫТЫУ** (эй) *ҡ.* бер-бер артлы тотоу — *ловить подряд.* Ҡармаҡ менән балыҡты тупҡытабыҙ ғына

**ТУПЛАН** (урта) *и.* эскадрон. Башҡортларҙың Алдар батыр башлығындағы атлы тупланы йебәрелде

**ТУПЛАУ I** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* малдарҙың һыулау урыны — *водопой.* Туптау (урта урал, эй). Сәйҙегүл ҡаршыһында туптауҙа йата мал эҫе үткәнсе. Туплау (төньяҡ-көнбайыш)

**ТУПЛАУ II** (урта) *ҡ.* өйөлөү — *скопиться.* Туплап йаталар һарыҡлар

**ТУПЛАУ III** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бесән ҡатыһы — *объедья*

**ТУПЛАУ IV** (ырғыҙ) *ҡ.* бәргесләү — *бить, ударить.* Килһен әле, ни йетте шуның менән туплап сығарырмын

**ТУПЛЫҠ КҮҘ** (урта) *и.* таҫрыҡ — *пучеглазый*

**ТУПРАҒӨЙ** (һаҡмар) *и.* тупаҡ өй — *дом с плоским верхом*

**ТУПРАҠҪА** (урта) *и.* ҡолаҡбау — *гуж.* Тупраҡса (һаҡмар)

**ТУПРАҠ ТЫЙҒЫС** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ҡарабура, нигеҙ буйы — *завалинка.* 2. Иң өҫкө ниргә — *верхний венец*

**ТУПРАЙЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бысраныу, бурьяҡланыу — *помутнеть.* Йылға тупранған, күрәһең үрҙә балыҡ һөҙгәннәр

**ТУПСА I** (урта урал) *и.* ишек күгәне — *дверная петля*

**ТУПСА II** (ҡариҙел) *и.* 1. Күтәрмә баҫҡысы — *ступеньки крыльца.* 2. Күтәрмә — *крыльцо*

**ТУПСАЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* сурайыу — *опухать.* Ҡуллар тупсайыпөткән, һаулығын йуғалтҡан

**ТУПСАЛАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ҡатлы-ҡатлы итеп тегеү — *нашивать, накладывая друг на друга (о монетах на одежде)*

**ТУПСАН АТ** (урта) *и.* аяҡтары ҡыҫҡараҡ тәпәш ат — *низкорослая порода лошади*

**ТУПСАҢЛАУ, ТУПСАҢНАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* аҡһаңлау — *прихрамывать.* Ғилминур тупсаңлап атлап киләсе

**ТУПСЫ I** (мейәс) *и.* бармаҡ быуыны — *сустав пальцев рук*

**ТУПСЫ II** (дим) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Тупсы иҫәр ул

**ТУПСЫ БАШЫ** (ҡыҙыл) *и.* тупсыубаш *(аттың алғы аяғының ҡалаҡ һөйәгенә тоташҡан урыны) — верхний кончик плечевой кости.* Тупсы башына ҡамыт тейгән

**ТУПСЫУ I** (арғаяш, ҡыҙыл, эй) *и.* 1. Малдың алғы аяғының кәүҙәгә тоташып торған йоморо башы — *округленный кончик сустава передних ног скота.* 2. (мейәс) Яурын һөйәге — *плечевая кость.* 3. (эйек-һаҡмар) Терһәк быуынының башы — *наконечник локтевого сустава.* 4. (ҡыҙыл) Аттың ҡойроҡ һөйәгенең осо — *копчик.* 5. (ҡыҙыл, урта) Ҡоштарҙың ҡанат төбө — *корень крыльев*

**ТУПСЫУ II** (дим, ҡариҙел) *ҡ.* 1. Иҙеү баҫҡанда сиккән һымаҡ итеп тегеү — *вид шитья.* 2. (ҡыҙыл) Арҡан төйнәү — *делать узлы на веревке*

**ТУПСЫУ III** (эй) *ҡ.* интегеп һөйләү — *объясняться заикаясь*

**ТУПСЫУА** (арғаяш) *и.* беләҙек — *браслет*

**ТУПСЫУБАШ** (ҡыҙыл) *и.* яурын һөйәге — *плечевая кость*

**ТУПҪА I** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡашаға — *притолока.* 2. Күтәрмә — *крыльцо.* Тупҫа киркәсләп һалына. 3. Күгән — *дверная петля.* 4. (дим, һаҡмар) Ишек күгәне кереп ултырған тимер — *дверной шарнир*

**ТУПҪА II** (урта) *и.* ҡаҙҙың бәләкәй ҡанаты — *маленькое крылышко гуся*

**ТУПТАЙЫУ** (урта) *ҡ.* ҡабарыу — *выпячиваться.* Зәйнәп туптайып торған күкрәген уға терәп һыйпанғанға ҡаушабыраҡ ҡалғайны

**ТУПТАЛЫУ** (арғаяш) *ҡ.* ойошоу, тупланыу — *сбиться в кучу.* Тупталып йөрөйҙәр күп булып

**ТУПФА, ТУПҺА** (эйек-һаҡмар) *и.* күтәрмә — *крыльцо*

**ТУПҺЫҘ** (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *с.* тотанаҡһыҙ, тәртипһеҙ — *невоспитанный.* Бала-саға араһында ибәтәйһеҙ, тупһыҙ (ҡыҙыл)

**ТУПЫЙ I** (арғаяш, мейәс, урта) *и.* 1. Бүрек — *шапка.* ◊ Тупый апҡасыу (урта) туйҙы ҡаршы алғанда һыбай ҡоҙаларҙың ҡунаҡҡа килгән ҡоҙаның бүреген алып ҡасыу йолаһы — *свадебный обычай, при котором встречающие сватья прячут шапку гостя-свата.* 2. (урта урал, эй) *и.* яулыҡ аҫтынан кейеү өсөн материалдан һырып тегелгән баш кейеме — *шапочка из простой материи, надеваемая под платок.* 3. Материянан тегелгән балалар башлығы — *детская шапочка из простой материи*

**ТУПЫЙ II** (урта) *с.* тупаҫ, аңһыҙ — *тупой, ограниченный*

**ТУПЫЙ III** (дим) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта*

**ТУПЫЙ IV** (урта) *и.* төпөш — *коротыш*

**ТУПЫЙГҮҘ** (һаҡмар) *с.* таҫрый күҙле — *пучеглазый*

**ТУПЫЙҘЫ ТАУЫҠ** (урта) *и.* бүрекле тауыҡ — *курица-хохлатка*

**ТУПЫЛ** (арғаяш, салйоғот, урта) *и.* тирәк — *тополь*

**ТУПЫРАЙЫУ** (дим) *ҡ.* 1. Үтмәҫләнеү — *притупиться.* Балта жөрөй-жөрөй тупырайып китә. 2. Шешенеү — *одеревенеть (о ноге).* Тупырайып китте айағым. Тупырандау (эй)

**ТУПЫРСЫҠ I** (урта) *и.* бәкәл — *щиколотка.* Тупырсығыңа типкәс, бүтән һыу бирмә

**ТУПЫРСЫҠ II** (һаҡмар) *и.* ҡуянтубыҡ — *бутень Прескотта.* Тупрый (дим).

**ТУПЫС** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Шәбеһе төшкән бармаҡ — *палец без ногтя.* 2. (урта, эйек-һаҡмар) Бер бармағы булмаған кеше — *человек без одного пальца.* 3. (дим) Кәкерәйгән бармаҡ — *загнутый палец.* 4. (урта, ырғыҙ) *с.* киҫелгән, тоҡос — *укороченный.* Тупыс ҡойроҡ. Тупыс бармаҡ. Тупыч (гәйнә)

**ТУПЫША** (ҡыҙыл) *с.* килешһеҙ, килбәтһеҙ — *неуклюжий.* Тупыша кейем

**ТУР** (урта) *с.* ҙур — *большой*

**ТУРА** (дим) *и.* еләкте һөттә ҡайнатып киптергән ашамлыҡ — *пастила ягодная*

**ТУРАЛАҠАҪ** (арғаяш) *и.* ҡушы *(яр буйында өң яһап оялай торған өйрәк)* — *длинноносый крохаль*

**ТУРАЛАМА** (ҡыҙыл) *и.* ҙур күгәүен — *овод бычачий*

**ТУРАЛЫ** (һаҡмар) *б.* турала — *о, про.* Ырыу туралы, ауыл туралы мин әйтмәгән инем

**ТУРАЛЫМАЙ** (минзәлә) *и.* киптереп төйөлгән ҡыҙыл эремсек ҡушылған аҡ май — *сливочное масло с сушеным красным творогом*

**ТУРАМ** (дим) *и.* ҡалъя — *кусок мяса.* Турамыс (урта, эй)

**ТУРАМЫСЛАУ** (урта) *ҡ.* турау — *разрезать.* Ит турамыслау

**ТУРАНАН** (урта) *б.* тарафтан — *по поводу.* Әлләнней туранан шулай тигәндер

**ТУРАНДЫ** (урта урал) *с.* туралған — *разрезанный.* Туранды ит

**ТУРАУ** (ҡариҙел, урта) *ҡ.* киҫеү — *резать.* Икмәк тура ҡунаҡларға (урта). Әрҙәнә турау (ҡариҙел). 2. (ҡариҙел, һаҡмар) ватыу — *колоть.* Утын турау

**ТУРБА, ТУРБЫ** (һаҡмар) *и.* мөкшә, һоло һалып ат моронона кейҙерелә торған тоҡсай — *торба*

**ТУРБАШ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Өйҙөң ҡаҙанлыҡ яғы — *кухонная половина дома.* 2. (урта) Бәләкәй урындыҡ — *маленькие нары*

**ТУРБИСА** (урта урал) *и.* көпсәк — *ступица.* Турбич (гәйнә)

**ТУРҒАЙ** (гәйнә, минзәлә, урта урал) *и.* 1. Һабан турғайы — *жаворонок.* 2. (эй) Беснәк — *синица*

**ТУРҒАЙБАШ** (урта) *и.* ер еләге — *клубника*

**ТУРҒАЙ ЕЛӘГЕ, ТУРҒАЙЙЕЛӘК** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡайын еләге — *земляника*

**ТУРҒАЙ ҠУҘҒАЛАҒЫ** (һаҡмар) *и.* йылға буйы ташлығында үҫә торған ваҡ ҡуҙғалаҡ — *щавель мелкий, который растет на отлогих берегах реки*

**ТУРҒАЙ ТИПКЕС** (ҡыҙыл) *и.* мүктәрге — *кобчик*

**ТУРЕТЕН** (эй) *и.* әре ҡорт — *трутень*

**ТУРЖАҠ** (салйоғот) *и.* ҡырпаҡ ҡар —*пороша*

**ТУРЖЫҠ** (урта) *с.* киң танаулы — *широконосый.* Бигерәк туржыҡ танаулы килен алғаннар

**ТУРЙАҠ** (арғаяш) *и.* 1. Түрьяҡ — *гостиная.* 2. (эйек-һаҡмар) Ҡаҙанлыҡ яҡ — *кухонная половина дома*

**ТУРҠЫЛДАҠ** (мейәс) *и.* мығырҙаҡ — *ворчун*

**ТУРЛАМА** (ҡыҙыл, урта) *и.* ҙур күгәүен — *овод бычачий.* Күгәүентен ҙуры — турлама атты сыҙатмай (урта)

**ТУРЛАУ** (дим) *ҡ.* тоҫҡау — *целиться*

**ТУРПАН** (арғаяш) *и.* ҡарасабан — *турпан*

**ТУРПОША** (һаҡмар) *и.* турпыша — *полог.* Ул тоҡ, ул турпоша, ул ашаулыҡ, ул таҫтамал. Торпоша (эй)

тупый 'бүрек' (ХО, с.2-2011, ЭБ.)

**ТУРПЫША** (һаҡмар) *и.* 1. Сепрәк балаҫ — *самотканый тряпичный половик.* 2. Киндер ашъяулыҡ — *холщовая скатерть* 3. (ҡыҙыл) Ҡорот һарҡыта торған бәләкәй тоҡ — *мешочек для курута.* 4. Мөкшә — *торба*

**ТУРПИША** (ҡариҙел) *и.* сымылдыҡ — *полог*

**ТУРПЫШ** (урта) *и.* сепрәк балаҫ — *самотканый тряпичный половик.* Йәшерәк йегетләр, иҫкерәк бер турпыш түшәп, түгәрәлеп иҙәнгә ултырғаннар

**ТУРСЫҠ, ТУРҪЫҠ** (һаҡмар) *и.* турһыҡ — *бурдюк.* Турҫыҡ (дим, ҡариҙел, әй), турҫлыҡ (урта, эйек-һаҡмар)

**ТУРТА** (урта) *и.* 1. Май туртаһына ҡыҙған он болғап әҙерләнгән боламыҡ — *мучная каша.* 2. (дим, урта, эйек-һаҡмар, ырғыҙ) Һурпа, иреткән май өҫтөнә сыҡҡан күбек — *пенка (на бульоне, на топленом масле).* 3. (арғаяш, әй) Аҡ майҙы иреткәндә төбөнә ултырған түпрәһе — *осадок топленого масла*

**ТУРТАЙ** (һаҡмар) *и.* турһыҡ — *бурдюк.* Туртыҡ (урта)

**ТУРУН, ТОРОН** (арғаяш) *и.* арыш атаһы — *спорынья*

**ТУРҺЫЛДАҠ** (салйоғот) *и.* балыҡ ҡыуығы — *рыбный пузырь*

**ТУРҺЫУ** (урта) *ҡ.* турһайыу — *надуться.* Өлкән улым ҡайтты, йәш килен шуға турһый

**ТУРЫ АЛА** (урта) *и.* туры ат төҫө төрө — *гнедой с пятнами*

**ТУРҒЫС** (ҡариҙел) *и.* мөйөш төҙләгес — *уровень*

**ТУРЫ: ТУРЫ КИТЕРЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* тотоу — *хватать.* Ҡомаҡ та бар, усал песей генә туры китерә. Туры суғыу (гәйнә) тура килеү — *попадаться.* Ниндейгә туры суға ле уы?

**ТУРЫЛАНЫУ** (дим) *ҡ.* дөрөҫләнеү — *стать точным.* Сәғәт тә турыланды

**ТУРЫНДА** (һаҡмар) *б.* хаҡында — *насчет.* Ашлыҡ турында барам. Турыһынан (ҡыҙыл). Китап турыһынан һөйҙәргә шәп була торғайны

**ТУРЫҺЫНТА** (урта) *б.* тирәһендә — *около.* Өс йыл турыһынта булғайны

**ТУС, ТУҪ** (дим) *и.* дуҫ — *друг*

**ТУСА** (дим) *и.* 1. Ике йәшлек һыйыр малы — *телка двухгодовалая.* 2. Быҙауламаған тана — *нетель.* 3. (эйек-һаҡмар) Өс йәшлек һыйыр малы — *трехгодовалый крупнорогатый скот.* Һыйыр малын өс йәшлек буһа туса тиләр. 4. (урта) Бер йәшлек үгеҙ — *годовалый бык*

**ТУСАБАЙ** (һаҡмар) *и.* бер өйөр йылҡыһы булған хужа — *хозяин, имеющий косяк лошадей*

**ТУСТАҒАН, ТУСТАҠАН** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* сынаяҡ — *чашка чайная.* 2. Ағас туҫтаҡ — *чашка деревянная.* 3. (гәйнә) Ағас табаҡ — *большая деревянная чаша*

**ТУСТАҠ, СӘЙТУСТАҠ** (ҡариҙел, урта урал) *и.* сынаяҡ — *чашка чайная.* ТустаҒ эсеү *(өйләнешеүгә килешкәндән һуң эскән сәй)* — *ритуальное чаепитие после сговора на брак*

**ТУСТАҠ ЖӘЙЕНКЕСЕ** (ҡариҙел) *и.* сынаяҡ аҫты — *блюдце.* Тустаҡ тышы (урта урал)

**ТУСТАҠ СОҠОРО** (дим, ҡариҙел) *и.* сынаяҡ өҫтө — *чашка чайная*

**ТУҪТАҒАН** (һаҡмар) *и.* сеүәтә — *чашка средней величины*

**ТУҪТАҒАҪТЫ** (урта) *и.* 1. Сынаяҡ аҫты — *блюдце.* 2. (дим) Мәгәрис — *могарыч*

**ТУҪТАҒӨҪТӨ** (урта) *и.* сынаяҡ өҫтө — *чашка чайная*

**ТУҪТАҠ** (урта) *и.* 1. Ҡоштабаҡ — *большая чашка.* 2. (ҡыҙыл, урта, әй) Сеүәтә — *чашка средней величины.* 3. (дим, урта) Сынаяҡ — *чашка чайная*

**ТУҪТАҠКҮҘ** (дим, урта, әй) *и.* таҫрыҡ күҙ — *пучеглазый*

**ТУҪТАҠ** (арғаяш) *и.* екән башы — *головка рогоза*

**ТУҪРАЙ** (ырғыҙ) *с.* Һимеҙ — *пухлый.* Туҫрай ҡулдары менән күперенке сәстәрен төҙәткеләнә

**ТУҪЫРАЙЫУ** (дим, әй) *ҡ.* турһайыу — *надуться.* Бер балаҫыҙ туҫырайып торалар (дим). Аның бер ғыҙы туҫырайырға ғына тора (әй)

**ТУТ: ТУТҠА ЭЛЕҮ, ТУТЛАТЫУ** (дим) *ҡ.* йыуған керҙе туңдырып киптереү — *сушить белье на морозе.* Тутҡа һалыу (әй) киндерҙе ағартыу өсөн ҡарға күмеү — *отбеливание холста под снегом.* 2. (ҡыҙыл) Етен йәйеү — *отбеливание льна*

**ТУТАЙ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, әй) *и.* 1. Апай — *старшая сестра.* Нурмыйның тутасы синме диделәр (төньяҡ-көнбайыш). Тутайым тип бер хат йаҙһасы (әй). 2. (урта урал) Атай-әсәйҙән кесе нәҫел һәм ят ҡатын-ҡыҙҙарға өндәшеү һүҙе — *вежливое обращение к женщинам младше родителей.* 3. (арғаяш, мейәс) Балаларға иркәләп өндәшеү һүҙе — *слово ласкового обращения к детям.* 4. (салйоғот) Ҡайынһеңле — *младшая золовка*

**ТУТАҠАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* апай — *старшая сестра*

**ТУТАПАЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ТУТҠАУ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* туҡтау — *остановиться*

**ТУТЛАУ** (дим, туҡ-соран) *ҡ.* икмәктең иҫкереп туралып тороуы — *зачерстветь (о хлебе).* Икмәк тутлаған

**ТУТРУҠ** (дим) *и.* инә ҡор — *тетерка*

**ТУТЫЙАПАЙ** (ырғыҙ) *и.* ҡамҡа — *божья коровка.* Тутыйҡош (төньяҡ-көнбайыш)

**ТУТЫЙҒОШ, ТОТОҒОШ** (ҡыҙыл) *и.* попугай

**ТУТЫРМА** (төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *и.* тултырма — *домашняя конская колбаса.* Ат суйған кешеләр тутырмалар тозлап киптерәләрейе, ҡойашҡа да эләләрейе (төньяҡ-көнбайыш)

**ТУТЫРМӨЙ** (арғаяш) *и.* стенаһы ике ҡат ситән йәки текмәнән булып араһына тупраҡ, тиҙәк тултырып һалған өй — *изба, стены которой сделаны из двойного плетня, заполненного землей, навозом*

**ТУТЫРМЫШ** (урта, урта урал) *и.* тултырма — *домашняя конская колбаса.* Униһы тутырмыш һымаҡ шөкәтһеҙ йыуан (урта)

**ТУТЫРЫҠ** (ҡариҙел) *с.* тулы — *полный*

**ТУТЫРЫП: ТУТЫРЫП ҺЫРЫУ** (урта) *ҡ.* нағышлау — *вышивать гладью*

**ТУФА** (арғаяш, ҡыҙыл, салйоғот, урта) *и.* 1. Тупһа — *порог.* 2. (арғаяш, эйек-һаҡмар) Күтәрмә — *крыльцо*

**ТУФАЛТА** (һаҡмар) *и.* 1. Күтәрмә — *крыльцо.* 2. (мейәс, һаҡмар, эй) Тупһа — *порог.* ◊ Туфа типтереү (мейәс). Бала таба алмаған ҡатындан тупһа типтереү — *обычай упирания о порог при тяжелых родах*

**ТУФИЕМ, ТУФИМ** (гәйнә, ҡариҙел, урта) *с.* наҙан — *неграмотный.* Туфим сүләшәләр (гәйнә)

**ТУФЛАЙЫУ** (урта) *ҡ.* турһайыу — *надуться*

**ТУФТА** (һаҡмар) *и.* 1. Тупһа — *порог.* 2. Күтәрмә — *крыльцо*

**ТУФТАҒАН, ТУФТАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* сеүәтә — *чашка средней величины*

**ТУФФА** (арғаяш, мейәс, эйек-һаҡмар, эй) *и.* 1. Тупһа — *порог.* 2. Күтәрмә — *крыльцо.* 3. (һаҡмар) Ишек шарниры — *дверной шарнир*

**ТУХ-ТУХ** (арғаяш) *и.* ҡашыҡморон өйрәк — *утка-широконоска*

**ТУХХАН** (арғаяш, мейәс, эй) *һ.* туҡһан — *девяносто*

**ТУҺ** (салйоғот) *и.* туҙ — *береста*

**ТУҺҠАҠ** (салйоғот) *и.* екән — *рогоз*

**ТУҺТАҒАН** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* сеүәтә — *чашка средней величины*

**ТУЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ябай металл — *простой металл.* Балдаҡ көмөштән, тучтан эшләнәдерейе, ансы прастуйы

**ТУШ, ТҮШ, ТУЫШ** (арғаяш, дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал) *и.* шәре — *наледь.* Туш ҡалҡҡан боз өстенә (төньяҡ-көнбайыш)

**ТУШИШ** (ҡариҙел) *и.* дуҫ-иш — *друзья.* Тушиш йыҡ

**ТУШМА-ТУШ** (ҡыҙыл, урта) *р.* нәҡ, тас — *точь-в-точь*

**ТУШПАУ** (ҡариҙел) *и.* тамаҡбау — *супонь*

**ТҮБ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ҡабыҡ — *шелуха.* Шепкән түбләре нәмәгә йарағандыр. 2. Түпрә *(һуты алынған еләк-емештең ҡалдығы)* — *отжим ягод и фруктов.* Ҡарағат түбе иләг өстендә ҡалғаны, ҡағыт йасағанда

**ТУБЕРТКЕРҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* эт һөсләтеү — *натравливать собаку*

**ТҮБИ** (арғаяш) *и.* көйәҙ турғай — *щеголь*

**ТҮБӘ** (эй) *и.* ара — *родовое подразделение.* Бөрҙөң бер түбә булып йәшәпумай

**ТҮБӘК** (урта) *и.* төбәк, йәшәгән ер — *местность, район.* Шул түбәктә үҫкән геше ул

**ТҮБӘ ҠАПҠАСЫ** (дим, ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* түбә — *макушка*

**ТҮБӘЛ** (ҡыҙыл) *и.* йондоҙ ҡашҡа *(йылҡы төҫө)* — *масть лошади со звездочкой на лбу*

**ТҮБӘЛЕК** (дим, урта) *и.* 1. Лапаҫ — *навес.* 2. (урта) Өҫтө ябыулы утынлыҡ — *дровяной сарай*

**ТҮБӘЛӘС** (дим, ҡыҙыл) *и.* бәләкәй тау, ҡалҡыулыҡ — *возвышенность, холмик*

**ТҮБӘЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Башҡа һуғыу — *бить по голове.* Түбәләп китһәләр нишләйһең. 2. Ирек бирмәү, ҡыҫыу — *давить.* Түпәләү (урта урал, эй)

**ТҮБӘН** (һаҡмар) *б.* былай — *от.* Мынан түбән әллә бар ғөмөр, әллә йуҡ

**ТҮБӘНАУЫҘ** (дим) *и.* борош — *подуст*

**ТҮБӘН МӘЙЕЛЛЕ** (урта) *с.* кеселекле — *почтительный*

**ТҮБӘННӘС** (урта) *и.* уйһыулыҡ — *низменность*

**ТҮБӘННӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* балыҡтарҙың ҡышлауға күсеүе — *перемещение рыб на зимовье*

**ТҮБӘНТЕН** (гәйнә) *р.* түбән — *низко*

**ТҮБӘРӘК** (ҡариҙел, урта, эйек-һаҡмар) *с.* түңәрәк — *круглый*

**ТҮБӘСАЙҒАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* түшәм — *потолок*

**ТҮБӘСЕК** (мейәс, эй) *и.* түбә — *возвышенность*

**ТҮБӘ СҮМЕСЕ** (дим) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**ТҮБӘСӘЙ** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Сипарат күмәсе — *поплавок сепаратора.* 2. (ҡариҙел, ҡыҙыл) Самауыр баҫырғысы — *заглушка самовара*

**ТҮБӘТҮШӘМ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* түшәм — *потолок.* Түбәтакта (ҡыҙыл)

**ТҮБӘТӘЙ I** (дим, урта) *и.* материянан тегелгән ҡатын-ҡыҙ башлығы — *шапка женская, сшитая из материи*

**ТҮБӘТӘЙ II** (дим, ҡариҙел) *и.* таҙғарын — *сычуг.* Түбәтәй эсәк (ҡариҙел)

**ТҮБӘТӘЙ III** (минзәлә) *и.* самауыр баҫырғысы — *заглушка самовара*

**ТҮБӘТӘЙ СЫБЫҠ** (урта урал) *и.* боронғо йәштәр уйыны — *вид старинной молодежной игры*

**ТҮБӘТӘЙ ТИПКЕС** (урта) *и.* балалар уйыны — *детская игра.* Малайҙар түбәтәй типкес, соҡор туп уйнай торҙолар

**ТҮГЕЛДЕ** (дим) *с.* түгелгән — *рассыпной.* Суҡ Ерек буйында түгелде арыш бешеп, ҡойолоп ултыра

**ТҮГЕЛЕП: ТҮГЕЛЕП ТОРОУ** (урта, ырғыҙ) *ҡ.* бик матур булып тороу — *быть очень красивым.* Йеңгәмдең күҙе матур, керфекләре түгелеп тора. Түгелеп илау (урта, эй) ныҡ илау — *горько плакать*

**ТҮГЕЛЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡойолоу — *выпадать.* Сәсләре лә ағарманы, түгелмәне лә

**ТҮГЕЛСЕК** (мейәс) *и.* сәселмәй, үҙ алдына үҫкән етен — *дикий лён*

**ТҮГЕП-САЙЫУ** (урта) *ҡ.* түгеп-сәсеү — *расплескать.* Һыуға барғанда түгеп-сайып китерәм ти

**ТҮГЕРИК** (гәйнә) *с.* түңәрәк — *круглый.* Түгерик йөҙлө

**ТҮГЕҮ I** (урта) *ҡ.* 1. Ҡойоу — *сбрасывать лепестки.* Сәскәһен түгә. 2. (дим, эй) Тотоноу — *израсходовать.* Мал түгеп барҙы

**ТҮГЕҮ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ташыу — *возить.* Ат белән жиҙе жәй ашлыҡ түгеүдә йөрөдөм

**ТҮГӘЛ, ТҮӘЛ** (гәйнә) *к.* түгел — *частица отрицания.* Үфә түгәл

**ТҮГӘНӘК** (арғаяш) *и.* кәкересуҡыш көйөлдө — *зоол. кулик*

**ТҮГӘРЛӘНЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* бөгәрләнеү — *свертываться.* Түгәрләнеп китә ата озанның ҡойроғо

**ТҮГӘРЛӘТЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* тәгәрләтеү — *катить.* Һәнәк белән түгәрләтеп йыйа ла ғуйалар. Тәгәрмәсте түгәрләтеп әпкиткән йерҙән ҡалдырғаннар

**ТҮГӘРӘК** (эйек-һаҡмар) *с.* түңәрәк — *круглый.* Түгәрәк ҡамыш йуҡ

**ТҮГӘРӘК БҮРЕК** (арғаяш) *и.* ҡырпыулы бүрек — *шапка с оторочкой*

**ТҮГӘРӘК МЕЙЕС** (арғаяш, салйоғот) *и.* галанка *(мейес)* — *голландка (печь)*

**ТҮГӘРЕЛЕП** (урта) *р.* түңәрәк тирәләй — *кругом.* Йәшерәк йегетләр, иҫкерәк бер турпыш түшәп, түгәрелеп иҙәнгә утырғаннар. Иң йаҡын туғаннары менән әле генә түгәрелеп аш ашап алдыҡ

**ТҮГӘСӘЙ** (ҡыҙыл, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* самауыр баҫырғысы — *заглушка самовара*

~~**ТҮДӘ, ТҮҘӘ, ТҮЗӘ**~~ (кариҙел) *и.* төйҙә — *обух.* Балта түдәсе

**ТҮҘ** (һаҡмар) *и.* сабылғандан ҡалған төп — *стерня.* Бесән түҙенә баҫҡандыр

~~**ТҮҘҘЕК**~~ (әй) *и.* тапанды — *объедья*

**ТҮҘЕМ** (урта, әй) *с.* түҙемле, сабырлы — *терпеливый.* Мин үҙем түҙем геше (урта)

~~**ТҮҘЛЕК I**~~ (дим) *и.* 1. Туҙ һауыт — *берестяной кузовок.* 2. Сыраға ярыу өсөн ҡулланылған ағас — *полено, выбранное для лучинки*

~~**ТҮҘЛЕК**~~ **II** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡамыл — *стерня.* 2. Дүңгәк — *кочка.* 3. (төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) Төпсөк, ағас төбө — *пень.* Салғы түҙлеккә барып эләкһә ҡалтайып китә. 4. Түмәр — *чурбан*

**ТҮЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* төйөү — *толочь.* Шуны түәбеҙ маса

~~**ТҮЗ**~~ **I** (гәйнә) *и.* 1. Ағас төбө — *пень.* 2. Япраҡ һабағы — *черенок листа.* 3. Төп — ~~*основание, корень.*~~ Борон түз. Жилкә түз. Самауыр түзе. 4. Тотҡа, һап — *ручка*

**ТҮЗ II** (гәйнә, кариҙел) *и.* йылға тамағы — *устье реки.* Абдулла бай йылғаның түзентә утыра (кариҙел). Тол түзе (кариҙел)

~~**ТҮЗЛЕК**~~ (гәйнә) *и.* ағас төбө — *пень, пенек*

~~**ТҮЙЕС**~~ (мейәс) *и.* туҙ һауыт — *берестяной сосуд, ведерко.* <u>Һауын гүнәк</u> кесерәк була, түйес тиб әйтәләр, анаһын түҙҙән тегәләр әбейҙәр, анан ҡымыҙ ҙа аҡмай

**ТҮКМӘРСӘ** (арғаяш, мейәс, урта урал) *и.* түмәр — *чурбан*

**ТҮКМӘСЕҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* тәгәрәү — *кататься.* Түкмәсеп йөрөй торғайнылар, ҡымыҙ эсеп иһереп

**ТҮКӘ** *(салйоғот, урта) р.* тик — *только.* Анда түкә ыстанса

**ТҮКӘН** (урта урал) *и.* төпөш — *коротыш*

**ТҮЛ** (ҡыҙыл, урта) *и.* орлоҡ — *приплод.* Һыйырҙың түлен һатып торабыҙ. ◊ Түлгә олғашмау (эйек-һаҡмар) биҙәү ҡалыу *(ҡатын кешегә ҡарата)* — *остаться бесплодной*

**ТҮЛДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* малдың ҡасыуы — *оплодотвориться (о самках животных)*

**ТҮЛӘКҺЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йөрәкһеү — *волноваться, беспокоиться*

**ТҮЛӘМ** (эйек-һаҡмар) *и.* һалым — *налог.* Түләмең бар тей ҙә ҡағыҙ йебәрәләр

**ТҮМГӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Түңгәк — *кочки.* 2. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Ағас төбө — *пень.* 3. (дим, кариҙел, урта) Ҡырмыҫҡа иләүе — *муравейник*

**ТҮМГӘЛӘК I** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* салғы түше — *наковальня для косы*

**ТҮМГӘЛӘК II** (дим) *и.* түңгәк — *кочка*

**ТҮМСӘК** (кариҙел) *и.* түмәр — *кочка.* Түмсә (урта)

**ТҮМҺӘ** (арғаяш) *и.* түмһәкәй — *анат. лобок.* Түмһәк *(мейәс)*

**ТҮМҺӘЛӘК, ТҮМҺӘЛӘКӘЙ** (ырғыҙ) *и.* ҡалҡыулыҡ — *бугор, бугорок*

**ТҮМҺӘЛӘС** (ҡыҙыл) *и.* 1. Ҡалҡыулыҡ — *бугор, бугорок.* 2. Түмәр — *чурбан*

**ТҮМҺӘЙЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡалҡып тороу — *возвышаться*

**ТҮМӘ** (әй) *и.* 1. Күмәгәй — *кадык.* 2. Гәрәбә — *янтарные бусы.* 3. (төньяҡ-көнбайыш) һиҙәп — *пуговица*

**ТҮМӘЛӘС, ТҮМӘҪ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡалҡыулыҡ — *бугор, возвышенность.* Был ауыл түмәләс-түмәләс ҡалҡыулыҡлар итәгенә һибелеп кенә ултырған (эйек-һаҡмар). Түмәләстең башына менгәс, Сөнәғәт туҡтап хәл алды ла артына ҡайырылып ҡараны (урта)

**ТҮМӘН** (мейәс, салйоғот, урта урал, ырғыҙ) *р.* түбән — *низко.* Аларҙың өйө ауылдың түмән осонда (мейәс)

**ТҮМӘР** (арғаяш, эйек-һаҡмар) *и.* түңгәк — *кочка*

**ТҮМӘР БАЛТАҺЫ** (һаҡмар) *и.* утын яра торған ҡалын балта — *колун*

**ТҮМӘРКӘ** (урта, әй) *и.* түмәр — *чурбан.* Түмәрсә (ҡыҙыл). Түмәрткә (эйек-һаҡмар)

**ТҮМӘРЧЕК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* утрау — *остров*

**ТҮНЕҮ** (кариҙел) *ҡ.* юлығыу — *оказаться.* Шул хәлгә түнтем

**ТҮНТӘЙЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* иңкәйеү, ҡыйшайыу — *скосить.* Был бағанаң һулға түнтәйеп тора, тура тот

**ТҮНӘҘЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* иркенләү, тын алып ҡалыу — *отдышаться.* Ағайың гитә эрмейәгә, һылыу, тип көлә. Мин әҙерәк кенә түнәҙеп ҡалдым иркеннәп

**ТҮНӘЛЕҮ** (дим) *ҡ.* йүнәлеү — *поправиться*

**ТҮРБАШ** (урта) *и.* өйҙөң ҡашыяҡ яғы — *кухонная половина дома.* Фатима ойалышынан ҡыҙарып түрбашта тора ине

**ТҮМӘРӘК** (әй) *с.* түңәрәк — *круглый.* Түмәрәк йалан

**ТҮМӘРӘК ҮЛӘН** (һаҡмар) *и.* бесәй үләне — *алтея*

**ТҮҢ** (һаҡмар) *и.* 1. Түңгәк — *кочка.* 2. *Ҡалҡыулыҡ* — *возвышенность.* Бер түңгә ашҡайныҡ, ник атлап булһын, ҡар

**ТҮНДӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* түңгәк — *кочка*

**ТҮНЕЙ, ТҮНИ** (әй, урта урал) *и.* быйма — *валенки*

**ТҮШӘМЕС** (урта) *и.* кейеҙ — *войлок*

**ТҮҢ** (эйек-һаҡмар) *и.* түбәләс, бәләкәй тау — *небольшой холм.* Йул белән бер түң үткәс ағас башлана

**ТҮҢГӘК** (һаҡмар) *и.* 1. Түмәр — *чурбан.* 2. Ағас төбө — *пень, пенек.* Ҡурҡаҡҡа түңгәк тә айыу булып күренә

**ТҮҢГӘК УМАРТА** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* түмәр умарта — *колодочный улей*

**ТҮҢГӘЛӘК, ТҮҢӘРЛӘК** (урта) *и.* салғы ҡулсаһы — *колечко у косы*

**ТҮҢЕРЕК** (ҡыҙыл) *с.* түңәрәк — *круглый.* Ижау шикелде түңерек йер

**ТҮҢЕҮ** (урта) *ҡ.* юлығыу, тарыу — *попадаться, оказаться.* Бер хәлгә түңгәнсе шулай йөрөр инте

**ТҮҢКӘҘ** (ҡыҙыл) *ҡ.* түңкәр — *опрокинь*

**ТҮҢКӘК** (урта) *и.* түңгәк — *кочка*

**ТҮҢКӘРМӘ** (арғаяш) *и.* йүшкә — *вьюшка*

**ТҮҢКӘРМӘ ШЕШ** (урта) *и.* тире ауырыуы — *кожная болезнь*

**ТҮҢӘР** (һаҡмар) *и.* 1. Түмәр умарта — *колодочный улей.* 2. Түмәр — *чурбан*

**ТҮҢӘРӘК** (арғаяш, мейәс) *и.* тирә-яҡ — *окружность.* Өйөм түңәрәк ҡыл арҡан *(йомаҡ)*

**ТҮҢӘРӘГАСЫҠ** (урта) *и.* аҡлан — *поляна*

**ТҮҢӘРӘК БҮРЕК** (арғаяш) *и.* ҡырпаулы бүрек — *шапка с оторочкой*

**ТҮҢӘРӘК ЙЫШҠЫ** (ҡыҙыл) *и.* солокто таҙартыу өсөн махсус йышҡы — *приспособление для скобления бортевого улья*

**ТҮҢӘРӘК МЕЙЕС** (арғаяш, мейәс, әй) *и.* галанка *(мейес)* —*голландка (печь).* Ҙур йаҡка түңәрәк мейес килешә инде (әй)

**ТҮҢӘРӘКПАШ** (һаҡмар) *и.* бесәй аяғы *(үлән)* — *кошачья лапка (растение)*

**ТҮҢӘРӘЛТЕҮ** (урта) *ҡ.* түңәрәкләү — *округлять*

**ТҮҢӘРӨТЕҮ** (урта) *ҡ.* тәгәрәтеү — *катить*

**ТҮП** (ҡыҙыл) *с.* баҫалҡы — *скромный.* Түп кенә геше

**ТҮПЕР** (һаҡмар) *и.* 1. Дебет ҡалдығы — *отходы пуха.* 2. Түпрә — *остаток.* Балдың түпере ғалды

**ТҮПИК ӨЙ** (кариҙел) *и.* ҡыйыҡһыҙ өй — *дом без крыши*

**ТҮПРӘ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Сүпрә — *дрожжи.* Буҙа түпрә мән күпереп асый (мейәс). 2. (әй) Балауыҙҙы иреткәндән һуң ҡалдығы — *остатки растопленного воска*

**ТҮПТӘМӘ** (урта) *и.* справка

**ТҮПӘ** (арғаяш, салйоғот, әй) *и.* 1. Түбә — *макушка.* Түпә күккә тейеү *(ныҡ шатланыу)* — *ликовать.* 2. Түшәм — *потолок.* 3. (арғаяш) Төйҙә — *обух*

**ТҮПӘ АСТАРЫ** (арғаяш) *и.* яулыҡ аҫтынан түбәгә генә кейелә торған башлыҡ — *макушница*

**ТҮПӘ БАЛСЫҒЫ** (салйоғот) *и.* түшәмгә һалынған тупраҡ — *засыпка на потолке*

**ТҮПӘ ҒАПҠАСЫ** (мейәс) *и.* сөйҙә — *бугорок атланта*

**ТҮПӘЙ I** (һаҡмар) *и.* ара исеме — *название родового подразделения.* Умбер ара исеме бар: ҡаҙаҡлар, ҡалмаҡлар, көҙәннәр, алағышлар, таулылар, суҡмарлар, мәскәйләр, түпәйәләр, оҙонмылтыҡлар, сейғолаҡлар, мишәрләр. Туғыҙ түпәйгә бер аҡыл тип тә ғуйалар

**ТҮПӘЙ II** (кариҙел) *ы.* төпәй *(балаға йығылмаҫҡа иҫкәртеү һүҙе)* — *слово для предупреждения ребенка от падения.* ◊ Түпәй итеү *(баланың йығылыуы)* — *падение ребенка.* Түпәй итәсең

**ТҮПӘНЛЕК** (мейәс) *и.* 1. Тәҙрә, ишектең өҫкө яҡтауы — *верхний косяк окон, дверей.* 2. (арғаяш) Лапаҫ башы — *навес*

**ТҮПӘЛЕҒАПҠА** (арғаяш) *и.* башлы ҡапҡа — *ворота с крышей*

**ТҮПӘЛӘҮ** (арғаяш, әй) *ҡ.* 1. Туҡмау — *бить, колотить.* 2. Тыйып, баҫып тороу — *подавлять*

**ТҮПӘН** (гәйнә) *и.* төпөш — *коротыш*

**ТҮПӘ ӨРҘӨГӨ** (арғаяш) *и.* өрлөк — *матица*

**ТҮПӘТАҠТА** (арғаяш, әй) *и.* түшәм — *потолок.* Түпәтаҡта буйаттым әле (әй)

**ТҮПӘСӘС** (мейәс) *и.* кикел — *челка у лошади*

**ТҮР** (урта) *и.* ҡаҙанлыҡ, ҡашыяҡ — *кухонная половина дома.* Түрбаш (урта, һаҡмар). Түрбашта ҡашығайаҡ менән аҙаплана ине. Түрбашйаҡ (һаҡмар)

**ТҮРГЕ ӨЙ** (салйоғот) *и.* ҡунаҡ өйө — *гостиная*

**ТҮРЙУРҒАН, ТУР ЙУРҒАНЫ** (урта) *и.* һике буйына йәйеү өсөн тар ҡорама юрған — *узкая разноцветная стеганая подстилка на нарах*

**ТҮРКЕН** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Ата йорто — *отчий дом (для невесты).* 2. (урта, ырғыҙ) Кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙың тыуған ауылы — *родина женщины.* ◊ Түркеннән барыу *(ҡыҙ малын алырға барыу)* — *приезд за приданым невесты.* 2. (дим, ырғыҙ) Кейәүгә киткән ҡыҙҙың тәү башлап күстәнәстәр менән, һарыҡ һуйып алып, ата йортона кейәүе менән бергә ҡунаҡҡа барыуы — *первое посещение невестой отчего дома вместе с женихом*

**ТҮРКЕННӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* кейәүгә киткән ҡыҙҙың ата йортона ҡайтып йөрөүе — *посещение родного дома замужней женщиной.* Түрә ҡыҙы түркеннәй. ◊ Түркендәй барыу, гитеү (ҡыҙыл, урта)

**ТҮРКЕНСӘК** (һаҡмар) *и.* ата йортона ҡайтырға яратыусан килен — *девушка, часто посещающая родной дом после замужества.* Түрә ҡыҙы түркенсәк

**ТҮРЛЕГЕС** (туҡ-соран) *и.* түръюрған — *узкая разноцветная стеганая подстилка на нарах*

**ТҮРЛӘМӘ** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* тәҙрә ҡаймаһы — *оконный бордюр*

**ТҮРӨЙ** (дим, кариҙел) *и.* ҡунаҡ өйө — *гостиная*

**ТҮРСИКЕ** (кариҙел) *и.* ағас карауат — *деревянная кровать*

**ТҮРЙАҠ** (урта) *и.* аш-һыу әҙерләй торған яҡ — *кухонная половина дома*

**ТҮРӘРГӘЛЕ** (һаҡмар) *с.* барлыҡ ағзаһы камил — *полностью нормальный.* Ҡыҙ бала булһа ней булған, түрәргәле булып тыуғас йараған

**ТҮҪӘРЕЛЕҮ** (әйек-һаҡмар) *ҡ.* күп булыу — *быть обильным.* Түҫәрелеп үҫә йеләк

**ТҮТ** (ҡыҙыл) *с.* ҙур — *большой.* Бер ҡаҙағынан түт йаулыҡ сыға

**ТҮТАҠМА** (ҡыҙыл, һаҡмар) *с.* ташҡын мәлендә һыуҙың тапҡыр ағып ятҡан урыны — *течение реки во время половодья*

**ТҮТЕГҮЛӘН, ТҮТЕК** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* бесәй тарыһы — *просо петушье.* Ул йерҙә түтектән башҡа үлән йуҡ (һаҡмар)

**ТҮТЕР** (туҡ-соран) *и.* татырлауыҡ — *солончак*

**ТҮТКӘЙ, ТҮТӘЙ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Апай — *старшая сестра.* Абыйым барыйы, ике түтәй барыйы. 2. Үгәй әсәй — *мачеха*

**ТҮТӘ** (арғаяш, туҡ-соран) *и.* төйҙә — *обух.* Солоҡ балтаһының түтәһе менән шыҡ иттереп кенә берҙе һуға

**ТҮТӘ: ТҮТӘ ӘЙТЕҮ** (мейәс, ҡыҙыл) *ҡ.* тураһын әйтеү — *говорить прямо*

**ТҮТӘЛСӘ** (ҡыҙыл) *и.* тәҙрә ҡашы — *навершье (у окна)*

**ТҮТӘРӨМ** (урта) *и.* егерме аҙым ер — *мера длины (двадцать шагов земли)*

**ТҮШ, ТУШ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, әй) *и.* шәре — *наледь*

**ТҮШБАУ** (гәйнә, кариҙел, урта урал) *и.* тамаҡбау — *супонь*

**ТҮШЕЛДЕРЕК** (һаҡмар) *и.* 1. Алғы айыл — *передняя подпруга.* 2. (урта урал, әй). Тар ғына төрлө-төрлө ситсанан ҡорап тегелгән күкрәк япмаһы *(күлдәк эсенән кейелә) — нагрудник, носимый женщинами под платьем.* 3. (урта) Әмәйҙек — *женское нагрудное украшение из монет и кораллов, надеваемое косо*

**ТҮШКЕ** (һаҡмар) *и.* баҫыуҙа эшләгән бригада — *полевая бригада*

**ТҮШКӘ** (һаҡмар) *и.* түш — *наковальня для отбивки косы*

**ТҮШ ҠЫҪМАҺЫ** (һаҡмар) *и.* бронх астмаһы — *бронхиальная астма*

**ТҮШЛЕК I** (дим, ҡариҙел, урта) *и.* түш — *наковальня для отбивки косы*

**ТҮШЛЕК II** (минзәлә) *и.* 1. Бауырғалыҡ — *подбрюшник.* 2. (дим, ҡыҙыл, мейәс, урта) Күмелдерек — *нагрудник (у седла).* 3. (ҡариҙел) Уҡа менән ҡайылған иҙеү — *планка рубахи, вышитая позументом.* 4. *(дим)* Яға, һаҡал — *женское нагрудное украшение из монет, кораллов и камней*

**ТҮШЛЕК III** (урта) *и.* йылы камзул — *душегрейка*

**ТҮШТЕЙ** (дим) *и.* 1. Түшелдерек — *нагрудник.* 2. (минзәлә) Яға, һаҡал — *женское нагрудное украшение из монет, кораллов, камней.* Түштей шау көмөш тәңкә була. 3. (төньяҡ-көнбайыш) Әмәйҙек — *женское нагрудное украшение из монет и кораллов, надеваемое косо*

**ТҮШТЕК I** (ҡыҙыл) *и.* иң алдынғы салғысыларҙы һыйлау өсөн түш ите — *грудинка для угощения самых передовых косарей*

**ТҮШТЕК II** (мейәс) *и.* күмелдерек — *нагрудник (седла)*

**ТҮШТИМЕР** (ҡариҙел) *и.* һандал — *наковальня (большая, кузнечная)*

**ТҮШӘК** (урта) *и.* 1. Кейеҙҙән ситенә төрлө материя ҡуйып эшләнгән урындыҡ ябыуы — *войлочное покрывало для нар, украшенное разноцветными материалами по краям.* 2. (һаҡмар) Аҙбарға түшәлгән бесән, һалам тапандыһы — ~~*сено или солома*~~, *устилающие пол в хлеву.* 3. (ҡыҙыл, салйоғот) Урын әйберҙәре — *постельные принадлежности.* ◊ Түшәк тартыу (урта) ҡаты ауырыу — *тяжело болеть.* Биш йыл түшәк тартып йаттым

**ТҮШӘК-ЙАҪТАНДЫ** (мейәс) *и.* урын әйберҙәре — *постельные принадлежности*

**ТҮШӘКТӘНЕҮ, ТҮШӘКТӘНЕП ЙАТЫУ** (урта) *ҡ.* ҡаты ауырып ятыу — *тяжело болеть*

**ТҮШӘМ** (һаҡмар) *и.* атлама — *стропило*

**ТҮШӘМЕС, ТҮШӘМЕШ** (урта) *и.* 1. Ҡораманан эшләнгән эскәмйә ябыуы — *покрывало для скамейки из разноцветных лоскутков.* 2. Һике кейеҙе — *войлочное покрывало для нар.* 3. Матрац йәки түшәк — *матрац или перина*

**ТҮШӘП-ЙАҪТАУ** (урта) *ҡ.* түшәү — *постелить.* Түшәп-йаҫтап йатырын да эшләргә кәрәк

**ТҮШӘМЛӘҪ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡалҡыулыҡ — *возвышенность*

**ТЫБЫРСЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ҡабалан — *торопливый*

**ТЫВАРЛАП: ТЫВАРЛАП МЕНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* үрмәләү — *лазить*

**ТЫҒЫЛЫУ** (дим) *ҡ.* онотоу — *забыть*

**ТЫҒЫН I** (һаҡмар) *и.* йүшкә — *вьюшка*

**ТЫҒЫН II** (ҡыҙыл) *и.* айыу өңөн биклəгән бағана — *шест поперек медвежьего логова*

**ТЫҒЫНСЫҠ I** (арғаяш, салйоғот) *и.* бөкө — *затычка, пробка.* 2. (урта) Йүшкә — *вьюшка.* 3. (ырғыҙ) Төнлөк сепрәге — *затычка для вентиляционного отверстия в бане.* Мөрйә тығынсығына ут тоҡанған да гиткән

**ТЫҒЫРЫҠ** (дим, ҡариҙел) *и.* 1. Мейес арты — *запечье.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Тыҡырыҡ — *переулок*

**ТЫҒЫРЫМ** (арғаяш) *р.* тығыҙ, тар — *тесный.* Тығырым йер

**ТЫЖЫҒЫС** (урта) *и.* ҡырғыс — *терка*

**ТЫЖЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* тултырма — *домашняя колбаса из конины*

**ТЫЖЫЛДАҠ** (урта) *и.* балыҡ тәңкәһе — *рыбья чешуя*

**ТЫЖЫНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Төпсөнөү, ныҡышыу — *доискиваться чего.* 2. (урта) Ҡысыныу — *чесаться*

**ТЫЖЫУ** (мейәс) *ҡ.* мыжыу — *ворчать*

**ТЫЗАНДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* бер ҙә йуҡҡа йүгергеләү — *носиться без пользы*

**ТЫЗДАУ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* шәп йүгереү — *бежать быстро*

**ТЫЗКАНДАҠ** (дим, ҡариҙел) *с.* тынғыһыҙ — *непоседа*

**ТЫЗЫЙ** (дим) *и.* бал ҡорто — *пчела*

**ТЫЗЫҠЛАУ** (урта) *ҡ.* тырнау — *царапать*

**ТЫЗЫҠЛЫҠ** (урта) *и.* һыйышмаусанлыҡ, тынышмаусанлыҡ — *неуживчивость.* Үгәйҙең тызыҡлығы белән ун алты йәшемдә генә кейәүгә сыҡтым

**ТЫЗЫЛДАТЫУ** (урта) *ҡ.* ҡыуалау — *гнаться за кем-либо*

**ТЫЗЫЛДАУ** (дим) *ҡ.* мыяулау — *мяукать*

**ТЫЗЫМ** (урта) *и.* кереш — *тетива ручной пилы*

**ТЫЗЫНМА** (эйек-һаҡмар) *и.* бер һүҙҙе күп һөйләүсе, теңкәгә тейеүсе — *докучливый (о человеке)*

**ТЫЗЫНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* яйлау — *медлить*

**ТЫЗЫРАЙ** (ҡыҙыл) *с.* үсексән — *обидчивый.* Шу тиктек тызырай. Бер һүҙ әйттеңме тызырайа

**ТЫЗЫРАЙЫУ** (дим) *ҡ.* 1. Күбеү, ташыу — *раздуться.* Тызырайып китә шешеп. 2. (ҡыҙыл) Әтәсләнеү, ҡыҙыу — *психовать*

**ТЫЗЫРАНДАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* алпан-толпан баҫып атлау — *шагать вперевалку*

**ТЫЗЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Баҫыу — *валять.* Асалап арҡан һалалар ҙа йөндө шунда һалып тызыйлар. 2. Тырнау — *царапать.* 3. (дим, урта) Ышҡыу — *тереть.* Тирене кирбес белән тызығаннар. 4. (ҡыҙыл, һаҡмар) Мыжыу — *докучать.* Һаман тызый барып мәңрәү итепөткән

**ТЫЙҒЫ, ТЫЙҘЫҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* өҫкө нирҙә — *венец (верхний)*

**ТЫЙҒЫСЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Төйөү *(тыңҡыслау)* — *трамбовать.* 2. Ауыш яҡҡа берәй нәмә ҡыҫтырып ҡуйыу — *поставить подпорку.* Күбәң ауыша, тыйғысла

**ТЫЙЛЫҒЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* һыҡыу — *застревать.* Боҙ тыйлыҡҡан

**ТЫЙЛЫҠ** (һаҡмар) *и.* баҫрау — *слега*

**ТЫЙМАЛЫҠҺЫҘ** (урта) *с.* тыйнаҡһыҙ — *несдержанный, невоспитанный*

**ТЫЙЫҠЛЫҠ** (гәйнә) *и.* тыйнаҡлыҡ — *послушание, сдержанность*

**ТЫЙЫУҺЫҘ** (ҡыҙыл, урта, эй) *с.* тәртипһеҙ — *невоспитанный.* Тыйыуһыҙ балаһын кешегә йөрөтмәһә лә йарай ҙа бит (ҡыҙыл). Тыймалыҡһыҙ (урта)

**ТЫКА** (һаҡмар) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Тыка йаратманым ауылын. Имәнтамағыма ҡайтам тинем

**ТЫҠҠАН ҠАҘЫ** (урта) *и.* тултырма — *домашняя колбаса из конины*

**ТЫҠҠЫС** (арғаяш) *и.* 1. Шылдырма — *задвижка.* 2. (мейәс) Тыйғыса — *притужальник (у домашнего ткацкого станка)*

**ТЫҠСЫУ** (урта) *ҡ.* тығыу — *совать.* Тураҡланған ҡаҙы киҫәктәрен ауыҙына тыҡсыны

**ТЫҠШАЙҒАН** (ҡыҙыл) *с.* йыуан ҡыҫҡа муйынлы — *короткошейый.* Тыҡшыҡ (эй)

**ТЫҠШЫРЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* йәшереп йыйыу — *убирать, спрятать.* Тыҡшырынып йөрөй ҙә йата торған был

**ТЫҠЫҠЛАУ, ТЫҠЫҠЛЫУ** (гәйнә) *ҡ.* сиҡаҡ тотоу — *икать*

**ТЫҠЛЫҠ ПЕЧИН** (гәйнә) *и.* ҡый үләне — *сорная трава*

**ТЫҠЫРЛЫҠ** (ырғыҙ) *и.* туҡмаҡ — *колотушка.* Йелдә теге тыҡырлыҡ һелкенеп тауыш сығарып тора

**ТЫҠЫРЫҠТАУ** (арғаяш) *ҡ.* мәжбүр итеү — *неволить.* Тыҡырыҡтап һурашып алды

**ТЫҠЫУ** (урта) *ҡ.* тыҡылдау — *докучать (поучая или твердя одно и то же).* Камисарлар тыҡыған һүҙләр башына бик ныҡ һеңгән икән

**ТЫҠЫУЫЧ** (гәйнә) *и.* бешкәк — *пахталка*

**ТЫҠЫШ ҮҢӘС** (ҡыҙыл) *и.* ҡыҫҡа үңәс — *короткошейый*

**ТЫЛАЖЫН** (арғаяш) *с.* үткен — *бойкий*

**ТЫЛҠАУ I** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* 1. Кеше һөйләү — *обсуждать других.* Мине тылҡама, йетәр (ҡыҙыл). 2. (мейәс) Күп һөйләү — *болтать.* 3. (ҡыҙыл, урта) Тылҡып имеү — *толкать мордочкой при сосании (о детенышах животных).* Быҙау күп имеп тылҡап бөткән

**ТЫЛҠАУ II** (һаҡмар, ырғыҙ) *и.* 1. Һаҡау — *заика, косноязычный.* Тылҡау тына белмәҫ. 2. Тел биҫтәһе — *говорун*

**ТЫЛҠЫТЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* ҡуҙғатыу — *сдвинуть.* Нийә быларны тылҡыттың эле?

**ТЫЛПЫЛДАУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* күп һөйләү — *болтать*

**ТЫЛСЫМ** (эй) *и.* үҙәк етен — *обработанный пучок льна*

**ТЫЛЫҒЫУ** (урта урал) *ҡ.* кибеү *(бешкән иткә ҡарата)* — *подсохнуть (о вареном мясе).* Тылыҡҡан итте йулға һалаһың. Был тауҙа үрҙәкте бешереп тылыҡтырҙылар ҙа, тағы ары киттеләр, тей *(әкиәттән)*

**ТЫЛЫМ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* толом — *коса.* Элек чәчне тылымнап йөрөтәләрейе

**ТЫМА** (арғаяш, урта) *р.* 1. Бөтөнләй — *совсем.* Тыма йарҙы булған (арғаяш). 2. (ҡариҙел) Тотош — *сплошь.* Ул йаҡ тыма йалан

**ТЫМАУЫРАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тымау менән ауырып йөрөү — *болеть простудой*

**ТЫМБАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* тирләү *(тәҙрәгә ҡарата)* — *потеть (о стекле).* Тәҙрә быуаланып, тымбап тора

**ТЫМҒАЙЫҠ** (салйоғот) *и.* томбойоҡ — *кувшинка (водяная)*

**ТЫМЗЫЙА** (урта) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Тымзыйа нәмә булмай торғайны

**ТЫМЙЫУ** (урта) *ҡ.* тонсоу — *стать душным.* Бигерәк тымйып китте өй

**ТЫММАУ** (гәйнә) *ҡ.* өндәшмәү — *молчать.* Без тыммыйбыз бер сүз

**ТЫМНАНЫУ** (урта) *ҡ.* томраланыу — *стать душным.* Өй тымнанып китте

**ТЫМПАЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* турһайыу — *надуться.* Ниңә тымпайҙың, исмаһам хәбәреңде һөйләй ултыр

**ТЫМСАНАЙ** (гәйнә) *с.* баҫалҡы — *скромный*

**ТЫМҺАЙЫУ** (ырғыҙ) *ҡ.* турһайыу — *дуться, надуться.* Бер һүҙ әйтергә йарамай, көн буйы тымһайа ла йөрөй. Тымырайыу (ҡыҙыл)

**ТЫМЫЗЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* тымыҡ — *тихий.* Тымызыҡ күл ҡортло була. Тымыҙыҡ (туҡ-соран)

**ТЫМЫҘЫУ** (урта, һаҡмар) *ҡ.* туҡтатыу — *остановить.* Ҡанын тымыҙырға гәрәк

**ТЫМЫЙЫҠ** (ҡариҙел) *р.* 1. Тыныс — *спокойно.* Ыраса тымыйыҡта ғына йауа. 2. Йылғаның тәрән ере — *омут*

**ТЫМЫЛЫУ** (урта урал, эй) *ҡ.* тымыу — *притихать.* Бала ней тымылып китәләүы (урта урал). Буран тымылған булған (эй)

**ТЫМЫРҒАН** (арғаяш) *р.* томра — *душно*

**ТЫМЫРҪЫҠ** (эй) *с.* шым, өндәшмәҫ — *молчун.* Телгә зерә шәп түгел, тымырҫыҡ ҡына

**ТЫМЫРҪЫН** (урта урал) *с.* аҫтыртын, уҫал, яһил — *коварный*

**ТЫМЫРҪЫН: ТЫМЫРҪЫН ҺЫУЫҠ** (арғаяш) *и.* сатлама һыуыҡ — *трескучий мороз*

**ТЫМЫРҪЫУ** (арғаяш) *и.* томра, эҫе көн — *зной.* Тымырҡа (мейәс). Тымырһын (салйоғот)

**ТЫМЫРҺЫҠ** (ҡыҙыл) *с.* 1. Аҫтыртын — *скрытный.* Тымырһыҡ кеше. Тымырһын (арғаяш)

**ТЫМЫРҺЫН: ТЫМЫРҺЫН ҺЫУЫҠ** (мейәс) *и.* ҡоро һыуыҡ — *сухой мороз*

**ТЫМЫУ** (гәйнә) *ҡ.* өндәшеү — *молвить*

**ТЫН I** (урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* ҡат — *слой.* Ҡороҡ ике тынны итеп ишелә лә өсөнсөгә тағы үткәреп сығыла (эйек-һаҡмар)

**ТЫН II** (урта) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Тын бумай торғайны башҡортлар

**ТЫН III** (дим, урта) *р.* тына, бер аҙ — *немного.* Әмиргә бер тын ҡарап торҙо ла әйтте

**ТЫН IV** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Ҡаты, иҙелмәгән — *твердый, неразварившийся.* Бутҡаһы тын булған. Тың (һаҡмар). 2. (урта) *и.* күп йылдар һөрөлмәй ятҡан сиҙәм — *долголетняя целина.* 3. (дим, ҡариҙел) *с.* бөтәү — *цельный.* Тын бәрәңге ашаҙы (ҡариҙел)

**ТЫН V** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* дебеткә ҡатлап ҡушылған еп — *пара пуховой пряжи*

**ТЫН: ТЫН АЛМАУ** (дим) *ҡ.* һауа үтмәү — *не проникать (о воздухе).* Сармай ҫалҫаҡ, тын алмаҫа боҙолмай

**ТЫНАЛҒЫС** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* боғарлаҡ — *трахея*

**ТЫНАНАН** (эйек-һаҡмар) *р.* бер ыңғай, тотош — *сразу.* Тынанан эйттем эйтәһемде

**ТЫНЙУЛ** (урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* аҙ йөрөлгән юл — *малохоженая тропинка*

**ТЫНЙЫРАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* буталыу — *мешаться.* Әйтәм тынйырап йанында бесән сабып йөрөгән була

**ТЫНСЫҠ** (һаҡмар) *и.* тыныслыҡ — *покой.* Һыйыр һауғанда тынсыҡ бирмәй

**ТЫНСЫУ I** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Тынысланыу — *успокоиться.* Кисә төнө тынсып йоҡланым. Улың башлы-күҙле булмай тынсыйһыңмы? 2. (һаҡмар) Татыу булыу — *жить дружно.* Тынсый алманылар, айырылдылар

**ТЫНСЫУ II** (урта урал) *ҡ.* һөрһөү *(иткә ҡарата) — тухнуть (о мясе)*

**ТЫНЫРТЫМ** (дим) *и.* һулыш алыу — *дыхание*

**ТЫНУРМАН** (ҡариҙел) *и.* ҡара урман — *дремучий лес*

**ТЫНЫҒЫУ I** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Иҫкереү *(иткә ҡарата) — тухнуть (о мясе).* У итең ул моҡсала тыныған китмәйме һуң? 2. Кибеү — *подсохнуть (о мясе)*

**ТЫНЫҒЫУ II** (гәйнә, урта урал) *ҡ.* ял итеү — *отдохнуть.* Әҙерәк тыныҡтырыб алам әле тиливизырны (гәйнә)

**ТЫНЫУ** (ҡыҙыл) *и.* һулыш алыу — *дыхание.* Ҡул тамырын тотоп ҡарағайным, һәйбәт тибә, тыныуы ла оҙон

**ТЫНЫШ I** (ҡариҙел) *и.* торош — *вид.* Тынышынан билгеле, кешенең ней фурмы ҡыланғанын беләсең

**ТЫНЫШ II** (гәйнә) *и.* тына — *промежуток в работе.* Бер тыныш эшләйбеҙ

**ТЫНҒЫРЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* танау менән һөйләшеү — *гнусавить*

**ТЫНҠАУ** (һаҡмар) *и.* 1. Тынҡауыҡ — *чернильный орешек.* 2. (урта) Картуф алмаһы — *семенники картофеля.* 3. Эт ҡарағаны — *крушина.* 4. (дим, урта) Имән сәтләүеге — *желудь*

**ТЫНҠАУ** (дим, урта) *и.* тынҡыш — *гнусавый*

**ТЫНҠАУЫҠ** (урта) *и.* 1. Имән ҡорто — *черви на дубе.* 2. (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) Имән япрағындағы торон — *шишка на листке дуба.* 3. (эйек-һаҡмар) Картуф алмаһы — *семенники картофеля*

**ТЫП-ЙЫЛТЫР** (урта) *с.* йып-йылтыр — *блестящий.* Тып-йылтыр май

**ТЫПА** (урта) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Тыпа белмәйем

**ТЫП: ТЫП ҠЫНА** (урта) *р.* тиҙ генә — *быстро, в момент.* Әле лә тып ҡына әҙерләйем

**ТЫПЫРСА, ТЫПЫРСЫ** (урта) *и.* тырпыса — *дуплянка (часть домашнего ткацкого станка).* Тыпырсыларын, айаҡ аҫтында оронсоҡ булып ултырмаһын тип, урҙа башына элде. Тыпырча (төньяҡ-көнбайыш)

**ТЫПЫРЫСТАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* сыпрандау — *вести себя беспокойно.* Көйөп тыпырыстай ҙа гитә

**ТЫПЫШ** (эй) *и.* сысҡандың йәшерен исеме — *«подпольное» название мышки.* Төгөндә бар ахры тыпыш, тәпәйен тығып ҡарай ҙа ышкаф артына

**ТЫРАБЫҘ, ТЫРАБИС** (ҡыҙыл) *с.* 1. Еңмеш — *упрямый.* Тырабыз, йеңмештәнеп үҙ һүҙен бирмәй, йеңер йарауын гүрә. 2. (урта) Сос, егәрле — *проворный, хваткий.* Тыравиз (туҡ-соран)

**ТЫРАЖ, ТЫРАШ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* тараш — *шершень*

**ТЫРАЖА I** (урта) *и.* сүпрә — *дрожжи*

**ТЫРАЖА II** (эй) *и.* 1. Таҡта өй башы — *черепичная крыша.* 2. (ҡыҙыл, урта) Йоҡа ваҡ таҡта — *черепица*

**ТЫРАНТАЙ I** (дим) *с.* ҡыҫҡа — *куцый (о платье)*

**ТЫРАНТАЙ II** (ҡариҙел) *с.* нәҙек сираҡлы *(ҡыҙ балаға ҡарата) — тонконогая (о девочке)*

**ТЫРАНТАЙ III** (эй) *и.* ҡорман балығының иң ваға — *маленький лещ*

**ТЫРАТАЙКА** (ҡыҙыл) *и.* ваҡ тәгәрмәсле арба — *тележка на маленьких колесах*

**ТЫРАХМАН ЙАПРАҒЫ** (урта) *и.* әрекмән — *лопух*

**ТЫРАХУН** (мейәс) *и.* шаҙра таҫтамал — *вафельное полотенце*

**ТЫРАШ ҮЛӘНЕ** (урта) *и.* күк һөтлөгән — *молочай синий*

**ТЫРБЫҠ** (урта урал) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка*

**ТЫРЖЫҠ** (дим, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәмшек танау — *курносый*

**ТЫРҠЫШ** (арғаяш, гәйнә, ҡариҙел, урта урал, эй) *с.* бысраҡ — *грязный, грязно.* Тырҡыш тотона (эй). Тырҡышын, таҙасын белмәй хәзер (гәйнә)

**ТЫРҠЫША** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* оятһыҙ — *нахал*

**ТЫРМА I** (дим) *и.* еп оҙатыу станогы — *станок для складывания нитки-основы (в ткачестве)*

**ТЫРМА II** (һаҡмар, эй) *и.* торма — *редька*

**ТЫРМА БАУЫ** (урта) *и.* мисәү бауы — *постромка*

**ТЫРМАЛАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* тырышыу — *стараться*

**ТЫРМА ШАЛҠАН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* торма — *редька*

**ТЫРМЫСЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* тырнау, өйкәү — *скрести.* Аның күңелен туҡтауһыҙ тырмыслап торҙо

**ТЫРНА** (ҡыҙыл) *и.* торма — *редька*

**ТЫРНАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Тояҡ — *копыто.* 2. Сана тойағы — *копыл, копылья (у саней).* 3. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Тәгәрмәс тештәре — *зубья колеса.* 4. (урта) Мәләү — *лопаточка, кол (употребляемый для выкапывания овощей и корней трав)*

**ТЫРНАҠ БИТЕ** (ҡыҙыл) *и.* шәбе — *основание ногтя*

**ТЫРНАҠЛЫ, ТЫРНАҠЛЫ-ҠУЛЛЫ** (эйек-һаҡмар) *с.* ҡулсыр, мут — *вороватый*

**ТЫРНАҠЛЫ: ТЫРНАҠЛЫ УҠА** (төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *и.* кәкерсәкле яҫы уҡа — *зигзагообразный плоский позумент*

**ТЫРНАШЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* тырышыу — *стараться.* Бик ныҡ эшләҙем, бик тырнашыб үстерҙем

**ТЫРПАҠ I** (урта) *и.* тәгәрмәс тештәре — *зубья колеса*

**ТЫРПАҠ II** (мейәс) *и.* юртыуға ла, юрғалауға ла оҡшаған ат йөрөшө — *ход лошади между иноходью и рысью*

**ТЫРПЫЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* тыпырсыныу — *трястись.* Тырпылдап айағы-башы ҡорошоп йата геше быума бәлән

**ТЫРПЫСА I** (арғаяш) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный половик*

**ТЫРПЫСА II** (салйоғот, һаҡмар) *и.* кәтүкле еп — *катушечные нитки*

**ТЫРПЫСА III** (урта) *и.* тырыз — *короб из бересты (для ягод и грибов)*

**ТЫРПЫСА IV** (ҡыҙыл) *и.* туп уйыны — *игра в мяч*

**ТЫРПЫСА БҮРЕК** (ҡариҙел, һаҡмар) *и.* ҡырма бүрек — *круглая шапка с оторочкой*

**ТЫРҪАЙЫУ** (урта) *ҡ.* үсегеү — *обидеться.* Ул миңә үсекте, ҡылтайҙы, тырҫайҙы, ҡылтым ине

**ТЫРТАЙЫУ** (арғаяш) *ҡ.* турһайыу — *дуться, надуться*

**ТЫРТАН** (дим) *и.* алабуға — *окунь*

**ТЫРТЫҠ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Кәже — *хилый.* Үҙе тыртыҡ, йабығ ине (ырғыҙ). 2. (эйек) Оҙон буйлы, ябыҡ — *долговязый*

**ТЫРТЫҠАЙ** (салйоғот) *с.* үсексән, ҡарышма — *капризный*

**ТЫРЫЗ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* үҙ һүҙле — *упрямый*

**ТЫРЫШМА** (урта) *и.* ҡарышма — *капризный*

**ТЫРЫШЫУ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, урта) *ҡ.* һүҙ көрәштереү — *спорить, пререкаться*

~~**ТЫСҠАН ЙАҪТЫҒЫ**~~ (туҡ-соран) *и.* картуфтың бороңғо исеме *(үҙ исемен әйтеү тыйылған булған)* — *табуированное название картофеля.* Борон бәрәңгене тысҡан йаҫтығы тинеләр, ашарға ҡушманылар

**ТЫСҠАН ҠАРАУЫЛСЫ** (урта) *и.* көйгәнәк — *лунь полевой*

**ТЫСҠАН КҮҘӘҮГЕС** (ҡариҙел) *и.* торомтай — *обыкновенная пустельга*

~~**ТЫСҠАН СЫБЫҒЫ**~~, **ТЫСҠАНСЫБЫҠ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* селек — *чилига.* Тысҡан сыбығы тауларҙа үҫә, себеркегә йарай (дим)

**ТЫСҠАНСЫЛАП: ТЫСҠАНСЫЛАП ЙУРҒАЛАУ** (арғаяш) *ҡ.* ваҡ баҫып юрғалау — *идти мелкой рысью*

**ТЫСҠАН УТЫ** (дим, ҡариҙел) *и.* баҙлауыҡ — *светлячок*

**ҺЕҢКЕЛДӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* һиңкелдәү — *трясти.* Оҙаҡ йөрөниһәң, эс һеңкелдәй. Һеңкелтәү (урта)

**ҺЕҢКЕҮ I** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Һиңкеү — *трястись.* 2. (мейәс) *с.* һиңкетә торған — *трясший*

**ҺЕҢКЕҮ II** (мейәс) *ҡ.* мул булыу — *быть в изобилии.* Быйыл бесән һеңкеп уңған

**ҺЕҢНЕЛӘШ** (урта) *и.* бер туған ҡыҙҙар — *родные сестры*

**ҺЕПЕРЕМ** (мейәс) *и.* ырҙын төбө — *вымолотки*

**ҺЕПЕРКЕ** (урта) *и.* миндек — *веник (для парки в бане)*

**ҺЕПЕРТКЕ БУРАН** (ҡыҙыл, урта) *и.* һепертмә буран — *поземица, поземка.* Һеперенде буран (ырғыҙ), һеперткәк буран (эйек-һаҡмар), һепертмәк буран (урта)

**ҺЕПТЕК** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *и.* 1. Сүплек — *свалка.* Эңерҙә һептектә йөрөргә йарамай, балам, нәҫтә ҡағылыр (эй). 2. *с.* йүнһеҙ, алама — *негодный.* Уй, һептек! (мейәс). 3. (төньяҡ-көнсығыш) Бәүелен тота алмаған — *страдающий недержанием мочи (человек).* *Ҫептек (эй)*

**ҺЕРГӘНСӘК** (һаҡмар) *и.* сүмесбаш — *головастик*

**ҺЕРҘЕКТЕРЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* һырыктырыу — *прижать.* Бүре һарыҡтарҙы мөйөшкә һерҙектереп, берен боғаҙлағайны (ҡыҙыл)

**ҺЕРЕ** (ҡыҙыл, урта, урта урал, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Ҡаты бәғерле — *жестокий.* 2. (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) Түҙемле — *терпеливый.* Һере геше, бер нимәһен белгертмәй (ырғыҙ). Йәтим кеше һере була бит у (эйек-һаҡмар). 3. (урта) Әрһеҙ — *беззастенчивый.* 4. (урта, ырғыҙ) Ныҡ — *выносливый.* Бик һере ат булып сыҡты беҙен ҡаҙаҡларҙан алған ат (ырғыҙ). 5. (эйек-һаҡмар) Беше — *плотный.* Үтә һере тауар икән. 6. (мейәс, эйек-һаҡмар) Һауалы — *высокомерный.* 7. (ҡыҙыл) *и.* һыҡмыр — *скряга*

**ҺЕРЕҒОЛАҠ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* әйткәнде ҡолағына элмәгән кеше — *непослушный, своевольный (человек)*

**ҺЕРЕЛДӘК** (һаҡмар) *и.* ҡойҡа — *холодец*

**ҺЕРЕЛДӘТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* һөсләтеү — *натравить собак на кого*

**ҺЕРЕЛДӘҮ** (эйек-һаҡмар) к. 1. Бәлтерәү — *обессилеть.* 2. Ҡалтырау — *дрожать.* Башы һерелдәй ҙә гитә

**ҺЕРЕЛДӘШЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡалтыраныу — *дрожать.* Талашҡанда һерелдәшә лә гитә

**ҺЕРЕЛӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* үҙһүҙләнеү — *упрямиться*

**ҺЕРКЕЛДӘҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* 1. Борсолоу, өҙгөләнеү — *беспокоиться.* Күңелем һеркелдәне лә гитте (урта). 2. (ҡыҙыл) Тертелдәү — *вздрогнуть*

**ҺЕРКӘ I** (эйек-һаҡмар) *и.* балдан әсетелгән эсемлек — *медовуха*

**ҺЕРКӘ II** (эй) *и.* күтәреп һуғылған эйберҙең аҫкы үрнәге — *нижний узор передника и платья*

**ҺЕРКӘ: ҺЕРКӘҺЕ ҺЫУ КҮТӘРМӘЙ** (ҡыҙыл, урта) *с.* үсексән — *досл. его пыльца не терпит воды (говорится об очень обидчивом человеке)*

**ҺЕРКӘНДЕК** (арғаяш) *с.* 1. Ҡыйшандаҡ — *кокетливый.* 2. (мейәс) Тертелдәк — *вздрагивающий*

**ҺЕРПЕ** (ҡыҙыл) *с.* тырпаҡ — *торчащий.* Һерпе-һерпе булып сауҡа ғаптаған Әсе түбәһен

**ҺЕРСЕНЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* һөрөнөү — *спотыкаться*

**ҺЕРӘ** (урта) *и.* бәйләнсек — *придира*

**ҺЕРӘЙГӘН** (төньяҡ-көнсығыш) *с.* 1. Һауалы — *с гонором.* 2. Йомош тыңламаған — *непослушный.*

3. (әй) Кәүҙәһен тура ғына тотоп атлаған кеше — *тот, кто держит фигуру прямо (во время ходьбы)*

**ҺЕРӘНДӘТЕҮ** (ҡыҙыл, әй) *ҡ.* 1. Ҡалҡытыу, күтәреү — *приподнять.* ◊ Ҡул һерәндәтеү *(һуғырға ҡул күтәреп барыу) — пустить в ход руки.* Ҡулыңды һерәндәтмә, ҡурҡмайым. 2. (әй) Күрһәтеп йөрөү — *показывать что.* Һерәңләтеү (урта). Күстәнәскә бал килтергәйнем үҙеңә, һерәңләтеп бында уҡ апкилеп йөрөмәнем

**ҺЕРӘҮ I** (ҡыҙыл, ырғыҙ, әйек-һаҡмар) *с.* бешеп етмәгән, ҡаты — *неразварившийся, твердый.* Итең һерәү булған (ырғыҙ). Буткаң һерәү, бешеп етмәгән (ҡыҙыл). Шамбы ите ашауға һерәү була, нығыраҡ бешер (әйек-һаҡмар)

**ҺЕРӘҮ II** (мейәс, әй) *с.* ялҡау — *ленивый.* Эшкә һерәү

**ҺЕРӘКЕҮ, ҺЕРӘҮҺЕҮ** (мейәс) *ҡ.* һауаланыу — *зазнаться.* Һерәүһеп киткән ул

**ҺЕРӘШ** (һаҡмар) *и.* әйткәнде ҡолағына элмәгән кеше — *непослушный, своевольный.* Серәш (урта урал)

**ҺЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ы.* дәртләндереү һүҙе — *слово воодушевления, вдохновения*

**ҺЕҮҘӘТЕҮ, ҺЕҮҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Геүләтеү, яңғыратыу — *издавать громкий звук.* Һеүҙәтеп йырҙай ҙа ултыра. 2. Дәртләндереү — *подбадривать.* Һеүләү (әйек-һаҡмар). Һеүләп көрәшселәрҙе дәртләндереп ултыралар

**ҺЕҮМӘҘӘТ, ҺЕҮМӘЛЛӘ** (ҡыҙыл, әйек-һаҡмар) *ы.* дәртләндереү һүҙе — *слово подбадривания*

**ҺЕҮӘН** (ҡыҙыл, әйек-һаҡмар) *и.* йәлдәү — *горловина верши.* Һеүәнһеҙ мурҙаһы бар (ҡыҙыл)

**ҺЕЪЕМЕ, ҺӘЪЕМЕ** (ҡариҙел) *к.* һорау-раҫлауҙы белдергән һүҙ — *вопрос утверждения.* Һеъемә (урта урал)

**ҺИБЕҮ** (урта) *ҡ.* ултыртыу, сәсеү — *посадить (об овощах).* Эсвикла һипкәйнек был ергә

**ҺИБӘ I** (ҡыҙыл, мейәс, урта, әйек-һаҡмар) *и.* килен күренешенә ҡаршы әйтелгән бүләк — *первый подарок невесте от родителей жениха.* Алған бүләктең һибәһен ҡайтара (ҡыҙыл)

**ҺИБӘ II** (һаҡмар) *и.* һебә — *ложное ребро*

**ҺИГЕҘҘЕ ҒЫЛЫС** (әй) *и.* йыш тешле киже ҡылысы — *бердо (часть домашнего ткацкого станка)*

**ҺИҘЕМЛЕ** (әйек-һаҡмар) *с.* һиҙгер — *чуткий.* Һиҙемле бала

~~**ҺИҘӘПТЕКӘЙ**~~ (ҡыҙыл) *и.* һиҙәп үлән — *алтея*

~~**ҺИҘӘПТӨЙМӘ**~~ (урта) *и.* һиҙәп үлән — *алтея*

**ҺИКЕ** (ҡыҙыл, мейәс, әйек-һаҡмар) *и.* 1. Һауыт-һаба өҫтәле — *кухонный стол.* 2. (көньяҡ диалект, төньяҡ-көнсығыш) Урындыҡ — *нары.* 3. (урта, һаҡмар) Эскәмйә — *скамейка*

**ҺИКЕЛДЕК, ҺИКЕЛЕК** (мейәс) *и.* һауыт-һаба өҫтәле — *кухонный стол*

**ҺИКЕРТМӘ, ҺИКЕРТМӘК** (көнсығыш диалект, урта, әйек-һаҡмар) *с.* һикәлтәле — *ухабистый.* Һикертмәк йул (урта)

**ҺИКЕРТМӘ ҠАШ** (көнсығыш диалект) *и.* ҡыйғас ҡаш — *брови дугой*

**ҺИКЕРӘНДӘҮ** (көнсығыш-диалект) *ҡ.* ырғандау — *припрыгивать*

**ҺИКӘ** (урта) *и.* монар — *мгла, марево*

**ҺИКӘЛ** (мейәс) *и.* һикәлтә — *выступ.* Ҡайа һикәле. Тау һикәле

**ҺИКӘЛТ** (урта) *с.* һикәлтәле — *ухабистый.* Һикәлт йул

**ҺИКӘЛТӘ** (ҡыҙыл, урта) *и.* 1. Күтәрмә — *крыльцо.* 2. (урта) Тупһа — *порог*

**ҺИЛ I** (ҡыҙыл) *с.* 1. Тымыҡ — *тихий.* Көн һил ине. 2. (урта) *и.* ҡалҡыу ер — *возвышенность.* Һил йерҙә ләпәк кенә ҡыҙыл бөрлөгән үҫә

**ҺИЛ II** (әйек) *и.* юшҡын — *накипь.* Ҫил (дим). Сәйгүнеңә ҫил ултырған

**ҺИЛ III** (һаҡмар) *и.* ҙур булмаған утрау — *островок*

**ҺИЛДЕРӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* һүрәнләтеү — *остудить.* Мейесте һилдереп кенә бешерәбеҙ икмәкте

**ҺИЛДӘҮ** (әйек-һаҡмар) *с.* еләҫ — *слегка ветреный*

**ҺИЛЛӘҮЕК** (урта) *и.* 1. Ҡалҡыу ер — *возвышенность.* Һилләүек йер. 2. *с.* еләҫ — *слегка ветреный*

**ҺИЛЫМ** (туҡ-соран) *и.* һыйлым — *обращение к жене своего сверстника и, наоборот, жены к сверстнику своего мужа*

**ҺИМЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* шиңеү — *уменьшаться.* Ҡорһағы һимгән, йабыҡҡан, бахыр

**ҺИММӘТ** (көнсығыш-диалект) *и.* 1. Байлыҡ — *богатство.* 2. Дан — *слава*

**ҺИММӘТ ИТЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* ҡулай күреү — *считать подходящим, удобным.* Кешегә йөрөүен һиммәт итә

**ҺИН** (көнсығыш диалект, урта, әйек-һаҡмар) *өн. һ.* ир менән ҡатындың бер-берейһенә өндәшеү һүҙе — *слово обращения супругов друг к другу.* Һин, сәй ултырт әле (ҡыҙыл). Ҫин (дим). Ҫин, ҡайҙа бараҫың?

**ҺИҢГӘҘӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* иҫен юғалтыу — *потерять сознание.* Һиңгәҙәп йатҡан, тей

**ҺИҢЕРӘҮ I** (ҡыҙыл, урта, әйек-һаҡмар) *с.* тыңҡыш — *гнусавый.* Ул бит һиңерәү, танауы белән һөйләй (әйек-һаҡмар). Һиңгерәү (әйек-һаҡмар)

**ҺИҢЕРӘҮ II** (ҡыҙыл, урта) *с.* миңерәү — *глупый*

**ҺИҢКЕТЕҮ** (туҡ-соран, һаҡмар) *ҡ.* һелкетеү — *трясти.* Ҡуй, һиңкетмә, башым ауырта (һаҡмар). Урам тулы халыҡ йер һиңкетеп атлап баралар (туҡ-соран). Һеңкетеү (урта урал). Аты һеңкетә тартып эпкитте

**ҺИҢМАЙ** (ҡыҙыл, урта, әйек-һаҡмар) *с.* 1. Миңрәү — *тупой (о человеке).* Ҡайғынан һиңмай булып бөткәммен (ҡыҙыл). Һиңмаймын бигерәк, шуны ла аңҡармайым (урта). 2. Ғәмһеҙ — *беззаботный*

**ҺИҢМАЙҘАНЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* миңрәүләнеү — *отупеть.* Һиңмайланыу (урта)

**ҺИПЕРТКЕС** (әйек-һаҡмар) *и.* һыу һипкес — *лейка.* Һиптерткес (әйек, әй)

**ҺИПКЕЛ** (урта) *и.* бит туты — *матеж*

**ҺИПКЕН I** (әйек) *и.* монар — *мгла*

**ҺИПКЕН II** (ҡыҙыл, әйек-һаҡмар) *и.* шауҡым — *влияние.* Ул замандың һипкене миңә лә ҡағылып китте (әйек-һаҡмар)

**ҺИПТЕРТКЕС** (әй) *и.* туп һуғыу уйыны — *«Лапта»*

**ҺИПТЕҪТЕРЕҮ** (урта) *ҡ.* таратыу — *разбазаривать.* Бер нәмәһен һиптеҫтермәй ҡараным

**ҺИПТӘҮ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* ҡушыу, ҡатыштырыу — *смешать что.* Бәрәс йөнө һиптәп йаҙғы йөндән кейеҙ баҫалар (әй)

**ҺИПҺЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* һирәгәйеү — *редеть.* Үлән һипһей башлаған

**ҺИРАЙЫУ** (туҡ-соран) *ҡ.* һонтайыу — *вытянуться в длину.* Оҙон геше бото һирайыб алып йөрөй

**ҺИРАҠ** (дим, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Сираҡ һөйәге — *большая берцовая кость.* 2. Сираҡ — *голень.* Һыйраҡ (һаҡмар, ырғыҙ)

**ҺИРҘАЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* һуйҙайыу — *идти в рост.* Һирҙайып үҫеп киткән

**ҺИРЕНДЕ** (арғаяш, салйоғот) *и.* һүренте — *нитки, выдерганные из ткани*

**ҺИРЕҮ I** (арғаяш, салйоғот) *ҡ.* бүре, һеләүһен кеүек йәнлектең кесе ярау итеүе — *мочиться (о животных)*

**ҺИРЕҮ II** (салйоғот) *и.* кәпрән — *нижняя наволочка*

**ҺИРЕҮ III** (салйоғот) *и.* һүренте — *нитки, выдерганные из ткани.* ◊ Һиреп төйөү *(ептең бер нисә осон бергә бәйләү)* — *завязать узлом что-л.*

**ҺИРКЕҮ** (дим) *и.* тау ҡыры — *гребень горы*

**ҺИРПЕЛЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йоғоу — *пристать (о болезни).* Рәнйеү һирпелеү. Быума кешегә һирпелә

**ҺИРПЕНДЕ** (ҡыҙыл) *и.* ташланған нәмә — *заброшенная вещь*

**ҺИРПЕҮ** (мейәс) *ҡ.* 1. Туҡмау — *побить кого-что.* 2. (ҡыҙыл, мейәс) Һибеү — *посыпать что.* Йулға ҡом һирпте (ҡыҙыл). 3. (әй) Һуғып ебәреү — *ударить кого-что.* Һирпеп йебәрҙем тегене

**ҺИРПМӘ I** (ырғыҙ) *и.* уй — *мысль.* Халыҡтың һирпмәһен һиҙеп китепарҙы

**ҺИРПМӘ II** (ҡыҙыл) *и.* ҡош аулау өсөн эйелгән ағастың осона ҡоролған йүкә тоҙаҡ — *петля для ловли птиц.* Һиртмә (ҡыҙыл, мейәс)

**ҺИРТМАҠ** (арғаяш) *и.* мәскәү — *проволочная или волосяная петля для ловли птиц и т. д.* Һиртмәк (мейәс)

**ҺИРТМӘ I** (ҡыҙыл, урта) *и.* 1. Муйыл ағасынан яһалған сәңгелдәк аҫмаһы — *черемуховая палка, приспособленная для качания люльки.* 2. (ҡыҙыл) Пружина. Һиртмәк (төньяҡ-көнсығыш)

**ҺИРТМӘ II** (урта) *и.* йәшенмәк уйыны — *игра в прятки.* Һиртмә уйнау

**ҺИРТМӘҒОЙО** (урта) *и.* сиртмә ҡоҙоҡ — *колодец с длинным шестом (журавлем)*

**ҺИРӘЙТЕҮ** (мейәс) *ҡ.* һирәгәйтеү — *поредеть.* Ике баланы һирәйтеп тапты

**ҺИРӘКҺЕҮ** (эйек) *ҡ.* һирәгәйеү — *редеть.* Халыҡ килеп ултырғас ағас һирәкһене

**ҺИРӨҮ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* һирәгәйеү — *поредеть.* Ағас ҡырҡыу белән һирәне (мейәс)

**ҺИССУҒЫНДА** (ҡыҙыл) *к.* юҡ тигәндә, һис булмаһа — *хотя, хоть.* Һиссуғында ҡоҙаларҙан алып тор бер ун һум. Һисйуғында (ҡыҙыл, әй)

**ҺИТА, ҺИТӘ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* инәне ашатыу өсөн ҡорт йыйған сәскә һеркәһе — *перга.* Һитәле бал (ҡыҙыл). Һитәле балтан ҡойолған әсе бал көслө була (урта)

**ҺИТӘЛӘНЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* балауыҙ ҡарайып боҙолоу — *почернеть, испортиться (о воске)*

**ҺИҺАҠАЙҘАУ** (урта) *ҡ.* ҡыйшандау — *кокетничать.* Ирҙәр күрһә һиһаһайҙап тора

**ҺОҒАЛАН** (ҡыҙыл, урта, ырғыҙ) *и.* ашар өсөн үлеп барған, ашҡа төшөп барған кеше — *жадный до еды (человек).* Һоғалаҡ (әй)

**ҺОҒАЛАНЫУ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* ҡомһоҙланыу — *стать ненасытным.* Пленныйҙар һоғаланып тарта башланылар (урта)

**ҺОҒОНДОРА КЕЙЕҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* батырып кейеү *(бүреккә ҡарата)* — *натянуть шапку.* Бүректәрен һоғондора кейгәннәр

**ҺОҒОНОМ: БЕР ҺОҒОНОМ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *с.* бер ҡабырлыҡ — *то, что можно один раз брать в рот.* Бер һоғоном ит (ҡыҙыл)

**ҺОҘА** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* 1. Һоҫа — *челнок.* Һоҫа энәһе. Һоҫа үҙәге (мейәс). 2. Һоҫҡо — *совок.* Һоҙғо (мейәс)

**ҺОҘҒАҠ** (арғаяш, мейәс, әй) *и.* һоҫҡо — *совок*

**ҺОҘОУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* һоҫоу — *черпать*

**ҺОЗДАУ I** (мейәс) *ҡ.* өҙләү — *горловое пение*

**ҺОЗДАУ II** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* зыйҙау, шәп итеп сабыу — *промчаться стрелой*

**ҺОЙҘАН** (арғаяш, салйоғот) *с.* һуйҙан — *долговязый*

**ҺОЙҠАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* һөйкәнеү — *прислониться.* Түрә-ғараға һойҡанып йәшәп өйрәнгән ул

**ҺОЙТ** (көнсығыш диалект) *ы.* күмәк малды, ҡошҡортто ҡыуыу һүҙе — *слово, выражающее отгон скота, птиц*

**ҺОҠ: ҠУЛЫ ҺОҠ** (ҡыҙыл) *с.* ҡулсыр — *нечист на руку, ворующий.* Һоҡ һимермәһ, бур байымаһ

**ҺОҠ** (ҡыҙыл) *с.* ашар өсөн үлеп барған, ашҡа төшөп барған кеше — *жадный до еды*

**ҺОҠҺОҠ** (арғаяш) *и.* ҡашыҡморон — *утка-широконоска*

**ҺОЛ** (ҡыҙыл) *с.* туймаҫ — *ненасытный*

**ҺОЛАҒЫУ** (урта) *ҡ.* эләгеү — *зацепиться.* Ағаслар йарға барып һолаҡҡан әнә. Серегән ағас ергә төшмәй икенсе ағасҡа һолағып ҡалған

**ҺОЛАУ** (урта) *ҡ.* һуҙылыу, һуҙылып ятыу — *лежать врастяжку.* Һолай ҙа йата шу

**ҺОЛҒА** (мейәс) *и.* таҫыл — *сноровка.* Күҙем йерҙе ут амай, һолға тегәм

**ҺОЛУЛӘН** (ҡыҙыл) *и.* һолобаш — *овсяница*

**ҺОЛҺОҘ** (төньяҡ көнсығыш) *с.* 1. Ипһеҙ, килбәтһеҙ — *несуразный.* 2. Таҫылһыҙ — *бестолковый*

**ҺОЛҺОЛ** (арғаяш) *и.* ҡош исеме — *название птицы*

**ҺОМАЙҒОШ** (ҡыҙыл) *и.* һөмәй — *бородатая неясыть*

**ҺОМҺОҘ** (урта) *с.* һөмһөҙ — *нахальный*

**ҺОНА** (урта) *с.* һонтайған — *долговязый*

**ҺОНАҒАҘ** (урта) *и.* эре ҡаҙ төрө — *крупная порода гуся*

**ҺОНДОР, ҺОНТОР** (урта) *с.* 1. Һонтайған — *долговязый.* 2. Оҙон — *длинный.* Һонтор кәүҙәле кешегә һонтор күлмәк килешмәй. Ҫондор (дим)

**ҺОНДОРЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* мыштырҙау — *копошиться*

**ҺОНО** (дим) *с.* эре — *высокомерный.* Мин алама булдым, һоно булдым

**ҺОНОҠ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *с.* ҡайырыңҡы — *откинутый (о косе).* Һоноҡ һаплаған салғы белән ҡыйын у (ҡыҙыл). Салғыһы һоноҡ икән (эйек-һаҡмар)

**ҺОНОҠЛАНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* салғының артҡа саңҡайыуы — *откинуться (о косе).* Салғы һоноҡланып китте, бәкесләп алыр гәрәк, тибеҙ

**ҺОНТОЙМАҪ** (һаҡмар) *и.* аҫтыртын — *скрытный.* Һонтоймаҫҡа йомошоң төшмәһен

**ҺОНТОР** (һаҡмар) *с.* сомтор — *короткий (в длину).* Һонтор күлдәктә йөрөй

**ҺОҢ БАШҠОРТ** (дим) *и.* «һ» өнө менән һөйләшеүсе башҡорт — *башкир, употребляющий в языке звук «h»*

**ҺОҢҒАУ** (ҡыҙыл) *с.* 1. Эш рәте белмәгән — *бестолковый.* 2. Миңрәү — *глупый.* 3. (арғаяш) Килбәтһеҙ — *несуразный.* 4. (урта) Һонтайған — *долговязый*

**ҺОҢҒО** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* оңғо — *ушко топора (в которое вставляют топорище).* Балтамдың һоңғоһо йарылды (арғаяш)

**ҺОҢҒОЛ** (ҡыҙыл) *с.* һонтайған — *долговязый*

**ҺОҢҒОЛДАУ, ҺЫҢҠЫЛДАУ** (дим, ҡариҙел) *ҡ.* «һ» өнө менән һөйләшеү — *говорить со звуком «h».* Иҙел арйағында һоңғолдап ҫөйләшәләр (дим)

**ҺОҢҒОРЛАУ** (һаҡмар) *ҡ.* һөйләнеү — *ворчать*

**ҺОҢҠО, ҺОҪОҢҠО** (урта) *с.* ҡайырыңҡы — *загнутый (о косе)*

**ҺОҢҠОЛДАҠ** (туҡ-соран) *и.* «һ» өнө менән һөйләшеүсе — *разговаривающий со звуком «h».* Туҡ башы йағында һоңҡолдаҡ башҡорт та бар

**ҺОР** (урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Аҡһыл һоро — *светло-коричневый.* 2. (ҡыҙыл, мейәс, урта) Күкһел — *синеватый.* Сысҡан һор була (урта). Ҫор (дим). 3. (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) Көрән — *коричневый.* Һор айыу күрҙек урманда (мейәс). 4. (дим) Күк — *синий*

**ҺОРАМТАЛАШЫУ** (мейәс) *ҡ.* һораныу — *клянчить.* Белешем йаратып шу буҙаны һорамталашыпарып тирмән табып әпкилеп ҡойҙорҙо

**ҺОРАНСЫ** (мейәс) *и.* һораныусы — *попрошайка.* Хәйерсене һорансы талаған

**ҺОРАНСЫЛАУ** (мейәс) *ҡ.* һораныу — *попрошайничать.* Йемерепөттөң бит самауырҙы, инде йөрөйөм һорансылап

**ҺОРАТ** (ҡыҙыл) *и.* күк ат — *сивая лошадь*

**ҺОРҒОЛ** (мейәс) *с.* һорғолт — *коричневатый.* Һорғол күҙле

**ҺОРҠОТ** (ҡыҙыл, урта) *и.* оҙон ағас — *высокое дерево.* Һорҡот (эйек-һаҡмар)

**ҺОРНАЙҒАН** (эйек-һаҡмар) *с.* һонтайған — *долговязый*

**ҺОРНАЙЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* оҙонайыу — *стать длинным.* Һорнайып һаман утынға йөрөй

**ҺОРНАС** (мейәс) *с.* һороҡай — *коричневатый*

**ҺОРТОЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* һорғолт — *коричневатый.* Шәшке һортой була

**ҺОРТУРҒАЙ** (урта) *и.* турғай — *воробей*

**ҺОРҺОҘ** (һаҡмар) *с.* холҡһоҙ — *дурной по характеру.* Шу хәҙәре һорһоҙ геше буламы инде

**ҺОҪА** I (мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡорт ҡашығы — *большая берестяная ложка для вычерпывания пчел.* Күсте һарыған урынынан һоҫа белән һоҫоп алып моҙғаға һалалар (мейәс)

**ҺОҪА** II (һаҡмар) *и.* мөшкә — *мельничная насыпь*

**ҺОҪҠАҠ** (арғаяш) *и.* 1. Һоҫа — *челнок.* 2. Ҡорт ҡашығы — *большая берестяная ложка для вычерпывания пчел.* 3. Һоҫҡо — *совок*

**ҺОҪҠОН** (урта) *и.* оҫҡон йыуаһы — *лук линейный*

**ҺОҪҠОС** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡорт ҡашығы — *большая берестяная ложка для вычерпывания пчел*

**ҺОҪОҢҠО** (урта) *с.* һоноҡ — *вытянутый.* Һоҫоңҡо салғы

**ҺОҪМА** (эйек-һаҡмар) *и.* балыҡ тота торған ҡулайлама — *приспособление для ловли рыб*

**ҺОҪОУ** I (урта) *ҡ.* йотоу — *глотать*

**ҺОҪОУ** II (ҡыҙыл) *ҡ.* боҫоу — *прятаться*

**ҺОҪОУ** III (арғаяш) *ҡ.* һөҙөү — *ловить рыбу бреднем.* Йылым белән һоҫҡан гешеләрҙә балыҡ бар

**ҺОҺҠАҠ** (арғаяш) *и.* һоҫҡо — *совок.* Һоҡҡо (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар)

**ҺӨБӘ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* бүләк — *подарок.* Һөбә өләшә торғайнылар, биш кешегә бер тире (мейәс). Үрге урамдан оҙон ҡолғаға һөбәләр тағып төшөп килеүсе бер төркөм йегетләр күренде (урта). ◊ Һөбә бағанаһы (урта) эшкинмәгән, йүнһеҙ кеше — *бестолковый человек*

**ҺӨҘГӨ** (ҡыҙыл) *и.* һөт һөҙгөсө — *цедилка.* Һөттө һөҙгө белән һөҙәһең

**ҺӨҘӨК** (арғаяш, урта, эйек-һаҡмар) *и.* һөҙлөк — *навар (на мясном бульоне)*

**ҺӨҘМӨШ** (мейәс) *и.* һөҙмә — *отжатое кислое молоко (наподобие сырковой массы)*

**ҺӨҘМӘЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* һөҙмә яһау — *сделать сюзмэ.* Һөттө һөҙмәләп йыйған кеше

**ҺӨҘМӘС** (эйек-һаҡмар) *и.* һөҙмә — *отжатое кислое молоко (наподобие сырковой массы)*

**ҺӨҘӨҺӨТ** (эйек-һаҡмар) *и.* Һөҙһөт — *удод.* Һөдөһөт (дим, ҡыҙыл, урта)

**ҺӨҘӘК** (арғаяш, мейәс) *с.* ҡайырыңҡы — *откинутый (о косе).* Һөҙәк салғы китергәһең бит (арғаяш)

**ҺӨҘӘГӘС** (ҡыҙыл) *с.* һөҙөшкәк — *бодливый.* Һөҙәгәс һыйырыңды һатманыңмы әле?

**ҺӨЖДӘҺЕҘ** (эйек-һаҡмар) *с.* выжданһыҙ — *недобросовестный.* Һөждәһеҙ гешенән ней өмөт итәһең инде

**ҺӨЖӨРӨЛӨҮ** (урта) *ҡ.* ябырылыу — *нахлынуть.* Тулҡыннар йарға һөжөрөлдө

**ҺӨЖӨРӨҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* 1. Таҙартыу, ҡырыу — *сгрести, чистить.* Трактыр белән йулды һөжөрәләр (урта). Төрпө белән солоҡ эсен һөжөрәләр (ҡыҙыл). 2. Ыуыу, ҡырыу — *тереть.* Ағала белән тире һөжөрәләр (ҡыҙыл). 3. (ҡыҙыл) Тәгәрәтеү — *катать (о холсте)*

**ҺӨЖӨҮ** I (урта) *ҡ.* тиҙ генә ашап бөтөрөү — *быстро съедать все поставленное.* Бал бер туҫтаҡ итеп ултыртҡайным, шуны һөжөп ҡуйҙылар

**ҺӨЖӨҮ** II (урта) *ҡ.* ышҡыу, шымартыу — *шлифовать.* Аҙаҡ кирбес белән һөжәһең. Тайаҡтың бер осон айаҡҡа кейеп һөжәһең тирене

**ҺӨЗДӘТЕҮ, ҺӨЗӨЛДӘТЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* һөсләтеү — *науськать (собаку).* Һөзгөрөү, һөздәү (мейәс), һөзөлдәтеү, һөсөлдәтеү (ҡыҙыл). Һөс тә һөс, эт һөзөлдәтә, баллар шарылдығы сыға (ҡыҙыл)

**ҺӨЗДӘҮ, ҺӨЗЗӘҮ** (ҡыҙыл) *и.* өҙләү — *горловое пение.* Һөздәүсе йуҡ һәҙер

һөҙөҙ - ҡуҙ

**ҺӨЙКӨНЕҮ** (мейәс) *ҡ.* һөйкәлеү — *привалиться, прислониться*

**ҺӨЙЛӘМЕШ** (ырғыҙ) *и.* һөйләү — *говор, сказ.* Бабайларҙың һөйләмеше буйынса ғына беләм

**ҺӨЙЛӘМЛЕ** (урта) *с.* белемле — *образованный.* Бик һөйләмле геше ул Мехәмәт ағай

**ҺӨЙМӘЛЕК** (ҡыҙыл, урта) *и.* мөхәббәт — *любовь.* Һөймәлек тотоп хат йаҙып йатты (ҡыҙыл)

**ҺӨЙМӘЛЕКТЕ** (көнсығыш диалект) *с.* һөйкөмлө — *обаятельный.* Бик оҡшаны ул миңә, һөймәлекте геше (ҡыҙыл). Һөймәлекле (урта)

**ҺӨЙМӘЛЕКҺЕҘ, ҺӨЙМӘЛӘКҺЕҘ** (көнсығыш диалект) *с.* һөйкөмһөҙ — *несимпатичный.* Һөймәләкһеҙ (урта)

**ҺӨЙНӘКҺЕҘ** (әй) *с.* 1. Һөйкөмһөҙ — *несимпатичный.* Бигерәк һөйнәкһеҙ геше. 2. Тәртипһеҙ — *недисциплинированный*

**ҺӨЙӨККӨҘ** (ҡыҙыл) *с.* һөйкөмһөҙ — *несимпатичный.* Һөйөмһөҙ (арғаяш), һөйөтһөҙ (мейәс). Кешегә һөйөтһөҙ булыпөткән инде хәҙер

**ҺӨЙӨҪӨНӨҮ, ҺӨЙҪӨНӨҮ** (урта) *ҡ.* һөйөү, теләү — *желать.* Камфитты ла һөйөҫөнөп ашамайым. Һөйһөнөү (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар)

**ҺӨЙӨТТӨ** (салйоғот) *с.* һөйкөмлө — *обаятельный, симпатичный.* Иң бәләкәй һөйөттө ҡәйенһендем — тутайым инде

**ҺӨЙРӘ, ҺӨРӘТМӘ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* һөйрәтке — *волокуша.* Һүрәтке (урта урал), ҫөйрәтмә (дим), сүрәтке (кариҙел)

**ҺӨЙРӘЛТКЕ** (һаҡмар) *и.* шамтыр — *неряха.* Йөрәле һөйрәлткең айланып!

**ҺӨЙРӘСЕ** (һаҡмар) *и.* күбәсе, күбә тейәүсе — *человек, который грузит копны*

**ҺӨЙРӘТӘЙ** (һаҡмар) *и.* ығыш — *копуша*

**ҺӨЙСӨЛДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һөсләтеү — *науськать собаку*

**ҺӨЙС-ҺӨЙС** (ҡыҙыл) *ы.* һөс-һөс, эт һөсләтеү ымлығы — *междометие науськивания собаки*

**ҺӨЙҺӨН** (арғаяш) *и.* кейәүҙең ата-әсәһенә ҡыҙ яғынан бирелә торған мал — *скот, подаренный со стороны невесты родителям жениха.* Һөйһөндөк (әй)

**ҺӨЙҺӨНМӘҮ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, урта) *ҡ.* 1. Хушһынмау — *быть неудовлетворенным.* 2. (арғаяш) Ҡағыу — *отчуждать кого*

**ҺӨЙҺӨНӨҮ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* күңелгә ятыу, оҡшау — *прийтись по душе.* Һөйһөнөб йетмәйем мин андый ашты (әй)

**ҺӨЙӘК** I (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* 1. Һөлдә — *скелет.* 2. (көнсығыш диалект, урта) Кәүҙә, һын — *стан, телосложение.* Һөйәге ғупшы (ҡыҙыл). Һөйәгемте йортомнан сығарам, тей (урта). ◊ Һөйәккә һеңеү (мейәс, урта) ҡанға һеңеү — *впитаться в кровь.* Мин үҙебеҙсә һөйҙәйем, һөйәккә һеңгән бит ул (мейәс). Һөйәгемә һеңгәнсе өйрәтте (урта). Һөйәк һатыу (урта) ҡыҙ өсөн мәһәр алыу — *взять калым*

**ҺӨЙӘК II** (мейәс) *и.* талҡыш — *кострика, костра*

**ҺӨЙӘК СИХУТЫ** (урта) *и.* һөйәк туберкулезы — *туберкулез костей*

**ҺӨЙӘЛДЕ** (урта) *и.* киҫкә — *валежник*

**ҺӨЙӘМ, ҺӨЙӘМӘ** (урта, әй) *и.* урманда әҙерләнеп ҡуйылған утын — *заготовленные в лесу дрова.* ◊ Һынык һөйәм (көнсығыш диалект) баш бармаҡ менән бөкләнгән һуҡ бармаҡ араһындағы оҙонлоҡ — *пядь (старинная мера длины, равная расстоянию между большим и согнутым указательными пальцами руки)*

**ҺӨЙӘНГЕС** (урта) *и.* арт — *спинка стула.* Һөйәнгесле ултырғыс алтыҡ

**ҺӨЛГӨ СӘЙЕ** (һаҡмар) *и.* ҡыҙ яғынан яусы һөлгө алып ҡайтҡас, егеттең ата-инәләре, ағай-энеләре менән йыйылышып эскән сәй — *ритуал чаепития у родителей жениха после обоюдного сговора на брак.* Барып сәй эсеп, йегеттең атинәһе үҙенән ағай-энеһен йыйып, һөлгөнө, һәр береһе тотоп ҡарап, йөҙләренә һыпырып, һөлгө сәйе эсеп ҡайтып китәбеҙ

**ҺӨДДӘ** (әй) *с.* һонтайған — *долговязый*

**ҺӨЛӨҢГӨ** (мейәс) *и.* һөлгө — *полотенце с вышивкой на концах*

**ҺӨЛӘРЕҮ, ҺӨРӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* һөйрәлеү — *волочиться.* Күлмәктең арты һөләреп йөрөй. Һөрәлеү (ҡыҙыл), һүрәлеү (урта урал)

**ҺӨМБАШ, ҺӨМБӘШ** (ҡыҙыл) *и.* ташбаш — *пескарь*

**ҺӨМТОЙМАҪ** (урта) *и.* аҫтыртын — *скрытный.* Һөйтоймаҫҡа көнөң ҡалмаһын у

**ҺӨМТӘЙ** (мейәс) *с.* йәмһеҙ — *неприглядный.* Кейәүемдең төҫө лә йуҡ, һөмтәй генә

**ҺӨМҺӨҘ** (көнсығыш диалект, урта) *с.* 1. Тәртипһеҙ, тәрбиәһеҙ — *невоспитанный.* 2. Килбәтһеҙ — *неуклюжий.* 3. (урта) Әрһеҙ — *нахальный.* 4. (ҡыҙыл) Йәмһеҙ — *некрасивый.* 5. (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) Ҡараңғы сырайлы — *неприветливый.* Бүре шикелде һөмһөҙ ғараш (ҡыҙыл). 6. (әй) *и., с.* бирән — *обжора.* Һөмһөҙ һыйыр бөтә йерҙе йапыртып йөрөй. Һөмһөҙ, ашҡа төшмә!

**ҺӨМҺӨР: ҺӨМҺӨРӨ ҠОЙОЛОУ** (көнсығыш диалект, урта, ырғыҙ) *ҡ.* һөмөрө ҡойолоу — *быть не в духе, быть хмурым.* Һөмһөрөң ҡойолоп ултырма ҡаршымда (урта). Оҙаҡ ҡына һөмһөрө ҡойолоп йөрөнө (урта)

**ҺӨМӘЙ, ҺӨМӘЙ ҠОШ** (дим) *и.* күгәрсендән бәләкәйерәк, мөгөҙлө ҡош — *бородатая неясыть*

**ҺӨНӘРСЕН, ҺӨНӘРСӘН** (дим) *с.* һөнәрмән — *мастер на все руки.* Минең атай һөнәрсән ҡарт булған

**ҺӨҢГӨЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* һабаҡ ебәреү — *пускать стрелу.* Йыуа һөңгөләнгән, ҡаты хәҙер

**ҺӨР** I (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* ҡаҡланған ит — *вяленое мясо.* Йете-һигеҙ йыл торған һөрҙө бешермәй ашағандар (ҡыҙыл). Ҡайһауыл йортҡа элек сыҡһа, шул һөр һалып бешереп, үҙ ырыу кешеләрен көтөп торор ине (һаҡмар)

**ҺӨР** II (урта) *и.* ҡот, йәм — *уют.* Өйөнөң бер һөрө йуҡ. Ирле геше — һөрлө геше

**ҺӨРГӨ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* юнғы төрҙәренең дөйөм исеме — *общее название всевозможных скобелей.* Тәпәндең эсен һөргө менән һөрөп таҙарталар (ҡыҙыл)

**ҺӨРГӨС** (урта) *и.* 1. Ҡарлау — *лемехочиститель.* 2. (һаҡмар) Һал якоре — *якорь плота*

**ҺӨРҘӨГӨП, ҺӨРҘӨГӨШӨП** (көнсығыш диалект) *ҡ.* өймәкләшеп, күмәкләшеп — *сгрудившись.* Өйгә ҡыҙҙар һөрҙөгөп килеб инделәр. Тай-тулаҡ һөрҙөгөшөп сабып үтте (ҡыҙыл). Һөрлөгөп, һөрлөгөшөп (урта). Һал тотмаға һөрлөгөшөп сыға халыҡ

**ҺӨРҘӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* еҫкәнеү — *обнюхивать кого-что.* Эт һөрҙәп йөрөй

**ҺӨРИТ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ҡаҡланған ит — *вяленое мясо.* 2. (һаҡмар) Һөрһөгән ит — *тухлое мясо*

**ҺӨРМӘКЛӘТЕҮ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ойпалау — *мять.* Йергә һөрмәкләтеп барып эт ҡуйанды тотто (ырғыҙ)

**ҺӨРМӘКЛӘШЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* көрмәкләшеү — *схватиться (о борьбе)*

**ҺӨРӨ, ӨРӨ** (урта) *и.* тоҙлоҡ — *навар*

**ҺӨРӨЛӨҮ** (урта) *ҡ.* һөрөнөү — *споткнуться.* Һыбай барғанда ат һөрөләп китте. Һөрһөнөү (дим)

**ҺӨРӨМЛӘНЕП** (урта) *ҡ.* 1. Томанланып — *покрывшись мглою.* Буран һөрөмләнеп килә. 2. Күренер-күренмәҫ булып — *быть едва заметным.* Ҡойаш һөрөмләнеп тора

**ҺӨРӨНКӘК, ҺӨРӨҢКӘК** (мейәс) *с.* һөрөнсәк — *часто спотыкающийся*

**ҺӨРӨНТӨ** (урта) *и.* һыу менән ағып килгән сүп-сар — *мусор, сносимый водой*

**ҺӨРӨҮ** (мейәс, урта) *ҡ.* 1. Йышыу, шымартыу — *шлифовать.* 2. Йырыу — *прорыть что.* Һыу һөргән йер (урта). 3. Ырыу — *пазить.* Ағастың эсен һөрөп алаһың (мейәс)

**ҺӨРПӨЛДӘТЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* шурпылдатыу — *чавкать.* Ашты бигерәк һөрпөлдәтеп эсәһең (мейәс)

**ҺӨРҺӨГӘН ИТ** (арғаяш, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* ҡаҡлаған ит — *вяленое мясо*

**ҺӨРҺӨҘ** (эйек-һаҡмар) *с.* 1. Төҫһөҙ — *невзрачный.* Ниндәй һөрһөҙ тауар һуң был? 2. (ҡыҙыл, мейәс, урта) Йәмһеҙ — *некрасивый.* Бигерәк һынһыҙ, һөрһөҙ ҙәһә! (мейәс)

**ҺӨР-ҺӨРҺӨҘ** (урта) *с.* йәп-йәмһеҙ — *совсем неприглядный.* Һөр-һөрһөҙ ҡыҙы бар

**ҺӨРӘ I** (урта) *и.* тына, тапҡыр — *раз.* Ике һөрә айыу күрҙем. Ике һөрә саҡырып йырлаттылар

**ҺӨРӘ II** (мейәс) *и.* һөйрәтке — *волокуша.* Һөрә менән һөрәләйбеҙ бесәнде. Һөрәт (ҡыҙыл), һөрәтке (ҡыҙыл, мейәс)

**ҺӨРӘН** (һаҡмар) *с.* ҙур — *большой.* Һөрән айаҡ буғас ништәмәк кәрәк, бер ҡата һыймай

**ҺӨР ӘРВӘНТЕ** (урта) *и.* әрмәнде — *жаба*

**ҺӨРӘТ** (ҡыҙыл) *и.* ығыш — *копуша*

**ҺӨРӘТЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* һөйрәтеү — *волочить, тащить.* Тас һөрәтеп, бысаҡ ҡайрап туй һуйалар (мейәс)

**ҺӨРӘТКЕ I** (ҡыҙыл) *и.* ығыш — *копуша.* Һүрәтке (әй)

**ҺӨРӘТКЕ II** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* һөйрәтке — *волокуша.* Һөрәтмә (урта). Йәйләүгә күскәндә һөрәтмәгә һалып күсәң әйбереңде

**ҺӨСИТ** (һаҡмар) *и.* хөсөт — *месть.* Хөсит (урта урал). ◊ һөсит ҡойоу (урта) хаслыҡ ҡылыу — *враждовать.* Һөсит ҡойоп ҡына торалар

**ҺӨСКӨРТӨҮ** (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* ҡотортоу — *натравить кого-либо.* Һөстөрөү (эйек-һаҡмар), өскөтөү (ҡариҙел), өҫтөрөү (дим), һөсөлдәтеү, һөстәтеү (ҡыҙыл)

**ҺӨҪКӘ** (арғаяш) *и.* һоҫа — *челнок*

**ҺӨҪКӘК** (арғаяш, салйоғот) *и.* һөҙгөс — *цедилка*

**ҺӨТКӘ: ҺӨТКӘ УЛТЫРЫУ** (урта) *ҡ.* баш ҡоҫоу — *колоситься*

**ҺӨТЛӨГӘН, ҺӨТЛҮЛӘН, ҺӨТЛӨКӘС, ҺӨТЛӨКӘЙ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Һары билсән — *бодяк полевой.* Һөтләкәй, һөтләк (урта), һөттө үлән (салйоғот). 2. (урта) Бәпембә — *одуванчик.* Һөттүлән (арғаяш, салйоғот)

**ҺӨТЛӨК I** (ҡыҙыл, урта) *и.* йәйге аш бешереү урыны — *летняя кухня*

**ҺӨТЛӨК II** (урта) *и.* сипарат мороно — *рожки сепаратора*

**ҺӨТЛӨК III** (урта) *и.* һары билсән — *бодяк полевой*

**ҺӨТӨҺӨҘ** (дим, урта) *и.* һөҙһөт — *удод.* Һөтөһөт (ҡыҙыл, мейәс), һөтөт, һөтһөт (арғаяш)

**ҺӨТ СЫҒАРЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* һөт айырыу — *сепарировать молоко*

**ҺӨТ ТАРТЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* һөт айырыу — *сепарировать молоко*

**ҺӨТТӨМӘКӘЙ** (ҡыҙыл) *и.* һары билсән — *бодяк полевой*

**ҺӨҺКӘК** (салйоғот) *и.* һөҙгөс — *цедилка*

**ҺУҒАҠАЙ** (һаҡмар) *с.* һуға торған — *предназначенная для тканья.* Һуғаҡай балаҫым тора

**ҺУҒЫЛМА** (урта) *и.* биҙгәк — *малярия*

**ҺУҒЫЛМЫШ** (мейәс) *ҡ.* һуғылған — *тканый.* Был йөндән һуғылмыш

**ҺУҒЫЛЫНЫУ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* тап булыу — *попасть.* Бер түгел өс аслыҡҡа һуғылынды (эйек-һаҡмар)

**ҺУҒЫЛЫУ** (салйоғот) *и.* өҙлөгөү — *осложнение (после болезни)*

**ҺУҒЫМ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* һуғыу эше — *ткачество*

**ҺУҒЫНЫУ** (төньяҡ-көнсығыш, эйек-һаҡмар) *ҡ.* киндер һуғыу — *ткать.* Һуғынырға әҙерҙәнә (мейәс)

**ҺУҒЫУ** (көнсығыш диалект, урта) *ҡ.* аулау, тотоу — *охотиться.* Ҡоралайҙы кәзә урынына һуҡтыҡ (урта)

**ҺУҘМА I** (урта) *и. резина*

**ҺУҘМА II** (эйек) *и.* урындыҡ буйына йәйелә торған ҡорама менән һырып эшләнгән буй юрған — *узкая длинная стеганая подстилка на нарах*

**ҺУҘМАЙЛАНЫУ** (эйек) *ҡ.* яйлау — *медлить*

**ҺУҘМАҠАЙ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* ығыш — *копуша*

**ҺУҘМАҠОЙОҠ** (урта) *и.* баҙар ойоғо — *простые чулки фабричного производства*

**ҺУҘЫЛМАҠ** (урта) *и. резина*

**ҺУҘЫЛЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* яйлау — *медлить.* Һуҙылып йөрөү (ҡыҙыл)

**ҺУҘЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* аялау — *расчесывать козий пух.* Дебетте өсөнсө ҡат һуҙҙым

**ҺУЙҘАЙ, ҺУЙҘАЙҒАН** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран, урта урал, әй) *с.* һонтор — *долговязый.* Һуйҙыҡ (әй), һуйҙан (эйек-һаҡмар)

**ҺУЙҘАЙЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* һонтайыу — *быть долговязым*

**ҺУЙҘАҢЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эшләр-эшләмәҫ йөрөү — *работать неохотно.* Тағы күпме һуйҙаңларға уйлайһың?

**ҺУЙҠАЙ, ҺУЙҠЫЙ, ҺУЙЫҠАЙ** (арғаяш, салйоғот) *и.* уйһыулыҡ — *низменность*

**ҺУЙЛАЙЫУ** (урта) *ҡ.* иҫәүәнләнеү — *забываться*

**ҺУЙЫЛ** (урта) *с.* һығылмалы — *гибкий.* Һуйыл сыбыҡ менән һуйар инем мин һеҙне

**ҺУЙЫЛЫУ** (ҡыҙыл, әй) *ҡ.* туҙыу, бүҫәләү — *износиться.* Күлдәктәре һуйылып төштө тей ине (ҡыҙыл)

**ҺУЙЫУ** (урта) *ҡ.* 1. Тунау — *сдирать шкуру.* Хәҙер тиреһен һуйып алабыҙ. Төрткө һуйа гиткәннәр. 2. Талау — *грабить.* 3. Ныҡ әрләү — *сильно ругать.* Берсиҙәтел һуйа ғына тегене

**ҺУҠА** (урта) *и.* тәпке — *мотыга*

**ҺУҠАБАШ** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* япа-яңғыҙ — *одинокий.* Һуҡабашым тик йатам шунда (мейәс)

**ҺУҠА БЫСАҒЫ** (арғаяш) *и.* һуҡа төрәне — *сошник*

**ҺУҠА БОТО** (арғаяш, мейәс) *и.* һуҡа тотҡаһы — *ручки плуга*

**ҺУҠАЙЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* суҡайыу — *торчать на виду, выделяться на фоне чего-либо.* Һуҡайып машинаға менеп ултырҙы. Һупайыу (ҡыҙыл)

**ҺУҠА ҠЫРҒЫСЫ** (арғаяш) *и.* ҡарлау — *лопатка, которой очищают лемех во время пахоты*

**ҺУҠАЛАҒӨЙ** (һаҡмар) *и.* 1. Ҡаралтыһыҙ өй — *дом без приусадебных построек.* 2. (урта) Башы ябылмаған өй — *дом без крыши*

**ҺУҠАЛАУ** (мейәс) *ҡ.* алдаштырыу, әүрәтеү — *занимать, развлекать кого-л. чем-л.* Һуҡалаһаң, аҙ ғына йухалаһаң бабайҙы китә лә бара

**ҺУҠҠЫ** (һаҡмар) *и.* сыбағас — *цепь*

**ҺУҠҠЫТАЙ** (урта) *и.* ҡалын туҡыма — *толстая материя*

**ҺУҠЛЫҒЫҮ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Һуғылыу — *заезжать.* Килгәндә беҙгә һуҡлығып кит. 2. Юлығыу — *попасть.* Ауыр эшләргә һуҡлығаһың байағы, шуға аҡ ҡорбан салалар

**ҺУҠМА** (арғаяш, салйоғот) *с.* һуғылған — *тканый.* Һуҡма балаҫтар күб ине әүәле (арғаяш)

**ҺУҠМА ЙУЛ** (мейәс) *и.* үлән баҫҡан иҫке юл — *старая, заросшая дорога*

**ҺУҠМАЛЫ АТ** (арғаяш, мейәс) *и.* һуҡҡанға йөрөгән ялҡау ат — *ленивая лошадь*

**ҺУППАРМАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец*

**ҺУҠТА I** (көнсығыш диалект, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡыҫыр башаҡ — *пустой колос*

**ҺУҠТА II** (көнсығыш-диалект) *и.* 1. Ҡош йөнөн йолҡҡандан һуң тороп ҡалған ҡара-күкһел төбө — *иссиня-черный пух, оставшийся после ощипывания птиц.* Йабыҡ өйрәктә һуҡта була (ҡыҙыл). Ҡаҙҙың йөнөн йолҡоп алғас, тәнендә ҡара-ғороһо ҡала, аны һуҡта, тиҙәр (әй). 2. (ҡыҙыл) Сәс төбө — *корни волос*

**ҺУҠТА III** (эйек-һаҡмар) *и.* емеш-еләк һабағы — *стебель ягод.* Һуҡталы балан. Һуҡталы муйыл. Баланды һуҡтаһы менән ала ла элеп ҡуйа (һаҡмар)

**ҺУҠТЫБАЙ** (эйек) *и.* эскесе — *пьяница*

**ҺУҠТЫБАЙЛАНЫУ** (эйек) *ҡ.* эсеү — *выпивать*

**ҺУҠЫРАҠ** (урта) *с.* күрер-күрмәҫ кеше — *подслеповатый*

**ҺУҠЫРАНЫУ** (урта) *ҡ.* тынысһыҙланыу, мыжыу — *беспокоиться (о ребенке)*

**ҺУҠЫРГЕСЕРТКӘН** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек, әй) *и.* һаңғырау кесерткән — *глухая крапива*

**ҺУҠЫР СЕБЕН** (көнсығыш диалект) *и.* 1. Ләпәкәй — *мошкара.* 2. (арғаяш, салйоғот) Серәкәй — *комар*

**ҺУҠЫР ТЕГӘНӘК** (урта) *и.* һырмалсыҡ — *липучка*

**ҺУҠЫРТӘКӘ** (урта урал, әй) *и.* һәпәләк — *игра в жмурки*

**ҺУҠЫР ШӘМ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* ҡыуыҡһыҙ шәм — *коптилка.* Һуҡыр лампы (арғаяш, урта, әй)

**ҺУЛА** (ҡыҙыл) *и. рахит*

**ҺУЛҠЫЛДАҠ, ҺУЛҠЫЛДЫҠ** (ҡыҙыл) *и. пружина*

**ҺУЛҠЫЛДАП: ҺУЛҠЫЛДАП ҺЫҘҘАУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* шештең өҙлөкһөҙ әрнеп һыҙлауы — *постоянная ноющая боль.* Һулҡылдап һыҙҙай, шешек сығып килә (ҡыҙыл)

**ҺУЛПЫ** (мейәс) *и.* рахиттың өсөнсө стадияһы — *третья стадия рахита.* Өсйәндән һулпыға айҙанһа оҙаҡ аттамай бала

**ҺУЛПЫҠ** (әй) *с.* 1. Бер яҡҡа ауышыраҡ, ҡыйышыраҡ итеп атлаусы — *шагающий, наклонившись в бок.* 2. Яҫы битле — *широколицый*

**ҺУЛТАНЛАУ** (урта) *ҡ.* юртыу — *бежать рысью.* Атлар һултанлап ҡына баралар

**ҺУЛЫҒЫУ I** (мейәс) *ҡ.* һулыу — *вянуть.* Гөлөм һулыҡҡан

**ҺУЛЫҒЫУ II** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* һулҡылдау — *всхлипывать.* Ул тыйыла алмай һулығып илай (урта)

**ҺУЛЫМ** (ҡыҙыл, урта) *и.* 1. Батҡыл, кеше йөрөй алмай торған юл — *топкая узкая дорога.* 2. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Иҫке һуҡмаҡ — *старая, заброшенная тропинка*

**ҺУЛЫУ I** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* теләү — *желать.* Ул малай шул йаҡҡа тайырға һулый

**ҺУЛЫУ II** (урта) *и.* һулыш — *дыхание.* Һулыуы бөтмәгәс, йата инде хәл өҫтөндә

**ҺУМАЛА** (нөгөш) *и.* ыҫмала — *смола*

**ҺУМАЛАУ** (туҡ-соран) *ҡ.* яңы бешкән икмәктең өҫтөн һыулап һөртөп алыу — *обмачивание водой поверхности только что испеченного хлеба*

**ҺУМАЛТАЙ** (эйек) *с.* килешһеҙ — *грубый.* Һумалтай таҡта иҙәне

**ҺУМДЫҠ** (төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *и.* башһыҙ, биҙ һымаҡ үҙәкле шеш — *карбункул.* Ҡултығына һумдыҡ ҡалҡҡан, тәңкә һумдыҡ ҡуйар гәрәк, килешәуыл (урта урал). Һумныҡ (һаҡмар)

**ҺУМНАЙ** (мейәс) *с.* ибәтәйһеҙ — *неуклюжий*

**ҺУМНАУ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* һаплау — *засадить что-либо на черенок.* Көрәккә ағас һумнап ҡуйҙым әле (урта)

**ҺУМНАЙ** (мейәс, әй) *с.* килбәтһеҙ — *неуклюжий*

**ҺУМ ШЕШЕК** (арғаяш) *и.* башһыҙ, биҙ һымаҡ үҙәкле шеш — *карбункул*

**ҺУНАҒАРА** (ҡыҙыл) *и.* йыртҡыс ҡош — *вид хищной птицы.* Һунағара тигән ай йаман ғош, ҡош ҡундырмай ағас башына *(халыҡ йырынан)*

**ҺУНАРҘАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һунарға йөрөү — *охотиться.* Һунарлау (һаҡмар). Һунарлап килеп урынлашҡаннар

**ҺУНАРСЫЛ** (мейәс, эйек) *и.* һунарға әүәҫ кеше — *заядлый охотник*

**ҺУҢ** (һаҡмар) *к.* эйе, раҫлау һүҙе — *да.* — Кисә ҡайттыңмы? — Һуң

**ҺУҢ БАРМАҠ** (һаҡмар) *и.* һуҡ бармаҡ — *указательный палец*

**ҺУҢҒА** (һаҡмар, ырғыҙ) *р.* һуң — *поздно.* Афтауыз ғалай һуңға гигән (һаҡмар)

**ҺУҢҒАРЫ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *р.* һуң — *поздно.* Һыйыр һуңғары ғына быҙаулаған (ырғыҙ). Һуңғары урыҫларҙан гүрмәксе мейес сығарҙы. Бороңғо ғаҙан йуҡ инде ул, һуңғары алынған ғаҙан (эйек-һаҡмар)

**ҺУҢҒАРЫРАҠ** (һаҡмар) *р.* һуңыраҡ — *позднее.* Һуңғарыраҡ буһа, бесәнден ашы түбәнәйә

**ҺУҢҒЫ, ҺУҢҒЫҺЫ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар, эй) сыу — *плацента (у животных).* Һуңҡыһы (урта). Һуңҡыһы төштө

**ҺУҢҒЫҒА** (эйек-һаҡмар) *р.* үтескә — *взаймы.* Һуңғыға бер-ике кила ит биреп тор әле

**ҺУҢҒЫЛЫҠТА** (ҡыҙыл) *р.* иң һуңынан — *впоследствии*

**ҺУПАЙЫП УЛТЫРЫУ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* бер ни эшләмәй тик ултырыу — *сидеть сложа руки.* Ултырған була һупайып, бер нигә эшкинмәй (эйек-һаҡмар)

**ҺУПАЛ** (мейәс) *с.* иҫәр — *глупый*

**ҺУПАЛАҠ** (арғаяш, мейәс, салйоғот, эй) *и.* 1. Көнйәлә — *пук чесаной шерсти или трепаного льна, прикрепленный к прялке.* Бер һупалаҡ йөн (мейәс). 2. (төньяҡ-көнсығыш) Йомарлам — *комок.* Бер һупалаҡ майым ҡалды (салйоғот)

**ҺУПАЛАҠТАУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* 1. Йомарлау, йомғаҡлау — *скатать (в комок).* Май һупалаҡтау. Ҡорот һупалаҡтау. Теткәс һулаҡтап ҡуйабыҙ (мейәс). 2. (көнсығыш диалект) Арлы-бирле, унан-бынан ғына эшләү — *делать как попало.* 3. (ҡыҙыл, эй) Аҙ ғына белеү — *немного уметь что-либо делать.* Урыҫса аҙ ғына һупалаҡтайым (ҡыҙыл)

**ҺУПАТА, ҺУПАТАЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* лупыш — *неуклюжий*

**ҺУПАТАЛАЙ** (ҡыҙыл) *с.* ҙур — *большой.* Һупаталай быйма кейгән

**ҺУПИМ** (эй) *с.* белдекһеҙ — *непонятливый*

**ҺУПЫЛДАҠ, ҺУПЫЛДЫҠ, ҺУПАЙ** (дим) *и.* 1. Һупайҙы — *сыч.* 2. (эй) Һеҙһөт — *удод*

**ҺУР** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *с.* ҙур — *большой.* Һеләүһен эт шикелде һур була (ҡыҙыл)

**ҺУРАП I** (урта) *и.* эҙ — *след.* Һурабынан йуллаған айыуҙы

**ҺУРАП II** (ҡыҙыл) *и.* ҙурат — *продолговатая копна снопов в поле.* Быйыл ғына урған, ай, ураҡты көлтәләпкәй һалдыҡ һурапҡа *(халыҡ йырынан)*

**ҺУРАПАН: ҺУРАПАН ЙУЛ** (мейәс) *и.* иҫке юл — *старая, заброшенная дорога*

**ҺУРАТ** (һаҡмар) *и.* йөҙ көлтәнән торған ҙурат — *копна из ста снопов*

**ҺУРҘЫРТҠЫС** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* киптергес — *промокашка*

**ҺУРҠЫЛДАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡамыш башы — *головка камыша*

**ҺУРҠЫЛДАУ** (мейәс) *ҡ.* шештең өҙләкһеҙ әрнеп һыҙлауы — *постоянная ноющая боль.* Беләгем һурҡылдап һыҙҙай

**ҺУРҠЫУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* һурығыу — *подсохнуть.* Бесән аҙыраҡ һурҡый (мейәс)

**ҺУРНАҠСЫ** (урта) *и. бур ҡорт* — *пчела-воровка*

**ҺУРПА** (ҡыҙыл) *и.* йәш — *слеза.* Күҙенән һурпаһы ғойолоп шәмәрә лә йөрөй ҡарт кешенен. ◊ Күҙ һурпаһын ҡойоу *(күҙ йәшен түгеү)* — *плакать*

**ҺУРПАГҮҘ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар, эй) *и.* йәшкәҙәп торған ауырыу күҙ — *больные слезящиеся глаза.* Һурпалыгүҙ (урта урал, эй)

**ҺУРПЫСЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* һурпыс — *сердечник (напр. часть ножа, всаженная в черенок)*

**ҺУР ТУН** (һаҡмар) *и.* толоп — *тулуп.* Мыны таштап һур тун алмаҡ пула.

**ҺУРЫҒЫУ** (көнсығыш диалект, урта) *ҡ.* 1. Елләү, кибеү — *подсохнуть.* Бесән һурыға. Йер һурыға (ҡыҙыл). 2. Ябығыу — *похудеть.* Бик ныҡ һурыҡҡанһың, әллә ауырыйһыңмы? (урта)

**ҺУРЫҠТЫРЫУ** (көнсығыш диалект, эйек-һаҡмар) *ҡ.* киптереү — *обсушить.* Тирене һурыҡтырып алып шунан тарта торғайнылар (ҡыҙыл)

**ҺУРЫЛЫУ** (мейәс) *ҡ.* ҡуҙғалыу — *трогаться (с места).* Тыуған йерендән һурылып сығып китеүе ғыйын

**ҺУРЫНДЫ** (салйоғот) *и.* һүренте — *нитки, выдерганные из ткани*

**ҺУРЫТЫУ** (дим) *ҡ.* һурҙырыу — *обдирать.* Тары һурытып ҡайттым

**ҺУРЫУ** (мейәс) *ҡ.* һуғыу — *побить (о мареве).* Ашты монар һурып китте

**ҺУҺЫҠ** (салйоғот) *и.* ҡашыҡморон — *широконоска*

**ҺУҺЫҠ АРБА** (салйоғот) *и.* кырандас — *тарантас*

**ҺҮГӘН** (мейәс, урта) *и.* йәлдәүһеҙ мурҙа — *морда без внутренней воронки*

**ҺҮҘ: ҺҮҘ АЛЫШТЫРМАУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* һөйләшергә мөмкинлек бирмәү — *не давать возможность разговаривать;* һүҙ ғайтарыу (көнсығыш диалект) ҡарышыу — *пререкаться;* һүҙ ҡатыу (туҡсоран) һөйләү — *говорить.* Был хаҡта әлегә бер кемгә бер һүҙ ҡатҡаным йуҡ. Һүҙ тишеү (урта) йәрәшеү — *сватать.* Ҡыҙға һүҙ тишеп ҡайттыҡ, тейләр; һүҙен һүтеү (ҡыҙыл) һөйләү — *рассказать.* Сәй эсереп тороп һүҙҙе һүтәһе ине һиңә: һүҙгә ҡалдырыу (ҡыҙыл) мәсхәрәләү — *опозорить;* һүҙ уҫмаҡтау (эй) белмәмеш булып һорашыу — *расспрашивать притворившись незнающим;* һүҙ һалыу (һаҡмар) яусылау — *сватать.* Берәүҙең ҡыҙына һүҙ һалып кил, тип йаусы йебәрәбеҙ

**ҺҮЖӘ** (эйек-һаҡмар) *м. һ.*, кеше эшләп торғанда ҡеүәтләп әйтелә торған һүҙ — *слово поощрения.* — Һүжәгеҙ! Алла ҡеүәт бирһен! — Әйҙә һүжәләшергә! (һаҡмар)

**ҺҮЛ** (ҡыҙыл, салйоғот, эйек-һаҡмар) *с.* еүеш — *мокрый.* Һүлле бесән (ҡыҙыл). Һүл утын насар йана (һаҡмар)

**ҺҮЛДЕР** (мейәс) *с.* һүрән — *плохо истопленный (о печи, бане); плохо пропеченный (о хлебе).* Мейес тә һүлдер, икмәк тә һүлдер

**ҺҮЛЕМ ЙУЛ** (эйек-һаҡмар) *и.* иҫке юл — *старая, заброшенная дорога.* Һүлем йулды беләһең, шуның менән тит. Һүләм йул (ҡыҙыл)

**ҺҮЛПӘН** (дим, ҡыҙыл, мейәс, ырғыҙ, әй) *с.* эшләп еткерелмәгән — *недоделанный.* Йеп һүлпән сиратылған (ырғыҙ). Һүлпән арҡан, һүлпән сирау (әй)

**ҺҮЛӘ** (әй) *и.* күбә — *копна (сена).* Ос һәнәгеп алып тотош һүләне ырғытып йебәрҙе

**ҺҮМЕС ҺӨЙӘГЕ** (әй) *и.* соңҡа — *бугор затылочной кости*

**ҺҮРЕМ** (эйек-һаҡмар) *и.* 1. Бер һаплам еп — *нитка длиной на одно вдевание в иголку.* Бер һүрем йеп бир әле. 2. (арғаяш, салйоғот) Һүренте — *нитки, выдерганные из ткани.* Һүрем йебе. Һүрендек (һаҡмар)

**ҺҮРЕҮ** (төньяҡ-көнсығыш, урта, эйек-һаҡмар) *и.* кәпрән — *наперник.* Ҫүреү (дим), сүреү (ҡариҙел)

**ҺҮРМӘ** (ҡыҙыл) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный половик*

**ҺҮРМӘКӘЙ** (ҡыҙыл) *и.* иҫке юл — *старая, заброшенная дорога*

**ҺҮРНӘКӘ** (ырғыҙ) *и.* һүренте — *нитки, выдерганные из ткани*

**ҺҮРӘМ ЙУЛ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* иҫке юл — *старая, заброшенная дорога*

**ҺҮРӘМТӘ** (ҡыҙыл) *и.* иҫке юл — *старая, заброшенная дорога*

**ҺҮРӘМҪЕҮ** (урта) *ҡ.* һүрәнәйеү — *остыть.* Мейесем һүрәмҫегән. Һүрәнһеү (арғаяш)

**ҺҮРӘНКЕ** (урта урал, һаҡмар) *с.* һүрән — *плохо истопленный (о печи, бане).* Мис һүрәнке булған (урта урал)

**ҺҮРӘНЛӘНЕҮ** (туҡ-соран) *ҡ.* кәмеү — *уменьшиться.* Бер аҙҙан халыҡ һүрәнләнде

**ҺҮРӘПӘН ЙУЛ** (мейәс) *и.* иҫке юл — *старая, заброшенная дорога*

**ҺҮРӘПӘТ** (әй) *и.* әрпеш — *неряха*

**ҺҮРӘТ** (арғаяш, урта) *и.* ҡараҫҡы — *чучело*

**ҺҮРӘҮ I** (урта) *с.* һүрән — *плохо истопленная (о печи, бане).* Мейес һүрәү булған

**ҺҮРӘҮ II** (ҡыҙыл) *и.* һүренте — *нитки, выдерганные из ткани*

**ҺҮТЕЛЕП ЙӨРӨҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* тырышып йөрөү — *стараться.* Мин икмәк баҫам тип һүтелеп йөрөйөм (мейәс)

**ҺЫБА I** (урта) *и.* кәзә тиреһенән яһалған биҙрә — *ведро, сделанное из козьей шкуры*

**ҺЫБА II** (урта) *и.* ҡолға — *шест*

**ҺЫБАЙ БЕЙЕҮ** (мейәс) *ҡ.* туй ваҡытында өйгә ат индереп бейеү — *во время свадьбы плясать на коне дома*

**ҺЫБАЙҠАН** (ҡыҙыл) *и.* тотош, билһеҙ күлдәк — *платье прямого покроя*

**ҺЫБАЙЛАП** (ырғыҙ, эйек) *р.* һыбай — *верхом.* Элек гел һыбайлап йөрөгәннәр (ырғыҙ). Һыбайлап сығырға гәрәк буған (эйек)

**ҺЫБАЙЛАУ** (эйек-һаҡмар) *р.* һыбай — *верхом.* Һыбайлау килеп ҡайттылар

**ҺЫБАУ** (арғаяш, дим, урта) *с.* һыулы — *мокрый.* Бәрәңгебеҙ һыбау түгел (дим). Тиреҫтә үҫкән бәрәңге һыбау була (урта)

**ҺЫБАУ: ҺЫБАУ ҠАР** (арғаяш) *и.* ҡырпаҡ ҡар — *первый снег*

**ҺЫБЫЛЖЫУ** (арғаяш) *с.* шамтыр — *неряшливый*

**ҺЫҒЫНЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ярҙам һорап аллаға табыныу — *просить божьей помощи, преклоняясь перед ним.* Сығыныу, аллаға сығыныу (әй)

**ҺЫҒЫУ** (арғаяш) *ҡ.* ҡамау — *окружить кого-что.* Ике тау араһына һығып алдыҡ

**ҺЫҘА** (урта) *и.* һыҙағайым — *лес, растущий длинной полосой.* Ике ҡулын кеҫәһенә тығып һыҙа буйынан китте

**ҺЫҘАТ** (нөгөш) *и.* күлдәк итәгенә һалынған таҫма — *тесьма, нашитая на подол платья*

**ҺЫҘҒАҠ: ҺЫҘҒАҠ ЙЕЛ** (ҡыҙыл) *и.* ыжғыр ел — *пронзительный ветер*

**ҺЫҘҒЫ, ҺЫҘҒЫС** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* бура бураҒанда бүрәнәне ырып сабырҙан алда һыҙып сыға торған саталы тимер — *пазник*

**ҺЫҘҒЫРАҠАЙ, ҺЫҘҒЫРТМАҠАС** (һаҡмар) *и.* һыҙғыртҡыс — *свистулька*

**ҺЫҘҒЫРЫҠ: ҺЫҘҒЫРЫҠ ЙЕЛ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнсығыш, һаҡмар) *и.* ыжғыр ел — *пронзительный ветер.* Ҡыбаланан өргән һыҙғырыҡ йел бешерә микән бохар алмаһын *(халыҡ йырынан. — ҡыҙыл)*

**ҺЫҘҒЫРЫУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* һыҙҙырыу — *топить (сало).* Туң май һыҙғырыу (ҡыҙыл). Һыҫҡырыу (арғаяш), һыһҡырыу (салйоғот), һыҙғытыу (урта)

**ҺЫҘҘЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* һызыҡ — *шкварки*

**ҺЫҘЛЫҠЛАУ, ҺЫҘЫҠЛАУ** (урта, һаҡмар) *ҡ.* соҡоу — *ковырять.* Мин үҙем тартмайым, теште һыҙлыҡлау өсөн генә шырпы йөрөтәм (һаҡмар)

**ҺЫҘМА I** (ҡыҙыл, мейәс) *с.* һыҙыҡлы — *линованный.* Һыҙма балдағым бар ине, йуғалды (ҡыҙыл)

**ҺЫҘМА II** (эйек-һаҡмар) *и.* ағас семәрләү ҡоралы — *орудие, посредством которого делают узоры на деревянных вещах*

**ҺЫҘМАҠА** (урта) *с.* мыштыр — *медлительный*

**ҺЫҘМАТУП** (һаҡмар) *и.* туп менән уйнай торған балалар уйыны *(Туңәрәк һыҙалар. Бер төркөм эстә, икенсеһе түңәрәктән тышта була. Тыштағылар, туп йәшереп килеп, эстәгеләргә бәрәләр, кемгә тейә шул түңәрәктән сыға)* — *детская игра с мячом*

**ҺЫҘЫП АУЫРЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, урта урал, эйек-һаҡмар) *ҡ.* оҙаҡ ваҡыт һыҙланып ауырып йөрөү, һыҙланып ябығыу — *угасать от продолжительной болезни*

**ҺЫҘҘЫҠТАП: ҺЫҘҘЫҠТАП ЭРЕТЕҮ** (урта урал) *ҡ.* яй иретеү — *таять медленно.* Ҡарҙы һыҙҙыҡтап ҡына эретә. Һыҙыу (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар). Ҡар ҡапыл китмәне, һыҙып китте (ҡыҙыл)

**ҺЫЗЫРҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* рәт — *ряд*

**ҺЫҘЫУ I** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *ҡ.* китеү — *уходить.* Теге артына ғарай-ғарай һыҙҙы (ҡыҙыл). Бараыуз һыҙҙы (урта)

**ҺЫҘЫУ II** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ябығыу — *худеть.* Май шәм кеүек айағөҫтө һыҙып бара әсәйем

**ҺЫЖЫРЫП: ҺЫЖЫРЫП АЛЫП КИТЕҮ** (урта) *ҡ.* ҡырып-емереп алып китеү — *уносить, разрушая все на своем пути.* Ҡар күсһә тауҙан, йерҙе һыжырып алып китә

**ҺЫЙ I** (урта урал, ырғыҙ) *и.* кәҙер — *честь.* Һыйығыҙ барҙа китегеҙ (ырғыҙ)

**ҺЫЙ II** (төньяҡ-көнсығыш, урта урал, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* мәжлес — *меджлис*

**ҺЫЙА** (дим, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Гөрләүек — *ручей (из снеговой или дождевой воды).* 2. (урта, эйек-һаҡмар) Шыя — *шуга.* Сыйа (ҡариҙел). 3. (эйек-һаҡмар) Яҙлы-көҙлө була торған бысраҡ ваҡыт — *осенне-весеннее бездорожье.* 4. (урта) Тығылған боҙ — *ледяная пробка*

**ҺЫЙАЛЫ ЙУЛ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡарлы-һыулы юл — *бездорожье.* Йул бик һыйалы икән

**ҺЫЙҒАУЫР** (арғаяш) *и.* оҙон төҙ ағас — *ровное длинное дерево*

**ҺЫЙҒЫҘЫУ** (туҡ-соран, урта урал, эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* 1. Һыйҙырыу — *уместить.* Хатынды бер-ике биткә һыйғыҙ (туҡ-соран). 2. Ҡыйырһытмау — *не притеснить кого.* Үҙараларына һыйғыҙманылар (эйек-һаҡмар). Йаңғыҙ әсәнде һыйғыҙмай сығарҙың (һаҡмар). Өйөмә һыйғыҙып яткырам шуларҙы (эй)

**ҺЫЙҒЫР, ҺЫЙҒЫРҘЫҠ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* оҙон төҙ ағас — *ровное длинное дерево*

**ҺЫЙҠАНЫУ, ҺЫЙҠАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һыйыныу — *прильнуть к кому-чему.* Нигә һыйҡашыпараһың? Өләпсәһенә һыйҡашып инепара

**ҺЫЙЛЫ I** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *с.* ҡәҙерле — *почтенный, дорогой.* Һантыҡ ҡынаһы белән күтәреп әпкиһәң һинән һыйлы геше бумаҫ ине (урта)

**ҺЫЙЛЫ II** (эйек-һаҡмар) *и.* һыйлым — *обращение к жене близкого сверстника и, наоборот, жены к сверстнику своего мужа*

**ҺЫЙМАЛЫ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *с.* һыйышлы — *вмещающий, емкостью в ...* Өс пот һыймалы тәпән (урта)

**ҺЫЙПАҠЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* һыйпау — *погладить кого-что-л. рукой.* Олатаһының муйынынан ҡосаҡлап, аппаҡ һаҡалын һыйпаҡлап шайара (эйек)

**ҺЫЙПАЛАМА** (ырғыҙ) *с.* берәй нәмә һауыттың сите менән тип-тигеҙ итеп тултырып һалынған — *наполненный до края*

**ҺЫЙРАҠ** (һаҡмар) *и.* сираҡ — *голень.* Уй, һыйрағың матур!

**ҺЫЙСАН** (эйек-һаҡмар) *с.* ҡунаҡсыл — *гостеприимный*

**ҺЫЙ ТӨҘӨҮ** (урта) *ҡ.* ҡунаҡ саҡырыу — *звать гостей*

**ҺЫЙЫҠ** (арғаяш, эй) *с.* шыйыҡ — *жидкий.* Ҡаймағы һыйыҡ (эй)

**ҺЫЙЫР ЙАТАҒЫ** (һаҡмар) *и.* ялан кәртә — *открытый летний загон для скота*

**ҺЫЙЫРСАЙ** (ырғыҙ) *и.* ҡусҡар — *улитка*

**ҺЫЙЫР СӘСКӘГЕ** (көнсығыш диалект) *и.* уҡра — *овод кожный*

**ҺЫЙЫР ТЕЛЕ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* ҡаҙаяҡтың бер төрө — *один из видов папоротника.* Һыйыр телен балаҫ буйағанда тотона торғайнылар, һары булып сыға. Эре үлән, туғайҙа була (эйек-һаҡмар)

**ҺЫЙЫР ШАЛҠАНЫ** (арғаяш) *и.* сөгөлдөр — *свекла*

**ҺЫЙЫР ӘТТӘГЕ** (ҡыҙыл) *и.* тегәнәк тамыры — *корень лопуха*

**ҺЫҠА, ҺЫҠЫ** (арғаяш, һаҡмар, эй) *и.* 1. Һырынды — *снежные заносы* 2. (урта урал) Санаға йәбешеп торған ҡар — *липкий снег.* Зыҡы (ҡариҙел, урта урал). 3. Бәҫ — *иней*

**ҺЫҠРА** (мейәс) *и.* тарма үҙәге — *обработанная конопля*

**ҺЫҠРА ҺЫҘҒЫРЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* көйләп һыҙғырыу — *напевно свистеть.* Һыҡра һыҙғырып, ҡулын кеҫәгә тығып тик йөрөй

**ҺЫҠТАМСЫРАП: ҺЫҠТАМСЫРАП ТОРОУ** (мейәс) *ҡ.* болотлап тороу — *быть пасмурным.* Көн һыҡтамсырап тора

**ҺЫҠТАУ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *ҡ.* 1. Илау — *плакать.* Ана, апай ҡолаҡ ҡырҡам, тей, һыҡтаһа тей, белдемең? (салйоғот). 2. *и.* сеңләү — *плач-причитание*

**ҺЫҠЫЛАНЫУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* йәбешеү — *липнуть*

**ҺЫҠЫРА** (мейәс) *с.* һаран — *скупой*

**ҺЫҠЫРАУ, ҺЫҠЫРЫУ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* 1. Моңланып һыҙғырыу — *свистеть опечалившись.* Һыр белмәгән халыҡҡа һыр сискәнсе, һыҡырап йөрөһәң шул артыҡ (һаҡмар). 2. (ҡыҙыл) Ыҙаланыу — *мучиться.* Йулға хәрез күберәк ал, һыҡырарһың

**ҺЫҠЫУ** (урта) *с.* 1. Йәбешкәк — *липкий.* 2. (һаҡмар) *ҡ.* йыйылыу; тығылыу — *сгрудиться; застревать.* Төбәктә боҙ һыҡыған

**ҺЫҠЫ ҺЫУЫҠ** (арғаяш, ҡыҙыл) *и.* сасҡау һыуыҡ — *сильный мороз с инеем*

**ҺЫЛАМА ЙУЛ** (арғаяш) *и.* ҡар баҫҡан юл — *дорога, покрытая снегом*

**ҺЫЛАТЫУ** (арғаяш, эй) *ҡ.* 1. Һыйпатыу — *позволить погладить.* Эйәген атып тора һылатырға (арғаяш). 2. (көнсығыш диалект) Массаж яһатыу — *делать массаж.* Сыҡҡан айаҡты һылатып төшөрәләр (салйоғот)

**ҺЫЛАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Яғыу — *мазать.* Ҡоротто иҙәһең дә тирене йәйеп һалып тирегә һылайһың. 2. (урта) Массаж яһау — *массажировать.* Дәнемде һыланы өшкөрөп

**ҺЫЛБЫР** (салйоғот) *и.* шаҡшы — *грязнуля*

**ҺЫЛҒАУЫР** (урта) *с.* һонтор — *долговязый*

**ҺЫЛҒЫЙ** (дим) *и.* һуйыл — *дубина*

**ҺЫЛТАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* аҡһаңҡырау — *прихрамывать.* Бөгөн әллә ни тураттың артҡы айағы һылтап тора

**ЫҠ I** (ҡыҙыл, урта, hаҡмар, эй) *и.* ыңғай — *направление.* Баллар кеше ығына йөрөмэhэ, ҡыйын була (ҡыҙыл)

**ЫҠ II** (hаҡмар, ырғыҙ) *и.* ышыҡ — *укрытие.* Ыҡта торған малдар (hаҡмар). Эй, hиңэ эйтэм, малды шунда биклэ, ындыр ыҡ булыр (ырғыҙ)

**ЫҠЛАУ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-hаҡмар) *и.* 1. Уҡлау — *скалка (для раскатывания теста).* Иклау (гэйнэ, hаҡмар), оҡлау (төньяҡ-көнбайыш, урта), ыҡтау (мейэс, эй). 2. (урта) Борғоса — *пришва (часть домашнего ткацкого станка, на которую наматывают вытканный материал)*

**ЫҠЛАУ II** (туҡ-соран) *ҡ.* ыңғайлау — *пойти в определенном направлении.* Ул тауыш ишетелгэн йаҡҡа ыҡлаған

**ЫҠЛАУ III** (ырғыҙ) *ҡ.* ышыҡланыу — *укрыться.* Мал тау аҫтында ыҡлап тора

**ЫҠМАТТЫ** (урта) *с.* ыҡсым — *аккуратный.* Өйө, ыҡматты ҡаралтылары, бигерэк тэ баҡсаhы уға бөгөн тағы ла матурыраҡ, ҡэҙерлерэк булып күренте

**ЫҠСАМ** (ҡыҙыл) *с.* ыҡсым — *аккуратный*

**ЫҠСЫМАТ** (гэйнэ, дим, ҡариҙел, урта урал) *р.* ыҡсым — *аккуратно.* Ыҡсымат ҡына кейенеп, матур булып тора (ҡариҙел). Ыҡҫымат (дим), ыҡтымат (төньяҡ-көнбайыш, hаҡмар)

**ЫҠТАНЫУ** (эйек-hаҡмар) *ҡ.* уфтаныу — *вздыхать, охать.* Һыу үтмэhен тип клэйеңкэ ҡаплап йабынған иҫке йурған аҫтында эсэйемдең ыҡтаныуы ишетелде

**ЫҠТАУ I** (мейэс, урта урал, эй) *и.* уҡлау — *скалка (для раскатывания теста).* Оҡтау, уктау (эй). Оҡтау, оҡтау башы суҡтау. Аны тапҡан йегеткэ бер сэкмэндек боҫтау

**ЫҠТАУ II** (ҡыҙыл, мейэс) *ҡ.* ыҡҡа килеү, көйгэ килеү — *быть покладистым*

**ЫҠТЫМАТ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, hаҡмар) *с.* 1. Йыйнаҡ, бөхтэ — *уютный, убранный.* Уның өйө ыҡтымат ҡына. 2. (төньяҡ-көнбайыш) *р.* самалы — *в меру, умеренно*

**ЫҠТЫРА ТЕЙЭҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* күп итеп тейэү — *перегрузить.* Ана, Һөппөниса ире ыҡтыра тейэп бесэндэн килэ

**ЫҠТЫРМА** (эйек-hаҡмар) *и.* ун көлтэле hоҫлан — *суслон из десяти снопов.* Тары гөлтэhен ыҡтырмаға hалабыҙ

**ЫҠТЫРЫУ** (hаҡмар) *ҡ.* эйеү — *пригнуть.* Бер нисэ сэүелде *(ҡайынды)* ыҡтырып, ҡыуыш эҫэре йаhаныҡ

**ЫҠШАЙЫУ** (hаҡмар) *ҡ.* ығышыу — *медлить*

**ЫҠШАНДАУ** (ҡыҙыл, мейэс) *ҡ.* ҡыйшандау — *кокетничать.* Ыҡшаңлау (урта). Аның ыҡшаңлап йөрөгэн ҡыҙына йегеттең был йулы иғтибар иткеhе лэ килмэне

**ЫҠШАННАҠ** (урта) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Ыҡшандаҡ (ҡыҙыл)

**ЫҠШЫҠАЙ** (эйек-hаҡмар) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка.* Ыҡшыҡай, ниндэй куфтылар кейгэн буған

**ЫҠШЫЛЫУ** (мейэс, урта) *ҡ.* ышҡылыу — *тереться*

**ЫҠШЫМҺЫҘ** (мейэс) *с.* 1. Өнhөҙ–hүҙhеҙ, баҫымсаҡ — *молчаливый.* Ул ыҡшымhыҙ ғына ул. 2. Тупаҫ телле — *грубый на язык.* 3. (эй) Килбэтhеҙ — *несуразный*

**ЫҠШЫУ I** (ҡыҙыл, мейэс, урта, эйек-hаҡмар) *ҡ.* ышҡыу — *тереть.* Ҡэйникамал самауырҙы йалтыратҡансы ыҡшыны (ҡыҙыл). Ыҡшығас, айағымды тутҡап ҡараб алдым (эйек-hаҡмар)

**ЫҠШЫУ II** (ҡыҙыл, мейэс, урта, эйек-hаҡмар) *и.* ығыш — *копуша.* Ыҡшыу эҙэм булдың бит (эйек-hаҡмар)

**ЫҠЫ-БЫҠЫ** (эй) *и.* уҙған-барған — *прохожий.* Ыҡы-быҡыhы жыйылып йата шунда

**ЫҠЫЙ** (урта) *и.* эрпеш — *неряха.* Низам мулланың ҡыҙы матур ғына ла, берҙэн, бик ыҡый күренэ

**ЫҠЫЛДАУ** (эйек-hаҡмар) *ҡ.* ыҡ-мыҡ итеү — *запинаться.* Ул ней эйтергэ белмэй ыҡылдап тик тора

**ЫЛАА, ЫЛЫЫ, ЫЛЫЙ** (арғаяш, мейэс, салйоғот) *ы.* аптырау, ҡурҡыу ымлығы — *междометие удивления, испуга*

**ЫЛАГУН** (арғаяш, ҡыҙыл, салйоғот) *и.* дегет күнэге — *лагун*

**ЫЛАЙ** (арғаяш, мейэс) *и.* ҡыуаҡлыҡ үҫкэн түңгэкле ер — *кочкарник, заросший кустарником*

**ЫЛАЙҒЫ** (эйек-hаҡмар) *и.* гөрлэүек — *ручей (от дождевых и талых вод)*

**ЫЛАҠ** (арғаяш, урта, эйек-hаҡмар) *и.* буяу — *краска.*

**ЫЛАҠЛЫ** (арғаяш, урта, эйек-hаҡмар) *с.* буяулы — *крашеный.* Ылаҡлы тэгэс. Ылаҡлы гүнэк. Ылаҡты (арғаяш)

**ЫЛАҠ I** (hаҡмар) *и.* 1. Яҙ тыуған кэзэ бэрэсе — *козленок весеннего окота.* 2. (эйек-hаҡмар) Көҙ тыуған кэзэ бэрэсе — *козленок осеннего окота.* 3. (ырғыҙ) Бэрэс — *козленок, ягнёнок*

**ЫЛАҠ II** (эй) *и.* 1. Улаҡ — *желоб.* 2. Ялғаш — *колода для водопоя*

**ЫЛАҠЛАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* бэрэслэү — *оягниться.* Төнө белэн ҡуйымды ҡарап сыҡтым, ылаҡлап туңып йатмаhын тип

**ЫЛАН** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* йәш бала — *младенец.* Итәктә ылан, итәктән төшсә йылан (дим). Күрше хатынның ыланын күрергә белен алып кердем (төньяҡ-көнбайыш). Ыланҡай (дим), улан (урта урал)

**ЫЛАНҠЫ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* 1. Ауырлыҡ — *бремя.* Ыланҡымды һалыб илаб йөрөрмөн, апарып таштаң тип (ҡыҙыл). Миңә ыланҡы тағылмай буламы! Буш ҡайтыр әмәл йуҡ (һаҡмар). 2. (һаҡмар) Аламалыҡ, яманлыҡ — *нехороший поступок.* 3. (һаҡмар) Аламһалам — *хлам, старье*

**ЫЛАП ЙЕГЕҮ** (дим) *ҡ.* ат ослап йегеү — *упряжка цугом*

**ЫЛАУ: ЫЛАУ САБЫУ** (эйек-һаҡмар, эй) *ҡ.* 1. Ылауға йөрөү *(үҙ аты менән йөк ташыу)* — *заниматься извозом.* Әүәле ылау сабыуға йаҡшы ызбурыйы буманы (эйек-һаҡмар). 2. (эйек-һаҡмар) Өйҙәнөйгә һүҙ ташыу — *сплетничать.* 3. Яза биреү — *наказывать.* Эштәгәс эштәнем, ылау саптырмаҫһың әле

**ЫЛАУЛАУ** (эйек-һаҡмар) *и.* ылау менән — *с обозом.* Ылаулаб апҡайттым. Ылауҙап (эй). Ылауҙап барҙыҡ

**ЫЛАУЫР** (дим, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *и.* ыйыҡ — *туберкулез желез.* Ылауырыу (дим)

**ЫЛАУЫРЙЕМЕШ** (дим, урта) *и.* ыйыҡ ауырыуын дауалай торған тау үләне — *лекарственная трава от туберкулеза желез*

**ЫЛАШ** (дим) *и.* мурҙа ҡанаты — *крыло верши*

**ЫЛБИҘАК** (эй) *и.* елбәҙәк — *блестки*

**ЫЛБЫРАТЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* 1. Ылдыратыу — *обтрепать.* 2. Иҙеү — *мять*

**ЫЛБЫРАУ** (ҡыҙыл, ырғыҙ, эй) *ҡ.* 1. Ылдырыу — *обтрепаться.* 2. Ныҡ бешеү — *развариться.* Ит оҙаҡ ҡайнағас, бис ылбырап киткән

**ЫЛБЫРҒАУ** (урта) *ҡ.* тарҡалыу, сереү — *разложиться*

**ЫЛҒЫ** (урта) *р.* тотош — *сплошь.* Ылғы урман менән ҡапланған был таулар

**ЫЛДЫЙ, ЫЛДЫН** (ҡыҙыл) *и.* 1. Һарҡыу ер — *низменная местность.* 2. (һаҡмар) *р.* ыңғай — *попутно.* Һыу бер ылдый аға. Кеше ылдыйына йөрө!

**ЫЛДЫЙЛАНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* тәртипкә һалыу — *наладиться, поправиться*

**ЫЛДЫМ-ЙЫЛДЫМ: ЫЛДЫМ-ЙЫЛДЫМ ИТЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йәһәтләү, хәстәрләү — *позаботиться.* Ылдым-йылдым иткән ике туйыр, иң һығып тартҡан тик торор *(мәҡәл)*

**ЫЛҠА-ҺАЛҠА** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *р.* илкеһалҡы — *кое-как, так себе.* Ылҡа-һалҡа бейегән була (ҡыҙыл)

**ЫЛҠАҺЫ: ЫЛҠАҺЫ ҠАЛМАУ** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *ҡ.* туҙып ылдырау, тотор ере ҡалмау — *обтрепаться, износиться (об одежде, обуви).* Күлмәктең ылҡаһы ла ғалманы. Ылҡаһыҙ булыу (ырғыҙ, эй)

**ЫЛҠЫЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* йыртылып бөтөү — *изодраться.* Ул йаланайаҡ, йаланбаш, ыштан-күлдәге ылҡыланған, теше тешкә теймәҫлек булып өшөгән

**ЫЛЛЫ, ЫЛЫ, ЫЛЫЙ** (арғаяш, гәйнә, мейәс, салйоғот, урта урал) *ы.* ҡурҡыу, аптырау ымлығы — *междометие удивления, испуга.* Ыллы, ул да кигән (гәйнә). Ылы, малайың ҡалай дан булыб үҫеп киткән (арғаяш). Ылый, ҡайҙан килеп сыҡтың? (урта урал)

**ЫЛМАЙЫУ** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* элмәйеү — *худеть.* Үңәсе ылмайып, йабығып киткән (ҡыҙыл)

**ЫЛПЫЛДАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Батҡыл булыу — *быть вязким.* Һаҙы ылпылдап йата, баҫыуы ҡурҡыныс. 2. *с.* бешеп етмәгән — *недопеченый.* Икмәгең бешмәгән бит шыпа, ылпылдап тора

**ЫЛЫҒЫМ** (һаҡмар) *с.* илгәҙәк — *приветливый, ласковый*

**ЫЛЫҒЫШЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эйәләшеү — *привыкать.* Ул Иштуған белән Айһылыуҙың мөнәсәбәтенә балаларса ылығышыуҙыр тип кенә ҡараны

**ЫЛЫҠТЫРЫУ** (мейәс) *ҡ.* тороҡтороу — *случать*

**ЫЛЫМ-ШАЛЫМ** (ҡыҙыл) *и.* ерәнгес нәмә — *гадость (пренебр).* Әрмәнде йоморткаһы һыуҙа ылымшалым булып йата

**ЫЛЫМ-ШЫЛЫМ** (урта) *и.* үткенселәр — *прохожие, проезжие.* Ылым-шылым килеп тора

**ЫЛЫМ-ШЫЛЫМ: ЫЛЫМ-ШЫЛЫМ ЙӨРӨҮ** (мейәс) *ҡ.* ҡайҙа етте шунда бәрелеп һуғылып йөрөү — *ходить бесцельно, болтаться*

**ЫЛЫМЫҠ** (ҡыҙыл) *с.* кешегә ылығып барыусан, илгәҙәк — *тянущийся к людям, приветливый*

**ЫЛЫНЫУ** (арғаяш) *ҡ.* ауырлыҡ кисереү — *переносить трудности*

**ЫЛЫП** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* арҡала йөрөтөү өсөн туҙҙан яһалған һауыт — *котомка, охотничий кошель из бересты*

**ЫЛЫСГӨЛ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ылыҫ япраҡлы гөл — *аспарагус*

**ЫЛЫҪ** (һаҡмар) *и.* 1. Күл мүге — *водяной мох.* Күл гипкәс, тороп ҡала у ылыҫ аппаҡ пулып түшәлеп. 2. (урта, эйек-һаҡмар) Бәҫ — *иней.* Ылыс (ҡариҙел)

**ЫЛЫУ** (ҡыҙыл) *и.* 1. Оҙон аяҡлы бәләкәй үрмәксе — *длинноногий паук.* 2. (эйек-һаҡмар) Һыу өҫтөндә йүгереп йөрөй торған оҙон аяҡлы бөжәк — *водомерка*

**ЫЛЫШ I** (арғаяш) *и.* боламыҡ *(ҡаймаҡҡа он туҡып бешерелгән ашамлыҡ)* — *мучная каша, сваренная в сметане*

**ЫЛЫШ II** (эй) *и.* ығыш — *копуша.* Ул ылышты гөтөп көнөм үтте

**ЫЛЫШЫУ** (эй) *ҡ.* әкрен йөрөү — *ходить не спеша.* Ылышып ул ғасан килеп йетә инде

**ЫМБЫЛ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* соңғол — *омут.* Ашҡаҙарҡай һыуы ымбыл-ымбыл, ҡаракөрән *(ат)* ҡалҡып йөҙалмай *(халыҡ йыры)*

**ЫМДЫЛЫУ** (ҡариҙел) *ҡ.* ынтылыу — *стремиться.* Ана, ана, ымдылып ҡарап тора. Ымтылыу (һаҡмар), ындылыу (дим)

**ЫМ-ИШАРА** (эйек-һаҡмар) *и.* ишара — *намек.* Ирҙәрҙең берәүһе уға ым-ишара йаһау менән, ул уйнап йебәрҙе. Ым ҡағыу (һаҡмар) ымлау — *делать намеки.* Мин аға ым ғаҡтым, ул миңә ым ғаҡты

**ЫМПЫ** (урта) *с.* һаҡау — *косноязычный.* Йәнбәк бер һүҙ өндәшмәй, эйтерһең дә ымпы геше. Ыпы (ҡыҙыл)

**ЫМТАНЫУ** (гәйнә, урта урал) *ҡ.* 1. Ымһыныу — *обнадежиться.* 2. Һоҡланыу — *восхищаться.* Аңҡы ызбасына ымтанмыйым да, ҡуышта тормам әле. Шуңа, сәсемә, ымтана да ымтана (гәйнә)

**ЫМҺАНАЙ** (һаҡмар) *и.* Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Сурай ауылы эргәһендәге тау исеме —

*название горы у дер. Сураево Кувандыкского района Оренбургской области*

**ЫМШАНЫУ** (урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ымһыныу — *обнадежиться и обмануться.* Сәғиҙә Йамалдың туҫтағына ымшанып, кипкән ирендәрен йалап ҡуйҙы (урта). Аҡылың булһа ошо йәштә ымшанмаҫ инең ҡыҙға (эйек-һаҡмар)

**ЫМЫҘ** (урта) *и.* өмөт — *надежда.* Ымыҙы барҙың ырыҫы алда *(мәҡәл)*

**ЫМЫЛЖЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* сөсө — *пресный.* Әпәйең ымылжы булған

**ЫНДЫМ** (ҡыҙыл, ырғыҙ, эйек-һаҡмар, әй) *с.* 1. Ыңғай, тыңлаусан — *выносливый, послушный (о лошади).* Йерән ат күбә тарттырыуға ындым, шәп (ҡыҙыл). 2. (ырғыҙ) *р.* бер төрлө генә — *умеренно.* Ат ындым ғына бара. 3. (һаҡмар) *с.* тырыш — *старательный, усердный.* Көрән ат үҙенең йегәрлелеге, ындымлығы менән дөмпөлдәп китеп барыуында ине

**ЫНДЫР** (дим, төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ырҙын — *гумно.* Һабанда һайрашмаһаң, ындырҙа ыңрашма (эйек-һаҡмар). Ынтыр (кариҙел). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Картуф баҡсаһы — *картофельный огород.* Сарыҡлар ындыр артында ғына йөрөйләрейе. 3. (дим) Баҡса арты — *заоколица*

**ЫНДЫРЫЫҘ** (ҡыҙыл) *с.* ямаҡ, йәмһеҙ — *несуразный, некрасивый*

**ЫНЖЫ ТАШЫ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* ынйы — *жемчуг.* Ыуағы ынжы таштары (мейәс)

**ЫНЙЫ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* мәрйен — *коралл.* Ынжы (төньяҡ-көнбайыш)

**ЫНЙЫҠ** (эйек-һаҡмар) *с.* йонсотҡос — *изнурительный, утомительный.* Тышта көҙ, бик ынйыҡ уахыт

**ЫНЙЫСӘҘӘП** (дим) *и.* елбәҙәк — *блестки*

**ЫНЙЫТЫУ** (ҡыҙыл, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ыҙалатыу — *замучить.* Кешене ынйытыу ғына был эшең (ырғыҙ). Эй шул ҡустыңды ынйытаһың да инде йуҡҡа (эйек-һаҡмар). 2. Илатыу — *заставить плакать.* Йөрөй шунда әсәһен ынйытып (эйек-һаҡмар). 3. Рәнйетеү — *сильно обидеть.* Ана теге кейәүен ынйытып киткән (һаҡмар). Йуҡ пелән булалар күсерәбеҙ тип халыҡты ынйытып (ҡыҙыл)

**ЫНЙЫУ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ыҙалау — *мучиться.* 2. Рәнйеү — *сильно обидеться.* Ынйығаным төштө башына. 3. Илау — *плакать.* Ынйып ҡалды бахыр әсәһе

**ЫНТЫР** (кариҙел) *и.* ырҙын — *ток, гумно.* Ҡаҙларны ынтыр йағынан ҡыуарға кәрәк

**ЫНЫҠЫЙ** (гәйнә) *ы.* аптырауҙы белдергән ымлыҡ — *междометие удивления.* Ыныҡый, ҡайсы сазда күрдемей баса! Ыныҡый, мине алдаған да

**ЫҢЫУ** (мейәс) *и.* сай — *речная водоросль*

**ЫҢҒАЙ I** (көнсығыш диалект) *р.* туп-тура — *прямо.* Тупаҡҡа барғас та ыңғай ҡоҙаларға бар. Ыңғай барып ҡайт (ҡыҙыл)

**ЫҢҒАЙ II** (арғаяш, гәйнә, мейәс, салйоғот, туҡ-соран, урта, урта урал, һаҡмар) *р.* һәр ваҡыт, гел — *всегда, постоянно.* Ыңғай килә, килер әле (урта). Ыңғай ҡаса кетеүҙән (мейәс). Шал гүлдәк ыңғай кейеүгә инде (арғаяш). Ыңғай (төньяҡ-көнбайыш). Ыңғай шул йөрөр инде

**ЫҢҒАЙҘАТЫП: ЫҢҒАЙҘАТЫП ТОРОУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* оҡшап тороу — *походить.* Мал врашына уҡы, ыңғайҙатып тораһың, тигәйне

**ЫҢҒАЙҺЫҘЛАНЫУ** (дим) *ҡ.* уңайһыҙланыу — *чувствовать неловкость.* Абзыйымдан ыңғайһыҙланам

**ЫҢҒЫ** (мейәс) *и.* илһам — *вдохновение.* Бай тәбиғәтте күрһәм ыңғы тыуа

**ЫҢҒЫРБАУ** (дим, урта, ырғыҙ) *и.* иңербау — *завязка, тесемка (у воротника рубахи)*

**ЫҢҒЫРЛАУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* асыҡ һөйләмәү — *говорить невнятно.* Ыңғырлап һөйләй, аңғарыпумай

**ЫҢҒЫРСАҠ ҪӨЙӘГЕ** (дим) *и.* аттың ыңғырсаҡ ята торған һырты — *лопатка (у лошади)*

**ЫҢҒЫРСАҠ ТАНАУ** (дим) *и.* йәмшек танау — *курносый*

**ЫҢҒЫРСАҠ ТАРТМАҺЫ** (урта) *и.* ыңғырсаҡ бауы — *подседельник*

**ЫҢҒЫР-ШЫҢҒЫР** (ҡыҙыл, туҡ-соран, ырғыҙ) *р.* саҡ-саҡ — *кое-как, еле-еле.* Ыңғыр-шыңғыр йөрөгән булам әле шунда (туҡ-соран). Ыңғыр-шыңғыр кереүгә шул аның, ҫөйләп ҡуйыр тип ҡурҡа (ырғыҙ)

**ЫҢЖЫУ** (арғаяш) *ҡ.* 1. Яйлау — *медлить.* 2. *с.* Ығыш — *медлительный (о человеке)*

**ЫҢҠАЙ** (урта) *и.* 1. Яй — *лад.* Ыңҡайына ҡуймай. 2. (кариҙел) Яҡ — *сторона.* Бу ыңҡайта әл тә бар. Бу ыңҡайта былса былыр. 2. (урта) *р.* гел, һәр ваҡыт — *всегда, постоянно*

**ЫҢҠАУ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* аңҡау — *твердое небо.* Ыңҡыу (һаҡмар). Сәй эһе булды, ыңҡыуымды бешерҙем

**ЫҢРАНЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ыңғырашыу — *стонать.* Нигәлер ыңранып торҙо ҡыҙым

**ЫҢ-СЫҢ** (һаҡмар) *и.* хәлһеҙлек — *недомогание.* Миңә бит үпкә йуғ инде, дүртенсе быуын әле, ың-сың йуғ әлегә

**ЫҢҺАРҘАУ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ризаһыҙлыҡ белдереү — *выражать недовольство.* Бер йомош ҡушһаң ыңһарҙап тиҙ ҡуҙғалмаҫ инде (мейәс) 2. *р.* теләр-теләмәҫ — *нехотя, неохотно.* Бабай баҙарға ыңһарҙай-ыңһарҙай ғына гитте (ҡыҙыл). Балам, ыңһарҙама, йүгереп кенә бар ҙа гил (эйек-һаҡмар). Ыңһырҙау (ҡыҙыл). 3. *ҡ.* (эйек-һаҡмар) икеләнеү — *колебаться.* Барырғамы, бармаҫҡамы, ыңһырҙабыраҡ торам әле

**ЫҢ-ШАҢ** (кариҙел) *и.* ыңғыраш — *стон.* Ың-шаң белән генә йөрөйөм

**ЫҢШАҢЛАУ** (эйек-һаҡмар) *р.* теләр-теләмәҫ — *нехотя, неохотно.* Тәҡдим урынһыҙ булһа ла, ҡорҡҡа ыңшаңлап күнде, кантон һүҙенә ҡаршы гилергә батырсылыҡ итә алманы

**ЫҢЫРБАУ** (урта) *и.* иңербау — *завязка, тесемка (у воротника рубахи).* Ыңырбау, бәйҙәместәр майҙанға уғата йәм бирҙе

**ЫҢЫРСАҠ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* ыңғырсаҡ — *седелка*

**ЫҢЫШ** (урта урал) *и.* ығыш — *копуша.* Эй, ыңышһың да инде

**ЫПТЫ** (урта урал) *и.* опто — *язь*

**ЫПЫ, ЫПЫҠ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, урта, һаҡмар) *и.* телгә зәғиф — *косноязычный.* Аның кейәүе ыпы, телһеҙ кеше икән (туҡ-соран). Унын хәле йуҡлығы,

саҡ-саҡ баҫып тороуы әллә ғайҙан һиҙелә, тик бер һүҙ өндәшмәй, әйтерһең дә ыпыҡ кеше (урта)

**ЫРАҒАЙҺЫҘ** (мейәс) *с.* 1. Оятһыҙ — *бесстыдный.* 2. (әй) Изгелекһеҙ — *недоброжелательный*

**ЫРАҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* раҫ — *верно.* Мин әйткәндәр ыраҙ килде

**ЫРАЙ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Кәйеф — *настроение.* Кешенең ырайына ҡарап эш итәргә, һүҙ һөйҙәргә тура гилә (ҡыҙыл). Һинең был һүҙең аның ырайына туры гилде (эйек-һаҡмар) 2. (ҡыҙыл) Уй — *мысль.* Сырайым йаман булһа ла, ырайым йаҡшы. Сырайы йуҡтың ырайы йуҡ. ◊ Ырайҙан ҡайтыу (дим) — дүнеү, әйткән һүҙҙән кире ҡайтыу — *передумать*

**ЫРАЙА** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, әй) *р.* теләр-теләмәҫ — *нехотя, неохотно.* Ырайа ғына ҫөйләй (дим). Ырайа эшләй

**ЫРАЙАНАН** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *р.* теләр-теләмәҫ — *нехотя, неохотно.* Ырайадан (төньяҡ-көнбайыш). Ырайадан ғына эшләй. Ырайҙан (дим)

**ЫРАЙАҺЫҘ** (урта урал) *р.* хәйләһеҙ — *бесхитростно.* Эштәһә ырайаһыҙ эштәй. 2. *с.* Оятһыҙ, тәрбиәһеҙ — *бесстыдный.* Ырайаһыҙ кеше ауыҙына ней кигәнен дә белмәй ҫүтә. Ырайасыс (ҡариҙел)

**ЫРАЙЫШ** (гәйнә) *и.* ҡиәфәт — *вид, облик.* Ырайышың кеше ҡурҡытырлыҡ. Шунда әзерәк ырайышы килсә йарар

**ЫРАМАЛЫ** (ҡыҙыл, урта) *р.* күп — *много.* Ағас бы йаҡта ырамалы түгел (урта). Ырамалы тороп бумаҫ, ауырыйым (урта). Эштәп бөтөүгә ырамалы ваҡыт ҡалманы (ҡыҙыл). Ырамалы (урта)

**ЫРАМҘА** (һаҡмар) *р.* арамъя — *нерадиво, кое-как*

**ЫРАМЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* шәбәйеү — *ускоряться.* Оҙаҡ та үтмәне, бик күп балалар эйәртеп, уҡытыусы апай килеп йетте, шунан инде эш тағы ла ырамланды

**ЫРАМЛАТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* шәбәйтеү — *ускорять.* Ул әйләнеп ҡараманы, йауап та ҡайтарманы, аҙымдарын ырамлата биребер әк атлауында булды

**ЫРАМТАЛ** (урта) *р.* ырамлы — *споро.* Күҙ теймәһен, эш ырамтал бара әле

**ЫРАМЫШНАЙ** (эйек-һаҡмар, әй) *и.* дадан умарта — *рамочный улей.* Ырамышнай бал. Ырам умарта (дим)

**ЫРАНЫП** (һаҡмар) *р.* үҙһүҙләнеп — *упрямо.* Мана, ыранып тороб үсегә

**ЫРАПАТ I** (урта, һаҡмар) *и.* ағас ҡыуышы — *дупло дерева*

**ЫРАПАТ II** (ҡыҙыл) *и.* Башҡортостандың Баймаҡ районы Темәс ауылы эргәһендәге тау исеме — *название горы у дер. Темясово Баймакского района Башкортостана*

**ЫРАСПУСКЫ** (мейәс) *и.* оҙон арба — *дроги*

**ЫРАҪЛЫ** (дим) *с.* тоғролоҡло — *верный, правдивый.* Беҙ ыраҫлы башҡортбоҙ

**ЫРАТАҒА, ЫРТАҒА** (мейәс) *р.* бушҡа, тиккә — *понапрасну, зря.* Ыратаға шашып киткән. Ыратаға уаҡыт үткәреп йөрөнөңмө?

**ЫРАУ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, һаҡмар) *ҡ.* төҙәлеү — *исправиться*

**ЫРАУАЙАТ** (мейәс) *и.* риүәйәт — *предание.* Өмөкәй әбей боронҒонан килгән ырауайаттарҙы күп белә, иҫлелегенә аптырарһың

**ЫРАУАНЙАЛ** (эйек-һаҡмар) *с.* вайымһыҙ — *равнодушный*

**ЫРАУАТАЛ** (дим) *р.* арамъя — *нерадиво, кое-как.* Ул ырауатал эшләй

**ЫРАУАХ** (һаҡмар) *и.* меҫкен — *бедняга*

**ЫРАУҘА** (әй) *и.* урҙа — *шест, прикрепляемый к стене пониже потолка для развешивания вещей.* Беҙ әйбер элә торған ағасты ырауҙа тейбеҙ. Ырауда (гәйнә). Ырауда мейес йанына түшәмгә йеткерә йаҙып ҡуйыла

**ЫРАХ** (ҡыҙыл) *р.* раҫ — *верно, точно.* Ырас (әй)

**ЫРАША** (урта) *и.* рәшә — *мгла, сухой туман.* Ыраша ҙа төшә, томан һымаҡ, ағасҡа, игенгә зарары була

**ЫРАШҠЫ** (дим, көнсығыш диалект, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* 1. Рашҡы — *мокрый снег вперемешку с дождем.* Ырашҡы йаҙҙы-көҙҙә була (көнсығыш диалект). Ырашҡы һуҡһа йылҡы малының арҡалары боҙолоп ҡутырлап китә (урта). Ырашҡый (төньяҡ-көнбайыш), ырашки (ҡариҙел). 2. (мейәс) Борсаҡ — *град.* 3. (урта) Ҡырау — *заморозки*

**ЫРАШҠЫСЕБЕН** (урта урал) *и.* эре йәшел себен — *зеленая падальная муха*

**ЫРБАЙТЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* 1. Шалбайтыу — *отвисать (о губах).* Мынау геше ауыҙын ырбайтып тора. 2. Яралау, йәрәхәтләү — *ранить.* Ауыҙыңды ырбайтырмын, килеп ҡара

**ЫРБАЙЫУ** (дим, ҡыҙыл) *ҡ.* асылып тороу, асыҡ тороу — *быть голым.* Ырбыйыу (дим). Элек түшебеҙ беҙҙең ырбыйып торманы, бала имеҙгәндә күкрәксә белән ҡаплай торғайныҡ

**ЫРҒАЗИМБАЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* аҡ, күк, алһыу умырзая — *сон-трава белого, голубого, розового цвета.* Арғазымбай (дим)

**ЫРҒАҠ I** (көнсығыш диалект, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* ҡаты аңҡау — *твердое небо.* Ырғағым шешкән (һаҡмар)

**ЫРҒАҠ II** (арғаяш, салйоғот) *и.* ишек келәһе — *дверной крючок*

**ЫРҒАҠ III** (урта) *и.* асалы ағасҡа тимер беркетеләп эшләнгән тире иләү ҡоралы — *приспособление для выделки шкуры.* Тирене ырғаҡ белән тызыйлар

**ЫРҒАҠ IV** (мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* йәйә бысҡының бауын бороп нығыта торған таяҡса — *ворот для натяжения лучковой пилы*

**ЫРҒАҠ: ЫРҒАҠ ТАШЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йылҡы малының таңлайы *(өҫкө аңҡауы)* шешеү — *воспаление мягкого неба у лошадей*

**ЫРҒАҠ ЭНӘ** (арғаяш, салйоғот, урта) *и.* 1. Селтәр бәйләү энәһе — *крючок для вязания.* 2. (мейәс) Теләнсе *(киндер һуғыуҙа)* — *крючок, применяемый для прокладывания нитки в домашнем ткачестве*

**ЫРҒЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡәбер ҡаҙыу өсөн эшләнгән оҙон һаплы тимер ҡорал — *железное приспособление для рытья могилы*

**ЫРҒЫЛДЫРЫУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ырғылырға мәжбүр итеү — *заставить стремительно мчаться.* Машинаны бәйҙән ысҡынған айғыр кеүек ырғылдырҙы, ауыл осонда элекке тирәк үҫкән йергә килтереп туҡтатты

**ЫРҒЫМБАЙ** (туҡ-соран) *и.* ырғандаҡ — *попрыгун (-ья)*

**ЫРҒЫМЫШ** (урта урал) *и.* балалар уйыны — *детская игра.* Ырғымыш уйнап хәле бөтөп кергән теге бала

**ЫРҒЫТҠЫС** (һаҡмар) *и.* һикәлтә — *ухаб, выбоина.* Һырғалаҡтын ырғытҡысы гүп, сана ырғып китә!

**ЫРҒЫУ** (дим, эйек-һаҡмар) *ҡ.* урғылыу — *бить фонтаном.* Ҡойоҫо митыр йарымға ырғып тора (дим)

**ЫРҘАНДАҠ** (әй) *с.* ырғандаҡ — *попрыгун (-ья).* Ырҙандап ҡына торма, әҙерәк инәйеңә эштәш

**ЫРҘЫН** (арғаяш, мейәс, урта) *и.* картуф баҡсаһы — *картофельный огород.* Кәртүкте ырҙынында бирәм

**ЫРҘЫН АСЫУ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ҡ.* ырҙын өсөн ерҙең ҡыртышын асыу — *снятие дерна для тока.* Ауылдын эргәһендә ырҙын астылар (һаҡмар)

**ЫРҘЫУАН** (арғаяш, мейәс, урта) *и.* көлтә арбаһы — *рыдван, сноповозка.* Ыриҙыуан (мейәс)

**ЫРЖА** (арғаяш, мейәс, салйоғот, әй) *и.* 1. Рәшә — *мгла, сухой туман.* Ырйа (арғаяш), ыраша (урта). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Ялағай — *зарница.* Йәшен кебек йалтырый, игенне житкезә торған ыржа дибез. Ыраса (төньяҡ-көнбайыш)

**ЫРЖАҢНАУ** (эйек) *ҡ.* тик тормау — *не сидеться.* Ыржаңнап өйҙә тора тейеңме... Ыржаннау (ҡариҙел), ырйандау (ҡыҙыл)

**ЫРЖЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* гел йылмайып тороусы кеше — *постоянно улыбающийся человек*

**ЫРИҘУАН** (һаҡмар) *и.* көлтә арбаһы — *рыдван, сноповозка.* Әүәле көлтәне ыриҙуан белән ташыныҡ

**ЫРИЗЫҠ: ЫРИЗЫҒ ЭСЕҮ** (мейәс) *ҡ.* ашау — *есть.* Тамағәсеү (ҡыҙыл). ◊ Ыризығы бетеү (гәйнә) үлеү — *умирать.* Ыризыҡ кәмеү (урта урал) үлемесле ауырыу — *смертельно заболеть*

**ЫРЙА-МЫРЙА** (арғаяш, салйоғот) *р.* теләр-теләмәҫ — *нехотя, неохотно.* Ырйа-мырйа ғына эштәй (арғаяш)

**ЫРЙАНДАУ, ЫРЙАҢНАУ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡыйшандау — *кокетничать.* Утыра тағы ырйаңдап, ҡыйпысыҡ

**ЫРЙАННАҠ, ЫРЙЫҠАЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка*

**ЫРҠЛЫ-ТЫРҠЛЫ** (урта) *р.* теләһә ҡалай, тупаҫ — *непочтительно, грубо.* Мин уның йурамал ырҡлы-тырҡлы һөйләшеүен, йарһыулы тауышы менән күңел төбөндәге ҡайғы-һағышын йәшерергә, һиҙҙермәҫкә тырышыуын аңлап алдым

**ЫРҠЫЛДАУ** (һаҡмар) *ҡ.* мөлкөлдәү — *трястись.* Һимеҙ буһа, һарыҡтын майы ырҡылдап тора

**ЫРМАЙЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* ныҡ ябығыуҙан муйын оҙонайып ҡалыу — *утончение шеи из-за чрезмерной худобы.* Ҡайғы-хәсрәт баҫҡан әй башынды, муйындарың ҡаһылай ырмайған

**ЫРМАНҠЫҘ** (мейәс, әй) *с.* әҙәпһеҙ — *невоспитанный*

**ЫРМАУ I** (арғаяш, салйоғот) *и.* үңербау — *тесемка, завязка (у воротника рубашки)*

**ЫРМАУ II** (урта, ырғыҙ) *ҡ.* 1. Ырыу — *пазить, выбирать паз.* Ырмыу (дим). 2. (дим, төньяҡ-көнбайыш) *и.* Ырма — *паз.* Был бүрәнәндең ырмауы йуҡ бит

**ЫРТАҒА** (мейәс) *р.* тиктән-тиккә — *понапрасну, зря.* Ыртаға һыуыҡ тейә. Ыратаһына (әй)

**ЫРУҒ** (ҡариҙел) *и.* ырыу — *род.* Алар бөтөн ыруғлары белән бөттөләр

**ЫРУҘА, ЫРЫУҘЫ** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* урҙа — *шест, прикрепляемый к стене пониже потолка, для развешивания вещей.* Күлмәкләреңне ыруҙаға элеп ҡуй (ҡариҙел). Ыруда, ыраида (төньяҡ-көнбайыш)

**ЫРФЫЙА** (ҡариҙел) *и.* көмбәҙ — *женское украшение в виде выпуклой цветной монеты.* Орфиа (дим)

**ЫРЫЙАҺЫҘ** (арғаяш) *с.* 1. Хәйләһеҙ — *бесхитростный.* Ырыйасыҙ (ҡариҙел). 2. Әҙәпһеҙ — *невоспитанный.* Ырығайаһыҙ (мейәс)

**ЫРЫҒЫС** (эйек-һаҡмар) *и.* ырыуыс — *пазник*

**ЫРЫЗЫЙА: ЫРЫЗЫЙА СЫҒЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ҡайғырыу — *горевать.* Ырызыйа сығып ултырһын тей

**ЫРЫЙ** (гәйнә) *и.* 1. Һаҡау — *косноязычный.* 2. Алйот — *глупый, бестолковый.* Йуҡны сөйләп торма әле, ырый

**ЫРЫЙА** (көнсығыш диалект, ҡариҙел, урта, эйек-һаҡмар) *р.* 1. Теләр-теләмәҫ — *нехотя, неохотно.* Ырыйа ғына ҡулын бирә (эйек-һаҡмар). Ырыйа ғына һөйләшә (урта). У эште шу тиктем ырыйа эштәй (ҡыҙыл). Сәхрәләргә сығып кемләр йөрөмәй, ырыйа йәргә күңел иремәй. Ырыйа йәргә күңел ирениһә, донйа малы күҙгә күренмәй (ҡыҙыл). Ырайа (ҡыҙыл), ырйа (арғаяш, салйоғот). 2. (урта) Аҫтыртын — *скрытно.* Ул ырыйа ғына һораша. 3. (урта) Әкрен — *тихонечко.* Рыйа (һаҡмар). 4. (ҡыҙыл) Арамья — *нерадиво*

**ЫРЫЙАҺЫҘ** (арғаяш) *с.* 1. Хәйләһеҙ — *бесхитростный.* Ырыйасыҙ (ҡариҙел). 2. (мейәс) Тәртипһеҙ — *безалаберный*

**ЫРЫЙЛАНЫУ** (гәйнә) *ҡ.* алйотланыу — *сходить с ума.* Ғәззә әбей ике йыл инде ырыйланып утыра

**ЫРЫҠ** (мейәс) *и.* ек, ырма — *паз.* Ырығ ырыу

**ЫРЫҠ-МЫРЫҠ** (урта) *с.* килешмәүсән — *непримиримый (о человеке)*

**ЫРЫҠТА I** (эйек-һаҡмар) *р.* 1 Теләр-теләмәҫ — *нехотя, неохотно.* Ҡалай ырыҡта ғына яуап бирәһең. 2. *с.* вайымһыҙ, иренсәк — *нерадивый.* Ырыҡта булып йөрөй, атлауға ла йыбана, эшләүгә лә йыбана. 3. (мейәс, урта) Тиҫкәре — *упрямый*

**ЫРЫҠТА II** (һаҡмар, урта, эйек-һаҡмар, әй) *с.* бик ныҡ ябыҡ — *очень худой.* Ырыҡта ғына килене бар (урта). Кешеләр иһә, атам тапҡан мал түгел тип, аттарҙы йән-фарман ҡыуып ырыҡтаға әйләндереп бөтә (эйек-һаҡмар)

**ЫРЫҠТА III** (ырғыҙ) *и.* көмөш һымаҡ аҡ металл — *мельхиор*

**ЫРЫҠТА IV** (урта) *с.* бәхәсле — *спорный.* Ул эш ырыҡта буғайны, шуның өсөн эшкенмәй

**ЫРЫҠТА V** (урта) *с.* 1. Уңмаған — *неудачный (о работе).* Ырыҡта булты бы эш. 2. Килешһеҙ — *несуразный, неподходящий*

**ЫРЫҠТАЛАНЫУ** (мейәс) *ҡ.* киреләнеү — *упрямиться.* Ней китә һалмай, ней ҡалмай, ырыҡталанып тора шунда. Уй, кире, ырыҡта!

**ЫРЫҠ-ЦЫРЫҠ** (мейәс) *р.* урыҡ-һурыҡ — *урывками.* Ырыҡ-шырыҡ ашау

**ЫРЫЛДАШЫУ** (дим) *ҡ.* әрләшеү — *ругаться*

**ЫРЫМ** (ҡыҙыл, әй) *и.* ыңғырсаҡ бауы — *подседельник*

**ЫРЫМАЛЫ** (урта) *с.* ырамлы — *спорый, продуктивный*

**ЫРЫМДАЛЫУ, ЫРЫМДАНЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* ырымдың берәй төрөн үҙендә кисереү, үткәреү — *быть заговоренным.* Ана, танауы ҡоромға буйалып, ырымданып йөрөй. Ырымдалған ырамаҫ

**ЫРЫМҘАУ** (арғаяш) *ҡ.* ырымлау — *лечить (знахарскими средствами)*

**ЫРЫНДЫ** (арғаяш, салйоғот) *и.* йырын — *овражек, углубление, прорытое водой*

**ЫРЫУ I** (дим, урта) *и.* 1. Аймаҡ — *родовое подразделение.* 2. (дим, эйек-һаҡмар) Нәҫел-нәсәп — *родня.* Ырыулары буғас килә инде (дим). Өс улдан ырыу таралған. Бикҡолда Аҡмулланың ырыуы әлдә лә бар (эйек-һаҡмар)

**ЫРЫУ II** (гәйнә, урта) *и.* 1. Түл — *плод.* 2. (гәйнә) Йөклө булыу — *беременность.* Бер ырыуға ғына життем. Хатын-ҡыз бер бала тапса, бер генә ырыуым булды тей. Ничә тапса, шулай әйтә. 3. (гәйнә, урта, урта урал) Күрем — *менструация.* Ырыуҙан ҡағанына ике йыл, һаман да ауырыуҙан ҡалҡынмай (урта урал)

**ЫРЫУЛЫ** (эйек-һаҡмар) *с.* туған-тыумасалы, нәҫел-нәсәпле — *имеющий родственников*

**ЫРЫШҠЫ** (ҡариҙел) *и.* рашҡы — *мокрый снег вперемешку с дождем*

**ЫС БАСЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* йоҡо килеү — *клонить ко сну.* Утыра торғач ыс басып китте

**ЫСБУТ** (гәйнә, дим, урта урал) *и.* 1. Кәрниз — *карниз.* 2. Уша — *боковой выступ печи.* 3. Төтөн юлы — *свод печи, дымоход.* Ысҡут (төньяҡ-көнбайыш)

~~**ЫСКУЗЫЙ**~~ (дим) *и.* шыу юрға — *иноходец с ровным аллюром*

**ЫМҠАНЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эй) *ҡ.* көсәнеү — *напрягаться, делать что-либо из последних сил.* Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, нисек кенә ысҡанып ҡысҡырмаһын, уның тауышы ике-өс аҙымтан ары китмәне (урта)

**ЫСҠЫЛУҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сираҡ — *голень.* Ысҡылуғың йалтыратып йөрөмә бында

**ЫСҠЫЛЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал) *и.* осҡолоҡ — *икота.* Ысҡылыҡ тотоу (арғаяш, ҡариҙел, эйек-һаҡмар, эй)

**ЫСҠЫНДЫРМАУ** (дим) *ҡ.* рөхсәт итмәү — *не разрешать.* Борон әбейләр бик ысҡындырмай ине

**ЫСҠЫНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* әйтеп һалыу — *проговориться.* Ул миндә шәҙерә *(шәжәрә)* бар тип ысҡынды. Ысҡындырыу (дим, ҡыҙыл, эй)

**ЫСҠЫР** (урта) *и.* үҥербау — *тесемка, завязка (у воротника рубахи)*

**ЫСҠЫРЫУ** (арғаяш) *ҡ.* бейә ҡолонон күргәндә сығарған тауыш — *ржанье кобылы при виде жеребенка*

**ЫСЛЫҠ** (гәйнә) *и.* ҡором — *сажа.* Тәмәке тартсаң үпкәгә утыра бит ул ыслыҡ

**ЫСНАҠЫҠ** (урта) *и.* аҡыҡ — *сердолик.* Ыснаҡыҡ ҡашлы йөҙөгөм бар ине

**ЫСПАЙ** (гәйнә, ҡариҙел) *с.* ыҡсым — *аккуратный.* Минке шәл ыспайы, сиңке жаматай (гәйнә). Өйне ыспайлыйбыз (ҡариҙел)

**ЫСТА** (ҡыҙыл, һаҡмар) *ы.* аптырау ымлығы — *междометие удивления* («Ба-а!»). Ыста, ул да мындамы?! Ыста, бы балдар һаман һөйҙәшәләр, йоҡтағыҙ инде! (ҡыҙыл). Ыста, ҡалай һур (һаҡмар)

**ЫҪТАН I** (урта) *и.* 1. Тыйғыса — *притужальник.* 2. (урта, һаҡмар) Киндер урыны — *ткацкий станок*

**ЫҪТАН II** (арғаяш, салйоғот) *и.* туҡталыу урыны — *стоянка.* Ҡай йаҡта һеҙҙең ыстан? (салйоғот). ◊ Ыстаны ҡыҫҡа (арымтал) — *легко утомляющийся*

**ЫСТАНСАҺЫҘ** (мейәс) *с.* арымтал — *легко утомляющийся.* Ыстансаһыҙ ат

**ЫСЫН ҒЫНА** (мейәс) *р.* дөп-дөрөҫ — *совершенно правильно, точно.* Ысын ғынамды әйтәм мына үәт! Сын ғынаһы (эй)

**ЫСЫН-ИХЛАС** (ҡыҙыл) *м. һ.* ысынлап та — *действительно.* Ысын-ихлас, шулай булды

**ЫСЫНТЫЛАП** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *р.* ысынлап — *всерьез.* Ысынтылап ҡыҙыр гитә ине бабай, әҙерәк йомшарҙы

**ЫСЫНЙАҺАУ** (эйек-һаҡмар) *с.* матур, һәйбәт — *красивый, славный.* Ә төҫ тигәндә, халыҡ теле белән әйткәндә, ысынйаһау инде мына. Матур кейем мынауы килбәтһеҙ Сәхибә туташты ла ысынйаһау итеп ҡуйа лабаһа!

**ЫСЫНЫ-ТУРЫҺЫ** (урта) *и.* иң дөрөҫө — *сущая правда.* Ысынын-турыһын әйткән тә йарамаған

**ЫСЫРЫЛДАШЫУ** (дим) *ҡ.* сырылдашыу — *визжать (о многих)*

**ЫСЫТ** (ҡыҙыл) *и.* сыт — *большая корзина, плетенка*

**ЫҪ** (арғаяш, дим, ҡыҙыл, урта, һаҡмар) *и.* 1. Төтөн — *дым.* Ҡоротто ыҫҡа элер гәрәк (һаҡмар). Әүәле ҡоротто ыҫҡа элеп киптерә инек (дим). 2. (арғаяш, урта) Ҡором — *сажа*

**ЫҪ: ЫҪ БУЛЫУ** (эй) *ҡ.* шул кәрәк — *так и надо.* Һиңә ыҫ буған

**ЫҪЛЫҠ I** (ырғыҙ) *и.* шырлыҡ — *чаща, дебри.* Ҡуйы үлән, тал үҫкән үҙәк буйын ыҫлыҡ тибеҙ

**ЫҪЛЫҠ II** (дим) *и.* төтәткес — *дымарь*

**ЫҪЛЫ ҠЫМЫҘ** (эйек-һаҡмар) *с.* ыҫланған ҡымыҙ — *прокопченый кумыс.* Борон ҡымыҙҙы тәмле буһын өсөн ыҫлай торғайнылар

**ЫҪПАЙ** (эйек) *с.* үҙен тәрбиәләүсе — *ухаживающий за собой (о человеке)*

**ЫҪТАЛЫУ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* артыш төтөнөнә тотоп үҙен-үҙе дауалау — *окуриваться*

**ЫҪТАН** (урта) *и.* стан, туғын бөгөү урыны — *станок, приспособление для сгибания обода*

**ЫҪТАУ** (мейәс, урта) *ҡ.* ыҫлау — *коптить.* Ағас күнәкте йыуалар, көнгә киптерәләр ҙә, сөрөк быҫҡытып, күнәкте ыҫтайҙар, йаңыртып алалар (мейәс). Ыһтау (ҡыҙыл, мейәс)

**ЫҪЫМ БУЛЫУ** (эй) *ҡ.* оятҡа ҡалыу — *опозориться*

**ЫТЫРҒАЛАНЫУ** (урта) *ҡ.* ытырғаныу — *почувствовать дрожь на теле.* Дәнем ытырғаланып китте

**ЫТЫРҒЫҺЫҘ** (урта) *р.* самаһыҙ — *безмерно, чересчур*

**ЫТЫРЫҢҠЫ** (эйек-һаҡмар) *с.* көсләп эшләнгән — *насилу сделанный.* Был эш бик ытырыңҡы эш булды бит әле

**ЫТЫС** (ҡыҙыл) *и.* сыт — *большая корзина, плетенка*

**ЫУ I** (арғаяш, ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* ағыу — *яд.* Ҡара йыландың ыуы көслө була (ҡыҙыл). Бал ҡортоноң ыуы. Бесәйҙең тырнағы ыулы була (һаҡмар)

**ЫУ II** (гәйнә) *а.* ул — *он.* Ыу кеше ҡайҙа китте? Ҡарт ыу. Ыу йегет хеҙмәткә алынды инде

**ЫУ III** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* үрмәксе ауы — *паутина.* Анау ыуны алып ырғыт! (ҡариҙел)

**ЫУ IV** (ырғыҙ) *и.* һуғанға оҡшаған ағыулы үлән исеме — *название ядовитой травы наподобие лука*

**ЫУ: ЫУ ТОҘ** (мейәс) *р.* шыр тоҙ — *пересоленный.* Ашыбыҙ ыу тоҙ булған. Ыу тоҙ итеп ашап утыра

**ЫУА** (һаҡмар) *ы.* аптырау ымлығы — *междометие удивления.* Ыуа, аны түгел Мортаза ҡартты онотҡаным эле

**ЫУАБА** (һаҡмар) *и.* ыуа — *суставной и мышечный ревматизм*

**ЫУА ҒОРТО** (арғаяш) *и.* быуындарҙы шештерә торған бактерия — *бактерия суставного ревматизма*

**ЫУАҒЭЧӘК** (гәйнә) *и.* нәҙек эсәк — *тонкая кишка*

**ЫУАЙАҠ** (ҡыҙыл) *и.* айаҡ кейемен тиҙ туҙҙырыусы кеше — *человек, быстро изнашивающий обувь.* У шу тиктем ыуайаҡ, төттөрмәй айаҡ кейемен

**ЫУАЙҮКӘ** (урта урал) *и.* бүре йүкәһе — *волчье лыко*

**ЫУАҠ** (урта) *с.* ваҡсыл — *мелочный.* Ул ыуаҡ кеше

**ЫУАҠАЙ** (урта) *с.* 1. Мыжыҡ — *ворчливый.* 2. Ваҡсыл — *мелочный*

**ЫУАҠҠАБЫРҒА** (мейәс) *и.* ҡулан ҡабырға — *ложное ребро*

**ЫУАҠ СЫБАР** (һаҡмар) *и.* ваҡ-төйәк — *всякая всячина*

**ЫУАҠ ТУМАЛАҠ** (һаҡмар) *и.* бауырһаҡ — *баурсак*

**ЫУАЛАҠЛАУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ваҡлау — *мельчить.* Сумар бешерә торғайнылар ҡамырҙы ыуалаҡлап, өйрә араһына һалып

**ЫУАЛАУ** (урта) *ҡ.* әүәләү — *валять*

**ЫУАЛЫУ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* ватылыу — *сломаться.* Машинаһы ыуалып утыра (мейәс)

**ЫУАНАС** (ҡыҙыл) *с.* түҙемһеҙ, сабырһыҙ — *нетерпеливый.* Ыуанас була торғайны ул ғарт

~~**ЫУАСАҠ**~~ (мейәс) *с.* бик ваҡ — *мельчайший, очень мелкий.* Ыуасаҡ ҡына (ҡыҙыл)

**ЫУАТЫУ** (урта) *ҡ.* ватыу — *бить, разбивать*

**ЫУҒЫҘ** (дим, урта) *и.* ыуыҙ — *молозиво*

**ЫУҒЫС** (һаҡмар) *и.* йыуғыс — *тряпка для мытья пола*

**ЫУҘАУ** (урта урал) *ҡ.* ыңғайына һыйпау — *непротивиться чьей-либо воле.* Аны ыуҙа ғына, башҡа нәмә кәрәкмәй

**ЫУҠЫНЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* һөйләнеү — *ворчать.* Ул шулай ыуҡынып алыр ҙа йөрөр инде

**ЫУМЫРЫУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* йыртыу — *рвать*

**ЫУЫҘ: ЫУЫҘ ИГЕН** (көнсығыш диалект) *и.* 1. Бешеп өлгөрмәгән иген — *недозрелое зерно.* Игенде ыуыҙ көйө сабып әрәм иткәндәр (ҡыҙыл). 2. *с.* йомшаҡ — *мягкий.* Йәш баланың тәне ыуыҙ ғына. 3. (туҡсоран) *и.* үҫенте — *поросль (о травах).* Яңы ғына ҡалҡып килгән йәшел ыуыҙ үләндәр, ысыҡланып, тәндәрҙе сиркәндерәләр

**ЫУЫҘ БАЛА** (ҡыҙыл) *и.* имсәк бала — *грудной ребенок.* Аларҙың ыуыҙ балдары бар

**ЫУЫҘ БЕСӘН** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* йәш бесән — *свежее сено*

**ЫУЫҘ ҠЫҘ** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* үҫмер ҡыҙ — *несовершеннолетняя девочка*

**ЫУЫҘ ТЕШ** (мейәс) *и.* һөт теше — *молочные зубы*

**ЫУЫЛДЫҠ I** (арғаяш, дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, салйоғот, урта, эй) *и.* ыуылдырыҡ — *икра.* Ыуылтыҡ (арғаяш, ҡариҙел, урта), ыуылтырыҡ (урта)

**ЫУЫЛДЫҠ II** (дим) *и.* балтыр — *икра (часть ноги)*

**ЫУЫЛЙЫМ** (урта) *с.* һүрән — *умеренно спадающие (о лучах солнца).* Байып барған ҡойаштың ыуылйым нурҙары аҫтында кешеләр күҙгә бер нөктә булып ҡына салына ине

**ЫУЫМ** (ҡыҙыл) *и.* дүртенсе быуын балалары — *дети четвертого поколения*

**ЫУЫМБЫҠ, АУЫМБЫҠ** (арғаяш) *и.* аласабыр — *пеганка*

**ЫУЫНДЫ** (урта урал) *и.* тапанды — *объедья*

**ЫУЫНЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* үкенеү — *каяться, сожалеть.* Апайың үткән ҡайтҡанында да һине күрә алмай китәм тип ыуынды

~~**ЫУЫҪ I**~~ (арғаяш, салйоғот) *и.* ыуыҙ — *молозиво*

**ЫУЫҪ II** (арғаяш, салйоғот) *и.* мал табанындағы йомшаҡ урын — *мягкий нарост на копыте*

**ЫУЫУ** (дим, ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* 1. Массаж яһау — *массажировать.* 2. (дим, урта, эй) Йыуыу — *мыть.* Кер ыуыб алам. Башымды ыумайым (дим)

**ЫФЫУЫ** (гәйнә) *ы.* ҡурҡыу ымлығы — *междометие испуга*

**ЫХЫУАТ** (гәйнә) *и.* ухыуат — *ухват*

**ЫҺТАУ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* ыҫлау — *коптить*

**ЫША** (һаҡмар) *и.* сер — *секрет*

**ЫША: ЫША БИРМӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Ал бирмәү, алдына сығармау — *не уступать первенства, не давать опередить себя.* 2. (урта) Тыңламау, баш бирмәү — *не подчиняться, не повиноваться.* 3. (һаҡмар) Сер бирмәү — *не подавать вида; не давать маху.* А, ул ыша бирмәй ул

**ЫШАНДЫҠ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, эй) *и.* ышаныс — *доверие, вера.* Ышандыҡ бармы ни аңа, әллә ҡайта, әллә йуҡ (төньяҡ-көнбайыш). Малайҙарға ышандыҡ бармы разы (эй). Ышантыҡ (ҡариҙел)

**ЫШАНДЫҠЛЫ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *с.* ышаныслы — *надежный, верный.* Ул бик ышандыҡлы кеше (гәйнә). Ышаныҡлы (урта), ышандыҡты (урта урал), ышанышлы (ҡыҙыл, һаҡмар)

**ЫШАҺЫҘ** (ҡыҙыл) *с.* әрһеҙ, үткер — *беззастенчивый, решительный,* Ҡәһәрмәндәр ышаһыҙыраҡ алар

**ЫШБЫР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ығыш — *копуша.* 2. Әрпеш — ~~*неряха*~~

**ЫШҠАҢНАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡыйшандаҡ — *кокетка*

**ЫШҠАҢНАУ** (дим) *ҡ.* шиҡандау — *кокетничать.* Ышҡандау (ҡыҙыл)

**ЫШҠАШМАҒАН** (һаҡмар) *с.* эшкә ашмаған, булдыҡһыҙ — *беспутный.* Эй, һин, ышҡашмаған, ҡойтоһоң

**ЫШҠЫЛЫУ** (ҡариҙел, эйек-һаҡмар) *ҡ.* өйкәләү — *натереть.* Айағым ышҡылды

ЫШҠЫНЫУ (дим, эйек-һаҡмар) *ҡ.* тотоноу — *держаться.* Ситэнгэ ышҡынып ҡына ҡайттым, ҡаранғы (дим)

ЫШҠЫРЫУ (ҡыҙыл) *ҡ.* эш ҡырыу, булдырыу — *справляться.* Йырлап ышҡыра алмайым

ЫШЛАННИК (ҡариҙел) *и.* умарта баҙы — *омшаник*

ЫШЛАҢҠЫ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* шланг. Алар үҙләре сиптерә ышлаңҡы белән

ЫШЛАПА (дим, ҡариҙел) *и. шляпа*

ЫШЛАНУР (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, салйоғот, ырғыҙ, эйек-һаҡмар, әй) *и.* күлдәктең түшенә йәки ең осона бөрмәләп ҡуйылған тар ғына бала итәк — *узкая оборка на вороте или на рукавах платья*

ЫШЛАУ (эйек-һаҡмар) *ҡ.* бөтөрөү, елгә осороу — *разорить, развеять.* Донйамды ышлайым тиһәң бөтә

ЫШЛУМКА ЙӨН (салйоғот) *с.* шленка — *шерсть тонкошерстной породы овец*

ЫШЛУН: ЫШЛУН ҺАРЫҠ (дим) *с.* шленка — *овца тонкошерстной породы*

ЫШПУР (төньяҡ-көнбайыш) *и.* аяҡ табанына сыҡҡан оро — *шпора (костный нарост на стопе).* Айағына ышпур сыҡҡан, басалмый

ЫШТАУАЙ САҢҠА, ЫШТАУЛАҢҠАН САҢҠА (ҡариҙел) *с.* босҡаҡлы, табанына тире ҡағылған саңғы — *лыжи, подбитые шкурой*

ЫШТЫЙ (туҡ-соран, һаҡмар) *и. штаны.* Көнө буйы һырғалаҡ эйеп ыштыйҙары һыуҙанып бөткән (һаҡмар)

ЫШТЫЙА (көнсығыш диалект) *и.* ышлыя — *шлея*

ЫШТЫЙАТҺЫҘ (мейәс, әй) *с.* килбәтһеҙ — *неуклюжий*

ЫШТЫР I (арғаяш) *и.* кендексөй — *шкворень*

ЫШТЫР II т(өньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* 1. Силғау — *портянки.* 2. (урта) Сабата бауы — *завязка (у лаптей)*

ЫШТЫР III (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ығыш — *копуша.* 2. Әрпеш — *неряха*

ЫШЫҠСЫҘ (ҡариҙел) *с.* йәмһеҙ — *некрасивый.* Ышыҡсыҙ нәмәгә ҡарамай йегетләр. Шыҡһыҙ (ҡыҙыл, урта урал). Шыҡһыҙ ҡиәфәте менән иң алдан йөрөй (урта урал)

ЫШЫМ: ЫШЫМ ҠАТА (урта) *и.* бышым ҡата — *вид обуви, состоящий из кожаной головки и холщевой оборки, в которую продевается шнур и завязывается над лодыжками*

ЫШЫМЛАУ (урта) *ҡ.* бышымлау — *сшить с холщевым верхом (об обуви).* Түңәрәк ҡатаны бесемләп тегәһең, ирләргә ышымлап

ЫШЫРТҠЫ, ЫШЫРТҠЫС (эйек-һаҡмар) *и.* һөйрәтке — *волокуша.* Бесән күбәһен ышыртҡы белән тарттырабыҙ инде

ЫШЫРЫЛЫУ (ҡыҙыл, әй) *ҡ.* күсерелеү — *перемешаться.* Мейестең күмере бер йаҡҡа ышырылған

ЫШЫРЫУ (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, әй) *ҡ.* этеү — *толкать.* Йулдың ҡарын тыраҡтыр белән ышыралар (урта). Ана шуға ондо иләп кенә ала ла урындығ аҫтына ышыра ла ғуйа (ҡыҙыл). Ҡыҙ иҙәнде һепереп, сүп-сарҙы һоҫҡоға ышырҙы ла, мейескә ташланы (эйек-һаҡмар). Эшереү (төньяҡ-көнбайыш), ышыу (мейәс)

# Э

ЭҘ (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* аяҡ мәғәнәһендә — *в значении ноги.* Хатта эҙен дә баҫтырма (һаҡмар)

ЭҘЕЛӘҮ I (арғаяш) *ҡ.* аш талымлау — *быть разборчивым в пище.* Эҫеләү (әй)

ЭҘЕЛӘҮ II (арғаяш) *и.* эҫеләү — *опой.* Аның аты эҙеләүҙән үлде

ЭҘЕНДЕРЕҮ (арғаяш) *ҡ.* эйәләштереү — *приручить*

ЭҘЕРГӘНЕҮ (һаҡмар) *ҡ.* екеренеү — *накричать.* Ул асыуына түҙә алмай эҙергәнә

ЭҘЕҺЕТ (салйоғот) *и.* һөҙһәт — *удод.* Эҙеһөт (арғаяш)

ЭҘМӘ: ЭҘМӘ ЙУЛ (ҡыҙыл) *с.* үлән баҫҡан берләм юл — *заросшая тропинка*

ЭҘӘКЛӘҮ (урта) *ҡ.* ошаҡлау — *доносить*

ЭЗГЕРӘЙ (урта) *и.* ун тинлек бороңғо тәңкә — *десятикопеечная старинная монета*

ЭЗГӘКЛӘҮ (һаҡмар) *ҡ.* себенләү — *беспокоиться от укуса мух (о животных).* Йәй булһа маллар эзгәкләп ҡайта ла килә

ЭЗМӘҮЕР (төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта урал) *и.* буйға ҙур, таҙа кеше — *человек высокого роста, рослый*

ЭЙ I (көнсығыш диалект) *т.* һәм — *и.* Болан аттыҡ, эй һыуһарын да тотторҡ

ЭЙ II (көнсығыш диалект) *ы.* үкенеү ымлығы — *междометие удивления*

ЭЙ III (һаҡмар) *и.* тире иләгәндә ҡулланыла торған шыйыҡса — *раствор, применяемый при обработке кожи*

ЭЙ: ЭЙГӘ КИЛТЕРЕҮ (минзәлә) *ҡ.* яңынан тәрбиәләү — *перевоспитывать*

ЭЙ АТТАЙ (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *ы.* эттәгенәһе — *ах, ахти*

ЭЙ БУЛЫУ (ырғыҙ) *ҡ.* йомош биреү — *дать поручение*

ЭЙДЕРЕҮ (гәйнә) *ҡ.* 1. Күндереү — *уговорить.* Аны апҡайтырға эйдергәннәр. 2. Эйәреү — *следовать.* Арттан эйдереп сыҡтап тик йөрөй

ЭЙҘӘҮ (һаҡмар) *ҡ.* эйҙәү, ҡыуып алып барыу — *гнать (скотину).* Үҙебеҙҙең йылҡы өйөрөн эйҙәп тә генә һалдым утлауға. Ҡаҙаҡлар бабайҙы үтереп, малды эйҙәп, киленде алып китәләр

ЭЙЕБЕЙЕҮ (мейәс) *ҡ.* таш атыу, ташлап ебәреү — *бросать, кидать (камень)*

ЭЙЕ (мейәс) *и.* яға аҫтына һалынған туҡыма — *материя, пришитая к изнанке воротника*

ЭЙЕГЕҮ (урта) *ҡ.* эйәләшеү — *привыкать.* Йәш бит, эйегер ҙә гитәр. Бәләкәс улы үҙенә эйегер ҙә гитәр тип димләнеләр. Ағайығыҙ бик һәйбәт ине, йаттан килгән кеше эйекһен типтер инте, бик ҡәҙерләп тотто

ЭЙЕЛТМӘ (урта) *и.* һиртмә — *пружина.* Сәңгелдәктең эйелтмәһе насарайған

ЭЙЕМ (һаҡмар) *и.* атҡан уҡ барып төшкән ара — *дальность полета стрелы.* Уҡ эйеме ҡәҙәр атылған

ЭЙЕМЕК (урта) *с.* биле эскә бөгөлөп, эйелеп торған — *с вогнутой спиной.* Мынау аттың биле эйемек кенә

**ЭЙЕМӘ** (кариҙел, мейәс, төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *к.* эйеме? — *да, разве?* Эймә (гәйнә). Мин күрәсен син күрмәйсен эймә?

**ЭЙЕНСЕ** (эйек-һаҡмар) *и.* инсе — *скот, обещанный невесте родителями жениха.* Эйенсе малға теймәгеҙ

**ЭЙЕНТЕ, ЭЙЕНТЕК** (ҡыҙыл, урта) *и.* эйенде — *задержанное молоко в вымени в конце дойки.* Һыйыр эйентеһен бирмәй, быҙауына ҡалдыра (ҡыҙыл). Эйентек ҫөтө (дим). Эйентек ҫөтө ҡуйы була

**ЭЙЕНТЕКЛӘҮ** (дим) *ҡ.* елен төбөн һауып алыу — *выдаивание оставшегося в вымени молока*

**ЭЙЕНТЕЛӘҮ** (урта) *ҡ.* быҙауҙы имеҙеп, эйҙереп-эйҙереп һауыу — *выдаивание оставшегося в вымени молока.* Эйентеләп ҫауыу (дим)

**ЭЙЕҢКЕ** (дим) *с.* кеселекле — *вежливый, почтительный.* Ул бик эйеңке кеше

**ЭЙЕРҘЕК** (ҡыҙыл) *и.* ҡыра — *длинный ряд сгребенной высохшей травы*

**ЭЙЕРЕЛЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* өйөрөлөү — *вихриться*

**ЭЙЕРЕМ I** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* күбә — *копна (сена).* Бесән эйереме

**ЭЙЕРЕМ II** (ҡыҙыл) *и.* балыҡ көтөүе — *косяк рыбы*

**ЭЙЕРЕҮ I** (ҡыҙыл) *ҡ.* күбәләү — *копнить (сено).* Бесән эйереү. Эйеү (Аралбай ауылы)

**ЭЙЕРЕҮ II** (ырғыҙ) *ҡ.* өйөрөү — *согнать в кучу (стадо).* Малын ирκеннәп көтмәй, эйереп алып тик йөрөтә

**ЭЙЕРТМӘ** (ҡыҙыл) *и.* ҡыра — *длинный ряд сгребенной высохшей травы*

**ЭЙЕТЕҮ** (дим) *ҡ.* екетеү — *выдержать шкуру в кислом растворе*

**ЭЙЕҮ I** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Бәүелеү — *качаться.* Әүһәләг эйергә йаратыуы (ҡыҙыл). Беҙ сәңгелдәг эйҙек (эйек-һаҡмар). 2. Шыуыу — *кататься.* Малайҙар көнө буйы һырғалаг эйә (ҡыҙыл). Әйҙә, сана эйәйек! (эйек-һаҡмар)

**ЭЙЕҮ II** (гәйнә, ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнсығыш, урта урал, эйек-һаҡмар) *ҡ.* «ебәреү» мәғәнәһендәге ярҙамлыҡ ҡылым — *вспомогательный глагол.* Иҫләремә төшөб йырлаб эйһәм, һигеҙ йөҙ ҙә һикһән өс кенә (эйек-һаҡмар). Ҡайтарыб эйеп әсәһен... (эйек-һаҡмар). Баҡырып эйеү. Йырлаб эйеү (мейәс). Бара ла ғына торғас йырҙап эйҙем, төрҙө-төрҙө һәсрәт-уй белән (ҡыҙыл). Ҡурай ғына тартып йырҙап эйә, эскенәйе тулы һағышҡа (ҡыҙыл). Сәй эсеб эй (урта урал). Биреб эй (урта урал)

**ЭЙЕҮ III** (ҡыҙыл) *ҡ.* өйөү — *складывать, сложить.* Әсәмдәр бесән эйә

**ЭЙЕҮ IV** (дим) *ҡ.* екеү — *сползать (о шерсти).* Сәсләре эйегән ҫыуҙа йатып. Йейеү (туҡ-соран)

**ЭЙЕШТЕРЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* эйеү — *согнуть.* Эйештерә тартып айыу ашаған быҙауҙы

**ЭЙЛЕМ** (салйоғот) *с.* илгәҙәк — *приветливый, любезный*

**ЭЙМӘ** (гәйнә) *к.* эйеме? — *да?* Мин күрәсен син күрмәйсен эймә? Эйемә (урта урал)

**ЭЙРӘТЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* өйрәтеү — *приучить*

**ЭЙҺЕНЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* һауылып торған малдың һөт биреүен туҡтатыуы — *задержка молока при доении.* Эйҙергәс һыйырҙы оҙаҡ көттөрһәң эйһенә лә ғуйа (ҡыҙыл). Оҙағыраҡ һауһаң бейә эйһенә (мейәс)

**ЭЙ-ҺӘМ** (мейәс, туҡ-соран, урта урал) *м. һ.* мыҡты — *точно (модальное слово усиления, подтверждения).* Эй-һәм бөтөп килә шул бороңғо ҫүҙләр (туҡ-соран). Кимәҫ ул тинем, эй-һәм шулай булды ла (ҡыҙыл). Эй-һәм бөтәһе лә килерҙәр, үҙемдә торорҙар (урта урал)

**ЭЙӘК: ЭЙӘГ АТЫУ** (ҡыҙыл) *ҡ.* эйәк ҡағыу — *показать подбородком.* Ул иптәп кенә ишек йағына эйәгатты. Зыйаратты төртөп күрһәтеү йарамай, эйәгатып күрһәтер гәрәк. 2. (эй) Кешенең үлер алдынан һуңғы һулышы — *последний вдох умирающего*

**ЭЙӘКЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эйәләшеү — *привыкать.* Ҡапҡаргәһендә бүкән буһа, йәштәр эйәкләй у. Бер аҙ торһа эйәкләр ҙә гитәр. Эйәләнеү (төньяҡ-көнбайыш). Ҡомаҡ эйәләнде лә, сигеҙ тауыҡ шебеше барыйы, үләксәсе ҙә ҡалмаҙы. Эйәкләшеү (эйек). Эйәкләшмәһен тинем, кешенең күңеле аҙман була. Баллар бер-беренә тиҙ эйәкләште

**ЭЙӘКСЕН** (арғаяш, мейәс) *и.* ҡушъяулыҡтың тәңкәле һағалдырығы — *завязка у спаренного платка (кушъяулыка).* Эйәксә (урта урал, эй)

**ЭЙӘК ТАШТАУ** (арғаяш) *ҡ.* аянлау — *заигрывать, резвиться (о лошади)*

**ЭЙӘКҺӘ** (мейәс) *и.* 1. Ҡыңғырау сәскә — *колокольчик (цветок).* 2. Ҡолон муйынына тағылған ҡыңғырау, шалтыраҡ — *маленький колокол на шее жеребенка*

**ЭЙӘЛӘНЕП КИТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ауырыуҙың аҙыуы — *осложнение болезни*

**ЭЙӘЛӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡабаланыу — *спешить.* Эйәләнеп ней бар, һуңламам әле

**ЭЙӘЛӘҮ I** (ҡыҙыл) *ҡ.* яратыу — *любить.* Ҡарындашыңды бер кеше эйәләне

**ЭЙӘЛӘҮ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* өйәҙәү — *заваливаться (о животных, цыплятах)*

**ЭЙӘМ** (урта урал, һаҡмар) *и.* йәм — *уют.* Эйәмде көндәр йетте (урта урал). Әхирәт, һинең өйөңдөң эйәме йуҡ (һаҡмар). Мейестен ҡыйын таҙаламаһаң эйәмһеҙ була (һаҡмар)

**ЭЙӘН** (дим) *и.* ейән — *внук*

**ЭЙӘНСӘР** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* ейәнсәр — *внучка*

**ЭЙӘНӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өйәнәк — *падучая болезнь.* Баш эйәнәге ике тотто

**ЭЙӘР** (эй) *и.* гөрләүек — *ручей (после дождя и от таяния снега)*

**ЭЙӘР: ЭЙӘР АҠТАҺЫ** (мейәс, урта) *и.* ҡаптал — *ленчик седла.* Эйәр ағасы (эйек-һаҡмар), эйәр ҡашағаһы (урта) эйәр ҡашы — *передняя лука седла;* эйәр ҡойошҡаһы (арғаяш) ҡойошҡан — *подхвостник;* эйәр мендәре (урта, ырғыҙ) эйәр өҫтөнә һалына торған күн тышлы бәләкәй мендәр — *подушка (седла);* эйәр тартмаһы (һаҡмар) айыл — *подпруга;* эйәр тоҡсайы (дим) артмаҡ — *переметная сумка (для перевозки вещей во время верховой езды);* эйәр үңнеге (дим) үңдек — *потник*

**ЭЙӘРЕШӘ КИЛЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* тиҫтер булыу — *быть сверстниками.* Рузаһы Үәлимәгә эйәрешә килә. Безең бабайларға эйәрешә килгән кеше ул Илмырҙа ҡарт

**ЭЙӘР-ӨПСӨН** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡамыт-дуға — *принадлежности для запряжки лошадей.* Эйәр-упсын (мейәс). Ул эйәр-упсынын жыйып тота

**ЭЙӘРСӘН, ЭЙӘРСЕН** (көнсығыш диалект) *с.* етәккә шәп, эйәртеүгә ыңғай — *идущий на поводу (о лошади),* эйәрсен (әй), эйәрсәк, эйәрсән (урта, эйек), эйәрсән (мейәс)

**ЭЙӘР ТАНАУ** (урта) *с.* йәмшек танау — *вогнутый нос*

**ЭЙӘРТЕҮ** (урта) *ҡ.* эйәреп барыу — *следовать*

**ЭЙӘРТМӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* кейәү егете — *шафер.* Элгәре ҡыҙ алырға кейәү эйәртмә белән киләдерейе

**ЭЙӘ СЫҒЫУ** (урта) *ҡ.* кейәүгә сығыу — *выйти замуж.* Эйә сыҡкас, барҙым та ҡуйҙым

**ЭЙӘҮҘӘҮ** (мейәс) *ҡ.* өйәләү — *завалиться (о животных и птицах).* Мынау себеш эйәүҙәп йата ла

**ЭЛБИҘАҠ** (әй) *и.* елбәҙәк, йылтыраҡ — *блестки; мелкие тонкие монеты для украшения одежды*

**ЭЛГЕР** (ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар, әй) *с.* өлгөр, етеҙ — *проворный.* Унының хәтере үтә элгер шул, бер күргән-кисергәнде ғүмергә һаҡлай ҙа ҡала (эйек-һаҡмар). Ул бик элгер у (ҡыҙыл). Эшкә элгер тотона (мейәс)

**ЭЛГЕРСӘК, ЭЛГЕСӘК** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* 1. Ҡаптырма — *петля (на одежде).* 2. Кейем елкәлеге — *крючок (на одежде).* 3. Келә — *крючок (дверной).* 4. (мейәс) Әйбер элеү өсөн эшләнгән элгес — *вешалка*

**ЭЛГӘҘӘК** (арғаяш, мейәс) *с.* егәрле — *проворный, расторопный (о лошаде).* Элгәҙәк ат һуҡтырмай, үҙе шәп йөрөй (арғаяш)

**ЭЛГӘК** (арғаяш, салйоғот, төньяҡ-көнсығыш) *и.* келә — *крючок дверной*

**ЭЛГӘЙНӘК** (урта) *и.* әлгәнйәк — *бурундук.* Буйлы-буйлы ғына, бер ере аҡ, бер ере ҡара була ул элгәйнәктең

**ЭЛГӘРЕ** (арғаяш, дим, урта) *р.* 1. Боронғо — *старинный.* 2. Элекке — *бывший, прежний, былой.* Элгәреңке (арғаяш, мейәс). Мин элгәре ҫуғышта ла ҡатнаштым (дим). Элгәре әҙәм бит, күп белә (урта). 3. Элекке көн — *позавчера, третьего дня.* Алар элгәре көн генә ҡайттылар (урта). Элгәреңке (мейәс), элгәре (төньяҡ-көнбайыш). Элгәре гөн килде. 4. (ҡыҙыл, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта, һаҡмар, әй) *р.* элек — *раньше.* Элгәре ирҙәр ҡыҙыл ыштан кейҙе француздан бер ғат итеп (ҡыҙыл). Элгәртен, элгәртән (төньяҡ-көнбайыш)

**ЭЛГӘРЕК** (дим) *р.* иң элек — *сперва, сначала*

**ЭЛГӘРЕСИКЕ** (гәйнә) *и.* ҡаҙанлыҡ яғындағы һике — *нары в кухне*

**ЭЛГӘРТЕ** (урта урал) *и.* ҡашығаяҡ — *посуда, утварь.* Элгәртеләре бөтә йалт итеп тора. Элгәртеләре көнә буйы йыуылмай ултыра

**ЭЛГӘС** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта, һаҡмар) *и.* 1. Келә — *дверной крючок.* Элгесәк (ҡыҙыл), элгәрсек (эйек-һаҡмар), элмәс (дим, эйек-һаҡмар), элтергес (төньяҡ-көнбайыш). 2. (дим, эйек-һаҡмар) Ҡаптырма — *крючок (на одежде)*

**ЭЛГӘСӘК** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Элмәк — *петля (на одежде).* Көпөңдөң элгәсәге өҙөлөп бара бит. 2. Келә — *дверной крючок*

**ЭЛГӘШЕҮ** (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* өлгәрөү — *успеть.* Насила барып элгәшәсең базарға

**ЭЛДЕК** (урта урал) *и.* 1. Үңербау — *тесемка (у воротника рубахи).* Беҙ ҡыҙ саҡта кис ултырып элдек ишә туғайныҡ. 2. (гәйнә) Ҡаптырма — *застежка*

**ЭЛДЕРГЕЧ, ЭЛДЕРМЕЧ, ЭЛДЕРМӘЧ** (гәйнә) *и.* 1. Элгес — *дверной крючок.* 2. Элмәк — *вешалка (у одежды)*

**ЭЛДЕР-САЛДЫР** (ҡариҙел) *и.* алам-һалам — *хлам, старье*

**ЭЛДЕРӘТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эләктереү — *хватать.* Элдерәтергә генә ултыра һүҙҙе

**ЭЛЕБАЛЫУ** (ҡыҙыл, әй) *ҡ.* типсеү — *наметать.* Башта күлдәгеңде элебал, шунан тегерең (ҡыҙыл). Элебалыр йере йуҡ *(ҡулға тотар ере йуҡ)* — *очень старый, изношенный.* Күлмәгенең элебалыр йере йуҡ (әй)

**ЭЛЕК** (гәйнә) *р.* иртә — *рано.* Ҡайа ашығасың, кина башланырға элек ҡый

**ЭЛЕКЕН** (ҡариҙел) *р.* элек — *раньше, прежде.* Элекен ҡартлар ҡайырыҙан үлә *(бәләкәй сана)* эшләгәннәр

**ЭЛЕККЕ** (әй) *р.* элек — *раньше, прежде.* Элекке көлтә жыйғанда йулдар таба гүк йалтырап йата туғайны. Элекке гел Баҙраҡтар беҙҙә була туғайны йәрминкә буһа

**ЭЛЕККЕНӘН** (һаҡмар) *р.* электән — *издавна.* Элеккенән мында тора торғайнул

**ЭЛЕККЕҢГЕ** (мейәс) *р.* элекке — *бывший, прежний*

**ЭЛЕКЛӘР** (ырғыҙ) *р.* элек — *раньше, прежде.* Элекләр шулай ине бит

**ЭЛЕКТӘҢГЕ** (һаҡмар) *р.* боронғо — *древний.* Ҡыуыҡаннар электәңге халыҡ инде алар

**ЭЛЕМЕК** (урта) *и.* 1. Һуҡыр себен — *мошкара.* 2. (эйек-һаҡмар) Сей ҡатыҡ — *неудавшееся кислое молоко*

**ЭЛЕМЕТ: ЭЛЕМЕТ МАЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* ярымай — *пленочное нутряное сало*

**ЭЛЕМ-СЕЛЕМ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* эленеп ҡуйылған йорт әйбере, йыһаз — *домашние вещи*

**ЭЛЕМТӘ** (урта) *и.* киҫәк, ҡырҡынды — *лоскут.* Барып йеткәнсә күлмәктең элемтәһе генә ҡалды

**ЭЛЕМТӘЛ: ЭЛЕМТӘЛ ГЕШЕ** (арғаяш) *с.* ҡулы оҙон — *нечист на руку; вороватый*

**ЭЛЕНЙӘ** (мейәс) *и.* 1. Тимер йулы — *железная дорога.* 2. (һаҡмар) Сик, межа — *граница, межа*

**ЭЛЕН-САЛЫН, ЭЛЕНТЕ-САЛЫНТЫ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Алам-һалам — *старье.* Элен-салын әйберләрен кейә ҙә йөрөй. 2. Кейем-һалым — *одежда.* Анда инде элен-салын эләбеҙ

**ЭЛЕНКӘН АҒАС** (урта) *и.* эләгет — *бурелом (зацепившийся за другое дерево)*

**ЭЛЕП АЛЫУ** (салйоғот, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* типсеү — *наметать.* Элеп һалыу (эйек-һаҡмар). Йурғанды эре генә итеп элеп һалдым

**ЭЛЕП ҺАЛЫУ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *ҡ.* өҫкә һалыу — *накинуть на себя одежду.* Ҡапыл ғына элеп һалыу өсөн өйҙә бер ни йуҡ (ырғыҙ)

**ЭЛЕҮ I** (урта) *и.* келә — *дверной крючок.* Балам, ишектең элеүен элеп ултырығыҙ, йәме

**ЭЛЕҮ II** (дим, ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Типсеү — *наметать.* Күлмәк итәген элеү (эйек-һаҡмар). Күлдәгенде тәүлә элебал, шунан машинала тегерең (ҡыҙыл)

**ЭЛЕҮ III** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* 1. Төрттөрөү — *намекать, говорить намеками.* 2. Эләктереү — *придираться.* Бер һүҙ әйтер әмәл йуҡ, элебалырға ғына тора (ҡыҙыл). Күҙгә элеү (ҡыҙыл, мейәс, әй) иғтибар итеү — *обращать внимание.* Ул шу тикте эре, беҙҙе һымаҡтарҙы күҙгә лә элмәй (ҡыҙыл)

**ЭЛКЕ** (эйек-һаҡмар) *с.* яҡшы — *хороший.* Йеләктең ҡайҙа элкеһе, шуны сүпләп сыға ла гитә

**ЭЛКЕГӨН** (урта урал) *р.* элекке көн — *позавчера.* Саматлар элкегөн ҡайттылар. Элекекөн (гәйнә), өлөкөгөн (ҡыҙыл, һаҡмар), элкөгөн (әй)

**ЭЛКЕ-САЛҠЫ, ЭЛКЕ-СЕЛКЕ** (гәйнә) *р.* илкеһалҡы — *кое-как, так себе.* Ул ғүмер буйы эшкә элкеселке йөрөҙө

**ЭЛКӘҮ I** (ҡыҙыл) *р.* 1. Арлы-бирле эләктереү — *надеть, напялить что-либо на ноги.* Калуш элкеп буһа ла сыҡһаңсы һуң айағыңа. 2. Арамъя — *нерадиво, кое-как.* Эште элкәү эшләгәнһең бит! Элкә-һәлкә (эйек-һаҡмар). Элкә-һәлкә генә эшләй ҙә ғуйа ул

**ЭЛКӘҮ II** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Арлы-бирле ҡуйылған ҡамау — *кое-как поставленное ограждение.* 2. Ҡамау — *окружать.* Көтөүҙе көнө буйы элкәп тоттолар

**ЭЛМӘ I** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта урал, әй) *и.* 1. Йыла — *ильм.* Элмәне ҡайыҙлайсың да уаҡ ҡына итеп турап он тартасың, күмәч пешереп ашайсың (төньяҡ-көнбайыш). 2. (гәйнә, урта урал) Саған — *клен.* 3. (төньяҡ-көнбайыш) Һары сәскәле сәрүи ағасы — *желтая акация*

**ЭЛМӘ II** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* келә, элмәк — *дверной крючок.* Элмәс (дим, урта)

**ЭЛМӘ ИЛӘК** (эйек-һаҡмар) *и.* элеп ҡуйып ашлыҡ иләй торған баулы ҙур иләк — *висячее сито для просеивания зерна (на току).* Бикә шул саҡ келәт башында күгәрсен ойалап тутығып йатҡан оло элмә иләкте төшөрөп, үәкил алдына тәгәрәтте

**ЭЛМӘЙЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* йонсоу, хәлһеҙләнеү — *утомляться, ослабевать*

**ЭЛМӘЙТЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* түште асыҡ йөрөтөү — *ходить нараспашку.* Хәҙерге йәштәр муйынын элмәйтеп йөрөтә

**ЭЛМӘК** (арғаяш, мейәс, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш) *с.* аҫмалы шәм — висячая *(подвесная) лампа.* ◊ Элмәле ғул. 1. Ҡулы шуҡ — ҡулы тик тормай — *на руку нечист.* 2. (әй) Тотҡан әйберен төшөрөп йебәреүсән кеше — *непроизвольно, нечаянно роняющий из рук человек*

**ЭЛМӘЛЕ АЛЪЯПҠЫС** (арғаяш) *с.* сигелгән алъяпҡыс — *вышитый передник (фартук)*

**ЭЛМӘЛӘҮ** (арғаяш) *ҡ.* сигеү — *вышивать гладью*

**ЭЛМӘНДӘК** (мейәс) *и.* әрһеҙ, йылмайаҡ — *проныра, проникающий всюду путем хитрости, ловкости.* Һине һымаҡ элмәндәкте ғөмөрө күргәнем йуҡ

**ЭЛМӘНДӘҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* 1. Темеҫкенеү, өмөт итеү — *уповать, надеяться.* Элмәндәп йөрөй ҙә йата (мейәс). Кит, элмәндәп йөрөмә мында (ҡыҙыл). Элмәндәмәй тороғоҙ инде, сабыр итегеҙ (ҡыҙыл). Элмәннәү, элмәңнәү (мейәс, урта). Төшөрөргә элмәңнәп кенә тора (мейәс). 2. (әй) Ябыҡ ҡына нәҙек айаҡлы баланың йүгереүе — *бег худенького, тонконогого ребенка*

**ЭЛМӘС** (дим, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* келә — *дверной крючок.* Элмә (урта), элмәсәк (һаҡмар)

**ЭЛПЕ** (һаҡмар) *и.* лепкә — *родничок (у новорожденного)*

**ЭЛПЕРӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* туҙыу — *износиться (об одежде)*

**ЭЛПӘ** (дим) *и.* теш үңе — *зубная эмаль*

**ЭЛПӘСЕ ҠОЙОЛОУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* төҫө боҙолоу — *помрачнеть (лицом).* Элпәсе ҡойолоп килеп керҙе

**ЭЛТЕРГЕС** (кариҙел) *и.* келә — *дверной крючок*

**ЭЛӘГЕП-ҺАРҠЫП** (көнсығыш диалект) *р.* саҡсаҡ — *кое-как.* Эләгеп-һарҡып утырып киттем (арғаяш)

**ЭЛӘГЕТ** (гәйнә, урта) *с.* 1. Ныҡ ябыҡ — *очень худой.* Эләңгет (урта урал). Эләңгет эттәй йеҫкәнеп тик йөрөй. 2. (гәйнә) Имгәк — *обуза.* Үҙенә эләгет булырый, йарый бармаған

**ЭЛӘГЕТЛӘҮ** (гәйнә) *ҡ.* эләгешеү, бәйләнешеү — *ссориться.* Мин аның белән эләгетләнеп тормайым

**ЭЛӘГЕШЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* әрләшергә әҙер тороу — *готовность сцепиться, вступать в ссору (с кем-нибудь)*

**ЭЛӘГӘН, ЛӘГӘН** (дим, һаҡмар) *и.* ялғаш — *корыто*

**ЭЛӘЙСӘ** (мейәс) *и.* ләйсән ямғыры — *первый весенний дождь*

**ЭЛӘКЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* ошаҡлау — *ябедничать, доносить.* Берсен бөрсе эләкләй

**ЭЛӘКМӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* таяныс — *опора.* Ҡайда да бер эләкмәң булса әйбәт инде

**ЭЛӘКСЕН** (дим) *и.* һағалдырыҡ — *тесьма с нашитыми монетами у спаренного национального платка (ҡушъяулыҡ), которая служит завязкой*

**ЭЛӘКТЕРГЕЛӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* һуҡҡылау — *надевать (временами).* Элек бабайҙар әбейҙәренә дөмбөрсәк белән эләктергеләр буғандар

**ЭЛӘКТЕРМӘ** (дим) *и.* келә — *дверной крючок*

**ЭЛӘКТӘҮ** (ҡыҙыл, әй) *ҡ.* үсекләү — *дразнить*

**ЭЛӘКӘРЛӘП: ЭЛӘКӘРЛӘП ЭШЛӘҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* арамъя эшләү — *работать спустя рукава.* Эләкәрләп эшләп тик йөрөй ул әйтмәһәң

**ЭЛӘМЕК** (дим, урта) *и.* 1. Ләм — *ил.* Эләм (дим). 2. Ылымыҡ — *водоросль, нитчатка*

**ЭЛӘМЕС** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный палас (вытканный из тряпья)*

**ЭЛӘМӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ләпәкәй — *мошка*

**ЭЛӘН** (төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *и.* етен — *лён*

**ЭЛӘҢГЕС** (арғаяш) *с.* ябыҡ, арыҡ — *тощий*

**ЭЛӘҢГЕТ** (әй) *с.* 1. Йонсоу, хәлһеҙ — *слабый, измученный.* 2. *и.* йылмаяҡ — *проныра*

**ЭЛӘҢГӘС, ЭЛӘНГӘС** (һаҡмар) *и.* ылаш — *помост для сушки курута*

**ЭЛӘТСӘ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* йәтсә — *ласка*

**ЭЛӘҮКӘ** (урта) *и.* мейес артында таҡта түшәп эшләнгән урын — *полати (в запечье)*

**ЭЛӘҮСӘН** (урта) *и.* һеләүһен — *рысь*

**ЭЛӘШӘ** (мейәс) *и.* бәҫ — *иней*

**ЭМЕЖЕ** (гәйнә, урта урал) *и.* ҡурай еләге — *малина.* Өмөжө (гәйнә, төньяҡ-көнбайыш)

**ЭМЕЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* имсәк — *грудь.* Эмес (урта), имей (дим)

**ЭМЕЙ БАЛА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* имсәк бала — *грудной ребенок.* Эмей баласын ташлап китәрейем, аламаланып петтем инде

**ЭМЕЧЕКЛЕ** (гәйнә) *с.* һыулы — *сочный.* Йәш ҡайынның япырағы эмечекле була

**ЭМӘЙЛЕК** (дим, урта) *и.* тура ғына итеп ике ҡат ҡуйылып тегелгән муйын тәңкә — *монетный ошейник (женское украшение).* Беҙ әүәле эмәйлек кейҙек (урта)

**ЭН** (гәйнә, ҡыҙыл, мейәс) *и.* өң — *берлога.* Айыуны энендә генә аталар (гәйнә). Беҙ айыу эне күреп ҡайттыҡ әле урмандан (мейәс)

**ЭНАҒАС** (салйоғот, төньяҡ-көнсығыш, һаҡмар) *и.* энәлек — *боярышник.* Эналағас (дим), энәлеғас (урта, һаҡмар), энәлағас (төньяҡ-көнсығыш)

**ЭНГӘК** (арғаяш) *и.* элгес — *дверной крючок*

**ЭНДӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* өндәү — *уговаривать*

**ЭНДӘШЕҮ** (дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, әй) *ҡ.* өндәшеү — *окликать.* Сәхипъйамалға эндәшеп йүнәтеп ҫалдыҡ (дим)

**ЭНДӘШЕШМӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* һөйләшмәү — *не разговаривать.* Эндәшешмибез, әллә ҡайа олаҡма димен

**ЭНДӘШМӘК** (дим) *с.* өндәшмәҫ — *молчаливый*

**ЭНДӘШМӘҪ** (дим, урта) *с.* 1. Өндәшмәҫ — *молчаливый.* Шу хәҙәрлек эндәшмәҫ ине (урта). 2. (дим) Аҫтыртын — *скрытный*

**ЭНЕ, ЭНЕКӘЙ, ЭНЕКӘШ** (мейәс, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, әй) *и.* 1. Ҡусты — *младший брат.* Энекәйҙең улы. Ул минең энекәш белән йәштәш (урта урал). Энекәй (дим), эне, энекәс (арғаяш, салйоғот, урта, эйек-һаҡмар). Бер нәмә лә белмәйем тигәйнем, әйттерә бит был энекәс (эйек-һаҡмар). 2. (гәйнә, дим, ҡыҙыл, урта). Нәҫеллеге булмаған үҙенән кесе ир затына ҡарата әйтелгән һүҙ — *обращение мужчинам младше себя.* Энекәш, йырламаға белмим ҡый (гәйнә)

**ЭНЕР** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* эңер — *сумерки.* Башта ҡыҙыл энер, шунан мәҙе була (эйек-һаҡмар). Энер төшкәс килерең, йәме (ҡыҙыл)

**ЭНЕС I** (туҡ-соран) *и.* ҡусты — *младший брат*

**ЭНЕС II** (ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш) *и.* инес — *подоплека (у рубахи, платья)*

**ЭНЕСӘ: ЭНЕСӘ БАРМАҠ** (ҡариҙел) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**ЭНЕШ** (туҡ-соран) *и.* ҡусты — *младший брат*

**ЭНЖЕ** (гәйнә, ҡариҙел, мейәс, төньяҡ-көнсығыш, урта урал) *и.* 1. Ынйы — *жемчуг.* Энйе (әй), энжеү (дим). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Перламутрҙан эшләнгән ваҡ һиҙәп — *мелкая перламутровая пуговица.* Энйе (ҡариҙел)

**ЭНЖЕҮЛӘН** (ҡариҙел) *и.* 1. Ынйы сәскә — *ландыш.* 2. Һиҙәп үлән — *алтея*

**ЭНТӘҮЛЕ** (ҡариҙел) *р.* иң тәүҙә — *сначала, сперва.* Энтәүле арси күстәнәсен ашадыҡ

**ЭНТӘШЕҮ** (урта) *ҡ.* өндәшеү — *окликать*

**ЭНӘ I** (мейәс) *и.* һергә — *намордник*

**ЭНӘ II** (арғаяш) *и.* ҡаяу — *жало.* Ҡорт энәһе

**ЭНӘБУРЫ** (дим, ҡыҙыл, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-һаҡмар) *и.* энәғараҡ — *стрекоза.* Энәбур (төньяҡ-көнбайыш)

**ЭНӘҒАС** (арғаяш, урта урал, эйек-һаҡмар, әй) *и.* энәлек — *боярышник.* Һыу буйларында үҫә энәлек, энағас, ҡарыйәнҡе талдан башҡа (эйек-һаҡмар). Энәде, энәте, энәле, энәлекәй (мейәс), энәйемеше (ҡыҙыл), энәле (әй)

**ЭНӘДЕ: ЭНӘДЕ БАЛСЫҠ** (мейәс) *и.* ҡом ҡатыш балсыҡ — *глина с примесью песка*

**ЭНӘЖЕҮ** (мейәс, әй) *ҡ.* 1. Асығыу — *голодать.* 2. Ябығыу — *исхудать.* ◊ Энәжегән эт күк (әй) үтә йабыҡ — *очень худой*

**ЭНӘ КҮҘӘҮЕ** (дим, ҡыҙыл) *и.* энә күҙе — *ушко иглы.* Энәкүз (гәйнә). Энәкүзгә жепне күзлә әле, ҡыҙым

**ЭНӘЛЕҒАС** (арғаяш, салйоғот, урта) *и.* *энәлек — боярышник*

**ЭНӘЛЕК I** (арғаяш, дим, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, әй) *и.* энәлек — *боярышник.* Энәлекәй (ҡыҙыл)

**ЭНӘЛЕК II** (гәйнә) *и.* ҡашлы булавка — *брошка.* Миңке энәлек тә йуҡ

**ЭНӘСӘ I** (дим) *и.* бауырһаҡ өсөн нәҙек кенә итеп әҙерләнгән ҡамыр — *тесто, приготовленное для баурсака*

**ЭНӘСӘ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сәтәкәй — *мизинец.* Энесә (ҡариҙел)

**ЭНӘТЕ** (мейәс, урта урал, әй) *и.* энәлек — *боярышник.* Энәтек, энәтлек (арғаяш), энәтел (мейәс, туҡ-соран), энәтал (арғаяш)

**ЭНӘТЕШТЕҒАЙЫН** (арғаяш) *и.* энәлек — *боярышник*

**ЭНӘТЕШТЕКӘЙ** (арғаяш) *и.* энәлек — *боярышник*

**ЭНӘТКЕС** (урта урал) *и.* энәлек сәнскеһе — *игла боярышника*

**ЭНӘЧӘБАРМАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**ЭҢ** (арғаяш) *и.* өң — *берлога.* Айыу эңе

**ЭҢГӘР-МЕҢГЕР** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *р.* аңҡы-тиңке — *шатаясь.* Әбейем эңгер-меңгер йөрөй әле

**ЭҢГӘК** (ырғыҙ) *с.* орғасы — *детёныш женского пола животных (коровы, овцы и др.).* Эңгәк дөйә

**ЭҢЕРБАУ** (эйек-һаҡмар) *и.* үңербау — *тесёмка (у воротника рубахи)*

**ЭҢЕРГЕ ЙОНДОҘ** (эйек-һаҡмар) *и.* эңер йондоҙо — *Венера, вечерняя звезда.* Эңер йондоҙо (дим, әй)

**ЭҢЕРГЕ СУЛПАН** (эйек-һаҡмар) *и.* эңер йондоҙо — *Венера, вечерняя звезда.* Эңер сулпаны (мейәс)

**ЭҢЕРҘӘ** (урта) *р.* кисен — *вечером*

**ЭҢЕРҘӘТЕП** (урта) *р.* кисләтеп — *к вечеру, под вечер.* Хажғәле ҡарт энеләрен эңерҙәтеп кенә ашҡа саҡырып алды

**ЭҢЕРӘЙЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* өңөрәйеү — *зиять.* Ологеше эңерәйеп йырҙап тора

**ЭҢКЕР-МЕҢКЕР** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* аңҡытиңке — *шатаясь.* Ул эңкер-меңкер йөрөй

**ЭПЕЙ, ЭПЕКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* икмәк — *хлеб.* Эпекәй ашайбыҙ. Әпәкәй, эпәк (урта урал)

**ЭПИ ЧИЛӘГЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* икмәк күнәге — *квашня*

**ЭПСЕН** (урта) *и.* эйәр — *седло*

**ЭРБЕЛСӘК** (арғаяш) *и.* ҡайын туҙының өҫкө йоҡа ҡатламы — *верхний тонкий слой бересты*

**ЭРГӘ** (гәйнә, урта урал) *и.* нигеҙ буйы — *завалинка.* Эргә салу (төньяҡ-көнбайыш) тыш яҡтан нигеҙ буйына тупраҡ өйөү — *делать завалинку (снаружи).* Эргә буйы (арғаяш, мейәс). Алар эргә күмәләр сувыҡ кермәскә (гәйнә)

**ЭРГӘЗИМБАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һары умырзая — *горицвет.* Эрғәзембай (дим)

**ЭРГӘ ЙУРҒАН** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* түр йурған — *узкая длинная подстилка на нарах, сшитая из разноцветных клинышков.* Буй йурған (ҡыҙыл), эргәлек (салйоғот)

**ЭРГӘЛЕК** (урта) *и.* ышлыя өлөшө — *часть шлеи*

**ЭРГӘЛЕТАБАҠ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡоштабаҡ — *большая чашка (деревянная или металлическая).* Әүәле эргәлетабаҡларҙы тултырып ит ҡуйалар ине ҡунаҡ алдына

**ЭРГӘЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *р.* эргәнән, йәнәштән — *рядом.* Эргәләүҙән генә икенсе һунарсы бара

**ЭРГӘЛӘШЕҮ** (урта) *ҡ.* асыуланышыу — *ссориться.* Аталары бәлән эргәләшкән

**ЭРГӘНЖӘК** (арғаяш) *и.* алйырҙан — *хомяк*

**ЭРЕ I** (гәйнә) *и.* көрпә — *отруби, высевка муки.* Тауыкларға эре ашаттым

**ЭРЕ II** (урта) *с.* ҙур — *крупный.* Беҙҙеке эре малайлар

**ЭРЕГӘНМАЙ** (арғаяш) *и.* һары май — *топленое масло*

**ЭРЕҒӘЙӘЛЕ** (ҡыҙыл) *с.* ихтирамлы — *уважительный.* Кешегә шу тиктем эреғәйәле у

**ЭРЕЗИНКӘ, ЭРЗИНКӘ** (урта) *и.* калуш — *галоши.* Эрзиңкә (төньяҡ-көнбайыш). Минем эрзиңкәләр тыштамы?

**ЭРЕ-ЙАРЫ** (эй) *р.* эре-төрө *(тегеү)* — *шить на живую нитку.* Эре-йары сәстем дә тектем

**ЭРЕЙКӘ** (дим) *и.* рәшәткә — *решётка*

**ЭРЕ ЙӨН** (салйоғот, урта) *с.* шырт йөн — *грубая шерсть*

**ЭРЕК** (гәйнә, урта урал) *и.* эремсек — *творог.* Элекке көн мин эрек бөккәне пешердем

**ЭРЕКМӘН, ЭРӘКМӘН** (ҡариҙел) *и.* әрекмән — *лопух*

**ЭРЕКПЕЧИН** (гәйнә) *и.* меңъяпраҡ — *тысячелистник*

**ЭРЕКОРТ** (дим, урта) *и.* эреғорт — *трутень*

**ЭРЕЛЕК** (мейәс) *т.* көрпә — *отруби, высевка муки*

**ЭРЕЛӘЙЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эреләнеү — *укрупняться.* Кәртуф эреләйеп киткән

**ЭРЕМАР** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡарағура — *бурьян.* Ауыл араһын эремар үлән алып петкән (эйек-һаҡмар). Эремар үләнтән байтаҡ силос та һалынҡайны (урта)

**ЭРЕМЕК I** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, төньяҡ-көнбайыш) *и.* эремсек — *творог.* Эремек шәңкәһе. Эремекте ҡыһарткanса ҡайнатһаң ҡыһыл эремек була (салйоғот). Эремек пирүге. Эремек билмәне

**ЭРЕМЕК II** (дим) *р.* эрерәк — *крупнее.* Бында ағас эремек

**ЭРЕМЕК III** (дим, эй) *и.* шырт йөн — *грубая шерсть*

**ЭРЕМЕКЛӘНЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ойоп етмәү — *недозакисшее (о молоке)*

**ЭРЕМЕКТЕ I** (төньяҡ-көнсығыш) *с.* эремсекле — *творожный.* Эремекте май

**ЭРЕМЕКТЕ II** (төньяҡ-көнсығыш) *с.* эре, ойошҡан йөнлө — *с грубой, свалявшейся шерстью.* Был һарыҡтың йөнө эремекте булды

**ЭРЕМЕКТӘЛЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* һөттөң эреүе — *свертываться (о молоке)*

**ЭРЕМЕКТӘНЕҮ I** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* ҡырҡылған йөндөң йәки дебеттең оҙаҡ ятыуҙан боҙолоуы — *порча, огрубление шерсти или пуха вследствие выламывания, распыления подшерстка*

**ЭРЕМЕКТӘНЕҮ II** (ҡыҙыл, эй) *ҡ.* һөттөң эреүе — *свертываться (о молоке).* Һөт эремектәнеп киткән

**ЭРЕМСЕКТӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* эремсеккә болғау — *смешивать с творогом.* Май эремсектәү

**ЭРЕНДӘҮ** (арғаяш, ҡыҙыл) *ҡ.* эренләү — *нагнаиваться.* Эреннәү (ҡыҙыл)

**ЭРЕНТЕ** (урта) *и.* кәбәк — *мякина*

**ЭРЕСЕБЕН** (урта) *и.* эре йәшел себен — *зеленая падальная муха*

**ЭРЕСЕМӘК** (гәйнә) *с.* тәкәббер, һауалы — *гордый, высокомерный*

**ЭРЕТЕҮ** (ҡыҙыл, төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* 1. Эремсеккә әйләндереү — *створожить.* Эремсек эретеү. 2. (дим, төньяҡ-көнсығыш, эйек-һаҡмар) Күңелен йомшартыу — *расчувствовать; вызвать прилив чувств.* Йылы һүҙ менән ниндәй кешене эреттем (эйек-һаҡмар)

**ЭРЕТКЕ** (урта) *и.* епшек — *слякоть*

**ЭРЕ ТОҘ** (эйек-һаҡмар) *и.* ата тоҙ — *комковая соль*

**ЭРЕ-ТОРО** (ҡыҙыл, мейәс, эй) *р.* 1. Эре генә — *высокомерно.* Эре-торо һөйҙәш тә ғуй, бик ыуаҡһыуаҡты һөйҙәмә (мейәс). 2. (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) Эре-төрө үлән — *бурьян.* Ҡыҙым, эре-төрө үләнен генә уташтыр (ҡыҙыл)

**ЭРЕ ҮРҘӘК** (дим) *и.* һуна өйрәк — *утка-кряква*

**ЭРЕШКЕ** (гәйнә, урта) *и.* ҙур йәшел себен — *зеленая падальная муха.* Итте ней эрешке боҙа инте (урта). Марле ҡорғач эрешке дә йуҡ, кермей (гәйнә)

**ЭРЕШКЕЛӘҮ** (урта) *ҡ.* эренләү — *гноиться.* Күҙе эрешкеләп китте

**ЭРЕШКӘ** (урта) *и.* эрен — *гной*

**ЭРЖӘ** (ҡариҙел) *и.* рәшә — *мгла, сухой туман.* Эржә төштө. Ыржа (урта урал)

**ЭРЗИНКӘЛӘҮ** (төньяҡ-көнсығыш) *ҡ.* бер уң, бер һул итеп бәйләү — *связать резинкой*

**ЭРИГӘ** (ҡыҙыл) *и.* көлтә ташыу арбаһы — *рыдван, сноповозка.* Әүәле ней көлтәне эригә белән ташынылар. Эрәгә (мейәс)

**ЭРИЖИК** (һаҡмар) *и.* шипкән — *рыжик (растение)*

**ЭРИС** (дим) *и.* һеләүһен — *рысь*

**ЭРИҮӘЙӘТ** (һаҡмар) *и.* риүәйәт — *предание*

**ЭРЙӘ** (урта) *и.* әрйә — *ящик.* Лафкаға бер эрйә һабын эпкилтеләр

**ЭРКЕЛЕҮ** (көнсығыш диалект, урта) *ҡ.* 1. Бер ергә йыйылыу — *скопиться (о воде, животных, народе).* Уның асыҡ йөҙө томорайҙы, күҙенә йәш эркелде (ҡыҙыл). Йөрәгемтә эркелгәнтәрҙең барыһын-барыһын та ҡалтырмай йаҙам (урта). Эркелеп йатҡан һыу. Уның күҙҙәренә йәш эркелде, ҡалай һағындырҙың, берҙәнбер айанысым бит Уралым минең, ҡәзиз йерем (ҡыҙыл). 2. (урта) Ауышыу — *податься в сторону.* Кәбән бер йаҡҡа эркелгән. 3. (урта) Сығыу, үтеү — *пройти.* Тау эркеләбеҙ кискә

**ЭРКЕЛЕШЕП** (төньяҡ-көнбайыш, эйек-һаҡмар) *р.* күп булып — *очень много.* Ҡаз пипиләре былтыр эркелешеп үскән эйе, быйыл начар булды (төньяҡ-көнбайыш). Анда фирме маллары ҡайта эркелешеп (эйек-һаҡмар). Өйгә эркелешеп, леркелешеп килеп инделәр (эйек-һаҡмар)

**ЭРКЕЛТЕҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* быуыу, йыйыу — *накапливать.* Күл йаһап, быуа быуып, һыуҙы эркелтебалалар

**ЭРКЕМ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* күләүек — *лужа.* Эркеңде (мейәс)

**ЭРКЕТ** (дим) *и.* май айраны — *пахта*

**ЭРКЕТ ҠАТЫҠ** (урта) *и.* ныҡ әсе ҡатыҡ — *перекисший катык*

**ЭРКЕТЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* арҡан ярҙамында бал батманын солоҡ умартаға мендереү — *поднятие борти на аркане*

**ЭРКЕҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* көтөү, өйөр — *косяк, стая.* Бер эркеү бүрегә тап булғаннар (эйек-һаҡмар). Балыҡ эркеүе (ҡыҙыл)

**ЭРКӘТӘҮ** (урта) *и.* күн ҡайыш — *кожаный ремень*

**ЭРКӘҮ** (дим) *ҡ.* ырыу — *выбирать паз, пазить*

**ЭРЛӘҮ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта) *ҡ.* иләү — *прясть*

**ЭРМЕК** (арғаяш) *и.* эремсек — *творог.* Эрмәк (гәйнә). Эрмәк пәрәмәче бешердем

**ЭРПЕК I** (гәйнә, урта урал) *с.* епшек — *мокрый (о снеге).* Эрпек ҡарда йул ҡарасы күренә (гәйнә). Эрпәк, өрпәк (ҡыҙыл)

**ЭРПЕК II** (минзәлә) *и.* эрбет ағасы — *кедр.* Без эрпек чикләүегенә бардыҡ

**ЭРЧӘК** (гәйнә) *и.* кәртә — *шест, жердь.* Урамбый ыңғайға изеп йөртәләрей эрчәк күтәреп чучҡаны

**ЭРӘРУЖА** (эй) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный палас*

**ЭРӘҒӘЙЛЕ** (ҡыҙыл, эй) *с.* кешелекле, тәүфиҡлы — *человечный, благодетельный.* Эрәғейәле (урта)

**ЭРӘҒӘЙӘҺЕҘ** (ҡыҙыл, эй) *с.* кешелекһеҙ, тәүфиҡһыҙ — *бесчеловечный, неблагодетельный.* Эрәғейәһеҙ (урта)

**ЭРӘЙЕҮ** (дим) *ҡ.* эреләнеү — *возгордиться*

**ЭРӘМЗӘЛЕ** (минзәлә) *с.* ғауғалы — *скандальный.* Килен эрәмзәле түгел алай бер дә

**ЭРӘНЙЕҮ I** (көнсығыш диалект, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Аш үтмәү ауырыуы — *сужение пищевода.* 2. (эйек-һаҡмар) Ен һуғыу — *подвергаться заболеваниям, порче (под влиянием каких-то мифических сил).* Эрәнйеү һуғылған, зәғиф (эйек-һаҡмар). Эрәнжеү (эй)

**ЭРӘНЙЕҮ II** (урта, эй) *ҡ.* рәнйеү — *сильно обидеться*

**ЭРӘНКЕСЕЗ** (гәйнә) *с.* мәғәнәһеҙ — *бестолковый*

**ЭРӘПӘТЬЕҘ** (эйек-һаҡмар) *с.* килбәтһеҙ — *несуразный*

**ЭРӘСӘ: ЭРӘСӘҺЕНӘ ТӨШӨНӨҮ** (эй) *ҡ.* айышына төшөнөү — *вникнуть в суть дела*

**ЭРӘТ I** (мейәс) *и.* ҡыра, өйөрөм — *длинный ряд сгребенного высохшего сена*

**ЭРӘТ II** (урта) *и.* башлыҡ маңғайына теҙелгән тәңкә — *монета, пришитая к женской шапке.* Минең эрәтем баштан уҡ йуғалды

**ЭРӘТ III** (эйек-һаҡмар) *р.* башта — *сначала.* Тәү эрәттә ауырығанымды белмәй йөрөгәммен

**ЭРӘТ IV** (урта) *р.* рәттән — *подряд.* Эрәт үлә кеше сәсәтмәнән

**ЭРӘТ АУЫРЫУЫ** (салйоғот, төньяҡ-көнбайыш, урта, эйек-һаҡмар, эй) *и.* эндәт — *повальная болезнь*

**ЭРӘТКӘ I** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *р.* 1. Йыш — *часто.* Эрәткә алып ташлайым йурғандан ул сатаҡайҙы (ҡыҙыл). 2. Рәткә — *подряд.* Эрәткә толар бейәләрҙе

**ЭРӘТКӘ II** (гәйнә, салйоғот, урта урал, һаҡмар) *р.* йәнәшә — *рядом.* Эрәткә утырабыҙ (урта урал)

**ЭРӘТКӘ III** (эйек-һаҡмар) *и.* улаҡ — *желоб*

**ЭРӘТЛӘШ** (урта) *и.* йәштәш — *ровесник.* Минең белән эрәтләш ул. Эрәттәш (көнсығыш диалект). Беҙҙең эрәттәш быуай (эй)

**ЭРӘТНӘЙ I** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *и.* эндәт — *повальная болезнь*

**ЭРӘТНӘЙ II** (дим) *с.* ҡәҙимге — *обычный.* Эрәтнәй он

**ЭРӘТСИР** (ҡариҙел) *и.* эндәт — *повальная болезнь.* Эрәт киҙеүе (урта)

**ЭРӘТСИТСА** (ҡариҙел) *и.* ябай ситса — *простой ситец.* Эрәтситсанан ғына күлмәк тектем

**ЭРӘТТӘ** (ҡыҙыл) *р.* яҡын тирәлә — *поблизости.* Был эрәттә ауылдар йуҡ бүтән

**ЭРӘТТӘН** (гәйнә, урта урал, һаҡмар, эй) *р.* йәнәш — *рядом*

**ЭРӘТТӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* өй беренсә йөрөү — *ходить, бродить из дома в дом.* Өй эрәттәп сығып китте. Бөгөнгә эрәттәнең ҡарсыҡ, йетәр (арғаяш)

**ЭРӘТҮК** (эйек-һаҡмар) *р.* рәткә — *подряд.* Эрәтүк эбейләр һыймай, баллары һыйҙырмай. Рәтүк (урта)

**ЭРӘТӘ: ЭРӘТӘ ҠАПҠА** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ел ҡапҡа — *легкие ворота (из жердей)*

**ЭРӘҮЕШ** (көнсығыш диалект, урта) *и.* 1. Холоҡ — *характер.* Эйәртмәгеҙ шу йебегәнде, эрәүеше һыймаҫтай тейләр (урта). 2. (эй) Меҫкен кеше — *бедняжка.* Шул эрәүеш тә йөрөбатҡас әҙәм булып. 3. (эй) Насар эйбер, туҙған кейем-һалым — *старье.* Был эрәүеште кейеп ней

**ЭРӘҮЕШТӘҮ** (көнсығыш диалект) *ҡ.* рәүешенә килтереү, һынына килтереү — *привести в порядок, поправлять*

**ЭРӘҮЕШҺЕҘ** (көнсығыш диалект, урта, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Килбәтһеҙ — *неуклюжий.* 2. Йәмһеҙ — *невзрачный.* Эрәүешһеҙ кеше ине төҫкә (урта). Эрәүешһеһ (салйоғот). 3. (эй) Булдыҡһыҙ — *бестолковый*

**ЭРӘҮКЕ** (мейәс) *и.* серек ағас — *гнилое дерево.* Эрәүке буһа ҡатты-ғатты сөрөгө була

**ЭРӘҮКЕ СЫУЫ** (ҡаризел) *и.* Башҡортостандың Асҡын районы Ҡышлауйылға ауылындағы йылға исеме — *название реки у дер. Кышлауелга Аскинского района Башкортостана*

**ЭРӘШ** (әй) *и.* сепрәк балаҫ — *тряпичный палас*

**ЭРӘШКЕ** (мейәс) *и.* йәш — *слезы.* Эрәшкеhе ғойолоп тик тора күҙҙең

**ЭРӘШӘ I** (урта) *и.* бәҫ — *иней*

**ЭРӘШӘ II** (көнсығыш диалект, туҡ-соран, әйек-һаҡмар) *и.* эре йәшел себен — *зеленая падальная муха.* Эрәшәсебен (һаҡмар)

**ЭРӘШӘ БАЛЫ** (ҡыҙыл, урта, әй) *и.* татлы ысыҡ — *медвяная роса.* Эрәшә балы әскел була (урта). Эрәшә балына ҡортлар үлә (урта)

**ЭС: ЭС-БАУЫРЫ ҠАЛҠЫУ** (урта) *ҡ.* үҫеү — *расти.* Эс-бауыры ҡалҡа барған һайын ул өйҙәге хужалыҡ эштәрен үҙе үтәй баштаны; ◊ эстән һыҙыу (урта) үтә ҡайғырыу — *переживать.* Тыштан кәпәренгән булһа ла, ир кеше күбеһен эстән һыҙа; эс һарҡыуланыу (ҡыҙыл) өҙлөгөү — *осложнение (после родов);* эс бороу (ҡыҙыл, мейәс) эс ауыртыу — *боль в животе;* эс бушау (әй) асығыу — *проголодаться.* Эс бүҫкәреү (ҡыҙыл, мейәс). 1. Асығыу — *проголодаться.* 2. Еңеләйеү — *облегчаться.* Һөйҙәшеп алғас эс бүҫкәреп ҡалды. Эсе йарыҡ (ҡыҙыл) сер тотмау — *выболтать тайну;* эс ҡуңҡылдау (кыҙыл) асығыу — *проголодаться;* эс ташыу (көнсығыш диалект) эс күбеү — *вздуться (о животе);* эс күтәрҙәү (урта, ҡыҙыл) үкенеү — *сожалеть.* Иҫән-һау йөрөп ҡайтыуына эсе көтөрҙәйҙер әле тегенең; эс түбәндәү (ҡыҙыл, мейәс) эс төшөү — *опущение живота;* эс дөбөртәү (ҡариҙел) эс бығырҙау — *урчание живота.* Эсте дөбөртәтә ҡыҙыл эремек

**ЭСБЕЙӘЛӘЙ** (урта) *и.* бейәләй — *варежки*

**ЭС БУРА** (ҡыҙыл) *и.* ҡарабура — *сруб в подполе*

**ЭСЕБЕЙ** (арғаяш) *ҡ.* эсеп ебәр — *попей.* Сәй эсебей

**ЭСЕГЕҮ** (урта урал, әй) *ҡ.* эҫенеү — *привыкать.* Бергә торғанға эсегеп китәләр алар (урта урал)

**ЭСЕКТУН** (ырғыҙ) *и.* кәзә тиреһенән тегелгән тун — *шуба из козьей шкуры*

**ЭСЕНДӘ** (урта) *б.* араһында — *среди, между.* Солоҡ бар инде тау эсендә

**ЭСЕНЕҮ** (арғаяш, мейәс, салйоғот) *ҡ.* эсеү — *попить.* Бала эсенмәй ҙә йоҡтаны (мейәс)

**ЭСЕРГЕЛӘҮ** (дим) *ҡ.* сабыртыу — *высыпать (о сыпи).* Тән ҡып-ҡыҙыл булған, эсергеләгән

**ЭСЕРӘҢКЕ** (ырғыҙ) *с.* һыу эсеүсән — *водохлюп.* Беҙҙең йылҡы үҙе бер эсерәңке тоҡом

**ЭС ИМКӘГЕ** (урта) *и.* бабасыр — *глисты.* Баҡа ыуылтығы булып инә лә ашҡаҙанта үҫеп тешләй эс имкәге

**ЭС ЙЫЛАНЫ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* бабасыр — *глисты*

**ЭСКЕ** (дим, көнсығыш диалект, әйек-һаҡмар) *и.* 1. Иҫерткес эсемлек — *алкогольный напиток.* 2. Мәжлес — *вечеринка с выпивкой.* Эске мәҙелесе. Элек эске буманы ул (әйек-һаҡмар). Эске бар йерҙә күбутырма (көнсығыш диалект)

**ЭСКЕБУРА** (урта) *и.* баҙ бураһы — *сруб в подполе*

**ЭСКЕГҮНДӘК** (арғаяш) *и.* эске күлдәк — *сорочка, нижняя рубашка.* Эскүлдәк (ҡыҙыл, мейәс), эскүлмәк (урта)

**ЭСКЕЙЕМ** (көнсығыш диалект) *и.* эстән кейелә торған кейем — *нательное белье*

**ЭСКЕНИГЕҘ** (һаҡмар) *и.* баҙ бураһы — *сруб в подполе*

**ЭСКЕНӘҮ** (әйек-һаҡмар) *ҡ.* асҡаҡлау, асүҙәк булыу — *изголодаться.* Эскенәп киткәндер инде ураҙа тотоп

**ЭСКЕСҮРЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* кәпрән — *наперник.* Эскесереү (урта урал). Мендәрнең эскесереүе беткән (урта урал)

**ЭСКЕСОЛАН** (әй) *и.* соландағы бүлмә — *отсек в чулане.* Казанка, кәзәңкә, кәзәңке (әйек-һаҡмар), кәзәнке (дим), синдек (ҡыҙыл, мейәс)

**ЭСКЕҺЕҘ: ҺЫУ ЭСКЕҺЕҘ ИТЕҮ** (әйек-һаҡмар) *ҡ.* ныҡ итеп әрләү һ. б. — *сильно ругать и т. д.* Һыу эскеһеҙ итеп ҡайтарҙым малайҙы

**ЭСКИБЕҮ** (урта) *и.* эс ҡатыу — *запор (болезнь)*

**ЭСКӨЙ** (арғаяш) *и.* түрҙәк — *гостиная*

**ЭСКӘКҠОЙРОҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* айырығойроҡ — *уховертка*

**ЭСКӘМИКӘ** (урта) *и.* ете-һигеҙ көлтәнән өйөлгән һоҫлан — *суслон из семи-восьми снопов*

**ЭСКӘМИӘ** (урта) *и.* утын һалып бысыу станогы — *козлы*

**ЭСКӘРЕ: ЭСКӘРЕ ЙАҠ** (дим, ҡариҙел, һаҡмар) *и.* эске яҡ — *внутренняя сторона.* Өйнө эскәре йаҡтан йылыттым. Эскәрге (төньяҡ-көнбайыш, әй)

**ЭСҠАЙАЛЫУ** (урта) *ҡ.* эс ташыу — *вздуться (о животе)*

**ЭСҠАҪТА** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *с.* аҫтыртын— *скрытный.* Эсҡаҫталы (һаҡмар), эсҡарта (ҡыҙыл). Эсҡартаһына һалыбөрөй ул (ҡыҙыл)

**ЭС ҠАТАЛАУ** (ҡыҙыл, әйек-һаҡмар) *и.* эс ҡатыу — *запор (болезнь)*

**ЭС-ҠОРАМТА, ЭС ҠУРАМТА** (гәйнә) *и.* эсҡарын — *ливер*

**ЭС ҠОРОУ** (ҡыҙыл) *и.* эс ҡатыу — *запор (болезнь).* Эс кенә ғоропөттө

**ЭС ҠЫҘЫУ** (мейәс) *ҡ.* һоҡланыу — *восхищаться*

**ЭС ҠЫҪЫУ** (арғаяш) *ҡ.* ҡыҙығыу — *завидовать*

**ЭСЛЕ, ЭС ҠАҪТАЛЫ** (һаҡмар) *с.* аҫтыртын — *скрытный*

**ЭСЛИМ** (ҡыҙыл) *р.* татыу, һәйбәт — *дружно.* Алар эслим торалар

**ЭС-МАУЫР** (арғаяш) *и.* эске донъя — *душа.* Эсмауырыма инден, дан итеп ҡунаҡ итәйем. Эс-пауыр (урта). Эс-пауырына инепара, алсаҡ

**ЭСМӘЙЕЛДЕ** (мейәс) *с.* кеше күңелле — *добрый.* Эсмәйелде кеше. Кесмәйелде (әй)

**ЭСМӘК** (ҡариҙел) *и.* йүргәк — *пелёнка*

**ЭСМӘЛЕК, ЭСМӘЛИК** (ҡыҙыл) *и.* һал ситe, борты — *борт плота*

**ЭССЕЛЕҮ I** (гәйнә, ҡариҙел) *ҡ.* аш талымлау — *привередничать в пище (во время беременности)*

**ЭССЕЛЕҮ II** (гәйнә) *ҡ.* яныу — *опаивать (коня).* Ат эсселей сыуыҡны эсеп

**ЭС-СЫР** (мейәс) *и.* сер — *секрет.* Эс-сырымды һөйҙәпирҙем

ЭС **ТАЛАШЫУ** (урта) *к.* көйҙөрөп, ҡайғыртып торған хәлдәрҙе һөйләп бушаныу, эс бушатыу — *освободиться от душевных тягостей*

**ЭС ТАРТЫУ** (ҡыҙыл) *к.* ҡайғырыу — *печалиться.* Көйләһәм, эс тартам, йыр гилешмәй гешегә

**ЭСТЕ ЖЫЙЫУ** (эй) *к.* һағайыу — *насторожиться.* Шуның йөрөй баштағас та эсемде жыйғайным

**ЭСТЕ-ТЫШТЫ** (эй) *р.* төптө, юҡты — *без основания.* Эсте-тышты йуҡты һөйҙәйһең

**ЭС ТОТЛОҒОУ** (ҡариҙел) *и.* эс ҡатыу — *запор (болезнь)*

**ЭС ТҮБӘНДӘҮ** (ҡыҙыл) *к.* эс төшөү — *опущение живота.* Эс түбәннәү (дим, эйек), эс һарҡыуланыу (ҡыҙыл)

**ЭСТӘП: ХӘЙЕР ЭСТӘП** (туҡ-соран) *р.* хәйерсеrange — *попрошайничая.* Бына күрәһегеҙ, ун ике йыл хәҙер ошолай тәҙрәнән-тәҙрәгә, тупһанан-тупһаға йөрөп, хәйер эстәп йән аҫырайым

**ЭС ҮТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *и.* эс китеү — *понос.* Эс үтеүе ауырыуы белән үлде тине

**ЭСӘГАРТЫУ** (ҡыҙыл, мейәс, эйек-һаҡмар) *к.* малды һуйғас эсәген таҙартып йыуыу — *очищение и мытье кишок после убоя скота.* Эсәк арытыу (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар). Эсәктәрҙе тиҙерәк арыта һалығыҙ

**ЭСӘГАЛМАШЫУ** (салйоғот) *к.* эсәк сейәләнеү — *заворот кишок.* Эсәге ашыныу, эсәк салмашыу (арғаяш)

**ЭСӘГЕ** (туҡ-соран) *и.* эсәк — *кишка.* Бисәләр эсәгене таҙартып йыуып ҡайттылар Туҡҡа барып

**ЭСӘК БҮРТТЕРЕҮ** (ҡыҙыл, урта) *к.* эсәк бешекләү — *ошпаривание кишок.* Эсәк пешекләү (ҡариҙел), эсәк бешекләү (эйек-һаҡмар), эсәк бешектәү, бешәләү, бешәгеләү (ҡыҙыл, мейәс)

**ЭСӘКӘЙ** (һаҡмар) *с.* эсә торған — *питьевая.* Бер эсәкәй дарыу ғына эс әле, былай бөтәкәй түгел ауырыуың

**ЭҪӘР** (гәйнә) *с.* иҫәр — *глупый*

**ЭҪАЛҒЫС** (арғаяш) *и.* төнлөк — *вентиляционное отверстие (в банях)*

**ЭҪЕ КҮРЕҮ** (урта) *с.* яҡын күреү — *считать близким*

**ЭҪЕЛЕК** (эйек-һаҡмар) *и.* усаҡ — *очаг.* Эҫелегендә йағып йебәр. Мейескә терәтеп эҫелек эшләттем

**ЭҪЕЛӘБӨРӨҮ** (эй) *к.* аш талымлау — *привередничать в пище (во время беременности).* Лимундан эҫеләбөрөйөм. Эҫеләү (арғаяш)

**ЭҪЕЛӘҮ** (эйек) *к.* тары ярмаһын ҡаҙанда йылытып алыу — *пригреть просо в казане*

**ЭҪЕ МӘЛЕНДӘ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, ырғыҙ) *р.* ҡыҙыуында, ваҡытында — *вовремя.* Әйҙәгеҙ, эҫе мәлендә эштәп алайыҡ (ҡыҙыл)

**ЭҪЕНЕҮ** (ырғыҙ) *к.* яҡын күреү — *считать близким*

**ЭҪЕРГӘНЕҮ** (ҡыҙыл, урта) *к.* 1. Тән температураһы күтәрелеү — *температурить.* 2. (урта) Сабыртыу — *высыпать (о сыпи).* Эҫергәләнеү, эҫергеләү (дим)

**ЭҪЕРЕҮ** (һаҡмар) *к.* эҫеү — *нагреться.* Эһереү (ҡыҙыл). Өй эһереп китте, ишегеңде асыбәр (ҡыҙыл)

**ЭҪЕРТЕҮ** (һаҡмар) *к.* эҫетеү — *разогреть.* Араҡыны эҫертеп айаҡҡа баҫам, һыҙҙағанын бөтөрә

**ЭҪЕҺӨТ** (эйек-һаҡмар) *и.* һөҙһәт — *удод.* Һөтөһөҙ (урта), һөҙөһөт (ҡыҙыл)

**ЭҪКЕЛЛЕ** (ырғыҙ, эйек) *с.* тынғыһыҙ — *беспокойный.* Эҫкелле йатып, йоҡлай алманым (эйек-һаҡмар). Бөгөн йоҡлап булманы, әллә ниндәй эҫкелле йоҡо булды (ырғыҙ)

**ЭҪКӘКТӘҮ** (арғаяш, урта урал, эй) *к.* 1. Ашыҡтырыу — *торопить.* Атты эҫкәктәбутыра (арғаяш). 2. Бер ҙә юҡҡа елкенеү, сыпрандау — *беспокоиться.* Шул Рәхимәнең эҫкәктәүе бөтмәне, һис түҙмәй (урта урал). 3. (эй) Төртмә телләнеү — *колкословить.* Һин һаң эҫкәктәмәһәң булама. 4. (эй) Киреләнеү — *упрямиться*

**ЭҪКӘЛӘКЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *к.* юхаланыу — *угодничать.* Эҫкәләкләп алдаштырмаҡ, айнытмаҡ булаһыңмы?

**ЭҪМӘ** (урта) *и.* тәнгә эре генә булып ҡалҡҡан ҡыҙыл сабыртма — *сыпь.* Уға эҫмә ғалҡҡан

**ЭҪТӘТ** (мейәс) *и.* батҡаҡ — *слякоть, грязь*

**ЭҪТӘТТЕК** (мейәс) *и.* батҡаҡлыҡ — *топь*

**ЭҪТӘҮ** (арғаяш) *к.* эҙләү — *искать*

**ЭҪӘРГӘЛӘНЕҮ** (дим) *к.* эҫелектән тән сабыртыу — *потница (болезнь)*

**ЭТ: ЭТ АУЫҘЫНА ТАЯҠ ТЫҒЫУ** (эй) *к.* үсектереү, кешенең йәненә тейеү — *дразнить, нервировать;* эт бүреге кейеү (ҡариҙел, урта) эт күрмәгәнде күреү — *подвергаться к таким испытаниям, которых и собака не испытывала.* Туйҙа кейәүгә эт бүреге кейҙереп бөтәләр (ҡариҙел); эт бәйҙәһәң торғоһоҙ (ҡыҙыл) ныҡ һыуыҡ — *очень холодно.* Унын өйөндә эт бәйҙәһәң торғоһоҙ һыуыҡ; эт булыу (эйек-һаҡмар) йонсоу — *изводиться.* Эт пулып арыным. «Тайы ат пуғанса, эйәһе эт пуған» *(мәҡәл);* эт ҡәҙерһеҙе (төньяҡ-көнсығыш) яҡшылыҡты белмәй торған кеше — *неблагодарный;* эт һуғарыу (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран) эшһеҙ йөрөү — *бездельничать.* Мында уны һымаҡ эш ҡалдырып, эт һуғарып йөрөүселәр бөтмәҫ (ҡыҙыл)

**ЭТАЙАҠ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Эткә аш һалыу өсөн ағастан ырылған бәләкәй генә ялғаш — *маленькое деревянное корытце для кормления собаки.* 2. (ҡыҙыл) Тирмән мөйәшәһе мороно — *нос засыпки (воронки из досок на мельнице для засыпки зерна)*

**ЭТАЛАБУҒА** (урта) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

**ЭТАЛАҠАҪ** (арғаяш) *и.* ҡыр ҡаҙы — *дикий гусь*

**ЭТАРҠА I** (урта) *и.* 1. Йылмайаҡ — *пройдоха.* 2. (ырғыҙ) Ығыш — *копуша*

**ЭТАРҠА II** (һаҡмар) *и.* 1. Ауыш ябылған ҡыйыҡ — *крыша со скатом;* этарка йабыу *(ауыш ябыу)* — *крыть со скатом.* Ларҙың өҫтөн этарка йабалар. 2. (арғаяш) Кәҫ менән ябылған ҡыйыҡһыҙ тупаҡ өй — *дом, крытый дерньюю*

**ЭТАРҠА III** (арғаяш) *и.* ҡыҫма, көлтәләрҙе кәртәгә ҡаҙыҡ менән бер аҙ күтәртеп ике яҡлап һөйәү — *приспособление из жердей для сушки снопов*

**ЭТАРҠА IV** (һаҡмар) *и.* эткә аш һалыу өсөн ағастан ырылған бәләкәй генә ялғаш — *маленькое деревянное корытце для кормления собаки.* Эт аштауы (арғаяш, салйоғот)

**ЭТАУЫҘ** (мейәс) *и.* 1. Ҡыпһыуыр — *клещи.* 2. Бөгәзе *(сарлағанда балта уңҙсенә кейҙерә торған ҡорамал)* — *кольцеобразное железное приспособление*

*при точке топора.* 3. (эй) Һүгенгән кеше — *бранчливый*

ЭТБАЛА (төньяҡ-көнбайыш) *и.* көсөк — *щенок*

ЭТ БАЛЫҒЫ (мейәс, урта, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Йыланбалыҡ — *угорь.* Эт балығы тәмне була (урта). Әмөкө (урта). 2. (төньяҡ-көнбайыш) Ташбаш — *пескарь.* Ташбашны эт балығы ла тибеҙ аны безнең илдә. 3. (арғаяш, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) Сүмесбаш — *головастик*

ЭТБАУЫР (урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* эт муйылы — *крушина ольховидная.* Этбауыр суҡ ҡара йемешле, әҙәм ҡарағыһыҙ була ул (эйек-һаҡмар). Этбауыр ағасын әҫпеһе ғалкҡан кешегә ҡайнатып эсерәләр (эйек-һаҡмар). Тамаҡ ауыртканда ғайнатып эсәләр. Эт бауыры (дим, урта, урта урал, эйек-һаҡмар), этпауыр (эйек-һаҡмар)

ЭТ БОРСАҒЫ (һаҡмар) *и.* эт ҡарағаты — *паслен черный*

ЭТБӨТКӨҺӨҘ (һаҡмар) *р.* бик күп — *множество.* Сәскә этбөткөһөҙ беҙҙә

ЭТБҮКСӘСЕ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төпөш — *коротыш*

ЭТБӘКЕС, ЭТМӘКЕС, ЭТМӘКӘЙ, ЭТПӘКЕС (эйек-һаҡмар) *и.* тау йыуаһы — *лук горный*

ЭТ ДЕГӘНӘГЕ (арғаяш, салйоғот) *и.* 1. Гөлйемеш — *шиповник.* 2. (ҡыҙыл) Тегәнәк — *репей*

ЭТЕ-БЕТЕ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* барыһы ла — *все.* Авылның эте-бете, берсе дә ҡалмаған

ЭТЕКӘЙ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ташбаш — *пескарь.* 2. (эй) Этеш — *ерш*

ЭТЕМЕШ (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ваҡсыл — *мелочный*

ЭТЕМҮС (ҡариҙел) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

ЭТЕНЕҮ (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* тотлоғоу — *заикаться*

ЭТЕНМЕШ (гәйнә, ҡариҙел) *с.* тиҫкәре — *упрямый.* Бер йомош ҡушып тыңлатып булмай, бик этенмеш ул (гәйнә). Этеңмеш (ҡариҙел), эт жиңмеше (урта урал)

ЭТЕП-ТӨРТӨП: ЭТЕП-ТӨРТӨП ҺӨЙЛӘШЕҮ (урта) *ҡ.* шаярыулы һөйләшеү — *разговаривать игриво.* Апай, ташла әле шул этеп-төртөп һөйләшеүеңте, уйын ҡайғыһымы ни

ЭТЕСӘК (урта) *и.* ал сәскәле сырмалсыҡ үлән — *вьюнок полевой.* Этечәк печин (гәйнә)

ЭТЕҮ (ҡыҙыл, урта) *ҡ.* 1. Ҡаршы төшмәү, кешенең үҙ теләгенә ҡуйыу — *не воспрепятствовать.* Ыңғайына этеп кенә йебәр, әйҙә, бәләнән башайыҡ (ҡыҙыл). Ғүмер буйы бөтә күңелем, саф йөрәгем белән өҙөләп йараткан кешемте йатларға үҙем этәм түгелме (урта). 2. (эйек-һаҡмар) Көсләп биреү — *навязывать.* 3. (ҡыҙыл, һаҡмар) Ҡыйырһытыу — *обижать.* Этелеп ғүмерем үтте, тине әсәһе (һаҡмар). Этәү (ҡариҙел). Этәп төшөрә. 4. (гәйнә) Ҡыҫтау — *уговаривать.* Этмәң әле шул чәйегез белән

ЭТ ЖИЛӘГЕ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* мәрүәр ағасы — *бузина красная*

ЭТ ЖИМЕШЕ (ҡариҙел) *и.* бүре емеше — *волчья ягода*

ЭТЖУРТЫШ (гәйнә) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

ЭТ ЗЕЛПЕСЕ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* осҡат — *бересклет.* Эт зелпесе бар, аны ашамайлар, ҡызыл йемеш

ЭТ ИМСӘГЕ (дим, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *и.* күберәген ҡултыҡ аҫтына сыға торған ҙур шеш — *карбункул подмышечный*

ЭТ ЙАЛҒАШЫ (урта, эйек-һаҡмар) *и.* эткә аш һалыу өсөн ағастан ырылған бәләкәй йалғаш — *маленькое деревянное корытце для кормления собаки*

ЭТ ЙАТЫУ, ЭТ ЙАТЫШ (арғаяш, мейәс) *и.* 1. Түңгәклек — *кочкарник.* Уйғылды-сыйғылды тумарҙыҡты эт йатыш тибеҙ, бесән сабыуы ла насар (арғаяш). 2. Урамдағы баткаҡ — *слякоть.* 3. (ҡыҙыл) Тигеҙһеҙ ер — *неровная местность.* 4. (урта) Һикәлтәле юл — *ухабистая дорога*

ЭТ ЙЕМЕШЕ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Осҡат — *бересклет.* 2. Энәлек — *боярышник.* 3. (арғаяш, дим, салйоғот, урта урал) Гөлйемеш — *шиповник.* 4. (арғаяш, эй) Баланға оҡшаш ашарға ярамаған тәлгәш емешле ағас — *растение, похожее на калину с несъедобными ягодами.* Күк төҫтө, тәлгәштәнеп утыра (арғаяш). Нәҡ тә бөрҙөгән гүк була (эй)

ЭТ ЙЕЙМӘҪ (һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* эт тә ашамаҫ — *даже собака не съест.* Ауыҙынан сыҡҡанды эт йеймәҫ

ЭТЙОРОШ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* этеш — *ерш.* Этйурыш, этйүреш (урта урал)

ЭТЙЫҒЫШ (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *с.* 1. Тырыш — *усердный.* Эй этйығыш кеше лә инде һин, тәки эштәп ҡуйған (ҡыҙыл). 2. Үҙ һүҙле — *упрямый.* Ҡалай бер этйығыш кеше (ҡыҙыл). 3. (һаҡмар) Мыжыҡ — *ворчливый.* 4. (ҡыҙыл) Бәйләнсек — *назойливый.* 5. (эйек) Ныҡышмалы — *настырный.* 6. (ҡыҙыл) Әрһеҙ — *беззастенчивый*

ЭТ ЙЫУАҺЫ (урта) *и.* урманда үҫкән, эт ашай торған яҫы япраҡлы үлән — *широколистное лесное растение, которого охотно едят собаки*

ЭТКЕ (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тиреҫ таҙартыу ҡоралмалы — *приспособление для чистки навоза*

ЭТ КЕСЕРТКӘНЕ (дим) *и.* һаңғырау кесерткән — *глухая крапива*

ЭТ КӨПШӘҺЕ (эйек-һаҡмар) *и.* шыма көпшә — *дягиль*

ЭТ ҠАЙЫШЫ (урта) *с.* 1. Белекһеҙ — *непонятливый.* 2. Күндәм — *послушный.* 3. (эй) Тиҫкәре — *упрямый.* 4. (ҡыҙыл, туҡ-соран) Әрһеҙ — *беззастенчивый.* 5. (төньяҡ-көнсығыш) Сабыр, түҙемле — *терпеливый (о человеке)*

ЭТ ҠАРАҒАНЫ, ЭТ ҠАРАҒАТЫ (салйоғот, эй) *и.* эт муйылы — *крушина ольховидная*

ЭТҠАҪТА (урта) *с.* рахит ауырыуы — *рахит.* Өсйәнкә әйләнгән, этҡаҫта буған, эттән ашаҡлатырға кәрәк, Өсйән (ырғыҙ). Әллә өсйән булған инде, бер тынмай илай, эсе лә күбеп тора

ЭТҠОЛАҠ (дим, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Атҡолаҡ — *щавель конский.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Юл япрағы — *подорожник*

ЭТҠОРОШ (салйоғот) *с.* ауырыусан — *хворливый*

ЭТҠОСАҠ (эйек-һаҡмар) *и.* һауаға атып ебәрелә торған туҙҙан яһалған уйынсыҡ — *название игрушки*

ЭТ ҠУҘҒАЛАҒЫ (мейәс) *и.* ашарға ярамаған ҡуҙғалаҡҡа оҡшаш үлән — *щавель курчавый.* Йапрағы йаҫы, кеше ҡуҙғалағы шикелде

ЭТ ҠӘҘЕРҺЕҘЕ (мейәс) *с.* ҡәҙерҙе белмәгән — *неблагодарный*

**ЭТЛЕК I** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* тырышлыҡ — *старание.* Уны эшләп бөтөрөү минең этлек (дим)

**ЭТЛЕК II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* йыланбалыҡ — *угорь.* Этлекәй (ҡариҙел), этләй, этләс, этләч (төньяҡ-көнбайыш)

**ЭТЛЕКЛЕ** (урта) *с.* 1. Аҫтыртын уҫал — *зловредный.* Шу хәҙәре этлекле, шу хәҙәре боҙоҡ ине. 2. Шаян — *шутник*

**ЭТЛЕК ТАМЫРЫ** (ҡариҙел) *и.* этлек — *бубенчик лилиелистный*

**ЭТЛЕ-МАСЛЫ** (ҡариҙел) *р.* талашып-йыртышып — *со скандалом.* Алар этле-маслы йәшәнеләр. Этле-мәҫле, этте-мәсле (дим), этле-мырлы (дим, эй). Этле-мырлы йәшәп йатабыҙ әле (эй)

**ЭТЛЕ-ТАРТЫШЛЫ** (эйек-һаҡмар) *с.* тартышлы, талашлы — *скандальный.* Этле-тартышлы эштең ни йүне булһын

**ЭТЛӘНЕҮ-ГҮРЛӘНЕҮ** (урта) *ҡ.* ауырлыҡ күреү, яфа сигеү — *испытать нужду, мучиться*

**ЭТМОРОН** (көнсығыш диалект, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Гөлйемеш — *шиповник.* 2. (урта, эйек-һаҡмар) Оҫкат — *бересклет.* 3. (дим, эйек-һаҡмар) Эт ҡарағаны — *крушина ольховидная.* 4. (арғаяш) Себен аулаусы үлән — *мухоловка*

**ЭТ МУЙЫЛЫ** (дим, ҡариҙел, урта, эйек-һаҡмар) *и.* бүре емеше — *волчья ягода*

**ЭТ МУНСАҒЫ** (һаҡмар) *и.* эт ҡарағаты — *паслен черный*

**ЭТМӘЙ** (гәйнә) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

**ЭТМӘКӘЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* тау йыуаһы — *лук горный.* Этмәкес (ҡыҙыл), этпәкес (һаҡмар)

**ЭТ МӘМЕЧЕ** (гәйнә) *и.* алыҫ юлға сығыр алдынан йола буйынса эткә бешерелгән аш — *суп, сваренный для собаки по обычаю перед дальней дорогой*

**ЭТ МӘМӘЙЕ** (дим) *и.* эт ҡарағаты — *паслен черный*

**ЭТНЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ташбаш — *пескарь*

**ЭТОЛОТОП** (урта) *р.* ҡойоп — *ливнем.* Этолотоп йауҙы кисә йамғыр

**ЭТ ПАЛЫҒЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* этеш — *ерш*

**ЭТПАУЫР** (эйек-һаҡмар) *и.* эт муйылы — *крушина ольховидная*

**ӘТПОРӨН** (гәйнә) *и.* гөлйемеш — *шиповник*

**ЭТ СЫБЫҒЫ** (урта урал) *и.* гөлйемеш — *шиповник*

**ЭТ СЫУАҠ** (урта) *и.* ҡояшлы көҙгә һалҡын көндәр — *солнечные осенние прохладные дни*

**ЭТ ТАБАНЫ** (мейәс) *и.* 1. Һиҙәп үлән — *алтея.* 2. Дөйә табан үләне — *вид лесной травы «верблюжья стопа».* 3. (урта) Һиҙәп үләненә оҡшаш, тик ныҒыраҡ бөрөлөп торған үлән — *вид лесной травы «собачья стопа»*

**ЭТ ТАЛПАНЫ** (урта) *и.* ҙур аҡ төҫтәге мал талпаны — *клещ собачий*

**ЭТ ТАМЫРЫ** (ҡариҙел) *и.* этлек — *бубенчик лилиелистный*

**ЭТ ТЕГӘНӘГЕ** (урта) *и.* 1. Шайтан тайағы — *чертополох.* 2. (төньяҡ-көнбайыш) Йәбешкәк — *липучка*

**ЭТТЕШ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡаҙыҡ теш — *клык*

**ЭТТЕШ ҮЛӘНЕ** (мейәс, салйоғот) *и.* күрән — *осока.* Тымғыйоҡто гүлдә эттеш үләне айаҡты сыйа (салйоғот)

**ЭТ ТЕШТЕ ГАЙЫН** (арғаяш) *и.* гөлйемеш — *шиповник*

**ЭТ ТУБЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* ҡуянтубыҡҡа оҡшаған илертә торған үлән — *одурманивающая трава, похожая на дикую морковь*

**ЭТ ТӘГӘСЕ** (мейәс, салйоғот) *и.* эткә аш һалыу өсөн ағастан ырылған бәләкәй генә ялғаш — *маленькое деревянное корытце для кормления собаки.* Эт һауыты (арғаяш)

**ЭТТӘЙ УҢЫУ** (эй) *ҡ.* ныҡ уңыу — *сильно повезти.* Шул ғыҙҙы аһа, эттәй уңа ине лә

**ЭТ ҺАБЫНЫ** (ҡыҙыл) *и.* һабын сәскәһе — *мыльнянка.* Ҡып-ҡыҙыл сәскә ата, һыуҙап ыуалаһаң күпереп китә

**ЭТ ҺӨЛӨГӨ** (һаҡмар) *и.* сүмесбаш — *головастик*

**ЭТ ШАМБЫҺЫ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡултыҡ аҫтына сыҡҡан ҙур шеш — *карбункул подмышечный*

**ЭТ ШОМОРТО** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* эт муйылы — *крушина ольховидная*

**ЭТЫҒЫШ** (һаҡмар) *с.* 1. Ялҡытҡыс — *надоедливый.* 2. Ығыш — *медлительный (о человеке).* Эй, йөрөтмә шуны, этығышты

**ЭТЫЖЫҠ** (ҡыҙыл) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

**ЭТЫЛАҠЫ** (һаҡмар) *и.* этеш — *ерш*

**ЭТ ӘСӘГЕ** (көнсығыш диалект, урта, урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Ал сәскәле сырмалсыҡ үлән — *вьюн полевой.* 2. (урта) Кесерткән ебәге — *повилика полевая*

**ЭТӘГЕС АРБА** (мейәс) *и.* йәш баланы атларға өйрәтеү өсөн эшләнгән өс тәгәрмәсле арба — *ходули (детские).* Этмарба (ҡыҙыл)

**ЭТ ӘҘӘМЕ** (эйек-һаҡмар) *и.* бер кем дә — *никто.* Баллары утауға гитеп пөтһә, эт әҙәме ҡалмай ауылда

**ЭТӘКТӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* ситләтеү — *обижать*

**ЭТӘЛӘКӘС** (һаҡмар) *и.* ыҙа — *мучение.* Беҙ ул саҡта этәләкәс сиктек

**ЭТӘМБАЙ** (дим) *и.* бүлтерек — *приплод у овец и коз, родившийся летом*

**ЭТӘНЕҮ** (мейәс) *ҡ.* этләнеү — *измучиться*

**ЭТӘРГЕ** (арғаяш) *и.* этәлге — *кречет (самка)*

**ЭТӘТЕК** (арғаяш) *и.* гөлйемеш — *шиповник*

**ЭТӘҮ** (дим, ҡариҙел, урта) *ҡ.* этеү — *толкать.* Кит әле бынан тип, ул мине этәп йебәрҙе (дим). Этәмә әле кешене (урта)

**ЭҮ** (гәйнә) *и.* өй — *дом.* Әйҙәң, безнеке эүгә керийек

**ЭҮЕҮ** (гәйнә) *ҡ.* өйөү — *складывать.* Ул утынны эүеп ҡуйҙы

**ЭҮКӘРТӘ** (гәйнә) *и.* ишегалды — *двор*

**ЭҮӘЛӘҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* әүәләү — *валять.* Күмәчне эүәләп салалар

**ЭҺЕЛӘҮ** (салйоғот) *ҡ.* талымлау — *быть разборчивым в пище*

**ЭҺЕНЕҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* эйәләшеү — *привыкнуть.* Урындыҡ пирмәйем тегеләргә, эһенеп китерҙәр тип, иҙәндә йатҡырам (ҡыҙыл). Эһенеп китерһең ҡалаға (эйек-һаҡмар)

**ЭҺЕҺӨТ** (ҡыҙыл) *и.* һөҙһөт — *удод*

**ЭҺКӘК** (ҡыҙыл, салйоғот) *и.* эҫкәк — *пинцет*

**ЭЧЕРЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* сереү — *сгнить.* Шифер эчермәй диде. Чөгендерләре эчеребетте дә. Гел эчергән салам бирәләр

**ЭЧИТ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сит — *чужбина.* Эчиткә-нейгә китсә, гел мине ҡалдырды

**ЭЧКӘРЕ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Эске — *внутренний.* Эчкәре йағында сазлыҡ, басыуын да Борғаҙаҡ тейләр. 2. *р.* эскә табан — *вовнутрь.* Бик эчкәре салдым буғай

**ЭЧ-ҠУРАМТА** (гәйнә) *и.* эс-ҡарын — *внутренность*

**ЭЧЛИПМӘК** (гәйнә) *и.* бәлеш — *пирог*

**ЭЧМӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һырып тегелгән түшәк — *стеганая подстилка.* Эчмәк тегеп эйәр урынына сала. Эчмәкте ҡатлы-ҡатлы сырып салалар балалар астына бишектә йатырға (гәйнә)

**ЭЧ ТОТОУ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* эс ауыртыу — *боль в животе.* Эче тотоп бардымикән?

**ЭЧӘЙ** (гәйнә) *и.* сәй — *чай.* Ҡайын эчәйе

**ЭШ: ЭШ БАШЫНДА УТЫРЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* етәксе булыу — *быть руководителем.* Улым да эш башында утыра; ◊ эш бумау (һаҡмар) һауыҡмау — *не выздоравливать.* Ат маңҡа буһа, эш бумай; эшкә үлеү (мейәс, әй) эште бирелеп эшләү — *работать с душой;* эшен төшөрөү (эйек-һаҡмар) килештереү, урын-еренә еткереү — *делать складно.* Әүәле эшен төшөрөп китә торғайнылар ғуй; эшен китереп (эйек-һаҡмар) шәп итеп — *как следует, как подобает.* Эшен китереп йәшәргә ине, именселек кәрәк

**ЭШЕРЕЛЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* бүҫерелеү — *обвалиться*

**ЭШЕТЕҮ** (арғаяш, ҡариҙел, салйоғот, урта, урта урал, эйек-һаҡмар, әй) *ҡ.* ишетеү — *слышать*

**ЭШ ЙӨРӨТӨҮ** (дим) *ҡ.* юллау — *ходатайствовать*

**ЭШ-КӨШ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* эш-маҙар, мәшәҡәт — *дела, заботы.* Эш-көш бөткәс кил. Эш-күш (төняҡ-көнбайыш)

**ЭШКҮРЕМ** (урта) *с.* эшсән — *работящий.* Бик эшкүрем бала

**ЭШКӘ ҠОНО** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта, әй) *с.* эшкә тырыш — *жадный до работы.* Эшкә ғоно кеше тырышып эштәй (әй). Бы тикте лә эшкә ҡоно, эшкә туймаҫ булыр икән (мейәс). Эшкә ҡомар (төньяҡ-көнбайыш), эшкә ҡоморо (дим)

**ЭШКӘРЕҮ, ЭШКӘГЕРЕҮ** (мейәс) *с.* яраҡлы булыу — *быть годным*

**ЭШКӘРӘ** (гәйнә, ҡариҙел) *м. һ.* шул кәрәк — *поделом.* Әйбәт, былған, эшкәрә (гәйнә)

**ЭШКӘРЕЛМӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* эшкинмәү — *быть негодным.* Эшкәрелмәй бүтән нәмәгә кәзә йөнө

**ЭШКӘТӘҮ БУРАН** (эйек-һаҡмар) *с.* һырма буран — *липкий буран.* Эшкәтәү буран башланды

**ЭШКӘ ҮКЕМ** (урта) *с.* эшкә тырыш — *старательный*

**ЭШЛЕЙӘ** (арғаяш, урта) *и.* ышлыя — *шлея*

**ЭШЛЕК** (гәйнә) *и.* эш — *работа.* Ниндәй эшлеккә урнаштың?

**ЭШЛҮН** (урта) *и.* шленка *(шерсть).* Эшленка, эшлүңкә (дим, һаҡмар), өшләңкә (урта), эшлүмкә (мейәс), эшлүңкә (эйек-һаҡмар)

**ЭШЛҮН ҺАРЫҒЫ** (урта) *и.* нәҙек йөнлө тоҡом һарыҡ — *шленка (овца)*

**ЭШЛӘПӘ I** (дим, салйоғот, урта) *и.* шәм ҡалпағы — *абажур*

**ЭШЛӘПӘ II** (салйоғот) *и.* алты көлтәнән өйөлгән һоҫлан — *суслон*

**ЭШМӘКӘЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* эшсән — *работящий*

**ЭШНӘ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *и.* әшнә — *друг.* Зариф эшнәң дә ҡайтыр инде оҙаҡламай, тине йеңгәм (ҡыҙыл)

**ЭШ ӨКШӨҮ** (эйек-һаҡмар) *р.* эш насар — *дела плохи*

**ЭШ ТАЙЫУ** (арғаяш) *ҡ.* ҡулдан эш китеү — *освободиться от работы.* Эш тайҙы инде минән

**ЭШ ТҮГЕЛ** (эйек-һаҡмар) *р.* харап — *очень.* Бәрәңге эш түгел уңған.

**ЭШ ҺЫНҺЫҘ** (һаҡмар) *с.* килбәтһеҙ — *неуклюжий*

**ЭШӘМНЕК** (дим) *и.* атлама — *стропила.* Өйҙөң эшәмнеге

**ЭШӘНЕКЛЕ** (эйек-һаҡмар) *с.* ышаныслы — *надежный.* Ул эшәнекле кеше. Эшәнесте (ҡыҙыл)

**ЭШӘНЕҮ** (арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* ышаныу — *надеяться.* Атыңа, ҡатыныңа эшәнмә, этеңә эшән *(мәҡәл).* Көҙгө боҙға көҙгөләй буһа ла эшән, йаҙғы боҙға йарҙай буһа ла эшәнмә *(мәҡәл).* Ул йалғансының һүҙенә эшәнмәгеҙ, алдай ул (ҡыҙыл). Кәмфит бөткән тиһәң дә эшәнмәй (мейәс). Бер һәнәк бесәнем йуҡ, калхузға эшәнеп торам (мейәс)

**ЭШӘНЕШЛЕ** (һаҡмар) *с.* ышаныслы — *надежный.* Аның эшәнешле кешеһе буған

# Ә

**ӘБДӘН, ӘПТӘН, ӘПТӘМ** (туҡ-соран) *р.* бөтөнләй — *окончательно, совсем.* Ҡаранға йәйәү йөрөнөк, әбдән хәлдән тайып, ҡойаш байыуға барып керә торғайныҡ. Абдан (ырғыҙ)

**ӘБҘӘН-МӘҢГЕ** (әй) *р.* борон-борондан — *издавна.* Әбҙән-мәңге кигән йола

**ӘБЕГЕҮ** (урта) *ҡ.* йонсоу — *утомляться, изнуряться.* Йәйәү оҙам йул йөрөп әбеккән Сөнәғәт бик оҙаҡ йоҡланы

**ӘБЕГӘР** (арғаяш) *и.* меҫкен — *бедняжка*

**ӘБЕЙ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* 1. Ҡәйнә — *теща.* 2. (ҡыҙыл, минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта, һаҡмар, ырғыҙ) Ирҙең үҙ ҡатынына өндәшеү һүҙе — *слово обращения мужа к жене.* Әбей, сәй утыртһана ҡунаҡларға (һаҡмар)

**ӘБЕЙ БАЛЫҒЫ** (эйек) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

**ӘБЕЙ ҒОЙАШЫ** (мейәс) *и.* әбей сыуағы — *осенний солнцепек*

**ӘБЕЙ ҒЫЛЫ** (арғаяш) *и.* ҡылған — *ковыль*

**ӘБЕЙЕШКӘ** (урта) *и.* әбекәй — *бабусенька.* Әбейеүшкә (ҡыҙыл)

**ӘБЕЙ ЙЕМЕШЕ** (эйек-һаҡмар) *и.* дунала — *боярышник*

**ӘБЕЙКҮЧ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ӘБЕЙ ҠАЛАҠ** (мейәс, эйек-һаҡмар) *и.* туп һуғыу — *«Лапта» (игра)*

**ӘБЕЙ ҠАМЫРЫ** (дим) *и.* дунала — *боярышник*

**ӘБЕЙ ҠОЙАШЫ** (минзәлә) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ӘБЕЙ СЫУАҠ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ӘБЕЙ СӘСЕ** (арғаяш, мейәс) *и.* ҡылған — *ковыль.* Әбейсәс (төньяҡ-көнбайыш), әби сәсе (дим)

**ӘБЕЙ СӘСКӘҺЕ** (төньяҡ-көнбайыш, һаҡмар) *и.* үгәй инә үләне — *мать-и-мачеха*

**ӘБЕКӘЙ: ЙАҠЫН ӘБЕКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әсәйҙең әсәһе — *бабушка по матери*

**ӘБЕКӘЙ: ЙЫРАҠ ӘБЕКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* атайҙың әсәһе — *бабушка по отцу*

**ӘБЕН** (гәйнә) *и.* әүен — *овин*

**ӘБЕРГӘЛӘНЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* юғалып ҡалыу — *теряться.* Ул гилеп күренгәстен әллә нигә әбергәләнеп тә гиттем

**ӘБЕРКӘ** (дим, урта) *и.* балитәк — *оборка.* Абурка, аберка, абырка (дим), әүеркә (урта)

**ӘБЕРСӘ** (мейәс, урта) *и.* ҡурай еләге — *малина*

**ӘБЕРҺЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* алдан һиҙеү, тойоу — *предчувствовать.* Алдан уҡ күңелем әберһенеп йөрөнө, барыбер килешә алманылар, айырылдылар

**ӘБЕРӘКМӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* әрекмән — *лопух.* Эперәкмән, эпрәкмән (ҡариҙел)

**ӘБЕРӘМ** (дим, урта) *и.* әрекмән — *лопух*

**ӘБЕТ** (ҡариҙел) *к.* эйе бит — *ведь да?*

**ӘБЕҮЕК** (урта) *и.* ҡара һоло — *овсюг.* Әпеүек (эйек)

**ӘБЕҮЛӘҮ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *ҡ.* баланы иркәләү, уның бөтә теләктәрен үтәргә ынтылыу — *баловать.* Балалары берәү генә булғас, әбеүләп кенә үстергәннәр шул (туҡ-соран)

**ӘБЗӘЙ** (урта урал) *и.* ҡурай еләге — *малина*

**ӘБЗӘҢКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өләсәйгә ихтирам һүҙе — *уважительное обращение к бабушке*

**ӘБИӘТКЕ** (туҡ-соран, эй) *и.* һандыҡ — *объедья*

**ӘБИБАБАЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**ӘБКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* өләсәй — *бабушка*

**ӘБСӘ, ӘБСӘЙ ЙЕЛӘГЕ** (арғаяш, мейәс) *и.* ҡурай еләге — *малина*

**ӘБӘКЛӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* үсекләү — *дразнить*

**ӘБӘКҺЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ялҡыу — *утомляться.* Һеҙҙә бигерәк оҙаҡ булдым, әбәкһенеп киттем

**ӘБӘК-ҺӘБӘК** (ҡыҙыл, урта) *р.* 1. Һирәк-һаяҡ — *изредка.* Әбәк-һәбәк һыбай кешеләр ҙә үткеләй (ҡыҙыл). 2. (ҡыҙыл) *и.* юҡ-бар — *всякая всячина, мелочь.* Ул өндәшмәй генә әбәк-һәбәкте күреб ултырҙы

**ӘБЕЛӘЙ** (урта) *и.* ҡылған — *ковыль*

**ӘБӘЛӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* 1. Йомшаҡ — *мягкий.* Ҡара шыршы кебек әбәләк ағас йуҡ. 2. *и.* ығыш — *копуша.* Нәселләре белән әбәләкләр алар. 3. (урта урал) Ҡауғасы — *недотрога*

**ӘБӘЛӘНЕҮ** (ҡыҙыл, эйек-һаҡмар) *ҡ.* өтәләнеү — *суетиться*

**ӘБӘТ БИҘРӘСЕ** (минзәлә) *и.* сапсаҡ — *кадка*

**ӘГЕЛ-БӨГӨЛ** (ҡыҙыл) *и.* бәпембә — *одуванчик.* Әгел-бөгөл бәп-бәп, туғай ағай туҡ-туҡ

**ӘГРӘМӘТ** (һаҡмар) *и.* ейәк — *тесьма, пришитая к оборке*

**ӘГҮН** (эй) *и.* әүен — *овин*

**ӘГҮРСӘ, ӘГӨРСӘ** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* ҡыяр — *огурец*

**ӘГӘР** (дим, ҡариҙел) *и.* арҙан — *кобель.* Әкәр (төньяҡ-көнбайыш, урта урал, эй)

**ӘГӘРСЕН** (дим) *и.* әберсен — *вяхирь*

**ӘҒЕҮӘСЕ** (урта, эй) *с.* 1. Ғауғасыл — *скандальный.* Әғеүәсе ул ҡатын, ул ҡотортор (урта). 2. Мәкерле — *коварный*

**ӘҒӘБЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Ата-әсәнән өлкән ҡатындарға өндәшеү һүҙе — *обращение к женщинам старше родителей.* 2. Атайҙың йәки әсәйҙең апаһы — *тетя (старшая сестра отца или матери).* Өлкән ағайҙың ҡатыны — *тетя (жена старшего брата)*

**ӘҒӘЛ КИЛЕҮ** (эй) *ҡ.* 1. Зыҡ ҡубыу — *расшуметься.* Балдар туҡтауһыҙ ҡоторошоп, әғәл киләләр. 2. Ашығыу — *спешить.* Әғәлем гилеп ҡайтып киләм. 3. Хәлдән тайыу — *обессилиться*

**ӘҘЕР** (ҡыҙыл, мейәс, урта) *и.* мәл, саҡ — *время, пора.* Килгән әҙере эштән ғалаң (мейәс)

**ӘҘЕҺӨТ** (һаҡмар) *и.* һөҙһөт — *удод.* Әҙһет (арғаяш)

**ӘҘӘМ СИЛСӘҺЕ** (эйек) *и.* силсә — *туберкулез желез*

**ӘҘӘМ ТАҒАҺЫ** (һаҡмар) *и.* яңғырыҡ — *эхо.* Урманда ҡысҡырһаң әҙәм тағаһы һин булып йаңғырай

**ӘҘӘМ ҮЛӘТЕ** (дим) *и.* ваба — *холера*

**ӘҘӘРҘӘҮ** (дим, мейәс, урта) *ҡ.* тиргәү — *бранить, ругать.* Ул ней икән, кешене әҙәрҙәһә «сабака» тип әҙәрҙәй (мейәс)

**ӘЖДАҒЫ, ӘЖДӘҒЕ** (гәйнә, ҡариҙел) *и.* аждаһа — *дракон.* Әждаһа, әждәһә (ҡыҙыл, салйоғот, урта)

**ӘЖЕК** (урта урал) *с.* кәже, сибек — *щуплый.* Хатыны әжек кенә

**ӘЖЕР-БӨЖӨР** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* арлы-бирле — *кое-как.* Әжер-бөжөр генә эшләгәс, оҙаҡҡа бармай шул

**ӘЖЕҒӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ялағай — *зарница*

**ӘЖӘМЕ** (гәйнә) *с.* кәже — *щуплый.* Әжеме генә бичә шапшаҡтай бала тапҡан

**ӘЖӘМӘТ I** (арғаяш) *и.* боламыҡ — *мучная каша*

**ӘЖӘМӘТ II** (арғаяш) *с.* йомшаҡ — *слабый (о человеке)*

**ӘЖӘТ** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* бурыс — *долг.* Әжәткә биреп торҙом. Әжәт бирһәң, уахытында бирмәй (урта урал)

**ӘЗГӘРӘЙ** (урта) *и.* бороңғо биш тинлек көмөш тәңкә — *старинная пятикопеечная серебряная монета*

**ӘЗЕКӘЙ, ИЗЕКӘЙ** (ырғыҙ) *и.* ҡыҙыл эремсек *(эремсекте һыуы менән талғын ғына утта ҡыҙартып, ҡуйырғансы ҡайнатып яһалған ашамлыҡ)* — *особо приготовленный красный творог*

**ӘЗНӘП** (урта) *и.* гонаһ — *грех.* Әзнәпле бултым инте ошаҡлап

**ӘЗӘ** (мейәс) *р.* йәл — *жаль.* Баҡсанан апҡайтҡан ҡыйарҙарым сереп бөттө, шуныһы әзә булды

**ӘЗӘЙ** (урта) *и.* өләсәй — *бабушка*

**ӘЗӘЛ** (туҡ-соран, урта, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* әжәл — *смерть*

**ӘЙБЕР-ҠУРА** (дим) *и.* өй кәрәк-ярағы — *домашняя утварь*

**ӘЙБИТ** (ҡариҙел, урта урал) *к.* эйе бит — *да ведь?*

**ӘЙҘӘКӘ** (ҡариҙел, урта урал) *ө. һ.* әйҙә әле — *айда-ка.* Әйҙәкә, ай буйына бесән сабып ҡара (урта урал)

**ӘЙҘӘМ ӨСӨН** (эй) *и.* күрһәтеү өсөн — *для вида.* Хәҙер кейәүгә бер ҡат күлмәк кейҙерә лә, әйҙәм өсөн, шул йетә

**ӘЙЕРӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* айран. Әйрән (дим, ҡариҙел, мейәс, эй)

**ӘЙКӘЙ** (дим, мейәс, туҡ-соран, урта) *и.* дуҫ ҡатын-ҡыҙҙарҙың бер-береһенә өндәшеү һүҙе — *слово-обращение подруг друг к другу*

**ӘЙЛӘМӘЛ** (урта) *р.* әлдән-әле — *часто.* Әйләмәл һуғышыр ҙа йөрөр ине

**ӘЙЛӘНГЕС I** (урта) *и.* әйләнсек — *вертячка (болезнь)*

**ӘЙЛӘНГЕС II** (урта) *и.* боролма — *поворот*

**ӘЙЛӘНДЕРЕҮ: ҺӨТ ӘЙЛӘНДЕРЕҮ** (урта) *ҡ.* һөт айырыу — *сепарировать (молоко).* Һөт әйләндерә гитте инәйем

**ӘЙЛӘНДЕРӘСЕ** (ҡариҙел) *р.* әйләнәһе — *вокруг.* Өй әйләндерәсенә баҡса утырттым

**ӘЙЛӘНМӘ I** (дим) 1. Стена урауына ҡорған шаршау — *настенная занавеска.* 2. Өрләк шаршауы — *занавеска матицы*

**ӘЙЛӘНМӘ II** (дим, ҡариҙел) *и.* 1. Өйрөлмәк — *водоворот.* 2. (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) Бөгәл — *извилина (реки).* Атың Байсәләм әйләнмәһендә тора ине (эйек-һаҡмар)

**ӘЙЛӘНМӘ III** (урта) *и.* 1. Мөйәшә — *засыпня.* 2. Талдан үрелгән ашлыҡ һауыты — *лубок-плетенка*

**ӘЙЛӘНМӘ IV** (урта) *с.* йылдам — *проворный.* Әйләнмә кеше

**ӘЙЛӘНСЕК** (ҡариҙел) *и.* өйөрсөк — *юла*

**ӘЙЛӘНӘ** (урта) *и.* йортто ураҡан кәртә — *изгородь вокруг дома*

**ӘЙЛӘШЕҮ** (урта) *ҡ.* эйәләшеү — *привыкать, привыкнуть*

**ӘЙРЕМ** (ҡыҙыл) *и.* ҡыра — *длинный ряд сгребенной высохшей травы*

**ӘЙРӘН** (дим, ҡариҙел, мейәс, эй) *и.* май айраны — *пахта*

**ӘЙРӘНМАЙ** (гәйнә) *и.* аҡ май — *сливочное масло*

**ӘЙРӘНЧЫПЧАК** (гәйнә) *и.* көбө — *деревянная посуда для сбивания масла*

**ӘЙТЕМ** (көнсығыш диалект) *и.* кәләп баҫмаһының өс бөртөгө — *три нитки мотушки*

**ӘЙТЕШЕҮ** (урта) *ҡ.* ҡунаҡ булышыу — *бывать в гостях друг у друга*

**ӘЙТКЕРЕҮ** (мейәс) *ҡ.* әйттереү — *сказать (через кого-либо).* Быуайыма ла әйткергәйнем, кимәне шай

**ӘЙТКЕС** (һаҡмар) *и.* сәсән — *импровизатор.* Борон бик әйткес кешеләр буған

**ӘЙТМӘКСЕ** (мейәс, туҡ-соран, урта) *м. һ.* әйткәндәй — *в самом деле.* Ҡөлнур ғайҙа уыл, әйтмәксе (мейәс)

**ӘЙ-ТӘЙ: ӘЙ-ТӘЙ ТОРОУ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *начать вставать на ноги (о ребенке)*

**ӘКЕМ** (һаҡмар) *и.* кәбәк — *мякина.* Иген әкеме. 2. Һандыҡ — *объедья.* Һалам әкеме

**ӘКЕРЕС** (ҡыҙыл, мейәс, урта, һаҡмар) *с.* быжмыр — *неторопливый*

**ӘКЕРЕСЛӘП** (урта) *р.* әкеренләп — *потихоньку*

**ӘКТӘЙ, КӘКТӘЙ** (эй) *и.* башалтай — *шерстяные носки ручной вязки.* Йөндән әктәй бәйләйбеҙ

**ӘКӘЙ I** (гәйнә) *и.* өләсәй — *бабушка*

**ӘКӘЙ II** (дим) *и.* һоҫлан — *суслон*

**ӘКӘЙ III** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* мари ҡатын-ҡыҙы — *марийка.* Ике әкәй сыуға бара, берсенән берсе уза бара (төньяҡ-көнбайыш)

**ӘКӘЙ IV** (арғаяш) *и.* ағай — *старший брат*

**ӘКӘЙ ТҮНЕШЕ** (дим) *и.* әрекмән — *лопух*

**ӘКӘЛ: ӘКӘЛ СИККӘ ЕТЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* аҡтыҡ сиккә етеү — *дойти до предела*

**ӘКӘЛӘ** (гәйнә, туҡ-соран, һаҡмар) *и.* имән сәтләүеге, тубырсыҡ — *шишка, желудь.* Имән әкәләһе (һаҡмар)

**ӘКӘМӘЙ** (эй) *и.* һармаҡ — *чудак.* Йамғырҙы гөн бесән жыйа, әкәмәй

**ӘКӘМӘТЛӘНЕҮ** (дим, туҡ-соран) *ҡ.* маташыу — *возиться.* Алабута белән әкәмәтләндек аслыҡта (дим)

**ӘҠРӘ** (урта урал) *и.* нәҫел-нәсәп — *родня.* Беҙҙең әҡрәләр ҙә бар анда. Әҡрәп (дим, урта)

**ӘЛБЕРЛОҠ** (һаҡмар) *и.* тилебәрән — *белена черная*

**ӘЛБЕРӘҮ** (дим, эйек-һаҡмар) *ҡ.* хәлһеҙләнеү — *обессилить.* Йүнһеҙ, әлберәбөткән биш минут эшләйем тип (эйек-һаҡмар)

**ӘЛБИЗӘ** (урта) *и.* аҡ алабута — *лебеда белая*

**ӘЛБЫУЫН** (туҡ-соран) *с.* тәнтерәк — *слабый (в ходьбе)*

**ӘЛБӘТ** (ҡариҙел, мейәс) *р.* һәйбәт — *хорошо.* Йүнәлдем, әлбәт булдым, терелеп киләм (мейәс)

**ӘЛДЕРГӘН, ӘЛДЕРҘӘН** (ҡыҙыл) *и.* алйырҙан — *хомяк*

**ӘЛДИЛӘҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* иркәләү — *ласкать.* Әлдиләп кенә үҫтергәйнеләр шул ул балларын

**ӘЛДӘ НЕЙӘ** (мейәс) *р.* әллә ниңә — *почему-то.* Әлдә нейә тауыҡ ашап ҡуйҙы

**ӘЛДӘ ЛӘ** (гәйнә, көнсығыш диалект, туҡ-соран) *р.* 1. Әле лә — *и сейчас, и ныне.* Киезтекте әлдә лә басалар (гәйнә). Һары сәскә әлдә лә бар урманда (ҡыҙыл). Әлтә лә (ҡариҙел). 2. (эйек-һаҡмар) Ярай әле — *ладно еще.* Әлдә лә сыҡты әле был Нуриман кетеүгә

**ӘЛДӘНЕЙ** (мейәс) *и. һ.* ахыры — *по-видимому.* Бесәй йөрөгән, әлдәней

**ӘЛЕГҮК** (урта) *р.* әле лә — *и сейчас, и ныне.* Ошо әлегүк барыбер элеккесә һөйләшәбеҙ

**ӘЛЕЙ ИТЕҮ** (эй) *ҡ.* ҡаҙыҡай тороу — *начать вставать на ноги (о ребенке)*

**ӘЛЕКӘС** (арғаяш, мейәс, эй) *р.* хәҙер үк — *сейчас же.* Әлекәстән китһәң ойат та (арғаяш)

**ӘЛЕМ** (мейәс) *и.* шамбы — *налим*

**ӘЛЕМӘС** (һаҡмар) *и.* сепрәк балаҫ — *половик, сотканный из тряпичных полосок*

**ӘЛЕҢГЕ** (арғаяш, мейәс, салйоғот, урта, эй) *а.* әлеге — *тот, тот самый.* Әлеңге бала бер тәүлек йоҡтаған уйанмай (мейәс)

**ӘЛЕП** (урта) *и.* ҡайын туҙының һыҙыҡтары — *полосы на бересте*

**ӘЛЗЕЙ** (ырғыҙ) *р.* әле — *сейчас, ныне.* Әлзей иптәшең дә бармы?

**ӘЛИБУҒАС** (төньяҡ-көнбайыш) *т.* улай булғас, улайһа — *раз так*

**ӘЛИРЛӘН** (һаҡмар) *и.* алйырҙан — *хомяк*

**ӘЛИЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* 1. Ҡартайыу — *стареть.* 2. Аптырау, ҡаңғырыу — *обалдеть*

**ӘЛИЕҮӘК** (эйек-һаҡмар) *с.* 1. Йомшаҡ — *слабый.* Эшкә әлиеүәк кенә. 2. Сөскәл — *пресноватый.* Ойотмосо әлиеүәк буғанға ҡатыҡ ойор-ойомаҫ утыра

**ӘЛ-ЙӨЛ: ӘЛ-ЙӨЛ ИТЕП ҠАРАУ** (ырғыҙ) *ҡ.* алан-йолан ҡарау — *озираться.* Әл-йөл итеп ҡарап тора

**ӘЛ-ЙӨЛ** (урта) *р.* арлы-бирле — *кое-как.* Имен ҡалған өйләрҙә әл-йөл итеп йаңынан йәшәй башлағаннар

**ӘЛЙЫРҘАН** (мейәс) *и.* алйырҙан — *хомяк*

**ӘЛЛӘЙТЕҮ** (урта) *ҡ.* әллә нимә тип әйтеү — *осудить.* Кеше әлләйтеп әйтер

**ӘЛЛӘҺӘҢ** (әй) *р.* улай булғас, улайһа — *раз так.* Әлләһәң, үҙең генә барып ҡайт

**ӘЛПЕШ** (урта) *и.* әрпеш — *неряха*

**ӘЛПӘНДӘҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* йөрәк ҡағыуҙан хәлһеҙләнеү — *обессилиться от сердцебиения.* Һеҙ гигәнгә әлпәндәп киттем

**ӘЛПӘН-ТӨЛПӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* алпан-толпан — *вразвалку.* Әлпән-төлпән баҫып килә

**ӘЛСӘ, ӘЛСӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *т.* улайһа — *раз так*

**ӘЛТЕНСӘЙ** (эйек) *и.* ҡуянтубыҡ — *дикая морковь*

**ӘЛТӘЙ-СӘЛТӘЙ** (минзәлә) *с.* иҫке-моҫко — *старье.* Әлтәй-сәлтәй кейемнәр кейҙек суғыш дәүерендә

**ӘЛҮК** (урта) *р.* әле генә — *только что.* Әлүк кенә мынта ине, ҡайҙа киткәнтер

**ӘЛҮҠАҠ** (урта) *и.* миләш ҡағы — *пастила рябиновая*

**ӘЛ-ХӘЛ БУЛЫУ** (дим, туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *ҡ.* терелеү, һауығыу — *выздороветь.* Ныҡ йаттым, көскә әл-хәл булып киләм (дим)

**ӘЛӘЙГӘС** (мейәс, һаҡмар) *т.* улай булғас, улайһа — *раз так.* Шулай диген әләйгәс, ҡустым (һаҡмар). Әләгәс (урта)

**ӘЛӘЙҺЕҢ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *т.* улайһа — *раз так.* Әләйһең, үҙең бараң инде

**ӘЛӘК** (төньяҡ-көнбайыш) *к.* һәләк — *изумительно.* Бүреләр әләк икән (ҡариҙел)

**ӘЛӘКЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш, эйек) *ҡ.* ошаҡлау — *ябедничать.* Мин әләкләҙе тимәссең (төньяҡ-көнбайыш)

**ӘЛӘКӘЙ** (арғаяш) *ҡ.* ҡаҙыҡҡай тороу — *начинать вставать на ноги (о ребенке)*

**ӘЛӘКӘТ** (әй) *и.* шуҡлыҡ — *шалость.* Шуның ғына әләкәте

**ӘЛӘЛӘЙ** (дим, ҡариҙел) *ҡ.* ҡаҙыҡҡай тороу — *начинать вставать на ноги (о ребенке)*

**ӘЛӘҢГӘС** (һаҡмар) *и.* ылаш — *помост для сушки курута*

**ӘЛӘҢЛӘҮ** (ырғыҙ) *ҡ.* алаҡандау — *вертеть головой по сторонам*

**ӘЛӘФ-ТӘЛӘФ ИТЕҮ** (туҡ-соран, әй) *ҡ.* әрәмшәрәм итеү — *разбазаривать.* Хәҙер йыйған аҡсаһын да әләф-тәләф итеп бөтөрҙө (туҡ-соран)

**ӘМГЕМӘ, ӘҢГЕМӘ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* мәрәкә — *забава.* Туйҙа элек төрлө әмгемәләр күп була торғайны (туҡ-соран). Туйлығын һатып бирәләр әңгемә өсөн (ҡыҙыл)

**ӘМГЕМӘСЕЛ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* мәрәкәсел — *затейник, шутник.* Унып ире бигерәк әмгемәсел геше (туҡ-соран)

**ӘМЕЖЕ** (гәйнә) *и.* ҡурай еләге — *малина*

**ӘМЕШ I** (дим) *и.* маҡау — *тупица*

**ӘМЕШ II** (арғаяш) *и.* уймаҡ — *наперсток*

**ӘМЗӘ** (дим, туҡ-соран, ырғыҙ) *и.* тауҙа үҫкән ҡырағай һуған — *вид горного дикого лука.* Таулыҡтарҙа тәмле әмзә үҫә (туҡ-соран)

**ӘМӨКӨ** (урта) *и.* йыланбалыҡ — *угорь*

**ӘМӘЙ** (мейәс) *и.* муйын — *шея.* Бер әмәй мәрйен

**ӘМӘЛСЕ** (туҡ-соран, урта, һаҡмар, ырғыҙ, әй) *и.* сихырсы — *колдун*

**ӘМӘЛҺЕҘ** (көнсығыш диалект, урта) *р.* 1. Бик ныҡ — *очень сильно.* Көн әмәлһеҙ эҫе, томра (урта). Әмәлһеҙ ауырый инде (көнсығыш диалект). 2. (мейәс) Тәртипһеҙ — *беспорядочно*

**ӘМӘН** (төньяҡ-көнбайыш) *р.* һаман — *все еще*

**ӘНДӘШЕҮ** (арғаяш, гәйнә, урта урал, әй) *ҡ.* өндәшеү — *окликать*

**ӘНЕЙ** (гәйнә, урта, урта урал) *и.* 1. Әсәй — *мать.* Әнәй (гәйнә, ҡариҙел, минзәлә, эйек-һаҡмар), әнкәй (ҡариҙел). 2. (урта урал, һаҡмар) Ҡәйнә — *свекровь.* Әнейләре килене белән улына әйтә икән, әнә бәрәсләр алып ҡайттым, һуйайыҡ, тип (һаҡмар)

**ӘНЕ ҠЫЙ** (гәйнә) *к.* ана бит — *вон же!*

**ӘНЕСӘ, ӘНӘСӘ** (ҡариҙел) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**ӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *и.* дәрт — *страсть.* Әнеүең ҡайттымәллә, нишләп эшеңде ташлап ҡуйҙың?

**ӘНИС** (урта) *и.* муйыл ағасы сайыры — *черемуховая смола*

**ӘННӘН** (ҡариҙел) *р.* унан — *затем*

**ӘНТӘК** (туҡ-соран) *с.* 1. Көсһеҙ, хәлһеҙ — *слабый, хилый.* Әнтәк малайлар булып сыҡты, бер гөн эшләнеләр ҙә тайҙылар. 2. (һаҡмар) *р.* яҙа, яңылыш — *мимо, невпопад.* Әй, эттәгенәһе, әнтәк һуҡтырҙы бит был

**ӘНЧИ БАРМАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**ӘНЧҮР** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* селбәрә — *малек*

**ӘНӘЛӘҮ** (минзәлә) *ҡ.* әүәләү — *мять.* Эпейне йасай ҙа тоҙға әнәләй

**ӘНӘСӘ** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* 1. Бармаҡ йыуанлығы ғына итеп йомарланған ҡамыр — *тесто в продолговатой форме, изготовленное для лапши.* Әнәсәҙән сумар бешерә торған эйек (төньяҡ-көнбайыш). Әнәсәне өҙәһең дә менә һиңә өҙмә һалма була. Шул әнәсәне киҫеп бауырҫаҡ йаҫайһың (урта урал). 2. (дим) Өшә — *лепешка*

**ӘНӘСӘБАРМАҠ, ӘНЧӨБАРМАҠ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сәтәкәй — *мизинец*

**ӘҢКЕШ** (арғаяш, мейәс) *и.* иңкеш — *шмель*

**ӘҢГӘМӘ** (туҡ-соран, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *р.* мәрәкә, ҡыҙыҡ — *интересно, забавно.* Ҡалай әңгәмә булды әле, хәҙер нисек табабыҙ аларҙы (туҡ-соран)

**ӘҢКӘЛ** (ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *и.* һурпала бешкән эре һалма — *крупная лапша, сваренная в бульоне.*

Ҡунаҡларға башта ит белән әңкәл бирәләр, аннан һуң һурпа (ырғыҙ)

**ӘПЕ** (дим) *с.* 1. Телһеҙ — *немой.* 2. Тупаҫ — *тупой*

**ӘПЕКӘЙ, ӘПЕКЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* икмәк — *хлеб.* Әпкәй, әпәй, әпәк (урта урал)

**ӘПЕМ** (урта) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**ӘПЕРӘКМӘН, ӘПРӘКМӘН** (ҡариҙел) *и.* әрекмән — *лопух.* Әперитмән (төньяҡ-көнбайыш)

**ӘПЕҮӘ** (дим) *с.* аҙ һүҙле — *молчаливый*

**ӘПИ I** (урта урал) *и.* сепрәктән эшләнгән ҡурсаҡ — *тряпочная кукла.* Ҡыҙлар әпи уйнаталар иде ул саҡта

**ӘПИ II** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* икмәк — *хлеб*

**ӘПИГӨПШӘ** (ҡариҙел) *и.* айыу ҡурайы — *дягиль лекарственный*

**ӘПИПАПА** (минзәлә, төньяҡ-көнбайыш) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**ӘПИПӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ӘПКӘЛӘЙ** (ҡыҙыл, мейәс, туҡ-соран) *и.* 1. Ялағай — *подхалим.* 2. (әй) *с.* йүнһеҙ — *бестолковый*

**ӘПЛӘ** (ырғыҙ) *с.* ярлы — *бедный.* Борон халыҡ бигерәк әплә тормошта йәшәгән инде

**ӘППӘКЕС** (һаҡмар) *и.* тау йыуаһы — *лук горный.* Түмәләстә кәзә һуғаны, әппәкес лыҡ тулы

**ӘПРӘМ** (дим, урта) *и.* әрекмән — *лопух*

**ӘПРӘКӘНДӘН-ӘПРӘКӘН** (һаҡмар) *р.* буштан-бушҡа — *попусту.* Берәүҙе әпрәкәндән-әпрәкән әрләргә ҡырсынып тора

**ӘПСҮК, ӘПСЕК** (дим, көнсығыш диалект, туҡ-соран) *и.* ҡара һоло — *овсюг.* Быйыл бөйҙай әпсүкле булды (туҡ-соран)

**ӘПСӘ** (ҡыҙыл, мейәс, һаҡмар, ырғыҙ) *и.* 1. Әсә — *мать.* Әпсәләре үҙенеке буманы, йәтим үҫте балалары (ҡыҙыл). 2. (ҡыҙыл, мейәс) Инә мал — *матка, самка.* Быҙауға морондоҡ бәйҙәп йебәрәләр, әпсәһен имһә (мейәс)

**ӘПСӘ ЙЕЛӘГЕ** (арғаяш, мейәс) *и.* ҡурай еләге — *малина*

**ӘПСӨЙ ӨЙСӨГӨ** (мейәс) *и.* ҡурай еләклек — *малинник*

**ӘПСӘК** (арғаяш) *и.* ҡайын еләге — *земляника*

**ӘПТЕК-ҺӘПТЕК** (эйек-һаҡмар) *а.* теләһә ниндәй — *какой-то.* Әптек-һәптек кеше өҙәлмәй ҙә баһа

**ӘПТЕК-ҺӘТЕК** (эйек-һаҡмар) *и.* сүп-сар — *мусор*

**ӘПТЕКӘС** (дим) *и.* ҡомай — *пескарь*

**ӘПТӘЛӘН** (туҡ-соран, ырғыҙ, эйек-һаҡмар) *с.* ҡабалан — *суетливый.* Әхмәҙғәлим ағай бик әптәлән кеше ине ул (туҡ-соран)

**ӘТӘН, ӘПТӘМ** (туҡ-соран, һаҡмар) *р.* бөтөнләй — *окончательно.* Ҡуҙгүрпәс әптән арыны (һаҡмар)

**ӘПӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* һаҡау — *косноязычный.* Баласы ҡурҡып әпә булып ҡалды

**ӘПӘЙ I** (дим, һаҡмар) *и.* манса — *перга.* Бал ҡорто әпәйҙе айағына бәйләп ташый (дим)

**ӘПӘЙ II** (дим, ҡариҙел) *и.* ашлыҡ — *зерно*

**ӘПӘЙ АСЫТҠЫСЫ** (ҡариҙел) *и.* әсетке — *закваска*

**ӘПӘЙ АСЫҪЫ** (дим) *и.* әсетке — *закваска*

**ӘПӘЙ ГӨРӘГЕ** (дим, ҡариҙел) *и.* мейескә икмәк ултырта торған көрәк — *лопаточка для поставки хлеба в печку*

**ӘПӘЙ ҒАШЫҒЫ** (дим, ҡариҙел) *и.* ҡамыр болғата торған ҡашыҡ — *деревянная ложка для сбивания теста.* Әпәй ҡашыҡ (урта)

**ӘПӘЙ САПСАҠ** (урта урал) *и.* икмәк күнәге — *квашня*

**ӘПӘЙ СИЛӘК** (дим, урта) *и.* икмәк күнәге — *квашня*

**ӘПӘК КҮНӘГЕ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* икмәк күнәге — *квашня*

**ӘПӘК-СЕПӘК ИТЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* ҡурсалау — *защищать, ограждать.* Һин бигерәк шул малайыңды әпәк-сәпәк итәһең

**ӘПЕН-СӨПӨН** (туҡ-соран) *р.* аҙ-маҙ — *немного.* Әпен-сөпөн генә ашаны ла, йөгөрөп сығып та гитте. Әпен-сепән (урта)

**ӘПӘНӘ** (дим) *р.* һаҡау — *косноязычно.* Әпәнә ҫөйләшә, бер нәмә лә белмәйем тей

**ӘПӘРӘКТӘҮ** (һаҡмар) *ҡ.* әрләү — *обругать.* Әпәрәктәне лә әпәрәктәне мине өс көн буйына

**ӘПӘРӘКӘН** (һаҡмар, ырғыҙ) *р.* 1. Бөтөнләй, бер ҙә юҡҡа — *совсем, совершенно.* Әпәрәкән аҡсаһыҙ ҡалдым (ырғыҙ). 2. Юҡҡа — *напрасно, попусту.* Әпәрәкән йөрөп ҡайттым (һаҡмар)

**ӘПӘТТӘНЕҮ** (арғаяш, салйоғот) *ҡ.* ялағайланыу — *подхалимничать*

**ӘПӘҮҘӘП: ӘПӘҮҘӘП ҮҪТЕРЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* иркәләп үҫтереү — *воспитывать в неге.* Әпәүләү (туҡ-соран). Балаларын хатта инде әпәүләп кенә үҫтерәләр

**ӘР I** (төньяҡ-көнбайыш, урта урал) *и.* һоро ҡорт — *трутень.* Әре (урта)

**ӘР II** (дим) *и.* тәпән — *кадка*

**ӘР III** (төньяҡ-көнбайыш) *а.* һәр — *каждый, всякий.* Әр йылны ҡайтып тора балаларым (ҡариҙел)

**ӘРБӘК-ҺӘРБӘК** (урта) *р.* арлы-бирле — *кое-как.* Әрбәк-һәрбәк йаҡтырыуға мейескә йағып йебәреп, ашарға әҙерләргә тотонто

**ӘРБӘНДЕ, ӘРБӘНТЕ** (ҡыҙыл, урта) *и.* әрмәнде — *жаба*

**ӘРБӘНДӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡыбырҙау; күҙгә салыныу — *шевелиться; мелькнуть в глазах.* Ҡайҙа нимә әрбәндәй, ун-ун биш саҡрымдан йалт итеп күренеп тора

**ӘРБӘҢ-ҺӘРБӘҢ ИТЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* ҡыбырҙау; күҙгә салыныу — *шевелиться; мелькнуть в глазах.* Анауында ҡыуаҡлыҡта кемдер әрбәң-һәрбәң итеп ҡалды түгелме?

**ӘРГЕНДЕК** (дим, туҡ-соран, урта, эйек-һаҡмар) *с.* хәлһеҙ, сибек — *слабый, хилый.* Был әргендек малайларҙы ҡайҙан табып бөттөң тағы? (туҡ-соран)

~~**ӘРҘӘН**~~ (арғаяш, әй) *и.* алйырҙан — *хомяк.* Әрлән (һаҡмар)

**ӘРЕК** (урта) *и.* терәү — *подпора.* Ҡойма әреге

**ӘРЕ ҠОРТ** (урта, әй) *и.* һоро ҡорт — *трутень*

**ӘРЕПЛӘШЕҮ** (дим) *ҡ.* ҡаршы әйтешеү — *пререкаться*

**ӘРЕ-ҺӘРЕ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* иртә таң — *ранняя заря.* Таңдың әре-һәреһе белән йулға сыға инек (туҡ-соран). Әрә-һәрә (ырғыҙ, әй)

**ӘРЕШКЕ** (урта) *и.* эре йәшел себен — *зеленая падальная муха.* Әрешке иткә йомортҡа һала, шунан ит ҡортлай

**ӘРЕШКЕЛӘҮ** (урта) *и.* ҡортлау — *червиветь (о мясе).* Ит әрешкеләгән

**ӘРЕШКӘ** (урта) *и.* кәрешкә — *вика*

**ӘРЙӘ** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ҡумта — *коробка.* 2. Эркет һауыты — *кадка.* 3. Моҙға — *роевня*

**ӘРКЕ** (мейәс) *и.* дегет ҡайнатыу һауыты — *кадка для варки дегтя*

**ӘРКӘР** (ҡыҙыл) *и.* болан — *олень*

**ӘРКӘТӘҮ I** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* солоҡҡа ваҡ-төйәк күтәреү өсөн ҡуйылған оҙон бау — *специальный аркан, применяемый в бортничестве.* Әркәтәй (урта)

**ӘРКӘТӘҮ II** (әй) *и.* йүкә ағасынан яһалған бал һауыты — *посуда для меда, сделанная из липы*

**ӘРЛЕК** (гәйнә) *с.* кәрлә — *карлик.* Әрлек ағас. Әрлек халыҡ

**ӘРЛӨ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* ҡурпы — *отава*

**ӘРЛӘН** (дим, ҡариҙел, урта, һаҡмар) *и.* алйырҙан — *хомяк*

**ӘРМӘК** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар, әй) *и.* 1. Сепрәк балаҫ — *тряпичный половик.* 2. Турпыша — *полог*

**ӘРМӘНДЕ** (ҡыҙыл, урта) *и.* тәлмәрйен — *лягушка*

**ӘРМӘС** (салйоғот) *и.* йөндән һуғылған балаҫ — *палас, сотканный из шерсти*

**ӘРПЕК** (гәйнә) *с.* өрпәк — *пушистый (о снеге)*

**ӘРПЕТ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* әрпеш — *неряшливый, неопрятный.* Әрпәт (әй)

**ӘРПЕТҺЕҘ** (төньяҡ-көнбайыш) *с.* ҡәҙерһеҙ, бәҫһеҙ — *потерявший вид, ценность (о вещах).* Әрпәтһеҙ (әй)

**ӘРСЕЙ** (дим) *и.* арсый — *провожатый (сопровождающий невесту в дом жениха после свадьбы)*

**ӘРСЕЛЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* асылыу — *проясняться, очищаться.* Башитәк тауына йеткәндә, тәбиғәт ҡараңғылыҡтан әрселде. Йер ҡарҙан әрселә башланы

**ӘРСЕҮ** (дим) *ҡ.* 1. Таҙартыу — *чистить.* Урман әрсеү. 2. (төньяҡ-көнбайыш) Йыйыштырыу — *убрать.* Өстәлне әрсеп ташлайыҡ, балам

**ӘРҮК** (һаҡмар) *и.* өрөк — *урюк*

**ӘРҮӘҪ** (ҡыҙыл) *с.* меҫкен, бахыр — *жалкий, бедный.* Ат арығы тулаҡ була, ир йарлыһы әрүәҫ була

**ӘРҺӘЛӘНЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Алаҡандау — *вертеть головой по сторонам.* 2. (әй) Үрһәләнеү — *кипятиться*

**ӘРӘБӘҒӘТҺЕҘ** (һаҡмар) *с.* һөйкөмһөҙ — *отталкивающий, несимпатичный*

**ӘРӘҒӘЙӘЛЕ** (ҡыҙыл) *с.* 1. Иғтибарлы — *внимательный.* Кейәүең әрәғәйәле буһа, тәңкә әпкилепиреп китә. 2. (әй) Тәртипле, тәүфиҡлы — *воспитанный*

**ӘРӘНДЕК** (ырғыҙ) *и.* ҙур йөк арбаһы — *тяжелая повозка*

**ӘРӘПӘ ЖЫЙЫУ** (минзәлә) *ҡ.* һабан туйға ашамлыҡ йыйыу — *сбор продуктов для сабантуя*

**ӘРӘСӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* мәғәнә — *семантика, значение.* Сығанаҡ тигәнең һыуға ғына ҡайтып ҡалмай, ҡустым, уның әрәсәһе ғәләмәт киң. Эрәсә (әй)

**ӘРӘҮӘН: ӘРӘҮӘН ЙӘН** (ырғыҙ) *с.* йомшаҡ күңелле — *мягкосердечный.* Бигерәк әрәүән йән кеше ине атайыбыҙ

**ӘРӘШӘ I** (дим, урта, урта урал, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Ашлыҡҡа төшкән ҡара ыржа — *черная ржавчина (бьет колосовые).* Быйыл арышты әрәшә ҫуҡты (дим). 2. Монар — *мгла, марево.* Ашлыҡты монар ҡурҙы (урта)

**ӘРӘШӘ II** (һаҡмар) *и.* эре йәшел себен — *зеленая падальная муха.* Рәшә (туҡ-соран)

**ӘСБИ ЙЕЛӘГЕ** (дим) *и.* эт еләге — *белладонна.* Әҫбә йеләге (урта), әсбе (ҡариҙел)

**ӘСЕ I** (ҡыҙыл) *и.* татырлауыҡ — *солончак.* Әселә йөрөй мал

**ӘСЕ II** (ҡыҙыл) *и.* үт — *желчь.* Айыу әсеһе

**ӘСЕК-МӘСЕК** (әй) *р.* улай-былай — *так и сяк.* Аның ире әсек-мәсек кенә түгел шул ул

**ӘСЕЛЕШ: ӘСЕЛЕШЛЕ БУЛЫУ** (урта) *ҡ.* ҡаршы булыу — *быть против.* Асыҡтан-асыҡ әселешле булып йөрөмәһә лә, эллә ниңә йаратып бөтмәй бит ул

**ӘСЕРТКЕ ҮЛӘН** (һаҡмар) *и.* ҡаҡы — *свербига восточная*

**ӘСЕ ҺЫРҒАҠ** (туҡ-соран, һаҡмар) *с.* ыжғыр — *пронзительный, сильный (о погоде)*

**ӘСКЕРНӘ I** (ҡыҙыл, урта) *и.* аскернә — *обжора.* Әскернәй (һаҡмар)

**ӘСКЕРНӘ II** (ҡыҙыл) *с.* әсе телле — *злоязычный, зубастый*

**ӘСКӘРНӘ** (урта) *с.* бәләсел — *поднимающий шум; ноющий по пустякам*

**ӘСМӘЙЕЛ** (ҡыҙыл, урта, эйек-һаҡмар) *и.* аскернә — *обжора.* Әснәйел (мейәс)

**ӘСМӘК** (ҡыҙыл) *и.* аскернә — *обжора.* Өрәк бик әсмәк пула икән, күб ашай

**ӘСНӘҠӘТ** (ҡыҙыл, урта) *и.* аскернә — *обжора.* Үҙҙәре, әснәҡәтләнеп, иртәнән кискә тиклем ашарға һораүҙан бушамай. Әстәкәт (мейәс)

**ӘСТӘ** (гәйнә, урта урал) *и.* һуҡыр шәм төрө *(сыра яндырыу өсөн ағас нигеҙгә ултыртылған тармаҡлы тимер) — вид коптилки (железо с вилкой на деревянной подставке для зажжения лучины)*

**ӘСТӘҒ, ӘСТӘҒИН** (урта, эйек-һаҡмар) *ы.* атаҡ, алла һаҡлаһын — *о, не дай бог (междометие удивления).* Ойат инде, әстәғин, теҙҙән күлдәк кейә, тувыңы күренеп тора (эйек-һаҡмар)

**ӘСТӘЙ** (дим) *и.* бесәйғойроҡ — *щетинник сизый*

**ӘСӘ** (ҡыҙыл, мейәс) *и.* инә — *матка.* Әсә ғорт. Әсә алмаштырыу. Әсәһе икене бәрәсләне (ҡыҙыл)

**ӘСӘЙ** (туҡ-соран, урта) *и.* 1. Өләсәй — *бабушка.* 2. (урта) Кендек әбейе — *повивальная бабка*

**ӘСӘК I** (дим) *и.* эсәк — *кишка*

**ӘСӘК II** (ҡариҙел) *и.* мейес — *печка*

**ӘСӘК III** (ҡыҙыл, әй) *ы.* бәрәкәт — *ба (междометие удивления, испуга).* Әсәк, бушҡа тертелдәп барамсы (ҡыҙыл)

**ӘСӘК-ҺӘСӘК** (әй) *а.* эллә ниндәй — *какой-то.* Әсәк-һәсәк кеше жыйған анда

**ӘСӘКӘЙ АЛЫУ** (эйек) *ҡ.* сикәнес алыу — *испытать первую дрожь при купании*

**ӘСӘЛЕК** (мейәс) *и.* ҡорт инәһе ситлеге — *пчеломаточник*

**ӘСӘМӘК** (дим) *и.* аскернә — *обжора*

**ӘСӘНЧЕ** (урта урал) *и.* кейәү үләне — *чабрец башкирский*

**ӘСӘТЕР** (урта) *и.* бикре — *осетр*

**ӘСӘРЕҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* әҫәрләнеү — *возбуждаться.* Ата ҡаҙ ҡычҡырса әсәрә

**ӘСӘХ** (урта) *и.* сәбәп — *причина.* Ваһаптың үлеүенең әсәхен һорашты

**ӘҪБЕ I** (дим) *и.* 1. Сабыртма — *сыпь.* Әҫпе, әҫфе (туҡ-соран, ырғыҙ). Йеләк ашаһа дәненә ҡып-ҡыҙыл булып әҫпе ғалҡа (туҡ-соран). Әһпе (һаҡмар), әҫпе (ҡыҙыл, мейәс). 2. (дим) Скарлатина. Әҫпе (һаҡмар), әҫпә (урта)

**ӘҪБЕ II** (дим) *и.* себен аулаусы (үлән) — *мухоловка*

**ӘҪБӘТЛӘҮ** (урта) *ҡ.* имләү — *лечение домашними средствами*

**ӘҪПЕ** (эйек-һаҡмар) *и.* шәкәр ауырыуы — *сахарный диабет*

**ӘҪПЕ ЙЕЛӘГЕ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* себен ҡыуағы — *спаржа*

**ӘҪПЕ ЙЕМЕШЕ** (ҡыҙыл) *и.* әҫпе еләге — *жостер слабительный*

**ӘҪПӘТҺЕҘ** (һаҡмар) *с.* килбәтһеҙ — *нескладный (об одежде).* Ҡалай әҫпәтһеҙ кейем гейгән

**ӘҪТӘТ** (эй) *и.* ысул — *способ.* Әҫтәтен белмәһәң аны ҡора ла алмайһың

**ӘТЕЙ** (төньяҡ-көнбайыш, урта, урта урал, эйек-һаҡмар, эй) *и.* атай — *отец*

**ӘТЕЙ-ҠАРА** (ҡариҙел) *и.* ата-инә — *родители.* Әтей-ҡара башҡорт булғас шулай һөйләшәбеҙ

**ӘТЕКӘЙ, ӘТКӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* 1. Атай— *отец.* 2. *(урта урал)* Ҡайны — *свекор.* 3. (ҡариҙел) *р.* тас атаһы — *весь в отца*

**ӘТЕЛКӘ, ӘТИЛКӘ** (арғаяш, мейәс) *и.* 1. Балитәккә баҫылған таҫма — *тесемка, пришитая на оборке.* 2. Балитәк — *оборка*

**ӘТЕМТӘЙ** (эйек-һаҡмар) *с.* бер ҡатлы — *наивный.* Әтемтәй геше бөтә нимәһен бирергә тора

**ӘТЕМҮС** (ҡариҙел) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ӘТЕҢМЕШ** (ҡариҙел) *с.* тиҫкәре — *капризный*

**ӘТЕҮ** (дим) *т.* юғиһә — *а то.* Әтеү үҙем генә барайыммы?

**ӘТИМӘСЛӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* сыпранлау — *ерепениться.* Нимә әтимәсләнәһең, беҙ ҙә малай-шалай түгел бит

**ӘТКОЛАҠ** (урта, эйек-һаҡмар) *и.* аткolaҡ — *щавель конский*

**ӘТЛЕК** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* ҡыңғырау сәскә — *колокольчик.* Әттек (ҡыҙыл, мейәс, эй)

**ӘТМӘ I** (дим, эйек-һаҡмар) *и.* 1. Тоҙаҡ — *силок.* Шәшкене сирттереп, ҡыҫтырып тоталар әтмә белә (эйек-һаҡмар). 2. (дим) Йәтмә — *сачок*

**ӘТМӘ II** (эйек) *и.* шыуҙырма йүшкә — *раздвижная вьюшка*

**ӘТМӘ III** (ҡариҙел) *и.* йәрбесәк — *мочка*

**ӘТМӘ IV** (эйек) *и.* ҡоштар аяғындағы яры — *перепонка на лапках водоплавающих птиц*

**ӘТМӘКӘС, ӘТНӘКӘС** (эйек-һаҡмар) *и.* әтмәкәй — *лук линейный*

**ӘТМӘН** (ҡариҙел) *и.* кәтмән — *мотыга*

**ӘТНӘ** (гәйнә, урта урал) *и.* аҙна — *неделя.* Ике әтнә йөрөп ҡайттым (урта урал)

**ӘТНӘКӘ** (туҡ-соран) *т.* 1. Шулай ҙа — *однако.* Әтнәкә, үҙе бармаған бит әле, ҡурҡҡан. 2. (урта) *и.* мәғәнә — *суть, смысл.* Әтнәкәһен һиҙә биреп ҡалам. 3. (урта) Үс — *злоба*

**ӘТНӘШКӘ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* сүмесбаш — *головастик*

**ӘТПИТКӘ** (эй) *и.* һандыҡ — *объедья*

**ӘТТИ БАҪЫУ** (дим) *ҡ.* ҡаҙыҡай баҫыу — *начать вставать на ноги (о ребенке)*

**ӘТТӘ I** (нөгөш) *р.* бөтөнләй — *окончательно.* Беҙҙекеләр эттә гиткәнсе калхузда эшләйләр

**ӘТТӘ II** (дим, урта) *и.* атай — *отец.* Әттәм ҡайтмаҙы әле (урта)

**ӘТҮКӘШ** (урта) *и.* һыуыҡ — *мороз*

**ӘТҮМЕС** (ҡариҙел) *и.* ҡамҡа — *божья коровка*

**ӘТӘЙ** (дим, төньяҡ-көнбайыш, урта) *и.* атай — *отец.* Әтәйләр әйтәҙерейе башҡырт булғанбыҙ тип (төньяҡ-көнбайыш)

**ӘТӘЙ: ҘУР ӘТӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* атайҙың ағаһы — *старший брат отца*

**ӘТӘЙ-БАБАЙ** (урта) *и.* ата-баба — *предки*

**ӘТӘЙБАШ** (гәйнә) *и.* бәпембә — *одуванчик*

**ӘТӘК-ЙОМАҠ** (урта) *р.* арлы-бирле — *как попало.* Әтәк-йомаҡ тегеүләре оҡшамай

**ӘТӘКӘС** (ҡариҙел) *р. атас — похожий на отца*

**ӘТӘКӘС: ӘТӘКӘС АЛЫУ** (мейәс, урта) *ҡ.* сикәнес алыу — *дрожь (от холодной воды).* Әтәкәш алыу (эй)

**ӘТӘЛБАЙ** (дим) *и.* этәмбәй — *припущенник.* Беҙ әтәлбай, Бөрйән йағынан кигәмбеҙ

**ӘТӘЛГЕ** (урта) *и.* ырыуғыс — *пазник*

**ӘТӘМБӘЙ** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* тол иген — *хлеб, выросший из осыпавшихся зерен*

**ӘТӘМГҮРЛӘҮ** (урта) *ҡ.* табыу — *приобрести.* Бына һыйырларҡа берәй нәмә әтәмгүрләркә кәрәк ине

**ӘТӘМКӘЛӘҮ** (һаҡмар) *и.* иҫкереү — *обветшать.* Өй алама, әтәмһәләгән

**ӘТӘННӘҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* тик тормау — *не садиться.* Әтәннәп ҡайҙа йөрөйөң көнө буйы

**ӘТӘРБАЙ** (урта) *и.* үтембей — *проныра*

**ӘТӘС** (ҡариҙел) *р.* атас — *весь в отца*

**ӘТӘСБАЛЫҠ** (дим) *и.* мыйыҡлы балыҡ — *усач (рыба)*

**ӘТӘС ГӨЛӨ** (дим) *и.* әтәс кикреге — *марьянник гребенчатый*

**ӘТӘСҠАН** (эйек) *с.* ҡыҙыу — *вспыльчивый.* Бәләкәстән әтәсҡан булды Хәмзә малайы

**ӘТӘС ҺАҠАЛЫ** (һаҡмар) *и.* әтәс кикреге — *марьянник гребенчатый*

**ӘҮГӘЛЕ** (ҡыҙыл, мейәс) *р.* әүәл — *раньше.* Әүгәле зәңге булды, биҙәр-биҙәр булып шешә туғайны (мейәс)

**ӘҮҘЕРЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс) *ҡ.* ҡаратыу — *привлечь на свою сторону.* Үҙенә әүҙереп алған (мейәс)

**ӘҮЕН** (урта) *и.* 1. Ҡор ауы — *силок для рябчиков.* 2. Балыҡ ауы — *рыболовная снасть.* Әүен һалайыҡ әле балыҡҡа. 3. (урта, һаҡмар) Таған — *стожар.* 4. (ҡыҙыл) Аусы ҡыуышы — *шалаш охотника.* 5. (дим) Яһалма соҡор — *искусственный лог (для ловли птиц и зверей)*

**ӘҮЕН: ӘҮЕН БАҘАРЫНА КИТЕҮ** (ҡыҙыл, туҡ-соран, һаҡмар, эй) *ҡ.* йоҡлап китеү — *заснуть.* Сеү,

ɪуыштанма, бәпәйең әүен баҙарына китепара ɪаҡмар)

**ӘҮЕН МАШИНА** (әй) *и.* ат менән ашлыҡ һуҡыс — *конная молотилка*

**ӘҮЕННӘҮ** (урта) *ҡ.* ашлыҡ йәки бесәнде тағанлап юү — *скирдование хлеба или сена на стожары*

**ӘҮЕРКӘ** (урта) *и.* балитәк — *оборка*

**ӘҮЕРЕҮ** (ҡариҙел, мейәс, әй) *ҡ.* әүрәтеү — *завлечь.* Был нисектер әүерҙе бит мине (ҡариҙел). Әүерә-әүерә саҡ туҡтаттыҡ (мейәс)

**ӘҮЕРНӘ АЙАҒЫ** (ҡыҙыл) *и.* өсаяҡ — *треножник (в домашнем ткачестве)*

**ӘҮЕРНӘ БАҒАНЫ** (урта) *и.* өсаяҡ — *треножник (в домашнем ткачестве)*

**ӘҮЕРНӘ БҮКӘНЕ** (эйек) *и.* өсаяҡ — *треножник (в домашнем ткачестве)*

**ӘҮЕРНӘ ТОЙАҒЫ** (салйоғот) *и.* өсаяҡ — *треножник (в домашнем ткачестве)*

**ӘҮЕРНӘТӨП** (ҡариҙел) *и.* өсаяҡ — *треножник (в домашнем ткачестве)*

**ӘҮЕРНӘ ҺӘНӘГЕ** (һаҡмар) *и.* өсаяҡ — *треножник (в домашнем ткачестве)*

**ӘҮЕРӘ-СӘҮЕРӘ** (ырғыҙ) *и.* мәшәҡәт — *забота.* Әүерә-сәүерә белән донйа гөттөм

**ӘҮЕРҪЛЕК, ӘҮЕҪЛЕК** (дим, урта) *и.* 1. Аҙбар башы — *крыша хлева.* 2. (урта) Ҡыйыҡ — *крыша (дома)*

**ӘҮЕРТЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* әүрәтеү — *завлечь*

**ӘҮЕҪТЕК** (ҡыҙыл, һаҡмар) *и.* утын һарайы — *дровяник*

**ӘҮЕҮ** (ҡыҙыл) *ҡ.* 1. Ығыу — *наклоняться.* 2. (мейәс) Һатыу — *предавать.* Һине әүебутырам

**ӘҮЕШТЕРЕҮ** (ҡыҙыл, мейәс, әй) *ҡ.* болғатыу — *помешивать.* Утты әүештереү

**ӘҮКӘЙ** (һаҡмар) *и.* әхирәт — *подруга.* Минем әүкәйем ҡунаҡҡа кигән Аҡйарҙан

**ӘҮҠАН** (гәйнә) *с.* аулаҡ — *укромный.* Әүҡан урын. Әүҡан өй. Ауҡан, ауҡам (урта урал)

**ӘҮҠАТ** (урта урал, һаҡмар) *и.* 1. Дәүләт — *богатство.* Әүҡат таралып бөттө инде (урта урал). 2. (көнсығыш диалект, һаҡмар) Көс, хәл — *сила, мощь.* Әүҡат йуҡ, барырға ауыр (һаҡмар)

**ӘҮҠАТ: ӘҮҠАТТАН ТАЙЫУ** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *ҡ.* хәлдән тайыу — *обессилеть.* Ҡартлығынан әүҡаттан тайған инде ул бабай (һаҡмар)

**ӘҮЛӘ** (урта, эйек-һаҡмар) *р.* яҡшы — *лучше.* Байға хеҙмәтсе булып йөрөгәнсе хәйерселәп йөрөгәнең әүлә (урта)

**ӘҮМӘКЛӘҮ** (дим, туҡ-соран) *ҡ.* әүәләү — *валять.* Ҡурмасты усында әүмәкләп улының итәгенә ҫалды (дим)

**ӘҮМӘКӘЙ** (ҡыҙыл, урта, урта урал) *с.* аумаҡай — *непостоянный.* Мына хәҙер әүмәкәй буған да гиткән бабай (ҡыҙыл)

**ӘҮМӘКТЕҮ** (арғаяш) *ҡ.* күңелгә тейеү — *тошнить*

**ӘҮМӘЛЕ: ӘҮМӘЛЕ ЛӘ ДӘҮМӘЛЕ** (ҡыҙыл) *с.* аумаҡай — *непостоянный.* Әүмәле лә дәүмәле был донйаның хәлдәре. Әүмәле дә тәүмәле (төньяҡ-көнбайыш)

**ӘҮМӘЛӘҮ I** (көнсығыш диалект, туҡ-соран) *ҡ.* әүәләү — *валять.* Әүмәләп ике-өс йәймә бешерә һал сәйгә (ҡыҙыл)

**ӘҮМӘЛӘҮ II** (көнсығыш диалект, һаҡмар) *ҡ.* өҫтән-мөҫтән эшләү — *работать кое-как, поверхностно.* Әүмәләй торғас бер нәмә гилтереп сығарырбыҙ әле (һаҡмар)

**ӘҮМӘТ** (эйек-һаҡмар) *и.* дәүләт, байлыҡ — *богатство.* Шул малларын әүмәт күрәләр инде

**ӘҮРЕЙӘҺАН БУЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* баҙнат итмәү — *не решиться.* Эшләйемме-йуҡмы тип әүрейәһан булып тик торола

**ӘҮРӘ** (эйек-һаҡмар) *и.* шырлыҡ — *чаща.* Ҡарурман әүрәһендә йәшәгән

**ӘҮРӘ: ӘҮРӘ БУЛЫУ** (һаҡмар) *ҡ.* әүрәү — *увлечься.* Йәштән эш белән әүрә булып ҡарһүҙҙе хәтерләмәнем

**ӘҮРӘК** (арғаяш, мейәс) *и.* әүрәү — *мякина*

**ӘҮРӘЛӘҮ** (урта урал) *ҡ.* әүрәү — *увлечься.* Шулай әүрәләп торғанда, бер ҡарт килеп сыҡты

**ӘҮҪӘЛӘҮ I** (урта) *ҡ.* әүәләү — *валять.* Ҡоротто әүҫәләп ылашҡа теҙеп ҡуйабыҙ ут аласығына

**ӘҮҪӘЛӘҮ II** (туҡ-соран, урта) *ҡ.* эрһеҙләү — *носить неаккуратно (об одежде).* Әүҫәләмәй тор кейемеңде, апайыңнарға ней гейеп барырың (туҡ-соран)

**ӘҮҺӘЛӘЙ, ӘҮҺӘЛДӘЙ** (урта) *и.* 1. Сәңгелдәк — *колыбель.* 2. Бәүелсәк — *качели.* Аласыҡлар артындағы ҡайынҡа әүһәләй тағып бир әле. Әүһәләк, әүһәлдәк (ҡыҙыл)

**ӘҮҺӘЛӘҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* иркәләү — *баловать.* Ҡоро әүһәләп йөрөтөү белән генә булмай балаңы

**ӘҮШӘЛӘҮ I** (дим, урта, әй) *ҡ.* көйшәнеү — *пережевывать.* Әбейе әүшәләп кенә икмәк ашабутыра (урта)

**ӘҮШӘЛӘҮ II** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* әүәләү — *валять.* Көтөү ҡайта башладисә йабағасын йеүешләп әүшәләйҙерейек тә туб итеп уйнатаҙырыйыҡ

**ӘҮӘ** (туҡ-соран, эйек-һаҡмар) *с.* яйлы — *удобный.* Әнә, шул урындан да әүәһе йуғ инде ҡунарға (эйек)

**ӘҮӘЛӘҮ** (төньяҡ-көнбайыш) *ҡ.* өйәләү — *валиться.* Бәпкә әүәләгән

**ӘҮӘМ** (һаҡмар) *р.* бөтөнләй — *совсем.* Әүәм белмәгәм

**ӘҮӘССЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* әүәҫләнеү — *пристраститься*

**ӘХЕЙ** (туҡ-соран) *и.* 1. Әхирәт *(ҡатын-ҡыҙҙар)* — *подруги.* Әхейләр өйләренә быйыл ғына сыҡтылар. 2. (эйек) Дуҫ *(ир-егеттәр)* — *друзья*

**ӘХИРӘТ** (туҡ-соран, һаҡмар) *и.* йәштәш ҡатын-ҡыҙҙар — *сверстницы.* Беҙ аның белән әхирәт инек, ун икенсе йылғыларбыҙ (туҡ-соран)

**ӘХИРӘТАПАЙ** (һаҡмар) *и.* әсәйҙең әхирәте — *подруга матери*

**ӘХИРӘТЛЕГИНӘЙ** (дим, урта) *и.* морондоҡ инәй — *посаженая мать*

**ӘХИРӘТЛЕГӘТӘЙ** (дим, урта) *и.* морондоҡ атай — *посаженый отец.* Әхирәтлегатай (ҡыҙыл)

**ӘХИРӘТЛЕГӘСӘЙ** (ҡыҙыл) *и.* морондоҡ инәй — *посаженая мать*

**ӘХМӘЛ: ӘХМӘЛГӘ ТӨШӨҮ** (дим) *ҡ.* хәлдән тайыу — *обессилиться, уставать.* Бу уахытта эшләп әхмәлгә төшә инек

**ӘХҮӘЛ** (туҡ-соран, урта) *и.* хәл — *положение, состояние.* Шул арҡала әхүәл ҡапыл үҙгәреп китте (туҡ-соран). Иренең шул әхүәлен белгәс нигә саҡырырға (урта)

**ӘҺЕРГӘНЕҮ** (эйек-һаҡмар) *ҡ.* эҫелектән тын ҡыҫылыу — *задыхаться от духоты*

**ӘҺӘҺӘЙ** (эйек-һаҡмар) *и.* ҡағараҡ — *чернозобая гагара*

**ӘШБӘ, ӘШПӘ** (гәйнә) *и.* булдыҡһыҙ, ебегән — *мямля.* Әшбә хатын белән көн итте инде ул

**ӘШЕТ I** (ҡыҙыл) *и.* ҡарлы ҡатыш ямғыр — *снег с дождем.* Әшит (эйек)

**ӘШЕТ II** (урта) *и.* сытыр — *хворост*

**ӘШЕҮӘК** (һаҡмар) *с.* йомшаҡ — *слабый (о человеке)*

**ӘШЕҮӘТҺЕҘ** (урта) *с.* килешһеҙ — *нескладный.* Күлмәге әшеүәтһеҙ оҙон. Әшеүәтһеҙ оҙон бер һеңлеһе бар. Әшеүәтһеһ (салйоғот)

**ӘШИПТӘН ТЫШ** (туҡ-соран, һаҡмар, ырғыҙ) *р.* саманан тыш — *слишком.* Әшиптән тыш эшләмәһә ней була икән (туҡ-соран)

**ӘШКЕ** (арғаяш, мейәс) *и.* әрпеш — *неряха*

**ӘШКӘЙЕКЛӘНЕҮ** (ҡариҙел) *ҡ.* ашҡаяҡланыу — *облупиться (о коре)*

**ӘШКӘР** (дим, ҡариҙел) *и.* 1. Сүпләп һуҡҡанда киндергә ҡуйылған биҙәк — *узор (в подборном ткачестве).* 2. Буй-буй икенсе төрлө еп атылып һуғылған киндер — *полотно, вытканное с полоской.* Әшкәрле киндерҙән ирләр күлмәге тегәләр (ҡариҙел)

**ӘШКӘРЕЛТЕРЕҮ** (урта) *ҡ.* фаш итеү — *разоблачить*

**ӘШКӘРНИК** (төньяҡ-көнбайыш) *и.* төпөш — *коротыш*

**ӘШКӘРТЕҮ** (эй) *ҡ.* иҫкәртеү — *предупредить.* Атайыңа бөгөн үк әшкәртеп ҡуй, иртәгә эшкә иртүк барабыҙ

**ӘШКӘТӘҮ** (һаҡмар) *и.* епшек буран — *липкий буран*

**ӘШНӘ** (дим) *и.* йәштәш — *сверстник*

**ӘШНӘЛӘШ** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *и.* серҙәш — *самый близкий друг*

**ӘШНӘЛӘШЕҮ** (дим, урта, эйек-һаҡмар) *ҡ.* серләшеү — *обмениваться секретами.* Ҡоҙасаһы белән әшнәләшкән була апайым (эйек-һаҡмар)

**ӘШПӘЙЕҮ** (һаҡмар) *ҡ.* бәлшәйеү — *распустить губы.* Ауыҙы әшпәйеп йөрөй

**ӘШТӘК** (ҡыҙыл) *и.* тау һикәлтәһе — *уступ горы*

**ӘШӘ** (салйоғот) *и.* ау энәһе — *сетевязальная игла*

**ӘШӘК** (төньяҡ-көнсығыш) *и.* плиталы усаҡ, мейес — *очаг, печка с плитой*

**ӘШӘКӘЛӘНЕҮ** (эйек) *ҡ.* ябығыу — *худеть*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДИАЛЕКТТАРЫ ҺҮҘЛЕГЕ

## ДИАЛЕКТОЛОГИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

Справочное издание


Редакция мөдире *З. Ҡ. Ханова*
Мөхәррирҙәре *Ф. У. Камалова, Ф. М. Бикташева*
Рәссамы *Ш. Э. Ғәлиев*
Биҙәүсе мөхәррире *Ф. Ф. Ислахов*
Техник мөхәррире *З. Ғ. Сыңғыҙова*
Корректорҙары *А. Р. Дилмөхәмәтова, А. В. Иҙелбәкова, А. М. Абдуллина, А. Ф. Исламова, В. С. Усманова*